БАШҠОРТ
ТЕЛЕНЕҢ АКАДЕМИК
ҺҮҘЛЕГЕ

АКАДЕМИЧЕСКИЙ
СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО
ЯЗЫКА

РОССИЙСКАЯ АКАДЕМИЯ НАУК
УФИМСКИЙ НАУЧНЫЙ ЦЕНТР
ИНСТИТУТ ИСТОРИИ, ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ

АКАДЕМИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

В десяти томах

ТОМ IV

Й–К

Под редакцией
доктора филологических наук, профессора
Ф. Г. Хисамитдиновой

Рекомендовано Министерством образования
Республики Башкортостан

КИТАП
УФА • 2012

РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
ӨФӨ ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ АКАДЕМИК ҺҮҘЛЕГЕ

Ун томда

IV ТОМ

Й–К

Филология фәндәре докторы, профессор
Ф. Ғ. Хисамитдинова
редакцияһында

Башҡортостан Республикаһының
Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителде

КИТАП
ӨФӨ • 2012

РЕДАКЦИОННАЯ КОЛЛЕГИЯ

А. В. Дыбо, член-корреспондент Российской академии наук
Э. Ф. Ишбердин, доктор филологических наук, профессор
Н. Н. Казанский, академик Российской академии наук
И. В. Кормушин, доктор филологических наук, профессор
К. М. Мусаев, доктор филологических наук, профессор
Д. М. Насилов, доктор филологических наук, профессор
М. Х. Надергулов, доктор филологических наук
Ф. А. Надршина, доктор филологических наук
Ф. Г. Хисамитдинова, доктор филологических наук, профессор

АВТОРЫ-СОСТАВИТЕЛИ IV ТОМА

Ф. Г. Хисамитдинова, доктор филологических наук, профессор
М. И. Багаутдинова, кандидат филологических наук
Л. А. Бускунбаева, кандидат филологических наук
Р. Т. Муратова, кандидат филологических наук
З. А. Сиразитдинов, кандидат филологических наук
Р. А. Сулейманова, кандидат филологических наук
Г. Н. Ягафарова, кандидат филологических наук
А. М. Ишегулова, младший научный сотрудник
Л. К. Ишкильдина, младший научный сотрудник
Р. Н. Каримова, младший научный сотрудник

РЕДАКТОРЫ IV ТОМА

Ф. Г. Хисамитдинова, доктор филологических наук, профессор
М. И. Багаутдинова, кандидат филологических наук
Г. Н. Ягафарова, кандидат филологических наук

В ПОДГОТОВКЕ К ИЗДАНИЮ IV ТОМА СЛОВАРЯ ПРИНИМАЛИ УЧАСТИЕ

Р. А. Давлетшин, научный сотрудник (этимологические справки)

Ш. В. Нафиков, кандидат филологических наук (этимологические справки, переводы на английский язык)

З. А. Сиразитдинов, кандидат филологических наук (топонимы, названия организаций, предприятий, учреждений)

Р. А. Сулейманова, кандидат филологических наук (антропонимы)

А. М. Хакимьянова, младший научный сотрудник (источники и литература по башкирскому народному творчеству)

Г. Н. Ягафарова, кандидат филологических наук (перечень словарей, энциклопедий, переводы на турецкий язык)

ҺҮҘЛЕКТЕҢ КӘҢӘШСЕЛӘР ҠОРО

А. В. Дыбо, Рәсәй фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы
Э. Ф. Ишбирҙин, филология фәндәре докторы, профессор
Н. Н. Казанский, Рәсәй фәндәр академияһы академигы
И. В. Кормушин, филология фәндәре докторы, профессор
К. М. Мусаев, филология фәндәре докторы, профессор
Д. М. Насилов, филология фәндәре докторы, профессор
М. Х. Нәҙерғолов, филология фәндәре докторы
Ф. А. Нәҙершина, филология фәндәре докторы
Ф. Ғ. Хисамитдинова, филология фәндәре докторы, профессор

IV ТОМДЫҢ АВТОР-ТӨҘӨҮСЕЛӘРЕ

Ф. Ғ. Хисамитдинова, филология фәндәре докторы, профессор
М. И. Баһауетдинова, филология фәндәре кандидаты
Л. А. Боҫҡонбаева, филология фәндәре кандидаты
Г. Н. Йәғәфәрова, филология фәндәре кандидаты
Р. Т. Моратова, филология фәндәре кандидаты
З. Ә. Сиразитдинов, филология фәндәре кандидаты
Р. Ә. Сөләймәнова, филология фәндәре кандидаты
А. М. Ишеғолова, кесе ғилми хеҙмәткәр
Л. К. Ишкилдина, кесе ғилми хеҙмәткәр
Р. Н. Кәримова, кесе ғилми хеҙмәткәр

IV ТОМДЫҢ МӨХӘРРИРҘӘРЕ

Ф. Ғ. Хисамитдинова, филология фәндәре докторы, профессор
М. И. Баһауетдинова, филология фәндәре кандидаты
Г. Н. Йәғәфәрова, филология фәндәре кандидаты

ҺҮҘЛЕКТЕҢ IV ТОМЫН БАҪМАҒА ӘҘЕРЛӘҮҘӘ ҠАТНАШТЫЛАР

Р. Ә. Дәүләтшин, ғилми хеҙмәткәр (этимологик белешмәләр)

Г. Н. Йәғәфәрова, филология фәндәре кандидаты (һүҙлектәр, энциклопедиялар исемлеге, төрөк теленә тәржемәләр)

Ш. В. Нафиҡов, филология фәндәре кандидаты (этимологик белешмәләр, инглиз теленә тәржемәләр)

З. Ә. Сиразитдинов, филология фәндәре кандидаты (ер-һыу атамалары, ойошма, учреждение, предприятие исемдәре)

Р. Ә. Сөләймәнова, филология фәндәре кандидаты (кеше исемдәре)

А. М. Хәкимйәнова, кесе ғилми хеҙмәткәр (башҡорт халыҡ ижады буйынса сығанаҡтар һәм әҙәбиәт)

УДК 821.512.141(038)
ББК 81.2 Баш-4
Б 28

IV томға баһалама биреүселәр

Ғарипов Т. М., Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы
Ғәләүетдинов И. Г., Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы
Ҡаһарманов Ғ. Ғ., филология фәндәре кандидаты
Мудрак О. А., филология фәндәре докторы, профессор
Хажин В. И., педагогия фәндәре кандидаты

Рецензенты IV тома

Галяутдинов И. Г., член-корреспондент Академии наук Республики Башкортостан
Гарипов Т. М., член-корреспондент Академии наук Республики Башкортостан
Кагарманов Г. Г., кандидат филологических наук
Мудрак О. А., доктор филологических наук, профессор
Хажин В. И., кандидат педагогических наук

Баҫмаға Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге
Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ғилми советы тарафынан раҫланды

Б 28 **Башҡорт теленең академик һүҙлеге:** 10 томда. Т. IV: (Й—К хәрефтәре) / Ф. Г. Хисамитдинова редакцияһында. — Өфө: Китап, 2012. — 944 б.

ISBN 978-5-295-05608-6 (т. 4)
ISBN 978-5-295-05388-7

Башҡорт теленең академик һүҙлеге — башҡорт лексикографияһы тарихында беренсе аңлатмалы-тәржемәүи һүҙлек. Һүҙлек, нигеҙҙә, хәҙерге башҡорт теленең дөйөм ҡулланылышлы лексикаһын, фразеологияһын үҙ эсенә ала. Бынан тыш, һүҙлеккә киң таралған диалектизмдар, иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр, фәнни һәм халыҡ терминологияһы индерелгән. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләре башҡортса аңлатыла, рус теленә тәржемә ителә һәм бай иллюстратив материал менән раҫлана. Баш һүҙҙәр рус, инглиз, төрөк телдәренә ауҙарыла.

Һүҙлек телсе-ғалимдарға, журналистарға һәм нәшриәт хеҙмәткәрҙәренә, уҡытыусыларға һәм студенттарға тәҡдим ителә. Хеҙмәт башҡа өлкәлә эшләүсе белгестәр, башҡорт мәҙәниәте, тарихы менән ҡыҙыҡһыныусы киң ҡатлам уҡыусылар өсөн дә файҙалы булыр.

Академический словарь башкирского языка является первым в истории башкирской лексикографии толково-переводным словарём. Словарь, в основном, включает в себя общераспространённые слова и фразеологизмы современного башкирского языка. Кроме этого, в словарь включены наиболее распространённые диалектизмы, устаревшие и новые слова, научная и народная терминология. Толкование слов и фразеологических единиц даётся на башкирском языке с переводом на русский язык. Заглавные слова переводятся на русский, английский и турецкий языки.

Словарь адресуется лингвистам, журналистам, работникам издательств и средств массовой информации, учителям и студентам. Он будет полезен специалистам, работающим и в других областях, и всем, кто интересуется историей и культурой башкирского народа.

УДК 821.512.141(038)
ТП – 098/12 **ББК 81.2 Баш-4**

ISBN 978-5-295-05608-6 (т. 4)
ISBN 978-5-295-05388-7

© РФА ӨҒҮ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

БАШ ҺҮҘ

«Башҡорт теленең академик һүҙлеге» — аңлатмалы-тәржемәүи һүҙлек. Һүҙлектең дүртенсе томына **Й, К** хәрефтәренә башланған һүҙҙәр индерелде.

Һүҙлек, нигеҙҙә, хәҙерге башҡорт теленең дөйөм ҡулланылышлы лексикаһын, фразеологияһын үҙ эсенә ала. Шулай уҡ Һүҙлеккә киң таралған диалектизмдар, иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр, фәнни һәм халыҡ терминологияһы индерелде. Һүҙлектең һүҙҙәр теҙмәһе ябай, яһалма һәм ҡушма һүҙҙәрҙән тора. Һүҙлеккә алынған лексик берәмектәрҙең дөйөм индексы унынсы томда бирелә.

Һүҙҙәрҙең мәғәнәләре башҡортса аңлатыла, рус теленә тәржемә ителә һәм бай иллюстратив материал менән раҫлана. Баш һүҙҙәр рус, инглиз, төрөк телдәренә ауҙарыла.

Һүҙлектең ҡушымта өлөшөндә башҡорт телендә иң йыш ҡулланылған аббревиатуралар һәм ҡыҫҡартмалар, ер-һыу атамалары, кеше исемдәре, киң таралышлы ойошма, учреждение, предприятие исемдәре урын алды.

Һүҙлектең дүртенсе томы филология фәндәре докторы, профессор Ф. Ғ. Хисамитдинова мөхәррирлегендә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре тарафынан әҙерләнде.

Һүҙлекте төҙөүселәр дүртенсе томдың баһалама биреүселәренә — Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, филология фәндәре докторы, профессор Т. М. Ғариповҡа, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, филология фәндәре докторы, профессор И. Ғ. Ғәләүетдиновҡа, филология фәндәре кандидаты, доцент Ғ. Ғ. Ҡаһармановҡа, филология фәндәре докторы, профессор О. А. Мудракка, педагогия фәндәре кандидаты, доцент В. И. Хажинға әһәмиәтле кәңәштәре һәм конструктив тәҡдимдәре өсөн ҙур рәхмәтен белдерә.

Авторҙар коллективы Һүҙлекте камиллаштырыу буйынса иҫкәрмәләрҙе һәм теләктәрҙе ихлас күңелдән ҡабул итә. Тәҡдим ителгән һүҙҙәр, шулай уҡ яңы реалияларҙы аңлатҡан, Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында» Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Комиссияның Терминология хеҙмәте тарафынан раҫланған актуаль һүҙҙәр һәм төшөнсәләр Һүҙлектең унынсы томында урын аласаҡ. Кәңәштәрегеҙҙе һәм иҫкәрмәләрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса ебәреүегеҙ һорала:

450054, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 71-се йорт,
РФА Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты
E-mail: rihll@anrb.ru

ПРЕДИСЛОВИЕ

«Академический словарь башкирского языка» является толково-переводным словарём. В четвёртый том Словаря вошли слова, начинающиеся на буквы **Й, К.**

В Словаре зафиксирован разнообразный лексический материал, включающий базовую общеупотребительную лексику современного башкирского литературного языка, наиболее распространённые диалектизмы, устаревшие и новые слова, научную и народную терминологии. Словник Словаря состоит из простых, производных и составных (сложных) слов. Индекс к Словарю приводится в десятом томе.

Толкование слов и фразеологических единиц даётся на башкирском языке с переводом на русский язык. Заглавные слова переводятся на русский. английский и турецкий языки.

В Приложениях к тому приведены общеупотребительные в современном башкирском языке аббревиатуры, перечень топонимов, антропонимов, список названий организаций, предприятий и учреждений.

Четвёртый том Словаря подготовлен сотрудниками отдела языкознания Института истории, языка и литературы Уфимского научного центра Российской академии наук под редакцией доктора филологических наук, профессора Ф.Г. Хисамитдиновой.

Коллектив составителей Словаря выражает искреннюю благодарность рецензентам четвёртого тома члену-корреспонденту Академии наук Республики Башкортостан, доктору филологических наук, профессору Т. М. Гарипову, члену-корреспонденту Академии наук Республики Башкортостан, доктору филологических наук, профессору И. Г. Галяутдинову, кандидату филологических наук, доценту Г. Г. Кагарманову, доктору филологических наук, профессору О. А. Мудраку, кандидату педагогических наук, доценту В. И. Хажину, высказавшим ряд ценных замечаний и конструктивных предложений.

Редакция Словаря с большой признательностью примет все критические замечания и пожелания, способствующие улучшению настоящего Словаря. Предложенные Вами дополнения, а также актуальные слова и выражения, обозначающие новые реалии действительности и утверждённые Терминологической службой Комиссии при Правительстве Республики Башкортостан по реализации Закона РБ «О языках народов Республики Башкортостан», будут представлены в десятом томе Словаря. Ваши рекомендации просим направлять по адресу:

450054, г. Уфа, проспект Октября, 71,
Институт истории, языка и литературы Уфимского научного центра РАН
E-mail: rihll@anrb.ru

ҺҮҘЛЕК МЕНӘН ФАЙҘАЛАНЫУ ТӘРТИБЕ
КАК ПОЛЬЗОВАТЬСЯ СЛОВАРЁМ

тартынкыларҙың ялғау ҡушылғанда сиратлашыуы (чередование согласных при словоизменении)

этимологик мәғлүмәт (этимологическая справка)

баш һүҙ (заглавное слово)

АҠЫҠ **(аҡығы)** [ғәр. عقيق] (Р.: сердолик; И.: cornelian; Т.: akik) *и. мин.*

һүҙ төркөмө (часть речи)

1. Ҡыҙыл йәки ҡыҙғылт һары төҫтәге аҫыл таш. □ Сердолик. *Аҡыҡ ҡаш. Аҡыҡ төймә.* ■ *Унар ғына һумлыҡ ай ун аҡыҡ, һалдыр, егет, әйәр ҡашыңа.* Халыҡ йырынан.

һүҙҙең ҡулланылышын күрһәткән цитата (цитата, иллюстрирующая употребление слова)

стилистик һ.б. билдәләр (стилистические и др. пометы)

2. *диал.* Йөҙөк ҡашы. □ Камень, вставляемый в перстень.

3. *миф.* Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, күҙ тейеүҙән, йыландан, үлемдән һаҡлаусы таш. □ Мифологизированный камень, выполняет функцию оберега, амулета от сглаза, ранений, смерти.

рус теленә тәржемә (перевод на русский язык)

БАҒЫР I (Р.: форель; И.: trout; Т.: alabalık) *и. зоол.*

латинса халыҡ-ара фәнни флора һәм фауна атамалары (латинские международные научные названия флоры и фауны)

омоним

1. Һыртына төрлө төҫтәге тəрткө төшкән затлы балыҡ *(ваҡ тау йылғаларында, саф һыуҙа була).* □ Форель. / Форелевый (лат. *Salmonidae*). *Бағыр ыуылдырығы. Бағыр үрсетеү.* ■ *Мин Һүрәмдең моңон тыңлап үҫтем, йөҙҙөм, һөҙҙөм бәрҙе, бағырын.* М. Кәримов.

исемдең сифат формаһында тәржемәһе (перевод существительного в форме прилагательного)

2. *диал. кар.* **этеш.**

3. *диал. кар.* **бағара 1.**

БАҒЫР II *и. диал. кар.* **баҡыр I, III.** *Бағырҙан эшләнгән алҡа.*

төп һүҙгә һылтанма (отсылка к основному слову)

БАҒЫР III *и. диал. кар.* **бәғер.** *Бағырҙарым телен*ә.

һүҙҙең һүҙбәйләнештә ҡулланылышы (употребление слова в словосочетании)

♦ **Ҡар бағыр** һауалы, тәкәббер *(кешегә ҡарата).* □ Высокомерный *(о человеке). Ҡар бағыр кеше ул.*

фразеологизм

ҡылымдың нигеҙе (глагольная основа)

ҘУРЛАУ **(ҙурла-)** (Р.: оказывать почести; И.: honour; Т.: saygı göstermek) *ҡ.*

баш һүҙҙең рус, инглиз, төрөк телдәренә тәржемәһе (перевод заглавного слова на русский, английский, турецкий языки)

мәғәнә (значение)

1. Ҡәҙер-хөрмәт итеү, ололау, хөрмәтләү, ихтирам итеү. □ Чтить, почитать *кого*, оказывать почести *кому.* // Почитание. ■ *Инде, егет, нишләйек, ниндәй бүләк бирәйек, ни тип әйтеп ҙурлайыҡ?* «Урал батыр». *[Тарғынбай:] Һинең көмөш миҙалың өсөн бирелә торған премияны бөгөн киске мәжлестә ағай-эне алдында күрерһең. [Шәғәли:] Ҙурлауың өсөн рәхмәт, ағай.* Ғ. Әхмәтшин. *Класташтары еңеү менән ҡайтҡан Әҙһәмде ҙурлап ҡаршы алды.* Р. Низамов. *Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп ҡалҡыуыраҡ бер ергә күмде, ти.* «Урал батыр».

асыҡлаусы һүҙҙәрҙең яҙылышы (подача поясняющих слов)

ҡылымдың исем формаһында тәржемәһе (перевод глагола в именной форме)

2. Маҡтау, ҡупырайтыу, маһайтыу. □ Возвеличивать; восхвалять; превозносить. // Возвеличивание, восхваление. ● *Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.* Әйтем.

мәҡәл, әйтем (пословица, поговорка)

ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

а. — алмаш — местоимение

алъялғау — префикс

аныкл. — аныҡлаусы һүҙ — определение

артыкл. дәр. — артыҡлыҡ дәрәжәһе — превосходная степень

а.х. — ауыл хужалығы — сельское хозяйство

бал. — балалар теле — детская речь

балк. — балыҡсылыҡ — рыболовство, рыбоводство

берл. — берлек формаһында — в единственном числе

билд.а. — билдәләү алмашы — определительное местоимение

билдһ.а. — билдәһеҙлек алмашы — неопределённое местоимение

бойр. — бойороҡ һөйкәлеше — повелительное наклонение

бүл. — бүлеү — разделительный

бәйл. — бәйләүес — послелог

диңг. — диңгеҙселек — мореходство

дини — дини һүҙ — религиозное слово

дәр. — дәрәжә — степень

И. — инглиз теленә тәржемә — перевод на английский язык

и. — исем — имя существительное

икт. — иҡтисад термины — экономический термин

инш. — инеш һүҙ — вводное слово

ирк. — иркәләү формаһы йәки мәғәнәһендә — ласкательная форма или значение

иҫк. — иҫкергән һүҙ — устаревшее слово

йөкм. — йөкмәтеү йүнәлеше — понудительный залог

йола — обряд

йый.һ. — йыйыу һаны — собирательное числительное

йыйн. — йыйнау — собирательное

йәки — или

киҫ. — киҫәксә — частица

кит. — китап телендәге һүҙ — книжное слово

клш. — килеш — падеж

көлк. — көлкөгә алып әйтелгән һүҙ — шутливое слово

көс. — көсәйтеү мәғәнәһендә — в усилительном значении

күбр. — күберәк *(ниндәйҙер бер форма йәки мәғәнәлә)* — в большинстве

күпл. — күплек һаны — множественное число

күрһ.а. — күрһәтеү алмашы — указательное местоимение

күсм. — күсмә мәғәнәлә — в переносном значении

кәмһ. — кәмһетеү һүҙе — презрительное слово

ҡ. — ҡылым — глагол

ҡайт. — ҡайтым йүнәлеше — возвратный залог

ҡалк. — ҡалкыулыҡ — возвышенность

ҡар. — ҡара *(икенсе бер һүҙгә тоҫҡаған-да)* — смотри *(при ссылке на другое слово)*

ҡарғ. — ҡарғау һүҙе — слово проклятия

ҡыҫҡ.ф. — ҡыҫҡартылған форма — сокращённая форма

махс. — махсус — специальное

мөн. — мөнәсәбәт, модаль һүҙ — модальное слово

мыҫк. — мыҫҡыллау һүҙе — пренебрежительное слово

мәм. — мәмерйә — пещера

оҡш. — оҡшатыу һүҙе — подражательное слово

өнд. — өндәү һүҙе — восклицательное слово

өндш. — өндәшеү һүҙе — обращение

Р. — рус теленә тәржемә — перевод на русский язык

р. — рәүеш — наречие

раҫл. — раҫлау — утверждение

рәт һ. — рәт һаны — порядковое числительное

с. — сифат — имя прилагательное

сағ. — сағыштырығыҙ — сравните

сағышт. — сағыштырыу формаһы йәки мәғәнәһендә — в форме сравнения

саҡ. — саҡырыу йәки ҡыуыу һүҙе — звательное или отгонное слово

сама һ. — сама һаны — приблизительное числительное

сығн. клш.– сығанаҡ килеш — исходный падеж

сәнғ. — сәнғәт — искусство

Т. — төрөк теленә тәржемә — перевод на турецкий язык

тар. — тарихи һүҙ — историзм

тау — тау эше термины — термин горного дела

телк. — теләк һүҙе — благопожелание

терк. — теркәүес — предлог

т. юл — тимер юл эше — железнодорожная работа

төб. клш. — төбәү килеш — дательный падеж

төҙ. — төҙөлөш термины — строительный термин

төп клш. — төп килеш — именительный падеж

төш. — төшөм йүнәлеше — страдательный залог

төш. клш. — төшөм килеш — винительный падеж

туҡ. — туҡыу эше — текстильное дело

тупаҫ — тупаҫ һүҙ — грубое слово

у.-в. клш. — урын-ваҡыт килеш — местно-временной падеж

умарт. — умартасылыҡ — пчеловодство

урм. — урман эше — лесное дело

урт. — уртаҡлыҡ йүнәлеше — взаимный залог

үс. — үсәү һүҙе — слово злорадства

фәлс. — фәлсәфә термины — философский термин

хупл. — хуплау һүҙе — одобрительное слово

хушл. — хушлашыу һүҙе — слово прощания

хәб. — хәбәр функцияһында — в функции сказуемого

хәрби — хәрби термин — военный термин

һ. — һан — число

һ. б. — һәм башҡалар — и другие

һир. — һирәк ҡулланыла — редкое, редкоупотребительное слово, выражение

һөйл. — һөйләү телендәге һүҙ — разговорное слово

шарт — шарт һөйкәлеше — условное наклонение

шаяр. — шаярыу һүҙе — шутливое слово

шелт. — шелтәләү һүҙе — укорительное слово

шиғр. — шиғри һүҙ йәки мәғәнә — поэтическое слово или значение

ымл. — ымлыҡ — междометие

эйл. а. — эйәлек алмашы — притяжательное местоимение

эйл. клш. — эйәлек килеше — притяжательный падеж

эйл. ф. — эйәлек формаһы — форма притяжательности

эйһ. ф — эйәһеҙ форма — безличная форма

әҙ. — әҙәби термин — литературоведческий термин

әрл. — әрләү һүҙе — бранное слово

юғары — юғары стиль — высокий стиль

юкл. ф. — юклыҡ формаһы — отрицательная форма

яманл. — яманлау һүҙе — ругательное слово

ярҙ. — ярҙамлыҡ ҡылымы рәүешендә — в функции вспомогательного глагола

УСЛОВНЫЕ СОКРАЩЕНИЯ

авиа. — авиация
анат. — анатомия
антроп. — антропология
археол. — археология
архит. — архитектура
астр. — астрономия
безл. — безличное
биол. — биология
биохим. — биохимия
бот. — ботаника
бран. — бранное
буд. вр. — будущее время
букв. — буквально
бухг. — бухгалтерия
в. (вв.) — век (века)
ввод. сл. — вводное слово
вет. — ветеринария
взаимн. — взаимный залог
возв. — возвышенность
возвр. — возвратный залог
вспом. — вспомогательный
г. (гг.) — год (годы)
геогр. — география
геод. — геодезия
геол. — геология
гидрол. — гидрология
гл. — глагол
грам. — грамматика
дат. п. — дательный падеж
деепр. — деепричастие
диал. — диалектное слово
дип. — дипломатия
досл. — дословно
др. — другой
зват. ф. — звательная форма
зоол. — зоология
знач. — значение
им. — имя
инф. — информатика
ирон. — ироническое
иск. — искусство
исх. п. — исходный падеж
и т. п. — и тому подобное
косм. — космонавтика
кул. — кулинария
л. — лицо
-л. — либо
ласк. — ласкательное
лингв. — лингвистика
лог. — логика
мат. — математика
мед. — медицина
межд. — междометие
местно-времен. п. — местно-временной падеж
метал. — металлургия
метеор. — метеорология
мин. — минералогия
миф. — мифология
мод. — модальность
муз. — музыка
-н. — -нибудь
обр. — обрядовая лексика
опт. — оптика
осн. — основной
отриц. — отрицательный
п. — падеж
полигр. — полиграфия
понуд. — понудительный залог
поэт. — поэтическое
превосх. степ. — превосходная степень
пренебр. — пренебрежительное
прил. — прилагательное
прокл. — проклятие

прост. — просторечное
прош. вр. — прошедшее время
радио — радиотехника, радиоэлектроника
разд. — разделительный
рит. — ритуальное
род. п. — родительный падеж
см. — смотри
соед. — соединительный
соотв. — соответствует
сочет. — сочетание
спорт. — физкультура и спорт
сравн. степ. — сравнительная степень
страд. — страдательный залог
суфф. — суффикс
сущ. — существительное
твор. п. — творительный падеж
театр. — театральный термин
тех. — техника
типогр. — типографский термин
употр. — употребляется
усил. — усилительный
ф. — форма
фарм. — фармакология
физ. — физика
физиол. — физиология
фин. — финансовый термин
хим. — химия
числ. — числительное
шахм. — шахматный термин
шутл. — шутливое
эвф. — *эвфемизм*
эк. — экономика
электр. — электричество
этн. — этнография
юр. — юридический термин

ТЕЛДӘР, ДИАЛЕКТТАР, ҺӨЙЛӘШТӘР
ЯЗЫКИ, ДИАЛЕКТЫ, ГОВОРЫ

алт. — алтай — алтайский
боронғо төрки — боронғо төрки — древнетюркский
вен. — венгр — венгерский
гол. — голланд — голландский
гр. — боронғо грек — древнегреческий
груз. — грузин — грузинский
ғәр. — ғәрәп — арабский
дөйөм төрки — дөйөм төрки — общетюркский
ингл. — инглиз — английский
исл. — исланд — исландский
исп. — испан — испанский
ит. — итальян — итальянский
йәһүд — йәһүд — еврейский
каб. — кабардин — кабардинский
кар. — карел — карельский
коми — коми
ҡаҙ. — ҡаҙаҡ — казахский
ҡалм. — ҡалмыҡ — калмыцкий
ҡырғ. — ҡырғыҙ — киргизский
ҡыт. — ҡытай — китайский
лат. — латин — латинский
латш. — латыш — латышский
лит. — литва — литовский
монг. — монгол — монгольский
морд. — мордва — мордовский
нан. — нанай — нанайский
нем. — немец — немецкий
норв. — норвег — норвежский
нуғ. — нуғай — ногайский
пол. — поляк — польский
полин. — полинезий — полинезийский
порт. — португал — португальский
рум. — румын — румынский
рус. — рус — русский
санскр. — санскрит — санскритский
синг. — сингал — сингальский
сканд. — скандинав — скандинавский
сығ. — сығатай — чагатайский
там. — тамил — тамильский
тиб. — тибет — тибетский
торк. — төрөк — турецкий
төрки — төрки — тюркский
фарс. — фарсы — персидский
фин — фин — финский
фр. — француз — французский
һинд — һинд — индийский
чех — чех — чешский
шв. — швед — шведский
әзр. — әзербайжан — азербайджанский
эст. — эстон — эстонский
эф. — эфиоп — эфиопский
япон — япон — японский

ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ
ИСПОЛЬЗОВАННАЯ ЛИТЕРАТУРА

##ҺҮҘЛЕКТӘР, ЭНЦИКЛОПЕДИЯЛАР
СЛОВАРИ, ЭНЦИКЛОПЕДИИ

Абаев. В. И. Историко-этимологический словарь осетинского языка. Т. I–V. — М. — Л., 1958–1995.

Абдулбанеев Б. О. Словарь музыкальных терминов на башкирском и русском языках. — Уфа, 1997. — 256 с.; 2-е изд., доп. — Уфа, 2009. — 151 с.

Абуталипова Р. А., Камалетдинова А. В. Русско-башкирский словарь терминов по методике преподавания языков. — Уфа, 2009. — 95 с.

Административно-территориальное устройство Республики Башкортостан. — Справочник. — Уфа, 1999. — 416 с.: илл.

Аҙнағолов Р. Г. Башҡортса-русса хоҡуҡ терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1996. — 208 б.

Азнабаев М. Т. Русско-башкирский толковый словарь офтальмологических терминов. — Уфа, 2004. — 111 с.

Азнабаев М. Т., Гумаров В. З., Суфьянова Н. Ф. Русско-башкирский толковый словарь медицинских терминов. — Уфа, 2007. — 839 с.

Англо-русский словарь / В. Д. Аракин и др. — 11-е изд., испр. и доп. — М., 1980. — 808 с.

Англо-русский словарь / В. К. Мюллер. — 24-е изд. — М., 1992. — 960 с.

Аслаева Р. Г. Русско-башкирский дефектологический толковый словарь. — Уфа, 2001. — 172 с.

Ашмарин Н. И. Словарь чувашского языка. Вып. 1—17. — Казань — Чебоксары, 1928–1950.

Багаутдинова М. И. Башкирско-русский словарь этнокультуроведческой лексики. — Уфа, 2003. — 136 с.

Байрамғолов А. Математика терминдары. — Өфө, 1941. — 32 б.

Байрамғолов А., Ғәлимов К. Русса-башҡортса математика терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1949. — 20 б.

Байышев Т. Г. Зоология терминдары һүҙлеге. Русса-башҡортса һәм башҡортса-русса. — Өфө, 1952. — 150 б.

Баранов С. Латинса, русса һәм башҡортса үҫемлек исемдәре: 2-се өлөш. — Өфө, 1952.

Баранов С., Шакиров З. Названия растений на латинском, русском и башкирском языках. Ч. 1. – Уфа, 1932. – 34 с. (лат. шр.)

Баскаков Н. А., Инкижекова-Грекул А. И. Хакасско-русский словарь. – М., 1953. – 487 с.

Батыршина Г. Р. Башкирско-русский словарь лексики родинного обряда. – Уфа, 2008. – 56 с.

Баһауетдинова М. И. Башҡортса-русса этнографик терминдар һүҙлеге. – Өфө, 1994. – 56 б.

Баһауетдинова М. И. Тыуған телем – байлығым: Башҡортса-русса этнографик терминдар һүҙлеге. – Өфө, 2000. – 120 б.

Башкирская энциклопедия. В 7-ит. / Гл. ред. М. А. Ильгамов. Т. 1 (А – Б). – Уфа, 2005. – 624 с.: илл.: карт.: Т. 2 (В – Ж). – Уфа. 2006. – 624 с.: илл.: карт: Т. 3 (З – К). – Уфа, 2007. – 672 с.: илл.: карт; Т. 4 (Л – О). – Уфа, 2008. – 672 с.: илл.: карт; Т. 5 (П – С). – Уфа, 2009. – 576 с.: илл.: карт; Т. 6 (С – У). – Уфа, 2010. – 544 с.: илл.: карт.

Башкортостан: Краткая энциклопедия / Гл. ред. Р. З. Шакуров. – Уфа, 1996. – 672 с., илл.

Башҡорт АССР-ының топонимдар һүҙлеге / А. А. Камалов һ. б. – Өфө, 1980. – 200 б.

Башҡорт аш-һыуҙары терминдарының башҡортса-урыҫса аңлатмалы һүҙлеге / Ф. С. Әминева. – Өфө, 2002. – 64 б.

Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге / М. И. Дилмөхәмәтов һ. б. – Өфө, 2002. – 430 б.

Башҡорт теленең һүҙлеге. 2 томда / Ә. Ғ. Бейешев һ. б. I том (А – М). – М., 1993. – 862 бит; II том (Н – Я). – М., 1993. – 814 б.

Башҡорт терминдары һүҙлеге: Биҙәү-ҡулланма сәнғәте // Авижанская С. А. и др. Декоративно-прикладное искусство башкир. – Уфа, 1964. – С. 248–255.

Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Урыҫсанан тулыландырылған һәм төҙәтелгән тәржемәһе / Баш мөхәррир Р. З. Шәкүров. – Өфө, 1997. – 696 б., һүрәттәре менән.

Башҡортса-инглизсә-русса мәғәнәләш мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге / Ф. А. Нәҙершина һ. б. – Өфө, 2002. – 159 б.

Башҡортса-русса ҡушма һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр һүҙлеге / Ф. Ғ. Хисамитдинова һ. б. – Өфө, 2007. – 80 б.

Башҡортса-русса һүҙлек / З. Ғ. Ураҡсин һ. б. – М., 1996. – 884 б.

Башҡортса-русса һүҙлек / Ҡ. З. Әхмәров һ. б. – М., 1958. – 804 б.

Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге. I том. Көнсығыш диалект / Н. Х. Мәҡсүтова һ. б. – Өфө, 1967. – 300 б.

Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге. II том. Көньяҡ диалект / Н. Х. Мәҡсүтова һ. б. – Өфө, 1970. – 327 б.

Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге. III том. Көнбайыш диалект / Н. Х. Мәҡсүтова һ. б. – Өфө, 1987. – 231 б.

Бейешев Ә. Ғ. Башҡорт телендә йөрөгән ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре. – Өфө, 2009. – 137 б.

Бикбаев Ф. М. Русско-башкирский словарь терминов и понятий по черчению: тезаурус. – Уфа, 2008. – 184 с.

Большой толковый словарь якутского языка = Саха тылын быhаарыылаах улахан тылдьыта: В 15 т. / Под ред. П. А. Слепцова. — Новосибирск, 2004 — .

Бутанаев В. Я. Хакасско-русский историко-этнографический словарь. — Абакан, 1999. — 240 с.

Вилданов Ғ. Башҡорт лөғәте (халыҡ араһынан алып) // Белем. — 1924. — № 3–4.

Вилданов Ғ. Эш атамалары (терминдары). — Өфө, 1927. — 56 б. (ғәрәп графикаһында).

Вәхитова А. Ғ. Башҡорт-монгол лексик параллелдәр һүҙлеге. — Бөрө, 2008. — 48 б.

Галин С. А. Народной мудрости источник. Толковый словарь башкирского фольклора. — Уфа, 2007. — 304 с.

Ғалин С. Ә. Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклоры: аңлатмалы һүҙлек. — Өфө, 1993. — 224 б.; Төҙәтелгән һәм тулыландырылған 2-се баҫмаһы. — Өфө, 1999. — 328 б.

Гарипов Т. М., Емалетдинов Ф. Д., Емалетдинова З. А. Краткий русско-башкирский словарь иноязычных заимствований. — Уфа, 2006. — 92 с.

Гарипов Т. М. Историко-этимологический словарь башкирского языка. Вып. I. Корнеслова с гласными инициалиями. — Уфа, 2007. — 140 с.

Гарипов Т. М., Нафиков Ш. В. Историко-этимологический словарь башкирского языка. Вып. II. Раздел I: Двуфонемные моносиллабы с согласными инициалиями. — Уфа, 2009. — 27 с.

Гарипов Ф. Н., Ураксин З. Г. Русско-башкирский словарь экономических терминов. — Уфа, 2007. — 184 с.

Гиндуллина А. Ф., Каримова Ф. Х. Русско-башкирский учебный ситуативный словарь фразеологических единиц. — Уфа, 1992. — 112 с.

Гумаров В. З. Краткий русско-башкирский словарь медико-гигиенических терминов. — Уфа, 1990. — 272 с.

Гумаров В. З. Русско-башкирский словарь по анатомии и физиологии человека. — Уфа, 1981. — 132 с.

Ғадилов Л., Шиғаев М. Русса-башҡортса ҡыҫҡаса ауыл хужалығы һүҙлеге. — Өфө, 1961. — 95 б.

Ғарипов И. М. Башҡортса-русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. — Өфө, 1994. — 168 б.

Ғүмәр Г., Әбдрәшит Х., Мағаз Р. һ. б. Башҡорт теле терминдары һүҙлеге. Бюллетень № 1: Социаль-экономик-фәлсәфи терминдар, 1-се киҫәк. — Өфө, 1931. — 73 б. (лат. шр.)

Даль В. И. Толковый словарь живого великорусского языка. — 6-е изд. — Т. I — IV. — М., 1955.

Диалектологический атлас башкирского языка / Н. Х. Максютова и др. — Уфа, 2005. — 234 с., 169 карт.

Древнетюркский словарь / В. М. Наделяев и др. — Л., 1969. — 676 с.

Дәүләтшин Ғ. Башҡорт теленең имлә һүҙлеге. — Өфө, 1930. — 167 б. (лат. шр.)

Егоров В. Г. Этимологический словарь чувашского языка. — Чебоксары, 1964. — 355 с.

Зайнуллина Г. Д. Башкирско-русский, русско-башкирский терминологический словарь по животноводству. — Уфа, 2006. — 168 с.

Зайнуллина Г. Д. Русско-башкирский терминологический словарь по языкознанию. — Уфа, 2002. — 280 с.

Зайнуллина Г. Д. Русско-башкирский, башкирско-русский терминологический словарь по физическому воспитанию и спорту. — Уфа, 2009. — 157 с.

Зәйнуллина Г. Д. Русса-башҡортса лингвистик терминдар һүҙлеге. — Өфө, 1991. — 184 б.

Зәйнуллина Г. Д. Урыҫса-башҡортса, башҡортса-урыҫса умартасылыҡ һүҙлеге. — Өфө, 2001. — 154 б.

Ишбаев К. Ғ., Ишкилдина З. К. Башҡорт теленең паронимдар һүҙлеге. — Өфө, 2001. — 312 б.

Ишбаев К. Ғ., Ишкилдина З. К. Башҡорт теленең һүҙьяһалыш һүҙлеге. — Өфө, 2005. — 552 бит.

Ишбирҙин Э. Ф. Башҡортостан ҡоштары (белешмә китап). — Өфө, 1986. — 168 б., һүрәттәре менән.

Ишмөхәмәтов И. Х. Русса-башҡортса химия терминдары. — Өфө, 1950. — 40 б.

Ишмөхәмәтов И. Х. Химия терминдары. — Өфө, 1942. — 51 б.

Йосопов Ғ., Ишмөхәмәтов И., Уразмәтов Н. Химия терминдары. — Өфө, 1934. — 78 б. (лат. шр.)

Йәнтүрин С., Хисамов Ғ. Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1981. — 100 б.

Йәнтүрин С. И. Үҫемлектәр донъяһына сәйәхәт. — Өфө, 1990. — 160 б.

Йәрмөхәмәтов А. И. Урман эше терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1954. — 68 б.

Йәһүҙин Т. И. Эстетика буйынса русса-башҡортса ҡыҫҡаса аңлатмалы һүҙлек. — Өфө, 2008. — 148 б.

Кадырматов Х. Х. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь терминов по физике. — Уфа, 1984. — 128 с.

Қазақ тілінің түсіндірме сөздігі. — Т. 1—10. — Алматы, 1974. — 1986.

Камалов А. А., Ураксин З. Г., Хисматов Ф. Г., Шакуров Р. З. Топонимический словарь Башкортостана. — 2-е изд., доп. — Уфа, 2002. — 256 с.

Камалов А. Ә., Камалова Ф. Ү. Атайсал. — Өфө, 2001. — 544 б.

Каракалпакско-русский словарь / Н. А. Баскаков и др. — М., 1958. — 892 с.

Каримова Г. Р. Русско-башкирский словарь. — М., 1954. — 600 с.

Катаринский В. В. Башкирско-русский словарь. — Оренбург, 1899. — 237 с.

Кильдибекова Т. А., Гафарова Г. В., Миниярова И. М. Русско-башкирский функционально-когнитивный словарь (сфера *двигаться*). — Уфа, 2002. — 231 с.

Кильдибекова Т. А., Гафарова Г. В., Яныбаева Г. Я., Миниярова И. М., Усманова М. Г. Русско-башкирский учебный функционально-ситуативный словарь. — Уфа, 2003. — 184 с.

Краткий русско-башкирский словарь. — Оренбург, 1893. — 92 с.

Краткий русско-башкирский терминологический словарь по естествознанию / А. М. Багаутдинов и др. — Уфа, 2009. — 74 с.

Кувандыков Ф. Г. Русско-башкирский словарь пчеловодческих терминов. — Уфа, 2008. — 134 с.

Кувандыков Ф. Г., Шагимухаметов Р. Б. Русско-башкирский словарь пчеловодческих терминов. — Уфа, 1999. — 77 с.

Кунафина Г. К., Ишкина Т. Д. Русско-башкирский словарь общественно-политических терминов. — Уфа, 2001. — 256 с.

Кусимова Т. Х. Башҡорт исемдәре. — Өфө, 1976. — 104 б.; Өфө, 1982. — 136 б.

Кусимова Т. Х. Исемдәр донъяһында: Башҡорт исемдәре һүҙлеге, башҡорт һәм рус телдәрендә. — Өфө, 1991. — 192 б.

Кусимова Т. Х., Биккулова С. А. Башкирские имена. — Уфа, 2010. — 232 с.

Кусимова Т. Х., Бикҡолова С. Ә. Башҡорт исемдәре. — Өфө, 2000. — 176 б.

Кусәйев А. Н. Русса-башҡортса техника терминдары һүҙлеге. — Өфө, 2003. — 384 б.; Өфө, 2007. — 384 б.

Кәримова Р. Н. Башҡортса-урыҫса, урыҫса-башҡортса халыҡ медицинаһы терминдары һүҙлеге. — Өфө, 2005. — 120 б.

Маматов А. Ф. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь названий позвоночных животных Башкортостана. — Уфа, 1998. — 32 с.

Миңлебаев Р. Г., Хәйретдинов Н. С., Миңлебаев Ф. Р. Русса-башҡортса-татарса ботаника терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1997. — 249 б.

Мифологический словарь / Е. М. Мелетинский и др. — М., 1991. — 736 с.

Молчанова О. Т. Топонимический словарь Горного Алтая. — Горно-Алтайск, 1979. — 400 с.

Мөхәмәтдинов М. М. Русса-башҡортса, башҡортса-русса юридик терминдар һүҙлеге. — Өфө, 1956. — 68 б.

Мөхәмәтдинов М. М., Әбсәләмов З. З. Русса-башҡортса, башҡортса-русса юридик терминдар һүҙлеге. — Өфө, 1994. — 168 б.

Мурзаев Э. М. Словарь народных географических терминов. — М., 1984. — 654 с.

Мурзакаев Ф. С. Русско-башкирский словарь сельскохозяйственных терминов. — 2-е изд., доп. — Уфа. 2001. — 496 с.

Мухаметдинов М. М., Абсалямов З. З. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь юридических терминов. — Уфа, 1980. — 64 с.

Мырҙаҡаев Ф. С. Русса-башҡортса ауыл хужалығы терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1987. — 155 б.

Мюллер В. К. Англо-русский словарь. — 24-е изд. — М., 1995. — 960 с.

Надршина Ф. А. Русско-башкирский словарь пословиц-эквивалентов. — Уфа, 2008. — 196 с.

Надршина Ф. А., Зубаирова Э. М. Башкирско-англо-русский словарь адекватных пословиц и поговорок. — Уфа, 2002. — 160 с.

Никонов В. А. Краткий топонимический словарь. — М., 1966. — 510 с.

Новый англо-русский словарь / В. К. Мюллер и др. — 5-е изд., стереотип. — М., 1998. — 880 с.

Норманская Ю. В., Дыбо А. В. Тезаурус. Лексика природного окружения в уральских языках. — М., 2010. — 363 с.

Пекарский Э. К. Словарь якутского языка. В 3-х т. — 3-е изд., испр. и доп. — СПб. 2008.

Пюрбеев Г. Ц. Толковый словарь традиционного быта калмыков. — Элиста, 1996. — 176 с.

Радлов В. В. Опыт словаря тюркских наречий. В 4-х томах. — СПб., 1899–1911.

Расторгуева В. С., Эдельман Д. И. Этимологический словарь иранских языков. Т. I. — М., 2000. — 327 с.; Т. II. — М., 2003. — 502 с.; Т. III. — М., 2007. — 493 с.

Риториканан ҡыҫҡаса һүҙлек // Псәнчин В. Ш. Риторика нигеҙҙәре. Урта мәктәптең 10—11 синыф уҡыусылары осон уҡыу ҡулланмаһы. — Өфө, 2001. — 188—195-се биттәр.

Русса-латинса-башҡортса медицина терминдары. 1-се киҫәк: Анатомия, физиология, гистология терминдары / М. Н. Мөхәмәтов һ. б. — Өфө, 1935. — 256 б.

Русско-башкирский словарь / К. З. Ахмеров и др. — М., 1964. — 986 с.

Русско-башкирский словарь / Н. К. Дмитриев и др. — М., 1948. — 960 с.

Русско-башкирский словарь водных объектов Республики Башкортостан / Ф. Г. Хисамитдинова и др. — Уфа, 2005. — 256 с.

Русско-башкирский словарь: В 2-х т. / З. Г. Ураксин и др. Т. 1 (А — О). — Уфа, 2005. — 808 с.; Т. 2 (П — Я). — Уфа, 2005. — 680 с.

Русско-башкирский словарь-справочник названий населённых пунктов Республики Башкортостан / Ф. Г. Хисамитдинова и др. — Уфа, 2000. — 162 с.

Русско-башкирский толковый юридический словарь / Г. З. Хасанов и др. — Уфа, 2003. — 708 с.

Русско-башкирский учебный функционально-ситуативный словарь / Т. А. Кильдибекова и др. — Уфа, 2010. — 212 с.

Русско-башкирский функционально-когнитивный словарь (сфера *говорить*) / Т. А. Кильдибекова и др. — Уфа, 2003. — 254 с.

Русско-башкирский функционально-когнитивный словарь (сфера *жить*) / З. Ф. Абубакирова. — Уфа, 2001. — 130 с.; 2-е изд., перераб. — Уфа, 2001. — 228 с.

Русско-башкирско-турецко-английский словарь / Т. Ю. Кайбышева и др. — Уфа, 2002. — 300 с.

Рәйемғужина З. М. Башҡортса-урыҫса-немецса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. — Өфө, 1995. — 96 б.

Самситова Л. Х. Реалии башкирской культуры: Словарь безэквивалентной лексики башкирского языка. — Уфа, 2006. — 216 с.

Севортян Э. В. Этимологический словарь тюркских языков. — Т. 1 (Общетюркские и межтюркские основы на гласные). — М., 1974. — 767 с.; Т. 2 (Общетюркские и межтюркские основы на букву «Б»). — М., 1978. — 349 с.; Т. 3 (Общетюркские и межтюркские основы на буквы «В», «Г» и «Д»). — М., 1980. — 395 с.; Т. 4 (Общетюркские и межтюркские основы на буквы «Ж», «Ӂ», «Й»). — М., 1989. — 292 с.

Сиразитдинов З. А., Шамсутдинова Г. Т. Частотный словарь башкирского языка. Т. 3. Публицистика. — Уфа, 2006. — 382 с.

Сиразитдинов З. Ә. Башҡорт теленең йышлыҡ һүҙлеге. Т. 1 (фәнни әҙәбиәт буйынса). — Өфө, 1997. — 330 б.; Т. 2 (проза буйынса). — Өфө, 2002. — 414 б.

Сиразитдинов З. Ә. Дауыт Юлтый әҫәрҙәренең йышлыҡ һүҙлеге. — Өфө, 1995. — 292 б.

Словарь иностранных слов. — 15-е изд., испр. — М., 1988. — 608 с.

Словарь русского языка: В 4-х т. / А. П. Евгеньева и др. — 2-е изд., испр. и доп. — М., 1981 — 1988.

Словарь современного русского литературного языка: В 17-и т. / В. И. Чернышёв и др. — М. — Л., 1948–1965.

Сөләймәнов В. Русса-башҡортса һәм башҡортса-русса астрономия терминдары. — Өфө, 1954. — 24 б.

Сөләймәнов В., Емасов Д., Ғәзизов Ф. һ. б. Физика терминдары. — Өфө, 1934. — 42 б. (лат. шр.)

Сөләймәнова Л. Р. Башҡорт теленең үлем йолаһы лексикаһы: башҡортса-русса һүҙлек. — Өфө, 2005. — 80 б.

Сулейманов В. С., Сиразитдинов З. А. Русско-башкирский словарь терминов по астрономии. — Уфа, 2008. — 160 с.

Сулейманова Р. А. Русско-башкирский словарь-справочник для работников предприятий бытового обслуживания. — Уфа, 2007. — 112 с.

Суфьянова Н. Ф., Ишмөхәмәтов З. К. Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. — Өфө, 2002. — 351 б.

Суфьянова Н. Ф. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь для работников культуры. — Уфа, 2009. — 176 с.

Суфьянова Н. Ф. Русско-башкирский словарь педагогических и психологических терминов. — Уфа, 2002. — 112 с.

Суфьянова Н. Ф. Русско-башкирский словарь-справочник. Для работников торговли и общественного питания. — Уфа, 2007. — 128 с.

Сәмситова Л. Х. Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары: Лингвокультурологик һүҙлек. — Өфө, 2010. — 164 б.

Татаринцев Б. И. Этимологический словарь тувинского языка: В 5-и т. — Новосибирск, 2000–2009.

Татар теленең аңлатмалы сүзлеге: 3 томда. / Л. Т. Махмутова һ. б. — Казан, 1977, 1979, 1981.

Татарско-русский словарь: В 2-х т. / Ш. Н. Асылгараев и др. Т. 1 (А — Л). — Казань, 2007. — 726 с.; Т. 2 (М — Я). — Казань, 2007. — 726 с.

Таһиров Н. Башҡорт лөғәте. — Өфө, 1926.

Терминологический словарь по математике / Х. Абдрашит. Ч. 1. — Уфа, 1932. — 26 с. (лат. шр.)

Төпәев С. Х. Башҡорт исемдәренең мәғәнәүи һүҙлеге. — Өфө, 2010. — 360 б.

Тумашева Д. Г. Словарь диалектов сибирских татар. — Казань, 1992. — 255 с.

Турецко-русский словарь / А. Н. Баскаков и др. — М., 1995. — 950 с.

Ўзбек тилининг изохли луғати = Толковый словарь узбекского языка: В 2-х т. — М., 1981.

Уйгурско-русский словарь / Э. Н. Наджип. — М., 1968. — 828 с.

Уразбаева З. Г. Словарь аффиксальных морфем башкирского языка. — Уфа, 2004. — 82 с.

Уразбаева З. Г. Этика буйынса ҡыҫҡаса русса-башҡортса һүҙлек. — Өфө, 2009. — 71 б.

Уразмәтов Н. Русса-башҡортса һәм башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1952. — 130 б.

Ураксин З. Г. Русско-башкирский фразеологический словарь. — М., 1989. — 404 с.

Ураксин З. Г., Сиразитдинов З. А. Русско-башкирский и башкирско-русский словарь архитектурно-строительных терминов. — Уфа, 2004. — 82 с.

Ураксин З. Г., Уразбаева З. Г., Суфьянова Н. Ф. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь по лесному делу. — Уфа, 2006. — 152 с.

Ураҡсин З. Г. Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. — Өфө, 1966. — 270 б.; Өфө, 1985. — 164 б.

Ураҡсин З. Г. Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. — Төҙәтелгән, өҫтәлгән 2-се баҫмаһы. — Өфө, 2000. — 208 б.

Ураҡсин З. Г. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. — Өфө, 1996. — 290 б.; 2-се баҫма, яңыртылған. — Өфө, 2006. — 342 б.

Ураҡсин З. Ғ., Надршина Ф. А., Йосопов Х. Ғ. Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек. — Өфө, 1973. — 167 б.

Усманова М. Г. Башкирско-русский словарь синонимов. — Уфа, 2010. — 174 с.

Усманова М. Ғ. Башҡорт ҡылымдарының башҡортса-урыҫса аңлатмалы идеографик һүҙлеге (телмәр ҡылымдары нигеҙендә). — Өфө, 2002. — 130 с.

Федотов М. Р. Этимологический словарь чувашского языка: В 2-х т. — Чебоксары, 1996.

Фразеологический словарь русского литературного языка: В 2-х т. / А. И. Фёдоров. — Новосибирск, 1995.

Фәтихов Р. Р. Һынлы сәнғәт буйынса русса-башҡортса терминдар һүҙлеге. — Өфө, 1997. — 56 б.

Хадыева Р. Н. Русско-башкирский и башкирско-русский словарь терминов по экологии. — Уфа, 2008. — 176 с.

Хажиева З. Р. Русско-башкирский функционально-когнитивный словарь (сфера *сельское хозяйство*). — Уфа, 2007. — 115 с.

Хайретдинов С. С. Русско-башкирско-латинский словарь ботанических терминов (Роды растений). — Уфа, 2002. — 59 с.

Хасанов М. А., Хасанов А. М. Англо-башкирско-русский словарь. — Уфа, 1997. — 312 с.

Химия терминдары. 1-се киҫәк. — Өфө, 1932. — 35 б. (лат. шр.)

Хисамитдинова Ф. Г. Башкирская мифология. Словарь-справочник. — Уфа, 2002. — 130 с.

Хисамитдинова Ф. Г. Ғеографические названия Башкортостана. Словарь. — Уфа, 1992. — 104 с.: 2-е изд., испр. и дополн. — Уфа, 1994. — 109 с.

Хисамитдинова Ф. Г. Географические названия Башкортостана: Материалы для историко-этимологического словаря. — 2-е изд., испр. и доп. — Уфа, 2006. — 128 с.

Хисамитдинова Ф. Г., Ишегулова А. М. Русско-башкирский словарь для работников библиотек, издательств и информационных служб. — Уфа, 2006. — 150 с.

Хисамитдинова Ф. Г. Мифологический словарь башкирского языка. — М., 2010. — 455 с.

Хисамитдинова Ф. Г., Сиразитдинов З. А. Русско-башкирский словарь-справочник названий населённых пунктов Республики Башкортостан. — Уфа, 2001. — 319 с.

Хисамитдинова Ф. Г., Сиразитдинов З. А., Суфьянова Н. Ф. Русско-башкирский словарь названий улиц городов Республики Башкортостан. — Уфа, 2008. — 310 с.

Хисамитдинова Ф. Г. Словарь башкирской мифологии. — Уфа, 2011. — 420 с.

Хисамитдинова Ф. Г., Султанова Р. И. Настольная книга работников загса, сельских, районных и городских администраций и учреждений ритуальных услуг: Краткий словарь. — Уфа, 2000. — 96 с.

Хисамитдинова Ф. Г., Султанова Р. И. Русско-башкирский словарь-справочник личных имён, отчеств и фамилий. — Уфа, 2000. — 86 с.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге / З. Ғ. Ураҡсин һ. б. — Өфө, 2004. — 528 б.

Хәкимов М. А. Русса-башҡортса һәм башҡортса-русса география терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1952. — 54 б.

Һаҙыева Р. Н. Башҡорт теленең этнолингвистика һүҙлеге. — Өфө, 2002. — 174 б.

Чураев Ш. Русса-башҡортса физика терминдары. — Өфө, 1949. — 32 б.

Чураев Ш. Физика терминдары. — Өфө, 1941. — 42 б.

Шакиров З., Хөсни У. Тел терминдары. — Өфө, 1935. — 32 б.

Экба З. Н. Башкирско-русский словарь слов арабского и персидского происхождения. — Уфа, 2004. — 208 с.

Әбдрәшит Х., Срумов М., Әсәдуллин һ. б. Математика терминдары. 1-се өлөш. Төҙәтелгән һәм өҫтәлгән 2-се баҫмаһы. — Өфө, 1934. — 29 б. (лат. шр.)

Әбсәләмов З. З. Русса-башҡортса, башҡортса-русса ижтимағи-политик терминдар һүҙлеге. — Өфө, 1984. — 160 б.

Әбсәләмов З. З., Хажин В. И. Башҡортса-русса грамматик-орфографик һүҙлек. — Өфө, 1993. — 136 б.

Әхмәр Ҡ. З. Башҡорт әҙәби теленең орфография һүҙлеге. Башланғыс һәм урта мәктәптәр өсөн. — Өфө, 1942. — 189 б.; ҡайтанан эшләнгән һәм өҫтәлгән 2-се баҫмаһы. — М., 1952. — 234 б.

Әхмәтйәнов К. Ә. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. — Өфө, 1965. — 260 б.

Әхмәтьянов Р. Г. Татар теленең кыскача тарихи-этимологик сүзлеге. — Казан, 2001. — 272 б.

Әхтәмов А. М., Әхтәмова М. С., Әхтәмов М. Х. Русса-башҡортса, башҡортса-русса математика терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1993. — 176 б.

Әхтәмов М. Х. Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге. — Өфө, 1973. — 147 б.; тулыландырылған 2-се баҫма. — Өфө, 1987. — 256 б.; тулыландырылған 3-сө баҫма. — Өфө, 2009. — 350 б.

Әхтәмов М. Х. Башҡорт теленең грамматика һүҙлеге. Һүҙ үҙгәреше: 20 мең һүҙ. — Өфө, 1994. — 216 б.

Әхтәмов М. Х. Башҡорт теленең кире һүҙлеге: 21 мең һүҙ. — Өфө, 1999. — 238 б.

Әхтәмов М. Х. Башҡорт теленең морфемалар (һүҙҙәрҙең мәғәнәләргә эйә булған өлөштәре) һүҙлеге: 10 мең самаһы һүҙ. — Өфө, 1992. — 272 б.

Әхтәмов М. Х. Башҡорт теленең омонимдар һүҙлеге. — Өфө, 1966. — 141 б.

Әхтәмов М. Х. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. — Өфө, 2008. — 776 б.

Әхтәмов М. Х. Омонимдар һүҙлеге: Уҡыусылар өсөн ҡулланма. — Өфө, 1986. — 152 б.

Әхтәмова М. С., Әхтәмов М. Х. Русса-башҡортса, башҡортса-русса математика терминдары һүҙлеге. — Өфө, 1982. — 120 б.

Юдахин К. К. Киргизско-русский словарь: В 2-х кн. Кн. 1 (А — К). — М., 1985. — 503 с.; Кн. 2 (Л — Я). — М.,1985. — 475 с.

Ягафарова Г. Н. Башкирско-русский словарь военной лексики. — Уфа, 2007. — 148 с., илл.

Türkçe sözlük. = Толковый словарь турецкого языка. — 10. baskı. — Ankara, 2005. — 2244 s.

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

1. Башҡорт халҡ ижады. 1-се том / Төҙөүсе редакторы. инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар биреүсе Ә. И. Харисов. — Өфө, 1954. — 304 б.

2. Башҡорт халҡ ижады. 2-се том / Төҙөүсе редакторы, инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар биреүсе Ә. И. Харисов. — Өфө, 1959. — 282 б.

3. Башҡорт халҡ ижады. 3-сө том. Совет осоро / Төҙөүсе редакторы, баш һүҙ яҙыусы һәм аңлатмалар биреүсе Кирәй Мәргән. — Өфө, 1955. — 310 б.

4. Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. 1-се китап / Төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе М. М. Сәғитов. — Өфө, 1972. — 242 б.

5. Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. 2-се китап / Төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе М. М. Сәғитов. — Өфө. 1973. — 370 б.

6. Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. 3-сө китап / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Н. Т. Зарипов. — Өфө, 1982. — 342 б.

7. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 1-се китап / Төҙөүселәре М. Х. Минһажетдинов менән Ә. И. Харисов, инеш мәҡәлә яҙыусы М. Х. Минһажетдинов, аңлатмалар биреүсе Л. Г. Бараг менән М. Х. Минһажетдинов. — Өфө, 1976. — 374 б.

8. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 2-се китап / Төҙөүселәре М. Х. Минһажетдинов менән Ә. И. Харисов, инеш мәҡәлә авторы М. Х. Минһажетдинов, аңлатмалар биреүсе Л. Г. Бараг менән М. Х. Минһажетдинов. — Өфө, 1976. — 374 б.

9. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 3-сө китап / Төҙөүселәре Н. Т. Зарипов менән М. Х. Минһажетдинов, инеш мәҡәлә авторы Н. Т. Зарипов. аңлатмалар биреүсе Л. Г. Бараг менән Н. Т. Зарипов. — Өфө, 1978. — 352 б.

10. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 4-се китап / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә авторы Ә. М. Сөләймәнов, аңлатмалар биреүсе Л. Г. Бараг менән Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө, 1981. — 398 б.

11. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 5-се китап. / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы Ә. М. Сөләймәнов, аңлатмалар биреүсе Л. Г. Бараг менән Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө, 1983. — 390 б.

12. Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. 1-се китап / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе С. Ә. Галин. — Өфө, 1974. — 388 б.

13. Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. 2-се китап / Төҙөүсе. инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар биреүсе С. Ә. Галин. — Өфө, 1977. — 294 б.

14. Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар һәм көйҙәр / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Р. С. Сөләймәнов. — Өфө, 1983. — 310 б.

15. Башҡорт халыҡ ижады. Бәйеттәр / Төҙөүселәре М. М. Сәғитов менән Н. Д. Шоңҡаров, инеш мәҡәлә яҙыусы Ғ. Б. Хөсәйенов менән М. М. Сәғитов, аңлатмалар биреүсе М. М. Сәғитов. – Өфө, 1978. – 398 б.

16. Башҡорт халыҡ ижады. Йомаҡтар / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ф. А. Нәҙершина. – Өфө, 1979. – 348 б.

17. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ф. А. Нәҙершина. – Өфө, 1980. – 470 б.

18. Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр һәм легендалар / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ф. А. Нәҙершина. – Өфө, 1980. – 414 б.

19. Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро. Бәйеттәр, йырҙар, таҡмаҡтар / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүселәре М. М. Сәғитов менән М. Ә. Мәмбәтов. – Өфө, 1981. – 392 б.

20. Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро. Әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады / Төҙөүселәре, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Н. Т. Зарипов менән Ә. М. Сөләймәнов. – Өфө, 1982. – 422 б.

21. Башҡорт халыҡ ижады. Көләмәстәр / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ә. М. Сөләймәнов. – Өфө, 1985. – 382 б.

22. Башҡорт халыҡ ижады. I том. Йола фольклоры / Төҙөүсе. баш һүҙ һәм аңлатмалар авторы Ә. М. Сөләймәнов һәм Р. Ә. Солтангәрәева. – Өфө, 1995. – 558 б.

23. Башҡорт халыҡ ижады. II том. Легенда һәм риүәйәттәр / Төҙөүсе, баш һүҙ һәм аңлатмалар авторы Ф. А. Нәҙершина. – Өфө, 1997. – 440 б.

24. Башҡорт халыҡ ижады. III том. Эпос / Төҙөүсе А. М. Сөләймәнов, инеш һүҙ яҙыусы М. М. Сәғитов, һүҙ ахыры Ә. М. Сөләймәнов менән Р. Ф. Рәжәпов, аңлатмалар М. М. Сәғитов менән Ә. М. Сөләймәнов. – Өфө, 1998. – 448 б.

25. Башҡорт халыҡ ижады. IV том. Эпос / Томға материалдар һайлап алыу, коммент. авторҙары М. М. Сәғитов, Б. С. Байымов; инеш мәҡәлә авторҙары М. М. Сәғитов, Б. С. Байымов, С. Ә. Галин. – Өфө, 1999. – 400 б.

26. Башҡорт халыҡ ижады. V том. Тарихи эпос / Төҙөүсе. инеш мәҡәлә. коммент., глоссарий авторы Н. Т. Зарипов. – Өфө, 2000. – 392 б.

27. Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос: ҡисса һәм дастандар / Төҙөүсе, коммент. һәм һүҙлек авторҙары Н. Т. Зарипов, Ә. М. Сөләймәнов, Ғ. Б. Хөсәйенов, З. Я. Шәрипова; инеш мәҡәлә яҙыусы Н. Т. Зарипов, һүҙ ахыры Ә. М. Сөләймәнов. – Өфө, 2002. – 552 б.

28. Башҡорт халыҡ ижады. VII том. Яҙма ҡисса һәм дастандар / Төҙөүселәре Ә. М. Сөләймәнов, Ғ. Б. Хөсәйенов, М. Х. Нәҙерғолов; инеш һүҙ яҙыусы Ә. М. Сөләймәнов; һүҙ ахыры Ә. М. Сөләймәнов, Ғ. Б. Хөсәйенов, М. Х. Нәҙерғолов, Ф. Сибәғәтов. – Өфө, 2004. – 624 б.

29. Башҡорт халыҡ ижады. VIII том. Эпос: иртәктәр һәм эпик ҡобайырҙар / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм коммент. авторы Ә. М. Сөләймәнов. – Өфө, 2006. – 492 б.

30. Башҡорт халыҡ ижады. IX том. Йомаҡтар / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм коммент. авторы Ф. А. Нәҙершина. – Өфө, 2007. – 416 б.

31. Башҡорт халыҡ ижады. X том. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм коммент. авторы Ф. А. Нәҙершина. – Өфө, 2006. – 543 б.

32. Башҡорт халыҡ ижады. XI том. Новеллистик әкиәттәр / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм коммент. авторы Ә. М. Сөләймәнов. – Өфө, 2008. – 566 б.

33. Башҡорт халыҡ ижады. XIII том. Хайуандар тураһында экиәттәр / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм коммент. авторы Г. Р. Хөсәйенова. – Өфө, 2009. – 200 б.

34. Башкирское народное творчество. Эпос / Сост. М.М. Сагитов, коммент. Н. Т. Зарипова, М. М. Сагитова, А. М. Сулейманова. – Уфа, 1987. – 542 с.

35. Башкирское народное творчество. Предания и легенды / Сост., автор вступ. ст. и коммент. Ф. А. Надршина. – Уфа, 1987. – 574 с.

36. Башкирское народное творчество. Богатырские сказки / Сост. Н. Т. Зарипов; вступ. ст., коммент. Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова. – Уфа, 1988. – 448 с.

37. Башкирское народное творчество. Волшебные сказки. Сказки о животных / Сост. Н. Т. Зарипов, вступ. ст., коммент. Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова. – Уфа, 1989. – 510 с.

38. Башкирское народное творчество. Бытовые сказки / Сост. А. М. Сулейманов, вступ. ст., коммент., указатели Л. Г. Барага и А. М. Сулейманова. – Уфа, 1990. – 494 с.

39. Башкирское народное творчество. Шуточные сказки и кулямасы / Сост. А. М. Сулейманов, вступ. ст., коммент. Л. Г. Барага и А. М. Сулейманова. – Уфа, 1992. – 462 с.

40. Башкирское народное творчество. Пословицы и поговорки / Сост., автор вступ. ст. и коммент. Ф. А. Надршина. – Уфа, 1993. – 464 с.

41. Башкирское народное творчество. Песни (дооктябрьский период). / Сост., автор вступ. ст. и коммент. С. А. Галин. – Уфа, 1995. – 400 с.

42. Башкирское народное творчество. Песни советского периода / Сост., авторы вступ. ст. и коммент. Б. С. Баимов, М. А. Мамбетов. – Уфа, 1996. – 400 с.

43. Башкирское народное творчество. Исторический эпос / Сост., автор вступ. ст. и коммент. Н. Т. Зарипов. – Уфа, 1997. – 396 с.

44. Башкирское народное творчество. Баиты / Сост. Б. С. Баимов, вступ. ст. Г. Б. Хусаинова, Б. С. Баимова, коммент. Б. С. Баимова. – Уфа, 2004. – 424 с.

45. Башкирское народное творчество. Обрядовый фольклор / Сост., авторы вступ. ст. и коммент. Р. А. Султангареева и А. М. Сулейманов. – Уфа, 2010. – 590 с.

Баимов Б. С. Башкирские народные такмаки. – Уфа, 2001. – 222 с.

Байымов Б. С. Атылған йондоҙ Амантай. – Өфө, 1998. – 176 б.

Башкирские богатырские сказки / Сост., авторы вступ. ст., подгот. текста, коммент. Л. М. Барага, Н. Т. Зарипова. – Уфа, 1981. – 336 с.: ил.

Башкирские богатырские сказки. – 2-е изд. / Сост., авторы вступ. ст., подгот. текста, коммент. Л. М. Барага, Н. Т. Зарипова. – Уфа, 1986. – 320 с.: ил.

Башкирские народные протяжные песни / Сост., автор предисл. и коммент. Л. К. Сальманова. – Уфа, 2007. – 276 с.

Башкирский народный эпос / Сост. А. С. Мирбадалева, М. М. Сагитов, А. И. Харисов, автор предисл. А. С. Мирбадалева; отв. ред. Н. В. Кидайш-Покровская. – М., 1977. – 518 с.

Башкирский фольклор. Исследования последних лет / Отв. ред. Л. Г. Бараг. Н. Т. Зарипов. – Уфа, 1986. – 136 с.

Башкирский фольклор: Исследования и материалы / Отв. ред. Ф. А. Надршина, А. М. Сулейманов. – Вып. 1. – Уфа, 1993. – 180 с.

Башкирский фольклор: Исследования и материалы / Отв. ред. А. М. Сулейманов, Ф. А. Надршина. – Вып. 2. – Уфа, 1995.– 205 с.

Башкирский фольклор: Исследования и материалы / Отв. ред. А. М. Сулейманов, Г. Р. Хусаинова. – Вып. 3. – Уфа, 1999.– 224 б.

Башкирский фольклор: Исследования и материалы. 85 лет записи башкирского эпоса «Урал-батыр» / Отв. ред. А. М. Сулейманов, Г. Р. Хусаинова. – Вып. 4. – Уфа, 2000. – 301 с.

Башкирский фольклор: Исследования и материалы / Отв. ред. Г. Р. Хусаинова. – Вып. 5. – Уфа, 2004.– 232 с.

Башҡорт халыҡ ҡобайыр-иртәктәре. Башкирские народные эпические сказания. Bashkir folk epic stories / Подготовка текстов, сост., вступ. ст., коммент., глоссарий, указатели Ф. А. Надршиной. – Уфа, 2010. – 280 с.

Буранғолов М. Ә. Сәсән аманаты / Төҙөүсе, баш һүҙ авторы, яуаплы мөхәррир Б. С. Байымов. – Өфө, 1995. – 352 б.

Галин С. А. Башкирский мифологический эпос. – Өфө, 1998. – 102 с.

Галин С. А. Башкирский народный эпос. – Уфа, 2004. – 320 с.

Галин С. Ә. Башҡорт фольклоры. – Өфө, 1975. – 236 б.

Галин С. Ә. Башҡорт фольклорының афористик жанрҙары. – Өфө, 1982. – 65 б.

Галин С. Ә. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. – Өфө, 2009. – 472 б.

Галин С. Ә. Башҡорт халҡының йыр поэзияһы. – Өфө, 1979. – 256 б.

Галин С. Ә. Заман һәм фольклор. – Өфө, 1972. – 112 б.

Галин С. Ә. Йылдар һәм йырҙар. – Өфө, 1967. – 158 б.

Галин С. Ә. Тарих һәм халыҡ поэзияһы. – Өфө, 1996. – 288 б.

Дәүләкән ынйылары / Төҙөүселәре А. М. Хәкимйәнова, Р. Ғ. Мөхәмәтғәлин. – Өфө, 2008. – 328 б.

Зарипов Н. Т. Исторические сказания / Подготовлено А. М. Сулеймановым. – Уфа, 2005. – 66 с.

Зарипов Н. Т. Башкирские богатырские сказки: Эстетика жанра / Отв. ред. Г. Р. Хусаинова, А. М. Сулейманов. – Уфа, 2008. – 240 с.

Иҙеүкәй менән Мораҙым: Тарихи ҡобайыр / Редактор, баҫмаға әҙерләүсе Н. Т. Зарипов. – Өфө, 1994. – 352 б.

Йәшәгән, ти, батырҙар...: Башҡорт халыҡ әкиәттәре / Баҫмаға әҙерләүсе, инеш һүҙ авторы Н. Т. Зарипов. – Өфө, 1990. – 543 б.; Өфө, 2005. – 411 б.

Кирәй Мәргән, Минһажетдинов М. Х. Башҡорт легендалары. – Өфө, 1969. – 186 б.

Кирәй Мәргән, Нәҙершина Ф. А. Башҡорт халыҡ йомаҡтары. – Өфө, 1968. – 255 б.

Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады: Юғары уҡыу мәктәптәренең филология факультеттары өсөн дәреслек. – Өфө, 1981. – 232 б.

Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре. – Өфө, 1960. – 263 б.

Кирәй Мәргән. Йыр дәфтәре. Фольклорист яҙмалары. – Өфө, 1964. – 172 б.

Кирәй Мәргән. Мәңгелек шишмә: фольклор жанрҙары үҫешенең ҡайһы бер мәсьәләләре. – Өфө, 1978. – 189 б.

Кирәй Мәргән. Халыҡ күңеленең көҙгөһө. Әҙәби тәнҡит мәсьәләләре. – Өфө, 1960. – 220 б.

Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. – Өфө, 1961. – 388 б.

Нагаева Л. И. Башкирские народные праздники, обряды и обычаи. – Уфа, 1999. – 160 с.

Надршина Ф. А. Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре. Башкирские народные песни, песни-предания. Bashkort folk songs, songs-legends. – Уфа, 1997. – 288 б.

Надршина Ф. А. Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары. Башкирские народные предания и легенды. Bashkort folk legends. – Уфа, 2001. – 468 с.

Надршина Ф. А. Салават Юлаев в башкирском фольклоре (исследования и материалы): В 2-х т. Т. 1: Предания и легенды. Т. 2: Эпос, песни и баиты. – Уфа, 2008. – 526 с.

Народный эпос «Кузы-Курпес и Маян-хылу» / Под ред. А. Н. Киреева, А. И. Харисова. – Уфа, 1964. – 123 с.

Нәҙершина Ф. А. Башҡорт халҡының көйҙәре, йырлы-бейеүле уйындар. – Өфө, 1996. – 78 б.

Нәҙершина Ф. А. Риүәйәт һәм легендаларҙа халыҡ тарихы. – Өфө, 2011. – 360 б.

Нәҙершина Ф. А. Рухи хазиналар. – Өфө, 1992. – 78 б.

Нәҙершина Ф. А. Халыҡ күңеленә сәйәхәт (башҡорт халыҡ ижадын йыйыу тарихынан). – Өфө, 2010. – 248 б.

Нәҙершина Ф. А. Халыҡ хәтере (башҡорт халыҡ риүәйәт, легендаларының тарихи ерлеге, жанр үҙенсәлектәре). – Өфө, 1986. – 188 б.; тулыландырылған 2-се баҫма. – Өфө, 2006. – 320 б.

Нәҙершина Ф. А. Халыҡ һүҙе. – Өфө, 1983. – 160 б.

Рухи мираҫ: Свердловск башҡорттарының фольклоры / Төҙ. Ф. А. Нәҙершина, Г. Р. Хөсәйенова, Г. В. Юлдыбаева, Ф. Ф. Ғайсина. – Өфө, 2008. – 260 б.

Солтангәрәева Р. Ә., Баймырҙина Г. Башҡорт халыҡ бейеүе. – Өфө, 2009. – 90 б.

Солтангәрәева Р. Ә. Мин – тәбиғәт балаһы. – Өфө, 2001. – 80 б.

Солтангәрәева Р. Ә., Сөләймәнов Ә. М. Башҡорт халыҡ йола уйындары. – Өфө, 1997. – 118 б.

Солтангәрәева Р. Ә. Хәтер көйө. – Өфө, 2003. – 90 б.

Сөләймәнов Ә. М. Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы. – Өфө, 1980. – 79 б.

Сөләймәнов Ә. М. Башҡорт халыҡ тормош-көнкүреш әкиәттәренең сюжет составы. – Өфө, 1988. – 64 б.

Сөләймәнов Ә. М. Йөк аты (Кирәй Мәргәндең ижад донъяһына бер байҡау). – Өфө, 1998. – 45 б.

Сөләймәнов Ә. М. Мөғжизә инештәре: Ижади портреттар. – Өфө, 2001. – 255 б.

Сөләймәнов Ә. М., Рәжәпов Р. Ф. Башҡорт халҡының архаик эпосы. – Өфө, 1999. – 124 б.

Сөләймәнов Ә. М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре: жанр үҙенсәлектәре. – Өфө, 1990. – 268 б.

Сөләймәнов Ә. М. Халыҡ ижадынан һут алып: Ж. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романында фольклор башланғыстары. Препринт. – Өфө, 2000. – 48 б.

Сөләймәнов Ә. М. Халыҡҡа – халыҡса (Һәҙиә Дәүләтшина сәсмәүеренең фольклорлығы). – Өфө, 2000. – 43 б.

Сөләймәнов Ә. М. Халыҡтың юмористик сәсмәүере: жанр төрлөлөгө һәм поэтик үҙенсәлектәре. – Өфө, 1998. – 158 б.

Сөләймәнов Ә. М., Хөсәйенов Ғ. Б. Яҙма дастандар. – Өфө, 2006. – 164 б.

Сөләймәнов Ә. М. Әкиәттә хәҡиҡәт. Башҡорт халыҡ көнкүреш әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрлөлөгө, тормош ерлеге. – Өфө, 1997. – 400 б.

Сулейманов А. М., Бараг Л. Г. Повествовательные жанры башкирского фольклора. – Уфа, 2001. – 248 с.

Сулейманов А. М. Башкирская народная новелла: Исследования с приложением 105 новеллистических сказок. – Уфа, 2005. – 347 с.

Сулейманов А. М. Башкирские народные бытовые сказки: Сюжетный репертуар и поэтика / Отв. ред. Л. Г. Бараг. – М., 1994. – 224 с.

Сулейманов Р. С. Башкирская народная песня (проблемы жанровой системы). – Уфа. 2005. – 73 с.

Сулейманов Р. С. Башкирские народные мелодии. – Уфа, 1995. – 104 с.

Сулейманов Р. С. Башкирское народное музыкальное искусство: В 3-х т. Т. 1. Эпические песни и напевы. – Уфа, 2001. – 240 с. с нотами.

Сулейманов Р. С. Башкирское народное музыкальное искусство: В 3-х т. Т. 2: Лирические песни и напевы в 2-х частях. Ч. 1. – Уфа. 2001. – 196 с.

Сулейманов Р. С. Башкирское народное музыкальное искусство: В 3-х т. Т. 2: Лирические песни и напевы в 2-х частях. Ч. 2. – Уфа, 2002. – 236 с. с нотами.

Сулейманов Р. С. Башкирское народное музыкальное искусство: В 3-х т. Т. 3: Лирико-драматические песни и напевы. – Уфа, 2002. – 266 с. с нотами.

Сулейманов Р. С. Башкирское народное музыкальное искусство. Думбыра-саз. – Уфа, 2003. – 100 с.

Сулейманов Р. С. Башкирское народное музыкальное искусство: песни северо-восточных башкир. – Уфа, 2005. – 83 с. с нотами.

Сулейманов Р. С. Жемчужины народного творчества Урала. – Уфа, 1995. – 248 с.

Сулейманов Р. С. Песенное творчество иргизо-камеликских башкир. – Уфа, 2002. – 75 с.

Сулейманов Р. С. Песни и наигрыши южноуральских башкир. – Уфа, 2009. – 240 с.

Сулейманов Р. С. Песни юго-западных башкир (локальные особенности жанровой системы). – Уфа, 2005. – 100 с.

Сулейманов Р. С. Старинная башкирская скрипка кыл-кубыз. – Уфа, 2001. – 156 с.

Султангареева Р. А. Башкирская юрта / Сост. Р. М. Юсупов, Р. А. Султангареева, С. Н. Шитова. – Уфа, 2008. – 239 с.

Султангареева Р. А. Башкирская юрта: Сборник научных трудов / Сост., автор предисл., коммент. и послесловия Р. А. Султангареева. – Уфа, 2004. – 239 с.

Султангареева Р. А. Башкирский народный курэш. – Уфа, 2009. – 142 с.

Султангареева Р. А. Башкирский свадебно-обрядовый фольклор. – Уфа, 1994. – 200 с.

Султангареева Р. А. Башкирское силовое состязание: Культура и ритуал. – Уфа, 2005. – 160 с.

Султангареева Р. А. Жизнь человека в обряде. – Уфа, 2006. – 343 с.

Султангареева Р. А. Семейно-бытовой обрядовый фольклор башкирского народа. — Уфа, 1998. — 342 с.

Сәғитов М. М. Башҡорт халыҡ эпосының мифологик һәм тарихи нигеҙҙәре / Төҙөүсеһе Ә. М. Сөләймәнов, Т. Сәғитова. — Өфө, 2009. — 280 б.

Сәғитов М. М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. — Өфө, 1987. — 224 б.

Сәғитов М. М. Ғүмерлеккә ҡалған яра: хикәйәләр, юлъяҙмалар, фәнни-популяр мәҡәләләр. — Өфө, 1993. — 128 б.

«Урал-батыр»: Башкирский народный эпос / Автор проекта, сост., ред., вступ. ст., коммент. Ф. А. Надршина (на башк., рус., англ. яз.). — Уфа, 2003. — 465 с.

Халҡым йыры — Песни моего народа — My people`s songs / Науч. ред., сост., автор вступ. ст. Ф. А. Надршина; муз. часть подготовлена Ф. А. Кильдияровой и Ф. А. Фаизовой. — Уфа, 1995. — 184 б.

Харисов А. И. Литературное наследие башкирского народа. — Уфа, 2007. — 342 с.

Харисов Ә. И. Башҡорт поэзияһы антологияһы. — Өфө, 1971.

Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мирасы. — Өфө, 1965. — 416 б.

Харисов Ә. И. Мирас: Башҡорт фольклоры буйынса күҙәтеүҙәр, тикшеренеүҙәр һәм ауыҙ-тел ижады өлгөләре. — Өфө, 2004. — 388 б.

Харисов Ә. И. Рухи тамырҙар. — Өфө, 1984. — 191 б.

Харисов Ә. И. Үткән ғүмер — ҡалған хәтер: Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. — Өфө, 1997. — 191 б.

Харисов Ә. И. Әҙәби күренештәр. — Өфө, 1963. — 311 б.

Хөсәйенова Г. Р., Сиражитдинова Н. М. Фольклор йыйынтығы. — Өфө –Учалы, 2009. — 180 б.

Хусаинова Г. Р. Башкирские народные игры. — Уфа, 2006. — 72 с.

Хусаинова Г. Р. Башкирское народное творчество. Хрестоматия. Учебное пособие для студентов вузов факультета башкирской филологии. — Уфа, 2005. — 280 с.

Хусаинова Г. Р. Поэтика башкирской народной волшебной сказки. — М., 2000. — 245 с.

Һамар. Һарытау өлкәһе башҡорттарынын рухи хазинаһы / Төҙ. Р. Ә. Солтангәрәева, Г. В. Юлдыбаева, Ф. Ф. Ғайсина, Г. Р. Батыршина, Л. Ҡ. Сәлмәнова. — Өфө, 2008. — 284 б.

Экспедиционные материалы 2003 года: Зилаирский район / Сост. Г. Р. Хусаинова, Р. А. Султангареева, Л. К. Сальманова, Г. М. Ахметшина, Г. В. Юлдыбаева, Ф. Ф. Гайсина. — Уфа, 2006. — 235 с.

Экспедиционные материалы 2004 года: Альшеевский район / Сост. Г. Р. Хусаинова, Р. А. Султангареева, Г. В. Юлдыбаева, Ф. Ф. Гайсина. — Уфа, 2006. — 235 с.

Экспедиционные материалы 2005 года: Янаульский район / Сост. Г. Р. Хусаинова, Р. А. Султангареева, Г. В. Юлдыбаева, А. М. Хакимьянова, Л. К. Сальманова, Ф. Ф. Гайсина. — Уфа, 2009. — 264 с.

Экспедиционные материалы 2006 года: Бураевский район / Сост. Г. Р. Хусаинова, Р. А. Султангареева, Г. В. Юлдыбаева, Г. М. Ахметшина, Ф. Ф. Гайсина, А. С. Сальманов. — Уфа, 2008. — 240 с.

Экспедиционные материалы 2008 года: Балтачевский район / Сост. Г. Р. Хусаинова, Г. В. Юлдыбаева, А. М. Хакимьянова, Ф. Ф. Гайсина, Р. Р. Зинурова. — Уфа, 2009. — 200 с.

Экспедиционные материалы 2009 года: Бурзянский район / Сост. Г. Р. Хусаинова, Г. В. Юлдыбаева, А. М. Хакимьянова. — Уфа, 2011 — 184 с.

Юлдыбаева Г. В. Төньяҡ Башҡортостан башҡорттарының хәҙерге халыҡ ижады. — Өфө, 2008. — 160 б.

Юлдыбаева Г. В. «Урал батыр» эпосының сюжеты һәм стиле. — Өфө, 2007. — 136 б.

ӘҪӘРҘӘРЕНӘН МИҪАЛДАР АЛЫНҒАН ЯҘЫУСЫЛАР, ШАҒИРҘАР, ЖУРНАЛИСТАР, ҒАЛИМДАР

ПИСАТЕЛИ, ПОЭТЫ, ЖУРНАЛИСТЫ, УЧЁНЫЕ, ИЗ ТРУДОВ КОТОРЫХ ВЗЯТ ИЛЛЮСТРАТИВНЫЙ МАТЕРИАЛ

Абдуллин А.	Абдуллин Азат Хаммат улы	Абдуллин Азат Хаматович
Абдуллин И.	Абдуллин Ибраһим Әхмәт улы	Абдуллин Ибрагим Ахметович
Агиш С.	Агишев Сәғит Ишмөхәмәт улы (Сәғит Агиш)	Агишев Сагит Ишмухаметович (Сагит Агиш)
Аҡмулла М.	Камалетдинов Мифтахетдин Камалетдин улы (Мифтахетдин Аҡмулла, Аҡмулла)	Камалетдинов Мифтахетдин Камалетдинович (Мифтахетдин Акмулла, Акмулла)
Аллаяров Ғ.	Аллаяров Ғәзим Закир улы	Аллаяров Газим Закирович
Амантай Ғ.	Амантаев Ғабдулла Сәхипгәрәй улы (Ғабдулла Амантай)	Габдулла Сахипгареевич (Габдулла Амантай)
Арслан Т.	Арсланов Тимер Гәрәй улы (Тимер Арслан)	Арсланов Тимер Гареевич (Тимер Арслан)
Асанбаев Н.	Асанбаев Николай Васильевич (Нәжиб Асанбаев)	Асанбаев Николай Васильевич (Нажиб Асанбаев)
Атнабаев Ә.	Атнабаев Әнғәм Ҡасим улы	Атнабаев Ангам Касимович
Бабич Ш.	Бабичев Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы	Бабичев Шайхзада Мухаметзакирович
Байбурин Ғ.	Байбурин Ғабдулла Ғиндулла улы	Байбурин Габдулла Гиндуллович
Байрамов Ә.	Байрамов Әхнәф Арыҫлан улы	Байрамов Ахнаф Арсланович
Байымов Р.	Байымов Роберт Нурмөхәмәт улы	Баимов Роберт Нурмухаметович

Басыров М.	Басыров Миәссәр Мәсәғүт улы	Басыров Миассар Масагутович
Б. Дим	Баянов Дим Фатхлислам улы (Баязит Дим)	Баянов Дим Фатхлисламович (Баязит Дим)
Биишева З.	Биишева Зәйнәб Абдулла ҡыҙы	Биишева Зайнаб Абдулловна
Бикбаев Р.	Бикбаев Рауил Төхфәт улы	Бикбаев Равиль Тухватович
Бикбай Б.	Бикбаев Баязит Гаяз улы (Баязит Бикбай)	Бикбаев Баязит Гаязович (Баязит Бикбай)
Бикҡол Ш.	Бикҡолов Шәриф Сәғәҙәтулла улы (Шәриф Бикҡол)	Биккулов Шариф Сагадатуллович (Шариф Биккул)
Бикҡолов Ш.	Бикҡолов Шакир Сәлим улы	Биккулов Шакир Салимович
Бикчәнтәев Ә.	Бикчәнтәев Әнүәр Һаҙый улы	Бикчентаев Анвер Гадеевич
Бураҡаев Д.	Бураҡаев Диҡҡәт Насретдин улы	Буракаев Диккат Насретдинович
Бураҡаева М.	Бураҡаева Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы	Буракаева Марьям Сабирьяновна
Буранғолов М.	Буранғолов Мөхәмәтша Абдрахман улы	Бурангулов Мухаметша Абдрахманович
Бүләков Д.	Бүләков Динис Мөҙәрис улы	Буляков Динис Мударисович
Бәҙретдинов С.	Бәҙретдинов Сәлимйән Миңлеәхмәт улы	Бадретдинов Салимьян Минниахметович
Вахитов Ә.	Вахитов Әнүр Хисмәт улы	Вахитов Анур Хисматович
Вәли Ә.	Вәлиев Әкрәм Мөхәррәм улы (Әкрәм Вәли)	Валиев Акрам Мухаррамович (Акрам Вали)
Вәлид Б.	Вәлидов Батыр Хажиәхмәт улы (Батыр Вәлид)	Валидов Батыр Хажиахметович (Батыр Валид)
Вәлиди Ә.-З.	Вәлидов Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы (Әхмәтзәки Вәлиди Туған)	Валидов Ахметзаки Ахметшахович (Заки Валиди Тоган)
Вәлиев Ғ.	Вәлиев Ғәйфулла Хәмит улы	Валиев Гайфулла Хамитович
Вәлиев Яр.	Вәлиев Ярулла Носратулла улы	Валиев Ярулла Нусратуллович
Галин С.	Галин Салауат Әхмәҙиә улы	Галин Салават Ахмадиевич
Гәрәев Ә.	Гәрәев Әмир Сәлимгәрәй улы	Гареев Амир Салимгареевич
Гәрәй Й.	Гәрәев Йософ Ибраһим улы (Йософ Гәрәй)	Гареев Юсуф Ибрагимович (Юсуф Гарей)

Ғабдрахманов Р.	Ғабдрахманов Рәис Бикмөхәмәт улы	Габрахманов Раис Бикмухаметович
Ғарипов Р.	Ғарипов Рәми Йәғәфәр улы	Гарипов Рами Ягафарович
Ғарипова Т.	Ғарипова Таңсулпан Хизбулла ҡыҙы	Гарипова Тансулпан Хизбулловна
Ғафури М.	Ғафуров Ғәбделмәжит Нурғәни улы (Мәжит Ғафури)	Гафуров Габдельмажит Нурганиевич (Мажит Гафури)
Ғиззәтуллин И.	Ғиззәтуллин Ибраһим Ғәзизулла улы	Гиззатуллин Ибрагим Газизуллович
Ғиззәтуллина Г.	Ғайсарова-Ғиззәтуллина Гөлсирә Мирза ҡыҙы	Гайсарова-Гизатуллина Гульсира Мирзаевна
Ғиләжев Х.	Ғиләжев Лоҡман-Хәким Ғабдрахман улы (Хәким Ғиләжев)	Гиляжев Лукман-Хаким Габдрахманович (Хаким Гиляжев)
Ғиниәтуллин Т.	Ғиниәтуллин Талха Йомабай улы	Гиниятуллин Талха Юмабаевич (Анатолий Генатулин)
Ғирфанов А.	Ғирфанов Агиш Шәйех улы	Гирфанов Агиш Шаихович
Ғирфанов Т.	Ғирфанов Түләк Хәбибрахман улы	Гирфанов Туляк Хабибрахманович
Ғөбәйҙуллин М.	Ғөбәйҙуллин Мөхәмәтйән	Губайдуллин Мухаметьян
Ғүмәр Ғ.	Ғүмәров Ғариф Мортаза улы (Ғариф Ғүмәр)	Гумеров Гариф Муртазович (Гариф Гумер)
Ғүмәров В.	Ғүмәров Вәрис Зыяҡай улы	Гумеров Варис Зиякаевич
Ғүмәров Ф.	Ғүмәров Фәйзи Муллағәли улы	Гумеров Файзи Муллагалиевич
Ғәбитов Х.	Ғәбитов Хәбибулла Әбделҡадир улы	Габитов Хабибулла Абделькадирович
Ғәйетбаев Н.	Ғәйетбаев Наил Әсхәт улы	Гаитбаев Наиль Асхатович
Ғәйнуллин Ғ.	Ғәйнуллин Ғабдулла Рәхмәтулла улы	Гайнуллин Габдулла Рахматуллович
Ғәли М.	Ғәлиев Ғабдрахман Ғәли улы (Муса Ғәли)	Галиев Габдрахман Галеевич (Муса Гали)
Ғәниева Т.	Ғәниева Тимербикә Әхмәтшәриф ҡыҙы (Тамара Ғәниева)	Ганиева Тимербика Ахматшарифовна (Тамара Ганиева)
Даян Ҡ.	Даянов Ҡадир Хәким улы (Ҡадир Даян)	Даянов Кадыр Хакимович (Кадыр Даян)
Дәүләтов Ғ.	Дәүләтов Ғәлим Абдулла улы	Давлетов Галим Абдуллович

Дәүләтшин Ғ.	Дәүләтшин Ғөбәйҙулла Әхмәткирәй улы (Ғөбәй Дәүләтшин)	Давлетшин Губайдулла Ахматкиреевич (Губай Давлетшин)
Дәүләтшина Һ.	Дәүләтшина Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы	Давлетшина Хадия Лутфулловна
Зарипов Н.	Зарипов Нур Талип улы	Зарипов Нур Талипович
Зарипов Х.	Зарипов Хәкимйән Сәрьяр улы	Зарипов Хакимьян Сарьярович
Ибраһимов Ғ.	Ибраһимов Ғәли Ғизетдин улы	Ибрагимов Гали Гизетдинович
Ибраһимов Х.	Ибраһимов Хәбибулла Кәлимулла улы	Ибрагимов Хабибулла Калимуллович
Ибәтуллин Ҡ.	Ибәтуллин Ҡаҙыҡ Булат улы	Ибатуллин Казык Булатович
Игебаев А.	Игебаев Абдулхаҡ Хажмөхәммәт улы	Игебаев Абдулхак Хажмухаметович
Игеҙйәнова Н.	Игеҙйәнова Нажиә Заһир ҡыҙы	Игизьянова Нажия Загировна
Иҙелбаев М.	Иҙелбаев Мирас Хәмзә улы	Идельбаев Мирас Хамзович
Иҙелбай Н.	Иҙелбаев Нәжиб Сафа улы (Нәжиб Иҙелбай)	Идельбаев Нажиб Сафаевич (Нажиб Идельбай)
Илбаев М.	Илбаев Мөхәммәт Исмәғил улы	Ильбаев Мухамет Исмагилович
Ильясов С.	Ильясов Спартак Мөжәүир улы	Ильясов Спартак Мужавирович
Исламов Д.	Исламов Динис Фәтхи улы	Исламов Динис Фатхиевич
Исхаҡов В.	Исхаҡов Вәзих Мөхәмәтша улы	Исхаков Вазих Мухаметшинович
Иҫәнғолов Ф.	Иҫәнғолов Фәрит Әхмәҙулла улы	Исангулов Фарит Ахмадуллович
Ихсан Ә.	Ихсанов Әхтәм Сөләймән улы (Әхтәм Ихсан)	Ихсанов Ахтям Сулейманович (Ахтям Ихсан)
Ишбирҙин Э.	Ишбирҙин Эрнст Фәйзрахман улы	Ишбердин Эрнст Файзрахманович
Ишемғол Б.	Ғабдрахманов Ғабдрахман Закир улы (Булат Ишемғол)	Габдрахманов Габдрахман Закирович (Булат Ишемгул)
Йосопов Т.	Йосопов Тимер Йосоп улы	Юсупов Тимер Юсупович
Йәнбәк Р.	Йәнбәков Рәмил Әхмәт улы (Рәмил Йәнбәк)	Янбеков Рамиль Ахметович (Рамиль Янбек)
Йәнәби Т.	Кәлимуллин Төхфәтулла Кәлимулла улы (Төхфәт Йәнәби)	Калимуллин Тухватулла Калимуллович (Тухват Янаби)

Камал Р.	Камалов	Камалов
	Ринат Әлтәф улы	Ринат Альтафович
	(Ринат Камал)	(Ринат Камал)
Карнай А.	Зөлҡәрнәев	Зулькарнаев
	Имамғәли Мөхәммәтдин улы	Имамгали Мухаммадинович
	(Али Карнай)	(Али Карнай)
Кейекбаев Ж.	Кейекбаев	Киекбаев
	Жәлил Ғиниәт улы	Джалиль Гиниятович
Кейеков Ғ.	Кейеков	Киеков
	Ғарифулла Мөхәммәтғәли улы	Гарифулла Мухамматгалиевич
Килмөхәмәтов Т.	Килмөхәмәтов	Кильмухаметов
	Тимерғәле Абдулғәлим улы	Тимергале Абдулгалимович
Кинйәбулатов И.	Кинйәбулатов	Киньябулатов
	Ирек Лотфулла улы	Ирек Лотфуллович
Кинйәбулатова К.	Кинйәбулатова	Киньябулатова
	Кәтибә Кәрим ҡыҙы	Катиба Каримовна
Көҫәпҡол И.	Көҫәпҡолов	Кусяпкулов
	Исмәғил	Исмагил
	(Исмәғил Көҫәпҡол)	(Исмагил Кусяпкул)
Кулибай С.	Кулибаев	Кулибаев
	Сәләх Ғәбит улы	Салях Габитович
	(Сәләх Кулибай)	(Салях Кулибай)
Күзбәков Ф.	Күзбәков	Кузбеков
	Фәнил Тимерйән улы	Фаниль Тимерьянович
Кәрим М.	Кәримов	Каримов
	Мостафа Сафа улы	Мустафа Сафич
	(Мостай Кәрим)	(Мустай Карим)
Кәрим Х.	Кәримов	Каримов
	Хәниф Кәрим улы	Ханиф Каримович
	(Хәниф Кәрим)	(Ханиф Карим)
Кәримов М.	Кәримов	Каримов
	Марат Нәби улы	Марат Набиевич
Ҡарамышева Т.	Ҡарамышева	Карамышева
	Таңһылыу Фаяз ҡыҙы	Тансылу Фаязовна
Ҡол-Дәүләт Р.	Ҡолдәүләтов	Кулдавлетов
	Рәмил Хөснөтдин улы	Рамиль Хуснутдинович
	(Рәмил Ҡол-Дәүләт)	(Рамиль Кул-Давлет)
Ҡолмой Я.	Ҡолмөхәмәтов	Кульмухаметов
	Яҡуп Хәйрулла улы	Якуп Хайруллович
	(Яҡуп Ҡолмой)	(Якуп Кулмый)
Ҡотдосов Н.	Ҡотдосов	Кутдусов
	Наил Яҡуп улы	Наиль Якупович
Ҡотлоғәлләмов М.	Ҡотлоғәлләмов	Кутлугаллямов
	Марсель Әҡсән улы	Марсель Аксанович
Ҡотоева Г.	Ҡотоева	Кутуева
	Гөлназ Мират ҡыҙы	Гульназ Миратовна
Ҡудаш С.	Ҡудашев	Кудашев
	Сәйфетдин Фәттәхетдин улы	Сайфетдин Фаттахетдинович
	(Сәйфи Ҡудаш)	(Сайфи Кудаш)

Ҡунаҡбай Х.	Ҡунаҡбаев Хөсәйен Әхмәтйән улы (Хөсәйен Ҡунаҡбай)	Кунакбаев Хусаин Ахметьянович (Хусаин Кунакбай)
Ҡунафин Ғ.	Ҡунафин Ғиниәт Сафиулла улы	Кунафин Мунир Сахиуллович
Ҡәрип Н.	Ҡәрипов Низам Ҡәрип улы (Низам Ҡәрип)	Карипов Низам Карипович (Низам Карип)
Лоҡманов Ғ.	Лоҡманов Ғаян Лоҡман улы	Лукманов Гаян Лукманович
Мағазов А.	Мағазов Азат Шәйехйән улы	Магазов Азат Шаихьянович
Минһажетдинов М.	Минһажетдинов Марат Хәләф улы	Мингазетдинов Марат Халяфович
Мирзаһитов Ә.	Мирзаһитов Әсғәт Мәсғүт улы	Мирзагитов Асгат Масгутович
Мифтахов Р.	Мифтахов Риф Фәйзрахман улы	Мифтахов Риф Файзрахманович
Морат Т.	Моратов Төхфәт Фәттәхетдин улы (Төхфәт Морат)	Муратов Тухват Фаттахетдинович (Тухват Мурат)
Мостафин Й.	Мостафин Йәмил Мостафа улы	Мустафин Ямиль Мустафиевич
Мохтар Х.	Мохтаров Хәсән Баһауетдин улы (Хәсән Мохтар)	Мухтаров Хасан Багаутдинович (Хасан Мухтар)
Мусин Н.	Мусин Ноғман Сөләймән улы	Мусин Нугуман Сулейманович
Мәргән К.	Кирәев Әхнәф Нурый улы (Кирәй Мәргән)	Киреев Ахнаф Нуреевич (Кирей Мэргэн)
Мәсғүт Ғ.	Ғәлиуллин Мәсғүт	Галиуллин Масгут (Г.Масгут)
Назар Х.	Назаров Хәсән Мөҙәрис улы (Хәсән Назар)	Назаров Хасан Мударисович (Хасан Назар)
Назаров Р.	Назаров Рәшит Сәйетбаттал улы	Назаров Рашит Саитбатталович
Насыри И.	Насыров Имаметдин Низаметдин улы (Имай Насыри)	Насыров Имаметдин Низаметдинович (Имай Насыри)
Насыров Ш.	Насыров Шакир Ғиниәт улы	Насыров Шакир Гиниятович
Ниғмәти Р.	Ниғмәтуллин Рәшит Ниғмәтулла улы (Рәшит Ниғмәти)	Нигматуллин Рашит Нигматуллович (Рашит Нигмати)
Ниғмәтуллин И.	Ниғмәтуллин Имел Ислам улы	Нигматуллин Имиль Исламович
Ниғмәтуллин Р.	Ниғмәтуллин Рауил Хөрмәт улы	Нигматуллин Равиль Хурматович

Низамов Р.	Низамов Рәис Ғилметдин улы	Низамов Раис Гилметдинович
Ноғоманов Б.	Ноғоманов Барый Миңлеғәлим улы	Нугуманов Барый Миннигалимович
Ноғоманов И.	Ноғоманов Иҙрис Мөҙәрис улы	Нугуманов Идрис Мударисович
Нәҙерғолов М.	Нәҙерғолов Миңлеғәле Хөсәйен улы	Надергулов Минлигали Хусаинович
Нәҙершина Ф.	Нәҙершина Фәнүзә Айытбай ҡыҙы	Надршина Фануза Аетбаевна
Нәжми Н.	Нәжметдинов Хәбибназар Нәжметдин улы (Назар Нәжми)	Назмутдинов Хабибназар Назмутдинович (Назар Наджми)
Өмөтбаев М.	Өмөтбаев Мөхәмәтсәлим Ишмөхәмәт улы	Уметбаев Мухаметсалим Ишмухаметович
Өмөтбаев Р.	Өмөтбаев Рамазан Ғимран улы	Уметбаев Рамазан Гимранович
Поварисов С.	Поварисов Суфиян Шәмсетдин улы	Поварисов Суфиян Шамсутдинович
Рамазанов Ғ.	Рамазанов Ғилемдар Йыһандар улы	Рамазанов Гилемдар Зигандарович
Рафиҡов Б.	Рафиҡов Булат Заһретдин улы	Рафиков Булат Загретдинович
Рәхимғолова Ф.	Рәхимғолова Фәүзиә Абдулла ҡыҙы	Рахимгулова Фаузия Абдулловна
Садыҡов Ғ.	Садыҡов Ғәбит Ғата улы	Садыков Габит Гатович
Сафин Р.	Сафин Рафаэль Әхмәтсафа улы	Сафин Рафаэль Ахметсафиевич
Сафуанов С.	Сафуанов Суфиян Ғаяз улы	Сафуанов Суфиян Гаязович
Сиражи М.	Сиражетдинов Муса Шәрәфетдин улы (Муса Сиражи)	Сиразетдинов Муса Шарафутдинович (Муса Сиражи)
Ситдиҡова Г.	Ситдиҡова Гүзәл Рамаҙан ҡыҙы	Ситдикова Гузель Рамазановна
Солтангәрәев Р.	Солтангәрәев Рәшит Ғимран улы	Султангареев Рашит Гимранович
Солтанов Й.	Солтанов Йыһат Әҙһәм улы	Султанов Зигат Адигамович
Сөләймәнов Ә.	Сөләймәнов Әхмәт Мөхәмәтвәли улы	Сулейманов Ахмет Мухаметвалеевич
Сөндөклө М.	Маҡсудов Садиҡ Мөбин улы (Маҡсуд Сөндөклө)	Максудов Садык Мубинович (Максуд Сюндюкле)
Сәғитов М.	Сәғитов Мохтар Мофаззал улы	Сагитов Мухтар Муффазалович
Сәғитов Р.	Сәғитов Рәсүл Хәсән улы	Сагитов Расуль Хасанович

Сәғитов Т.	Сәғитов	Сагитов
	Тайфур Барый улы	Тайфур Бареевич
Сәлимова Ф.	Сәлимова	Салимова
	Флүрә Хаматғәли ҡыҙы	Флюра Хаматгалиевна
Сәләм Ғ.	Ғәлимов	Галимов
	Сәләм Ғәлим улы	Салям Галимович
	(Ғәлимов Сәләм)	(Галимов Салям)
Тажи М.	Тажитдинов	Тажитдинов
	Мөхәтдин Язар улы	Мухитдин Язарович
	(Мөхәтдин Тажи)	(Мухутдин Тажи)
Таһиров А.	Таһиров	Тагиров
	Афзал Мөхәтдин улы	Афзал Мухитдинович
Таһирова Ә.	Таһирова	Тагирова
	Әнисә Абдулла ҡыҙы	Аниса Абдулловна
Туғыҙбаева Ф.	Туғыҙбаева	Тугузбаева
	Факиһа Һаҙый улы	Факиха Хадыевна
Ураҙғолов Р.	Ураҙғолов	Уразгулов
	Рәлис Ришат улы	Ралис Ришатович
Ураҡсин З.	Ураҡсин	Ураксин
	Зиннур Ғәзиз улы	Зиннур Газизович
Фәхретдинов Р.	Фәхретдинов	Фахретдинов
	Риза Фәхретдин улы	Риза Фахретдинович
	(Ризаитдин Фәхретдинов)	(Ризаитдин Фахретдинов)
Хажиев Р.	Хажиев	Хажиев
	Ризуан Закирхан улы	Ризван Закирханович
Хажиәхмәтов Ш.	Хажиәхмәтов	Хажиахметов
	Шамил Сафуан улы	Шамиль Сафуанович
Хамматов Я.	Хамматов	Хамматов
	Яныбай Хаммат улы	Яныбай Хамматович
Харис М.	Харисов	Харисов
	Мәлих Харис улы	Малих Харисович
	(Мәлих Харис)	(Малих Харис)
Харисов Ә.	Харисов	Харисов
	Әхнәф Ибраһим улы	Ахнаф Ибрагимович
	(Әхнәф Харис)	(Ахнаф Харис)
Хисамитдинова Ф.	Хисамитдинова	Хисамитдинова
	Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы	Фирдаус Гильмитдиновна
Хисамов Ғ.	Хисамов	Хисамов
	Ғәлим Афзал улы	Галим Афзалович
Хисмәтов М.	Хисмәтов	Хисматов
	Марат	Марат
Хисмәтуллин З.	Хисмәтуллин	Хисматуллин
	Зөлфәр Фазлетдин улы	Зульфар Фазлетдинович
Хоҙайбирҙин Ш.	Хоҙайбирҙин	Худайбердин
	Шәһит Әхмәт улы	Шагит Ахметович
Хөсәйенов Ғ.	Хөсәйенов	Хусаинов
	Ғайса Батырғәрәй улы	Гайса Батыргареевич
Хужин М.	Хужин	Хужин
	Мәхмүт Хәйрүш улы	Махмут Хайрушевич

Хәй М.	Мөхәмәтйәров Хәй Ғабдрафиҡ улы (Мөхәмәтйәров Хәй)	Мухамедьяров Хай Габдрафикович (Мухамедьяров Хай)
Хәйбуллин Т.	Хәйбуллин Әбүталип (Хәйбуллин Талип)	Хайбуллин Абуталип (Хайбуллин Талип)
Хәйҙәров М.	Хәйҙәров Мөхәммәт Аллаяр улы	Хайдаров Мухамет Аллаярович
Хәйри Ғ.	Хәйретдинов Ғәйнан Бәҙретдин улы (Ғәйнан Хәйри)	Хайритдинов Гайнан Бадретдинович (Гайнан Хайри)
Хәкимов Ә.	Хәкимов Әхиәр Хәсән улы	Хакимов Ахияр Хасанович
Хәмәтдинова Ә.	Хәмәтдинова Әнисә Әхтәм ҡыҙы	Хаматдинова Аниса Ахтямовна
Хәсән Б.	Хәсәнов Бәшәр Хәсән улы (Бәшәр Хәсән)	Хасанов Башар Хасанович (Башар Хасан)
Һибәт М.	Уразаев Мәхмүт Һибәт улы (Мәхмүт Һибәт)	Уразаев Махмут Хибатович (Махмут Хибат)
Чаныш Ә.	Чанышев Әмир Иҙрис улы (Әмир Чаныш)	Чанышев Амир Идрисович (Амир Чаныш)
Шаммас Р.	Шаммасов Рауил Сәхиулла улы (Рауил Шаммас)	Шаммасов Равиль Сахиуллович (Равиль Шаммас)
Шәкүр Р.	Шәкүров Рәшит Закир улы (Рәшит Шәкүр)	Шакуров Рашит Закирович (Рашит Шакур)
Шәрипов Ғ.	Шәрипов Ғәли Ғәли улы	Шарипов Гали Галиевич
Шәрипов С.	Шәрипов Сабир Нәғим улы	Шарипов Сабир Нагимович
Шәрәфетдинов Д.	Шәрәфетдинов Дамир Мөлкаман улы	Шарафутдинов Дамир Мулкаманович
Шәһәр Ш.	Шәһәретдинов Шиһабетдин Шәһәретдин улы (Шиһабетдин Шәһәр)	Шагаретдинов Шигабетдин Шагаретдинович (Шигабетдин Шагар)
Әбүзәров С.	Әбүзәров Салауат Нәзир улы	Абузаров Салават Назирович
Әлибаев С.	Әлибаев Сафуан Әфтәх улы	Алибаев Сафуан Афтахович
Әминев Ә.	Әминев Әмир Мөхәммәт улы	Аминев Амир Мухаметович
Әмири Ғ.	Әмири Ғәйнан Ғимазетдин улы (Ғәйнан Әмири)	Амиров Гайнан Гимазетдинович (Гайнан Амири)
Әсәнов Ф.	Әсәнов Фәнил Абдулһаҙый улы	Асянов Фаниль Абдулхадыевич

Әхмәҙиев Т.	Әхмәҙиев Таминдар Хажғәле улы	Ахмадеев Таминдар Хазигалиевич
Әхмәтйәнов К.	Әхмәтйәнов Ким Әбүзәр улы	Ахмедьянов Ким Абузарович
Әхмәтшин Ғ.	Әхмәтшин Ғабдулла Ғабдрахман улы	Ахметшин Габдулла Габдрахманович
Юлаев С.	Юлаев Салауат Юлай улы	Юлаев Салават Юлаевич
Юлтый Д.	Юлтыев Дауыт Исхаҡ улы (Дауыт Юлтый)	Юлтыев Даут Исхакович (Даут Юлтый)
Юнысова Г.	Юнысова Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙы	Юнусова Гульфия Азнагуловна
Яҡупова Г.	Яҡупова Гөлнур Миҙхәт ҡыҙы	Якупова Гульнур Мидхатовна
Яҡшыбаева Л.	Яҡшыбаева Лира Әхмәт ҡыҙы	Якшибаева Лира Ахметовна
Ямалетдинов М.	Ямалетдинов Мәүлитбай Байгилде улы (Мәүлит Ямалетдин)	Ямалетдинов Мавлетбай Байгильдеевич (Маулит Ямалетдин)
Янбаев Ш.	Янбаев Шакир Мәхийән улы	Янбаев Шакир Махиянович
Янбулатова Р.	Янбулатова Рәғиҙә Сәйетғәли ҡыҙы	Янбулатова Рагида Саитгалиевна
Янышев Ф.	Янышев Фәнис Фәтих улы	Янышев Фанис Фатыхович

ҠУЛЛАНЫЛҒАН ФӘННИ ӘҘӘБИӘТ

ИСПОЛЬЗОВАННЫЕ НАУЧНЫЕ ТРУДЫ

Азнабаев А. М., Псянчин В. Ш. Историческая грамматика тюркских языков. — Уфа, 1983.

Аманжолов С. А. Вопросы диалектологии и истории казахского языка. — Алма-Ата, 1959.

Антонов Н. К. Материалы по исторической лексике якутского языка. — Якутск, 1971.

Апресян Ю. Д. Лексическая семантика. Синонимические средства языка. — М., 1995.

Ахатов Г. Х. Мишарский диалект татарского языка. — Уфа, 1980.

Ахметов М. Х. Глагол в языке орхоно-енисейских памятников (в сравнительном плане с современным башкирским языком). — Саратов, 1978.

Ахметьянов Р. Г. Общая лексика духовной культуры народов Среднего Поволжья. — М., 1981.

Ахметьянов Р. Г. Общая лексика материальной культуры народов Среднего Поволжья. — М., 1989.

Алтайская этимология. — Л., 1984.

Баишев Т. Г. Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. — 2-е изд. — Уфа, 2006.

Башҡорттарҙың им-том китабы / Ф. Ғ. Хисамитдинова. — Өфө, 2006.

Баязитова Ф. С. Урта Урал (Свердловск өлкәсе) татарлары. — Казан, 2002.

Биишев А. Г. «Первичные» долгие гласные в тюркских языках. — Уфа, 1963.

Бикбулатов Н. В. Башкирская система родства. — М., 1981.

Благова Г. Ф. «Бабур-наме»: Язык, прагматика текста, стиль. К истории чагатайского литературного языка. — М., 1994.

Булич С. К. Очерк истории языкознания в России. Т. 1. — СПб., 1904.

Вопросы башкирского языкознания / А. Г. Биишев и др. — Уфа, 1973.

Галяутдинов И. Г. Два века башкирского литературного языка. — Уфа, 2000.

Ганиев Ф. А. Способы действия глаголов в татарском языке. — Казань, 2003.

Гарипов Т. М. Башкирское именное словообразование. — Уфа, 1959.

Гарипов Т. М. Кыпчакские языки Урало-Поволжья: Опыт синхронической и диахронической характеристики. — М., 1973.

Грамматика современного башкирского литературного языка / А. А. Юлдашев и др. –М., 1981.

Грунина Э. А. Историческая грамматика турецкого языка. — М., 1991.

90 лет Н. А. Баскакову / Э. Р. Тенишев и др. — М., 1997.

Диалектологический атлас башкирского языка / Ф. Г. Хисамитдинова и др. — Уфа, 2005.

Дильмухаметов М. И. Говор среднеуральских башкир. — Уфа, 2006.

Дмитриев Н. К. Башҡорт теленең грамматикаһы. — Өфө, 1950.

Дмитриев Н. К. Говоры дер. Аисова, Худайберды, Махмудово, Гадильшино, Субхангулово, Зуяково // Башкирский диалектологический сборник. — Уфа, 1959.

Дмитриев Н. К. Грамматика башкирского языка. — М., 2008.

Дмитриева Л. В. Некоторые тюркские этимологии // Языки народов Сибири. Вып. 3. — Кемерово, 1979.

Дмитриева Ю. Чувашские народные названия дикорастущих растений. — Debrecen, 2001.

Дыбо А. В. Лингвистические контакты ранних тюрков. Лексический фонд. Пратюркский период. — М., 2007.

Дыбо А. В. Семантическая реконструкция в алтайской этимологии. Соматические термины (плечевой пояс). — М., 1996.

Дыбо А. В. Хронология тюркских языков и лингвистические контакты ранних тюрков // Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Пратюркский язык — основа. Картина мира пратюркского этноса по данным языка. — М., 2006. — С. 766–817.

Дыренкова Н. П. Грамматика хакасского языка: фонетика и морфология. — Абакан, 1948.

Егоров Н. И. Избранные труды. Этимология. Этноглоттогенез. Этнокультурология: В 2-х т. — Чебоксары, 2009.

Закирова Р. Г. Структура и функции слов-повторов башкирского языка. — Уфа, 2006.

Изысканный дар тюркскому языку: Грамматический трактат XIV в. на арабском языке. — Ташкент, 1978.

Иллич-Свитыч В. М. Материалы к сравнительному словарю ностратических языков // Этимология — 1965. — М., 1967.

Иллич-Свитыч В. М. Опыт сравнения ностратических языков. Т. I. — М., 1971; Т. II. — М., 1976.

Историческое развитие лексики тюркских языков. — М., 1961.

Ишбердин Э. Ф. Историческое развитие лексики башкирского языка. — М., 1986.

Ишбирҙин Э. Ф., Ғәләүетдинов И. Г., Халикова Р. Х. Башҡорт әҙәби теленең тарихы. — Өфө, 1993.

Ишбулатов Н. Х. Башҡорт диалектологияһы. — Өфө, 1979.

Кайдар Ә. Т. Қазақтар ана тілі әлеминде. I том. Адам. — Алматы, 2009.

Камалов А. А. Башкирские географические термины и топонимия. — Уфа, 1997.

Кейекбаев Ж. Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. — Өфө, 2002.

Кляшторный С. Г. Мифологические сюжеты в древнетюркских памятниках // Тюркологический сборник — 1997. — М., 1981.

Козин С. А. Сокровенное сказание. — М., Л., 1941.

Кононов А. Н. Грамматика языка тюркских рунических памятников VII — IX вв. — М., Л., 1980.

Кононов А. Н. Родословная туркмен. — М., Л., 1958.

Кормушин И. В. Тюркские енисейские эпитафии: Тексты и исследования. — М., 1977.

Котвич В. Исследования по алтайским языкам. — М., 1962.

Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. — М., 1974.

Ҡаһарманов Г. Г. Башҡорт терминологияһы. Тарихи-лингвистик тасуирлау тәжрибәһе. — Өфө, 2002.

Левитская Л. С. Историческая морфология чувашского языка. — М., 1976.

Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка. В сравнительно-историческом освещении. — М., 1976.

Максютова Н. Х. Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении. — Уфа, 1996.

Малов С. Е. Памятники древнетюркской письменности. Тексты и исследования. — М., Л., 1951.

Махмуд ал-Кашгари. Дивану лугат ат-турк (Свод тюркских слов): В 3-х т. / Пер. с араб. А. Р. Рустамова, под ред. И. В. Кормушина. Т. 1. — М., 2010.

Мелиоранский П. М. Араб-филолог о турецком языке. — СПб., 1900.

Миржанова С. Ф. Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). — Уфа, 1991.

Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. — М., 1979.

Мудрак О. А. Классификация тюркских языков и диалектов с помощью методов глоттохронологии на основе вопросов морфологии и исторической фонетики (Серия «Orientalia et Classica»). Вып. 23. — М., 2004.

Мусаев К. М. Лексика тюркских языков в сравнительном освещении. — М., 1975.

Наджип Э. Н. Хорезми. Мухаббатнаме. — М., 1961.

Насилов Д. М. К проблеме тождества аффиксов в алтайских языках // Тюркологический сборник -1975. — М., 1978.

Нафиков Ш. В. Бореальные элементы в башкирском языке. — Уфа, 2003.

Өмөтбаев М. И. Йәдкәр. — Өфө, 1984.

Покровская Л. А. Термины родства в тюркских языках // Историческое развитие лексики тюркских языков. — М., 1961.

Поливанов Е. Д. Статьи по общему языкознанию. — М., 1968.

Поппе Н. Н. — Poppe N, Bashkir manual. Bloomington, 1964. First edition.

Потапов Л. П. Алтайский шаманизм. — Л., 1991.

Поцелуевский А. П. Избранные труды / Б. Ч. Чарыяров и др. — Ашхабад, 1975.

Пюрбеев Г. Ц. Эпос «Джангар»: культура и язык. — Элиста, 1993.

Рамстедт Г. И. Введение в алтайское языкознание. Морфология. — М., 1957.

Рассадин В. И. Монголо-бурятские заимствования в сибирских тюркских языках. — М., 1980.

Расянин М. Материалы по исторической фонетике тюркских языков. — М., 1955.

Руденко С. И. Башкиры. Историко-этнографические очерки. — Уфа, 2006.

Садыкова З. Р. Говоры Оренбургских татар. — Казань, 1985.

Серебренников Б. А., Гаджиева Н. З. Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. — Баку, 1979.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Фонетика / Э. Р. Тенишев и др. — М., 1984.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Морфология / Э. Р. Тенишев и др. — М., 1988.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Лексика / Э. Р. Тенишев и др. — М., 1997.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Лексика: 2-е изд., доп. / Э. Р. Тенишев и др. — М., 2001.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Региональные реконструкции / Э. Р. Тенишев и др. — М., 2002.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Пратюркский язык-основа. Картина мира пратюркского этноса по данным языка / Э. Р. Тенишев, А. В. Дыбо и др. — М., 2006.

Суфьянова Н. Ф. Проблемы многозначности в башкирском языке и её лексикографическая разработка. — Уфа, 1998.

Тенишев Э. Р. Избранные труды: В 3-х кн. 1–2-я кн. — Уфа, 2006; 3-я кн. — Уфа, 2011.

Тенишев Э. Р. Языки древне- и среднетюркских памятников в функциональном аспекте // Вопросы языкознания. — 1979. — № 2. — С. 85–86.

Традиционное мировоззрение тюрков Южной Сибири: Знак и ритуал / И. Н. Гемуев и др. — Новосибирск, 1990.

Традиционное мировоззрение тюрков Южной Сибири. Пространство и время. Вещный мир / И. Н. Гемуев и др. — Новосибирск, 1988.

Традиционное мировоззрение тюрков Южной Сибири. Человек. Общество / И. Н. Гемуев и др. — Новосибирск, 1989.

Уразбаева З. Г. Вариативность слова в башкирском языке. — Уфа, 1998.

Ураксин З. Г. Фразеология башкирского языка. — М., 1975.

Фазылов Э. Староузбекский язык. Хорезмийские памятники XIV в. Т. I–II. — Ташкент, 1966–1971.

Хабичев М. А. Карачаево-балкарское именное словообразование: Опыт сравнительно-исторического изучения. — Черкесск, 1971.

Хадыева Р. Н. Башкирская этнокультура и язык: Опыт воссоздания языковой картины мира. — М., 2005.

Халикова Р. Х. Язык башкирских шежере и актовых документов XVIII–XIX вв. — М., 1990.

Хисамитдинова Ф. Г. Башкирская ойконимия XVI — XIX вв. — Уфа, 1991.

Хисамитдинова Ф. Г. История башкирского языка: Материалы по исторической фонетике. — Уфа, 1989.

Хисамитдинова Ф. Г. К ареальной характеристике названий с булгарскими чертами в топонимии Башкирии // Имя — Этнос — История. — М., 1989.

Хисамитдинова Ф. Г. Названия башкирских населённых пунктов XVI–XIX вв. — Уфа, 2005.

Цинциус В. И. К этимологии алтайских терминов родства // Очерки сравнительной лексикологии алтайских языков. — Л., 1972.

Шайхулов А. Г. Мотивирующие основы в названиях растений татарского и башкирского языков // Татарская лексика в семантико-грамматическом аспекте. — Казань, 1988.

Шакуров Р. З. По следам географических названий: Топонимия бассейна реки Дёмы. — Уфа, 1986.

Шәкүров Р. З. Исемдәрҙә — ил тарихы. Тикшеренеүҙәр, мәҡәләләр. — Өфө, 1993.

Щербак А. М. Названия домашних и диких животных в тюркских языках // Историческое развитие лексики тюркских языков. — М., 1961.

Щербак А. М. Огуз-наме. Мухаббат-наме: Памятники древнеуйгурской и староузбекской письменности. — М., 1959.

ҠУЛЛАНЫЛҒАН ФӘННИ ӘҘӘБИӘТ

Әхмәров Ҡ. З. Башҡорт яҙыуы тарихынан (башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы тарихы). — Өфө, 1972.

Юлдашев А. А. Аналитические формы глагола в тюркских языках. — М., 1965.

Ягафарова Г. Н. Исследование тематических групп башкирской лексики (ономасиологический подход). — Уфа, 2008.

Языки мира: Тюркские языки. — М., 1997.

Яруллина У. М. Лексика дёмских башкир. — Уфа, 2009.

ҠУЛЛАНЫЛҒАН МАТБУҒАТ БАҪМАЛАРЫ ИСЕМЛЕГЕ

СПИСОК ИСПОЛЬЗОВАННЫХ ПЕРИОДИЧЕСКИХ ИЗДАНИЙ

«Ағиҙел» (әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси журнал)	«Агидель» (литературно-художественный и общественно-политический журнал)
«Аҡбуҙат» (мәктәпкәсә йәштәге һәм кесе мәктәп йәшендәге балалар өсөн республика айлыҡ журналы)	«Акбузат» (республиканский ежемесячный литературно-художественный журнал для детей дошкольного и младшего школьного возраста)
«Башҡортостан» (республика ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Башкортостан» (республиканская общественно-политическая газета)
«Башҡортостан ҡыҙы» (ҡатын-ҡыҙҙар һәм ғаилә өсөн ижтимағи-сәйәси һәм әҙәби-нәфис журнал)	«Башкортостан кызы» (общественно-политический и литературно-художественный журнал для женщин и семьи)
«Башҡортостан панорамаһы» (республика ижтимағи-сәйәси журналы)	«Панорама Башкортостана» (республиканский общественно-политический журнал)
«Башҡортостан уҡытыусыһы» (республика фәнни-педагогик методика журналы)	«Башкортостан укытыусыхы» («Учитель Башкортостана») (республиканский научно-педагогический и методический журнал)
«Ватандаш» (ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм художестволы журнал)	«Ватандаш» (общественно-политический, научно-популярный и художественный журнал)
«Инйәр» (Архангел районының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Инзер» (общественно-политическая газета Архангельского района)

«Йүрүҙән» (Салауат районының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Юрюзань» (общественно-политическая газета Салаватского района)
«Йәншишмә» (республика балалар һәм үҫмерҙәр гәзите)	«Йэншишма» (республиканская газета для детей и подростков)
«Йәшлек» (республика йәштәре гәзите)	«Йэшлек» (республиканская молодёжная газета)
«Киске Өфө» (ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзит)	«Киске Офо» (общественно-политическая и культурная газета)
«Көнгәк» (Мәләүез районының ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни гәзите)	«Конгэк» (общественно-политическая газета Мелеузовского района)
«Салауат» (Салауат ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Салауат» (общественно-политическая газета г. Салават)
«Табын» (Ғафури районының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Табын» (общественно-политическая газета Гафурийского района)
«Тамаша» (нәфис-публицистик журнал)	«Тамаша» (художественно-публицистический журнал)
«Таң» (Бөрйән районының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Тан» (общественно-политическая газета Бурзянского района)
«Торатау» (Ишембай ҡалаһының һәм Ишембай районының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Торатау» (общественно-политическая газета г. Ишимбай и Ишимбайского района)
«Урал» (Белорет ҡалаһының һәм районының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Урал» (общественно-политическая газета г. Белорецка и Белорецкого района)
«Һаҡмар» (Баймаҡ ҡалаһының һәм районының ижтимағи-сәйәси гәзите)	«Сакмар» (общественно-политическая газета г. Баймак и Баймакского района)
«Һәнәк» (Башҡортостан сатира һәм юмор журналы)	«Хэнэк» (журнал сатиры и юмора Башкортостана)

«Шоңҡар»
(Башҡортостан йәштәренең ижтимағи-сәйәси, әҙәби-нәфис журналы)

«Шонкар»
(общественно-политический молодёжный журнал)

«Юшатыр»
(Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районының ижтимағи-сәйәси гәзите)

«Юшатыр»
(общественно-политическая газета г. Кумертау и Куюргазинского района)

БЕЛЕШМӘ МАТЕРИАЛДАР

СПРАВОЧНЫЕ МАТЕРИАЛЫ

1. Башҡорт Википедияһы сайты http: //ba.wikipedia.org/wiki/Wikipedia
2. Башҡортса дини календарь. — Өфө: Китап, 2003 — 2012.
3. Башҡортостан календары. — Өфө: Китап, 1998 — 2012.
4. «Башинформ» мәғлүмәт агентлығы сайты http: //www.bashinform.ru

БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ

Аа	Ҡҡ	Фф
Бб	Лл	Хх
Вв	Мм	Һһ
Гг	Нн	Цц
Ғғ	ң	Чч
Дд	Оо	Шш
Ҙҙ	Өө	Щщ
Ее	Пп	ъ (ҡалын айырыу билдәһе)
Ёё	Рр	Ыы
Жж	Сс	ь (нәҙек айырыу һәм нәҙеклек билдәһе)
Зз	ҫ	Ээ
Ии	Тт	Әә
Йй	Уу	Юю
Кк	Үү	Яя

ШАРТЛЫ БИЛДӘЛӘР

УСЛОВНЫЕ ЗНАКИ

■ миҫал итеп алынған цитаталар алдынан ҡуйылған билдә – знак предшествует цитате, иллюстрирующей употребление толкуемого слова

□ рус теленә тәржемә алдынан ҡуйылған билдә – знак перед переводом на русский язык

.. һөйләмдәге ҡыҫҡартмалар – сокращения в предложении

♦ фразеологик берәмек – фразеологический оборот

● мәҡәл һәм әйтемдәр – пословицы, поговорки

/ исемдең сифат формаһындағы тәржемәһе – перевод имён существительных в форме имён прилагательных

// ҡылымдарҙың исем формаһындағы тәржемәһе – перевод глаголов в именной форме

Й

Й [й] (Р.: тринадцатая буква башкирского алфавита; И.: the thirteenth letter of the Bashkir alphabet; Т.: Başkurt alfabesinin on üçüncü harfi)

Башҡорт алфавитының ун өсөнсө хәрефе, ышҡыулы, тел уртаһы — урта аңҡау, сонор тартынҡыһы. Ҙур (баш) хәреф — Й, бәләкәй — й формаһында яҙыла. Хәрефтең исеме — ҡыҫҡа и. □ Тринадцатая буква башкирского алфавита. *Й хәрефе.*

ЙОБАЛҒЫ *с. диал. ҡар.* **шамтыр.** *Йобалғы кеше. Йобалғы булыу. Килен бигерәк йобалғы булып сыҡты: өйө бысраҡ, балаһы бысраҡ.*

ЙОБАЛҠЫ *с. диал. ҡар.* **йыбытҡы I.** *Йобалҡы бала. Йобалҡы ат.*

ЙОБАНЫУ I (йобан-) (Р.: возиться; И.: fuss (about); Т.: uğraşmak) *ҡ. диал.*

Мыштырлау, ығышыу. □ Возиться *(долго),* копошиться. *Йобанып йөрөү. Йобанып ҡына кейенеү. Йобанып ҡына атлау.* ■ *Флүрә менән Баныу тракторист янында оҙаҡ йобанманылар, уларҙың китеүҙәре булды, әйләнеп ҡайтыуҙары булды.* Ә. Вәли.

ЙОБАНЫУ II (йобан-) *ҡ. диал. ҡар.* **йыбаныу I, 1.** *Эшләргә йобаныу. Уҡырға йобаныу. Йобанып ултырыу. Ҡуҙғалырға йобаныу.*

ЙОБАНЫУ III (йобан-) *ҡ. диал. ҡар.* **йыуаныу**. *Балаға йобаныу. Өмөттәр менән йобаныу.* ■ *Бына Хәмит һүрәт яһай, үҙ эшенә ҡыуана. Матур-матур һүрәт яһап, көн дә шулай йобана.* Ҡ. Даян.

ЙОБАТАЙЛАУ (йобатайла-) (Р.: делать аккуратно; И.: do thoroughly, neatly; Т.: özenle yapmak) *ҡ. диал.*

Бөтмөрләү, ентекләп эшләү, еренә еткереү, ипләү. □ Делать *что-л.* аккуратно, тщательно. *Йобатайлап эшләү. Йобатайлап тикшереү. Һәр эште йобатайлап башҡарырға кәрәк.*

ЙОБАТЫУ (йобат-) *ҡ. диал. ҡар.* **йыуатыу**. *Баланы йобатыу. Күңелде йобатыу. Үҙеңде йобатыу.* ■ *Йәшлектә була торғандыр инде ул, тип. Баныу үҙ күңелен үҙе йобата ине.* Ә. Вәли.

ЙОБАУ (йоба-) *ҡ. диал. ҡар.* **йонсоу.** *Йобап китеү. Ауыр эштән йобау. Ай, йобап киткәнһең. Ҡалай йобап тораһың.*

ЙОББӘ [ғәр. جبة] *и. иҫк. кит. ҡар.* **йөббә.** *Йоббә кейеү. Йоббә тектереү.*

ЙОГ [рус. < санскр. *yoga*] (Р.: йог; И.: yogi; Т.: yogi) *и.*

Йога тарафдары. □ Йог. *Йогтар системаһы. Йог күнегеүҙәре. Йогтар китабы.* ■ *Йогтарҙың фекеренсә, әле быға тиклем боронғо Һиндостанда ҡулланылып, хәҙерге йогтар тарафынан камиллаштырылған бит өсөн күнегеүҙәр комплексы мимик һырҙарҙан ҡотолорға ярҙам итә.* «Йәшлек», 19 апрель 2008.

ЙОГА [рус. < санскр. *yoga*] (Р.: йога; И.: yoga; Т.: yoga) *и.*

Һиндостандағы күп кенә дини-фәлсәфәүи концепцияларҙың бер өлөшө булып тороусы шәхси камиллашыу һәм рухи азатлыҡ юлдары тураһындағы тәғлимәт. □ Йога. *Йога менән шөғөлләнеү. Йоганы үҙләштереү. Йога үҙәге. Йога төрҙәре. Агни-йога.* ■ *Карма тураһындағы тәғлимәт буларак, йога кешенең был тормоштағы хәл-әхүәленең торошон элекке ҡылған ҡылыҡтарына бәйләп*

аңлата. «Ағиҙел», № 3, 2010. *Йәрәхәт һалмаусы спорт төрҙәрен, әйтәйек, йога һәм аджилингты һайлау яҡшы булыр.* «Йәшлек», 28 май 2009.

ЙОГУРТ [рус. < боронғо төрки *йоғурт*] (Р.: йогурт; И.: yoghurt; Т.: yoğurt) *и.*

Төрлө емеш-еләк ҡушып әҙерләнгән әсе һөт аҙығы. □ Йогурт. *Йогурт әҙерләү. Шәкәрһеҙ йогурт.* ■ *Популяр йогурттың тамырҙары кәзә һөтөнә барып тоташа.* «Йәшлек», 6 апрель 2010.

ЙОҒАНЫС I (Р.: заразный; И.: infectious; Т.: bulaşıcı) *с. диал.*

Берәүҙән башҡаларға күсә торған *(ауырыуға ҡарата)*, йоғошло. □ Заразный, инфекционный. *Йоғаныс ауырыу. Йоғаныс булыу. Йоғаныс ауырыуҙан ҡотолоу юлы.*

ЙОҒАНЫС II *и. диал.*

1. *ҡар.* **яғыныс**. ■ *Ул [Тимербикә], кистән һарҡытырға элеп ҡуйған ҡоро биҙрәһен алып, уның ситенә һыйыр имсәген йомшартыу өсөн йоғаныс йәбештерә лә, әске кәртәнән быҙауын сығарып, буралай оло кәүҙәле ала һыйырға ҡуша.* Н. Мусин.

2. Ҡуйыраҡ шыйыҡсаның яғылып ҡалыуы. □ Гуща, отстой. ■ *Йоғаныс ҡала балды медогондан үткәргәндән һуң.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҒАНЫСЛЫ *с. диал. ҡар.* **йоғошло**. *Йоғаныслы сир.* ■ *Әлимәлә йоғаныслы яман ауырыу булған, имеш, байҙың улы Ҡанзафарға ла быны шауҡымы тейгән, имеш, шуға күрә ҡалаға киткән, имеш.* Д. Юлтый.

ЙОҒАНЫУ (йоған-) *ҡ. диал. ҡар.* **тейеү**. ■ *Баланы кеше нәҫтәһенә йоғанма, тип үҫтермәк кәрәк.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҒАНЫШЛЫ *с. диал. ҡар.* **йоғошло**. *Йоғанышлы ауырыу.*

ЙОҒАШ (Р.: похожий; И.: (a)like; Т.: benzeyen) *с. диал.*

Ниндәйҙер яғы менән тап килгән, оҡшаш. □ Похожий, схожий, подобный; аналогичный. *Йоғаш булыу. Атаһына йоғаш. Әсәһенең яғына йоғаш.*

ЙОҒАШАН *с. диал. ҡар.* **йоғошло**. *Йоғашан сир.* ■ *Һуғыш ваҡытында йоғашан сире лә аптыратты.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҒАШЛЫ (Р.: полезный; И.: nourishing; Т.: faydalı) *с. диал.*

Файҙалы, килешле. □ Полезный, питательный. *Йоғашлы аш. Йоғашлы бесән. Малға йыла бик йоғашлы.*

ЙОҒОЛОУ (йоғол-) (Р.: касаться; И.: touch; Т.: dokunmak) *ҡ.*

1. Тейеп, һыланып, эҙ ҡалдырыу; йоғоу, яғылыу. □ Касаться *чего,* прикасаться, притрагиваться *к чему,* трогать *кого-что,* пачкать, мазать. // Касание, прикосновение. *Буяу итәккә йоғолдо.* ■ *Беҙ оҙатҡан йәйҙең матурлығы ҡалды алмаларға йоғолоп.* Т. Арслан. *Йондоҙҙарға йоғолоп, йыһандан ут сағамын — ил-толпарҙың тояғын тайҙыртмаҫлыҡ дағамын.* Й. Солтанов.

2. *диал. ҡар.* **ҡағылыу 4.** *Ашҡа йоғолмау.* ■ *Арыҫланбәк ағалары машинаһы янына береһен дә [малайҙарҙың] яҡын ебәрмәне. — Йоғолма, танауың кибеп етмәгән, — тине.* Р. Низамов. *Нур ҙа төшә ергә, ситкә йоғолмай, тап йөҙөңә һинең.* Р. Назаров.

3. *диал.* Һаналыу, иҫәпләнеү. □ Считаться. ■ *Хеҙмәткә йоғолмай был.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҒОМЛО *с. диал. ҡар.* **йоғошло.** *Йоғомло ауырыу. Йоғомло сир эләктереү.*

ЙОҒОМҺОҘ I *с. диал. ҡар.* **йоғошһоҙ.** *Йоғомһоҙ сир. Ҡурҡма, уның ауырыуы йоғомһоҙ.*

ЙОҒОМҺОҘ II (Р.: непитательный; И.: low-calorie; Т.: besleyici olmayan) *с. диал.*

Туҡлыҡһыҙ, яғышһыҙ. □ Непитательный, несытный; низкокалорийный. *Урман бесәне малға йоғомһоҙ. Йоғомһоҙ бойҙай. Йоғомһоҙ аш.*

ЙОҒОНДОРОУ (йоғондор-) (Р.: позволять касаться; И.: let touch; Т.: dokundurmak) *ҡ.*

1. Ҡул менән тейҙереү; ҡағылдырыу. □ Позволять касаться, притрагиваться. *Үҙеңә йоғондороу.* ■ *[Алдар — Ғилмиязаға:] Ҡурҡма, бер ни ҙә булмаҫ. Мин һиңә бер кемде лә йоғондормайым.* Н. Мусин.

2. Яҡын мөнәсәбәт булдырыу, яҡын итеү, яҡынлатыу. □ Допускать близкие отношения *с кем-л. Яҡын йоғондормау. Ул берәүҙе лә йоғондормай.*

3. *ҡусм.* Кешенең аңына, күңеленә һеңдереү. □ Довести до сознания *что-л. Йоғондороп әйтеү. Фекерен йоғондороу. Йоғондороп аңлатыу.* ■ *[Хөббөниса абыстай] икеләнеберәк булһа ла Мотыйҡ мулланың аманат һүҙенә йоғондороборак бер нисә һүҙ ташлап ҡуйҙы.* Т. Хәйбуллин.

ЙОҒОНОС (Р.: влияние; И.: influence; Т.: etki) *и.*

Аңға һеңерлек, күңелгә ятырлыҡ тәьҫир *(һүҙҙең, эштең).* □ Влияние, вес, значимость, убедительность *(слова, действия). Әйткән һүҙенең бер йоғоносо юҡ.* ■ *Бәхетенә күрә, [Байсаловтың] әлеге хәле оҙаҡҡа һуҙылманы, тиҙ үтте. Был тәңгәлдә, моғайын, әллә ҡасанғы булһа ла, хәтәр «чечен мәктәбенең» йоғоносо теймәй ҡалмағандыр.* И. Ноғоманов.

ЙОҒОНОСЛО (Р.: веский; И.: weighty; Т.: etkili) *с.*

1. Аңға, күңелгә ярашлы, аңға һеңгән. □ Веский; убедительный *(о словах). Йоғоносло телмәр. Йоғоносло булыу.* ■ *Ҡәләм тотҡан һәр беребеҙҙең тырышлығының мәғәнәһе – кешеләрҙе ғафиллыҡ торғонлоғонан алып сығыу, йоғоносло һүҙ менән һәр кемдең йөрәгенә юл эҙләү бит.* М. Ҡотлоғәлләмов.

2. *диал. ҡар.* **йоғошло.** *Ауырыуым йоғоносло түгел. Йоғоносло сир.*

ЙОҒОНОСҺОҘ (Р.: неубедительный; И.: unconvincing, not weighty; Т.: etkisiz) *с.*

Аңға, күңелгә ятышһыҙ, аңға һеңмәгән. □ Невеский, неубедительный. *Йоғоносһоҙ һүҙ һөйләү. Йоғоносһоҙ телмәр тотоу. Килгән етәксенең йоғоносһоҙ телмәрен бер кем дә ҡабул итмәне.*

ЙОҒОНОУ **(йоғон-)** (Р.: касаться; И.: touch; Т.: dokunmak) *ҡ.*

1. Ҡул менән тейеү; ҡағылыу, тотоноу. □ Касаться *чего,* прикасаться, притрагиваться *к чему,* трогать *кого-что,* дотрагиваться *до чего.* // Касание, прикосновение. *Кеше әйберенә йоғоноу. Йоғонop барыу. Һорауһыҙ йоғоноу.* ■ *[Фазылетдин] бер ваҡытта ла майлы өҫтөн алмаштырмай ҡарауатҡа ултырманы, ҡулын һабынлап йыуымай ашҡа йоғонманы.* Р. Камал. *Был ҡаруан башсыларына юлбаҫарҙар ҙа йоғонмай.* Ғ. Ибраһимов. ● *Яманға йоғонма, йоғонһаң, йығылма.* Мәҡәл.

2. *ҡусм. Ниндәйҙер* насар нәмәнең шауҡымы ҡағылыу. □ Испытывать отрицательное влияние *чего-л.* ■ *Ринат ауылдарҙағы был күренеште белһә лә, әле, үҙе килеп төртөлгәс, ғәжәп итте, хатта күңеленә шом йоғондо.* «Ағиҙел», № 1, 2010. *[Мәмбәтсура:] Бармайым, бысраҡҡа йоғонмайым, Аллаһы Тәғәлә иманына хыянат итеүсене былай ҙа түбәнһенән орор.* Н. Мусин.

ЙОҒОНТО I (Р.: влияние; И.: influence; Т.: etki) *и.*

Кем йәки *нимә* тарафынан *кемгә* йәки *нимәгә* лә булһа яһала торған тәьҫир, шул тәьҫирҙең һөҙөмтәһе, шауҡымы. □ Влияние, действие, воздействие. *Етәксе йоғонтоһо. Ололар йоғонтоһо. Ата-әсә йоғонтоһо.* ■ *«Пугачёв тарихы»н яҙыу өсөн Ырымбурға килеп киткән Александр Сергеевич Пушкин йоғонтоһона бирелеп, Даль «Пугачёв тураһында Верхолонцев хикәйәте»н ижад итте.* Я. Хамматов. *Уның [Өмөтбайҙың] яғаларына, салғыйҙарына, итәктәренә әҙеп-ләгән ҡыҙыл соғаһы кер, ҡояш йоғонтоһо менән тәүге төҫөн үҙгәртеп, аҡһыл бер төҫкә әйләнгән.* Ғ. Дәүләтшин. *Үҙ аяғы менән йөрөй алмаған яралыларҙың һыҡраныуҙары өҫтөнә тынсыу һауаның йоғонтоһо ла уларҙың рәнйеүен көсәйтә башланы.* А. Таһиров.

ЙОҒОНТО II *и. диал. ҡар.* **ЯҒЫНЫС.** *Йоғонто һөртөү. Һыйырҙың еленен йомшартыу өсөн йоғонто һөртөү.*

ЙОҒОНТОЛО (Р.: влиятельный; И.: influential; Т.: nüfuzlu) *с.*

Йоғонтоһо булған, йоғонто яһай алырлыҡ, һүҙе үткән. □ Влиятельный, действенный. *Йоғонтоло даирәләр. Йоғонтоло кешеләр менән аралашыу. Йоғонтоло булыу. Йоғонтоло ысул. Йоғонтоло сара. Йоғонтоло ғалим. Йоғонтоло тәнҡит.* ■ *Бындай йоғонтоло төркөмдө, нигеҙҙә, урындағы власть башлыҡтары һәм ауылдың байҙарынан*

торған кешеләр тәшкил итә. М. Өмөтбаев. *Үҙе [Нурый] яраткан ролдәрҙе бирелеп, еренә еткереп уйнағандағы кеүек, һүҙҙәрен асыҡ, йоғонтоло итеп әйтергә тырышты.* А. Таһиров. *Гәрәй ырыуы Алтын Урҙаның йоғонтоло ырыуҙары ҡуңрат һәм кираиттарҙан башлана.* «Киске Өфө», № 40, 2011. *Статистар, иҫәп-хисап алыу — халыҡтың дәүләт менән бәйләнеш тотоуының иң йоғонтоло алымдарының береһе, тип иҫәпләй.* «Ағиҙел», № 3, 2010.

ЙОҒОНТОҺОҘ I (Р.: невлиятельный; И.: not influential; Т.: etkisiz) *с.*

Йоғонто яһай алмаған. □ Невлиятельный, бездейственный. *Йоғонтоһоҙ хәбәр. Йоғонтоһоҙ эш.* ■ *Йоғонтоһоҙ предприятиеларҙан ҡотолоу, йоғонтоһоҙ предприятиеларҙан йоғонтололарына эшсе көстәрҙе ҡайтанан бүлеү иҫәбенә хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыу талап ителә.* «Йәшлек», 30 июль 2011.

ЙОҒОНТОҺОҘ II (Р.: бесследно; И.: without consequences; Т.: tesirsiz) *р.*

Йоғонто яһай алмаҫлыҡ. □ Невлиятельно, бездейственно, бесследно. ■ *Исламғәле ҡарттың үтенестәре, Ғабдрахман мулланың бүләктәре .. Ҡарабашҡа йоғонтоһоҙ ҡалманы.* И. Насыри. *Шул ук вакытта укытыусылар ҙа, уның аралашҡан мөхите лә балаға йоғонтоһоҙ үтмәй.* «Йәшлек», 15 декабрь 2009. *Абай ижады менән танышыу йәш Шәйехзадаға йоғонтоһоҙ ҡалмай.* Р. Бикбаев.

ЙОҒОНТО ЯҺАУ (йоғонто яһа-) (Р.: влиять; И.: influence; Т.: tesir etmek) *ҡ.*

Кемгәлер йәки *нимәгәлер* тәьҫир итеү. □ Влиять, воздействовать *на кого-что. Кешегә йоғонто яһау. Көс менән йоғонто яһау.* ■ *Олатаһы Хашимдың бөтмөр, ижади кеше булыуы ла йоғонто яһаны Дауытҡа.* Т. Ғарипова. *Күптән бирле лампа, шәм яҡтыһы күрмәгән яралыларға был бер аҙ йоғонто яһаны булырға кәрәк.* А. Таһиров. *[Тимеркәй:] Әһә, тимәк, Сулпан һүҙендә торған, аталары арҡыры йоғонто яһауға тотона, былай булғас, эш бешә!* С. Ҡудаш.

ЙОҒОРАУ (йоғора-) *ҡ. диал. ҡар.* **йоҡомһорау.** *Йоғорап китеү. Йоғорап ултырыу.*

ЙОҒОРТ [боронғо төрки *йоғурт*] *и. ҡар.* **йогурт**. *Майһыҙландырылған йоғорт. Йоғорттоң калориялылығы. Йоғорт ашау.*

ЙОҒОРШОҠ (йоғоршоғо) *и. диал. ҡар.* **йүгерек.** ■ *Йыйындарҙа көрәшселәр, йоғоршоҡтар ярыша ине.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҒОУ (йоҡ-) [боронғо төрки теленән] (Р.: прилипать; И.: stick; Т.: yapışmak) *ҡ.*

1. Тейеп, һыланып буялыу, эҙ ҡалдырыу. □ Приставать, прилипать; пачкать, мазать. *Бысраҡ йоғоу. Үләндең йәшеле йоға. Мейестең ағы йоға.* ■ *Мин ҡулдың мазуты йоғоп ҡалыуынан ҡурҡып, үҙемдең кеҫәнән яулыҡ ала башланым.* А. Таһиров. *[Татар егеттәре] әсегән тире тәпәндәре тирәһендә, бысрағы йоҡмаһа ярар ине тигән кеүек, ерәнеп кенә йөрөйҙәр.* А. Таһиров. ● *Ҡоромдан ҡором йоғор.* Мәҡәл. *Кәкре ҡайынға ҡар йоҡмаҫ.* Мәҡәл. *Аҡҡа ҡара тиҙ йоға.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Үҙләшеп йәбешеү. □ Приставать, прилипать. *Ауылда ҡушамат йоғорға ғына тора.*

3. Берәүҙән икенсегә күсеү, эләгеү *(ауырыуға ҡарата).* □ Передаваться, переходить *(о болезни),* заражаться *(какой-л. болезнью).* // Заражение, передача. *Ауырыу йоғоу. Грипп йоғоу. Тимрәү йоғоу. Ҡорсаңғы йоғоу. Йәнлектәрҙән йоҡҡан сир.* ■ *[Гәйшә:] Ваба ауырыуынан ике улым менән ҡыҙым, улар артынса ҡайным менән ҡәйнәм яҡты донъяны ҡуйҙы. Тәҡдирем етмәгәс, үҙемә генә ауырыу йоҡманы.* Я. Хамматов. *Донъяһы етеш-хәсрәтһеҙ йәшәгән ҡайһы бер бисәләргә һаранлыҡ сире йоғоусан.* Н. Мусин. ● *Сир ҡулдан йоғор, тымау — тындан.* Мәҡәл. *Ҡутыр ҡулдан йоға, таҙ бүректән йоға.* Мәҡәл.

4. *күсм.* Файҙалы булып, һиҙелерлек булып үҙләшеү; һеңеү. □ Быть, идти на пользу. *Ашаған ашы йоҡмай.* ■ *[Аҫылбикә] быныһы килешер тип, балан ҡағы һалып, сәй яһаны — тәме йоҡманы.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡадир юлдаш булыу йөҙөнән атаһы менән бергә һөнәргә йөрөштөрҙө, әммә һөнәр ҡомары үҙенә тәки йоҡманы.* Ә. Чаныш. ● *Кәкре ағасҡа ҡар йоҡмаҫ, бурға мал йоҡмаҫ.* Мәҡәл. *Урлап ашаған йоҡмаҫ.* Мәҡәл. *Аңра башҡа аҡыл йоҡмаҫ.* Мәҡәл.

5. Күңел биреп үҙләшеү; ылығыу. □ Испытывать стремление, склонность *к чему;* тянуться, тяготеть *к кому-чему.* ■ *Ул [Низай] үҙенең тыуған Усман ауылына йоҡмай ҙа тиерлек.* Ф. Иҫәнғолов.

6. *күсм.* Тәьҫирле булыу, йоғонто яһау; кереү. □ Производить впечатление, впечатлять; воздействовать. ■ *[Урал — Шүлгәнгә:] Һин һүҙеңдә торманың, якшыға юл бирманың, атам һүҙен тотманың, әсәм һүҙе йоҡманы.* «Урал батыр». *Ни мәғәнә һинән, һүҙ кеүәһе, оло ғәмдәр йәнгә йоҡмаһа?* Х. Назар. *Уның [Ишмөхәммәт Мырҙаҡаевтың] оло ижадының телдән телгә, ҡолаҡтан ҡолаҡҡа күсмәүе, ҡалдырған традицияларының күңелдән күңелгә йоҡмауы мөмкин түгел.* М. Ямалетдинов. ● *Якшыға яҡынлашһаң, якшылығы йоғор, яманға яҡынлашһаң, яманлығы йоғор.* Мәҡәл. *Ҡаҙанға яҡын барһаң, ҡараһы йоғор, яманға яҡын барһаң, бәләһе йоғор.* Мәҡәл. *Эт ҡарғышы бүрегә йоҡмаҫ.* Мәҡәл. *Кеше хаҡы кешегә йоҡмаҫ.* Мәҡәл.

7. *күсм.* Өлөш булып эләгеү; тейеү. □ Доставаться. ■ *[Арыҫлан:] Шул ғилем миңә лә аҙырак йоҡһон.* Ғ. Ибраһимов. *[Әсәһе — Хашимға:] Диуананы рәнйеткән кешегә ҡот йоҡмай!* Т. Ғарипова. ● *Ата байлығы улға йоҡмаҫ, әсә байлығы ҡыҙға йоҡмаҫ.* Мәҡәл. *Байҙан йоҡмай, балдан йоға.* Мәҡәл. *Аңра башҡа аҡыл йоҡмаҫ.* Мәҡәл.

8. *диал.* *Ҡайҙалыр* китеп барғанда *ҡайҙалыр* боролоп инеү, инеп сығыу; һуғылыу. □ Приходить; заходить. ■ *Ирҙәр әлеге шул ат сауҙаһы менән баҙарҙан баҙарға саба, өйгә һирәк йоғалар.* Ф. Иҫәнғолов.

9. *диал.* Тулыланыу, һимереү. □ Полнеть, поправиться. *Ашай-ашай, үҙенә һис бер йоҡмай.*

♦ **Ит йоғоу** бер аҙ таҙарыу, көрәйеп алыу. □ Поправиться, пополнеть. *Ит йоғоп, матурланып китеү. Үҙенә ит йоҡмай.* **Кесе телгә лә йоҡмау** бик әҙ булыу. □ Быть в очень малом количестве, не хватать *(о еде). Әҙерләгән аштары кесе телгә лә йоҡманы.* ■ *Бирелгән аштар елп итеп ҡалды, кесе телгә лә йоҡманы.* Д. Юлтый. **Ҡолаҡҡа йоҡмаған һүҙ** (*йәки* **хәбәр**) төптө дөрөҫ булмаған, килешһеҙ, буш һүҙ (хәбәр). □ Чушь, вздор. *Ҡолаҡҡа йоҡмаған һүҙ һөйләү.* **Ҡулға ла йоҡмау** һиҙелмәй ҙә ҡалыу, тиҙ бөтөү. □ Быстро кончиться, истратиться *(например, о деньгах).* ■ *Остоҡ ҡына арышынлы тауар, бала-сағa өсөн бер-ике пар аяҡ кейеме, һирәклән сәй-шәкәр ҡайтһа, күҙем күрҙе, ҡулға йоҡманы тиерлек кенә.* Ә. Хәкимов. **Теле телгә йоҡмай** туҡтауһыҙ һөйләй; һүҙгә сая, оҫта. □ *соотв.* Язык хорошо подвешен. ■ *Сабир һөйләргә тотондо. Теле телгә йоҡмай үҙенең.* Ғ. Ибраһимов. *Тирмәнсе Михайло беҙҙеңсә бик оҫта һөйләй, теле телгә йоҡмай.* Б. Ишемғол. **Теш тешкә йоҡмау** ныҡ ҡалтырау. □ *соотв.* Зуб на зуб не попадает *(о дрожи от сильного холода, страха и т. п.).* ■ *Был хәлдән Паша теше тешкә йоҡмай ҡалтыранды.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОҒОШ (Р.: сытность *(пищи, корма);* И.: nourishing value; Т.: besin değeri) *и.*

1. Аҙыҡтың файҙа биреше, туҡлығы. □ Сытность, питательность *(пищи, корма). Арпаның йоғошо. Бутҡаның йоғошо.*

2. *күсм. ҡар.* **йоғонос**. *Һүҙҙең йоғошо. Хәбәренең бер йоғошо юҡ.*

ЙОҒОШЛАНЫУ (**йоғошлан-**) (Р.: заражаться; И.: become infected; Т.: tutulmak) *ҡ.*

1. Йоғошло ауырыу менән зарарланыу. □ Заражаться *(болезнью).* // Заражение. *Вирус менән йоғошланыу. Грипп менән йоғошланыу. Бешмә менән йоғошланған һөт.*

2. *күсм.* *Нимәнеңдер* йоғонтоһона, тәьҫиренә бирелеү; *нимә менәндер* мауығыу. □ Заражаться. *Уртаҡ эш менән йоғошланыу.* ■ *Башҡорт халҡы үҙаллылыҡ һәм автономия идеяһы менән йоғошланған.* Й. Солтанов.

ЙОҒОШЛО (Р.: заразный; И.: infectious; Т.: bulaşıcı) *с.*

1. Берәүҙән башҡаға күсә торған *(ауырыуға ҡарата).* □ Заразный, инфекционный. *Йоғошло сир. Йоғошло һыркау. Йоғошло ауырыу сығанаҡтары. Үсемлектәрҙең йоғошло ауырыуҙары. Йоғошло ауырыуҙар бүлеге. Йоғошло булыу. Йоғошло сирҙәргә ҡаршы тороу.* ■ *[Кинйәғол:] Йоғошло ауырыу булһа, быға тиклем бүтәндәргә лә йоғор ине.* А. Таһиров. *Уның [ҡымыҙҙың] тап шул үҙенсәлеге туберкулёзға һәм йоғошло эсәк таяҡсаларына ҡаршы уңышлы ҡулланыла ла инде.*

«Киске Өфө», № 45, 2011. *Шул [серәкәй] тарата зәһәр йоғошло ауырыуҙы.* «Ағиҙел», № 4, 2010. ● *Йоғошло таҙҙан ҡасҡаның яҡшы.* Мәҡәл.

2. *күсм. ҡар.* **йоғонсло.** *Йоғошло һүҙ. Һүҙе йоғошло булғаны өсөн уны хөрмәт итәләр.*

3. *һөйл.* Туҡлыҡ тойғоһо бирерлек; туҡлыҡлы. □ Сытный, питательный. *Йоғошло аҙыҡтар менән генә туҡланыу. Йоғошло ашамлыҡ.* ■ *Бөйрәкәйенең токомо үрсемле, һөтө ҡуйы, йоғошло булды.* Т. Ғарипова.

4. *күсм.* Кире тәьҫир иткән, йоғонто яһаған. □ Заразительный, прилипчивый. *Йоғошло ғәҙәт.*

ЙОҒОШЛОҠ (йоғошлоғо) (Р.: инфекционная болезнь; И.: infectious disease; Т.: bulaşma) *и. мед.*

Йоғошло ауырыу. □ Зараза, инфекция, инфекционное заболевание, заразная болезнь. *Йоғошлоҡ менән сирләү. Йоғошлоҡ эләктереү. Йоғошлоҡ менән көрәшеү юлдары.*

ЙОҒОШЛОЛОҠ (йоғошлолоғо) (Р.: инфекционность; И.: infectivity; Т.: bulaşıcılık) *и.*

1. Йоғошло (1) булыу хәле. □ Заразность, инфекционность. *Ауырыуҙың йоғошлолоғо. Вирустың йоғошлолоғо.*

2. *күсм.* Йоғошло (4) булыу сифаты. □ Заразительность. *Насар ҡылыҡтың йоғошлолоғо.*

ЙОҒОШМАЛЫ *с. диал. ҡар.* **йоғошло.** *Йоғошмалы сир. Йоғошмалы ауырыу йоҡтороу.*

ЙОҒОШОУ (йоғош-) (Р.: вертеться около; И.: hang about; Т.: yapışmak) *ҡ.*

Кемгәлер тартылып, эргәһендә уралыу; һырлығыу. □ Вертеться около *кого-л.;* крутиться возле *кого-л. Йоғошоп йөрөү. Йоғошоп барыу.* ■ *Холҡо яйһыҙ әҙәмгә инде ҡайтып йоғошма.* М. Аҡмулла.

ЙОҒОШҺОҘ (Р.: незаразный; И.: non-contagious; Т.: bulaşık olmayan) *с.*

1. Берәүҙән берәүгә күсмәй, йоҡмай торған *(ауырыуға ҡарата).* □ Незаразный. *Йоғошһоҙ ауырыу. Малдарҙың йоғошһоҙ ауырыуҙары. Йоғошһоҙ ауырыуҙарҙы асыҡлау.* ■ *Бала ҡорттарҙың ауырыуҙарын йоғошһоҙ һәм йоғошло ауырыуҙарға бүлеп йөрөтәләр.* Картотека фондынан.

2. *күсм. ҡар.* **йоғонсоһоҙ.** *Йоғошһоҙ һүҙ.* ■ *Билал уның [Васьканың] шулай дисциплинаға ҡаршы һүҙ ҡайтарыуын йоғошһоҙ эш һанап, уға яҡын килгәйне, Нистерев Васьканың ҡабырғаһына терһәге менән төрттө.* А. Таһиров.

3. *һөйл.* Туҡлығы булмаған, туҡлыҡһыҙ *(аҙыҡҡа ҡарата).* □ Несытный, непитательный *(о пище, кормах). Йоғошһоҙ аҙыҡ. Йоғошһоҙ үлән. Йоғошһоҙ аш.*

4. Килешһеҙ, ятышһыҙ. □ Неуместный, неподходящий. ■ *Бик боронғо, хатта иҫке осорҙарға ҡараған комартҡыларыбыҙ ҙа ҡайһы бер кәләм эйәләребеҙ тарафынан күп тигәндә XVI быуат менән тамғалана, һөҙөмтәлә сал тарихыбыҙ яһалма «сабыйландырылып», ҡолаҡҡа йоғошһоҙ һәм нигеҙһеҙ раҫлауҙар тыуып ҡуя.* Интернет селтәренән.

ЙОҒОШҺОҘЛАНДЫРЫЛЫУ (йоғошһоҙландырыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йоғошһоҙландырыу.** *страд. от* **йоғошһоҙландырыу.** *Фатир йоғошһоҙландырылды. Ятаҡ йоғошһоҙландырылған.*

ЙОҒОШҺОҘЛАНДЫРЫУ (йоғошһоҙландыр-) (Р.: обеззараживать; И.: disinfect; Т.: mikropsuzlaştırmak) *ҡ.*

Ауырыу таратыусы микробтарҙы бөтөрөү; йоғошһоҙ итеү, дезинфекция үткәреү. □ Обеззараживать, дезинфицировать, стерилизовать. // Обеззараживание, дезинфекция, стерилизация. *Бүлмәне йоғошһоҙландырыу. Кейемде йоғошһоҙландырыу. Йоғошһоҙландырыу сараһы.* ■ *Бәхетһеҙлеккә тарымау өсөн ошо ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү мөһим: бөтә хәүефле матдәләрҙе (дарыу, көнкүреш химияһы, йоғошһоҙландырыу, иретеү саралары .. һәм башҡаларҙы) балалар үрелеп алмаҫлыҡ урынға йәшерегеҙ.* «Башҡортостан», 17 февраль 2012.

ЙОҒОШҺОҘЛАНДЫРЫУСЫ (Р.: антисептический; И.: anticeptic; Т.: antiseptik) *с.*

Ауырыу таратыусы микробтарҙы бөтөрөүсе, антисептик. □ Антисептический. *Йоғошһоҙландырыусы саралар. Йоғошһоҙландырыусы дарыуҙар.* ■ *Көн һайын бүлмәләрҙе, йыһаздарҙы йоғошһоҙландырыусы*

көнкүреш саралары ярҙамында йыуығыҙ, һөртөгөҙ. «Башҡортостан», 15 ноябрь 2009.

ЙОҒОШҺОҘЛАНЫУ (йоғошһоҙлан-) (Р.: обеззараживаться; И.: become disinfected; Т.: mikropsuzlaşmak) *ҡ.*

Зарарлы бактерияларҙан таҙарыу. □ Обеззараживаться, дезинфицироваться. *Һыу йоғошһоҙлана. Орлоҡ йоғошһоҙланды. Ҡыш көнө һауа йоғошһоҙлана.*

ЙОД [рус. < гр. *iōdēs*] (Р.: йод; И.: iodine; Т.: tentürdiyot) *и.*

1. *хим.* Химик элемент, ҡара буҙ төҫтәге кристаллик матдә. □ Йод. / Йодный. *Йод эретмәһе. Радиоактив йод.* ■ *Йәшел сәйҙә B, C, P, PP, K, калий, баҡыр, фтор, цинк, йод кеүек витаминдар бар.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010. *Йодҡа бай диңгеҙ тоҙо, балығы, кәбеҫтәһе өҫтәлегеҙҙә йыш булһын.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

2. *мед.* Шул матдәнең спирттағы иретмәһе *(медицинала ҡулланыла).* □ Йодный раствор, йод. *Яраға йод һөртөү. Йод һатып алыу.* ■ *Инде медсестра ҡыҙыҡай, бармағын спирт менән мазуттан таҙартып, йод ҡына һөртә башлағайны, машина ҡысҡыртҡаны ишетелде.* Д. Бүләков. *Фельдшер Амантаевтың беләгенә жгут һалды, яраһын йыуып, йод һөрттө.* Р. Солтангәрәев.

ЙОДИЗМ [рус. < гр. *iodismus*] (Р.: йодизм; И.: iodism; Т.: iyodizm) *и. мед.*

Организмға йодты артыҡ индергәндә йәки уны ҡабул итә алмау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йод бүленеп сыҡҡан ерҙәрҙәге лайлалы тиресәнең асептик шешенеүе. □ Йодизм. *Йодизм менән ауырыу. Йодизм билдәләре.*

ЙОДЛАНҒАН (Р.: йодированный; И.: iodine added; Т.: iyotlu) *с.*

Йод ҡушылған. □ Йодированный. *Йодланған тоҙ. Йодланған һыу. Йодланған икмәк.* ■ *Организмға йод инһен өсөн диңгеҙ продукттары, йодланған тоҙ ашарға кәрәк.* «Йәшлек», 22 март 2008.

ЙОДЛАУ (йодла-) (Р.: йодировать; И.: iodate; Т.: iyotlamak) *ҡ.*

Нимәгәлер йод ҡушыу. □ Йодировать. *Тоҙҙо йодлау. Һыуҙы йодлау.*

ЙОДЛЫ (Р.: йодистый; И.: iodic; Т.: iyotlu) *с.*

Составында йод булған, йод ҡатнаш. □ Йодистый. *Йодлы металл. Йодлы көмөш. Йодлы тоҙ. Йодлы икмәк. Йодлы һыу.* ■ *Өҫтәмә компонентлы — йодлы, фторлы, төрлө минераллы тоҙ күпкә файҙалыраҡ.* «Йәшлек», 18 август 2009.

ЙОДОДЕРМА [рус. < гр. *iododerma* < *iodes* + *derma* 'тире'] (Р.: йододерма; И.: iododerma; Т.: cilt hastalığı) *и. мед.*

Йодлы дарыу ҡабул итеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән, һытҡылар рәүешендәге тире ауырыуы. □ Йододерма. *Төйөрлө йододерма. Һытҡылы йододерма.*

ЙОДОПСИН [рус. < гр. *ioeidēs* 'миләүшә төҫөндәге' + *ops* 'күҙ'] (Р.: йодопсин; И.: iodopsin; Т.: gözün retina tabakasındaki rod'ların yapısında bulunan ve görme olayında önemli rol oynayan bir iyot bileşiği) *и. мед.*

Күҙҙең селтәр ҡабыҡ һауытсаларында барлыҡҡа килеүсе һәм төҫлө күреүҙе тәьмин итеүсе күреү пигменттарының дөйөм атамаһы. □ Йодопсин.

ЙОДОФОРМ [рус. < гр. *iodoformium*] (Р.: йодоформ; И.: crystal iodine medicine; Т.: iyodoform) *и.*

Бик көслө еҫле һары кристалл порошок *(медицинала йоғошһоҙландырыу сараһы булараҡ ҡулланыла);* йод препараты. □ Йодоформ. ■ *Минең башым әйләнде йодоформдың еҫенән.* М. Тажи.

ЙОДТИРОЗИН [рус. < гр. *iōdēs* + *tyrhos* 'томан'] (Р.: йодтирозин; И.: iodotyrosines; Т.: iodotyrosines) *и. мед.*

Тирозиндың йодлы яһалмаларының дөйөм атамаһы *(йодтирозинды билдәләү ауырыуҙар диагностикаһында һәм ҡалҡан биҙенең төрлө ауырыуҙарын өйрәнеүҙә, дауалау маҡсатында ҡулланыла).* □ Йодтирозин. *Йодтирозинды синтезлау. Ҡандағы йодтирозиндарҙың кимәле. Йодтирозин әшкәртеү.*

ЙОДТИРОНИН [рус. < гр.] (Р.: йодтиронин; И.: iodothyronine; Т.: iodothyronine) *и. мед.*

Тирониндың йодлы яһалмаларының дөйөм атамаһы. □ Йодтиронин. *Йодтиро-*

ниндың барлыкка килеүе. Йодтирониндың йоғонтоhо.

ЙОҘАҠ (йоҙағы) [боронғо төрки *д'урғаг] (Р.: замок; И.: lock; Т.: kilit) *и.*

1. *Нимәнелер* бикләү осон эшләнгән аскыслы ҡоролма; бик. □ Замок. / Замковый; замочный. *Аҫмалы йоҙаҡ. Тимер йоҙаҡ. Ишек йоҙағы. Бура йоҙағы. Йоҙаҡ тишеге. Йоҙаҡты асыу. Йоҙаҡҡа бикләү. Әүәле ауылда ишекте бикләмәй, йоҙаҡ һалып ҡына сыға инек.* ■ *Элмә йоҙаҡ менән бикләнгән ҙур бүрәнә һарай тора.* Д. Бураҡаев. *Бер көн таҙ йорт тирәһендә йөрөгәндә ҡыҙ батшаның ун ике келәте барлығын, был келәттәрҙең барыһы ла йоҙаҡ менән бикле булыуын күреп ҡалған.* Әкиәттән. *Мәскәй батыр егетте тауҙағы өс ҡорос йоҙаҡ менән бикләнгән баҡыр ишекле мәмерйә янына алып бара.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Бүлмәлә тик еҙ сыйырыбының береһенә сүкеш, икенсеһенә быҡау йоҙағы аҫылған боронғо сәғәт өҙлөкһөҙ текелдәп, үткән ғүмерҙең секундтарын һанай.* Р. Ғабдрахманов. ● *Аҡсаның йоҙағы — һаран, ашлыҡтың йоҙағы — һалам.* Мәҡәл. *Аҡыл — ҡаҙна, күңел — йоҙаҡ, тел — асҡыс.* Мәҡәл. *Асҡыс йоҙағы менән, борсаҡ ҡуҙағы менән.* Мәҡәл. *Ауыҙ — йоҙаҡ, тел — тоҙаҡ.* Мәҡәл. *Донъя — йоҙаҡ, асҡысы — белем.* Мәҡәл. *Ир — келәт, ҡатын — йоҙаҡ.* Мәҡәл. *Йоҙағын эшләгән асҡысын да эшләр.* Мәҡәл. *Йоҙағына күрә асҡысы.* Мәҡәл. *Һәр йоҙаҡтың үҙ асҡысы.* Мәҡәл.

2. *хәрби.* Ҡайһы бер атыу ҡоралында атып ебәреү өсөн эшләнгән ҡулайлама. □ Затвор, замок *(оружия). Туп йоҙағы. Ҡорал йоҙағы.* ■ *Пулемёт ун биш минут эсендә боевой хәлгә килтерелде. Тик йоҙаҡ тотҡаһын ике тапҡыр шылтыратып бороп, кнопкаһын баҫырға ғына ҡалды.* И. Насыри.

3. Ағас конструкцияларҙа бүрәнә, бурса һ. б. өлөштәрҙе ҡаптырып, эләктереп ҡуйыу ысулы. □ Затвор, замок *(сруба). Йәшерен йоҙаҡ. Мунса бураһының йоҙағы. Йәшерен йоҙаҡ ҡуйыу.*

4. *инф.* Мәғлүмәттәргә инеү мөмкинлеге менән идара итеү өсөн ҡулланылған программа йәки мәғлүмәттәр коды. □ Замок. *Хәтер йоҙағы. Һаҡ йоҙағы.*

5. *миф.* Яман көстәрҙән, зәхмәттәрҙән һаҡлау көсөнә эйә булған әйбер; бетеү. □ Замок *(мифологизированный предмет; охраняет от злых сил; оберег). Йоҙаҡ элеү.* ■ *Ауыры төшмәһен тип, ҡатындың эсен һыйпап, итәген тегеп, бәләкәй йоҙаҡ элеп ҡуйғандар.* Башҡорттарҙың им-том китабынан. *Никаҳтары ғүмерле булһын тип, яман һүҙҙәр үтмәһен тип, йәштәр мөхәббәт күперенә йоҙаҡтар элә.* Башҡорттарҙың им-том китабынан.

♦ **Ете ҡат йоҙаҡ аҫтында (***йәки* **менән)** бик ныҡ, ышаныслы итеп йәшерелгән. □ *соотв.* За семью замками. ■ *Ни өсөн әле ул [Камалетдинов] Мәҙинәне күреү шатлығын ете ҡат йоҙаҡ менән биктә тоторға тейеш?* Т. Ғарипова.

ЙОҘАҠ ВАТЫУСЫ (Р.: взломщик; И.: picklock; Т.: kilit açma ustası, hırsız) *и.*

1. Йорт-йыһаз ҡарағы. □ Взломщик, вор. *Йоҙаҡ ватыусы йортто таҙартып сыҡҡан. Йоҙаҡ ватыусыны тотоу.*

2. Йоҙаҡтарҙы ватып асыу менән шөғөлләнгән белгес. □ Слесарь, взломщик сейфов.

3. *инф.* Шаярыу, кешеләрҙең мәғлүмәттәрен алыу, ялған мәғлүмәт индереү һ. б. маҡсат менән сит кешеләрҙең мәғлүмәти системаларын ватып ингән компьютер хулиганы. □ Хакер. / Хакерский.

ЙОҘАҠЛАНЫУ (йоҙаҡлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йоҙаҡлау 1.** *страд. от* **йоҙаҡлау 1.** *Өй ишеге йоҙаҡланған.* ■ *Айбулат .. бәләкәй саҡта уға ҡарт әсәһе һөйләгән әкиәттәге ете йоҙаҡ менән йоҙаҡланған ете ишекле алтын һарай эсендәге алтын тултырылған хазина көрсәктәрен күҙ алдына килтерә.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОҘАҠЛАТЫУ (йоҙаҡлат-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йоҙаҡлау 1.** *понуд. от* **йоҙаҡлау 1.** *Ишекте йоҙаҡлатыу. Компьютерҙы йоҙаҡлатыу.*

ЙОҘАҠЛАУ (йоҙаҡла-) (Р.: запирать; И.: lock; Т.: kilitlemek) *ҡ.*

1. Йоҙаҡ (1) менән бикләү, йоҙаҡ һалыу. □ Запирать, закрывать на замок. *Йоҙаҡлап ҡуйыу. Ишекте йоҙаҡлау. Келәтте йоҙаҡлау.*

■ *Пугачёвсылар, һаҡсыларҙы баструкка бикләп, ишекте шартлатып йоҙаҡлап алғас, ҡайҙалыр барып ниҙер эшләргә ашыҡманылар.* Б. Рафиҡов. *Гөлйөҙөм шулай итеп, Айбулат көлтә бушатып, ат еккәнсе, һыйырын көтөүгә ҡыуып, өйҙәге эштәрҙе бөтә һалып, балалары өҫтөнән йоҙаҡланы.* Һ. Дәүләтшина. *[Өлгөнөң олатаһы] кәмәһен һәләк ҙур йоҙаҡ менән йоҙаҡлап киткән.* М. Кәрим.

2. Йоҙаҡ (3) ҡуйыу; йоҙаҡлы итеү. □ Соединять брёвна сруба в замок. *Бураны йоҙаҡлап эшләү. Өйҙө йоҙаҡлап бурау.*

3. *инф.* Ағымдағы операцияның эше тамамланыуға тиклем киләһе операцияларҙың ебәрелеүен тыйыу. □ Блокировка. *Мөрәжәғәтте йоҙаҡлау. Клавиатураны йоҙаҡлау. Хәтерҙе йоҙаҡлау. Сығанаҡты йоҙаҡлау. Локаль йоҙаҡлау. Йоҙаҡлау ысулы.*

ЙОҘАҠЛЫ I (Р.: запертый; И.: closed, locked; Т.: kilitli) *с.*

1. Йоҙаҡ (1) менән бикләнгән. □ Закрытый, запертый на замок; на замке. *Йоҙаҡлы бүлмә. Йоҙаҡлы сумаҙан.* ■ *Бер һалдат менән унтер-офицер Монасиптың йоҙаҡлы бүлмәне күрһәтеүен һораны.* А. Таһиров. *Ҡараңғы төштө. Ә йоҙаҡлы таш лавка ҡәбер кеүек тыныс ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

2. *күсм.* Кешенән йәшерен; бикле. □ Закрытый, под замком. *Йоҙаҡлы күңел. Йоҙаҡлы йөрәк.* ■ *[Зөһрә:] Дөрөҫ әйтәһең, Әхәт, башы-аяғы бер тын уның [Ғәлимдең], йөҙө лә, күңеле лә йоҙаҡлы.* А. Таһиров.

ЙОҘАҠЛЫ II (Р.: взаперти; И.: locked up; Т.: kapatılmış) *р.*

1. Бик аҫтында, йоҙаҡ аҫтында. □ Взаперти. *Йоҙаҡлы булыу. Йоҙаҡлы тотоу.* ■ *Өйҙә бөтә нәмә йоҙаҡлы булғанлыҡтан, Вәзир бәләкәйҙән үк аҡтарынырға, һәрмәнергә өйрәнде.* М. Кәрим.

2. *күсм.* Йәшерен, *кемдәндер* йәшереп. □ Взаперти, тайно, секретно, скрытно. *Хистәрҙе йоҙаҡлы тотоу.* ■ *Күҙең йомоҡ, ҡолағың бикле, телең йоҙаҡлы булһын.* Ә. Хәкимов.

ЙОҘАҠСЫ (Р.: замочник; И.: locks maker; Т.: kilit ustası) *и.*

1. Йоҙаҡ эшләү оҫтаһы. □ Замочник. *Йоҙаҡсы булып эшләү. Йоҙаҡсыны саҡыртыу.*

2. Һәр йоҙаҡты аса алыусы кеше. □ Медвежатник. *Сейфты йоҙаҡсынан астырыу.*

ЙОҘАҠҺЫҘ I (Р.: незапертый; И.: unlocked; Т.: kilitsiz) *с.*

Йоҙаҡ (1) менән бикләнмәгән, йоҙаҡ һалынмаған. □ Незапертый, без замка, незапирающийся на замок. *Йоҙаҡһыҙ йорт. Йоҙаҡһыҙ келәт. Йоҙаҡһыҙ бүлмә.*

ЙОҘАҠҺЫҘ II (Р.: незаперто; И.: unlocked; Т.: kilitsiz) *р.*

Йоҙаҡҡа бикләнмәй, йоҙаҡ һалмай. □ Незаперто, без замка. *Йоҙаҡһыҙ ҡалдырыу. Йоҙаҡһыҙ булыу.*

ЙОҘАҠ ЭЙӘҺЕ (Р.: дух замка; И.: spirit of the lock; Т.: kilidin iyesi) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, яман күҙтәрҙән, зәхмәттәрҙән һаҡлаусы әйберҙең эйәһе. □ Дух замка. ■ *Башҡорт мифологияһында йоҙаҡ эйәһе тигән зат та бар.* Ф. Хисамитдинова.

ЙОҘРОҠ (йоҙроғо) [боронғо төрки *йумдурук*] (Р.: кулак; И.: fist; Т.: yumruk) *и.*

Бармаҡтары уҫҡа ҡыҫып йомолған ҡул осо. □ Кулак. / Кулачный. *Йоҙроҡ төйөү. Йоҙроҡ менән өҫтәлгә һуғыу. Йоҙроҡ ҙурлыҡ. Йоҙроҡто танауға терәү. Йоҙроҡ менән төртөү. Йоҙроҡ һуғышы.* ■ *Нуриханов иренен салышайтты, йоҙроғо менән шаплатып кресло башына һуғып алды.* Д. Бүләков. *Гөлнур шулай һөйләнеп ултыра торғас, ике бүлмә араһындағы таҡта стенаға йоҙроғо менән бер нисә тапҡыр һуғып ҡуйҙы.* М. Тажи. ● *Йоҙроҡ ҙур булһа, еңгә һыймаҫ.* Мәҡәл. *Ҡурҡаҡ кешенең йоҙроғо кеҫәһендә була.* Мәҡәл. *Сит кешенең һөйөүе — үҙ инәңдең йоҙроҡ төйөүе.* Мәҡәл. *Һуғыштан һуң йоҙроҡ төймәйҙәр.* Мәҡәл. *Яуҙан аҙаҡ йоҙроҡ күтәргән.* Мәҡәл.

♦ **Йоҙроҡ ашау** (*йәки* **алыу**) туҡмалыу. □ *соотв.* Отведать кулаков (тумаков). *Ҡылған эштәре өсөн йоҙроҡ ашап ҡына торҙо.* **Йоҙроҡ хәтле** (*йәки* **саҡлы, тиклем**) үҙ самаһынан ҙур (бәләкәй) булған бәләкәй (ҙур) нәмәгә әйтелә. □ С кулак (*при преувеличении маленького или преуменьшении большого предмета*). ■ *Йоҙроҡ хәтле генә бер өйҙөң һалам һымаҡ ҡына мөрйәһенән ҡыл*

күүек кенә төтөн сығып тора, ти. Әкиәттән. **Йығылғанға** – **йоҙроҡ** бераүгә өҫтө-өҫтөнә бәлә килгәндә әйтелә. □ Битого бьют.

ЙОҘРОҠ ИМЕ (Р.: заговаривание с помощью кулака; И.: fist charm; Т.: yumruk yardımında büyü yapmak) *и. миф.*

Йоҙроҡ ярҙамында имләү *(күҙгә сыҡҡан арпаны өшкөрөп дауалау ысулы).* □ Заговаривание с помощью кулака *(способ заговаривания ячменя на глазу).* ■ *Арпаны йоҙроҡ менән төртөп-төртөп имләйҙәр. Шуны йоҙроҡ име, тиҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОҘРОҠ КҮРҺӘТЕҮ (йоҙроҡ күрһәт-) (Р.: показывать кулак; И.: threaten with a fist; Т.: yumruk göstermek) *ҡ.*

1. *Кемделер* ҡурҡытыу өсөн йоҙроҡ менән янау. □ Показывать кулак, погрозить кулаком. *Йоҙроҡ күрһәтеп ҡасыу.* ■ *Мин [Әминә] иләп кенә өләсәйҙең артынан Рәғиҙәгә йоҙроҡ күрһәтәм.* «Шоңҡар», № 9, 2011.

2. *миф.* Күҙ тейеүҙән һаҡланыу ысулы. □ Показывать кукиш *(способ профилактики от сглаза).* ■ *Һине маҡтаһалар, күҙ теймәһен тип, йәшереп кенә йоҙроҡ күрһәтеп торорға кәрәк.* Башҡорттарҙың им-том китабынан.

ЙОҘРОҠЛАНЫУ (йоҙроҡлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йоҙроҡлау 1.** *страд. от* **йоҙроҡлау 1.** ■ *Батыр үҙенең ҡыҙа башлауын тойҙо. Бындай саҡта яңаҡ мускулдары дерелдәй, ирендәре ҡымтыла һәм ҡулдары йоҙроҡлана.* И. Ғиззәтуллин. *Ҡаҙнабаев ырғып торҙо, бөтә тәне, йәне менән ҡалтыранып, йоҙроҡланып, ҡулдарында әллә нindәй ҡағыҙҙарҙы иҙҙе, бөгәрләне, күҙҙәре аларып китте.* Д. Бүләков.

ЙОҘРОҠЛАУ (йоҙроҡла-) (Р.: сжать пальцы в кулак; И.: clench a fist; Т.: yumruklarını sıkmak) *ҡ.*

1. Бармаҡтарҙы ус төбөнә ҡыҫып йомарлау, йоҙроҡто йомоу. □ Сжать пальцы в кулак. *Ҡан баҫымын үлсәгәндә ҡулдарҙы йоҙроҡларға кәрәк.* ■ *Булат инде көрәктәй ҡулын йоҙроҡлап, яһанып үк бөткәйне, ләкин дуҫының тыныс хәрәкәте һәм һүҙе уның ярһыуын баҫты.* Б. Бикбай.

2. Йоҙроҡ менән туҡмау. □ Бить (стучать) кулаком; избивать кулаком (кулаками). *Йоҙроҡлап туҡмау. Йоҙроҡлап һуғыу. Йоҙроҡларға тотоноу.* ■ *[Генерал Циалковский] яуап хаты һуңлаһа, яҡындағы һыбайлы башҡорт егетен йоҙроҡлап туҡмаған.* Я. Хамматов.

ЙОҘРОҠЛАШЫУ (йоҙроҡлаш-) (Р.: драться на кулаках; И.: have a fist fight; Т.: yumruklaşmak) *ҡ.*

Йоҙроҡ менән һуғышыу. □ Драться на кулаках, биться на кулачках, драться на кулачках. *Йоҙроҡлашып алыу. Йоҙроҡлашыуға етеү.* ■ *Улар [Шакир менән Закир] айғыр өсөн һәр ваҡыт талашалар. Ҡайһы саҡта йоҙроҡлашып та алалар.* Д. Юлтый.

ЙОҘРОҠ ТӨЙНӘҮ (йоҙроҡ төйнә-) (Р.: угрожать; И.: threaten; Т.: yumruk sıkmak) *ҡ.*

Янау, ҡурҡытыу. □ Угрожать. ■ *Мин донъяла йоҙроҡ төйнәп йәшәмәйем. Ул ят йола. Йоҙроҡ төйнәп йәшәүсенең тик дошманы ғына була.* М. Кәрим.

ЙОҘРОҠ ХОҠУҒЫ (Р.: кулачное право; И.: club law; Т.: yumruk hakkı) *и.*

Көслөрәк кешенең артығыраҡ хоҡуҡ алыуы, бәхәстәрҙе көс ярҙамында хәл итеү. □ Кулачное право, фаустрехт. *Йоҙроҡ хоҡуғы менән хәл итеү.*

ЙОЗАФ [ғәр. حذف 'төшөрөп ҡалдырыу'] (Р.: неясный; И.: indistinct, vague; Т.: seçik olmayan) *с. иҫк. кит.*

Аңлашылмаған, аңлашылып етмәгән. □ Неясный. ■ *Тел төбөмдә бер һүҙем бар, һүҙ төбөндә бик лайыҡ. Бер йозаф һүҙ булһа ла гәр, бер изаһыҙ үтмәйек.* Ш. Бабич.

ЙОҠ I (йоғо) (Р.: прилипший остаток; И.: stuck remainder; Т.: yapışık kalıntı) *и.*

1. Йоғоп, яғылып ҡалған нәмә. □ Прилипший остаток *чего-л. (пищи, краски и т. п.). Һауытта бояуҙың йоғо ҡала.* ■ *Шырпы һымаҡ яна минуттар, йөрәгемә минең сыйылһа, янар юлдарға гел юлыҡҡас, янғын йоғо хәтһеҙ йыйылған.* Й. Солтанов.

2. *күсм.* Файҙа йәки дан өҫтәгән, килешкән нәмә. □ *что-л.* прославляющее или приносящее пользу. *Йоҡ арттырыусан.* ■ *Ат аунаһа – төк ҡалыр, ир яулаһа – йоҡ ҡалыр.* Й. Солтанов.

ЙОҠ II (йоғо) (Р.: глава рода; И.: ancestor, forefather; Т.: soyun başı) *и. диал.*

Бер төптән, бер сығанаҡтан таралған кешеләрҙең башы, ырыу башы. □ Глава рода, родоначальник. ■ *Ырыуыбыҙҙың йоғо Шәғәле Шаҡманға барып тоташа.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҠА I [боронғо төрки *йуҡа, йувға, йувҡа, йуйҡа*] (Р.: тонкий; И.: thin; Т.: ince) *с.*

1. Ике яҡ йөҙ өҫтө сағыштырмаса яҡын; ҡалынлығы ҙур түгел; *киреһе* — ҡалын. □ Тонкий. *Йоҡа туҡыма. Йоҡа телем. Йоҡа балаҫ. Йоҡа ҡатлам. Йоҡа юрған. Йоҡа дәфтәр.* ■ *Аптырағас, Юлдаш та башҡалар кеүек дөйөм табаҡтан ашарға тотоноп китте, һөҙләктә генә бешкән йоҡа һалма ла, һимеҙ һарыҡ ите лә ғәжәп тәмле ине.* З. Биишева. *Ғабдуллаға ҡустәнәскә тигән йомортҡалар шундай йоҡа ҡабыҡлы булып сыҡты.* М. Кәрим. *[Фәйзулла] ҡырсындан һайлап алған йоҡа таштарҙы шаршынан түбәнерәк тоноҡ һыу өҫтөнән кәйелтте.* Я. Хамматов.

2. Йылы тотоу яғынан насар булған, һырылмаған, еңел *(кейемгә ҡарата).* □ Тонкий, лёгкий *(об одежде). Йоҡа кейем. Йоҡа күлдәк. Йоҡа салбар.* ■ *Был егет унан да [Әхмәттән] ярлыраҡ булһа кәрәк, ана бит, йоҡа ғына куртка эсендә нисек ҡалтырай.* Интернет селтәренән. *Күҙгә бысраҡ көндәр, ел-ямғырҙар иңләп һибә һалҡын тамсылар; ярлыларҙың, үкһеҙ етемдәрҙең йоҡа кейемдәрен мансыйҙар.* Д. Юлтый. ● *Атыу тороу байҙарса, өҫтә кейем йоҡараҡ.* Мәҡәл.

3. Һирәк булып үҫкән; ҡуйы түгел. □ Редкий, жидкий. *Йоҡа урман. Йоҡа мыйыҡ. Быйыл үлән йоҡа булды.* ■ *Баҡуй йоҡа булғас ни, үҙебеҙгә тип сапҡан бесән оҫҡонлоларынан алда кипте.* Н. Мусин. *Тар маңлайлы, осло танаулы, йоҡа сәсле чех полковнигы аяҡ үрә тороп, шпорлы үксәләрен бер-береһенә сәкәштерҙе, элек тә алға сығып торған эйәген ҡутәрә төштө.* А. Таһиров.

4. Үтә күренеп торған; ҡуйы түгел. □ Редкий; прозрачный. ■ *[Марусяның] күҙ төптәрен йоҡа ғына күләгә ҡаплаған.* Һ. Дәүләтшина.

5. Ит, май ҡунмаған, итләс түгел; ҡаҡса. □ Худощавый, сухопарый. *Йоҡа кәүҙәле. Йоҡа кеше.* ■ *Уның [кажандың] аҫтынан тәпәшәк кенә буйлы, йоҡа кәүҙәле, ялтырап торған ҡара сырайлы, осло эйәкле һәм йөҙ түбән ҡарашлы бер кеше килеп сыҡты.* И. Насыри. *Мәһинурҙың йоҡа ғына кәүҙәһен ҡосаҡлап, Мәҙинә лә ҡушылып илай.* Т. Ғарипова.

6. *күсм.* Етерлек дәрәжәнән аҙ; наҡыҫ. □ Недостаточный, скудный. *Аҡса яғы йоҡараҡ. Ашау яғы йоҡа.* ■ *Ибрайҙың башы йоҡа уның. Бындай йәпле фекер уның уйына бер ваҡытта ла киләсәк түгел.* М. Кәрим.

♦ **Елкәһе йоҡа** (*йәки* **йоҡа елкә**) ауыр эшкә яраҡһыҙ булған, эш яратмаған кешегә әйтелә. □ Лентяй. ■ *Йорт-ҡура, өйҙәге эшкә елкәһе йоҡалар гел шулай колхоз йомошон сәбәп итеүсән инде ул.* Ә. Әминев. **Кеҫәһе йоҡа** аҡсаһы юҡ; ярлы. □ Безденежный, не имеющий денег. ■ *Кеҫәһе йоҡа уның, бер мандый алмай.* Экспедиция материалдарынан. **Тиреһе йоҡа** (*йәки* **йоҡа тиреле**) ауырлыҡҡа, эшкә сыҙамһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ У него шкура тонка. *соотв.* Кишка тонка. ■ *[Етембай — Моталлапҡа:] Үҙең дә бигерәк йоҡа тиреле икәнһең.* М. Хәйҙәров.

ЙОҠА II [боронғо төрки *йуҡа, йувға, йувҡа, йуйҡа*] (Р.: тонко; И.: thinly; Т.: ince) *р.*

1. Нәҙек итеп. □ Тонко. *Йоҡа юныу. Йоҡа итеп йәйеү.* ■ *Йоҡа ғына итеп ҡойолған майлы ҡоймаҡты Ҡыҙырас элек бик ярата торғайны.* З. Биишева. *Әҙер ҡамырҙы йоҡа итеп йәйергә һәм 4х4 см ҙурлығындағы шаҡмаҡтарға киҫергә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010. *Байбисә, ауыҙ эсенән шыбырлап, Һабрауҙың иңенә йоҡа итеп һырылған ҡупшы елән һалды, ҡулына ҙур төйөнсөк тотторҙо.* Ә. Хәкимов.

2. Еңел итеп. □ Легко, не кутаясь, налегке. *Йоҡа кейенеп йөрөй. Йоҡа йөрөү. Йоҡа ғына кейенә лә, ҡалтыранып тик йөрөй.*

ЙОҠА III [боронғо төрки *йувға*] *и. диал.*

1. *кар.* **күлсә.** *Йоҡа бешереү. Йоҡаға ҡамыр әҙерләү.* ■ *Ошо йоҡаны ҡаймаҡ менән ашап сәй эсһәм, доньям матур, теүәл кеүек тойола.* Экспедиция материалдарынан.

2. *кар.* **ҡоймаҡ.** *Йоҡа майлау.* ■ *Ике йома араһында йоҡа бешерәбеҙ, әруахтар*

риза булһын тип. Экспедиция материалдарынан.

ЙОҠА IV *с. диал. кар.* **ярлы.** *Йоҡа кеше.* ■ *Нәҫеле менән йоҡа улар. Бәғзеләренең бер кәзәнән башҡа бер нәмәһе лә юҡ.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҠА БУЛЫУ (йоҡа бул-) (Р.: жить без достатка; И.: live poorly; live from hand to mouth; Т.: sıkıntı içinde yaşamak) *ҡ. диал.*

Етешһеҙ тормош итеү. □ Еле сводить концы, жить без достатка. *Көнитмеше йоҡа булды.*

ЙОҠАГИТ (Р.: кусок баранины; И.: a piece of mutton; Т.: koyun eti parçası) *и. диал.*

Көрәштә еңеүселәргә бүләк итеп бирелгән ҡыҫҡа ҡабырға ите; һебә. □ Кусок баранины *(мясо на ложных рёбрах),* который вручался победителям башкирской борьбы курэш. *Йоҡағит өсөн көрәшеү. Йоҡағит алыу. Йоҡағит биреү.*

ЙОҠАҠ *с. диал. кар.* **йоҡа I.** *Йоҡаҡ пальто. Йоҡаҡ тун.* ■ *Бында [алаңҡырт ағаслыҡта] үлән йоҡаҡ булһа ла, бик таҙа — ҡыйҒаҡ үлән генә, мал яратып ашар әле.* Н. Мусин. *Сәлимгәрәй күлдәген сисеп, сәкмәне ятҡан оло таш өҫтөнә һалды. Өҫтөнә йоҡаҡ ҡына камзул кейҙе.* Я. Хамматов.

ЙОҠА ҠОРМАН (Р.: сырть; И.: vimba bream; Т.: eğrez balığı) *и. зоол.*

Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған, Балтика, Ҡара һәм Азов диңгеҙҙәренә ҡоя торған йылғаларҙа йәшәүсе аҡ итле, көмөш төҫөндәге уртаса ҙурлыҡтағы балыҡ. □ Сырть, рыбец (лат. *Vimba vimba*). *Йоҡа ҡорманға ау ҡуйыу. Йоҡа ҡорман тотоу.*

ЙОҠАЛАУ (йоҡала-) *ҡ. диал. кар.* **йоҡартыу.** *Йышып йоҡалау. Йоҡалап ҡуйыу. Кейемде йыш йыуып йоҡалау.*

ЙОҠАЛТАЙ *с. диал. кар.* **ҡаҡса.** *Йоҡалтай кәүҙәле. Йоҡалтай яңаҡ. Йоҡалтай кеше. Йоҡалтай әбей.*

ЙОҠАЛЫҠ (йоҡалығы) (Р.: тонкость; И.: thinness; Т.: incelik) *и.*

Йоҡа булыу хәле. □ Тонкость; прозрачность. *Таҡтаның йоҡалығы.* ■ *[Котлобаев] атлай-атлай ҙа, декабрь яҡынлашыуға ҡарамаҫтан, ҡарҙың үтә йоҡалығына, запчасть етешмәү арҡаһында тракторҙар ремонтлауҙың тотҡарланыуына, тағы әллә ниндәй етешһеҙлектәргә әсенеп ҡуя.* Ә. Хәкимов. *Тулған ай аҫтында болоттарҙың йоҡалыҡтары, тиҙ шыуышыуҙары айырым-асыҡ күренә.* А. Таһиров.

ЙОҠАН (Р.: потомство; И.: posterity; Т.: dōl dōş) *и. иҫк.*

Нәҫел-ырыуҙың тамыры, тоҡомо, заты; йыуата. □ Потомство, род. *Ҡонайҙарҙың йоҡаны ныҡ. Әсәһенең йоҡаны.*

♦ **Йоҡаның ҡороһон** ҡарғағанда әйтелә. □ *прокл.* Чтоб твой род вымер! Чтоб твоё потомство перевелось!

ЙОҠАРТТЫРЫУ (йоҡарттыр-) *ҡ. йокм. кар.* **йоҡартыу.** *понуд. от* **йоҡартыу.** *Таҡтаны йоҡарттырыу. Ҡамырҙы йоҡарттырыу.*

ЙОҠАРТЫЛЫУ (йоҡартыл-) *ҡ. төш. кар.* **йоҡартыу.** *страд. от* **йоҡартыу.** *Йәймә йоҡартылды. Таҡта йышып йоҡартылды.*

ЙОҠАРТЫУ (йоҡарт-) (Р.: утончать; И.: make thinner; Т.: inceltmek) *ҡ.*

Йоҡа (1) хәлгә килтереү, йоҡаға әйләндереү. □ Утончать, делать более тонким. *Ҡамырҙы йәйеп йоҡартыу. Йоҡартып ҡырыу. Йоҡартып йышыу.* ■ *[Аҙнаев] .. бер нисә урындан тимер айыл ышҡып йоҡартҡан һорғолт ҡайышы менән билен ҡыҫа быуып, һыуыҡ саҡтарҙа ла хәрби формала йөрөй бирҙе.* Н. Мусин. *[Кеше] һигеҙенсе тотамы тәңгәленән осон киҫте, тишектәр яһаны ла, ауыҙға ҡаба торған яғын бәке мороно менән йоҡартып ҡырғас, ҡурайҙы тешенә терәне.* Н. Мусин.

ЙОҠАРЫНЫУ (йоҡарын-) *ҡ. диал. кар.* **ябығыу.** *Ҡыҙ йоҡарынып киткән. Һуғыш мәлендә халыҡ ныҡ йоҡарынды.*

ЙОҠАРЫУ (йоҡар-) (Р.: утончаться; И.: become thin; Т.: incelmek) *ҡ.*

1. Ҡалындан йоҡаға әйләнеү. □ Утончаться, становиться более тонким. *Иҙән йоҡарған. Итектең табаны йоҡарған.* ■ *Был хужалыҡтың күп баҫыуҙарында ҡара тупраҡ йоҡарғайны.* Н. Мусин. *Ҡыш буйы ер өҫтөн юрған кеүек ҡаплап ятҡан көрттәр хәҙер көндән-көн йоҡарҙылар.* Ә. Чаныш. *Төньяҡ полюста океандың боҙ япмаһы һиҙелерлек йоҡарған.* «Башҡортостан», 25 май 2011.

Ҡалын ҡаты ҡар күҙгә күренеп йоҡара, урыны-урыны менән ҡорама юрғандай сыбарлана башлай. Р. Өмөтбаев.

2. Ҡуйынан һирәккә әйләнеү. □ Становиться редким. *Ирҙең сәсе йоҡарған.* ■ *Уҡыусылар йыйылып бөтөр-бөтмәҫтән, урта буйлы, сәстәре арыу уҡ йоҡара төшкән ағай йомшаҡ ҡына баҫып килеп инде.* И. Кинйәбулатов.

3. Шыйыҡыраҡҡа, һирәккә әйләнеү. □ Становиться жидким, редким. *Йоҡара төшөү. Киҫкә табан ҡуҡтәге болоттар йоҡарҙы.*

4. Һимеҙҙән ябыҡҡа әйләнеү. □ Похудеть, становиться худым. *Ябығып, йоҡарып ҡалыу.* ■ *Миңлекамал хәҙер бик шат йөрөй, иртән һәм кис һауа һыйырҙы, ала быҙау ғына, үҫкән һайын, таҡта кеүек булып йоҡарҙы.* Картотека фондынан.

5. *күсм.* Ярлыланыу, фәҡирләнеү. □ Беднеть, нищать; скудеть. *Йоҡарып китеү. Һуғыштан һуң халыҡ ныҡ йоҡарҙы.*

ЙОҠА САБАҠ (сабағы) (Р.: синец; И.: zope; Т.: sazangillerden bir balık türü) *и. зоол. диал.*

Ҡорбан балыҡтар ғаиләһенә ҡараған йәшел һыртлы йоҡа ғына йылтыр йылға балығы; күкйөн. □ Синец *(рыба)* (лат. *Abramis ballerus*).

ЙОҠАСАЙ *и. диал. ҡар.* **сабаҡ I.** *Йоҡасай тотоу. Йоҡасай тәңкәһе.*

ЙОҠҠАН *и. диал. ҡар.* **яғыныс.** *Йоҡҡан һөртөү. Кәртәгә йоҡҡан ҡалдырыу.*

ЙОҠЛАҒАН ДЕБЕТ (Р.: залежавшийся пух; И.: stale down; Т.: eskimiş tüy) *и.*

Оҙаҡ ятыу йәки ваҡытында тарап алмау сәбәпле ойошоп, сифаты насарланған дебет; эрегән дебет. □ Залежавшийся пух.

ЙОҠЛАЙ АЛМАУ (йоҡлай алма-) (Р.: страдать бессонницей; И.: suffer from insomnia; Т.: uykusuzluktan kıvranmak) *ҡ.*

Йоҡоһоҙлоҡтан интегеү. □ Страдать бессонницей; не смочь уснуть. *Таңға тиклем йоҡлай алмау.* ■ *Ярты төндә уянып, йоҡлай алмай уйланып, уйлап ятҡан уйҙарҙы, таралышҡан ҡуйҙарҙы ҡалай итеп йыяйым, ҡалай итеп тыяйым?* Р. Ғарипов.

ЙОҠЛАМЫШ I *и. диал. ҡар.* **йоҡо.** *Татлы йоҡламыш. Йоҡламыш бөтөү. Балаңың йоҡламышы бар.*

ЙОҠЛАМЫШ II *и. диал. ҡар.* **йоҡосо.** *Бесәй кеүек йоҡламыш беҙҙең кейәү. Йоҡламыш бала.*

ЙОҠЛАП АЛЫУ (йоҡлап ал-) (Р.: поспать; И.: have a nap; Т.: biraz uyumak) *ҡ.*

Серем итеп алыу, бер аҙ йоҡлау. □ Поспать, вздремнуть. *Төштән һуң йоҡлап алыу. Берәй сәғәт йоҡлап алыу.* ■ *Ире йоҡлап алған. Торғас, ҡатынына хандың нимә бойорғанын һөйләп биргән.* Әкиәттән.

ЙОҠЛАП ЙӨРӨҮ (йоҡлап йөрө-) (Р.: быть беспечным; И.: be carefree; Т.: dalgın olmak) *ҡ.*

Вайымһыҙ, иғтибарһыҙ булыу. □ Быть беспечным (рассеянным). *Бөгөнгө заманда йоҡлап йөрөргә ярамай. Тормош йоҡлап йөрөгәндәрҙе яратмай.*

ЙОҠЛАП КИТЕҮ (йоҡлап кит-) (Р.: заснуть; И.: fall asleep; Т.: uyuya kalmak) *ҡ.*

Йоҡо хәленә инеү. □ Заснуть, уснуть, погрузиться в сон. *Таңға табан ғына йоҡлап китеү.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс, әҙерәк серем итеп алайым әле, тип, тирәк төбөнә ятты, ти. Ул шундай йоҡлап китте, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Әбей, шулай һөйләнеп ултыра торғас, талғын ғына елле, йомшаҡ тау һауаһына иҫергәндәй, башын муккә һалып йоҡлап китте.* М. Тажи.

ЙОҠЛАП ҠАЛЫУ (йоҡлап ҡал-) (Р.: проспать; И.: sleep over; Т.: fazla uyumak) *ҡ.*

1. Кәрәкле ваҡыттан һуңлап уяныу. □ Проспать. *Дәреҫкә йоҡлап ҡалыу.* ■ *[Селиванов:] Йоҡлап ҡала яҙғанмын. Радистарҙы алмаштырыр ваҡыт еткән.* Ә. Хәкимов.

2. *күсм.* Нимәнелер күҙ уңынан ысҡындырыу, һиҙгерлек, уяулыҡ күрһәтмәү. □ Проспать, упустить, прозевать; проморгать. ■ *Хәҙер йоҡлап ҡалырға ярамай, бер минутҡа һуңланыңмы, ғүмер буйы үкенергә тура килмәгәйе.* Д. Бүләков. *[Арғынбаев:] Бында йоҡлап ҡалырға ярамай. Кеше хәҙерге заманда үҙен күрһәтмәһә, башҡалар хәстәрләмәҫ.* Д. Бүләков.

ЙОҠЛАР-ЙОҠЛАМАҪ (Р.: в полудрёме; И.: drowsily; Т.: yarı uyur yarı uyanık hal) *р.*

Уяулы-йоҡоло, йоҡо аралаш, ярым йоҡоло. □ В полудрёме, в полусонном (в дремотном) состоянии. *Йоҡлар-йоҡламаҫ ятыу.* ■ *Ҡарт мейескә терәлеберәк, оҙон һикелә йоҡлар-йоҡламаҫ ята ине.* М. Хужин. *[Әхәт] ошолай әтләнә-әтләнә, йоҡлар-йоҡламаҫ ултыра торғас, икенсе дәрес тә бөтөп ҡуйҙы.* Картотека фондынан.

ЙОҠЛАТҠЫС (Р.: снотворный; И.: soporific; Т.: uyutucu) *с.*

1. Йоҡлата, йоҡо килтерә торған *(дарыу һ.б. тураһында).* □ Снотворный; усыпительный. *Йоҡлатҡыс дарыу. Йоҡлатҡыс онтаҡ. Йоҡлатҡыс үлән.*

2. Йоҡо килтергес, эс бошорғос. □ Усыпляющий; скучный, неинтересный. *Йоҡлатҡыс көн. Йоҡлатҡыс лекция. Йоҡлатҡыс фильм ҡарау.*

ЙОҠЛАТЫЛЫУ (йоҡлатыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йоҡлатыу.** *страд. от* **йоҡлатыу.** ■ *Йәш балалар юҡ-барҙы ишетмәһен өсөн күптән йоҡлатылған.* С. Агиш. *Үҙе [Кәбир], ирекһеҙҙән, дарыуҙар менән йоҡлатылған кеше һымаҡ, тағы ла уйға, тағы ла ҡатыраҡ уйға сумды.* Б. Ишемғол.

ЙОҠЛАТЫУ (йоҡлат-) (Р.: усыплять; И.: lull to sleep; Т.: uyutmak) *ҡ.*

1. Йоҡоға ебәреү, йоҡоға талдырыу. □ Усыплять, укладывать спать; убаюкать, укачивать. // Убаюкивание, укачивание. *Баланы йоҡлатыу. Бәүетеп йоҡлатыу.* ■ *Юлдыбай ишек тауышына уянған малайын барып һөйҙө лә уның сәңгелдәген аҡрын ғына һелкетеп йоҡлатты.* Һ. Дәүләтшина. *Бурансаның ҡатыны уны [Аҙнағолдо] Зөләйхәһендәй яҡын күрә. Бергә ашата, бергә йоҡлата, бергә йыуындыра тигәндәй.* З. Биишева.

2. Йоҡларға ирек биреү. □ Давать спать. ■ *Тегеләрҙең [милиционерҙарҙың] закон үҙҙәре янында, бының ҡыҙыуын баҫып алдылар ҙа бер кис йоҡлатып ҡайтарҙылар, артынса эшенә хат ебәрҙеләр.* Р. Солтангәрәев. *Салауат, ит бешкәнсе лә, ит ашалғас та, көн яҡтырғансы бер генә ҡыҙылармеецты ла йоҡлатманы.* А. Таһиров. *[Ҡарт:] Һеҙ бөрсә юҡ тигәйнегеҙ, бында ғына түгел, сарҙаҡта ла бар икән. Ярай әле өйҙә ятмағанмын: бөтөнләй йоҡлатмаҫтар ине!* Әкиәттән.

3. *Ниндәйҙер* сара менән йоҡларға мәжбүр итеү. □ Усыплять. *Наркоз менән йоҡлатыу. Гипноз менән йоҡлатыу. Дарыу эсереп йоҡлатыу.*

ЙОҠЛАУ (йоҡла-) [боронғо төрки *уйу-*] (Р.: спать; И.: sleep; Т.: uyumak) *ҡ.*

1. Йоҡо хәлендә булыу, йоҡоға китеү. □ Спать, засыпать. // Засыпание. *Үлек кеүек йоҡлау. Һаҡ йоҡлау. Йоҡо туйғансы йоҡлау. Йоҡлап ятыу. Йоҡларға һалыу. Аяҡ өҫтө йоҡлау.* ■ *Ай киткән, ти [Шүлгән], йыл киткән, күп йылға, тауҙар үткән. Ҡайҙа ғына төн булһа, шунда ятып йоҡлаған.* «Урал батыр». *Хужа ҡатын аш өйө яғында күптән йоҡлағайны инде, йәштәрҙең ҡайтыуын тойманы.* Б. Бикбай. *Батша ҡыҙы балдаҡты ебәк еп менән бармағына бәйләгән дә ауыҙына ҡабып йоҡлаған, ти.* Әкиәттән. *Йөҙ илле лә керпек күҙен йомоп, йоҡлаймы икән Фатимам төш күреп?* Халыҡ йырынан. ● *Атҡа ышанып, арбала йоҡлама, аҙаштырһа, үпкәһе үҙеңә.* Мәҡәл. *Егет булһаң, йоҡлап ятма.* Мәҡәл. *Иген эше кинәнес — эшләй белеп эшләһәң, иген эше көйөнөс — ялҡауланып йоҡлаһаң.* Мәҡәл. *Йылан йоҡлар, дошман йоҡламаҫ.* Мәҡәл. *Йәйәүле ҡунаҡ тыныс йоҡлар.* Мәҡәл. *Көн күрмәҫ көндөҙ йоҡлар, кис торор.* Мәҡәл. *Сит өйҙөң түшәгендә йоҡлағансы, үҙ өйөңдөң иҙәнендә йоҡла.* Мәҡәл. *Таң йоҡоһон йоҡлаған — бәхетен йоҡлаған.* Мәҡәл. *Ялҡау ултырып йоҡлай, ятып эшләй.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Тынлыҡ урынлашыу, тынып ҡалыу. □ Спать, успокоиться. *Ауыл йоҡлай. Урман йоҡлай.* ■ *Күм-күк томан ҡосағына сумып, ҡыҙ балалай, йоҡлай ҡайындар.* Р. Ғарипов. *Яҡ-яғымда киң ялан йоҡлап ята тып-тын ғына.* Ш. Бабич. *Ҡараңғы төшөп, бөтә ауыл йоҡлағас, бына шулай балыҡҡа китеүҙән ниндәйҙер ләззәт таба инем мин.* Н. Мусин. *Етте көткән йәмле яҙ ҙа, ҡар ирей, һыу яр баҫа, ҡыш буйы тын йоҡлаған ҡыр уяна, аҡ нур таша.* Д. Юлтый. *Төн уртаһы инде. Ҡала йоҡлай. Һаҡсы булып йөрөй яңғыҙ ай.* Р. Ниғмәти.

3. *күсм.* Эшкә һүлпән, вайымһыҙ булыу; ғәмһеҙлек күрһәтеү. □ Спать на ходу. *Йөрөгән ерҙә йоҡлау.* ● *Йоҡлағандың өҫтөнә ҡар яуыр.* Мәҡәл.

♦ **Йән белмәй (***йәки* **иҫһеҙ) йоҡлау** бик ҡаты, һис бер нәмәне тоймай йоҡлау. □ Спать крепко. ■ *[Айбулат:] Рәхмәт, атай, йән белмәй йоҡланым.* Ғ. Ибраһимов. *Етем үҫмер ҡаҡ һикелә, бүркенә башын һалып, ҡолас ташлап, йән белмәй йоҡлай ине.* Ф. Исәнғолов.

ЙОҠЛАШЫУ (йоҡлаш-) *к. диал. ҡар.* **йоҡлау 1.** *Якшы ғына йоҡлаштығыҙмы? Йоҡлашып алыу.*

ЙОҠЛОШ *с. диал. ҡар.* **йоҡосо.** *Бесәй йоҡлош була. Йоҡлош бала. Йоҡлош килен.*

ЙОҠМАЛЫ *с. диал. ҡар.* **йоғошло.** *Йоҡмалы ауырыу. Йоҡмалы вирус. Йоҡмалы ауырыуҙарға ҡаршы тороу.*

ЙОҠО I [дөйөм төрки *уйу-*] (Р.: сон; И.: sleep; Т.: uyku) *и.*

1. Билдәле бер ваҡыт араһында ҡабатланып торған һәм аң эшмәкәрлегенең тулыһынса йәки өлөшләтә туҡталып тороуы менән бәйләнешле физиологик яҡтан тыныслыҡ, организмдың ял итеү хәле. □ Сон, дремота, дрёма. / Сонный; дремотный. *Таңғы йоҡо. Йоҡо бирмәү. Йоҡо ҡасырыу. Йоҡонан уяныу. Йоҡо кермәү.* ■ *[Шүлгән — Уралға:] Атамдар йоҡо ҡалдырып, көн дә икәү ҡайғырып, аяҡ-ҡулын талдырып, беҙҙе өйҙә ҡалдырып, йөрөмәҫ ине, һунар, тип.* «Урал батыр». *Тулған ай ҙа, иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар ҙа, уның [Юлдаштың] тыныс йоҡоһона һоҡланып, таң атҡансы керпек тә ҡаҡмай ҡарап торҙолар.* З. Биишева. *Әлүкәйҙең ашы аш түгел, йоҡоһо йоҡо түгел: гел ҡатынын үйлай, ти. Әкиәттән.* ● *Ауырығанға йоҡо юҡ, күрмәгәнгә ҡайғы юҡ.* Мәҡәл. *Бала көлкөгә туймаҫ, ялҡау йоҡоға туймаҫ.* Мәҡәл. *Балаң үлһә, бер төнгө йоҡоң осор, ҡатыының үлһә, бер өйөрлө йылҡың сығыр.* Мәҡәл. *Ғәйепленең йоҡоһо ҡасыр.* Мәҡәл. *Дәртле күҙҙе йоҡо алмаҫ.* Мәҡәл. *Йоҡлаған йоҡо тапҡан, йоҡламаған йылҡы тапҡан.* Мәҡәл. *Йоҡо балдан татлы.* Мәҡәл. *Йоҡо бесәйгә генә моң.* Мәҡәл. *Йоҡо менән үлем тиң.* Мәҡәл. *Йоҡо тамаҡ туйҙырмай.* Мәҡәл. *Йоҡо һимертә, аҡса тилертә.* Мәҡәл. *Йоҡо ялҡауҙы ярата.* Мәҡәл. *Йоҡо яҫтыҡ теләмәй.* Мәҡәл. *Йоҡоһо оҙондоң бәхете ҡыҫҡа.* Мәҡәл. *Күп йоҡо йөҙҙө һарғайтыр.* Мәҡәл. *Өлкәр ҡалҡһа, ҡолон һөткә, ҡол йоҡоға туя.* Мәҡәл. *Сүп баҫҡан ер боҙолор, йоҡо баҫҡан ир боҙолор.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Тынлыҡ, һиллек. □ Сон, спячка; покой, тишина. *Тәбиғәт ҡышҡы йоҡоға талған.* ■ *Ауыл күйы һаҙлыҡ, тау-таш араһына йәшеренгән дә иркәләнеп тыныс йоҡоға сумған.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Йоҡо мискәһе** йоҡларға артыҡ яратҡан, ялҡауыраҡ кешегә ҡарата әрләү һүҙе итеп ҡулланыла. □ Соня, засоня. ■ *[Ихсанбай:] Йоҡо мискәһе. Ашауҙан түгел, йоҡонан һимерә микән әллә был бисә заты?* Т. Ғарипова. **Йоҡо сүлмәге** *ҡар.* **йоҡо мискәһе.** ■ *[Егор Николаевич:] Күҙ алдында һарай һүттергәндәр, бына бурһыҡтар! Йоҡо сүлмәктәре!* З. Ураҡсин. *Кәләшем .. мине «йоҡо сүлмәге» тип ирештерә-ирештерә көҙгө алдында сәсен тарай.* Ш. Янбаев. *[Лидия:] Ә Зәбиҙәкәй? Йоҡлай? Бына беҙ ниндәй йоҡо сүлмәктәре!* Ғ. Әмири. **Йоҡо тоҡсайы** *ҡар.* **йоҡо мискәһе.** ■ *[Рабиға:] Беҙ барғансы уҡ клубта йөрөй ине инде ул. Беҙҙе, йоҡо тоҡсайҙары тип, ҡаршы алды.* Ш. Бикҡол. **Йоҡо төҫө (***йәки* **йөҙө) күрмәү** йоҡо эләкмәү. □ Не знать сна, совсем не спать. *Уның йоҡо төҫө күргәне юҡ.* **Күҙгә йоҡо кермәү (***йәки* **ҡунмау)** йоҡлай алмау. □ Не смочь уснуть. *Төнө буйы күҙгә йоҡо кермәне.* ■ *Был өмөтөмдөң дә аҡланмаҫына төшөнгәс, ятып ҡараным. Күҙгә әҫәр ҙә йоҡо ҡунмай.* Н. Мусин. *Уяндым да, ҡабат күҙемә йоҡо ҡунманы.* Ш. Янбаев. **<Күҙгә> йоҡо төйөлөү** йоҡо килеү. □ Очень хотеть спать. ■ *Шул саҡта ғына бик ныҡ арыуымды, бөтә тәнем ҡойолоп килеүен, күҙемә йоҡо төйөлөүен тойҙом.* Н. Мусин. *Ултыра торғас, казактың күҙенә йоҡо төйөлә башланы.* М. Хужин. *Йәнбикә генә, ҡартының хәтерен һаҡлапмы, әллә үҙенең ологайған күҙҙәренә йоҡо төйөлмәгәнгәме, ҡарты янында мыштырлай ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Бөгөн тағы таңға тиклем Хәйҙәрҙең күҙенә йоҡо төйөлмәне.* Ф. Исәнғолов. **Ҡош йоҡоһо** әҙ йоҡлаған кешегә әйтелә. □ Чуткий

сон. **Тыныс йоҡла** үлгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Спи спокойно. ■ *Тыныс йоҡла, Барсы... Һин инде күптән үҙең дә йәшәмәйһең, миңә лә йәшәргә ирек бирмәйһең.* Т. Ғарипова. **Тыныс йоҡо** йоҡо алдынан әйтелә торған теләк һүҙе. □ Спокойной ночи. ■ *[Әсә:] Тыныс йоҡо, матурым минең.* Н. Ғәйетбаев. *[Йәғәфәр:] Ярай, тыныс йоҡо... Мин һеҙгә тағы ла шылтыратырмын әле.* Н. Мусин.

ЙОҠО II *и. диал.*

1. *ҡар.* **йоҡолоҡ.** *Һуйған малдың йоҡоһон алырға кәрәк.*

2. *ҡар.* **йөлөн.** *Йоҡо бүҫере. Йоҡо шыйыҡсаһы.*

ЙОҠО АЛМАУ (йоҡо алма-) *ҡ. ҡар.* **йоҡо асылыу.** *Күҙҙәрҙе йоҡо алмай.* ■ *Башлыҡты ла был төндә бик оҙаҡ йоҡо алманы.* М. Кәрим.

ЙОҠО АЛЫУ (йоҡо ал-) *ҡ. ҡар.* **йоҡо баҫыу.** *Күҙҙәрҙе йоҡо ала бара. Төштән һуң йоҡо ала башланы.*

ЙОҠО АРАЛАШ (Р.: сквозь сон; И.: in half dream; Т.: uyku sersemliğiyle) *р.*

Йоҡо (1) менән өн араһында, йоҡлар-йоҡламаҫ. □ Сквозь сон, спросонья. ■ *Ҡаты йоҡо аралаш ниндәйҙер тыҡ-тыҡ иткән тауыш Сурағолдоң ҡолағына салына.* Т. Хәйбуллин. *Аяғы һыҙлаймы икән, тип уйлайым йоҡо аралаш, уны [атайымды] йәлләп.* Н. Мусин. *Мифтахетдин ҡайҙа ятыуын, кемдәрҙеңдер ҡысҡырышыуын йоҡо аралаш ишетеп бер ни аңламаны.* Я. Хамматов.

ЙОҠО АРТЕРИЯҺЫ *и. анат. ҡар.* **йоҡо тамыры.** *Йоҡо артерияһы сирҙәре. Эске йоҡо артерияһы. Тышҡы йоҡо артерияһы.*

ЙОҠО АСЫЛЫУ (йоҡо асыл-) (Р.: терять сон; И.: lose sleep; Т.: uyku açılmak) *ҡ.*

Йоҡоға булған теләк бөтөү. □ Терять сон, сон не идёт. ■ *Хәйриҙең йоҡоһо тағы асылды, ул бошонған һымаҡ икенсе яҡҡа боролоп ятты.* А. Таһиров. *Тәгәрмәстәр күҙ эйәртмәҫ әйләнде — йоҡом һыпырып алғандай асылды ла китте.* Й. Солтанов.

ЙОҠО АУЫРЫУЫ (Р.: сонная болезнь; И.: sleeping sickness, trypanosomiasis; Т.: uyku hastalığı) *и. мед.*

Тропик Африкала быҙгәк тотоу, йыш баш ауыртыу, психика боҙолоу, ныҡ йоҡо килеү менән ҡылыҡһырланған йоғошло ауырыу. □ Сонная болезнь. *Йоҡо ауырыуы әләктереү. Йоҡо ауырыуынан интегеү.*

ЙОҠО БАБАЙ (Р.: дух сна; И.: spirit of sleep; Т.: uyku ruhu) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында йоҡо эйәһе. □ Дух сна. *Йоҡо бабай килә. Йоҡо бабайҙы саҡырыу.*

ЙОҠО БАҘАРЫНА КИТЕҮ (йоҡо баҙарына кит-) (Р.: уснуть; И.: fall asleep; Т.: uykuya dalmak) *ҡ.*

Йоҡоға китеү, йоҡлап китеү. □ Уснуть, заснуть. *Бала йоҡо баҙарына китте.* ■ *Минең менән килгән Хәким, ауыл клубында булып ҡайтҡас, бер аҙ беҙҙе тыңлап ятты ла йоҡо баҙарына киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.* Картотека фондынан.

ЙОҠО БАҪЫУ (йоҡо баҫ-) (Р.: клонить ко сну; И.: feel, be sleepy; Т.: uyku basmak) *ҡ.*

Ныҡ йоҡо килеү, ауырайтыу. □ Клонить ко сну, сморить. // Сонливость. ■ *[Сабира апай] бик тә йоҡо баҫып барғас, саҡ ҡына күҙемде алдап алайым тип, урынға барып ятты.* Ә. Вахитов. *Тиҡ урам буйында, ҡышлаҡ ситендә йөрөгән һаҡсылар ғына йоҡо баҫҡан күҙҙәре менән тирә-яҡты байҡайҙар.* Б. Хәсән. *Бүтәндәре һиҙҙеме-юҡмы, шулай ҙа оло мосафир күҙен йоҡо баҫҡансы онотманы ҡуйынында ҙур бысаҡлы бишмәтен янына һалырға.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОҠО БҮЛМӘҺЕ (Р.: спальня; И.: bedroom; Т.: yatak odası) *и.*

Йоҡлау өсөн билдәләнгән махсус бүлмә. □ Спальня. *Йоҡо бүлмәһен йыйыштырыу.* ■ *Торлаҡтар түңәрәк формала, һәм унда фәҡәт йоҡо бүлмәһе генә бар.* Н. Ғәйетбаев. *Юлдыбай арлы-бирле генә ашаны ла йоҡо бүлмәһенә инеп китте.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОҠО БҮҪЕҮ (йоҡо бүҫ-) (Р.: дрыхнуть; И.: sleep it off; Т.: çok uyumak) *ҡ. диал. һөйл.*

Күп итеп йоҡлау, йоҡо һимертеү. □ Дрыхнуть, спать много. *Бала йоҡоно бүҫә генә. Йоҡоно көндөҙ бүҫкәс, төнөн ни эшләрһең?*

ЙОҠОҒА БАТЫУ (йоҡоға бат-) (Р.: погрузиться в сон; И.: fall asleep; Т.: derin bir uykuya dalmak) *и. диал.*

Бик ҡаты итеп йоҡлап китеү. □ Погрузиться в сон. *Арып ҡайтып, йоҡоға батыу.* ■ *Аҡ түшәккә ятыпһың, йән йоҡоға батыпһың, яныңа мин ҡайтыпмын, уян, Гөлйемешкәйем!* Бәйеттән.

ЙОҠОҒА КИТЕҮ (йоҡоға кит-) (Р.: заснуть; И.: fall asleep; Т.: uykuya dalmak) *ҡ.*

Йоҡо (1) хәленә инеү. □ Заснуть, уснуть, погрузиться в сон. ■ *Өйҙәгеләр йоҡланы, шаулап йорөүсе бөттө. Луиза менән Альберт та арып йоҡоға китте.* Ғ. Сәләм. *Вәхит ойоп йоҡоға китте.* Ғ. Хәйри. *[Ольга Ивановна] .. руль өҫтөнә Хәлил килтереп һалған бәләкәй мендәргә башын һалып, йоҡоға китте.* Б. Дим.

ЙОҠОҒА ОЙОУ (йоҡоға ойо-) *ҡ. ҡар.* **йоҡоға сумыу.** *Тирә-яҡ йоҡоға ойоно. Балалар йоҡоға ойонолар.*

ЙОҠОҒА СУМЫУ (йоҡоға сум-) (Р.: заснуть; И.: fall asleep; Т.: uykuya dalmak) *ҡ.*

1. Йоҡоға китеү, йоҡлау. □ Заснуть, уснуть, погрузиться в сон. *Бала йоҡоға сумған.* ■ *[Баймораттың] малайы ла ҡайтты ла йоҡоға сумды.* Ф. Янышев. *Тевкилев үҙенең иҙрәп йоҡоға сумғанын да һиҙмәне.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Тынып ҡалыу. □ Затихать, утихать. // Затихание, утихание. *Тирә-яҡ йоҡоға сумды. Ауыл төнгө йоҡоға сумған.* ■ *Ҡаланың заводтары .. үҙҙәренең көслө тауыштары менән тын һауаны ярып, кисәге арып-талып йоҡоға сумған ҡаланы уяттылар.* Ғ. Дәүләтшин. *Улар [сәскәләр] уның һайын баштарын әйә төшәләр, тағы ла ҡатыраҡ йоҡоға сумалар.* И. Насыри.

ЙОҠОҒА ТАЛЫУ (йоҡоға тал-) *ҡ. ҡар.* **йоҡоға сумыу.** ■ *Был урмандың иң өлкән, иң көслө, иң иҫәр йыртҡысы булған айыу ҙа әллә ҡасан уҡ ҡышҡы йоҡоға талған да, табанының майын һурып, тамаҡланып ята.* Ғ. Дәүләтшин. *Диңгеҙ берсә утлы өйөрмә булып күккә үрелгән, берсә тамуҡ утындай урғылған, тәрән йоҡоға талған.* З. Биишева. *[Һуйырҙар] яҙғы ҡатҡыл ҡарҙы өс-дүрт метр өңөп инеп, шунда тынысланып йоҡоға талалар.* Н. Мусин. *[Баһау] ҡапҡа төбөндә туҡтап тәрән йоҡоға талған ауылды тыңланы.* А. Таһиров.

ЙОҠОҒА ҺАЛЫШЫУ (йоҡоға һалыш-) (Р.: спать много; И.: sleep much; Т.: çok uyumak) *ҡ.*

Ваҡытлы-ваҡытһыҙ оҙаҡ итеп йоҡлау. □ Спать много. *Ялҡауланып йоҡоға һалышыу. Малай йоҡоға һалышты.*

ЙОҠО ДАРЫУЫ (Р.: снотворное; И.: hypnotic drug, sleeping pill; Т.: uyku ilacı) *и. мед.*

Йоҡо (1) килтерә торған дарыу. □ Снотворное. *Йоҡо дарыуы эсеп ятыу. Йоҡо дарыуы һатып алыу.* ■ *Йоҡо дарыуы, тынысландырыусы төймәләр эсергә ашыҡмағыҙ.* «Башҡортостан», 28 октябрь 2011.

ЙОҠО ДОҒАҺЫ (Р.: заговор сна; И.: dream charm; Т.: uyku duası) *и.*

Йоҡо (1) алдынан уҡыла торған доға. □ Заговор сна, молитва на сон грядущий. *Йоҡо доғаһын уҡыу.* ■ *Өләсәйемдең йоҡо доғаһы тиҙ генә тынысландыра һәм йоҡлата.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҠО КИЛЕҮ (йоҡо кил-) *ҡ. ҡар.* **йоҡо баҫыу.** *Бала арыны, йоҡоһо килә башланы. Хәл юҡ, йоҡо килә.* ■ *Төн урталарында һалдаттың бик йоҡоһо килә башлаған.* Әкиәттән. *Бер көндө аталары йоҡлап бөтәләр, теге малайҙың, әллә ни эшләптер, һис тә йоҡоһо килмәй.* Әкиәттән. *Емештең дә, Сабираның да йоҡоһо килмәй.* З. Биишева.

ЙОҠО КҮЛДӘГЕ (Р.: ночная сорочка; И.: nightgown; Т.: gecelik) *и.*

Йоҡлағанда кейә торған күлдәк. □ Ночная сорочка, пижама. *Йоҡо күлдәген кейеү. Йоҡо күлдәген йыуыу. Йоҡо күлдәге һатып алыу.*

ЙОҠО КҮРМӘҮ (йоҡо күрмә-) (Р.: не знать сна; И.: be up, awake; Т.: uyku görmemek) *ҡ.*

Бөтөнләй йоҡламау. □ Не знать сна, совсем не спать. *Төндәрен йоҡо күрмәү.* ■ *Кешеләргә әйтер һүҙҙе эҙләп, йоҡо күрмәй күпме төн үтә. Бер ҡулығыҙ бишек бәүеткәндә, икенсеһе Ерҙе бәүетә.* Р. Бикбаев.

ЙОҠО ҠАЛЫУ (йоҡо ҡал-) (Р.: не выспаться; И.: undersleep; Т.: uykusunu alamamak) *ҡ.*

Етерлек йоҡламау, йоҡо туймау. □ Не выспаться. *Бала сабый саҡта һәр атаәсәнең йоҡоһо ҡала инде ул. Эше арҡаһында йоҡоһо*

ҡала. ■ *Төндәр буйы йоҡом ҡалды, күтәреп ҡулдарым талды. Был ни ғәжәп, был ни хайран — бала өсөн әсә тынмай.* Халыҡ ижадынан.

ЙОҠО ҠАСЫУ (йоҡо ҡас-) *ҡ. ҡар.* **йоҡо асылыу.** ■ *[Борамсы:] Кәләшең юғалһа, йоҡо ҡаса ул!* К. Мәргән. *Тәмәке тартмай тартыуын, тик был рәүешле ҡалғып барғансы, әҙерәк йоҡо ҡасмаҫмы, тигәйне ул [Рамазан].* Ә. Хәкимов. *Ғатаның күҙенән йоҡо ҡасты.* Ә. Хәкимов. *Ҡаты орош булыр. .. Күҙҙәрҙән йоҡо ҡасты.* Ғ. Ибраһимов.

ЙОҠОҠЛАУ (йоҡоҡла-) *ҡ. диал. ҡар.* **сикаҡлау.** ■ *Йоҡоҡлаһаң әүәле, кемдең нимәһен урлап ашаның, ти торғайнылар.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҠОЛО (Р.: сонный; И.: sleepy; Т.: uykulu) *с.*

Йоҡо баҫҡан, йоҡоһо туймаған, йоҡонан арына алмаған. □ Сонный, заспанный. *Йоҡоло күҙҙәр менән ҡараныу. Йоҡоло тауыш менән.* ■ *Үҙемдең ҡайҙа икәнемде онотоп, йоҡоло күҙҙәрем менән тирә-яғыма ҡарандым.* Н. Мусин. *Тауышҡа йоҡоло күҙ менән Алма сыға.* М. Буранғолов. *Ләүкегән иҫтәлектәрҙән, уйланыуҙарҙан тамам талығып, ул [Сергей], яртылаш уяу, яртылаш йоҡоло килеш, икенсе яғына әйләнеп ятты.* И. Абдуллин. *[Ҡаҙҙар] муйындарын кәкрәйтешеп, йоҡоло тауыш менән үҙ-ара ҡыйғылдашҡандан һуң, һыуға төштөләр.* С. Агиш.

ЙОҠОЛОҠ I (йоҡолоғо) (Р.: поджелудочная железа; И.: pancreas; Т.: uykuluk) *и. анат.*

Малдың ҡарынына йәбешеп торған бер биҙ. □ Поджелудочная железа *(у домашнего скота). Йоҡолоҡто ҡырҡып ташлау. Йоҡолоҡ шешеүе.*

ЙОҠОЛОҠ II (йоҡолоғо) (Р.: сонная железа; И.: carotid artery; Т.: uykuluk) *и. анат. диал.*

Йоҡо биҙе. □ Сонная железа. *Йоҡолоғом ауырта.*

ЙОҠОЛОҠ III (йоҡолоғо) (Р.: перхоть *(на голове грудного ребёнка)*; И.: baby dandruff; Т.: uykuluk) *и. диал.*

Яңы тыуған бала башындағы ҡауаҡ. □ Перхоть, корочка *(на голове грудного ребёнка). Баланың йоҡолоғон таҙартыу.*

ЙОҠОЛО-УЯУЛЫ I (Р.: полусонный; И.: half asleep; Т.: yarı uykulu) *с.*

Ярым йоҡоло. □ Полусонный. ■ *Йоҡоло-уяулы һалдаттың һүҙгә һаран булмауынан файҙаланып, һөйләшә торғас, ул беҙҙе урынлаштырырға булды.* А. Таһиров. *Ашыҡ-бошоҡ атылып-бәрелеп керһәм, йә уятырмын, йә ҡурҡытырмын, йоҡоло-уяулы Кәрим ишетмәҫ тип, ул [Хәйерниса] ҡолағын ишеккә ҡуйҙы.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 8, 2010.

ЙОҠОЛО-УЯУЛЫ II *р. ҡар.* **йоҡлар-йоҡламаҫ.** *Йоҡоло-уяулы ятыу. Йоҡоло-уяулы тыңлау. Йоҡоло-уяулы йөрөү.*

ЙОҠОМҺОРАП АЛЫУ (йоҡомһорап ал-) (Р.: вздремнуть; И.: have a nap; Т.: uyku kestirmek) *ҡ.*

Серем итеп алыу. □ Вздремнуть. *Ашағандан һуң йоҡомһорап алыу. Бер аҙ йоҡомһорап алыу.*

ЙОҠОМҺОРАП КИТЕҮ (йоҡомһорап кит-) (Р.: задремать; И.: have a nap, doze; Т.: içi geçmek) *ҡ.*

Ойоп китеү, йоҡоға иҙрәү. □ Задремать. ■ *Эй, киткән был [бабай], эй, киткән, бер тау битләсенә барып еткән. Шунда ял итергә ултырған. Ултыра торғас, был йоҡомһорап киткән.* Әкиәттән. *Батырҡай хаҡлыҡ Ғөлкәй яғында икәнен, үҙенең ысынлап та, йоҡомһорап китеп, һүҙ айышын төшөнә алмай ҡалыуын уйлап ҡыҙарҙы.* Й. Солтанов.

ЙОҠОМҺОРАП ТОРОУ (йоҡомһорап тор-) (Р.: клонить ко сну; И.: feel sleepy; Т.: uykulu olmak) *ҡ.*

1. Ойоп тороу, йоҡо баҫыу. □ Клонить ко сну, навевать дремоту. *Ямғырҙың быҫҡаҡлап яуыуынанмылыр, бала йоҡомһорап тора.* ■ *Туҡлыҡ ләззәте баҫып, йоҡомһорап торған Ғимрандың ике күҙе маңлайына һикерҙе.* Й. Солтанов.

2. *күсм.* Һүнеп тороу, һүрелеп тороу. □ Остыть, потухать, угасать. ■ *Һеркәләнде күңел сәскәләре, тумаланды орлоҡ ҡыяҡта. Һин инең бит йоҡомһорап торған хистәремде килеп уятҡан.* Л. Ҡәйепова.

ЙОҠОМҺОРАП ЯТЫУ (йоҡомһорап ят-) (Р.: дремать; И.: doze; Т.: uyuklamak) *ҡ.*

Ярым йоҡоло хәлдә ятыу. □ Лежать в дремотном состоянии; дремать. *Төн уртаһына тиклем йоҡомһорап ятыу.* ■ *Йоҡомһорап ятҡан Ҡөҙрәтҡол тумарлығын тартай тауышы уятты, Һаҡмар туғайында бүҙәнә ҡысҡырҙы.* И. Ноғоманов.

ЙОҠОМҺОРАТЫУ (йоҡомһорат-) (Р.: клонить ко сну; И.: make sleepy; Т.: uyku basmak) *ҡ.*

1. Йоҡоно килтереү. □ Клонить ко сну, нагонять сон, дремоту. *Ямғырлы көн йоҡомһората. Ҡыҙыҡ булмаған китап йоҡомһората.*

2. *эйһ. ф. ҡар.* **йоҡомһорау.** *Йоҡомһоратып китеү. Йоҡомһората башлау. Ҡыҫҡа табан йоҡомһората.* ■ *Яҙын иммунитет бер аҙ ҡаҡшағандай була. Тиҙ арыта, йоҡомһората, тән кибә, дөйөм хәлһеҙлек барлыҡҡа килә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 4, 2012. *Ҡамаҫығышта ултырам, балыҡ ҡапмай. Минең ҡармағымды уйнатып, селәүен ала ла ҡасалар. Бына бер заман йоҡомһората башланы.* «Башҡортостан», 28 июль 2010.

ЙОҠОМҺОРАУ (йоҡомһора-) (Р.: дремать; И.: doze; Т.: uyuklamak) *ҡ.*

Йоҡо килә башлау, ярым йоҡоло хәлдә булыу. □ Дремать, задремать, навевать дремоту. // Дремота, дрёма, полусон. *Йоҡомһорап ултырыу. Йоҡомһорап китеү.* ■ *[Байгилде] киҫ дәртләнеп ҡайта, иртән, балтаһы һыуға төшкән утынсы һымаҡ, кабинала йоҡомһорап килә.* Д. Буләков. *Йоҡомһорап ултырған Ишкужа имамдың ҡатындары, ҡумаҡ уландары, ҡыҙҙары, килендәре менән кейәүҙәре лә, түҙемһеҙлектәренең сигенә етеп, ҡыуыштарына табан ыңғайланы.* Я. Хамматов.

ЙОҠОМҺОРАУЛЫ (Р.: сонный; И.: sleepy; Т.: uykulu) *с.*

Йоҡо баҫҡан, йоҡоло. □ Сонный. *Йоҡомһораулы күҙҙәр менән ҡарау.*

ЙОҠОНАН УЯНЫУ (йоҡонан уян-) (Р.: просыпаться; И.: wake up; Т.: uyanmak) *ҡ.*

1. Йоҡо хәленән арыныу, уяу хәлгә инеү. □ Просыпаться *(ото сна).* ■ *Кәрим, йоҡонан уянған кеше кеүек, күҙен бер нисә ҡат сылт-сылт йомғоланы.* Б. Хәсән. *Шунан һуң [Миңлеямал] аш өҫтәле эргәһенә килеп, балаларының йоҡонан уяныуҙарын көтөп ҡалды.* Г. Дәүләтшин. *Ғабдулла йоҡонан уянғанда, өләсәһе өйҙә юҡ ине.* М. Кәрим.

2. *күсм.* Тыныс хәлдән арынып, хәрәкәткә килеү, йәнләнеү. □ Пробуждаться. *Бар тәбиғәт йоҡонан уянған. Әтәс тауыштары ишетелә, ауыл яйлап йоҡонан уяна.*

3. *күсм.* Әүҙем хәрәкәткә күсеү, әүҙем эшкә керешеү. □ Просыпаться *(переходить к активным действиям).* ■ *[Бүкәншин иптәш:] — Һин ниңә артта бараһың? Алда түгелһең ниңә?.. Давай, йоҡоңдан уян! Рәтләмәһәң эште бөгөн, тотоп бюроға ҡуям!* Р. Ниғмәти.

ЙОҠО ОСОРҒОС (Р.: отгоняющий сон; И.: driving sleep off; Т.: uyku kaçıran) *с.*

Йоҡоға булған теләкте бөтөрә торған. □ Отгоняющий сон. *Йоҡо осорғос тауыш.* ■ *Ғилман, шәм дә тоҡандырып тормай, сисенеп ятты, насар, йоҡо осорғос уйҙарҙан ҡотолоу өсөн. Зөбәржәтте күҙ алдына килтерергә, уның әйткән һүҙҙәрен хәтерләргә тырышты.* Н. Мусин.

ЙОҠО ОСОУ (йоҡо ос-) *ҡ. ҡар.* **йоҡо асылыу.** ■ *Әҙәм башына бер уй килдеме, йоҡоһо оса инде уның.* К. Мәргән. *[Барсынбикә:] Олоғайһаң, йоҡо оса, тигәндәре шулдыр.* Т. Ғарипова. *Үҙ уйҙарынан ҡото алынып, йөрәге урынынан ҡупҡан Гөлзифаның бөтөнләй йоҡоһо осто.* И. Ноғоманов.

ЙОҠОСАН *с. диал. ҡар.* **йоҡосо.** *Йоҡосан кеше.* ● *Дәртһеҙ егет йоҡосан булыр.* Мәҡәл. *Йоҡосан кеше бәхетһеҙ булыр.* Мәҡәл.

ЙОҠОСО I (Р.: любящий поспать; И.: oscitant, sleepyhead; Т.: uykucu) *с.*

Йоҡларға яратҡан. □ Любящий поспать. *Йоҡосо бала.* □ *Жандармдар, тәҙрәнән йоҡосо байҙың үҙен күреп, дер ҡалтырап тора.* Р. Камал.

ЙОҠОСО II (Р.: соня; И.: oscitant; Т.: uykucu) *и.*

Йоҡо яратҡан, йоҡоға әүәҫ кеше. □ Любитель поспать; соня. □ *Төнлөктәргә һыймаған төтөн йоҡосоларҙы ла һәндерәнән ҡыуып төшөрҙө.* Б. Рафиҡов. ● *Ялҡауҙың эсе,*

йоҡосоноң башы ауырта. Әйтем. *Йоҡосоға аш юҡ.* Мәҡәл.

ЙОҠОСОЛ *с. диал. ҡар.* **йоҡосо.** ■ *Суров һаман да һөйләр ине, ләкин йоҡосол Ковальчук ғырылдай башланы.* А. Таһиров. *Йоҡосол ялҡауҙарға рәхәттер инде. Таң атмаған, ҡояш сыҡмаған әле, тип ята бирәлер.* Ғ. Ғүмәр.

ЙОҠО СӘҒӘТЕ (Р: тихий час; И.: afternoon sleep; Т.: uyku saati) *и.*

Көндөң икенсе яртыһында ойошторолған ял ваҡыты. □ Тихий час. *Балалар баҡсаһында төшкө аштан һуң йоҡо сәғәте була.*

ЙОҠОТ *с. диал. ҡар.* **һай.** *Йоҡот йылға. Йоҡот соҡор. Йоҡот ҡоҙоҡ.*

ЙОҠО ТАМЫРЫ (Р.: сонная артерия; И.: carotid artery; Т.: şahdamar) *и. анат.*

Муйындың ике яғынан баш мейеһенә үткән йыуан ҡыҙыл ҡан тамыры. □ Сонная артерия. *Йоҡо тамыры атеросклерозы. Йоҡо тамырына баҫырға ярамай.*

ЙОҠО ТОҒО (Р.: спальный мешок; И.: sleeping bag; Т.: uyku tulumu) *и.*

1. Ҡырға (урманға) походҡа сыҡҡанда йоҡлау йәки ял итеү өсөн тәғәйенләнгән ҡапсыҡ. □ Спальный мешок. *Йоҡо тоғо һатып алыу. Йоҡо тоғонда йоҡлау. Йоҡо тоғон тағатыу.*

2. *күсм. ҡар.* **йоҡо мискәһе.** *Йоҡо тоғона әйләнеү. Йоҡоһонан айный алмай, йоҡо тоғо!*

ЙОҠО ТУЙЫУ (йоҡо туй-) (Р.: выспаться; И.: have a good sleep; Т.: uykusunu almak) *ҡ.*

Етерлек йоҡлап, ял итеп алыу. □ Выспаться, отсыпаться. ■ *Зөлҡәрнәйҙең иптәштәре Зилскийҙан, Зөлҡәрнәйҙе, йоҡоһо туйғансы, эштән ҡалдырып тороуҙы һораһалар ҙа, Зилский «дүртәүҙән бишәү яҡшы» тип, уны ла тегеләр менән эшкә ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин. *Йоҡоһо туйып, быуындарына көс ҡайтҡан егет, дымлы шинелен ҡырға атып, һикереп торҙо ла аптырап ҡалды.* Ә. Хәкимов. *Мәҙинә менән һөйләшә-сөкөрләшә сәй эсеү ҙә, йоҡоһо туйып кирелеп-һуҙылып уянған баланы ҡулына алыу ҙа [Хашимдың] күңелен йыуатманы.* Т. Ғарипова. *[Айбикә] шунан бирле көнө-төнө эштән бушамай, шул көндән бирле йүнләп йоҡоһо туйғаны, рәхәтләнеп ял иткәне юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОҠО ҮЛӘНЕ (Р.: прострел; И.: pasque-flower; Т.: rüzgârçiçeği) *и. бот.*

Лютик һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үлән. □ Прострел; сон-трава (лат. *Pulsatilla*). *Йоҡо үләне йыйыу. Йоҡо үләнен киптереү.*

ЙОҠО ФӘРЕШТӘҺЕ (Р.: ангел сна; И.: angel of sleep; Т.: uyku meleği) *и. миф.*

Йоҡлаған саҡта һаҡлап торған фәрештә. □ Ангел сна. ■ *Йоҡо фәрештәһе ҡанатын ҡағып тора кеше йоҡлағанда.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОҠО ҺИМЕРТЕҮ (йоҡо һимерт-) (Р.: спать много; И.: sleep much; Т.: uyumak) *ҡ.*

Ваҡытлы-ваҡытһыҙ оҙаҡ итеп йоҡлау. □ Спать много, долго. ■ *[Камил – Рифҡәткә:] Йоҡоно күп һимерттең шул, эй, һин, балыҡсы!* Ф. Иҫәнғолов. *Бөтә яҡшы нәмәләр таң алдынан эшләнә, ә Самат шундай бәхетле ваҡытты йоҡо һимертеп үткәрә.* Ә. Бикчәнтәев. *Ата-әсәһе эшкә киткән, ә был [Хәлит] һаман йоҡо һимертә.* Н. Ғәйетбаев. *[Индрил:] Бик эсегеҙ бошһа, ятып йоҡо һимертә тороғоҙ.* Д. Юлтый.

ЙОҠОҺОҘ I (Р.: бессонный; И.: sleepless; Т.: uykusuz) *с.*

1. Йоҡламай үткәргән. □ Бессонный. *Йоҡоһоҙ төндәр бик оҙон тойола.* ■ *Үкенеүҙәр, үтенеүҙәр — бала өсөн, йоҡоһоҙ төн, тынғыһыҙ көн — бала өсөн.* Картотека фондынан. *Хыял донъяһында үткәргән йоҡоһоҙ төндәр, күҙ йәштәре, икеләнеүҙәр һәм хаталаныуҙар... Барыһын да үҙ башынан үткәрҙе Илгенә.* «Шоңҡар», № 11, 2010.

2. Йоҡоға бирелмәгән, йоҡо хәлендә булмаған. □ Бессонный, не сонный, не в состоянии сна. *Йоҡоһоҙ кеше. Йоҡоһоҙ бала.* ■ *Тик яҡында, ҡуйы таллыҡта, йоҡоһоҙ ҡоштар ғына сутылдаша, тарбаҡ имән ҡыуышында сыпай ыңғыраша.* З. Биишева.

ЙОҠОҺОҘ II (Р.: без сна; И.: without sleep; Т.: uykusuz) *р.*

Йоҡламайынса. □ Без сна. ■ *Бер нисә йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡыҙҙың биттәре янды, күҙ алдына томан төштө.* Ш. Ха-

жиәхмәтов. *Шул Ватан тиеп, башымды ватам. Уттарҙа янам, һыуҙарға батам, эштәрен уйлап, йоҡоһоҙ ятам.* Р. Ғарипов.

ЙОҠОҺОҘЛОҠ (йоҡоһоҙлоғо) (Р.: бессонница; И.: sleeplessness, insomnia; Т.: uykusuzluk) *и.*

Йоҡоһоҙ (1) булған хәл. □ Бессонница. *Йоҡоһоҙлоҡтан интегеү. Йоҡоһоҙлоҡтан йонсоу.* ■ *Сәлимә, йоҡоһоҙлоҡтан талған күҙҙәрен әсәһенән йәшереү өсөн, күҙгә ҡараған булып, арты менән әйләнде һәм тәбиғи булмаған шат тауыш менән ҡысҡырып көлдө.* З. Биишева. *Дежурный, йоҡоһоҙлоҡтан ҡыҙарған күҙҙәрен күтәреп, иң элек Хәлилгә, унан һуң уның юлдашы Павелға ҡараны.* Б. Дим. *Интегеүҙәнме, йоҡоһоҙлоҡтанмы, [Бикбулат старшинаның] күҙҙәренә ҡан һауған, ҡабаҡтары шеш.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОҠО ҺЫТЕҮ (йоҡо һыт-) (Р.: спать долго; И.: oversleep; sleep like a log; Т.: uzun uyumak) *ҡ.*

Ваҡытлы-ваҡытһыҙ оҙаҡ итеп йоҡлау. □ Спать *(долго). Йоҡо һытергә ярата.* ■ *Фёдорычтың уты һүнек, телевизор яҡтыһы ла былк-былк уйнаҡламай тәҙрәһендә. Йоҡлайҙыр, ғөмүмән, ул йоҡоно һытә, хатта көндөҙ ҙә серем итә.* С. Шәрипов.

ЙОҠТОРОУ (йоҡтор-) (Р.: заражать; И.: infect; Т.: bulaştırmak) *ҡ.*

1. Ауырыу эләктереү. □ Заражать *кого,* передавать болезнь *кому;* заносить инфекцию. // Заражение. *Малға сир йоҡтороу. Грипп йоҡтороу. Бетсә йоҡтороу. Таҙ йоҡтороу.* ■ *[Әптерәш:] Туҙан күп, зарарлы. Ауырыу йоҡторорға мөмкин.* Ғ. Хәйри. *[Ирина Платоновнаның ире] тиф менән ауырыған ҡыҙылармеецтарҙы дауалағанда, ана шул ҡәһәрле сирҙе йоҡтороп, йәп-йәш көйө үлеп ҡала.* Ә. Хәкимов. *Кемерово ҡалаһы табиптары аҡса аша ниндәй сирҙәр йоҡтороу ихтималлығын тикшергән.* «Йәшлек», 21 июль 2009.

2. *йөкм. ҡар.* **йоғоу 1.** *понуд. от* **йоғоу 1.** *Буяу йоҡтороу. Бысраҡ йоҡтороу. Ҡором йоҡтороу.* ■ *Ул [Рәмилә] баҙрап торған шыма, һутлы миләштәрҙе битенә тейҙереп ала, әйтерһең, уларҙың ҡыҙыллығын үҙенә йоҡторорға теләй.* Н. Мусин.

3. *күсм. Ниндәйҙер* һөнәр, ғәҙәт йәиһә характер һыҙатын, кәйефен икенсе кешегә күсереү, шундай йоғонтоға дусар итеү. □ Передавать. *Кәйеф йоҡтороу.* ■ *Ул [йырсы], бөтә ғәмен йырға биреп, бик хисләнеп, мөкиббән китеп йырлай, үҙенең илһамланыуын башҡа һалдаттарға ла йоҡтора.* Д. Юлтый. *[Һолтанбай:] Был бит тормошҡа ныҡлап аяҡ баҫмаҫ борон уҡ бала күңеленә боҙоҡлоҡ йоҡтороуға тиң.* Н. Мусин. *Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың заманса йәшәүҙе лә, тиң хоҡуҡлы булыуҙы ла, азат рухлылыҡты ла икенсе төрлө аңлауы, холоҡтарына ят ҡылыҡтарҙы тиҙ йоҡтороп алыуҙары һәм ғәҙәткә әйләндереп ебәреүҙәре борсолдора, әлбиттә.* М. Бураҡаева.

ЙОҠТОРТОУ (йоҡторт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йоҡтороу.** *понуд. от* **йоҡтороу.** *Ауырыу йоҡтортоу. Таҙ йоҡтортоу. Ҡорсаңғы йоҡтортоу.*

ЙОҠҺОҘ (Р.: бедный; И.: poor; Т.: yoksul) *с. һөйл.*

Мал йоҡмаған, байый алмаған. □ Бедный. *Йоҡһоҙ ир. Йоҡһоҙ булыу.*

ЙОҠҺОҘҘОРАУ (йоҡһоҙҙор-) (Р.: вызывать тоску; И.: cause melancholy, depression; Т.: hüzünlendirmek) *ҡ. диал.*

Һағыш уятып, бошондороу; юҡһындырыу. □ Вынуждать скучать, тосковать. *Баланы сит яҡ йоҡһоҙҙора. Тыуған ил йоҡһоҙҙора.*

ЙОЛА [дойом төрки *йула*] (Р.: обычай; И.: custom; Т.: âdet) *и.*

Быуындан быуынға килеп, халыҡ араһында ҡағиҙәгә әйләнеп киткән эш-ҡылыҡ тәртибе; ғөрөф-ғәҙәт. □ Обычай, обряд; традиция. / Обрядовый. *Ата-бабалар йолаһы. Балаға исем ҡушыу йолаһы. Мәйет ерләү йолаһы. Йолаға әйләнеү. Йоланы тотоу. Йола буйынса.* ■ *[Урал:] Батша тигән нәмәне, кеше һуйыр йоланы ишетеп тә, күреп тә, нисә йылдар йөрөп тә, һис бер ерҙә күрмәнем, барлығын да белмәнем.* «Урал батыр». *Йола шулай, кем беренсе күрә тәңкәләрҙе, шул бәхетле була.* Д. Бүләков. *Навалихин башҡорт түрәләренә күп ҡатнашҡан. Был аймаҡтың бөтә ғәҙәтен, йолаһын белә.* Т. Хәйбул-

лин. *Йола буйынса, йырткыс кейекте үҙ кулы менән үлтергән кешегә генә уның канын татып карарға яраған.* Әкиәттән. *Иренеңә әсә баллы майҙар яға алманы (боҙҙо йоланы).* М. Кәрим. ● *Ил йолаһыҙ булмаç.* Мәҡәл. *Ил йолаһына хан да буйһона.* Мәҡәл. *Ир үлһә лә, йола үлмәç.* Мәҡәл. *Тәүге ир — ир йолаһы, икенсеһе — йөҙ караһы.* Мәҡәл. *Ырыуына күрә йолаһы, биреүенә күрә доғаһы.* Мәҡәл.

ЙОЛА КҮРЕҮ *и. диал. кар.* **күрем.** ■ *Оҙак йола күргән катын сәләмәт була.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОЛАЛАУ (йолала-) (Р.: соблюдать обычаи; И.: keep, observe customs; Т.: âdetlere uymak) *ҡ.*

Ҡабул ителгән йоланы башҡарыу, йола буйынса эш итеү. □ Придерживаться обычая, соблюдать обычаи и традиции. ■ *Ирмен тигән ир кеше ил-йорт йолаларын да йолалай белер, ололарҙы ололоклар, ата-бабаларының изге эшенә, оло тарихына аманат итеп карар.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡыҙы такыяны бирмәйҙер был эштә, йолалап ултыра шакшы мөйөштә.* М. Өмөтбаев.

ЙОЛАСА (Р.: по обычаю; И.: after custom; Т.: âdete göre) *р.*

Ҡабул ителгән йола буйынса. □ По обычаю. *Туйҙы боронғо йоласа үткәреү. Йоласа каршылау. Йоласа оҙатыу.*

ЙОЛАСЫ (Р.: приверженец *каких-л.* обычаев и обрядов; И.: one observing (abiding) traditions; Т.: âdetlere uyan kimse) *и.*

Йоланы якшы белеп, нык тоткан кеше. □ Приверженец, сторонник *каких-л.* обычаев и обрядов; обрядчик. *Ырыу йоласыһы.* ■ *[Р. Солтангәрәева:] Тәржемәгә бик һак карайым, тәржемәсе янында тел һәм әҙәбиәт белгесенең, йоласының, философтың булыуы шарт, минеңсә.* «Башҡортостан», 6 декабрь 2011.

ЙОЛА ҺӨЙӘГЕ *и. анат. диал. кар.* **умыртка.** *Йола һөйәге бағанаһы. Йола һөйәге һыныу.*

ЙОЛАҺЫН КИЛТЕРЕҮ (йолаһын килтер-) (Р.: соблюдать обычай; И.: observe customs; Т.: âdetlere uymak) *ҡ.*

Йоланы еренә еткереп башҡарыу, йолалау. □ Соблюдать обычай. *Йолаһын килтереп үтәү. Йолаһын килтереп каршы алыу.*

ЙОЛА-ЫРЫМ (Р.: обычаи и поверья; И.: customs and traditions; Т.: âdet ve inanç) *и. йыйн.*

Йола һәм ырым. □ Обычаи и поверья. *Туйҙы йола-ырымдар буйынса үткәреү. Йола-ырымдарға таянып эш итеү. Йола-ырымды белеү.*

ЙОЛДОҘЛОҠ (йолдоҙлоғо) (Р.: Млечный путь; И.: Milky Way; Т.: Samanyolu) *и. астр. диал.*

(баш хәреф менән) Күк йөҙөндә аҡ юлаҡ булып күренгән алыç йондоҙҙар төркөмө; Ҡош юлы. □ Млечный путь. *Йолдоҙлок тураһында легендалар. Йолдоҙлокто күҙәтеү.*

ЙОЛДОҘҺОҘ *с. диал. кар.* **һөймәлекһеҙ.** *Йолдоҙһоҙ әҙәм. Ҡыҙы бигерәк йолдоҙһоҙ шул.*

ЙОЛҠАР *и. диал. кар.* **йолҡкос 3.** *Күршем йолкар булып сыкты. Йолкар әҙәм.*

ЙОЛҠКОЛАНЫУ (йолкколан-) *ҡ. төш. кар.* **йолҡколау 1—4.** *страд. от* **йолҡколау 1—4.** ■ *Тамьян иле тәртипһеҙ йолкколаныу аркаһында йылыһын юғалткан хайуан тиреһен хәтерләтә ине.* К. Мәргән. *Республикам, йолкколанған йөрәк, кырғын үткән аҙмы канатып.* Р. Бикбаев.

ЙОЛҠКОЛАТЫУ (йолкколат-) *ҡ. йөкм. кар.* **йолҡколау.** *понуд. от* **йолҡколау.** *Тамырынан йолкколатты. Ул һунар эттәрен һөсләтеп, беҙҙең кәзәне йолкколатты.*

ЙОЛҠКОЛАУ (йолккола-) (Р.: выдёргивать; И.: pluck out; Т.: çekip çıkarmak) *ҡ.*

1. Тартып өҙөү, күпләп йолҡоу. □ Выдёргивать, вырывать; выщипывать. *Сүпте йолкколау. Йолкколап бөтөрөү. Сәсте йолкколау. Ҡый йолкколау.* ■ *Әле генә онотолоп торған которма ел, капыл ғына кұҙғалып, кайын бөҙрәләренең алкаларын йолкколаны.* Д. Бүләков. *Теге тана торорға ынтылғайны, айыу уға кабат ташланды. Ҡыскырғанымды бар тип тә белмәй, теге хайуанды йолкколай.* Н. Мусин. *[Егет] ай барған, йыл барған, бара торғас, бер ерҙә үҫеп ултырған имәндәрҙе йолкколап, икенсе ергә күсереп ултыртып йөрөүсе кеше күргән, ти.* Әкиәттән.

2. Тотоп, тартып ойпалау. □ Мять; измять. *Мендәрҙе йолҡколап ботөү. Карауат өҫтөн йолҡколау. Әйберҙәрҙе йолҡколау.*

3. *күсм.* Төрлө ерҙән өлөш-өлөш итеп айырып алыу. □ Выдёргивать частями, вырывать кусками. *Йолҡколап алыу. Йолҡколап йыйыу.* ■ *Шиғыр жанрының еҫе лә булмаған, бары тик тегенән-бынан йолҡколап йыр текстары әтмәләүселәр ҙә бихисап хәҙер.* Г. Юнысова.

4. *күсм. һөйл. Кемдеңдер* аҡсаһын, малын әҙләп алыу, йолҡоу. □ Вымогать *что;* добиваться *чего. Балалар башҡа сыҡһалар ҙа, аталарын йолҡколайҙар.* ■ *[Сөнәғәт:] Бында управляющийҙар беҙҙең браттың елкәһен кимерә генә бирәләр. Эш хаҡын йолҡколап бөтәләр.* Ж. Кейекбаев. *Көндөҙ унан-бынан йолҡколап тупланған наҡыҫ ҡына дөйөм улъяны бүлешкәндә яньял килеп сыҡты.* Ә. Хәкимов.

5. Унан-бынан йолҡоп алыу, ауырлыҡ менән *нимәлер* табыу. □ Доставать с трудом, кое-как; получать частями.

ЙОЛҠҠОЛАШЫУ (йолҡколаш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йолҡҡолау 1—4.** *взаимн. от.* **йолҡҡолау 1—4.** *Сүпте йолҡколашыу. Үләнде йолҡколашыу.*

ЙОЛҠҠОС (Р.: льнотеребильная машина; И.: flax plucking machine; Т.: sökme aleti) *и.*

1. Етен йолҡа торған машина; етен йолҡҡос. □ Льнотеребильная машина. *Етен йолҡҡос һатып алыу. Етен йолҡҡос эшләү.*

2. *ҡар.* **ҡаш йолҡҡос.** *Ҡыҙҙар биҙәнә, сәс төрә, йолҡҡос менән ҡаш йолҡа. Йолҡҡос менән бөртөкләү.*

3. *күсм.* Оят, намыҫты белмәй, һәр нәмәне үҙ файҙаһына тартыусы кеше; өҙгөс. □ Рвач. ■ *[Князев:] Улайһа, Бикбаев — намыҫлы, ә Князев йолҡҡос булып сыға инде?* Р. Солтангәрәев. *Өҙә лә гел йолҡа икән, был ваҡыт йолҡҡос икән.* Т. Йосопов.

♦ **Йән йолҡҡос** йәнде үртәгес, йән ашағыс. □ Терзающий душу, рвущий душу. *Йән йолҡҡос хәл. Йән йолҡҡос хәбәр. Йән йолҡҡос һүҙ.*

ЙОЛҠҠОСЛАНЫУ (йолҡкослан-) *ҡ. ҡар.* **йолҡҡоланыу.** *Йолҡкосланып бөтөү. Йолҡкослана башлау. Йолҡкослана барыу.*

ЙОЛҠҠОСЛАУ (йолҡкосла-) *ҡ. ҡар.* **йолҡҡолау.** *Йолҡкослап бөтөрөү. Йолҡкослап ҡуйыу. Үләнде йолҡкослау.*

ЙОЛҠҠОСЛОҠ (йолҡкослоғо) (Р.: бесстыдство; И.: shamelessness; Т.: utanmazlık) *и.*

Оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, тәртипһеҙлек, инсафһыҙлыҡ, битһеҙлек. □ Бесстыдство, рвачество. *Йолҡкослоҡ күрһәтеү.* ■ *Бөгөнгө хаяһыҙ тормошта, матди байлыҡ ҡына төп үлсәм, бары ул ғына барыһын да хәл итә, тип баһаланған йолҡкослоҡ солғанышында һығылмалы йәш ҡайындың утына әйләнеүенә, бал тамған телдән тоҙ әсеһе килеүенә, бөртөк нур ҡалмаған йәндең тамам тупаҫланыуына аптырайһы юҡ.* «Ағиҙел», № 3, 2010.

ЙОЛҠОЛОУ (йолҡол-) *ҡ. төш. ҡар.* **йолҡоу.** *страд. от* **йолҡоу.** *Йолҡолған сәс.* ■ *Ул арала көнсығыштағы өҙөк-һурыҡ йолҡолған болоттар ситенән, офоҡ артынан сыҡҡан тоноҡ ҡына яҡтылыҡ та күренә башланы.* «Ағиҙел», № 9, 2010. *Баяр икенсе ҡылған өйкөмөн, төбөнәнерәк эләктереп, тартып ҡараны, быныһы ла йолҡолманы.* З. Ураҡсин.

ЙОЛҠОНҒАН *с. диал. ҡар.* **йолҡош.** *Йолҡонған кеше. Йолҡонған булыу.*

ЙОЛҠОНДОҠ (Р.: рваный; И.: worn-out, torn; Т.: yırtılmış) *с.*

Иҫкереп туҙған, тишек-тошоҡ; алама. □ Рваный; изношенный. *Йолҡондоҡ өҫ кейеме. Йолҡондоҡ юрған.* ■ *[Баныуҙың] юл-юл сал йүгергән сәстәре туҙышып иңенә һибелгән, йолҡондоҡ кейеме елгә елберләй.* Ә. Хәкимов.

ЙОЛҠОНОУ (йолҡон-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йолҡоу 1—3.** *страд. от* **йолҡоу 1—3.** *Ағас тамыры менән йолҡонған. Йөнө йолҡонған тауыҡ.* ■ *Идрисов, тирләгән, бешкән, һыуға төшкән тауыҡ һымаҡ йолҡонған хәлдә, атын менеп, Күлбашҡа ҡарай сапты.* А. Карнай. *Йолҡонған һәр төк сәс алтын ҡылға әйләнә бара — тот та бау ыш.* М. Кәрим. *Уралдағы имән йолҡонмаҫ ул, шоңҡар булып мәңге шоңҡарым.* Х. Назар. *Барып ҡараһалар, — ағас ботағында теге ҡарттың һаҡалы ғына йолҡоноп тороп ҡалған, ә үҙе ҡаскан, ти.* Әкиәттән.

2. *диал.* Өҙгөләнеү, ҡайғырыу. □ Печалиться, надрываться. *Йолҡоноп йөрөү. Бушҡа йолҡоноу.* ■ *Һөйгән йәре өсөн бөрәү йырлай, өҙөлөп, йөрәге өҙөлөп, йолҡоноп.* М. Буранғолов. *Тәрән уйҙарға сумған Шәриф Әхмәҙуллин да күтәрелде, ләкин ул үҙенең йөрәген, ауырттырмайынса ғына йолҡоноп, ниндәйҙер тәрәнлек – бушлыҡҡа өҙөлөп төшөп киткән кеүек һиҙҙе.* Ғ. Хәйри.

3. Тартышыу, ысҡынырға тырышыу. □ Вырываться, силой освободиться. ■ *Ғәлимә апай шәле менән ныҡлап ҡаплаған битен һаман асмай, һаман китергә тырыша, һаман йолҡона.* М. Ғафури.

ЙОЛҠОП АЛЫУ (йолҡоп ал-) (Р.: вырвать; И.: pluck off; Т.: yolmak) *ҡ.*

Һурып, тартып сығарыу. □ Вырвать, выдернуть. ■ *Урман батыр эре-эре ағастарҙы йолҡоп ала.* Әкиәттән. *[Батша улы] шунан хеҙмәтселәренә был алмағасты төбө-тамыры менән йолҡоп алып үртәргә ҡуша.* Халыҡ ижадынан.

ЙОЛҠОП БӨТӨҮ (йолҡоп бөт-) (Р.: повыдёргивать; И.: pluck away; Т.: yolmak) *ҡ.*

Төбө-тамыры менән тартып сығарыу. □ Повыдёргивать *(что-л. полностью). Сүпте йолҡоп бөтөү. Кискә йолҡоп бөтөү.* ■ *Йолҡоп бөткәс, ҡаҙҙарҙы көйәнтәгә элеп, һыу буйына барып йыуабыҙ.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОЛҠОП ТАШЛАУ (йолҡоп ташла-) (Р.: вырвать; И.: pluck out; Т.: söküp atmak) *ҡ.*

1. Төбө-тамыры менән тартып алыу. □ Вырвать с корнем. *Дауыл ағастарҙы тамыры менән йолҡоп ташлаған.* ■ *Олоҫ йыйылыштары булып, унда старшиналарҙы төшөрөү, урядниктарҙың погондарын йолҡоп ташлау, батшаның һүрәттәрен алып ырғытыуҙар киткәс, ваҡытлы тәртип һаҡлау комитеттары ойошторола.* «Ағиҙел», № 8, 2011.

2. *күсм.* Юҡҡа сығарыу, бөтөрөү, алып ташлау. □ Вырвать *(из сердца, памяти и т. д.). Күңелдән йолҡоп алыу.* ■ *Хатта Аняны осратыу, әкиәти һылыулығына мауығып йөрөү ҙә Фәғиләне күңелемдән йолҡоп ташлай алманы (үҙ баҡсаңдың гөлө – үҙеңдеке шул).* Й. Солтанов.

ЙОЛҠОУ (йолҡ-) [боронғо төрки *йулҡ-*] (Р.: дёргать; И.: pull out; Т.: yolmak) *ҡ.*

1. Төбө, тамыры менән аҡтара тартыу. □ Дёргать, выдёргивать, рвать, вырывать; выщипывать. // Дёргание, выдёргивание, вырывание, выщипывание. *Үлән йолҡоу. Тамыры менән йолҡоу. Йолҡоп алыу. Йолҡоп бөтөрөү.* ■ *Кеше уны [ҡурайҙы] имгәтмәҫкә тырышып, иплән кенә тамыры менән йолҡоп алды.* Н. Мусин. *[Егор Николаевич] бер услам ҡылғанды йолҡоп алмаҡсы булып, тартып ҡарағайны, ҡыу һабаҡтар шытыр-шытыр килеп өҙөлдө.* З. Ураҡсин. *[Ҡыҙ – егеткә:] Дейеүҙең бөтә көсө һаҡалында. Ана шул һаҡалын йолҡоп ал.* Әкиәттән.

2. Өҙөп-өҙөп йыйыу. □ Теребить. // Теребление. *Етен йолҡоу. Мамыҡ йолҡоу. Дебет йолҡоу.* ■ *Йәйҙең бер көнөндә беҙ шул күл янында мүк йолҡа инек.* Д. Бураҡаев.

3. Өҙөп-өҙөп йөндән таҙартыу *(ҡошҡортто).* □ Общипывать *(птицу). Күркә йолҡоу. Ҡаҙ йолҡоу.* ■ *[Бейеш] ҡорҙоң йөнөн йолҡоп, эсәк-ҡарынын яр аҫтына бырағытты ла утта ҡурҙаҡ әҙерләне.* Я. Хамматов. *Ҡәҙермәт менән Кәримә тауыҡты йолҡоп таҙартты.* Н. Мусин. *[Ҡыҙрас:] Бына, йөҙ ҙә ете йәшлек ябалаҡ тотҡайным, шуны йолҡоп ултырған баш.* Әкиәттән.

4. *күсм.* *һөйл.* Тейешле-тейешһеҙ юлдар менән үҙеңә алыу, үҙләштереү *(аҡса, малды)*; эләктереү. □ Проявлять рвачество, обирать, обкрадывать. *Кеше мөлкәтен йолҡоу.* ■ *[Арыҫлан:] Ул [Соймонов] инде, халыҡты алдау ғына түгел, ҙур-ҙур йолом йолҡорға ла оҫта ине.* Ғ. Ибраһимов.

5. Киҫкен хәрәкәт менән тартыу, тартып алыу. □ Вырывать, выдёргивать *(силой).* ■ *[Батыр] ишекте асты ла бауҙа эленеп торған трико менән куртканы йолҡоп алды.* Н. Ғәйетбаев. *Уҫаллығы бөтә йөҙөндә, һоро күҙҙәрендә үк сағылып торған комиссар Ҡаныш һонған ҡағыҙҙы, килтергән аҡсаһын ҡулынан йолҡоп тигәндәй алды.* Ғ. Ибраһимов. *Йылғаның урта өлөшөнә етеү менән, ҡайнап, ял-ял булып ишелеп аҡҡан ташҡын борамды урынынан йолҡоп алырҙай итеп түбәнгә һөйрәне.* И. Абдуллин.

♦ **Сәс йолкоу** *нимәгәлер* үкенеп, үҙеңде үҙең өҙгөләү. □ Рвать на себе волосы *(от досады).* ■ *[Булатов:] Ҡара уны, иптәш Ямаҡаев, биш-алты йылдан ике ҡуллап сәсеңде йолкорһоң, әммә һуң булыр.* Яр. Вәлиев. **Тамырынан йолкоу** бар булмышы менән юҡ итеү, бөтөрөү. □ Искоренить. *Яман ғәҙәтте тамырынан йолкоп бөтөрөү.* ■ *Водителдәргә ҡаршы санкцияларҙы ҡатыраҡ итеү, штрафтар күләмен арттырыу менән генә проблеманы тамырынан йолкоп ташлап булмай.* «Башҡортостан», 30 декабрь 2011.

ЙОЛҠОШ I (Р.: нищий; И.: pauper; Т.: hırpani) *с.*

1. Тышҡы күренеше алама, ярлы, хәйерсе. □ Нищий, бедный. *Йолҡош бәндә. Йолҡош малай.* ■ *Шул саҡ, һис көтмәгәндә, артҡы рәттә бер йолҡош ҡына ир заты ҡулын күтәрә һәм ул заман өсөн ғәҙәттән тыш ҡыйыу һорау [бирә].* «Шоңҡар», № 4, 2011. *Был ҡасандыр өлкән түңәрәк ҡорһағын кәзәкейенең ике салғыйы араһынан килеп сығарып, ҡара түңәрәк бүректе ҡырын кейеп, кәпәйеп йөрөгән, хәҙер шиңгән ҡорһаҡты йолҡош кейем менән генә ҡаплап алған Әптрахман ҡарт.* Һ. Дәүләтшина. *[Баташаның кешеләре:] Ошо йолҡош малайға алма кеүек ҡыҙҙы әрәм итергә яраймы һуң?* Әкиәттән.

2. Насар, хәлһеҙ, йонсоған. □ Слабый, немощный, изнурённый, измученный, больной. ■ *[Егеттәр] тотоп, баштарына йүгән кейҙереп, һырттарына эйәр һалып, үҙҙәре менгәйне, теге йолҡош ҡына тайҙар ете йәшәрле ат, һәйбәт толпарға әйләнә лә ҡуя.* Әкиәттән. *Йөҙ илле йолҡош тауыҡ иҫке тирмәндәге серек ситән кетәктән күсерелеп, инкубаторҙан меңәрләгән себештәр ҡайтарылды.* Й. Солтанов. *[Төлкө] ҡайтып етеп үҙенә күҙ һалһа, элекке ҡупшылығынан бер ни ҡалмаған: уға йолҡош ҡына, аяҡтарында көскә баҫып торған йән эйәһе ҡарап тора, ти.* Әкиәттән.

ЙОЛҠОШ II (Р.: оборванец; И.: hobo, pauper; Т.: hırpani) *и.*

Ярлы, хәйерсе кеше. □ Оборванец, растрёпа, обормот. ■ *Уның [Лапшиндың], тағы ни әйтергә инде был йолҡоштарға, тип уйланып тороуынан файҙаланып, халыҡ ҡуҙғалып ҡуйҙы.* Н. Мусин. *[Лавкасы:] Нимә кәрәк һеҙгә, йолҡоштар?* М. Кәрим.

ЙОЛҠОШЛАНЫП КИТЕҮ (йолҡошланып кит-) (Р.: стать нищим; И.: become destitute; Т.: yoksullaşmak) *ҡ.*

1. Хәйерсе хәленә төшөү. □ Стать нищим, бедным. *Ир йолҡошланып китте. Йолҡошланып киткән кеше.*

2. Емерелеү, насарайыу. □ Обтрепаться, обноситься. *Йорт хужаһыҙ йолҡошланып китте. Мәктәп йолҡошланып китте.*

ЙОЛҠОШЛАНЫП ҠАЛЫУ (йолҡошланып ҡал-) (Р.: обнищать; И.: go broke; Т.: yoksullaşmak) *ҡ.*

1. Ярлыланыу, йолҡош хәленә ҡалыу. □ Обнищать, разориться. *Халыҡ йолҡошланып ҡалды. Көрсөктән һуң күптәр йолҡошланып ҡалды.*

2. Емерек хәлгә ҡалыу, бик ныҡ туҙыу. □ Обтрепаться, износиться. *Ауыл һуғыштан һуң йолҡошланып ҡалды. Ферма йолҡошланып ҡалды.*

ЙОЛҠОШЛАНЫУ (йолҡошлан-) (Р.: разориться; И.: get poor; Т.: yıkıma uğramak) *ҡ.*

Бөлгөнләккә төшөү, ярлыланыу; туҙыу. □ Разориться, обнищать; изнашиваться. ■ *Ырымбур менән ике арала поезд йөрөп тороу мөмкинлегенә ҡарамаҫтан, дүртенсе полктың ашау яғы ла ҡаҡы-тоҡо ғына, кейем-һалым бөтөнләй йолҡошланған.* А. Таһиров. *Кемдәр генә килеп алманы ла, кемдәр генә нисек кенә өҙөп йолҡманы беҙҙең унһыҙ ҙа йолҡошланып бөткән Илсеғолдо.* З. Биишева.

ЙОЛҠОШЛОҠ (йолҡошлоғо) (Р.: бедность; И.: poverty; Т.: yoksulluk) *и.*

Ярлылыҡ, фәҡирлек. □ Бедность, нищета, нищенство. *Йолҡошлоҡ хәленә төшөү.* ■ *[Туғанов:] Беҙҙең үҙебеҙҙең ауылдың да ергә мохтажлығы юҡ юғын да, ләкин барлыҡ ергә ауылдың унлап байы ғына сәсә ала, ҡалғандары һаман шул йолҡошлоҡтан сыға алмай.* А. Таһиров.

ЙОЛҠОШОУ (йолҡош-) *ҡ. урт. ҡар.* **йолкоу 3.** *взаимн. от* **йолкоу 3.** ■ *[Ҡорбанғәле] ҡайтышлай зыярат ҡапҡаһы алдында ҡауырһындар йолҡошоп, мамыҡ туҙҙырышып*

аяуһыҙ ыҙғышҡан ике ата ҡаҙға тап булды. М. Кәрим. *Ике сапсан йолҡошһа, бөркөткә емтек ем шул.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОЛЛОҠ (йоллоғо) (Р.: союзка; И.: vamp; Т.: yama) *и.*

Аяҡ кейеменең баш күне сит-ситенән айырылып сыҡҡанда уратып һалына торған ямау. □ Союзка *(кожаная нашивка на носок и бок передней части обуви). Яңы йоллоҡ. Йоллоҡ һалыу. Йоллоҡто алмаштырыу.*

ЙОЛЛОҠ БАШ (Р.: головка союзки; И.: vamp patch; Т.: yama) *и.*

Итектең баш өлөшөн яңыртып һалған ҙур ямау. □ Головка союзки. *Йоллоҡ баш әҙерләү. Йоллоҡ баш тегеү.*

ЙОЛЛОҠЛАНЫУ (йоллоҡлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йоллоҡлау.** *страд. от* **йоллоҡлау.** *Йоллоҡланған быйма. Йоллоҡланған ситек.*

ЙОЛЛОҠЛАУ (йоллоҡла-) (Р.: наложить нашивку; И.: put on a vamp; Т.: yama vurmak) *ҡ.*

Йоллоҡ һалып ямау. □ Наложить нашивку *(в виде союзки). Быйманы йоллоҡлау.* ■ *Атаһының янында әсәһе лә .. кешегә ярым-ярты хаҡҡа, йә бушҡа уҡ ситек йоллоҡлап, ямап ултыра.* Һ. Дәүләтшина. *[Сәғиҙә] Шаһиҙә әбейҙең яңы ғына йоллоҡлаған ситеген, Гөлйөҙөмдөң галоштарын бара һалып алып килде.* М. Тажи.

ЙОЛМАҠ I (йолмағы) *и. диал. ҡар.* **йолон I.** *Йолмаҡ эшкәртеү. Йолмаҡ әҙерләү.*

ЙОЛМАҠ II (йолмағы) *и. диал.* **тоҡом 2.** *Йолмаҡ малы. Һыйыр йолмағын яҡшыртыу.* ■ *Атайымдың малының йолмағы менән йыл да аят уҡытам.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОЛМАҠ III (йолмағы) (Р.: запас; И.: stock; Т.: yedek) *и. диал.*

Запас, һаҡлам. □ Запас. *Ҡышҡылыҡҡа йолмаҡ әҙерләү. Йолмаҡты ботороу. Йоҡа кеше йолмаҡһыҙ була.*

ЙОЛМАЛАУ (йолмала-) *ҡ. диал. ҡар.* **йолҡоу 1.** *Сүпте йолмалау. Үләнде йолмалау. Тамыры менән йолмалау.*

ЙОЛОҒОУ I (йолоҡ-) (Р.: соединиться; И.: unite; Т.: birleşmek) *ҡ. диал.*

Үҙ-ара ҡушылыу, тоташыу. □ Соединиться. *Кәртләнсеккә бөйән йолоҡҡан.*

ЙОЛОҒОУ II (йолоҡ-) (Р.: быть выдернутым; И.: be plucked; Т.: sökülmek) *ҡ. диал.*

1. Төбө-тамыры менән йолҡоноу. □ Быть выдернутым, вырванным, снятым. *Йолоҡҡан кишер. Йолоҡҡан ағас.* ■ *[Хәтирә ханым:] Йолоҡҡан һуғандарым түтәл өҫтөндә ятып ҡалғайны, барып, шуларҙы верандаға индереп ҡайтһағыҙ, арыу булыр ине.* Н. Мусин.

2. *күсм.* Тартып алыныу, йолҡоноу. □ Быть вырванным. ■ *«Халыҡ дошманы» тип ил улдарын — иң ҡаһарман халҡым батырҙарын — тарихтан мин ниңә йолоҡтом?* Р. Ғарипов.

ЙОЛОҠ (йолоғо) *и. диал. ҡар.* **ҡаран.** ■ *Ҡыш туңмаған һыуҙы йолоҡ тиҙәр беҙҙә.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОЛОМ (Р.: выкуп; И.: ransom; Т.: fidye) *и. тар.*

Ғәйепте баҫырыу йәки кешене ҡотҡарыу өсөн бирелгән аҡса, мал. □ Выкуп, откуп. / Выкупной, откупной. *Йолом аҡсаһы. Йолом түләү. Йолом түләп, әсирлектән ҡотолоу. Йолом биреп ҡотолоу.* ■ *Старшина үҙе һөйләшеп, йолом һонop ҡайтҡан да элеккесә ҡуҡырайып йөрөй бирә.* Ғ. Ибраһимов. *Золомдан йолом үҙебеҙҙә генәлер, моғайын.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОЛОН I (Р.: невыделанная кожа; И.: rough leather; Т.: deri) *и.*

Күн өсөн йөнө ейетелгән тире; сей күн. □ Невыделанная кожа, сыромять. *Йолондо эшкәртергә биреү. Йолон тапшырыу.*

ЙОЛОН II *и. диал. ҡар.* **йөлөн.** ■ *Иҡсанбайҙың йолон буйы семберләне, маңлайынан тир бәреп сыҡты.* Т. Ғарипова.

ЙОЛОНОУ (йолон-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йолоу I.** *страд. от* **йолоу I.** *Йолонған һуған. Йолонған сәс.*

2. Ауыр хәлдән арыныу, ҡотолоу. □ Избавляться. *Бөлгөнлөктән йолоноу.* ■ *Ул замандарҙа кейем юҡ, аслыҡ тырнағынан саҡ йолоноп тора инек, шул тилмәшкәһенән сыҡманы ул Әдисәй ҡәйнеш.* «Ағиҙел», № 10, 2010. *[Бикбулат старшина] донъянан .. яңғыҙ, бәхиллектәр алмай, гонаһтары йолонмай, ясинһыҙ-ниһеҙ үтте.* Ғ. Хөсәйенов. *Мораҙымдың яҙығы йолоноп, ҡылған доғаһы ҡабул булып, атаһы ҡарт Иҙеүкәйҙең һуҡыр*

күҙҙәре асылған була. «Иҙеүкәй менән Моразым».

ЙОЛОП АЛЫУ (йолоп ал-) (Р.: вырывать; И.: pull out, eradicate; Т.: yolmak) *ҡ.*

Төбө-тамыры менән йолҡоп алыу. □ Вырывать. *Тамыры менән йолоп алыу. Ҡый үләнде йолоп алыу. Ел ҡайынды йолоп алды.*

ЙОЛОП ҠАЛЫУ (йолоп ҡал-) (Р.: спасать; И.: save; Т.: kurtarmak) *ҡ.*

Ҡотҡарып ҡалыу, ауыр хәлдән ҡотолдороу. □ Спасать, выручать. // Избавление, спасение. ■ *Хуш күңелле, намыҫлы Ҡарабай уның һүҙҙәренә артыҡ ҡолаҡ һалмай, шаштырып маҡтауына яуап ҡайтармай, бары тик уны бәлә-ҡазанан йолоп ҡалыу бәхетенә ирешкәне өсөн генә бөтә йөрәктән шатлана.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Янғындарҙы һүндереү, юл-транспорт фажиғәләренә тарығандарға ярҙам итеү, урман һәм ҡипкән үләнде уттан йолоп ҡалыу — былар барыһы ла янғын һүндереүселәрҙең бурысы.* «Һаҡмар», 8 февраль 2012.

ЙОЛОТОУ (йолот-) (Р.: снимать шерсть; И.: shear; Т.: yüzmek) *ҡ.*

1. Ейетеп ҡойолтоу *(сәсте, йөндө).* □ Снимать шерсть, волос *(специальной обработкой). Тирене йолотоу. Йөндө йолотоу. Сәсте йолотоу.*

2. Тере көйө сейләндереп боҙолдороу. □ Вызывать разложение кожи, гниение заживо. *Йәрәхәтте йолотоу. Яраны йолотоп бөтөү.*

ЙОЛОУ I (йоло-) [борондо төрки *йулу-*] (Р.: выдёргивать; И.: pull out, pluck out; Т.: yolmak) *ҡ.*

1. Төбө, тамыры менән һурыу; йолҡоу. □ Выдёргивать, рвать, вырывать; выщипывать. // Выдёргивание, вырывание, выщипывание. *Сәс йолоу. Йөн йолоу.* ■ *Ҡара дауыл күпме генә ҡотормаһын, ағастарҙы төбө-тамыры менән йолоп ырғытмаһын, бер ваҡыт ул барыбер тына.* «Ағиҙел», № 4, 2010. *Һаҡалын йолоп батша күп иланы.* Әкиәттән.

2. Һөйрәп сығарыу, тартып алыу. □ Вытаскивать, вытягивать. *Көрттән йолоп алыу. Йолоп сығарыу. Батып барған кешене йылғанан йолоп алыу.*

3. *күсм.* Ауыр хәлдән аралап ҡотҡарыу; әрсәләү. □ Избавлять, спасать, выручать, освобождать. // Избавление, спасение, освобождение. *Бәләнән йолоп ҡалыу.* ■ *Был ауырлыҡтан һине кемдәр йолор, кем ҡотҡарыр?* М. Ғафури. *Ирғәле, үҙен тәрбиәләгән, үлемдән йолоп алып ҡалған кешеләр менән хушлашыр алдынан .. гармунын алды һәм ғәжәп бер дәрт, елкенеү һәм оло өмөттәр менән уйнап ебәрҙе.* Н. Мусин. *Сит яҡтарҙа ятып ҡалдың шул һин, яу утынан йолоп илдәрҙе.* Ш. Бикҡол. *Ата кешегә, улын бәләнән йолоп алыр өсөн, уны төнөн ҡаланан ҡасырып алып сығып китеүҙән башҡа сара ҡалмай.* Р. Шәкүр.

4. *күсм.* Тартып алыу. □ Изымать. // Изъятие. *Документтарҙы йолоу. Ҡағыҙҙарҙы йолоу. Әйберҙәрҙе йолоу.*

5. Йәшереп ҡалыу. □ Спрятать, скрывать, утаивать. ■ *Оҙонтал бөтә был өйөр-бәләне эсенә йәшерҙе, бөтә был шомдо тамағына йолоно.* Р. Камал. *Аңлымы, аңһыҙмы эшләгән енәйәтте йолоп ҡалыу хәрби уставҡа ғына түгел, әхлаҡҡа һыймай.* М. Кәрим.

♦ **Ғәйепте (йәки яҙыҡты) йолоу** ғәйепте йәки яҙыҡты юйыу. □ Доказать *чью-л.* невиновность, оправдать *кого.* ■ *[Иҙеүкәй — Моразымға:] Ҡартайған көндө ҡарт бабаңдың ҡурҙай ҡыҙыл күҙен сығарҙың. Яҙығыңды ҡайҙан йолорһоң?* «Иҙеүкәй менән Моразым».

ЙОЛОУ II (йоло-) (Р.: облезать; И.: fall out; grow bare; Т.: dökülmek) *ҡ.*

1. Ейеп ҡойолоу *(сәс, йөнгә ҡарата).* □ Облезать, выпадать *(о шерсти, волосах).* // Выпадение *(шерсти, волос). Йолоп төшөү. Тиренең йөнө йолоған. Сәс йолой.*

2. *һөйл.* Сейләнеп боҙолоу *(тәнгә ҡарата).* □ Разлагаться, гнить *(о ранах). Йәрәхәте йолоған. Яра йолоп китеү. Йолоп бөтөү.*

ЙОЛПОС *и. диал. ҡар.* **һелкеүес.** *Йолпоска он һалыу. Йолпоска он иләп индер әле, ҡыҙым.*

ЙОМА [ғәр. جمعة] (Р.: пятница; И.: Friday; Т.: Cuma) *и.*

1. Аҙнаның бишенсе көнө. □ Пятница. / Пятничный. *Йома ҡайтыу. Йоманан башлау. Йомаға ҡаршы.* ■ *Хәмиттәр киләһе йомаға китәләр.* С. Агиш. *Ике көн буйы отчёт тапшырып, Ғәбдеян йома көн генә эшкә сыҡты.* Н. Мусин.

2. *миф.* Изгеләштерелгән көн. □ Пятница *(мифологизированный священный день).* ■ *Йомаға ҡаршы ямғыр яуһа, аҙна буйы яуа.* Һынамыштан. ● *Йома көн үлгән ожмахлы булған.* Мәҡәл.

3. *дини.* Аҙнаның бишенсе көнөндә уҡыла торған оло намаҙ. □ Пятничный намаз. *Йомаға йөрөү. Йоманан ҡайтыу. Йомаға әҙерләнеү.* ■ *[Юлдыбикә әбей:] Хөббөниса абыстай, мин һиңә әйтәм, халыҡ йоманан сығып ята ине.* Т. Хәйбуллин. *[Кунаҡкол ағай:] Иртәгә йоманан һуң мулланы саҡырып әйтәм әле.* Д. Юлтый. *[Мулла:] Йомаларға ла бик аҙ йөрөй башланығыҙ.* А. Карнай.

4. *һөйл.* Ете көн араһы; аҙна. □ Неделя *(счёт ведётся от пятницы). Бер йома өйҙә булманы.* ■ *Ныязғолдоң бөтә өй эсе .. берике йома элек кенә ҡышлауға күсеп ҡайтҡанға күрә, ҡура-тирәләрҙе әйләндереп үҫкән эре алабуталар, тапалмайынса, көҙгө ҡарлы һыуыҡҡа ҡатып ултыралар.* Һ. Дәүләтшина. *[Тажетдин хәҙрәт:] Унан Мәкәрйә ҡалаһына килдек. Унда өс йома торҙоҡ.* М. Өмөтбаев.

ЙОМА АРАҺЫ (Р.: между полуднями четверга и пятницы; И.: time space from midday Thursday to Friday; Т.: Perşembe ve Cuma arası) *и. миф.*

Кесаҙнаның төш уртаһынан йоманың төш уртаһына тиклемге ваҡыт арауығы *(был ваҡыт арауығында әрүахтар килә тип иҫәпләнә).* □ Время между полуднями четверга и пятницы *(мифологизированное время, в которое приходят души умерших предков).* ■ *Йома араһында әрүахтар килә, шуға май еҫе сығарып йыуаса бешерергә кәрәк.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОМА ВАҠЫТЫ (Р.: время пятничного намаза; И.: Friday prayer time; Т.: Cuma namazı) *и. дини.*

Йома намаҙы уҡыла торған ваҡыт, төш ваҡыты. □ Время пятничного намаза, обеденное время. *Йома ваҡыты етте. Йома ваҡытына саҡырыу. Йома ваҡытына барыу.*

ЙОМАҒАЙ *с. диал. ҡар.* **йомаҡай**. *Йомағай кеше.* ■ *Бер аҙ шулай барғас, Сабит бабай йомағай тауыш менән һүҙ башланы.* Яр. Вәлиев.

ЙОМАҒАЙЛАНЫУ (йомағайлан-) *ҡ. диал. ҡар.* **йомаҡайланыу.** *Йомағайланып йөрөү. Йомағайланырға яратыу.* ■ *Һүҙҙе аяҡ аҫтына һалмайыҡ, – тип йомағайланды мәсет ҡарты Искәндәр.* М. Кәрим. *Бирҙеғол старшинаның бик илтифатлы булырға күшыуы һиҙелеп тора. Йомағайланырға маташа, тип уйланы Арыҫлан.* Ғ. Ибраһимов.

ЙОМАҒАРА (Р.: мохноногий канюк; И.: rough-legged buzzard; Т.: paçalı şahin) *и. зоол.*

Ҡарсыға тоҡомло ҡара-һоро һыртлы, ҡара ҡорһаҡлы ҡош. □ Мохноногий канюк (лат. *Buteo lagopus*). ■ *[Йомағара] вак кимереүселәр һәм ҡоштар менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

ЙОМАҒУЖА (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени усерган.

ЙОМАДИӘЛАХЫР [ғәр. جمادى الاخر] (Р.: название шестого месяца мусульманского лунного календаря; И.: the sixth month of Moslem lunar calendar; Т.: Cemaziyelahir) *и. иҫк.*

Ай календарының алтынсы айы. □ Юмадилахыр *(название шестого месяца мусульманского лунного календаря).*

ЙОМАДИӘЛӘҮҮӘЛ [ғәр. جمادى الاول] (Р.: название пятого месяца мусульманского лунного года; И.: the fifth month of Moslem lunar calendar; Т.: Cemaziyelevvel) *и.*

Ай календарының бишенсе айы. □ Юмадилаввал *(название пятого месяца мусульманского лунного календаря).*

ЙОМА КӨН *и. ҡар.* **йома.** *Йома көн ҡайтыу. Йома көн мәсеткә барыу. Йома көн үлгән — ожмахлы булған.*

ЙОМАҠ I (йомағы) (Р.: загадка; И.: riddle; T.: bilmece) *и.*

1. Төп мәғәнәһен уйлап табыу өсөн *нимәнелер* кинәйә менән йәки һүҙ уйнатып, һүрәтләп әйткән һүҙ (мәҫәлән, *«Ялт-йолт итә, ялмап йота» — салғы; «Ана бара — эҙе юҡ» — кәмә*). □ Загадка. *Йомаҡ әйтеү. Йомаҡтың яуабын табыу.* ■ *1871 йылда ул [Ибраһимов] Оло Урҙа ҡаҙаҡтары араһында йыйған йомаҡтарын һәм яуаптарын, шул уҡ йылда ҡаҙаҡ далаһындағы муллалар тураһындағы мәҡәләһен баҫтыра.* Р. Шәкүр. *Ут яҡтыһында ултырып әкиәттәр һөйләшәбеҙ, йомаҡтар әйтешәбеҙ, уйнайбыҙ, шаярабыҙ.* Ә. Чаныш. *Йомаҡ әйткән һүҙ йыйыр, йөн йомғаҡтай йомарлап, һүҙ эсенә уй йомор.* Ҡобайырҙан.

2. *күсм.* Серле, ҡыйын аңлашыла торған нәмә. □ Загадка. ■ *Нисек итеп таптандыр, ауылдаштарына уныһы йомаҡ булып ҡалды, ләкин бер сәфәренән Ғилман яҡшы Орлов тоҡомло юртаҡ менеп ҡайтты.* М. Хужин. *Тәкәтен ҡороткан анау серле йомаҡты сисергә тейеш ине Камил.* Ә. Хәкимов. *Башлыҡ үҙе лә быны серенә төшөнә алманы, йомаҡ сиселмәй ҡалды.* М. Кәрим.

ЙОМАҠ II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-юрматинцев.

ЙОМАҠАЙ I (Р.: льстивый; И.: smooth-tongued; T.: pohpohlayıcı) *и.*

Ярамһаҡланып, сөсө тел менән күңелде арбаған; юха. □ Льстец, подхалим, подлиза / льстивый. *Йомаҡай ҡатын. Йомаҡай булыу.* ■ *Бөгөн заводсы хужа шаҡтай йомшаҡ, йомаҡай тойолдо.* Ғ. Хөсәйенов. *Ул [Түрәкәева], әлбиттә, һәр һүҙен йәрхәмбикә тип хуплағанды, йомаҡай ҡыланғанды, үтенгәнде ярата.* Ә. Хәкимов.

ЙОМАҠАЙ II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени усерган.

ЙОМАҠАЙҒА ӘЙЛӘНЕҮ (йомаҡайға әйләнә-) *ҡ. ҡар.* **йомаҡайланыу**. *Ҡыҙ йомаҡайға әйләнде.*

ЙОМАҠАЙЛАНЫУ (йомаҡайлан-) (Р.: льстить; И.: flatter; T.: pohpohlamak) *ҡ.*

Йомаҡай (I) булыу; юхаланыу. □ Льстить; подхалимничать, подлизываться. ■ *Һыуынғас, Искәндәр күпме йомаҡайланмаһын, Нәсимә өндәшмәне.* Ә. Хәкимов. *Эрнст-Иоган Бирон .. батшабикә алдында йомаҡайланып, бөтә эште үҙ мәнфәғәтенә ҡора белеүсе әҙәм ине.* Ғ. Ибраһимов.

ЙОМАҠАЙЛАУ (йомаҡайла-) *ҡ. ҡар.* **йомалау I.** *Йомаҡайлап йөрөү. Йомаҡайлап ярау.* ■ *Шул уҡ өйҙә [Яныш старшина] кисәге нәүбәт эштәре менән булды, береһен ҡурҡытып, береһен хатта һуҡтырып, икенсеһен йомаҡайлап үҙенгә килтерергә тырышты.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОМАҠАЙЛЫҠ (йомаҡайлығы) (Р.: подхалимство; И.: toadiness; T.: yaltaklık) *и.*

Ҡуштанланып яҡшы күренергә, *кемгәлер* ярарға тырышыу хәле; ялағайлыҡ. □ Подхалимство, прислужничество, угодничество. *Йомаҡайлыҡ күрһәтеү. Йомаҡайлыҡ һыҙаттары. Йомаҡайлыҡта ғәйепләү.*

ЙОМАҠ ҠОЙОУ (йомаҡ ҡой-) (Р.: загадывать загадку; И.: say a riddle; T.: bir bilmece söylemek) *ҡ.*

1. Йомаҡ әйтеү. □ Загадывать загадку. *Балаларға йомаҡ ҡойоу.* ■ *Беҙ дүртәү, Сәхи, мин, ике һеңлем Хаят әбейҙең әкиәт һөйләүен, йомаҡ ҡойоуын һорай башланыҡ.* А. Таһиров.

2. *күсм.* Аңлайышһыҙ һөйләү, төп мәғәнәһен әйтмәү, кинәйә менән һөйләү. □ Говорить загадками, намёками; выражаться неясно. ■ *[Басариев:] Аңлатып һөйлә, Бикбаев, юҡһа йомаҡ ҡояһың.* Р. Солтангәрәев. *[Хан:] Һин йомаҡ ҡойоп ултырма, әмир, асығын әйт!* Ә. Хәкимов.

ЙОМАҠ ӨЙӨҮ (йомаҡ өй-) *ҡ. ҡар.* **йомаҡ ҡойоу 1.** *Йомаҡ ойоу бик ҡыҙыҡлы шөғөл ул. Йомаҡ өйөргә яратыу.*

ЙОМАҠ ӘЙТЕҮ (йомаҡ әйт-) *ҡ. ҡар.* **йомаҡ ҡойоу 1.** *Балаларға йомаҡ әйтеү. Дәрестә йомаҡ әйтеү.*

ЙОМАЛАҠ I (йомалағы) *и. диал. ҡар.* **йомарлам.** *Бер йомалаҡ май. Бер йомалаҡ балсыҡ. Ике йомалаҡ ҡорот.*

ЙОМАЛАҠ II (йомалағы) *и. диал. ҡар.* **йомаҡ I, 1.** *Йомалаҡ әйтеү. Йомалаҡ сисеү.*

ЙОМАЛАҠЛАУ (йомалаҡла-) *ҡ. диал. ҡар.* **йомарлау 1.** *Уҫка йомалаҡлау. Ҡоротто йомалаҡлау. Май йомалаҡлау.*

ЙОМАЛАНЫУ (йомалан-) *ҡ.*

1. *ҡар.* **иркәләнеү.** *Әсәйгә йомаланыу. Йомаланып һөйләшеү.*

2. *ҡар.* **йыуаныу.** *Бала менән йомаланыу. Булғаны менән йомаланыу.*

ЙОМАЛАП I *р. диал. ҡар.* **аҙналап.** ■ *Анау йылдары ла шулайтып өсәр көнләп, йомалап, айлап юғалып тора торғайны [Ҡотлобай].* Ғ. Дәүләтшин. *[Усман ҡарт:] Йомалап ҡунаҡ булып ятмағас ни, эшме ни ул!* А. Таһиров.

ЙОМАЛАП II *р. ҡар.* **юхалап.** *Йомалап ҡарау.* ■ *Усман ҡарт башта Ғафарҙы йомалап, унан асыуланып атты бирмәү сәбәптәрен күрә башланы.* А. Таһиров.

ЙОМАЛАУ I (йомала-) (Р.: льстить; И.: flatter; Т.: pohpohlamak) *ҡ.*

Һөсө тел, татлы һүҙ менән йыуыу; юхалау. □ Льстить, угождать. *Йомалап йөрөү. Йомалап ярау.* ■ *[Күсем:] Хәйләләп, йомалап маташма, Алдар бай!* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОМАЛАУ II (йомала-) (Р.: утаивать; И.: conceal; Т.: gizlemek) *ҡ. диал.*

Йомоу, баҫырыу. □ Утаивать, скрывать; заминать. *Эште йомалап ҡалдырыу. Ғәйепте йомалау. Енәйәтте йомалау.*

ЙОМА НАМАҘЫ (Р.: пятничный намаз; И.: Moslem prayer on Friday; Т.: Cuma namazı) *и. дини.*

Йома көнө төш ваҡыты уҡыла торған намаҙ. □ Пятничный намаз. *Йома намаҙын уҡыу. Йома намаҙынан һуң.*

ЙОМАРҘАҠ (йомарҙағы) *и. диал. ҡар.* **йомарлам.** *Ике йомарҙаҡ йөн. Йомарҙаҡ иләү.*

ЙОМАРҘАУЫҠ (йомарҙағы) *и. диал. ҡар.* **йомарсаҡ.** *Ҡар йомарҙауығы. Тартылған иттән йомарҙауыҡтар эшләү.*

ЙОМАРҘАУЫҠТЫ *с. диал. ҡар.* **йомарламлы.** *Йомарҙауыҡты балсыҡ. Йомарҙауыҡты тупраҡ.*

ЙОМАРҠА *и. диал. ҡар.* **йомортҡа.** *Йомарҡа ағы. Йомарҡа бешереү.*

ЙОМАРҠАЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **ажау.** *Йомарҡай бешереү. Яр буйында йомарҡай тыпырсынып ята.*

ЙОМАРЛАҠ (йомарлағы) *и. диал.*

1. *ҡар.* **йомарлам.** *Май йомарлағы. Ҡамырҙан йомарлаҡ яһау.* ■ *Лена, шаяралыр, тип уйлап өлгөрмәне, тағы бер йомарлаҡ аяҡ аҫтына килеп төштө.* Ә. Хәкимов. *Һүҙен әйтеп бөтөрөүе булды, ҡатындың арҡаһына тып итеп бер йомарлаҡ ҡар килеп бәрелде.* Л. Яҡшыбаева. *Ләкин «терегөмөш» үҙ асылын юғалтманы, сәсрәп-һибелеп киткән ваҡыттары булһа ла, йәнә бергә йыйылды, бер йомарлаҡ булып йомарланды.* М. Кәрим.

2. *ҡар.* **йомғаҡ 1, 2.** *Иләнгән йөн йомарлағы. Йомарлаҡҡа урау.*

3. *ҡар.* **көнйәлә 1.** *Бер йомарлаҡ мамыҡ. Сүбәк йомарлағы.*

ЙОМАРЛАМ (Р.: комок; И.: lump; Т.: topak) *и.*

Билдәле бер ҙурлыҡта йомарланған нәмә. □ Комок, кругляк. / Комковый. *Бер йомарлам ҡорот. Ҡар йомарламы. Май йомарламы.* ■ *Күп кенә ризыҡ тейәлгәйне был арбаға — мөйәт-мөйәт ҡаҙы, йомарлам-йомарлам ҡорот, сапсаҡ-сапсаҡ ит-май менән бал, турһыҡ-турһыҡ ҡымыҙ.* К. Мәргән. *Ағастан ағасҡа күсә-күсә шатланып ҡарҡылдай ҡарғалар. Уларҙы сәләмләп шыҡ малайҙар йомарлам-йомарлам ҡар атыр.* «Башҡортостан», 29 март 2011.

ЙОМАРЛАМЛЫ (Р.: комковый; И.: lumpy; Т.: topak) *с.*

Йомарланған, йомғаҡ һымаҡ әүәләнгән. □ Комковый, комковатый. *Йомарламлы талҡан. Йомарламлы май һатып алыу.*

ЙОМАРЛАНА БАШЛАУ (йомарлана башла-) (Р.: начинать сворачиваться; И.: start to roll; Т.: topaklanmak) *ҡ.*

1. Йомарланыуға табан барыу, йомро хәлгә килә башлау. □ Начинать сворачиваться, скатываться. *Май йомарлана башланы. Йомғаҡ һымаҡ йомарлана башланы.*

2. *диал.* Ауырға ҡалыу. □ Забеременеть.

ЙОМАРЛАНА ТӨШӨҮ (йомарлана төш-) *ҡ. ҡар.* **йомарлана башлау.** *Ҡорот йомарлана төштө. Ҡар йомарлана төштө.*

ЙОМАРЛАНЫП ТОРОУ (йомарланып тор-) (Р.: сворачиваться; И.: curl; Т.: topaklanmak) *ҡ.*

Йомро формаға килеп тороу. □ Сворачиваться, скатываться *(легко). Май йомарланып тора. Көндәр йылынды, ҡар йомарланып тора.*

ЙОМАРЛАНЫУ (йомарлан-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йомарлау 1—3.** *страд. от* **йомарлау 1—3.** *Йомарланған ҡорот. Йомарланған ҡағыҙ. Йомарланып ятҡан йылан.* ■ *Күл эсендә төн булғас, баҡсалағы йылғалар ағыуынан туҡтағас, алтмыш ҡолас аждаһа, йомарланып йомғаҡтай, тупһаға ятып йоҡлағас, — ошо ишектән үтерһең.* Әкиәттән. *[Бисмилла:] Бер ваҡыт юлда ат менән килә инем, бер йылан килә, урындыҡ аҫтындағы балдай һажлап, мейес артындағы баштай таш менән алып һуҡҡайным, һике аҫтындағы ҡаҙылай булып йомарланып барып ятты.* Әкиәттән.

2. *ҡар.* **тумалыу**. *Сәскәгә йомарланыу. Йомарланған сейә. Сәскә орлоҡҡа йомарланған.* ■ *Ул [Ҡарабаш] сығып ике йөҙ метр ҙа китә алманы, юл яҙып, яңы ғына сәскәгә йомарланып килгән картуф һәм көнбағыш түтәлдәре араһына инеп китте.* И. Насыри. *Ипкен ерҙәргә һибелгән алма баҡсалары, баш әйләндергес хуш еҫ аңҡытып, сәскәгә йомарланды.* Ә. Хәкимов.

3. Ҡул-аяҡты бөкләп, йыйып бөгәрләнеү. □ Свернуться *(калачиком). Йомарланып ултырыу. Йомарланып ятыу.* ■ *Яғымлы әсә ҡулы тәненә ҡағылыу менән, йомарланып ятҡан Миңлеғәле йоҡо аралаш һикереп торҙо.* Я. Хамматов. *Юлай түбыҡтарын түш тәңгәленә тиерлек еткереп йомарланды ла ябынған арестант көпөһөн башына уҡ бөркәнде.* Б. Рафиҡов.

ЙОМАРЛАНЫШЫУ (йомарланыш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йомарланыу.** *взаимн. от* **йомарланыу.** ■ *Имеш, берҙән-бер көндө йәшенле-яуынлы ҡойма ямғыр сыҡҡан; ҡара болоттар, ергә тейә яҙып, ҡот оскос булып, дыу килеп йомарланышып, өйөрөлөп йөрөгән; күк күкрәгән, йәшен атҡан.* Ф. Иҫәнғолов.

ЙОМАРЛАУ I (йомарла-) (Р.: лепить в ком; И.: shape it round; Т.: yuvarlamak) *ҡ.*

1. Йомро, тумалаҡ хәлгә килтереү. □ Лепить, сбивать в ком, делать комок, скатывать. // Сбивание. *Ҡар йомарлау. Май йомарлау. Ҡорот йомарлау.* ■ *Аҡ тәрилкә өҫтәрендә йомарлаған май ғына. Беҙҙең кеүек яңғыҙ йәшәй ҡояш менән ай ғына.* Халыҡ йырынан. *Йомарлап торам, алыҫ осорам. Бирешмәй һаман буранлы урам.* Л. Абдуллина. *Үгәй ҡыҙын гел генә ҡағып-һуғып, .. унан ҡотолорға маташҡан үгәй әсә (йә ул уны урманда аҙаштырып маташа, йә сүбәкте ебәк кеүек итеп иләп йомарлаған йомғағын алып атып, йортта эйәрсән ҡыҙы менән рәхәтләнмәксе була) был донъялыҡта уҡ үҙ яҙаһын ала.* Ә. Сөләймәнов. ● *Байҙың ҡыҙы — яҙғы тай, ярлы ҡыҙы — йомарлаған май.* Мәҡәл.

2. Йоҙроҡто ныҡ ҡыҫыу, йоҙроҡлау. □ Сжимать в кулак *что. Йоҙроҡто йомарлау.* ■ *Йоҙроғон йомарлап, кемгәләр, нимәгәләр янаны ла талип егет арҙаҡлы ҡарт мөдәррис һөжрәһенә ҡарай тотоп йүгерҙе.* Ә. Хәкимов. *Бына-бына дошманына ташланырға йыйына торған кеше һымаҡ, [Ҡарабаш] йоҙроҡтарын йомарланы.* И. Насыри.

3. Бөрөп алып ҡымтыу. □ Зажимать *(в руке, в кулаке).* ■ *Йыртып астым күкрәгемде, йолҡоп алдым йөрәгемде һәм, йомарлап устарыма, илттем уны дуҫтарыма.* Р. Назаров.

4. Теләһә нисек бөкләп ойпалау. □ Комкать, мять. *Хатты йомарлап ташлау. Ҡағыҙ кеҫәлә йомарланған. Документты йомарлап ташлау.* ■ *[Сәйҙеямал] ҡулдәкте йомарлап, әле бер, әле икенсе яғына һуғып йомшартты.* Я. Хамматов. *Аптырауынан нишләргә белмәгән кеүек, ул [гимназист] әле ҡулындағы фуражкаһын йомарлай, әле әйләндереп ҡарай.* Ә. Чаныш. *[Таһир] хатты йомарлап кеҫәһенә тыҡты ла аттан һикереп төштө.* Р. Өмөтбаев.

5. Йомғаҡ итеп урау; йомғаҡлау. □ Сворачивать, свёртывать *(в трубку);* мотать,

свивать в клубок. *Еп йомарлау. Йөндө йомарлап ҡуйыу.* ■ *Йомғаҡ та йомғаҡ ебәкте йомарлаһағыҙ, тағы ни була? Бер йоҙроҡтай ғына башымды аҫраһағыҙ, тағы ни була?* Сеңләүҙән.

ЙОМАРЛАУ II (йомарла-) (Р.: забеременеть; И.: become pregnant; Т.: gebe kalmak) *ҡ. диал.*

Ауырға ҡалыу. □ Забеременеть. *Ҡатын икенсегә йомарлаған.*

ЙОМАРСАЙ (Р.: блюдо из пшеничного толокна, замешенного на масле или молоке и сбитого в комок; И.: sort of Bashkir national dairy dish; Т.: yöresel yemek çeşidi) *и. кул.*

Төйөлгән тарыға һөт ҡушып йомарлаған ашамлыҡ. □ Блюдо из пшеничного толокна, замешенного на масле или молоке и сбитого в комок. *Йомарсай әҙерләү.* ● *Йортта ҡалған йомарсай менән туй итә.* Мәҡәл.

ЙОМАРСАҠ (йомарсағы) (Р.: колобок; И.: round object; (little) ball; Т.: topak) *и.*

1. Әүәләп яһалған бәләкәй йомро нәмә. □ Колобок, кругляшок, шарик. *Майҙан йомарсаҡтар яһау. Ҡар йомарсаҡтары. Ҡамырҙан йомарсаҡтар эшләү.*

2. *кул. диал. ҡар.* **йомарсай.** *Йомарсаҡ эшләү. Йомарсаҡ ашау.*

ЙОМАРСАҠЛАНЫУ (йомарсаҡлан-) (Р.: округляться; И.: become rounded; Т.: yuvarlaklaşmak) *ҡ.*

Йомарсаҡ (1) хәлгә килеү. □ Округляться; скатываться. *Ҡар йомарсаҡлана.* ■ *[Тимоша — Шоңҡарға:] Их, һин, йүнһеҙ!.. Буйҡа тығынып тороп, ана осаларың шамбы һыртылай булып йомарсаҡланған!* Й. Мостафин.

ЙОМАРСАҠЛАУ (йомарсаҡла-) (Р.: округлять; И.: round (off); Т.: yuvarlaklaştırmak) *ҡ.*

Йомарсаҡ (1) хәлгә килтереү, йомро итеү. □ Округлять, скатывать. *Ҡоротто йомарсаҡлау. Ҡарҙы йомарсаҡлау.*

ЙОМАРТ (Р.: щедрый; И.: generous; Т.: cömert) *с.*

1. Бар нәмәһен кеше менән бүлешкән, әйберен кешенән ҡыҙғанмаған; *киреһе — һаран.* □ Щедрый. *Йомарт ҡатын. Йомарт булыу.* ■ *Эй, ҡыҙыҡ был тормош: йә йомарт, йә ҡормош.* Т. Йосопов. *Киң күңелле, йомарт Вәзир үндай ваҡсыл шаярыуҙарҙан өҫтөн ине.* М. Кәрим. ● *Аҡыллы булған — әйтмәй белгән, йомарт булған — һорамай биргән.* Мәҡәл. *Аҡыллы тип әйтәләр — кеше әйтмәй белгәнгә, йомарт тип әйтәләр — кеше һорамай биргәнгә.* Мәҡәл. *Йомарт булһаң, үҙ кеҫәңдән бир.* Мәҡәл. *Йомарт булығыҙ тип һөйләһә лә, «йомарттың» икмәген күрмәҫһең.* Мәҡәл. *Йомарт ирҙең итәге киң.* Мәҡәл. *Кешенеке менән йомарт булма.* Мәҡәл. *Йомарт кешенең күңеле — дарья.* Мәҡәл. *Һаран байға төшкәнсе, йомарт ярлыға төш.* Мәҡәл. *Һаран байҙан йомарт ярлы яҡшы.* Мәҡәл.

2. *күсм. Нимәгәлер* әүәҫ, ихлас. □ Любитель, человек, склонный *к чему-л. Маҡтауға йомарт. Һүҙгә йомарт кеше.* ■ *Тағы килә илде иңләп тойғоларға, йырға йомарт, яңы дәрт һәм бәхет юрап йылмайыусан һөйкөмлө март.* Ғ. Рамазанов.

3. *күсм. Нимәгәлер* муллыҡ килтергән, *ниҙелер* күп биргән. □ Щедрый, обильный, богатый *чем. Йомарт йыл. Йомарт ҡояш. Йомарт күҙ.* ■ *Ҡар һыуҙарынан һәм әленән-әле яуып торған ямғырҙарҙан дымға туйып ҡалған, күперелеп торған ер бөтә үҫемлек донъяһы өсөн дә йомарт була.* Д. Исламов. *Йомарт сыуаҡлы, зауыҡтырғыс яҙ миҙгеле башланды.* М. Тажи. *Өләшеүсенең йомарт ҡулдары береһенән-береһе затлыраҡ нәмәләрҙе сығарып ҡына торҙо.* М. Кәрим. *Күк ситенән, йомарт ҡулдай, болот сыҡты күпереп.* Р. Назаров.

ЙОМАРТ ҠУЛЛЫ (Р.: щедрый; И.: generous; Т.: cömert, eli açık) *с.*

Бар нәмәһен кеше менән бүлешкән. □ Щедрый. ■ *Ҡоҙаһы Шаҡман түрәгә үҙенең мул һәм йомарт ҡуллы икәнен күрһәтергә теләгәйне ул [Буләкән].* К. Мәргән. *Мүйылбикә ул йомарт ҡуллы.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОМАРТЛАНЫУ (йомартлан-) (Р.: расщедриться; И.: show (a bit of) generosity; Т.: cömertleşmek) *ҡ.*

1. Йомартлыҡ күрһәтеү. □ Становиться щедрым, расщедриться. *Йомартлана төшөү. Йомартланып китеү.* ● *Ҡоҙа ашы мул булһа, ҡоҙағый йомартлана.* Мәҡәл.

2. Йомарт (3) булып китеү. □ Становиться щедрым, обильным. *Ер, ямғырға*

тиклем тир менән һуғарһаң ғына, йомартлана. И. Ғиззәтуллин. *Икенсе көндө ҡояш йомартланды, көн үҙәгенә тиклем үк епшегән юлда һыйыр малы түгел, башмаҡтар бата башланы.* Ш. Янбаев. *Ҡояш ниңә йомартланып көлмәй ҙә көлмәй һаман? Беҙ көткәнде яҙ белмәйҙер — килмәй ҙә килмәй һаман.* М. Сиражи.

3. *күсм. Нимәгәлер* әүәҫләнеү, ихласланыу. □ Увлекаться *чем,* пристраститься *к чему-л. Һүҙгә йомартланыу.* ■ *Прудский һүҙгә артыҡ йомартланды.* А. Таһиров.

ЙОМАРТЛЫҠ (йомартлығы) (Р.: щедрость; И.: generosity; Т.: cömertlik) *и.*

Йомарт булыу хәле. □ Щедрость. *Һүҙгә йомартлыҡ. Йомартлыҡ күрһәтеү.* ■ *Яҡшы эше өсөн айыу төлкөгә ҙур йомартлыҡ күрһәтеп, алдынан ҡалғансы һыйлаған.* Әкиәттән. ● *Аҡылдың ҡәҙере — әҙәп менән, байлыҡтың ҡәҙере — йомартлыҡ менән, кеүәттең ҡәҙере — баһадирлыҡ менән.* Мәҡәл. *Урынлы йомартлыҡ — ҙурлыҡ, урынһыҙ һаранлыҡ — хурлыҡ.* Мәҡәл.

ЙОМАРТЫ *и. диал. ҡар.* **шәмбе.** *Йомарты юлға сығабыҙ. Әсәйем йомарты ҡайта. Йомарты укыуҙар тамамлана.*

ЙОМАХЫР *и. диал. ҡар.* **шәмбе.** ■ *Әүәле йомахыр килен алыу, ҡыҙ биреү тыйылды.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОМБОРО I *с. диал. ҡар.* **йомро.** *Йомборо таш. Йомборо тау. Магазинға йомборо кәнфит килде.*

ЙОМБОРО II *и. диал.* **бауырһаҡ.** *Йомборо бешереү. Йомбороға ҡамыр әҙерләү. Йомборо менән һыйлау.*

ЙОМҒАҠ (йомғағы) [боронғо төрки *йумғак*] (Р.: клубок; И.: clew; Т.: yumak) *и.*

1. Тумалаҡлап ураған еп. □ Клубок *(ниток);* моток. *Ҙур йомғаҡ. Бер йомғаҡ еп. Еп йомғағы. Йомғаҡҡа урау.* ■ *Вәзир йомғаҡты алып ҡыҫҡылап ҡараны.* М. Кәрим. *[Туктамыштың] хәтәр уй-ниәттәре, әкиәттәге йомғаҡ шикелле, алдарынан тәгәрәне китте.* Ғ. Хөсәйенов. *Йомғаҡ осон тапмаһаң, үҙем табып бирәйем; йомаҡ айышын тапмаһаң, үҙем табып бирәйем.* Халыҡ ижадынан. *Шунан алтын ҡош, йәнә ҡатынға әйләнеп, алтын йомғаҡты тәгәрәтеп ебәрә.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Буталсыҡ, сыуалсыҡ нәмә. □ Клубок *(мыслей),* путаница. *Сер йомғағы.* ■ *Торған һайын ул [уй] үҫә барып оло йомғаҡҡа әйләнде һәм Әминәнең бар мейеһен ялмап алды.* Н. Ғәйетбаев. *Ул [Зинүнә] ҡоро күҙҙәрен һаман да түшәмдән алмай ятты. Ә уйҙар йомғағы һүтелде лә һүтелде.* Ә. Вәли. *Сер йомғағы тамам шешенә, ишңер ине, әйтһәң кешегә.* М. Кәрим.

3. Бер сама ҙурлыҡта итеп йомарланған нәмә; йомарлам. □ Колобок. *Бер йомғаҡ ҡорот.* ■ *Киндер тоҡсайҙа бер таба сөсө икмәк, бер табаҡтай бауырһаҡ, бер йомғаҡ май, уңлап баш ҡаты ҡорот.* Һ. Дәүләтшина. *Теге ут йомғағы бер түбәнәйеп, бер өҫкә күтәрелеп оҙаҡ ҡына осоп йөрөгән.* Н. Ғәйетбаев. *Шунан һуң был ҡамырҙан йомро йомғаҡтар яһап, уларҙы алдан әҙерләп ҡуйылған ылашҡа йәки лашҡа теҙәләр.* М. Өмөтбаев. *Быларҙың бисәләре бер ашлау бутҡа бешереп, уртаһына бер йомғаҡ май һалып килтереп ултырта.* Әкиәттән.

4. *күсм.* Дөйөмләштереп иҫәпләнгән *ниндәйҙер* эштең, хеҙмәттең нәтижәһе; һөҙөмтә. □ Итог, результат; заключение, обобщение. *Йыллыҡ эш йомғағы. Ярыш йомғағы. Конкурс йомғағы.* ■ *Ғаббас Сынбулатов .. беренсе ун көнлөктөң йомғаҡтары тураһындағы докладын һөйләп бөткәс, халыҡҡа тағы ла бер тапҡыр мөрәжәғәт итте.* М. Тажи. *Алда көрәш әле бөтмәгән, тәрән йомғаҡтарын һутмәгән.* Д. Юлтый.

5. *миф.* Мифлаштырылған предмет *(юл һәм яҙмыш символы).* □ Клубок *(символ дороги, пути, судьбы).*

♦ **Йомғаҡ кеүек тәгәрәү** *ниҙер* бик етеҙ ҡуҙғалғанда әйтелә. □ Катиться. *Йомғаҡ кеүек тәгәрәп йөрөү.*

ЙОМҒАҠЛАНЫУ (йомғаҡлан-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йомғаҡлау 1.** *страд. от* **йомғаҡлау 1.** *Йомғаҡланған еп. Йомғаҡланған балсыҡ. Ҡар йомғаҡланыу.* ■ *Быяла шкаф эстәрендә йомғаҡланған май ғына.* Халыҡ ижадынан.

2. *төш. ҡар.* **йомғаҡлау 2.** *страд. от* **йомғаҡлау 2.** *Эш йомғаҡланды.* ■ *Бөгөн Балалар һәм йәштәр матбуғаты аҙналығы йомғаҡлана.* «Юшатыр», 7 декабрь 2009.

ЙОМҒАҠЛАУ (йомғаҡла-) (Р.: мотать; И.: wind; Т.: yumaklamak) *ҡ.*

1. Тумалаҡлап ыраy *(епте).* □ Мотать, сматывать в клубок. // Мотание (наматывание, сматывание) в клубок (моток). *Еп йомғаҡлау. Йомғаҡлау цехы.* ■ *Йомғаҡлаған бәйләр ебемде бәйләп кенә бөтһәм ни була?* Сеңләүҙән.

2. Билдәле ҙурлыҡта тумалаҡ итеп йомарлау. □ Сбивать в комок. *Ҡоротто йомғаҡлау. Талҡанды йомғаҡлау. Ҡамырҙы йомғаҡлау.*

3. *күсм.* Дөйөмләштереп һөҙөмтә сығарыу. □ Обобщать, подытоживать, заключать, резюмировать. // Обобщение, подытоживание. *Йомғаҡлау рәүешендә. Йыллыҡ эште йомғаҡлау. Йомғаҡлау концерты.* ■ *[Яҡуп Мырҙабаев] .. тәүге биш көнлөк һуңында, эште йомғаҡлау өсөн саҡырылған кәңәшмәгә лә илаулап ҡына килде.* Б. Бикбай. *Азатлыҡ һәм яу ораны бик иртә саҡырҙы шул аталарын, әйләнеп ҡайтмаҫлыҡ юлға саҡырҙы, һай, улдарҙы уйламау мөмкинме Юлай шикелле, ғүмер юлын йомғаҡлап, ахирәткә әҙерләнеүсе кешегә!* Б. Рафиҡов.

ЙОМҒАҠЛАУ ҺҮҘЕ (Р.: заключительное слово; И.: concluding remark; Т.: son söz) *и.*

Һөҙөмтә итеп әйтелгән һуңғы һүҙ. □ Заключительное слово. ■ *Фекер алышыуҙа сығыш яһаусылар бөткәс, йомғаҡлау һүҙен Аҙнағол Һибәтович әйтте.* Д. Бүләков. *Айыу йомғаҡлау һүҙендә тетеп һалды үгеҙҙе.* С. Кулибай.

ЙОМҒАҠЛЫ (Р.: смотанный в клубок; И.: wound into a ball; Т.: yumaklanmış) *с.*

1. Йомғаҡ итеп уралған. □ Смотанный в клубок. *Йомғаҡлы еп. Йомғаҡлы йөн.* ■ *Бағымсылар һауытҡа таҙа һыу ҡойоп, ағын һыуға юныҫҡы ташлап, уларҙың нисек ағыуына, өйрөлөүенә ҡарап, йомғаҡлы еп менән, утҡа туҙ ташлап, ҡол алып доға уҡып, кем бур икәнен фаш итергә тырышалар.* Ә. Сөләймәнов.

2. Тумалаҡлап йомарланған. □ Сбитый в комок. *Йомғаҡлы ҡар. Йомғаҡлы май.* ■ *Уларға [өмәселәргә] Мүйылбикәнең һурпалы ит ҡурҙағы ла, тары бутҡаһы ла, йомғаҡлы аҡ майҙары ла бик тәмле тойолдо.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОМҒАҠ ОСО (Р.: конец клубка; И.: end of a clew; Т.: yumağın ucu) *и.*

1. Ураған ептең тышҡы осо. □ Конец клубка. *Йомғаҡтың осон тотоп урау. Йомғаҡтың осон табыу.*

2. *күсм.* Буталсыҡ, сыуалсыҡ эште сисә торған бер йәбешке. □ Ниточка, ключ *(к распутыванию сложного дела). Йомғаҡтың осон табыу. Йомғаҡтың осона сығыу. Йомғаҡтың осон юғалтыу. Йомғаҡтың осон йәшереү. Йомғаҡтың осон тотоу.* ■ *Әгәр, төпсөнә торғас, йомғаҡтың осона барып сыҡһалар?* Б.Бикбай. *Аҙ ғына һуңмаҡсе булдым ошо тәмсил йомғағын, күрһәтәйем йомғаҡ осон, үҙегеҙ һүтерһегеҙ.* Ш. Бабич.

ЙОМҒАҠ СИСЕҮ (йомғаҡ сис-) (Р.: разматывать клубок; И.: unwind, uncoil a clew; Т.: yumağı açmak) *и.*

1. Уралған йомғаҡты тағатыу. □ Разматывать клубок. *Бесәй йомғаҡты сисергә тырыша.*

2. *күсм.* Ауыр булған хәлде асыу, серҙе билдәле итеү. □ Разрешить трудный вопрос; развязать узел. *Ниһайәт, йомғаҡ сиселде.*

ЙОМҒАҠ ҺҮТЕҮ (йомғаҡ һүт-) *ҡ. ҡар.* **йомғаҡ сисеү.** *Һис шикһеҙ, был йомғаҡты һүтергә кәрәк.*

ЙОМҒАҠ ЯҺАУ (йомғаҡ яһа-) (Р.: подвести итог; И.: conclude; Т.: sonuçlandırmak) *ҡ.*

Дөйөмләштереп һөҙөмтә сығарыу. □ Подвести итог, подытожить *что.* ■ *Мендем йәшәү үрҙәренә, етте йомғаҡ яһау мәле, ләкин йөрәгем түрендә йәшлегем дә йәшәй әле.* Ғ. Рамазанов. *Ултырышта һөйләгән бөтә һүҙҙәр, әйтелгән фекерҙәр партком секретарының бер нисә һүҙе менән йыйылып, йомғаҡ яһап әйтелде.* А. Карнай.

ЙОМҒОЛАУ (йомғола-) (Р.: моргать; И.: blink; Т.: gözlerini kıpıştırmak) *ҡ.*

Күҙ ҡабаҡтарын йыш-йыш бер-береһенә тейҙереү. □ Моргать *(о глазах).* ■ *Сабирьянов иләмһеҙ ҙур, көмрө һыртында яра эҙе ялланып ятҡан танауын тыҙыны, күҙен сылт-сылт йомғолап, аптырағандай итте, шунан ҡулын һелтәне.* Н. Мусин. *Ҡаушап төшкән*

Хәлит күҙҙәрен селт-селт йомғоланы. Н. Ғәйетбаев.

ЙОМҒОС КҮҘӘНӘКТӘР (Р.: клетки замыкающие; И.: special kind of cells in leaves; Т.: hücre çeşidi) *и. бот.*

Япраҡ ауыҙсалары тирәләй ҡуш урынлашҡан тиресә күҙәнәктәре. □ Клетки замыкающие. *Йомғос күҙәнәктәренең хәрәкәте. Үҫемлектәрҙең йомғос күҙәнәктәре.*

ЙОМҒОС ЯРЫ (Р.: перепонка мигательная; И.: nictitating membrane; Т.: zar) *и. анат.*

Ҡоштарҙың, һөйрәлеүселәрҙең күҙҙәрендә ҡабаҡтарҙан башҡа ярым үтә күренмәле өсөнсө ҡабаҡ. □ Перепонка мигательная. *Һөйрәлеүселәрҙең йомғос ярыһы.*

ЙОМДОРОУ (йомдор-) *ҡ.*

1. *йөкм. ҡар.* **йомоу.** *понуд от.* **йомоу.** ■ *Тереләр үлеләрҙең күҙҙәрен йомдора. Үлеләр тереләрҙең күҙҙәрен аса.* Яр. Вәлиев. ● *Күрәсәк күҙ йомдора.* Мәҡәл.

2. Бүтәндәргә һиҙҙермәй (белдермәй) биреү. □ Давать, вручать *что-л.* тайком; подсовывать (например, *взятку*). *Аҡса йомдороу. Күп тә тормай, ауылдың ерен дәғүәләп, [Әлимбай бай] оло түрәләргә яҙыу биргән. Өҫтәүенә, тегеләргә аруҡ аҡса, бал-май ҙа йомдорған был.* Ә. Вахитов. *Истебай, бүркенең ҡолағы эсенән яҙыу сығарып, Ҡотлоярҙың усына йомдорҙо.* Һ. Дәүләтшина.

3. Йәшереп алып китеү; сәлдереү. □ Воровать, красть, похищать. // Хищение, кража. *Ә берҙән-бер көндө наҳаллыҡтың сигенә еткән бер бүре, аҙбарҙы емереп, атай үрсемгә тип биргән берҙән-бер һарыҡты йомдороп киткән.* Д. Исламов.

ЙОМҠОС *с. диал. ҡар.* **йомро I, 3.** *Йомҡос кәүҙәле. Йомҡос беләк. Йомҡос яурын.*

ЙОМОҠ I [боронғо төрки *йум-*] (Р.: закрытый; И.: closed; Т.: kapalı) *с.*

1. Йомолған, асыҡ түгел; ябыҡ. □ Закрытый, сомкнутый, сжатый. *Йомоҡ күҙҙәр. Йомоҡ ирендәр.* ■ *Һолтанбайҙың киәфәте ҡот оскос ине: битенә яраһынан һарҡып аҡҡан тупраҡ ҡатыш ҡан укмашҡан, күҙҙәре йомоҡ, ирендәре күгелйем төҫкә ингән.* Н. Мусин. *Ҡарт әле өйөндә һике ситендә ултыра, күҙҙәре йомоҡ — әллә йоҡомһорай, әллә тәрән уйға талыуы.* Б. Рафиҡов. ● *Йомоҡ ауыҙға себен кермәҫ.* Мәҡәл.

2. Насар күреүсән, күҙгә насар. □ Подслеповатый. *Йомоҡ ҡарт. Йомоҡ кеше.*

3. Тоташтырылған, ҡушылған. □ Замкнутый, смыкающийся. *Йомоҡ геометрик фигура. Йомоҡ кәкре һыҙыҡ. Есемдәрҙең йомоҡ системаһы.*

4. *күсм.* Сер тотоусан, әҙ һөйләүсән. □ Необщительный, замкнутый, скрытный. *Йомоҡ кеше.* ■ *Кәшфи — сандыр кәүҙәле, ас яңаҡлы, ябыҡ кешеләргә хас була торған ғәҙәти йөҙ-һынлы, йомоғораҡ характерлы кеше.* Д. Буләков.

ЙОМОҠ II (йомоғо) *и. диал. ҡар.* **лепкә 1.** *Йомоҡ бөтәшеү. Баланың йомоғо дерелдәп тора.*

ЙОМОҠ III (йомоғо) *и. диал. ҡар.* **лепәкәй.** *Кисен эшләп булмай, йомоҡ баҫа. Быйыл йомоҡ күп.*

ЙОМОҠА *и. диал. ҡар.* **йомоҡай.** *Йомоҡа булыу. Күрше йомоҡа булып сыҡты.*

ЙОМОҠАЙ (Р.: замкнутый человек; И.: unsociable person; Т.: içine kapanık kimse) *и.*

Аралашмаусан, һөйләшмәүсән, аҙ һүҙле кеше. □ Замкнутый, необщительный человек. *Йомоҡай кеше. Йомоҡай булыу.* ■ *[М. М. Шайморатов:] Юғарынан команда көтөп кенә эш итеү, йомоҡай булыу һис тә яраған нәмә түгел.* Картотека фондынан. *Йомоҡай Славик ғәмәлдә йор телле булып сыҡты, ҡыҙҙарҙы ниҙер һөйләп көлдөрҙө.* Г. Ситдиҡова.

ЙОМОҠЛОҠ (йомоҡлоғо) (Р.: замкнутость; И.: reticence; Т.: içine kapanıklık) *и.*

Аралашмаусанлыҡ, аҙ һүҙле булыу. □ Замкнутость, необщительность, обособленность. *Йомоҡлоҡ күрһәтеү.* ■ *Барый тәүҙәге һымаҡ кәзәләнмәй инде. .. Йомоҡлоғо бар, әлбиттә.* Ә. Хәкимов. *[Солтановтың] уға [Менәүәрәгә] ниндәй ҙә булһа һүҙ ҡушҡыһы килә, ләкин, әллә ваҡланмайым тип, әллә йомоҡлоғона барып, һоҡланып ҡарауҙан ары китә алғаны юҡ ине.* Н. Мусин.

ЙОМОЛДОРОУ (йомолдор-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йомолоу I, 1, 2.** *понуд. от* **йомолоу I, 1, 2.** ■ *Байрас Емештең ҡулын ҡаты ғына итеп ҡыҫты ла усын йомолдороп ҡуйҙы.* З. Бише-

ва. *Күҙ керпектәреңде аҙ ғына йомолдороп, кояшҡа битең менән ултырһаң, уның иркә нурҙары .. рәхәтләндереп-рәхәтләндереп һыйпайҙар, һөйәләр.* С. Ҡудаш.

ЙОМОЛОУ I (йомол-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йомоу 1.** *страд. от* **йомоу 1.** *Йомолған йоҙроҡ. Йомолған ус.* ● *Кәкре бармаҡ эскә йомола.* Мәҡәл.

2. Бер-береһенә тейеп, ҡымтылып ябылыу *(күҙ, күҙ ҡабаҡтары, ирендәр һ.б. ҡарата).* □ Закрываться, смыкаться *(о глазах, веках, губах и др.);* слипаться. *Күҙҙәр йомола. Ирендәр йомолдо.* ■ *Фатиманың күҙҙәре йомолған, бары күгелйем күҙ ҡабаҡтары ғына һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡыбырлайҙар ине.* Ғ. Хәйри. *Йоҡо туймаған, күҙҙең ҡабаҡтары ауыртып, үҙенән-үҙе кире йомолалар.* Һ. Дәүләтшина. *Йоҡлағанда булды тән иҙерәп тынып, ҡалды тик күҙҙәр йомолмай яҡтырып.* Ш. Бабич.

3. Сәскәләрҙең асылған таж япраҡтарының кире ябылыуы, бергә тоташыуы. □ Сворачиваться, свёртываться, закрываться. *Етен сәскәһе төштән һуң йомола. Төнгә йомолоу.* ■ *Йомолоп, таңды көткән сәскәләр күҙҙәрен асып, хуш еҫ һипте.* И. Насыри. *Күлдәге аҡ томбойоҡ сәскәһе йомолһа, ямғыр булырын көт тә тор.* Һынамыш.

4. *күсм.* Ҡасыу, йәшеренеү. □ Скрываться, укрываться; прятаться. ■ *[Иҫәнғол] бөтә ырыуы менән күсеп-күнып, унда-бында һуғылып бер аҙ йөрөнө лә .. Ирәкте ҡанаты аҫтына инеп йомолорға булды.* К. Мәргән.

ЙОМОЛОУ II (йомол-) (Р.: бросаться; И.: fall (upon, on); Т.: fırlamak) *ҡ.*

1. Етеҙ хәрәкәт менән һөжүм итеү, ташланыу. □ Бросаться, набрасываться, кидаться. *Таяҡ менән йомолоу. Йомолорға ғына тороу.* ■ *Һунарға йөрөп өйрәнгән башҡорт аты ҡуян артынан йомолдо.* Б. Хәсән.

2. Бөтә ынтылыш менән *нимәгәлер, ҡайҙалыр* йүнәлеү; ташланыу. □ Мчаться, нестись. *Ат үләнгә йомолдо.* ■ *Вагондың ишеге асылыу менән, Сафия проводницаны ситкә этте лә вагон эсенә йомолдо.* Т. Ғиниәтуллин. *Ул арала быларға табан биш яҡтан биш төркөм һыбайлының йомолоп сабыуы күренде.* Ә. Хәкимов. *Урам тын. Андаһанда алыҫта ғына бер-ике әҙәм күренә лә, тиҙерәк өйөнә йомолған йомран һымаҡ, ҡар баҫҡан өйҙәренә инеп юғала.* Һ. Дәүләтшина. *Йә атылып күккә менә уҡтай, йә йомолоп ергә төшә туптай, ерҙе күккә әйҙәп яна уттай, был еҙ шөңгөр ҡасан ялға туҡтай?* Р. Ғарипов. *Малайҙар аттарын тышап ебәрәләр ҙә үҙҙәре янтауҙағы ҡатыҡҡа йомолалар.* Ж. Кейекбаев. *Студенттар талаша-талаша ишеккә йомолалар.* Н. Мусин.

3. *күсм.* Бөтә күңел менән бирелеү. □ От всей души делать *что-л. Йомолоп ҡарау. Йомолоп һөйләү. Йомолоп эшләү. Йомолоп тыңлау.* ■ *Уны [Төлбаҙыянды] йырсы ҡоштар ҙа, зифа буйлы ағастар ҙа, йүгерек йәнлектәр ҙә, тын да алмайынса, йомолоп тыңланылар.* Р. Ғабдрахманов.

ЙОМОЛОУ III (йомол-) *ҡ. диал. ҡар.* **тешләү.** *Эт йомолдо. Бәйле этҡә яҡын барма, йомолор.*

ЙОМОП ҠАЛЫУ (йомоп ҡал-) *ҡ. ҡар.* **йомоу 3, 4.** *Ҡырын эште йомоп ҡалыу. Малды йомоп ҡалыу.*

ЙОМОРАС *с. ҡар.* **йомро I.** ■ *Зәлифә тубыҡтарын түшкә табанырак килтереп, шунда йомораc эйәген терәне лә онотолоп уйға талды.* Н. Мусин. *Йыуантаҡ, йомораc кәүҙәле, төпөш Байгилде көтмәгәндә, йәпйәш егеттәр һымаҡ, бер талпыныуҙа эйәргә менеп ултырҙы.* Ә. Хәкимов.

ЙОМОРСА *и. диал.*

1. *зоол. ҡар.* **йоморсай.** *Йоморса ҡармаҡлау. Йоморса тотоу. Йоморса бешереү.*

2. *ҡар.* **йомарлам.** ■ *Ике дәрүиш .. көндөҙ үк һиртмәккә аулаған ҡор итен турап, ҡая ярсығы һымаҡ ҡаты ҡорот йоморсаһын иҙеп, тәғәм хәстәрләне, һыуһын яһаны.* Ә. Хәкимов. *Азамат .. ҡуйынындағы ҡағыҙ йоморсаһын шофёрға һондо.* Р. Солтангәрәев.

ЙОМОРСАЙ (Р.: елец; И.: dace; Т.: gümüşlü balık) *и. зоол.*

Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған аҡ тәңкәле, оҙонса йомро кәүҙәле йылға балығы; йомро сабаҡ. □ Елец (лат. *Leuciscus leuciscus*). *Йоморсай тотоу. Йоморсай һурпаһы. Йоморсай таҙартыу.*

ЙОМОРСАҠ (йоморсағы) (Р.: круглый предмет; И.: round object; Т.: yuvarlak) *и.*

Йомро нәмә. □ Круглый предмет. ■ *Бәрәңгене тәүге ауыҙ итеүе ине Урал кешеләренең, мактай-мактай ашанылар, был тәмле йоморсаҡтарҙың ер аҫтында үҫкәнен белгәс, иҫтәре китте.* Б. Рафиҡов. *Мең төрлө ваҡ йоморсаҡ ҡырсынташтары араһынан ғәҙәтенсә шат, йәш сылтырап ағып ятҡан Оло Эйек менән уның янында бөшөнөп тынып торған ҙур менән хушлашҡанда, Хаммат ошо хаҡта уйланы.* З. Биишева.

ЙОМОРСҠА I *и. бот. диал. ҡар.* **кәрешкә.** *Ҡыҙыл йоморсҡа. Йоморсҡа үләне. Йоморсҡа сәскәһе.*

ЙОМОРСҠА II *и. зоол. диал. ҡар.* **йоморсай.** *Беҙҙә йоморсҡа тоталар. Йоморсай үрсетеү.*

ЙОМОРТҠА I [боронғо төрки *йумурут-ка* < *йум-ур*] (Р.: яйцо; И.: egg; Т.: yumurta) *и.*

1. Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең (мәҫәлән, *гөбөргәйел, крокодилдың*) ҡабыҡлы оҙонса түңәрәк яралғыһы. □ Яйцо. / Яичный. *Тауыҡ йомортҡаһы. Ташбаҡа йомортҡаһы. Йомортҡа етештереү. Йомортҡа һалыу. Йомортҡа баҫыу. Йомортҡа ҡабығы.* ■ *[Һомай — Уралға:] Ҡош көйөмә ҡалырмын, тыу йомортҡа һалырмын.* «Урал батыр». *Ҡыҙырас — бәләкәс кенә йыуантыҡ буйлы, .. күгәрсен йомортҡаһы кеүек сыпсыбар һипкел баҫҡан йомро битле, .. уяу, теремек малай.* З. Биишева. *Һайыҫҡан ояһы тура киләме шунда, ҡарға ояһымы — ҡарапнитеп тормай, ундағы йомортҡаны эсеп, йән аҫраған был бабай.* Әкиәттән. *Ҡоштоң йомортҡаһын тотһаң, ҡош ояһынан биҙә.* З. Биишева. ● *Бер йомортҡанан ике себеш сыҡмай.* Мәҡәл. *Йомортҡа ғына йөйһөҙ була.* Мәҡәл. *Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡиммәт.* Мәҡәл. *Үс эсендә тотҡан йомортҡа һытылмай.* Мәҡәл. *Һары йомортҡа һабан түйында ғына була.* Мәҡәл. *Яман ҡәйнә йомортҡанан йөй табыр.* Мәҡәл.

2. Тауыҡтың аҙыҡҡа файҙаланылған шундай уҡ яралғыһы. □ Яйцо. / Яичный. *Йомортҡа һарыһы. Йомортҡа ағы. Йомортҡа ҡушыу. Бешкән йомортҡа. Ҡурылған йомортҡа.* ■ *Әмир үрелеп әле генә һалынған йомортҡаны ҡулына алды.* Ғ. Ғүмәр. *Батмустың әйләнәһен ҡалас, май, йомортҡа, монпаси кеүек бисәләрҙең күҙ ҡорто булған нәмәләр әйләндереп алдылар.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Иртәгәһе тауыҡтан бөгөнгө йомортҡа артыҡ.* Мәҡәл. *Йомортҡа тауыҡты өйрәтмәй.* Мәҡәл. *Йомортҡаһын урлаған тауығын да урлар.* Мәҡәл. *Уртаҡ аттан тай артыҡ, иртәнге тауыҡтан бөгөнгө йомортҡа артыҡ.* Мәҡәл. *Уртаҡ тауыҡтан яңғыҙ йомортҡа артыҡ.* Мәҡәл.

3. Ҡайһы бер бөжәк, селәүсендәрҙең оҙонсараҡ ваҡ бөртөксәләрҙән торған яралғыһы; күкәй. □ Личинка. *Ҡырмыҫҡа йомортҡаһы. Күбәләк йомортҡаһы.* ■ *Сиңертләр берлекләшеп, киләһе йылға етерлек итеп йомортҡа һалып ҡалдыралар.* Ғ. Дәүләтшин.

4. *һөйл. ҡар.* **түл 1.** *Йомортҡа йыйыу осоро.*

5. *миф.* Нәҫелде дауам итеү, тоҡом, түллелек билдәһе. □ Яйцо *(символ плодородия, плодовитости).* ■ *Балаһыҙ ҡатынды имләгәндә кендек тирәһенә йомортҡа һытып һылайҙар.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Йомортҡанан йөй эҙләү** ғәйеп табырға тырышыу. □ Искать изъян. ■ *Ләкин Шәһәрбаныу Хәлимәнең ошо яуабынан йомортҡанан йөй эҙләгәндәй итеп, тауышын күтәрә биреп, төрткө телләнеп дауам итте.* Һ. Дәүләтшина. *Һинең әҙмә-әҙлекле, тәфсирләп-нигеҙләп әйтелгән фекерҙәреңде юҡҡа сығарырға әҙер торған, йомортҡанан йөй эҙләүсе әҙәбиәт әһелдәренә йәнә бер нисә мәҡәләлек кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәрең ҡәләмең осонда ғына булырға тейеш.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

ЙОМОРТҠА II (Р.: детва; И.: bee larvae; Т.: arı yavrusu) *и. умарт. диал.*

Яңы сыҡҡан бала ҡорт; бал ҡортоноң ҡарышлауығы. □ Детва. *Бал ҡорто йомортҡаһы. Йомортҡа ауырыуы.*

ЙОМОРТҠА АҒЫ (Р.: белок; И.: albumen; Т.: yumurta akı) *и.*

Ҡош йомортҡаһының һарыһын уратып алған үтә күренмәле шыйыҡса. □ Белок *(яичный).*

ЙОМОРТҠА БАЙРАМЫ (Р.: Пасха; И.: Easter; Т.: Paskalya) *и.*

Христиандарҙың пасха байрамы. □ Пасха. ■ *[Гәйсәр:] Мин уны [ул кешене] уҙған йыл теге ҡыҙыл йомортҡа байрамында ошонда бай менән бергә урамда йөрөгәндәрен күргәйнем.* Т. Хәйбуллин.

ЙОМОРТҠА БАҪЫУ (йомортҡа баҫ-) *ҡ. ҡар.* **себеш сығарыу.** ● *Инә ҡаҙ йомортҡа баҫҡанда, ата ҡаҙ янында бейер.* Мәҡәл. *Өйрәк йомортҡаһын тауыҡ баҫыр, бәпкәһе һыуға ҡасыр.* Мәҡәл.

ЙОМОРТҠА БИРЕҮ (йомортҡа бир-) (Р.: подаяние яйцом; И.: do charity by giving eggs; Т.: yumurta vermek) *ҡ. миф.*

Нәҫел өҙөлмәһен өсөн хәйергә йомортҡа таратыу. □ Подаяние яйцом для обеспечения плодовитости. ■ *Етлекмәгән бала төшкән була икән, хәйергә йомортҡа бирергә кәрәк.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОМОРТҠА КҮҘӘНӘКТӘР (Р.: клетки яйцевые; И.: ovule; Т.: yumurta (hücre) *и.*

Йомортҡалыҡтағы күҙәнәктәр. □ Клетки яйцевые. *Йомортҡа күҙәнәктәренең өлгөрөүе. Ҡатын-ҡыҙҙың йомортҡа күҙәнәктәре.*

ЙОМОРТҠАЛЫ (Р.: яичный; И.: egg; Т.: yumurtalı) *с.*

1. Йомортҡа һалып, ҡушып әҙерләнгән, бешерелгән. □ Яичный, с яйцом, из яиц. *Йомортҡалы гөбәҙиә. Йомортҡалы аш.*

2. Йомортҡа булған, йомортҡа һалынған. □ Яичный, с яйцом, из яиц. ■ *Хашим «аша мине, йот мине!» тип тетрәп ятҡан йомортҡалы усын асты.* Т. Ғарипова. *Үҙән буйын күңелле ауаздарға күмеп, халҡыбыҙҙың күркәм уйындары дауам итте: кемдер, сыбыҡ «ат»ta сабышһа, кемдер йомортҡалы ҡалаҡ менән йүгерҙе; егәрлеләр һыу ташыуҙа уҙышты, көслөләр арҡан тартышты.* «Таң», 30 май 2011.

ЙОМОРТҠАЛЫҠ (йомортҡалығы) (Р.: яичник; И.: ovary; Т.: yumurtalık) *и. анат.*

Түл ярала торған инәлек төйөнө; түллек. □ Яичник. *Йомортҡалыҡ янбаш һөйәге ҡыуышлығында урынлашҡан.*

ЙОМОРТҠА ӨЙРӘКТӘРЕ (Р.: утки яйценоские; И.: productive ducks; Т.: iyi yumurtlayıcı ördekler) *и. зоол.*

Йомортҡаны күп һала торған йорт өйрәге тоҡомоноң дөйөм исеме. □ Утки яйценоские. *Йомортҡа өйрәктәре һайлау. Йомортҡа өйрәктәре тотоу.*

ЙОМОРТҠА САЙҠАУ (йомортҡа сайҡа-) (Р.: забеременеть; И.: become pregnant; Т.: gebe kalmak) *ҡ. диал.*

Ауырға ҡалыу. □ Забеременеть. *Ул йомортҡа сайҡап ауырып йөрөй.*

ЙОМОРТҠА ТАУЫҠТАРЫ (Р.: куры яйценоские; И.: productive hens; Т.: iyi yumurtlayıcı tavuklar) *и. зоол.*

Йыл эсендә 200 самаһы йомортҡа һала торған тауыҡ тоҡомдарының дөйөм исеме. □ Куры яйценоские. *Йомортҡа тауыҡтары үрсетеү. Йомортҡа тауыҡтары һатып алыу.*

ЙОМОРТҠА ТАШЛАУ (йомортҡа ташла-) (Р.: выбрасывание яйца; И.: kind of Bashkir charm; Т.: büyü ile tedavi usülü) *ҡ. миф.*

Ерҙән тейгән ауырыуҙы магик дауалау ысулы. □ Выбрасывание яйца *(способ магического лечения болезней, приставших от земли).* ■ *Ерҙән тейенгән ауырыуҙан ҡотолоу өсөн йомортҡаны билдән уратып алып кеше күрмәгән ергә баш осондан ташлап китергә кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОМОРТҠА ТӘГӘРӘТЕҮ (йомортҡа тәгәрәт-) (Р.: катание яйца; И.: sort of Bashkir ethnographic rite; Т.: bir âdet) *ҡ. этн.*

Сәсеү барышында иген уңһын өсөн башҡарылған йола. □ Катание яйца *(обрядовое действие во время посева, направленное на обеспечение хорошего урожая).* ■ *Иген уңһын өсөн сәсеү ваҡытында ергә бешкән йомортҡа тәгәрәтәләр.* Халыҡ ижадынан.

ЙОМОРТҠА ҺАЛЫУ (йомортҡа һал-) (Р.: нести яйца; И.: lay eggs; Т.: yumurtlamak) *ҡ.*

Ҡайһы бер хайуандарҙа күкәй һалып нәҫел үрсетеү *(мәҫәлән, бөтә ҡоштарҙа, күп кенә балыҡтарҙа, һөйрәлеүселәрҙә, ер-һыу хайуандарында, бөжәктәрҙә һ. б.).* □ Нести яйца, нестись; метать икру. ■ *Торналар шул убаларға йыл һайын осоп килеп, йомортҡа һалып, бала сығарған.* Й. Солтанов. ● *Торна йомортҡа һалһа, ҡауҙы эсен йыртыр.* Мәҡәл.

ЙОМОРТҠА ҺАРЫҺЫ (Р.: желток; И.: (egg) yolk; Т.: yumurta sarısı) *и.*

1. Йомортҡа ағының уртаһындағы һары ҡуйы матдә. □ Желток. *Йомортҡа һарыһын ҡушыу. Йомортҡаның һарыһын айырыу.*

2. *миф.* Магия менән бәйле һыу эйәһенә «ҡорбан итеп» килтерелгән предметтарҙың береһе. □ Желток *(мифологизированный продукт, выполняющий умилостивительную функцию).* ■ *Һыу тотҡанда, һыуға йомортҡа һарыһы һалғандар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОМОРТҠА ЯРЫҺЫ (Р.: плёнка яичной скорлупы; И.: envelope; Т.: yumurta zarı) *и.*

Йомортҡаның ҡабығы менән ағын бер-береһенән айырған нәҙек ярыһы. □ Плёнка яичной скорлупы. *Йомортҡа ярыһы әле ҡапланмаған.*

ЙОМОРТОЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **йоморсай.** *Йомортой тотоу. Йомортой бешереү. Йомортой ҡармаҡлау.*

ЙОМОСҠА *и. диал. ҡар.* **юныҫҡы I.** ■ *Саша үҙен өйөрөлөп аҡҡан һыу өҫтөндәге йомосҡа кеүек һиҙә ине.* Ә. Бикчәнтәев. *Яҡында ғына төшөп ярылған бомба шартлауы уларҙың икеһен дә [Георгий менән Нурфәйезде] йомосҡа һымаҡ әллә ҡайҙарға алып бырҡтырҙы.* Ш. Янбаев.

ЙОМОСҠО ҮЛӘНЕ (Р.: лапчатка гусиная; И.: goose grass; Т.: kaz otu) *и. бот. диал.*

Ҡыйғас япраҡлы, һары сәскәле үрмәле күп йыллыҡ үҫемлек; ҡаҙ үләне. □ Лапчатка гусиная (лат. *Potentilla anserina*). *Ишек алдында йомосҡо үләне шәп үҫкән. Балалар йомосҡо үләнендә аунайҙар.*

ЙОМОУ (йом-) [боронғо төрки *йум-*] (Р.: закрывать; И.: close; Т.: yummak) *ҡ.*

1. Ҡымтып ябыу *(ауыҙ, күҙ, усты).* □ Закрывать, смыкать *(глаза, губы). Күҙҙе йомоу. Ауыҙҙы йомоу. Күҙҙе сытырлатып йомоу.* ■ *[Ҡош — Уралға:] Күҙең йомоп, күрмәй тор, ҡулың алып ҡанаттан, һис еремдән тотмай тор.* «Урал батыр». *[Бәрҙе] ауыҙын бер асып, бер йомғанында айғолаҡтары ҡыҙарып күренеп ҡала.* Н. Мусин. *Күҙҙәрен йомоп, бәйеттең аҙағына саҡлы ихлас тыңлаған Лоҡман мулланың йөҙө бойоҡланды.* Я. Хамматов. *Юламан ҡарт, күҙҙәрен сырт йомоп, ҡаҡ тау башындағы сал ҡылған шикелле, бәүелеп ултырҙы.* З. Биишева. *Ул [Зәйтүнә] лейтенант кейемендәге оҙон, төҙ буйлы, мөләйем йөҙлө гармунсы егеттә күҙҙәрен йомған килеш уйлап ҡына ятты.* Ф. Әсәнов.

2. Ҡымтып йәшереү *(ус эсенә).* □ Сжимать кулак. // Сжимание, сжатие *(в кулак). Усҡа йомоу.* ■ *Зөләйхә [балдаҡты] усына һалып әҙерәк ҡарап торғандай итте лә, сырайын һытыңҡырап, усына йомдо.* Т. Йәнәби. *Йондоҙҙарҙы йомоп усына, таң килһә лә ергә ҡараңғы, ҡараңғы ҡояш сыға таң алды, — бәхет бар ул, бар ул, валлаһи!* К. Кинйәбулатова.

3. *күсм.* Аҫтыртын үҙләштереү. □ Скрывать, утаивать, зажимать. // Сокрытие, утаивание. *Аҡсаны йомоу. Ғәйепте йомоу. Йомоп ҡалыу.*

4. *күсм.* Өндәшмәй, фашламай йәшереү; баҫырыу. □ Прятать, скрывать. *Асыуҙы йомоу.* ■ *Үткәндәрҙе үҙенә йомғаҡ һымаҡ йома бара йөрәк-йомарлам. Күпме яныу, ҡайғышатлыҡ ҡала уҙған юлдарҙан һәм йылдарҙан.* М. Сиражи. *[Әбләй:] Был мәсьәләне лә йомдоҡ.* И. Абдуллин. *Сатира һәм юмор пафослы әҫәрҙәргә, ғөмүмән, кинәйәлелек, әйтеп бөтөрмәй, уй йомоу хас.* Ә. Сөләймәнов.

5. *күсм.* Тауышһыҙ-тынһыҙ юҡ итеү, үлтереү. □ Убить, уничтожить *кого.* ■ *[Гөлсирә:] Ошо арала Ҡәйүм менән Әптерәйҙе юҡ итергә, унан һуң Сәләх менән тағы бер активтарын йоморға булдылар әле.* А. Таһиров.

♦ **Күҙ асып йомғансы (**йәки **йомған арала)** бик тиҙ, тиҙ арала. □ В одно мгновение; в мгновение ока. ■ *Күҙ асып йомғансы булмай, пар туры аттар еңел сананы елдереп алып киттеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Иштуған уны [һыуҙы] күҙ асып йомғансы төп күтәрә эсеп бөтөрҙө.* З. Биишева. *Күпме генә йәшәй ерҙә кеше? Күҙ аса ла бары күҙ йома! Шул күҙ асып йомған арала ла күпме кәртә ятҡан юлына.* Р. Ғарипов. *Әбей абайламай ҙа ҡала, егет күҙ асып йомған арала ҡылысты ҡулына алып, билбауына элеп тә ҡуя.* Әкиәттән. **Усҡа йомоу** һаранланыу. □ Скупиться, жадничать.

ЙОМОШ I [дөйөм төрки *йумуш*] (Р.: поручение; И.: assignment, errand; Т.: görev) *и.*

1. *Кемгәлер* эшләргә, башҡарырға ҡушылған эш. □ Поручение, задание, дело.

Йомошҡа йөрөтөү. Йомошто үтәү. Ҙур йомош. Йомошҡа ебәреү. Йомошҡа йүгертеү. ■ *[Һомай — Уралға:] Һүҙең һөйлә, тыңлайым, ҡулдан килһә, йомошоңа ярҙамсыңдан булайым.* «Урал батыр». *Ирендәрен ҡыҫып тырыша Марат, йомоштарға йөрөй өлтөрәп.* Р. Ниғмәти. *[Әсәһенең] йомошо булһа, өҫтәлдәге дәфтәргә генә яҙып ҡалдыра ине.* Н. Ғәйетбаев. *Гөлйөҙөмдөң янына ситтән бер кемде лә индермәйҙәр. Тик Хәмдиә генә, ҡайныларына бер барып, бер ҡайтып, йомошҡа йүгерә.* Һ. Дәүләтшина. *Сәлмән эшкә өлгөр, йомошҡа тилбер, һүҙгә тапҡыр, уйға өтҡор булған.* Әкиәттән. ● *Балаң йомошҡа китһә, артынан үҙең бар.* Мәҡәл. *Эткә йомош ҡушһаң, һөйәк һөйрәп килтерер.* Мәҡәл. *Ялҡауға йомош ҡушһаң, ул һиңә аҡыл өйрәтер.* Мәҡәл. *Төймәләй ҙә йомош, дөйәләй ҙә йомош.* Мәҡәл.

2. Эш, хеҙмәт буйынса кәрәк булған нәмә, эшләй торған эш. □ Поручение, задание, дело. *Йомош табыу. Йомош ҡушыу. Йомошҡа ебәреү. Йомош менән йөрөү.* ■ *Алыҫ юлға эйәрләйҙәр аттарҙың иң яҡшыһын, ҙур йомошҡа ебәрәләр ирҙәрҙең иң затлыһын.* М. Кәрим. *Кисә генә Әмирхановтың йомошо менән идараға, Сыртланов янына барҙым.* С. Агиш. *Был экспедицияла Шаймөрат бабай аш бешереү, йомошҡа йөрөү, аҙыҡ ташыу, аттарҙы ҡарау, транспортҡа етәкселек итеү кеүек күп кенә эштәрҙе башҡара.* Ә. Бикчәнтәев.

3. Кәрәк ваҡытта файҙаланып тороу өсөн һорап алынған йәки биреп торолған нәмә. □ Долг; надобность, нужда, потребность. *Йомош һорау. Йомошҡа алыу. Йомош биреп тороу.* ■ *[Гөлйөҙөм] һылтау йомош итеп килгән тәрән табаны ғына алды ла, күҙенең ихтыярһыҙ тәгәрәгән йәштәрен һөртә-һөртә, ҡайтып китте.* Һ. Дәүләтшина. *Фатима, кешенән йомош һорарға артыҡ яратып бөтмәһә лә, ошо ғәҙәткә буйһонорға булды.* Б. Бикбай. ● *Юлаусының йомошо йүрмә ашағас онотола.* Мәҡәл. *Яҡшы кешене йомошоң төшкәндә белерһең.* Мәҡәл. *Яҡшы күргән дуҫыңдың йомошон килгәс тә һора, яман күргән дуҫыңдың йомошон китҡәндә һора.* Мәҡәл. *Йомошҡа килһәң, туҫтағыңды йәшермә.* Мәҡәл.

4. *Нимәгәлер* төбәлгән хәстәр; уй, моң. □ Забота, мысль, направленная *на что-л.* ■ *Алтындуға батыр мал араһына барып, йүгәнен шылтыратты, ҡороғон ҡылтыратты, ти. Уға бер насар ғына буҙ тай әйләнеп ҡараны, ти. Башҡаларының йомошонда ла булманы, ти.* Әкиәттән.

♦ **Юҡ йомошто бар итеп** һылтау табып, *ҡайҙалыр* барғанда әйтелә. □ Под предлогом *чего (чтобы прийти, встретиться и т. п.).* ■ *Гөлбаныу, мендәрҙән осаһын түйтаңлатып, тырт-мырт атлап, юҡ йомошон бар итеп, соланға уҡ сығып китте.* Н. Мусин. *Бынан тыш йыш ҡына осраша башланыҡ. Заһит ике-өс көн һайын, юҡ йомошто бар итеп, Инешмамаҡҡа килеп сыға.* Ф. Әсәнов. *Мәскәү тиклем Мәскәүҙә юҡ йомошто бар итеп тә тыҡталаһың инде ул.* Ғ. Гүмәр.

ЙОМОШ II (Р.: важно; И.: it is important; Т.: mühim) *р. диал.*

Мөһим. □ Важно. *Таҙалығы йомош әле ул уның, матурлығы йомош түгел.*

ЙОМОШАҠ ДӘРЖИН *и. бот. диал. ҡар.* **билсән.** *Йомошаҡ дәржиндән беләктәрем бүртеп сыҡты. Йомошаҡ дәржинде йолҡоп ташлау.*

ЙОМОШАҠҠА ҺӨРӨҮ (йомошаҡҡа һөр-) *ҡ. диал. ҡар.* **туңға һөрөү.** *Ерҙе йомошаҡҡа һөрөү. Көҙҙән йомошаҡҡа һөрөү.*

ЙОМОШАТЫУ (йомошат-) *ҡ. диал. йөкм. ҡар.* **йомошау.** *понуд. от* **йомошау.** *Малайҙы йомошатыу.*

ЙОМОШАУ (йомоша-) (Р.: давать поручение; И.: charge with an assignment, give an errand; Т.: görevlendirmek) *ҡ.*

Йомош (1) ҡушыу, ҡушып эшләтеү. □ Давать поручение *кому-л.*, повелевать, приказывать. *Бала йомошау. Йомошап эшләтеү.* ■ *[Рауза:] Үҙем дә килен йомошап, һәндерәлә ятыр йәштә түгелмен.* Т. Ғарипова. *[Туҡтамыш] йомошап батырҙарҙы Иҙел менән Яйыҡты, Эйек менән Һаҡмарҙы көнөтөнө ҡыҙыртты.* Халыҡ ижадынан.

ЙОМОШДАР (Р.: порученец; И.: special messenger; Т.: görevli) *и. иҫк.*

Эш буйынса теге йәки был йомошто үтәү бурысы ҡушылған вазифалы кеше. □ Порученец. *Йомошдар булыу. Йомошдарға ҡушыу. Йомошдарҙы саҡырыу.*

ЙОМОШ-ЙҮН (Р.: разные поручения; И.: various assignments, errands; Т.: görevler) *и. йыйн.*

Һәр төрлө йомош, эш. □ Разные поручения, задания. *Йомош-йүнгә ярау.* ■ *[Эткол:] Һуң, түрәләр, йомош-йүнегеҙ ни ине?* Ғ. Дәүләтшин. *[Штабтың] башҡа йомош-йүндәре тауыҡ сүпләһә лә бөткөһөҙ.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОМОШ ҠУШЫУ (йомош ҡуш-) (Р.: поручить; И.: entrust (with); Т.: görevlendirmek) *ҡ.*

Ниҙер башҡарырға бойороу. □ Поручить. ■ *Беҙҙе уйнап йөрөгән еребеҙҙән әсәйебеҙ йә атайыбыҙ саҡырып ҡайтара ла теге-был йомош ҡуша.* Н. Мусин. *Ҡәмән менән Сәмән һүҙгә һүрән, эшкә һүлпән, йомош ҡушһаң — елкәләрен тырнаусан .. булғандар.* Әкиәттән.

ЙОМОШЛАНЫУ (йомошлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йомошлау.** *страд. от* **йомошлау.** *Эштәр йомошланды. Йомошланып бөтөү.* ■ *Идарала һөйләшенәһе һүҙҙәр һөйләшенеп, йомоштар йомошланып бөткәс, Зәки урамға сыҡты.* Картотека фондынан.

ЙОМОШЛАТЫУ (йомошлат-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йомошлау.** *понуд. от* **йомошлау.** *Йомошлатырға ебәреү.*

ЙОМОШЛАУ (йомошла-) (Р.: выполнять; И.: do, fulfil; Т.: yerine getirmek) *ҡ.*

Йомошто (1, 2) башҡарыу, йомошто үтәү. □ Выполнять, исполнять (например, *поручение*). *Кеше йомошон йомошлау. Йомошлай торған эш.* ■ *Эштең бик етди икәнен һиҙеп, Ғариф староста, башҡа ваҡ йомоштарын йомошламай, тиҙерәк ҡайтыу яғын ҡараны һәм атына атланды ла юлға сыҡты.* Ж. Кейекбаев. *Аҙнаев тышҡы ишеккә ҡарай атланы һәм .. бер йомошон ғына булһа ла йомошлай алыуына шатланған һымаҡ итеп ҡуйҙы.* Н. Мусин.

ЙОМОШЛО (Р.: имеющий поручение; И.: having an errand; Т.: ihtiyaclı) *с.*

1. Йомошо булған. □ Имеющий поручение, дело, нужду. *Йомошло кеше. Йомошло булыу.*

2. *тар. Ниндәйҙер* урында эшләүсе; вазифалы. □ Служилый, должностной. *Йомошло кешеләр.* ■ *Мишәрҙәр — йәнәһе, йомошлолар, аҡ батшаның тоғро хеҙмәтселәре.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡазандың йомошло татары Мөслимов, Мәндей Төпәйев — башҡорт еренән.* И. Кинйәбулатов.

ЙОМОШЛОҠЛО *с. диал. ҡар.* **йомошсан.** *Йомошлоҡло бала. Малай бик йомошлоҡло.*

ЙОМОШСАН (Р.: исполнительный; И.: obedient, dutiful; Т.: ödevcil) *с.*

Кеше йомошон (1, 2) үтәүсән, тыңлаусан. □ Исполнительный, послушный. *Йомошсан бала. Йомошсан булыу. Йомошсан күренеү.*

ЙОМОШСО (Р.: посыльный; И.: messenger; Т.: kurye) *и.*

1. Йомошҡа (1, 2) ебәрелгән кеше. □ Посыльный, рассыльный; порученец. *Йомошсо ҡайтты. Йомошсо ебәреү. Йомошсонан саҡыртыу.* ■ *Юлдыбикә әбей елпәндәп баҫып Ҡолош мулланың ҡапҡа төбөнә барып еткәндә, Хөббөниса абыстай йомошсоһон ҡаршы алырға сыҡҡайны.* Т. Хәйбуллин. *Суҡ турғай, ике арала йомошсо булып, көнөнә өс-дүрт таҡыр килеп-китеп йөрөнө, ти.* Әкиәттән.

2. Ваҡ-төйәк эш, йомош өсөн тотолған хеҙмәтсе. □ Рассыльный, посыльный, курьер. *Йомошсо булып йөрөү. Йомошсо бала.* ■ *Ҡаһарман кантонда ҡунаҡ булып йәшәгәндең икенсе тәүлегендә, Мифтахетдин Аҡмулланы губернаторға саҡыртып, махсус йомошсо килде.* Я. Хамматов. *Тирмәнең тышындағыларға — унда-бында йүгерә торған йомошсоларға, саҡҡындарға, ашнаҡсыларға — еңел түгел.* К. Мәргән. *Закир был саҡта [Хаммат ағаһы таҡҡанда] китап лавкаһы тотҡан бер театрҙа йомошсо малай булып эшләп йөрөй ине.* З. Биишева. *Тауышҡа йомошсо офицер килеп керҙе.* Ф. Янышев.

ЙОМОШТАР *и. иҫк. ҡар.* **йомошдар.** *Йомоштар булып йөрөү. Йомоштарға ҡушыу.*

ЙОМОШТОҠҺОҘ I (Р.: необходительный; И.: unsociable; Т.: nazik değil) *с. диал.*

Аралашмаусан, һаран. □ Необходительный, скупой. *Йомоштоҡһоҙ уҡыусы. Йомоштоҡһоҙ кеше менән аралашыуы ауыр.*

ЙОМОШТОҠҺОҘ II (Р.: не выполняющий поручения; И.: not efficient and dependable; Т.: gõrevini yapmayan) *с. диал.*

Тыңлауһыҙ, йомош үтәмәүсән. □ Не выполняющий поручения; непослушный. *Йомоштоҡһоҙ кеше. Ул йомоштоҡһоҙ әҙәмгә барып та торма.*

ЙОМОШ ТӨШӨҮ (йомош төш-) (Р.: нуждаться *в чьей-л.* помощи; И.: need; Т.: muhtaç olmak) *ҡ.*

Кәрәклек, ихтыяж булыу. □ Нуждаться *в чьей-л.* помощи, иметь дело *к кому.* ■ *Күптән түгел генә минең ҡыҙым Миңнекамал староста Фатиманың кәнсәләренә барған, йомошо төшкән булған.* «Ағиҙел», № 8, 2011. *[Федотов:] Донъяңды онотоп уйнар, мажаралы китаптар уҡыр заманыңда ололар атҡарыр йомош төшә сибек кенә иңеңә.* Ә. Хәкимов. *[Йәғәфәр] гел ошо бүлексәгә эләгергә тырыша, йомош төшһә-төшмәһә лә, һуғылып үтә ине.* Р. Солтангәрәев.

ЙОМОШ-ЮЛ *и. кар.* **йомош-йүн.** *Йомош-юлға барыу. Йомош-юлға етеҙ булыу.* ■ *Рәхмәт хужаһына үҙе менән бер етем малай алып килеүен, уның йомош-юлға етеҙ, ат менеп йөрөүгә бик сос, эшкә тилбер булыуын һөйләне.* Ж. Кейекбаев. *Йомош-юл менән ингән кешеләрҙе лә буш сығара алмайым хәҙер.* Ф. Рәхимғолова. *Илсебикә йомош-юлға сапсан ҡыҙыҡай, йоданы тиҙ килтереп тоттора.* К. Кинйәбулатова. *Бесән, һоло тейәп, колхоз-совхоздарҙан ылау, төрлө йомош-юл менән штабҡа юлланған кешеләр йөрөй.* Р. Өмөтбаев.

ЙОМРАН I [алтай телдәренән] (Р.: суслик; И.: gopher; Т.: tarla sincabı) *и. зоол.*

Тейендәр ғаиләһенә ҡараған кимереүсе дала йәнлеге. □ Суслик. / Сусликовый (лат. *Spermophilus*). *Йомран тиреһе. Йомран тотоу. Йомран аулау.* ■ *Айбулат, Ялаибикәнең иркен һөйләшеүенән файҙаланып, йомран тотҡандағы бөтә ҡыҙыҡтарҙы һөйләй-һөйләй, ҡыҙҙар менән ҡатарлап ауыл яғына атланы.* Һ. Дәүләтшина. *Алексей күҙен далалан алманы. Күптән түгел генә йомран баҫтырған ерҙәрҙең аҫты-өҫкә килде.* Р. Низамов. *Беҙҙәр иҫән ҡалмаҫ инек, ҡулдарҙа тимер көрәк. Йомран кеүек ер ҡаҙыйбыҙ, көрәк беҙгә бик кәрәк.* Халыҡ ижадынан.

ЙОМРАН II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир-табынцев; И.: a Bashkir clan name; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһенә ҡараған бер башҡорт ырыуының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-табынцев. *Йомран ырыуы. Табындарҙың бер ырыуы йомран.*

ЙОМРАН ҮЛӘНЕ (Р.: подъельник; И.: Indian pipe, monotropauniflora; Т.: fundagillerden bir bitki) *и. бот.*

Ылыҫлы урманда үҫеүсе һарғылт япраҡлы күп йыллыҡ үлән. □ Подъельник (лат. *Monótropa*). *Йомран үләнен йыйыу. Йомран үләнен киптереү.*

ЙОМРАС (Р.: округлый; И.: round(ed), roundish; Т.: yuvarlak) *с. һөйл.*

Тумалаҡ, йомро. □ Округлый. *Йомрас әйәк. Йомрас тауҙар.* ■ *Ә тәбиғәт, йомрас бала һымаҡ, иҙерәп ята ташлы биләүҙә.* Х. Назар. *Өркиә көрһөндө, матур, йомрас әйәген семеткеләргә тотондо.* Н. Мусин.

ЙОМРО I [дөйөм төрки *йум-*] (Р.: круглый; И.: round; Т.: yuvarlak) *с.*

1. Тумалаҡ рәүештәге. □ Круглый, округлый. *Йомро таш. Йомро булыу. Йомро итеү.* ■ *Йомро матур тояғыңды дағаларбыҙ, юрғам.* Халыҡ йырынан. *[Мотай йылғаһының] төбөнә йомро, шыма беләү таштар түшәлгәнлектән, ул, күпме кеше һыу инһә лә, һис ҡасан буйрамай, ағымы ла ҡаты түгел.* Н. Мусин. *Тау битендәге тәгәрәп ятҡан йомро таштарҙы йыйып, уға балсыҡ ҡатнаштырып, ҡайһы берҙәрен, ҡырҡа-сорҡа итеп, кәртә һымаҡ нәмәләр яһағандар.* Ғ. Дәүләтшин. *Хасбулат олатай һүҙенең ошо урынында оҙаҡ ҡына туҡтап, урман өҫтөнән ҡып-ҡыҙыл, йомро ут булып ҡалҡып килгән тулы айға ҡарап, уйланып ултырҙы.* З. Биишева.

2. Арҡыры киҫелеше түңәрәк *(оҙонса нәмәгә ҡарата).* □ Круглый, округлый. *Йомро мейес. Йомро икмәк.* ■ *Мүкһеҙ аласыҡтың тыранса ҡыйығындағы йомроботаҡ*

тишектәренән аласыҡ буйлап буй-буй яҡты юлаҡтар һыҙылған. Д. Шәрәфетдинов.

3. Тулы итле, һимеҙ. □ Круглый, полный. *Йомро кәүҙәле. Йомро кеше.* ■ *Инде Мәрзиә, кәүҙәгә йомро, тулы ғына ҡатын, үҙе килеп баҫҡайны Мәрйәм менән Хәйрулла ҡаршыһына.* Д. Бүләков. *Ғәбдеян иплән кенә урынынан торҙо, елкәһен ыштый-ыштый бисәһенең эргәһенә килде лә уның йомро ярынына ҡулын һалды.* Н. Мусин.

4. *күсм.* Күләме, һаны арыу уҡ ҙур. □ Большой *(по количеству). Йомро хаҡ. Йомро сумма.* ■ *Бар халыҡ көскә йыйнаған хәрездәрен, һаҡлыҡ банкыһында туҙанланып ятҡан йомро суммаларын .. аҡсаға әйләндерә башланылар.* «Һәнәк», № 3, 2011.

♦ **Йомро баш** хәйләкәр һәм аҡыллы кешегә ҡарата әйтелә. □ Себе на уме, хитрец. ■ *Боғара тирә-яҡта үҙен «йомро баш», «хәйләкәр төлкө» тип йөрөтөүҙәрен белә. Әйҙә, тип көлә, кинәнһендәр.* Ә. Хәкимов. ● *Һәр кемдең дә башы йомро.* Мәҡәл.

ЙОМРО II *и. диал.*

1. *ҡар.* **сынаяҡ аҫты.** *Йомроно түңкәреү. Йомроға һалып эсеү.*

2. *ҡар.* **кәсә.** *Өс йомро сәй эсеү.* ■ *[Атайым] әсәйемдең сүмес менән ҡаҙандан һирпеп алып, топҡаһыҙ йомроға килтереп ҡуйған сәйен бер урттаны.* Ғ. Ғүмәр.

ЙОМРО III *и. диал. ҡар.* **йомарсай.** *Йомро әҙерләү. Йомро ашау.*

ЙОМРО БӘРҘЕ (Р.: вид хариуса; И.: grayling species; Т.: gölgebalığı) *и. зоол.*

Бәрҙе балығының төрө. □ Вид хариуса. *Йылғала малайҙар менән йомро бәрҙе тоттоҡ. Йомро бәрҙе ҡаптырыу.*

ЙОМРО ГӨЛ (Р.: глобулярия; И.: globularia; Т.: küre çiçeği) *и. бот.*

Ярым ҡыуаҡ булып үҫкән күп йыллыҡ үлән. □ Глобулярия (лат. *Globularia*). *Карлик йомро гөл. Төрткөлө йомро гөл.*

ЙОМРОҒАР *и. диал. ҡар.* **ыраштқы.** *Март айында йомроғар яуып йөҙәтә. Таңға табан йомроғар яуа башланы.*

ЙОМРО ҠАБЫРҒА *и. диал. ҡар.* **бығым.** *Йомро ҡабырғаны һындырыу.*

ЙОМРОҠАЙ I *и. диал. ҡар.* **күмәс.** *Йомроҡай бешереү. Йомроҡайға ҡамыр баҫыу.*

ЙОМРОҠАЙ II *и. диал. ҡар.* **ташбаш.** *Йомроҡай тотоу. Йомроҡайҙы итәк менән һөҙөү.*

ЙОМРО ҠАМЫШ (Р.: клубнекамыш; И: reed grass species; Т.: çapıl otu) *и. бот.*

Күрән һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, оҙон нәҙек һабаҡлы, йомро башлы күп йыллыҡ үлән төрө. □ Клубнекамыш (лат. *Bolboschoenus*). *Ҡоролоҡ йылы йомро ҡамыштан башҡа нәмә үҫмәгән бесәнлектә. Борон ҡыйыҡты йомро ҡамыш менән йылытҡандар.*

ЙОМРОЛАНЫУ (йомролан-) (Р.: округлиться; И.: become rounded; Т.: yuvarlaklaşmak) *ҡ.*

1. Йомро формаға инеү. □ Приобретать форму шара, становиться круглым, округлиться. *Таш йомроланған. Бесәй йомроланып ятһа, көн һалҡынға.* Һынамыштан. ■ *Оҙон аяҡлы, йомроланып бөткән ҡойроҡло, түҙөк кәүҙәле матур күгәрсен, һырты ерәнһыу көрән, ҡара-көрән таптар менән сыбарланған.* Э. Ишбирҙин.

2. *күсм.* Тулыланыу, һимереү. □ Полнеть, располнеть, округлиться. *Ҡатын йомролана башлаған.* ■ *Үҙенең утыҙ биш йәштә генә булыуына ҡарамаҫтан, ваҡытынан алда йомроланып, ауырайыбыраҡ киткәйне ул [Нурбикә еңгә].* Д. Бүләков. *Аҡһаҡ Бүре үҙе лә бик ныҡ үҙгәргән. Сатанлаһа ла, йөрөштөрөшө баҙыҡ, ҡабырғалары, һырты йомролана төшкән.* Ә. Хәкимов.

ЙОМРОЛАУ (йомрола-) (Р.: округлять; И.: round; Т.: yuvarlaklaştırmak) *ҡ.*

Арҡыры киҫелешен түңәрәккә әйләндереү, йомро итеү. □ Придавать форму шара, округлять. // Округление. *Йомролап юныу. Ҡарҙы йомролау. Майҙы йомролау.*

ЙОМРО МЕЙЕС (Р.: голландка; И.: Dutch oven; Т.: kuzine) *и. диал.*

Ғәҙәттә, кафелдән һалынған, йәиһә кирбестән һалынып, тышы ҡалай менән көпләнгән түңәрәк мейес; галанка. □ Голландка. *Йомро мейескә икмәк һалыу. Йомро мейескә утын күп китмәй. Йомро мейес сығарыу.*

ЙОМРО САБАҠ (сабағы) *и. зоол. диал. ҡар.* **бөгәрсәй.** *Ҡармаҡ менән йомро сабаҡ тоттоҡ. Йылғала йомро сабаҡ нык үрсене.*

ЙОМРОСАЙ *с. ҡар.* **йомро 3.** ■ *Мәүсилә балитәкләп тегелгән ситса күлдәген күтәрә биреберәк йомросай ап-аҡ яланғас тубыҡтарын көн яҡтыһында ялтлатып ебәрҙе лә шишмә тирәләй хәтфә балаҫ һымаҡ түшәлеп үҫкән ҡаҙ үләне өҫтөнә теҙләнде.* Д. Бүләков.

ЙОМРОСҠА *и. бот. диал. ҡар.* **яҫмыҡ.** *Йомроска сәсеү. Йомроска орлоғо. Йомроска бешереү.*

ЙОМРО ТОЯҠ (тояғы) (Р.: конь; И.: horse; Т.: at) *и. диал.*

Йылҡы малы. □ Конь, кони. *Йомро тояҡ аҫрау. Йомро тояҡ һуйыу.*

ЙОМРО ТОЯҠЛЫЛАР (Р.: непарнокопытные; И.: perissodactyls, odd-toed ungulates; Т.: tek toynaklılar) *и. зоол.*

Урта бармағы нығыҡ үҫешкән һәм шуның менән нығыҡ баҫып йөрөй торған, 2-се һәм 4-се бармаҡтарының эҙе генә ҡалған, бүтән бармаҡтары юғалған һөтимәр хайуандар. □ Непарнокопытные, однокопытные (лат. *Perissodactyla*). *Зебралар, йылҡы, ишәктәр, носорогтар йомро тояҡлыларға ҡарай. Йомро тояҡлылар ғаиләһе.*

ЙОМРО УМАРТА *и. умарт. диал. ҡар.* **түмәр умарта.** *Йомро умарта ултыртыу. Йомро умарта балы. Йомро умартаға ҡүс ҡундырыу.*

ЙОМРО ҺАЛМА *и. диал. ҡар.* **сумар.** *Йомро һалма бешереп ашау.*

ЙОМРО ЭСӘК *и. анат. диал. ҡар.* **тура эсәк.** *Йомро эсәк сире. Йомро эсәк менән яфаланыу.*

ЙОМРО ЮЛ (Р.: тропинка; И.: path; Т.: patika) *и.*

Йәйәү кеше юлы; һуҡмаҡ. □ Тропинка. ■ *Бына бер ваҡыт өйөр-өйөр йылҡы йомро юл буйлап һыулауға төшә башланы, ти.* Әкиәттән. *Эре-эре тирәктәр араһынан ҡырла буйлап киткән йомро юл менән бер аҙ барғандан һуң, ялан башланды.* А. Абдуллин.

ЙОМСОҠ (Р.: узкоглазый; И.: Oriental, Asian looking; Т.: çekik gözlü) *с. диал.*

Ҡыҫыҡ күҙле. □ Узкоглазый. *Йомсоҡ күҙле ҡыҙ. Тыумыштан йомсоҡ булыу.*

ЙОМШАҠ I [боронғо төрки *йумшаҡ*] (Р.: мягкий; И.: soft; Т.: yumuşak) *с.*

1. Тейгәндә, баҫып, ҡапшап ҡарағанда тығыҙ булмаған; *киреһе* — ҡаты. □ Мягкий. *Йомшаҡ ултырғыс. Йомшаҡ уйынсыҡ. Йомшаҡ бүрек. Йомшаҡ юрған. Йомшаҡ ҡамыр. Йомшаҡ түшәк.* ■ *Осһоҙ-ҡырыйһыҙ киң матур ялан, ул йомшаҡ ҡарҙан юрған ябынған.* Н. Иҙелбай. *Таңда тороп хәҙер ҡырға сығам, ысыҡ кипмәҫ борон гөлдәрҙә; ҡояш сыҡҡан саҡта сәскә ҡуям ул баш һалған йомшаҡ мендәргә.* М. Кәрим. *Мин поезда барам. Йәшел вагон, һығылмалы йомшаҡ урындар.* Р. Ниғмәти.

2. Ҡабарып торған, нәфис *(ҡул, бит һ. б. ҡарата).* □ Мягкий, пухлый, нежный *(о руке и т.д.). Йомшаҡ ҡул. Йомшаҡ яурын. Йомшаҡ бит. Йомшаҡ тире.* ■ *Мировой йыуан, йомшаҡ бармаҡтары менән башын тызығылаңы ла эйәген усланы.* Н. Мусин. *Уның [Оло инәйемдең] йомшаҡ ҡулы битемә ҡағылғас, мин бөтөнләй-бөтөнләй бәләкәс булып ҡалам.* М. Кәрим.

3. Тотоп, ҡапшап ҡарауға нескә, ебәк кеүек *(сәс, йөн, тукыма һ. б. ҡарата).* □ Мягкий. *Йомшаҡ сәс. Йомшаҡ дебет. Бәрхәт кеүек йомшаҡ. Йомшаҡ йөнлө.* ■ *Ғәлим, ниндәйҙер рәхәтлек ҡатыш тыныслыҙланыу тойоп, Зөһрәнең йомшаҡ мамыҡ шәленән, яурынынан һыйпаны.* Н. Мусин. *Йәшел йомшаҡ ҡурпы ат ауыҙында үҙе ирәп тора.* М. Кәрим. *Егет, нисектер, һонолоп, күкрәктәре киңәйеп киткәндәй булды, ирен өҫтөндәге йомшаҡ бәпкә йөндәр ҡуйырып ҡара мыйыҡҡа әйләнде, бер аҙ тартыла төшкән йөҙөнә ирҙәрсә нур ҡунды.* Ғ. Хөсәйенов.

4. Баҫымға, ҡыҫыуға еңел бирешеүсән; *киреһе* — ҡаты. □ Рыхлый, мягкий. *Йомшаҡ балауыҙ. Йомшаҡ балсыҡ. Йомшаҡ пластилин. Йомшаҡ ер.* ■ *Арҡан осондағы ырғаҡ көйһөҙ булып сыҡты: тәүге ырғытҡанда, барып етмәне, икенсеһендә әләгер урын тапмай кире ҡайтты, өсөнсө юлы ғына ҡаҙалырға йомшаҡ ағасмы, таҡта егенме тапты.* Б. Рафиҡов. *Йорт бураһы буйында ике тауыҡ ҡына йырлай, тәпәйҙәре менән йомшаҡ тупраҡты ҡаҙыйҙар ине.* Ғ. Хәйри.

5. Эшкәртеүгә еңел бирелә торған. □ Мягкий, легко поддающийся обработке. *Йомшаҡ металдар. Йомшаҡ материал. Йом-*

шаҡ матдә. ■ *Көмөш — аҡ төҫлө йомшаҡ металл.* Интернет селтәренән. ● *Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫыр, йыуаш кешене һүҙ баҫыр.* Мәҡәл.

6. Яңы, иҫкереп ҡатмаған. □ Свежий, мягкий. *Йомшаҡ икмәк. Йомшаҡ бәлеш.* ■ *Шиғырым, һин әрем тәме әйткән, көйөп бешкән арыш икмәге. Мамыҡтай аҡ, йомшаҡ ҡалас һымаҡ.* Р. Ғарипов.

7. Ҡарар күҙгә, ишетер ҡолаҡҡа хуш килерлек, ҡуҙғытмай торған, тупаҫ түгел; яғымлы. □ Мягкий, нежный, ласковый. *Йомшаҡ тауыш. Йомшаҡ моң. Йомшаҡ телле.* ■ *Атаһы уны [Төлкөсураны] шулай таныштыҡлы, кешегә йомшаҡ телле итеп тәрбиәләргә тырышты.* Н. Мусин. *Бөтә табынды хайран ҡалдырып, Аҡйондоҙҙоң йомшаҡ моңло тауышы яңғыраны.* М. Кәрим. *Әле генә баҫылған һуғыш шау-шыуынан һуң ҡыҙҙың музыка һымаҡ йомшаҡ һәм мөләйем тауышы Шакирға иҫ киткес ныҡ тәьҫир яһаны.* Ә. Чаныш. ● *Йомшаҡ телгә ышанма.* Мәҡәл. *Бал менән ауыҙланғандың теле татлы булыр, май менән ауыҙланғандың теле йомшаҡ булыр.* Мәҡәл.

8. Саҡ ишетелерлек, әкрен, шым. □ Мягкий, спокойный. *Йомшаҡ тауыш менән һөйләү. Йомшаҡ ауаз.*

9. Һалмаҡ, талғын. □ Мягкий; осторожный, нежный. *Йомшаҡ хәрәкәттәр.* ■ *Тоняның .. хәрәкәте һалмаҡ һәм йомшаҡ.* И. Абдуллин.

10. *күсм.* Берәй төрлө тәьҫир, йоғонто, ҡыҫымға юл ҡуйыусан, ыңғай килеүсән, ныҡ түгел; *киреһе* — ҡаты. □ Слабый, мягкий; слабохарактерный. *Йомшаҡ тәбиғәтле булыу. Йомшаҡ холоҡ.* ■ *[Ирина Платоновна:] Тик бер яғы — йомшаҡ тәбиғәтле булып сыҡты [ирем].* Ә. Хәкимов. *Йомшаҡ тәбиғәтле Ҡорбанғәленең хатта күңеле тулып китте.* М. Кәрим.

11. Кеше хәлен уртаҡлашыусан, кеше мохтажын аңлаусан; мәрхәмәтле, шәфҡәтле. □ Сострадательный, милосердный, жалостливый, мягкосердечный. *Йомшаҡ күңел.* ■ *Уның [Ҡыҙрастың] йомшаҡ күңеле баштан уҙған ваҡиғаларҙы берәмләп һанап үтә барҙы.* Т. Йәнәби. *Уны [Нуранияны] Ғилемхандың йомшаҡ күңеле, миһырбанлығы әүрәтте, йөрәген әсир итте.* Р. Камал.

12. Мәрхәмәтле, шәфҡәтле булғанлыҡты, асыҡ йөҙлөлөктө сағылдырған. □ Мягкий, нежный, ласковый. *Йомшаҡ ҡараш.* ■ *Егет бөтмәҫ-төкәнмәҫ йылы ҡараш, бәйләм-бәйләм йомшаҡ һүҙҙәр букеты менән күмелде.* И. Насыри. *[Баш адъютанттың] күҙендә йомшаҡ йылмайыу беленде.* Ф. Янышев.

13. *күсм.* Кешегә ҡарата киҫкен, талапсан түгел; *киреһе* — ҡаты. □ Мягкий, слабый. *Йомшаҡ хөкөм сығарыу. Йомшаҡ яза биреү.* ■ *Минең ҡарамаҡҡа, ҡатын-ҡыҙҙар тәбиғәте буйынса ир-аттарға ҡарағанда йомшағыраҡ, хислерәк.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010. *Ғөбәйҙең ҡарашынса, ҡатын-ҡыҙ Ашраф ише көсө самалы, ихтыяры йомшаҡ ирҙәрҙе һанға һуҡмай инде ул.* Ә. Хәкимов. *Ҡуйсы, атай, ҡуйсы, атай, ҡыҙыңа йомшаҡ булсы, атай.* «Алпамыша». ● *Үҙеңә үҙең ҡаты бул, кешеләргә йомшаҡ бул.* Мәҡәл. *Ҡыҙ биргән ергә ебәктән дә йомшаҡ бул, килен алған ергә тегәнәктән дә ҡаты бул.* Мәҡәл.

14. Тупаҫлыҡ, ҡатылыҡ менән һуғарылмаған, тупаҫ түгел. □ Мягкий, негрубый. *Йомшаҡ һүҙ.* ■ *Немец ҡыҙҙары бит улар тулы тәнле, оҙон ғына буйлы, йомшаҡ һүҙле ҡыҙҙар булалар.* И. Насыри. *Замана егеттәрендә бик үк йыш осрамай торған ғәҙәт тә бар үҙендә [Мөбәрәктә:] кәрәкле-кәрәкмәгәнгә эсеп йөрөмәй, олоһона, кеҫеһенә лә йомшаҡ һүҙле.* Н. Мусин. *Их, шул йомшаҡ һүҙ! Ҡыҙырасты үлтерә лә ҡуя шул.* З. Биишева. ● *Ҡаты һүҙҙән тал һына, йомшаҡ һүҙҙән таш ирей.* Мәҡәл.

15. Тәьҫире киҫкен, көслө түгел, сағыштырмаса йылы *(көн, климат һ. б. ҡарата).* □ Мягкий, тёплый. *Йомшаҡ ел. Йомшаҡ ҡыш. Йомшаҡ көн.* ■ *Үҙенең яҡты көндәрен, йылы, йомшаҡ һауаларын эйәртеп, яҙ килде.* И. Насыри. *Йылы, йомшаҡ ел, ҡар һыуы, яңы ер, тамыр еҫе таратып, тынды ҡыҫҡандай итә һәм күңелде ҡытыҡлай.* И. Абдуллин. *Тәҙрәнең пәрҙәләрен ике яҡҡа айырып ҡуйғандан һуң, йомшаҡ ҡына елдәр, өй эсенә шаярып кереп, гөл япраҡтарын һелкетте.*

Ғ. Хәйри. *Туғайҙарҙағы көтөүҙәр, йомшаҡ елгә тулҡынланыусы иген баҫыуҙары, сәскәнән сәскәгә күсеп шәрбәт эҙләүсе бал ҡорттары — һәммәһе лә Билаловты ҡанатландырҙы, ҡыуандырҙы.* Д. Юлтый.

16. Етерлек тиклем ҡеүәте булмаған, ныҡлы хәрби көскә эйә булмаған. □ Слабый, уязвимый. *Йомшаҡ яҡ. Дошмандың йомшаҡ урыны.* ■ *Дошмандың бигүк йомшаҡтарҙан булмауын черкес та аңғарҙы, күрәһең, һағыраҡ ҡылана башланы.* Н. Мусин. *Батша хөкүмәте тап ошо маҡсатта, яуҙа ҡатнашыусыларға ҡарата был юлы үҙенә күрә бер төрлө йомшаҡ сәйәсәт тотоп, улар менән еңелсәрәк кенә иҫәпләшергә булғайны.* Ғ. Ибраһимов.

17. *күсм.* Тәьҫир көсө, ҡеүәте бәләкәй булған, ҡаты булмаған. □ Слабый, не крепкий; неконцентрированный. *Йомшаҡ ҡаһуә. Йомшаҡ ҡымыҙ. Йомшаҡ сәй. Йомшаҡ тәмәке.* ■ *Өндәшеү ҡайҙа, һирәкләп йомшаҡ шарапты һуплай-һуплай, кинәнеп ашаны [Рәсүл Әмирович].* Ә. Хәкимов.

18. Тейешле дәрәжәле булмаған, насар. □ Слабый; плохой. *Тәртибе йомшаҡ булыу. Мәсьәләне йомшаҡ ҡуйыу.*

19. Кимәле, торошо түбән. □ Слабый, мягкий; некачественный. *Йомшаҡ хикәйә. Йомшаҡ эш.* ■ *Үҙебеҙҙә металлургия сәнәғәте йомшаҡ. Ул .. һуғыш кәрәге өсөн булған продукцияны бирә алмай.* Д. Юлтый.

20. Үҙ эшен насар белгән, насар башҡарған. □ Слабый, некомпетентный. *Йомшаҡ уҡыусы. Йомшаҡ класс. Йомшаҡ студент.*

♦ **Йомшаҡ алтын** ҡиммәтле тире. □ Кожа и меха, мягкое золото. *Йомшаҡ алтын алыу. Йомшаҡ алтынға ҡыҙығыу. Йомшаҡ алтын һатыу салоны.* **Йомшаҡ барып төшөү** осоу аппаратының талғын барып төшөүе. □ Приземлиться мягко, совершить мягкую посадку. **Йомшаҡ йәйеп** (*йәки* **һөйләп**) **ҡатыға ултыртыу** һәйбәт кенә һөйләп, киреһен эшләү. □ *соотв.* Мягко стелет, да жестко спать. ■ *Улы исеменән йомшаҡ һөйләп, ҡатыға ултыртыуынан бигерәк бисәһенең бына ошо йылмайыуы йөрәген өтөп алды Ҡәҙермәттең.* Н. Мусин.

ЙОМШАҠ II (Р.: мягко; И.: with care; Т.: özenle) *р.*

1. Әкрен, талғын. □ Мягко, осторожно. *Самолётты йомшаҡ итеп ултыртыу. Йомшаҡ баҫып йөрөү.* ■ *Тәҙрәнән төшкән ҡояш нурҙары битемдән йомшаҡ ҡына итеп һыйпай.* Н. Мусин. *Шул саҡ уның [Сергейҙың] артында тәгәрмәстәрҙең йомшаҡ ҡына шығырлауы ишетелде.* И. Абдуллин. *Хатта аттар ҙа. ҡурҡыныс барын тойғандай. һаҡ ҡына башҡырынып, тос туяҡтарын йомшаҡ баҫырға тырышып барған һымаҡ бит!* З. Биишева. *Троллейбус йөрөһөн урамда шым ғына, йомшаҡ итеп, көн һайын мине эшкә ул һуңлатмай ҡуйһын илтеп.* Р. Ниғмәти.

2. Иркәләп, матур итеп. □ Мягко, нежно, ласково. *Йомшаҡ итеп йылмайыу.* ■ *Гөлйөҙөм әхирәтен ныҡытып ҡосаҡлай, йомшаҡ көлә.* Һ. Дәүләтшина. *Үҙе [Хәмит], ниңәлер, ғәйепле кеше шикелле, йомшаҡ ҡына йылмая.* З. Биишева.

3. Әкрен генә, матур итеп. □ Не грубо, мягко. *Йомшаҡ һөйләшеү. Йомшаҡ иҫкәртеү. Йомшаҡ итеп әйтеү. Үҙен йомшаҡ тотоу.* ■ *Сафура был һөйкөмлө, илгәҙәк бикәсенең былай йомшаҡ шаяртыуына ҡаршы, үҙенең теҙеп ҡуйған ынйы кеүек аҡ тештәрен күрһәткәнсе асыҡ йылмайҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Хәс тә Ғөбәйҙең малай сағындағы кеүек, йомшаҡ итеп, иркәләп өндәште.* Ғ. Хәйри. *Прокурор .. йомшаҡ ҡына иҫкәртте, хатта асыулы кеүек булған йөҙөндә йылмайыу ҙа уйнап алды.* С. Агиш. ● *Хәйләкәргә ышанма: йомшаҡ һөйләп, ҡатыға ултыртыр.* Мәҡәл.

4. Бик үк яҡшы түгел, насарыраҡ. □ Слабовато. ■ *Йомшағыраҡ уҡыған курсанттарҙы, кесе лейтенант званиеһы бирел. хәрби хеҙмәттән бушаттылар.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

ЙОМШАҠ III (йомшағы) (Р.: мякиш; И.: bread crumb; Т.: ekmek içi) *и.*

1. Икмәктең, йәшелсә һәм емеш-еләктең эсендәге итләс өлөшө. □ Мякиш. *Икмәк йомшағы. Хөрмә емешенең йомшағы. Ҡарбуз йомшағы.*

2. Кеше йәки хайуан тәненең итләс, мускуллы урыны (*табанда*). □ Мякиш (*подош-*

венный). Табан аҫты йомшағы. Тояҡ йомшағы. Эттең табан аҫты йомшағы.

ЙОМШАҠ IV (йомшағы) (Р.: хлеб из пшеничной муки; И.: bread; Т.: ekmek) *и. диал.*

Юғары сортлы бойҙай ононан бешерелгән икмәк. □ Хлеб из пшеничной муки. *Йомшаҡты мейестән алыу.*

ЙОМШАҠАЙ (Р.: нерешительный; И.: irresolute; Т.: ikircimli) *с.*

Ихтыяры ныҡлы түгел, эш-йомошто еренә еткерә алмай торған, үтә ҡыйыуһыҙ. □ Нерешительный, несмелый; робкий; мягкий. *Йомшаҡай булыу.* ■ *[Таңһылыу – Фәнисәгә:] Һин көлөрһөң, мине йомшаҡай, йүләр, тип атарһың.* Р. Камал. *[Картәсәй:] Ҡоҙағый үҙе лә Әлтәфенә баш була алманы, йомшаҡай.* Г. Яҡупова.

ЙОМШАҠ АЛАНҒЫ (Р.: подмаренник; И.: bedstraw; Т.: yoğurt otu) *и. бот.*

Нәҙек оҙон һабаҡлы, оҙонса ваҡ япраҡлы, ваҡ суҡ сәскәле күп йыллыҡ болон үҫемлеге. □ Подмаренник (лат. *Galium mollugo*). *Йомшаҡ аланғы сәскәһе. Йомшаҡ аланғы үләнен йыйыу.*

ЙОМШАҠ АҢҠАУ (Р.: мягкое нёбо; И.: soft palate; Т.: yumuşak damak) *и. анат.*

Ауыҙ ҡыуышлығының хәрәкәтсән, көмбәҙ формаһындағы юғары өлөшө; таңлай. □ Мягкое нёбо. *Был өн йомшаҡ аңҡау менән әйтелә. Йомшаҡ аңҡауҙы сәйгә бешереү.*

ЙОМШАҠ АУЫҘ (Р.: мямля; И.: milksop; Т.: meleme) *с.*

Ихтыяры ныҡлы түгел, эш-йомошто еренә еткерә алмай торған, үтә ҡыйыуһыҙ. □ Мямля. *Йомшаҡ ауыҙ булыу. Йомшаҡ ауыҙ кеше.*

ЙОМШАҠ БОЙҘАЙ (Р.: пшеница мягкая; И.: soft varieties of wheat; Т.: ekmeklik buğday) *и. бот.*

Бойҙайҙың ҡоролоҡҡа, һыуыҡҡа сыҙамлы, тиҙ өлгөрә торған ҡылсыҡһыҙ йәки мурт ҡылсыҡлы төрө. □ Пшеница мягкая (лат. *Triticum aestivum*). *Йомшаҡ бойҙай ҡоролоҡҡа бирешмәүсән. Йомшаҡ бойҙай үҫтереү. Йомшаҡ бойҙай төрө.*

ЙОМШАҠ БӨРМӘКӘЙ *и. бот. ҡар.* **йомшаҡ аланғы.** *Йомшаҡ бөрмәкәй сәскәһе. Йомшаҡ бөрмәкәй тамыры. Йомшаҡ бөрмәкәй болонда үҫә.*

ЙОМШАҠ ВАГОН (Р.: спальный вагон; И.: sleeper; Т.: yataklı vagon) *и.*

Йоҡлау өсөн йомшаҡ урынлы пассажир вагоны. □ Спальный вагон. *Йомшаҡ вагонда барыу. Йомшаҡ вагонға билет алыу.* ■ *Йомшаҡ вагондарҙың береһенең асыҡ тәҙрәләренән күренеп торған бер яҡшы сумаҙан Сиражиҙың диҡҡәтен ылыҡтырҙы.* И. Насыри. *Беҙ [мин күршем менән] картты ҡултыҡлап, участка урынлашҡан йомшаҡ вагонға барып индек.* Ә. Чаныш.

ЙОМШАҠ ЕЛ (Р.: лёгкий ветер; И.: light wind; Т.: meltem, esin) *и.*

Киҫкен булмаған талғын йылы ел. □ Лёгкий ветер, зефир. *Йомшаҡ ел сәстәрҙе тарап үтә.*

ЙОМШАҠ ЕР (Р.: мягкое место; И.: soft place; weak spot; Т.: yumuşak yer) *и.*

1. Ултырыуға йомшаҡ булған урын. □ Мягкое место.

2. *күсм.* Эштәге, ҡылыҡ-холоҡтағы бушаҡлыҡ, етешһеҙ яҡ. □ Слабое место, слабина. *Йомшаҡ ерен табыу. Йомшаҡ ерен белеү.* ■ *Һәр бер кешенең үҙенә күрә бер йомшаҡ ере була бит уның.* И. Насыри.

3. *эвф.* Арт яҡ, ултыра торған ер. □ Попа, мягкое место. ■ *[Карашиде мулла:] Мин тиҙ генә ҡорһаҡ аҫтына инеп китәм дә уның [айыуҙың] йомшаҡ ерен бешәм!* И. Насыри.

ЙОМШАҠ КҮҢЕЛЛЕ (Р.: мягкосердечный; И.: softhearted; Т.: iyi kalpli) *с.*

Кешене йәлләп, илап барыусан. □ Мягкосердечный. *Йомшаҡ күңелле кеше.* ■ *Электән йомшаҡ күңелле, кешеләргә игелек кенә ҡылып өйрәнгән Мөхәмәтшаның ныҡ үҙгәреш кисергән булмышы күңеле ине.* М. Хужин. *Йомшаҡ күңелле әсәйем ошолай асыулы һөйләшкән кеше алдында ҡаушабыраҡ ҡала ине.* Н. Мусин. *Ул [Мәһәр бисәһе] йомшаҡ күңелле Миңьямал өсөн бик ҡаты булып бәрелә торған әллә ниндәй һүҙҙәр ысҡындырҙы.* С. Агиш. *Бөтәһе лә яҡшы бара, әммә йомшаҡ күңелле, оялсан Йылҡыбай, кире ҡағып ҡуймағайы тип, Маянһылыуға үҙ уйын әйтергә баҙнат итмәй.* Халыҡ ижадынан.

ЙОМШАҠ КҮҢЕЛЛЕЛЕК (күңеллелеге) (Р.: мягкосердечность; И.: softheartedness, kindness; Т.: iyi kalplilik) *и.*

Йомшаҡ күңелле булыу хәле, шәфҡәтлелек. □ Мягкосердечие, мягкосердечность. *Йомшаҡ күңеллелек күрһәтеү. Йомшаҡ күңеллелеге менән арбай.*

ЙОМШАҠ ҠУСТЕРӘ (Р.: костёр мягкий; И.: soft brome; Т.: yumuşak brom) *и.*

Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ваҡ ҡына ялпаҡ башаҡлы, йомшаҡ ҡыяҡ япраҡлы бер йәки ике йыллыҡ үлән. □ Костёр мягкий (лат. *Bromus mollis*). *Йомшаҡ ҡустерә сәсеү. Йомшаҡ ҡустерәне сабып алыу.*

ЙОМШАҠ ҠАНАТЛЫЛАР (Р.: мягкоперые; И.: the Gadidae family of fishes; Т.: gadiformes) *и. зоол.*

Күпселек диңгеҙҙәрҙә йәшәй торған һөйәкле балыҡтар. □ Мягкоперые (лат. *Gadiformes*). *Шамбылар, трескалар, камбалалар йомшаҡ ҡанатлыларға ҡарай. Йомшаҡ ҡанатлылар ғаиләһе.*

ЙОМШАҠЛАНЫУ (йомшаҡлан-) (Р.: смягчаться; И.: soften; Т.: yumuşamak) *ҡ.*

1. Йомшаҡ (I, 1—6) хәлгә килеү; йомшарыу. □ Смягчаться, размягчаться. *Икмәк йомшаҡланды. Картуф йомшаҡланған.*

2. *күсм.* Йомшаҡлыҡ күрһәтеү. □ Проявлять слабость. *Йомшаҡланып китеү.* ■ *[Әлтәф:] Ауылдың исемен бысратыусыларға йомшаҡланырға ярамай!* Ғ. Хәйри.

ЙОМШАҠЛЫҠ (йомшаҡлығы) (Р.: мягкость; И.: softness; Т.: yumuşaklık) *и.*

1. Йомшаҡ булыу хәле. □ Мягкость, рыхлость. *Һыуҙың йомшаҡлығы. Мендәрҙең йомшаҡлығы. Урындың йомшаҡлығы. Ерҙең йомшаҡлығы. Ҡыштың йомшаҡлығы.* ■ *Ул [Назаров] аяғы аҫтында сүпләп эшләнгән балаҫтың йомшаҡлығын тоя-тоя түргә үтте.* Н. Мусин. *Тупраҡтың йомшаҡлығы хайран итте: көрәк баҫмайынса ла батып инеп тора.* Т. Ғарипова. *[Линара] таянған усы аҫтында келәмдең ҡытыҡлағыс йомшаҡлығын тоя.* Л. Яҡшыбаева.

2. *күсм.* Мәрхәмәтле, шәфҡәтле булғанлыҡ, асыҡ йөҙлөлөк. □ Мягкость, нежность, ласковость. *Күңел йомшаҡлығы. Ҡараштың йомшаҡлығы. Мөғәмәләнең йомшаҡлығы.* ■ *Һағыш-моң шиғриәтендә ихласлыҡ, сафлыҡ, күңел йомшаҡлығы символы булып торған күҙ йәше детале лә әһәмиәтле урын тота һәм лирик геройҙы, уның эстетик идеалын кәүҙәләндереүҙә мөһим роль уйнай.* «Ағиҙел», № 4, 2010. *Вазифа тағы ла бер нисә минут әрепләшеп торҙо ла, Һимайҙа бер генә төрлө лә йомшаҡлыҡ аҫәре күрмәгәс, лышҡ-лышҡ илап сығып китергә мәжбүр булды.* И. Насыри.

3. *күсм.* Ихтыярһыҙлыҡ, ебегәнлек. □ Слабость, безволие. *Ихтыяр йомшаҡлығы. Йомшаҡлыҡ күрһәтеү.* ■ *Йомшаҡлыҡ һиҙереү уның [Юлдыбикә әбейҙең] намыҫын киптерә, ул турала уйлана, баш вата башланы.* Т. Хәйбуллин. *Ҡыҙ, үҙенең йомшаҡлыҡ күрһәтеүенә, асылып китеүенә үкенгәндәй, ҡапыл тымһайҙы.* Н. Мусин.

4. *күсм.* Тейешле сифат-талапҡа яуап бирмәүсәнлек, етешһеҙлек. □ Слабое место, недостаток. ■ *Ниғмәтиҙең был киң пландағы тәүге поэмаһында эпик форманы үҙләштереүҙә композицион тарҡаулыҡ, сюжеттың һүлпәнлеге кеүек художество йомшаҡлыҡтары ла юҡ түгел.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОМШАҠ СӘС (Р.: мягковолосник; И.: chickweed; Т.: karanfilgillerden bir bitki) *и. бот.*

Ҡәнәфер һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек төрө. □ Мягковолосник (лат. *Myosoton*). *Йомшаҡ сәс һабағы. Йомшаҡ сәс — күп йыллыҡ үҫемлек.*

ЙОМШАҠ ТӘНЛЕЛӘР (Р.: мягкотелые; И.: mollusks; Т.: yumuşakçalar) *и. зоол.*

Йомшаҡ тәнле умыртҡаһыҙ хайуандар (*уларҙың бик күп өлөшө тышҡы яҡтан ҡабырсаҡ менән ҡапланған була, корола, диңгеҙҙәрҙә һәм сөсө һыуҙарҙа йәшәй*). □ Мягкотелые (лат. *Mollusca*). *Йомшаҡ тәнләләр ғаиләһенән.*

ЙОМШАҠ УРЫН *и.*

1. *ҡар.* **йомшаҡ ер 1.** *Йомшаҡ урынға ултырыу.*

2. *күсм.* Яҡшы вазифа. □ Хорошее место, должность. *Йомшаҡ урынға барып ултырған ул.*

3. *күсм. ҡар.* **йомшаҡ ер 2.** *Йомшаҡ урынын белеп ҡалыу. Йомшаҡ урынына ба-*

ҫыу. ■ *[Басариев] бармаһы ла, йөрөмәне лә, быларҙың [Бәхтиәровтарҙың] йомшаҡ урындарын белешер өсөн үҙенең урынбаҫары Мағазовты ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев.

ЙОМШАҠ ҮЛӘН (Р.: мякотница; И.: orchis; Т.: bitki türü) *и. бот.*

Орхидея һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ваҡ йәшкелт сәскәле күп йыллыҡ үҫемлек. □ Мякотница (лат. *Malaxis*). *Йомшаҡ үлән тамыры. Йомшаҡ үлән июнь, июль айҙарында сәскә ата.*

ЙОМШАҠ ХОЛОҠЛО (Р.: слабохарактерный; И.: flabby, weak-willed; Т.: zayıf karakterli) *с.*

1. Ихтыяр көсө булмаған. □ Слабохарактерный, мягкотелый. *Йомшаҡ холоҡло кеше. Йомшаҡ холоҡло булыу.* ■ *Йомшаҡ холоҡло, ихтыярһыҙ, ялҡау ир-егеттәр ошо мөхиттә ярала ла инде.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

2. Һәйбәт, изге күңелле. □ Хороший, добрый. ■ *[Хөсниямал:] Балдай татлы телле, майҙай йомшаҡ холоҡло бул, балам!* Т. Ғарипова. *[Бибеш:] Хисбулла ла һәйбәт күңелле, йомшаҡ холоҡло кеше бит.* З. Биишева.

ЙОМШАҠ ХОЛОҠЛОЛОҠ (холоҡлолоғо) (Р.: безволие; И.: weak will; Т.: iradesizlik) *и.*

Мәмәй ауыҙлылыҡ; ихтыярһыҙлыҡ. □ Безволие, мягкотелость, слабохарактерность. *Йомшаҡ холоҡлолоҡ күрһәтеү. Йомшаҡ холоҡлолоғо менән дан алыу.*

ЙОМШАҠ ҺЫУ (Р.: мягкая вода; И.: smooth water; Т.: yumuşak su) *и.*

Эзбизле тоҙҙары әҙ булып, һабынды еңел иретә торған һәм эсәр өсөн тәмле булған һыу. □ Мягкая вода. ■ *Буранбай битен сайҡаны, һабынлап йомшаҡ һыу менән башын йыуҙы.* Т. Килмөхәмәтов.

ЙОМШАҠ ӘРЕМ (Р.: полынь шелковистая; И.: wormwood species; Т.: pelin) *и.*

Әсе тәмле, ҡырҡыу еҫле, аҡһыл-йәшел тетмәкәй япраҡлы, ҡаты тамырһабаҡлы күп йыллыҡ эре ҡый үләне. □ Полынь шелковистая (лат. *Artemisia sericea*). *Йомшаҡ әремдең еҫе. Йомшаҡ әремдең сәскәһе.*

ЙОМШАҠ ЯҠ (яғы) *и. кар.* **йомшаҡ ер 2.** *Йомшаҡ яҡтарҙы барлау. Йомшаҡ яҡтарын табыу.* ■ *Баҫҡан саҡта Ахил үксәһен, һәр кем белеп, үҙе үлсәһен: һәр кемдең бар йомшаҡ яҡтары, айҙың да бар ҡара таптары.* Р. Ғарипов.

ЙОМШАРТҠЫС I (Р.: слабительный; И.: purgative; Т.: müshil) *с.*

Йомшарта торған. □ Слабительный. *Йомшартҡыс сара. Эс йомшартҡыс дарыу эсеү.* ■ *[Бал] эсәктәр атонияһын дауалағанда юғары терапевтик йоғонтоға, йәнә эс йомшартҡыс, эс китәргес тәьҫиргә эйә һәм шундай дарыуҙарҙы алмаштыра ала.* «Киске Өфө», № 19, 2009.

ЙОМШАРТҠЫС II (Р.: разрыхлитель; И.: loosener, desintegrator; Т.: yumuşatıcı) *и.*

1. Тупраҡты йомшарта торған ҡорал. □ Разрыхлитель, рыхлитель. *Йомшартҡыс менән эшкәртеү. Йомшартҡыс ҡулланыу. Үҫентеләрҙең төбөн йомшартҡыс менән йомшартып сығыу.*

2. Аҙыҡты йомшартыусы һәм ҡабартыусы матдә. □ Разрыхлитель (например, теста). ■ *Тәмләткестәр, йомшартҡыстар кеше организмына ҙур хәүеф тыуҙырмай.* «Йүрүҙән», 15 март 2011.

3. Күнде, тирене йомшартыу ҡорамалы. □ Мялка. *Тире йомшартҡыс. Күн йомшартҡыс.*

ЙОМШАРТЫЛЫУ (йомшартыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йомшартыу.** *страд. от* **йомшартыу.** *Йомшартылған тупраҡ. Йомшартылған һыу.* ■ *Ә әйләнә-тирәләге бөхтәлеккә, тәртипкә ҡарап һоҡланмау мөмкин түгел: сәскәләрҙең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып ултыртылған түтәлдәр, уталған, кәрәк ерендә йомшартылған, йәшелсәләргә бай баҡса, төҙөк, матур итеп буялған йорт-ҡура.* «Йәшлек», 9 сентябрь 2009.

ЙОМШАРТЫУ (йомшарт-) (Р.: смягчать; И.: soften; Т.: yumuşatmak) *ҡ.*

1. *Ниндәйҙер* хәрәкәт, процесс арҡаһында йомшаҡ хәлгә әйләндереү, йомшаҡ итеү. □ Смягчать, размягчать; разминать. // Смягчение, размягчение. *Майлап йомшартыу. Тирене йомшартыу. Һыулап йомшартыу.* ■ *Балдың фитогормональ һәм биологик әүҙем компоненты бар. Ул тирене йомшарта, ҡан әйләнешенә булышлыҡ итә.* «Йәшлек»,

17 февраль 2012. ● *Һуғып, тимерҙе генә йомшарталар.* Мәҡәл.

2. Ҡәүшәк, көпшәк хәлгә әйләндереү, йомшаҡ итеү. □ Рыхлить, разрыхлить, взрыхлить. // Рыхление, разрыхление, взрыхление. *Ағас төбөн йомшартыу. Түтәлде йомшартыу.* ■ *[Балалар] мәктәп янында сәселә торған баҡса ерынын йомшартып, орлоҡ шыттырып, ҡош ояларын эшләп йөрөйҙәр.* Һ. Дәүләтшина. *Гөлшат ой алдындағы баҡсала йәшелсә түтәлдәрен йомшартып йөрөй ине.* Ф. Әсәнов. *Уңлап көнлөксө ҡышҡылыҡҡа күмелгән йөҙөм ҡыуаҡтарын яҡты донъяға сығара, емеш ағастарын таҙарта, төптәрен йомшарта.* Ә. Хәкимов.

3. Ҡарар күҙгә, ишетер ҡолаҡҡа хуш килерлек, ағымлы итеү. □ Расслаблять, смягчать, приводить в состояние душевной мягкости. *Ҡарашты йомшартыу. Тауышты йомшартыу.* ■ *Профессор үтә етди әйтеп ысҡындырҙы, шикелле, араны тәүҙә үк боҙмаҫҡа була, Хәйернас Хәйернасович тауышын йомшартты.* Д. Бүләков.

4. *күсм. Кемдең* йәки *нимәнеңдер* ҡырҡыулығын, кисҡенлеген кәметеү. □ Ослаблять, смягчать (*силу проявления чего-л.*). // Ослабление, смягчение. *Ҡырҡыулыҡты йомшартыу. Уяулыҡты йомшартыу. Талаптарҙы йомшартыу.* ■ *Тасуирлы биҙәктәр, кинәйәшаралар ҡәтғи талапты йомшарта бирә, хат уҡыусыны көтмәгән яҡтан ҡыҫымға ала, арбай, ымһындыра.* Ә. Хәкимов. *Мәрәкә лә кәрәк ине ҡоршау кеүек ҡыҫҡан көсөргәнеште йомшарта төшөргә, хатта битараф төҫтә ултырыусы Юлай ҡарттың иреннәр йылмайыу ҡунды.* Б. Рафиҡов.

5. *Нимәнеңдер* көсөн, кисҡен тәьҫирен кәметеү. □ Ослаблять, смягчать (*силу проявления чего-л.*). // Ослабление, смягчение. *Эске режимды йомшартыу. Күрәште йомшартыу.* ■ *[Вернер:] Һөйөклөм, мине бер нәмә борсой. Ахыры, беҙ элекке ҡатылыҡты йомшарта төшөк булһа кәрәк.* С. Кулибай.

6. *Нимәнеңдер* кисҡенлеген, ауыр тәьҫирен кәметеп, еңеләйтеү. □ Смягчить. *Язаны йомшартыу. Хөкөмдө йомшартыу. Ғәйепте йомшартыу.* ■ *Бүләр хан был сапҡынды ҡылған хыянаты өсөн Ҡолтүбә янына зинданға оҙатырға була ла, Аҡтүбә уның [Алпамышаның] язаһын йомшартыуҙы үтенгәс, берлексәгә ҡалдырҙы, ти.* «Алпамыша».

7. Тупаҫлығын кәметеү (*һүҙҙең*). □ Смягчить (*слово, критику*). *Һүҙҙе йомшартыу. Тәнҡитте йомшартыу.* ■ *Мин һүҙҙе йомшартыр өсөн тағы шаяртмаҡсы булдым.* И. Абдуллин.

8. Температура тирбәлештәренең кисҡенлеген әҙәйтеп, сағыштырмаса йомшағыраҡ итеү (*климатты*). □ Ослаблять, смягчать (*климат, погоду*). // Ослабление, смягчение. *Көндөҙ бер аҙ йомшарта төштө.*

9. *Нимәнеңдер* көсөн, сифат кимәлен, дәрәжәһен, көсөргәнешен әҙәйтеү. □ Расслаблять, смягчать, приводить в состояние душевной мягкости. *Иғтибарҙы йомшартыу.* ■ *[Әүхәҙи:] Тик быны һеҙҙең ебәргән күҙелдерекле егеттәрегеҙ генә бер аҙ эште йомшартып киттеләр әле.* А. Таһиров. *[Әмир] ғәскәрҙең яуға әҙерлеген барланы, һәрби уйындар үткәрҙе, һүлпәнлек күрһәткән, эскелеккә бирелеп, тәртипте йомшартҡан, аҙғынлыҡ юлына баҫҡан ҡушын, мең баштарын аяуһыҙ язалатты.* Ә. Хәкимов. *Бары балаларҙың мәнфәғәттәре менән йәшәү, теләктәренә, уй-ниәттәренә иғтибарлы булыу ғына араларҙы яҡынайта, күңелдәрҙе йомшарта ала.* «Башҡортостан», 2 декабрь 2011. *Ғүмерҙә бер генә була торған татлы минуттарҙы исҡә төшөрөү Ғәбдеяндың да күңелен йомшартты.* Н. Мусин. *Билдәле, ауылдаш ҡатындарының шулай туғандарса ҡайғы уртаҡлашыуы йәш егеттең күңелен йомшартмай булманы.* Б. Бикбай.

10. *Нимәнеңдер* ҡатылығын, ҡуйылығын, әселек көсөн әҙәйтеү. □ Смягчать. *Әсемлекте йомшартыу. Спиртҡа һыу өҫтәп йомшартыу.*

11. Эзбизле тоҙҙарҙан таҙартыу; татырһыҙландырыу (*һыуҙы*). □ Смягчать (*о воде*). *Һыуҙы йомшартыу. Гөлдәргә һыуҙы йомшартып һибеү.*

ЙОМШАРЫУ (**йомшар-**) (Р.: смягчаться; И.: become soft(er); Т.: yumuşamak) *ҡ.*

1. *Ниндәйҙер* хәрәкәт, процесс арҡаһында йомшаҡҡа әйләнеү, йомшаҡ хәлгә килеү. □ Смягчаться, размягчаться, разминать-

ся, размякать. // Смягчение. *Балсыҡ йомшарҙы. Күн йомшарҙы. Ямғыр яуғас, ер йомшара.* ■ *Яртышар метр киңлектә кәҫтәрҙе умырып әйләндереп ташлайһың. Шулай ҙа эре ер йомшарып етмәй.* А. Карнай. *[Алмасов] өйҙән сығып көнө буйы ямғыр менән күпергән, йомшарған ерҙе аҙымланы.* А. Таһиров. *Кереш йомшар, уктарығыҙ үтә алмаҫ, һөңгө тишмәҫ, ҡылысығыҙ киҫә сапмаҫ.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

2. Ҡарар күҙгә, ишетер ҡолаҡҡа хуш килерлек яғымлыға әйләнеү. □ Смягчиться, растрогаться, расчувствоваться. *Ҡараш йомшарыу. Тауыш йомшарыу.* ■ *[Зәки:] Әммә уҫалһың да, Фатима, мин һине бер аҙ йомшарғанһыңдыр, тип уйлағайным, тимәк, был һинең һуңғы һүҙең инде?* Картотека фондынан. *Кәйефе арыу саҡта фрауҙың Ирназарға мөғәмәләһе лә йомшара төшә.* Ә. Хәкимов.

3. *күсм. Кемдеңдер* йәки *ниҙеңдер* ҡырҡыулығы, киҫкенлеге кәмеү. □ Слабеть; размягчаться *(от физического или морального воздействия). Быуын йомшарыу. Күңел йомшарыу.* ■ *Әле бит ос һәнәге менән кәбәнде ослайһы бар, ниңә йомшарам әле, тип, сәмләнеп, тағы эшкә тотонам.* Н. Мусин. *Тарамыш муйыны кәлп итеп бер яҡҡа ҡыйшайған саҡта уяныл китә лә [Һолтанбай], шулай йомшарғаны өсөн, үҙенә үҙе асыулана.* Б. Рафиков. *Йәнтимергә был яуап, белеп торам, килешеп етмәне. Ул зарланыу, йомшарыу рәүешендәрәк бер һүҙ көткәйне.* С. Агиш. *Улар [атайым менән әсәйем] минең Нюраны көслө һөйгәнлекте белгәс, бер ҡәҙәре йомшара төштөләр һәм мине төрлөсә ыңғайға килтерергә тырыштылар.* Ғ. Хәйри. *[Ҡарттың] аяҡ быуындары йомшарҙы, хатта баҫҡан еренән ҡуҙғала алмай торҙо.* И. Абдуллин. ● *Ҡартайғас, күңел йомшара.* Мәҡәл.

4. *Ниҙеңдер* көсө, киҫкен тәьҫире кәмеү. □ Слабеть, смягчаться. *Көрәш йомшарҙы. Халыҡ-ара көсөргәнешлек йомшарыуға бара.* ■ *Хәҙер дошмандың йомшарғаны күренеп тора.* А. Карнай. *Дошмандың ут көсө бермә-бер йомшарҙы.* Ғ. Әмири.

5. *Ниҙеңдер* киҫкенлеге, ауыр тәьҫире кәмеп, еңеләшеү. □ Слабеть, смягчаться. *Хөкөм йомшарҙы. Яза йомшарҙы.*

6. Температура тирбәлештәренең киҫкенлеге әҙәйеп, сағыштырмаса йомшағыраҡ булыу *(көнгә, климатҡа ҡарата).* □ Смягчаться, ослабевать; теплеть *(о погоде, климате).* // Ослабление, смягчение. *Көн йомшарҙы. Климат йомшарҙы.* ■ *Һауа көндөҙгөнән әллә нисә дәрәжә йомшарып, һулап түйғыһыҙ бер хәлгә килде.* Ғ. Ибраһимов.

7. *Ниҙеңдер* көсө, сифат кимәле, дәрәжәһе, көсөргәнеше әҙәйеү. □ Ослабление, смягчение. *Иғтибар йомшарҙы. Уҡытыу эше йомшарҙы.*

8. *Ниҙеңдер* ҡатылығы, тәьҫир көсө, әселеге әҙәйеү. □ Смягчаться, размягчаться, размякать. // Смягчение. *Оҙаҡ ултырып, һыра йомшарған. Дарыу көсө йомшарҙы.*

9. Эзбизле тоҙҙарҙан таҙарыу, татырһыҙланыу *(һыу тураһында).* □ Смягчаться *(о воде).* // Смягчение. *Һыу йомшарған. Йомшарған һыуҙы эсергә кәрәк.*

10. *күсм.* Иҫереү. □ Опьянеть. *Ҡартым бөгөн тағы ла йомшарып ҡайтты.*

ЙОМШАТЫУ (йомшат-) *ҡ. ҡар.* **йомшартыу.** *Күңелде йомшатыу.* ■ *Фәүзиәнең күңелен саҡ ҡына ла йомшатманы, ишкелле.* Т. Ғарипова. *Нәғим, эшләп тә юҡҡа рәнйетелгән кеше төҫөн алып, халыҡтың күңелен йомшатып, уның ышанысына инергә иҫәп тота.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОМШАУ (йомша-) [дөйөм төрки *йумуш-а* < *йуң-*] *ҡ.*

1. *ҡар.* **йомшарыу.** ■ *Ҡапыл ғына баҫылыу, шунда уҡ йомшап төшөүҙе ул [Сәйф] килештермәне.* С. Агиш. *Уның [йәш егеттең] ҡатын-ҡыҙҙар алдында шундай йомшап ҡала торған ғәҙәте бар ине.* И. Насыри. ● *Эш ҡаты булһа ла, тырышҡас, йомшай.* Мәҡәл.

2. *диал. ҡар.* **йомошау.** *Балаларҙы йомшау. Күрше малайын йомшау.*

ЙОНДОҘ [дөйөм төрки *йулдуз*] (Р.: звезда; И.: star; Т.: yıldız) *и.*

1. Тәбиғәте менән Ҡояшҡа оҡшаш һәм ҡыҙыу газдарҙан (плазманан) торған, төнөн күктә яҡты нөктә кеүек күренгән күк есеме. □ Звезда. / Звёздный. *Етегән йон-*

доҙо. Алтын ҡаҙыҡ йондоҙо. Таң йондоҙо. Иләк йондоҙо. Йондоҙҙар системаһы. ■ *[Һомай — Уралға:] Һыуҙа балыҡ булырҙай, күктә йондоҙ булырҙай ҡулда көсөм бар ине, китер юлым бар ине.* «Урал батыр». *Йүрүҙән буйының йондоҙҙарҙы шаҡырайтырлыҡ аяҙ һыуыҡтары, сәнскеле ҡоро ҡар менән ҡойондороусы бурандары үҙҙәре үк шифа һымаҡ тойола башлай уға [Юлайға].* Б. Рафиҡов. ● *Ай яҡтыртҡанда йондоҙ күренмәй.* Мәҡәл. *Айҙың да йондоҙо бар.* Мәҡәл. *Айым тура баҡҡанда йондоҙҙарға йоҙроҡ.* Мәҡәл. *Балдыҙ — көмөшкә ҡойған алтын йондоҙ.* Мәҡәл. *Етмеш йондоҙ тыуһа ла, яҡтылығы айҙай юҡ.* Мәҡәл. *Ҡыҙ булһа, ҡыҙ булһын, йондоҙға тиң булһын.* Мәҡәл.

2. *эйл. ф.* **йондоҙом.** Иркәләгәндә әйтелә. □ Звёздочка моя. *Йондоҙом минең.* ■ *Бәүбәү, йом күҙең, йоҡла, балам, йондоҙом.* Сәңгелдәк йырынан.

3. Осло башлы сығанаҡтары әйләнә буйынса берҙәй йыраҡлыҡта урынлашҡан геометрик фигура. □ Пятиконечная звезда. *Биш мөйөшлө йондоҙ. Йондоҙ тағыу. Ҡыҙыл Йондоҙ ордены. Маршал йондоҙо.* ■ *Кремлдәге йондоҙҙар күренәләр көндөҙ ҙә.* З. Биишева. *Ҡайтырһығыҙ, арғымаҡты уйнатып, тояҡтарын таҡыр юлда тупылдатып, көнгә ҡаршы Алтын Йондоҙ йылтылдатып, Иҙел аша ҡаршы сығыр Башҡортостан.* Р. Ниғмәти. *Кисәге эскадрон командиры Күсемов граждандар һуғышы фронтында ике Ҡыҙыл Байраҡ һәм фин кампанияһында Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған полк командиры Скутельникка ярҙамсы булып күсерелә.* Р. Өмөтбаев.

4. Осло башлы сығанаҡтары әйләнә буйынса берҙәй йыраҡлыҡта урынлашҡан геометрик фигура рәүешендәге нәмә. □ Звезда. *Йондоҙ сигеү. Йондоҙ биҙәк.* ■ *Ҡышҡы селләнең әсе һыуығы тәҙрәнең тышҡы ҡатлауын ҡырауытып, ваҡ ҡына урмандар, шыршы ағастары, йондоҙ биҙәктәре .. менән биҙәкләп алыуы уға [Гөлйөҙөмгә] урамды күрергә ирек бирмәне.* Һ. Дәүләтшина. *Аҡ сәскәләр кеүек ҡар ҡойола тәҙрә алдындағы шоморттан. Күбәләктәр һымаҡ, тәҙрәләргә осоп ҡуна ап-аҡ йондоҙҙар.* Р. Ниғмәти.

5. *полигр.* Китап, яҙмала ҡулланыла торған шартлы билдә. □ Звёздочка. *Йондоҙ ҡуйыу. Йондоҙ билдәһе. Йондоҙҙо алып ташлау.*

6. *күсм. Ниндәйҙер* өлкәлә дан ҡаҙанған, атаҡлы кешегә ҡарата әйтелә. □ Звезда. *Балет йондоҙо. Спорт йондоҙо. Сәхнә йондоҙо. Йондоҙҙар тормошо.* ■ *Бөгөн Гөлли Мөбәрәкова — башҡорт милли театр сәнғәтендә генә түгел, бөтә төрки донъяһы һәм Рәсәй театр сәнғәтенең сағыу йондоҙо.* «Урал», 24 ғинуар 2012. *Училищены тамамлаусылар араһында Мәскәүҙең Ҙур һәм Кремль, Санкт-Петербургтың Мария театрҙарында ғына түгел, сит ил сәхнәләрендә лә балет йондоҙо булып балҡыған данлыҡлы Татьяна Краснова, Наталья Сологуб, .. Айҙар Шәйҙуллин, Айрат Фәтхелисламов та бар.* «Шоңҡар», № 9, 2011.

7. *иҫк.* Ун ике йыллыҡ мөсәлдәге һәр йылдың ун икенән бер өлөшө; ай. □ Месяц. ■ *Аҡһаҡ Тимер хан килде. .. Сысҡан йылында, ғәҡрәп йондоҙоноң икенсе көнөндә Ҡазан шәһәрен алды.* Халыҡ ижадынан.

8. Бура уйынында: ҡарыш оҙонлоғо таяҡтарҙан төҙөлгән йондоҙ фигураһы. □ Звезда *(фигура в игре городки).*

9. *миф.* Мифлаштырылған, изгеләштерелгән, кеше яҙмышына тәьҫир иткән күк есеме. □ Звезда *(мифологизированное, связанное с судьбой человека небесное тело). Кеше үлһә, йондоҙ атыла. Кеше тыуһа, яңы йондоҙ ҡалҡа.*

♦ **Йондоҙо балҡыған мәл** кешенең эше уңған, һәләте иң юғары булған мәле. □ Звёздный час. **Йондоҙ һанарлыҡ** түбәһе тишек-тошоҡло йорт-ҡаралты хаҡында әйтелә. □ Дырявый, как решето *(о крыше). Йорттоң түбәһе тишелеп бөткән — йондоҙ һанарлыҡ.* **Өмөт йондоҙо** киләсәктә *нимәнелер* хәл итеүгә ныҡ ышаныс, ҙур өмөт бағлап ҡараған кешегә ҡарата әйтелә. □ Человек, на которого возлагают большие надежды. *Өмөт йондоҙо булыу.*

ЙОНДОҘ-АРА (Р.: межзвёздный; И.: interstellar; Т.: yıldızlararası) *с.*

Йондоҙҙар араһындағы; йондоҙҙар араһында булған. □ Межзвёздный. *Йондоҙ-*

ара йыраҡлыҡ. Йондоҙ-ара газ. Йондоҙ-ара туҙан.

ЙОНДОҘ АТЫЛЫУ (йондоҙ атыл-) (Р.: звездопад; И.: meteor shower; Т.: yıldız kayması) *ҡ.*

1. Уттай ҡыҙған есемдең Ер атмосфераһында бик шәп хәрәкәт итеп юҡҡа сығыуы. □ Звездопад, падение звезды. ■ *Үҙенең артынан ап-аҡ юл ҡалдырып, йондоҙ атылды ла ситкә ҡыя китеп һүнде.* Я. Хамматов. *Туҡта, күктең бер ситендә кинәт бер йондоҙ атылды.* Ф. Рәхимғолова.

2. *миф.* Башҡорт мифологияһында *кемдеңдер* тыуыуы йәки үлеме менән бәйле күренеш. □ Падение звезды *(в башкирской мифологии связывается с чьей-н. смертью или рождением).* ■ *Урал батыр үлгән, ти. Ҡайғырышып барыһы башын түбән эйгән, ти, күктән йондоҙ атылып, Һомайға оран биргән, ти.* «Урал батыр».

ЙОНДОҘ БАЛЫҠ (балығы) *и. зоол. диал. ҡар.* **йотҡолоҡ II.** *Һыуҙа йондоҙ балыҡтар уйнай. Йондоҙ балыҡтарҙы һөҙөү.*

ЙОНДОҘ ЙЫЛЫ (Р.: звёздный год; И.: sidereal year; Т.: yıldız yılı) *и. астр.*

Ҡояштың күктә йондоҙҙарға нисбәтән бер әйләнгән ваҡыт араһы. □ Звёздный год. *Йондоҙ йылының оҙайлылығы.*

ЙОНДОҘҠАЙ (Р.: звездчатка; И.: chickweed; Т.: kuş otu) *и. бот.*

Ҡәнәфер һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған нәҙек һабаҡлы, йондоҙ сәскәле күп йыллыҡ ҡый үләне. □ Звездчатка *(*лат. *Stellaria). Йондоҙҡай сәскәһе. Йондоҙҡай тамыры.*

ЙОНДОҘ ҠАШҠА (Р.: лошадь с белой звёздочкой на лбу; И.: horse with a white star; Т.: akıtmalı at, kaşka) *и.*

Аттың маңлайындағы бәләкәй генә түңәрәк аҡ тап һәм шундай табы булған ат. □ Лошадь с белой звёздочкой на лбу, звёздчатая лысина. ■ *Ҡарабаштың йондоҙ ҡашҡаһына менеп алған Вәғизов бер төркөмдән икенсеһенә сабып йөрөй.* И. Насыри. *Диңгеҙ эсендә йондоҙ ҡашҡа ҡолонлай, малай ҡолондо эләктереп ала ла, яр ситенә алып сыға.* Әкиәттән. *Улар, ай тояҡлы толпарҙар, аҡ бәкәлле юрғалар, йондоҙ ҡашҡа дүнәндәр, өндәү тауыштарын көсәйткән һайын, дәртләнеп китте.* Ә. Ихсан.

ЙОНДОҘ ҠОРТО *и. зоол. диал. ҡар.* **быҙлауыҡ.** *Төндә йондоҙ ҡорто йөрөй яҡтырып. Йондоҙ ҡортон тотоу.*

ЙОНДОҘЛАМА *и. диал. ҡар.* **йондоҙнамә.** *Йондоҙлама уҡыу. Йондоҙлама төҙөтөү. Йондоҙлама асыу.*

ЙОНДОҘЛАУ (йондоҙла-) (Р.: вышивать, рисовать в виде звёздочки; И.: embroider with a star pattern; Т.: yıldız şeklinde nakış işlemek) *ҡ.*

Йондоҙ биҙәге төшөрөү. □ Вышивать, рисовать в виде звёздочки. *Йондоҙлап сигелгән таҡыя.* ■ *Ҡәуи, урынынан тороп, башындағы йондоҙлап сигелгән ҡара бәрхәт таҡыяһын, ҡупшылаңҡырап ҡуҙғатып, сикәһенәрәк шыуҙырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

ЙОНДОҘЛО (Р.: звёздный; И.: starry; Т.: yıldızlı) *с.*

1. Йондоҙҙар менән ҡапланған; йондоҙҙар күп булған. □ Звёздный. *Йондоҙло төн. Йондоҙло кистәр. Йондоҙло күк.* ■ *Күҙҙәрен тәҙрәнән йондоҙло күккә төбәп, ғалим шул турала уйланды.* «Ағиҙел», № 7, 2010. *Тышта айлы һәм йондоҙло ҡышҡы төн, бәҫ селтәре солғап алған ер өҫтөн.* М. Кәрим.

2. Йондоҙ формаһындағы, йондоҙ рәүешендәге. □ Звездообразный, в виде звезды. *Йондоҙло биҙәк. Дим буйы башҡорттарының еләндәренә йондоҙло биҙәктәр һырылған.*

3. Йондоҙо (3) булған. □ Со звездой. *Йондоҙло пилотка.* ■ *Хашимдың күҙ алдына береһе кокардалы тимер юлсы фуражкаһы, икенсеһе йондоҙло пилотка кейгән малайҙары килде.* Т. Ғарипова. *Өҫтөнә күн тужурка, башына йондоҙло фуражка кейгән, бил ҡайышына пистолет таҡҡан ҡатынды танымаҫы ҡарт.* Ә. Хәкимов.

4. *Нимәнеңдер* сифатын билдәләү өсөн ҡулланылған билдә. □ ...звёздочный. *Өс йондоҙло коньяк. Биш йондоҙло отель. Дүрт йондоҙло ҡунаҡхана.* ■ *Өҫтәлдә биш йондоҙло ҡыҙғылт шешә, алтын буталлы нәфис рюмкалар һәм бик һимеҙ ит бәлеше.* Й. Солтанов. *Кисә баш ҡалала «Мәскәү» ҡунаҡханаһын һүтеү башланды. 1935 йылда һалынған был бина тотош емерелеп, урыны-*

на биш йондоҙло яңы ҡунаҡхана төҙөләсәк. «Йәшлек», 25 июль 2006.

ЙОНДОҘЛОҠ (йондоҙлоғо) (Р.: созвездие; И.: constellation; Т.: takımyıldız) *и.*

Бер исем аҫтына берләштерелгән йондоҙҙар төркөмө. □ Созвездие. *Оло Етегән йондоҙлоғо. Көтөүсе йондоҙлоғо. Игеҙәктәр йондоҙлоғо. Бөрөж йондоҙлоҡтары.* ■ *Үҙе лә ул [Лоҡман] Ҡыҫала йондоҙлоғонда тыуған, күрәһең, ошондай тыныс ятыуҙарға мохтаж булыуы уның өсөн тыумышы тарафынан уҡ билдәләнгән.* Т. Ғарипова. *Маймыл йондоҙлоғо аҫтында тыуғандарҙың етеҙлеге, тапҡырлығы, хәбәрҙар булыуы уңышҡа өлгәшеүгә яңы киңлектәр асыр.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

ЙОНДОҘЛО ЛӘПӘК (ләпәге) *и. бот. ҡар.* **йондоҙ томшоҡ.**

ЙОНДОҘЛО СЕЛӘҮСЕНДӘР (Р.: черви звёздчатые; И.: star-shaped sea worms; Т.: deniz solucanı) *и. зоол.*

Кәүҙәһенең алғы өлөшөндә йондоҙға оҡшаш томшоғо булған диңгеҙ селәүсене. □ Черви звёздчатые (лат. *Gephyrei*). *Йондоҙло селәүсендәр диңгеҙҙә йәшәй. Йондоҙло селәүсендәр ләмдә ятыусан.*

ЙОНДОҘЛО СӘҒӘТ (Р: звёздный час; И.: hour of triumph; Т.: parlak başarı) *и.*

Кешенең эше уңған, һәләте иң юғары булған осоро. □ Звёздный час. ■ *Бик күптәргә өлгө булырҙай булдыҡлы үҫмерҙең йондоҙло сәғәте алда әле, һәм уға илткән һуҡмаҡтан ышаныслы аҙымдар менән атлай Руслан.* «Таратау», 7 март 2012.

ЙОНДОҘНАМА *и. иҫк. ҡар.* **йондоҙнамә.** *Аҙналыҡ йондоҙнама. Игеҙәктәр өсөн йондоҙнама.*

ЙОНДОҘНАМАСЫ *и. иҫк. ҡар.* **йондоҙнамәсе.**

ЙОНДОҘНАМӘ [төрки *йулдуз* + ғәр. نامه] (Р.: книга по астрологии; И.: horoscope; Т.: yıldızname) *и.*

1. Йондоҙҙарға ҡарап күрәҙәлек итеү, фал асыу өсөн ҡулланылған китап. □ Книга по астрологии; гороскоп. *Йондоҙнамәгә таянып эш итеү. Көндәлек йондоҙнамә.*

2. *Кемдеңдер* яҙмышы йәки *ниндәйҙер* ваҡиғаның ни менән бөтөүен алдан әйтеү өсөн астрологтар тарафынан йондоҙҙарҙың урынлашыу тәртибенән сығып төҙөлгән таблица. □ Гороскоп. ■ *[Зәһира:] Йондоҙнамәм шулай ҡушамы — үлсәргә, ҡат-ҡат уйлап самаларға әүәҫмен әммә.* Г. Яҡупова. *[Друидтар] кешеләрҙе тыуған көнө аша төрлө ағасҡа бәйләп, үҙенсәлекле йондоҙнамә лә уйлап тапҡандар.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 8, 2010.

ЙОНДОҘНАМӘ АСЫУ (йондоҙнамә ас-) (Р.: гадать, предсказывать по книге астрологии; И.: cast a horoscope; Т.: yıldız falına bakmak) *ҡ.*

Йондоҙнамә буйынса күрәҙәлек ҡылыу. □ Гадать, предсказывать по книге астрологии. ■ *Аулаҡ өйҙә ҡыҙҙар йондоҙнамә асырып яҙмыш юраҡандар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОНДОҘНАМӘСЕ (Р.: астролог; И.: astrologer; Т.: yıldız falcısı) *и.*

Йондоҙнамә буйынса күрәҙәлек иткән кеше; астролог. □ Астролог. *Йодоҙнамәсегә мөрәжәғәт итеү. Йондоҙнамәсе булыу.*

ЙОНДОҘСО (Р.: звездочёт; И.: astrologer; Т.: yıldız falcısı, astrolog) *и.*

1. Йондоҙҙарға ҡарап күрәҙәселек итеүсе; астролог. □ Астролог; звездочёт. *Йондоҙсоға барыу. Йондоҙсонан йондоҙнамә төҙөтөү.*

2. Йондоҙҙарҙы өйрәнеүсе белгес; астроном. □ Звездочёт; астроном. *Йондоҙсо ғалим. Йондоҙсо тикшеренеүҙәре.*

ЙОНДОҘСОҠ (йондоҙсоғо) (Р.: звёздочка; И.: starlet; Т.: küçük yıldız) *и.*

1. Бәләкәй йондоҙ. □ Звёздочка. ■ *Яңы ҡарҙан аҙаҡ донъя ныҡ ыраҡ яҡтырып киткән төҫлө. ҡояштың һалҡын нурҙарынан ер өҫтөндә ваҡ ҡына йондоҙсоҡтар ҡабынған.* Н. Мусин. *Бер нисә секундтан сихри ҡой ишетелде, ә тирмә көмбәҙендә мең-мең йондоҙсоҡ балҡыны, көмөш ай хасил булды.* «Йәшлек», 3 февраль 2012.

2. Биш кешенән торған төркөм. □ Звёздочка *(группа из пяти человек).* ■ *Октябряттар йондоҙсоғо була торғайны элек беҙ бәләкәй саҡта.* Экспедиция материалдарынан.

3. *күсм.* Бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, *ниндәйҙер* өлкәлә танылыу алған бала. □ Звёздочка. *Сәхнә йондоҙсоғо.*

4. *ҡар.* **йондоҙ 3.** ■ *Ғалим симпозиумға килә. Уға анкета тултырырға ҡушалар. Ул бит «йондоҙсоҡ» ҡуя ла, ручкаһын кеҫәһенә һала.* «Йәшлек», 31 май 2008.

ЙОНДОҘ СӘСКӘ (Р.: астра; И.: aster; Т.: pat) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ингән, эре сәскәле баҡса гөлө. □ Астра (лат. *Aster*). *Аҡ йондоҙ сәскә. Ҡыҙыл йондоҙ сәскә. Йондоҙ сәскә түтәле.*

ЙОНДОҘ ТОМШОҠ (томшоғо) (Р.: звездорыл; И.: star-nosed mole; Т.: yıldız burunlu köstebek) *и. зоол.*

Төньяҡ Америкала йәшәй торған, ауыҙы тирәһендә йондоҙ һымаҡ кимерсәк үҫендеһе булған бөжәк ашаусы бәләкәй йәнлек. □ Звездорыл (лат. *Condylura cristata*). *Йондоҙ томшоҡтоң йәшәү мөхите. Йондоҙ томшоҡ балаһы.*

ЙОНДОҘ ТОТОУ (йондоҙ тот-) (Р.: мечтать о недостижимом; И.: dream vainly; Т.: hayal kurmak) *ҡ.*

Тормошҡа ашмай торған хыялдар тураһында хыялланыу. □ Мечтать о недостижимом. *Йондоҙ тотоп йөрөү. Йондоҙ тотоп тороп ҡалыу.*

ЙОНДОҘ ҺАНАУ (йондоҙ һана-) (Р.: предсказывать судьбу; И.: prophesy; Т.: yıldız falcısı) *ҡ.*

1. Йондоҙҙарға ҡарап, киләсәк ваҡиғаларҙы күрәҙәләү; астрология. □ Предсказывать судьбу. // Астрология.

2. *күсм.* Белмәгән кешене һемәйтә торған элекке аулаҡ өй мәрәкәһе *(еңенән үтә ҡараһаң, йондоҙ күренә, тип, кешенең башына бишмәт бөркәйҙәр ҙә, ең эсенә сүмес менән һыу ҡойоп ебәрәләр).* □ Забава во время посиделок. *Йондоҙ һанау наказы төшөү.*

3. Фантик уйынында бирелә торған «яза» төрө *(яза бирелгән егет ҡыҙҙы, ҡыҙ егетте алып, урамға сығып, күктәге йондоҙҙарҙы «һанап» инергә тейеш).* □ «Наказание» в игре «фантик». *Йондоҙ һанарға сығарып ебәреү.*

4. *күсм.* Эшһеҙ йөрөү, ваҡытты бушҡа үткәреү. □ Бездельничать; пинать воздух. *Йондоҙ һанап йөрөү. Йондоҙҙо күп һанай.* ■ *Әминәме йондоҙ һанай торған ҡыҙ, уға шайтан туйы кәрәк — дискотекаларҙа ла ул дауыл уйната, йырға ла оҫта, ярыштарҙа ла ал бирмәй.* Д. Шәрәфетдинов. ● *Йондоҙ һанап, аттан ҡалған.* Мәҡәл.

ЙОНДОҘ ҺАНАУСЫ (Р.: астролог; И.: astrologer; Т.: yıldız falcısı) *и.*

Йондоҙға ҡарап, кешенең яҙмышын әйтеү менән шөғөлләнеүсе; астролог. □ Астролог, звездочёт. *Йондоҙ һанаусы фаразы. Йондоҙ һанаусы юраған яҙмыш.* ■ *Йондоҙ һанаусыға барып ҡайтҡас, йәшәреп китте ул.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОНДОҘ ҺҮНЕҮ I (йондоҙ һүн-) (Р.: угасание звезды; И.: extinction of a star; Т.: yıldızın sönmesi) *и. астр.*

Йондоҙҙарҙың яйлап һүрелә барып, бөтөнләй күренмәй башлауы. □ Угасание звезды. ■ *Күктә йондоҙ һүнде, осҡон баҙлап осмаҫ булғас минең усаҡтан.* Р. Бикбаев. *Төнгө күктә һуңғы йондоҙ һүнгән, тимәк, хыялдар мине борсомаҫ.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

ЙОНДОҘ ҺҮНЕҮ II (йондоҙ һүн-) (Р.: умирать; И.: die; Т.: ölmek) *ҡ.*

Үлеме етеү. □ Умирать. *Уның йондоҙо һүнде. Йондоҙ һүнһә, кемдер үлә.*

ЙОНДОҘ ЮЛАУСЫ (Р.: конь, скачущий сквозь звёзды; И.: horse riding through the stars; Т.: yıldızlarda koşan at) *и. миф.*

Йондоҙҙарҙы үтәләй сабыусы ат. □ Конь, скачущий сквозь звёзды.

ЙОНДОҘ ЯМҒЫРЫ (Р.: звездопад; И.: meteor shower; Т.: yıldız kayması) *и.*

Метеор есемдәрҙең, ер атмосфераһына ҙур тиҙлек менән килеп инеүе сәбәпле, бөтөнләй тарҡалып, ут хәленә әйләнеүенән ғибәрәт булған күренеш. □ Звёздный дождь, звездопад. *Йондоҙ ямғырын күҙәтеү. Йондоҙ ямғыры яуыу.* ■ *[Билал] күҙен аса. Хайран ҡала: күктән яуа йондоҙ ямғыры.* Х. Кәрим.

ЙОНСОЛОУ (йонсол-) *ҡ. әйһ. ф. ҡар.* **йонсоу I.** *Йөрөп йонсолған.* ■ *Ҡыш буйы бүрәнә әҙерләп йонсолған, һөйәктәрҙе аҙмаҙ йомшартып алырға кәрәк.* Н. Мусин. *Нык йонсолһа ла, күҙгә йоҡо килмәне.* Р. Сол-

тангәрәев. *Йонсола күкрәк еңелсә моң менән, әҫеһе бөткән йылы мунса һымак.* Ш. Бабич.

ЙОНСОТКОС (Р.: утомительный; И.: tiresome; Т.: yorucu) *с.*

Ыҙа, ғазап сиктерә торған; интектергес. □ Утомительный, изнурительный. *Йонсоткос эш. Йонсоткос кеше. Йонсоткос ямғырҙар.* ■ *Йонсоткос көҙгө ямғырҙарҙан һуң, кар төшөп, бер аҙ вакыт үткәс, тотоштан иретте лә, бер көндә. каты һыуытып, күҙ аскыһыҙ бурандар башланды.* И. Абдуллин. *Кайтыр юл тағы ла оҙонорак, тағы ла йонсоткосорак булды.* М. Кәрим. *Йонсоткос ямғырҙан ер генә түгел, өйҙәр, кәртә-кура-ларға хәтле бурһып, шешенеп бөткән.* З. Биишева.

ЙОНСОТОЛОУ (йонсотол-) *к.*

1. *төш. кар.* **йонсотоу 1, 2.** *страд. от* **йонсотоу 1, 2.** *Йонсотолған кеше. Ат ауыр эш менән йонсотолған.*

2. *эйһ. ф. кар.* **йонсотоу 1, 2.** *Эштә йонсотолдо.* ■ *Алдарбай яҫтыкка терәлгәйне, йоко баҫа ук башланы. Бына, эй, ысынлап, йонсотолған икән.* Н. Мусин.

ЙОНСОТОУ (йонсот-) (Р.: утомлять; И.: tire; Т.: yormak) *к.*

1. Тән һәм йән ыҙаһы сиктереү; ыҙалатыу, интектереү. □ Утомлять, изнурять, изводить, мучить. // Утомление, изнурение, мучение. *Ауырыу йонсотоу. Йонсотоп бөтөрөү.* ■ *Көҙгө ямғырлы һауала, бысрак юлдан Днестрға тиклем барыу йәштәрҙе байтак йонсотто.* А. Таһиров. *Тамам йонсотто королок, шундай бөлдөк, һеҙҙән ашлык һорарға килдек имде.* «Йософ вә Зөләйха». *[Шәрғиә:] Бәндәләрҙе кайғы-хәсрәт, аслык-яланғаслык йонсотмаһа, ни әйттең дә бит, тормоштар ауыр, яфалы.* Ә. Хәкимов.

2. Мохтажлык кисертеү. □ Испытывать недостаток, нужду. *Ашауға йонсотоу. Бесәнгә йонсотоу. Утынға йонсотоу. Эсәр һыуға йонсотоу.*

3. Тыныслык бирмәй борсоу, тынғыһыҙлау. □ Беспокоить, мучить. *Һорауҙар бирел йонсотоу. Төпсөнөп йонсотоу.* ■ *Бында ундай хәлдәр булғылап тора. Уҙған аҙнала айыу бимазалап йонсоткайны.* Н. Мусин.

4. *эйһ. ф. кар.* **йонсоу.** ■ *Коро дала шарттарында оҙак йылдар йәшәгән кешегә әллә дымлы һауа килешмәне, әллә оҙон юл йонсоткан.* Ф. Янышев.

ЙОНСОУ I (йонсо-) [дөйөм төрки *йунчы-, йунчу-* < *йуң* ‘йөн’] (Р.: утомляться; И.: get tired; Т.: yorulmak) *к.*

1. Тән һәм йән ыҙаһы кисереү; ыҙаланыу, интегеү. □ Утомляться, изнуряться, мучиться. // Утомление, изнурение, мучение. *Ауыр эштән йонсоу. Йоклай алмай йонсоу. Нык йонсоу.* ■ *Айһылыу ҙа йонсоған, күп кайғынан борсолған, әсәһен дә һағынған.* «Урал батыр». *Нык йонсоғайны ул [Һолтанбай], кола юрғаһы һиңкетмәй генә атлап килгән ыңғайы, күҙенә йоко төйөлөп, ойоп та киткеләне хатта.* Б. Рафиков. *Ат бик йонсоған, йөктө серәнеп сак тарта.* Ғ. Ибраһимов. *Ул [үгеҙ] шул саклы сабыуҙан, һыҙланыуҙан тамам йонсоғайны. Башын да күтәрә алмай, ауыҙынан туктауһыҙ һеләгәй аға.* М. Кәрим.

2. Мохтажлык кисереү. □ Испытывать недостаток, нужду. *Утынға йонсоу. Аксаға йонсоу. Бесәнгә йонсоу.* ■ *Халык йорт-кураһын төҙөкләндереү өсөн ағас ала алмай йонсой.* «Башҡортостан», 3 февраль 2012. *Акса алмау сәбәпле, нисәмә миллион кеше фатирҙарына, газға, һыуға түләй алмай йонсой.* «Юшатыр», 29 сентябрь 2009.

3. *диал. кар.* **зәғифләнеү.** *Йонсоп китеү. Ауыр эштән йонсоп калыу.*

ЙОНСОУ II (Р.: утомлённый; И.: tired; Т.: bitkin) *с.*

1. Ыҙа сигеп арыған, талсыккан, йонсоған, хәлдән тайған, эштән сыккан. □ Утомлённый, изнурённый, измученный, измождённый, истощенный, исхудалый. *Йонсоу ат. Йонсоу катын. Йонсоу күренеү.* ■ *[Таиба:] Үтә лә ябык, үтә лә йонсоу инең. Әле инде, Аллаға шөкөр, бөтөнләй үҙ төҫөңә кайта яҙҙың.* З. Биишева. *Майҙан бөткәс тә, тауташ кыҫаны, тарлауык-шарлауыктар аша мал әйҙәп, йонсоу аттарҙы һайт-һайтлап кыҫтап, Күк Корт Урал эсенә йөмолдо.* Ә. Хәкимов. *Кинйә үҙе лә, тәүҙә сырамыта алмайынса, инеүсенең кар һырып бөткән*

өҫтөнә, йонсоу төҫөнә бер аҙ ҡарап торғас ҡына саҡ-саҡ төҫмөрләне. Г. Ибраһимов.

2. Ыҙалы, яфалы, мәшәҡәтле. □ Полный нужды, лишений; трудный; беспокойный, хлопотливый. *Йонсоу ваҡыт. Йонсоу тормош.* ■ *Шундай үтә йонсоу көндәрҙең береһендә уға [Закирға] повестка тапшырҙылар.* З. Биишева. *[Карттар:] Быйыл йылҡы йылы шул, йонсоу йыл.* Һ. Дәүләтшина.

3. Ямғырлы, һыуыҡ елле, буранлы *(көнгә, һауаға ҡарата).* □ Пасмурный, дождливый. ■ *Яҙғы аҡман-тоҡман ҡоторған йонсоу миҙгел ине.* Ә. Хәкимов. *Тик ҡояшты болот ҡаплап китә көндәр боҙоҡ, йонсоу заманда.* М. Кәрим. *Көн йонсоу булһа ла, кешеләрҙең күңелдәре күтәренке, рухтары ҡанатлы бөгөн.* Р. Бикбаев. ● *Мартта көндәр болотло, йонсоу торһа, майҙа һауа торошоноң яҡшы булыуы көтөлә.* Һынамыш.

ЙОНСОУ III (Р.: мучение; И.: torment; Т.: ıstırap) *и.*

1. Кешене ныҡ интектергән, ыҙалатҡан тормоштағы *ниндәйҙер* ауырлыҡ; ғазап. □ Мучение. ■ *Яралыларҙың йонсоуҙары бер аҙ баҫылғандай булды.* А. Таһиров. *Уҙған ҡыштағы йонсоуым барҙыр, йә бит шул сиккә барып еттек, өсәр көнләп тамаҡҡа алмай ултырҙым.* Т. Хәйбуллин.

2. Ямғырлы, һыуыҡ елле, буранлы көн. □ Ненастье. ■ *Әҙәм хатта зарураттан да өйҙән сығырға баҙнат итмәҫ бынау йонсоуҙа йәне алҡымына килеп сана һөйрәгән яңғыҙ ҡатын бар ни донъяла, юҡ ни улар өсөн.* Ә. Хәкимов. *Көн йонсоуынан арыған малсылар ҙа, йыйылышып, тәмәке көйрәтә.* Т. Ғарипова.

ЙОНСОУ (йонсо-) IV (Р.: ругаться; И.: swear, curse; Т.: sövmek) *ҡ. диал.*

Асыуланып, ауыр һүҙҙәр әйтеү, әрләшеү. □ Ругаться. *Минең менән йонсомаҡсы була. Күршеләре менән йонсорға ғына тора.*

ЙОНСОУ V *с. диал. ҡар.* **урлашыусан.** *Был ауыл ғүмер буйы йонсоу булды. Заты менән йонсоу улар.*

ЙОНСОУЛАНЫУ (йонсоулан-) (Р.: портиться *(о погоде)*; И.: become overcast; Т.: bulutlanmak) *ҡ.*

Йонсоуға әйләнеү, боҙолоу *(көнгә ҡарата).* □ Портиться *(о погоде),* становиться пасмурным. ■ *Ә ҡарағай янында күҙ яуын алырҙай алһыу ҡыҙыл сәскәләр, көндөң йонсоуланып китеүенә лә ҡарамай, күҙ яуын алырҙай булып нурлана.* Д. Бүләков. *Көн йонсоуланды, ундай саҡта умартаға дошмандар ябырылыусан.* Ф. Иҫәнғолов.

ЙОНСОУЛАУ (йонсоула-) (Р.: становиться пасмурным; И.: get cloudy; Т.: bulutlanmak) *ҡ.*

1. Йонсоу булыу, боҙолоу *(көнгә ҡарата).* □ Становиться пасмурным. *Көн йонсоулай.* ■ *Көндәр ҡапыл йонсоулап китте.* Б. Бикбай.

2. Ауырып тороу, ауырыңҡырау. □ Прибалеть. *Бабай йонсоулап тора. Кискә табан йонсоулап китеү.*

ЙОНСОУЛЫ *с. диал. ҡар.* **йонсоу II, 2, 3.** *Йонсоулы ҡараш. Йонсоулы ҡиәфәт.* ■ *Ҡояш сыуағына манып йонсоулы күҙҙәремде, әйткем килә кешеләргә наҙ йоҡҡан һүҙҙәремде.* Ш. Бикҡол. *Ҡояшлы көндәр йонсоулы көндәр менән алмашынды.* Р. Низамов.

ЙОНСОУЛЫҠ (йонсоулығы) (Р.: утомлённость; И.: tiredness; Т.: ezginlik) *и.*

1. Ыҙа сигеп арығанлыҡ. □ Утомлённость, подавленность. ■ *Аҙнаевтың күҙҙәрендә шатлыҡ осҡондары тоҡанды, был һүҙҙәр уны айнытып ебәрҙе, сырайындағы сирле кешеләрҙә була торған йонсоулыҡ һыҙаттары ҡапыл бөттө, йөҙөнә нур ҡунды.* Н. Мусин.

2. Ыҙалыҡ, ауырлыҡ. □ Нужда. *Ул йонсоулыҡ менән ғүмер итә. Уның өлөшөнә бик күп йонсоулыҡтар төштө.*

3. Ямғырлы, һыуыҡ елле, буранлы көн булыу. □ Пасмурность, ненастность; ненастье. ■ *Диңгеҙгә барып сыҡҡас иһә, көндәрҙең йонсоулығы тағы ла нығырaҡ һиҙҙерә башланы.* Ә. Хәкимов.

ЙОНСОУСЫ (Р.: угнетённый; И.: oppressed; Т.: ezilen) *с.*

Иҙелгән, баҫылған, йәберләнгән, ҡыйырһытылған. □ Угнетённый. *Йонсоусы халыҡ. Йонсоусы ҡатлам.* ■ *[Сурағол] Константин менән көн дә тигәндәй күп кенә ултырҙаш булып, уға иҙелеүсе, йонсоусы ҡатламдарҙың*

төп сәбәптәрен белергә тырышып, күп кенә һорауҙар бирҙе. Т. Хәйбуллин.

ЙОП (Р.: чётный; И.: even; Т.: çift) *с.*

1. Икегә тигеҙ бүленгән; *киреһе* — так. □ Чётный. / Чёт. *Йоп һан. Такмы, йопмо?* ■ *Уларҙың [ижектәрҙең] тәүге икәүһе, кағиҙә рәүешендә, так һанда, калғандары йоп һанда килә.* К. Әхмәтйәнов.

2. Үҙ-ара ишле, парлы. □ Чётный, парный. *Йоп кылыу. Йоп булыу.* ■ *Ер-һыу — йөрәк тибешем, Ер-һыу — минең йоп ишем.* «Уҙак-Туҙак — балабәшнәк ярсығы». *Яҙ ишек кағa — бөтә булған ерҙе, катын-кыҙҙарҙы ла иҫәпләп, йоп башынан бүлергә кәрәк.* А. Карнай.

3. *миф.* Ыңғай семантикаға эйә төшөнсә. □ Чётный *(имеет положительную семантику).* ■ *Бер матурға — бер батыр тура килһә, йоп булыр, йоп булғанға — хуп булыр.* Кобайырҙан.

ЙОПАН (Р.: лентяй; И.: lazy person, lazy bones; Т.: tembel) *с. диал.*

Ялкау, эшләргә яратмаған. □ Лентяй. *Йопан кеше. Йопан малай. Йопан булыу.*

ЙОПАР I *и. кар.* **йофар I.** *Йопар еҫе. Йопар кушылған май.* ● *Йопарҙы йәшерһәң дә, еҫенән беленер.* Әйтем.

ЙОПАР II *и. кар.* **йофар II.** *Йопар тиреһе. Йопар аулау.*

ЙОПАРЛЫ (Р.: ароматный; И.: fragrant; Т.: (güzel) kokulu) *с.*

Хуш еҫле. □ Ароматный, благовонный, душистый. *Йопарлы һабын. Йопарлы май. Йопарлы крем.*

ЙОП-ЙОКА (Р.: очень тонкий; И.: very thin; Т.: çok ince) *с. артыкл. дәр. кар.* **йока.** *превосх. степ. от* **йока.**

Бик, үтә нык йока. □ Очень тонкий, совершенно тонкий.

ЙОП-ЙОМРО (Р.: очень круглый; И.: very round; Т.: yusyumru) *с. артыкл. дәр. кар.* **йомро.** *превосх. степ. от* **йомро.**

1. Тулыһынса, тотошлайы менән йомро. □ Очень выпуклый, круглый. ■ *Башкыһаһы йоп-йомро булып, шаулап өрөп торған була байғош.* Т. Гарипова.

2. Кәүҙәгә бик тулы, йыуан. □ Очень полный, толстый. ■ *Бер вакыт ул [Сафия апайҙың улы] ғаиләһе менән кайтып төштө. Йоп-йомро, кыҫка аяклы катыны һәм ике малайы.* Т. Ғиниәтуллин.

3. Бик теремек, көр. □ Упитанный, полный сил. ■ *Ни ғиллә, шулай тамаша кылып торғанда, кайҙандыр бер йоп-йомро бейә уйнаклап килеп сыкмаһынмы.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОП-ЙОМШАК (Р.: очень мягкий; И.: very soft; Т.: yumuşacık) *с. артыкл. дәр. кар.* **йомшак.** *превосх. степ. от* **йомшак.**

Бик, нык йомшак. □ Очень мягкий, мягонький. *Йоп-йомшак күлдәр.*

ЙОП КҮРЕҮ (йоп күр-) (Р.: считать достойным; И.: consider (somebody) worthy; Т.: eş görmek) *к.*

Тиңһенеү, иш итеү. □ Считать достойным, подходящим *кого-то.* ■ *[Айһылыу — Урал батырға:] Беҙҙең илде хуп күрһәң, мине үҙеңә йоп күрһәң, әйҙә, беҙгә барайык.* «Урал батыр».

ЙОПЛАНЫУ (йоплан-) (Р.: сойтись в пары; И.: get in pairs; Т.: çiftlenmek) *к. иҫк.*

Икәү-ара парланышыу; ишләшеү. □ Сойтись в пары, строиться попарно, парами. ■ *[Урал:] Кешеләр бергә тупланып, үҙараһы йопланып, көслө ырыуҙар көсһөҙҙө талауын да күрҙем мин.* «Урал батыр». *[Урал — Шүлгәнгә:] Дейеү-ендәр тупланды, бары бергә йопланды, — ил каплаған диңгеҙҙе нисек йөҙөп сығырһың?* «Урал батыр».

ЙОПЛАШТЫРЫУ (йоплаштыр-) (Р.: свести; И.: bring together; Т.: bitiştirmek, kavuşturmak) *к. иҫк.*

Иш итеп кауыштырыу; парлаштырыу. □ Свести *с кем. Әхирәт менән йоплаштырыу.* ■ *[Бикйән — Көләйшәгә:] Әсәң дә хәбәрһеҙ түгел. Ырыҫ булһа, икебеҙҙе йоплаштырырға үҙе теләй.* Әкиәттән.

ЙОПЛАШЫУ I (йоплаш-) (Р.: сойтись в пары; И.: get in pairs; Т.: çiftleşmek) *к. иҫк.*

Икәү-ара парлашыу. □ Сойтись в пары. *Йоплашып сығыу.* ■ *Йәше-карты йоплашып, канлы яуҙан тынышып, байман табып, тын алып, рәхәтләнеп калған, ти.* «Урал батыр».

ЙОПЛАШЫУ II (йоплаш-) (Р.: найти общий язык; И.: find mutual understanding; Т.: ortak dil bulmak, anlaşmak) *к. диал.*

Уртаҡ тел табыу. □ Найти общий язык. *Икәүләп йоплашып киттек. Студенттар менән йоплашыу.*

ЙОР I (Р.: быстрый; И.: quick, prompt; Т.: hızlı) *с.*

1. Етеҙ, тиҙ хәрәкәтле. □ Быстрый, проворный. *Йор ҡыҙ. Йор инеш. Йор ағыш.* ■ *Ебәк кеүек йомшаҡ, таңғы ысыҡтай саф һыу менән ҡойонмаҡсы булһаң, йор ҡолондай уйнаҡлап Ағиҙел ағып ята.* Т. Килмөхәмәтов. *Өмөт, бәхет һирпеп күңелгә, йор ишимәләй, аға ғүмер ҙә.* С. Кулибай.

2. Шаян, үткер, тапҡыр *(һүҙгә һәм шундай һүҙле кешегә ҡарата).* □ Остроумный, шутливый; бойкий на язык. *Йор һүҙле кеше. Йор кеше.* ■ *[Таминка] һүҙгә йор, кешеләрҙе көлдөрә белә.* Д. Юлтый. *Йор еңгәнең ишараһын малайҙар дөрөҫ аңланы.* К. Мәргән.

ЙОР II (Р.: быстро, проворно; И.: quickly, promptly; Т.: çabuk) *р.*

1. Етеҙ, тиҙ рәүештә. □ Быстро, проворно. *Йор башҡарыу. Йор үтәү. Йор эшләү.*

2. Шаян, тапҡыр. □ Остроумно, бойко. *Йор һөйләшеү. Йор яуап биреү.*

ЙОР III (Р.: вид антилопы; И.: antelope species; Т.: antilobun bir türü) *и. зоол.*

Антилопаның бер төрө. □ Вид антилопы. *Йор балаһы. Йорҙар көтөүе.*

ЙОР IV (Р.: окрестность; И.: environs; Т.: çevre) *и. диал.*

Тирә-яҡ, тирә-йүн, сик. □ Окрестность, округа. *Ошо йорҙан сыҡҡан. Теге йорҙан килгән.*

ЙОРАТ (Р.: намёк; И.: hint; Т.: ima) *и.*

1. *Нимәгәлер* ишара һаған билдә. □ Намёк *на что. Алдашыу йораты ла юҡ.* ■ *Әлеге шул көндәш ҡатындарса хәйлә йораты: иренең күңелен күрергә теләйҙер [Кинйәһолтан].* Н. Мусин.

2. *кәмһ.* Исеме есеменә тура килмәгән йәки үҙенең исемен һаҡлап та элекке сифат, дәрәжә, бәҫен юғалтҡан кеше, нәмә, күренешкә һ. б. ҡарата әйтелә. □ Подобие *кого-чего. Һарай йораты. Кейем йораты.* ■ *Тәүге сыҫҡан юлы, саҡ ҡына барғас та, һикмаҡ аша һарҡыған инеш йораты ярында осрай.* Д. Шәрәфетдинов. *Егеттәр, ҡыҙҙар бәләкәй генә клуб йоратын үҙҙәре яғып йылыталар, үҙҙәре иҙән-фәләнен йыуалар.* Н. Мусин. *Ҡарауатта әҙәм йоратының йомғаҡтай ғына йөҙөн, йөҙөндә ике ҡараһыу тамсының емелдәүен күреп, ул [Сергей] хайран ҡалды.* И. Абдуллин. *Унда [утынлыҡта] меҫкен ир йораты, нимәгә килгәнен онотҡандай, бер аҙ тапанып торҙо.* «Ағиҙел», № 4, 2010. *Булманы был тормош! Булды бары ниндәйҙер бер тормош йораты. Ярай әле, тиҙерәк китер өсөн ярһып тора тышта тұратым.* Р. Ғарипов.

3. *иҫк.* Яңы ғына үҫә башлаған яралғы. □ Зародыш; зачаток. *Бала йораты.* ■ *Бынау йоморҡаның йораты ҡан йыя башлаған.* Картотека фондынан.

ЙОРҠА I (Р.: талон; И.: coupon; Т.: kupon) *и. һөйл.*

Ниҙер алырға хоҡуҡ биргән ҡағыҙ; талон. □ Талон. *Икмәк йорҡаһы. Май йорҡаһы. Ярма йорҡаһы.*

ЙОРҠА II *и. ҡар.* **йорҡаҡ 1.** *Ҡағыҙ йорҡаһы.* ■ *[Сураш:] Юлсыға йорҡа ла йөк. Артыҡ-борттоҡ булһа, ташлағыҙ.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙОРҠАҠ (йорҡағы) (Р.: часть; И.: part; Т.: bölük) *и.*

1. Өҙөп, ҡырҡып алынған киҫәк. □ Часть, кусок; обрывок. *Ҡағыҙ йорҡағы. Хат йорҡағы. Гәзит йорҡағы.*

2. *күсм.* Ҙурҙың бер бәләкәй өлөшө, бәрәмеге. □ Часть. ■ *Хажи солтан — ҡарағалпаҡ халҡының бер йорҡағы.* Ғ. Хөсәйенов.

3. *күсм. диал. ҡар.* **йорат 2.** *Егет йорҡағы. Ир йорҡағы. Йорт йорҡағы.*

ЙОРЛАНДЫРЫУ (йорландыр-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йорланыу.** *понуд. от* **йорланыу.** *Кешене йорландырыу. Халыҡты йорландырыу. Йорландырып китеү.*

ЙОРЛАНЫП АЛЫУ (йорланып ал-) (Р.: пошутить, побалагурить; И.: jest a bit; Т.: şaka etmek) *ҡ.*

Мәрәкәләп, шаян ҡыланып алыу. □ Пошутить, побалагурить. *Бала бер аҙ йорланып алды. Еҙнәһе балдыҙы менән йорланып алды.*

ЙОРЛАНЫП ТОРОУ (йорланып тор-) *ҡ. ҡар.* **йорланыу.** *Бала йорланып тора. Күрше йорланып тора.*

ЙОРЛАНЫП УЛТЫРЫУ (йорланып ултыр-) *к. кар.* **йорланыу.** *Коҙа, мәрәкәләр һөйләп, йорланып ултыра. Ҡунаҡтар йорланып ултырҙылар.*

ЙОРЛАНЫУ (йорлан-) (Р.: острить; И.: be witty; Т.: espri yapmak) *ҡ.*

Йор, шаян ҡыланыу. □ Острить, шутить, балагурить. *Йорланып китеү. Йорланып йөрөү. Бала йорланып киткән.* ■ *[Харис — Дәржеманға:] Һин бит арғы яҡ мәхәллә кешеһе. Шундағы кешеләр менән һөйләшергә кәрәк ине һиңә, — тип йорланды.* А. Таһиров.

ЙОРЛОҠ (йорлоғо) (Р.: острословие; И.: wittiness, witticism; Т.: zekilik) *и.*

Шаян ҡыланыш; сослоҡ, үткерлек. □ Острословие, шутливость. ■ *Сәнғәт Тимофей Зайцевты йорлоғо, тура һүҙлелеге, егетлеге өсөн яратты.* Ж. Кейекбаев. *[Кинйә] Әлибайҙың йорлоғо барлығын, ҡыл дилбегә менән бәйләп ҡуйырға тырышыуын һиҙенә.* Ғ. Ибраһимов.

ЙОРМАҠ (йормағы) (Р.: кусочек; И.: small piece; Т.: küçük parça) *и. диал.*

Остоҡ, осмот. □ Кусочек. *Ебәк йормағы. Икмәк йормағы. Туҡыма йормағы.*

ЙОРОҠ (йороғо) (Р.: установившийся порядок; И.: established order; Т.: düzen) *и. һөйл.*

Халыҡта ныҡынған дөйөм тәртип; йола. □ Общеустановленный порядок, общее направление жизни, обычай. *Йороҡ буйынса. Йороҡто һаҡлау.* ■ *[Тәнкәбикә:] Сынаяҡты төшөрөү яҡшы йороҡ түгел, хәйерлегә булһын.* М. Кәрим.

ЙОРОҠҠА КИЛМӘГӘН (Р.: упрямый; И.: obstinate; Т.: inatçı) *с.*

Ыңғайға килмәгән; кире. □ Не поддающийся уговорам, упрямый. *Йороҡҡа килмәгән кеше. Йороҡҡа килмәгән ҡатын.*

ЙОРОН I (Р.: лоскут; И.: patch rag; Т.: parça) *и.*

1. Иләнгән тире ярпыһы, тире ҡырҡындыһы. □ Лоскут, остаток, кусочек шкуры. *Йорондан кәпәс тегеү. Йорондан тун тегеү.* ■ *Был мыйыҡ уның [Ҡылысбаевтың] үҫмер егеттәргә хас нәҙек кәүҙәһенә, .. күк күҙҙәренә һис оҡшамай, шаярып, йорон йәбештереп ҡуйған һымаҡ ҡына булып тора ине.* З. Биишева. *Аҡ йорондан ҡырпыулаған кәпәс кейгән .. Әлкәйҙең, Ҡолморҙа старшина ҡапҡаһынан сығып, .. доверенный Әкбәрҙең йортона инеп киткәнен күрҙе [Сурағол].* Т. Хәйбуллин. *Уның [Ҡылысбаевтың] был ҡул һелтәүенән дә, йорон йәбештерелгән кеүек мыйығынан да Гөлкәйҙең бик көлгөһө килһә лә көлә алманы.* З. Биишева. ● *Уңған ҡатын йорондан элкеп ҡуйтыр сығарыр.* Әйтем.

2. *миф.* Бөтә йөн, сәс, төк менән бәйле әйберҙәр кеүек, байлыҡ, муллыҡ символы. □ Лоскут, остаток *(как и все предметы, имеющие отношение к шерсти, волосам, является символом богатства, изобилия и благополучия).*

ЙОРОН II (Р.: лоскутный; И.: scrappy; pieced; Т.: parçalı) *с.*

Ярпыларҙан тегелгән. □ Лоскутный. *Йорон бүрек. Йорон күлдәк. Йорон тун.* ■ *Йәнә бер һырғый уҫаҡ ергә ауғас, Петя маңлайына бәреп сыҡҡан тирҙе йорон бейәләй осо менән һөртөп алды.* З. Ураҡсин.

ЙОРОУ (йор-) *к. диал. кар.* **юрау.** *Төш йороу. Төш йороу китабы. Яҡшыға йороу.*

ЙОРО ЯТ (Р.: дальний родственник; И.: distant relation; Т.: uzak akraba) *и. диал.*

Алыҫ нәҫел. □ Дальний родственник. ■ *Ғәлим беҙгә йоро ят ине. Йот йылында йоро ятыбыҙ картуф биреп ҡотҡарып ҡалды.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОРПЛАУ (йорпла-) *к. диал. кар.* **уртлау**. *Сәйҙе йорплап эсеү. Ауыҙға һыу йорплау. Йорплап алыу.*

ЙОРСО (Р.: младенец; И.: baby; Т.: bebek) *и. диал.*

1. Сабый, тәнәй. □ Младенец, малютка. *Йорсо илауы. Йорсоно йоҡлатыу.*

2. Ирҙең ҡустыһы *(ҡатынына ҡарата)* һәм ҡатындың ҡустыһы *(иренә ҡарата)*; ҡәйнеш. □ Младший деверь. *Яратҡан йорсо. Йорсо килде.*

3. Моронроҡ ҡыҙҙың кейәүе. □ Муж названой дочери. *Йорсонан ярҙам һорау. Йорсоно сәйгә саҡырыу.*

ЙОРТ I [дөйөм төрки *йурт*] (Р.: дом; И.: house; home; Т.: ev, yurt) *и.*

1. Йәшәү өсөн, төрлө ойошма һ. б. урынлаштырыу өсөн тәғәйенләнгән ҡоролма; бина, өй. □ Дом, изба, здание, жилище. / Домовой, домашний. *Ағас йорт. Кирбес йорт. Биш ҡатлы йорт. Йорт һалдырыу. Йорт нигеҙе. Йорт күтәреү. Өс ҡатлы йортта тороу.* ■ *Ҡатил батша йортона Урал ҡарап китһән, ти.* «Урал батыр». *Илкөндөң һаулығын, мал-йәндең аманлығын һорашып, шунда менеп ултырғас, Килмәк абыҙ был йорттоң именлегенә доға ҡылды.* Г. Ибраһимов. ● *Алдаҡсының йорто янһа ла, ышанмаҫтар.* Мәҡәл. *Атайым йорто һаламдыр — һарай булып күренә, ҡайным йорто ҡабыҡтыр — тамуҡ булып күренә.* Мәҡәл. *Балалы йортта бур ятмаҫ.* Мәҡәл. *Йорт һатып алма, күрше һатып ал.* Мәҡәл.

2. Айырым бер ғаиләнең хужалығы. □ Двор, усадьба, хозяйство. / Домашний. *Йорт кәрәк-ярағы. Йорт хужабикәһе. Йорт мәшәҡәттәре. Йорт эштәре. Йорт ҡарау.* ■ *Егет бөтә йортҡа хужа булып ҡала.* Әкиәттән. *Ғәйшә әбей Наиләне .. йорт эшенә егә башланы.* С. Поварисов. ● *Бөлөр йорттоң буйҙағы баш булыр.* Мәҡәл. *Булмаҫ йортҡа бөкрө ҡарсыҡ.* Мәҡәл. *Яҡшы ағай йорт көтһә, йортҡа шатлыҡ килтерер, яман ағай йорт көтһә, йәм-байлығын бөтөрөр.* Мәҡәл. *Йортто тотҡан — ир, өйҙө тотҡан — ҡатын.* Мәҡәл.

3. Шул хужалыҡты уратып алған кәртә эсе. □ Двор, усадьба. *Йорт эсе. Йорт уртаһы. Йорт ҡапҡаһы.* ■ *Малдар йорттарға таралышып, урамдағы саң баҫыла төшкәс, өй алдарында биҙрәләр шалтырай.* Ф. Әсәнов. *Аяҡтары шаҡылдап, тояҡтары дөңгөлдәп, һыйыр, башмаҡ, мөңөрҙәп, йортоң баҫһын, киленсәк.* Халыҡ ижадынан. *Толпар, ҡоштай осоп, йорт кәртәһен аша һикереп сығып, күҙҙән дә юғалған.* Халыҡ ижадынан. *Ҡамыр батыр бер йорттоң ҡапҡа төбөнә барып туҡтауы булған, уның аҡ һаҡаллы хужаһы ҡаршы сыҡҡан.* Әкиәттән. *Ҡыҫҡә табан йорт уртаһында, йәшел үлән өҫтөндә бик ҙур табын йыйыла.* Халыҡ ижадынан.

4. Шул хужалыҡтарҙы иҫәпләү берәмеге. □ Двор. *Ҡырҡ йортло ауыл.* ■ *Берләштерелгән был армия ил сигендә һаҡта торған сәнкемдәр менән тағы ҡаты бәрелешеп, Болан-дала (Ланьдулу) тигән иркөндә (ғәскәр башлығын) ун меңдән ашыу йортло ауылы менән баш эйергә мәжбүр ҡыла.* Й. Солтанов. *Гитлер һуғыш башлағас, ошо 35 йортло ауылдан 83 ир-егет фронтҡа алынған.* «Йәшлек», 15 ғинуар 2011.

5. Мәҙәни-ағартыу, фән, мәғариф, социаль, көнкүреште хеҙмәтләндереү һ. б. дәүләт ойошмаһы һәм шул ойошма урынлашҡан бина. □ Дом, учреждение. *Мәҙәниәт йорто. Ҡарттар йорто. Дауалау йорто. Йорт-музей. Ҡунаҡ йорто. Рәссамдар йорто.* ■ *[Юлдыбай:] Баланы мин һиндә ҡалдырмайым, имсәк балалар йортона бирәм.* Һ. Дәүләтшина. *Табыныу йортонан Яҡуп бер ҙә сыҡмаҫ, күңеле китек, ауыҙына ризыҡ ҡапмаҫ.* «Йософ ҡиссаһы». *Юғары уҡыу йорттарының студенттары ҡышҡы каникулға таралыша башланы.* Б. Бикбай.

6. Бер хужалыҡ булып йәшәгән ғаилә, кешеләр һәм уларҙың ғүмер иткән төйәге. □ Отчий дом, отчизна. *Ата йорто. Тыуған йорт. Үҙ йортом.* ■ *[Муйылбикә:] Ҡороғоро бала, ҡарт көнөмдә бала үҫтерҙем, тип ҡыуанып торғанда, ҡайһылайтып йорт алдында мәсхәрә итте.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡайғы-хәсрәт кенә күрә икән, тыуған йорттан китҡәс, ҡыҙ бала.* Халыҡ ижадынан. *Үҙ көнөмдө үҙем күрергә, донъя менән танышып йөрөргә тип, ун ике йәшемдә тыуған йорттан сығып киттем.* М. Тажи. ● *Иренсәк йорт ил булмаҫ, ил булһа ла, гел булмаҫ.* Мәҡәл. *Үҙ йортон яманлаған — кеше йортонда әрләнер.* Мәҡәл.

7. Этник берәмеккә ойошҡан халыҡ; ил, ырыу. □ Племя, народ, страна. *Табын йорто. Юрматы йорто. Ҡыпсаҡ йорто. Бөрйән йорто.* ■ *Ғарифты малай сағында атаһы Ноғман бай, Ҡатай йортонда Аҡкөсөк ауылындағы рус-башҡорт мәктәбенә һалып, русса уҡытҡан.* Ж. Кейекбаев. *Ай, Уралым, таш йортом, башҡортомдоң баш йорто.* Р. Шәкүр. *Башҡорт йортонда Байрамбикә исемле ҡара сәсле, ҡара күҙле, бик матур бер ҡыҙ йәшәгән.* Халыҡ ижадынан. ● *Халыҡ йорто — Тыуған ил.* Мәҡәл. *Ямандан бурыс*

алһаң, йорт алдында яғаңдан алыр. Мәҡәл. *Булмаҫ йортҡа бөкрө билле ул тыуыр.* Мәҡәл.

8. *тар.* Элекке башҡорттоң йәйгелектә тәбиғәткә сығып йәшәгән урыны; йәйләү. □ Летовка. *Йәйге йорт. Йәйге йортҡа күсеү. Йәйге йорттан ҡайтыу.* ■ *Яҙғы йортҡа күсенер көн дә етте. Күсенә торған көндө бөрәү ҙә йоҡламаны.* Я. Хамматов.

9. *тар.* Кантон эсендә булып, бер нисә ауылды биләп торған административ-территориаль берәмек. □ Юрт. / Юртовый. *Йорт йыйыны. Йорт йомошсоһо. Йорт старшинаһын һайлау.* ■ *Беҙҙең Ялпаҡйылға менән Өссусаҡ ауылдары Ҡыҙылъяр йортоноң көнсығыш-төньяғындағы бер ситтә ята.* Ғ. Дәүләтшин. *Хеҙмәткә ебәреү сиратын йорт старшиналары билдәләгән.* Интернет селтәренән. *Кантондар йорттарға, йәғни командаларға бүленгән.* Картотека фондынан.

10. *миф.* Мифлаштырылған сакраль халыҡ төркөмө; халыҡ ил, ғаилә именлеге символы. □ Символ благополучия рода, семьи. ■ *Әй, Иҙел йорт, Иҙел йорт — атам кейәү булған йорт, әсәм килен булған йорт.* Ҡобайырҙан.

♦ **Йортҡа бәрәкәт!** йортҡа барып ингәндә әйтелә торған теләк. □ Пусть в доме всегда будет благополучие!

ЙОРТ II [дөйөм төрки *йурт*] (Р.: домашний; И.: domestic; house; T.: evcil) *с.*

Ҡулға эйәләштерелгән, хужалыҡта аҫралған ҡош-ҡорт, хайуандарға ҡарата әйтелә. □ Домашний. *Йорт хайуандары. Йорт ҡуяны. Йорт ҡоштары.* ■ *Өйҙә һыйыр мөгөҙөнә элер нәмәһе, йорт малынан бесәйе лә юҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Кәртә-ҡура тиһәң, ҡайын сыбығынан үреп яһалған кәртәнән, урам яғындағы араталы ҡапҡанан башҡа нәмә юҡ. Йорт ҡоштары, ылаш һымаҡ нәмәләрҙең әҙе лә беленмәй.* Ғ. Дәүләтшин. *Йорт хайуандары мотлаҡ теркәлеү үтергә тейеш, йыл һайын ҡабаттан теркәлеү үтеү ҙә мотлаҡ һанала.* «Торатау», 3 март 2011.

ЙОРТ АЛДЫ *и. ҡар.* **ишек алды.** ■ *[Төлнур] ҡойма ярығынан башта йорт алдын күҙәтеп сыҡты.* М. Кәрим. *Һәр бер йорттоң алды йә һары талдан үрелгән ситән, йә таҡта менән кәртәләп алынған.* М. Тажи. *Йорт алдында тауыҡтар ем суҡләп йөрөй, ҡаҙҙар ҡыуаныша.* Ф. Әсәнов.

ЙОРТ АНАҺЫ *и. миф. ҡар.* **йорт эйәһе.** ■ *Йорт анаһын яңы өйгә алып китергә кәрәк.* Башҡорттарҙың им-том китабынан.

ЙОРТ-АРА (Р.: двор; И.: homestead; T.: avlu) *и. диал.*

Ҡапҡа эсе. □ Двор. *Йорт-араны йүнәтеү. Йорт-араны таҙартыу. Йорт-араны һепереү.*

ЙОРТ АРАИЫҠЫ ЭЙӘҺЕ *и. миф. диал. ҡар.* **йорт эйәһе.**

ЙОРТАУАЙ I (Р.: хозяйственный; И.: thrifty, economical, practical; T.: evirgen) *с. диал.*

Табыу, хәстәрләү яғына булдыҡлы, тырыш, хужалыҡсыл. □ Хозяйственный. *Йортауай кеше.* ■ *Туғаҙаҡ шул йылды ошо Йәмиләне алды. Үҙе йәмһеҙ генә булһа ла, харап йортауай бисә булып сыҡты.* Т. Килмөхәмәтов.

ЙОРТАУАЙ II [рус.] (Р.: юртовый; И.: governor of a small province; T.: ilbay) *и. тар.*

Кантон эсендәге бер нисә ауылды берләштереп торған административ-территориаль берәмектең башлығы. □ Юртовый. ■ *Йортауай әллә ни йәйелеп китеп маҡтаманы, алған айыуҙарының йөҙҙән артыҡ булыуын әйтте лә, барыһы ла ҡул ҡапты.* Б. Рафиҡов. *Ырыҫҡол исемле бер йортауай дау ҡуптарҙы.* З. Ураҡсин. *Иртәгеһен оҫта ныҡлы ҡурғау аҫтында йортауай ҡарамағына оҙатылырға тейеш ине.* Ә. Хәкимов.

ЙОРТ БАБАЙ (Р.: дух двора; И.: hause-spirit; spirit of a homestead; T.: Avlu Ruhu, Abzar İyesi) *и. миф.*

Йорт эйәһе. □ Дух двора, домовой. ■ *Йорт бабай йортто яман заттан һаҡлай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОРТ БЕСӘЙЕ *и. зоол. ҡар.* **бесәй.** *Йорт бесәйен аҫрау. Йорт бесәйе йортта яҡшы энергетика булдыра.*

ЙОРТ-БИЛӘМӘ *и. ҡар.* **йорт-ер.** ■ *Алама көстәр яҡын юламаһын өсөн, йорт-биләмә тирәһен кесерткәндән бәйләнгән һепертке менән һепергәндәр.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010.

ЙОРТ-ЕР (Р.: хозяйство; И.: property and estate; Т.: mal (varlığı) *и. йыйн.*

1. Кешенең бөтә хужалығы: өйө, милке, биләгән ере. □ Хозяйство, имущество. ■ *[Рәйсә] бөтә тормошон йорт-ер йыйыуға, кейемгә, һылыуланыуға, ҡунаҡҡа ла театрға йөрөүгә әйләндерҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Ялбыр йөнлө Алабай йорт-ерҙәрҙе һаҡлай.* Ғ. Амантай. *Шул уҡ йәйҙе Харрас батыр, йорт-ерен ҡутарып, Яҡтыкүлгә күсеп ултырҙы.* Ә. Хәкимов. ● *Ир-ат булһа, йорт-ерен маҡта, ҡатын-ҡыҙ булһа, аш-һыуын маҡта.* Мәҡәл.

2. Тирә-яҡ халыҡ, ил. □ Родные края; народ, люди. *Йорт-ер алдында. Йорт-ерҙән китеү.* ■ *Бөтә тарихыңа шаһит булған ил күкрәге — Урал тауың бар, дошмандарың ҡыҫһа йорт-ереңде, ҡаршы сығып өсөн яуың бар.* Д. Юлтый.

3. Күмәк кеше; халыҡ. □ Народ, люди. *Бөтә йорт-ер алдында һүҙ бирәм.*

4. *миф.* Изгеләштерелгән ер. □ Сакральная земля.

ЙОРТ ЕРТИШКЕСЕ (Р.: землеройка домовая; И.: greater white-toothed shrew; Т.: ev sivri faresi) *и. зоол.*

Йорт-ҡаралтыға эйәләшеп көн күреүсе ертишкес төрө. □ Землеройка домовая; длиннохвостая белозубка (лат. *Crocidura russula*). *Йорт ертишкесенең ояһын туҙҙырыу.*

ЙОРТ ИДАРАЛЫҒЫ (Р.: домоуправление; И.: house management; Т.: ev yönetimi) *и.*

Билдәле бер нисә йортто көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереү һәм күҙәтеү бурысын үтәгән ойошма. □ Домоуправление. *Йорт идаралығына инеү.* ■ *8-се йорт идаралығы дөйөм ятаҡтарға идара итеү менән шөғөлләнә.* «Юшатыр», 22 декабрь 2009.

ЙОРТ-ИЛ [боронғо төрки *йурт-эл*] (Р.: страна; И.: country; Т.: yurt) *и. йыйн.*

1. Ил, дәүләт, йәшәгән ер. □ Страна, государство, место обитания, край. ■ *Кире азамат йорт көтһә, йорт-иленән йүн китер.* Ҡобайырҙан. *Арыҫлан, йорт-илдәге хәлдәрҙең боларып китәсәген һиҙгәс тә, бик ныҡ борсолдо.* Ғ. Ибраһимов.

2. Халыҡ, ырыу. □ Народ, род. *Йорт-ил менән ханға ҡаршы сығыу.* ■ *Тыйыу кешеләргә, ғаиләгә, ырыуға, ҡәрҙәштәргә, ғөмүмән, йәмғиәткә, йорт-илгә имен, ырыҫлы йәшәү өсөн ҡулланылған йола, ҡанун булған.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

3. *миф.* Изгеләштерелгән, сакраль тыуған ил төшөнсәһе. □ Сакральное, священное понятие. *Йорт-ил менән Йәйташынан ямғыр һорау.*

ЙОРТ ЙОНДОҘҠАЙЫ (Р.: звездчатка средняя; И.: chickweed species; Т.: kuş otu) *и. бот.*

Аҡ йондоҙ сәскәле, ҡыҫҡа төҙ һабаҡлы? һуҡтаһыҙ түңәрәк япраҡлы дымлы ер үләне. □ Звездчатка средняя, мокрица (лат. *Stellaria media*). *Йорт йондоҙҡайының япрағы һәр саҡ дымлы.* ■ *Ҡыҙыл клевер, йорт йондоҙҡайы, меңъяпраҡ, һуҡыр кесерткән, туғай яраны кеүек башлыса дарыу үләне итеп файҙаланылғандар был белешмәгә индерелмәне.* «Йәшлек», 28 апрель 2009.

ЙОРТ ЙЫЛАНЫ *и. зоол. ҡар.* **туҙбаш**. *Йорт йыланын үлтерергә ярамай.* ■ *Йорт йыланын үлтергән кешенең малы зыянлай, кәртә-ҡураһында янғын була, үҙе зәғифләнә йә үлә.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОРТ-ЙЫҺАЗ (Р.: домашнее имущество; И.: domestic property; Т.: mülk) *и. йыйн.*

Йорт һәм бөтә булған йыһаз. □ Домашнее имущество. *Йорт-йыһаз етештереү. Йорт-йыһазы бөтөн.* ■ *[Генерал-губернатор] Бөгөлмәлә бар йорт-йыһаздарын оло улына ҡалдырып, тәүәккәлләп, ғаиләһе менән тейәнешеп сыҡты китте Ырымбурға.* Ғ. Хөсәйенов. *Һәр кантон икешәр-өсәр тирмә ҡора, шунда йорт-йыһаз нәмәләрен ҡуя, ҡымыҙҙарын бешеп, туҫтаҡтарға һалып тора, башҡа нигмәтен дә йәлләмәй.* З. Ураҡсин.

ЙОРТ ЙӘМЕ *и. миф. диал. ҡар.* **өй эйәһе.** *Йорт йәме өйөмдө яман көстәрҙән һаҡлай.*

ЙОРТ КЕНӘГӘҺЕ (Р.: домовая книга; И.: house register; Т.: kiracı kayıt kütüğü) *и.*

Йортта тороусыларҙы теркәп барған китап *(йорт идараһы тарафынан башҡарыла).* □ Домовая книга. *Йорт кенәгәһенә теркәү. Йорт кенәгәһе алып барыу.* ■ *Тикшереү барышында йәшәү шарттарын яҡшыртыуға мохтаждар сиратына*

алыныусыларҙың ғаилә ағзаларын сағылдырған документтары, шулай уҡ йорт кенәгәһе күсермәһе булмай сығыуы асыҡлана. «Шоңҡар», № 3, 2011.

ЙОРТ КӨТӨҮ (йорт көт-) (Р.: вести хозяйство; И.: keep household; Т.: ev işlerine bakmak) *ҡ.*

1. *диал.* Донъя көтөү. □ Вести хозяйство. *Йәштәр матур итеп йорт көтәләр, үҙҙәренең малы бар.*

2. *иҫк.* Ил, халыҡ менән идара итеү. □ Управлять страной, народом. *Йорт көтөү өсөн ҙур тәжрибә кәрәк.*

ЙОРТ КҮГӘРСЕНЕ (Р.: голубь домашний; И.: domestic pigeon; dove; Т.: evcil güvercin) *и. зоол.*

Ҡырағай күгәрсендәрҙән өйрәтелгән, бик күп тоҡомдарға бүленә, ҡайһы берҙәре итен ашау өсөн, ҡайһы берҙәре почта йөрөтөү, һуғыш һәм авиация эшендә файҙаланыу өсөн аҫралған күгәрсен төрө. □ Голуби домашние (лат. *Columba*). *Йорт күгәрсендәре үрсетеү. Йорт күгәрсендәре аҫрау.*

ЙОРТ КҮРКӘҺЕ (Р.: индюк домашний; И.: domestic turkey; Т.: evcil hindi) *и. зоол.*

Ҡырағай күркәләрҙе эйәләштереү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тауыҡ һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған эре йорт ҡошо. □ Индюк домашний (лат. *Meleagris gallopavo Linnaeus*). *Йорт күркәләренең себештәре. Йорт күркәләренә ем һатып алыу.*

ЙОРТ КҮРҺӘТЕҮ (йорт күрһәт-) *ҡ. этн. диал.*

1. *ҡар.* **өй туйлау.** *Яңы өйөн эшләп бөткәс, йорт күрһәтеү мәжлесе үткәрҙе. Йорт күрһәтеү мәжлесенә саҡырыу.*

2. Туйға тиклем ҡоҙаларҙы кейәү өйөнә саҡырып, ҡунаҡ итеп, бүләк биреү йолаһы. □ Обычай показа сватам дома жениха. *Ҡоҙаларға йорт күрһәтеү.*

ЙОРТ КӘЗӘҺЕ (Р.: коза домашняя; И.: domestic goat; Т.: evcil keçi) *и.*

Мамығы, һөтө һәм ите өсөн аҫрала торған мөгөҙлө, ҡыҫҡа ҡойроҡло йорт хайуаны. □ Коза домашняя (лат. *Capra aegagrus hircus*). *Йорт кәзәһе көтөү. Йорт кәзәһе аҫрау. Йорт кәзәһен бәйле тотоу.*

ЙОРТ-КӘРТӘ (Р.: изгородь; И.: fence; Т.: çit) *и. диал.*

Йортто уратҡан кәртә. □ Изгородь. *Йорт-кәртәне йүнәтеү. Йорт-кәртәне алыштырыу.*

ЙОРТ ҠАҘЫ (Р.: гусь домашний; И.: domestic goose; Т.: evcil kaz) *и. зоол.*

Эйәләштерелгән ала ҡаҙ төрө. □ Гусь домашний (лат. *Anser anser*). *Дим, Өршәк буйҙарында йорт ҡаҙын күп аҫрайҙар. Йорт ҡаҙҙарына ем.*

ЙОРТҠА ИНЕҮ (йортҡа ин-) (Р.: стать примаком; И.: become a lodger by marriage; Т.: hanım köylü olmak) *ҡ.*

1. *этн.* Өйләнеп, ҡатындың ата-әсәһе һ. б. менән бергә йәшәргә инеү. □ Стать примаком *(поселиться в доме невесты).* ■ *Кейәүҙәре ҡайны йортона инде, сөнки етем генә егет ине.* Экспедиция материалдарынан.

2. *Кем* менәндер йәшәргә урынлашыу. □ Поселиться *у кого-л.* в доме.

ЙОРТ-ҠАРАЛТЫ (Р.: дом и надворные постройки; И.: home and outbuildings; Т.: ev ve müştemilatı) *и. йыйн.*

Йорт һәм бөтә булған ҡаралты. □ Дом и надворные постройки, домашнее хозяйство. ■ *Оҙаҡламай һалҡын ҡыш та етә, йорт-ҡаралтыны йүнәтергә, етерлек аҙыҡты йыйнап ҡуйырға кәрәк, ҡар аҫтынан бер нәмә лә эҙләп алып булмай.* З. Ураҡсин.

ЙОРТ-ҠУРА (Р.: дом и надворные постройки; И.: house and outbuildings; Т.: ev ve müştemilatı) *и. йыйн.*

Йорт һәм бөтә кәртә-ҡура. □ Дом и надворные постройки. ■ *Торлағың киң булып та, йөрәгең тар икән, йорт-ҡураңа барыбер ҡот ҡунмаясаҡ.* Р. Бикбаев. *Тәүге йорт-ҡура Гәрәй ҡарттыҡы.* М. Хужин.

ЙОРТ ҠОШТАРЫ (Р.: домашние птицы; И.: domestic birds; Т.: evcil kuşlar, kümes hayvanları) *и. зоол.*

Ите, йомортҡаһы, мамығы өсөн хужалыҡта аҫрала торған ҡоштар (мәҫәлән, *тауыҡ, күркә, өйрәк, ҡаҙ*). □ Домашние птицы. *Хәҙер ауылдарҙа йорт ҡоштары күбәйҙе. Йорт ҡоштарын арттырыу. Йорт ҡоштары аҫрау.*

ЙОРТ ҠУЯНЫ (Р.: кролик; И.: rabbit; Т.: evcil tavşan) *и. зоол.*

Йортта аҫрай торған оҙон ҡолаҡлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло кимереүсе йәнлек. □ Кролик (лат. *Oryctolagus cuniculus*). *Йорт ҡуяндары аҫрау. Йорт ҡуяндары тотоу.*

ЙОРТ-МИЛЕК (йорт-милке) (Р.: дом и надворные постройки; И.: home and outbuildings; Т.: mülk) *и. йыйн.*

Йорт һәм бөтә булған милек; йорт-мөлкәт. □ Дом и надворные постройки; домашнее хозяйство. ■ *[Эткол:] Уларҙың [Сураголдарҙың] илде буҭап, халыҡты ҡотортоп йөрөүенә, шул арҡала аңламаҫтан илгә сығып йорт-милеккә ут һалып тәләф итмәһен тип һеркелдәймен.* Т. Хәйбуллин.

ЙОРТ-МӨЛКӘТ *и. ҡар.* **йорт-милек.** ■ *Йорт-мөлкәтенең, ишле мал-тыуарының именлегенә ҡул һелтәп, ул [Шәрғиә] өйҙә бикләнеп ятты.* Ә. Хәкимов.

ЙОРТ-МУЗЕЙ (Р.: дом-музей; И.: memorial house; Т.: Müze Evi) *и.*

Күренекле бер кешенең тормошона бәйле булып, шуның музейына әйләндерелгән йорт. □ Дом-музей. *С. Т. Аксаковтың йорт-музейы.* ■ *Уларҙы [кешеләрҙе] көс-хәлгә йырып үҙып, машиналар колоннаһы Туҡһанбай ауылы уртаһында һалынған йорт-музей ҡаршыһында туҡталды.* Я. Хамматов. *Әле [Фәнис Янышев] — М. Ғафуриҙың Өфөләге мемориаль йорт-музейы директоры.* «Ағиҙел», № 2, 2010. *Ошонда [һары ағаста] атаҡлы Жамбыл Жабаевтың йорт-музейы менән кәшәнәһе урынлашҡан.* М. Ямалетдинов.

ЙОРТ ӨЙӨ (Р.: летняя кухня; И.: summer cookhouse; Т.: yaz mutfağı) *и. диал.*

Йәйге аш өйө. □ Летняя кухня. *Йорт өйөн йыйыштырыу. Йорт өйөнә күсеү. Мин ҡайтҡанда, өләсәйем йорт өйөндә сәй эсеп ултыра ине.*

ЙОРТ ӨЙРӘГЕ (Р.: утка домашняя; И.: domestic duck; Т.: evcil ördek) *и. зоол.*

Сығышы ҡырағай һуна өйрәгенән булған, хужалыҡта аҫрала торған өйрәк төрө. □ Утка домашняя, кряква (лат. *Anas platyrynchа*). *Йорт өйрәктәре аҫрау. Йорт өйрәктәрен күл буйында үрсетеү отошло.*

ЙОРТ СЕБЕНЕ (Р.: муха домашняя; И.: typhoid fly; Т.: sinek) *и. зоол.*

Кеше торлаҡтарында күпләп осрай торған пар ҡанатлы, быуын аяҡлы бөжәк. □ Муха домашняя, муха комнатная (лат. *Musca domestica*). *Йорт себендәре күбәйгән. Йорт себендәрен ағыулау.*

ЙОРТ СЛИВАҺЫ (Р.: домашняя слива; И.: domestic plum tree; Т.: erik) *и. бот.*

Күгән менән алсаны һеркәләндереүҙән барлыҡҡа килгән, һалҡынға сыҙамлы слива төрө. □ Домашняя слива (лат. *Prunus domestica*). *Йорт сливаһы емеше. Йорт сливаһы ҡыуағы.*

ЙОРТСОЛ (Р.: хозяйственный; И.: thrifty; Т.: evirgen) *с.*

Йорт эшенә уңған; хужалыҡсыл. □ Хозяйственный. *Йортсол кеше. Йортсол булыу.* ■ *Уңған да, йортсол да булмаҡсы [Кәбир].* Яр. Вәлиев.

ЙОРТ СЫСҠАНЫ (Р.: мышь домовая; И.: house mouse; Т.: fare) *и. зоол.*

Кеше йәшәгән йорттарҙа көн иткән сысҡан. □ Мышь домовая (лат. *Mus musculus*). *Йорт сысҡандарына ҡаршы көрәш. Йорт сысҡандарына ағыу һалыу.*

ЙОРТ ТАУЫҒЫ (Р.: курица домашняя; И.: domestic chicken; Т.: evcil tavuk) *и. зоол.*

1. Ите һәм йомортҡаһы өсөн аҫралған йорт ҡошо. □ Курица домашняя (лат. *Gallus gallus domesticus*). *Йорт тауыҡтары аҫрау. Йорт тауыҡтарының ите тәмле була.*

2. *күсм.* Өйҙән сыҡмай ултырған кешегә ҡарата әйтелә. □ Домосед. *Йорт тауығы кеүек көнө буйы өйҙә ултыраһың, тышҡа сығып йөрөп кил әҙерәк.*

ЙОРТ ТУРҒАЙЫ (Р.: домовой воробей; И.: house sparrow; Т.: bayağı serçe) *и. зоол.*

Сыбар көрән һыртлы, аҡһыл ҡорһаҡлы, буҙ башлы ваҡ ҡош; өй турғайы, өй сыпсығы, сыпсыҡ, хәрәм турғай, буҙ турғай, ауыл турғайы. □ Домовой воробей (лат. *Passer domesticus*). *Йорт турғайҙары ем ашай. Йорт турғайҙары — короткос бөжәктәрҙең дошманы.*

ЙОРТ ҮЛӘНЕ (Р.: лапчатка гусиная; И.: silverweed species; Т.: kaz otu) *и. бот. диал.*

1. *Ҡаҙ үләне.* □ Лапчатка гусиная (лат. *Potentilla anserina*). *Йорт үләнен сабыу. Кәртәмде йорт үләне баҫты.*

2. *ҡар.* **йорт йондоҙҡайы.** *Йорт үләне сәскәһе. Йорт үләне һабағы.*

ЙОРТ ХАЙУАНДАРЫ (Р.: домашние животные; И.: domestic animals; Т.: evcil hayvanlar) *и. зоол.*

Хужалыҡ ихтыяжынан йәки эстетик маҡсаттарҙан кеше тарафынан аҫралған хайуандар (мәсәлән, *һыйыр, ат, суска, бесәй*). □ Домашние животные. *Йорт хайуандары тотоу. Йорт хайуандарының кеше тормошондағы әһәмиәте ҙур. Йорт хайуандары араһында таралған сир.*

ЙОРТ ХУЖАБИКӘҺЕ (Р.: домохозяйка; И.: housewife; house owner's wife; Т.: ev hanımı) *и.*

Өй хужаһының ҡатыны. □ Домохозяйка; хозяйка дома. *Йорт хужабикәһенең тәмле аштары. Ҡунаҡтарҙы йорт хужабикәһе ҡаршы алды.*

ЙОРТ ХУЖАҺЫ (Р.: хозяин дома; И.: house owner; householder; Т.: ev sahibi) *и.*

1. Ғаилә башлығы; йорттағы хужалыҡты алып барыусы. □ Хозяин двора, дома. ■ *Сынаяҡтарҙы теҙеп ҡуйғас, йорт хужаһы, тамағын ҡыра биреп, бер йырҙың аҙағын ниндәйҙер көйгә һуҙып йырлап ебәрҙе.* Ж. Кейекбаев. *Изге ирҙәр урыны ошо ауылда имеш, тип, был йылдар шаушыуҙар күп булғас, уларҙың йорт хужалары Яңауылға күсеп киттеләр.* Ғ. Кейеков. *Йорт хужаһы, күтәрмәнән төшөп, уларға [Тәнзилә әбейҙәргә] ҡаршы сыҡты.* М. Тажи.

2. *миф. ҡар.* **йорт эйәһе.** ■ *Йорт хужаһы яратмаған хайуанын ҡыйнай, яратҡанының ялын, йөнөн тарай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОРТ ҺАЙЫН *р. ҡар.* **өй һайын.** *Йорт һайын йөрөп сығыу.* ■ *Халыҡ етеш йәшәй, йорт һайын тиерлек автомобиль бар, эшҡыуарҙар ҙа күбәйә башланы.* «Башҡортостан», 4 февраль 2011.

ЙОРТ ҺАЛЫУ (йорт һал-) (Р.: строить дом; И.: build a house; Т.: ev yaptırmak) *ҡ.*

Үҙең йәшәр өсөн өй, йорт төҙөү. □ Строить дом. *Кирбестән йорт һалыу. Кесе улына йорт һала.* ■ *Йорт һалырға бер ҡасан да аптырап торманыҡ, малайҙар кәләш алмаҫ борон уҡ йорт һалып ҡуя инек тә, килен төшөргәс тә, йәштәрҙе әҙер өйгә айырым сығара ла ебәрә инек.* «Киске Өфө», № 47, 2011. *Халыҡ, күп ваҡыттар үткәс, ажарҙары һил булғас, ошо Ослоташ тауыморонона йорт һалып тора башлаған.* Б. Бикбай. *Бай байлығын итә: ай һайын ҡатын ала, ауыл һайын йорт һала.* Мәҡәл.

ЙОРТҺОҘ (Р.: бездомный; И.: homeless; Т.: barınaksız) *с.*

Йорт-ере булмаған. □ Бездомный. ■ *Ләкин минең аҙашырлыҡ түгел: йортһоҙ. таныштыҙ кеше аҙаша аламы ни? Миңә ҡайҙа ла барыбер.* Картотека фондынан. *Ул [Байрамбикә] донъянан биҙгән, йортһоҙ, төбәкһеҙ ҡырағай кеше кеүек, кеше тыны ишетелмәгән урындарҙа, бер ауҡамдан икенсе ауҡамға күсеп, ҡыр еләге, үлән тамырҙары ашап көн итә.* Халыҡ ижадынан.

ЙОРТҺОҘ-ЕРҺЕҘ (Р.: бездомный; И.: homeless; Т.: barınaksız) *с.*

Йорт-ере, хужалығы булмаған. □ Бездомный, безземельный. *Йортһоҙ-ерһеҙ кеше. Йортһоҙ-ерһеҙ ҡалыу. Янғын сығып, йортһоҙ-ерһеҙ торол ҡалды.*

ЙОРТ ҺУПАЙҘЫҺЫ (Р.: сыч домовой; И.: little owl; Т.: kukumav) *и. зоол.*

Ауыл тирәһендә йәки ҡаралтыға оялай торған, эңерҙә ауға сыға торған һупайҙы. □ Сыч домовой (лат. *Athene noctua*). *Йорт һупайҙыһы ояһы. Һуңғы йылдарҙа йорт һупайҙыһы күренмәй башланы.*

ЙОРТ ҺУПАЙЫ (Р.: сплюшка; И.: European scops owl; Т.: İshakkuşu) *и. зоол. диал.*

Ябалаҡтар ғаиләһенә ҡараған, сыйырсыҡтан ҙурыраҡ, ҡолаҡһыҙ, йомро башлы төнгө ҡош; һыҙғырыҡ ябалаҡ. □ Сплюшка, обыкновенная совка (лат. *Otus scops*). *Йорт һупайҙары оса. Йорт һупайы йомортҡаһы. Йорт һупайы бала сығара.*

ЙОРТ ЭЙӘҺЕ (Р.: домовой; И.: goblin; Т.: Ev İyesi) *и. миф.*

Йорттоң именлеген тәшкил иткән мифик зат. □ Домовой. ■ *Батыр ҙа, әсәһе лә юҡ-барға ышанмай ине, әммә ошо сәйер*

ваҡиғаларҙан һуң, әллә йорт эйәһе буламы икән, тип шикләнә башланылар. Н. Ғәйетбаев. *Йорт һалғанда, уның дүрт мөйөшөнә шул йорт эйәһе өсөн йоморҡа киҫеп һалыуҙың да .. мәғәнәһен шулай [зыян килтереүҙән һаҡланыу сараһы тип] аңлатырға була.* Ә. Сөләймәнов. *Һәр йорттоң эйәһе, хужаһы була.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОРТ ЭТЕ (Р.: дворняжка; И.: mongrel (dog); Т.: avlu köpeği) *и. һөйл.*

Нәҫелһеҙ урам эте. □ Дворняга, дворняжка. *Йорт этен ашатыу. Йорт этен ҡыуып сығарыу.*

ЙОРТ ӘБЕЙЕ *и. миф. ҡар.* **йорт эйәһе.** ■ *Йорт әбейе шағыр-шоғор баҫып йөрөй, ти.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОРТ-ЮШАН (Р.: домашнее хозяйство; И.: household; Т.: ev işleri) *и. йыйн.*

Кемдең йәки *нимәнеңдер* ҡарамағында булған бөтә байлыҡ; милек, мөлкәт. □ Домашнее хозяйство. *Йорт-юшаның именме? Йорт-юшанды барлау.*

ЙОСОП (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ырыуының араһы. □ Родовое подразделение башкир-катайцев. *Улар йосоп араһынан.*

ЙОСОП ПӘЙҒӘМБӘР (Р.: пророк Юсуф; И.: prophet Joseph; Т.: Yusuf peygamber) *и. миф.*

(баш хәреф менән) Ислам дине менән килеп ингән пәйғәмбәрҙәрҙең береһе. □ Пророк Юсуф.

ЙОҪОҠ I (йоҫоғо) *и. ҡар.* **юҫыҡ.** *Үҙ йоҫоғонда донъя көтөү. Эш йоҫоғона өйрәнеү. Йоҫоҡ белмәү.* ■ *Һаҡмар ҡәлғәһе артта ҡалды. Тәғәйен йоҫоҡ юҡ ине.* Ғ. Ибраһимов. *Юлдар ерҙән дә, күктән дә йүнәлгән бер йоҫоҡҡа. Тоташырҙар төҫлө улар алыҫтағы офоҡта.* С. Әлибаев.

ЙОҪОҠ II (Р.: воспитанный; И.: educated, civil; Т.: terbiyeli) *с. диал.*

Әҙәпле, йүнле. □ Воспитанный, учтивый, вежливый, почтительный, деликатный. *Йоҫоҡ кеше. Йоҫоҡ булыу.*

ЙОҪОҠЛАП *р. диал. ҡар.* **йүнләп.** *Йоҫоҡлап мал йөрөмәй. Йоҫоҡлап ҡайтмай. Йоҫоҡлап эшләмәй.*

ЙОҪОҠЛАУ (йоҫоҡла-) *ҡ. ҡар.* **юҫыҡлау.** *Ауыл яғына йоҫоҡлау. Ҡайтыр яҡҡа йоҫоҡлау. Өйгә табан йоҫоҡлау.*

ЙОҪОМБАШ *и. диал. ҡар.* **торомбаш.** ■ *Боҙ яуһа, урамға йоҫомбаш сығарып ташлау йолаһы булған.* Башҡорттарҙың им-том китабынан.

ЙОТ I [дөйөм төрки *йут* 'аслыҡ'] (Р.: голод; И.: hunger; Т.: açlık) *и.*

1. Ҡоролоҡ булып, илгә килгән аслыҡ. □ Голод, голодное бедствие *(о массовом падении скота, неурожае и т.п.).* / Голодный. *Йот килеү. Йотҡа ҡалыу.* ■ *Аҡһаҡалдарҙың имеш-мимешенә ҡарағанда, егерме беренсе йылғы йоттан һуң ауыл ишләнә, халыҡ ишәйрәп үрсей башлаған, тирәк ултырған ер .. Бөҙрә Фәткулланың атаһына бирелә.* Ә. Хәкимов. *Ил йот күрһә, уларҙы ла [ағастарҙы] шул йот йыға. Ил ҡот күрһә, уларға ла шул ҡот йоға.* М. Һибәт. ● *Илеңә йот килһә, малыңа көс.* Әйтем.

2. Һуңғы сиккә еткән мохтажлыҡ; юҡһыҙлыҡ. □ Бедствие; нужда, бедность. ■ *Баҫҡаҡ килһә, йот килә, ҡот китә.* К. Мәргән. ● *Бер килеп — йот, бер килеп — ҡот.* Мәҡәл. *Ҡот килгән өйҙән йот китә.* Мәҡәл. *Белемлегә йот юҡ, белемһеҙгә ҡот юҡ.* Мәҡәл.

3. *миф.* Аслыҡ, ярлылыҡ эйәһе. □ Демон, дух голода, бедствия. *Тирә-яҡҡа үлем сәсеп, йот килә.*

ЙОТ II [дөйөм төрки *йут-, үйүт-, йувут-*] (Р.: голодный; И.: hungry; Т.: aç) *с.*

Аслыҡ, мохтажлыҡ булған. □ Голодный. *Йот йыл. Йот заман.* ■ *[Унбашы] шешмә ҡабаҡтарын ҡалҡытып, йот күҙҙәре менән яңы килгән яугирҙы баштан-аяҡ үгертеп ҡарап сыҡты ла, умырып алған итен сәйнәй-сәйнәй, һорау бирҙе.* К. Мәргән.

ЙОТ III (Р.: прожорливый; И.: voracious; Т.: obur) *с. диал.*

Ашамһаҡ, бирән, мәскәй. □ Прожорливый. *Йот кеше. Йот мал.*

ЙОТАТЫУ I (йотат-) *ҡ. диал. ҡар.* **йөҙәтеү 1, 2.** *Йотатып бөтөү. Таптырып*

йотатыу. Эшләтеп йотатыу. Талап йотатыу. ■ *Яуҙар менән төрлө яньялдар, афәттәр ҡалҡа. Йорт-ерҙе йә йото йотата, үләте миктәтә, вабаһы вайран итә.* Ғ. Хөсәйенов. *Ямсы йөҙ башы ла — торғаны менән ҡараҡ. Йотата тирә-яҡты.* Ә. Хәкимов.

ЙОТАТЫУ II (йотат-) (Р.: уничтожить; И.: destroy; Т.: yok etmek) *ҡ. диал.*

1. Бөтөрөү, ҡоротоу. □ Уничтожить. *Донъяны йотатыу. Барлыҡ матурлыҡты йотаталар.*

2. Һиҙҙермәйенсә генә аҙлап урлау. □ Незаметно, понемногу красть. *Игенде йотаталар. Кассалағы аҡсаны йотатыу.*

ЙОТАУ (йота-) *ҡ. диал. ҡар.* **йөҙәү I, 1, 2.** *Аҡсаға йотау. Юлдан йотап ҡайтыу. Ауыр эштән йотап бөтөү.*

ЙОТАЦИЗМ [рус. < гр. *iota*] (Р.: йотацизм; И.: iotacism; Т.: iyotakizm) *и. лингв.*

Тел ғилемендә [j] (йот) өнөнөң ҡулланылышы; [j] (йот) өнө, ғәҙәттә, һүҙҙәрҙә икенсе өн менән алмаштырыла йәки төшөрөп ҡалдырыла. □ Йотацизм. *Йотацизм күренеше. Йотацизм — төрки телдәренә хас күренеш.*

ЙОТ ЙЫЛ (Р.: голодный год; И.: lean year; Т.: kıtlık yılı) *и.*

Ҡоролоҡ йәиһә ямғырҙарҙың күп яуыуы һөҙөмтәһендә аҙыҡҡа, игенгә мохтажлыҡ кисергән йыл. □ Голодный год. ■ *Билдәле яҙыусы Рәлис Ураҙғоловтың «Аслыҡ» исемле китабын ҡулыма алғас, оло быуын кешеләренең йот йылдары тураһында һөйләгәндәре иҫкә төшөп, тән семерләп китте.* «Башҡортостан», 27 декабрь 2011.

ЙОТ КЕШЕ (Р.: обжора; И.: glutton; Т.: obur) *и. диал.*

Бирән, мәскәй, убыр. □ Обжора. *Йот кешеләй барыһын да ашай. Йот кеше булып сыҡты.*

ЙОТ КИЛЕҮ (йот кил-) (Р.: падеж скота; И.: loss of cattle, cattle-plague, murrain; Т.: kırcın) *ҡ.*

Аслыҡтан малдың күпләп үлеүе, ҡырылыуы. □ Падеж скота *(от голода). Ауылға йот килде. Ямғыр яумағанлыҡтан, үлән үҫмәне быйыл, тирә-яҡҡа йот килде.*

ЙОТ КҮҘ (Р.: дух голода; И.: spirit of hunger; Т.: Kıtlık İyesi) *и. миф.*

Аслыҡ эйәһе. □ Дух голода. ■ *Йот йылдары йот күҙ күп осто, ауылдар юҡҡа сыҡты.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОТКО *и. диал. ҡар.* **йәлдәү.** ■ *Мырҙаның өҫкә инеп торған ерен йотко тиҙәр беҙҙә.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОТКО ҠАРМАҠ (ҡармағы) (Р.: мелкий рыболовный крючок, заглотыш; И.: small fishing hook; Т.: küçük çengel) *и.*

Иң ваҡ ҡармаҡ. □ Мелкий рыболовный крючок, заглотыш. *Балыҡты йотко ҡармаҡ менән тотоу. Йотко ҡармаҡ һатып алыу.*

ЙОТҠОЛАУ (йотҡола-) (Р.: глотать временами или многократно; И.: swallow from time to time; Т.: yutkunmak) *ҡ.*

Ваҡыты-ваҡыты менән йотоу. □ Глотать временами. ■ *Алыр сиктә Сәмиғулла сынаяҡ өҫтөнөң төбөнә генә һалып йотҡоланы.* Ж. Кейекбаев. *[Әхмәҙулла] ике аҙна бит инде тәғәм ризыҡ ҡапҡаны юҡ. Тик һыу ғына йотҡолай.* Р. Солтангәрәев.

ЙОТҠОЛОҠ I (йотҡолоғо) [боронғо төрки *йут-*] (Р.: глотка; И.: gullet; Т.: yutak) *и. анат.*

Ҡыҙыл үңәстең иң өҫкө өлөшө. □ Глотка, зев. *Йотҡолоҡ ауыртыу. Йотҡолоҡҡа килеп төйөлөү. Йотҡолоҡ ауырыуҙары.* ■ *Икенсенән, уның [ой хужаһының] кәтғи рәүештә тамаҡ ҡырғылауы йотҡолоғоноң тәҡәтһеҙ ҡымырйыуын аңлата ине.* М. Ямалетдинов. *Уйымда — Минзифам, йөрәгемдә — әле генә утлы ярсыҡ булып ҡаҙалған ҡот осҡос хәбәрҙең күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғыһы, йотҡолоҡҡа тегеләй ҙә, былай ҙа китмәйенсә торған таш киҫәге.* Ш. Биҡҡол.

ЙОТҠОЛОҠ II (йотҡолоғо) (Р.: ангина; И.: quinsy, angine; Т.: anjin) *и. мед.*

1. Тамаҡ шеше ауырыуы. □ Ангина. *Йотҡолоҡҡа ҡаршы дарыу алыу. Йотҡолоҡ менән ауырыу. Йотҡолоҡтан дауалау.*

2. Ҡыҙыл үңәстең яман шеше. □ Рак пищевода. *Йотҡолоҡтан интегеү. Йотҡолоҡҡа операция эшләү.*

3. *миф.* Тамаҡ ауырыуы эйәһе. □ Дух болезни горла.

ЙОТҠОЛОҠ III (йотҡолоғо) (Р.: малёк; И.: small fry; Т.: balık yavrusu) *и.*

Ыуылдырыҡтан яңы сыҡҡан ваҡ балыҡ; селбәрә. □ Малёк. ■ *Һыу ситендә ҡыҫҡырышып, һыуға ҡаҙалып төшөп йотҡолоҡ тотоусы аҡсарлаҡтар Сәғиттең башына уй индермәне.* А. Таһиров. *Йылы һыуға йыйылып, мыжғып ятҡан сабаҡ балалары — әнә осондай ғына йотҡолоҡтар – ҡайҙа ҡасырға белмәй көтөүе менән ары-бире йөҙҙөләр.* З. Биишева.

ЙОТҠОЛОҠ IV (йотҡолоғо) (Р.: начало дымохода; И.: beginning of a chimney neck; Т.: baca başlığı) *и. диал.*

Ыҫлыҡ башы. □ Начало дымохода. *Йотҡолоҡто таҙартыу. Йотҡолоҡҡа ҡором ултырыу.*

ЙОТҠОЛОҠ БУЛЫУ (йотҡолоҡ бул-) (Р.: болеть *(о горле)*; И.: have a sore throat; Т.: damak şişmesi) *ҡ.*

1. Тамаҡ ауыртыу. □ Болеть *(о горле)*, заболеть ангиной. *Йотҡолоҡ булып, тамағыма аш барманы. Туңдырма ашап, йотҡолоҡ булды.*

2. *миф.* Йотҡолоҡ эйәһе ҡағылыуҙан ауырыу. □ Заболеть от духа болезни горла. ■ *Йотҡолоҡ булһа: «Тамағым ауырта, тау йотам, тамағым ауырта, таш йотам, тфу, тфу, тфу!» — тиһәң, йотҡолоҡ эйәһе китә.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОТҠОЛОҠ ИМЛӘҮ (йотҡолоҡ имлә-) (Р.: заговор болезней горла; И.: spell against a sore throat; Т.: damak şişmesini büyü ile tedavi etmek) *ҡ. миф.*

Тамаҡ ауыртыуын имләү ысулы. □ Заговор болезней горла. ■ *Йотҡолоҡ имләгәндә: «Тауҙы, ташты йотам — хуп!» — тип өс тапҡыр төкөрөгөңдө йотоп төкөрәһең.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙОТҠОЛОҠ ӨҪТӨ (Р.: носоглотка; И.: nasopharynx; Т.: yutak burun boşluğu) *и. анат.*

Йотҡолоҡтоң өҫкө бүлеге. □ Носоглотка. *Йотҡолоҡ өҫтөнөң шешеүе. Йотҡолоҡ өҫтөнөң яман шеше.*

ЙОТҠОС (Р.: малёк; И.: fish fry; Т.: balık yavrusu) *и. диал.*

1. Селбәрә. □ Малёк. *Һыуға ингәндә балалар шул йотҡосто йота. Йотҡос йотоусы шәп йөҙә.*

2. Сүмесбаш. □ Головастик. *Йотҡостар һөҙөү. Йотҡостар ятыу ситен үҙ итә.*

ЙОТЛАУ (йотла-) [боронғо төрки *йут-*] (Р.: голодать; И.: starve; Т.: açlık çekmek) *ҡ. һөйл.*

Аслыҡ кисереү; асығыу. □ Голодать, бедствовать. *Мал йотлап ҡырылды. Халыҡ йотлай. Барлыҡ ил йотлай.*

ЙОТЛОҒОУ (йотлоҡ-) (Р.: есть взахлёб; И.: choke (with); Т.: boğulur gibi olmak) *ҡ.*

1. Тuйымаҫтай булып, ҡылҡынып ашау, эсеү, һулау һ. б. □ Есть, пить, вдыхать взахлёб. *Йотлоғоп ашау. Йотлоғоп һыу эсеү.* ■ *Сынтимер йотлоғоп-йотлоғоп тәмәкеһен тарта, Мәликә ышаныр-ышанмаҫ, шикләнеп, уның буш еңенә күҙ һала.* Ә. Хәкимов. *Сөнәғәт һаман әйтер һүҙен әйтә алмай интекте, үҙе ҡып-ҡыҙыл булды, йөрәге дөпөлдәп тибә башланы, алҡымына нимәләр килеп тығылған төҫлө булды, тамағы йотлоҡто.* Ж. Кейекбаев.

2. Асығып ауыҙ һыуы йотоу. □ Сильно проголодаться; глотать слюну от голода. *Асығып йотлоғоу. Һыуһап йотлоғоу. Йотлоғоп ҡуйыу.*

3. *күсм.* Бөтә күңел менән бирелеү. □ Захлёбываться; делать *что-л.* самозабвенно, взахлёб. *Йотлоғоп эшләү. Йотлоғоп көтөү. Балалар йотлоғоп әкиәт тыңлай.* ■ *Йәнен бирерҙәй булып яратҡан, .. уға тәүге һәм һуңғы тапҡыр күргәндәй йотлоғоп ҡарап торған Дилбәрҙең уның [Харистың] ҡағылыуына башы әйләнеп китте.* Г. Ғиззәтуллина. *[Юламан] Ырымбурҙың үҙендә баҫылған йә хатта Ҡазандан килгән газета-журналдарҙы йотлоғоп уҡыны.* Ә. Хәкимов. *Күптән түгел генә йотлоғоп доклад тыңлай, ҙур мәсьәләләр хәл итергә йыйылына торған йәштәрҙең клубты ҡалдырып китеүҙәренә ун минут та ваҡыт үтмәне.* И. Насыри.

ЙОТЛОҒОШОУ (йотлоғош-) *ҡ. урт. ҡар.* **йотлоғоу.** *взаимн. от* **йотлоғоу**. ■ *Хәҙер был нефть әллә ҡайҙарға барып еткәндер, күп ҡалалар янында әсәр һыу һурҙыра торған*

насостарҙы туҡтатып ҡуйғандарҙыр, кешеләр һыуға йотлоғоуып ултыраларҙыр һымаҡ күренде. Р. Солтангәрәев.

ЙОТЛОҠ I (йотлоғо) (Р.: голод; И.: hunger; Т.: açlık) *и.*

Ҡоролоҡ булып, илде ас иткән хәл; йот. □ Голод. / Голодный. *Йотлоҡ килеү. Йотлоҡ башланыу.* ■ *[Өләсәһе – Юлдашҡа:] Бындай ямғырһыҙ ҡоро йылда борон илгә бик яман йотлоҡ килә торғайны.* З. Биишева. *Ыҙғыш-талаштың илгә йотлоҡ килтереүен үҙ елкәбеҙҙә күп татыныҡ.* Н. Мусин. *Бик ҡаты ҡытлыҡ, йотлоҡ, ауырыу башлана.* Ә. Вахитов. *Бына бер заман йотлоҡ килгән: иген уңмаған, бесән үҫмәгән.* Әкиәттән.

ЙОТЛОҠ II (Р.: голодный; И.: hungry; Т.: aç) *с.*

Аслыҡ, мохтажлыҡ булған. □ Голодный. *Йотлоҡ йыл.* ■ *[Аҡбикәнең] ире, өс улы ҡот осҡос фажиғәгә тарыған: йотлоҡ йылды яман ҡырғынға эләгеп, барыһы ла бер юлы тиерлек үлеп бөткәндәр.* И. Ноғоманов.

ЙОТЛОҠТОРОУ (йотлоҡтор-) (Р.: привлекать *кого-что*; И.: attract; Т.: çekmek) *ҡ.*

Кешенең уй, күңелен үҙенә йәлеп итеү. □ Привлекать *кого-что к кому-чему,* вовлекать *кого-что во что. Йыр йотлоҡтора. Китап үҙенә йотлоҡтора. Эш йотлоҡтора.*

ЙОТМА *и. диал. ҡар.* **йотҡолоҡ.** ■ *Йотма сиренән үлде бабайы.* Экспедиция материалдарынан.

ЙОТОҒОУ (йотоҡ-) (Р.: нуждаться; И.: need; Т.: ihtiyaç içinde olmak) *ҡ.*

1. Ҙур мохтажлыҡ кисереү, *нимәлер* булмауҙан яфаланыу. □ Испытывать недостаток, нуждаться. *Утынға йотоғоу. Аҡсаға йотоғоу. Эсәр һыуға йотоғоу.*

2. Аслыҡ кисереү; асығыу. □ Голодать. *Аслыҡтан йотоғоу. Бала йотоҡто.* ■ *Бүре күҙле яуыздың, йотоҡҡан ҡанлы ауыҙҙың ян һөйәген аҡтарҙыҡ, ил приказын атҡарҙыҡ.* Р. Ниғмәти. *Улар ҙа [атайҙар ҙа] бит, ғүмер буйҙарына мәңге бил бөгөп тә, тир түгеп тә, имәк төҫө күрмәй йотоҡҡан.* Ш. Бикҡол.

ЙОТОҠ I (Р.: нуждающийся; И.: needy; Т.: yoksul) *с.*

Ныҡ мохтажлыҡ кисергән, етешһеҙ булған. □ Нуждающийся, испытывающий нужду. *Йотоҡ булыу. Йотоҡ ир. Зәрә йотоҡ та баһа.*

ЙОТОҠ II (йотоғо) (Р.: обжора; И.: glutton; Т.: obur) *и. диал.*

Мәскәй. □ Обжора. *Был йотоҡ бөтә ашты ашап бөткән. Йотоҡ кеүек ашай.*

ЙОТОҠЛАНЫУ (йотоҡлан-) (Р.: нуждаться; И.: need; Т.: gereksinmek) *ҡ. һөйл.*

Нимәгәлер ныҡ мохтажлыҡ кисереү. □ Нуждаться, испытывать нужду. *Йотоҡлана барыу. Йотоҡланып китеү. Ҡормош йотоҡлана башланы.*

ЙОТОҠТОРОУ (йотоҡтор-) (Р.: заставлять нуждаться; И.: make need; Т.: ihtiyaç içinde bırakmak) *ҡ. һөйл.*

1. *Нимәгәлер* мохтаж итеү, мохтаж итеп интектереү. □ Заставлять нуждаться. *Бесәнһеҙ йотоҡтороу. Ғаҙһыҙ йотоҡтороу. Һыуһыҙ йотоҡтороу.*

2. Астан интектереү; асыҡтырыу. □ Обрекать на голод. *Балаларҙы йотоҡтороу. Малды йотоҡтороу.*

ЙОТОЛОУ (йотол-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йотоу.** *страд. от* **йотоу.** *Утрауҙар диңгеҙ тарафынан йотолдо. Тупраҡтағы азот һыу менән йотолдо.* ■ *Бер ике секундтан һуң был тауыштар урманға инеп йотолдолар.* Д. Юлтый. *Тиҙҙән конференция ҙур мәсьәләләр сиселеүен көткән ауыр проблемалар эсенә инеп йотолдо.* И. Насыри. ● *Икмәк сәйнәлмәйенсә йотолмай.* Мәҡәл.

2. Һеңеп, батып, эскә инеү. □ Погружаться. ■ *Улар [өйҙәр] ҡыш миҙгелендә, бөтөнләй тигәндәй түбәһенә тиклем ҡарға күмелеп, ергә йотолған төҫлө күренәләр.* Т. Хәйбуллин. *Һеңрән ырыуы тора-бара әкренләп Тамъян иле тарафынан йотолорға тейеш.* К. Мәргән. *Ә ҡалғаны – зәңгәр тулҡын һаны – йылдар упҡынында йотола. Тәүге хистәр, тәүге кистәр генә ай серендә һаҡлап торола.* Р. Ғарипов.

3. *күсм.* Бөтә күңел менән бирелеү; йотлоғоу. □ Делать *что-л.* самозабвенно; погрузиться. *Йотолоп һөйләү. Йотолоп эшләү. Йотолоп яҙыу. Йотолоп ҡарау.* ■ *Күк тирәгем, әллә ысынлап та ғашиҡ булдыңмы һин ғүмергә? Ниңә, шул тиклем дә йотола-йото-*

ла, карап торайың һин Иҙелгә?! А. Игебаев. *Йәш бер катын йотолоп тыштан күҙләй, һөйәлгән дә тәҙрә ситенә.* Ғ. Байбурин.

ЙОТОМ I (Р.: глоток; И.: swallow; gulp; Т.: yudum) *и.*

Бер йоторлоҡ күләм. □ Глоток. *Бер йотом һыу. Бер йотом сәй.* ■ *[Бер карт:] Бер йотомдай каным бар, әлберәгән тәнем бар; һөйәк-һаяк кыйралған, тик таркалмаҫ һыным бар.* «Урал батыр». *[Аҫылгужа тархан] башын калкытып, бер-ике йотом кымыҙ эсте, һимеҙ генә бер калъя ит һоғонол куйҙы.* К. Мәргән. *Андыҙ һыуын ялғашта һыуыткас, ерәнсәй шулай ҙа еҫкәп караны, ләкин бер йотом да эсмәне.* Ж. Кейекбаев.

ЙОТОМ II *и. диал. кар.* **кылтамак**. *Йотом булып, ашай алмай үлеп китте. Йотомға операция эшләү.*

ЙОТОМЛАУ (йотомла-) (Р.: делать глоток; И.: make a gulp; Т.: yudumlamak) *к.*

Йотом эшләү; йотом-йотом итеү. □ Делать глоток, прихлёбывать, пить глотками. *Йотомлап кына эсеү.* ■ *Карсык һыуҙы ҙур-ҙур йотомлап ашык-бошок кына эсте лә, йөрәген баҫып, ишеккә йүнәлде.* Т. Ғарипова. *Закир айранды оҙак ултырып, яйлап, йотомлап кына эсеп бөттө.* З. Биишева.

ЙОТОМЛОҠ (Р.: количество *чего-л.* на (один) глоток; И.: swallow; Т.: yudumluk) *с.*

Йотоп ебәрерлек. □ Количество *чего-л.* на (один) глоток. *Бер йотомлоҡ сәй.* ■ *Әсәләре эскә баткан күҙҙәрен яна торған утка текәгәндәр, аталарҙың берәй генә йотомлок булһа ла аҙык килтереүҙәрен көтәләр.* А. Таһиров.

ЙОТОМОС *и. кар.* **селбәрә.** *Йотомос һөҙөү.* ■ *Уларҙың [малайҙарҙың] кайһылары, усы менән һөҙөп, вак кына балык селбәрәләре — йотомос торорға маташа.* Н. Мусин.

ЙОТОНОУ (йотон-) (Р.: делать глотательные движения; И.: swallow; Т.: yutkunmak) *к.*

1. Йоткан хәрәкәт яһау; кылкыныу. □ Делать глотательные движения. *Йотонол ултырыу. Йотонол алыу. Асығып йотоноу.*

2. *кусм.* Үҙләштерергә, кулға төшөрөргә кыҙыкһыу; тамшаныу. □ Смотреть *на что-л.* с завистью, зариться. *Йотонол йөрөү. Йөҙ һумды күп күреп йотоноу.*

3. *кар.* **йотлогоу 3**. *Йотонол карау. Йотонол тыңлау. Йотонол һөйләү.*

ЙОТОНОШОУ (йотонош-) *к. урт. кар.* **йотоноу.** *взаимн. от* **йотоноу.** *Йотоношол карау. Йотоношол һөйләү.* ■ *Урал һүҙен барыһы йотоношол тыңлаған.* «Урал батыр».

ЙОТОУ (йот-) [боронғо төрки *йут-*] (Р.: глотать; И.: swallow; Т.: yutmak) *к.*

1. *Нимәнелер (ашамлык, эсемлекте һ. б.)* мускулдар ярҙамында ауыҙҙан кыҙыл үңәскә һәм ашкаҙанға оҙатыу. □ Глотать, проглатывать, заглатывать. // Глотание, проглатывание, заглатывание. *Сәй йотоу. Йотоп ебәреү. Сәйнәмәй йотоу. Йотоу хәрәкәттәре.* ■ *Кымыҙҙы бер-ике йотоу менән Ғилмиязаның күкрәктәре киңәйеп киткәндәй булды.* Н. Мусин. *Тыш та мыш тышылдашып, ул [Бейеш] калған иттең һәр кабымын кыйынлык менән сәйнәп йотто.* Я. Хамматов. *Тәмле тамак Якуп хатта, ирендәрен сәпелдәтеп, һеләгәйен йотоп куйҙы.* М. Кәрим. ● *Тапһаң — тота бел, капһаң — йота бел.* Мәҡәл. *Бер йоткансы, ике йоткан, өсөнсөһөндә — башын әлмәккә тыккан.* Мәҡәл. *Сәйнәгәндән йоткан якшы.* Мәҡәл. *Бер төкөргән төкөрөгөңдө кире йотма.* Мәҡәл. *Тәүәккәлләгән — таш йоткан.* Мәҡәл.

2. *һөйл.* Ауыҙға алыу; ашау. □ Есть. *Аш йотоу.* ■ *Уралды ла йоторға койроҡ менән һуккан, ти, Урал урап йыландың койроғонан тоткан, ти.* «Урал батыр». *Килен ат муйынынан камыткын һалдырып ырғыта. Убырлы әбей быны ла йота.* Әкиәттән. ● *Алдыңа килгән ашты йота бел.* Мәҡәл. *Ашымды йотоп ултырыр, ашъяулығымды йыртып ултырыр.* Мәҡәл. *Балыкты кылсығы менән йотмайҙар.* Мәҡәл.

3. Үпкәгә алыу; һулау. □ Глотать; дышать. *Саң йотоу. Саф һауа йотоу. Туҙан йотоу.* ■ *Шул вакыттан бирле Баланлының көмөшләнеп тулкынған кылғандары, аллыгөллө сәскәләре араһында һәр кем иркенләп, йәйрәп саф һауа йотоп йөрөй алмай.* Һ. Дәүләтшина. *Килә танһык итеп шул һауаны уртлап-уртлап йотоп алаһы.* Ғ. Аман-

тай. *Төтөн йотоп, асыу утын йотоп, батып тиргә, тояҡ саңына, күбекләнгән атта беҙ үтәбеҙ байып барған ҡояш яғына.* М. Кәрим. *Бер үк планетала йәшәйбеҙ бит, бергә йотоп төтөн, саңдарын, бергә оҙатып бер үк шәфәҡтәрен, ҡаршы алып бер үк таңдарын.* Р. Ғарипов.

4. *күсм.* Аң-зиһенгә алыу; һеңдереү. □ Впитывать, усваивать; поглощать. ■ *Флүрә беренсе рәттә ултыра, йоҙроҡтарын эйәгенә терәп, уҡытыусының һәр һүҙен йота, һәр хәрәкәтен күҙәтә.* Ш. Хажиәхмәтов.

5. Тышҡа сығармай бөтөрөү; тыйыу *(күҙ йәштәре, үпкәгә ҡарата).* □ Глотать, проглатывать *(обиды, слёзы).* *Тамаҡтағы төйөндө йотоу. Йәш йотоу.* ■ *Ул [Тимерғәле ҡарт] төйөлгән йәштәрен тышҡа сығармаҫҡа тырышҡан кеүек, уларҙы ауыр-ауыр итеп йотто.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Асыу — ағыу, йотһаң — дарыу.* Мәҡәл.

6. *күсм.* Тышҡа сығармай, эстә һаҡлау, белгертмәү. □ Сносить, выносить молча. *Барыһын да йотоу. Йотоп ҡалыу.* ■ *Ергә яткан ҡуләгә шикелле, төҫһеҙләнде Сәйҙел йөҙҙәре; Зәйнәпкә ҡараны, ниҙер әйтмәк булды, кире йотто унан һүҙҙәрен.* Ғ. Сәләм. *Беҙ бит, ҡала йөҙөндә иҫ китмәле берәй үҙгәреш күрһәк, аптырап бот сапҡан булабыҙ ҙа, ризаһыҙлығыбыҙҙы йотоп, артабан йәшәй бирәбеҙ.* М. Ҡотлоғәлләмов.

7. Үҙ эсенә һурыу, батырып, аҫта ҡалдырыу. □ Втягивать, засасывать, поглощать. // Втягивание, всасывание. *Өйөрмә йотҡан. Ҡойон йотҡан. Диңгеҙ утрауҙы йотҡан.* ■ *Һуғыш хаҡында гәзиттәрҙән уҡып ҡына белгәнгәме, һәр кайһыһының күңеле түҙемһеҙлек менән әҙәм балаларының башын меңәрләп йотоп тороусы шул мәхшәр эсенә тартыла.* Н. Мусин. *Етембай түбәнгә тәкмәсләне — уны һә тигәнсе ҡар йотто.* Б. Рафиҡов. *Торбаларҙың һыҙғырып, сыйылдап күтәрелеүе, станок деталдәренең дөбөршатыр килеп шылтырауы бында башҡа бөтә тауыштарҙы йоталар.* Ғ. Ибраһимов.

8. *күсм.* Күңелһеҙ кисерешкә дусар булыу, баштан кисереү. □ Испытывать горе, сильно переживать, горевать. *Ут йотоу. Ғазап йотоу. Михнәт йотоу.*

9. *күсм.* Юҡҡа сығарыу, һәләк итеү. □ Поглощать; губить, загубить. ■ *Ул [Камил], әлбиттә, ситтән тороп уҡыу бүлеген хуп күрҙе, сөнки ике улын һуғыш йотҡан олатаһы бик ныҡ ҡартайҙы, йонсоно.* Ә. Хәкимов. *Ә күпме ирҙәрҙе йотманы был Нөгөш ул саҡтарҙа?!* Н. Мусин. *[Фәрзәнә:] Бигерәк бөтә ирҙәрҙе йотоп бөтөрҙө, оҙаҡҡа һуҙылды был һуғыш.* Ф. Әсәнов.

10. *күсм.* Намыҫһыҙ юл менән үҙләштереү. □ Присвоить, прибрать к рукам. *Аҡсаларҙы йотто бит.* ■ *Трофим борондан да һаранырак кеше лә ул. Анау бер йылды минең бер һум ҡырҡ тинде күрәләтә йотоп китте ул.* Һ. Дәүләтшина. *Уның кино аҡсаһын да йота мыйыҡлы дошман. Был хәлдә атаһы белһә, ул яҙыр ине һуштан.* Т. Арслан.

♦ **Ел йотоу** 1) сараһыҙҙан эшһеҙ йөрөү. □ Слоняться без дела. *Ел йотоп йөрөйҙәр шунда;* 2) һыуыҡта, елдә өшөп, йонсоп йөрөү. □ Мёрзнуть в холод. ■ *Һөт-ҡатыҡ табып ашатмағас, минең бында ел йотоп йөрөүемдән ни файҙа?* Ш. Янбаев. **Ер йотҡоро** (*йәки* **йотһон**) 1) ҡарғағанда әйтелә. □ *прокл.* Чтоб земля проглотила. ■ *Бынан биш кенә йыл самаһы элек был йортта тап миңә кәрәкле бер әҙәм йәшәй ине. Ләкин ул, үҙ теләге менән тип әйтерлек теге донъяға китеп өлгөрҙө. Эх, ер йотҡоро!* С. Кулибай; 2) үҙ һүҙеңде дөрөҫләү өсөн әйтелә. □ Чтоб сквозь землю провалился! ■ *Был хәбәр әсәйемде шаҡ ҡатырҙы, күҙҙәре томраланды, маңлайындағы һырҙар тәрәнәйҙе. — Ысынмы был, Земфира? — Ер йотһон, әгәр алдаһам.* Яр. Вәлиев. **<Кеше> ашағанын йотоу** кеше ашағанда тамшаныу. □ *соотв.* Глотать слюни. ■ *Ул [командир] ас. Һалдаттарҙың ашағанын йотоп ултыра.* Д. Юлтый. **Тел өҫтөнә һалып йоторлоҡ** иҫ киткес матур; ҡалаҡҡа (ҡашыҡҡа) һалып йоторлоҡ. □ Очаровательная, изумительная *(обычно о женщине).* ■ *Һиңыҡай ҙа менән Юлдыҡайҙы тел өҫтөнә һалып йоторлоҡ.* Халыҡ ижадынан. **Уҡлау йотоу** төп-төҙ булып ҡатып ҡалған кешегә ҡарата әйтелә. □ *соотв.* Будто аршин проглотил. ■ *[Йәмғи — Фәрхиәгә:] Эй, һин, ҡара әле! Ниңә ҡаттың, уҡлау йоттоңмо әллә?* Х. Ғиләжев.

ЙОТТОРОУ (йоттор-) *к. йөкм. кар.* **йотоу 1—6.** *понуд. от* **йотоу 1—6.** *Сәй йоттороу. Дарыу йоттороу.* ■ *Әшрәфтең тағы Айыусыға киткәнен ишеткәс, Миңзифа .. тыны кыҫылып йығыла яҙҙы. Әйтерһең, ағыу йотторҙолар.* Г. Яҡупова. *Йотмаҫҡа тырышты [карт] — үңәсен бер ҡыҫып, бер ебәреп йотторҙолар.* Б. Рафиҡов.

♦ **Йән йоттороу** нык ғазаплау. □ Мучить. *Йән йоттороп туҡмау.*

ЙОФАР I (Р.: мускус; И.: musk; Т.: misk) *и.*

Ҡайһы бер йәнлектәрҙең биҙендә була торған хуш еҫле май. □ Мускус. / Мускусный. *Йофар еҫе. Йофар майы.* ■ *[Якуп] тундарын йофар менән сыландырҙы, күҙҙәренә уның һөрмә тартыр имде.* «Йософ вә Зөләйха». *Талғын ғына өргән ел ағас япраҡтарын ҡалтыратып, йофар еҫе бөрккән сәскә еҫтәрен ҡыуып биткә бәрә.* Т. Хәйбуллин. *Күктә-күктә ниҙәр бар? — Сыбар ала ҡоштар бар. — Ҡанатында ниҙәр бар? — Шәкәр менән йофар бар.* Р. Ниғмәти.

ЙОФАР II (Р.: выхухоль; И.: desman; Т.: desman) *и. зоол.*

Бөжәк ашаусылар төркөмөнә ҡараған оҙон моронло, затлы ялтыр тиреле, күл, йылға буйҙарында йәшәгән, ҡыҫҡа аяҡлы һөтимәр йәнлек. □ Выхухоль. / Выхухолевый (лат. *Desmana moschata*). *Йофар аулау.* ■ *Һыу буйында йофар күп, йофарҙан да һыуһар күп.* М. Ғафури.

ЙОФАР ГӨЛӨ (Р.: тимьян; И.: thyme; Т.: kekik) *и. бот.*

Ваҡ япраҡлы, хуш еҫле гөл. □ Тимьян (лат. *Thymus*). *Йофар гөлө ултыртыу. Йофар гөлөнә һыу һалыу.*

ЙОФАРЛЫ (Р.: мускусный; И.: musk; Т.: misk) *с.*

Йофар еҫле. □ Мускусный. *Йофарлы һабын. Йофарлы лосьон. Йофарлы крем.*

ЙОШ *с. диал. кар.* **юш.** *Йош булыу. Йош килеү.*

ЙОША *и. зоол. диал. кар.* **мышы 1.** *Йоша балаһы. Инә йоша. Ата йоша.*

ЙӨББӘ [ғәр. جبة] (Р.: верхняя одежда с широкими рукавами; И.: jubbah; Т.: dini adamların giysesi) *и. иҫк.*

Муллаларҙың киң еңле оҙон кейеме. □ Джубба *(верхняя одежда муллы с широкими рукавами).* ■ *Йәшел таяғын таянып ҡына килергә уйлап та, һуңынан ни өсөндөр йөббә кейеп кенә килгән Ырымбур муллаһы Ҡушаев та күренде.* А. Таһиров.

ЙӨГАЯҠ (йөгаяғы) (Р.: широкая низкая деревянная скамейка для постельных принадлежностей; И.: kind of wooden rack for bedding; Т.: geniş alçak peyke) *и. этн.*

Урын йыйып ҡуя торған киң, тәпәшәк ширлек. □ Широкая низкая деревянная скамейка для постельных принадлежностей. *Йөгаяҡҡа һалыу. Йөгаяҡҡа йыйыштырыу.* ■ *Көмөш сабып эшләнгән йөгаяҡ өҫтөнә урын йыйылып, нағышлы урын тартҡыһы төшөрөлгән.* Х. Ғәбитов.

ЙӨГӨЛМӘ (Р.: копытница; И.: kind of veterinary condition; Т.: hayvan hastalığı) *и. вет.*

Тояҡ араһы сейләнеп иҙелә торған мал ауырыуы. □ Копытница *(нагноение в месте раздвоения копыта). Йөгөлмә менән ауырыу. Йөгөлмәне дауалау. Һыйырҙың тояғына йөгөлмә сығыу.*

ЙӨГӨНДӨРӨҮ (йөгөндөр-) *к. йөкм. кар.* **йөгөнөү 1.** *понуд. от* **йөгөнөү 1.** ■ *[Мансур:] Беҙгә лә ҡыйын булды, иләмәгәр бирешмәнек, эште йөгөндөрмәнек, үҙең дә күрерһең.* М. Кәрим. *Алтышар ботло бесән тоҡтарын күтәреп ситкә, йөҙ аҙым ергә алып барып өйәбеҙ. Елкәне баҫа, муйын сыға, аяҡтарҙы йөгөндөрә.* А. Таһиров.

ЙӨГӨНЛӘҮ (йөгөнлә-) *к. диал. кар.* **йөгөнөкләү.** *Йөгөнләп ултырыу.* ■ *Икенсе тапҡыр төшөрә [Ҡыран батыр], ҡарсыҡ йөгөнләп ултыра.* Әкиәттән. *Ҡарабай батыр артында ҡарттар, шунан инде өлкәнерәктәр менән йәштәр йөгөнләп ултырғандар.* Эпостан.

ЙӨГӨНЛӘШЕҮ (йөгөнләш-) *к. урт. кар.* **йөгөнләү.** *взаимн. от* **йөгөнләү.** ■ *Йөгөнләшеп бер-береһенең түбыҡтарын тешләргә самалауны, һикереп теп-текә тороп сәйнәшеүме, бер-береһен уҙырға маташып, яландың бер осонан икенсе осона тиклем ҡыуышыуны — барыһын да башҡарҙы ҡолондар.* С. Ильясов.

ЙӨГӨНӨКЛӘТЕҮ (йөгөнөклəт-) *к. йөкм. кар.* **йөгөнөкләү.** *понуд. от* **йөгөнөкләү.** ■ *Һәм ул, Револь, фиркәһенең «тура һыҙығынан» илле йыл буйына тайпылмай әйҙәп барыусы, башкаларҙы ла шул «тура һыҙык»ка йөгөнөкләтеп көн күрә.* Й. Солтанов.

ЙӨГӨНӨКЛӘҮ (йөгөнөклә-) (Р.: опускаться на колени; И.: kneel; Т.: diz çökmek) *к.*

1. Тубыкты бөгөп ергә сәнсеү; тубыкланыу. □ Опускаться на колени, стоять на коленях. *Йөгөнөкләп ултырыу.* ■ *Юлай ҙа торҙо. Аласык буйына һуҙылған оҙон һикенән төшөп тормайынса, йөгөнөкләп кенә килеп, икенсе остағы өҫтәл артына сәй эсергә килеп тә ултырҙы.* Д. Шәрәфетдинов. *[Шәрғиә] шифалы үлән-сәскә һуттары эсеп, муйынына өшкөрөлгән бетеүҙәр такты, аулакта йөгөнөкләп-йөгөнөкләп иланы.* Ә. Хәкимов. *Әлибай менән Кинйә лә, табын корона килеп, аяктарын йөгөнөкләп ултырҙы.* Ғ. Ибраһимов. *Миңлеғәле Минһажевич Шаймаратов, бөтә дивизия алдында ергә йөгөнөкләп, Кыҙыл байрактың суклы мөйөшөнән үбә һәм уны байраксылар кулына тоттора.* Р. Өмөтбаев.

2. *күсм.* Баш эйеү, теҙ сүгеү. □ Опускаться на колени. // Коленопреклонение. *Дошман алдында йөгөнөкләмә.* ■ *[Гәли:] Уй-уй, иптәш сержант, атма, сержант, зинһар, карт-короно рәнйетмә! (Тубыклана, йөгөнөкләп, Ишмырҙаның аяктарын косаклай).* Й. Солтанов.

ЙӨГӨНӨҮ (йөгөн-) [боронғо төрки *чөк-*] (Р.: опускаться на колени; И.: kneel down; Т.: diz çökmek) *к.*

1. Тубыкты ергә сәнсеү; йөгөнөкләү. □ Опускаться на колени. ■ *Биле бөкрәйгән, күҙе сыпыйланған, атлағанда аяғы алға йөгөнә торған карт әшселәргә, катын-кыҙ, йәш үҫмерҙәргә эш хакы ярты иҫәп менән бирелә.* А. Таһиров.

2. *күсм.* Баш эйеү, теҙ сүгеү; йөгөнөкләү. □ Опускаться на колени. // Коленопреклонение. *Дошман алдында йөгөнмәү. Ауырлыктар алдында йөгөнмәү.* ■ *Ахырҙа Түрәбайҙың бисәһе Гөлкәй старшинаның алдына барып йөгөндө.* Т. Хәйбуллин.

3. *диал. Кемделер* йәки *нимәнелер* кеше аңынан һәм тәбиғәт көсөнән өҫтөн күреп, уға баш эйеү; табыныу. □ Поклоняться. *Юғары көстәргә йөгөнөү. Ағас һындарға йөгөнөү.*

4. Аяктан баҫа алмаҫ булыу *(тояк араһы сейләнгән ауырыу малға карата).* □ Хромать при болезни копыт *(о животных). Ат йөгөнөп йөрөй. Һыйыр йөгөнә.*

5. *диал. кар.* **сырмалыу I, 2.** *Йөгөнөп үҫеү. Бер-береһенә йөгөнөп үҫеү.*

6. *диал.* Бөлгөнлөккә төшөү. □ Разориться. *Халык йөгөндө. Ауыл халкы йөгөндө.*

7. *диал.* Төҫ ташлау, йонсоу; бөтөрөнөү. □ Утомляться, изнуриться. // Утомление, изнурение. *Йөгөнөп китеү. Ул тиклем йөгөнмә.*

ЙӨГӨНӘ КЕРЕҮ (йөгөнә кер-) (Р.: угождать; И.: please; Т.: yaranmak) *к. диал.*

Ыңғайына тороу. □ Угождать. *Балаңдың йөгөнә кермә. Аркыры төшмә, йөгөнә кер.*

ЙӨГӨРМӘ БУРАН *с. диал. кар.* **йәйәүле буран.** *Йөгөрмә буран башланды.*

ЙӨГӨРТМӘ *и. диал. кар.* **баҫырау 1.** *Йөгөртмә менән тарттырыу. Йөккә йөгөртмә һалыу. Йөктө йөгөртмә менән баҫтырыу.*

ЙӨҘ I [боронғо төрки *йүз*] (Р.: лицо; И.: face; Т.: yüz) *и.*

1. Кеше башының алғы яғы; бит. □ Лицо, лик. *Матур йөҙ. Оҙонса йөҙ. Йөҙ ағарыу. Йөҙ кыҙарыу.* ■ *Толопка уранып, елгә арка куйып, йөк өҫтөнә ултырып алған ылаусыларҙың йөҙҙәрен күреп булмай, һакал-мыйыктарына тотош боҙ каткан.* Б. Бикбай. *Айбулат сикһеҙ ҙур өмөттәр менән тулған күҙҙәрен Яланбикәнең йөҙөнә текәне.* Һ. Дәүләтшина. ● *Акыллының йөҙө әйтер, йөҙө әйтмәһә, һүҙе әйтер.* Мәкәл. *Булырҙайҙың — йөҙөнән, булмаҫтайҙың — һүҙенән (билгеле).* Мәкәл. *Йөҙ күрке — һакал, һүҙ күрке — мәкәл.* Мәкәл. *Йөҙ йыуыу менән яманлык китмәй.* Мәкәл. *Йөҙ картайһа ла йөрәк картаймай.* Мәкәл. *Йөҙө ак тип алданма, эсе кара булмаһын.* Мәкәл. *Йөҙө йәмһеҙ көҙгөнө яманлар.* Мәкәл.

2. Сырай. □ Лицо, лик; облик, вид. *Нурлы йөҙ. Йонсоу йөҙ. Йөҙ асылыу.* ■ *Григорий һәр вакыттағыса үҙенең яй һәм һалмак һүҙе, көләс йөҙө менән Юлияның яуры-*

нына уң ҡулын һалып һөйләгән һымаҡ булды. Һ. Дәүләтшина. ● *Бал бирәйем үҙеңә, балҡып сыҡһын йөҙөңә.* Мәҡәл. *Татлынан-татлы — яҡшы һүҙ, затлынан-затлы — яҡты йөҙ.* Мәҡәл.

3. *Ниҙеңдер* өҫкө яғы, өҫтө. □ Лицо, поверхность, верх *чего-л;* лицевая сторона *чего-л. Икмәктең йөҙө. Әйберҙең йөҙ яғы.*

4. *Ниҙеңдер* тышҡы яҫылығы. □ Поверхность *чего-л. Квадраттың йөҙө. Дүртмөйөштөң йөҙө. Ярымшар йөҙөнөң майҙаны.*

5. *Ниҙеңдер* киң өҫтө йәки күҙгә күренгән киңлеге. □ Поверхность *чего-л. Күк йөҙө. Һауа йөҙө. Күл йөҙө.* ■ *Күк йөҙө саф аяҙ ине. Баш өҫтөндә, зәңгәр күк бушлығында, тулы ай йөҙөп йөрөй.* М. Тажи. *Улар [ҡара ҡарғалар], һауа йөҙөн иңләп, ауылды икеөс ҡат әйләнеп сыҡтылар ҙа иген баҫыуына ҡарай юл тоттолар.* Я. Хамматов. *Оҙоная барған көндөң ҡояшы, көңгөрт еҙ табанса кеүек кенә булып, күк йөҙөндә йөҙөүендә булды.* Ғ. Дәүләтшин. *Юлсы-күскенселәр, был яңы ергә көн йөҙөндә бағырға ҡарар ҡылып, каруандарын туҡтатҡандар.* Ҡ. Аралбаев. *Күк йөҙөнән иркен ҡырға ҡояш яҡты нур һибә.* А. Игебаев. ● *Ике дәрүиш бер балаҫҡа һыйыр, ике батша ер йөҙөнә һыймаҫ.* Мәҡәл.

6. Ҡырҡа торған нәмәнең үткер ҡыры. □ Лезвие, остриё. *Бысаҡтың йөҙө. Салғының йөҙө. Ураҡтың йөҙө. Йөҙөн ҡайтарыу. Йөҙөн сығарыу.* ■ *Ағайым иһә биленә бысағын ҡыҫтырып алған, сәс алырлыҡ үткер йөҙө көн яҡтыһында йылт-йылт итә.* Д. Бүләков. *Шул ваҡыт Булат ишек башында йөҙө иңләп һалып ҡуйылған алмас ҡылысты күрә.* Әкиәттән. *Бына Таһир ситтә йоҡомһорап күҙен йомоп торған ишәктең бысаҡ йөҙө шикелле ябыҡ һыртты аша бер аяғын ташланы ла башмаҡтан да ҡайтышыраҡ ишәккә менеп ултырҙы.* Р. Өмөтбаев.

7. *кусм. Ниҙеңдер* тәҫ биреп торған тышҡы күренеше. □ Внешний вид. *Журналдың йөҙө. Ауылдың йөҙө. Ҡаланың йөҙөн матурлау.*

8. *Кемдеңдер* шәхесе йәки *ниҙеңдер* төп булмышы. □ Природа, характер, натура. ■ *Әҙәбиәтебеҙ йөҙөн күрһәтеүсе жанрҙарҙың береһе — драматургия.* Ш. Бикҡол. *М. Өмөтбаевтың шиғриәте — XIX быуат башҡорт прогрессив әҙәбиәтенең йөҙөн билдәләүсе ижад өлгөһө ул.* Г. Ҡунафин. *Башҡорт халҡының хәҙерге этник һәм культура йөҙөнөң формалашыуында ҡыпсаҡ-командар ҙур роль уйнаған.* Картотека фондынан.

9. *миф.* Кешенең күңел донъяһын кәүҙәләндергән тән өлөшө. □ Лицо, лик *(мифологизированная часть тела, на котором отражается душа, внутренний мир человека). Ҡара йөҙ.*

♦ **Асыҡ** (*йәки* **яҡты**) **йөҙ<лө>** алсаҡ, мөләйем йөҙ(лө); яҡты сырай(лы). □ Приветливый, приветливое выражение лица. ■ *Мурзин, асыҡ йөҙ менән йылмайып, Айбулатҡа бороладо.* Һ. Дәүләтшина. *Ул [Ғәли ағай] үҙенә барған кешеләрҙе асыҡ йөҙ менән ҡаршы ала.* М. Ғафури. **Икмәктең йөҙө килеү** икмәктең өҫтө ҡыҙара биреп бешеү. □ Зарумяниться *(о хлебе).* **Йөҙгә бәреү** (*йәки* **бәреп әйтеү**) йәшермәй, туранан-тура әйтеү. □ Сказать в лицо, прямо. ■ *Йыйылыш һайын Фазелетдин Әхмәтханды тәнкитләп һөйләр, уғрылығын йөҙөнә бәреп әйтер ине.* Р. Камал. **Йөҙгә ҡара яғыу** кеше алдында ғәйепте асыу, хурлау. □ Очернить, оклеветать. ■ *Оло улы [Сабирйәндең] бар ауылды күҙғатты, бар халыҡты уның затына ҡаршы аяҡландырҙы, йөҙөнә ҡара яҡты.* Р. Камал. **Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтереү** хурлыҡҡа ҡалдырыу, оятлы итеү. □ Поставить в неудобное положение. ■ *[Мулла:] Һеҙ, ирмен тигән егеттәр, йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерергә тырышмағыҙ. Батша хәҙрәттәренә тоғро хеҙмәт итегеҙ.* Һ. Дәүләтшина. **Йөҙгә серкеү килтереү.** *ҡар.* **йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтереү. Йөҙгә төкөрөү** хурлыҡ килтереү. □ Опозорить. **Йөҙҙө йыртыу** кеше алдында битәрләп ҡаты һүҙ әйтеү. □ Опозорить, публично оскорбить. **Йөҙҙән алыу** тура ҡарап ғәйепләү. □ Обвинять (открыто), обругать при людях. **Йөҙ итеү** хөрмәтләп ҡунаҡ итеү. □ Оказать гостеприимство. ■ *[Хәйерниса:] Һуғым һуймағас, ҡаҙы юҡ таһа, ҡунаҡтарҙы нисек йөҙ итербеҙ икән?* Б. Бикбай. **Йөҙ йыйырыу** *нимә* йәки *кем менәндер* ризаһыҙлыҡ белдереү. □ Морщить лицо. **Йөҙ күрһәтеү** ҡунаҡ итеп, үҙенде

яҡындан таныштырыу. □ Приглашать гостей для близкого знакомства. **Йөҙ менән боролоу** 1) алғы яҡ менән әйләнеү. □ Повернуться лицом. ■ *Флүрә көлдө, унан уйсанланды, Вил Ваһаповичҡа йөҙө менән боролдо.* Ш. Хажиәхмәтов; 2) иғтибар йүнәлтеү. □ Обратить внимание. ■ *Яҡлау һәм иғтибар булғас, һуңғы йылдарҙа күп кенә хужалыҡтар был тармаҡҡа [йылҡысылыҡҡа] йөҙө менән боролдо.* «Башҡортостан», 13 март 2012. **Йөҙө аҡ булғыр** 1) яҡшы теләк менән әйтелә. □ Радости тебе; будь счастлив; 2) еңел генә орошҡанда әйтелә. □ *досл.* Пусть твоё лицо будет светлым *(при лёгком упрёке).* ■ *[Әхмәҙулла бабай:] Инәйең [ҡымыҙҙы] кәзә һөтө менән шимләп маташҡан. Боҙҙомо икән инде, йөҙө аҡ булғыр!* Ә. Вахитов. **Йөҙө<ң> ҡара** 1) асыуланғанда әйтелгән әрләү, хурлау һүҙе. □ Бесстыжий; презренный, проклятый *(ругательное слово).* ■ *[Мөхәмәтулла бабай:] У-ух, йөҙө ҡара, тағы саба .. өйгә еткәс, йүнле әҙәм һыуындыра атты.* Ә. Вахитов. *Эй, йөҙө ҡаралар! Ни эшләп үлмәнеләр икән? — ти хан, аптырай, бот саба.* Әкиәттән; 2) көнләшеү ҡатыш һоҡланып әйтелә. □ Чертовка *(при восхищении).* ■ *Сәрүәр шул егерме биштәр тирәһендә булдымы икән? Бик сибәр ине, йөҙө ҡара!* С. Кулибай. **Йөҙ<ө> ҡарайыу** кәйеф боҙолоу хәленең сырайҙа сағылыуы тураһында. □ Почернеть от злости. ■ *Канцелярия башлығы, комиссар янында Ғимайҙы күргәс, тәүҙә йөҙө ҡарайып китҡәйне.* И. Насыри. **Йөҙө ҡара ҡойолоу** ныҡ ҡайғырыу, бошоу. □ Почернеть от горя, злости. ■ *Янһары йөҙө ҡара ҡойолоп, өйөнә ҡайтып инә.* Әкиәттән. **Йөҙөн асыу** кемлеген фаш итеү. □ Разоблачить *кого;* срывать маску, вывести на чистую воду. // Разоблачение. **Йөҙөн йыртыу** кеше алдында кәмһетеп, әрләп оятҡа ҡалдырыу, оятлы итеү. □ Позорить, унижать *(в присутствии кого-л.).* ■ *Етерлек йыртттылар йөҙөңдө, серетеләр золматта үҙеңде, һин хәҙер ватандың хәр улы, бынан һуң асыҡ тот күҙеңде.* Ш. Бабич. *Шундай тура һүҙле ҡатын инде ул [Бәғиҙә], саҡ ҡына хилафлыҡ эшләнеңме, ситтәр алдында йөҙөңдө йыртам тип тормаҫ, таснатып әйтер ҙә һалыр.* Ш. Янбаев. **Йөҙөн күрмәйем** асыуланып, ҡарғағанда әйтелә. □ *соотв.* Глаза б мои не видели. ■ *[Үмәр:] Ҡаты ҡарғышым төшһөн, мәлғүнгә! Йөҙөн күрмәйем.* Һ. Дәүләтшина. **Йөҙөн ҡара итеү** (йәки **ҡылыу**) хурлыҡҡа ҡалдырыу. □ Очернить. **Йөҙөнә йәбешеү** әрләп, хурлап оятлы итеү. □ Грубо и публично обругать. ■ *Ирҙәр, ҡайтҡас, үҙенә осоп ҡунасаҡтарын белә ул [Гөлйөҙөм]. Йөҙөнә йәбешәсәктәр.* Ф. Иҫәнғолов. **Йөҙөнә ҡарамаҫлыҡ булыу** ныҡ биҙеү. □ Совсем опротиветь, не желать видеть *(от обиды).* **Йөҙө(ң) ҡара булғыр** әрләгәндә әйтелә. □ Бесстыжий *(ругательное слово).* ■ *Носрат ағайҙың түрә булыуын күп халыҡ екһенмәне. Ә Таһир олатай, тұранан-тура: «Һәй, йөҙө ҡара булғыры, илдең елек майын һурыр инде бер талай, һурыр!» — тип хафаланды.* Й. Солтанов. **Йөҙ сөйөү** (*йәки* **сөйөрөү**) баш тартыу. □ Отказываться. ■ *Әллә, юҡһа, улар үҙ идеалдарынан йөҙ сөйҙөләрме? Әллә, юҡһа, улар кисәге дошмандарына ҡул бирҙеләрме?* И. Насыри. **Йөҙ сыйышыу** әрләшеү, талашыу. □ Ссориться. ■ **Йөҙ тотоу** йүнәлеш алыу. ■ *Айндар хәҙер бөтөргә йөҙ тотҡан ҡәбилә булыуҙары, үлемгә дусар ителгән этник төркөм булыуҙары иҫәбенә йәшәп яталар.* К. Мәргән. **Йөҙ һөртөү** түбәнселек менән баш эйеү. □ Подчиниться, покориться; попадать в зависимость. ■ *Бары ла эйелеп ергә сәждә иттеләр, ҡул-аяғын үптеләр, йөҙ һөрттөләр.* Ш. Бабич. **Йөҙ һытыу** ризаһыҙлыҡты, ҡәнәғәт булмауҙы йөҙгә сығарыу. □ Нахмуриться, насупиться, сострить кислую мину. ■ *Туҡта! Йөҙөң һытып, сәскәләрҙең күҙҙәренән шатлыҡ өркөтмә.* Р. Бикбаев. *Йөҙөн һытып, хәтәр хәүеф йәйгән саҡта косағын, ғүмер үҙәненә баҡҡан бәхет тигән Ҡояшым.* Т. Йосопов. **Йөҙ һыуы китеү** оятһыҙланыу □ Бесстыдничать, нахальничать, наглеть. ■ *Йөҙ һыуы китһә битеңдән, ул саҡта эштәр харап!* С. Ҡудаш. **Йөҙ һыуын түгеү** оятлы булыу, түбәнһенеү. □ Унижаться перед *кем-л.*, терпеть унижение. ■ *[Һәүбән] ауыр эш эшләргә йәш булғас, өйҙән өйгә йөрөп, йөҙ һыуын*

түгеп, һоранып тамаҡланып көн күргән, ти. Эпостан. **Йөҙ яҡтырыу** күңел күтәрелеп, йөҙгә шатлыҡ билдәһе сығыу. □ Посветлеть в лице, проявить радость. **Күҙе лә йөҙө (*йәки* йөҙө лә күҙе)** *кемделер* шаһит итеп күрһәтеп, *ниҙелер* дөрөҫләргә тырышҡанда әйтелә. □ Точно, не вру *(употребляется при утверждении чего-л. в присутствии очевидца)*. **Ҡара йөҙ(лө)** насар уйлы, яуыз, оятһыҙ. □ Недобрый, злой. ■ *[Шүлгән:] Дейеүҙе тар-мар итәйем; ҡара йөҙөм йыуайым, аҡ йөҙ менән алдыңа килеп, ерҙе үбәйем.* «Урал батыр».

ЙӨҘ II [боронғо төрки *йүз*] (Р.: сто; И.: hundred; Т.: yüz) *төп һ.*

1. Туҡһан туғыҙҙан һуң килгән; 100, С цифрҙарының исеме. □ Сто, сотня. *Йөҙгә тиклем һанау. Йөҙҙө унға бүлеү. Йөҙҙән бер өлөш.* ■ *Әсхәт йоҡларға нисек кенә тырышмаһын, нисә генә тапҡыр йөҙгә ҡәҙәр һанамаһын, йөҙҙән кире һанап төшмәһен, керпектәре ауырайманы.* М. Ғиләжев.

2. *Кемдең* йәки *нимәнең* йөҙгә тиң иҫәбе. □ Сто. *Йөҙ һум. Йөҙ саҡрым. Йөҙ баш мал. Йөҙ йыл. Йөҙ йәш. Йөҙ ватлы лампочка. Йөҙ процент.* ■ *Кәрәкмәй суртан әмере, кәрәкмәй тылсым ҡулы, зәңгәр поезд асып ҡуя йөҙ ишеген бер юлы.* Р. Ғарипов. *Әминбәк тоҡсайын арҡаһына аҫҡан да, йөҙ һум аҡсаһын алып, юлға сығып киткән.* Әкиәттән. ● *Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.* Әйтем. *Байға ялынам тип, ярлының йөҙ һумлыҡ хаҡы сыҡҡан.* Мәҡәл. *Бер төрлө торһаң, йөҙ йыл тороһоң.* Мәҡәл. *Йөҙ наҙан бер ғалимдың тырнағына тормаҫ.* Мәҡәл. *Йөҙ яуызлыҡты бер дөрөҫлөк еңә.* Мәҡәл. *Йылан йөҙ йәшәһә — аждаһаға, аждаһа йөҙ йәшәһә, юхаға әйләнә, имеш.* Мәҡәл. *Көҙгә етһәм — йөҙгә етәм.* Мәҡәл. *Ҡыҙым — ҡыҙ кеше, килер йөҙ кеше, алыр бер кеше.* Мәҡәл.

3. Һан иҫәбе, күләме яғынан бик күп булған. □ Много. *Йөҙ ерҙән ямалған. Йөҙ ергә етеү.* ● *Бер урлағансы, йөҙ һора.* Мәҡәл. *Йөҙ ҡат әйткәнсе, бер ҡат эшләп күрһәт.* Мәҡәл.

♦ **Йөҙгә бәрәү тулмаған** аҡыл йәһәтенән камил булмаған; ахмаҡ, алйот. □ Придурковатый; ограниченный, недалёкий. *Йөҙгә бәрәү тулмаған бала.* **Йөҙ һүҙгә етеү** *нимәләр* өсөн тауыш сығарыу. □ *букв.* Дойти до ста слов. *Күрше юҡҡа ғына йөҙ һүҙгә етте.*

ЙӨҘ АСЫЛЫУ (йөҙ асыл-) (Р.: просветлеть в лице; И.: brighten up; Т.: yüzü açılmak) *ҡ.*

1. Рух, кәйеф күтәрелеп, сырайҙа шатлыҡ сағылыу, йылмайыу күренеү. □ Посветлеть в лице, проявить радость. ■ *Гөлйөҙөм еңгәнең йөҙө асылып китте.* З. Биишева. *Шул арала майҙанға Гөлйемеш сығып баҫа. Уны күреүгә халыҡтың йөҙө асылып китә.* Әкиәттән.

2. Фашланыу, ғәйебе билдәле булыу. □ Обвиняться, разоблачаться. *Шулай итеп, ғәйепленең йөҙө асылды. Бурҙың йөҙөн асыу.*

ЙӨҘ БАШЫ (Р.: сотник; И.: centurion; Т.: yüzbaşı) *и. тар.*

Элекке башҡорт ғәскәрендәге йөҙ кешенән торған төркөм башлығы. □ Сотник. ■ *[Байгилде] .. нуғай ғәскәренең йөҙ башына ҡыҙын биргәндән аҙаҡ, Боғара менән ярышып-ярышып ҡараны ла, уҙҙыра алмаҫын тойғас, шымтайып, баш һалырға мәжбүр булды.* Ә. Хәкимов. *Һыбайлыларҙы ҡаршылаған Иманғол ҡарт заманында йөҙ башы булған, төрлөһөн күргән ил ағаһы.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӨҘ БҮРЕ (Р.: обманщик; И.: deceiver; Т.: yalancı) *и. диал.*

Алдай торған кеше; алдаҡсы. □ Обманщик. *Эх, был йөҙ бүре, әллә нимәләр һөйләй. Уға ышанырлыҡ түгел, йөҙ бүре ул.*

ЙӨҘГӨН (Р.: джузгун; И.: calligonum; Т.: calligonum) *и. бот.*

Ҡарабойҙай ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ ботаҡлы ҡыуаҡ. □ Джузгун (лат. *Calligonum*). *Йөҙгөндә дөйәләр һәм һарыҡтарға бирәләр. Йөҙгөн әҙерләү.*

ЙӨҘГӨР (Р.: хорошо плавающий; И.: swimming well; Т.: iyi yüzen) *с.*

Йөҙөүгә шәп. □ Хорошо плавающий. *Йөҙгөр булыу. Йөҙгөр малай.*

ЙӨҘГӨС (Р.: плавник; И.: fin; Т.: yüzgeç) *и.*

1. Балыҡ йәки ҡайһы бер башҡа һыу йәнлектәренең йөҙөү өсөн ҡулайлашҡан ағзаһы. □ Плавник *(рыбы)*. / Плавниковый. *Балыҡ йөҙгөсө. Акула йөҙгөсө.* ■ *Ләкин*

ул балыҡтың башы ла, ҡойроғо ла, хатта йөҙгөстәре лә күренмәй. Ә. Бикчәнтәев.

2. Ҡайһы бер һыу һөйрәлеүселәренең, ҡоштарҙың, һөтимәрҙәрҙең *(диңгеҙ ташбаҡаһы, пингвин, морж, тюлень һ. б.)* үҙгәргән ҡыҫҡа аяғы. □ Ласт *(конечность некоторых водоплавающих животных). Пингвин йөҙгөсө. Морж йөҙгөсө.* ■ *Имәнес януарҙың оҙонлоғо 9 метр, ә ауырлығы 11 тонна самаһы була. Уның ос йөҙгөсө һәм ҡойроғо — балыҡтыҡына, ә тиреһе филдекенә оҡшаш була.* Д. Бураҡаев.

3. Йөҙөү өсөн аяҡҡа кейә торған ишкәк һымаҡ ҡулайлама. □ Ласты *(приспособление для плавания). Резина йөҙгөстәр. Йөҙгөс кейеү. Йөҙгөс менән ишеү. Йөҙгөс һатып алыу.*

4. *диал. ҡар.* **ҡалҡыуыс.** *Ҡармаҡ йөҙгөсө. Ҡауырһын йөҙгөс. Ауға йөҙгөс ҡуйыу.*

ЙӨҘГӘ-ЙӨҘ *р. ҡар.* **ҡара-ҡаршы.** *Йөҙгә-йөҙ осрашыу. Йөҙгә-йөҙ бәрелешеү. Йөҙгә-йөҙ тап булыу. Йөҙгә-йөҙ тороу.* ■ *Мәҫәлән, йөҙгә-йөҙ әйтәм, тәнҡит юк беҙҙә һаман, күҙ йомоу һәм тәнҡит итмәү — был инде артыҡ яман.* С. Кулибай. *[Миңлебай Бикмөхәмәтов] Орёл—Курск дуғаһындағы хәл иткес һуғышта фашистар менән йәнә йөҙгә-йөҙ осраша.* «Юшатыр», 6 май 2010.

ЙӨҘГӘ-ЙӨҘ КИЛЕҮ (йөҙгә-йөҙ кил-) (Р.: противостоять; И.: confront, withstand; Т.: dayanmak, karşı koymak) *ҡ.*

1. Ҡырҡа ҡара-ҡаршы тороу *(дошманлашыусы яҡтар тураһында әйтелә).* □ Противостоять. // Противостояние. ■ *Был операцияла Әнүәр Абдуллин ғүмерендә беренсе тапҡыр ҡоралды дошманға ҡаршы йөҙгә-йөҙ килеп баҫты.* Ғ. Әмири. *Михнәтле йылдарҙы үҙ иңендә татып, фашистар менән йөҙгә-йөҙ килеп алышҡан олатайҙарҙың сафы һирәгәйеүе күңелдәргә һағыш өҫтәй.* «Һаҡмар», 23 ғинуар 2012.

2. Күҙгә-күҙ, тура ҡарап *(осрашыу, тап килеү).* □ Встретиться лицом к лицу. *Йөҙгә-йөҙ килеп осрашыу. Күрше менән йөҙгә-йөҙ килеү.*

ЙӨҘГӘЛӘК (йөҙгәләге) (Р.: плавунец; И.: diving beetle; Т.: yüzer kınkanatlılar) *и. зоол.*

Аҡмаҫ һәм аҡрын аға торған һыуҙа йыртҡыслыҡ итеп йәшәй, яҡшы йөҙә һәм оса торған һыу ҡуңыҙы. □ Плавунец (лат. *Dytiscidae*). *Күл өҫтөндә йөҙгәләктәр уйнай. Йөҙгәләк тотоу.*

ЙӨҘҘӨРМӘ САЛҒЫ (Р.: вид косы; И.: kind of a scythe; Т.: tırpan türü) *и.*

Оҙон үләнде өҫтән йөҙҙөрөп саба торған һабы кәкре һоноҡ салғы. □ Вид косы.

ЙӨҘҘӨРӨЛӨҮ (йөҙҙөрөл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йөҙҙөрөү.** *страд. от* **йөҙҙөрөү.** ■ *Һәр ваҡыт һолола торған, яҡшы тәрбиәләнгән, көн дә Ғәли, Шәмси тарафынан туғайҙа йөҙҙөрөлгән аты көслө, шәп юртаҡ булғанлыҡтан, ундай хәлде күтәргә мөмкин түгел.* Ғ. Хәйри.

ЙӨҘҘӨРӨҮ (йөҙҙөр-) (Р.: купать; И.: bathe; Т.: yüzdürmek) *ҡ.*

1. Ҡойондороу өсөн һыуға төшөрөү, һыу индереү *(малды).* □ Купать *(в реке);* мыть. *Атты йөҙҙөрөү. Ҡолондо йөҙҙөрөү. Йылға аша атты йөҙҙөрөп сығарыу.* ■ *Бай Ҡыҙраска ошо ишәкте йөҙҙөрөп, ерҙә аунатмайынса алып ҡайтырға бойорған.* Әкиәттән. *Күл буйынан, ат йөҙҙөрөп, иренеп ҡайтып киләм, һалмаҡ ҡына башын сайҡап, күгәүен ҡыуа Ерән.* М. Кәрим. *Хәүефлерәк булһа ла, берҙән-бер генә юл ҡала: аттарҙы йөҙҙөрөп сығыу.* Н. Мусин.

2. *йөкм. ҡар.* **йөҙөү I, 2.** *понуд. от* **йөҙөү I, 2.** *Малайҙы һыуҙа йөҙҙөрөү. Сабыйҙы ваннала йөҙҙөрөү. [Һомай:] Ямды һыуҙан баҫтырған, һалҡын һыуҙы таштырған, Зәрҡумды һыуҙа йөҙҙөрөп, аптырауға ҡалдырған.* «Урал батыр».

3. *йөкм. ҡар.* **йөҙөү 7—8.** *понуд. от* **йөҙөү 7—8.** ■ *Илаһи моңло тауыш уның [Ғөбәйҙулла солтандың] күңелен сихри ғаләмдә йөҙҙөрөп, ләззәт ҡосағына сумдырғайны.* Ф. Янышев. *Ил өҫтөнә яу ҡылған, ил таларға дау һалған, илде ҡанға йөҙҙөргән Тәфтиләү ҙә сапҡан, дан тигән.* Халыҡ ижадынан.

♦ **Үпкә йөҙҙөргәнсе (*йәки* йөҙгәнсе) эсеү** бик күп итеп эсеү. □ Много пить жидкости. ■ *Әйтәгүр, бер кинәнеп үпкәм йөҙгәнсе сәй эсеп ҡайттым әле.* Һ. Дәүләтшина. *Юлдыбикә әбей үпкәһе йөҙгәнсе эселгән сәйҙе*

һеңдереү яйы менән аяҡтарын һона төшөп ян-яғына ҡаранды. Т. Хәйбуллин.

ЙӨҘҘӨРТӨҮ (йөҙҙөрт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йөҙҙөрөү.** *понуд. от* **йөҙҙөрөү.** ■ *Ҡырҡатар йылғаның бирьяғына йөҙҙөртөп сыҡҡан да ғәскәр менән батшаның торған еренә килгән.* Әкиәттән. *Капитан Макшеев, сокорҙарға һәм арыҡтарға тултырылған һыуҙарҙы аттарынан йөҙҙөртөп аша сыҡҡас, кирегә табан килгән Тургай менән Хәсәнханды ҡосратты.* Я. Хамматов.

ЙӨҘҘӘРСӘ *сама һ. ҡар.* **йөҙәрләгән.** *Йөҙҙәрсә йылдар. Йөҙҙәрсә кешеләр. Йыйылышта йөҙҙәрсә халыҡ булды.* ■ *Икһеҙсикһеҙ ерҙәрҙе, йөҙҙәрсә телдә аралашҡан ҡәүемдәрҙе ҡулда тотоу өсөн батша миллион ярымға яҡын ғәскәр аҫрарға мәжбүр булды.* М. Хужин. *Иҙелдең ташҡыны йөҙҙәрсә кешене үҙенә тарта, ниҙер тураһында телһеҙ һөйләгән төҫлө була.* А. Карнай.

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠ I (йыллығы) (Р.: столетие; И.: century; Т.: yüzyıl) *и.*

1. Йөҙ йыл дауам иткән ваҡыт, быуат. □ Столетие, век. *Һуңғы йөҙ йыллыҡ. Киләһе йөҙ йыллыҡта.* ■ *Ноғман Мусиндың «Мәңгелек урман»ы бөгөн дә, иртәгә лә, киләһе йөҙ йыллыҡта ла халҡыбыҙҙы, милләтебеҙҙе, рухыбыҙҙы мәңгелеккә алып барасаҡ!* «Йәшлек», 13 сентябрь 2011.

2. Күренекле ваҡиғаға йөҙ йыл тулыу көнөн билдәләп үтә торған календарь дата. □ Столетие, столетний юбилей. *Музейҙың йөҙ йыллығы. Шағирҙың йөҙ йыллығын билдәләү. Ҡалаға нигеҙ һалыныуҙың йөҙ йыллығы.* ■ *Данлыҡлы эпостың 1910 йылда Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙән яҙып алыныуының йөҙ йыллығына билдәле уңыштар, лайыҡлы ҡаҙаныштар менән киләбеҙ.* Картотека фондынан.

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠ II (Р.: столетний; И.: centenary, century old; Т.: yüzyıllık) *с.*

Йөҙ йыл дауам иткән. □ Столетний. *Йөҙ йыллыҡ һуғыш. Йөҙ йыллыҡ юбилей.*

ЙӨҘЙӘШӘР (Р.: столетний; И.: centenarian; ages-old; Т.: yüzyaşar) *с.*

Оҙаҡ йәшәүсе. □ Столетний. *Йөҙйәшәр ағас. Йөҙйәшәр ҡарт.* ■ *Ҡариҙелдең текә яры буйлап, .. сик һаҡсылар шикелле, йөҙйәшәр һырғый ҡарағайҙар теҙелгән.* Яр. Вәлиев. *Улар, сәғәт һайын эшләп эштәрен, меңйәшәр бер имән ир шикелле, сәсә ергә емештәштәрен.* Р. Ғарипов. *Ул [хан], аптырағас, муллаларҙың өшкөрөү-төкөрөүҙәренән һис кенә лә файҙа булмағас, .. ил ағаһын — йөҙйәшәр аҡһаҡалды саҡыртып алған.* Н. Мусин. *Вәзирҙәр йөҙйәшәр әбейҙе эҙләп киттеләр.* Әкиәттән.

ЙӨҘЙӘШӘР ГӨЛ *и. бот. диал. ҡар.* **алоэ.**

ЙӨҘ ҠАБАТ (Р.: много раз; И.: many times, often; Т.: çok kez) *р.*

Күп, бик күп. □ Много раз, сто раз; многократко. *Йөҙ ҡабат әйтеү. Йөҙ ҡабат эшләү.* ■ *[Төлйөҙөм — Тимерғәлегә:] Мин һиңә йөҙ ҡабат әйттем бит, сит ауылға бирмәйек, тинем. Үҙебеҙгә кейәү индереп кенә алайыҡ, тинем.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӨҘ-ҠИӘФӘТ (Р.: внешний вид; И.: appearance; looks; Т.: görünüş) *и.*

Кешенең тышҡы күренеше *(йөҙө, өҫ-баш кейемдәре).* □ Внешний вид. ■ *[Еңгәмдең] йөҙ-ҡиәфәтендә — һөйләп бөтөргөһөҙ нәфислек, матурлыҡ, һөйкөмлөлөк.* Д. Бүләков. *Ҡояшҡа ҡаршы баҫып торған ҡыҙ саҡ ҡына йылмая биреп яуап ҡайтарҙы, һәм уның ошо саҡтағы торош-һыныны, йөҙ-ҡиәфәте Дәүләттең күңеленә ғүмеренә тонокланмаҫ сихри һүрәт булып инеп ултырҙы.* Н. Мусин. *Ҡыҙҙар үҙҙәренең йөҙ-ҡиәфәтенә, тән төҙөлөшөнә, атлауына хәтлем ҙур иғтибар йүнәлтә башлай.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

ЙӨҘ ҠЫҘАРЫУ (йөҙ ҡыҙар-) (Р.: краснеть; И.: redden; Т.: kızarmak) *ҡ.*

1. Уңайһыҙланып, оялып, ҡыҙыл булыу. □ Краснеть, покраснеть лицом, залиться румянцем. *Оялышынан йөҙө ҡыҙарҙы.* ■ *Рәхимйәндең йөҙө сөгөлдөрҙәй ҡыҙарҙы.* Й. Солтанов.

2. Оятҡа ҡалыу. □ Опозориться, оконфузиться. ■ *Кеше алдында [Зәлифә] тыйнаҡлы, һүҙен дә үлсәп һөйләй... Уның менән бер ҙә йөҙөң ҡыҙармаҫ.* Ф. Рәхимғолова.

ЙӨҘЛӨ I (Р.: с лицом; И.: ...faced; Т.: yüzlü) *с.*

1. *Ниндәйҙер* йөҙгә эйә булған. □ С лицом, имеющий *какое-л.* лицо. *Нурлы йөҙлө. Алһыу йөҙлө.* ■ *Кәпәс кейгән улдарын, көләс йөҙлө ҡыҙҙарын, барын ҡоллап, хан булған.* «Мәргән менән Маянһылыу». *Ибраһим бабай килеп етте. Ул ап-аҡ һаҡаллы, ҡыҙыл йөҙлө, һикһән йәштәрҙә булыуына ҡарамаҫтан, уйнап торған күкһел күҙле, ҡаҡса ғына бер ҡарт ине.* З. Биишева.

ЙӨҘЛӨ II (Р.: равный ста; И.: a hundred; size hundred; Т.: yüzlü) *с.*

Үлсәме йөҙгә тиң. □ Равный ста, сто... *Йөҙлө лампа. Йөҙлө лампочка.*

ЙӨҘЛӨ ДИСӘТИНӘ (Р.: площадь земли длиной в сто, шириной в сорок метров; И.: measure of land (100x40 metres); Т.: boyu 100, eni 40 metre yer) *и. тар.*

Буйы йөҙ, иңе ҡырҡ метрлыҡ ер. □ Площадь земли длиной в сто, шириной в сорок метров. ■ *Хаҡын уның һиңә ҡыҫмам инде. Йөҙлө дисәтинәгә бер һум егерме тин ҡуйырмын.* И. Кесәпкол.

ЙӨҘЛӨК I (йөҙлөгө) (Р.: оболочка плода в утробе матери; И.: placenta; Т.: plasenta, etene) *и.*

1. Ҡарындағы баланы уратып ҡаплаған яры. □ Оболочка плода в утробе матери, плацента. *Йөҙлөк менән тыуған бала.*

2. *диал. ҡар.* **битлек I.** *Йөҙлөк кейеү.* ■ *Алсы, Тәңрем, был күңелдең йөҙлөгөн, һалсы күҙҙән был томанлы күҙлегем.* Ш. Бабич.

3. *миф.* Ышаныуҙар буйынса, һаҡлау көсөнә эйә булған яры. □ Оболочка плода в утробе матери *(мифологизированный предмет, выполняющий обережную функцию). Йөҙлөклө бала — бәхетле бала.* ■ *Йөҙлөктө, киптереп, сәңгелдәккә элеп ҡуйғандар.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Йөҙлөк менән тыуыу** бәхетле булып тыуыу. □ Родиться в рубашке.

ЙӨҘЛӨК II (йөҙлөгө) (Р.: подъём (ноги или обуви); И.: instep; Т.: ayağın üst kısmı) *и.*

Аяҡтың йәки аяҡ кейеменең алҡымдан түбәнге өҫтө. □ Подъём *(ноги или обуви). Итектең йөҙлөгө. Йылға һай, аяҡтың йөҙлөгөнән генә.* ■ *Уның [ишек ҡағыусының] ҡыҙыл күндән йөҙлөгө семәрләп тегелгән кәүеше менән буйлы мамыҡ ыштанының балаҡтары асыҡ күренде.* Б. Хәсән. *Ҡар, апаруҡ яуғас-икәс, кире ирегәйне шул, урыны-урыны менән үлән араһын йөҙлөктән һыу баҫҡан, сокор-саҡыр күренмәй ҙә.* Ә. Әминев.

ЙӨҘЛӨК III (йөҙлөгө) (Р.: наличник; И.: platband; Т.: söve pervazı) *и.*

1. Урындыҡтың таҡта һалынған алғы буй ағасы. □ Наличник *(у нар). Урындыҡтың йөҙлөгө. Ағас йөҙлөк. Һике йөҙлөгө.* ■ *Йығыуынып ҡайтыуыма, ағайым һике йөҙлөгөндә бысаҡ үткерләп ултыра ине.* Д. Бүләков. *Хужа уның ҡабырғаһына нығыраҡ типкәйне, төнгө ҡунаҡ .. башын урындыҡ йөҙлөгөнә бәрҙе, ауыртыуға түҙмәй ыңғырашып ҡуйҙы.* З. Ураҡсин. *Күҙгә ҡапыл килеп тығылған йәштәрҙе тыя алманым, үксәләрҙе һике йөҙлөгөнә бәреп, тиктомалға аҡырып-аҡырып илай башланым.* И. Насыри.

2. Тәҙрәнең йәки ишектең биҙәкле тирәсе *(ғәҙәттә, семәрләп эшләнә).* □ Наличник. *Тәҙрә йөҙлөгө. Буяуһыҙ йөҙлөк. Йөҙлөк эшләү. Семәрләп эшләнгән йөҙлөк.* ■ *[Мәмбәтсура] тәҙрә баштарын, яҡтау йөҙлөгөн семәрләп эшләткән, рамдарға быяла ҡуйылған, ҡыйығы тыранса менән ябылған.* Н. Мусин.

3. *архит.* Төрлө тау тоҡомдарын беркетеп эшләгән биҙәү, ябыу материалы. □ Брекчия. *Гранит йөҙлөк. Йөҙлөк үҙенсәлектәре.*

ЙӨҘЛӨК IV (йөҙлөгө) (Р.: шесток; И.: hearth; Т.: şömine tabanı) *и.*

Икмәк мейесенең ҡуҙ тартып ҡуя торған урыны. □ Шесток *(печи). Йөҙлөктө таҙартыу. Йөҙлөк ҡором менән ҡапланған. Йөҙлөктә генә бәрәңге йылытып ашаным.*

ЙӨҘЛӨК V (йөҙлөгө) (Р.: сторублёвка; И.: hundred-rouble note; Т.: yüzlük) *и. һөйл.*

Йөҙ һумлыҡ ҡағыҙ аҡса. □ Сторублёвая купюра, сторублёвка, сотенная, сотня. *Йөҙлөктө ваҡлатып алыу.* ■ *[Тулыбай] кеҫәһендәге Ҡаҙнабаев ағаһы һалған йөҙлөктө сығарҙы ла күрһәтте.* Д. Бүләков. *[Экстрасенс:] Бер алдаһам, уңлыҡ, йөҙлөк кереп китә кеҫәгә! Нисек кенә йәшәр инем булмаһа был иҫәрҙәр?* Н. Ғәйетбаев.

ЙӨҘЛӨК VI (йөҙлөгө) *и. диал. ҡар.* **башҡүнәк.** *Ҡымыҙҙы йөҙлөктә һаҡлау. Йөҙлөк эшләтеү.*

ЙӨҘЛӨК ДУҒА (Р.: архиволът; И.: archivault; Т.: başkemer) *и. архит.*

Арканың йөҙ йәки ал яғы. □ Архиволът. *Йөҙлөк дуға семәрләнеп эшләнгән.*

ЙӨҘЛӨК ҠОЛАҒЫ (Р.: ушки оконных наличников; И.: case staples; Т.: pervaz çıtası) *и.*

Тәҙрә ҡашының ике яҡҡа сығып торған өҫкө өлөшө. □ Ушки *(оконных наличников). Йөҙлөк ҡолағында бороңғо семәр һаҡланған.*

ЙӨҘЛӘГӘН (Р.: сотнями; И.: by hundreds; very many; Т.: yüzlerce) *сама h.*

Йөҙ тирәһе, йөҙгә яҡын, бик күп. □ Сотнями; в большом количестве. *Йөҙләгән бала. Йөҙләгән һыйыр.* ■ *Йөҙләгән күкрәктән бәреп сыҡҡан көләүҙән зал инде ярылырҙай булып гөрләй ине.* И. Абдуллин. *Батша йөҙләгән һыбайлыһын ауылдарға тарата, халыҡты йыйып алып килергә ҡуша.* Әкиәттән. *Ҡараңғы төшкәндә, ҡорал амбарҙарындағы туп, мылтыҡтар йөҙләгән ылауҙарға тейәтелеп оҙатылдылар.* А. Таһиров.

ЙӨҘЛӘНЕҮ (йөҙлән-) *ҡ. төш. ҡар.* **йөҙләү II.** *страд. от* **йөҙләү II.** *Кирбес менән йөҙләнгән. Өйҙөң тышы йөҙләнгән.* ■ *Тимер юл вокзалының икенсе ҡаты әҙер тиһәң дә була. Иҙәнгә гранит түшәлгән, стеналар йөҙләнгән.* «Башҡортостан», 24 сентябрь 2007. *Ул [ашхана] бик күркәм бина ине: ҡиммәтле ҡыҙыл ағас менән йөҙләнгән, милли нағыш һалынған.* «Йәшлек», 17 апрель 2010.

ЙӨҘЛӘП (Р.: около ста; И.: about a hundred; Т.: yüz civarında) *сама h.*

Йөҙ тирәһе, йөҙгә яҡын. □ Около ста; сотнями. *Йөҙләп бала. Йөҙләп иҫәпләү.* ■ *Ауылға йөҙләп ғәскәрҙең килеп инеүен күргәс, [кешеләр] аҡрын ғына таралыша башланылар.* А. Таһиров. *Йәйге матур көндәрҙең береһендә башҡорт атлы дивизияһы йугирҙарының әле иҫән булған ике йөҙләп һалдаты бер юлы ошо шифаханаға ял итергә килеп урынлашты.* З. Ураҡсин.

ЙӨҘЛӘҮ I (йөҙлә-) (Р.: заделывать шов; И.: caulk; Т.: dikmek) *ҡ.*

Йөйҙө эскә бөкләп, икенсе ҡатҡа һырыу. □ Заделывать шов, зашивать край, кромку *чего-л. Итек башын йөҙләү. Япма йөҙләү.*

ЙӨҘЛӘҮ II (йөҙлә-) (Р.: облицовывать; И.: revet; face; Т.: kaplamak) *ҡ.*

1. Ныҡлыҡ, матурлыҡ өсөн таш, таҡта йәки башҡа нәмә менән көпләү. □ Ставить наличники; облицовывать. // Облицовка. *Кирбес менән йөҙләү. Мәрмәр менән йөҙләү. Стенаны тыштан йөҙләү.* ■ *Бәғиҙә апай күпме келәт, һарай һылап аҡлағандыр, күпме йорт йөҙләп йылытҡандыр — быны әйтеүе ҡыйын.* И. Ғиззәтуллин. *Әллә уны [һыуҙы] аҙлап-аҙлап теге яҡҡа ағыҙа башларғамы? Алдан уҡ бер нисә урындан канау ҡаҙып, ярҙарын тимер-бетон плиталар менән йөҙләргә лә кәрәктер.* Б. Рафиҡов.

2. Ҡытыршы урындарҙы тигеҙләү. □ Затирать, сглаживать неровности, шероховатости. // Затирка. *Мейесте йөҙләү. Стенаны йөҙләү. Йөҙләү өсөн материал әҙләү.*

ЙӨҘЛӘҮ III (Р.: облицовка; И.: revetment; facing; Т.: kaplama) *и.*

1. Ныҡлыҡ, матурлыҡ өсөн тыштан ҡапланған көп. □ Облицовка. *Мәрмәр йөҙләү. Йорт йөҙләүе.* ■ *Йәтим ҡалған йорттарҙың йөҙләүҙәре ҡупҡан, ватыҡ тәҙрәләренән ел ыжғыра.* Д. Исламов.

2. Ағас, таш h. б. өҫтөн йөҙләп биҙәү сәнғәте. □ Инкрустация. *Йөҙләү төрҙәре. Төрлө таштар менән йөҙләү.*

ЙӨҘЛӘҮ IV (Р.: поверхность; И.: surface; Т.: yüzey) *и.*

Ниҙеңдер өҫкө яғы, өҫтө. □ Поверхность. ■ *Юлда һуңғы туҡтау урындары яр буйында ҡамыштар үҫкән, быжыр йөҙләүендә томбойоҡ сәскәләре бәүелгән күл сите ине.* Н. Мусин.

ЙӨҘМӘ (Р.: плавучий; И.: floating; Т.: yüzer) *с.*

1. Йөҙөп йөрөй торған. □ Плавучий; плавающий. *Йөҙмә боҙ. Йөҙмә үҫемлектәр.*

2. Һыу өҫтөнә ҡоролған. □ Наплавной. *Йөҙмә күпер. Йөҙмә ҡойма. Йөҙмә база.*

ЙӨҘМӘ-ЙӨҘ *р. ҡар.* **ҡара-ҡаршы.** ■ *Баштарыңды әйеп тораһың, ҡарашыңды ситкә бораһың. Әйләнеп баҫ минә йөҙмә-йөҙ — һөйләшергә ваҡыт күҙмә-күҙ.* Ш. Бикҡол. *Аҙна араһы булдымы-юҡмы, [Әмин менән Ҡолансәстең] юлдары йәнә тап булды йөҙмә-йөҙ.* Г. Хөсәйенов. *Кеше араһында үҙеңдең асыуыңды, бигерәк тә атайың менән уҡытыусыға ҡарата, йөҙмә-йөҙ белгертеү*

борондан хупланмаған. «Башҡортостан ҡыҙы», № 10, 2010.

ЙӨҘМӘЛЕ *с. ҡар.* **йөҙмә 1.** *Йөҙмәле боҙ. Тәлмәрйен тәңкәhе — йөҙмәле hыу үҫемлеге. Йөҙмәле аквариум үҫемлектәре.*

ЙӨҘ МӘРТӘБӘ *р. ҡар.* **йөҙ ҡабат.** *Йөҙ мәртәбә тыңлау. Йөҙ мәртәбә ишетеү. Йөҙ мәртәбә килеү.*

ЙӨҘМӘ ҮҪЕМЛЕКТӘР (Р.: плавучие растения; И.: floating plants; Т.: yüzer bitkiler) *и. бот.*

Тамыры ерҙә түгел, ә hыу эсендә үҫкән, япраҡтары hыу өҫтөндә йөҙөп йөрөгән үҫемлектәр. □ Плавучие растения. *Йөҙмә үҫемлек тамыры.*

ЙӨҘӨК (йөҙөгө) [дөйөм төрки *йүргүг*] (Р.: перстень; И.: (finger)ring; Т.: yüzük) *и.*

1. Ҡашлы балдаҡ. □ Перстень. *Ынйы ҡашлы йөҙөк. Алтын йөҙөк hатып алыу. Йөҙөк кейеү.* ■ *Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар, ҡарағыҙсы, ниндәй йөҙөк ҡаштары! Ғүмер буйы hайлағандыр аҫыл Урал таштарын.* Халыҡ йырынан. *Ташлап киттең мине, йөрәгем. Йөрәкhеҙ бар кемгә кәрәгем? Гүйә, ҡашы төшкән йөҙөкмөн, аты йығып ҡасҡан егетмен.* М. Кәрим. *Йөҙөк бик матур була, ҡашында Сөләймән батшаның исеме яҙылған.* Эпостан. ● *Йөҙөк ҡашы ҙур булмай.* Мәҡәл. *Ҡырма бүрек — баш күрке, көмөш йөҙөк — ҡул күрке.* Мәҡәл. *Фирүзә ташы — йөҙөк ҡашы.* Мәҡәл. *Фәлән ерҙәге фирүзә таш йөҙөккә ҡаш була алмай.* Мәҡәл.

2. *миф.* Ышаныуҙар буйынса, күҙ тейеүҙән hаҡлаусы предмет *(металл көсөнә ышаныуға нигеҙләнгән).* □ Перстень *(мифологизированный предмет, как любой металл, выполняет обережную функцию от сглаза; участвует во многих обрядах, гаданиях, как оберег от нечистой силы).* ■ *Йөҙөк, hырға, беләҙек күҙ тейеүҙән hаҡлай.* Башҡорт мифологияhынан.

3. *этн.* Никахлашыу символы. □ Символ бракосочетания. *Йөҙөк биреү. Йөҙөк алыу.*

♦ **Ауыҙға йөҙөк ҡабыу (***йәки* **йәшереү)** өндәшер ерҙә өндәшмәү. □ Помалкивать, воды в рот набрать, играть в молчанку. ■ *[Гәбдеян — Мөбәрәккә:] Һин ниңә ауыҙыңа йөҙөк ҡапҡан шикелле ултыраhың? Ҡатының ҡайҙа эшләhә лә барыберме ни?* Н. Мусин.

ЙӨҘӨК АЛЫУ (йөҙөк ал-) (Р.: принять кольцо; И.: accept the wedding proposal; Т.: yüzük takmak) *к. этн.*

Егеттең кейәүгә сығыу тәкдименә ризалыҡ биреп, ҡыҙҙың йөҙөк ҡабул итеүе. □ Принять кольцо *(является залогом согласия девушки выйти замуж). Егеттең тәкдименә риза булып, ҡыҙ йөҙөгөн алды.*

ЙӨҘӨК БИРЕҮ (йөҙөк бир-) (Р.: преподносить невесте кольцо при сватовстве; И.: present bride with a ring; Т.: yüzük takmak) *к. этн.*

Ҡыҙға тәкдим яhау йолаhы. □ Преподносить невесте кольцо при сватовстве, обручении, сговоре. *Егет ҡыҙға йөҙөк бирҙе. Йөҙөк биреү йолаhы.*

ЙӨҘӨК ЙӘШЕРЕШ *и. диал. ҡар.* **йөҙөк hалыш.** *Йөҙөк йәшереш уйыны.* ■ *Бала саҡта йылға буйында йөҙөк йәшереш уйнаныҡ.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӨҘӨКҠАШ (Р.: узор на краях пухового платка; И.: tracery of a downy shawl; Т.: şal deseni) *и. диал.*

Дебет шәл ситендәге йөҙөк ҡашы формаhындағы биҙәк. □ Вид узора на краях пухового платка. *Йөҙөкҡаш биҙәге. Йөҙөкҡаш биҙәген бәйләргә өйрәнеү. Шәл ситенә йөҙөкҡаш hалып бәйләү.*

ЙӨҘӨК ҠАШЫ (Р.: камень на перстне; И.: precious stone; Т.: yüzük taşı) *и.*

1. Йөҙөккә ҡуйылған аҫыл таш. □ Камень на перстне.

2. *күсм.* Йәм, күрк. □ Краса. *Ауылыбыҙҙың йөҙөк ҡашы булған ҡыҙҙар.*

♦ **Йөҙөк ҡашы кеүек күреү** бик хөрмәтле, ҡәҙерле итеп hанау. □ Уважать, почитать. **Йөҙөк ҡашы урынына йөрөү** бик ҡәҙерле, хөрмәтле булыу. □ Быть очень уважаемым человеком. ■ *Хәҙер Мырҙаш .. халыҡ алдында йөҙөк ҡашы урынына йөрөй.* Д. Юлтый.

ЙӨҘӨКЛӨ (Р.: с кольцом; И.: having a finger-ring; Т.: yüzüklü) *с.*

Йөҙөгө булған. □ Имеющий кольцо, перстень, с кольцом. *Йөҙөклө бармаҡ. Алтын йөҙөклө, көмөш йөҙөклө ҡулдар.*

■ *[Бай — ялсыһына:] Ярай, улай булһа, уның [Юныстың] бармағында минең йәш ҡатындың йөҙөгө булыр, шул йөҙөклө бармағын киҫеп килтер.* Әкиәттән.

ЙӨҘӨК ӨЛӘШЕҮ (йөҙөк өләш-) (Р.: часть свадебного обряда; И.: one of Bashkir ethnographic rites; Т.: düğünün bir töreni) *ҡ. этн.*

Оҙатылып килгәс, килендең бикәстәренә бүләк өләшеп биреү йолаһы. □ Обряд, посвящённый раздаче подарков (перстней) младшим сёстрам жениха. *Еңгә йөҙөк өләшә башланы. Йөҙөк өләшеү башланды. Йөҙөк өләшеү йолаһы.*

ЙӨҘӨК ТАРАТЫУ (йөҙөк тарат-) *ҡ. ҡар.* **йөҙөк өләшеү.**

ЙӨҘӨК ФАЛЫ (Р.: гадание по кольцу; И.: a kind of Bashkir divination; Т.: yüzük falı) *и. этн.*

Йәштәрҙең нардуған осоронда башҡарылған яҙмыш менән бәйле ырым-юрауҙары. □ Гадание по кольцу.

ЙӨҘӨК ҺАЛЫУ (йөҙөк һал-) (Р.: гадание по кольцу; И.: fortune-telling by a ring; Т.: yüzük falı) *ҡ. миф.*

Йөҙөк ярҙамында бағымсылау *(йөҙөктө һыуға һалалар ҙа уны ҡояшҡа ҡаршы түгәләр, йөҙөктөң нисек ятыуына ҡарап, киләсәкте юрайҙар).* □ Гадание по кольцу *(суть гадания сводится к тому, что в посуду с водой бросают кольцо, затем выливают против солнца; в зависимости от того, как будет лежать кольцо, толкуют будущее). Аулаҡ өйгә йыйылышып, йөҙөк һалыу.*

ЙӨҘӨК ҺАЛЫШ (Р.: национальная игра; И.: one of Bashkir youth games; Т.: yüzük oyunu) *и. этн.*

Йәштәр, балалар уйыны *(күмәкләп теҙелеп ултыралар; бер уйын башы, бер «үгеҙ» була; «үгеҙ» ситтә тора, уйын башы кемдеңдер усына йөҙөктө йәшереп ҡалдырып: «Үгеҙ, йөҙөк кемдә?» — тип һорай; дөрөҫ әйтмәһә, «үгеҙ» бер йәшкә ҡартая; дөрөҫ әйтһә, кире бер йәшкә йәшәрә; ун тапҡыр ҡартайғас, «яман үгеҙ»гә әйләнә; барыһын да баҫтыра башлай; кемде тәүҙә тотһа, шул «үгеҙ» була).* □ Кольцо *(суть игры заключается в угадывании человека, в ладонях которого спрятано кольцо). Йөҙөк һалыш уйнау. Йөҙөк һалышта «үгеҙ» булыу.*

ЙӨҘӨКҺӨҘ (Р.: без кольца; И.: with no ring; Т.: yüzüksüz) *с.*

Йөҙөгө булмаған. □ Без кольца, не имеющий колец. *Йөҙөкһөҙ бармаҡ. Йөҙөкһөҙ ҡулдар.*

ЙӨҘӨМ [боронғо төрки *йүзүм, үзүм*] (Р.: виноград; И.: vine, grapes; Т.: üzüm) *и. бот.*

1. Йылы яҡта үҫә торған үрмәле емеш ағасы. □ Виноград. / Виноградный (лат. *Vitis*). *Ҡырағай йөҙөм. Йөҙөм үҫтереүсе. Йөҙөм сыбығы. Йөҙөм баҡсаһы.* ■ *Зиннәт, рәхәт бағтар бар, һыуҙар аға, гөлдәр бар; йөҙөм үрмәләп үҫер алтынланған диуар бар.* М. Өмөтбаев. *Йөҙөм баҡсаһына килеп, бәйләнем аттарымды. Күҙ керпектәрем талғансы, уҡыным хаттарыңды.* Халыҡ йырынан.

2. Шул ағастың тәлгәш-тәлгәш булып үҫкән һутлы емеше. □ Виноград. / Виноградный. *Йөҙөм емеше. Йөҙөм шәкәре. Йөҙөм һуты. Йөҙөм йыйыу. Йөҙөм киптереү.* ■ *[Шарапсы:] Өс шәлкем бешкән йөҙөм һыға инем, ҡыҙыл алтын касаларға ҡоя инем, Раянға һона инем, ул эсте имде.* Эпостан. *Өрөк, алма, хөрмәләр бешеп килгән, йөҙөмдөң шәрбәтле һутҡа тулышҡан мәле.* Ә. Хәкимов. ● *Етем балаға йөҙөм еләге лә аш.* Мәҡәл. *Тура булһаң, түҙем бул, телгә татлы йөҙөм бул.* Мәҡәл.

3. Шул емештең махсус киптерелгән төрө. □ Изюм. / Изюмный. *Йөҙөм ҡушылған эремсек. Йөҙөм ашау.* ■ *Ҡарғалыла алған кипкән йөҙөмдәр ҙә, бохар ҡауыны ла бар ине.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡарсыҡ камзул кеҫәһенә тығылды һәм .. бер ус кәнфит, йөҙөм, өрөк сығарҙы.* Т. Ғарипова.

ЙӨҘӨМ АЛАҠАСЫ (Р.: пестрянка виноградная; И.: vine bud moth; Т.: güve türü) *и. зоол.*

Сыбар күбәләктәр ғаиләһенә ҡараған, ҡара-күрән төҫтәге, йөҙөм ағасына зыян килтереүсе ҡороҡос ялтыр күбәләк. □ Пестрянка виноградная (лат. *Theresia ampelophada*). *Йөҙөм алаҡастары үрсегән. Йөҙөм алаҡастарын ағыулау.*

ЙӨҘӨМ БӨРСӘҺЕ (Р.: блошка виноградная; И.: vine flea beetle; Т.: böcek türü) *и. зоол.*

Япраҡ мырҙары төрөнә ҡараған, ҡара-күк төҫтәге, йөҙөм ағасына зыян килтереүсе ваҡ ҡуңыҙ. □ Виноградная блошка (лат. *Altica ampelophaga*). *Йөҙөм бөрсәләренә ҡаршы көрәш. Йөҙөм бөрсәләрен ағыулау.*

ЙӨҘӨМ ҠУСҠАРЫ (Р.: улитка виноградная; И.: edible snail; Т.: salyangoz) *и. зоол.*

Көньяҡ, Урта һәм Көнсығыш Европала таралған ҡусҡар төрө. □ Улитка виноградная (лат. *Helix pomatia*). *Йөҙөм ҡусҡарының төҙөлөшө.* ■ *Йөҙөм ҡусҡарын аҙыҡ булараҡ та ҡулланалар.* Интернет селтәренән.

ЙӨҘӨМЛӨ (Р.: с изюмом; И.: having raisins; Т.: üzümlü) *с.*

Йөҙөм ҡушылған; йөҙөм ҡушып әҙерләнгән. □ С изюмом, изюмный, начинённый изюмом. *Йөҙөмлө күмәс. Йөҙөмлө бүкә. Йөҙөмлө былау.* ■ *Ярата ҡыҙым булканың ап-ағын, йөҙөмлөһөн.* Р. Ниғмәти.

ЙӨҘӨМСӨЛӨК (йөҙөмсөлөгө) (Р.: виноградарство; И.: viticulture; Т.: bağcılık) *и.*

Хужалыҡтың йөҙөм үҫтереү менән шөғөлләнгән тармағы. □ Виноградарство. *Йөҙөмсөлөк хужалығы. Йөҙөмсөлөк менән шөғөлләнеү. Йөҙөмсөлөктө үҫтереү.*

ЙӨҘӨМ ҮҪТЕРЕҮСЕ (Р.: виноградарь; И.: wine-grower; Т.: bağcı) *и.*

Йөҙөм үҫтереү менән шөғөлләнеүсе һөнәр эйәһе. □ Виноградарь. *Йөҙөм үҫтереүсе тәжрибәләре. Йөҙөм үҫтереүсе ҡыҙ.*

ЙӨҘӨМ ШАРАБЫ (Р.: вино виноградное; И.: wine made of grapes; Т.: şarap) *и.*

Йөҙөм емешенән эшләнгән шарап. □ Вино виноградное. *Йөҙөм шарабы эсеү. Йөҙөм шарабын әҙерләү процесы.*

ЙӨҘӨМ ШӘКӘРЕ (Р.: виноградный сахар; И.: grape sugar; Т.: üzüm şekeri) *и.*

Үҫемлек емештәрендә, тереклек организмында була торған глюкоза. □ Виноградный сахар. *Йөҙөм шәкәренең файҙаһы. Йөҙөм шәкәре һатып алыу. Йөҙөм шәкәре етештереү.*

ЙӨҘӨМ ЯПРАҠ ТӨРГӨСӨ (Р.: листовёртка гроздевая; И.: European grapevine moth; Т.: haçlı salkım güvesi) *и. зоол.*

Йөҙөмдө зарарлаусы ҡороткос күбәләк. □ Листовёртка гроздевая (лат. *Polychrosis botrana*). *Ағасты йөҙөм япраҡ төргөсө баҫҡан. Йөҙөм япраҡ төргөсөн ағыулау.*

ЙӨҘӨНСӨ (Р.: сотый; И.: the hundredth; Т.: yüzüncü) *рәт һ.*

Урын тәртибе 100 менән билдәләнгән. □ Сотый. *Йөҙөнсө көн. Йөҙөнсө уҡыусы. Йөҙөнсө тапҡыр.* ■ *[Әбей менән бабай — Исмайға:] Шул аҡсыстарҙы алып, йөҙөнсө бүлмәгә етһәң, унда ҡарт ятыр, ә һин эҙләгән ҡыҙ быяла шкафта булыр.* Әкиәттән.

ЙӨҘӨНӘН (Р.: из-за; И.: because of; Т.: yüzünden) *бәйл.*

Төп килештәге исем йәки исем ҡылым формаһындағы һүҙҙән һуң килеп, берәй төрлө сәбәп, маҡсатты белдерә. □ В порядке, из-за, в виде *(послелог в исх. п.). Рәхмәт йөҙөнән. Ихтирам йөҙөнән. Хөрмәт йөҙөнән.* ■ *Ҡартлас солоктоң кәңәшен үтәү йөҙөнән, ошонан аҙаҡ бөтә ишеткән-күргәндәремде аҡҡа теркәй барырға, бүтән кешеләр күңеленә лә еткерергә ҡарар иттем.* Н. Мусин. *[Мәһинур:] Һабантуй хөрмәтенә, йырсыларға ихтирам йөҙөнән мин дә бер йыр йырлайым әле.* Т. Ғарипова. *Батыр ханға хөрмәт йөҙөнән уның был теләген дә үтәргә әҙер, ләкин үҙен кеселекле күрһәтеп, ат өҫтөндә нык ултыра белмәүен, шунлыҡтан уның маҡтауына лайыҡ була алмаясағын әйтә.* Әкиәттән.

ЙӨҘӨП АЛЫУ (йөҙөп ал-) (Р.: поплавать; И.: have a swim; Т.: (bir süre) yüzmek) *ҡ.*

Бер аҙ йөҙөү. □ Поплавать. *Диңгеҙҙә йөҙөп алыу. Йылғала йөҙөп алыу. Бассейнда йөҙөп алыу.*

ЙӨҘӨП БАРЫУ (йөҙөп бар-) (Р.: плыть; И.: swim; go by water; Т.: yüzmek) *ҡ.*

1. Һыуҙа хәрәкәт итеү. □ Плыть. ■ *Икһеҙ-сикһеҙ киң, тәрән был һыу донъяһын ярып, йөҙөп барыу уға [Юлдашҡа] бөткөһөҙ шатлыҡ, ғорурлыҡ бирә ине.* З. Биишева.

2. Һыу транспортында барыу. □ Плавать *(на водном транспорте). Кәмәлә йөҙөп барыу. Теплоходта йөҙөп барыу. Катерҙа йөҙөп барыу.*

ЙӨҘӨП ЙӨРӨҮСЕ ҮҪЕМЛЕКТӘР *и. бот. ҡар.* **йөҙмә үҫемлектәр.** *Аквариумда*

йөҙөп йөрөүсе үҫемлектәр үҫтереү. Йөҙөп йөрөүсе үҫемлектәр тамыры.

ЙӨҘӨП КИТЕҮ (йөҙөп кит-) (Р.: поплыть; И.: start swimming; Т.: yüzmeye başlamak) *к.*

1. Һыуҙа хәрәкәт итә башлау. □ Поплыть, заплыть, уплыть. ■ *Тыңлаусан бәпкәләре инәһе артынан епкә тағылғандай эйәреп йөҙөп китте бит әле ул!* «Башҡортостан», 23 июль 2011. *Үҙен үҙе онотоп, ажғырып ятҡан тулҡындарға ҡаршы йөҙөп киткән [Аҙнағол].* З. Биишева.

2. Махсус йөҙгөс ҡоролманың ҡуҙғалып китеүе. □ Отплывать, уплыть. // Отплытие. *Кәмә йөҙөп китте. Караптың йөҙөп китеү ваҡыты етте.* ■ *Ә хәҙергә ике кәмә ауыл яғына ҡарай йөҙөп китте.* М. Кәрим. *Яр аҫтына төшөп, кәмәнең матурын ғына һайлап алып, ялтырап торған Ағиҙелдең түбән ағышына аҡрын ғына йөҙөп киттек.* Т. Йәнәби.

ЙӨҘӨП СЫҒЫУ (йөҙөп сыҡ-) (Р.: переплыть; И.: swim over; Т.: yüzerek geçmek) *к.*

Һыуҙы (йылға, күл, диңгеҙ һ. б.) аша сығыу. □ Переплыть, перебраться вплавь. *Йылғаны йөҙөп сығыу. Күлде кәмәлә йөҙөп сығыу. Икенсе ярға йөҙөп сығыу.*

ЙӨҘӨ СЫҒЫУ (йөҙө сыҡ-) (Р.: стать острым; И.: become sharp; Т.: sivrileşmek) *к. диал.*

Ҡайралып, игәләп үткергә әйләнеү; үткерләнеү. □ Стать острым. *Бысаҡтың йөҙө сығыу. Салғының йөҙө сығыу.*

ЙӨҘӨҮ I (йөҙ-) [боронғо төрки *йүз-* < **йүргь-*] (Р.: плавать; И.: swim; Т.: yüzmek) *к.*

1. Төрлө ҡулайлашҡан ағзалар ярҙамында һыуҙа хәрәкәт итеү *(балыҡ, һыу йәнлектәре һ. б. ҡарата).* □ Плавать, плыть. // Плавание. *Балыҡтар йөҙә. Йылан һыуҙа йөҙөп килә.* ■ *Бер һылыу ҡош йөҙгәнен Урал айыра күргән, ти.* «Урал батыр». *Тирмән быуаһында ҡаҙ-өйрәктәре һыу өҫтөн күрһәтмәй, шығырым тулып йөҙөп йөрөгәндәр.* М. Тажи. *Диңгеҙҙә балыҡ кеүек йөҙгән, елкәнле кәмәләрҙә балыҡ аулап, яҡын араны арҡыры-буй айҡап сыҡҡан ҡыйыу, көләкәс егет Юламанды һағынып хәтерләйме ул?* З. Биишева. *Һыуҙа балыҡ йөҙәләр, һыу һалҡынын һиҙәләр. Ҡашы ҡара бер матур бар, эстәремде өҙәләр.* Халыҡ йырынан. ● *Балыҡты йөҙөргә, үгеҙҙе һөҙөргә өйрәтмәйҙәр.* Мәҡәл. *Күлдә йөҙгән күк өйрәк сүл ҡәҙерен белмәй.* Мәҡәл. *Үҙәндә йөҙгән балыҡтың үҙәге талмаҫ.* Мәҡәл.

2. Ҡул, аяҡ, тәнде ҡыбырлатып, һыуҙа хәрәкәт итеү. □ Плавать, плыть. // Плавание. *Шәп йөҙөү. Йөҙә белеү. Арҡала йөҙөү. Йөҙөргә өйрәнеү.* ■ *Үргә табан йөҙөү — ағым ыңғайына килеү түгел икән, ынтылған һайын алда тулҡын күтәрелә лә ҡабат үҙ күкрәгеңә ҡаҡлыға, ниндәйҙер һалҡын көс артҡа этәрә.* Н. Мусин. *Йөҙөү өсөн һыуға ингән кеше лә, бер саҡ килеп, барыбер ярға сығырға мәжбүр була.* К. Мәргән. *Беҙ шоңҡарҙар инек, хәҙер инде ҡул сыныҡты оя төҙөргә, ул йорт ҡоя, ә мин өйрәндем тулҡындарға ҡаршы йөҙөргә.* Ғ. Сәләм. ● *Йөҙһәң, юғарыға йөҙ.* Мәҡәл. *«Үҙем беләм» тигән үргә йөҙмәҫ.* Мәҡәл. *Һыуға ингәнсе, йөҙөргә өйрән.* Мәҡәл. *Ағымға ҡаршы йөҙөү ауыр.* Мәҡәл.

3. Махсус ҡулайламалар ярҙамында һыу өҫтөндә йәки һыу аҫтында хәрәкәт итеү *(кәмә, пароход һ. б. ҡарата).* □ Плыть. *Кәмә йөҙә. Яхта йөҙә.* ■ *Көҙгө кеүек йылтырап хәрәкәтһеҙ тынып ятҡан зәңгәр диңгеҙ бушлығында яңғыҙ карап йөҙә.* З. Биишева. *Пароход мороно менән аҡ тулҡындарҙы яра-яра йөҙҙө лә йөҙҙө.* М. Тажи. *Кәмәләр сыҙаны, утлы өйөрмәгә ҡаршы йөҙөүен дауам итте.* Я. Хамматов.

4. Һыу транспортында барыу. □ Плыть. *Кәмәлә йөҙөү. Яхтала йөҙөү. Катерҙа йөҙөү.* ■ *Ә Иҙелдә йәштәр йырлай, көлә, кәмәләрҙә йөҙә уҙышып.* Р. Ғарипов.

5. Һыу өҫтөндә тотолоп тороу, батмау. □ Плыть, держаться на плаву (на воде). *Һыуҙың өҫтөндә нефть йөҙөп йөрөй. Күлдә май йөҙә.* ■ *Ҡыҙ һыу өҫтөнә ҡараһа, бер үпкә йөҙөп йөрөй, ти.* Әкиәттән.

6. Һауала талғын ғына хәрәкәт итеү. □ Плавно передвигаться на небе, в воздухе; плыть. *Тулған ай йөҙә. Һауала болоттар йөҙә.* ■ *Мифтахетдин, туҙанды кисеп барыуынан туҡталыбыраҡ, төпһөҙ күм-күк һауа киңлегендә япа-яңғыҙы йөҙгән бөркөттө*

күҙәтте. Я. Хамматов. *Күк йөҙө салт аяҡ ине. Баш өҫтөндә, зәңгәр күк буштығында, тулы ай йөҙөп йөрөй.* М. Тажи. *Оҙонаяҡ барған көндөң ҡояшы, көңгөрт еҙ табанса кеүек кенә булып, күк йөҙөндә йөҙөүендә булды.* Ғ. Дәүләтшин.

7. *күсм.* Тотош мансылыу, мас булыу. □ Наслаждаться, получать удовольствие; утопать. *Йөҙөп ҡунаҡ булыу.* ■ *Улар ҙа [ат ҡарактары] бер ҡыл да ҡыбырлатманы, балда-майҙа йөҙҙөләр.* Р. Камал. *[Бәндәбикә — Ерәнсә сәсәнгә:] Ҡымыҙҙа йөҙөп ҡунаҡ булдығыҙ. Ҡурай уйнап, күңел астығыҙ.* Халыҡ ижадынан.

8. *күсм.* Тотош бирелеү; сумыу. □ Погружаться *во что,* предаваться *чему. Шатлыҡта йөҙөү. Хыялдарҙа йөҙөү. Өмөтһеҙлектә йөҙөү.* ■ *Етәкләшеп гиҙҙек саукалыҡты, күңелдәрҙә — сабый сафлығы. Икәүләшеп йөҙгән хыялдарҙа — ап-аҡ туҙҙың һөтһәй аҡлығы.* Картотека фондынан.

♦ **Йөҙөп йәшәү** иркен, мул йәшәү. □ Жить припеваючи. **Йөҙөп эшләү** күңел һалып, ихласлап эшләү. □ Работать с желанием. **Майҙа (***йәки* **май эсендә) йөҙөү** рәхәт, мул тормошта йәшәү. □ Жить богато, в полном достатке. ■ *[Гәрәй — Шәүәлигә:] Юҡ, өҙмә һин өмөтөңдө, тағы ҡайтыр ул замандар, май эсендә йөҙгән бөйөр һымаҡ, рәхәт йәшәрбеҙ.* Б. Бикбай. **Өҫтән йөҙөү** *ниндәйҙер* мәсьәлә буйынса еңел фекер йөрөтөү. □ Рассуждать поверхностно. ■ *[Кәбир:] Ғәфү ит, Сабир, был тәңгәлдә һин өҫтән йөҙәһең кеүек тойола миңә. Ә бында бит төптәнерәк ҡарарға кәрәк.* Яр. Вәлиев. **Һай йөҙөү** *ниндәйҙер* бер өлкәлә әҙ, насар белемле булыу, өҫтән генә фекер йөрөтөү. □ Мелко плавать *(плохо разбираться в каком-л. деле).* ■ *Быға тиклем һорауҙар бирмәй йөрөгән Нигмәт, аттар тирәһендә Кругловаың һайыраҡ йөҙгәнен аңлап, үҙе төпсөнөргә тотондо.* Б. Бикбай. *Бындай мәсьәләләрҙә мин үҙем дә һай йөҙәм йөҙөүен.* К. Мәргән.

ЙӨҘӨҮ II (йөҙ-) (Р.: ползать на четвереньках; И.: crawl on all fours; Т.: emeklemek) *ҡ. диал.*

Йөгөнөкләп, ҡул-аяҡҡа таянып хәрәкәт итеү, имгәкләү. □ Ползать на четвереньках. *Бала йөҙөп йөрөй. Сабый йөҙөп китте. Бала иҙәндә йөҙә башланы.*

ЙӨҘӨҮ БАССЕЙНЫ (Р.: плавательный бассейн; И.: swimming pool; Т.: yüzme havuzu) *и.*

Йөҙөү, һыу инеү өсөн йәки төрлө һынауҙар үткәреү өсөн тәғәйенләнгән махсус һалма күл. □ Плавательный бассейн. *Йөҙөү бассейны төҙөү. Йөҙөү бассейнын асыу. Мәктәптә балалар өсөн йөҙөү бассейны ла бар.* ■ *Проект илдәге юғары уҡыу йорттарында йөҙөү бассейндары төҙөүҙе күҙаллай.* «Башҡортостан», 2 ноябрь 2010.

ЙӨҘӨҮ ҠЫУЫҒЫ (Р.: пузырь плавательный; И.: fish sound, swimming bladder; Т.: hava kesesi) *и. зоол.*

Балыҡтарҙың умыртҡалыҡ аҫтында урынлашҡан йөҙөү, тын алыу, тауыш сығарыу функцияларын башҡарған ағза. □ Пузырь плавательный. *Балыҡтарҙың йөҙөү ҡыуығы. Йөҙөү ҡыуығының шешеүе.*

ЙӨҘӨҮСЕ I (Р.: пловец; И.: swimmer; Т.: yüzücü) *и.*

Йөҙә белеүсе, һыуҙа йөҙөп йөрөүсе. □ Пловец. *Яҡшы йөҙөүсе. Йөҙөүселәр ярышы.* ■ *[Линара:] Ял көндәре пляжға барып, рәхәтләнеп йөҙә торғайным. Рафиҡ белә, мин бит — йөҙөүсе.* Л. Яҡшыбаева. *Талдар араһынан, кемдең дә булһа нәмәләрен сәлергә теләгән ҡараҡ һымаҡ, ярға яҡынлашып, һыуҙа йөҙөүселәргә күҙҙәремде ташланым.* Ғ. Хәйри. *Бына Ағиҙелдең өҫтө, унда кәмәлә йөҙөүселәр шатланышалар.* Б. Ишемғол.

ЙӨҘӨҮСЕ II (Р.: плавающий; И.: swimming; Т.: yüzen) *с.*

Йөҙә белгән, һыуҙа йөҙөп йөрөгән. □ Плавающий. *Йөҙөүсе ҡош. Йөҙөүсе хайуан.* ■ *Һыу өҫтө пароходтарҙан таралған кәмәләр, йөҙөүсе кешеләр менән сыбарланды.* И. Насыри.

ЙӨҘӨҮСЕ ҺЫУ ЕБӘГЕ (Р.: рдест плавающий; И.: floating pondweed; Т.: deniz dili) *и. бот.*

Һыуҙа үҫкән күп йыллыҡ үлән. □ Рдест плавающий; водяная капуста (лат. *Potamogeton natans*). ■ *Күпселек осраҡта йөҙөүсе*

һыу ебәгеп сөсө һыулы күлдәрҙә осратырға мөмкин. Интернет селтәренән.

ЙӨҘӨҮ ЯРЫҺЫ (Р.: перепонка плавательная; И.: web, webbing; Т.: hicap) *и. зоол.*

Ҡайһы бер ҡош, тәлмәрйен аяҡтарының бармаҡтары араһындағы йөҙөүгә ярҙам итә торған ярылар. □ Перепонка плавательная. *Тәлмәрйендең йөҙөү ярыһы зарарланған. Йөҙөү ярыһы функцияһы.*

ЙӨҘ ТАПҠЫР *р. кар.* **йөҙ ҡабат.** *Йөҙ тапҡыр ҡабатлау. Йөҙ тапҡыр уҡыу.* ■ *[Мәфтүхә:] Ул [Баян] инде бындағы ғәйбәттәрҙе йөҙ тапҡыр арттырылған килеш ишеткәндер.* Ғ. Хәйри. *[Нарморат – Һабрауға:] Тәүарих өйрәнеү үкенестән, өмөтһөҙлөктән башҡа бер ни ҙә бирмәй шул. Һин уҡыған китаптарҙағы ҡанлы ваҡиғалар ҙа, әлегеләре лә борон йөҙ тапҡыр булып үҙған.* Ә. Хәкимов.

ЙӨҘ ТҮБӘН (Р.: лицом вниз; И.: facedown; Т.: yüzükoyun) *р.*

Йөҙ менән аҫҡа ҡарап, ҡапланып. □ Лицом вниз, ничком. *Йөҙ түбән йығылыу. Йөҙ түбән барып төшөү.* ■ *Теге ҡыҙ ҙа ҡурҡыуынан йөҙ түбән әйләнде.* Б. Хәсән. *Шул ваҡыт өҙөлөп корһаҡ асты. Мин шуны баҫыу өсөн өлпө төбөнә йөҙ түбән төшөп яттым.* Д. Юлтый. *Сәйҙел тынды, Зәйнәп, битен ҡаплап, карауатҡа ятты йөҙ түбән.* Ғ. Сәләм. *Ай салҡан тыуһа, шул айҙа аяҙға, йөҙ түбән тыуһа, яуынға булыр.* Һынамыш.

ЙӨҘ ТҮБӘН КИЛЕҮ (йөҙ түбән кил-) (Р.: упасть лицом вниз; И.: fall facedown; Т.: yüzkoyun yere kapanmak) *ҡ.*

1. Йөҙ менән ҡапланыу. □ Упасть лицом вниз. *Йөҙ түбән килеп төшөү. Йөҙ түбән килеп ятыу. Мин бер ташҡа эләгеп йөҙ түбән килдем.*

2. *тупаҫ.* Ютҡа сығыу, дөмөгөү. □ Подыхать, околевать. *Дошмандар бер-бер артлы йөҙ түбән килә башланылар. Йөҙ түбән килгер.*

ЙӨҘ ТҮБӘН КИТЕҮ (йөҙ түбән кит-) *ҡ. кар.* **йөҙ түбән килеү 2.** ■ *[Сурағол:] Хәбиҙең йөҙ түбән китеүе минең өсөн ғәжәп түгел.* Т. Хәйбуллин.

ЙӨҘ ТҮБӘН ҠАПЛАНЫУ (йөҙ түбән ҡаплан-) *ҡ. кар.* **йөҙ түбән килеү 1.** *Йөҙ түбән ҡапланған һалдаттар өйкөлөшөп ята. Алдағы һалдат йөҙ түбән ҡапланды.*

ЙӨҘ ТҮБӘН ШЕШЕК (шешеге) (Р.: закрытый чирей; И.: furuncle; Т.: kapalı çıban) *и. диал.*

Бөтәү шешек. □ Закрытый чирей, закрытая опухоль. *Йөҙ түбән шешеккә ҡаршы дауа. Йөҙ түбән шешек сығыу. Йөҙ түбән шешекте һытыу.*

ЙӨҘ ТҮБӘН ЯТЫУ (йөҙ түбән ят-) (Р.: лежать лицом вниз; И.: lie with one's face down; Т.: yüzkoyun yere kapanmak) *ҡ.*

Йөҙ менән аҫҡа табан ҡарап ятыу. □ Лежать лицом вниз, ничком. ■ *Бер аҙ уҙа биргәс, әлеге малай, йөҙ түбән ятып, ҡамыш араһындағы икәүҙе күҙәтергә кереште.* М. Кәрим. *Беҙ икәүләп йәшел үләнгә йөҙ түбән яттыҡ.* Д. Юлтый. *Шәһиҙә, диванға йөҙ түбән ятып, рәхәтләнеп иланы.* И. Абдуллин.

ЙӨҘӘ (Р.: совсем; И.: quite; Т.: büsbütün) *р. диал.*

Бөтөнләй, шыпа. □ Совсем. *Йөҙә шымып ҡалыу. Йөҙә уҡый белмәү.*

ЙӨҘӘНЕҮ (йөҙән-) (Р.: обессилеть; И.: lose one's strength; Т.: kuvvetten düşmek) *ҡ.*

Ныҡ йонсоп, кәрһеҙ булыу. □ Обессилеть, устать. *Йөҙәнеп бөтөү. Йөҙәнеп китеү.* ■ *[Бабай:] Ул ҡарттар хәҙер йөҙәнеп, дүрт аяҡлап йөрөй.* Әкиәттән.

ЙӨҘӘР (Р.: по сто; И. : hundreds; a hundred each; Т.: yüzer) *бул. һ.*

Һәр бере йөҙҙән торған, йөҙгә тиң. □ По сто. *Йөҙәр баш мал. Йөҙәр һум аҡса.* ■ *Йөҙәр йыл буйы туңып ятҡан ауыр боҙ иреп шартланы һымаҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Баласаға тейәп, йөҙәр саҡрым ер үтер хәле ҡалмаған, ти, уның [Мәхмүттең].* З. Биишева. *[Ҡурайсының һигеҙенсе ырыу улына арнау һүҙе:] Ергә сәскән ашлыҡтарың ишелешеп уңырҙар. Бөгөнгө лә зарар күрмәй, йөҙәр бөртөк булырҙар.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

ЙӨҘӘРЛӘГӘН (Р.: сотни; И.: hundreds of; Т.: yüzlerce) *сама һ.*

Бер нисә йөҙ тирәһе, бер нисә йөҙгә яҡын. □ Сотни, несколько сотен. *Йөҙәрләгән бала. Йөҙәрләгән миллион.* ■ *Аяҡтарың тупраҡҡа тейеп тә өлгөрмәй, йөҙәрләгән ҡул үҙеңде*

әләктереп ала ла күккә сөйә. Д. Бүләков. *Йөҙәрләгән буш арбалар янында, төрлө яктан килгән ылаусылар бер урынға йыйылып, бейек өрөндөк үрәсәһенә баҫып һөйләүсе ораторҙы тыңлайҙар ине.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӨҘӘРЛӘП (Р.: сотнями; И.: by the hundred; Т.: yüzlerse) *сама h.*

Йөҙәре-йөҙәре менән. □ Сотнями, по сотне, по сто. *Йөҙәрләп һанау. Йөҙәрләп ҡушыу. Йөҙәрләп бүлеү.* ■ *Үҙәктәге ойошмаларҙан иһә был ғәйәт ҙур дары мискәһенә табан йөҙәрләп бикфорд сымы һуҙылған.* Р. Бикбаев. *[Был йортта эшселәр] йөҙәрләп, унан да күпләп тороп, көн итәләр.* Т. Хәйбуллин.

ЙӨҘӘТЕҮ (йөҙәт-) (Р.: изводить; И.: exhaust pester; Т.: eziyet etmek) *ҡ.*

1. Ыҙа сиктереү, ыҙалатыу. □ Изводить, изматывать, мучить, изнурять. // Изматывание, мучение. *Ауыр эш йөҙәтте. Ауырыу йөҙәтте.* ■ *Тәүҙә француздың тонәтмәләре, дарыуҙары һис килешмәй, укшытып йөҙәтте.* Ф. Янышев. *Эй, һеҙ, юлдар, икһеҙ-сикһеҙ юлдар, һеҙ шаһиты ауыр хеҙмәттең: күпме юлдар беҙҙе ҡыуандырҙы, күпме юлдар беҙҙе йөҙәтте.* Р. Ғарипов. *[Трактор] тәүҙә ҡабынмайынса йөҙәтте, унан картерҙан май ағып маҙаға тейҙе.* Ғ. Лоҡманов.

2. Теңкәне ҡоротоу, аптыратыу, тынғылыҡ бирмәү, йәнгә тейеү. □ Надоедать, докучать, досаждать. *Юкка бәйләнеп йөҙәтеү.* ■ *Элекке ваҡытта .. күҙгә төшөп йөҙәтә торған шоморт ҡара сәстәрен артҡа ҡайырып ташлағанғамы, [Юлдыбайҙың] маңлайы боронғонан киңерәк.* Һ. Дәүләтшина. *[Шәүрә:] Хәсәнде әйтәм, бәләкәс бит әле ул, аңламай, икмәк һорап йөҙәтә.* З. Биишева. *Турғайҙар бик йөҙәткәс, малайҙар тары өҫтөнә сыбыҡтар ҡаҙап, иҫке сепрәктәр ҙә элеп ҡараныҙар.* Ж. Кейекбаев.

3. *диал.* Оялтыу. □ Смущать, стыдить. ■ *Бәй, илгә ҡайтҡайным, иптәштәрем миңә сат йәбеште: «Эй, йә-йәй! Шиғырҙарың бик шәп икән, баҫтыр ғына, иптәш!» — тинеләр, йөҙәтеп бөтөрҙөләр.* Ш. Бабич.

ЙӨҘӘТКЕС (Р.: докучливый; И.: importunate; Т.: can sıkıcı; usanç verici) *с.*

Ыҙа, яфа сиктереп, теңкәне ҡорота торған; йонсотҡос. □ Докучливый, назойливый; изнурительный. *Йөҙәткес кеше. Йөҙәткес ямғыр. Йөҙәткес буран.* ■ *Башта изге идеал, ҙур көс биргән уйҙар, теләктәр бара-тора йөҙәткес, туйҙырғыс буш фекер, хыялдар ғына булып ҡалдылар.* Ә. Чаныш. *Унан [ялдан] ҡайтыу менән, йәнә лә йөҙәткес һалдат йөгөн тартырға егеләһең.* Д. Юлтый.

ЙӨҘӘҮ I (йөҙә-) (Р.: мучиться; И.: exhaust oneself; Т.: ıstırap çekmek; azap çekmek) *ҡ.*

1. Ыҙа, яфа сигеү; йонсоу. □ Мучиться, изнуряться, выбиваться из сил, обессилевать. // Мучение, изнурение. *Аслыҡтан йөҙәү. Аҡсаһыҙ йөҙәү. Ауырыуҙан йөҙәү.* ■ *Халыҡ инде өсөнсө йылға һуҙылған ҡанлы һуғыштан бик нык йөҙәгән.* С. Агиш. *Ҡурҡыныстар аҫтында йөрөүҙән, йоҡоһоҙлоҡтан йөҙәүҙән тамам хәлдән тайған килеш, Гәнәкә килеп инә.* М. Буранғолов.

2. Тәҡәтһеҙ булыу, аптырау. □ Уставать, измучиться *(от надоедливых приставаний, посещений, упрёков и т. п.);* терзаться, истомиться. *Ҡунаҡ-төшөмдән йөҙәү. Тауыштан йөҙәү.* ■ *Унан һуң үҙе кескәй генә ауыл булыуға ҡарамаҫтан, ҡайһы урамдан ҡайҙа барырға белмәй, [егет] йөҙәп бөттө.* Ғ. Хәйри. *Кинйә улы уҡты таба алмай йөҙәп бөткән.* Әкиәттән. *Иҙеүкәй юл эҙләне, сығыр юлын күҙләне, аптыраны, йөҙәне, Аҡбуҙатты алырға һис бер әмәл тапманы.* Эпостан. ● *Аптыраған, йөҙәгән — артын мейескә терәгән.* Мәҡәл.

3. *диал.* Оялыу, ҡаушау. □ Теряться от волнения, стыда, страха и т. п. *Йөҙәп йөрөү. Йөҙәй белмәү.* ■ *Ир, ысынлап та, .. баҙаған, шай, ни әйтергә белмәй йөҙәй, күҙҙәре ҡамаша.* Р. Камал.

ЙӨҘӘҮ II (Р.: измученный; И.: exhausted; Т.: yorgun; bitkin) *с.*

1. Аслыҡтан, юҡлыҡтан хәлһеҙләнгән; йонсоу. □ Измученный, утомлённый, изнурённый. *Йөҙәү ҡарт. Йөҙәү мал.* ■ *Ниңә тиһәң, үткән ҡыш ҡарҙың ҡалын булыуы сәбәпле, йылҡы тибендән үҙенең һөлдәһен генә алып сыҡты. Йөҙәү булды.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Йөҙәүҙең йөҙөн йыртма.* Мәҡәл.

2. Төҙәлмәҫлек, дауалап булмай торған *(ауырыу тураһында)*. □ Неизлечимый. *Йөҙәү кеше. Йөҙәү ауырыу.*

ЙӨҘӘШ (Р.: очень худой; И.: very lean; skinny; T.: zayıf) *с. диал.*

Артыҡ ябыҡ. □ Очень худой *(о человеке). Йөҙәш ир. Йөҙәш булыу. Йөҙәшкә әйләнеү.*

ЙӨҘӘШЕҮ (йөҙәш-) (Р.: обессилеть; И.: lose one's strength; T.: kuvvetten düşmek) *ҡ. диал.*

1. Аслыҡтан хәлһеҙләнеү. □ Обессилеть *(от голода). Аслыҡтан йөҙәшеү. Аслыҡлы йөрөп, йөҙәшеп бөткән.*

2. Йонсоу. □ Ослабеть. *Ҡарт йөҙәшкән. Йөҙәшеп бөткән эшселәр. Ауыр эштән йөҙәшеү.*

ЙӨҘ ЯБЫУ (Р.: вещи, принесённые во время проводов умершего; И.: things brought during a funeral; T.: cenaze için akraba v.s. getiren eşyalar) *и. этн. диал.*

Мәйет оҙатҡанда килтерелгән төрлө таҫтамал, яулыҡ, ҡулъяулыҡ. □ Вещи *(полотенца, платки, носовые платки)*, принесённые во время проводов умершего. *Йөҙ ябыу йолаһы. Йөҙ ябыуға һалынған әйберҙәр.*

ЙӨЗАФ *с. ҡар.* **йозаф.** *Йөзаф һүҙ һөйләү.*

ЙӨЙ (Р.: шов; И.: seam; suture; T.: yiv) *и.*

1. Тегеп ҡуйған туҡыма, күн киҫәктәренең һ. б. тоташҡан урыны. □ Шов; строчка, стёжка. // Шовный. *Кейем йөйө. Йөйҙән һүтеү.* ● *Ебенә күрә йөйө, йөйөнә күрә көйө.* Мәҡәл. *Туғыҙ йөйө булһа ла, тун якшы.* Мәҡәл. *Энәһеҙ йөй булмаҫ, инәһеҙ йүн булмаҫ.* Мәҡәл. *Йөйө күптең көйө күп.* Мәҡәл.

2. *Ниҙеңдер* өлөштәре тоташҡан урын. □ Рубец. *Баш һөйәге йөйҙәре.* ● *Яман ҡайнә йомортҡанан йөй табыр.* Мәҡәл. *Йомортҡала ғына йөй булмай.* Мәҡәл.

3. *тех.* Деталь, ҡоролмаларҙың тоташҡан урыны. □ Шов; паз, фальц. *Иретеп йәбештерелгән йөй.*

4. *мед.* Хирургия операцияһы барышында туҡымаларҙы тоташтырған урын. □ Шов. *Маңлай-танау йөйө. Сат йөйө. Тире йөйө. Тешле йөй. Янсыҡ һымаҡ йөй. Эсәк йөйө. Ҡул менән тегелгән йөй.*

5. Яранан ҡалған эҙ. □ Шрам, рубец *(после заживания раны). Яра йөйө. Йәрәхәт йөйө.* ■ *Ләкин унда [табанда] былтырғы яраларҙың йөйҙәренән башҡа телгә алырлыҡ һис нәмә табылманы.* М. Кәрим. *Урта буйлы, утыҙға етеп килгән кеше икән. Битендә йәрәхәт йөйө бар, ти.* Ә. Хәкимов. *Әре-һәре генә яҡтылыҡта сырыштары, битенең янғандан ҡалған йөйҙәре артыҡ күҙгә ташланып тормаһас, Барсынбикә йәшерәк күренгәндәй, сөм-ҡара күҙҙәрендә нур сәсеп осҡондар һикерешкәндәй.* Т. Ғарипова.

♦ **Йөй ҡалдырмай эшләү** (*йәки* **башҡарыу, атҡарыу**) һиҙелерлек, беленерлек урын ҡалдырмай эшләү. □ Не оставлять следов. ■ *Шәрғиә бөтәһенә өлгөрә, ҡыҙҙарҙың ни йомошо төшһә, һәммәһен йөй ҡалдырмай атҡара, сер һаҡлай белә.* Ә. Хәкимов. **Йөйөн йөйгә килтереү** 1) бер тигеҙ йөй менән тегеү. □ Шить одинаковыми стежками; 2) бик бөхтәләп эшләү йәки ентекләп һөйләү. □ Делать *что-л.* тщательно. **Йөйөнә сөй ҡағыу** таралырға торған эште таркатып ебәреү. □ Распустить *что-л.* **Туҡһан ямау, ҡырҡ йөй** күп ямаулы *(кейемгә ҡарата)*. □ Изношенная, латка на латке *(об одежде)*.

ЙӨЙҘӨ АЛЫУ (йөйҙө ал-) (Р.: снять швы; И.: take sutures off; T.: dikişlerini sökmek) *ҡ. мед.*

Яра уңалғас, теккән ебен алыу. □ Снять швы. *Шәфҡәт туташы йөйҙө алырға булды. Йөйөн алып ҡайтарыу.*

ЙӨЙЛӨ (Р.: шовный; И.: having a seam; T.: yivli) *с.*

Йөйө булған. □ Шовный, со швами. *Йөйлө торба. Йөйлө туҡыма. Йөйлө материал.*

ЙӨЙЛӘНЕҮ (йөйлән-) (Р.: рубцеваться; И.: cicatrize; T.: yivlenmek) *ҡ.*

Йөйө беленеү, йөйлө булыу. □ Рубцеваться, образоваться *(о шве)*; появиться *(о шраме или рубце от раны). Йөйләнеп уңалыу. Йөйләнеп тороу.* ■ *Уның [Әхмәтсафаның] йөҙө үҙгәрҙе, күҙҙәре ҡыҫыла төштө, эйәгендәге яра, йөйләнеп, нығырак беленде.* А. Карнай. *Урҙа яһаҡсыһының ҡамсы эҙе әлегәсә [Һабрауҙың] арҡаһында йөйләнеп ята.* Ә. Хәкимов.

ЙӨЙЛӘНӘ ТӨШӨҮ (йөйләнә төш-) (Р.: слегка зарубцеваться; И.: cicatrize slightly; Т.: kapanavermek) *ҡ.*

Яраның бер аҙ бөтәшә башлауы, йөйгә әйләнеүе. □ Слегка зарубцеваться. *Операциянан ҡалған яра йөйләнә төштө. Ҡулдағы яра йөйләнә төштө.*

ЙӨЙЛӘП АЛЫУ (йөйләп ал-) (Р.: соединить части; И.: stitch together; Т.: yivlemek) *ҡ.*

Кейемдең айырым өлөштәрен беркетеп алыу. □ Соединить *(части одежды)*, застрочить *(вместе)*. *Еңдәрҙе йөйләп алыу. Бергә йөйләп алыу.*

ЙӨЙЛӘП ЕБӘРЕҮ (йөйләп ебәр-) (Р.: наложить швы; И.: stitch up; Т.: dikiş atmak) *ҡ.*

Ситтәрҙе бергә беркетеп ебәреү. □ Соединить швы.

ЙӨЙЛӘП СЫҒЫУ (йөйләп сыҡ-) (Р.: соединить швы; И.: stitch together; Т.: birleştirmek) *ҡ.*

Нимәнеңдер ситтәрен тоташтырып сығыу. □ Соединить швы. *Ҡулдәктең итәген йөйләп сығыу.*

ЙӨЙЛӘҮ (йөйлә-) (Р.: наложить швы; И.: stitch up; Т.: yivlemek) *ҡ.*

Махсус материал менән тегеп, ситтәрен тоташтырыу. □ Накладывать швы; делать шов; вытачивать. *Йөйләп тегеү. Йөйләп йәбештереү.* ■ *Ҡушыла уға [тутыйғошҡа] бит ни бары түрәсә уйларға, һөйләргә; түрәһе башлаған йөмләне йөпләргә, йөйләргә, төйнәргә.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

ЙӨЙӨКҺӨҮ (йөйөкһө-) (Р.: стать ухабистым; И.: become bumpy; Т.: pürüzlü olmak) *ҡ. диал.*

Һикәлтәләнеү, соҡорланыу. □ Стать ухабистым, неровным *(о дороге)*. *Сана юлы йөйөкһөгән. Урамдан ауыр техника йөрөп, юл йөйөкһөгән.*

ЙӨЙ ҺАЛЫУ (йөй һал-) (Р.: наложить швы; И.: put in (the) stitches; Т.: dikiş atmak) *ҡ. мед.*

Махсус материал менән тегеп, яраның ситтәрен тоташтырыу. □ Наложить швы. *Һалдаттың битенә йөй һалдылар. Дөрөҫ итеп йөй һалыу. Йөй һалыу ысулдары.*

ЙӨЙҺӨҘ (Р.: бесшовный; И.: seamless; Т.: dikişsiz) *с.*

Йөйө булмаған. □ Бесшовный. *Йөйһөҙ торба. Йөйһөҙ итеп йәбештереү.* ■ *Бөтәһе лә, Оло инәйем әйтмешләй, эт тәнендәге йәрәхәт кеүек, йөйһөҙ төҙәлә килде.* М. Кәрим.

♦ **Йөйһөҙ ерҙән (йәки йомортҡанан) йөй эҙләү** юҡ ғәйепте эҙләү. □ Стараться найти изъяны, недостатки *у кого*, придираться *к кому*. ■ *Шәһәрбаныу Кәлимәнең ошо яуабынан, йомортҡанан йөй эҙләгәндәй итеп, тауышын күтәрә биреп, төрткө телләнеп дауам итте.* Һ. Дәүләтшина. *Әлдә Сәрби әбей, йомортҡанан йөй табырға торған әсе телле ҡәйнәләр кеүек, күп һүҙле кеше түгел.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӨК I (йөгө) [дөйөм төрки *йүк*] (Р.: воз; И.: load; cart; Т.: yük) *и.*

1. Юл өсөн тейәлгән, йөкмәлгән нәмә. □ Воз, груз, кладь, поклажа. / Грузовой. *Еңел йөк. Ауыр йөк. Йөк аты. Йөк вагоны. Йөк транспорты. Йөк тейәү. Йөк бушатыу. Йөк тейәлгән вагон.* ■ *[Урал:] Алтын һалыр йөгөм юҡ, ынйы тағыр кемем юҡ, яҡшынан бүтән уйым юҡ; үлемдән бүтән бераүҙән юллай торған дауым юҡ.* «Урал батыр». *Бер сәғәттән һуң инде баҫыу ҡапҡаһынан өҫтөнә Фатима ултырған көлтә йөгө күренде.* Ғ. Хәйри. *Дүрт мең кешене берләштереүсе уҡсылар отряды, ике казачий полкы, башҡорт-мишәр ғәскәре, йөктәр артыулы ун меңгә яҡын дөйә һәм пушкалар менән походка сыҡҡас та, көндәр боҙолдо.* Я. Хамматов. ● *Арбаңа ҡарап, йөк һал, атыңа ҡарап, юлға сыҡ.* Мәҡәл. *Арыҡ атҡа ҡамсы ла йөк.* Мәҡәл. *Атҡа әйәр йөк булмаҫ.* Мәҡәл. *Аттың үҙе ниндәй — йөгө шундай.* Мәҡәл. *Икмәк юлда йөк түгел.* Мәҡәл.

2. Тейәп ташый торған нәмәне самаса үлсәү берәмеге. □ Повозка, воз, груз. *Бер йөк утын. Бер ат йөгө. Ике машина йөгө.* ■ *Сынбулатов ҡыҙыл ылау менән фәләнсә йөк иген оҙаттыҡ, тип маҡтанды, колхозда эштәр ал да гөл, тип кенә әйтмәне.* М. Тажи. *Аҡйелек .. алты йөк утын тейәгән дә ҡайтырға сыҡҡан.* Әкиәттән. *Бәләкәй саналар менән булһа ла,*

ихатаға утыҙ йөк шыҡылдап торған ҡоро утын килеп инде бит! Ф. Иҫәнғолов.

3. *күсм.* Өҫкә төшкән ауыр эш, ҡыйынлыҡ. □ Нагрузка; обуза, бремя, тягость, забота. ■ *Тормош йөгөн тартмаған һылыу байталдар, үкенес, хәҙер күбәйҙе шул, бик күбәйҙе.* С. Ильясов. *Тормош йөгөм һаман арта бара. Йөгө барҙың үтер юлы бар. Алда юлдар яҡты, нурлылар.* Б. Ноғоманов. *Уға [Рәүфкә] шаҡтай ҡанһыҙ, тупаҫ ағаһы ҡулында үҫергә, бала саҡтан уҡ тормош йөгөн тартырға тура килде.* Ғ. Рамазанов.

4. Мәшәҡәт, бимаза. □ Обуза, бремя, тягость, тяжесть. *Кешегә йөк булыу.* ● *Бер ҡунаҡ — шатлыҡ, ике ҡунаҡ — артыҡ, өс ҡунаҡ — йөк.* Мәҡәл.

♦ **Йөккә кереү** *диал.* бурысты, яуаплылыҡты өҫкә алыу. □ Ручаться, поручаться *за кого.* ● *Йөккә кергәнсе, утҡа кер.* Мәҡәл. **Йөктөң ауырын тартыу** эштең иң ауырын, ҡатмарлыһын башҡарыу. □ Выполнять трудную часть работы. **Йөк төшөү** (*йәки* **төшкәндәй булыу**) *ниндәйҙер* хәлдән, бурыстан ҡотолоп, еңеллек һиҙеү. □ *соотв.* Гора с плеч свалилась. ■ *Ҡунаҡ һыйының хәҙер шаҡтай оҙаҡҡа һуҙылырын, ҡалған яғын инде үҙенән башҡа ла бик шәп атҡарып сығасаҡтарын тойған Шакир, өҫтөнән оло йөк төшкәндәй, яланға китеү яғын ҡарай башланы.* Р. Солтангәрәев. *Бер нисә йылға һуҙылған эшен тамамлағас, шағирҙың иңенән тауҙай йөк төшкәндәй булды.* Ә. Хәкимов.

ЙӨК II (йөгө) (Р.: ребёнок в утробе; И.: foetus; Т.: dölüt) *и.*

Ҡарындағы бала. □ Ребёнок в утробе. *Йөгө булыу. Йөккә ҡалыу.*

ЙӨК АВТОМОБИЛЕ (Р.: грузовой автомобиль; И.: lorry; Т.: kamyon) *и.*

Йөк ташыу өсөн тәғәйенләнгән автомобиль. □ Грузовой автомобиль, грузовая машина, грузовик. *Йөк автомобиле һатып алыу. Йөк автомобиле менән ташыу.* ■ *Төн тыныс, көндөҙгә шау-шыу, разведкаға төрлө яҡтан ағас, машина өлөштәре ташыусыларҙың, йөк автомобилдәренең тауыштары ла туҡтаған.* А. Таһиров. *Төбәгебеҙ баҫыуҙарынан ашлыҡ ташыуҙы, башлыса, Урал арьяғы МТС-ының йөк автомилдәре атҡара.* Интернет селтәренән.

ЙӨК АТЫ (Р.: ломовая лошадь; И.: carthorse; Т.: yük beygiri) *и.*

1. Йөк ташыусы ат. □ Ломовая лошадь. *Йөк аттары аҫрау.* ■ *[Азамат:] Шундай нәҫел аттары була, иптәш Мағазов, унан бына тигән арғымаҡ та, ялҡау ғына йөк аты ла һап була. Бөтәһе лә хужанан тора.* Р. Солтангәрәев.

2. *күсм.* Эш-йомоштан баш тартмай торған, бик күндәм кеше. □ Рабочая лошадь, лошадка *(о человеке). Ул бит йөк аты, бөтә эште уның өҫтөнә өйәләр.*

ЙӨК ЙӨРӨҮ (йөк йөрө-) *ҡ. диал ҡар.* **ылау йөрөү.**

ЙӨККӨН *и. диал. ҡар.* **йома.** *Йөккөн ҡайтыу. Йөккөн барыу. Йөккөн мәсеткә барыу.*

ЙӨК КҮТӘРГЕС (Р.: грузоподъёмник; И.: load lift; Т.: yük asansörü) *и.*

Йөк күтәрә торған машина. □ Грузоподъёмник. *Йөк күтәргестәр һатып алыу. Йөк күтәргестәр етештереү цехы.*

ЙӨК КҮТӘРЕҮСӘНЛЕК (күтәреүсәнлеге) (Р.: грузоподъёмность; И.: carrying, bearing capacity; Т.: terfi kudreti, lasta) *и. махс.*

Транспорт күтәрә алырҙай йөктөң массаһынан ғибәрәт булған техник характеристика; йөк күтәреү мөмкинлеге. □ Грузоподъёмность. *Крандың йөк күтәреүсәнлек көсө. Йөк күтәреүсәнлекте арттырыу.*

ЙӨККӘ ҠАЛЫУ (йөккә ҡал-) (Р.: забеременеть; И.: become pregnant; Т.: gebe kalmak) *ҡ.*

Балаға уҙыу. □ Забеременеть. *Табип ҡатынға йөккә ҡалыуы тураһында хәбәр итте. Өсөнсөгә йөккә ҡалыу. Йөккә ҡалған ҡатын.*

ЙӨККӘ УҘЫУ (йөккә уҙ-) *ҡ. ҡар.* **йөккә ҡалыу.** *Йөккә уҙған ҡатын үҙендә хәлһеҙлек тойҙо.*

ЙӨКЛӨ I (Р.: гружёный; И.: loaded; Т.: yüklü) *с.*

Йөк тейәлгән. □ Гружёный, с грузом, навьюченный. *Йөклө машина. Йөклө сана.* ■ *Оҙатылған ылауҙың бер нисәһе төш ауыуға йөклө көйө, бер аҙы буш әйләнеп ҡайтты.* З. Ураҡсин. *Ярышыусы уҙаҡтар, бер-береһенә күҙ һала-һала, ахмалға төшөп,*

тулы йөклө арбаларҙы һөйрәп сығарып киләләр ине. Ғ. Ибраһимов. *Күтәрмә, ағас күпер өҫтөнән йөклө арба уҙғандай, дөбөрләне.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӨКЛӨ II (Р.: беременная; И.: pregnant; Т.: hamile) *с. һөйл.*

Буйында балаһы бар; ауырлы. □ Беременная. ■ *[Мәрәһим үҙенең хатында] иҫәнһаулығын ғына һөйләгән дә йөклө ҡалған бисәһенә үтенесен әйткән.* М. Кәрим.

ЙӨКЛӨ ҠАТЫН (Р.: беременная женщина; И.: pregnant woman; Т.: hamile kadın) *и.*

1. Буйында балаһы булған, ауырлы ҡатын. □ Беременная женщина. ■ *Йөклө ҡатындарға ла уны [кесерткәнде] файҙаланыу тыйыла — ваҡытынан алда тулғаҡ тота башлауы ихтимал.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010.

2. *миф.* Хәүеф-хәтәрҙән һаҡланырға тейешле мифлаштырылған зат. □ Беременная женщина *(мифологизированное, подверженное опасности лицо).* ■ *Йөклө ҡатынға һуңғы айҙа яланбаш, яланаяҡ йөрөргә ярамай.* Башҡорттарҙың им-том китабынан.

ЙӨКЛӨЛӨК (йөклөлөгө) (Р.: беременность; И.: pregnancy; Т.: hamilelik) *и.*

Буйында балаһы булыу, ауырлы булыу хәле. □ Беременность. *Нормаль йөклөлөк. Аналыҡтан тыш йөклөлөк. Йөклөлөк һәм бала тыуҙырыу буйынса ял. Йөклөлөк мәшәҡәттәре.* ■ *Әсәкә һәләтлелекте юғалтыу, бала тәрбиәләү, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие уртаса эш хаҡынан сығып иҫәпләнә.* «Башҡортостан», 30 август 2011.

ЙӨКЛӘМ (Р.: вьюк; И.: load pack; Т.: yük) *и.*

Йөкмәп алырлыҡ күләм. □ Вьюк. *Бер йөкләм бесән алып ҡайтыу. Бер йөкләм утын.*

ЙӨКЛӘМӘ (Р.: обязательство; И.: obligation; Т.: görev) *и.*

1. Эш буйынса үҙ өҫтөңә алған йәки йөкмәтелгән бурыс. □ Обязательство; задание, поручение. *Йөкләмә биреү. Йөкләмә үтәү. Йөкләмә алыу. Йөкләмә ҡуйыу.* ■ *[Хәкимов:] Ғүмәров, әйт әле, йөкләмәләреңде нисек үтәргә уйлайһың?* Р. Байымов. *[Багаев:] Беҙҙең йөкләмә — бер миллион бот иген тапшырыу.* И. Абдуллин. *Бына ул [Мәҙинә] ҡулы ҡалтырай биреп, үҙ ихтыяры менән өҫтөнә аласаҡ йөкләмәне күсереп яҙҙы.* Ә. Хәкимов.

2. *икт.* Облигацияның бер төрө. □ Обязательство *(денежный заёмный документ). Өлөшлө йөкләмә. Йөкләмә алыу.*

ЙӨКЛӘНЕҮ (йөклән-) *ҡ. ҡар.* **йөкмәтелеү.** ■ *[Хәлил:] Беҙгә .. өҫкә йөкләнгән бурыстарҙы һис кәмселекһеҙ үтәргә өйрәнергә кәрәк.* Б. Дим. *Һәр дөйәгә йөкләнгән һыу эргәһенә ҡарауыл ҡуйылды.* А. Таһиров.

ЙӨКЛӘНЕШ (Р.: нагрузка; И.: load(ing); Т.: yükleme) *и. тех.*

Механизмдың эшләү ҡеүәте. □ Нагрузка. *Моторҙың иң юғары йөкләнеше. Йөкләнеш нормаларын арттырыу. Икеләтә йөкләнеш менән эшләү.*

ЙӨКЛӘНМӘ *и. диал. ҡар.* **йөкләмә.** *Йөкләнмә алыу. Йөкләнмә ҡуйыу.*

ЙӨКЛӘП (Р.: с грузом; И.: by the load; Т.: yük ile) *р.*

Йөк менән; йөккә һалып. □ С грузом, мешками, вьюками. *Йөкләп ташыу. Йөкләп оҙатыу. Йөкләп алып ҡайтыу. Йөкләп таратыу.* ■ *Йософ ағаларына йөкләп ашлыҡ биреп ебәрә.* К. Мәргән. *[Айбулат:] Һин, ағай, ишеткәнһеңдер, Кузьмин утарынан игенде ҡалаға илләшәр йөкләп оҙаталар.* Һ. Дәүләтшина. *Шәңгәрәйҙең сауҡанан йөкләп кенә ташыған утыны менән ус ялап буламы?* Т. Ғарипова.

ЙӨКЛӘТЕЛЕҮ (йөклә тел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йөкләтеү.** *страд. от* **йөкләтеү.** *Атҡа тоҡ йөкләтелде.* ■ *Ул [Козин] үҙенә йөкләтелгән эште тешһеҙ-өнһөҙ үтәп йөрөһә лә, директорға, хәҙер алтмышты ҡыуған ҡартҡа, асыуы ла килә.* Н. Мусин. *[Комиссар:] Һин — разведка командиры! Һиңә хәрби бурыс йөкләтелгән.* М. Кәрим. *[Сәйфелмөлөктөң] янындағы ике дәрүишкә иһә был ырыуҙарҙың аңын ислам нуры менән яҡтыртыу бурысы йөкләтелгәйне.* Ә. Хәкимов.

ЙӨКЛӘТЕҮ (йөкләт-) (Р.: взваливать *что-л.* тяжёлое; И.: load; Т.: yüklemek) *ҡ.*

1. Йөк (I, 1) һалып күтәртеү. □ Взваливать *что-л.* тяжёлое *на кого,* навьючить *кого чем. Атҡа йөкләтеү. Дөйәгә йөкләтеү.* ■ *[Йософ] ашап-эскәс, алтын һауытын кил-*

тертте, барыһының дөйәһенә йөк йөкләтте, Ибне Йәмин йөгөнә һауыт йәшертте. «Йософ менән Зөләйха». ● *Атыңды көсөнә күрә йөкләт.* Әйтем.

2. Үтәр өсөн *кемгәлер* тапшырыу. □ Возлагать, поручать. // Возложение. ■ *[Башлык:] Кәмә табыуҙы Өлгө Якупка йөкләтергә!* М. Кәрим. *Окшаш мифологик персонаждарға бер үк вазифа йөкләтеү, уларҙың индивидуаль һыҙаттары менән артык иҫәпләшмәү, — күрәһең, аң үҫешенең һуңғырак дәүерҙәрендә тыуған хәл.* Ф. Нәҙершина.

ЙӨКЛӘҮ (йөклә-) (Р.: взваливать себе на спину; И.: hoist; load; Т.: yüklenmek) *к.*

1. Йөк итеп һалыу; артыу. □ Взваливать себе на спину; нагружать, нагрузить, взвалить, навьючивать, навьючить. *Арҡаға йөкләп ташыу.* ■ *Әкиәтем китте, таш йөкләп, үҙем киттем, аш йөкмәп.* Әкиәттән. *Төйөнсөгөм йөкләп, каптыр тундан килеп индем, малай, калаға.* Ғ. Амантай. *Албаҫты ялбыр сәсле, шүрәле катын-кыҙ затынан итеп күрһәтелә, ул, ток шикелле, яурын аша арткa ташлап, йөкләп йөрөмәле, ғәләмәт ҙур имсәкле йөнтәҫ зат рәүешендә һүрәтләнә.* Ә. Сөләймәнов.

2. *күсм. кар.* **йөкмәү I, 2.** ■ *Улар [Сәлимә менән Хәмит] тырышып укыйҙар, өйҙә, ғаиләлә бөтә эште йөкләп баралар.* З. Биишева.

3. *кар.* **йөкмәтеү 1.** *Дөйәгә төйөнсөктәр йөкләү. Атка йөкләү.*

ЙӨК МАШИНАҺЫ *и. кар.* **йөк автомобиле.** ■ *Сабып килгән йөк машинаһы, район үҙәгенә бер аҙ етмәҫтән, оло юл айырмаһында туктаны.* Б. Бикбай. *Дариға, күсенергә ниәтләп, ике-өс ир менән йөк машинаһына йорт йыһаздарын тейәй ине.* Ф. Янышев.

ЙӨК МЕХАНИЗМЫ *и. тех. кар.* **йөк эләктереү механизмы.** *Йөк механизмының эшләү кеүәте.*

ЙӨКМӘЛЕҮ (йөкмәл-) *к. төш. кар.* **йөкмәү I.** *страд. от* **йөкмәү I.** *Йөкмәлгән токтар.* ■ *Кайһы бер аттарға еңел-елпе тирмәләр төрөп йөкмәлгән.* Ғ. Ибраһимов. *Бигерәк тә елкәгә йөкмәлгән йомош ғәҙәти булмағанда, дәғүәле-низағлы булғанда, илселектең ауырлығы нык һиҙелә.* К. Мәргән. *Бөтә ауырлык тағы Акназарға йөкмәлде.* Г. Дәүләтшин. *[Гарифуллин:] Беҙҙең өҫкә ҙур эш йөкмәлә.* С. Агиш.

ЙӨКМӘНДЕРЕҮ (йөкмәндер-) *к. йөкм. кар.* **йөкмәнеү.** *понуд. от* **йөкмәнеү.** *Йөкмәндереп ебәреү.* ■ *[Александр Егорович:] Думбыра йөкмәндереп, кырғыҙ-кайсак далаһына уны [Мифтахетдинды] кем ебәргән?* Ф. Янышев.

ЙӨКМӘНЕҮ (йөкмән-) (Р.: взваливать на себя; И.: hoist; load; Т.: yüklenmek) *к.*

Яурынға йөк һалып күтәреү; күтәренеү. □ Взваливать на себя; поднимать, взвалив на спину. *Йөкмәнеп килеү. Йөкмәнеп кайтып барыу.* ■ *[Дилбәрҙең] бахыр әсәһе, үңәсе өҙөлөрҙәй булып йөкмәнеп, аҙна уртаһында ла килеп етә торғайны.* Ғ. Ғиззәтуллина. *[Бикмырҙа карт:] Мин шул тиклем ергә йөкмәнеп ташыныйыммы ни?* Т. Хәйбуллин.

ЙӨКМӘНЕШЕҮ (йөкмәнеш-) *к. урт. кар.* **йөкмәнеү.** *взаимн. от* **йөкмәнеү.** *Йөкмәнешеп кайтыу. Йөкмәнешеп походка сығып китеү.*

ЙӨКМӘТЕЛЕҮ (йөкмәтел-) *к. төш. кар.* **йөкмәтеү.** *страд. от* **йөкмәтеү.** *Йөкмәтелгән ток. Йөкмәтелгән бурыс. Йөкмәтелгән эш. Яңы бурыстар йөкмәтелде.* ■ *Йөк аттарына бесән әҙерләү бурысы ла башкорттарға йөкмәтелә.* Я. Хамматов. *1812 йылғы Ватан һуғышының атаклы партизаны һәм шағир Денис Давыдов үҙенең көндәлектәрендә башкорт атлыларына почётлы патриотик миссия йөкмәтелгән булыуын яҙа.* Ә. Харисов. *Шул вакыт ауыҙ ҙа аса алмай торһаң, өҫтөңә йөкмәтелгән эштең уңышһыҙ сығыуын көт тә тор инде.* К. Мәргән.

ЙӨКМӘТЕҮ (йөкмәт-) (Р.: взваливать поклажу на спину; И.: hoist; load; Т.: yüklemek) *к.*

1. Яурынына һалып, *кемгәлер* күтәртеү. □ Взваливать поклажу на спину *чью, кого,* нагружать *кого. Ток йөкмәтеү. Баланың биштәрен йөкмәтеү.* ■ *[Закир:] Минең командаңы тыңлағыҙ! Коралдарҙы аттарға йөкмәтергә!* З. Биишева.

2. Үтәр өсөн *кемгәлер* тапшырыу. □ Возлагать, поручать. // Возложение. *Эш йөкмәтеү. Вазифа йөкмәтеү.* ■ *Хәрби гене-*

рал-губернатор Перовский артиллеристар менән командалыҡ итеүҙе генерал Хрулёвка йөкмәтте. Я. Хамматов. *[Сабирйәнов:] Уйлайым-уйлайым да тағы бер уйлап ҡарайым тигәндәй, әллә ниндәй мәшәҡәттәр йөкмәтергә самалай беҙгә Ғәбит Сәлихович.* Н. Мусин. *1937–1939 йылдарҙа хәрби хеҙмәттә йөрөп ҡайтҡайны, шуғалыр инде һуғыш башланғас та, уға [Мөҙәриҫкә] бронь биреп, ошо эште йөкмәттеләр.* «Ағиҙел», № 4, 2010. *[Карттар:] Өҫтөбөҙгә йөкмәтелгән хеҙмәтте үтәргә әҙербеҙ.* Б. Бикбай.

ЙӨКМӘТЕҮ ЙҮНӘЛЕШЕ (Р.: понудительный залог; И.: causitive voice; Т.: ettirgen) *и. лингв.*

Эш башҡарыуҙы икенсе кешегә йөкмәтеүҙе, ҡушыуҙы белдергән ҡылым йүнәлеше. □ Понудительный залог. *Йөкмәтеү йүнәлеше ҡылымдарын өйрәнеү.*

ЙӨКМӘТКЕ (Р.: содержание; И.: content(s); Т.: içerik) *и.*

1. Ижад ителгән, яҙылған нәмәнең асылын тәшкил иткән эш-хәл, күренеш һ. б.; эстәлек. □ Содержание. *Китаптың йөкмәткеһе. Хаттың йөкмәткеһе. Мәҡәләнең ҡыҫҡаса йөкмәткеһе.* ■ *Ҡайһы берҙә китаптың тыуыу тарихы уның йөкмәткеһенә ҡарағанда ла ҡыҙыҡлыраҡ була.* Ә. Бикчәнтәев. *Ҡобайырҙарҙың йөкмәткеһендә башҡорт халҡы тарихында күбеһенсә XIV–XVIII быуаттарҙа булып үткән ваҡиғаларҙың сағылышы бар.* Ә. Харисов. *Әмир Әминевтең һәр повесы йөкмәтке йәһәтенән генә түгел, форма яғынан да ниндәйҙер яңылыҡ алып килә.* Ф. Күзбәков.

2. *фәлс.* Күренеш йәки процестың асылын тәшкил иткән төп нигеҙ. □ Содержание. *Йөкмәтке һәм форма.*

3. *Ниҙеңдер* мәғәнәһе, асылы. □ Суть. ■ *Әңгәмәнең йөкмәткеһенән тыш, күршеләренең ҡылыҡ-фиғелен күҙәтеү үҙе бер тамаша Мәҙинәгә.* Ә. Хәкимов. *Һөйләшеүебеҙҙең йөкмәткеһенә ҡарап күҙалларға була: тупраҡта өң ҡаҙып, таштарҙы йомран һәм уның балалары итеп уйнатҡанбыҙҙыр.* М. Ямалетдинов.

4. Китаптағы бүлектәрҙең исемлеге. □ Оглавление. *Йыйынтыҡтың йөкмәткеһе. Китаптың йөкмәткеһен ҡарау.*

ЙӨКМӘТКЕЛЕ (Р.: содержательный; И.: rich in content; Т.: münderecatlı, dolgun) *с.*

Йөкмәткегә, эске мәғәнәгә бай. □ Содержательный. *Йөкмәткеле сығыш. Йөкмәткеле хикәйә. Бай йөкмәткеле әҫәр.* ■ *Ҡоролтай ултырышында яңғыраған сығыштарҙың һәр береһе тәрән йөкмәткеле, күңелдәргә үтеп инерлек ине.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 7, 2010. *Хәҙерге башҡорт прозаһының күренекле вәкиле, эпик йөкмәткеле ҙур-ҙур романдарҙың, үткер проблемалы повестарҙың .. авторы Ноғман Мусин, нигеҙҙә, заман тураһында яҙа, замандаш образын тыуҙырыу өҫтөндә эшләй.* Ә. Вахитов. *М. Өмөтбаев беҙгә тәрән халыҡсан-демократик рухлы, бай йөкмәткеле, ғәжәп күп яҡлы әҙәби һәм ғилми йәдкәр ҡалдырҙы.* Ғ. Ҡунафин.

ЙӨКМӘТКЕҺЕҘ (Р.: бессодержательный; И.: empty; vapid; Т.: manasız) *с.*

Йөкмәтке яғынан ярлы булған; мәғәнәһеҙ. □ Бессодержательный. ■ *Әҙәбиәт, сәнғәт донъяһында ла ялған матурлыҡ күҙге сағылдыра, китап кәштәләрендә ялтыр тышлы, йөкмәткеһеҙ яҙмалар тупланған китап ишараттары тулып ята.* «Ағиҙел», № 8, 2011.

ЙӨКМӘТТЕРЕҮ (йөкмәттер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йөкмәтеү.** *страд. от* **йөкмәтеү.** *Атҡа йөкмәттереү. Токто ниңә ҡыҙҙарға йөкмәттерәһегеҙ?*

ЙӨКМӘҮ I (йөкмә-) (Р.: взваливать на себя; И.: shoulder; hoist; Т.: yüklenmek) *ҡ.*

1. Иңгә алып күтәреү. □ Взваливать на себя; поднимать, взвалив на спину. *Арҡаға йөкмәп алып килеү. Йөкмәп йөрөтөү. Биштәр йөкмәү.* ■ *Китаптарым йөкмәп арҡама, килеп төшкәйнем мин һиңә, Өфөм.* Р. Ғарипов. *Сәми ҡарт үҙенең тотҡан балыҡтарын йөкмәп баҙарға китте.* Д. Юлтый. ● *Ҡатыныңды ҡапыл бөкмә, ауырлығын арҡаңа йөкмә.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Үҙеңде яуаплы һанап, үҙ өҫтөңә алыу. □ Вести, выполнять. *Йәмәғәт эшен йөкмәү. Профсоюз эшен йөкмәү.* ■ *Күпме әҙәмдең әҙәбе, иманы, гонаһ-сауабы өҫөн*

яуаплылыкты үҙ ирке менән өҫтөнә алды, рухына йөкмәне ул [Фәхретдин]. М. Кәрим. *Янъяҡтарға ауып китмәҫ өсөн донъя йөгөн тигеҙ йөкмәйем.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

ЙӨКМӘҮ II (Р.: ноша; И.: burden; Т.: yük) *и.*

Иңгә алып күтәргән йөк. □ Ноша, груз. *Йөкмәү аҫыу.* ■ *[Аскар:] Ә һин әйтән сыктың иһә, һиңә донъя кәрәгенән бер сажин ер ҙә, бер йөкмәү утын да теймәйәсәк.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӨК ПАРАШЮТЫ (Р.: грузовой парашют; И.: cargo parachute; Т.: yük paraşütü) *и.*

Йөк төшөрөү өсөн тәғәйенләнгән парашют. □ Грузовой парашют. *Йөк парашютына танкылар, ҡорал тағып төшөрөү.*

ЙӨКСӨ (Р.: возчик; И.: carter; Т.: taşıyıcı, hamal) *и.*

1. Йөк ташыусы; ылаусы. □ Возчик, извозчик. *Йөксө булып эшләү.* ■ *Әптек яғынан килгән йөксө, атын бороп, ҡайтыуға йүнәлде.* Г. Ғиззәтуллина.

2. Йөк тейәүсе һәм бушатыусы. □ Грузчик, носильщик. *Йөксөләр вагон бушата.* ■ *Бәс, Зөләйха шунда уҡ кире ҡайтты, оҫталарҙан бер һандыҡ йүнәттерҙе, Йософто шул һандыҡ эсенә һалдыртты, йөксө күтәреп зинданға илтер имде.* «Йософ ҡиссаһы».

ЙӨК ТАКСИЙЫ (Р.: грузовое такси; И.: taxi lorry; Т.: yük taksisi) *и.*

Төрлө ауыр, ҙур нәмәләрҙе күсереү өсөн ҡулланылған такси. □ Грузовое такси. *Әйберҙәрҙе йөк таксийы менән күсереү. Йөк таксийын саҡырыу. Йөк таксийының телефон номеры.*

ЙӨК ТАШЫУ (йөк ташы-) (Р.: транспортировать; И.: transport; carry; Т.: taşımak) *ҡ.*

Йөктө бер урындан икенсе урынға күсереү. □ Транспортировать. // Транспортирование, транспортировка. *Йөк ташыу менән шөғөлләнеү. Йөк ташыу күләмен арттырыу.* ■ *Совет осоро менән сағыштырғанда, республикала һыу транспортында йөк ташыу күләме ун тапҡырға тиерлек кәмегән.* «Башҡортостан», 24 апрель 2012.

ЙӨК ТАШЫУСЫ *и. ҡар.* **йөксө.** *Йөк ташыусы булып эшләү. Йөк ташыусы яллау.*

ЙӨК ТЕЙӘГЕС (Р.: погрузчик; И.: loader; Т.: yükleyici) *и.*

Йөктө тейәү-бушатыу ҡоролмаһы. □ Погрузчик. ■ *Һуңғы ваҡытта техника паркы «Белорусь» маркалы трактор, шул тиклем күләмдә «Камаз» автомобиле, йөк тейәгес менән тулыланған.* «Юшатыр», 2 март 2010.

ЙӨКҺӨҘ (Р.: порожний; И.: empty; Т.: yük almamış) *с.*

Йөк тейәлмәгән. □ Порожний, не гружёный. ■ *Йөкһөҙ атҡа ҡамсы тейеп бармай, йөкләнһәнә тейә күберәк: бәйге атын данға күмәләр бит, йөк атына хөрмәт бик һирәк.* С. Әбүҙәров.

ЙӨКҺӨҘЛӨК (йөкһөҙлөгө) (Р.: незагруженность; И.: underutilization; Т.: yük almama hali) *и.*

Йөкһөҙ булыу. □ Незагруженность. *Машиналарҙың йөкһөҙлөгө.*

ЙӨК ЭЛӘКТЕРЕҮ МЕХАНИЗМЫ (Р.: грузозахватное устройство; И.: load gripper; Т.: yük zaptetme makinesi) *и. тех.*

Йөк тейәү механизмдарының йөктө эләктереп алыу өсөн тәғәйенләнгән өлөшө. □ Грузозахватное устройство. *Йөк эләктереү механизмын эшләтеү.*

ЙӨКӘЙ (Р.: попрыгунья; И.: fidget; Т.: yumurcak) *и. диал.*

Ырғырға, һикерәнләргә яратҡан, тик тормаҫ; ырғанлаҡ. □ Попрыгунья. *Был йөкәй һикерәндәп тик йөрөр инде.*

ЙӨЛГӨ (Р.: подарок победителю на состязаниях; И.: kind of a wedding present; Т.: zafer kazanana düğünde verilen hediye) *и. этн.*

Туй ярышында бирелә торған бүләк. □ Подарок, приз победителю на свадебных состязаниях. *Йөлгө алыу. Йөлгө биреү. Йөлгөгә бер һарыҡ бирҙеләр.*

ЙӨЛГӘ *и. диал. ҡар.* **бәйге 2.** *Йөлгәгә барыу. Йөлгәлә ҡатнашыу. Йөлгәгә еңеү.*

ЙӨЛДӘ *и. диал. ҡар.* **бәйге 3.** ■ *Уҙған атҡа, төп йөлдәгә өҫтәп, бер тонна һоло ла ҡуйылғас, сабыу оҙонлоғо тағы ла өҫтәлеп, ун дүрт саҡрымға етте.* С. Ильясов.

ЙӨЛӨН [боронғо төрки *йүлүн*] (Р.: спинной мозг; И.: spinal marrow; Т.: omurilik) *и. анат.*

Умыртка һөйәгенең эсендәге йомшаҡ матдә; арҡа мейеһе. □ Спинной мозг. *Һыйыр йөлөнө. Йөлөн һурыу. Йөлөн өҙөлөү.*

ЙӨЛӨН БУЙЫ (Р.: позвоночник; И.: spine; Т.: omurga) *и. анат. диал.*

Умыртка. □ Позвоночник. *Йөлөн буйы ауырта. Йөлөн буйы һыҙлай.*

ЙӨЛӨНӨҮ (йөлөн-) (Р.: отстать от кости; И.: come off the bone; Т.: kemikten ayrılmak) *ҡ. диал.*

Ысҡыныу, йолоу. □ Отстать, отделиться от кости. *Ит һөйәгенән йөлөнөп төшә.*

ЙӨЛТӨЛДӘҮ (йөлтөлдә-) (Р.: спешить; И.: hurry; Т.: acele etmek) *ҡ. диал.*

Ашығып атлау. □ Спешить. *Йөлтөлдәп ҡайтыу. Йөлтөлдәп килеү. Йөлтөлдәп сығып китте.*

ЙӨМЛӘ I [ғәр. جملة ‘барлығы, барыһы’] (Р.: весь, все; И.: all, every; Т.: hepsi) *билд. а. иҫк.*

Бөтә, барлыҡ, бөтә булған. □ Весь, все. *Йөмлә кеше. Йөмлә халыҡ.* ■ *Был хатты асҡанда [Ғаббас мулланың] ҡулдары тетрәне, йөрәге һелкенде, йөмлә тәне бер ҡыҙҙы, бер өшөнө.* Р. Фәхретдинов.

ЙӨМЛӘ II [ғәр. جملة ‘барлығы, барыһы’] (Р.: общее число, ранг, ряд; И.: rank; on a mass scale; Т.: tüm) *и.*

Бөтә халыҡ, күмәк төркөм. □ Общее число *кого-чего-л.;* в массовом масштабе. *Шәкерттәр йөмләһенә инеү. Хеҙмәтсәндәр йөмләһе.* ■ *Йөмләнән бере күрше Бишул Мансаҙы тигән ауылдан атайыбыҙҙың остазы Хаммат хәҙрәт йөҙләп шәкерттәре менән Ҡарлыман һыуының буйында күсеп йөрөмөштөр.* М. Өмөтбаев. *Бушлыҡ диңгеҙендә осоп йөрөй торған сикһеҙ планеталарҙың, шулар йөмләһендә Ер планетаһының да нисек яратылғанын .. аңлар өсөн, аңлап, доньяның көлкө, ялғандарына сик ҡуйыр өсөн, уҡы, бәгерем!* И. Насыри.

ЙӨМЛӘ III [ғәр. جملة] (Р.: предложение; И.: sentence; Т.: cümle) *и. лингв. иҫк.*

Тамамланған фекерҙе белдерә торған һүҙ йәки һүҙҙәр теҙмәһе; һөйләм. □ Предложение. ■ *Хәйер, бында әллә ниндәй һыу буйы һүҙҙәр һөйләп тороу, уны һайланған йөмләләр менән биҙәп булашыуҙың кәрәге лә юҡ ине.* И. Насыри. *Хикәйәбеҙ башҡорт сәхрәләрендә вә башҡорттар йәшәгән шәһәрҙәрҙә булғаны өсөн, башҡорттар хаҡында бер-ике йөмлә яҙмаҡ кәрәк булыр.* Р. Фәхретдинов. *Телдән телгә, ҡолаҡтан ҡолаҡҡа ҡалғандарҙан йөмләнән береһе беҙҙең Бодом буйында Жиримжи ауылында Иҫән хан булған.* Ғ. Кейеков.

ЙӨМӨРКӘЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **ташбаш.** *Беҙҙең йылғала йөмөркәй күп. Йөмөркәй һөҙөү. Йөмөркәй тотоу.*

ЙӨМҺҮР [ғәр. جمهور] (Р.: народ; И.: people; Т.: halk) *и. иҫк. кит.*

Халыҡ, йәмғиәт. □ Народ, общество, толпа, масса; публика.

ЙӨМҺҮРИӘТ [ғәр. جمهورية] *и. иҫк. кит. ҡар.* **республика.** *Башҡортостан йөмһүриәте.* ■ *Был мәсьәлә [яңы әлеп] йөмһүриәттәрҙә ныҡ ҡуҙғатылып, ғәмәли эштәргә барып бәйләнде.* Т. Йәнәби. *[Хәсән:] Беләм мин, йөмһүриәт ағзаларының эше һинең эсеңдә бошоралыр.* А. Таһиров. *[Командир:] Беҙ Петроградта булып үткән Үктәбер инҡилабынан һуң Башҡорт йөмһүриәтенең милли мөхтәриәтен иғлан иттек.* М. Хужин.

ЙӨМҺҮРЛЕК (йөмһүрлеге) *и. иҫк. кит. ҡар.* **республика.**

ЙӨН [боронғо төрки *йүн, йүң*] (Р.: шерсть; И.: hair; wool; Т.: yün, tüy) *и.*

1. Тереклек, хайуандарҙың тәнен тотош ҡаплап торған сәс кеүек төктәр. □ Шерсть, руно, волосы *(на теле);* пух. / Шерстяной, пуховый. *Йомшаҡ йөн. Һирәк йөн. Йөнө сығыу. Йөн сығарыу. Йөнө ҡойолоу. Йөнө үҫеү.* ■ *Яңы сыҡҡан ҡояш йылыһына йылынып, аҡрын ғына көйшәп торған ала һыйырҙың йөнөн һыйпаным.* Д. Юлтый. *Уның [боландың] ҡыҫҡа йөнө урайланып торған маңлайынан, муйынынан һыпырҙы Ишмырҙа.* Н. Мусин. ● *Бүре йөнөн алыштырыр, бүрелеген алыштырмаҫ.* Мәҡәл. *Эт тиһәң — йөнө юҡ, әҙәм тиһәң — һыны юҡ.* Мәҡәл. *Энәһеҙ йөй булмаҫ, тиреһеҙ йөн булмаҫ.* Мәҡәл.

2. Кеше тәнендәге төктәр. □ Волос, волосы. *Бала йөнө. Йөн баҫыу.* ■ *Ҡоласын йәйеп ҡаршылаға ул [Дистанов] Нурихановты, .. аймап алып, иҙеүенән бөҙрәләнеп йөнө*

күренеп торған итләс күкрәгенә сумдырҙы. Д. Буләков.

3. Хайуандарҙан *(һарыҡ, кәзә һ.б.)* ҡырҡып алынған шул нәмә. □ Шерсть. / Шерстяной. *Яҙғы йөн. Көҙгө йөн. Бәрәс йөнө. Бәрән йөнө. Йөн ойоҡ. Йөн бейәләй. Йөн туҡыма.* ■ *[Әсәйем] йөн башлатай, .. таҙа күлдәк алып бирҙе.* Н. Мусин. *Шәмси, йөн бейәләйе менән битенә йәбешкән ҡарҙарҙы һөртөп алғандан һуң, ҡарамаға яңынан бер тапҡыр ҡараны.* Ғ. Хәйри. *Ул [Гөлбәҙәр] өҫтөнә ябай ғына сәскәле ситса күлдәк, тупаҫ ҡына итеп йөндән бәйләнгән ҡыҙыл кофта кейгәйне.* Ф. Әсәнов. ● *Йөн урлаған ҡотолор, он урлаған тотолор.* Мәҡәл. *Насар буҫтауға йөн йәбешә.* Мәҡәл.

4. Ҡоштоң мамығы менән ваҡ ҡауырһыны. □ Пух, перо, оперение. *Күркә йөнө. Йөнөн йолҡоу. Йөн сығарыу.* ■ *Өкө йөнө менән һөйкөмлө тиҙәр ҙә, былбыл өнө менән ҡәҙерле.* Ғ. Ибраһимов. *Алтынға йөнөн буяһаң, ҡарға шоңҡар булырмы? Ҡанатына ҡан яҡһаң, шоңҡар ҡарға булырмы?* «Әлҡисса Буҙйегет». ● *Ике ҡарға талашһа, уҡсыға йөн була.* Мәҡәл. *Ике ҡарға һуғышһа, ябалаҡҡа йөн булыр.* Мәҡәл. *Ябалаҡтың йөнө күп, арыҫландың төгө күп.* Мәҡәл.

5. *миф.* Байлыҡ, муллыҡ символы, бәхетте кәүҙәләндереүсе әйбер. □ Шерсть *(мифологизированный предмет, связанный с судьбой; символ богатства, достатка, благополучия, счастья).* ■ *Аяғы йөнлө кеше бәхетле була.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Доньяя көтөп, йөн тетеп йәшәү** *шаяр.* тыныс ҡына, имен генә йәшәү. □ *соотв.* Жить-поживать да добра наживать. ■ *Әле булһа ла былар [егет менән ҡыҙ] доньяя көтөп, йөн тетеп, һәйбәт кенә баишалыҡ итеп, йәшәп яталар, ти.* Әкиәттән. **Йөндө (***йәки* **һырт йөнөн) ҡабартыу (***йәки* **тырпайтыу)** асыуланып, ҡаршылыҡ белдереү. □ Сердиться, огрызаться. ■ *Бүтән ярандар түҙер, баш эйер урында Әнүәр һырт йөнөн тырпайта.* Р. Камал. *Уларҙың [ил улдарының] исемен ишетеү менән, һырт йөндәрен ҡабартып, нәфрәт төкөрөктәрен сәсеүселәр әле лә осрай.* «Йәшлек», 4 сентябрь 2010. **Йөн йотторoу** ауыр язаға дусар итеү, ыҙалатыу, йонсотоу. □ Мучить, измучить. ■ *Айыу белә: бөрсәләр төлкөнән уның үҙенә күсергә мөмкин, сөнки уларҙың айыуҙы ла йөн йотторғандары бар.* Ж. Кейекбаев. **Йөнөн тарау** аҡса, малын һығып алыу. □ Заставить раскошеливаться *кого.* ■ *Әйҙә, был байҙың йөнөн ныҡыраҡ тарайыҡ, һарыҡты күберәк һуйҙырайыҡ.* Д. Юлтый. **Йөн табан** шым ғына йөрөгән шикле кешегә ҡарата әйтелә. □ Тихоня. **Йөн танау** эшлекһеҙ, йүнһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Мямля, недотёпа. **Йөн тибеү** эшһеҙ, бушҡа ваҡыт уҙғарыу. □ Бездельничать, бить баклуши. *Йөн тибеүҙән бушамау.* ■ *«Ни булһа ла булыр, йөн тибеп йөрөгәнсе, сығайым әле», — тип Ғиндулла ла бәхет ҡошон һынап ҡарарға булды.* Картотека фондынан.

ЙӨН АЛЫУ (йөн ал-) (Р.: стричь овец; И.: shear; Т.: yün kesmek) *ҡ. диал.*

Һарыҡтың йөнөн киҫеп алыу. □ Стричь *(овец). Һарыҡ йөнөн алыу.* ■ *Һарыҡ йөнөн алғас, былай тип әйтәләр: «Ябалаҡтан йөн ал, бүҙәнәнән май ал, ҡарсығанан ҡан ал!»* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӨН АТЫУ (йөн ат-) (Р.: прясть; И.: spin; Т.: eğirmek) *ҡ. диал.*

Йөн, киндерҙе һ. б. орсоҡ ярҙамында ишеп еп итеү; иләү. □ Прясть *(шерсть). Йөн атып ултырыу. Йөн атып ойоҡ бәйләү.*

ЙӨН БАҪЫУ (йөн баҫ-) (Р.: валять шерсть; И.: felt; Т.: keçe çizme yapmak) *ҡ.*

Йөндө әүәләп ойоштороу; кейеҙләндереү *(быйма баҫыу өсөн).* □ Валять шерсть *(для валенок). Көнө буйы йөн баҫып арыу. Олатайым мине йөн баҫырға өйрәтте.*

ЙӨНГӘС *с. диал. ҡар.* **йөнтәҫ**. *Йөнгәс ир. Йөнгәс балаҫ.*

ЙӨНДӨЙЕЛӘК (йөндөйеләге) (Р.: клубника; И.: strawberry; Т.: çilek) *и. диал.*

Ер еләге. □ Клубника (лат. *Fragaria moschata*). *Йөндөйеләк сәскәһе. Йөндөйеләк ултыртыу. Йөндөйеләк ашау.*

ЙӨНДӨКӘЙ (Р.: семена шиповника; И.: dog rose`s seeds; Т.: yabangülü tohumu) *и. бот. диал.*

1. Гөлйемеш орлоғо. □ Семена шиповника. *Гөлйемеште йөндөкәйҙәренән таҙартыу.*

2. Ер еләге. □ Клубника (лат. *Fragaria moschata*). *Йөндөкәй ҡайнатмаһы. Йөндөкәй япрағы.*

3. *ҡар.* **бәпембә 1**. *Йөндөкәй мамыҡтары оса. Урамды йөндөкәй баҫҡан.*

ЙӨН ИЛӘҮ (йөн илә-) (Р.: прясть шерсть; И.: spin wool; Т.: iplik çekmek) *ҡ.*

1. Йөндө орсоҡ ярҙамында ишеп еп итеү. □ Прясть шерсть. ■ *Ҡолғаларға бәйләп йөн иләйем, әллә ниңә йөндәрем ырамай.* Халыҡ йырынан. *Шул уҡ һикелә усаҡ алдында йөн иләп ултырыусы әбейе уға [Аҡмал ҡартҡа] ғәжәпләнеп ҡарап-ҡарап ала.* Б. Рафиҡов.

2. *миф.* Яҙмышҡа бәйле йола. □ Прядение шерсти *(ритуализированное действие, связанное с судьбой).* ■ *Бала ҡарында саҡта йөн иләргә, бәйләргә ярамай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӨН-ЙОРҠА (Р.: шерсть; И.: wool; Т.: yün, tüy) *и. йыйн.*

Төрлө йөн. □ Всякая шерсть *(разных сортов, цветов и т. п.). Йөн-йорҡанан бәйләнгән бейәләй.*

ЙӨН ЙЫУЫУ МАШИНАҺЫ (Р.: шерстомойка; И.: wool scouring device; Т.: yün yıkama makinesi) *и.*

Йөндө йыуыу өсөн тәғәйенләнгән махсус ҡулайлама. □ Шерстомойка. *Йөн йыуыу машинаһын эшләтеү. Йөн йыуыу машинаһы һатыу.*

ЙӨНКӨҮ (Р.: глупый; И.: silly; foolish; Т.: aptal) *с.*

Мәғәнәһеҙ, аҡылһыҙ, ахмаҡ. □ Глупый, тупой, бестолковый. *Йөнкөү кеше. Йөнкөү булыу.*

ЙӨНКӨҮ АШ (Р.: недоваренный суп; И.: half-cooked soup; Т.: pişmemiş çorba) *и. диал.*

Бешеп етмәгән аш. □ Недоваренный суп. *Йөнкөү ашты ашағы килеп тормай.*

ЙӨН ҠОЙОУ (йөн ҡой-) (Р.: линять; И.: shed hair; Т.: tüy atmak) *ҡ.*

Билдәле бер мәлдә ҡош-ҡорттоң, йәнлектәрҙең йөнө йолҡоноп төшөү. □ Линять *(о животных, птицах).* // Линька. *Тауыҡтың йөнө ҡойолоп бөттө.* ■ *Аҡҡош осор, йөнөн ҡойор, уның йөнөн кем йыйыр?* Халыҡ йырынан.

ЙӨНҠЫРҒЫС (Р.: власоед; И.: biting louse; Т.: kıl yiyen bitler) *и. зоол.*

Малдың, ҡош-ҡорттоң йөнөн ҡырҡып, шуның менән туҡланған бет. □ Власоед *(паразитическое насекомое)* (лат. *Trichodectes*). *Эт йөнҡырғысы. Һыйырҙарҙы йөнҡырғыс йонсота.* ■ *Йөнҡырғыстарҙың күпселек төрө йәш йөн менән туҡлана.* Интернет селтәренән.

ЙӨН ҠЫРҠЫУ (йөн ҡырҡ-) *ҡ. диал. ҡар.* **йөн алыу.** *Һарыҡтың йөнөн ҡырҡыу. Йөн ҡырҡырға барыу.*

ЙӨНЛӨ (Р.: волосатый; И.: hairy; Т.: yünlü) *с.*

1. Йөн менән ҡапланған, йөн үҫкән *(кешеләргә ҡарата).* □ Волосатый, мохнатый. *Ҡулы йөнлө. Күкрәге йөнлө.* ■ *Аҡназар ағайҙың йөнлө ҡулы Гөлбикә апайҙы ҡосаҡлаған.* Г. Яҡупова. *[Комендант] ҙур кәүҙәле, бите йөнлө, ана беҙҙең Ғарифҡа оҡшағаныраҡ кеше ине.* А. Таһиров.

2. Йөнө күп, йөнтәҫ. □ Покрытый шерстью, имеющий шерсть; с шерстью, шерстистый, волосатый; перистый. *Йөнлө кәзә. Йөнлө бәрән.* ■ *Ул [Гөлйөҙөм еңгә], аяғы өйсөкләнгән бөҙрә йөнлө ҡара бәрәс күтәреп, гел бер төҫлө шоморт ҡара кәзәләр араһында баҫып тора.* З. Биишева. *Стенала – аҫалы балаҫтар, улар өҫтөнә йылҡылдап, ҡабарып торған йөнлө һыҫар, шәшке, төлкө тиреләре эленгән.* Н. Мусин. *[Сәсәк Исабәктең] өҫтөндә билле ҡара елән икән, .. башында бөҙрә йөнлө түңәрәк ҡара бүрек икән, аяғында уксәһеҙ ҡара итек икән.* М. Кәрим. ● *Айғыр ҡалдырһаң, йүнлеһен ҡалдыр, ҡуҫҡар ҡалдырһаң, йөнлөһөн ҡалдыр.* Мәҡәл.

♦ **Йөнлө йылан күеүек (***йәки* **йыландай) күреү** яратмау, ерәнеп ҡарау. □ Ненавидеть, относиться с отвращением. ■ *[Юлғотло:] Ни булһа ла булыр, Вәлиҙе йөнлө йыландай күрерлек итеп эшлә инде, Сабира инәй.* М. Буранғолов.

ЙӨНЛӨҒОЛАҠ (йөнлөғолағы) *и. диал. этн. ҡар.* **таянсыҡ мал.** ■ *Киленде килтергәс, ҡәйнәһе берәй йөнлөғолаҡ әйтеп, арбанан төшөрә.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӨНЛӘНЕҮ (йөнлән-) (Р.: опериться; И.: become downy; become fully fledged; Т.: tüylenmek) *ҡ.*

1. Йөн (4) менән ҡапланыу; йөн сығыу. □ Обрастать шерстью, опушаться; опериться, покрыться пухом. *Бәпкәләр йөнләнә башланы. Йөнләнгән себештәр һатып ал, улар ныҡ булалар.*

2. *һөйл.* Йөн (3) һырып, йөнгә буялыу. □ Прилипать, приставать *(о шерсти, пухе). Салбары йөнләнгән. Тауыҡ йолҡоп, өҫтө йөнләнеп бөткән.*

3. Күк менән ҡапланыу; иҫкереү. □ Покрываться плесенью; испортиться. *Икмәге йөнләнеп бөткән. Ҡоймаҡ йөнләнә башлаған.* ■ *[Егет:] Ҡыҫтыбыйҙың эсе йөнләнә башламанымы икән?* Ғ. Хәйри.

ЙӨНЛӘҮ (йөнлә-) (Р.: оперить стрелу; И.: wing; Т.: tüy takmak) *ҡ.*

Ҡауырһын ҡуйыу *(уҡҡа).* □ Оперить стрелу. *Уҡ йөнләү.* ■ *Быны ишеткәс, [Маҡтымһылыуҙың] ағаһы уҡ юна ла йөнләй, уҡ юна ла йөнләй.* «Маҡтымһылыу».

ЙӨННӨКӘЙ I *и. бот. диал. ҡар.* **ҡуянтубыҡ**. *Йөннөкәй йыйыу. Йөннөкәй ашау.*

ЙӨННӨКӘЙ II *и. диал. ҡар.* **ләм**. *Йөннөкәйгә батыу. Йөннөкәйҙә ятыу.*

ЙӨН ОЙОҠ (ойоғо) (Р.: шерстяной носок; И.: woollen sock; Т.: yün çorap) *и.*

Йөндән бәйләнгән ҡыҫҡа ҡуныслы йоҡа аяҡ кейеме. □ Шерстяной носок. *Йөн ойоҡ бәйләү. Йөн ойоҡ кейеү.* ■ *Мин уға [Маратҡа] һис юғы табандарын ыуып, йөн ойоҡ кейеп, мейескә терәлеп ултырырға кәңәш иттем.* М. Бураҡаева.

ЙӨН-ТИРЕҺЕ (Р.: мех и кожа зверя; И.: animal skin and fur; Т.: yün ve deri) *и. йыйн.*

Йәнлектең йөнө һәм тиреһе. □ Мех и кожа *(зверя). Йәнлектең йөн-тиреһен эшкәртеү.*

ЙӨН ТЕТЕҮ (йөн тет-) (Р.: чесать шерсть; И.: comb wool; Т.: taramak) *ҡ.*

Йөндө тартып-тартып, бүй-бүй айырыу. □ Чесать шерсть. ■ *Һигеҙ туған хәҙер ҙә бала көтөп, йөн тетеп, татыу ғүмер итәләр, ти.* «Йософ менән Зөләйха». *Йөн теткәндә бармаҡтан ысҡынып киткән керештә дерелдәп торған йөн кеүек ҡалтыранған аяҡтарын нығырaҡ торорға, һиҙҙермәҫкә тырышты [Рахманбирҙе].* Б. Хәсән. ● *Ебәк иләй белмәгән йөн тетә, килен көтә белмәгән ой көтә.* Мәҡәл.

ЙӨН ТЕТЕҮ МАШИНАҺЫ (Р.: шерстобойка; И.: arco; Т.: yün tarama makinesi) *и.*

Йөн тетеү өсөн тәғәйенләнгән махсус ҡулайлама. □ Шерстобойка. *Йөн тетеү машинаһы һатып алыу. Йөн тетеү машинаһында эшләү.*

ЙӨН ТӨЙНӘКЛӘҮ (йөн төйнәклә-) (Р.: смотать пряжу в клубок; И.: reel in; Т.: yünü yumaklamak) *ҡ. диал.*

Йомарлау *(йөндө).* □ Смотать пряжу в клубок. *Йөндө төйнәкләп бөтөү. Әбей йөн төйнәкләп ултыра.*

ЙӨНТӨР *с. диал. ҡар.* **йөнтәҫ**. *Йөнтөр эт.* ■ *Түкта әле, йөнтөр көсөк, түкта, ниңә шулай миңә өрәһең?* Ҡ. Даян.

ЙӨНТӘЙ *с. диал. ҡар.* **йөнтәҫ**. *Йөнтәй кеше.* ■ *Иң арттан бер яңғыҙы барған ҡола йөнтәй атлы Әкрәмде уҙҙырғас ҡына, Сакай үҙ-үҙенә йылмайҙы.* А. Таһиров.

ЙӨНТӘЙБАШ *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1**. *Йөнтәйбаш сәскәһе. Йөнтәйбаш япрағынан салат эшләү. Болон йөнтәйбаш сәскәһенән һап-һары ине.*

ЙӨНТӘЙЛӘНЕҮ (йөнтәйлән-) *ҡ. диал. ҡар.* **йөнтәҫләнеү 1**. *Йөнтәйләнеп бөтөү. Йөнтәйләнеп киткән.*

ЙӨНТӘЙЛӘҮ (йөнтәйлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **йөнтәҫләү**. *Туҡыманы йөнтәйләү. Келәмде йөнтәйләп бөтөү.*

ЙӨНТӘЛӘҮ (йөнтәлә-) (Р.: чесать *(шерсть)*; И.: comb wool; Т.: taramak) *ҡ. диал.*

1. Теткеләү. □ Чесать *(шерсть). Йөндө йөнтәләү. Йөнтәләп бөтөү. Йөнтәләп ҡуйыу.*

2. Өҙгөләү, тартҡылау. □ Разрывать, раздирать, истрепать. *Сәсеңде йөнтәләрмен.* ■ *Үгәй инә ҡыҙҙы туҡмай, сәсен йөнтәләй икән.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӨНТӘПЕЙ (Р.: двуличный; И.: double-faced; Т.: ikiyüzlü) *с. диал.*

Ике йөҙлө, юха. □ Двуличный. *Кеше араһын боҙорға ғына шәп ул йөнтәпей ҡатын. Күршем йөнтәпей булып сыҡты.*

ЙӨНТӘПӘЙ (Р.: обращение к ребёнку с упрёком; И.: berating a child reproachfully; Т.: yaramaz) *и. диал.*

Балаға ҡарата яратып асыуланыу һүҙе. □ Обращение к ребёнку с упрёком. *Ух, был йөнтәпәй. Ултырып сыҙамаған, йөнтәпәй.*

ЙӨНТӘҪ (Р.: волосатый; И.: hairy; hirsute; Т.: tüylü, gür) *с.*

1. Йөн менән ҡапланған, йөн үҫкән. □ Волосатый, мохнатый. *Йөнтәҫ ир.* ■ *Заславский нескә генә аҡ йөнтәҫ ҡулдарына ҡарап ҡуйҙы.* М. Кәрим. *Хәйретдин, .. асыҡ иҙеүе аша күренгән йөнтәҫ түшенә башын эйеп, оҙаҡ ҡуҙғалмай торҙо.* Я. Хамматов. *Шунан [Әхмәҙи] оҙон һәм йөнтәҫ ҡулы менән үрелеп кәштәнән һарғайып бөткән бер китап алды.* Ж. Кейекбаев.

2. Мамыҡланып торған ҡыҫҡа йөнлө йәки епле, өбөрөлө. □ Ворсистый, ворсовый, ворсовой. *Йөнтәҫ шәл. Йөнтәҫ балаҫ. Йөнтәҫ келәм. Йөнтәҫ туҡыма. Йөнтәҫ таҫтамал.* ■ *[Аҡмал ҡарттың] .. пеләш башын йөнтәҫ малахайы менән ҡаплап, еңел тунының ҡаптырмаларын эләктерергә генә ҡалған.* Б. Рафиҡов. *Ҡышҡы көндәр яҙға тартыуға ҡарамаҫтан, [хәбәрсе] өҫтөнә йылы тун кейгән, оло, йөнтәҫ шарф ураған.* С. Ильясов.

3. Ҡуйы, ялбыр йөнлө. □ Волосатый. *Йөнтәҫ көсөк. Йөнтәҫ айыу.* ■ *Тәне йөнтәҫ айыуҙай, үҙҙәре ҙур дейеүҙәй [батшаның] дүрт батыры килгән, ти.* «Урал батыр». *Урмансы өйөнә яҡынлау менән йөнтәҫ бер алабай абалап сыҡты.* Г. Хөсәйенов. *Күгелйем һыртлы, ҡара йөнтәҫ йөнлө, арыған-йонсоған һарғылт күҙҙәре хәс әҙәмсә ҡарай.* Т. Ғарипова.

ЙӨНТӘҪЛӘНЕҮ (йөнтәҫлән-) (Р.: обрастать шерстью; И.: become covered with hair; Т.: yün ile kapanmak) *ҡ.*

1. Йөн менән ҡапланыу, йөнтәҫ булыу *(кешегә ҡарата).* □ Обрастать шерстью, волосами. *Йөнтәҫләнгән бит. Йөнтәҫләнеп бөткән.* ■ *Былар [сауҙагәрҙәр], элеккеге кеүек, йыйнаҡ, ыҫпай, таҙа түгелдәр, йөнтәҫләнгәндәр, күҙҙәре сейләнгән.* А. Таһиров. *Бында [мәҙрәсәлә] ете-һигеҙ йәшлек балалар булған кеүек, егерме биш-утыҙ йәштәренә еткән, биттәрен һаҡал баҫып, йөнтәҫләнеп бөткән кешеләр ҙә бергә уҡыйҙар.* М. Ғафури.

2. Өбөрөлөгә әйләнеү. □ Становиться ворсистым. ■ *Ҡапҡанан, иң элек, һыҙырылып төшкән, йөнтәҫләнә башлаған ситек кейгән аяҡ әкрен генә баҫып килеп сыҡты.* Г. Хәйри. *Салбарҙың түбыҡ тәңгәлдәре ҡырыла төшөп йөнтәҫләнгән булһа ла, үтекләгәс, сүйын кеүек ялтыраны.* Й. Солтанов.

ЙӨНТӘҪЛӘҮ (йөнтәҫлә-) (Р.: ворсовать; И.: raise; Т.: tarazlamak) *ҡ.*

1. Өбөрөлө, йөнтәҫ итеү. □ Ворсовать, делать ворсистым. *Келәмде йөнтәҫләү. Туҡыманы йөнтәҫләү.*

2. Таушалдырып *(туҙҙырып)* бөтөрөү. □ Истрепать, износить. ■ *Ә инде уҡый белгәндәре «Тәғбирнамә»не ҡарап, уның биттәрен керле ҡул менән йөнтәҫләп бөтәләр.* Г. Хәйри.

ЙӨНТӘҪ ҺАБАҠ (һабағы) (Р.: ворсинчато опушенный стебель; И.: fluffy and tomentous stalk; Т.: tüylü sap) *и. бот.*

Төктәр менән ҡапланған үлән һабағы. □ Ворсинчато опушенный стебель. *Йөнтәҫ һабаҡлы үҫемлектәр. Өҫкө өлөшө йөнтәҫ һабаҡлы.*

ЙӨНТӘҮ (йөнтә-) *ҡ. диал. ҡар.* **аҡтарыу.** *Сумканы йөнтәү. Кеҫәне йөнтәү.*

ЙӨНТӘФЕЙ (Р.: никчёмный; И.: worthless; Т.: boş) *с. һөйл.*

Булдыҡһыҙ, йүнһеҙ. □ Никчёмный *(человек). Йөнтәфей кеше. Йөнтәфей булыу.*

ЙӨНТӘФИ *с. ҡар.* **йөнтәфей.** ■ *[Исламғәле:] Минеңсә, бының бер ҙә рәте күренмәй бит .. Булмаҫ, бындай йөнтәфиҙе кантон башына ҡуймаҫтар.* И. Насыри.

ЙӨНӘЙ *с. диал. ҡар.* **остоҡай 1, 2.** *Йөнәй ҡыҙ. Йөнәй булыу.*

ЙӨН ЯҘЫУ (йөн яҙ-) (Р.: чесать шерсть; И.: comb wool; Т.: taramak) *ҡ. диал.*

Йөн тетеү. □ Чесать шерсть. ■ *Берҙән, мин иншә яҙҙым, кисә һәм бөгөн яҙҙым. Шунан инде май яҙҙым, шунан инде йөн яҙҙым.* Г. Ситдиҡова.

ЙӨҢКӨҮ *с. диал. ҡар.* **аңра.** *Йөңкөү кеше. Йөңкөү булыу.*

ЙӨПЛӘТЕҮ (йөпләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йөпләү.** *понуд. от* **йөпләү.** *Фекерҙе йөпләтеү.*

■ *[Бәхтиәр] үҙ һөйләгәндәренең дөрөҫлөгөн йөпләтеү өсөн быраусы Фролинкоға: «Шулай бит, иптәш Фролинко?» — тип ҡуя.* А. Таһиров. *«Шулаймы, дуҫтар?» — Лиза тигәнебеҙ һүҙен йөпләтер өсөн, ахырыһы, беҙгә ҡарап әйтте.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӨПЛӘҮ (йөплә-) (Р.: соглашаться; И.: consent; Т.: evetlemek) *ҡ.*

Ыңғайға һуғып, ҡеүәтләү; дөрөҫләү. □ Соглашаться, поддакивать; одобрять. *Йөпләп ҡуйыу. Һүҙҙе йөпләп тороу.* ■ *[Мостафа] ык-мык иткән маҡау Әптелгә ярҙам иткеләп, тегенең һүҙен йөпләп ултыра.* Ф. Иҫәнғолов. *Ауылдың .. иң ярлыһы, кем әйтһә, шуның һүҙен йөпләй торған бәләкәй кәүҙәле, кәкре аяҡлы, һыңар күҙле Әбләй ҙә шулар тирәһенә һырыҡҡан.* Ғ. Дәүләтшин. *Халыҡ уның [аҡ һаҡаллы ҡарттың] һүҙен йөпләгән һымаҡ яҡты йылмайҙы.* И. Насыри. *Ул [Шаҡман] ҡапыл ғына йөпләп ҡуйырға ашыҡманы, һаҡлыҡ менән генә шул фекерҙе ҡабат әйттерергә тырышты.* К. Мәргән.

ЙӨПЛӘШЕҮ (йөпләш-) *ҡ.*

1. *урт. ҡар.* **йөпләү.** *взаимн. от* **йөпләү.** *Һүҙен йөпләшеү.*

2. *диал.* Яраҡлашыу. □ Приспосабливаться, приноравливаться. // Приспосабливание. *Тормошҡа йөпләшеп йәшәү. Климатҡа йөпләшеү.*

ЙӨРГӨНСӨ [боронғо төрки *йоры-*] (Р.: прохожий; И.: passerby; Т.: gelip geçen) *и.*

1. Юлда барған кеше; үткенсе. □ Прохожий, проезжий; путник. *Йөргөнсөләр ағымы.* ■ *Тоҙ тейәгән ылауҙар ашығып уға [почта ямсыһына] юл бирҙе, йәйәүле йөргөнсөләр ҡурҡышып ситкә тайшанды.* Ғ. Ибраһимов.

2. *иҫк.* Халыҡ исеменән *ниҙер* юлларға ебәрелгән кеше; йөрөксө. □ Посланец; ходок. *Крәҫтиәндәр йөргөнсөһө.* ■ *Алыҫ-яҡын илдәрҙә ҡарт дәрүиштең тарафдарҙары күп. Урҙа йөргөнсөләре белмәгәнде шулар белә икән.* Ә. Хәкимов. *Йылдан ашыу ваҡыт үткәс, ауылдың уҙамандары, кәңәшләшеп, батша хәҙрәттәренең үҙенә йөргөнсө ебәрергә ҡарар ҡылдылар.* М. Кәрим.

ЙӨРҘӘК *с. диал. ҡар.* **йөрөмтәл.** *Йөрҙәк ир. Йөрҙәк мал. Йөрҙәк булыу.*

ЙӨРӨГҮЛӘН (Р.: сердечник луговой; И.: cuckooflower; Т.: eflatun kır çiçeği) *и. бот.*

Оҙонса тура һабаҡлы, ҡыйғас япраҡлы күп йыллыҡ үлән. □ Сердечник луговой (лат. *Cardamine praténsis*). *Йөрөгүлән үҫкән ялан. Йөрөгүлән араһында. Йөрөгүлән йыйыу.*

ЙӨРӨК I (Р.: быстрый; И.: quick; Т.: çabuk) *с.*

1. Бик етеҙ, йылдам хәрәкәтле. □ Быстрый, быстроногий. *Йөрөк болан.* ■ *Йөрөк йән тирә-йүнде байҡап бөткәндәр.* Ғ. Ибраһимов. *Болан мәхлүктәре бик йөрөк, аңдыу менән кеше тота алмаҫ.* Халыҡ йырынан. ● *Эт йөрөгөн төлкө һөймәҫ.* Мәҡәл. *Атҡыйҙан йөрөк уҡ булмаҫ.* Ҡобайырҙан.

2. Сабыуға, йүгереүгә шәп; йүгерек. □ Быстрый, быстроногий. *Йөрөк ҡола.* ■ *Тарланбот Турат шул ҡәҙәре йөрөк ат булған: ул сапҡан ваҡытта, ут урынындай итеп, ерҙе әйләндереп китер булған.* «Туҡтамыш хан менән Иҙеүкәй». *[Ямсы йөҙбашы] кемдең ҡураһында йә көтөүендә йөрөклөрәк атты күрһә, күҙен алартып: «Хан әмере!» — тип екереп, һөлөктәй аттарҙы алып китә.* Ә. Хәкимов.

3. Шәп ағыш. □ Быстрое течение.

ЙӨРӨК II (йөрөгө) *и. ҡар.* **йөрөксө.** ■ *Уй-ниәттәре фәрештә ҡанаттарына ҡундымы, бер заман Илешкә Урал аръяғы ерһыуҙар башы Мөслимдән йомошҡа йөрөктәр килеп төштө.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӨРӨК III *с. ҡар.* **күсәбә.**

ЙӨРӨКЛӘТӘ (Р.: на ногах; И.: on one's feet; Т.: ayaküstü) *р.*

Аяҡ өҫтө йөрөгән көйө. □ На ногах. *Киҙеүҙе йөрөкләтә үткәреү.*

ЙӨРӨКСӨ (Р.: посланец; И.: envoy; Т.: elçi) *и. иҫк.*

Ниндәйҙер йәмәғәт эшенә бәйле йомош менән ебәрелгән кеше. □ Посланец. ■ *Йөрөксөләр халыҡтың ҡайҙа ла ҡыҫым аҫтында йәшәүен .. халыҡтың тын алышын тейешле урынға еткереп тороуҙары тураһында белгерттеләр.* З. Ураҡсин. *Бына икенсе көн инде йөрөксөләрҙең йәшерәктәре тирә-йүнгә һоҡланып, тышҡы матурлыҡҡа ғына ҡыҙығып вайымһыҙыраҡ килә бирәләр.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӨРӨКСӘН *с. диал. кар.* **йөрөмтәл.** *Йөрөксән ир.*

ЙӨРӨЛӨҮ (йөрөл-) *к.*

1. *төш. кар.* **йөрөү.** *страд. от* **йөрөү.** ■ *Ап-аяҙ бер яҙ көнөндә кырҙа йөрөнөм көн буйы, калманы йөрөлмәйенсә сәхрә, урман, күл буйы.* Ш. Бабич. *Егерме ике сакрым ер — йөрөлмәгән арамы?* М. Кәрим.

2. *эйһ. ф. кар.* **йөрөү.** ■ *Был таныш ерҙәр түгел. Юлһыҙ йөрөлгәнме ни быгаса.* Ғ. Ибраһимов. *[Гәләү:] Уның карауы күп йөрөлдө, әгәр ҙә ел булмаһа, йөрөгән юлдың яртыһында ғына булыр инек әле.* А. Таһиров. *[Байгилде:] Йөҙшишмә тирәһен мин якшы беләм, күп йөрөлдө.* Ә. Хәкимов.

ЙӨРӨЛӘТӘ *р. диал. кар.* **йөрөкләтә.** *Йөрөләтә ауырыу һөҙөмтәһе. Сирҙе йөрөләтә үткәреү.*

ЙӨРӨМ (Р.: жизнь; И.: life; Т.: yaşam) *и.*

Тереклек, иҫәнлек. □ Жизнь, существование, житьё. *Йөрөм үйлау. Йөрөм теләү.* ■ *[Ниғмәт:] Кешегә үлем теләгәнсе, үҙеңдең йөрөмөңдө телә. Һауығырһың да, иҫән-аман сығырһың да.* К. Аралбаев. ● *Якшыға йөрөм юк, яманға үлем юк.* Мәкәл. *Яман йөрөмдән якшы үлем артык.* Мәкәл. *Үләм тигәнгә үлем юк, торам тигәнгә йөрөм юк.* Мәкәл. *Эт йөрөмөн бүре һөймәҫ.* Мәкәл.

♦ **Йәй йөрөм** йәй буйы иркендә йөрөгән. □ Летнего нагула. *Йәй йөрөм ат. Йәй йөрөм мал.* ■ *Элек ул [Гәлиәкбәр], мин фронттан кайткан сактарҙа, йәй йөрөм конан шикелле йылғыр, шыма, йылтыр ине.* З. Биишева.

ЙӨРӨМЛӨ (Р.: ходкий; И.: high-speed; Т.: sürümlü) *с.*

Алыҫ юлға арымай йөрөүсән; йөрөүгә шәп. □ Ходкий. *Ас яңаклы ат йөрөмлө була. Йырак юлға йөрөмлө ат егергә кәрәк.*

ЙӨРӨМӨШ *и. диал. кар.* **йөрөш.**

ЙӨРӨМСӘК *с. диал. кар.* **йөрөмтәл.** *Йөрөмсәк кеше. Йөрөмсәк һыйыр.*

ЙӨРӨМТӘК *с. диал. кар.* **йөрөмтәл.** *Йөрөмтәк булыу.*

ЙӨРӨМТӘЛ (Р.: ходкий; И.: restless, fidgety; Т.: sürümlü) *с.*

1. Бер урында сыҙамай, йөрөргә яратыусан. □ Ходкий; любящий много ходить, непоседливый. ■ *Һуңғы вакытта каҙак барымтасылары ла йөрөмтәл булып китте.* Н. Мусин. *Яткан таш мүкләнер, йөрөгән таш шымарыр тигәндәй, йөрөмтәл Алдар һис тынып ятманы.* Ғ. Хөсәйенов. *Бәләкәйҙән үк, йөрөмтәл атаһына эйәреп, күрше Елизаветино урамын йыш тапағанлыктан, урыҫ малайҙары араһында әшнәләре бар уның [Искәндәрҙең].* Ә. Хәкимов. *[Гәбит] китеп барғанында, Юламан тигән оло ғына йәштәрҙәге йөрөмтәл генә бабайға осрап, үҙенең Торатау битенән бөркөт балаһы табып алып кайтыуын .. һөйләне.* М. Ямалетдинов.

2. Кыҙырып (эҙләнеп) йөрөп ашай торған *(мал-тыуарға карата)* □ Не любящий кормиться на одном месте, любящий рыскать *(о скотине). Йөрөмтәл мал. Йөрөмтәл ат.*

3. *күсм.* Енси яктан тотанаҡһыҙ, йөрөргә яратыусан; аҙғын. □ Развратный, распутный, распущенный, похотливый, блудливый. *Йөрөмтәл кеше. Йөрөмтәл ир. Йөрөмтәл булыу.* ■ *Киленде ете быуынын тикшереп алып биргәндәр. Токомонда йөрөмтәл, яман сирле кешеләр булғанмы — барыһын да тикшергәндәр.* «Башҡортостан кыҙы», № 5, 2010.

ЙӨРӨМТӘЛЛӘНЕҮ (йөрөмтәллән-) (Р.: рыскать; И.: prowl; Т.: koşuşmak) *к.*

1. Бер урында тормай эҙләнеп йөрөү, йөрөмтәлгә әйләнеү *(малға карата).* □ Рыскать, стать бродячим. *Йөрөмтәлләнеп китеү. Йөрөмтәлләнгән һыйыр.*

2. *күсм.* Аҙғынлык юлына баҫыу, йөрөмтәлгә әйләнеү. □ Стать гулящим, блудливым. ■ *[Нәһиә — Фатимаға:] Ирҙе ир иткән дә катын, хур иткән дә катын. .. Тағы ла йөрөмтәлләнә башлаһа, үҙемә әйт, бығаулашып бирермен.* И. Ғиззәтуллин.

ЙӨРӨМҺӨҘ (Р.: неходкий; И.: slow; Т.: sürümsüz) *с.*

Алыҫ юлға йөрөй алмай тиҙ арыусан; йөрөүгә насар *(ат).* □ Неходкий *(о лошади). Йөрөмһөҙ булыу.* ● *Өс нәмә кешене картайтыр: йөрөмһөҙ ат, үтмәҫ бысак, яман катын.* Әйтем. *Ялкауҙың атын алма, йөрөмһөҙ булыр.* Мәкәл. *Йөрөмһөҙ ат йән кыйнар.* Әйтем.

ЙӨРӨМҺӘК (Р.: любящий рыскать; И.: liking to prowl; Т.: koşuşmayı seven) *с.*

Күп йөрөргә яратыусан. □ Не любящий кормиться на одном месте, любящий рыскать *(о скотине). Йөрөмһәк тай.* ■ *Йөрөмһәктән юл ҡалыр, сәсәндәрҙән тел ҡалыр, яҡшыларҙан зат ҡалыр, батырҙарҙан дан ҡалыр, һөйләп халыҡ дан ҡалыр.* Ҡобайырҙан.

ЙӨРӨНӨҮ (йөрөн-) (Р.: ходить взад-вперёд; И.: walk to and fro; Т.: yürümek) *ҡ.*

Үҙ алдыңа тегеләй-былай йөрөү. □ Ходить взад-вперёд, расхаживать. ■ *Салих, ғәҙәтенсә, ишекле-түрле йөрөнә ине.* А. Карнай. *[Ҡатын:] Юйһаң да ҡараһы бөтмәҫ, тимен, әгәр ҙә тороп йөрөнә башлаһаң, [ирем] һиҙер тип ҡурҡам.* Д. Юлтый. *Хафиз ҡарт атын бер ситкәрәк бороп ҡуйҙы ла, шунда уҡ халыҡ араһына кереп, арлы-бирле ҡараштырып йөрөнөп килде.* М. Тажи.

ЙӨРӨП АЛЫУ (йөрөп ал-) (Р.: пройтись; И.: have a walk; Т.: yürümek) *ҡ.*

Күпмелер ваҡыт хәрәкәтләнеү, *ниндәйҙер* сара ярҙамында хәрәкәт итеү. □ Пройтись, проехаться. *Йоко алдынан йөрөп алыу. Атта йөрөп алыу.* ■ *Сәғит Агиш, ултырған еренән тороп, таяғы менән туҡылдап, бүлмә буйлап йөрөп алды.* Картотека фондынан. *[Сәмиғ] тегеләй-былай йөрөп алған була, сәғәтенә күҙ һала — «Победа» маркалы ул сәғәтте яңы ғына алғайны.* Т. Ғиниәтуллин.

ЙӨРӨП ИНЕҮ (йөрөп ин-) (Р.: прогуляться; И.: have a walk; Т.: yürümek) *ҡ.*

Ҡайҙалыр йөрөп килеп, өйгә кереү. □ Погулять, прогуляться. *Саф һауала йөрөп инеү.* ■ *Бибиғәйшә ҡарсыҡ, Байрамғол бына-бына ҡайтып керер тип, өйҙә ҡалды. Аш һалды, .. умарталары янында йөрөп инде.* Ф. Янышев.

ЙӨРӨП КИЛЕҮ (йөрөп кил-) (Р.: походить и вернуться; И.: take a short walk; Т.: yürüyüp gelmek) *ҡ.*

Ҡайҙалыр барып ҡайтыу. □ Походить, погулять, поездить, покататься и вернуться. *Ҡала буйлап йөрөп килеү. Ял итеп йөрөп килеү. Машинала йөрөп килеү.* ■ *Ниғмәтулла оҙаҡ йөрөп килде.* Я. Хамматов.

ЙӨРӨП КИТЕҮ (йөрөп кит-) (Р.: пойти; И.: start going, etc.; Т.: harekete geçmek) *ҡ.*

Ҡуҙғалып китеү, эшләй башлау. □ Пойти; начать работать, двигаться. *Сәғәт йөрөп китте. Троллейбустар оҙаҡ емерелеп ултырғандан һуң йөрөп китте. Оҙаҡ ятҡандан һуң ауырыу йөрөп китте.*

ЙӨРӨП ЯТЫУ (йөрөп ят-) (Р.: ходить постоянно; И.: walk constantly, walk about; Т.: devamlı yürümek) *ҡ.*

Оҙайлы ваҡыт эсендә хәрәкәт итеү; һәр ваҡыт йөрөү. □ Ходить, ездить *(постоянно; в течение длительного времени).* ■ *Кәмәләргә лә, ҡарапҡа ла тулҡындар шап та шоп һуғыла, ә палубала итек туҡылдағаны ишетелеп ҡалғандай — шулай булһа, һаҡсылар йөрөп ята.* Я. Хамматов. *Күҙ алмамды һура һөмһөрө. Эре генә йөрөп ятыуҙанмы?! Рәнйеш бөккән арҡам — көмрө.* Т. Ғәниева.

ЙӨРӨТКӨС (Р.: приводящий в движение; И.: driving; Т.: harekete getiren) *с.*

Ниҙелер хәрәкәткә килтерә торған. □ Приводящий в движение, движущий. *Йөрөткөс ракета. Йөрөткөс ҡуласа.*

ЙӨРӨТӨЛӨҮ (йөрөтөл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йөрөтөү 1–4, 6–9, 11, 14, 15.** *страд. от* **йөрөтөү 1–4, 6–9, 11, 14, 15.** *Такси менән йөрөтөлөү. Һүҙ йөрөтөлөү. Алтын йөрөтөлгән сынаяҡ.* ■ *Райондың Таулыҡай булып аталып йөрөтөлөүе лә бушҡа түгел.* Д. Бүләков. *Арҡа тип йөрөтөлгән һыртта өс-дүрт сәскес таҡҡан бер нисә көслө трактор саң борҡотоп иген сәсә.* Ә. Әминев. *Был бәләкәй генә ғаилә тарихы, әлбиттә, бер-ике ай буйы ауыл араһында һөйләп йөрөтөләләр ҙә онотолалар ине.* Һ. Дәүләтшина. *Мәмерйәләге ҡаршы стенала тирәһе ыһйы һәм аҫыл таштар менән йөрөтөлгән дүрт мөйөшлө шыма таҡта тора.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

ЙӨРӨТӨҮ (йөрөт-) (Р.: двигать; И.: drive; move; Т.: yürütmek) *ҡ.*

1. Атлатып, хәрәкәт иттереү. □ Двигать *чем,* приводить в движение *что. Атты йөрөтөү. Йөрөтөп килеү. Саф һауала йөрөтөү. Бергә йөрөтөү.* ■ *Сергей аттан төштө һәм, уны бер нисә минут аллы-артлы йөрөткәндән һуң, тышауланы ла, кәбән төбөнә ултырып, талған аяғын яҙҙы.* А. Абдуллин. *Йәштәр, аттарҙы һыуытып алып*

килер өсөн, саналарға тейәлеп, урам буйына ат йөрөтөргә китте. Ғ. Дәүләтшин.

2. *Ҡайҙалыр* барырға, йөрөргә мәжбүр итеү. □ Двигать, приводить в движение. ■ *[Салих бабай:] Күпте күргән инде бабағыҙ, балаҡайҙар. Нишләйһең һуң, яҙмыш шулай йөрөтә торғандыр.* А. Карнай. *Монасип бер яй табып ҡайтырға сыҡҡас та, уны тиҙ ҡотҡарманылар: бер яҡтан Усман, икенсе яҡтан Ҡайрасовтар ҡултыҡлап алдылар, тура эскадронға ҡайтаһы урынға, әллә нисә урам арҡыры сыҡтылар, әллә нисә тыҡрыҡ буйлап йөрөттөләр.* А. Таһиров. ● *Бәндәне ризыҡ йөрөтә.* Мәҡәл.

3. Бер хәлдә тотмай ҡуҙғатыу; хәрәкәтләндереү. □ Приводить в движение *что;* двигать *что. Ҡулдарҙы йөрөтөү. Телде йөрөтөү.* ■ *Был эш .. ҡулдарҙы йәһәт йөрөтөүҙе, бик йәһәт борола алыуҙы, инструмент менән эш итә белеүҙе талап итә ине.* А. Карнай.

4. *Ниндәйҙер* сара ярҙамында хәрәкәт иттереү. □ Возить *на чём;* катать *на чём.* // Катание. *Сана менән йөрөтөү. Мотоцикл менән йөрөтөү. Машина менән йөрөтөү. Велосипед менән йөрөтөү. Атта йөрөтөү. Пароходта йөрөтөү.* ■ *Хафиз ҡарт баланы Сәғиҙәнән алып арбаға ултыртты ла, йорт алдында бер-ике тапҡыр әйләнеп, тартып йөрөттө.* М. Тажи. *[Ҡыҙ:] Рәхмәт инде, егет, ҡотҡарҙың бит. Шуның өсөн, әйҙә, үҙеңде бер рәхәтләндереп йөрөтәйем. Санама ултыр.* Әкиәттән.

5. Шахмат, шашка уйынында: бер урындан икенсе урынға шылдырыу, күсереү. □ Перемещать, ходить *(в шахматной игре). Пешканы йөрөтөү. Атты йөрөтөү.* ■ *Семәрле өҫтәлдәр өҫтөндәге сатраш таҡталарының яртыһы алтындан, яртыһы көмөштән икән. Йөрөтә торған һындарҙың да ун алтыһы алтындан, ун алтыһы көмөштән икән.* Әкиәттән.

6. Бер маҡсат менән *ҡайҙалыр* ебәреү. □ Отправить *с какой-то* целью. ■ *[Сурағол:] Әй, Моратша ағай, һин ул түрәләрҙе буш ята тип уйлайһыңмы? Улар аҫтыртын кешеләр йөрөтмәй торалар тиһеңме?* Т. Хәйбуллин.

7. Бер маҡсат менән *ҡайҙалыр* алып барыу. □ Водить *кого, что,* возить, носить, таскать. ■ *Профессор уны [Нурисламды] ярҙамсы-тылмас сифатында үҙе менән бергә Һаҡмар, Яйыҡ буйҙарында йөрөтә.* Ә. Хәкимов. *Никольский, Мәскәүҙән Башҡортостанға килергә булғас, Елена Михайловнаны Мәскәүҙә ҡалдырмай үҙе менән йөрөтөргә булды.* А. Карнай. *[Салауат:] Әсәй, уйлап ҡарағыҙ әле, аҡ һаҡаллы ҡарттарыбыҙҙы килмешәк баяр ялсылары һаҡалдарын өҙөп тукмағанда, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын ҡаланан ҡалаға йөрөтөп мал урынына һатҡанда, ҡуйыныгыҙҙа тыныс ятыу миңә оят түгелме?* Б. Бикбай.

8. Хәрәкәткә килә торған нәмәгә идара итеү. □ Водить *что,* управлять *чем.* // Управление, вождение. *Машина йөрөтөү. Вертолёт йөрөтөү. Трамвай йөрөтөү. Такси йөрөтөү.* ■ *Ҡош һауала осор, балыҡ һыуҙа йөҙөр өсөн яралған һымаҡ, мин дә машина йөрөтөр өсөн тыуғанмындыр донъяға!* Ғ. Әмири. *«Беларусь»та саҡта Сәми .. ат урынына йөрөттө үҙ йомошона колхоз техникаһын.* Ә. Әминев. *Штурман, Бикҡолға карапты йөрөтөү тураһында бер аҙ һөйләгәс, иртәгә линейныйға алып барырға булды.* А. Таһиров. ● *Һөнәре бар ком өҫтөндә кәмә йөрөтөр.* Мәҡәл.

9. Хәрәкәткә килтереү, эшләтеү *(механизмдар, энергия сығанаҡтары тураһында).* □ Водить. ■ *Үҙе [Закиров] яңынан йышҡыһын йөрөтә башлай, йоҡа ғына аҡ таптар төрөлөп-төрөлөп сығалар.* А. Карнай.

10. *Нимәнелер* берәй әйберҙең өҫтөнән хәрәкәт иттереү. □ Водить *чем.* ■ *[Баш командир] алдындағы карта өҫтөндә бер һыҙыҡ буйлап имән бармағын йөрөттө лә «Ст. Сырт» тип яҙылған урында бармаҡ башы менән нөктә яһап туҡтаны.* А. Таһиров.

11. Урындан урынға алып йөрөү. □ Возить; распространять, передавать. *Йөрөтөп таратыу. Йөрөтөп алыу.* ■ *Өйрәнсек уларҙы [көрпәктәрҙе] төрлө яҡҡа йөрөтөп һата.* З. Биишева.

12. *күсм.* Кешенән кешегә тапшырыу, таратыу *(һүҙҙе, хәбәрҙе һ. б.).* □ Распространять, передавать *(сплетни и т. д.). Ғәйбәт йөрөтөү. Һүҙ йөрөтөү. Ҡотҡо йөрөтөү.* ■ *Уның [Хисамовтың] һүҙен һүҙ йөрөтөргә,*

ғәйбәт һатырға ярата торған, донъяла Карғалы ғына — мосолман тергә, тип йөрөй торған халык, унлап, йөҙләп арттырып ебәргәйне. Ә. Хәкимов. *Ир аҙмаҫ — ямандарға эйәрмәҫ булһа, ошаҡ йөрөтөп, кеше ғәйебен тирмәҫ булһа.* М. Аҡмулла. *Тамара менән серләшеп була. Ул, башка кыҙҙар кеүек, һүҙ йөрөтмәй.* Ә. Бикчәнтәев.

13. Үҙеңдә, үҙе менән алып йөрөү. □ Иметь, носить с собой. *Үҙеңдә йөрөтөү. Сумкала йөрөтөү.* ■ *Ул [Корбанбикә] .. һандык, шкаф, келәт, аласык аскыстарын һәр вакыт үҙе менән йөрөттө.* М. Кәрим. *Ул [Әхтәм] уны [винтовка киҫәген] һәр вакыт салбар кеҫәһенә тығып йөрөтә икән.* Ғ. Хәйри. *Йәмйәшел булып сығып килгән һирәк үлән өҫтөнә шофёр егет брезент йәйеп ебәрҙе, стакан, үҙе менән йөрөткән башка кашығаяк сығарҙы.* Ә. Хәкимов. *Мөнәсәбәттәре етди дауам итеп алып киткәс, ул [Сәмиғ] куртка кеҫәһендә йөрөткән хаттарҙы күрһәтте.* Т. Ғиниәтуллин. ● *Бармаҡ йөрөт — аң эйҙер, бәке йөрөт — кын кейҙер.* Мәҡәл. *Бәхетте сепрәккә төрөп йөрөтмәйҙәр.* Мәҡәл. *Матурлыкты табакка һалып йөрөтмәйҙәр.* Мәҡәл.

14. Өҫ-баштағы нәмәне берәй рәүешкә килтереп тотоу. □ Носить. *Сәсте кыҫка йөрөтөү. Бүректе кырын һалып йөрөтөү. Сәсте алға төшөрөп йөрөтөү.* ■ *[Сәғиҙә:] Һеҙҙең ауыл катындары итәген шулай [кыҫтырып] йөрөтәме әллә?* М. Тажи.

15. Уйҙа, иҫтә тотоу, күңелдә һаклау. □ Иметь, носить *(в душе, мыслях). Сер йөрөтөү. Хыял йөрөтөү.* ■ *Әле таң алдынан килеп яуып торған ямғыр аҫтында телгә килгән дегәнәктәр һис кемгә һөйләмәй йөрөткән серемде иҫемә төшөрҙөләр.* Ш. Янбаев. *[Илгиз:] Шулайҙыр, килешәм, мин үҙем дә уларға [милиционерҙарға] мөхәббәт тойғолары йөрөтмәйем.* Ә. Әминев. *Сәгиҙәнең ошондай һорауы Гөлнурға ғәжәберәк тойолдо. Сөнки ул бығаса был кеше хаҡында ундай-былдай фекер йөрөтмәне, уға әллә ни әһәмиәт биреп карағаны ла юк ине.* М. Тажи. *[Фәтхел менән Гөлгөл] хыял йөрөттөләр: урак урғас, бергә тормош короп инергә.* Р. Ниғмәти.

16. *күсм.* Уратып һыҙыу йәки һалыу. □ Украшать, окаймлять. *Алтын йөрөткән ваза. Көмөш йөрөткән сынаяк.* ■ *Болоттоң сит-ситтәре кыҙыл бутал йөрөткән кеүек алһыуланды.* Ж. Кейекбаев.

17. *күсм. Нимәлер* тураһында һүҙ, хәбәр алып барыу, һүҙҙе *кемгә* йәки *нимәгәлер* кайтарып калдырыу. □ Иметь, носить. ■ *Әмин бай, бүтән каҙактарҙың теләгән кире кағып, кешеләргә белем таратыусы, ислам диненең сафлығы, дөйөм үҫешен дингә бәйләп фекер йөрөткән кәҙерле кунакты туранан-тура үҙенә алып кайтты.* Я. Хамматов. *Тик әҙәм балаһы бер төрлө уйлай, яҙмыш үҙенекен итә, тип фекер йөрөттө Суминов.* Ә. Хәкимов. *Ләкин ул [Сергей] тәү башта тормошто айкарға, хәрәкәт итергә кәрәклеген, коро уй-фекер йөрөтөп кенә тормошка лайык һәм хәжәте булырҙай әйбер тыуҙырыу мөмкин булмағанлығын аңлай ине.* И. Абдуллин.

18. *Ниндәйҙер* исем менән аталыу. □ Носить *(имя).* □ *Башкортостан Республикаһының Милли Йәштәр театры Мостай Кәрим исемен йөрөтә.* ■ *Республикабыҙҙа ғына әллә күпме университет, академия, колледж арҙаклы шәхестәрҙең исемен йөрөтә. Ул замандарҙа ата-олаталарының йөрөткән фамилияларын ташлап, йәштәрҙең икенсе фамилияға күсеүе яңы бер модаға әйләнеп киткән.* Р. Өмөтбаев.

19. *Кем* йәки *нимә* тип атау. □ В сочетании с вспомогательным глаголом *тип, итеп* означает «называть, считать *кем*». ■ *Һуғыштан һуң Камил ағайҙы үлеп киткәнсе «кытай» тип йөрөттөләр.* Ә. Әминев. *Сибәрлеге, йомшак өндәшеп катыға ултырта белеүе аркаһындамы, уны [Ирина Платоновнаны] Клеопатра тип йөрөтәләр.* Ә. Хәкимов. *Бына ошо киң баҫыуҙы яңғырата торған матур тауышы өсөн дә уны «һандуғас Әхмәтсафа» тип йөрөтәләр.* А. Карнай.

20. Айырым исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған эште ғәмәлгә ашырыуҙы, башкарыуҙы белдергән һүҙбәйләнеш яһай. □ Управлять, вести. *Үҙ-ара йомош йөрөтөү. Сауҙа йөрөтөү.* ■ *[Имайҙың] акыл-*

лы кәңәштәре, калала эш йөрөтә белеүе уға [Ниязғолға] тағы ла ҙур терәк булды. Һ. Дәүләтшина. *Улар [аэропландар], сәғәтенә бишәр йөҙ километр осоп, почта йөрөтәләр һәм илдең сиктәрен һаклайҙар.* А. Карнай.

♦ **Бармаҡ йөрөтөү** гел күрһәтмә генә биреү. □ Давать указания. **Күҙ йөрөтөү** өҫтән-мөҫтән генә байҡау, күҙ йүгертеү. □ Бросить взгляд; обвести взглядом, оглядеть. ■ *Ғимран бабай кеткелдәп көлә, төпкә батҡан сағыр күҙҙәрен алмаш-тилмәш беҙгә йөрөтөп сыға.* Н. Мусин. *[Суминов] әле яңы ғына күргәндәренең төш булыуына ҡыуанып, тирә-яҡҡа күҙ йөрөтөп алды.* Ә. Хәкимов. *[Сергей] аудиторияларға күҙ йөрөтөп сыҡты; тәнәфестә Тоняның гәзиттәге урыны — ҙур тәҙрә ҡаршыһына килде.* А. Абдуллин. **Шайтан йөрөтөү** кешегә хөсөт биреү. □ Проявлять зависть.

ЙӨРӨТӨШӨҮ (йөрөтөш-) *к. урт. ҡар.* **йөрөтөү.** *взаимн. от* **йөрөтөү.** ■ *Быны бергәүгә лә оҡшатып булырлыҡ түгел, тик сәләм биргәс кенә, атаҡлы ҡарттарҙан Моратша икәнен белеп, көрәштәләр ҙә. бер-береһенә сиктән тыш аяулы күҙҙәрен йөрөтөшөләр.* Т. Хәйбуллин.

ЙӨРӨҮ (йөрө-) [боронғо төрки *йүри-, йүрү-*] (Р.: ходить; И.: go, walk; Т.: yürümek) *к.*

1. Аяҡҡа баҫыу, ҡуҙғалыу, атлау. □ Ходить, идти. // Ходьба, хождение. *Йөрөй башлау. Йөрөп китеү.* ■ *Ул [Зәлифә] һыҙланған, йөрөгәндә лә аяғынан уттар сыҡҡан һымаҡ.* Т. Хәйбуллин.

2. Атлап, хәрәкәт итеү, хәрәкәттә булыу. □ Ходить, идти. // Ходьба, хождение. *Аяҡ ослап йөрөү. Тороп йөрөү. Урманда йөрөү. Йөрөп килеү.* ■ *Ҡара тауыҡ алан-йолан ҡаранды ла, әйтерһең, сит баҡсала йөрөгәнен саҡ аңлап, ҡыткылдай-ҡыткылдай үҙҙәре яғына китте.* Р. Низамов. *[Сәлмән ағай:] Самсон! Һеҙ Зөләйхә менән ана теге юлдан китегеҙ, һөйләшегеҙ, серләшегеҙ, .. түйгансы йөрөгөҙ ҙә, анау сиркәү мөйөшө тураһындағы ҡапҡаға барырһығыҙ.* Т. Йәнәби. *Был балдаҡты нисегерәк алырға инде тип торғанда, бесәй мөйөштә бер сысҡан йөрөгәнен һиҙеп ҡалған.* Әкиәттән.

3. Төрлө ҡулайлашҡан ағзалар ярҙамында һыуҙа хәрәкәт итеү *(балыҡ, һыу йәнлектәре һ. б. ҡарата).* □ Плавать *(о рыбах и т. д.).* ■ *Һыу төбөнә баҫыу менән, ятыуҙа ҡымйып йөрөгән сабаҡтар, ҡоморойҙар, моронҙары менән төрткөләп, аяҡты ҡытыҡлай башлай.* Н. Мусин.

4. Бер юл менән тәртип буйынса хәрәкәт итеү *(транспортҡа ҡарата).* □ Ходить, курсировать, летать *(о средствах передвижения). Ауылға автобус йөрөй. Ҡала менән дача араһында автобус йөрөй.* ■ *Беҙҙең полк, юл буйлап, шпалдар, рельстар өҫтөнән бара, бер генә поезд да йөрөмәй, тимер юлда бөтә хәрәкәт туҡталған.* Д. Юлтый.

5. Хәрәкәт итерлек хәлдә булыу, ҡуҙғалыу, хәрәкәтләнеү *(тән ағзаларына ҡарата).* □ Двигаться, шевелиться. *Аяҡ йөрөү. Ҡул йөрөү. Бармаҡтар йөрөү.* ■ *[Юламан ҡарт:] Аяҡ йөрөгәндә, өйгә ҡайтып йығылырға кәрәк.* З. Биишева. *Ихласым юҡ, баҫмай аяҡ, йөрөмәй ҡул.* Ш. Бабич. *Ауыҙ эсендә тел йөрөй, тел осонда һүҙ йөрөй.* С. Юлаев. ● *Аяҡ атламаһа, баш йөрөмәй.* Мәҡәл.

6. Хәрәкәтләнеү, эшләү *(төрлө механизмға ҡарата).* □ Ходить, работать *(о различных механизмах). Мотор йөрөй. Сәғәт йөрөй.* ■ *Йәшлек менән мөхәббәт һиҙмәй үтә ни барын, һәр көн һайын гәзәти, оҙаҡ йөрөй сәғәте.* М. Өмөтбаев.

7. *Ниндәйҙер* сара ярҙамында хәрәкәт итеү. □ Ездить, кататься *на ком-чём.* // Езда, катание. *Атта йөрөү.* ■ *Яҡуптың кәмәлә йөрөүен Вәзир яҡындан ҡарап китмәй булдыра алманы, әлбиттә.* М. Кәрим. *Миндә атта йөрөргә, сабырға оҫталыҡ бар. Хатта ат өҫтөндә ултырып ҡына түгел, аяҡ өҫтө тороп сабып йөрөгәнем бар.* Д. Юлтый. *Ир-егет һымаҡ ул Һырбикә, көн буйы һыбай йөрөһә лә, арыу тигәнде белмәй, уҡ-һаҙаҡ аҫып ала ла иң алыҫтағы көтөүҙәр артынан сыға ла китә.* Н. Мусин.

8. Күңел асыу, ял итеү өсөн *нимәләр* ярҙамында хәрәкәт итеү. □ Кататься *на ком-чём.* // Катание. *Саңғыла йөрөү. Роликлы конькиҙа йөрөү. Скутерҙа йөрөү.* ■ *Тротуарҙарҙа малайҙар ҡысҡырып конькиҙа йөрөйҙәр.* А. Карнай. *Майор Күсемов*

спортта тик ҡоро өйрәтеүсе генә түгел, практик күнекмәләрҙә лә, саңғыла йөрөүҙә лә дивизияла ал бирмәгән кеше булып сыға. Р. Өмөтбаев.

9. Сират буйынса шылдырып йәки сығарып ҡуйыу *(уйында).* □ Делать ход, ходить, идти *(в игре). Ат менән йөрөү. Валет менән йөрөү. Уйын кәрт менән йөрөү.* ■ *Улар сатраш уйнай башлағандар. Бер-ике рәт йөрөп тә өлгөрмәгәндәр, батша Әминбәкте бикләгән.* Әкиәттән.

10. Бер маҡсат менән *ҡайҙалыр* барыу. □ Находиться, быть, пребывать *где-л. Донъя гиҙеп йөрөү. Ситтә йөрөү. Эшкә йөрөү.* ■ *[Урал:] Мин алыҫтан ил йөрөп, яман-яҡшыны күреп, үлемде табып үлтереп, ҡотҡарырға кешене, тыңдырырға барыны уйлап сыҡҡан батырмын.* «Урал батыр». *Арыҫлан .. Бирҙеғолдоң яу баҫтырышып йөрөүен дә, Пётр батшаның мәшһүр ҡаһарманы Алдар батырға ҡанығыуын да ҡалдырманы.* Г. Ибраһимов. *Сауҙа итеп йөрөгәнендә, мәкер әбейҙән отолоп, бар байлығынан ҡолаҡ ҡағыуы арҡаһында, ҡайтырға оялған Сәлимйәнде эҙләргә сыҡҡан кәләше ирҙәр кейеме кейеү менән генә сикләнмәй, хатта үҙенә Сәтәи Тәхәүи улы тип паспорт та ала.* Ә. Сөләймәнов. ● *Иҫән саҡта йөрөп ҡал, был донъяны күреп ҡал.* Мәҡәл. *Донъяның ҡәҙерен — йөрөгәндә, малдың ҡәҙерен – бөлгәндә, йәндең ҡәҙерен үлгәндә белерһең.* Мәҡәл. *Елгән – ел күргән, йөрөгән – ил күргән.* Мәҡәл.

11. Урындан урынға ҡыҙырыу. □ Ходить. *Өй беренсә йөрөү.* ■ *Хан йөрөнө һәр йәнә: Кавказ, рус ҡырына, күп илдәрҙе вайран итеп ҡайта Ҡырым еренә.* М. Өмөтбаев. *Ямал .. күлдәк итәгенең йыртығын бөтөнләй онотоп, иҙән буйлап йөрөргә тотондо.* М. Тажи. *Малай, ауылдың һәр урамын ике яҡлап төшөп алған да, өй беренсә йөрөп, бөтә кешене ҡунаҡҡа саҡырған.* Әкиәттән. *[Фатир хужаһы:] Күптән түгел беҙҙең ҡалала бер алма һатыусы йөрөгәйне, күршебеҙҙәге бер ҡыҙ шунан бер алма һатып алып ашаған икән, кәзәгә әйләнгән дә ҡуйғансы.* Әкиәттән. *[Маянһылыу:] Илдән илгә йөрөһәң дә, атай, ил ғәриптәре булһаң да, атай, Ҡуҙыйкүрпәс кеүек аҫыл егетте таба алмаҫһың, атай.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

12. *күсм.* Кешенән кешегә таралыу *(һүҙ, хәбәр кеүеккә ҡарата).* □ Ходить, распространяться *(о слухе). Һүҙ йөрөү. Ғәйбәт йөрөү. Хәбәр йөрөү. Ҡотҡо йөрөү.* ■ *Береһенән-береһе шомлораҡ хәбәрҙәр йөрөп торғанға, кешеләр хәүефләнәләр.* Г. Ибраһимов. *Был ваҡиға тураһында артистар араһында ла бер ғауым ваҡыт күңелле хәбәр йөрөп алды.* Р. Өмөтбаев. ● *Күңелһеҙ хәбәр тиҙ йөрөр.* Мәҡәл.

13. *Ҡайҙалыр* күп тапҡырҙар булыу, *кем менәндер* йыш аралашыу. □ Ходить, находиться, быть *(многократно).* ■ *Әллә нисек булды ул айырылыу, әллә нисек шул кис йөрөгәндәр, әлдә онотолмаған ул хистәрем, күҙ алдымда һаман күргәндәр.* Г. Сәләм.

14. *Күпмелер* ваҡыт *ҡайҙалыр* булыу йәки ваҡытлыса тороу, йәшәү. □ Находиться, быть, пребывать *где-л.* // Нахождение, пребывание. *Армияла йөрөү. Юл йөрөү. Пленда йөрөү. Себерҙә йөрөү.* ■ *Сабирйән һуғышта йөрөгәндә лә Мәғҙәндән айырылып торҙо, ҡайғыһын да, шатлығын да шунда татыны.* Р. Камал. *Ул үҙе өс йыл буйы тоташтан фронтта йөрөгән. Өйөндә ҡатыны Гөлбөҫтан менән ваҡ-сыбыр балалары ғына ҡалған.* Ғ. Дәүләтшин. *Мин, ҡаҙаҡ араһында йөрөгән саҡта, ҡаҙаҡтар менән бәхәсләшеп, Илек һыуының иң киң еренән йөҙөп сыҡҡайным.* Д. Юлтый.

15. Тереклек итеү, көн итеү; йәшәү. □ Быть, жить. *Буйҙаҡ йөрөү. Яңғыҙ йөрөү.* ■ *Зөләйха, һин ерҙә йөрөгән хур ҡыҙы, күҙҙәреңдә яна күктең йондоҙо.* С. Юлаев.

16. *Ниндәйҙер* вазифаға бәйле эш башҡарыу. □ Быть. *Иҫәпсе булып йөрөү.* ■ *Сәйет бәләкәйҙән күршеһе Әхмәтхан байҙа ҡусылыҡта йөрөгән. Йомош-юлға етеҙ, эшкә барымлы булған ул.* Ә. Вахитов. *Ул [Байғужа] йәш ваҡытында күп уҡый алманы, күберәк батраклыкта йөрөнө.* Д. Юлтый.

17. *күсм. Кем менәндер* ғишыҡлы мөнәсәбәттә булыу. □ Иметь любовные отношения. ■ *«Туташ, мин һинең менән йөрөгәнде кеше һиҙмәһен тип, юрый танымаған кешенең ҡулын үпкән булдым», — тим.* Т. Йәнәби.

Ғәли һүҙ башланы: «Йә, егеттәр, ҡыҙҙар менән йөрөйбөҙмө»? З. Ураҡсин. ● *Яҡшы ҡатын өҫтөнән ир йөрөмәй, яҡшы ир өҫтөнән ҡатын йөрөмәй.* Мәҡәл.

18. Үҙеңдә бергә булыу, үҙең менән бергә булыу. □ Носить с собой. *Кеҫәһендә ҡәләм йөрөй.* ■ *Ул хәтәр ҡорал [рогатка] бөтә малайҙарҙың да кеҫәләрендә йөрөмәҫ ине.* М. Кәрим.

19. *Кемдеңдер* ҡулында булыу, *кемдәләр* һаҡланыу. □ Храниться, быть в руках *у кого.* *Өс мең һум таныышымда йөрөй.* ■ *[Сурағол:] Тукта, иртә менән байҙың үҙенә инәйем дә ун ике йыл буйы йөрөгән хаҡымды һорайым.* Т. Хәйбуллин.

20. Ғәмәлдә булыу, ҡулланылыу. □ Быть в действии, в обращении, иметь хождение. *Элекке ҡағыҙ аҡса хәҙер йөрөмәй.* ■ *Большевиктар әйтә, был донъяла ярлы халыҡ хөкөмө йөрөһөн, тип.* Ш. Бабич.

21. Баһаға ҡуйылыу, баһаланыу. □ Цениться. *Ҡиммәт йөрөү. Осһоҙ йөрөү.* ■ *Кеш тиреһе ни тиклем ҡарараҡ булһа, шул тиклем ҡәҙерле була, хаҡы ла юғары йөрөй.* Картотека фондынан.

22. *Кем* йәки *нимәләр* булып иҫәпләнеү, һаналыу. □ Считаться, быть *кем-чем.* *Паспорт буйынса мин буйҙаҡ булып йөрөйөм.* ■ *Уның атайым тип йөрөгән кешеһе әҙәм затынан түгел, ә дейеү бәрейе затынан булған.* Әкиәттән.

23. *-п/-а* формаһындағы хәл ҡылым менән ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәл йәки хәрәкәттең рәүешен йәки дауамлылығын белдергән ҡушма ҡылым яһай. □ С деепричастием на *-п/-а* основного глагола образует сложный глагол, придавая действию оттенок длительности, многократности, постоянства. *Йүгереп йөрөү. Ҡайтып йөрөү. Һөйләшеп йөрөү. Тыңлап йөрөү. Эшләп йөрөү.* ■ *Ул сакта райкомда эшләнеп ҡайтҡандан һуң Рәфҡәт бер нисә көн буйы шаңҡып йөрөнө.* Г. Хисамов. *Сере, дөрөҫөрәге, ҡайғыһы ҙур ине Йәмилдең. Уны күңелендә оҙаҡ һаҡлап йөрөй алманы, кем менәндер уртаҡлашҡыһы, серләшкеһе килде.* Р. Ҡол-Дәүләт. *Ғилажиҙы һалҡын һуғып, уның тамағы шешеп йөрөнө.* А. Таһиров. *Шул ваҡытта, Салауаттың ҡайтҡанын ишетеп, урман араһында ҡасып йөрөгән Айтуған батыр килеп керә, Айтуған сәләмләшә, барыһы менән дә күрешә.* Б. Бикбай.

24. *-рға/-ргә* формаһындағы ҡылым менән ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, билдәле маҡсатты үтәүгә әҙерләнеү мәғәнәһен белдерә. □ С глаголом в форме на *-рға/-ргә,* иногда в сочетании с глагольной формой *тип, итеп* выступает в функции вспомогательного глагола со значением намерения. *Ҡайтырға йөрөү. Һатырға йөрөү. Күсергә йөрөү.* ■ *Мин уҡырға йөрөй башлағанда, беҙҙең ауылда мәктәп юҡ ине әле.* Т. Йәнәби. *Төшөмдә кире алырға йөрөйөм, бабай, — тип әйтте, ти, егет.* Әкиәттән.

♦ **Ары йөрө!** *кемделер* эргәнән ҡыуғанда әйтелә. □ Убирайся! Уходи! ■ *[Кәйнәһе — Барсынһылыуға:] Кит, ары йөрө! Иреңә хыянат итеп йөрөйһөң, һинең менән һөйләшмәйем!* «Алпамыша менән Барсынһылыу». **Етәктә бау өҙмәй йөрөү** кеше ыңғайлы, тыңлаулы булыу. □ Быть уступчивым, покладистым. **Йөҙөп йөрөү** бөтә ихласлыҡты биреү; кинәнеү *(эштә).* □ Работать с удовольствием. ■ *[Ғәбделхәй Усманов:] Туризм бизнесын үҫтерергә ине. Бөгөнгө йәштәргә ошо юҫыҡта йөҙөп йөрөп эшләргә булыр ине.* «Башҡортостан», 30 март 2012. **Күтәреп алып йөрөү** бик ҡәҙерләү. □ Дорожить *кем-чем,* относиться бережно *к кому-чему.* **Маҡтап** (*йәки* **һөйләмәй) йөрөйһөң** ашаған ваҡытта килеп ингән кешегә әйтелә. □ Просим к столу *(употребляется по отношению к человеку, пришедшему в дом во время еды).* ■ *[Ҡатын:] Һөйләмәй генә йөрөйһөгөҙ икән, табындың уртаһына тап килдегеҙ.* М. Тажи. **Яманлап** (*йәки* **һөйләп) йөрөйһөң** ашап бөткәс кенә килеп ингән кешегә әйтелә. □ Пригласили бы к столу, но опоздал *(употребляется по отношению к человеку, пришедшему после окончания еды, тоном сожаления).*

ЙӨРӨШ (Р.: ход; И.: walking; Т.: yürüyüş) *и.*

1. Кеше йәки йәнлек, хайуандың үҙ аяғы менән хәрәкәте. □ Ход, ходьба, хождение. *Йөрөштө тиҙләтеү. Йөрөштө әкренәйтеү.* ■ *Бер аҙҙан ат йөрөшөн әкренәйтте. Талғын*

ғына юртып бара башланы. Д. Юлтый. *Йөрөшөн тағы ла ҡыҙыулатып иҙән буйында йөрөгән офицер ҡапыл туҡтаны.* А. Таһиров. *Оҙаҡламай, ысынлап та, ҡәмә һыуға бата башланы, йөрөшө әкренәйҙе.* Ә. Әминев. *Ул [карт] ынтылып-ынтылып атын ҡыуа, йөрөшөн тиҙләтергә тырыша.* Д. Юлтый. ● *Яҡшы кеше ҡартайһа ла, аҡылынан яҙмаҫ, яҡшы ат ҡартайһа ла, йөрөшөнән яҙмаҫ.* Мәҡәл.

2. Транспорт сараһының бер урындан икенсе урынға хәрәкәте. □ Ход, движение *(транспорта).* ■ *Эшелон, йөрөшөн бер тиҙләтеп, бер әкренәйтеп, үҙ юҫығы менән туҡтауһыҙ бара ла бара.* Ә. Хәкимов. *Машина тигеҙ юлдан шыма, тиҙ йөрөш алғас, Харбинконың күҙе оло юлдың ике яғында баш ҡоҫоуға яҡынлап торған оҙон һабаҡлы арыштарға төштө.* А. Таһиров. *Поезд йөрөшөн тиҙләтте, тирә-яҡтағы ҡаралтылар, телеграмм бағаналары артҡа ҡарап аға башланылар.* М. Ғафури.

3. Төрлө механизмдарҙың эш хәрәкәттәре. □ Ход, движение *(механизмов). Конвейер йөрөшө. Сәғәттең йөрөшөн тиҙләтеү.*

4. Шыйыҡлыҡтың, газдың һ. б. төрлө көпшә, торба, ҡан тамырҙары буйлап таралыу хәрәкәте. □ Движение, распространение *(по чему-л.). Ҡан йөрөшө. Шыйыҡлыҡтың торбанан йөрөшө.* ■ *Кесерткәндә веналар шешеү (варикоз), аяҡта ҡан йөрөшө тоткарланыу (тромбофлебит) осраҡтарында ҡулланырға ярамай.* «Башҡортостан ҡыҙы» № 5, 2010.

5. Атлау рәүеше. □ Поступь, походка. *Йөрөшө әсәһенеке.* ■ *Күтәргән нәмәләренең ауыр икәне барыусыларҙың йөрөштәренән беленеп тора.* А. Таһиров. *Рауза бик һимергән, йөрөшө һәм ҡыланыштары һалмаҡланған, уның бите, муйыны, яланғас беләктәре утыҙ процентлы аҡ ондан иҙелгән аҡ ҡамырҙы хәтерләтәләр.* А. Карнай. *Ғәлимә матур, тигеҙ йөрөшө менән ат таҙартыусылар эргәһенә килде.* А. Таһиров. ● *Йүгәнең көмөшө менән маҡтанма, атыңдың йөрөшө менән маҡтан.* Мәҡәл. *Яҡшы аттың йөрөшө тигеҙ, яҡшы кешенең холҡо тигеҙ.* Мәҡәл. *Ялҡау йөрөшөнән билгеле.* Мәҡәл. *Торошона килгән йөрөшө, өлөшөнә төшкән көмөшө.* Әйтем.

6. Уйнаусының сираттағы сығышы *(шахмат, шашка һ. б. уйынында).* □ Ход. *Сираттағы йөрөш. Икенсе йөрөш. Бик дөрөҫ йөрөштәр менән аҡтар ҡараларҙы ҡыҫырыҡлап еңә.* ■ *Был, ысынлап та, Барый ҡарт тарафынан уйланылған «ат йөрөшө», йәғни, урыҫ әйтмешләй, «ход конём» ине.* М. Ямалетдинов.

7. *Ҡайҙалыр* барып йөрөүҙең, *ҡайҙалыр* булыуҙың күрһәткесе. □ Посещаемость. *Эшкә йөрөш. Йөрөш табеле.* ■ *Уҡыу-уҡытыу һәм методик идаралыҡ уҡытыусыларҙың хеҙмәт тәртибен, студенттарҙың дәрестәргә йөрөшөн даими тикшерә.* Интернет селтәренән.

ЙӨРӨШЛӨ (Р.: ходкий; И.: fast (going); Т.: yürük) *с.*

Йөрөшө (1, 2) ырамлы. □ Ходкий, быстроходный; скорый. *Йөрөшлө ат. Йөрөшлө булыу. Тиҙ йөрөшлө поезд.* ■ *Туры атым йөрөшлө, йөрөштәре килешле. Хатҡа ҡаршы хат яҙырға, йәнем, һеҙгә тейешле.* Халыҡ йырынан. *Ауылда батырҙарҙан батыр, аҡыллыларҙан аҡыллы, сәсән телле, яҡты йөҙлө, сос йөрөшлө, күрер күҙгә һөйкөмлө бер егет үҫкән.* Ә. Вахитов. ● *Атың йөрөшлө булһа, тояҡҡа көс; ҡатының тауышлы булһа, ҡолаҡҡа көс.* Әйтем. *Әсәһе юрға булһа, ҡыҙы йөрөшлө була.* Әйтем.

ЙӨРӨШЛӘНЕҮ (йөрөшлән-) *ҡ. төш. ҡар.* **йөрөшләү.** *страд. от* **йөрөшләү.** *Йөрөшләнгән тай.*

ЙӨРӨШЛӘТЕҮ (йөрөшләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йөрөшләү.** *понуд. от* **йөрөшләү.** *Атты йөрөшләтеү.*

ЙӨРӨШЛӘҮ (йөрөшлә-) (Р.: идти иноходью; И.: pace; Т.: yürüklük) *ҡ.*

Ваҡ ҡына, еңел генә баҫып, шәп атлау. □ Идти иноходью; идти особым аллюром *(между шагом и рысью). Ат йөрөшләп бара.*

ЙӨРӨШӨҮ (йөрөш-) (Р.: ходить друг к другу; И.: go to each other, visit; Т.: bir birine yürümek) *ҡ.*

1. Бер-береңә барып йөрөү. □ Ходить, ездить друг к другу. *Ҡунаҡҡа йөрөшөү. Ашҡа йөрөшөү.* ■ *Кешеләр торлаҡ ҡорған, ти;*

бер-беренә йөрөшөп, уйнап бергә, көлөшөп, ҡоҙа-ҡоҙағый булышып, йәше-ҡарты йоплашып, ҡанлы яуҙан тынышып, байман табып, тын алып, рәхәтләнеп ҡалған, ти. «Урал батыр». *[Сәлим – Фәйзигә:] Һуғышта саҡта күпме һүҙ ҡуйыштыҡ, вәғәҙәләр бирештек, иҫән ҡалһаҡ, ҡунаҡҡа йөрөшөрбөҙ, тинек, .. ә береһе лә үтәлмәй.* Н. Асанбаев. *Бисәләр ҡумәкләшеп, төркөмләшеп бер-береһенә сәйгә йөрөшәләр.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Аралашыу, ҡатнашыу. □ Общаться; поддерживать приятельские, дружеские отношения. *Күршеләр менән йөрөшөү.* ■ *[Поляемеш:] Беҙ, Һәпизә әхирәт бар саҡта, шулай аралаша, йөрөшә торғайныҡ.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӨРӨШ-ТОРОШ (Р.: поступки; И.: actions; behaviour; Т.: davranış) *и. йыйн.*

Кешенең үҙен тотоу рәүеше, йөрөшө, ҡылығы. □ Поступки, поведение. *Йөрөш-торошо матур.* ■ *Бурылдың холҡонда, йөрөш-торошонда тулы үҙгәреш тыуҙы.* С. Агиш. *Йөрөш-торош көндән-көн матурлана.* Ғ. Хәйри. *Үҙенең [Аҡһаҡ бүренең] дә йөрөш-торошо баҙыҡ, ҡабырғалары, һырты йомролана төшкән.* Ә. Хәкимов. *Рәшиҙә иренә элеккенән дә наҙлыраҡ өндәшкән кеүек, йөрөш-торошттары ла үҙгәрҙе ҡатындың.* Т. Ғарипова.

ЙӨРӨШТӨРӨҮ (йөрөштөр-) (Р.: ходить (время от времени); И.: walk about; Т.: bazen yürümek) *ҡ.*

1. Ары-бире йөрөү, бер тегеләй, бер былай йөрөү. □ Ходить, гулять *(время от времени). Саңғыла йөрөштөрөп килеү. Урманда йөрөштөрөп ҡайтыу.* ■ *Ул [Нурислам] тәүҙә, таяҡҡа таянып, ишек алдында йөрөштөрҙө, өс-дүрт көндән һуң ғына урамға сыға башланы.* Ә. Хәкимов. *Мылтыҡты алырға ла яҡты күҙҙә йөрөштөрөп килергә кәрәк.* Д. Бүләков. *Икенсе көндө тирмәлә ултыра-ултыра екһендерә башлаһа, Кинйә, сығып китеп, аратирә йөрөштөрөп килгеләне.* Ғ. Ибраһимов. *Булат, арлы-бирле йөрөштөрөп, үҙе һаҡлай торған посты бөтә яҡтан күҙәтергә тырышты.* Р. Байымов.

2. Һирәк-һаяҡ барышыу. □ Изредка посещать друг друга. *Ҡунаҡҡа йөрөштөрөү.* ■ *Бында килгәс тә, улар [ҡунаҡ малайҙар] бер нисә көн утауға йөрөштөрөп алдылар.* З. Биишева.

ЙӨРӨШҺӨҘ (Р.: неходкий; И.: slow; Т.: yürük olmayan) *с.*

Йөрөшө (1) ырамһыҙ. □ Неходкий. *Йөрөшһөҙ ат. Йөрөшһөҙ булыу.*

ЙӨРЬӘТ [ғәр. جرأة] (Р.: смелость; И.: boldness; Т.: cüret) *и. иҫк. кит.*

Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ. □ Смелость; отвага, мужество. ■ *Хоҙайға илап, теләйем теләк: беләккә – ҡеүәт, йөрәккә – йөрьәт.* Ш. Бабич. *[Янышбай:] Был ҡурҡыныстарҙан сығыуға сара табыу мөмкин, әлбиттә! Ләкин баҙнат итеп әйтеүгә йөрьәтем етмәй тора.* М. Буранғолов. *Ҡалыр өмөт: илтер Ҡояш юлы көрсөктәрҙән сығыр йөрьәткә.* Х. Назар.

ЙӨРЬӘТ ИТЕҮ (йөрьәт ит-) (Р.: осмеливаться; И.: dare; Т.: cüret etmek) *и. иҫк.*

Ҡыйыуланыу; баҙнатсылыҡ итеү. □ Осмеливаться, решаться *на что.* ■ *[Кинйә:] Ғәрәп сәйәхәтселәре, Яурупа ғалимдары һис тә ҡурҡып ятмағандар бит әле, .. йөрьәт итеп, хатта беҙҙең яҡтарға уҡ килеп еткәндәр.* Ғ. Ибраһимов. *Ошоғаса бер һунарсының да уны [аҡбарыҫты] юллатып атырға йөрьәт итмәүен Алдар атаһынан да, бүтән өлкән кешеләр ауыҙынан да ишетте.* Н. Мусин. *Мәҙинә .. районҙан килгән ағай алдында йөрьәт итеп, ауыҙ күтәреп йырлап ебәрҙе.* Т. Ғарипова. *Шулай ҙа бер көн егет Санияға мөхәббәт хаты тапшырырға йөрьәт итте.* Т. Ғиниәтуллин.

ЙӨРӘГАУЫҘ (Р.: предсердие; И.: auricle; Т.: kulakçık) *и. анат. диал.*

Йөрәк алды. □ Предсердие. *Уң йөрәгауыҙ. Һул йөрәгауыҙ.*

ЙӨРӘК (йөрәге) [дөйөм төрки *йүрүк ~ йүрек*] (Р.: сердце; И.: heart; Т.: yürek) *и.*

1. *анат.* Күкрәк ҡыуышлығының һул яғында урынлашып, ҡан әйләнешен тәьмин итә торған мускуллы ҡапсыҡ кеүек үҙәк ағза. □ Сердце. / Сердечный. *Кеше йөрәге. Һау йөрәк. Йөрәк тибеше. Йөрәк тамыры. Йөрәк дарыуы. Йөрәк сәнсеү. Йөрәккә ҡан һауыу.* ■ *Ә мин иһә йүнләп атлай ҙа алмайым, баҫҡан һайын һәр һөйәк, һәр быуын ауырта, йөрәккә үтеп иңрәй.* Н. Мусин. *Уның [Нәғимә инәйҙең] йөрәген сәнсеү алды, быуын-*

дары таралды. М. Кәрим. *Һеҙҙең йөрәк булһа ҡаты тимер, беҙҙең йөрәк ҡаты ҡоростан!..* М. Ғафури. ● *Ауырыу – аяҡтан, ҡайғы йөрәктән алыр.* Мәҡәл. *Баланың бармағы ауыртһа, әсәнең йөрәге ауыртыр.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Кешенең эске донъяһы, эске сифаты һәм хис-тойғолары; күңел. □ Душа, чувства. *Йөрәк йылыһы. Йөрәк елкенеү. Йөрәк ашҡыныу. Йөрәкте асып һалыу. Бөтә йөрәктән ҡотлау.* ■ *Әсәм теле миңә – сәсән теле, унан башҡа минең халҡым юҡ, йөрәгендә халҡы булмағандың кеше булырға ла хаҡы юҡ!* Р. Ғарипов. *Мин йырламай, былбыл, кем йырлаһын, йөрәк ялҡындарым ҡабынғас.* Ш. Бабич. *Ошондай уҡ йылғалар шаулашҡан мәл, йөрәктәрҙе елкендереп, ҡоштар ҡайтҡан саҡ ине.* Р. Низамов. *Бөтә ғаиләнең күңелен тулҡынландырған, йөрәктәрен ҡытыҡлаған келәт асылды.* Г. Дәүләтшин. *[Карт – Уралға:] Егет тә егет икәнһең, егет, батыр икәнһең, йөрәгеңә таянып, беләгеңә һыҙғанып, беҙҙәйҙәрҙе ҡыҙғанып килгән батыр икәнһең.* «Урал батыр». ● *Иҫерек иҫендәген, зарлы йөрәгендәген һөйләр.* Мәҡәл. *Эшләгәндә йөрәгең елкенһен, ашағанда ҡолағың һелкенһен.* Мәҡәл. *Ҡул яраһы уңала, тел яраһы йөрәктә ҡала.* Мәҡәл. *Миһырбанлыҡ – йөрәктән, миһырбанһыҙлыҡ – беләктән.* Мәҡәл.

3. *эйл. ф.* **йөрәгем, йөрәккәйем.** Ҡәҙерле күргән яҡын кешегә иркәләп, яратып әйтелә. □ Сердце, сердечко моё, душечка, душа моя *(при ласковом обращении).* ■ *Ташлап киттең мине, йөрәгем, йөрәкһеҙ бар кемгә кәрәгем? Гүйә, ҡашы төшкән йөҙөкмөн, аты йығып ҡасҡан егетмен.* М. Кәрим.

4. *миф.* Мифлаштырылған, кешенең йәне йәшәгән тән ағзаһы. □ Мифологизированная часть тела, являющаяся вместилищем души, чувств человека.

♦ **Арыҫлан йөрәкле** бик ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ кешегә ҡарата әйтелә. □ Смелый, храбрый, храбрец. ■ *Аһ, Бураншa, Бураншa! Бөркөт күҙле, арыҫлан йөрәкле Бураншa!..* З. Биишева. *Ғафури Туҡай тураһында, арыҫлан йөрәкле кеше был, тип уйланы.* С. Ҡудаш. **Бөтә йөрәктән** ысын күңелдән, йән-тән менән. □ От всего сердца. *Бөтә йөрәктән рәхмәт әйтеү.* **Йөрәк болғаныу** күңел болғаныу. □ Тошнить. ■ *Хисмәтулла бик ныҡ өшөүҙән уянды. Йөрәге болғанды. Башы ярылырҙай булып һыҙланы.* Я. Хамматов. *Әгәр кешенең йөрәге болғанып, ашамай йәки ашай алмай торһа, уға әҙләп кенә йылан мөгөҙөн ҡайнатып эсергәндәр.* Башҡорт мифологияһынан. **Йөрәк дерелдәү** ҡурҡыу. □ Бояться, дрожать, трепетать. ■ *Был юлдан үткән ваҡытта, йөрәк дерелдәй ине.* С. Кулибай. **Йөрәк итен ашау** 1) күп тапҡырҙар әйтеп йөҙәтеп бөтөү. □ *соотв.* Прожужжать все уши. *Йөрәк итен ашап бөтөү;* 2) бик ныҡ борсоу, рухи ғазапҡа дусар итеү. □ Терзать душу. ■ *Юлда ҡойолоп ҡалған орлоҡтар, ҡырҙа сәселеп ҡалған башаҡтар етем булып ҡырҙа яталар. Шулар йөрәк итен ашайҙар.* Д. Юлтый. *Судьялар ҙа хөкөм итә-итә ялығалар ҙыр. Һәр процесс йөрәк итен ашай бит.* Ә. Бикчәнтәев. **Йөрәк итен телгеләү** *ҡар.* **йөрәк итен ашау 2.** *Йөрәк итен телгеләргә тырышыу.* **Йөрәк итен тырнау** *ҡар.* **йөрәк итен ашау 2.** ■ *Ҡыҙылармеецтарға тыңлаусан һәм тәртип һаҡлаусан булырға өйрәткәндә лә, ниндәйҙер сәнскеле сыбыҡ йөрәк итен тырнап торҙо.* И. Насыри. **Йөрәге күкрәгенә һыймау** ныҡ ярһығанда, ашҡынғанда әйтелә. □ Переполниться *(радостью, горем). Йөрәге күкрәгенә һыймай тибә.* ■ *Рафиҡтың ҡапыл дөрләп киткән хистәрҙән йөрәге күкрәгенә һыймаҫтай булып типте.* Л. Яҡшыбаева. *Сурағол баҫҡан урынында туҡтап ҡала, шатлығынан йөрәге күкрәгенә һыймай дөп-дөп тибә.* «Ҡуҙыйкүрпәс». **Йөрәккә инеү** йылы һүҙ менән ышаныс, хөрмәт ҡаҙаныу; эс-бауырға инеү. □ Войти в доверие; лезть в душу. ■ *Йөрәктәргә бәреп инһен йырым, дорфа булһа, ғәйеп итмәгеҙ.* З. Биишева. *Ниндәй йылы һүҙ бар туған телдә Әсмә йөрәгенә инерлек.* С. Кулибай. **Йөрәккә йәбешеү** ҡапыл ауыр булып китеп, үҙеңде насар тойоу. □ Хватать за сердце, почувствовать себя плохо. ■ *Боҙоҡ ҡымыҙҙы эсһәң, йөрәккә йәбешә.* М. Ғәбәйҙуллин. **Йөрәккә йылы инеү** ҡурҡыныс, хәүеф бөтөп, күңелдә ышаныс тыуыу. □ Полегчать на сердце. ■ *Ҡырҡ өсөнсө йылдың йәйе. Заманаларҙың ауыр, шулай ҙа кешеләр*

йөрәгенә йылы ингән сағы. Н. Мусин. **Йөрәк кәйһеү** *диал.* күп ашап биҙеү; бүгеү. □ Наедаться до отвращения; переедать. *Айырым бер ризыҡтан йөрәк кәйһеү.* **Йөрәккә ҡаҙалыу** күңелгә ауыр тойғо, әрнеү һалыу. □ Раздирать сердце *(душу).* ■ *Был һүҙ теге бахырҙың йөрәгенең тап уртаһына барып ҡаҙалды.* С. Агиш. **Йөрәккә май ҡуныу** көс-хәл алыу, нығыныу. □ Крепнуть, поправиться. ■ *Тәненә ит үрмәй, йөрәгенә май ҡунмай, бауыр һөйрәп ыҙа сиккән Күсәрбай ҡусты ла беҙҙән китте.* Т. Хәйбуллин. **Йөрәккә сыҙамау** нимә эшләргә белмәй, ғазап-ҡайғынан ыҙаланыу. □ Переживать *за что-л.,* беспокоиться. ■ *[Разия апай:] Йөрәгемә сыҙай алмай, .. кисә кискә табан урманға сығып киттем.* Н. Мусин. **Йөрәккә таш булып ултырыу** (*йәки* **ятыу)** күңелгә бик ауыр, ҡыйын булыу. □ Лечь камнем на сердце (душу). *Әйткән һүҙе йөрәгемә таш булып ятты.* **Йөрәккә төшөү** бик ныҡ яфалау, интектереү; үҙәккә үтеү. □ Надоесть; вымотать душу. *Аяғымдың ауыртыуы йөрәккә төштө.* **Йөрәккә ут һалыу** ярһытыу, елкендереү. □ Взволновать, взбудоражить *кого-что.* ■ *Етмәһә, һыу буйында уйнап йөрөгән балалар ҙа уның [Сәғиҙәнең] йөрәгенә ут һалдылар.* М. Тажи. **Йөрәккә ял булыу** рәхәтлек, тыныслыҡ килеү. □ Обрести душевный покой. ■ *Ҡоштар килеп һайраһа ла, ял була йөрәгемә.* Халыҡ йырынан. **Йөрәккә ятыу** күңелгә хуш килеү, оҡшау. □ Нравиться, доставлять удовольствие, быть по душе; иметь расположение *к кому-л.* ■ *Һәр йөрәккә ятыр йырың барҙа, хәсрәтлеһен миңә йырлама.* С. Кулибай. **Йөрәк ҡабыныу** *ниндәйҙер* көслө тойғо менән әҫәрләнеү. □ Вдохновляться *чем-л. Шатлыҡтан йөрәк ҡабыныу.* **Йөрәк ҡаны** иң ғәзиз, иң саф нәмә тураһында әйтелә. □ Самый близкий. ■ *Әллә ни яҡшы ла булманы, ләкин йөрәк ҡаны менән яҙылған бит улар [шиғырҙар].* Р. Ғарипов. **Йөрәк ҡатыу** *ниндәйҙер* тойғо бөтөп, һыуыныу. □ Охладеть, остыть *к кому-чему. Йөрәк ҡатып бөтөү.* **Йөрәк ҡубыу** бик ныҡ ҡурҡыу. □ Сильно испугаться, перепугаться. ■ *Миңлеямал, уттың үҙ яҡтарында булғанлығынан шикләнеп, йөрәге ҡубып, аҙымдарын йышайта башланы.* Г. Дәүләтшин. *Ҡупты йөрәк, шиңде ҡолаҡ — шөрләне меҫкен ҡуян.* Ш. Бабич. **Йөрәк ҡырҡылыу** ит, майлы ризыҡ ашамай асҡаҡланыу, хәлһеҙләнеү. □ Ослабеть *(без мяса и жирной пищи). Йөрәк ҡырҡылыу сәбәбе.* **Йөрәк ҡыҫылыу** ауыр хискә тулышыу. □ Ощущение сжимания сердца ■ *Сал сәстәренә, һурылған йөҙҙәренә ҡарап, Кәрим әсәһен йәлләне, йөрәге ҡыҫылды.* Я. Хамматов. **Йөрәк майы һыҙлау** (*йәки* **һыҙыу)** *ниндәйҙер* тойғо кисереп әрнеү, һыҙланыу. □ Отдаваться в сердце. *Көй бик алыҫтан килгәндәй, йөрәк майын һыҙып ҡына, әкрен генә ишетелә.* Н. Мусин. *Йөрәк майын һыҙҙырған ғәрлек араны һыуындырҙы.* Ш. Янбаев. *[Эшселәр] һаман түҙҙеләр, фирғәүендәр, ҡарундар йөрәк майын һыҙҙылар.* Ш. Бабич. **Йөрәк өҙгөс** *ҡар.* **йөрәк яргыс**. ■ *Ҡара болот һымаҡ ниндәйҙер бер нәмә йөрәк өҙгөс әсе тауыш менән ергә килеп төштө.* М. Тажи. **Йөрәк өҙөлөү** 1) бик ныҡ асығыу. □ Проголодаться; в животе сосёт *(от голода).* ■ *Шәрифулламдың йөрәге өҙөлөп асығып китһә, тоттороормон тип алып килгән берҙән-бер йоморҡаны Мөслимә һөйөнсө әйтеүсе Хәйерзаманға сығарып бирҙе.* Ф. Иҫәнғолов; 2) *нимәлер* уйлап әсенеү; әрнеү. □ Сильно страдать, печалиться. ■ *Егет кенә йыры тәсбих түгел, егет йырлай йөрәге өҙөлөп.* Халыҡ йырынан. **Йөрәк өшөү** аяныс хәлдән ҡурҡып ҡалтыраныу; биҙрәү. □ Сердце холодеет *(от неприятных чувств).* ■ *Сәғиҙәнең йөрәге өшөп китте. Бала ауыҙынан ошондай һүҙҙе ишетеүе ни тиклем ауыр.* М. Тажи. **Йөрәк параһы** иркәләткәндә, яратҡанда әйтелә. □ Сердечко моё, душенька. **Йөрәк сығыу** 1) көслө тойғонан ярһыу. □ Сильно волноваться. ■ *Артынан килеүсе юҡ кеүек, шулай ҙа ҡолаҡ шаулай, йөрәк сығып бара.* З. Ураксин. *Пианино тауышын, карауатҡа ултырып, икебеҙ ҙә тын ғына тыңлайбыҙ. Ләкин йөрәктәр сығып бара.* Д. Юлтый. *Әллә ҡаушап, әллә оялып, башым ауырта, йөрәгем сығып килә.* Н. Ҡәрип; 2) алдан бәлә һиҙеп, түҙемһеҙләнеү. □ Предчувствовать. ■ *[Сәйҙеямал:] Түҙмәнем. Аҙна буйы йөрәгем сығып*

барғанға ҡайтҡайным. Я. Хамматов. **Йөрәк сәнсеү** йөрәктең сәнсеп алған кеүек ауыртыуы. □ Рези в сердце. *Йөрәк сәнсеп ауыртыу.* ■ *Далдең бөтә хафалары таралып киткәндәй булды, күкрәгенә йылы инеп, йөрәк сәнсеүҙәре баҫылды.* З. Ураҡсин. **Йөрәкте алыу** ныҡ ҡурҡытыу; ҡотто алыу. □ Сильно испугать. ■ *Биктимер һаҡсыларҙың йөрәген ала, улар бөтөнләй ҡаушап төшәләр.* Әкиәттән. **Йөрәкте асыу** эске серҙе белдереү. □ Открыть душу. ■ *Ромашка, Ромашка! Әле мөхәббәттең ни икәнен дә белмәгән сакта тәү башлап йөрәген асҡан малай!* Ш. Янбаев. **Йөрәкте баҫыу** тынысланыу, тынысландырыу. □ Успокоить сердце. ■ *Беҙ хәҙер күрҙек ҡәҙәхтә ул матур йәрҙең йөҙөн: бир шараптың көслөһөн, баҫмай йөрәкте был йөҙөм!* Д. Юлтый. *Шулай ҙа Моратшиндар бөгөлмәгәндәр. Эш менән йөрәктәрен баҫҡандар.* Картотека фондынан. **Йөрәкте ҡуҙғатыу** тыныслыҡты алыу, болоҡһотоу. □ Тревожить, волновать, беспокоить. *Ҡыҙ йөрәкте ҡуҙғатты.* **Йөрәкте өҙөү** ниндәйҙер хис уятып әсендереү; әрнетеү. □ Заставить переживать, страдать. ■ *Бөгөн уйҙарыма үҙем хужа түгел. Уйҙарыма хужа таң нуры; төнгө йырҙар йөрәк өҙәләр, шатлыҡ бирә миңә таң нуры.* Д. Юлтый. *Һыуҙа балыҡ йөҙәләр, һыу һалҡынын һиҙәләр. Ауылыбыҙҙа бер һылыу бар, йөрәгемде өҙәләр.* Йырҙан. **Йөрәкте талау** күңелде өйкәп тынғы бирмәй уйландырыу. □ Раздирать душу. *Уй йөрәкте талай.* **Йөрәкте ус төбөнә алыу** ныҡ ҡурҡыуға төшөү. □ Дрожать от страха. **Йөрәкте ярыу** ныҡ ҡурҡытыу. □ Напугать. *Йөрәкте ярып ҡысҡырыу.* **Йөрәк түрендә (***йәки* **төбөндә) һаҡлау (тотоу** һ. б.**)** иң ҡәҙерле, изге нәмә итеп, онотмай, күңелдә тотоу. □ Хранить как зеницу ока. *Йөрәк түрендә һаҡланған сер. Йөрәк түрендә һаҡланған иң наҙлы һүҙҙәр. Йөрәк төбөндә тотҡан иң яҡын кешем. Йөрәк төбөндә һаҡланған иҫтәлектәр.* **Йөрәк урынында түгел** күңел тыныслығы юҡ, борсоулы. □ Душа (сердце) не на месте *у кого.* ■ *[Фатиманың] атаһы йортонда тол булып йәшәгән көндәре күңелһеҙ һәм һағышлы үтте, йөрәге үҙ урынында түгел, атлығып сығып килгән һымаҡ булды.* Ж. Кейекбаев. **Йөрәк һарыуы** тәрән ҡайғы, зар. □ Горе, печаль, скорбь. *Ауыр йөрәк һарыуы.* **Йөрәк шыу (***йәки* **жыу) итеү** ҡапыл ҡурҡып, ҡаушап ҡалыу, ҡойолоп төшөү. □ Сердце ёкнуло, сердце оборвалось *(о сильном испуге).* ■ *Ғәтиә апай менән әлеге Зөләйхә килеп тә сыҡтылар. Минең йөрәк шыу итеп китте.* Т. Йәнәби. **Йөрәк ялғау** әҙмәҙ ҡапҡылап, асыҡҡанды баҫыу; тамаҡ ялғау. □ Перекусить. *Йөрәк ялғап алыу.* **Йөрәк ялҡыны** шашып торған көслө хис. □ Огонь сердца; сильное чувство. *Йөрәк ялҡынына түҙә алмау.* **Йөрәк яныу** уй, хәсрәттән үртәнеү. □ Страдать; сокрушаться, печалиться *по чему-л. Ниңәлер йөрәк яна. Йөрәк яна, ярһый ут кеүек.* ■ *Үҙенең донъяла иң яратҡан, иң яҡын кешеһенең шулай юҡҡа кәмһетелеүенә Айбулаттың йөрәге янды.* Һ. Дәүләтшина. *Ауырта ла башым, яна йөрәгем, һеҙ дуҫтарҙы көн дә күрмәһәм.* Халыҡ йырынан. ● *Үлгәндән бары ла ҡала, ҡалғандың йөрәге яна.* Мәҡәл. **Йөрәк яраһы** *ниндәйҙер* ауыр хәл, фажиғәнең ныҡ рәнйеткән, әрнеткән ауыр шауҡымы, эҙе. □ Душевная рана. *Йөрәк яраһы уңалыр. Мәңгелеккә түгел йөрәк яраһы.* ■ *[Сәғиҙә:] Ҡуй, һөйләмә, Зыя, ул хаҡта һөйләмә! Йөрәгемдең яраһын яңыртма.* М. Тажи. **Йөрәк ярғыс** йөрәккә үтеп инерлек, бик ныҡ тәьҫир итерлек; тетрәткес. □ Душераздирающий. ■ *«Әсәй», — тип ҡысҡырған йөрәк ярғыс тауыштан айнып киткәндәй булды [Дилбәр].* Г. Ғиззәтуллина. *[Атайымдың] шундай шәп итеп йүгергәнен күргәнем дә, йөрәк ярғыс тауыш менән һөрәнләгәнен ишеткәнем дә юҡ ине.* З. Ҡотлогилдина. **Йөрәк ятыу** *кемде* йәки *нимәнелер* оҡшатыу, ярашлы тип табыу. □ Симпатизировать; быть по душе; иметь расположение *к кому-чему. Йөрәк ятҡан эш. Йөрәк ятҡан ҡыҙ. Йөрәк ятҡан ризыҡ.* **Ҡайнар йөрәк(ле)** ҡайнар хисле, дәртле. □ Горячее сердце; с горячим сердцем. **Ҡара йөрәк(ле)** ҡаты күңелле, бәғерһеҙ, яуыз. □ Жестокосердный. **Күш йөрәк<ле>** ҡурҡыу белмәгән ҡыйыу кешегә ҡарата әйтелә. □ Смелый, храбрый. ■ *Таиба әбей уйын Закирҙан Хамматҡа күсерергә тырышты. «Бына, исмаһам, арыҫлан ир... Күш йөрәкле*

баһадир». З. Биишева. *[Әхмәҙулла бабай:] Ул батыр егет беҙҙең ауылдан, минең тиңдәшем Сәлих булған... Ир намыҫлы кеше ине ул, ҡуш йөрәкле...* Ә. Вахитов. **Ҡуян йөрәк<ле>** ҡурҡаҡ кешегә ҡарата әйтелә. □ Заячья душа; трусливый. ■ *[Әминә:] Ҡурҡаҡ һанайһың-мы? Хата уйың! Бар һулышы менән һөйә белгән ҡатын ҡуян йөрәкле түгел.* Б. Бикбай. *[Колсобай — Хисмәтуллаға:] Мәйтәм, һине шундай ҡуян йөрәкле кеше булырһың, тимәгәйнем.* Я. Хамматов. **Таш йөрәк<ле>** ҡаты күңелле, бәғерһеҙ. □ Жестокосердный, безжалостный, бессердечный. ■ *Таш йөрәктәрҙе лә иретерлек таң симфонияһы тирбәлгән ошо гүзәллек эсендә ниндәйҙер һуғыш, тартыш, үлтереш хаҡында уйлау һис тә күңелгә ятмай.* З. Биишева. *Атаң һиңә ҡот биргән, әсәң һиңә һөт биргән; дошманға таш йөрәкле, дуҫыңа аш йөрәкле батыр итеп үҫтергән.* «Урал батыр». **Туң йөрәк(ле)** хис, тойғо менән əҫәрләнә белмәгән, янмаған. □ Равнодушный, чёрствый. ■ *[Гөлбикә:] Их, туң йөрәк! Ни эшләп шундай ҡыҙҙы күрмәй йөрөйһоң?* Ә. Хәкимов. **Үлгән (йәки һүнгән) йөрәк** хисһеҙ, дәртһеҙ. □ Бесчувственный, равнодушный. ■ *Таш ҡолаҡ, үлгән йөрәк, туңған баштар моңлоға моңаймаҫ та, бойоҡмаҫ та.* Ш. Бабич.

ЙӨРӘК АЛДЫ (Р.: предсердие; И.: auricle; Т.: kulakçık) *и. анат.*

Йөрәктең өҫкө ике бүлкәһенең береһе. □ Предсердие. *Уң яҡ йөрәк алды. Һул яҡ йөрәк алды.*

ЙӨРӘК АСЫУ (йөрәк ас-) *ҡ. диал. ҡар.* **асығыу.** *Еләк йыйып, арып, йөрәк асып ҡайттыҡ. Юлда йөрәгең асыр, ашап сыҡ.*

ЙӨРӘК АУЫРЫУЫ (Р.: болезнь сердца; И.: heart disease; Т.: kalp hastalığı) *и. мед.*

Йөрәктең ғәҙәти эшмәкәрлегенең боҙолоуы. □ Болезнь сердца. *Йөрәк ауырыуы менән ауырыу. Йөрәк ауырыуы һөҙөмтәһе. Йөрәк ауырыу арҡаһында.* ■ *[Флүрәлә] врачтар .. бер ниндәй ҙә сир тапманы, физик һәм күңел, йөрәк ауырыуылыр, тинеләр.* Ш. Хажиәхмәтов. *Йөрәк ауырыуын тауыҡ ултыртып имләйҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӨРӘК БАРМАҠ (бармағы) (Р.: безымянный палец; И.: the fourth finger; Т.: yüzükparmağı) *и. диал.*

Сығанаҡ бармаҡ. □ Безымянный палец. *Йөрәк бармағы осо. Йөрәк бармағындағы миң.*

ЙӨРӘК-БАУЫР (Р.: печень и сердце; И.: liver and heart; entrails; Т.: takım ciğer) *и. йыйн.*

1. Малдың йөрәк һәм бауыр ите. □ Печень и сердце *(у скотины). Йөрәк-бауыр бешереү.* ■ *[Эт] һаман да ашамаған, йә үлеп ҡуйыр, тип өсөнсө көнөнә бер тауығын салып, йөрәк-бауырын биреп ҡарарға булды Ғәбит.* М. Ямалетдинов.

2. *күсм.* Кешенең эске донъяһы; күңел, йән, рух. □ Душа *(внутренний психический мир человека).* ■ *[Ғимай ҡарттың] ҡоро тәбиғәтле кешеләре урынына йөрәгенә-бауырына инеп бара торған яҡшы тәбиғәтле кешеләре килеп сыҡтылар.* И. Насыри. *Ауырлыҡтың иң-иң ауыры була һәр саҡ еңел эсендә, һай йөҙгәндең йөрәк-бауыры тиҙ өҙөлә шуның өсөн дә!* Р. Назаров. *Атай үлһә, аһ, ауыр! Инәй үлһә, иң ауыр! Бүтән инәй табылмай шул, өҙөлә йөрәк-бауыр.* «Уҙаҡ-Туҙаҡ».

ЙӨРӘК БАШЫ (Р.: сердце; И.: heart; soul; Т.: yürek) *и.*

Иң нескә тойғолар тупланған тип һаналған урын. □ Сердце, душа *(как символ средоточия чувств, переживаний).* ■ *Илкәйемде һағынып уйлай-уйлай йөрәк башҡайымды һары алды.* Халыҡ йырынан.

ЙӨРӘК ЕТЕҮ (йөрәк ет-) *ҡ. ҡар.* **батырсылыҡ итеү.** ■ *[Тәки:] Ул мырҙаларға ҡағылырға атамандан башҡа кемдең йөрәге етһен?* Ш. Бикҡол. *Беҙ фронтта саҡта һуғышты туҡтатыу хаҡында йыш ҡына әңгәмәләшә инек, әммә берәүҙең дә хөкүмәткә, батшаға тел тейҙерергә йөрәге етмәй ине.* Д. Юлтый. ● *Теләк булһа, йөрәк етә.* Мәҡәл.

ЙӨРӘК ИТЕ (Р.: миокард; И.: myocardium; Т.: kâlp kası) *и.*

1. *анат.* Йөрәктең мускул туҡымаһы. □ Миокард, мышечная ткань сердца. *Йөрәк итенең функциональ үҙенсәлеге. Йөрәк ите ауырыуы.*

2. *күсм.* Иң ғәзиз, ҡәҙерле кешегә әйтелә. □ Дорогой. ■ *Мәрфуға апай ике ҡулын ҡаушырып өҫтәл өҫтөнә ҡуйған да, ауыҙына тәғәм ризыҡ ҡапмай, үҙенең йөрәк итен – улын күҙәтә.* Н. Ҡотдосов. *Тағатмасы, зинһар, толомоңдо, ҡанатмасы йөрәк итемде.* Р. Бикбаев. ● *Бала – бауыр ите, ир – йөрәк ите.* Мәҡәл.

3. Аттың тояғы аҫтындағы йомшаҡ ит; тояҡ мендәре. □ Мякиш *(утолщение кожного покрова на подошвенной части конечностей у лошади). Йөрәк итенең шешеүе.*

ЙӨРӘК КӨБӨ (Р.: перикард; И.: pericardium; Т.: perikard) *и. анат.*

Йөрәкте тыштан ҡаплаған яры. □ Перикард; околосердечная сумка. *Йөрәк көбө ауырыуы.*

ЙӨРӘК КӨЙӨҮ (йөрәк көй-) *ҡ. диал. ҡар.* **үҙәк көйөү.** *Йөрәк көйөүен баҫа торған дарыу.*

ЙӨРӘК КҮЛДӘГЕ *и. анат. ҡар.* **йөрәк көбө.** *Йөрәк йөрәк күлдәге эсендә урынлашҡан. Йөрәк күлдәге шыйыҡсаһы.*

ЙӨРӘК КҮСЕҮ (Р.: смещение сердца; И.: dislocation of the heart; Т.: kalp hastalığı) *и. мед.*

Йөрәктең уңға, һулға, алға, артҡа, өҫкә йә аҫҡа ҡарай күсеүе. □ Смещение сердца. ■ *Кеше ҡурҡһа, йөрәк күсә, тиҙәр. Шуны һыйпап, әпсенләп урынына ултырталар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӨРӘККӘ ЕТЕҮ (йөрәккә ет-) *ҡ. диал. ҡар.* **үҙәккә үтеү.** *Билдәһеҙлек йөрәккә етә.*

ЙӨРӘККӘ ҠАН ҺАУЫУ (Р: кровоизлияние в сердце; И.: bruise into a heart; Т.: kalp beresi) *ҡ.*

1. Ҡан тамырҙарының боҙолоуы сәбәпле йөрәк туҡымаһының берәй еренә ҡан тулышыу. □ Кровоизлияние в сердце. *Йөрәккә ҡан һауыу сәбәбе. Миокард инфаркты ваҡытында йөрәккә ҡан һауыу. Йөрәк аневризм шартлау һөҙөмтәһендә йөрәккә ҡан һауыу.*

2. *күсм.* Ауыр ғазап-ҡайғынан тәҡәтһеҙ булыу. □ Сильно переживать; сердце кровью обливается.

ЙӨРӘК ҠАБЫ *и. анат. ҡар.* **йөрәк көбө.**

ЙӨРӘК ҠАҒЫУ I (йөрәк ҡаҡ-) (Р.: рваться, порываться; И.: be anxious (to); Т.: gayret etmek) *ҡ.*

Ашҡынып ярһыу, елкенеү. □ Рваться, порываться, стремиться *к чему.* ■ *Йөрәк ҡағып, аҡбуҙ килә, саба-елә, саба-елә.* М. Кәрим.

ЙӨРӘК ҠАҒЫУ II (йөрәк ҡаҡ-) (Р.: способ магического лечения сердечной болезни; И.: spell against a heart trouble; Т.: kalp hastalığını büyü ile tedavi etmek) *ҡ. миф.*

Йөрәк ауырыуын имләү ысулы. □ Способ магического лечения сердечной болезни.

ЙӨРӘК-ҠАН (Р.: сердечно-сосудистый; И.: cardiovascular; Т.: kalp-damar) *с. йыйн.*

Йөрәктәге һәм ҡан тамырҙарында булған. □ Сердечно-сосудистый. *Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары. Йөрәк-ҡан тамырҙары өсөн дарыуҙар. Йөрәк-ҡан тамырҙары етешмәүсәнлеге.* ■ *Сифатлы ҡыҙыл ҡоро шарап – йөрәк-ҡан тамырҙарын нығытыусы ҡеүәтле сара.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

ЙӨРӘК ҠАПҠАСЫ (Р.: клапан сердца; И.: heart valve; Т.: kalp kapakcığı) *и. анат.*

Йөрәктә ҡандың кирегә йөрөшөн бикләп торған өлөшө. □ Клапан сердца. *Йөрәк ҡапҡасы эшмәкәрлеге. Йөрәк ҡапҡасын протезлау.*

ЙӨРӘК ҠАРЫНЫ (Р.: полость околосердечной сумки; И.: pericardium; Т.: kâlp zarı) *и. анат.*

Йөрәктең аҫҡы ике бүлкәһенең береһе. □ Полость околосердечной сумки. *Йөрәк ҡарыны эргәһе. Йөрәк ҡарыны буйы.*

ЙӨРӘК ҠАУЫНЫ *и. анат. диал. ҡар.* **йөрәк ҡапҡасы.** *Йөрәк ҡауыны ауырыуҙары. Йөрәк ҡауыны төҙөлөшө.*

ЙӨРӘК ҠУБЫУ (йөрәк ҡуп-) *ҡ. ҡар.* **йөрәк тайыу.**

ЙӨРӘК ҠЫУЫШЫ *и. анат. ҡар.* **йөрәк ҡарыны.**

ЙӨРӘК ҠӘҒБӘҺЕ *и. ҡар.* **ҡәғбә 2.** ■ *Салауат – Урал балаһы, Салауат – йөрәк ҡәғбәһе.* Ш. Бабич.

ЙӨРӘКЛЕ (Р.: отважный; И.: brave; Т.: yürekli) *с.*

Ҡурҡыуҙы белмәгән; ҡыйыу, ғәйрәтле. □ Отважный, бесстрашный. *Батыр йө-*

рәкле кеше. Ҡуш йөрәкле кеше. Йөрәкле ир. Йөрәкле булыу. ■ *Бүре ҡанлы әҙәмдәрҙән айырылырға ғүмер буйы үҙендә көс тапмаған йөрәкле кеше бына шулай, ҡараңғы төндә, буш юл өҫтөндә, япа-яңғыҙ һәләк була.* Б. Бикбай. *Ауылда батыр, ҡуш йөрәкле кешеләр йәшәгән.* Ә. Вахитов. *Батыр йөрәкле бәләкәс кенә йән эйәһе тәүҙә, Нурисламдың йоҡоһон асып, күңелен күтәрҙе, ә тора-бара ниндәйҙер шом, шик уятты.* М. Кәрим. *Кеше нисек кенә батыр йөрәкле булмаһын, был ғәрәсәт ялҡыны уны ҡурҡыта, йәнен өшөтә.* Р. Өмөтбаев.

ЙӨРӘКЛӘНЕҮ (йөрәклән-) (Р.: проявлять отвагу; И.: show bravery; Т.: yüreklenmek) *ҡ.*

1. Ҡыйыулыҡ алыу, батырланыу. □ Проявлять отвагу, смелость, становиться храбрым, набраться смелости. ■ *Йәш үҫмерҙәр һоҡланһын, илгә килгән дошманға йөрәкләнһен, уҡ атһын!* Эпостан. *Бәрей күскәндә, йөрәкләнеп, ҡурҡмай айғырын тотоп алһаң, бөтә малы һиңә килә, ти.* Әкиәттән.

2. *диал. ҡар.* **йөрәкһеү.** ■ *[Салауат:] Ни ҡәҙәр йөрәкләнһә лә, дәртләнһә лә, Аҡбулат ағай атайыма кәңәшсе булып ҡалһын.* Б. Бикбай.

ЙӨРӘК МАЙЫ (Р.: жировые ткани сердца; И.: heart`s adipose tissue; Т.: kalbin yağdokusu) *и.*

1. *мед.* Йөрәкте уратып алған май. □ Жировые ткани сердца. *Йөрәк майы туплаными.*

2. *күсм.* Бик ҡәҙерле, ғәзиз булған нәмә тураһында әйтелә. □ Душа, чувства. ■ *Инәң наҙы — йөрәк майың, бала.* Т. Ғәниева.

3. *күсм. ҡар.* **йөрәк 2.** ■ *[Һомай — Шүлгәнгә:] Күптәр башына еткән, ҡан эсергә уҡталған уҫал йөрәгең бөтһөн, бәгерле йөрәк үҫһен. Йөрәк майың иреһен, бөтә йәнде үҙендәй һөйөр бер күңел тыуһын.* «Урал батыр». *[Йәш егет] ҡаты ауыл арбаларында дыңғырлап, йөрәк майҙарын һыҙҙырҙы.* И. Насыри.

4. *әйл. ф.* **йөрәк майым.** Иркәләү һүҙе. □ Душа моя *(при ласковом обращении). Йөрәк майым минең, һөйөклөм.*

ЙӨРӘК ӨЙӘНӘГЕ (Р.: сердечный приступ; И.: heart attack; Т.: kalp krizi) *и.*

Йөрәк ауырыуының ваҡыты-ваҡыты менән ҡапыл ғына көсәйеп китеүе, көсәйгән мәле. □ Сердечный приступ. *Йөрәк өйәнәге ҡуҙғалыу. Йөрәк өйәнәге тотоу. Йөрәк өйәнәгенән үлде.*

ЙӨРӘК ТАЙЫУ (Р.: болезнь сердца от испуга; И.: heart condition due to scaring; Т.: korkudan kalp hastalığı) *и.*

Ҡурҡыуҙан барлыҡҡа килгән йөрәк ауырыуы. □ Болезнь сердца от испуга. ■ *Йөрәк күктән ҡурҡып тайһа, тышҡа сығып, әпсен әйтеп, уҡтан атҡандар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӨРӘК-ТАМЫР *с. ҡар.* **йөрәк-ҡан.** *Йөрәк-тамыр ауырыуы.*

ЙӨРӘК-ТАМЫР СИСТЕМАҺЫ (Р.: сердечно-сосудистая система; И.: cardiovascular system; Т.: kan dolaşım sistemi) *и.*

Бөтә ҡан йөрөшөн тәьмин иткән система. □ Сердечно-сосудистая система. *Йөрәк-тамыр системаһын тикшереү. Йөрәк-тамыр системаһы эшмәкәрлеге.*

ЙӨРӘКТАУ-ҠАҢНЫ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡаңны ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений племени канглы. *Йөрәктау-ҡаңны ырыуы.*

ЙӨРӘК ТОТОУ (йөрәк тот-) (Р.: сердечный приступ; И.: heart attack; Т.: kâlp krizi) *ҡ. мед.*

Йөрәк мускулдары епсәләренең ҡыҫҡарыусанлыҡ һәләте түбәнәйеү арҡаһында барлыҡҡа килгән ауырыу. □ Сердечный приступ. *Ҡапыл йөрәк тотоу. Йөрәк тотоп ала.*

ЙӨРӘК УЛТЫРТЫУ (йөрәк ултырт-) (Р.: *досл.* «усаживание сердца»; И.: spell against fright; Т.: büyü ile korkudan tedavi etmek) *и. этн.*

Ҡурҡып ауырыған кешене йола буйынса имләү. □ *досл.* «Усаживание сердца» *(способ магического лечения от испуга). Ҡурҡҡан кешенең йөрәген ултыртыу. Тайған йөрәкте ултыртыу.* ■ *Һеңлем йөрәк ултырта ине. Тауыҡты салып ебәреп, типкән йөрәген*

алып, ҡурҡҡан кешенең йөрәгенә ултырта торғайны. Башҡорт мифологияһынан.

ЙӨРӘК ҺАРЫУЫ (Р.: горе; И.: grief; Т.: acı) *и.*

Тәрән ҡайғы, зар. □ Горе, печаль, скорбь. *Ауыр йөрәк һарыуы. Йөрәк һарыуына түҙә алмау.*

ЙӨРӘКҺЕҘ (Р.: боязливый; И.: timid; Т.: korkak) *с.*

1. Ҡурҡыу тойғоһона тиҙ бирелеүсән, ҡурҡыу тойғоһон еңә алмаған; ҡурҡаҡ. □ Боязливый, трусливый, робкий, нерешительный. *Йөрәкһеҙ ир. Йөрәкһеҙ булыу.* ■ *[Нашлә:] Ниңә, Булат ағай, әллә һеҙ ҡатын-ҡыҙҙы йөрәкһеҙ тип уйлайһығыҙмы?* Р. Солтангәрәев.

2. Аяуһыҙ, ҡаты күңелле, миһырбанһыҙ, ҡанһыҙ. □ Жестокий, бессердечный. *Йөрәкһеҙ кеше.* ■ *[Сәхибә:] Мин ул ҡәҙәре йөрәкһеҙ түгел бит!* Ғ. Хәйри. *[Көнһылыу — Байғүбәккә:] Бүтән әйтһә лә, йөрәкһеҙ кешеләй булып, исмаһам, һин әйтмә ул һүҙҙе.* М. Буранғолов. *[Зөлфәт:] Йөрәкһеҙҙәр! Беҙҙең йәштәргә урыныбыҙ юк, ә улар — аҡса! Байлыҡ! Ҡанһыҙҙар!* Н. Ғәйетбаев. ● *Йөрәкһеҙҙән йыраҡ ҡас.* Мәҡәл.

ЙӨРӘКҺЕНЕҮ I (йөрәкһен-) *ҡ. ҡайт. ҡар.* **йөрәкһеү.** *возвр. от* **йөрәкһеү.** ■ *Ауыл күренһә, Марийкам йөрәкһенеп, танауҙарын пырхылдатып, ҡолаҡтарын ҡайсыландырып юрта торғайны.* Р. Низамов. *Шулай ҙа дыуамал Ивандың былай йөрәкһенеүе өсөн Кинйә бик нык баш ватты.* Ғ. Ибраһимов. *Яратам мин йөрәкһенеп үткән студенттың ҡыҫҡа төндәрен.* Р. Ғарипов. *Буранбайҙың йырын тыңлағанда йөрәкһенә ауыл ҡарттары.* Халыҡ йырынан.

ЙӨРӘКҺЕНЕҮ II (йөрәкһен-) *ҡ. ҡар.* **ҡурҡыу**. *Йөрәкһенеп ҡалыу. Йәшендән йөрәкһенеү.*

ЙӨРӘКҺЕТЕҮ (йөрәкһет-) (Р.: возбуждать; И.: excite; Т.: heyecanlandırmak) *ҡ.*

1. Хискә тулыштырыу, ярһытыу; ашҡындырыу. □ Возбуждать, горячить. ■ *Мине тағы юлға йөрәкһетеп, күкрәгемдә ярһый толпарым.* Р. Бикбаев. *[Сергей:] Далала хатта ҡояшлы көндәрҙә лә әйтеп аңлата алмаҫлыҡ яҡты һағыш, һине йөрәкһетеп̇кән моң ята.* И. Абдуллин. *Хатта ул [Роман] ябай бер башҡорт ҡыҙының үҙен ҡасандыр йөрәкһетеүенә аптырай биреп ҡуя.* Н. Мусин.

2. *әйһ. ф. ҡар.* **йөрәкһеү**. *Йөрәкһетеп китте. Йөрәкһетеп тора.* ■ *Ниңәлер йөрәкһетеп тора, байрам итеп алырға кәрәк.* Р. Солтангәрәев.

ЙӨРӘКҺЕҮ (йөрәкһе-) (Р.: рваться; И.: be dying for; Т.: heveslenmek) *ҡ.*

Хискә тулышып ярһыу; ашҡыныу, тулҡынланыу. □ Рваться, порываться, стремиться *куда, к чему. Йөрәкһеп тороу. Йөрәкһеп китеү.* ■ *Саҡ-саҡ атлап йөрөгән һаҡаллы-мыйыҡлы ағайҙар ҙа, йөрәкһеп китеп, .. хром итектәрен сығарып кейәләр.* Д. Бүләков. *Йүгерек аттай йөрәкһеп, сәсән ултыра алдыңда.* Ҡобайырҙан. *Быйылғы майҙа, йөрәкһеү һәм әрнеүҙәр менән өҙгөләнеп, атай-олатайҙарыбыҙ ҡулынан алған Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын байрам иттек.* «Йәшлек», 14 август 2010.

ЙӨРӘК ҺУҒЫУ (Р.: сердечный приступ; И.: heart attack; Т.: kalp krizi) *и. мед.*

Йөрәкте ҡан менән тәьмин итеү етешмәүсәнлеге һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ауырыу; йөрәк өйәнәге; миокарда инфаркты. □ Сердечный приступ. *Йөрәге һуға башланы.*

ЙӨРӘК ҺУРЫЛЫУ (йөрәк һурыл-) (Р.: сильно проголодаться; И.: feel much hungry; Т.: çok acıkmak) *ҡ.*

1. Ныҡ асығып, ашағы килеү. □ Сильно проголодаться. *Йөрәгем һурылып килә.*

2. Ныҡ борсолоу. □ Переживать, беспокоиться. *Бала өсөн йөрәк һурылыу.*

ЙӨРӘК ҺЫЛАУ (Р.: массаж области сердца; И.: massage of the heart area; Т.: kalp masajı) *и.*

Дауалау, йөрәкте урынына ултыртыу маҡсатында йөрәкте тыштан ыуыу, массаж яһау. □ Массаж области сердца.

ЙӨРӘК ШАРШАУЫ (Р.: диафрагма; И.: diaphragm; Т.: diyafram, canevi) *и. анат. диал.*

Күкрәк пәрҙәһе. □ Диафрагма. *Йөрәк шаршауы функцияһы.*

ЙӨРӘК ШАРШАУЫ БУҪЕРЕ (Р.: диафрагмальная грыжа; И.: kind of hernia; Т.: canevi fıtığı) *и.*

Йөрәк шаршауы тирәһенән сыҡҡан бүсер төрө. □ Диафрагмальная грыжа. *Ашҡаҙандың йөрәк шаршауы буҫере. Тыумыштан килгән йөрәк шаршауы буҫере.*

ЙӨРӘК ӘПСЕНЕ (Р.: заговор сердца; И.: spell against heart diseases; Т.: büyü) *и. миф.*

Йөрәкте дауалау маҡсатында имләү, әпсенләү. □ Заговор сердца. ■ *«Әй, йөрәк, ҡайт йөрәк, Ай ҡайтты, һин дә ҡайт» кеүегерәк әпсен әйтеп һамаҡлайҙар ул йөрәк әпсенендә.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӨРӘК ӘРНЕҮ (йөрәк әрне-) (Р.: щемить *(о сердце)*; И.: ache (of the heart); Т.: yürek sızlamak) *ҡ.*

Тәрән рухи ғазап кисереү. □ Щемить *(о сердце). Ҡатындың йөрәге әрней. Был хәбәрҙе ишетеп, әбейҙең йөрәге әрнене.*

ЙӨРӘКӘЙ (Р.: сердце моё; И.: oh my dear; Т.: canım) *и. диал.*

Иркәләү һүҙе. □ Сердце моё *(при ласковом обращении).*

ЙӨРӘК ЯРЫЛЫУ (Р.: разрыв сердца; И.: heart rupture; Т.: yüreğine inmek) *ҡ. һөйл.*

1. Йөрәк шартлау. □ Разрыв сердца. ■ *Донъя беҙҙән генә ҡалмаған ул, бер саҡ килер үлем — ят ҡунаҡ; ауһам ине шул саҡ, бәйгеләрҙә йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ.* М. Кәрим.

2. *күсм.* бик ныҡ ҡурҡыу. □ Сильно испугаться. ■ *[Нәфисә] аҙаҡ үҙенең һатылғанын ишетеп, йөрәге ярыла яҙҙы, үкһеп-үкһеп иланы.* И. Көҫәпҡол.

ЙӨРӘНӘ (Р.: печёнка, подаваемая с мясным наваром и курдючным салом; И.: kind of Bashkir traditional meal; Т.: yemek türü) *и. кул.*

Бешкән бауырҙы һөҙләккә һалып, оса майына ҡушып әҙерләгән аш. □ Печёнка, подаваемая с мясным наваром и курдючным салом. *Йөрәнә әҙерләү. Йөрәнә менән һыйлау.*

ЙӨСӨН *и. диал. кар.* **ҡором**. *Йөсөн һөртөү. Йөсөн ҡараһы.*

ЙӨСӨНБАШ *и. диал. кар.* **торонбаш**. *Йөсөнбаш һүндереү. Йөсөнбашты һыуға һалыу.*

ЙӨҪКӨРМӘ САЛҒЫ (Р.: специальная коса с вывернутым вверх лезвием; И.: special kind of scythe; Т.: tırpan türü) *и. диал.*

Оҙон үләнде эйелмәй генә сабыу өсөн йөҙө ҡайырыңҡы, һабы кәкре салғы. □ Специальная коса с вывернутым вверх лезвием. *Йөҫкөрмә салғы бөгәзейе. Йөҫкөрмә салғыны тапау.*

ЙӨҪТӨК (йөҫтөгө) *и. диал. кар.* **алҡым**. *Тар йөҫтөк. Итек йөҫтөгө.*

ЙӨТКӨРӨК *и. диал. кар.* **үпкә ауырыуы.** *Йөткөрөк менән ауырыу. Йөткөрөк эләктереү.*

ЙҮГЕРГЕЛӘҮ (йүгергелә-) (Р.: бегать туда-сюда; И.: run about; Т.: koşuşturmak) *ҡ.*

Бер тегеләй, бер былай йүгереү, ары-бире йүгереү. □ Бегать туда-сюда, забегать. ■ *Башта улар [малайҙар] бик йылдам атланылар, тау түбәне тура килгәндә, йүгергеләп тә алдылар.* М. Кәрим. *Ҡунаҡтар һыйлау мәшәҡәттәре менән йүгергеләп йөрөгән Ғилмияза .. Алдар эргәһендә туҡтаны.* Н. Мусин. *Ул арала полицейскийҙар йүгергеләй башланылар.* Д. Юлтый.

ЙҮГЕРЕК I (Р.: быстрый; И.: light-footed, quick; Т.: yürük) *с.*

1. Йүгереүгә, сабыуға шәп. □ Быстрый, быстроногий, резвый. *Йүгерек ат. Йүгерек кейек.* ■ *[Старшина:] Уландарым! Барығыҙ, иң яҡшы йүгерек арғымаҡтарҙы тотоп алығыҙ ҙа йүгәнләгеҙ, ҡая таштарҙа ҡылыстарығыҙҙы ҡайрағыҙ!* И. Абдуллин. *Уҡ, йүгерек батырҙың башына ҡаплаған сулмәккә барып тейеп, селпәрәмә килтергән.* Әкиәттән. *[Янарал:] Шул аттарҙы уҙырлыҡ йүгерек ат табып бирһәгеҙ, батырҙарығыҙҙы ла ҡотҡарам, ерегеҙҙе лә кире бирәм.* Ҡобайырҙан. ● *Байлыҡ көнөңә инанма, ҡатындар һүҙенә алданма, йүгерек атҡа таянма.* Мәҡәл. *Йүгерек ат туҡлығын белмәй.* Мәҡәл. *Йүгерек ат туҡлығын белдермәҫ, йомарт юҡлығын белдермәҫ.* Мәҡәл. *Йүгерек атҡа дала ҡәҙерле.* Мәҡәл. *Йүгерек атҡа ял теймәй.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Етеҙ, йылдам, шәп хәрәкәтле. □ Быстрый, быстротечный; проворный, резвый. *Йүгерек ишмә. Йүгерек уҡ.* ■ *[Карамдың] ҡарашы ҡояшта йым-йым иткән*

йүгерек тулҡынды күҙәтә. Ә. Хәкимов. *Бына минең тыуған ер был – Ҡарт Ҡаратау, йүгерек Йүрүҙән.* Р. Ғарипов. *Ағиҙелдә сайҡалышып аға ус аяһы хәтле шыялар, һаумыһығыҙ, йүгерек ҡар һыуҙары, һаумыһығыҙ, умырзаялар?* Р. Бикбаев. ● *Ат йүгерек түгел, күңел йүгерек.* Мәҡәл. *Күңел йүгерек, тел батыр.* Мәҡәл.

3. Етеҙ, өлгөр хәрәкәтле. □ Проворный, резвый, быстрый. *Йүгерек ҡул. Күҙҙәре йүгерек.* ■ *Айҙарҙың ярылып бөткән йүгерек ҡулдарына ысынлап та һоҡланып туймаҫлыҡ ине.* М. Кәрим. *Хәйернас Хәйернасович .. ҡалын тирәсле күҙлеген һалып яңынан кейҙе, йыуан кәүҙәле, тәбәнәк, йөҙө шаҙра, күҙҙәре йүгерек, уларҙа хәйлә билдәләре лә уҡып өлгөрҙө Арынбаҫаров.* Д. Бүләков.

ЙҮГЕРЕК II (йүгерере) (Р.: бегун; И.: runner; Т.: koşucu) *и.*

1. Йүгереүсе. □ Бегун. *Йүгеректәр ярышы.* ■ *[Ғабдулла:] Малайҙар, .. әкиәттә лә бит батырҙар өсәү булған: береһе йүгерек, береһе мәргән, береһе көрәшсе.* М. Кәрим. *Иҙел буйы шул йүгеректе ҡәҙерләп тота белһә, йылҡының ҡото йәнә ҡайтыр ине.* Әкиәттән. *Туй башланды, ти, бер заман. Аттар саптырылды, көрәшселәр көрәште, йүгеректәр йүгереште, ти.* Әкиәттән.

2. Йүгереүгә, сабыуға шәп ат. □ Скакун.

ЙҮГЕРЕК БУРАН *и. диал. ҡар.* **һепертмә буран.** *Күҙ аҫҡыһыҙ йүгерек буран башланды.*

ЙҮГЕРЕКЛЕК (йүгереклеге) (Р.: быстрота; И.: quickness; Т.: çabukluk) *и.*

Йүгерек булыу. □ Быстрота, проворность. ■ *Сослоғо, тәбиғәттән бирелгән тиҙ һиҙемләү һәләте һәм йүгереклеге ҡотҡарҙы Һарыҡайҙы.* С. Ильясов. *Шул көндән башлап Мәргән, йүгереклеге һыналған, табаны ялпаҡ буҙ атын менеп һунарға йөрөй, бәйгеләрҙә ҡатнаша.* К. Мәргән.

ЙҮГЕРЕКЛӘНЕҮ (йүгерекләң-) *ҡ. төш. ҡар.* **йүгерекләү.** *страд. от* **йүгерекләү.** ■ *Тәндәр еңеләйә. Ҡулдар йүгерекләнә.* Д. Юлтый.

ЙҮГЕРЕКЛӘТЕҮ (йүгерекләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йүгерекләү.** *понуд. от* **йүгерекләү.** *Ҡулдарыңды йүгерекләтмә.*

ЙҮГЕРЕКЛӘҮ (йүгереклә-) (Р.: бегать в хлопотах; И.: fuss; run about; Т.: koşuşturmak) *ҡ.*

Йәһәтләп, тегеләй-былай йүгереү. □ Бегать в хлопотах, заботах. ■ *Әбей йүгерекләп соланға сығып китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡыҙҙар, улар [яралылар] араһында йүгерекләп, әле береһенең, әле икенсеһенең хәлен еңеләйтергә тырыша.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010. *Мырҙаштың йөҙө яҡтырып китте, ул йүгерекләп йөрөп ҡәҙерле ҡунағын ҡарай башланы.* З. Ураҡсин.

ЙҮГЕРЕКЛӘШЕҮ (йүгерекләш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йүгерекләү.** *взаимн. от* **йүгерекләү.** *Йүгерекләшеп эшләү.* ■ *Улар [ҡатындар], шулай йүгерекләшеп, һуңғы самауырҙы оҙатҡас, дүртенсе бәләкәй еҙ самауырҙы ҡуйып үҙҙәре сәй эсергә ултырғас ҡына, Рәхимә ашъяулыҡ янына иркенләп ултырып алды.* Һ. Дәүләтшина.

ЙҮГЕРЕК УҠЫУ (Р.: беглое чтение; И.: fluent reading; Т.: hızlı okumak) *и.*

Тиҙ уҡыу. □ Беглое чтение. *Уҡыусы йүгерек уҡый. Йүгерек уҡыу буйынса конкурс.*

ЙҮГЕРЕП ЙӨРӨҮ (йүгереп йөрө-) (Р.: бегать туда-сюда; И.: rush about; Т.: koşuşturmak) *ҡ.*

Унда-бында йүгереү. □ Бегать туда-сюда. *Бала йүгереп йөрөй. Эт урамда йүгереп йөрөй.*

ЙҮГЕРЕҮ (йүгер-) [боронғо төрки *йүгүр-*] (Р.: бежать; И.: run; Т.: koşmak) *ҡ.*

1. Аяҡтарҙы тиҙ-тиҙ алмаштырып, ҡыҙыу хәрәкәт итеү. □ Бежать, бегать. // Бег. *Ҡаршы йүгереү. Йүгереп ҡайтыу. Йүгереп килеп етеү. Йән-фарман йүгереү. Шәп йүгереү. Яй йүгереү.* ■ *Апайым менән беҙ атайыма ҡаршы йүгерҙек, әсәйем, ниңәлер, ары аттарға хәле юҡ кешеләй, ҡапҡа бағанаһына һөйәлде.* Н. Мусин. *Атаһының ҡарғағанын ишетмәҫкә тырышып, Мифтахетдин тыны ҡурылғансы йүгерҙе.* Я. Хамматов. ● *Аҡрын барған аттан уҙған, йүгереп барған тайҙан ҡалған.* Мәҡәл. *Йүгереп ҡуян ҡыуалар, ултырып аҡыл йыялар.* Мәҡәл. *Кем бойорһа – шул солтан, кем йүгерһә – шул ҡуштан.* Мәҡәл. *Тыңлауһыҙға һүҙ әйтһәң, тыңлай-тыңлай артынан йүгерерһең.* Мә-

ҡәл. *Әкрен барған ҡалыр, йүгереп барған алыр.* Мәҡәл.

2. Ашығыс, етеҙ атлау; ҡабаланыу. □ Бежать, бегать, побежать. *Йүгереп барыу. Йомошҡа йүгереү.* ■ *Ҡыҙ йүгереп сығып, әфисәрҙән бер алма һатып алған.* Әкиәттән. *Йүгерә-йүгерә еләк йыям йәшел тәрилкәләргә.* Халыҡ йырынан. *Фәтхиә .. уҡынып, төкөрөнә-төкөрөнә ишектән сығып йүгерҙе.* Я. Хамматов. *Саҡырылмаған ҡунаҡ, тиҙ генә сумаҙанын эләктереп, артҡы ҡапҡанан сығып йүгерҙе.* М. Хужин. ● *Ялҡау өйөнә еткәс йүгерер.* Мәҡәл.

3. Билдәле бер йүнәлештә етеҙ хәрәкәт итеү. □ Бежать *в каком-то* направлении. ■ *Ебәк тулҡын йүгерә тирәләп, һөйә ҡояш шаян тулҡындарҙы, күҙгә кеүек, Иҙел емелдәй.* Р. Ғарипов. *Бына бер саҡ күл өҫтөн шаҙралатып ел йүгереп үтте.* М. Кәрим. *Дежурный ҡыҙ, диск тотоп, команда бирә — йылғыр поезд ер аҫтынан йомшаҡ йүгерә.* Р. Ғарипов. *Ялан буйлап һалҡын ел йүгерҙе, арыштарҙың һыйпап арҡаһын.* Р. Ниғмәти.

4. Бик етеҙ хәрәкәт итеү *(ҡулдарға, күҙгә ҡарата).* □ Бегать *(о руках, глазах).* ■ *Һығылып торған кәштәләргә ҡарап, күҙҙәр йүгерә.* «Йәшлек», 10 ноябрь 2009.

5. *һөйл. Нимдәйҙер* бер эште хәстәрләп, ҡабаланып йөрөү. □ Бегать, носиться. *Көнө буйы йүгереү. Йүгереп эшләү.* ■ *Бизнесмен Хәлим Әйүпов та, иң ауыр осор — тукһанынсы йылдарҙа тормошон яҡшыртыу өсөн яу аса, шунан алып балаларының киләсәге тип йүгерә лә йүгерә.* «Шоңҡар», № 5, 2010. *Көнө буйы йүгереп йөрөп, бүләк һалырға онотоп, Яңы йылды ҡаршыланыҡ та. ятып йоҡланыҡ.* «Йәшлек», 6 ғинуар 2012.

6. Тәнгә таралыу, тәьҫир итеү. □ Приливать, разливаться. *Башҡа ҡан йүгереү. Тәнгә һалҡын йүгерҙе.* ■ *Тирләгән, саң ҡунған тән буйлап ғәләмәт бер рәхәтлек йүгерә, күҙ алдары яҡтырып киткәндәй була.* Н. Мусин. *Кузьманың тәненән әҫеле-һыуыҡлы ҡан йүгерҙе.* С. Агиш. *Атаһының һүҙен ишеткәс тә, уның [Нәфисәнең] йөрәге ярһып типте. Битенә ҡан йүгерҙе.* Я. Хамматов.

7. *күсм. Нимәләр* барлыҡҡа килеү, күренеү; *нимдәйҙер* төҫкә инеү. □ Появляться, проявляться. *Йөҙгә ҡыҙыллыҡ йүгереү. Сәскә сал йүгереү.* ■ *Яҡуптың аҡһыл йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе.* М. Кәрим. *Яңаҡтары эскә батҡан, сикәләренә ҡуйы сал йүгергән, иҫке һалдат формаһындағы ирҙәр Стәрлетамаҡ тарафтарынан ҡабат күренмәне.* М. Хужин. *Юлдаш, баяғыса үҙһүҙләләнеп, һаман өндәшмәй тик ултыра бирҙе. Битенә йүгергән ҡыҙыллыҡ тағы ла нығыраҡ ҡуйырҙы.* З. Биишева.

ЙҮГЕРЕҮСЕ (Р.: бегун; И.: runner; Т.: koşucu) *и. спорт.*

Йүгереп ярышыусы. □ Бегун, гонщик. *Яҡын араға йүгереүсе.* ■ *Йүгереүселәр М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры алдындағы майҙандан сәғәт 12-лә старт ала.* «Йәшлек», 17 сентябрь 2011.

ЙҮГЕРЕШ (Р.: бег; И.: run; Т.: koşu) *и.*

1. *спорт.* Йүгереү ярышы. □ Бег, пробег, забег. *Йүгерештә ал бирмәү. Йүгереш уйнау. Йүгереш ойоштороу.* ■ *Батша ҡыҙын алам тигән кеше йүгерештә берәүгә лә ал бирмәгән бер йүгерек әбей менән ярышырға тейеш, ти.* Әкиәттән. *Физкультура уҡытыусыһы Вәсил Мостафин уларҙы [уҡыусыларҙы], ике командаға бүлеп, төрлө йүгереш эстафеталарында, кәрзингә туп ташлауҙа, мәргәнлеккә атышыуҙа, арҡан тартышыуҙа ярыштырҙы.* «Йәшлек» 26 февраль 2011.

2. Тегендә-бында йүгерешеү, сабышыу. □ Беготня. ■ *Ауылда шау-шыу, ҡыҫҡырыш, йүгереш, эт тауыштары ҡупты.* А. Таһиров. *Өй эсе йүгереш, көлөш, сыр-сыу менән тулды.* З. Биишева. *Ҡыңғырау тауышынан һуң коридорҙа йүгереш башлана.* «Ағиҙел», № 1, 2012.

3. Балалар уйыны атамаһы. □ Название детской игры.

ЙҮГЕРЕШЕҮ (**йүгереш-**) *ҡ.*

1. *урт. ҡар.* **йүгереү.** *взаимн. от* **йүгереү.** *Йүгерешеп килеү. Йүгерешеп барып етеү. Йүгерешеп сығыу.* ■ *Аҫта, Мифтахетдин баҫып торған Йөҙләтау итәге менән Дим йылғаһы араһындағы Туҡһанбай ауылында, ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтеп, кешеләр*

йүгерешә. Я. Хамматов. *Тәҙрәнән сит-ят ерҙәр, урмандар, туғайҙар, тауҙар йүгереште.* Т. Ғиниәтуллин. *Тауышҡа йүгерешеп килгән Камали менән Әхтәм Мәғишәне туктаттылар.* А. Таһиров. *Кешеләр, бер-берейен уҙармандан ҡыуышып, ут сыҡҡан яҡҡа ҡарай йүгерешә башланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Йүгереп ярышыу. □ Соревноваться в беге, бежать наперегонки. *Кемуҙарҙан йүгерешеү. Йүгерешә башлау. Йүгерешеп уйнау.* ■ *Күл өҫтөндә иртәнән бирле йүгерешеп уйнаған вак тулҡындар, ярға һыйынып, тынып ҡалғандар.* М. Кәрим. *[Күл эйәһе:] Күлде уратып йүгерешәйек. Мине уҙһаң, ат һинеке булыр.* Әкиәттән.

ЙҮГЕРЕШСЕ (Р.: бегун; И.: runner; Т.: koşucu) *и. спорт.*

Йүгереп ярышыусы. □ Бегун. ■ *[Тауыштар:] Йүгерешселәр килде, йүгерешселәр!* М. Буранғолов. *[Һыңараяк:] Беренсе йүгерешсемен. Йүгерешергә иш таба алмай ҡаңғырып йөрөйөм.* Әкиәттән.

ЙҮГЕРЕШТЕРЕҮ (йүгерештер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йүгерешеү 2.** *понуд. от* **йүгерешеү 2.** *Уҡыусыларҙы йүгерештереү.* ■ *Ауыл йәштәре һабан туйын еңел генә итеп, .. көрәштереү, йүгерештереү, бер генә урында ҡыҙыл мөйөш яһау менән үткәрергә уйлағайнылар.* А. Таһиров. *[Мәрхүм Ғәйнетдин ағай] төрлө уйындар уйната, беҙҙе йүгерештерә, көрәштерә, ҡайһы саҡта сәмләндереп һуғыштырып та ала.* М. Ямалетдинов.

ЙҮГЕРМӘЛӘҮ (йүгермәлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **йүгерекләү.** *Йүгермәләп йөрөү. Йүгермәләп китеү.* ■ *Ил, халыҡ намыҫын яҡлау мәсьәләһе сыҡҡас, хатта кантон башлығы тиклем кантон башлығы булған Локман, шул хаҡта ҡайғыртып, йүгермәләп йөрөй.* Ә. Сөләймәнов.

ЙҮГЕРТЕЛЕҮ I (йүгертел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йүгертеү II.** *страд. от* **йүгертеү II.** *Көмөш йүгертелгән һауыт.* ■ *[Иҫәкәй] төшөп, салғый ситтәренә, иҙеүенә уҡалы таҫма йүгертелгән сапанын сисеп, эйәренә аша һалды.* Н. Мусин. *Байыегет Ҡотлогилдегә көмөш йүгертелгән ҡылыс менән ҡара көрән төлкө бүрек бүләк итте.* «Зөһрә менән Алдар». *Ҡатын Нәфисәнең елкәһенә алтын йүгертелгән елән һала.* Н. Асанбаев.

ЙҮГЕРТЕЛЕҮ II (йүгертел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йүгертеү I.** *страд. от* **йүгертеү I.** ■ *Өйлә намаҙынан сығыуға ауылдың ҡарттары һәм күршеләре менән бергә муллаларҙы саҡырып ҡайтырға күрше малайҙары йүгертелде.* М. Ғафури.

ЙҮГЕРТЕҮ I (йүгерт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йүгереү 1—6.** *понуд. от* **йүгереү 1—6.** *Малайҙарҙы йүгертеү. Аттарҙы йүгертеү. Бер урындан икенсе урынға йүгертеү. Врачҡа йүгертеү. Йомошҡа йүгертеү.* ■ *[Кәмилә — Шөкөргә:] Малай йүгерт көтөүгә, бер тәкә ҡыуып ҡайтарһын.* М. Кәрим. *Фәттәх ағай тәкдиме буйынса, тиҙ генә бер кешене Мәрәйгә йүгерттеләр.* И. Насыри. *Исмәғил сыҡҡас, Сәхибә ултырған урынынан йорттоң һәр бер еренә күҙҙәрен йүгертте.* Ғ. Хәйри. *Һөмһөрө ҡойолған ир-аттың йөҙҙәре яҡтырҙы, .. ниңә барыбыҙға ла әйтмәнегеҙ, күмәгебеҙгә шул ғына етәме ни, тип аҡса йыйҙылар ҙа йәнә йүгерттеләр тегеләргә.* Ә. Әминев. ● *Атты ҡамсы йүгертә, егетте намыҫ йүгертә.* Әйтем.

ЙҮГЕРТЕҮ II (йүгерт-) (Р.: покрывать; И.: plate; Т.: sürmek) *ҡ.*

Нимәнеңдер өҫтөн йоҡа ғына итеп икенсе берәй матдә менән ҡаплау; ялатыу, буяу. □ Покрывать *чем (поверхность чего-л.).* *Алтын йүгертеү. Һауытҡа эмаль йүгертеү.* ■ *Һәжәр сәстәрен төҙәтте, битенә кершән яҡты, ирендәренә ҡыҙыл йүгертте.* Ғ. Хәйри.

ЙҮГЕРӘ-АТЛАЙ (Р.: вприпрыжку; И.: hurriedly; Т.: acele ile, apar topar, paldır küldür) *р.*

Бер йүгереп, бер атлап; бик ашығып; йүгерә-атлап. □ Вприпрыжку, то бегом, то шагом, торопливо. *Йүгерә-атлай барыу. Йүгерә-атлай ҡайтыу.* ■ *Нәғимә инәй йүгерә-атлай клуб эргәһенә килде.* М. Кәрим. *Сафия уҙенең алдында барған ирҙе ситкә һирпте лә вагондан һикереп төштө, йүгерә-атлай китеп барған ҡатынды ҡыуып етте.* Т. Ғиниәтуллин. *Яраланған шайтан йүгерә-атлай ҡайтып киткән, Дүрмән уның артынан эҙәрләкләп барған.* Әкиәттән.

ЙҮГЕРӘ-АТЛАП *р. ҡар.* **йүгерә-атлай.** ■ *Ул [Фәрзәнә], моғайын, хәҙер, һыйырҙарын кискелеккә һауыу өсөн, йүгерә-атлап фермаға китеп баралыр.* Г. Дәүләтшин. *Үҙе [күрше ҡатын] һәр саҡ алсаҡ йөҙлө, көлөп-йылмайып иҫәнләшә, йүгерә-атлап йөрөй, әйтерһең, ул донъяла иң бәхетле кеше.* Н. Мусин. *Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Сәхипъямал еләненең бер еңен кейә, икенсеһен кеймәйенсә, йүгерә-атлап, кешеләр йыйылып ултырған мәжлескә килеп инә.* «Буҙйегет».

ЙҮГЕРӘ-САБА (Р.: спешно; И.: in haste; Т.: acele ile) *р.*

Бер йүгереп, бер сабып; бик ашығып. □ То бегом, то вприпрыжку, спешно. *Йүгерә-саба ҡайтыу. Йүгерә-саба китеү.*

ЙҮГӘН [дөйөм төрки *йүгән*] (Р.: узда; И.: bridle; Т.: dizgin, köstek) *и.*

1. Менге һәм екке малдың башын тотор өсөн ауыҙлыҡлы итеп бауҙан эшләнгән нәмә. □ Узда, уздечка. / Уздечный. *Ҡайыш йүгән. Еҙле йүгән. Йүгән ауыҙлыҡтары. Йүгән башы. Йүгән кейҙереү. Йүгәнде һыпырып төшөрөү.* ■ *Дим яры буйлап килгән бәйләүән кәүҙәле һыбайлы йүгән теҙгенен тартып, саптарын һукмаҡҡа борҙо.* Я. Хамматов. *Яурын башымда йүгән, ҡасандыр һабантуйҙарҙа сабышҡанда «Ҡойон»ға кейҙерә торған суҡлы йүгән.* Д. Бүләков. ● *Алтын йүгән атты яҡшыртмаҫ.* Мәҡәл. *Арыҡ атҡа йүкә йүгән.* Мәҡәл. *Ат алмаҫ борон йүгән әҙләмә.* Мәҡәл. *Атын юғалтҡан йүгәнен әҙләй.* Мәҡәл. *Атың юғалһа ла, йүгәнең ташлама.* Мәҡәл. *Бер атҡа ике йүгән һалмайҙар.* Мәҡәл. *Йүгән кем ҡулында булһа, ат шуға буйһона.* Мәҡәл. *Йүнһеҙгә йүгән кейҙермә.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Эшләргә мөмкинлек бирмәй, тоткарлап торған хәл, сәбәп. □ Узда; преграда. ■ *[Илнур:] Аҡылым менән барыһын да аңлаһам да, аҙғын хистәремә йүгән һалырлыҡ көс юҡ миндә.* «Шоңҡар», № 7, 2011.

3. Буйһондороу, ҡулда тотоу, идара итеү сараһы; теҙген. □ Правление, власть. ■ *Яҡын киләсәктә улар [килмешәктәр], беҙҙең иң үтемле ер-һыуға хужа булып, ауыл иҡтисадының йүгәнен үҙҙәренең ҡулына төшөрөр, тип фараз итергә мөмкин.* «Башҡортостан», 15 декабрь 2011. *Муллайән атаһының йүгәненә яйлап күнегә төштө, мал ҡәҙерен белер егет булып үҫте.* Ф. Иҫәнғолов.

4. *миф.* Мифлаштырылған күк, йәшен менән бәйле, һаҡлау, түлләндереү көсөнә эйә булған предмет. □ Уздечка *(мифологизированный предмет, связанный с божеством грома Кук; во время грома башкиры трясут уздечкой и просят благополучия).* ■ *Күк килгәндә, ҡороҡ, йүгән алып, шылтырата-шылтырата, күккә ҡарай болғайһың да ергә һуғаһың.* Халыҡ ижадынан.

ЙҮГӘН ҠОЛТОРАТЫУ (йүгән ҡолторат-) (Р.: звенеть уздечкой; И.: clang with a bridle; Т.: bir âdet) *ҡ. миф.*

Йәшенгә йүнәлтелгән йола. □ Звенеть уздечкой *(обрядовое действие, направленное на заклинание неба, грома).* ■ *Күкте йүгән ҡолторатып ҡаршы ала ине өләсәйем.* Халыҡ ижадынан.

ЙҮГӘНЛЕ (Р.: взнузданный; И.: bridled; Т.: dizginli) *с.*

Йүгән кейҙерелгән. □ Взнузданный, с уздечкой. *Йүгәнле ат. Йүгәнле булыу.* ■ *Ишек артында – хандың хәрәмханаһына нур өҫтәйәсәк ике сирмеш ҡыҙы; тышта – көмөш йүгәнле алма сыбар айғыр.* Ә. Хәкимов. *[Нәфисә:] Миңә ана үҙеңдеке кеүек көмөш дағалы, алтын тәңкәләр тағылған йүгәнле арғымаҡ булһын, һинең менән бергә яу сабырға!* Н. Асанбаев.

ЙҮГӘНЛӘНЕҮ (йүгәнлән-) *ҡ. төш. ҡар.* **йүгәнләү.** *страд. от* **йүгәнләү.** *Ат йүгәнләнгән.* ■ *Ир-егеттең эсендә йүгәнләнгән ат булыр; сәсән булған егеттең күкрәгендә хат булыр.* Ҡобайырҙан.

ЙҮГӘНЛӘТЕҮ (йүгәнләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йүгәнләү.** *понуд. от.* **йүгәнләү.** *Тайҙы йүгәнләтеү. Хужа малайҙан атын йүгәнләтте.*

ЙҮГӘНЛӘҮ (йүгәнлә-) (Р.: надевать узду; И.: curb; Т.: dizgin takmak) *ҡ.*

1. Йүгән кейҙереү. □ Надевать узду, взнуздывать. // Взнуздывание. ■ *Төлкөсура ҡола бейәне әйәрләп бөтөп бара ине инде, үҙенә быйыл ғына менгегә өйрәтелгән тайын йүгәнләп, һыртына үңлек һалып әҙерләп ҡуйған.* Н. Мусин. *Ун биш йәшендә айыу йүгәнләп менерлек егет ҡиәфәтенә инеп,*

буйсанланып, көсләнеп киткән Илһам Роман Лапшинда урман ҡарауылсыһы булып эшләй башланы. Н. Мусин.

2. *ҡусм.* Сик ҡуйып, тыйыу. □ Обуздывать, укрощать, усмирять *кого.* // Обуздание, укрощение, усмирение. *Балаларҙы йүгәнләп тотоу. Тойғоно йүгәнләү.* ■ *Сәйфелмөлөк нәфсеһен йүгәнләй алманы.* Ә. Хәкимов. *[Гариф:] Атаны йүгәнләргә теләгән балаларҙы кемдең күргәне бар икән?!* Ғ. Хәйри. *Гүйә, ғәйрәтле ҡул борҙо заман ҡанатын, йүгәнләне ваҡиғаның тыңлауһыҙ атын.* М. Кәрим. *Яуызлыҡты, бала, аҡыл ғына, ҡаһарман уй ғына йүгәнләй.* Т. Ғәниева.

ЙҮГӘНҺЕҘ (Р.: невзнузданный; И.: unbridled; Т.: dizginsiz) *с.*

1. Йүгән кейҙерелмәгән. □ Невзнузданный, не имеющий узды, без узды. *Йүгәнһеҙ бейә. Йүгәнһеҙ булыу.* ■ *[Көтөр:] Үҙҙәре уйлар, ат һатһаң да, йүгәнһеҙ һатмайһың, тигәндәй, ҡыҙ биргәс, ул буш булмай, артынан түркен малы бара.* М. Буранғолов. ● *Яҡшы ат йүгәнһеҙ йөрөмәҫ.* Мәҡәл. *Йүгәнһеҙ тороп була, һөнәрһеҙ тороп булмай.* Мәҡәл.

2. *ҡусм.* Тәртибе булмаған, әҙәпһеҙ, тыйнаҡһыҙ. □ Распоясавшийся, разнузданный. *Йүгәнһеҙ кеше.* ■ *Бындай ярлы өйҙәргә һүҙҙәр иркен, йүгәнһеҙ була.* Д. Юлтый. *Өҫтәүенә, [Сырым батыр] үҙенең йүгәнһеҙ нәфсеһе, тупаҫ фиғеле арҡаһында ырыу күсен тәшкил итеүсе ун ике аранан биш-алтыһының ризаһыҙлығына дусар.* Ә. Хәкимов. *Йүгәнһеҙ хыялға нигеҙләнгән гротеск ҡыҙҙың донъяға үтә тарҡарашлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.* К. Әхмәтйәнов. ● *Ирһеҙ ҡатын — йүгәнһеҙ ат.* Мәҡәл.

ЙҮГӘНҺЕҘЛЕК (йүгәнһеҙлеге) (Р.: разнузданность; И.: lack of all restraint; Т.: azgınlık) *и.*

Артыҡ тыйнаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек. □ Разнузданность, несдержанность, неистовость. *Йүгәнһеҙлеге арҡаһында. Мораль йүгәнһеҙлек.* ■ *Тәүбә ҡилтер, улым, ғәфү үтен, шунан башҡа беҙҙең сарабыҙ юҡ, тәкәбберлегеңә ирек биреп, йүгәнһеҙлегеңә юл ҡуймасы.* М. Кәрим. *[Туҡтамыш — Иҙеүкәйгә:] Минең рөхсәтемдән тыш был йүгәнһеҙлектәрең өсөн һине ғәскәр башлығы вазифаңдан бушатырға мәжбүрмен!* М. Буранғолов.

ЙҮГӘНҺЕҘЛӘНЕҮ (йүгәнһеҙлән-) (Р.: разнуздываться; И.: get unbridled; Т.: azgınlaşmak) *ҡ.*

Йүгәнһеҙгә (2) әйләнеү, тыйнаҡһыҙланыу. □ Разнуздываться, распоясываться. *Йүгәнһеҙләнеп китеү.* ■ *Бәндәбикә ауырыҡһынып киткәс, был [Ерәнсә сәсән] айырыуса йүгәнһеҙләнә.* Халыҡ ижадынан.

ЙҮКШӘ *и. бот. диал. ҡар.* **ҡарабойҙай**. *Йүкшә бешереү.* ■ *Сыйырсыҡ сыбар килһә, йүкшә уңа.* Һынамыш.

ЙҮКӘ I (Р.: липа; И.: linden; Т.: ıhlamur) *и. бот.*

1. Киртләс япраҡлы, хуш еҫле, баллы, ваҡ һарғылт сәскәле ағас. □ Липа. / Липовый (лат. *Tilia*). *Йүкә ағасы. Йүкә урманы. Йөрәк япраҡлы йүкә. Эре япраҡлы йүкә. Йүкә сәскәһе. Йүкә балы. Йүкә сәйе. Йүкә аллеяһы.* ■ *[Йәнбирҙе:] Яу булып, еңеп үтһә — имәндә, еңелһә — йүкәлә, тыныс булһа — наратта йә шыршыла буламы?* М. Буранғолов. *Йүкәләр күптән сәскә атҡан, тирә-яҡ хуш еҫкә тулған.* Д. Бүләков. *Йүкәләрем ҡуя ҡулды сыйып, аралап та ғына ҡырҡҡанда.* Х. Назар. *Ҡаты ҡар менән тышауланған йүкәләрҙең алһыу көрән төҫкә ингән олондарынан көн сыуағында аҡрын ғына быу бөркөлә.* И. Абдуллин. *Аштан йүкә тәмеме, тимер тәмеме килә.* Д. Юлтый.

2. Шул ағастың ҡабығы, ҡайыры. □ Лыко. *Йүкә һуйыу. Йүкә батырыу. Йүкә бишек.* ■ *[Аҡ Ғәле] .. тағы эшкә тотона — нәҙек кенә йүкә һыҙырып, тоҡан әтмәләй.* Д. Шәрәфетдинов. ● *Аҡыллы тәкә һуйғанда, ахмаҡ йүкә һуйыр.* Мәҡәл. *Таштан йүкә һуйылмай.* Мәҡәл.

3. Шул ағастың ҡабығынан, ҡайырынан һыҙырып алынған эске ҡатлауы. □ Лыко. / Липовый. *Бешкән йүкә. Сей йүкә. Һалабаш йүкәһе. Йомшаҡ йүкә. Ҡаты йүкә. Йүкә сыбыртҡы. Йүкә сабата. Йүкә йыуғыс.* ■ *[Уйылдан — әсәһенә:] Һалабаш быуалары яғына барып, киптерергә элгән йүкәләрҙе ҡарап ҡайтырға кәрәк.* Н. Мусин. *Магазинда мануфактураларҙы бәйләй торған йүкәләр, матур шнурҙар, ҡурғаш пломбалар, төрлө*

фабрикалар төшөрөлгән маркалар була. С. Агиш. *[Нуғмәтулла] нәк һалабаш йүкәһен һыҙырғандағы һымаҡ, һыҙырылған тырансаны етеҙ, өйрәнгән ҡулдары менән ырғыта ла икенсеһенә йәбешә.* Я. Хамматов. ● *Арыҡ атҡа йүкә йүгән.* Мәҡәл. *Бер үгеҙгә бер йүкә муйынсаҡ етер.* Мәҡәл. *Йүкә ҡайышты өҙгән.* Мәҡәл.

♦ **Йүкә сөй** *нимәгәлер* ыңғайлатыр, *ниҙер* эшләтер өсөн юрамал әйтелгән маҡтау һүҙе. □ Лесть, похвала, лестные слова. ■ *Йүкә сөйгә ыреу. Уға йүкә сөй килешә.* **Йүкә шына (***йәки* **сөй) ҡағыу** *нимәгәлер* ыңғайлатыр, *ниҙер* эшләтер өсөн юрамал маҡтау, юхалау. □ Льстить *(с какой-л. целью).* ■ *Бындағы халыҡ йүкә шына ҡағыуҙы ярата.* Я. Хамматов. *[Мәрхәбә:] Бына бында беҙҙең сабыр һабы һынды инде, һин һорағанға ғына яуап бир, юҡ менән йүкә сөй ҡаҡма!* А. Таһиров. **Таштан йүкә һуйыу <менән бер>** бик ауыр эшкә ҡарата әйтелә. □ Трудное для выполнения дело. *букв.* С камня лыко драть. ■ *Был хәлде тик бер кем белмәҫ инде үҙ башынан уның үтмәһә. Таштан йүкә һуйылмай ҙа, тиҙәр, ә мин һуйҙым таштан йүкә.* Р. Ғарипов.

ЙҮКӘ II *и. диал. ҡар.* **һалабаш.** *Йүкә бәйләү. Йүкә һыҙырыу.*

ЙҮКӘ БЕТЕ *и. зоол. диал. ҡар.* **йүкә талпаны.** *Йүкә бете баҫып алыу.*

ЙҮКӘ ЙЫУАҺЫ *и. бот. диал. ҡар.* **тау йыуаһы.** *Йүкә йыуаһы йыйыу.*

ЙҮКӘЛЕК (йүкәлеге) (Р.: липняк; И.: lime grove; Т.: ıhlamur ormanı) *и.*

Йүкә үҫкән ағаслыҡ, йүкә урманы. □ Липняк, липовая роща. ■ *Йүкәлек яғынан йылы ел иҫә, шипкерт кенә бал еҫтәре һирпелә ул елдән.* Г. Яҡупова. *[Һаҡалтай] мылтыҡлы кешене күргәс, үҙе әле генә килеп сыҡҡан ҡуйы йүкәлеккә ташланды.* Н. Мусин. *Донъя көтмәк — кәсеп итмәк бит ул, йүкәлектә һыҙырам ҡурысты.* Х. Назар. *[Ирҙәр] бөтәһен ситкә ҡуйып, бүре ҡашлауы битендәге йүкәлек ҡулағәһенә йыйылып ултырҙылар ҙа донъя хәлдәре хаҡында баш ватырға тотондолар.* Ғ. Ибраһимов.

ЙҮКӘЛӘҮ (йүкәлә-) (Р.: поддакивать; И.: assent (to); Т.: evetlemek) *ҡ. диал.*

Йөпләү. □ Поддакивать. *Йүкәләп ҡуйыу. Ире әйткәнде ҡатыны йүкәләп ҡуя.*

ЙҮКӘ ТАЛПАНЫ (Р.: белый клещ; И.: white tick; Т.: kene) *и. диал.*

Аҡ талпан. □ Белый клещ. *Быйыл йүкә талпаны күп.*

ЙҮЛӘР (Р.: дурной; И.: foolish; bad, evil; Т.: aptal) *с.*

1. Аҡылға кәм; ахмаҡ, алйот. □ Дурной, придурковатый, глупый. *Йүләр булыу. Йүләр кеше. Башты йүләргә һалыу.* ■ *[Йәнтимер:] Башыңды йүләргә һалма, ни эшләргә теләйһең?* С. Агиш. *[Ғүмәр] сыкһа, Таңсулпан осрар һәм тағы йүләр кеше хәлендә ҡалыр һымаҡ.* Н. Мусин. *[Гата — Саматҡа:] Башыңды йүләргә һалма.* Ә. Хәкимов. ● *Белмәгән йүләр белгәндән көләр.* Әйтем. *Йүләр йүләрҙе маҡтар.* Әйтем. *Аҡыллы атын маҡтар, урта йүләр ҡатынын маҡтар, үтә йүләр үҙен маҡтар.* Мәҡәл. *Егет күңеле йүләрҙә, ҡыҙ күңеле көләрҙә.* Мәҡәл. *Йүләр ҡулдағе менән ике ҡат.* Мәҡәл.

2. Шелтәләп әрләгәндә ҡулланыла. □ Дурной, глупый. / Дурак. ■ *[Нина:] Мин йүләр бит инде, асыуланмаһағыҙ, һөйләйем?* Д. Юлтый. *[Хәҙисә — Шәрифкә:] Йә, һин, йүләр, ошондай ваҡытта ҡайҙа юғалып йөрөйһөң?* Ғ. Хәйри.

ЙҮЛӘРЛЕК (йүләрлеге) (Р.: дурачество; И.: tomfoolery; Т.: aptallık) *и.*

1. Йүләр булыу сифаты, хәле. □ Дурачество, глупость. ■ *[Хәбир:] Минең ҡайһы ерҙән йүләрлек табаһығыҙ?* Ғ. Хәйри. *Мөхәббәт тураһында романдарҙа яҙыла торған һүҙҙәр менән һөйләү килешмәй, ул йүләрлек булыр ине.* Б. Дим. *Һуңғы көнөм кеүек һәр бер иртәм, мәңгелеккә торош бер тәүлек. Мал артынан ҡыуған замандарҙа шиғыр яҙыу, имеш, йүләрлек.* Л. Абдуллина.

2. Уйлап, аҡыл менән эшләнмәгән эш. □ Дурачество, глупость. *Йүләрлек ҡылыу.* ■ *[Насиров:] Урын етмәгән ваҡытта, был ниндәй йүләрлек?* Д. Бүләков. *Мин бит .. үҙемдең йүләрлегем, дошмандың мәкерлеге арҡаһында бәләгә тарыным.* М. Кәрим. *Мин уның [Хажи Мораттың] ни өсөн тауҙан һикереүен дә, йүләрлек менән сикләнгән батырлыҡтың нигеҙ булыуын да — бөтәһен*

дә, бөтәһен дә төшөндөм. Ә. Чаныш. *[Марфа:] Аңламайым мин Таңһылыуҙы: бер караһаң, етди, акыллы кеүек, икенсе карағанда, йүләрлек кыла ла куя.* И. Абдуллин.

ЙҮЛӘРЛӘНЕҮ (йүләрлән-) (Р.: дурачиться; И.: fool (about); Т.: aptallanmak) *к.*

1. Йүләрлек эшләү, йүләрлек күрһәтеү. □ Дурачиться, дурить, совершать глупость. ■ *Кинәнмәсе, йүләрләнмә, бәндәм, һинеке лә бит ул шул ук төптәр: үлгән урман, кара көйгән гөлдәр, һинеке лә – ағыу һипкән күктәр.* М. Ғәли. *Кинйә лә атлығып кайтып китер ине. Йорт-илдең имен-аманлығы, бигерәк тә Айымдың хәле борсой ине уны [Кинйәне]. Былай ҙа әле, йүләрләнеп, уны шундай көйө калдырып киткән.* Ғ. Ибраһимов. *Ләкин шул сак тыя мине акыл: «Һуң, был ағым һинең өсөнмө? Йәшерәкһең! Куйсы, йүләрләнмә, һиңә кисеү бирер һыумы был?!»* Р. Назаров.

2. Йүләргә әйләнеү, ахмакланыу, алйотланыу. □ Сходить с сума, стать придурковатым. ■ *[Зәйнәп – Ғәлиғә:] Кит, юкты һөйләмә, .. әллә йүләрләндеңме?* Ғ. Локманов.

ЙҮН I (Р.: толк; И.: sense; Т.: yarar) *и.*

1. Кешенең физик көсө, рухи хәленән килгән сифаты, эш башкарыу мөмкинлеге. □ Толк. *Был баланың йүне юк.* ■ *Карт, ултырған еренән алға эйелә биреп, оҙак кына йүтәлләне: «Йүнем китте, улым».* Ғ. Локманов. *Батырмын, тип кем әйтмәй,– яу килгәндә, йүне юк; сәсәнмен, тип кем әйтмәй, – дау килгәндә, өнө юк.* С. Юлаев. *Йәнмен тигән йәндең дә үҙ йүне булыр.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Йүне барҙың көнө бар.* Мәкәл. *Йән биргәнгә йүн биргән.* Мәкәл. *Йәне барҙың йүне бар.* Мәкәл. *Йәш катынға йәнен бирер, карт катынға йүнен бирер.* Мәкәл. *Көнөн биргәнгә йүнен бирер.* Мәкәл.

2. Тейешле тәртип, тәртиплелек. □ Порядок, лад. *Йүнгә килеү.* ■ *Шүлгән йүнгә килмәгән, ни эшләргә белмәгән, үҙ яғында калғандың барыһын бергә йыйнаған, Урал тағы юл сапкан, дейеүҙәргә яу аскан.* «Урал батыр». *Белемһеҙ үҙе белмәҫ, йүнгә күнмәҫ, холко – тинтәк һыйырҙай һауҙырмаған. Иң әүүәл паклау кәрәк эстең керен, эстә тулып ятмаһын наҫык эрен.* М. Акмулла. ● *Белемһеҙ белмәҫ, йүнгә күнмәҫ.* Мәкәл.

3. Уңышлы, ыңғай эш; файҙа. □ Польза. ■ *[Крәҫтиәндәр:] Хөрриәт, хөрриәт тигән булалар ҙа, бер ҙә йүне күренмәй әле, иптәш, һуғыштан кайткас, тағы бер якка эш эҙләп китергә тура килер, ахыры.* А. Таһиров. *Кайҙа ишан юк – унда мәҙрәсәнең йүне күрелмәй.* Г. Кейеков.

4. Эш итерлек әмәл, сара, мөмкинлек. □ Средство, способ. *Йүнен күреү. Йүнен табыу. Йүне табылыу.* ■ *[Даль:] Үрсем кала инде, уны бүлеп булмай, риза икәнһең, калымдың яртыһын алаһың да, үҙ йүнеңде күрәһең.* З. Ураксин. *[Сабир:] Нисауа. Әлегә ашарҙарына бар. Иртәгеһен ишәк кайғырткан тигәндәй, аҙактан йүне табылыр.* Я. Хамматов. *Башлык һаналған түрә-һәрәләр ҙә йәшенмәк уйнайҙыр инде йүне юкта.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Тиң – тиңе менән, йүнле эш – йүне менән.* Мәкәл.

ЙҮН II (Р.: хороший; И.: good; Т.: iyi) *с.*

Тейешле тәртипкә, кәрәкле сифатка ярашлы булған; арыу, яхшы. □ Подходящий, стоящий; хороший. ■ *[Мәзин:] Ни, кем, Закир кустым ниндәй байҙа кем булып эшләй икән, тием. Былай төҫ-башы ла йүн генә, кеҫә яғы ла калын ғына булғас, берәй арыу байҙалыр, тием.* З. Биишева.

ЙҮН III *и. диал.*

1. *кар.* **сыуын.** *Һыйырымдың йүне төшмәй.*

2. *миф.* Инә хайуандарҙың изгеләштерелгән ағзаһы, түллек символы. □ Плацента. ■ *Йүнде аяк аҫтына ташларға ярамай, мал уңмай.* Башкорт мифологияһынан.

ЙҮНДЕРЕҮ (йүндер-) *к. диал. кар.* **хәлһеҙләнеү**. *Йүндереп китте әле. Ауыр эш йүндерә.*

ЙҮНЕ-КОТО (Р.: порядок; И.: manner, way; Т.: düzen) *и. йыйн.*

Рәте-сираты. □ Порядок, лад. *Үҙ йүне-кото менән. Был эштең йүне-кото булмаҫтай күренә.*

ЙҮНКЕТЕҮ (йүнкет-) (Р.: мучить; И.: torment; Т.: eziyet etmek) *к.*

Интектереү, йонсотоу. □ Мучить, изводить. *Мыжып йүнкетеү. Һорап йүнкетеү.*

■ *Йәндәреңде күктәр алмаҫ борон, көндәреңде кемдер йүнкетмәк.* Х. Назар. *Кире азамат йорт көтһә, йортон-илен йүнкетер.* Ҡобайырҙан.

ЙҮНКЕТКЕС *с. диал. ҡар.* **йонсоҡос**. *Был эш бик йүнкеткес. Йүнкеткес ямғырлы көндәр оҙаҡҡа һуҙылды.*

ЙҮНКЕҮ I (йүнке-) (Р.: известись; И.: exhaust oneself; be tired; Т.: canı çıkmak) *ҡ.*

Интегеү, йонсоу. □ Известись, измучиться. *Йүнкеп бөтөү. Йүнкеп китеү.* ■ *Ҡарт соҡор эсендә ете йыл буйы ултыра-ултыра бик йүнкеп китә.* Әкиәттән.

ЙҮНКЕҮ II (йүнке-) (Р.: поправляться; И.: get well; Т.: iyileşmek) *ҡ. диал.*

Йүнәлеү, мандыу. □ Поправляться, выздоравливать. *Бер ҙә йүнкеп булмай. Йүнкеп китеү.*

ЙҮНКЕҮ III (Р.: утомлённый; И.: tired; Т.: yorgun) *с.*

Ауыр эш-хәлдән ҡаҡшаған; йонсоу. □ Утомлённый, изнурённый, измученный. *Йүнкеү ир. Йүнкеү мал.*

ЙҮНЛЕ I (Р.: толковый; И.: sensible; Т.: iş bilir, makul) *с.*

1. Ыңғай баһа бирерлек, һәйбәт, яҡшы *(кешегә ҡарата).* □ Толковый, путный, дельный. *Йүнле кеше. Йүнле булып ҡалыу. Үҙеңде йүнле тотоу.* ■ *[Фәйзулла Сәғитович – Нурислам Нурлығаяновичка:] Йүнле етәксе булһаң, колхоз алға барыр ине, ә һин үҙең артҡа һөйрәйһең.* Ә. Әминев. *[Хәмит:] Йүнле капитан заповедникта ағас һындырмай.* Д. Бүләков. *[Әбей – Ҡуҙыйкүрпәскә:] Бер йүнле егет булһаң, һинең кәләшең буласаҡ ҡыҙың да ташлап китмәҫ ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс». ● *Ахырызаман булғанда йүнһеҙ кеше йүнлегә эш өйрәтер.* Мәҡәл. *Йүнле үҙенән күрер, йүнһеҙ кешенән күрер.* Мәҡәл. *Йүнһеҙ маҡтаныр, йүнле һаҡланыр.* Мәҡәл.

2. Сифаты һәйбәт, арыу, яҡшы. □ Стоящий, подходящий, хороший. *Йүнле уңыш. Йүнле аш.* ■ *[Иҫәнбай ҡарт:] Яҡын-тирәлә йүнле ағас ҡалманы бит хәҙер.* Ә. Әминев. *Таулыҡай магазиндарында йүнле сигарет бөтөп торған саҡ.* Ә. Хәкимов. *[Зәйнәп:] Кейергә йүнле кейем юҡлыҡтан, өҫтөбөҙҙән гимнастёрка, һалдат шинеле төшмәне.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010. ● *Айғыр ҡалдырһаң, йүнлеһен ҡалдыр.* Мәҡәл.

3. Ыңғай йөкмәткеле, күңелгә ятышлы; яҡшы. □ Приятный, располагающий. *Йүнле һүҙ ишетеү. Йүнле хәбәр әйтеү.* ■ *Йүнле йөкмәтке юҡ икән, шиғырҙың үҙе лә юҡ тигән һүҙ.* К. Әхмәтйәнов. *Дилбәр юл буйы ҡабат осрашырға сәбәп уйлап маташты, тик башына бер генә йүнле фекер ҙә килмәне.* Г. Ғиззәтуллина. *[Мырҙағәле:] Әй, ошо Иштән ағайҙы, йүнле хәбәр һөйләрме тиһең?..* З. Ураҡсин. *Азамат, быларҙан йүнле һүҙ ишетмәҫһең, тигәндәй, аралағы өлкәнерәк кеше Әбсаликов тигән монтажсыға ҡараны.* Р. Солтангәрәев.

4. Иҫәпкә алырлыҡ, рәтле, арыу. □ Довольно хороший, неплохой; сносный; подходящий, хороший. *Йүнле йоҡо күрмәү. Йүнле эш күрһәтмәү.* ■ *Прудский сестраға беҙҙең бер аҙнанан бирле йүнле йоҡо күрмәүебеҙҙе белдерҙе.* А. Таһиров. *Аттар, көнөн-төнөн йүнле ял күрмәгән бахыр аттар, эйәләренең эс-тойғоларын аңлаған һымаҡ сапты ла сапты.* Я. Хамматов. ● *Тиң – тиңе менән, йүнле эш – йүне менән.* Мәҡәл.

ЙҮНЛЕ II *р. ҡар.* **йүнләп.** ■ *Иҙән һалҡын. Сит-сото боҙға уҡмашҡан бер яҡҡа салыш ишек йүнле ябылмағанлыҡтан, эскә ел урғылып инә.* Я. Хамматов.

ЙҮНЛЕ-БАШЛЫ (Р.: нормальный; И.: good; reasonable; Т.: normal) *с.*

Иҫәпкә алырлыҡ, иғтибар итерлек яҡшы, рәтле. □ Нормальный, путный. *Йүнле-башлы һүҙ.* ■ *[Хужа ҡатын:] Фронтҡа барып ҡапҡас, йүнле-башлы йоҡларға ла ирек булмаҫ әле үҙегеҙгә.* Д. Юлтый. *Бына Амуровтың һуңғы ваҡытта үҙе менән йүнле-башлы һөйләшмәй, ниндәйҙер асыу һаҡлаған һымаҡ мыштым ғына йөрөүе Ротөвка аңлашылып етеңкерәмәй.* Н. Мусин. *[З. Бикбулатов:] Ата-әсәйем бик иртә үлеп китеү сәбәпле, ғаиләләге ҡусты-һылыуҙарҙы аяҡҡа баҫтырыу кеүек мәшәҡәттәрҙе лә атҡарҙым. Йүнле-башлы кейем юҡ.* «Йәшлек», 4 март 2008.

ЙҮНЛЕ-РӘТЛЕ *с. ҡар.* **йүнле-башлы.** ■ *Шул ярһыуынан ул [Лапшин] әле лә баҫылмағайны. Шуға күрә Уйылданға йүнле-*

рәтле кәңәш бирә алмай торҙо. Н. Мусин. *Ҡаҙаҡтар йүнле-рәтле ризыҡ бирмәне, асыраҡ булһа, алыҫҡа ҡаса алмаҫ, тип уйланылар, ахыры.* З. Ураҡсин. *Әйтәйек, ил башлыҡтары халыҡтың телен йүнле-рәтле белмәй икән, уларҙан нимә өмөт итеп була?* «Йәшлек», 24 февраль 2012.

ЙҮНЛӘНЕҮ (йүнлән-) (Р.: образумиться; И.: come to (see) reason; Т.: uslanmak) *ҡ.*

Йүнле булып китеү, аҡыл инеү. □ Образумиться. *Йүнләнеп китеү. Йүнләнеп, телмәр тотоп ташланы егет.*

ЙҮНЛӘП (Р.: как следует; И.: properly; Т.: yeterince) *р.*

Үҙ рәүеше һәм кимәленсә; тейешенсә. □ Как следует, толком. *Йүнләп эшләмәй. Йүнләп һөйләшмәй.* ■ *[Йәнбирҙе:] Беҙ килгәндә, бында әле йәнлектәр ҙә аҙ ине, ере лә йүнләп кипмәгән, ҡаҡ-ваҡ күллек, һаҙ ине.* «Урал батыр». *Донъя серҙәренә төшөнөргә ашҡынған Мифтахетдин, тәүлектәр буйы йүнләп ял итмәйенсә, үҙ белемен арттырырға тырышты.* Я. Хамматов. *Ат бик ялҡау булды бит, һарҡыуҙа ла йүнләп юртмай.* С. Агиш. *Йүнләп атлай белмәгән кешенең дә был көй ыңғайына төшөп бейегеһе килә.* Т. Хәйбуллин.

ЙҮНЛӘҮ (йүнлә-) (Р.: приводить в порядок; И.: put in order; Т.: düzeltmek) *ҡ.*

1. Эшкә яраҡлы итеү, эшкә индереү; йүнәтеү. □ Приводить в порядок; исправлять, налаживать. *Ултырғыстарҙы йүнләп ҡуйырға кәрәк.*

2. *Ниҙер* булдырыу, хәл итеү йүнәлешендә эшләү; хәстәрләү. □ Добывать, изыскивать. *Ашарға йүнләү. Утын йүнләү.* ■ *Фәғилә әбей менән Айбикә тиҙ генә аҙыҡмаҙар йүнләп, бауырһаҡ бешереп, тоҡсайға тултырып, Юлдыбайға бирҙеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Булат йәһәт кенә машина йүнләне лә, Фәриҙәне теге ауылына тиклем уҡ алып барып ташланы.* Р. Солтангәрәев. *Минең хәҙер хәстәр-хәсрәтем юҡ, мыжып йонсотмамын алюһыҡҡа. Һин дә азат. Тик тим .. йәтеш кенә итек йүнлә, йәме, яҙғылыҡҡа.* Т. Ғәниева. *Уйларға, йүнләргә өйрәнмәгән ҡәүем башҡа йылғырыраҡ халыҡҡа ҡол буласаҡ, бил бөгәсәк, ахыр сиктә эскегә һалышасаҡ.* Т. Ғарипова. ● *Йыуаш ат йүнләүгә яҡшы.* Мәҡәл. *Тапҡандан йүнләгән артыҡ.* Мәҡәл.

ЙҮНСЕЛ (Р.: предприимчивый; И.: enterprising; Т.: girişken, girgin) *с.*

Табыу, хәстәрләү яғына булдыҡлы; тырыш. □ Предприимчивый, деловой. *Йүнсел кеше. Йүнсел булыу.* ■ *Йүнсел булған әсәмә йүнсел булған Уралым.* Ҡобайырҙан. *[Фәйзулла ҡарт — Хакимға:] Йүнсел хужа булһаң, бер ҡарыш ер өсөн талашып инең, ә һин һатып ултыраһың.* Ә. Әминев. *Улар [юғары ҡатлам кешеләре] араһында ҡомһоҙ байҙар, һатлыҡтар ғына түгел, ил мәнфәғәтен ҡурҙәтеүсе бынамын тигән ватансылар ҙа, йүнсел хужалар ҙа, уҡымышлы зыялылар, мәғрифәтселәр ҙә булыуын онотҡанбыҙ.* Ә. Хәкимов.

ЙҮНСЕЛЛЕК (йүнселлеге) (Р.: предприимчивость; И.: (spirit of) enterprise; Т.: girişkenlik, beceriklilik) *и.*

Ниҙер булдырыу, хәл итеү йүнәлешендә зирәк, отҡор булыу сифаты. □ Предприимчивость, деловитость. *Йүнселлек күрһәтеү.* ■ *Балаларҙа бәләкәйҙән үк үҙаллылыҡ, йүнселлек, белем алырға ынтылыш һәм камиллашыу тойғоһо тәрбиәләгеҙ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 7, 2010. *[Хужам] бигүк һыҡмыр булмаһа ла, аҡсаның ҡәҙерен белгән кеше ине ул. Һаҡсыллығы, йүнселлеге арҡаһында мөлкәтен түңәрәкләне лә.* Ә. Хәкимов.

ЙҮНТЕРӘҮ (йүнтерә-) (Р.: становиться вялым; И.: become sluggish; Т.: ihtiyarlanmak) *ҡ. диал.*

Ҡартайып көс-хәлдән яҙыу; бәлтерәү. □ Становиться вялым, апатичным. ■ *Егет атынан төшөп өйгә инһә, унда йүнтерәп бөткән бер әбей йөн тетеп ултыра, ти.* Әкиәттән.

ЙҮНҺЕҘ (Р.: бестолковый; И.: muddle-headed; Т.: anlayışsız, rabıtasız) *с.*

1. Эшкә булдыҡһыҙ, насар. □ Бестолковый. *Йүнһеҙ бала. Йүнһеҙ булыу.* ■ *[Тулыбай:] Шулай инде, ағайҙар, йәшләй генә өйләнеп ҡуйғайным, йүнһеҙ ҡатын тура килде.* Д. Буләков. *Ул саҡта бик йылдам йөрөүсе иң яҡшы ат та сабан һәм йүнһеҙ булып күренә.* «Ҡуҙыйкүрпәс». ● *Бер йүнһеҙ һарыҡ бөтөн көтөүҙе боҙор.* Мәҡәл. *Елһеҙ тирәк*

һелкенмәҫ, йүнһеҙ йөрәк елкенмәҫ. Мәҡәл. *Кәкре ҡайынға ҡар ятмаҫ, йүнһеҙ кешелә һүҙ ятмаҫ.* Мәҡәл.

2. Шелтәләп, әрләгәндә әйтелә. □ Бестолковый; дурной. ■ *[Гөлсөм:] Әнә менән еп һорап алды ла сығып китте бит [Ҡасим]. Йүнһеҙ, шунда өҙөлгән төймәһен үҙем тағып бирһәм ни була?* Н. Мусин. *[Мәүсиләнең ире] урман эшенән ҡайһылайырак бәлйерәп ҡайтты бит, йүнһеҙ.* Ә. Хәкимов.

3. Килешмәгән, мәғәнәһеҙ, насар. □ Дурной, плохой. *Йүнһеҙ хәбәр таратыу.* ■ *[Тәнкәбикә — Ишмырҙаға:] Кит, телең ҡороғоро! Йүнһеҙ йыр йырлап йөрөйһөң, алйот булдыңмы әллә?* М. Кәрим. *Йүнһеҙ хәбәр тиҙ тарала, тиҙәр. Дөлдөл менән булған хәл тураһында совхозда шунда уҡ белеп алғандар.* Ш. Биҡҡол.

ЙҮНҺЕҘЛЕК (йүнһеҙлеге) (Р.: неспособность; И.: muddle-headedness; Т.: beceriksizlik) *и.*

1. Эшкә булдыҡһыҙ булыу сифаты. □ Неспособность, бестолковость. *Йүнһеҙлек күрһәтеү.* ■ *[Хөснулланың] уң яҡтағы күршеһе Бәкергә йүнһеҙлеге өсөн «бахыр» ҡушаматы тағылған.* Ә. Әминев. ● *Йүнһеҙлек — көнһөҙлөк.* Мәҡәл.

2. Килешмәгән, мәғәнәһеҙ, насар эш, ҡылыҡ һ. б. □ Дурость, глупость. *Йүнһеҙлек эшләү.* ■ *Был миҙгелдә мурҙаға яҙып-яңылышып ингән балыҡты көтөп тороу йүнһеҙлек булыр ине.* М. Кәрим. *[Сираев] тағы ла ниндәй ҙә булһа берәй йүнһеҙлек эшләгәндер.* И. Насыри. *[Йосоп:] Асыуланмайһығыҙҙыр бит минең йүнһеҙлеккә?* Н. Мусин.

ЙҮНҺЕҘЛӘНЕҮ (йүнһеҙлән-) (Р.: становиться бестолковым; И.: get muddle-headed; Т.: beceriksiz olmak) *ҡ. һөйл.*

1. Йүнһеҙлек күрһәтеү, йүнһеҙ ҡыланыу. □ Совершать дурные поступки. ■ *[Менәүәрә] ниңә бөтөнләй йүнһеҙләнеп, бер эш ҡыра алмаҫтай хәлдә тик йөрөй?* Н. Мусин.

2. Йүнһеҙгә әйләнеү. □ Становиться бестолковым. ■ *Өҫтәге етәкселәрҙең эшкинмәгәнлегенән, донъя бутауынан килеп сыҡтымы был хәл, әллә Һолтанбай кеүек ҡул көсө менән илде байыҡтырырға тейешле ябай кешеләр йүнһеҙләндеме?..* Н. Мусин.

3. Ҡартайып йәки ауырып көс китеү, йүн бөтөү. □ Становиться дряхлым, бессильным, беспомощным. *Ҡартайҙым, йүнһеҙләндем.* ■ *Мал бөтөп, баҡ ҡунмаһа, хур булып, әрһеҙләнеп, китәрһең йүнһеҙләнеп.* М. Аҡмулла.

ЙҮНӘЙЕҮ (йүнәй-) *ҡ. диал.*

1. *ҡар.* **йүнәлеү II, 1.** ■ *[Нәжип ағай] бит йүнәйеп китә алманы, һуңғы йылды бер тай алғайны, хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, ул да үлеп китте.* А. Карнай.

2. *ҡар.* **йүнәлеү II, 2.** ■ *Бынан ары беҙ икебеҙ ҙә, йүнәйеп, аяҡҡа баҫтыҡ.* М. Кәрим.

ЙҮНӘЙТЕҮ (йүнәйт-) *ҡ. диал. ҡар.* **йүнәтеү 3.** ■ *[Шакир] хәҙер хужалығын да йүнәйтеп килә: бер аты, арбаһы, аты тороp өсөн аҙбары бар.* Г. Хәйри. *[Ҡарсыҡ:] Китте лә барҙы бит Андрюшам шахтаға! Кеҫәһенә бер аҙ ҡот ҡундыра, миңә бүләктәр йүнәйтә, йәнәһе.* Г. Лоҡманов.

ЙҮНӘКӘЙ *с. диал. ҡар.* **арзан.** *Йүнәкәй хаҡҡа һатып алыу.*

ЙҮНӘЛДЕРЕЛЕҮ (йүнәлдерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йүнәлдереү.** *страд. от* **йүнәлдереү.** ■ *Беҙҙә [Рәсәйҙә] һандары кәмеүсе ҡош-ҡортто ҡурсалауға йүнәлдерелгән ҙур эштәр алып барыла.* Э. Ишбирҙин. *Иртәнсәк йоҡонан уянғанда һаналған һәр минут, һәр секунд көндөң аҙағына тиклем курсанттан һәйбәт командир тәрбиәләүгә йүнәлдерелде.* Я. Хамматов.

ЙҮНӘЛДЕРЕҮ (йүнәлдер-) (Р.: направлять; И.: direct; Т.: yöneltmek) *ҡ.*

1. *Ниндәйҙер* тарафҡа йүнәлеш алдырыу; йүнәлтеү. □ Направлять, устремлять *что. Машинаны ауылға йүнәлдереү. Кәмәне ярға йүнәлдереү.* ■ *Генерал Гордон, уларҙы [татар атлыларын] бер ынтылышта иҙеп ташламаҡсы булып, бөтә ғәскәрен бер юлы уларға ҡаршы йүнәлдерҙе.* Н. Мусин.

2. *Ниндәйҙер* тарафҡа йәки *ниндәйҙер* нәмәгә төбәү. □ Направлять, устремлять *кого-что. Иғтибарҙы йүнәлдереү. Ҡарашты йүнәлдереү.* ■ *Мифтахетдин Дәүләтбайға әйләнеп ҡараны ла, бер һүҙ ҙә өндәшмәйнитмәйенсә, тоноҡланған моңһоу күҙҙәрен ситкә йүнәлдерҙе.* Я. Хамматов. *Рота командиры таҫырайып торған күҙҙәрен уға*

[Недосекоға] йүнәлдерҙе. И. Насыри. *Кеше сикһеҙ батыр, көслө карашын алға йүнәлдергән.* А. Карнай. *Ул [Зөбәржәт], бөтә фекер ептәрен бер нөктәгә йүнәлдерергә тырышып, каштарын йыйырған хәлдә, оҙак кына хәрәкәтһеҙ торҙо.* Ғ. Лоҡманов.

3. *күсм. Ниндәйҙер* эш йәки мәсьәләгә төбәү, йүнәлтеү. □ Направлять, устремлять *кого-что. Бөтә көстө сәсеү эшенә йүнәлдереү.* ■ *Бынан бер аҙна элек ак билетлыларҙы ебәргәйнеләр. Бына шулар араһында эшләргә, уларҙы ла һуғышка каршы йүнәлдерергә кәрәк.* А. Таһиров. *Һаулык һаклауға кағылып, сығыш яһаусы, был тармак өҫтөнлөклө булып калырға тейеш, тип билдәләне һәм төп иғтибарҙы сәләмәт тормош өлгөһөн пропагандалауға йүнәлдерергә сакырҙы.* «Ағиҙел», № 7, 2010. *Халык ижады әҫәрҙәрен, Көнбайыштағы кайһы бер авангардсылар һымак, халыктың үҙенә каршы йүнәлдерергә, хеҙмәтсәндәрҙе мыҫкыл итеү коралына әйләндерергә теләүселәр ҙә табылырға мөмкин бит әле.* К. Әхмәтйәнов.

ЙҮНӘЛЕҮ I (йүнәл-) (Р.: направляться; И.: head (for), be going (to); Т.: yönelmek) *к.*

1. *Ниндәйҙер* тарафка юл алыу. □ Направляться, нацеливаться. *Эшкә йүнәлеү. Өйгә йүнәлеү.* ■ *Лайон, .. тауышланмаҫка тырышып, ишеккә йүнәлде.* Н. Ғәйетбаев. *Эшселәр үҙ төркөмдәре менән үҙ заводтарына йүнәлделәр.* Д. Юлтый. *Мифтахетдин, мөғәллим рөхсәтен һорамайынса, үҙ урынына йүнәлде.* Я. Хамматов. *Бер өйөр халык Карағайлы урманы тарафына йүнәлде.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Китергә юл алыу, юлға сығыу. □ Отправляться, выходить в путь. *Сәфәргә йүнәлеү.* ■ *Бейеш тыуған яғына кайтып китергә ашыкманы. Стәрлетамак калаһынан туп-тура Туҡһанбай ауылына табан йүнәлде.* Я. Хамматов. *Саха Республикаһының баш калаһы Якутскиға йүнәлгән һауа сәйәхәтебеҙ инде нисәнсе сәғәт дауам итә.* Р. Бикбаев.

3. *Ниндәйҙер* тарафка йәки нәмәгә төбәлеү *(күҙгә карата).* □ Устремить взгляд. ■ *Уның [Бәкерҙең] күҙҙәре бер нөктәгә йүнәлгән.* Х. Зарипов.

4. *күсм. Ниндәйҙер* эш йәки мәсьәләгә төбәлеү. □ Направляться, устремляться, нацеливаться. *Халыктың иғтибары мәсьәләне хәл итеүгә йүнәлгән.*

ЙҮНӘЛЕҮ II (йүнәл-) (Р.: налаживаться; И.: get right; Т.: yoluna girmek) *к.*

1. Тейешле хәлгә, йүнгә килеү. □ Налаживаться. *Эш йүнәлде.* ■ *[Ныязғол:] Минең дә эштәр йүнәлеп бөтөп бара тиерлек.* Һ. Дәүләтшина.

2. Ауырыуҙан һ. б. төҙәлеү; һауығыу, сәләмәтләнеү. □ Поправляться *(о человеке). Ауырыу йүнәлеп килә. Кулы йүнәлгән. Йәрәхәте йүнәлгән.* ■ *Минең якын дуҫ лазареттан йүнәлеп килде бит.* А. Таһиров. *Кыҙҙың сәләмәтлеге йүнәлеү менән, өйләнешергә булдык.* Д. Юлтый. *Үткән кыш кар калын булып, йылкы .. йөҙәү булды. Әле һаман йүнәлеп бөтә алмайҙар.* Ғ. Дәүләтшин. *Улай ҙа анау фәрештә кыҙ ярҙамында, тәүҙә ниндәйҙер туклыклы шыйыкса эсеп, һуңғы көндәрҙә хатта тәме-тәмле билдәһеҙ ят ризыктарҙы ауырлык менән йота башлағаны бирле, ул [Камил] йүнәлеүгә ыңғайлағандай булды.* Ә. Хәкимов.

ЙҮНӘЛЕШ I (Р.: направление; И.: direction; Т.: yön) *и.*

1. Тараф. □ Направление, курс. *Билдәле бер йүнәлештә барыу. Вертикаль йүнәлеш.* ■ *Йүнәлешен һыуҙар бороп ағыр, алмашынып елдәр иҫеүе.* Б. Бикбай. *Хәҙер мин йүнәлеште белмәйем: фронт алдамы, арттамы?* Д. Юлтый. *[Килдебәк] бал корттарының юлда осраған хуш еҫле сәскәләргә лә иғтибар биреп тормайынса, гүйә рельстар буйлап бер йүнәлештә генә .. осоуын карап ултырғанда ла, ғәжәпләнеүҙән бигерәк, уйлана торғайны.* Ә. Хәкимов.

2. *күсм. Ниндәйҙер* эш, хәрәкәт, көрәштең һәм башканың үҫеш юлы. □ Курс, направление. *Сәйәсәт йүнәлеше. Иктисад йүнәлеше.* ■ *Ерҙе, тупракты нисек бәрәкәтле файҙаланыу йүнәлешендә тир түгергә кәрәк бөгөн.* Д. Буләков. *Мифтахетдин, әңгәмә йүнәлешен үҙгәртеп, шәкерттәр менән татыу мөнәсәбәттәге, тәкәбберлектең ни икәнен белмәүсе, үтә ябай, саф күңелле Шәмсетдин Зәкиҙән шиғыр укыуын үтенде.*

Я. Хамматов. *Район хакимиәте башлығы, йыйылыштың икенсе юҫыкка йүнәлеш алғанын самалап, урынынан ҡалҡынды.* Ә. Эминев.

3. Үҙенә бер төрлө теоретик йәки идеологик нигеҙе булған ғилем, ижтимағи ағым. □ Течение, направление. *Сәнғәттәге реалистик йүнәлеш. Әҙәби йүнәлештәр.* ■ *Төп герой, ярҙамсы образдар, ыңғай һәм кире геройҙар – быларҙың барыһы ла әҫәрҙең идея йүнәлеше буйынса төркөмләнеш һөҙөмтәһе.* К. Әхмәтйәнов. *Әҙәби йүнәлеште, ғәҙәттә, бер осорҙа һәм бер ижтимағи мөхиттә йәшәгән һәм ижад иткән бер төркөм яҙыусыларҙың ижадындағы уртаҡ идея-үҙенсәлектәр тәшкил итә.* К. Әхмәтйәнов.

ЙҮНӘЛЕШ II (Р.: наклонение глагола; И.: verb mood; Т.: fiil kipi) *и. лингв.*

Эш-хәрәкәттең субъектҡа йәки объектҡа булған мөнәсәбәттәрен белдергән ҡылым категорияһы. □ Наклонение глагола. *Башҡорт телендә ҡылым йүнәлештәре: төп йүнәлеш, төшөм йүнәлеше, ҡайтым йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше, уртаҡлыҡ йүнәлеше.*

ЙҮНӘЛЕШ ҠАҒЫҘЫ (Р: направление на работу; И.: job placement; Т.: yollama) *и.*

Эшкә ебәреү, тәғәйенләү документы. □ Направление *(на работу). Йүнәлеш ҡағыҙы тапшырыу. Йүнәлеш ҡағыҙы алыу.*

ЙҮНӘЛЕШЛЕ (Р.: направленный; И.: aimed (at); Т.: yönlü) *с.*

Билдәле бер маҡсаты булған. □ Направленный. *Йүнәлешле хәрәкәт. Йүнәлешле эш алып барыу.* ■ *[Малкин менән Савельевтың] күршеләр алдында уҡыған шиғырҙары төшөнкө рухлы, фантастик йүнәлешле.* Ә. Хәкимов. *В. И. Даль яҙмаларында ла, нигеҙҙә, мифологик йүнәлешле легендалар («Йылҡысыҡҡан күл», «Шүлгән», «Этташ», «Тирмән тауы», «Һанай-һары менән Шайтан-һары») урын ала.* Ф. Нәҙершина. *Күләм яғынан ҙур булмаһа ла, Салауат Юлаев шиғырҙары тәрән фекерле, халыҡсан йүнәлешле һәм оригиналь поэтик йөкмәткеле булыуы менән ҡиммәт.* Р. Шәкүр.

ЙҮНӘЛТЕЛЕҮ (йүнәлтел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йүнәлтеү I.** *страд. от* **йүнәлтеү I.** *Маҡсатҡа йүнәлтелгән эш.* ■ *Йырҙың тәүге куплеты халыҡ күңелендә илһөйәрлек, яугирлыҡ рухы тәрбиәләүгә йүнәлтелгән.* М. Ямалетдинов. *Яппарҙың да, Мәүлиәнең дә бөтә һүҙҙәре, бөтә ҡыланыштары ҡарсыҡтың күңелен табырға йүнәлтелде.* С. Агиш. *Унда [хәтирәләрҙең мотивында] төп иғтибар иң әүәл ҡаһарман шәхестәр ҡылған ғәмәлдәргә йүнәлтелә.* Ә. Сөләймәнов.

ЙҮНӘЛТЕҮ I (йүнәлт-) (Р.: направлять; И.: direct (at, to); Т.: yöneltmek) *ҡ.*

1. *Ниндәйҙер* тарафҡа йүнәлеш алдырыу; йүнәлдереү. □ Направлять *кого-что. Йәштәрҙе төҙөлөшкә йүнәлтеү. Атты фермаға йүнәлтеү.* ■ *Нух пәйғәмбәр, кәмәнең тәҙрәһен асып, күҙе менән донъяны байҡаны, алыҫта, һыу өҫтөндә, ҡалҡып торған осло тау түбәһен күрҙе һәм ишкәкселәргә кәмәне шул тарафҡа йүнәлтергә ҡушты.* М. Ямалетдинов. *Батыр осоусы аппаратын ҡалаға табан йүнәлтте.* Н. Ғәйетбаев.

2. *Ниндәйҙер* тарафҡа йәки *ниндәйҙер* нәмәгә төбәү. □ Направлять, устремлять *что. Күҙҙәрҙе йүнәлтеү. Ҡарашты йүнәлтеү.* ■ *Һүҙен әйтеп бөтмәйенсә, фонарь яҡтыһын уға [Сираевҡа] табан йүнәлтте. Ҡаҙанбаев.* И. Насыри. *Ишкужа имам, оҙаҡ йүткереп туҡталғас, көс-хәл тын алып, күҙ ҡарашын Камалетдин муллаға йүнәлтте.* Я. Хамматов. *[Әхмәтгәрәй] йорт араһында уны-быны хәстәрләп йөрөгәндә, йә ниҙер уйлап, онотолоп китә лә шым ғына көйләргә керешә, йә ҡарашын күгәреп ятҡан тау армыттарына йүнәлтеп, туҡтап ҡала.* Ә. Хәкимов.

3. *күсм. Ниндәйҙер* эш йәки мәсьәләгә төбәү; йүнәлдереү. □ Устремлять, направлять. *Көстө файҙалы эшкә йүнәлтеү.* ■ *Мин төп иғтибарҙы бөгөнгө әҫәрҙәрҙә тамырҙарҙы барлау, милли аңды үҫтереү, тарихи хәтерҙе ныҡтыу күренештәренә йүнәлттем.* Р. Бикбаев. *Әмилә, малай тураһында дөрөҫөн әйтеп, төп маҡсатына өлгәште – бандиттарҙың иғтибарын ситкә йүнәлтте.* Н. Ғәйетбаев. *Ярҙан айырылған кәмәгә көслө ағым бәрелгәс тә: «Тарихи кисеү башланды», – тип уйланы Ғөбәйҙуллин, бөтә иғтибарын дошман ҡулындағы ҡаршы ярға йүнәлтеп.* Я. Хамматов.

ЙҮНӘЛТЕҮ II (йүнәлт-) *ҡ. диал.*

1. *кар.* **йүнәтеү.** *Компьютерҙы йүнәлтеү. Өҫтәлде йүнәлтеү. Урам алдын йүнәлтеү.*

2. *йөкм. кар.* **йүнәлеү II, 2.** *понуд. от* **йүнәлеү II, 2.** *Һаулыкты йүнәлтеү. Башты йүнәлтеү.*

ЙҮНӘЛТМӘ *и. кар.* **юллама.** *Дауаханаға йүнәлтмә. Укыу йортона йүнәлтмә.*

ЙҮНӘТЕЛЕҮ (йүнәтел-) *к. төш. кар.* **йүнәтеү 1, 2.** *страд. от* **йүнәтеү 1, 2.** ■ *Тағы аттар кырғыслана, йүгән, камсы, эйәрҙәр йүнәтелә, һөңгө, кылыстар кайрала, йәшел лампаслы салбарҙар, шәмәхә погондар таҙартыла.* А. Таһиров. *Немецтарҙың косилка, лобогрейкалары, фургондары, камытсбруйҙары, һәнәк-тырмалары йүнәтелеп, салғылары кайралып, кәрәкле ялсылары ялланып куйылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Һандыктың иң төбөндә яткан матур күлдәктәр сығарылып тәҫләнде, аяк кейеме йүнәтелде.* Ғ. Хисамов.

ЙҮНӘТЕНЕҮ (йүнәтен-) (Р.: приводить себя в порядок; И.: tidy oneself up; Т.: kendine çeki düzen vermek) *к.*

Өҫ-башыңды, урын-ереңде карау, йүнәтеү. □ Приводить себя в порядок *(об одежде, причёске и др.). Йүнәтенеп алыу.* ■ *Көнтуған йокларға йүнәтенә башланы, ти.* Әкиәттән.

ЙҮНӘТЕП *р. диал. кар.* **йүнләп.** ■ *Күҙемде йәш каплаған, йүнәтеп күрә лә алмайым.* Ф. Иҫәнғолов.

ЙҮНӘТЕҮ (йүнәт-) (Р.: исправлять; И.: repair; correct; Т.: düzeltmek) *к.*

1. Боҙолған, туҙған нәмәне эшкә яраклы итеү; төҙәтеү. □ Исправлять, налаживать; ремонтировать. *Юлды йүнәтеү. Кала урамдарын йүнәтеү. Йүгәнде йүнәтеү. Күлдәкте йүнәтеп кейеү. Йүнәтеп тегеү. Йүнәтеп карау.* ■ *Нисек кенә булмаһын, бөгөн һалды йүнәтеп бөтөрөргә һәм иртәгә такта яра башларға кәрәк.* Н. Мусин. *[Тарауыл карт] оҙак уйлап ултырған да һунар корамалдарын йүнәтә башлаған, ти.* «Акбуҙат».

2. Тәртипкә, йүнгә килтереү, һәйбәтләү. □ Поправлять, прибирать. *Итәкте йүнәтеү. Шәлде йүнәтеп бәйләү.* ■ *Ул [Айбикә], бит-кулын йыуып, башындағы яулығын йүнәтеп бәйләп, һыйыр һауырға сығып китте.* Һ. Дәүләтшина. *Старшина кайһы бер һалдаттарҙың өҫтөнә одеялын йүнәтеп яба.* И. Насыри. *Алтынсәс, шым ғына тороп, кара һөрөм сәсеп ултырған лампаны өрөп һүндерҙе, Кәҙриәнең өҫтөндәге юрғанды йүнәтеп япты.* Ә. Хәкимов. *Шунан бирле Марта һәр көн һайын уның [Кәбирҙең] янына инә һәм уның яраһын йүнәтеп бәйләй торған булды.* Б. Дим.

3. Алып, хәстәрләп, бар итеү. □ Доставать, добывать, заготавливать. *Өҫ-баш йүнәтеү. Бесән йүнәтеп алыу. Тамакка йүнәтеү. Утын йүнәтеү.* ■ *[Гөлиемеш апай] үҙ балалары ауыҙынан өҙөп булһа ла Ғабдуллаға тип әҙерләгән йоморткаһынан, майынан күстәнәс йүнәтте.* М. Кәрим. *[Күсәрбай:] Әй, бисә, тор! Утыңды яға һал да, тамакка йүнәт.* Т. Хәйбуллин.

4. Булдырыу, яһау, бар итеү; әтмәләү. □ Создавать, заготавливать. ■ *Былары [егетелән] билбаулы, кеҫәле итеп заманса күлдәк, караға тар акһыл буй төшкән инглиз бүҫтауынан салбар йүнәтмәксе.* Ә. Хәкимов. *«Бәхет» эҙләп килгән ярлылар бәләкәс кенә балсык өй йүнәтеп, кайһылары татар, рус байҙарының малын карап, көтөү көтөп, кайһылары станцияла йөксө, тимер юлы төҙәтеүсе булып көн кисерәләр.* А. Таһиров. *[Малайҙар] иҫке ауҙы кыркып, селтәр ток йүнәттеләр.* М. Кәрим.

5. *диал.* Йыйыштырыу. □ Прибираться; убираться. *Өйҙәрҙе бола, йүнәтмәгәндәр.*

ЙҮНӘТЕШЕҮ (йүнәтеш-) *к. урт. кар.* **йүнәтеү 1–3.** *взаимн. от* **йүнәтеү 1–3.** ■ *Ике-өс көндән бирле шул эшкинмәҫ күперҙе йүнәтешеп йөрөй ине ул [Кәҙриә].* Ә. Хәкимов. *[Халык] кәрәк икән, һалдаттар менән бергә юл йүнәтешә, күпер һалыша.* З. Биишева. *Яуҙа һаулығын юғалткан һалдатка утын әҙерләшеү, каралты-кура йүнәтешеү, — етем калған ғаиләгә ярҙам итеү кеүек үк, Куштирәк халкының мөкәддәс кағиҙәһе, үҙ ихтыяры менән өҫтөнә алған бурысы.* Ә. Хәкимов.

ЙҮНӘТЕШТЕРЕҮ (йүнәтештер-) (Р.: поправить кое-как; И.: correct anyhow; repair off-hand; Т.: acele ile düzeltmek) *к.*

Арлы-бирле генә төҙәтеү, еңелсә генә йүнәтеү. □ Поправить кое-как, налаживать, приводить в порядок. ■ *[Констан-*

тин:] Сурағол, һин арығанһыңдыр, бер аҙ ял ит. Катя, һин урын йүнәтештереп бир уға. Т. Хәйбуллин.

ЙҮНӘТЛӘП (Р.: как следует; И.: properly; Т.: yeterince) *р. диал.*

Яҡшылап, йүнләп. □ Как следует, толком. *Ни булды? Йүнәтләп һөйлә.* ■ *Таныштырғанда исем-дәрәжәһен дә атағандай инеләр — [йортауай] тулҡынланыуынан йүнәтләп ишетмәне.* Б. Рафиҡов.

ЙҮНӘТТЕРЕҮ (йүнәттер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йүнәтеү 1—3.** *понуд. от* **йүнәтеү 1—3.** *Ҡапҡаны йүнәттереү. Кейемде йүнәттереү.* ■ *[Ризуанов:] Нисек инде шуны [өйҙө] йүнәттереп биреүгә көс таба алмайһығыҙ?* Б. Дим. *Бәс, Зөләйха шунда уҡ кире ҡайтты, оҫталарҙан бер һандыҡ йүнәттерҙе.* Эпостан. *Степандың матди хәле күҙгә күренеп рәтләнде. Лоҡмандың үҙенә айырым кузлалы арба, яҡшы ат йүнәттерҙе.* Т. Ғарипова.

ЙҮҢКЕШ (Р.: полоумный; И.: half-witted, crazy; Т.: aptal) *с. диал.*

Ярты аҡыл, аҡылға еңел. □ Полоумный. *Йүңкеш бала. Йүңкешкә әйләнеү.*

ЙҮПӘЙЛӘҮ (йүпәйлә-) (Р.: угождать; И.: oblige; Т.: yaranmak) *ҡ. диал.*

Йөпләү, ыңғайына тороу. □ Угождать, поддакивать. *Йүпәйләп тороу. Балаһына йүпәйләп кенә тора.*

ЙҮПӘЛӘҮ (йүпәлә-) (Р.: одурачивать лестью; И.: flatter much; Т.: yaranmak) *ҡ.*

Йомшаҡ һүҙ әйтеп иркәләү; алдаштырыу. □ Одурачивать лестью *кого-л.* ■ *Кукбурин йүпәләргә, сығыш яһаусының ыңғайына һуғырға мәжбүр ине.* М. Ямалетдинов. *[Айбулат] Рәхимәнең йүпәләй торған йомшаҡ тауышынан да, Ғәзимәнең бурҫылдауынан да, Имайҙың екеренеүҙәренән дә йонсоп, ыйыҡ булып бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

ЙҮПӘТЛӘҮ (йүпәтлә-) (Р.: льстить; И.: flatter; Т.: yaltaklanmak) *ҡ. һөйл.*

Йомшаҡ һүҙ менән йыуыу; юхалау. □ Льстить. ■ *Батша серҙе һиҙгән, ти, дейеүҙәргә ҡушҡан, ти. Ике толпар етәкләп, батыр ирҙәй олпатлап, ҙур ҡунаҡтай йүпәтләп, бер ҙур дейеү килгән, ти, Шүлгән менән Зәркумды һарайға алып киткән, ти.* «Урал батыр». *Көйлө саҡтарым да бик һирәк. Һин шәп бит ул, тиеп йүпәтләгеҙ, шағирҙар ҙа әҙәм балаһы бит, дарманыма ҡай саҡ сөй кәрәк.* Т. Ғәниева.

ЙҮРГӘК (йүргәге) (Р.: пелёнка; И.: nappy; Т.: kundak) *и.*

1. Йәш баланы урай торған сепрәк. □ Пелёнка. *Йүргәген алмаштырыу. Йүргәк йыуыу.* ■ *[Сафия] йәһәт кенә балаһын имеҙҙе, йүргәген алмаштырҙы.* Т. Ғиниәтуллин. *Баланың аҫтын алмаштырып, ҡоро йүргәккә төргән саҡта, Көнбикә уны иренә тоттора.* Н. Мусин.

2. *миф.* Йәш баланы яман заттарҙан һаҡлау көсөнә эйә булған предмет. □ Плёнка *(мифологизированный предмет, выполняющий обережную функцию).* ■ *Бала ғүмерле булһын тип, баланы олатай, өләсәй күлдәгенән алынған йүргәккә биләгәндәр.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙҮРГӘК ИСЕМЕ (Р.: пелёночное имя; И.: infant's very first name; Т.: bebeğin ilk ismi) *и. этн.*

Яңы тыуған балаға кендек инәһе тарафынан төрлө яман көстәрҙән һаҡлау өсөн бирелгән исем. □ Пелёночное имя *(имя, которое даётся новорождённому повитухой сразу после рождения в целях защиты от злых сил).* ■ *Кендек әбейе баланы ен-шайтандар алмаштырмаһын тип, уға берәй исем әйтеп һала, шул йүргәк исеме була.* Ф. Хисамитдинова.

ЙҮРГӘК КИПТЕРЕҮ (йүргәк киптер-) (Р.: ритуальная сушка пелёнок новорождённого; И.: Bashkir ethnographic ritual; Т.: bir âdettir) *ҡ.*

Бала илаҡ булмаһын өсөн яңы тыуған баланың йүргәктәрен киптереү ысулы. □ Ритуальная сушка пелёнок новорождённого. ■ *Баланың йүргәктәрен ҡырҡ көндән һуң ғына елгә эләләр. Һыҡта киптерергә кәрәк, әтеү бала илаҡ, сыҫҡаҡ була.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙҮРГӘКЛӘҮ (йүргәклә-) (Р.: пеленать; И.: swaddle; Т.: kundaklamak) *ҡ.*

Йүргәккә урау. □ Пеленать. *Баланы йүргәкләү. Бала табыу йортонда яңы тыуған бәпесте йүргәкләргә өйрәтәләр.*

ЙҮРЕЛЕК (йүрелеге) (Р.: лесной жаворонок; И.: wood lark; Т.: orman toygarı) *и. зоол.*

Турғай ҙурлыҡ, бүрекле, һырты буй ҡара таптар менән сыбарланған ҡара-көрән төҫтәге, ҡарағай урмандарында йәшәй торған һабан турғайы. □ Лесной жаворонок (лат. *Lullula arborea*). ■ *[Йүрелек] һабан турғайынан аҡ ҡашы һәм бәләкәйерәк булыуы менән айырыла.* Ә. Ишбирҙин.

ЙҮРЕМ *и. диал. ҡар.* **йүрмә.** *Йүрем бешереү. Өҫтәлгә йүрем ҡуйыу.*

ЙҮРЕҮ (йүр-) *ҡ. диал. ҡар.* **йүрмәү.** *Ойоҡ йүреү. Йүреп кейеү.*

ЙҮРЛӘЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **әлгәнйәк.** *Ағас башында йүрләйҙәр һикерешә. Йүрләй урманға зыян килтерә.*

ЙҮРМӘ I (Р.: юрма; И.: kind of Bashkir meat dish; Т.: yemek türü) *и. кул.*

1. Һарыҡтың эс майын оҙон-оҙон итеп ҡырҡып, ас эсәккә ҡуша үреп бешерелгән ашамлыҡ. □ Юрма *(кушанье типа рулета, изготавливаемое из свёрнутого нутряного сала барана, брюшины и кишки). Йүрмә бешереү. Йүрмә үреү.* ● *Юлаусының йомошо, йүрмә ашағас, онотола.* Мәҡәл.

2. *миф.* Яҙмыш символы. □ Символ доли, судьбы. ■ *Күрҙегеҙме, йөрөгән аяҡҡа йүрмә уралыр, тигәндәре раҫ икән! Ә.* Хәкимов. *Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә — барған-булған еренән яңы кәйеф, эмоциялар, ҡыуаныс, аптырау-һоҡланыу менән һуғарылған шиғырҙар, юлъяҙмалар алып ҡайтҡан.* «Ағиҙел», № 10, 2010. ● *Йөрөгән аяҡҡа — йүрмә, йүрмә булмаһа – ярма.* Мәҡәл. *Юл аяғы йүрмәгә.* Мәҡәл.

ЙҮРМӘ II (Р.: густой лес; И.: dense forest; Т.: orman) *и. диал.*

Ҡуйы урман. □ Густой лес. *Йүрмәлә аҙашырға мөмкин.*

ЙҮРМӘЛЕҮ (йүрмәл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йүрмәү.** *страд. от* **йүрмәү.** *Йүрмәлгән ойоҡ.* ■ *Фәсхи-Әдисәй менән Татар килен Таһура ҡиссаһы өҙөк-мөҙөк хәтирәләрҙән йүрмәлеп тыуып килә башымда — Меңәүәрәләр, Мусалар, баштары йәш, көтөп торһондар әле.* Г. Яҡупова.

ЙҮРМӘЛӘС *и. зоол. диал. ҡар.* **үрмәләс.** *Йүрмәләс ағастарҙағы бөжәктәр, уларҙың ҡурсаҡтары менән туҡлана.*

ЙҮРМӘЛӘҮ I (йүрмәлә-) (Р.: семенить; И.: mince (along); Т.: tıpış tıpış yürümek) *ҡ.*

Ваҡ-ваҡ ҡына баҫып, етеҙ атлау *(күберәк бөжәккә, кешегә ҡарата).* □ Семенить. *Әбей йүрмәләп килә.* ■ *[Ҡыҙҙар:] көршәкте яурындарына ултырталар ҙа, һаҡ, һалмаҡ ҡына баҫып, нескә билле ҡырмыҫҡалар шикелле, баяғы һуҡмаҡ менән йүрмәләйҙәр ҙә йүрмәләйҙәр, ти.* З. Биишева.

ЙҮРМӘЛӘҮ II (йүрмәлә-) *ҡ. ҡар.* **йүрмәү 1.** ■ *Күлдәгенең йыртығын йүрмәләп бөткән Йәғҙәгә Сергей: «Рәхмәт, Йәғҙә», — тине лә Мәғсүмгә йөҙөн борҙо.* И. Абдуллин.

ЙҮРМӘЛӘҮ III (йүрмәлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **үрмәләү.** *Бөжәктәр йүрмәләй.*

ЙҮРМӘҮ (йүрмә-) (Р.: штопать; И.: darn; Т.: yamamak) *ҡ.*

1. Ямау һалмай, арҡыс-торҡос сәнсеп тегеү. □ Штопать. *Ойоҡбашты йүрмәп ҡуйыу. Йүрмәп ямау.*

2. Теккәндә нәмәнең йөйөн, үтә сәнсмәй, ситтән уралтыу. □ Оверложить, зашивать *что-л.* по кромке. ■ *Тире ыҫланғас, йөйҙәрҙе тарамыш менән, тарамыш өҫтөнән ҡыл менән йүрмәп, һаба тегәләр.* М. Ғәбәйҙуллин.

ЙҮРӘЛӘЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **әлгәнйәк.** *Беҙҙең яҡта йүрәләй, тейен күп.*

ЙҮТКЕРЕК (йүткереге) (Р.: кашель; И.: cough; Т.: öksürük) *и. һөйл.*

1. Йүтәл. □ Кашель. *Йүткерек башланды. Йүткерек тейеү.*

2. *ҡар.* **туберкулёз.** *Йүткерек менән ауырыу. Үпкә йүткереге.*

3. *миф.* Үпкә ауырыуы эйәһе. □ Дух болезни лёгких. ■ *Йүткерек булһа, йүткерек эйәһен ғәрләндереп, бысраҡ сепрәк һалып ҡыуалар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙҮТКЕРЕНЕҮ (йүткерен-) (Р.: покашливать; И.: have a slight cough; Т.: öksürmek) *ҡ.*

Ара-тирә еңел итеп йүткереү. □ Покашливать. ■ *Йә, башлаһағыҙ башлағыҙ ҙа, өшөтә бит! — тип ҡыҫҡырҙы кемдер, ҡап та ҡоп бейәләй һуҡҡан, йүткеренгән тауыштарҙы аҫҡа ҡалдырып.* З. Ураҡсин. *[Сурағол] ахыры, ҡара таңдан торҙо, йүт-*

керенә-йүткеренә тышҡа сыҡты. Т. Хәйбуллин.

ЙҮТКЕРЕҮ (йүткер-) (Р.: кашлять; И.: cough; Т.: öksürmek) *ҡ.*

Үпкәнән үҙ иркеңдән тыш өҙөп-өҙөп көслө тын сығарыу. □ Кашлять. *Йүткереп ауырыу. Өҙлөкһөҙ йүткереү. Ҡаты йүткереү. Быуылып йүткереү. Сәсәп йүткереү.* ■ *Ул [Ғимран бабай], ҡапҡаһынан сыҡҡас, ҡарт кәзә йүткергәндәге шикеллерәк итеп, тамағын ҡыра-ҡыра беҙгә табан йүнәлә.* Н. Мусин. *Ул бик йыш йүткерә, тик ниңәлер ауырыуын минән йәшерергә тырыша.* Д. Юлтый. *Ун көн буйы, аҫты быҡкып ятҡан, мортайып ирей башлаған һырынтыларҙа бата-сума йөрөп, күпме эш ҡырғандыр, әммә урмандан тамам сиргә һабышып, каж-кож йүткереп ҡайтты Ашраф.* Ә. Хәкимов. ● *Йүткергәң килһә, тәмәке тарт.* Мәҡәл.

ЙҮТКЕРТЕҮ (йүткерт-) *ҡ.*

1. *йөкм. ҡар.* **йүткереү.** *понуд. от* **йүткереү.** *Тәмәке йүткертә. Төтөн йүткертә.*

2. *эйһ. ф. ҡар.* **йүткереү**. *Төнөн йүткертә.* ■ *Грипп булғанда йүткертә, .. сөскөртә, температура күтәрелә.* В. Ғүмәров.

ЙҮТӘЛ (Р.: кашель; И.: cough; Т.: öksürük) *и.*

Һыуыҡ тейеп йүткерткән ауырыу. □ Кашель. *Йүтәл тейеп ауырыу. Йүтәлде дауалау.* ■ *Йүтәлде ингаляция, үрмә гөл, бесәй тырнағы, юл япрағы кеүек дарыу үләндәре ярҙамында ла дауалайҙар.* «Йәшлек», 6 февраль 2010. *Ул [үзбәк] йылыға туймай, арыҡ тәнен ҡаҡшатып, йүтәл быуып бара.* Ә. Хәкимов. *Заславский, ҡалай көрөшкәгә ҡойоп, уға [Ғифритҡа] ҡайнар һыу һуҙҙы. Теге бер-ике уртлағас та йүтәленән тынды.* М. Кәрим. ● *Ҡараҡты йүтәл, мулланы тамаҡ харап итә.* Мәҡәл.

ЙҮТӘЛЛӘТЕҮ (йүтәлләт-) *ҡ.*

1. *йөкм. ҡар.* **йүтәлләү.** *понуд. от* **йүтәлләү.**

2. Йүткертеү. □ Кашлять. ■ *Шул саҡта [туҙанда] йүтәлләтә башлай.* М. Ғафури.

ЙҮТӘЛЛӘҮ (йүтәллә-) (Р.: кашлять; И.: cough; Т.: öksürmek) *ҡ.*

1. Оҙаҡ итеп, ҡат-ҡат йүткереү. □ Кашлять. *Мәхмүт ҡапыл, сәсәп, йүтәлләргә керешә.* М. Кәрим. *Ҡапыл ҡуҙғалыуҙанмы, ярһыулы дәртенәнме – уның [Кирилловтың] тыны ҡыҫылды, быуылып-быуылып йүтәлләй башланы, ҡаты ыңғырашып, ҡукрәгеп тотто.* Ғ. Ибраһимов. *Иртән Гөлгөл менән Гөлнур апай сәй эсәләр ине икәүләп. Икеһе лә ҡапыл тертләп китте: ишетелде әкрен йүтәлләү.* Р. Ниғмәти.

2. Йүтәл менән ауырыу. □ Иметь кашель. *Йүтәлләүҙе дарыу үләндәре менән дауаларға кәрәк.*

ЙҮТӘЛ ТӨШӨҮ (йүтәл төш-) (Р.: схватить кашель; И.: start coughing; Т.: öksürmeye başlamak) *ҡ.*

Йүткереп ауырый башлау. □ Схватить кашель, начать кашлять. *Йүтәл төшөп, ауырып киттем.*

ЙҮШКЕ *и. диал. ҡар.* **юшҡын**. *Йүшке ултырыу.*

ЙҮШКЕН *и. диал. ҡар.* **юшҡын**. *Йүшкендән таҙартыу.*

ЙҮШКӘ [рус. *вьюшка*] (Р.: вьюшка; И.: damper; Т.: baca kapağı) *и.*

Мейестең мөрйәһен яба торған ябыу. □ Вьюшка. *Мейес йүшкәһе. Йүшкәне асыу. Йүшкәне тартыу.* ■ *Мәгсүм, яңынан ҡанатланып, шат йылмая-йылмая, арбанан кенә, мөрйә ҡапҡасы, йүшкәләр тартып сығарырға тотонҙо.* И. Абдуллин. *Йәшен атмаһын тип самауырҙарын ябып, йүшкәләрен тығып, шомланып тәҙрәгә ҡарарға ла ҡурҡып ултыралар [кешеләр].* Д. Буләков. *Хашим көрһөндө, ялан аяҡ иҙәнгә баҫып, усаҡтың йүшкәһен асты, тәмәке тоҡандырҙы.* Т. Ғарипова.

ЙҮШЛӘҮ (йүшлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **йүнләү 2.** *Ашарға йүшләү. Утын йүшләү. Буралыҡ ағас йүшләү.*

ЙҮШНӘ (Р.: колёсная втулка; И.: bush; Т.: tıkaç) *и. диал.*

Тәгәрмәс втулкаһы. □ Колёсная втулка. *Йүшнәһе төшкән.*

ЙҮШӘ (Р.: снег, осевший на деревьях; И.: kind of hoarfrost; Т.: kırç) *и.*

Ағас башына боҙланып ҡатҡан ҡар; лүшә. □ Снег, осевший на деревьях. *Ағас баштары йүшә менән ҡапланған.* ■ *Артыштауҙағы ағастар ҡалын ҡар һәм ауыр йүшәнән һынып, ҡәкрәйеп, имгәнеп бөткән.* Н. Мусин.

ЙҮШӘН I (Р.: полевица; И.: bent; Т.: çimen) *и. бот.*

Һаҙамыҡ ерҙә үҫкән йомшаҡ ҡондораҡ. □ Полевица (лат. *Agrostis*). *Йүшән йолҡоу.*

ЙҮШӘН II *с. диал. ҡар.* **юшан.** *Йүшән ат.*

ЙҮШӘР *и. диал.*

1. *ҡар.* **бәҫ.** *Ағастарҙы йүшәр ҡаплаған.*

2. Быҫҡаҡ ямғыр. □ Моросящий дождь, изморось. *Был йүшәре лә йонсотто. Яуып тик тора.*

ЙҮШӘҮ (йүшә-) *ҡ. ҡар.* **юшау 1.** *Йүшәп алыу. Йүшәп тороу.*

ЙҮШӘ ЯМҒЫР (Р.: моросящий дождь; И.: drizzle; Т.: yağmur) *и. диал.*

Быҫҡаҡ ямғыр. □ Моросящий дождь, изморось. *Йүшә ямғыр һибәләй. Йүшә ямғыр башланды.*

ЙЫБАЛЫУ (йыбал-) *ҡ. диал. ҡар.* **ығышыу II.** *Йыбалып тороу. Йыбалып йөрөү.* ■ *Йә, һеҙ күп йыбалып йөрөмәгеҙ, беҙ нәмәләрҙе тейәп бөттөк.* Х. Ғәбитов.

ЙЫБАНДЫРЫУ (йыбандыр-) *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **йыбаныу I, 1.** *Уҡырға йыбандыра. Барырға йыбандыра.*

ЙЫБАНЫЛЫУ (йыбаныл-) *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **йыбаныу.** ■ *Иртәрәк ҡуҙғалыу ярҙам итте. Саҡ ҡына йыбанылһа, коро ҡул ҡайтылыр ине.* Яр. Вәлиев.

ЙЫБАНЫС (Р.: надоедливый; И.: pestering; boring; Т.: yılışık, usandırıcı) *с. диал.*

Ялҡытҡыс. □ Надоедливый. *Йыбаныс эш.* ■ *[Котлояр:] Көтөү эше бик йыбаныс, файҙаһыҙ бер һөнәр ул.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫБАНЫУ I (йыбан-) (Р.: лениться; И.: be lazy; Т.: tembelleşmek) *ҡ.*

1. *Ниҙер* эшләргә, ҡуҙғалырға ялҡауланыу; иренеү. □ Лениться. *Эшләргә йыбаныу. Яҙырға йыбаныу. Йыбанып эшләү.* ■ *Ниһайәт, милиционер пәйҙә булды, йыбанып ҡына ҡулын козырёк тәңгәленә тейҙерҙе лә йөҙөнә уҫаллыҡ сығарып һораны.* Т. Ғиниәтуллин. *Бикле эшелон, артыҡ ашыҡмай ҙа, бигүк йыбанмай ҙа, көнбайышҡа, яуыздар ояһы Германияға табан тәгәрәй.* Ә. Хәкимов. ● *Йыбанмаған оҫта булған, оялмаған күрәҙә булған.* Мәҡәл.

2. *диал.* Мыштырлау, ығышыу. □ Возиться, копошиться. *Йыбанып йөрөү.* ■ *Фәрит ырҙын табағына ҡайтып етеүен тоймай ҙа ҡалды. Ул унда был юлы ла артыҡ йыбанманы, Ғаяз ҡайтып еткәнсе, тағы элеваторға табан юл тотто.* Ф. Әсәнов.

3. *диал.* Ялҡыу. □ Уставать. *Көтөп ултырып йыбанып китеү.* ■ *Был тиклем ҡыҫҡа ҡалып ултырып өйрәнмәгән Һыуһылыу әбей улының былай оҙаҡ ултырыуына йыбанып бөттө.* Н. Мусин. *Улар [Айбулат менән Асатай] таң ҡараңғылығынан бирле юлда йылҡы ҡыуып килә-килә арып та, йыбанып та, асығып та бөткәндәр.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫБАНЫУ II (йыбан-) *ҡ. диал.* **йыуаныу.** *Киләсәккә өмөттәрен уйлап ҡына йыбана ала егет.*

ЙЫБАП ТӨШӨҮ (йыбап төш-) *ҡ. диал. ҡар.* **күңелһеҙләнеү.** *Ҡатын был хәбәрҙән йыбап төштө.*

ЙЫБАТЫУ (йыбат-) II *ҡ. диал.* **йыуатыу.** *Илама, тип йыбатты һеңлеһен Зәбирә.*

ЙЫБАУ (Р.: медлительный; И.: sluggish; Т.: yavaş) *с. диал.*

Ығыш, мыштыр. □ Медлительный, неповоротливый. *Йыбау кеше. Йыбау булыу.*

ЙЫБЫР *с. диал. ҡар.* **йыбытҡы 1.** *Йыбыр ҡыҙ.*

ЙЫБЫР-ЙЫБЫР (Р.: подражание шевелению; И.: imitation of mincing; Т.: hışır hışır) *окш.*

Ваҡ-ваҡ ҡына баҫып атлағанды йәки саҡ ҡына ҡыбырлап торған хәрәкәтте белдергән һүҙ. □ Подражание шевелению, мелким движениям. *Йыбыр-йыбыр атлау. Йыбыр-йыбыр килеү.*

ЙЫБЫРЛАТЫУ (йыбырлат-) (Р.: шевелить; И.: mince; Т.: hışırdatmak, kıpırdatmak) *ҡ.*

Йыбыр-йыбыр иттереү, йыбыр-йыбыр килтереү. □ Семенить, делать частые, мелкие движения. *Йыбырлатып баҫыу. Бармаҡты йыбырлатыу.* ■ *Машинист уға [Айсыуаҡҡа] ҡарап баш ҡаҡты, тәҙрә тупһаһынан бармаҡтарын йыбырлатҡан кеше булды.* Д. Исламов. *Ишбикә әбей үҙенең сынаяғында йөҙөп йөрөгән сәй шамаһын усына алды, ирендәрен йыбырлатып ҡына теләк теләп, күкрәксәһенә тыҡты.* З. Ураҡсин. *Үмәр ҡарт улының был ҡыйыу һүҙҙәренә иҫе китте. Аптырауынан һүҙен әйтә алмай,*

Әхмәҙигә ҡарап, ирендәрен бер талай йыбырлатып торҙо. Һ. Дәүләтшина.

ЙЫБЫРЛАУ (йыбырла-) (Р.: шевелиться; И.: stir; Т.: kıpırdamak) *к.*

Йыбыр-йыбыр итеү, йыбыр-йыбыр килеү. □ Шевелиться. *Йыбырлап атлау. Арҡала әллә нимә йыбырлай.* ■ *Ул [Гөлйөҙөм], шулай тыныс ҡына ятып, буйындағы бер туҡтауһыҙ йыбырлап, туҡтауһыҙ әйләнгән йән эйәһенең улмы. ҡыҙмы булыуы тураһында уйланды.* Һ. Дәүләтшина. *Шул саҡ Мәҙинәнең ҡуйынында нимәлер йыбырланы.* Т. Ғарипова. *Боҙҙан йыбырлап бара торғас, табан да ауырта башланы.* Ф. Янышев.

ЙЫБЫРЛАШЫУ (йыбырлаш-) *к. урт. ҡар.* **йыбырлау**. *взаимн. от* **йыбырлау**. *Таракандар йыбырлаша.* ■ *Ғүмерҙәре баҡый үҙҙәренең йәшәү төйәге менән мәшғүл, татыу бер ғаилә булып көн күргән егәрле йән эйәләре йыртҡыс туҙҙырып киткән «тирмәләр»ен зыу-ғәләмәт килеп, йыбырлашып, ғәжәйеп берҙәмлек һәм дәрт менән тәртипкә килтереп маташалар.* Н. Мусин.

ЙЫБЫТҠЫ (Р.: медлительный; И.: sluggish; Т.: yavaş) *с.*

1. Эшкә йомшаҡ; эшлекһеҙ. □ Медлительный, нерасторопный. *Йыбытҡы кеше. Йыбытҡы булыу.* ■ *[Фазыл:] Һөйлә, Мырҙабай ағай, тыңлама шул йыбытҡыны!* Ә. Хәкимов. *[Тәнкәбикә:] Ул йыбытҡының ауыҙынан һүҙе сыҡҡансы, ҡош бала сығарып өлгөрөр.* М. Кәрим.

2. Ҡулынан йүнле эш килмәгән, йыйнаҡ булмаған, таҙалыҡ тотмаған. □ Неряшливый, неаккуратный. ■ *[Йомай:] Алла бирһә, был килене беҙҙән уңырбыҙ, ахыры. Өлкән килен кеүек белдекһеҙ, йыбытҡы булмаҫҡа оҡшай.* Һ. Дәүләтшина. ● *Ҡатының йыбытҡы булһа, әнә-ебеңде үҙең тоторһоң.* Мәҡәл.

3. Һыуып тәмһеҙләнгән, тәме киткән *(ашҡа ҡарата).* □ Становиться невкусным; терять вкус. *Аш йыбытҡыға әйләнгән. Йыбытҡы аш. Ашы йыбытҡы булған.*

ЙЫВАНАЙ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуының араһы. □ Родовое подразделение башкир-усерганцев.

ЙЫҒАС *и. иҫк. ҡар.* **ағас**. ■ *Хикәйәт ҡылалар: император Александр Икенсенең жәүҙәһе Мария Александровна үҙенең Ҡырымдағы баҡсаһының йығастарын килтертеп ҡуйған тип.* М. Өмөтбаев.

ЙЫҒЫЛЫУ (йығыл-) (Р.: падать; И.: fall; Т.: düşmek) *к.*

1. Торған ерҙән ауыу; ҡолау. □ Падать, валиться. // Падение. *Арманһыҙ булып йығылыу. Боҙға тайып йығылыу. Артҡа йығылыу. Һөрлөгөп йығылыу. Эләгеп йығылыу.* ■ *Тамырынан умырылып йығылған ҡарағай олонона кешеләр ултырғас та, эт ныҡлап тынысланa алманы.* Я. Хамматов. *Ул [Сабиров] ҡапыл йығылған булды, бер нисә аҙым ситкә шыуышып һәм бөтә көсө менән һыу ыңғайына имгәкләне.* И. Абдуллин. *Йәүҙәттең өләсәһе, боҙлауыҡҡа йығылып, бер юлы ике ҡабырғаһын һындырҙы.* Р. Ғабдрахманов. ● *Артыңда ни барын белмәһәң, тотолорһоң, алдыңда ни барын белмәһәң, йығылырһың.* Мәҡәл. *Йығылған ағасҡа балта менән сабыусы күп була.* Мәҡәл. *Арғымаҡ йығылһа, алға йығылыр.* Мәҡәл. *Үҙе йығылған иламаҫ.* Әйтем. *Һарыҡтың йығылғаны ла күренмәй, дөйәнең һөрөнгәне лә күренә.* Әйтем.

2. Юғарынан аҫҡа ауыу; ҡолау. □ Падать. // Падение *(с высоты). Баҫҡыстан йығылыу. Аттан йығылыу. Йығылып төшөү.* ■ *[Хисами:] Юҡ, иптәшкәй, Әкрәм, улай тимә: аттан ҡолап үлмәҫһең, ишәктән йығылыуҙан һаҡлан, тигәндәр.* А. Таһиров. ● *Йығылһаң, бейек ағастан йығыл.* Мәҡәл. *Мин-минлеккә таянған – бейек тауҙан йығылған.* Мәҡәл. *Юғарынан йығылған ҡаты төшөр.* Мәҡәл.

3. *күсм.* Эш, тормошта бәләгә, ауыр хәлгә ҡалыу. □ Падать. ■ *[Сәжиҙә:] Был нимә? Йығылғанды туҡмаумы, әллә үҙеңде үҙең алдаумы?* М. Тажи. ● *Йығылғанға — йоҙроҡ.* Мәҡәл.

4. *күсм.* Һәләк булыу, үлеү. □ Пасть. *Яуҙа йығылыу.* ■ *Шаулап мылтыҡ, пулемёт тауыштары ҡутәрелделәр, ямғыр кеүек беҙҙең баш осонан үтә, яуа башланылар. Бик күп һалдаттар йығылдылар.* Д. Юл-

тый. *[Бикән:] Салауат үҙе Михельсондың Калун тигән янаралы менән ахыр сигенә ҡәҙәре арыҫландай һуғышты. Ахырҙа, аты йығылып, йәйәү ҡалғас, урман араһында тотоп алдылар.* Б. Бикбай. *Намыҫ өсөн ҙур һуғышта ауғандарға, еңеү өсөн ғәзиз башын һалғандарға, Ватан өсөн яуҙа йығылып ҡалғандарға мәңгелек дан һөйләп тора Башҡортостан.* Р. Ниғмәти.

5. Киҫкен хәрәкәт менән ҡапыл ултырыу, ятыу һ. б. □ Падать. // Падение. *Ҡосаҡҡа йығылыу. Урынға йығылыу.* ■ *Бара торғас, был һунарсы асығып, бөтөнләй хәлдән тайып, юл буйына килеп йығылды, ти.* Әкиәттән. *Күп уйлап торманы Фәхри, йәтешлерәк урынға барып ҡапыл йығылды ла, күҙҙәрен акайтып, ауыҙын күбекләндереп, барлыҡ тауышына аҡыра башланы.* Б. Бикбай. *Бала аяғын алмаш-тилмәш саҡ ҡына шыуҙырҙы ла лап итеп йығылып барып төштө.* М. Тажи. *Ҡарҙа тайып йығылмаһам ярар ине тигән төҫлө атлай [Сабира].* Ғ. Хәйри.

6. *күсм.* Ауыр хәлдә ҡалып, сараһыҙ булып *кемгәлер* һыйыныу. □ Упасть в ноги *кому.* ■ *Атайың икебеҙҙе лә эт һыйыбыҙҙы килтереп тукмаһа, ил өҫтөндәге оятҡан ҡайҙа барып йығылырбыҙ?* Һ. Дәүләтшина. *[Маһинур:] Эй, Шәрғиәкәйем, ҡасыр инем дә бит, юлдарым бикле шул! Бала менән ҡайҙа барып йығылайым?* Ә. Хәкимов.

7. Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, эш-хәрәкәттең бөтә күңелдән ихлас эшләнгәнен белдерә. □ В форме деепричастия на *-п* выступает в функции вспомогательного глагола и выражает высшую степень проявления действия. *Йығылып эҫеү. Йығылып китеп маҡтау. Эшкә йығылып ятыу.* ■ *Айыу баҡсаға инеп, йығылып солоҡ балы ашарға йәбешкән.* Әкиәттән.

♦ **Аяҡҡа йығылыу** инәлеп, ялбарып мөрәжәғәт итеү. □ Падать (упасть) к ногам (на колени). ■ *Аллаярҙың аяғына йығылырға әҙер торған наҙан Мөхәмәҙғәлене Йәмилә нисек ярата алды икән?* Ф. Иҫәнғолов. **Аяҡтан йығылыу** 1) арып, яфа сиген, арманһыҙ булыу. □ Валиться (падать) с ног. *Бесән сабып, аяҡтан йығылдым;* 2) ауырып, түшәккә ятыу. □ Заболеть. ■ *[Мәҙинәнең] апаһы, ниндәйҙер алама сиргә тарып, аяҡтан йығыла.* Ә. Хәкимов. **Түшәккә йығылыу** ныҡ ауырып китеү. □ Заболеть. ■ *Балаларҙың атаһы түшәккә йығылған.* Әкиәттән.

ЙЫҒЫЛЫШЫУ (йығылыш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йығылыу 1—8.** *взаимн. от* **йығылыу 1—8.** *Йығылышып ятыу. Йығылышып бөтөү. Ағастар дауылдан йығылышҡан.* ■ *Әй, ел сыҡты, тауҙа ағастар ауа башланы. Урамда балалар йығылышып ятты хатта.* Ф. Нәҙершина.

ЙЫҒЫТЫУ (йығыт-) (Р.: валить; И.: bring down; Т.: yığmak) *ҡ. диал.*

Йығыу, ҡолатыу. □ Валить, сваливать. // Сваливание. *Йығыта төртөү. Бәреп йығытыу.* ■ *[Сура батыр] тоҫҡап атһа, яҙлыҡмаҫ, мәргәнлектә бер ине; билғау тотһа, йығытмаҫ, батырлыкта бер ине!* С. Мифтахов.

ЙЫҒЫУ (йыҡ-) (Р.: валить; И.: bring down; Т.: yığmak) *ҡ.*

1. Торған ерҙән ауҙарыу; ҡолатыу. □ Валить, сваливать, сбивать. *Ағасты йығыу. Этеп йығыу. Аяҡтан йығыу. Төртөп йығыу.* ■ *Фатима ҡапыл уның алҡымынан һығып алып, ергә йыҡты ла аяуһыҙ быуа башланы.* Б. Бикбай. *Ирек дошмандарын еңер өсөн, ергә йығыр өсөн йөҙ түбән, — һәр бер һүҙем, бомба итеп, мин ырғытам шулар өҫтөнә.* Х. Кәрим. *Атаһы болан балаларын аңдып ятып Урал ташынан, ҙур суҡмары менән һуғып йығып, елкәһенә һалып ташыған.* Б. Вәлид. *Ҡышҡы төн еле, көйөҫ-көйөҫ килеп, үҙенең бөтә көсө менән, үҙҙәре саҡ ҡына торған өйҙәр өҫтөнә ҡолап, өйҙәрҙе йыға яҙа, тәҙрәләргә таянып тишә яҙа.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Илле итәктән алды, алтмыш аяҡтан алды, етмеш йүгән һалды, һикһән һикегә йыҡты, туҡһан туңҡайтып һалды, йөҙ өҙөп алды.* Мәҡәл.

2. Көрәшеп еңеү. □ Побороть; валить с ног. *Батырҙы йығыу. Көрәшеп йығыу.* ■ *Йыһаннур Сәреүҙе бер һуғыуҙа ҡалҡып тормаҫлыҡ итеп йығып һалып ҡуйҙы.* Т. Хәйбуллин. *Көрәшсе Фәхри үҙеңдән йәш кешене лә көс һалмайынса йығып булмағанлығын яҡшы белә.* Б. Бикбай. *Мөбәрәк рәттән биш-алты көрәшсене алып ата, хатта Петербургтан килгән ике*

күрәшсене лә бер-бер артлы йыға. Ә. Сөләймәнов. ● *Аҡыллы уйлағансы, тиле һуғып йыҡҡан.* Мәҡәл. *Беләге бар берҙе йығыр, белеме бар меңде йығыр.* Мәҡәл. *Майҙанда йыҡҡан батырҙан яуҙа йыҡҡан батыр оло.* Мәҡәл.

3. Өҫтөндә тотмай төшөрөү, ауҙарыу *(атҡа ҡарата).* □ Сбрасывать *(о лошади).* ■ *Күрән ат өҫтөндә малай тотмай, йыға ла китә.* Д. Юлтый. ● *Нәфсенең атын һимертмә, меңгәндә үҙеңде йығыр.* Мәҡәл.

4. Күпләп ауҙарыу, ҡырҡыу, сабыу *(үҫеп ултырған нәмәләрҙе).* □ Валить, повалить (например, *лес, дерево*). *Ағас йығыу.* ■ *Аҡбулат ҡарт ғүмер буйы ҡолға ҡырҡҡан да ҡыуғын ҡыуған, ҡарағай йыҡҡан да тыранса ярған, туҙ һыҙырған да дегет яҡҡан, ерек ҡырҡҡан да күмер үртәгән.* Әкиәттән.

♦ **Аяҡтан йығыу** ауырытып йәки ҡайғыртып хәлде алыу. □ Валить с ног *(о болезни, горе).* ■ *Яҙғы һалҡын һыуыҡтан тейгән ауырыу уны [Польцовты] аяҡтан йыҡты һәм ул оҙаҡ йәшәй алманы.* Я. Хамматов. *[Аҡйегет:] Ағайымдың ҡайғыһы мине аяҡтан йыға, әсәй.* М. Кәрим. **Һүҙен** *(йәки* **һүҙҙе)** **йыҡмау** кешенең һүҙен кире ҡаҡмау, риза булыу, һүҙен юҡҡа сығармау. □ Соглашаться; не отказать. ■ *Ата һүҙен тотмаған, әсә һүҙен йыҡмаған яуға сабыр ир булмаҫ.* Ҡобайырҙан. *Ҡунаҡтар хужаның һүҙен йыҡманылар.* М. Кәрим. *Бригадала уның [Һөйөндөктөң] һүҙен йығырға бирәү ҙә батырсылыҡ итмәй хатта.* З. Биишева. ● *Егет һүҙен егет йыҡмаҫ.* Мәҡәл.

ЙЫҒЫШЫУ (йығыш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йығыу.** *взаимн. от* **йығыу.** *Йыла йығышыу. Атты йығышыу.* ■ *[Аҙнаев] яңы килгән ҡатын-ҡыҙҙың барлыҡ бөтәк-сатаҡты, бүрәнәгә эшкинмәгән ағастарҙы үртәүен, ә ҡайһы берәүҙәренең ирҙәргә ағас йығышып йөрөүен күрҙе лә бында кемдең бригадир икәнен һораны.* Н. Мусин.

ЙЫЗЛАТЫУ (йызлат-) *ҡ. һөйл. йөкм. ҡар.* **йызлау.** *понуд. от* **йызлау.** *Күҙҙәрҙе йызлатыу.* ■ *Ут күҙҙәрен йызлатып, ул [бесәй] ҡарап алды һаҡ ҡына.* А. Игебаев.

ЙЫЗЛАУ (йызла-) (Р.: блестеть; И.: glitter; Т.: parlamak) *ҡ. һөйл.*

Осҡон сәскән кеүек йылтырап тороу *(күҙгә ҡарата).* □ Блестеть, сверкать, гореть *(о глазах). Күҙҙәре йызлай.* ■ *Уның [Барый ҡарттың] ялбыр ҡаштары артында йызлап торған теремек күҙҙәре, мыйығы аҫтына йәшеренгән йылмайыуы әллә ҡайҙан: «Беҙ — мут кешенеке!» — тип ҡысҡырып торғандай.* М. Ямалетдинов. *[Рәфҡәт:] Боролһам, Хәзирә мөйөшкә баҫҡан булған, күҙҙәре генә йызлап тора.* Ғ. Хисамов.

ЙЫЗРАЙТЫУ (йызрайт-) *ҡ. ҡар.* **бәзрәйтеү**. *Күҙен йызрайтҡан.*

ЙЫЗРАЙЫУ (йызрай-) *ҡ. ҡар.* **бәзрәйеү**. *Йызрайып ҡарап тора.*

ЙЫЗЫҠАЙ (Р.: коптилка; И.: (primitive) oil lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. *Йызыҡай яндырыу.*

ЙЫЙҒАС *и. иҫк. кит. ҡар.* **ағас.** *Йыйғас ултыртыу.*

ЙЫЙҒЫС I (Р.: накопитель; И.: storage device; Т.: istif edici alet) *и.*

Усмала, ҡырҙа ятҡан бесән, һаламды йыя торған ҡулайлама. □ Накопитель, копнитель *(о машинах, приспособлениях). Бесән йыйғыс. Һалам йыйғыс.* ■ *Хәҙер эштәре бөткән сәскестәр, тырмалар — бөтә ҡорамалдар иң төптә, уларға етә елгәргестәр, урғыстар һәм иң алдынғы урында бесән саба торған косилкалар, бесән йыйғыстар, ҡул тырмалары торалар.* Ғ. Дәүләтшин. *[Рәфҡәттең] тағы ла өс һыйыр, бер нисә быҙау, ике бесән сапҡыс, бер йыйғыс, ике-өс һабаны бар.* Ғ. Хисамов.

ЙЫЙҒЫС II *и. диал. ҡар.* **йыйыусы.** ■ *Үҙ апайым белгестер, һөйәк-һаяҡ йыйғыстыр.* Әкиәттән. *[Бизнәкәү] матур итеп биҙәп, ҡош һынына оҡшатып эшләнгән был тәтәйҙе хәйләкәр алама йыйғыстар бер күнәк һөйәккә алмаштырып бирә.* М. Ямалетдинов.

ЙЫЙҘЫРЫУ (йыйҙыр-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йыйыу.** *понуд. от* **йыйыу.** *Иген йыйҙырыу. Бәшмәк йыйҙырыу. Кеше йыйҙырыу.* ■ *[Мәғфурә:] Курәһең, анау йәш муллаһы бер бик ҡәҙерле нәмәләр. Бигерәк шуныһының һүҙен тыңлайҙар. Иртәгә сход та йыйҙырмаҡ булалар, шикелле.* Һ. Дәүләтшина. *Ул [Ризаитдин] Ҡөрьәндең айы-*

рым сүрәләрен ҡыҫҡырып уҡып, амин тот-то ла, мосолмандарҙы ниндәй маҡсат менән йыйҙырыуын ҡыҫҡаса аңлатҡас, беренсе һүҙҙе Аҡмуллаға бирҙе. Я. Хамматов.

ЙЫЙНАҠ (Р.: уютный; И.: comfortable; cosy; Т.: rahat, konforlu) *с.*

1. Бөтә нәмә урын-еренә ҡуйылған, йыйыштырылған; бөхтә. □ Уютный. *Йыйнаҡ өй. Йыйнаҡ итеп йыйыштырыу. Йыйнаҡ тотоу.* ■ *Кескәй генә йыйнаҡ, бөхтә өй, йырлап ултырған йылтыр еҙ самаур, күк буталлы ваҡ ҡына сынаяҡтар, сәскәле батмус Емештең ярһыу йөрәгендә күтәргеһеҙ ҡыуаныс тойғоһо уята.* З. Биишева. *Юлсылар йыйнаҡ ҡына ҡаралдылы йортҡа инделәр.* Б. Дим. *Унан да, бынан да йөнө ҡойолоп, туҙып торған яҫтыҡ, тағы берике мендәр, үҙҙәренең һыйына күрә тәңкәләп-таҫлап йыйнаҡ ҡына итеп өйөп ҡуйылған.* Һ. Дәүләтшина.

2. Бөтә нәмәһе ҡаралған, тәрбиәле булған. □ Уютный. ■ *Бына ҡайҙа ул әкәмәттәр донъяһы! Шул ҡәҙәр матур һәм йыйнаҡ итеп йыйыштырылған зал!* С. Агиш.

3. Эшкә, донъя ҡарауға тәрбиәле; бөхтә. □ Собранный, опрятный, аккуратный. *Йыйнаҡ ҡатын. Йыйнаҡ йөрөү.* ■ *Һәр ваҡытта йыйнаҡ, таҙа, ыҡсым тип танылған был әбейҙең былай туҙынып китеүе Гөлйөҙөмгә бик йәл тойолдо.* Һ. Дәүләтшина. ● *Йыйнаҡ бул, йыйнаҡлы булһаң, тыйнаҡлы булырһың.* Мәҡәл.

4. Кәрәге генә йыйып тупланған; күләме, эстәлеге яғынан ҡыҫҡа, тарау түгел; ыҡсым. □ Стройный; лаконичный, краткий. *Йыйнаҡ әҫәр.* ■ *Йыйнаҡ композицияға ирешеү яҙыусынан ҙур әҙәби оҫталыҡ һәм зауыҡ талап итә.* К. Әхмәтйәнов.

5. Тәртипле, әҙәпле. □ Порядочный. *Фатима йәш, матур, йыйнаҡ бисә, аҙып-туҙып йөрөгәне юк.* Б. Бикбай. ● *Ҡыҙ тыйнаҡ булһа, егет йыйнаҡ була.* Мәҡәл.

ЙЫЙНАҠЛАНА ТӨШӨҮ (йыйнаҡлана төш-) (Р.: стать аккуратней; И.: grow more accurate; Т.: daha özenli olmak) *ҡ.*

1. Йыйнаҡҡа (3) әйләнеү *(ниндәйҙер кимәлдә).* □ Собраться, стать аккуратней. ■ *Ғәҙел, талапсан уҡытыусы янында бала ла йыйнаҡлана, тыйнаҡлана төшә, дәрескә иғтибары арта.* Г. Юнысова.

2. Йыйнаҡҡа (4), ыҡсымға әйләнеү. □ Стать короче, лаконичнее *(о произведении).* ■ *Һәр хәлдә, роман йыйнаҡлана, камиллаша төштө.* Й. Солтанов. *Әҫәрҙе уҡып сыҡҡас, аптырап ҡалдым: теге саҡта тәнҡит һүҙҙәренә риза булмаған һымаҡ булһа ла, автор уны өр-яңынан ныҡлап ҡарап сыҡҡан, күп урындарын яңынан яҙған, байтаҡ үҙгәрештәр индергән, әҫәр йыйнаҡлана төшкән.* Н. Мусин.

ЙЫЙНАҠЛАНЫП КИТЕҮ (йыйнаҡланып кит-) (Р.: стать аккуратным; И.: become accurate; Т.: özenli olmak) *ҡ.*

Бөхтәгә әйләнеү. □ Стать аккуратным, опрятным. *Уҡыусы йыйнаҡланып китте.*

ЙЫЙНАҠЛАНЫП ҠАЛЫУ (йыйнаҡланып ҡал-) (Р.: стать уютным; И.: grow accurate; Т.: konforlu olmak) *ҡ.*

Йыйыштырғандан һуң бөхтәгә әйләнеү. □ Стать уютным, опрятным, прибранным. *Бүлмә йыйнаҡланып ҡалды.*

ЙЫЙНАҠЛАНЫУ (йыйнаҡлан-) (Р.: приводить в порядок; И.: put in order; Т.: düzen vermek) *ҡ.*

1. Йыйнаҡҡа (1) әйләнеү, йыйнаҡ хәлгә килеү. □ Быть убранным, прибранным. ■ *Һәр төрлө нәмәләр менән биҙәлгән, йыйнаҡланған карауат өҫтөнә ҡырынайған килеш ултырған, аяҡтарын һәлберәтеп, Сәхибәнең күҙҙәрен йәлеп итергә тырышҡан Рауза шаянлана.* Ғ. Хәйри. *Таҫтамалды карауат башына элдем. Бүлмә йыйнаҡланды.* Д. Юлтый. *Армияға китер ваҡытын Сәлим түҙемһеҙләнеп көттө. Беренсенән, ана шул энә күҙенән үтерҙәй булып йыйнаҡланыу оҡшай.* Т. Ғиниәтуллин.

2. Тәртипкә килеү. □ Быть упорядоченным. ■ *Тарҡауланған уйҙарым йыйнаҡлана төштө.* Н. Мусин.

ЙЫЙНАҠЛАУ (йыйнаҡла-) (Р.: убирать; И.: tidy up; Т.: toplamak) *ҡ.*

1. Йыйнаҡ, бөхтә хәлгә килтереү. □ Убирать, прибирать, привести в порядок. *Бүлмәне йыйнаҡлау.* ■ *[Әлфиә Рахимовна] ҡалын ҡара сәс толомдарын, бейек итеп йыйнаҡлап, түбәһенә өйөп ҡуйған.* Д. Бүләков.

2. Тәртипкә килтереү. □ Упорядочить, регулировать, наладить, привести в порядок. ■ *«Башҡорт әҙәбиәте тарихы» серияһының алты томлығы яҙылып бөттө. Уны бер аҙ йыйнаҡлап, урыҫ телендә өс томлыҡ итеп нәшриәткә тапшырҙыҡ.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫЙНАҠЛЫҠ (йыйнаҡлығы) (Р.: уют; И.: comfort; Т.: rahatlık) *и.*

1. Бөтә нәмә урын-еренә ҡуйылған, йыйыштырылған күренеш; бөхтәлек. □ Уют. *Өйҙөң йыйнаҡлығы.* ■ *Баш яҡта күпереп ятҡан аҡ мендәрҙәр һалынған койкалар оҙон, яҡты казармаға тағы ла бер йыйнаҡлыҡ, бөхтәлек, матурлыҡ бирип торалар.* Н. Ҡәрип. *Нәғимов .. бындағы кеүек йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡты күргәне юҡ ине.* А. Карнай. *Янып-ян янмай улар [электр лампалары], әммә барыбер шөкәтһеҙ бинаға нин-дәйҙер йыйнаҡлыҡ бирип тора.* Ә. Хәкимов.

2. Эшкә, донъя ҡарауға таҙа, бөхтә булыу сифаты; бөхтәлек. □ Аккуратность, опрятность. *Йыйнаҡлыҡ күрһәтеү.* ■ *Һалдат — һалдат инде, йыйнаҡлыҡҡа, ыҡсымлыҡҡа өйрәнгән.* Р. Низамов. *Әле баш врач секретаршаһының йөҙ-ҡиәфәтен, өҫ-башын ентекләп тикшереп сыҡты ла уның йыйнаҡлығына, бөхтәлегенә тел тейҙерерлек түгел икәнлегенә ышанды.* Ә. Хәкимов.

3. Кәрәге генә йыйып тупланған, күләме, эстәлеге һ. б. яғынан тарау булмаған хәл; ыҡсымлыҡ. □ Краткость, лаконичность. *Әҫәрҙең композиция яғынан йыйнаҡлығы.* ■ *Художестволы әҫәрҙең композицияһына бирелә торған иң универсаль баһа — йыйнаҡлыҡ.* К. Әхмәтйәнов. *Шиғри әҫәрҙәрҙең йыйнаҡлығы теҙмә әҫәрҙәрҙең төп законы булған әлеге ритм менән дә аңлатыла.* К. Әхмәтйәнов. *Өлкән йәштәге герой характерына эске бөтөнлөк, йыйнаҡлыҡ хас.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

ЙЫЙНАҠСЫЛ (Р.: бережливый; И.: thrifty; Т.: tutumlu) *с.*

Бәрәкәтһеҙләмәй, йыйып тота белгән, һаҡсыл. □ Бережливый. *Йыйнаҡсыл кеше. Йыйнаҡсыл ҡатын. Йыйнаҡсыл булыу.* ■ *Ғәбдеян йыйнаҡсыл кеше ине.* Н. Мусин.

ЙЫЙНАҠҺЫҘ (Р.: неаккуратный; И.: untidy; Т.: düzensiz, pasaklı) *с.*

1. Бөтә нәмә урын-еренә ҡуйылмаған; йыйыштырылмаған; бола. □ Неаккуратный, неубранный, неуютный. ■ *[Хөснулланың] ҡараш ирекһеҙҙән йыйнаҡһыҙ бүлмәне байҡап уҙҙы, өҫтәлдә тұҙылып ятҡан ҡағыҙҙарға һирпелде.* Ә. Хәкимов.

2. Эшкә, донъя ҡарауға тәрбиәһеҙ. □ Неаккуратный, неряшливый. *Йыйнаҡһыҙ уҡыусы. Йыйнаҡһыҙ булыу.*

ЙЫЙНАЛА ТОРОУ (йыйнала тор-) (Р.: собираться; И.: gather; Т.: toplanmak) *ҡ.*

Бер урынға йыйыла, туплана тороу. □ Собираться, скапливаться. *Халыҡ бер урынға йыйнала торҙо.* ■ *[Хөкүмәт] йорт һәм йән башынан йыйнала торған налог урынына тоҙ сығарыу эшен ҡаҙнаға алып, уны ҡыйбат хаҡҡа (бутон 35 тингә) һатырға уйланы.* Картотека фондынан.

ЙЫЙНАЛЫП БӨТӨҮ (йыйналып бөт-) (Р.: собраться; И.: have gathered together; Т.: toplanmak) *ҡ.*

Бер ергә тупланып бөтөү. □ Собраться, скопиться. ■ *Сәғәт эсендә тейешле кешеләр йыйналып бөттө.* Я. Хамматов. *Һалдаттар сәғәт алтыла ғына казармаға йыйналып бөттөләр.* Д. Юлтый.

ЙЫЙНАЛЫП ЯТЫУ (йыйналып ят-) (Р.: скапливаться; И.: gather (of water); Т.: toplanmak) *ҡ.*

Бер урында йыйылып, эркелеп ятыу *(һыу хаҡында).* □ Скапливаться, собираться (например, *о воде*). *Сокорҙа һыу йыйналып ята.*

ЙЫЙНАЛЫУ (йыйнал-) *ҡ.*

1. *ҡар.* **йыйылыу 2—4.** *Йыйналып ятҡан һыу. Бер урынға йыйналыу.* ■ *Тайга юлы ҡәһәрле юл ул. Аҙ ғына ямғыр булһа ла, кеше йөрөй алмаҫлыҡ һаҙлыҡҡа әүерелә. Ә хәҙер бөтә күҙ буйы йыйналған бысраҡ иҙелде.* Б. Дим.

2. *ҡар.* **йыйыныу**. *Ҡайтырға йыйналыу.* ■ *[Ҡыҙ-ҡыртындар] ағас ситәктәрен беләгенә элеп һауырға йыйналалар.* Т. Хәйбуллин. *Яңы сәскә атырға йыйналған гөл үҫентеһе кеүек йәш ҡыҙҙы һабан өҫтөндә күҙ алдына килтереүе еңел түгел.* Ә. Вәли. *[Салауат:] Эй, Ғариф, барлыҡ нәмәләрҙе йыйнағыҙ! Хәҙер күсәбеҙ. Айҙар ағай, һин*

штабтағыларға әмер бир, хәҙер йыйнал-һындар. Б. Бикбай.

ЙЫЙНАУ (йыйна-) *к. диал. кар.* **йыйыу**. ■ *Шүлгән йүнгә килмәгән, ни эшләргә белмәгән, үҙ яғында ҡалғандың барыһын бергә йыйнаған.* «Урал батыр». *[Айбикә:] Бына беҙҙең колхоздағы бисәләр барлығы 873 һумлыҡ аҡса һәм бөтән көмөш нәмәләр йыйнап бирҙеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Йылғыр һәм уҫалыраҡ баҫҡаҡтар, яһаҡ йыйнап, илде йылға бер генә тапҡыр түгел, икешәр, хатта өсәр тапҡыр әйләнеп сығалар.* К. Мәргән. *[Юлай:] Бола бик көсәйеп китһәс кенә, халыҡты йыйнап ошо урында тороп эшкә керешермен.* Б. Бикбай. ● *Күп йыйнап зая иткәнсе, аҙ йыйнап мая ҡуй.* Мәҡәл. *Ҡыш аҙығын йәй йыйна.* Мәҡәл.

ЙЫЙНАУЛАУ (йыйнаула-) *к. кар.* **йыйнаулашыу**. ■ *[Коломбәт:] Беҙ үҙ волосыбыҙҙа йыйнаулап кәңәшләштек.* Ғ. Хөсәйенов. *Суфияны йыйнаулап оҙаттыҡ та, машина эргәһенә килдек.* Ғ. Ғүмәр. *Тәфтиләү түрә йыйнаулап та, иләүләп тә һөйләште.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫЙНАУЛАШЫУ (йыйнаулаш-) (Р.: собираться гурьбой; И.: gather in a crowd; Т.: toplanmak) *к.*

Күмәкләп бергә тупланыу; йыйнаулау. □ Собираться гурьбой; скапливаться. *Йыйнаулашып барыу.* ■ *Эй, ҡыҙ сакта уҡый торғайныҡ та ул йыйнаулашып көйләп. Хатта «Йософ китабы»нан фалдар аса торғайныҡ.* Экспедиция материалдарынан. *Күрше ауылдарға йыйнаулашып барып, клубтарында бейеп ҡайтырға ла иренмәй торғайны улар [Күкҡүҙ егеттәре].* С. Поварисов. *Бер нисә урында усаҡтар яна, кешеләр төркөм-төркөм йыйнаулашып һөйләшеп ултыралар, ҡайһы берәүҙәре тирмә ҡороп уҡ ебәргән.* Н. Мусин.

ЙЫЙНАШТЫРЫУ (йыйнаштыр-) (Р.: накапливать; И.: accumulate; Т.: biriktirmek) *к.*

Ваҡыты-ваҡыты менән йыйыу, туплау. □ Накапливать, копить; собирать *(время от времени).* ■ *[Айбикәнең] түшенә, әсәһенең Айбикәгә тип, ҡыҙының ҡара йәшенән бирле йыйнаштырып яһаған һаҡалын һалындырҙылар.* Һ. Дәүләтшина. *[Кинйә] тәүге дәрестәр өсөн ярап ҡалыр әле тип, был барыуында, үҙендә барынан йыйнаштырып, байтаҡ ҡына китаптар илткәйне.* Ғ. Ибраһимов.

ЙЫЙЫЛА БАРЫУ (йыйыла бар-) (Р.: собираться; И.: gather, crowd; Т.: toplanmak) *к.*

Бер урынға туплана барыу. □ Собираться, скапливаться; накапливаться. ■ *Йәйләп яуланған еңеүҙәрме, һәр көн йыйыла барған тәжрибәме, әллә тыуған яҡҡа ҡайтыу теләгеме Айгиздең күңеленә тынғылыҡ бирмәй башлай.* «Башҡортостан», 15 ғинуар 2011.

ЙЫЙЫЛА ТОРОУ (йыйыла тор-) (Р.: собираться; И.: gather, crowd; Т.: toplanmak) *к.*

Бер урынға туплана тороу. □ Собираться. *Халыҡ йыйыла торҙо.*

ЙЫЙЫЛА ТӨШӨҮ (йыйыла төш-) (Р.: собираться (в небольшом количестве); И.: gather; Т.: toplanmak) *к.*

Бер аҙ тупланыу, эркелеү. □ Собираться, скапливаться, накапливаться (в небольшом количестве). *Ҡайын һыуы йыйыла төшкән. Халыҡ кисәгегә ҡарағанда йыйыла төштө.*

ЙЫЙЫЛМА I (Р.: сборный; И.: combined; Т.: toplu) *с.*

1. Төрлө төркөм, команда йәки төрлө урындан йыйылған кешеләрҙән торған. □ Сборный. *Йыйылма төркөм. Илдең йыйылма командаһы.* ■ *Рәсәй йыйылма командаһы, донъя миҙалдар һаны буйынса иң юғары күрһәткескә өлгәшеп, беренсе урынды яуланы.* «Йәшлек», 14 июль 2009.

2. Төрлө төрҙәге нәмәләрҙән, элементтарҙан йыйылған, төҙөлгән. □ Сборный. □ *Йыйылма оркестр. Йыйылма том.*

3. Тейешле белешмәләрҙе бергә туплаған. □ Сводный. *Йыйылма таблица. Йыйылма план. Йыйылма исемлек.* ■ *Йыллыҡ план-графикка ярашлы хәүефле гидротехник ҡоролмалар тикшереләсәк, уларҙың ташҡынды аварияһыҙ үткәреүгә әҙерлеге баһаланасаҡ һәм ташҡынға ҡаршы республика комиссияһына йыйылма мәғлүмәттәр тәҡдим ителәсәк.* «Башҡортостан», 22 февраль 2011.

4. Өлөш-өлөштәрҙән йыйылған. □ Сборный. *Йыйылма тимер-бетон конструкциялар. Йыйылма өй.* ■ *Тағы бер нисә көндән*

бер нисә йыйылма өй һәм палаткалар килтерҙеләр. Д. Исламов.

ЙЫЙЫЛМА II (Р.: сборник; И.: collection; Т.: derleme) *и.*

Бер иш нәмәләрҙе тәртипкә килтереп, йыйып баҫтырған китап; тупланма. □ Собрание, сборник, сводка. ■ *Улар [китаптар] араһында шағирҙар батшаһы тип йөрөтөлгән Әбуабдулла Рудаки, Ғүмәр Хәйәм, Шәмсетдин Хафиз, Әлишер Новаи әҫәрҙәре, Йософ Баласағунлының «Ҡотадғу билиг» йыйылмаһы бар ине.* Ә. Хәкимов. *Унан да һуң шаһит булған изге Ғосман, сифаттарын төшөндөргән изге Ҡөрьән, Алла уға оло диҡҡәтен нык бүлгән — Ҡөрьәндең йыйылмаһын төҙөгән имде.* «Ҡиссаи Йософ». *«Ғаруз» ғәрәпсә шиғри үлсәүҙәр йыйылмаһы тигәнгә тура килә.* К. Әхмәтйәнов.

ЙЫЙЫЛМАЛЫ (Р.: складной; И.: folding; Т.: açılır, portatif) *с.*

Йыйыла һәм таратыла торған. □ Складной. *Йыйылмалы ултырғыс. Йыйылмалы бәке.* ■ *[Рәмзил:] Бына, елкәне лә бар [хәрби кәмәнең], кәрәкһә. Ишкәктәре йыйылмалы.* Д. Бүләков. *Тәкбиров бер инеп, бер сығып байтаҡ йөрөнө лә, Нурияның бөгөн утарҙан сыҡмаҫын аңлағас, йыйылмалы койкаһына менеп ятты.* Н. Мусин.

ЙЫЙЫЛЫУ (йыйыл-)

1. *төш. ҡар.* **йыйыу 1—8.** *страд. от* **йыйыу 1—8.** *Йыйылған бесән. Йыйылған сумаҙан.* ■ *Һәр бер баҫҡаҡ буйҡа йөрөмәй, йыйылған малдан кәрәгенсә умырып ҡала.* К. Мәргән. *Икенсе бригаданың өс-дүрт гектар көнбағышы йыйылмай ҡалды.* Ә. Хәкимов. *Сәмиғ баҡыйҙан йыйылған бесәнде һөйрәткегә тейәй ҙә кәбән төбөнә килтереп ауҙара.* Т. Ғиниәтуллин. ● *Тамсы, йыйылып, күл яһай, тин, йыйылып, һум яһай.* Мәҡәл. *Күп йыйылһа, юҡ табыла.* Мәҡәл. *Хәрәмдән йыйылған мал әрәмгә китер.* Мәҡәл. *Донъя ҡораманан йыйыла.* Мәҡәл. *Мал бөртөкләп йыйыла.* Мәҡәл.

2. Йыйып алыныу *(баҫыуҙағы иген тураһында).* □ Завершить уборку. ■ *Күп тә үтмәне, арыштар ҙа йыйылып бөттө, уның артынан бойҙай бешергә әҙерләнеп ултыра.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Күмәкләп бер ергә килеү; тупланыу. □ Собираться, скапливаться. *Фатирға йыйылыу. Клубка йыйылыу. Бергә йыйылыу. Йыйылып ҡарау.* ■ *Алдан һис ниндәй һөйләшеү булмаһа ла, иртәнге тамаҡты түйҙырыу менән, ғәҙәттә, Ғимран бабайҙарҙың өйөнә эргәһенә йыйылабыҙ.* Н. Мусин. *Сәсәндән һүҙ һөйләтеп, эсер сәйен һыуытып, бар донъяһын онотоп, йыйылып ултырыр карттар бар.* Халыҡ ижадынан. *Ҡыуыш тирәһендә аш-һыу ҡалдыҡтарына ҡара себендәр .. йыйылған.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Балға себен йыйылыр.* Мәҡәл.

4. Күмәкләп берләшеү, йыйналышыу. □ Собираться. ■ *Ҡайһы берәүҙәр, түңәрәктәргә йыйылып баҫҡан урындарында йыр көйөнә сайҡалып йырлайҙар.* Б. Хәсән. *Ул арала тауыштты ишетеп, ишек алдының төрлө яғынан төрлө тауышлы эттәр өрөшөп йыйыла башланылар.* Һ. Дәүләтшина. *Йыйылып һөйләшмәгеҙ, тип, ҡайһыбыҙҙы аттылар. Һалдаттарҙың ҡайһы берен казематҡа яптылар.* Халыҡ ижадынан.

5. Бер урынға тупланыу; эркелеү. □ Собираться, скапливаться. *Соҡорға йыйылған һыу.* ■ *Уйһыу урынға йыйылған күләүеккә салҡан ҡолап төшкән зәңгәр күк тә — Зиннәттең бала сағы!* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡайтып килгәндә, әмәлгә ҡалғандай, урам сатында йыйылып торған һыуҙы аша сығырға тура килде.* Ғ. Ғүмәр. ● *Алтын бөртөкләп йыйыла.* Мәҡәл. *Бал тамсылап йыйыла.* Мәҡәл. *Eләк бөрәмләп йыйыла.* Мәҡәл. *Һыу соҡорға йыйылыр.* Мәҡәл. *Күл тамсынан йыйыла.* Мәҡәл.

6. Береһе өҫтөнә береһе өҫтәлеп артыу, күбәйеү *(төрлө уй-хис, тәжрибә кеүеккә ҡарата).* □ Собираться, скапливаться *(о чувствах, опыте).* ■ *Уның [Ирочканың] эргәһенә килһәң, бөтә тәбиғәтте үҙенә йыйып алған кеүек, иғтибарҙың бөтә нөктәһе шунда йыйыла.* Д. Юлтый.

ЙЫЙЫЛЫУСАН (Р.: имеющий обыкновение собираться; И.: wont to gather; Т.: toplanan) *р.*

Бер урынға туплана, йыйыла торған. □ Имеющий обыкновение собираться. ■ *Ул саҡта [30-сы йылдарҙа] Өфө йәштәре*

Карл Маркс урамындағы «Комсомол йорто» тип аталған бинаға йыйылыусан була. Т. Ғарипова. *Күпер аҫтындағы тәрән генә сыбайға, көн эҫе сакта унда күләгә булған-ғалыр инде, бәрҙеләр йыйылыусан.* Н. Мусин.

ЙЫЙЫЛЫУСАНЛЫҠ (йыйылыусанлығы) (Р.: обыкновение собираться; И.: habit to gather; Т.: toplanılma) *и.*

Йыйылыусан булыу. □ Обыкновение собираться. *Күмәк эшкә дәррәү йыйылыусанлыҡ — ауыл халҡына хас булған күркәм сифат.*

ЙЫЙЫЛЫШ (Р.: собрание; И.: meeting; Т.: toplantı) *и.*

Төрлө мәсьәләне бергәләшеп ҡарау өсөн тупланған күмәк ултырыш. □ Собрание. *Ата-әсәләр йыйылышы. Акционерҙар йыйылышы. Тантаналы йыйылыш. Йыйылыш рәйесе. Йыйылыш сәркәтибе. Йыйылыш ҡарары. Йыйылыштың көн тәртибе. Йыйылыш үҙгәреү.* ■ *Был хәлдең [сәсеүҙең һуҙылыуы] асылы колхоз йыйылышында ғына асыҡланды.* Ф. Иҫәнғолов. *Йыйылышта Сәлимде яҡлап, Шамилды ҡараларға тырышһалар ҙа булдыра алманылар.* Х. Мохтар. *Айбикә шул көндән һуң йыйылыштарҙан ҡалмай башланы.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫЙЫЛЫШЫУ (йыйылыш-) *к. урт. ҡар.* **йыйылыу 2—3.** *взаимн. от* **йыйылыу 2—3.** *Йыйылышып эшләү. Йыйылышып күңел асыу.* ■ *Күп ижтиһад ҡылғандан һуң, йыйылышырға муафаҡ булып, арыҫланды рәйес, ҡапланды сәркәтип итеп һайланылар.* М. Ғафури. *Өй артында йыйылышып, һөйләшеп ултырғанда ла яңы ауылға күсеүселәр исемлегенә яҙылған кешеләргә [Ҡотлояр] күҙҙәрен кертәйтеп, мыҫҡыл итеп көлөп, сәнсеп, төртөп һөйләй.* Һ. Дәүләтшина. *Йыйылышып кәңәшләшкәндәр, күбеһенең иҫенә ата-бабаларының тәмләп һөйләгән ере хәтергә килгән.* «Уҙаҡ-Туҙаҡ – Балабәшнәк ярсығы». *Кистәрен бурҙар, бер урынға йыйылышып, табыш бүлешә.* Р. Өмөтбаев.

ЙЫЙЫМ (Р.: сбор; И.: fund-raising; Т.: para birikimi) *и.*

1. *Ниндәйҙер* кәрәк өсөн халыҡтан йыйылған аҡса. □ Сбор. *Халыҡтан йыйым ойоштороу.* ■ *Ҡайҙа ғына туҡтап, кем менән генә һөйләшмә, бер үк хәлде күрәһең: һәр төрлө һалымдар, йыйымдар халыҡтың үҙәгенә үткән.* Н. Мусин. *[Әлмәт:] Беҙ яһағын да түләйбеҙ, төрлө йыйымын да бирәбеҙ, әммә тамағыбыҙ туҡ.* Б. Бикбай. *[Алдарбай:] Һинең ни шул һаман йыйым мәшәҡәте менән йөрөйһөңдөр инде, Хажибәк ағай.* Н. Мусин.

2. Иген, емеш-еләк, йәшелсә, балдың миҙгелендә йыйылған миҡдары. □ Сбор; взяток. *Арыштың түлайым йыйымы. Балдың йыйымы. Һуңлап алынған йыйым. Оҙайлы йыйым. Һеркәле йыйым.* ■ *Таулы урман зонаһында балдың төп йыйымы боланут менән шыма көпшәнән була.* Г. Байбурин. *Донъя баҙарына арыштың дөйөм йыйымының яртыһы, бойҙайҙың бишенсе өлөшө урыҫ империяһынан килә.* М. Хужин.

3. *ҡар.* **йыйылма II.** ■ *Табу, тыйыу вә аманаттар йыйымы, әхлаҡи ҡанундар һымаҡ, боронғо мифологияла, йәғни риүәйәттәрҙә, хикәйәттәрҙә сағылыш тапҡан.* С. Бәҙретдинов.

ЙЫЙЫМСЫ (Р.: сборщик; И.: collector; Т.: alıcı) *и. тар.*

Халыҡтан аҡса йыйыусы. □ Сборщик *(денег).* ■ *Баш йыйымсы Хажибәк килгәс, аш-һыу әҙерләтеп, Иҫәкәй Өфө кешеләрен үҙенең өйөнә саҡырып алды.* Н. Мусин.

ЙЫЙЫН I (Р.: съезд; И.: congregation; congress; Т.: büyük toplantı) *и.*

1. *тар.* Күмәк ырыуҙың ил, донъя хәлдәрен һөйләшеп, һүҙ, кәңәш беректереү өсөн саҡырған оло йыйылышы *(һый, уйын, бәйге менән үткәрелгән).* □ Съезд *(народа, племени). Йыйын йыйыу. Ырыу йыйыны. Халыҡ йыйыны.* ■ *Оҙаҡ йылдар буйынса Ҡаҙағстанда йәшәп, төрлө йыйындарҙа, һабантуйҙарында һәм байрамдарҙа ҡатнашыусы ҡаҙаҡ аҡындары менән һәр саҡ алышып ныҡ оҫтарған, сиктән тыш оҫта телле, йор һүҙле Мифтахетдин Аҡмулла шундуҡ сығарған шиғырҙарын айырыуса маһирлыҡ менән уҡып, тыңлаусыларҙың һәммәһен үҙ ауыҙына ҡаратты.* Я. Хамматов. *Сәғиҙулла ҡарт, йыйын тарала башлағас, уның [егеттең] янына килде лә үҙенә барып ҡунаҡ булып китеүен һораны.* И. Насыри. *Генерал-*

губернаторҙың оло йыйын тураһындағы әмер-хәбәре .. бик тиҙ арала халыҡҡа барып етте. З. Ураҡсин. ● *Уйында уҙған йыйында уҙыр.* Мәҡәл. *Эт йыйыны төшкә етмәҫ.* Мәҡәл. *Яман ҡатын алһағыҙ, йыйынға инер ул тыумаҫ.* Мәҡәл. *Яманға бирәһең булмаһын: йә түйҙә һорар, йә йыйында.* Мәҡәл.

2. Йәмғәттең *ниндәйҙер* мәсьәләне ҡарау өсөн йыйылған йыйылышы. □ Собрание, съезд. *Йыйын үткәреү.* ■ *Улар [земский, ер бүлеүсе] ауыл йыйынын йыялар ҙа ауыл еренән билдәле бер өлөштөң баярға бүленеп биреләсәген әйтәләр.* Ғ. Хәйри. *Йыйында ла, дөйөм йыйылышта ла, халыҡ йыйылған һәр бер ерҙә лә, Ғимай аты һәр саҡ маҡталған, маҡтау һүҙе яуған ерәнгә.* Х. Ҡунаҡбай.

3. Яҡын-тирә ауылдарҙы, ырыуҙаштарҙы йыйып, һый, уйын, төрлө ярыш менән үткәрә торған йәйге байрам; бәйге. □ Джиин *(народные летние праздники с разными играми, скачками, призами)*, народное гулянье, празднество. *Йыйынға әҙерләнеү. Йыйындарҙа көрәшеп беренселекте алыу.* ■ *[Хәмит:] Хәҙер ауылда яҙғы йыйындар, ҡарға түйҙары булалыр инде.* Н. Ҡәрип. *Майҙы үткәргәс халыҡтар, эш менән июнь етер. Милли байрамдар килерҙәр, бик хозур йыйын етер.* Ш. Бабич. *[Салауат:] Әсәй, сабышыуҙа, көрәшеүҙә, тартышыуҙа мин беренсе бәйгене алдым. Әммә йыйындарҙа, бәйгеләрҙә батыр исемен алыу минең дәртте баҫманы.* Б. Бикбай.

4. *иҫк.* Йәштәр уйыны. □ Посиделки. ■ *Ауылда аулаҡ өйҙәр, йыйындар була. Шунда уйнап йөрөгән саҡта, күңелең төшөп йөрөгән ҡыҙ йылыраҡ һүҙ әйтһә, .. ҡыуана торғайның.* Т. Йәнәби.

5. Саҡырылған ҡунаҡ мәжлесе. □ Пир, званый ужин. ■ *Түй үткәрелгәс, Солтан ҡарт, ике йыйынды бер юлы үткәреүе ауыр, ҡалымы көҙгә ҡалһын, киленде алабыҙ тип ашыҡмайбыҙ, тип әйтеп ебәргәс, былар ҙа риза булғайны.* Һ. Дәүләтшина.

6. *диал. ҡар.* **түй 2.** ● *Түй — йыйын, һый ҙа уйын.* Мәҡәл.

7. *этн.* Ырыу именлеген, быуындар бәйләнешен булдырыуға йүнәлтелгән сара. □ Летний джиин *(мероприятие)* башкирских родов, направленный на обеспечение благополучия, единства, непрерывности поколений. *Ҡайпан йыйыны. Күбәләк ырыуы йыйыны.*

ЙЫЙЫН II (Р.: одни; И.: sundry; Т.: tek, sadece) *билд. а.*

Күп һандағы кешегә йәки нәмәгә ҡарата «теләһә ниндәй, һәр төрлө» тигән мәғәнәлә, һанға һуҡмай, кәмһетеп әйткәндә ҡулланыла. □ Всякие, одно, одна, один, одни. *Йыйын ҡарт-ҡоро. Йыйын бала-саға. Йыйын юҡ-бар. Йыйын эшлекһеҙ.* ■ *[Айҙарҙың әсәһе:] Йөрөйһөгөҙ шунда йыйын йүнһеҙ.* М. Кәрим. *Ғәни .. һис көтмәгәндә генә йыйын юҡ-барҙы һөйләй ҙә куя.* Ә. Бикчәнтәев. ● *Йыйын йондоҙ йыйылһа ла — яҡтылығы айҙай юҡ, ылғы ярлы йыйылһа ла — яңғыҙ өйлө байҙай юҡ.* Мәҡәл. *Йыйын эттең араһында бер эттең ҡойроғо бот араһында.* Мәҡәл.

ЙЫЙЫНА БАШЛАУ (йыйына башла-) (Р.: начать собираться; И.: start gathering; Т.: toparlanmaya başlamak) *ҡ.*

Кәрәк-яраҡтарҙы хәстәрләп, берәй эшкә йәки юлға әҙерләнә башлау. □ Начать собираться, начать укладываться. *Юлға йыйына башлау.* ■ *Былар, Сафияның балаһын алған ҡатын менән ир, [поезддан төшөргә] йыйына башланы.* Т. Ғиниәтуллин. *Ял көнөнә ҡаршы Юнысович тағы һыу буйына йыйына башланы.* Б. Бикбай. *Ауылға ҡуна ҡайтып йөрөүсе колхозсылар ҡайтышты, ә бында ҡалыусылар, ҡайһыны ҡыптыр тунын, ҡайһыны иҫке шинелен һөйрәп, ятырға йыйына башланылар.* Б. Бикбай.

ЙЫЙЫН АЙЫ (Р.: летние месяцы; И.: summer months; Т.: yaz ayları) *и.*

Йәй айҙары. □ Летние месяцы. *досл.* Месяц йыйына. *Йыйын айында өйләнеү.* ■ *Йыйын айында ун бишенсе майҙан ун бишенсе июлгә ҡәҙәр йыйындар үткәрелгән.* Ф. Хисамитдинова.

ЙЫЙЫНА ТОРОУ (йыйына тор-) (Р.: собираться; И.: be about to; Т.: toparlanmak) *ҡ.*

Әҙерләнә тороу, кәрәк-яраҡты әкренләп йыйыу. □ Собираться. *Китергә йыйына тороу.*

ЙЫЙЫН ИТЕ (Р.: мясо, сваренное в первый день свадьбы; И.: ritual meat, item of Bashkir wedding rite; Т.: düğünde pişirilen et) *и. этн.*

Туйҙың тәүге көнөндә бешерелгән ит, аш. □ Мясо, сваренное в первый день свадьбы. *Йыйын ите бешереү. Йыйын ите өләшеү.*

ЙЫЙЫН ЙЫЙЫУ (йыйын йый-) (Р.: созвать собрание; И.: convene an assembly; Т.: toplantı yapmak) *к.*

Ниндәйҙер мәсьәләне хәл итеү өсөн оло йыйылыш ойоштороу. □ Созвать собрание. ■ *Туйҙан элегерәк үткән аҡһаҡалдар йыйынын юҡҡа ғына йыймағайны Бирҙеғол.* Ғ. Ибраһимов. *[Байгилде – Боғараға:] Ҡыштың имен-аман ҡышлаһаҡ, йыйын йыйып, бәйге күреп, бер яҙылып алырбыҙ.* Ә. Хәкимов. *Хан оло йыйын йыйған, халыҡҡа ер йәннәтенә ҡул күтәрмәҫкә әйтеп ҡалдырған икән, ти.* Н. Мусин. *Ике батыр күрешеп, .. еңеү шәрифенә йыйын йыйырға ҡарар ҡылдылар.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫЙЫН ҠОРОУ (йыйын ҡор-) *к. кар.* **йыйын йыйыу**. ■ *Ырыу башлыҡтары, ай һайын тип әйтерлек йыйын ҡороп, кәңәш иттеләр.* К. Мәргән. *Ат еткәнгә ат ебәреп, хат еткәнгә хат ебәреп, олатайым йыйын ҡора.* Т. Йосопов.

ЙЫЙЫНСАҠ (Р.: бережливый; И.: thrifty; Т.: tutumlu) *с.*

Эш, тормошта һәр нәмәне матур итеп, еренә еткереп башҡарыусан; йыйнаҡ, бөхтә. □ Бережливый, опрятный. *Йыйынсаҡ уҡыусы. Йыйынсаҡ булыу.* ■ *Яҡшы ҡатын шул булыр — яҡшы ҡатын йыйынсаҡ, яман ҡатын шул булыр — яман ҡатын түркенсәк.* Ҡобайырҙан.

ЙЫЙЫНТЫ *и. диал. кар.* **йыйынтыҡ II.** ■ *Ҡыштың һуңғы көндәре аҡман-тоҡманда күптәрҙең ундай йыйынтылары ла [әтәмбейҙәре лә] бөттө.* Ғ. Ибраһимов.

ЙЫЙЫНТЫҠ I (йыйынтығы) (Р.: сборник; И.: collection; Т.: dergin) *и.*

1. Бер иш нәмәләрҙе тәртипкә килтереп, йыйып баҫтырған китап. □ Сборник. *Шиғырҙар йыйынтығы. Законлар йыйынтығы. Документтар йыйынтығы. Көнъгеүҙәр йыйынтығы. Йыйынтыҡ сығарыу. Йыйынтыҡ авторы.* ■ *Симпозиумдағы сығыштар, ғәҙәттә, йыйынтыҡ булып баҫылып сыға, [Рафиҡ] аҙаҡ ентекләп танышыр әле.* Л. Яҡшыбаева. *Дүрт юллы йырҙарҙан тупланған һәм беҙгә билдәле булған иң тәүге йыйынтыҡтарҙың береһе Мирсалих Биксурин тарафынан төҙөлгән.* С. Ғәлин. *Йыйынтыҡҡа Әнүәр ағайҙың ошоғаса бер нисә тапҡыр нәшер ителеп, тарих һөйөүселәрҙең өҫтәл китабына әйләнгән ун баҫмаһы, шулай уҡ быға тиклем аҙ билдәле булған документтар ингән.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

2. Бер төрҙәге нәмәләр йыйылған тупланма. □ Собрание. *Файлдар йыйынтығы.*

ЙЫЙЫНТЫҠ II (йыйынтығы) (Р.: запас; И.: stock; Т.: yedek) *и. диал.*

Әҙерләнеп ҡуйылған кәрәк-яраҡ. □ Запас. *Йыйынтығы булмаған.*

ЙЫЙЫНЫП БӨТӨҮ (йыйынып бөт-) (Р.: закончить сборы; И.: finish compiling stocks; Т.: toparlanmak) *к.*

Әҙерләнеп бөтөү, кәрәк-яраҡты хәстәрләүҙе тамамлау. □ Закончить сборы. ■ *[Егеттәр] йыйынып бөткәс, атаһы уларҙы саҡырып ала ла юлда нимәләр осраясағын әйтеп бирә.* Әкиәттән. *Бер нисә көндән ҡапыл ғына ҡала яғына юлланған машина килеп сыҡты ла, ике балаһын ашыҡтырып юлға төйнәй башланы һәм, йыйынып бөткәс, аҡсаға тип күршеһенә йүгерҙе.* «Ағиҙел», № 2, 2012.

ЙЫЙЫНЫП ҠУЙЫУ (йыйынып ҡуй-) (Р.: собраться; И.: pack things up; Т.: toparlanmak) *к.*

Ниндәйҙер эшкә йәки юлға әйберҙәрҙе төйнәп, һалып ҡуйыу. □ Собраться, уложить вещи. *Юлға йыйынып ҡуйыу.*

ЙЫЙЫНЫУ (йыйын-) (Р.: собираться; И.: pack up one's things; Т.: toparlanmak) *к.*

1. Кәрәк-яраҡ нәмәне хәстәрләп, берәй эш, шөғөлгә йәки юлға әҙерләнеү. □ Собираться *куда*; готовиться *к чему*. // Сборы. *Тиҙ генә йыйыныу. Юлға йыйыныу. Сәйәхәткә йыйыныу. Ҡунаҡҡа йыйыныу. Бесәнгә йыйыныу.* ■ *Бай аунап көлдөксәгә барып төштө. Иҫтән ауҙы. Шул арала бик тиҙ генә йыйына һалып Сураҡол сығып юғалды.* Т. Хәйбуллин.

Инде өсөнсө тапҡыр был батшалыҡҡа ун ике башлы дейеү пәрейе килергә тейеш була. Ике батыр тағы йыйыналар. Әкиәттән. *Отряд, килгәндәге кеүек, яңынан тейәнеп, йыйынып, китергә бойороҡ көтөп, урамға теҙелде.* Һ. Дәүләтшина.

2. *-рға* формаһындағы төп ҡылымдан һуң килеп, берәй эш-хәрәкәтте башҡарыуға ниәт иткәнде белдерә. □ В сочетании с формой на *-рға* основного глагола выступает в роли вспомогательного глагола и выражает намерение сделать *что-л. Ҡарарға йыйыныу. Һөйләшергә йыйыныу. Уйнарға йыйыныу. Күңел асырға йыйыныу. Эшләргә йыйыныу.* ■ *Әсәйем ниҙер әйтергә йыйынған еренән тыйылды, әйәген тағы усына терәне.* Н. Мусин. *Ул [Зыя] тағы ла нәмәлер әйтергә йыйынғандай, йөҙөн сытырайтып, ҡарашын бер нөктәгә терәгән, маңлайына беленер-беленмәҫ кенә йыйырсыҡтар һыҙатланған.* М. Тажи. *Бергәләп ҡышларға йыйынып, көндәр һалҡынайғас, ашарға һары май әҙерләгән кейектәр янына уның [төлкөнөң] меҫкенләнеп килеп инеүе үк һиҫкәндерә.* Ә. Сөләймәнов.

ЙЫЙЫНЫҺЫ (Р.: всего; И.: in all; Т.: tümü) *билд. а.*

Бөтә булғаны; бөтәһе, барлығы. □ Всего, итого. *Йыйыныһы ун тонна иген. Йыйыныһы бер айлыҡ эш.* ■ *Бындағы «печенег» һәм «баджгард» (башҡорт) — бик боронғо башҡорт-бәжәнәк ҡәбиләһенең ике сатаҡ-ырыуы ул, ә «нукарда» (нуғай-урҙа) — уғата боронғораҡҡы Үҫәргән-Ҡаңны ҡәбиләһенең сатаҡ-ырыуҙары булып, йыйыныһы саф башҡорттар икәнлеге һәм уларҙың Башҡортостан көньяғынан ҡубыныуҙары ап-асыҡ.* Й. Солтанов.

ЙЫЙЫП АЛЫУ (йыйып ал-) (Р.: собрать; И.: collect; gather in; Т.: toplamak) *ҡ.*

Таралып ятҡан нәмәләрҙе, төрлө ерҙә булған кешеләрҙе бергә туплау. □ Собрать, насобирать; снять *(урожай). Игенде йыйып алыу. Еләк йыйып алыу.* ■ *[Атаһы:] Улым, ана аҡланда бер ҡаҙан бар, һин уның аҫтына ут ҡабыҙып тор, мин хәҙер утын йыйып алып барырмын.* Әкиәттән. *Халыҡ «татлы тамыр»ҙы йыйып алып, үҙ өләшендәге сөгөлдөрөн йәһәт кенә таҙартып, шәкәр заводына оҙатырға тырыша.* «Башҡортостан», 28 октябрь 2011.

ЙЫЙЫП БАРЫУ (йыйып бар-) (Р.: собирать регулярно; И.: collect; regularly; Т.: daima toplamak) *ҡ.*

Даими рәүештә туплау, йыйнау. □ Собирать *(регулярно, постоянно);* коллекционировать. *«Ағиҙел» журналын йыйып барыу. Бер урынға йыйып барыу.* ■ *Суфия апай йәш яҙыусыларҙың гәзит, журналдарҙа баҫылған әҫәрҙәрен йыйып барыу өсөн альбом булдырғайны.* Н. Мусин.

ЙЫЙЫП БӨТӨРӨҮ (йыйып бөтөр-) (Р.: собрать; И.: finish gathering; Т.: toplamak) *ҡ.*

Бер ергә туплауҙы тамамлау. □ Собрать, добрать. *Ҡалған ҡарағатты йыйып бөтөрөү. Һуғанды түтәлдән йыйып бөтөрөү.*

ЙЫЙЫП ҠУЙЫУ (йыйып ҡуй-) (Р.: убрать; И.: take away; Т.: kaldırmak, toplamak, saklamak) *ҡ.*

1. Әйберҙәрҙе үҙ урынына һалыу; йыйыштырып ҡуйыу. □ Убрать, сложить *куда-л.* ■ *[Хәйҙәр] яй ғына сисенде, кейемдәрен бөхтә итеп бер урынға йыйып ҡуйҙы, бөтәһен дә эшләнемме тигәндәй, бер аҙ баҫып торҙо ла әкрен генә һыуға инеп китте.* «Башҡортостан», 3 август 2011.

2. Йәшереп һалыу. □ Прибрать, убрать, запрятать. *Гәзиттәрҙе йыйып ҡуйыу. Алтындарҙы һандыҡҡа йыйып ҡуйыу.*

ЙЫЙЫП ЯТЫУ (йыйып ят-) (Р.: собирать; И.: be collecting; Т.: toplamak) *ҡ.*

Оҙайлы ваҡыт эсендә тарау ятҡан әйберҙәрҙе бергә туплау. □ Собирать *(в данный момент). Саң йыйып ятыу. Еләк йыйып ятыу.*

ЙЫЙЫРА ТӨШӨҮ (йыйыра төш-) (Р.: слегка сморщить; И.: pucker a little; Т.: buruşturmak) *ҡ.*

Бер аҙ йыйырсыҡландырыу, сирыштырыу. □ Слегка сморщить, нахмурить. *Танауын йыйыра төшөү. Ҡашын йыйыра төшөп, һөйләргә тотондо.*

ЙЫЙЫРСА I (Р.: брыжейка; И.: mesentery; Т.: mesenter) *и. анат.*

Ҡорһаҡта эсәктәрҙе тотоп торған яры. □ Брыжейка. *Малдың йыйырсаһы.*

ЙЫЙЫРСА II (Р.: извилина мозга; И.: convolutions (of the brain); Т.: kıvrım) *и. анат.*

Мейелә ҙур ярымшарҙың бураҙналар менән бүлгеләнгән өлөшө. □ Извилина мозга. ■ *[Гата] тынысланып, мейе йыйырсаларын эшкә егеп, алдағы бәхетле көндәрҙе күҙ алдына килтерергә тырышты.* Д. Бүләков.

ЙЫЙЫРСЫҠ (йыйырсығы) (Р.: морщина; И.: wrinkle; Т.: buruşuk, kırışık) *и.*

1. Тиреләге, тәндәге юл-юл булып батып үткән эреле-ваҡлы һыҙыҡ; һыр. □ Морщина, складка *(на лице, теле). Тәрән йыйырсыҡтар. Күҙ төбөндәге йыйырсыҡтар. Маңлайҙағы йыйырсыҡтар.* ■ *Урта йәштәр самаһындағы тулы йөҙлө ҡарт коммунист, битендәге хеҙмәт йыйырсыҡтарын тағы тәрәнәйтә төшөп, рәхәтләнеп көлдө.* И. Насыри. *Һалдат йөҙөн йыйырсыҡҡа күмде ил намыҫы өсөн борсолоп.* Ғ. Рамазанов. *Атайымдың эре йыйырсыҡтар йырмыслаған киң түңәрәк бите, ҡояшта янып, көйгән ҡоймаҡ һымаҡ, бөтөнләй ҡорән төҫкә ингән.* Ә. Вәли.

2. *Нимәнеңдер* өҫтөндәге тигеҙһеҙлек, һыр йәки бөгөм. □ Морщина, складка, сгиб, неровность на поверхности. *Күлдәк йыйырсығы. Тау битендәге йыйырсыҡтар.* ■ *Мәүсилә, иҫ-аҡылдары китеп, был яҡтарҙа әйтмешләй — ҡаяның таш битен, уның йыйырсыҡтарын берәм-берәм күҙҙән үткәрҙе.* Д. Бүләков.

ЙЫЙЫРСЫҠЛАНДЫРЫУ (йыйырсыҡландыр-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йыйырсыҡлау.** *понуд. от* **йыйырсыҡлау.** ■ *Папка Йәнтимергә бик килешеп тора. Ул, ҙур кешеләр кеүек, маңлайын йыйырсыҡландырған булған.* С. Агиш. *Даль яуап бирергә ашыҡманы, киң маңлайын йыйырсыҡландырып, башын күтәрҙе, хужаһына туп-тура ҡарап алды.* З. Ураҡсин.

ЙЫЙЫРСЫҠЛАНЫП БӨТӨҮ (йыйырсыҡланып бөт-) (Р.: покрыться морщинами; И.: wrinkle, get covered with wrinkles; Т.: buruşmak) *ҡ.*

Йыйырсыҡтар баҫып сирышып бөтөү. □ Покрыться морщинами; сморщиться; избороздить *(о морщинах). Бите йыйырсыҡланып бөткән.* ■ *Шундай йәш кешенең инде биттәре йыйырсыҡланып бөткән әбейҙең бабайы булғанына ышанып та бөтмәйбеҙ.* «Шоңҡар», № 9, 2011.

ЙЫЙЫРСЫҠЛАНЫП КИТЕҮ (йыйырсыҡланып кит-) (Р.: покрыться морщинами; И.: wrinkle up, become covered with wrinkles; Т.: buruşmak) *ҡ.*

Йыйырсыҡтар менән ҡапланыу. □ Покрыться морщинами, складками, стать морщинистым, морщиться. *Хәбәрҙе ишеткәс, биттәре йыйырсыҡланып китте.*

ЙЫЙЫРСЫҠЛАНЫУ (йыйырсыҡлан-) (Р.: покрываться морщинами; И.: wrinkle; Т.: buruşmak) *ҡ.*

1. Юл-юл булып батып үткән эреле-ваҡлы һыҙыҡ менән ҡапланыу *(тирегә, тәнгә ҡарата)*; һырланыу, сирышыу. □ Покрываться морщинами, складками, становиться морщинистым, морщиться. ■ *Ул [Юлдыбайҙың атаһы] иламай, ә йыйырсыҡланған бите, нурһыҙ күҙе, тешһеҙ ауыҙы менән бер туҡтамай йылмая ине.* Һ. Дәүләтшина. *[Ерәнсә сәсән дейеү хаҡында:] Йөҙө, бына ошо итек ҡунысым кеүек, йыйырсыҡланды.* Әкиәттән. *Әмирхановтың күҙҙәре аҡайҙы, морон төптәре йыйырсыҡланып дерелдәне.* С. Агиш.

2. Түлҡын-түлҡын булып торған бөгөмдәр, һырҙар менән ҡапланыу *(төрлө әйбергә, географик объекттарға ҡарата)*. □ Покрываться складками, сгибами *(о поверхности чего-л.). Тау битләүҙәре йыйырсыҡланған.* ■ *Ҡаршы яҡтары урман ышығы, ваҡ ҡына түлҡындар менән йыйырсыҡланған күлдең ел ыҡғайындағы ҡамышлы тымыҙыҡ сите кеүек, буйҙан-буйға ҡар төшмәйенсә, яланғас ҡалған.* С. Ҡудаш.

ЙЫЙЫРСЫҠЛАУ (йыйырсыҡла-) (Р.: морщить; И.: pucker, wrinkle; Т.: buruşturmak) *ҡ.*

1. Юл-юл булып батып үткән эреле-ваҡлы һыҙыҡ менән ҡаплау *(тирене, тәнде)*. □ Морщить, делать морщинистым. *Маңлайҙы йыйырсыҡлау. Танауҙы йыйырсыҡлау.*

2. Түлҡын-түлҡын булып торған бөгөмдәр, һырҙар менән ҡаплау. □ Покрывать складками, сгибами (поверхность *чего-л.*).

ЙЫЙЫРСЫҠЛЫ (Р.: морщинистый; И.: wrinkled; Т.: buruşuk) *с.*

1. Йыйырсыҡ (1) менән ҡапланған. □ Морщинистый. *Йыйырсыҡлы маңлай.* ■ *Уның [Юламанованың] яулыҡ аҫтынан күренгән йыйырсыҡлы бите, соҡорайған күҙҙәре йылмая.* Һ. Дәүләтшина.

2. Тулҡын-тулҡын булып торған бөгөмдәр, һырҙар менән ҡапланған. □ Складчатый, с неровностями *(о поверхности чего-л.). Йыйырсыҡлы үҙәндәр.* ■ *Башҡортостандың көнсығыш өлөшөн йыйырсыҡлы Урал тауҙары биләп ята.* М. Хисмәтов.

ЙЫЙЫРҺЫУ (йыйырһы-) *к. диал. ҡар.* **ерһәү.** *Йыйырһып ҡайтыу. Ныҡ йыйырһыу.*

ЙЫЙЫРЫҠ (йыйырығы) *и. ҡар.* **йыйырсыҡ 2.** *Кейемдәге йыйырыҡ. Тау тоҡомдары йыйырығы.*

ЙЫЙЫРЫЛА БИРЕҮ (йыйырыла бир-) (Р.: немного морщиться; И.: wrinkle a bit; Т.: bir az buruşmak) *к.*

Еңелсә йыйырсыҡланыу. □ Слегка морщиться, немного нахмуриться. *Ҡаштары йыйырыла биреп ҡуйҙы.*

ЙЫЙЫРЫЛА ТӨШӨҮ (йыйырыла төш-) *к. ҡар.* **йыйырыла биреү.** *Танауы йыйырыла төштө.*

ЙЫЙЫРЫЛЫП КИТЕҮ (йыйырылып кит-) (Р.: морщить; И.: wrinkle; Т.: buruşmak) *к.*

Ҡапыл йыйырсыҡ булып йыйылыу. □ Сморщиться *(внезапно). Был хәбәрҙе ишеткәс, ҡаштары йыйырылып китте.*

ЙЫЙЫРЫЛЫП ТОРОУ (йыйырылып тор-) (Р.: морщиться; И.: wrinkle; Т.: buruşturmak) *к.*

Сырышып тороу, йыйырсыҡтар барлыҡҡа килеү *(кейемгә ҡарата).* □ Морщиться *(об одежде). Салбар йыйырылып тора. Күлдәктең итәге йыйырылып тора.* ■ *[Моратшаның] сыбыртҡы һабы шикелле һығылып-бөгөлөп торған арыҡ оҙон кәүҙәһе, баш эймәкле ҡиәфәт менән татлы йылмайып тороуы, тиреләре ҡамыр кеүек йыйырылып торған арыҡ оҙонса бите лә Емешкә үтә һөмһөҙ күренде.* З. Биишева.

ЙЫЙЫРЫЛЫУ (йыйырыл-) (Р.: морщиться; И.: wrinkle; Т.: buruşmak) *к.*

1. Йыйырсыҡ (1) булып йыйылыу. □ Собираться в морщины, морщиться *(о коже лица, бровях). Маңлайы йыйырылды. Ҡашы йыйырылды.* ■ *Салауаттың ҡаштары йыйырыла, йоҙроҡтары төйнәлә, өндәшмәй, шулай ҙа Ҡәнзәфәр яғын тотоуы күренеп тора.* Б. Рафиҡов. *Ғәбделхәкимовтың йөҙөнә борсолоу билдәләре сыҡты: киң маңлайы йыйырылды, урттары бүлтәйҙе, йоҡа ирендәре ослайып бөрөштө.* Яр. Вәлиев. *Ямалдың ҡаштары һикергеләп, маңлайы йыйырылып ҡуйҙы.* М. Тажи. *Перовский урынынан тороп уҡ китте, уның дала еленә янған ҡуңыр йөҙө етди төҫ алды, ҡаштары йыйырылды.* З. Ураҡсин. ● *Башлыҡ булһаң — башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул.* Мәҡәл.

2. Тулҡын-тулҡын булып, һырҙар яһап йыйылыу. □ Собираться в складки. ■ *[Батша:] Шеш башында ит күрҙем, йыйырылған ҡойҡаһы, йыйырылған ҡойҡаһы, ҡарайып көйгән суңҡаһы, ҡарайып көйгән суңҡаһы, имәнесле баш күрҙем.* «Ҡиссаи Йософ».

ЙЫЙЫРЫУ (йыйыр-) (Р.: морщить; И.: wrinkle; Т.: buruşturmak) *к.*

Йыйырсыҡлап йыйыу; сырыштырыу. □ Морщить, наморщить *(лоб, нос и т. п.). Ҡашты йыйырыу. Танауҙы йыйырыу.* ■ *Ханым, яурынын ҡылансыҡ йыйырып, һиҙәптәй генә сәғәтенә күҙ төшөрөп алды.* Ф. Исәнғолов. *[Ҡарабаш] ҡеҫә сәғәтенә күҙ һалып, кемдеңдер һуңға ҡалыуына борсолоп, йөҙөн йыйыра биреп ҡуйҙы.* И. Насыри. *Ғабдрахманов, ерәнеп, сырайын йыйырҙы.* Н. Мусин. *Тимербулат, маңлайын тексәйтеп, ҡаштарын йыйырып, аһыҡҡан әсәһенең артынан һораулы ҡараш менән бер аҙ ҡарап торҙо ла, ауылға төштө.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫЙЫУ I (йый-) (Р.: собирать; И.: gather; collect; Т.: toplamak) *к.*

1. Таралып ятҡан нәмәләрҙе туплау, өйөү. □ Собирать, убирать. // Сбор; уборка. *Бесән йыйыу. Йыйып һалыу. Йыйып ҡуйыу.* ■ *Ошо баҡуйҙарҙы йыйып алһаң, әле һырланып-тулҡынланып ятҡан сабынлыҡтың йәме китер ҙә ҡуйыр төҫлө.* Н. Мусин. *Мин колхозсы, бөгөн комбайнда ашлыҡтарын йыям ҡырымдың.* Ғ. Сәләм. *Бөтә байлыҡтарын йыйып, алтын һандыҡҡа тейәп, улар юлға сыҡҡан.* Әкиәттән. *[Таҙ:] Шул дарыларҙы ҡайһығыҙ күберәк йыйып килтерһә, шуға ике, аҙыраҡ йыйғанығыҙға*

бер генә нәмә булыр. Әкиәттән. ● *Ҡалаҡлап йыйғанды табаҡлап түкмә.* Мәҡәл. *Ҡулың менән таратһаң, аяғың менән йыйырһың.* Мәҡәл. *Суп йыйһаң — сумәлә, сүбәк йыйһаң — көнйәлә.* Мәҡәл. *Инәһеҙ ҡорт бал йыймаҫ, бал йыйһа ла, мул йыймаҫ.* Мәҡәл.

2. Күмәген бергә үҙ яныңа килтереү. □ Собирать. // Сбор. *Иптәштәрҙе йыйыу. Ҡунаҡ йыйыу. Экспедицияға кешеләр йыйыу. Митинг йыйыу. Ғәскәр йыйыу.* ■ *[Юлсы:] Бөтә ауылды йый ҙа йәшенән дә, ҡартынан да һора; улар ни эшләргә икәнен әйтерҙәр.* Әкиәттән. *Хәмит бисәһе күҙ күргән, һүҙ үткән кешеләрен ҡунаҡҡа йыйғайны.* Б. Бикбай. *[Мәсем хан – Һәүбәнгә:] Ҡыуанысым бик ҙур булғас, илем данлап майҙан йыйғанмын, майҙан тотҡан батыр егеткә ҡыҙым бирәм тип вәғәҙә иткәнмен.* С.Мифтахов.

3. Алынған, таратылған нәмәне үҙ урынына ҡуйыу. □ Собирать, убирать. // Уборка, сборка. *Һауыт-һабаны йыйыу. Өҫтәлде йыйыу.* ■ *Сәйҙәрен йыйып алып, уның арты икенсе самауырҙы ултыртыуға, бейәләрҙең икенсе һауыны етте.* Һ. Дәүләтшина. *Шәхми ҡарт табаҡ-һауыттарҙы йыя һалды.* Т. Йәнәби. *Айбикәнең әсәһе күрше-тирәләрҙән һауыт-һаба йыйҙы, шаршау алып килеп ҡорҙо.* Һ. Дәүләтшина.

4. Һәр нәмәне урын-еренә ҡуйып, тәртипкә килтереү; йыйыштырыу. □ Убирать. // Уборка. *Бүлмәне йыйып ҡуйыу.* ■ *Өмөтбайҙың бисәһе Ҡарасәс үҙенең ой ҡаралдыһын булғанынса матурлап йыйып ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Алдың-артың йыйып йөрө.* Мәҡәл.

5. Айырым өлөштәрҙе бер бөтөнгә берләштереү. □ Собирать, монтировать. // Сборка, монтаж. *Деталдәрҙе йыйыу эше. Станок йыйыу. Йыйыу цехы.* ■ *Киләсәктә «Шкода» автомобилен үҙебеҙҙә йыймаҡсыбыҙ — был мәсьәлә өйрәнелә генә әле.* «Башҡортостан», 25 сентябрь 1999.

6. *типогр.* Текст баҫыу. □ Набирать *(текст)*. // Набор. *Тексты эре хәрефтәр менән йыйыу.*

7. Һибелеп, таралып ятҡан нәмәләрҙе берәмләп сүпләү, берәм-берәм алыу. □ Собирать. *Бәшмәк йыйыу. Еләк йыйыу. Сейә йыйыу. Сәскә йыйыу. Ямғыр һыуын йыйыу.* ■ *Сәскәләрҙең бөтә төрҙәренән һин йыйғанһың икән гөлләмә, бының өсөн һин һуң ғәйепләмә? Үҙ-үҙеңдән мине көнләмә.* Р. Ғарипов. *Тейен .. ергә төшкән һап-һары сәтләүектәрҙе ауыҙына йыйып йөрөй.* А. Карнай. *Йәйен бабай балыҡ тотҡан, әбей емеш-еләк йыйған.* Әкиәттән.

8. Үҫтерелгән нәмәнең уңышын алыу. □ Убирать *(урожай)*. // Уборка. *Арыш йыйыу. Һуған йыйыу. Кишер йыйыу.* ■ *Унан һуң колхоз рәйестәре һүҙ алып, үҙҙәрендә урожай йыйыу һәм хөкүмәткә иген тапшырыуҙарҙың барышы тураһында хисап бирҙеләр.* Б. Бикбай. *Крәҫтиәндәрҙең ашлыҡ йыйған миҙгелдәре.* Д. Юлтый. ● *Бойҙай сәсһәң, башағын йый, шалҡан сәсһәң, тамырын йый.* Мәҡәл. *Сәскән йыйыр, сәсмәгән илар.* Мәҡәл. *Сәсмәнең иһә яҙ көнө, ни йыйырһың көҙ көнө?* Мәҡәл.

9. *Нимәнелер* берәмләп туплау, әкренләп булдырыу. □ Собирать, коллекционировать. // Сбор, коллекционирование. *Марка йыйыу. Фольклор йыйыу. Экспонат йыйыу.* ■ *Бының өсөн яҙыусыға, тәржемәсе һымағыраҡ итеп, Азия һәм Европа тарихынан төрлө яҡлап мәғлүмәтле, риүәйәттәр һәм хикәйәттәрҙе йыйыуға һәләтле, тарихты яратҡан ысын башҡортто беркетергә кәрәк.* М. Өмөтбаев.

10. Әҙләп туплап, күбәйтеү. □ Накапливать, копить, собирать. // Накопление. *Аҡса йыйыу. Байлыҡ йыйыу. Донъя йыйыу.* ■ *Атаң йыйған изге малды вайран итһәң, халҡың тарихына төкөрөп байрам итһәң — башың һиңә ихтирамын һис күрһәтмәҫ.* М. Аҡмулла. *Бәләкәй генә, ябыҡ ҡына ҡыҙыл һыйырҙы күршеләге Нәғимә әбейгә ҡалдырып киттеләр ҙә, ул, йәй буйы һауып, һөтөн эсә, быларға егерме-егерме биш ҡаҙаҡтай май, ҡырҡ-илле башлап булһа ла ҡорот йыйып, әҙерләп ҡуя ине.* Һ. Дәүләтшина. *Өйҙә бутән эшләй торған эш ҡулы булмағанға, һуғышҡа тиклем тырышып-тырышып йыйған малғынаһы, үҙенә күрә йыйған донъяһы туҙып бөтөп, яңғыҙ һыйырға тҡалып ҡалған.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Аҡыллы аҡса йыя, аҡылһыҙ таш йыя.* Мәҡәл. *Арғымаҡтың бил-*

геһе — ҡаҙылыҡ йыймаҫ, ял йыйыр, яман егет билгеһе — ҡатын алмаҫ, мал йыйыр. Мәҡәл. *Ҡарун кеүек мал йыйғансы, яҡшы исемең ҡалһын.* Мәҡәл.

11. Көстө, ҡыйыулыҡты һ. б. туплау, күбәйтеү. □ Собраться с силами, духом. *Көс йыйыу. Ғәйрәт йыйыу. Ҡыйыулыҡ йыйыу.* ■ *Полковник ярҙамында көскә икенсе ҡатҡа күтәрелгән ҡарт генерал хәл йыйырға туҡталды.* Я. Хамматов. *Малайҙар тураһына еткәс, ул [Вәзир], бөтә көсөн йыйып, һүҙ ҡушты.* М. Кәрим. *Оҙаҡламай мөдир ҙә ҡайтып китте һәм Флүрә, бөтә ҡыйыулығын йыйып, кабинетҡа инде.* Ш. Хажиәхмәтов. *Ул [Әминбәк], бар ҡыйыулығын йыйып, ымлап, скрипка уйнарға дейеүҙән рөхсәт һораған.* Әкиәттән. ● *Аҡса тарат, белем йый.* Мәҡәл.

12. Бергә туплап, сағылдырыу. □ Собирать, набирать, накопить. *Тәжрибә йыйыу.* ■ *Ерҙең-күктең биҙәктәрен йыйып, бейек шыршы тора уртала.* М. Кәрим. *Ай, Уралым, Уралым, .. бөтә данды үҙенә йыйып торған Уралым.* Ҡобайырҙан.

13. Йәйелеп, таралып киткән нәмәне кире алыу, урынына ҡайтарыу. □ Убрать. *Терпе энәһен йыйҙы. Йыйып ҡуйыу.* ■ *Әбей яулығын эйәк аҫтынан салып бәйләне, ак сәстәрен яулығы эсенә йыйҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

14. Ышанычлы, йәшерен урынға алып һалыу; йәшереү. □ Убрать в надёжное место, спрятать. *Йыйып ҡуйыу. Ышанычлы урынға йыйыу.* ■ *Ҡамсыларымды, билбауҙарымды балдыҙҙар йыйып бөткән, аҡса биреп саҡ таптырып алдым.* М. Буранғолов.

15. Телефон өрөлтмәген бороп йәки төймәләренә баҫып бәйләнешкә инеү. □ Набрать *(номер телефона). Ышаныс телефонын йыйыу. Тиҙ ярҙам номерын йыйыу.*

♦ **Сәселгән ризыкты йыйыу** ситкә сығып йөрөү. □ Находиться на чужбине. **Хәбәр йыйыу** төрлө һүҙ, ғәйбәт артынан ҡыуыу. □ Собирать сплетни. **Эскә йыйыу** йәшереп һаҡлау. □ Копить, таить в себе *(злобу, обиду и т. п.). Асыуҙы эскә йыйыу. Үсте эскә йыйыу.* **Эсте йыйыу** алдан һиҙенеп шикләнеү. □ Сомневаться. *Уның дөрөҫлөгөнә эсте йыйып ҡарайым.*

ЙЫЙЫУ II (йый-) (Р.: хоронить; И.: bury; Т.: gömmek, defnetmek) *ҡ. диал.*

Ерләү, күмеү. □ Хоронить. *Мәрхүмде йыйырға барҙыҡ.*

ЙЫЙЫУ КҮҘӘНӘКТӘРЕ (Р.: клетки-сборщики; И.: collecting cells; Т.: hücre) *и.*

Бағаналы күҙәнәктәрҙе һыу менән тәьмин итеүсе һәм уларҙың үҙләштереү продукттарын «йыйыусы» күҙәнәк. □ Клетки-сборщики. *Йыйыу күҙәнәктәренең төҙөлөшөн өйрәнеү.*

ЙЫЙЫУСЫ (Р.: собиратель; И.: gatherer; collector; Т.: toplayıcı) *и.*

1. *Ниҙер* йыйыу вазифаһын үтәгән кеше. □ Собиратель, сборщик, заготовитель. *Һалым йыйыусы. Тире йыйыусы. Ит йыйыусы. Бал йыйыусы.* ■ *«Иң яҡшы һөт йыйыусы» конкурсында ла Лаҡлынан Нина Кашапова (ул йыл дауамында 70 тоннаға яҡын һөт йыйған) I урынды алды.* «Йүрүҙән», 3 апрель 2012.

2. Бер үк төрлө нәмәләрҙе берәмләп туплаусы, әкренләп булдырыусы. □ Коллекционер. *Халыҡ әкиәттәрен йыйыусы. Фольклор йыйыусы. Һирәк осрай торған нәмәләрҙе йыйыусы. Маркалар йыйыусы.* ■ *Фольклор йыйыусы һәм уны оҫта башҡарыусы йырау сәсән затлы Спартак Ильясовты журналдың ҡиммәтле табышы, тип атарға була.* Ә. Сөләймәнов.

ЙЫЙЫУСЫ ҠОРТ (Р.: пчела-сборщица; И.: worker bee; Т.: işçi arı) *и. умарт.*

Сәскәнән сәскәгә ҡунып тат йыйыусы, үрсемдәрҙе тәрбиәләүсе төп эшсе ҡорт. □ Пчела-сборщица. *Йыйыусы ҡорттар һан яғынан күберәк була.*

ЙЫЙЫШТЫРЫЛЫУ (**йыйыштырыл-**) *ҡ. төш. ҡар.* **йыйыштырыу 2—3.** *страд. от* **йыйыштырыу 2—3.** *Фатир матур итеп йыйыштырылған.* ■ *Хәйретдиндең өйө, артыҡ бай йыһазлы булмаһа ла, ҙур һәм таҙа итеп йыйыштырылғайны.* Ә. Вәли. *Урындыҡ өҫтөнә түшәлгән балаҫтар ҙа алыштырылып йәйелгән. Урын-ер ҙә бик матур итеп йыйыштырылған.* Т. Хәйбуллин. *Егет, киҫкә ҡайҙандыр икмәк табып, өйөнә ҡайтып керһә, өй эсе гөлт итеп йыйыштырылып ҡуйылған, ти.* Әкиәттән.

ЙЫЙЫШТЫРЫУ (йыйыштыр-) (Р.: убирать, собирать; И.: tidy; take away; Т.: temizlemek) *ҡ.*

1. Таралған, сәселгән нәмәне йыйып, үҙ урынына ҡуйыу; йыйыу. □ Собирать, убирать. // Уборка. *Ҡағыҙҙарҙы йыйыштырыу. Һауыт-һабаны йыйыштырыу.* ■ *Егет ҡойолоп ҡалған башаҡтарҙы йыйыштырған кеше булып йөрөй ине.* Әкиәттән. *Ул арала мин кейенеп бөткәйнем, сумкаларҙы йыйыштыра инем.* Д. Юлтый. *Григорий Иванович ҡағыҙҙарҙы йыйыштырҙы ла, өҫтөнә пальтоһын һалып, сығып китте.* Һ. Дәүләтшина. *Сәғиҙә әйберҙәрен тиҙ-тиҙ генә йыйыштырҙы ла сумаҙанын тотоп палубаға сыкты.* М. Тажи.

2. Һәр нәмәне урын-еренә матурлап ҡуйып, тәртипкә килтереү. □ Убирать, прибирать. // Уборка. *Өй йыйыштырыу. Бүлмәне йыйыштырыу. Ишек алдын йыйыштырыу.* ■ *Ахыр уйлап-уйлап, күҙ йәше менән йөрәгән бер аҙ баҫҡас, Бибеш ниндәйҙер өмөтһөҙ ярһыулыҡ менән өй йыйыштырырға керешеп китте.* З. Биишева.

3. *һөйл.* Үлгән кешене күмеү; ерләү; йыуыу. □ Хоронить, похороны. *Мәйетте йыйыштырыу.* ■ *Батырҙың кәүҙәһе былай ерҙә ятып серемәһен. Беҙ уны, соҡор ҡаҙып, йыйыштырып китәйек.* Әкиәттән.

ЙЫЙЫШТЫРЫУСЫ (Р.: уборщик; И.: cleaner, char woman; Т.: temizleyici) *и.*

Эш, уҡыу биналарын йыйыштырыу вазифаһын башҡарған кеше. □ Уборщик, уборщица. *Мәктәп йыйыштырыусыһы. Магазинда йыйыштырыусы булып эшләү.* ■ *Мәктәптә йыйыштырыусы булып эшләй ине ул [Нәзифә]. Сәхәр ваҡытынан тора ла мейестәренә яғыу өсөн шунда китә.* Н. Мусин.

ЙЫЙЫШЫУ (йыйыш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йыйыу I, II.** *взаимн. от* **йыйыу I, II.** *Сейә йыйышыу. Бесән йыйышыу. Картуф йыйышыу.* ■ *Иртәнсәк үҙенең эскадроны менән үлектәр йыйышырға барған Мәхмүтте күреп, Ғәйнулла уны саҡырып алды.* Б. Хәсән. *Бер ваҡыт көтөү көтөп йөрөгәндә, Ғәжәп-Сәйет еләк йыйып йөрөүсе ике кешене осратҡан, ул шуларға еләк йыйышҡан.* Халыҡ ижадынан.

ЙЫҠ I (*йәки* **йығы)** *и. диал. ҡар.* **ыйыҡ 1.**

♦ Йыҡ булғыры (*йәки* **тейгер)** ҡарғағанда әйтелә. □ Будь проклят! **Йыҡҡа сығыу (саптырыу)** интегеү, йонсоу, яфаланыу, аптырау. □ Мучиться, замучиться. ■ *[Вазифа:] Харап инде, иҫке ҡаҙан төбө булдың да ҡуйҙың. Әгәр ҡыҙ булһаң, һиңә кейәү табылмай, йыҡҡа саптырыр ине әле.* И. Насыри.

ЙЫҠ II (йығы) (Р.: название кожной болезни у лошадей; И.: veterinary skin condition; Т.: atların deri hastalığı) *и. диал.*

1. Аттың тире ауырыуы исеме. □ Название кожной болезни у лошадей. *Атыбыҙ йыҡ булған.*

2. *ҡар.* **ыйыҡ 1.** *Ат арҡаһындағы йыҡ.*

3. *миф.* Эренле шеш эйәһе ауырыуы. □ Дух гнойной опухоли.

ЙЫҠАМЫС *и. диал. ҡар.* **йыуаса.** *Йыҡамыс бешереү.*

ЙЫҠ БУЛЫУ (йыҡ бул-) *ҡ. ҡар.* **йыҡ күреү.** *Йыҡ булып йәшәү.*

ЙЫҠ КҮРЕҮ (йыҡ күр-) (Р.: мучиться; И.: suffer (from); Т.: ıstırap çekmek) *ҡ.*

Интегеү, йонсоу, яфаланыу. □ Мучиться, замучиться. *Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә күп йыҡ күреп өлгөрҙө.*

ЙЫҠМА *с. диал. ҡар.* **лаяҡыл.** *Йыҡма иҫерек булып ҡайтты.*

ЙЫҠМАЛЫ (Р.: отложной; И.: turndown; Т.: devrik) *с.*

Йығып һалмалы. □ Отложной, откидной. *Өҫтө йыҡмалы машина. Йыҡмалы яға.* ■ *Ҡара атты еле менән генә лә ағас йыҡмалы ат тип нарыҡлағандар.* Ә. Сөләймәнов.

ЙЫҠМА ЯҒА (Р.: отложной воротник; И.: turn-down collar; Т.: devrik yaka) *и. диал.*

Ҡайтарма яға. □ Отложной воротник. *Йыҡма яға үҙенә бик тә килешә.*

ЙЫҠ СИГЕҮ (йыҡ сик-) *ҡ. ҡар.* **йыҡ күреү.** *Йыҡ сигеп йәшәү.*

ЙЫҠТЫРЫУ (йыҡтыр-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йығыу.** *понуд. от* **йығыу.** *Имән йыҡтырыу. Аяҡтан йыҡтырыу.* ■ *Фәхри, уны [Һамирҙы] сапсан аттың көслө күкрәге менән бәреп йыҡтырып, осоп киткәндәй, күҙҙән юҡ булды.* Б. Бикбай. ● *Кәрәк тирәкте йыҡтыра.* Мәҡәл.

ЙЫЛ [боронғо төрки *йыл*] (Р.: год; И.: year; Т.: yıl) *и.*

1. Ерҙең Ҡояш тирәһендә бер әйләнеп сығыуына тиң булған ваҡыт берәмеге (1 ғинуарҙан башланып, 12 айҙы эсенә ала). □ Год. *Алдағы йыл. Үткән йыл. Йыл һайын. Һәр йыл. Йыл буйы. Йыл башында.* ■ *Ғәйни ағайға был йыл үҙ ғүмерендә күргән иң ҡыуаныслы йылдарҙың береһе булып күренде.* Т. Йәнәби. ● *Яңғыҙ ҡарға йыл килтермәç, яңғыҙ батыр яу ҡайтармаç.* Мәҡәл. *Яҙғы көн йыл аçрай.* Мәҡәл.

2. *Ниндәйҙер* бер көндән алып иçәпләнгән 12 айлыҡ ваҡыт арауығы. □ Год. *Ярты йыл. Йыл ярым. Бер йылға яҡын. Бер йыл самаһы. Биш йылдан һуң. Йылдан артыҡ.* ■ *Был өйҙә биш-алты йыл инде Түрәбай ғүмер һөрә. Уның бисәһе, ике балаһы һәм ҡарт әсәһе бар.* Т. Хәйбуллин. *Ошо ваҡиғанан һуң Шәғәли, ауылда лавка асып, ете йыл самаһы тора, ләкин ҡабат өйләнмәй.* Б. Бикбай. *Плис еләндең төгөлгәненә лә күп йылдар уҙған.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Ай тормай ат маҡтама, йыл тормай кейәү маҡтама.* Мәҡәл. *Ай үтә, йыл үтә, ай әйләнә көн үтә.* Мәҡәл. *Ат айында, ир йылында һыналыр.* Мәҡәл. *Бер йыл тартай һимерә, бер йыл бүҙәнә һимерә.* Мәҡәл. *Ғүмер оҙаҡ — йыл йыраҡ.* Мәҡәл. *Дуçынан айырылған ете йыл илар, иленән айырылған илле йыл илар.* Мәҡәл. *Ҡырҡ йыл ямғыр яуһа ла, шыма ташҡа һыу үтмәç.* Мәҡәл. *Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер.* Мәҡәл. *Бер йылға ҡуян тиреһе лә сыҙаған.* Мәҡәл. *Йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра.* Әйтем.

3. *күпл.* Билдәле рәт һаны менән килгәндә ун йыл эсендәге ваҡыт араһын билдерә. □ ~ годы. *Ичленсе йылдар осоро.* ■ *Иçкә төшә тукһанынсы йылдар — егерменсе быуат аҙағы; тормош ҡануңдары үҙгәреүгә күнә алмауҙарҙың ғазабы.* М. Ямалетдинов. *Әйткәндәй, илленсе, алтмышынсы йылдарҙа көньяк райондарҙа ике шартлау булды: кемдең мейесе ҡоланы, кемдең өйө емерелде.* Д. Бүләков. *Утыҙынсы-ҡырҡынсы йылдарҙа ауылдарҙа ҡурайсылар күп булған, ҡурайсылар бәйгеләре лә йыш үткәрелгән.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 7, 1991.

4. *күпл.* Билдәле бер ваҡыт арауығы. □ Годы ... . *Йәшлек йылдары. Көрсөк йылдары. Һуғыш йылдары.* ■ *Мин дә, урынымдан тороп, фото алдына баçам. Данлы көрәш йылдарының онотолмаç сәхифәләрен ниндәйҙер моңһоу тулҡынланыу менән ҡарарға керешәм.* З. Биишева. *Аслыҡ йылдарында ашар нәмәләре булмағанлыҡтан, үлгән кешеләрҙең өй, кәртә-ҡура ҡалдыҡтары, ағасы, ташы, кирбестәре сусайышып-сусайышып сығып торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

5. *миф.* Мифлаштырылған, үҙенең эйәһе, хужаһы булған ваҡыт арауығы. □ Год *(отрезок времени; мифологизированное время, имеющее своего хозяина, определяющего сущность года).* ■ *Һыйыр йылы – туҡлыҡ йылы.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛА I (Р.: ильм; И.: elm; Т.: karaağaç) *и. бот.*

Оҙонсараҡ япраҡлы, көрәнһыу ҡабыҡлы беше ағас. □ Ильм. / Ильмовый. *Тау йылаһы. Йыла ҡабығы. Йыла утын. Йыла ташыу. Йыла ҡырҡыу.* ■ *Беҙ Зәйнулла менән көн һайын йыла ташыйбыҙ, кәбән төптәрен йыйып алып ҡайтабыҙ.* Яр. Вәлиев. *Ошо күп урмандарҙа үçә имән, сағандар, аҡ ҡайындар, йылалар, ҡарамалар, баландар.* Ғ. Гүмәр.

ЙЫЛА II *и. диал. ҡар.* **юлаҡ 2.** *Алтын йылаһы. Таш-күмер йылаһы.*

ЙЫЛАЛЫҠ (йылалығы) (Р.: ильмовник; И.: place grown with elms; Т.: karaağaç ormanı) *и.*

Йыла ағастары үçкән ер. □ Ильмовник. *Йылалыҡҡа барып сыҡтыҡ.* ■ *[Әсәй:] Үҙ өçтөмә алам был эште, йылалыҡта аттар иçән ҡалыр.* Картотека фондынан.

ЙЫЛАН I [дөйөм төрки *йылан*] (Р.: змея; И.: snake, serpent; Т.: yılan) *и. зоол.*

1. Аяҡһыҙ нәҙек оҙон кәүҙәле, ҡайһы берҙәренең ағыулы теше булған һөйрәлеүсе йәнлек. □ Змея. / Змеиный (лат. *Serpentes*). *Диңгеҙ йыландары. Шыңғырауыҡ йыландар. Мөгөҙлө йылан. Һуҡыр йылан. Йылан арбау. Аҡ йылан. Туҙбаш йылан. Юха йылан.* ■ *Беҙҙең ҡыуанысты күреп, сәскәләр баш эйәсәк, йыландар – ояларына, бүреләр өңдәренә ҡасасаҡ.* М. Кәрим. *Ирлән имәнгә менә алмаһа ла, йылан, уға ҡарағанда,*

уңғанырак булып сыкты. А. Карнай. *Йылан саккан шешер, бөтөр, йыһан һуккан алып китер.* Картотека фондынан. *Малайҙарҙың баш осонан ғына, айырса ҡойроҡло көмөш йылан кеүек булып, Ҡош Юлы үтә.* З. Биишева. ● *Йәне теләгән йылан ите ашаған.* Мәҡәл. *Йортһоҙ — йылан, ерһеҙ — шайтан.* Мәҡәл. *Йығылғанды йылан сағыр.* Мәҡәл. *Йылан булһын да — сакмаһын, эт булһын да — ҡапмаһын.* Мәҡәл. *Йылан йөҙ йәшәһә — аждаһаға, аждаһа йөҙ йәшәһә, юхаға әйләнә.* Мәҡәл. *Башы ауыртҡан йылан юлға арҡыры ятҡан.* Мәҡәл. *Йоҡлаған йыланды уятма.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Бик яуыз, хәйләле, мәкерле кешегә ҡарата әйтелә. □ Злой, коварный человек, змея подколодная. ■ *Улар [һалдаттар] араһында төрлөһө бар: бәләкәйҙәре бар, ҙурҙары бар; томаналары бар, ғалимдары бар; аҡыллылары бар, ахмаҡтары бар; сабый кеүек саф күңеллеләре бар, йыландай мәкерлеләре бар.* Д. Юлтый.

3. *диал. ҡар.* **кылйылан 1.**

4. *миф.* Мифлаштырылған йәнлек, тотем. Ырыу башы. □ Змея *(мифологизированное животное; божество, в то же время и враг).* ■ *Йыланды өйөккән сакта үлтергән Йомағужа тигән кешенең бөтә заты бөттө.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Ер аҫтында йылан көйшәгәнен белеү** бөтә нәмәне белеп, күреп тороу. □ Видеть на три аршина под землёй. *досл.* Чуять, как под землёй змея жуёт. ■ *[Колкай:] Эй, тапмайҙармы һуң?! Минең бисә тегеләй: ер аҫтында йылан көйшәгәнен белә. Ул тапмай ҡуямы ни?!* М. Буранғолов. **Йылан аяғын киҫкән** уҫаллыкка, хәйләгә нык өйрәнгән; үткер. □ Видавший виды, прошедший огонь и воду. ■ *Күпте күргән, йылан аяғы киҫкән Фейхтвангер Рәсәй ғалимдарының кисә үк үҙ фекерен штыкка алыуын һиҙҙе.* «Ағиҙел», № 7, 2010. **Йылан булып уралыу** хәйлә, мәкер менән алдау. □ Виться как змея. **Йылан саккан кеүек** ҡапыл терт итеп һикереп киткәндә йәки сар-сор ҡысҡырып ебәргәндә әйтелә. □ Словно ужаленный. **Йылан телле** зәһәр, әсе телле. □ Язвительный, острый на язык. *Йылан телле кеше.* **Йылан эше** яуыз, мәкерле эшкә ҡарата әйтелә. □ Подлость. ■ *Бында ниндәйҙер йылан эше йөрөй.* С. Агиш. **Ҡуйында йылан аҫрау** аҫтыртын, яуыз кешене янында тотоу. □ *соотв.* Пригреть змею на груди.

ЙЫЛАН II (Р.: название одного из башкирских племён; И.: name of Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и.*

Бер башҡорт ырыуының исеме. □ Название башкирского племени. *Ҡыр йылан. Эске йылан. Иҙел йылан.* ■ *Биләрҙәр, бүләрҙәр, таҙҙар, ниндәйҙер ҡырғыҙ, йылан ырыуҙары һәм башҡа тағы Байғубәк түрә ишетмәгән илдәр теҙелеп киткән ул яҡта.* К. Мәргән.

ЙЫЛАН АРБАУ (йылан арба-) (Р.: заклинание змеи; И.: incantation of a snake; Т.: yılanı büyülemek) *ҡ. миф.*

Йыланды сихри көс, тылсымлы һүҙ менән тәьҫир итеп буйһондороу. □ Заклинание змеи. *Боронғолар йыланды арбау көсөнә эйә булған.*

ЙЫЛАН АТАЛАНЫУ (йылан аталан-) (Р.: брачный период у змей; И.: mating season of snakes; Т.: yılanların çiftleşme vakti) *ҡ. миф.*

Йыландарҙың ҡарығыу осоро. □ Брачный период у змей. ■ *Йылан аталанғанда кешегә ырғый.* Экспедиция материалдарынан.

ЙЫЛАН АЯҒЫ (Р.: змеиная ножка; И.: snake's leg; Т.: yılanın ayağı) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында бәхет һәм байлыҡ сығанағы *(ырым буйынса, йыландың аяғын тик иң бәхетле генә кеше күрә ала).* □ Ножка змеи *(в башкирской мифологии источник богатства, счастья; по поверью, её суждено видеть только счастливому человеку).* ■ *Имеш бит, йыландың аяғы бар ҙа, тик кешеләргә генә күренмәй икән.* С. Агиш. *Йылан аяғын күргән бәхетле булыр.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАНБАЛЫҠ (йыланбалығы) (Р.: вьюн; И.: loach; Т.: yılan balığı, kabarcık) *и.*

1. *зоол.* Оҙон йомро кәүҙәле, аҫлы-өҫлө буйҙан-буй һыҙылған йөҙгөслө, бәләкәй генә башлы, ҡараһыу төҫтәге йылға, күл балығы. □ Вьюн (лат. *Misgurnus*). ■ *[Карауыл взводы һалдаттары] үҙҙәренең ваннаһында бер*

йыланбалыҡ ашатып, көн дә һыуын алмаштырып ҡарағандар. «Ағиҙел», № 5, 2010.

2. *миф.* Мифлаштырылған, һыу эйәләре менән бәйле тип иҫәпләнгән балыҡ. □ Угорь *(змееподобная рыба, связанная с духами воды).* ■ *Йылан балыҡ — хәрәм ул. Уны ашарға ярамай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАН БАТШАҺЫ (Р.: царь змей; И.: king of serpents; Т.: Yılanların padişahı) *и. миф.*

Аҡ төҫтәге мифик йылан, барлыҡ йыландарҙың башлығы. □ Мифический царь змей. ■ *Аҡ йылан — йылан батшаһы, уны үлтерергә ярамай.* Ф. Хисамитдинова.

ЙЫЛАНБАУЫР КҮЛДӘК (күлдәге) (Р.: платье из блестящей ткани; И.: dress made of tinsel-like fabric; Т.: parlak dokumadan elbise) *и. диал.*

Йылҡылдап торған күлдәк. □ Платье из блестящей ткани. *Йыланбауыр күлдәк тектерҙем.*

ЙЫЛАНБАУЫР САЛҒЫ (Р.: острая коса; И.: sharp scythe; Т.: keskin tırpan) *и. диал.*

Үткер салғы. □ Острая коса. ■ *Атайым йыланбауыр салғыһы менән алдан, беҙ уның артынан саба инек.* Экспедиция материалдарынан.

ЙЫЛАНБАУЫР ТУҠЫМА (Р.: ткань с чёрными полосками; И.: fabric, stuff with black stripes; Т.: siyah çizgili kumaş) *и. диал.*

Буй-буй ҡара һыҙатлы туҡыма. □ Ткань с чёрными полосками. *Йыланбауыр туҡыманан күлдәк тектереү.*

ЙЫЛАНБАШ *и. бот. ҡар.* **йылан башлы үлән.** *Йыланбаш сәскәһе.*

ЙЫЛАН БАШЛЫ ҮЛӘН (Р.: змееголовник Рюйша; И.: dragon's head species; Т.: çok yıllık ot) *и. бот.*

Ҡыяҡ япраҡлы, шәмәхә сәскәле күп йыллыҡ үлән. □ Змееголовник Рюйша (лат. *Dracocephalum ruyschiana*). *Йылан башлы үлән халыҡ медицинаһында киң ҡулланыла.*

ЙЫЛАНҒАРАҠ (йыланғарағы) *и. ҡар.* **йыланҡараҡ II.** *Йыланғараҡты имләү.* ■ *Йыланғараҡ булһа, күҙ ауырта, кеше яҡтыға ҡарай алмай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАНҒАРАҠ ИМЛӘҮ (йыланғараҡ имлә-) (Р.: заговаривание болезней глаз; И.: spell against eye diseases; Т.: göz hastalıklarını büyü ile tedavi etmek) *ҡ. этн.*

Күҙ ауырыуын магик ысул менән имләү. □ Заговаривание болезней глаз *(магический способ избавления от духа (демона) болезни).* ■ *Йыланғараҡ булһа, миңһеҙ йыланды бешереп, шуның боҫона ауырыу күҙҙе тотһаң, бөтә, тиҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАНДАЙ I (Р.: как у змеи; И.: snake-like; Т.: yılan gibi) *с.*

Йыланға оҡшаған, йылан кеүек. □ Как у змеи. *Йыландай күҙҙәр. Йыландай ҡиәфәт.* ■ *Йәйәүле Мәхмүт ханға йыландай телен сығарып күрһәткән: «Бына ул мине Уралыма арбағыс, бәйләгес!»* Й. Солтанов.

ЙЫЛАНДАЙ II (Р.: по-змеиному; И.: like a snake; Т.: yılan gibi) *р.*

Йыланға оҡшатып, йылан һымаҡ. □ По-змеиному, как змея. ■ *Өҫ-башын һалды ла китте ергә ятып юлдашым, нәҡ йыландай бара шыуып, ҡалҡытып ҡына башын.* Ш. Бабич. *Зарары һигеҙ йәшәр йәш йыландай, белмәҫ һинең ҡәҙереңде ахмаҡ, наҙан.* М. Аҡмулла.

♦ **Йыландай телде сығарыу** бик ныҡ ялағайланыу, уҫал, яуыз ниәтле хәбәр һөйләү. □ Подхалимничать, угодничать, подлизываться. *Йыландай телемде сығарып ялындым.* ■ *Алдаҡсы, йыландай телен сығарып, һүҙ бирә бит әле ул, ә мин, йәш иҫәр, уға ышанған булып, исемен ҡара таҡтанан төшөрттөм.* Б. Бикбай.

ЙЫЛАН ДОҒАҺЫ (Р.: змеиная молитва; И.: snake prayer; Т.: yılan duası) *и. миф.*

Йыланды күргәндә уҡыла торған доға; йылан арбау. □ Змеиная молитва, заклинание. ■ *Йылан күрһәң, йылан доғаһын уҡырға кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАН ИТЕ (Р.: мясо змеи; И.: snake meat; Т.: yılan eti) *и. миф.*

Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, мифик көскә эйә булған *(хайуандар теленә аңлыҫ бирә торған)* ит. □ Мясо змеи *(по представлениям башкир, человек, съевший мясо змеи, будет понимать язык всего жи-*

вого вокруг; реликт тотемизма). ● *Йәне теләгән — йылан ите ашаған.* Мәҡәл.

ЙЫЛАНЙЕБӘК (йыланйебәге) (Р.: шелковник; И.: buttercup species; Т.: düğün çiçeği) *и. бот.*

Лютиктар ғаиләһенә ҡараған нәҙек, сибек һабаҡлы, аҡ, ҡҙәге һары сәскәле күп йыллыҡ һыу үләне. □ Шелковник, водяной лютик (лат. *Batrachium*). *Йыланйебәк башлыса тымыҡ һыуҙарҙа үҫә.*

ЙЫЛАН ЙЫЛЫ (Р.: год змеи; И.: year of the Snake; Т.: Yılan Yılı) *и.*

Ун ике йыллыҡ мөсәлдең алтынсы йылы. □ Год змеи. ■ *Сыскан, Эт, Йылҡы йылдары ҡоро килһә, Тауыҡ, Йылан йылдарын да маҡтамағандар.* «Ағиҙел», № 5, 2010. *Йылан йылы — яуынлыҡ.* Һынамыш.

ЙЫЛАН КЕҪӘРТКЕ (Р.: змеевидная ящерица; И.: anguine lizard; Т.: babakōş) *и. зоол.*

Ҡыҫҡа аяҡлы йыланға оҡшаған һары бауыр кеҫәртке. □ Змеевидная ящерица, веретеница ломкая (лат. *Anguis fragilis*). *Йылан кеҫәрткеһенең оҙонлоғо 60 см тиклемгә етә.*

ЙЫЛАН КӨПШӘҺЕ (Р.: синяк обыкновенный; И.: common viper's bugloss; Т.: engerek otu) *и. бот.*

Күгәрсен күҙе һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, сәнскәктәр менән ҡапланған тура һабаҡлы, ҡыяҡ япраҡлы баллы үҫемлек. □ Синяк обыкновенный (лат. *Échium vulgáre*). *Йылан көпшәһе сәскә атҡан.*

ЙЫЛАНКҮҘ I (Р.: нарыв на пальце; И.: boil on a finger; Т.: parmaktaki çıban) *и. диал.*

Бармаҡҡа сыға торған шеш. □ Нарыв на пальце. *Йылан күҙ сығыу.*

ЙЫЛАНКҮҘ II (Р.: анютины глазки; И.: Cupid's-delight; Т.: hercai menekşe) *и. бот.*

Миләүшә сәскәһенең төрө. □ Анютины глазки (лат. *Víola trícolor*). *Йылан күҙ — шифалы үлән.*

ЙЫЛАН КҮҘЕ (Р.: болезнь глаз от ветра; И.: sort of eye condition; Т.: gōz hastalığı) *и. миф.*

Күҙҙәрҙең елдән һыҙлауы. □ Название болезней глаз. *досл.* Змеиный глаз. ■ *Күҙемә йылан күҙе сыҡҡан.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАН ҠАБЫ *и. ҡар.* **йылан тиреһе.**

ЙЫЛАН ҠАБЫҒЫ *и. ҡар.* **йылан тиреһе.** ■ *Йылан ҡабығын һала. Йылан ҡабығын тапһаң, бәхетле булаһың, байыйһың.* Экспедиция материалдарынан.

ЙЫЛАНҠАРАҠ I (йыланҡарағы) (Р.: опухоль суставов руки; И.: swelling of a hand joint; Т.: dolama) *и. мед.*

Бармаҡҡа эренләп сыҡҡан шеш. □ Опухоль суставов руки, панацирий. *Ҡулға йыланғараҡ сыҡҡан.*

ЙЫЛАНҠАРАҠ II (йыланҡарағы) (Р.: болезнь роговицы глаз; И.: cornea sickness; Т.: saydam tabaka hastalığı) *и. диал.*

Күҙ ауырыуы. □ Болезнь роговицы глаз. ■ *Бисмилләһи, мәр-мер, бисмилләһи, төштүш, сыҡма, йылан ҡарағы!* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАН ҠАРЫҒЫУ (йылан ҡарыҡ-) *ҡ. ҡар.* **йылан аталаныу.** ■ *Йылан ҡарығып йөрөгәндә тейергә ярамай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАН ҠУҘАҒЫ (Р.: лядвенец; И.: bird's-foot; Т.: nilüfer çiçeği) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған өсәр япраҡлы, сатыр сәскәле үлән. □ Лядвенец (лат. *Lotus*). *Йылан ҡуҙағынан буяу алалар.*

ЙЫЛАН-ҠЫУАҠАН (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и.*

Ҡыуаҡан ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-куваканцев.

ЙЫЛАН МӨГӨҘӨ (Р.: змеиный рог; И.: snake's horn; Т.: yılan boynuzu) *и. миф.*

Ырым буйынса, аҡ йыландың мөгөҙө *(уны муйынға аҫып йөрөһәң, ҡот килтерә).* □ Змеиный рог *(по поверью, бывает только у белой змеи, нашедшему приносит счастье).* ■ *Оҙаҡ балаһы булмаған ир менән ҡатындың ятҡан түшәгенә йылан мөгөҙө (тиреһе) теккәндәр.* Башҡорт мифологияһынан. ■ *Йылан мөгөҙөн аҡ яулыҡҡа төрөп һаҡлағандар. Йылан мөгөҙөн тапҡан кеше байый, тиҙәр.* Ф. Хисамитдинова.

♦ **Йылан мөгөҙө алыу** ҡот килеп, байыу. □ Разбогатеть.

ЙЫЛАН ӨЙӨГӨҮ (йылан өйөк-) *к. миф. кар.* **йылан аталаныу.** ■ *Яҙ көнө кар иреп бөткәс, йылан өйөгә. Йыландар ҡайнап ята.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАНСА *с. кар.* **йыландай I.** *Йыланса хәрәкәт. Йыланса зәһәр ҡараш.*

ЙЫЛАНСАЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **йыланбалыҡ 1.**

ЙЫЛАН-САЯН (Р.: ядовитые змеи, скорпионы, пауки; И.: snakes and insects; Т.: yılanlar) *и. йыйн.*

Саға торған төрлө ағыулы йән эйәләре. □ Ядовитые змеи, скорпионы, пауки и т. п. ■ *Тора-бара уның [койонон] һыуы өҫкә ҡалҡҡан, йылан-саян – барыһы унда урын тапҡан.* «Буҙйегет». *Болот ситтәрендә йылан-саян, ялҡын сәйнәп тора, аҫылынып.* Ш. Бабич. *Мең йыл йәшәр аждаһа юхаға әйләнгәндәй, шуның әҙәми юхалары, ваҡ дейеүҙәре, йылан-саяндары үрсегән.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫЛАНСЫҠ (йылансығы) *и. диал. ҡар.* **бабасыр.**

ЙЫЛАНТАМЫР (Р.: горец змеиный; И.: serpent grass; Т.: yılankökü) *и. бот.*

Ҡарабойҙайҙар ғаиләһенә ингән ҡыяҡ япраҡлы, алһыу сәскәле үлән. □ Горец змеиный, раковые шейки (лат. *Polygonum bistorta*). ■ *Йылантамыр ҡайнатмаһын үт ҡыуығы шешкәндә, бөрәй эске ағзанан (ашҡаҙан, үпкә, аналыҡтан) ҡан килгәндә, эсәктәрҙә колит ауырыуы булғанда, эс киткәндә ҡулланырға кәңәш ителә.* В. Ғүмәров.

ЙЫЛАН ТАРЫҺЫ (Р.: бекмания; И.: Beckman's grass; Т.: bataklik otu) *и. бот.*

Ҡыҫҡа һабаҡлы, бер яҡлап төшкән һепертке башаҡлы ҡый үләне. □ Бекмания (лат. *Beckmannia*). *Йылан тарыһы тамыры. Йылан тарыһын йолҡоу.*

ЙЫЛАНТЕЛ (Р.: луговик дернистый; И.: tussock; Т.: ot öbeği, çimen topağı) *и. бот.*

Һыуһылыраҡ ерҙә түмгәкләнеп, өйкөм-өйкөм булып үҫкән ваҡ ҡына башаҡлы, тар ғына ҡыяҡ япраҡлы ҡаты үлән. □ Луговик дернистый (лат. *Deschampsia cespitosa*). *Йылантелдән эшләпә үреү.*

ЙЫЛАН ТЕЛЕ *и. миф. ҡар.* **йылан арбау.**

ЙЫЛАН ТИРЕҺЕ (Р.: змеиный выползок; И.: slough, shed snakeskin; Т.: yılan derisi) *и.*

1. Йыландың төләгәндә һыҙырып һалып киткән тиреһе. □ Змеиный выползок. ■ *Йылан тиреһен өшкөрөп һалһаң, күҙ ауырыуы бөтә.* Башҡорт мифологияһынан.

2. *миф.* Ырым буйынса, йыландың тиреһен муйынға аҫып йөрөһәң, ҡот килтерә. □ Змеиный выползок *(по поверью, если его одевать на шею, приносит счастье).*

ЙЫЛАН ТОМЫ *и. диал. ҡар.* **йылан теле.**

ЙЫЛАН ТУЙЫ *и. ҡар.* **йылан аталаныу.**

ЙЫЛАН УҒЫ (Р.: жало змеи; И.: forked tongue of a snake; Т.: yılan dili) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, йылан саҡҡандан һуң, уның уғы кешенең йөрәгенә ҡаҙала һәм кеше үлә. □ Жало змеи *(по представлениям башкир, после укуса змеи её жало направляется к сердцу человека, и человек умирает).* ■ *Йыландың күҙендә, телендә уғы була, тиҙәр. Шул йылан уғы килеп тейһә, кеше ҡатып ҡала, тиҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫЛАНУТ *и. диал. ҡар.* **монар.**

ЙЫЛАН ҮЛӘНЕ (Р.: вика; И.: vicia, vetch; Т.: burçak) *и. бот. диал.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән теҙмә япраҡлы, сырмалып торған мыйыҡлы, ваҡ ҡына ирен сәскәле үҫемлек. □ Вика (*лат. Vicia*).

ЙЫЛАНҺАБАҠ (йыланһабағы) (Р.: змеёвка; И.: kengia; Т.: çok yıllık ot) *и. бот.*

Оҙон нәҙек һабаҡлы, һепертке рәүешендәге сәскәләре булған, ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. □ Змеёвка (лат. *Cleistogenes*). *Йыланһабаҡ – яҡшы мал аҙығы.*

ЙЫЛАН ЫЛАСЫНЫ (Р.: змееяд; И.: short-toed snake eagle; Т.: yılan kartalı) *и. зоол.*

Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған һорокөрән төҫтәге ҙур йыртҡыс ҡош. □ Змееяд (лат. *Circaetus gallicus*). *Йылан ыласыны йыландар менән туҡлана.*

ЙЫЛАУҠАЙ I *и. диал. ҡар.* **зыйтым 2.** *Йылауҡай кеше. Йылауҡай булыу.*

ЙЫЛАУҠАЙ II (Р.: выдержанный кислый катык; И.: seasoned Bashkir yogurt; Т.: ekşi katık) *и. диал.*

Күпсегән ҡатыҡ, эркет. □ Выдержанный кислый катык, из которого варится и изготовляется курут. *Йылауҡай һыуы. Йылауҡай ҡайнатыу.*

ЙЫЛАУЫҠ (йылауығы) *и. диал. ҡар.* **йылыу II.**

ЙЫЛАШЛЫҠ (йылашлығы) (Р.: яровое зерно; И.: spring grain, corn; Т.: yazlık tahıl) *и. диал.*

Яҙ сәселә торған ашлыҡ. □ Яровое зерно. ■ *Йылашлыҡ сәсеү ваҡыты етте.* Экспедиция материалдарынан.

ЙЫЛ БАШЫ (Р.: начало года; И.: start of a year; Т.: yıl başı) *и.*

1. Йылдың башланған мәле. □ Начало года. ■ *2010 йыл башында «Торатау» гәзите редакцияһы 1941–1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышындағы Еңеүҙең 65 йыллығына арналған «Еңеү яҙы» исемле ҡала-район конкурсын иғлан иткәйне.* «Торатау», 7 апрель 2011.

2. *миф.* Мифлаштырылған, бөтә яҡшы эштәрҙе башларға рөхсәт ителгән ваҡыт *(ыңғай семантикаға эйә).* □ Мифологизированное время, обладающее положительной семантикой. *Йыл башында оло эштәр башлар булғандар.*

ЙЫЛБЫР (Р.: медлительный; И.: sluggish; Т.: yavaş) *с. диал.*

Яй, мыштыр *(кешегә ҡарата).* □ Медлительный, нерасторопный. *Йылбыр ғына бала. Йылбыр килен.*

ЙЫЛБЫРАУ I (йылбыра-) *ҡ. диал. ҡар.* **емелдәү**. *Йылбырап тороу. Күктә йондоҙҙар йылбырай.*

ЙЫЛБЫРАУ II (йылбыра-) *ҡ. диал. ҡар.* **йылмылдау**. *Аҫыл таштар ҡояшҡа йылбырап ята.*

ЙЫЛБЫР-ЙЫЛБЫР (Р.: подражание шевелению, мелким движениям; И.: sound imitative word; Т.: tıpış tıpış) *оҡш.*

Ваҡ-ваҡ баҫып, ашығып атлағанды, хәрәкәтләнгәнде белдергән һүҙ. □ Подражание шевелению, мелким движениям. *Йылбыр-йылбыр итеп атлау. Йылбыр-йылбыр хәрәкәтләнеү.*

ЙЫЛБЫРЛАУ (йылбырла-) (Р.: семенить; И.: mince; Т.: tıpış tıpış yürümek) *ҡ.*

Йылбыр-йылбыр итеү, йылбыр-йылбыр килеү. □ Семенить. *Йылбырлап, ҡырмыҫҡалар йүгерешә.*

ЙЫЛҒА [боронғо төрки *йул-ға-ғ*] (Р.: река; И.: river; Т.: nehir) *и.*

1. Үҙ үҙәне буйлап туҡтауһыҙ ағып ятҡан, ер аҫты һәм ер өҫтөндәге һыуҙар иҫәбенә байыҡҡан тәбиғи һыу. □ Река. / Речной. *Оло йылға. Кесе йылға. Йылға кисеү. Йылғаны йөҙөп сығыу.* ■ *Көндөҙгө сәйҙе йылға буйына төшөп бергә эсә торғайныҡ.* Н. Мусин. *Беҙҙең алда ҡарт йылғаның оҙон, яҫы киң таҫмаһы ялтырап ҡалды.* Ә. Чаныш. *Боҙҙар, ҡар киҫәктәре тейәп, йылғалар, соҡор-саҡырҙар үтеп ағалар.* Т. Йәнәби. *Һыу инергә был йылғаның ярҙары уңай икән, иң тәрән тигән сөмбәйе муйындан ғына икән.* С. Кулибай. *Йылғалар төнөн һөйләшә, болот тауҙарға ҡунғас, йөрәктәр төнөн серләшә, аяҡ тауышы тынғас.* М. Кәрим. ● *Инәң үлһә – йылғаң ҡороно, атаң үлһә – таянған тауың ауҙы.* Мәҡәл. *Ир кисмәҫлек йылға юҡ.* Мәҡәл. *Йылғаның үренә барма, ағышына бар.* Мәҡәл. *Кисеү бирмәҫ йылға юҡ, батыр еңмәҫ дошман юҡ.* Мәҡәл. *Шәп аҡҡан йылға тиҙ ҡорор.* Мәҡәл. *Тәрән йылға тын ағыр, һай йылға шаулап ағыр.* Мәҡәл. *Үлемһеҙ донъя юҡ, үтелгеһеҙ йылға юҡ.* Мәҡәл.

2. *миф.* Был һәм теге донъяны, аҫҡы һәм өҫкө донъяны бәйләп торған объект. □ Мифологизированный объект, соединяющий нижний и средний миры, тот и этот свет. ■ *Илгә бәлә-ҡаза килер булһа, йылға-күлдәр ныҡ таша.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Йылға булып** бик күп булып *(ағыу, ағылыу, ҡойолоу һ.б.).* □ Рекой *(литься, политься и др.).* ■ *Һуғыш ҡаты булды, ҡан йылға булып аҡты.* Әкиәттән.

ЙЫЛҒА БАШЫ (Р.: исток; И.: river head; Т.: pınar) *и.*

1. Йылғаның башланған урыны. □ Исток *(реки). Шишмәнән башланған йылға башы. Йылға башына тиклем. Йылға башында урынлашҡан ауыл. Йылға башына килеү.* ■ *Йылға башын йырғандар бит, ағастарын ҡырғандар бит.* Т. Йосопов. *«Мине килеп, тағы эҙләһәләр, йылға башында булыр-*

мын», — ти был [Атанғол]. Риүәйәттән. *Һәр йылғаның — йылға башы һәм диңгеҙгә, күлгә, йәки башҡа йылғаға ҡойған өлөшө бар.* Интернет селтәренән.

2. *миф.* Изгеләштерелгән урын *(имтомда ҡулланыла).* □ Священное место. *Йылға башынан алынған һыу.*

ЙЫЛҒА БЕЗЕЛДӘГЕ (Р.: речной сверчок; И.: Locustella fluviatilis; Т.: ağaç kamışçını) *и. зоол.*

Һырты һәм түше ҡара өҙөк һыҙыҡсалар менән сыбарланған, ҡараһыу көрән төҫтәге күсмә ҡош. □ Речной сверчок (лат. *Locustella fluviatilis Wolf*). ■ *Йылға безелдәге башҡа безелдәктәрҙән сыбар һырты һәм түше менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

ЙЫЛҒА БОРОЛМАҺЫ (Р.: изгиб реки; И.: river bend; Т.: nehirin kıvrımı) *и.*

Йылғаның боролған урыны, бөгөл. □ Изгиб реки. *Ағиҙел йылғаһының боролмаһы. Йылға боролмаһы буйында.*

ЙЫЛҒА БОРОМТАҺЫ *и. диал. ҡар.* **йылға боролмаһы.** *Йылға боромтаһы эргәһендә.*

ЙЫЛҒА БӨГӨЛӨШӨ *и. ҡар.* **йылға боролмаһы.**

ЙЫЛҒА ВОКЗАЛЫ (Р.: речной вокзал; И.: river-boat station; Т.: nehir limanı) *и.*

Йылғалағы пассажир караптары туҡтай торған урын. □ Речной вокзал. *Өфө йылға вокзалы. Заманса йылға вокзалы. Йылға вокзалы тирәһендә. Мәскәүҙә ике йылға вокзалы бар.*

ЙЫЛҒА КИҢЕРЕ (Р.: прибрежная равнина; И.: riverside plain; Т.: nehir kıyısındaki düzlük) *и. диал.*

Йылға буйындағы әҙ генә ҡалҡыуыраҡ тигеҙ урын, типһән. □ Прибрежная равнина. *Йылға киңерендәге бесәнлек. Йылға киңерен бәпембә ҡаплаған.*

ЙЫЛҒА-КҮЛ (Р.: реки и озёра; И.: rivers and lakes; Т.: nehir ve göller) *и. йыйн.*

Йылға һәм күлдәрҙең йыйылма атамаһы. □ Реки и озёра. *Йылға-күлдәр ташыуы. Йылға-күлдәрҙең иseme. Йылға-күлдәр буйында.* ■ *Болоттар һирәгәйгән урындарҙа ҙур ғына йылға-күлдәр күренеп ҡала.* Р. Бикбаев.

ЙЫЛҒА САРЛАҒЫ (Р.: речная крачка; И.: common tern; Т.: bayağı sumru) *и. зоол.*

Тар һәм оҙон ҡанатлы, аҡһыл һоро һыртлы, кәүҙәһенең аҫ яғы аҡ төҫтәге күсмә ҡош. □ Речная крачка (лат. *Sterna hirundo*). ■ *[Йылға сарлаҡтары] йылға һәм күл өҫтөнән тик парлашып йәки күмәкләп кенә осоп йөрөйҙәр.* Э. Ишбирҙин.

ЙЫЛҒА САТЛЫҒЫ *и. диал. ҡар.* **йылға саты.** *Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларының сатлығы. Йылға сатлығындағы сабынлыҡ. Йылға сатлығындағы урын.*

ЙЫЛҒА САТЫ (Р.: развилка рек; И.: river fork; Т.: nehirlerin çatalı) *и.*

Ике йәки бер нисә йылғаның тоташҡан урыны. □ Развилка рек. *Йылға саты буйында. Йылға сатындағы бесәнлек.*

ЙЫЛҒАСЫ (Р.: речник; И.: river transport worker; Т.: gemi adamı) *и.*

Йылға флотында эшләгән кеше. □ Речник. *Йылғасыға уҡыу. Йылғасы һөнәре. Ағиҙел йылғасылары. Йылғасылар училищеһы. Йылғасы булырға хыялланыу.*

ЙЫЛҒАСЫҠ (йылғасығы) (Р.: речка; И.: creek, rivulet, (small) river; Т.: küçük nehir) *и.*

Бәләкәй йылға. □ Речка. ■ *Эргәләге һыртлауҙарҙа йылҡылар өсөн утлауыҡ, малдарға урыш киң, йылғасыҡ та ҙурыраҡ.* Г. Ибраһимов. *Йылғасыҡ илап аға яндан, ағастар шаулайҙар.* Ш. Бабич. *[Любомир Зух] тар ғына бер йылғасыҡты кисеп түгел, осоп, һауала осоп сыҡты.* М. Кәрим. *Ҡар буйлап гөрләп аға ине көмөш төҫлө тонок йылғасыҡ.* Р. Назаров. *Таштар араһынан күбекләнеп, шарлап йылғасыҡ ағып ята.* Д. Шәрәфетдинов.

ЙЫЛҒА ТАМАҒЫ (Р.: устье реки; И.: river mouth; Т.: nehir ağzı) *и.*

Йылғаның бөткән, ҡойған урыны. □ Устье реки. *Йылға тамағынан өҫтәрәк. Йылға тамағының уң яғында.* ■ *Йылғаның икенсе йылғаға, күлгә, диңгеҙгә ҡойған урыны йылға тамағы тип атала.* Интернет селтәренән. *Уң яҡлап Ағиҙелгә ҡойған Эстәрле йылға тамағы саталанып һыҙылған; Эстәрле йылғаһына, уҡ башағы рәүешле, Ашҡаҙар йылғаһы ҡойған.* Й. Солтанов.

ЙЫЛҒЫР I (Р.: быстрый; И.: quick; Т.: çabuk) *с.*

1. Хәрәкәткә бик етеҙ; йылдам. □ Быстрый. *Йылғыр йырткыс ҡош.* ■ *Һыҙыҡ туп бик сос, йылғыр булыуҙы, тупты мәргән бәреүҙе талап итһә лә, артыҡ ҡабаланмай уйнай торған уйын.* Н. Мусин. *Тәүҙә йылғыр атбаҫарҙар ауылдан ауылға һөрән һалып үтте: «Торатауға — йыйынға! Үҫмерҙәр ярышына!»* Б. Рафиҡов. ● *Алғыр кеше алымынан, йылғыр кеше аҙымынан билдәле.* Мәҡәл. *Торомтайҙан йылғыр ҡош булмаҫ, турғай ташлап ҡаҙ алмаҫ.* Мәҡәл.

2. Йор хәрәкәтле, тиҙ тотонған, эшләгән һ. б. □ Ловкий, проворный. *Йылғыр ҡул.* ■ *Аҡыллы, йылғыр ҡуллы ҡыҙыҡай токарлыҡ һөнәренә тиҙ өйрәнде.* Ә. Вәли. ■ *[Василийҙың] аяғы йылғыр, кешеләрҙе таный.* Ә. Хәкимов.

3. Бик тиҙ, етеҙ башҡарылған. □ Быстрый. *Йылғыр хәрәкәтле. Йылғыр эш.*

4. *күсм.* Тормошта бик олгөр; мут, отҡор. □ Шустрый, ловкий, проворный. *Йылғыр егет.* ■ *Шулай ҙа йылғыр Ласточкин, байтаҡ ваҡыт йөрөп, ҡуйынына бер кирбес икмәк тығып ҡайтты.* М. Кәрим. *Шул арала иң йылғыр йөҙ һыбайлы уңлы-һуллы һелтәп урағыттарҙың тығыҙ сафтарын йырып инеп китте.* З. Ураксин. *Иптәшкә Афанасий тигән үтеп сыҡҡан йылғыр әҙәмде эйәртеп, Фрол башҡорт яҡтарына сығып китә.* М. Хужин.

♦ **Йылғыр күҙле** алан-йолан ҡарап, бөтә нәмәне күреп торған кешегә ҡарата әйтелә. □ Всевидящее око. ■ *Йәмлегөл инәйҙең урам ҡапҡаһын инде үрелеп астым тигәндә генә, йылғыр күҙле Вәзир ямғыр селтәре аша күл өҫтөн ҡапшап сыҡты.* М. Кәрим.

ЙЫЛҒЫР II *с. диал. ҡар.* **шыма.** *Йылғыр сәсле.*

ЙЫЛҒЫР III *и. диал. ҡар.* **сиртмә.** *Сәңгелдәк йылғыры.*

ЙЫЛҒЫРБАЙ (Р.: шустрый; И.: nimble; Т.: çevik, kıvrak) *с.*

Тормошта үткер, мут *(кешегә ҡарата).* □ Ловкач, шустрый, ловкий, проворный *(человек).* ■ *[Таибә:] Аллаға шөкөр, уландарым бығаса ундай йылғырбайҙарға юлдаш булманылар.* З. Биишева.

ЙЫЛҒЫР КҮРӘН (Р.: осока белая; И.: white leaved sedge; Т.: hasırotu) *и. бот.*

Дымлы урындарҙа үҫә торған суҡ тамырлы, нәҙек осло ҡыяҡлы күп йыллыҡ үлән. □ Осока белая (лат. *Carex alba*). *Күтерҙә үҫкән йылғыр күрән. Яр буйындағы йылғыр күрән.*

ЙЫЛҒЫРЛАНЫУ (йылғырлан-) (Р.: становиться проворным, ловким; И.: become agile; Т.: becerikli olmak) *ҡ.*

Етеҙ хәрәкәтлегә, йылғырға әйләнеү, йылғыр булыу. □ Становиться ловким, проворным. *Йылғырланып китеү. Хәрәкәте йылғырланыу.* ■ *Йылғырланып аҡҡан болоттарҙай, йылдар елеп үтте.* А. Игебаев. *Мозаһит шундай яуаплы эшкә ҡушҡандарынан бирле харап йылғырланып китте, алтмышҡа яҡынлауын да онотоп, көн тимәй, төн тимәй, тегенеһен йүнләп, быныһын рәтләп йөрөп ятҡан көнө.* Н. Мусин.

ЙЫЛҒЫРЛАТЫУ (йылғырлат-) (Р.: убыстрить; И.: add pace; Т.: becerikli etmek) *ҡ.*

1. *һөйл.* Етеҙ хәрәкәтлегә, йылғырға әйләндереү. □ Убыстрить. *Аттың хәрәкәтен йылғырлатыу. Аҙымдарҙы йылғырлатыу.*

2. Йылғыр хәрәкәт итеү; ашығыу. □ Быть быстрым в движениях, спешить. ■ *Турысай ҙа атым, ай, еләләр, йылғырлатып килгән ҡош кеүек.* Халыҡ йырынан.

ЙЫЛҒЫРЛЫҠ (йылғырлығы) (Р.: ловкость; И.: agility; Т.: beceriklilik) *и.*

Йылғыр булыу сифаты; етеҙлек, сослоҡ. □ Ловкость, проворство. *Эштә йылғырлыҡ күрһәтеү.* ■ *Был күпер аҫтына тартҡан нәмәләрҙең береһе йылғырлыҡты һынау булһа, икенсеһе — балыҡ.* Н. Мусин. *Һинең [һыбайлының] таҫыллығыңа, йылғырлығыңа хайран ҡалған халыҡ, умарта күселәй, геүләй башлай.* Д. Бүләков. *Өйрәнсек был эштә, ысынлап та, сикһеҙ ҙур оҫталыҡ, йылғырлыҡ күрһәтә.* З. Биишева. *Көрәштә берҙәй оҫта, берҙәй уҡ сос булған был егеттәр ике яҡтан да ниндәй генә йылғырлыҡ, ниндәй генә алым ҡулланмайҙар.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

ЙЫЛДАМ I (Р.: быстрый; И.: rapid; Т.: çevik) *с.*

1. Хәрәкәткә етеҙ; йылғыр, өлгөр. □ Быстрый, проворный, расторопный, ловкий. *Йылдам егет. Йылдам бейә.* ● *Ир уңған булһа, катын йылдам була.* Мәкәл. *Йылдам атҡа ҡамсы кәрәкмәй.* Мәкәл.

2. Бик тиҙ, етеҙ башҡарылған. □ Быстрый, ловкий. *Йылдам хәрәкәт. Йылдам эш.*

3. Бик әҙ ваҡыт эсендә башҡарылған, булған. □ Быстрый. *Йылдам үҫеш.*

ЙЫЛДАМ II (Р.: быстро, ловко; И.: rapidly; Т.: çevik) *р.*

Бик тиҙ, етеҙ, йылғыр. □ Быстро; ловко, проворно. *Йылдам атлау. Йылдам тотоноу. Йылдам йыйыныу. Йылдам эшләү.* ■ *Ипкенгә тирәк япраҡтары йылдам ғына шаулайҙар һәм ҡайһы саҡта япраҡтарҙың тиҫкәре яғы әйләнеп, ағарып китә.* Ж. Кейекбаев. *Бейеш, ауыр кәүҙәһен йылдам ҡыймылдатып, күлдәк еңдәрен терһәгенә тиклем бөрҙө.* Я. Хамматов. *Бурка кейгән кеше арбанан йылдам һикереп төштө лә ҡатындарға нәмәлер ымланы.* Ә. Чаныш. *Киҫәккайын ауылында төбәктә иң йылдам үҫешкән теплица хужалығы бар.* «Йәшлек», 30 июнь 2011.

ЙЫЛДАМЛАНЫУ (йылдамлан-) (Р.: становиться проворным; И.: become rapid, nimble; Т.: çevik olmak) *ҡ.*

Йылдамға әйләнеү, йылғырланыу. □ Становиться проворным, ловким. ■ *Техник прогресс йылдамлана барған һайын, кеше үҙен көслөрәк тоя, ул үҙен тәбиғәт өҫтөнән хаким итеп һанай.* М. Ҡотлоғәлләмов. ● *Ҡайтыр юлға сыҡкас, ат та йылдамлана.* Мәкәл.

ЙЫЛДАМЛАТЫУ (йылдамлат-) (Р.: убыстрять; И.: hasten; Т.: hızlandırmak) *ҡ.*

Хәрәкәтен тиҙләтеү, йылдамға әйләндереү. □ Убыстрять, ускорять. *Йөрөштө йылдамлатыу.*

ЙЫЛДАМЛЫҠ (йылдамлығы) (Р.: быстрота; И.: quickness; Т.: çabukluk) *и.*

Йылдам булыу сифаты; сослоҡ, йылғырлыҡ. □ Быстрота, проворство, расторопность, ловкость. *Йылдамлыҡ күрһәтеү.* ■ *Һәр ваҡыт йылдамлығы менән танылған Әкрәм иң алдан үҙ атына менеп, Билалдың ерән ҡашҡа толпарын эйәрләп етәкләп, урамға, казарма алдына сыҡты.* Ж. Кейекбаев.

ЙЫЛДАН-ЙЫЛ (Р.: с каждым годом; И.: with each passing year, year after year; Т.: yıldan yıla) *р.*

Һәр йыл үткән һайын. □ С каждым годом, год от году, год от года. *Йылдан-йыл Өфө матурлана. Филармония йылдан-йыл камиллаша.* ■ *Малдар йылдан-йыл кәмей.* Б. Бикбай.

ЙЫЛДАН-ЙЫЛҒА (Р.: из года в год; И.: year in, year out; Т.: her yıl) *р.*

Йылдар үткән һайын. □ Из года в год. *Йылдан-йылға эш яҡшыра. Йылдан-йылға тормош яҡшыра.*

ЙЫЛДЫ (Р.: в год; И.: in the year...; Т.: yılında) *р.*

Ниндәйҙер билдәле бер йылда. □ В год. *Бер йылды. Һуғыш башланған йылды.* ■ *[Әсәйем:] Бер йылды шулай Йәноҙаҡ бабайыңдар анау Ҡыҙылташ арьяғындағы яланды саптылар, беҙ әлеге ошонда инде. Көндөҙгө сәйҙе йылға буйына төшөп бергә эсә торғайныҡ.* Н. Мусин. *Ул йылды бик күп ҡунаҡ килгәйне.* ● *Ырыҫ килгән йылды эт башына ла эркет түгелә.* Әйтем.

ЙЫЛДЫҢ-ЙЫЛЫ (Р.: каждый год; И.: every year; Т.: her yıl) *р.*

Һәр йыл һайын. □ Каждый год. ■ *Хәҙер йылдың-йылы остаздарымдан алыҫайғандан-алыҫая барам, әллә яҡынайғандан-яҡынаям инде.* Т. Йософов.

ЙЫЛДЫР АРБА (Р.: тарантас; И.: tarantass; Т.: yaylı) *и. диал.*

Етеҙгә тотолған еңел арба; ҡырандас. □ Тарантас. *Йылдыр арбаһына ултырып сығып китте.*

ЙЫЛДЫРМА *и. диал. ҡар.* **ялтырауыҡ.**

ЙЫЛДЫРЫМ *и. диал. ҡар.* **һаҙағай.** *Йылдырым уйнау. Йылдырымдар өҙләкһеҙ ялтырайҙар. Йылдырым уйнаһа, иген уңа.*

ЙЫЛҠ *оҡш. ҡар.* **йылҡ-йылҡ.**

ЙЫЛҠАНЛАУ (йылҡанла-) *ҡ. диал. ҡар.* **йылтанлау**. *Күҙҙәр йылҡанлау.*

ЙЫЛҠ ИТЕҮ (йылҡ ит-) *ҡ. диал. ҡар.* **йылт итеү.** ■ *Мәскәүҙе башына инде кейҙерҙем генә тигәндә, бәрҙе йылҡ итеп борола ла аҫҡараҡ күсеп ята.* Н. Мусин.

ЙЫЛҠ-ЙЫЛҠ (Р.: подражание бликам на поверхности блестящего предмета; И.: imitative word; Т.: pırıl pırıl) *оҡш.*

Уйнап, йылтылдап торған төҫтө белдергән һүҙ. □ Подражание бликам на поверхности блестящего предмета. *Йылҡ-йылҡ килеү. Ҡояш нурҙары йылҡ-йылҡ уйнай.*

ЙЫЛҠ-ЙЫЛҠ ИТЕҮ (йылҡ-йылҡ ит-) *ҡ. ҡар.* **йылҡылдау.** *Күктә бихисап йондоҙҙар йылҡ-йылҡ итеп күҙ ҡыҫышты.*

ЙЫЛҠЫ I [дөйөм төрки *йилки*] (Р.: конь; И.: horse; Т.: at) *и.*

1. Ирекле йөрөгән өйөр аты; ат. □ Конь, лошадь. *Йылҡы ите. Йылҡы көтөүе. Йылҡы өйөрө.* ■ *Бөгөлөп кенә, һығылып үҫә икән һыу буйҡайҙарының талдары. Хәжегәле китеп, артыр микән Ильяс байҙың йылҡы малдары.* Халыҡ йырынан. *[Әбей менән бабай] бер тау араһындағы уяға барып, ҡышлау ҡорғандар ҙа йылҡыларын тибенгә ҡыуғандар.* Әкиәттән. *Йылҡылар, күгәүен тешләүенә сыҙамай, арҡа буйҙарына ҡойроҡтары менән һуға-һуға, билдәренән ала һыуға инеп торалар.* З. Биишева. *Аҡлы ғына күкле ала йылҡы тибен тибә тауҙың үңерендә.* Халыҡ йырынан. ● *Йоҡлаған йоҡо таптан, йоҡламаған йылҡы таптан.* Мәҡәл. *Йылҡы — данлыҡ, ҡуй — байлыҡ.* Мәҡәл. *Йылҡы йылың алдараҡ.* Мәҡәл. *Йылҡы — малдың батшаһы.* Мәҡәл. *Йылҡыла үт юҡ, ҡоро үләндә һөт юҡ, түрәлә ҡот юҡ.* Мәҡәл. *Ҡоштоң һөтө юҡ, йылҡының үте юҡ.* Мәҡәл. *Тәңкә тиндән үҫер, йылҡы ҡолондан үҫер.* Мәҡәл.

2. *миф.* Изгеләштерелгән, күк һәм ер аҫты менән бәйле, тотем функцияһын үтәгән аҡ мал. □ Конь, лошадь *(мифологизированные культовые животные; тотем, символ благополучия, здоровья и силы; выполняет обережную и отгонную функции).*

ЙЫЛҠЫ II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Дыуан ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-дуванцев.

ЙЫЛҠЫБАЙ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-усерганцев.

ЙЫЛҠЫ БОРСАҒЫ (Р.: эспарцет; И.: cockshead; Т.: adi korunga) *и. бот.*

Ҡыяҡ япраҡлы, аҡ сәскәле, оҙонса эре орлоҡло үҫемлек. □ Эспарцет (лат. *Onobrýchis*). ■ *Йүкә, ҡарабойҙай, ҡандала үләне, йылҡы борсағы кеүек бер төрлө үҫемлектәр сәскәһенән, йәнә төрлө болон, туғай сәскәләренән йыйылған бал юғары сифатлы һанала.* «Киске Өфө», № 24, 2009.

ЙЫЛҠЫ ИТЕ (Р.: конина; И.: horse meat; Т.: at eti) *и.*

Ат малының ите. □ Конина. ■ *Тоҡомло аттар үрсетеү, йылҡы ите, ҡымыҙ етештереү агросәнәғәт комплексының өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһенә әүерелде.* «Йәшлек», 23 март 2011.

ЙЫЛҠЫ ЙЫЛЫ (Р.: год лошади; И.: year of the Horse; Т.: At Yılı) *и.*

Ун ике йыллыҡ мөсәлдең етенсе йылы. □ Год лошади *(седьмой год двенадцатилетнего животного цикла у мусульман).* ■ *Ҡайһы йылдың нисек килеүен ошо хайуандар исеменә бәйләп фаразлағандар. Сысҡан, Эт, Йылҡы йылдары ҡоро килһә, Тауыҡ, Йылан йылдарын да маҡтамағандар.* «Ағиҙел», № 5, 2010. *Йылҡы йылында йәй һауаһы йылы, ямғырлы булыр.* Ышанмыш.

ЙЫЛҠЫ КӨТӨҮСЕҺЕ *и. ҡар.* **йылҡысы 2.** ■ *[Таҙ батыр] ахырҙа күрше илгә сығып китҡән. Унда бер батшаға йылҡы көтөүсеһе булып ялланған.* Әкиәттән.

ЙЫЛҠЫ ҠАҘЫҺЫ (Р.: колбаса из конины; И.: horse meat sausage; Т.: at eti sucuğu) *и. этн.*

1. Йылҡы ите һәм майынан эшләнгән ашамлыҡ. □ Колбаса из конины.

2. *миф.* Яман көстәрҙән һаҡлау, ҡурсалау көсөнә эйә булған аш. □ Колбаса из конины *(по представлениям башкир, обладает обережной и отгонной силой).*

ЙЫЛҠЫЛДАҠ (Р.: блестящий; И.: brilliant, shining; Т.: parlak) *с.*

Йылҡылдап торған. □ Блестящий, искрящийся. *Йылҡылдаҡ туҡыманан күлдәк тектерҙем.*

ЙЫЛҠЫЛДАТЫУ (йылҡылдат-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йылҡылдау.** *понуд. от* **йылҡылдау.** ■ *Ғәлимәнең үҙенә тултырып-тултырып ҡарауҙарын, сәс толомдарын йылҡылдатып ҡаршыһынан биш урап биш үтеүҙәрен күрмәне Әптелахәт.* Т. Ғарипова. *Менәүәрҙе эйәрткән ир, бында иң оло хужа кеүек, түшендәге орден, миҙалдарын йылҡылдатып, бер нисә хәрби кеше торған артабандағыраҡ кассаға ыңғайланы.* Н. Мусин. *Хандың үткер күҙҙәрендә тамшаныу билдәһе сағылды, бәләкәс ҡулдары, йөҙөк ҡаштарын йылҡылдатып, әле ҡыҫҡа һаҡалына үрелде, әле ең осонан күренгән тиҫбене һәрмәне.* Я. Хамматов.

ЙЫЛҠЫЛДАУ (йылҡылда-) (Р.: лосниться; И.: be glossy; Т.: parlamak, yaldızlanmak) *ҡ.*

Йылҡ-йылҡ итеү; йылтылдау, ялтырау. □ Лосниться. *Бәрхәт йылҡылдап тора. Һимеҙ аттар йылҡылдап тора.* ■ *Юртағым сер бирерлек түгел: бөрсәләй етеҙ, туп кеүек тумалаҡ, сөм ҡара ялдары тұҙып тора, ҡолаҡтары ҡайсылай, арҡаһы һумалалай йылҡылдай.* Д. Бүләков. *Ҡара ерлеккә эре алһыу сәскәләр төшкән, йылҡылдап торған шәльяулыҡты яҙып ҡараһас, Кәримәнең иҫтәре китте.* Н. Мусин. *Бынау йылҡылдап торған балыҡтарҙы үҙ ҡулдарың менән кире күлгә ебәр, имеш.* М. Кәрим. *Һунарсыларҙың олораҡы, ҡара мыйыҡлы, бөркөт танаулыһы, йәп-йәшел күҙҙәре мыҙлап янған күк бүрене һырты йылҡылдап торған ҡара айғырҙың эйәр башына арҡыры һалып алған.* З. Ураҡсин.

ЙЫЛҠЫЛДАШЫУ (йылҡылдаш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йылҡылдау.** *взаимн. от* **йылҡылдау.** ■ *[Айсыуаҡ быҙауҙарҙың] затлы ебәк шие йылҡылдашып торған бәрхәт йөндәренән һыйпаштырып наҙлай-наҙлай, әле генә һауылған йылы һөт имеҙә.* И. Ноғоманов.

ЙЫЛҠЫЛДЫҠ (йылҡылдығы) *и. диал. ҡар.* **һаҙағай.** *Йылҡылдыҡ уйнаған саҡ.*

ЙЫЛҠЫ МАЙЫ (Р.: жировое отложение, сало лошади; И.: horse's enteric fat; Т.: at yağı) *и.*

Аттың май ҡатламы. □ Сало лошади. *Йылҡы майын алыу. Йылҡы майы ҡушыу.*

ЙЫЛҠЫ МАЛЫ *и. ҡар.* **йылҡы I.** *Йылҡы малы аҫрау. Йылҡы малын тотоу.*

ЙЫЛҠЫНДЫҠ (йылҡындығы) *и. диал. ҡар.* **йолҡош.**

ЙЫЛҠЫН КҮҘ *и. диал. ҡар.* **йылтын күҙ.**

ЙЫЛҠЫСЫ (Р.: коневод, табунщик; И.: groom; Т.: seyis) *и.*

1. Йылҡы малын аҫраусы, тотоусы. □ Коневод, конюх. ■ *Мөхәмәтша сәсән геүаһлауынса, йылҡысы башҡорт йылҡы малының йөҙ илле төҫ-билдәһен айыра белгән.* «Йәшлек», 27 декабрь 2010.

2. Йылҡы ҡараусы, йылҡы көтөүсе. □ Конюх, табунщик. ■ *Шул китеүенән ул, [Азамат] Ҡатай иленә барып, йылҡысы булып көн итә икән.* Ә. Чаныш. *[Көтөүсе:] Алпамыша хан булған саҡта, мин ябай көтөүсе, Ҡолтаба баш йылҡысы ине.* «Алпамыша». *Сәғит сыҡҡанда, йылҡысы, ҡороғон эргәһенә ҡуйып, тәрән йоҡоға киткәйне.* А. Таһиров.

ЙЫЛҠЫСЫЛЫҠ (йылҡысылығы) (Р.: коневодство; И.: horse breeding; Т.: füruset) *и.*

Йылҡы аҫрау, йылҡы үрсетеү эше. □ Коневодство. / Коневодческий. *Йылҡысылыҡты тергеҙеү. Йылҡысылыҡ хужалығы. Йылҡысылыҡ фермаһы.* ■ *Бына беҙ колхоздың йылҡысылыҡ фермаһына килеп еттек.* Д. Бүләков. *Юлдаштың еңгәһе Гөлйөҙөм шунда, дебет кәзәләре фермаһында, өләсәһе Зөләйхә әбей йылҡысылыҡ фермаһында эшләй.* З. Биишева. *Бөтә ауылдың десятский, сотский һәм старшиналары шулар араһынан сыҡҡан. Улар йылҡысылыҡ һәм башҡа төр мал аҫрау менән шөғөлләнгән.* Р. Өмөтбаев.

ЙЫЛҠ-ЯЛҠ *окш. ҡар.* **ялҡ-йолҡ.** *Йылҡ-ялҡ итеү.* ■ *Тау битендә йылҡ-ялҡ итеп шыңғыр шишмә шылтырай.* Халыҡ йырынан.

ЙЫЛЛАҒАН (Р.: прошлогодний; И.: last year's; Т.: geçen yılki) *с.*

1. Бер йыл йәки бер нисә йыл ултырған, торған. □ Прошлогодний. *Йыллаған ҡай-*

натма. Йыллаған кәбән. ■ *Түбылғып үҫкән үләндәр араһында йыллаған караһыу көңөр төҫтәге ҡыу ҡурайҙы күргәс, Кеше уны, имгәтмәҫкә тырышып, иплән кенә тамыры менән йолкоп алды.* Н. Мусин. *[Ынйыбикә:] Уныһы [Дәүләтбирҙе бисәһе] йыллаған ҡаҙы һорап йөрөй.* М. Буранғолов.

2. Бер йәште тултырған, бер йәшлек *(малға ҡарата).* □ Годовалый *(о животных). Йыллаған башмак. Йыллаған бәрән.*

ЙЫЛЛАП (Р.: годами; И.: by years; Т.: yıllarca) *р.*

1. Йылы менән. □ Годами, по годам. ■ *[Әхмәдулла мулланың] байлығы ла йыллап түгел, көн һайын үҫә.* А. Карнай.

2. Һандарҙан һуң килеп, сама менән билдәләнгән йыл иҫәбен белдерә. □ Примерно — лет, год. *Осрашмағанға ике йыллап булыр. Ҡайтмағанға биш йыллап булып китте.* ■ *Төртмә телле Мәғәфүр менән улар хәҙер егерме йыллап күрше йәшәйҙәр.* Д. Бүләков. *Китте лә батты [Хәсән], ун йыллап барҙыр инде, хаты ла, хәбәре лә юҡ.* Р. Солтангәрәев.

ЙЫЛЛАТЫУ (йыллат-) (Р.: держать год; И.: keep during a year; Т.: yıllatmak) *ҡ.*

Бер йыл ултыртыу, бер йыл тотоу. □ Держать, сохранять в течение года. *Бесәнде яланда йыллатыу. Башмакты тотонмай йыллаттылар.*

ЙЫЛЛАУ I (Р.: прошлогодний; И.: stay during a year; Т.: geçen yılki) *с.*

Йыл ултырған. □ Прошлогодний. *Йыллау бал. Йыллау кәбән.*

ЙЫЛЛАУ II (йылла-) (Р.: пребывать в течении года; И.: stay during a year; Т.: yıllamak) *ҡ.*

Бер йыл ултырыу, йәшәү. □ Пребывать в течение года; прожить год. ● *Ай айламай ат маҡтама, йыл йылламай килен маҡтама.* Мәҡәл.

ЙЫЛЛАУ ҺУҒАН (Р.: лук-батун; И.: Welsh onion; Т.: soğan) *и. бот.*

Бер сәскәндән йыл да үҫеп тора торған һуған. □ Лук-батун (лат. *Allium fistulosum*). *Йыллау һуған үҫтереү.*

ЙЫЛЛЫҠ I (Р.: годовой; И.: annual; Т.: yıllık) *с.*

1. *Нисәлер* йыл дауам иткән, *нисәлер* йыл менән иҫәпләнгән. □ Годовой, годичный. *Йөҙ йыллыҡ тарих. Илле йыллыҡ ғүмер.* ■ *Ун ике йыллыҡ ғүмерендә янауҙарҙы күп ишеткән Вәзир был юлы ла, үҙенең күрәсәге алдында баш эйеп, яй ғына өйгә табан атланы.* М. Кәрим. ● *Иген уңмаһа — бер йыллыҡ, ҡатын уңмаһа — ғүмерлек.* Мәҡәл. *Йыллығын уйламаған ирҙән биҙ, айлығын уйламаған ҡатындан биҙ.* Мәҡәл.

2. Һандар менән килеп, шул һандағы йыл эсендә булғанды, йәшәгәнде белдерә. □ -летний. *Ике йыллыҡ үҫемлек. Күп йыллыҡ үҫемлек.*

3. *Нисәлер* йылға тәғәйенләнгән, билдәләнгән. □ -летний, -летие, годовой. *Биш йыллыҡ план. Туғыҙ йыллыҡ мәктәп. Ун бер йыллыҡ мәктәп. Киләһе ярты йыллыҡҡа план төҙөү.* ■ *[Юлдыбай:] Унда бөгөн бик мөһим мәсьәлә — колхоздарҙы бөтә йыл буйынса иген ҡорамалдары менән тәьмин итеү тураһында йыллыҡ план ҡарала.* Һ. Дәүләтшина. *[Ғилман:] Мин, ун йыллыҡты бөткәс, Ленинградҡа, уның [Владик] янына уҡырға барасаҡмын. Беҙ шулай һөйләштек.* З. Биишева. *Ер кәм тигәндә биш йыллыҡ һәм унан да артығыраҡ срок менән һатыла.* М. Өмөтбаев.

ЙЫЛЛЫҠ II (йыллығы) (Р.: -летие; И.: ...year annivesary; Т.: yıllık) *и.*

Бер ваҡиғаға *нисәлер* йыл тулыуын билдәләгән көн. □ -летие./-летний. *Илле йыллыҡты байрам итеү.* ■ *Кисә Ҡырмыҫҡалы районында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 70 йыллығы айҡанлы тантаналар башланды.* «Башҡортостан», 17 ноябрь 2011.

ЙЫЛЛЫҠ БАҪМА (Р.: ежегодник; И.: yearbook; Т.: yıllık) *и.*

Йылына бер тапҡыр сыға торған баҫма. □ Ежегодник. *Археография буйынса йыллыҡ баҫма. Тарих буйынса йыллыҡ баҫма сығарыу.*

ЙЫЛЛЫҠЛАУ (йыллыҡла-) (Р.: исходить из расчёта на один год; И.: pay (count) for a year; Т.: yıllık ödenek yapmak) *ҡ.*

Бер йыл иҫәбенән сығыу. □ Исходить из расчёта на один год. *Йыллыҡлап эшләү. Йыллыҡлап түләү.* ■ *Һалдатҡа киткәнсе*

[ағайым] ауылда Ибраһимдарҙа бер йыл, Саттар байҙа бер йыл ярым, унан һуң Ҡотлозаманда ике йыл йыллыҡлап эшләгән. А. Таһиров.

ЙЫЛМАҒАЙ (Р.: пронырливый; И.: pushing; Т.: kurnaz ve girgin) *с.*

Төрлө хәйлә менән алдап-йолдап, ярамһаҡланып йөрөүсән. □ Пронырливый, пройдоха. *Йылмағай әҙәм.*

ЙЫЛМАЙЛЫҠ (йылмайлығы) (Р.: смайлик; И.: smiley; Т.: gülenyüz) *и. инф. һөйл.*

Тыныш билдәләре һәм махсус символдар ярҙамында кеше хис-тойғоларының ҡыҫҡаса һүрәтләнеше *(ғәҙәттә, Интернет селтәрендә, кеҫә телефондарында хат алышҡанда ҡулла).* □ Смайлик. *Йылмайлыҡ ҡуйыу.*

ЙЫЛМАЙТЫУ (йылмайт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йылмайыу 1.** *понуд. от* **йылмайыу 1.** ■ *Ғариф .. күкһел йәшкелт күҙҙәрен хәйләкәр йылмайтып, үҙенән аша үрелеп ҡарап торған Ҡыҙырастың ҡабырғаһына төртөп алды.* З. Биишева. *Зәлифә .. Һөйөнөскә ҡараны ла иртәнге ҡояш нуры менән һөйкөмлө булып балҡыған алһыу аҡ йөҙөн йылмайтты.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙЫЛМАЙЫУ (йылмай-) (Р.: улыбаться; И.: smile; Т.: gülümsemek) *ҡ.*

1. Йөҙгә көлөү билдәһе сығарыу; көлөмһөрәү. □ Улыбаться, усмехаться. // Улыбка, усмешка. *Шатлыҡлы йылмайыу. Асыҡ йылмайыу. Йылмайып килеү. Йылмайып ҡарау. Йылмайып ҡаршы алыу. Мыҫҡыллы йылмайыу.* ■ *[Байғужалар] үҙ мәртәбәләрен белеп, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуялар.* Яр. Вәлиев. *Гөлгөл йоҡлай. Ирен ситтәрендә талпына бер йылы йылмайыу.* Р. Ниғмәти. *Бер ҡараһам һиңә, күңелем була, бер йылмайып ҡараһаң да ни була?* Халыҡ йырынан. ● *Ир кешегә бер йылмайып ҡараһаң, ҡар өҫтөнән ялан аяҡ йүгерер, ти.* Мәҡәл. *Дошмандың йылмайыуына ышанма, дуҫыңдың асыуына шикләнмә.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Салт асыҡ, нурлы, матур төҫ алыу. □ Улыбаться. // Улыбка. *Ҡояш йылмая. Йондоҙҙар йылмая. Гөлдәр йылмая.* ■ *Тик, сәскәләр, ҡояш йылмайһа ла, һаман һынауҙа бит йөрәгең!* Р. Ғарипов.

ЙЫЛМАЙЫУЛЫ (Р.: улыбчивый; И.: smiling; Т.: güleç (yüzlü) *с.*

Йылмайыу сағылдырған. □ Улыбчивый. ■ *Йылмайыулы ҡиәфәтем минең акварелдәр менән яҙылған.* Т. Ғәниева. *Ул көндө, асыу тотобораҡ йөрөй торған кешеләр ҙә минең йылмайыулы, асыҡ йөҙөмдө күрҙеләр, йылы, яғымлы һүҙемде ишеттеләр.* К. Мәргән.

ЙЫЛМАЙЫУСАН *с. ҡар.* **йылмайыулы.** ■ *Йылмайыусан күҙҙәрен һылыуҙарҙың белгән һуң, айҙай Урал һылыуы — Маянды бер күргән һуң, Ноғай хан уй туплаған.* «Мәргән менән Маянһылыу». *Көнсығыш халыҡтары — йылмайыусан милләт.* «Йәшлек», 20 август 2011.

ЙЫЛМАЙЫШЫУ (йылмайыш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йылмайыу.** *взаимн. от* **йылмайыу.** ■ *Улар [ҡунаҡтар] шым ғына бер-береһенә ҡарашып йылмайыштылар ҙа һүҙҙән туҡтаныштар.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫЛМАНЛАҠ (Р.: кокетливый; И.: flirtatious; Т.: cilveli) *с.*

Йылманлап йөрөүсән. □ Кокетливый. *Йылманлаҡ ҡыҙ. Йылманлаҡ бала.*

ЙЫЛМАНЛАУ (йылманла-) (Р.: кокетничать; И.: flirt (with); Т.: cilvelenmek; cilve yapmak) *ҡ.*

Күҙҙе йылтыратып борғоланыу; ҡыланһыҡланыу. □ Кокетничать, играть глазами. *Күҙе-башы йылманлап тора. Йылманлап йөрөү.* ■ *Күҙең-башың йылманлап, күҙсән булма, килентәк.* Туй йырынан.

ЙЫЛМАУЫҘ *и. диал. ҡар.* **ялмауыҙ.** *Йылмауыҙ йөрөй, тиҙәр.*

ЙЫЛМАЯҠ (Р.: неусидчивый; И.: restless; Т.: yerinde durmaz) *с. һөйл.*

Темеҫкенеп күп йөрөүсән; мөстән. □ Неусидчивый, любящий шататься. / Непоседа. *Йылмаяҡ ҡыҙ.* ■ *Йылмаяҡ мин түгел! Минме ул мурт?! Һыртсылдарға бигерәк насар мин.* Х. Назар. *[Атаһулла] ҡарт бирешмәне, тегеңә [болан йыҡҡан кешегә] һеңкеҙәтә бер бирҙе лә, ҡулын артҡа шаҡарып бәйләп, милицияға тапшырҙы. Шунан аҙаҡ уның зонаһына йылмаяҡтар аяҡ баҫмаҫ булды.* Н. Мусин. *[Төйемеш Сафура тураһында:] Минең бахырымды мәсхәрә итә, етмәһә!*

Таптырырмын мин һиңә тыуманы! Йылан! Йылмаяҡ! Ж. Кейекбаев.

ЙЫЛМАЯҠЛАНЫУ (йылмаяҡлан-) (Р.: быть неусидчивым; И.: be restless; Т.: yerinde durmamak) *ҡ. һөйл.*

Темеҫкенеп йөрөү; мөстәнләнеү. □ Быть неусидчивым, любить шататься. ■ *[Картәсәһе — Һылыуҡайға:] Ни эшләп улайтып йылмаяҡланып йөрөйһөң?* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫЛ МИҘГЕЛЕ (Р.: время года; И.: season; Т.: mevsim) *и.*

Йылдың һауа шарттары менән билдәләнгән дүрт ваҡыттың береһе: яҙ, йәй, көҙ, ҡыш. □ Время года, сезон. ■ *Йыл миҙгелдәренең сиратлашыуын тоткарлар көс бармы?* Ә. Хәкимов. *Боронғо замандарҙа игенселек, баҡсасылыҡ, малсылыҡ менән шөғөлләнгән кешеләргә йыл миҙгелдәрен билдәләү үтә мөһим булған.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 1, 2010.

ЙЫЛ МӨСӘЛЕ *и. ҡар.* **мөсәл.**

ЙЫЛМЫЛДАУ (йылмылда-) (Р.: сверкать; И.: sparkle; Т.: işıldamak) *ҡ.*

1. Йым-йым итеп ялтырау. □ Сверкать, мерцать. // Сверкание, мерцание. *Алыҫта уттар йылмылдай.* ■ *Үҙҙәре [ямғыр тамсылары] ҡояш нурына йылмылдай, ямғыр түгел, терегөмөш ҡойола тиерһең.* Р. Солтангәрәев. *Ахырҙа башымды ҡалҡытып ҡараһам, танк люгы эсендә йылт-йылт килеп ут йылмылдай.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

2. *ҡар.* **йылманлау.** *Ауыҙың-башың останлап, һүҙсән булма, киленсәк. Күҙең-башың йылмылдап, күҙсән булма, киленсәк.* Түй йырынан.

ЙЫЛМЫЛДАШЫУ (йылмылдаш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йылмылдау 1, 2.** *взаимн. от* **йылмылдау 1, 2.** *Йондоҙҙар йылмылдаша.* ■ *Инеп ултыралар [егет менән һыңар саңғылы], ҡыҙҙар йылмылдашып ҡына йөрөйҙәр.* Әкиәттән.

ЙЫЛМЫРЛАУ (йылмырла-) *ҡ. диал. ҡар.* **йылмылдау.**

ЙЫЛП (Р.: подражание мгновенному действию; И.: imitative word; Т.: ani hareketi anlatan kelime) *оҡш.*

Ҡапыл ғына етеҙ хәрәкәтте белдергән һүҙ. □ Подражание мгновенному действию. *Йылп итеп сығып китеү.* ■ *Ирҙәр, йылп итеп, тауыш килгән яҡҡа ҡараны.* Н. Ғәйетбаев. *Арыҫландар гелән ырғылып һөжүм яһай, шул саҡта егет, ҡалҡан менән көпләнеп, йылп итеп кенә лыпын ята һәм аҫтан рәхимһеҙ януарҙың йөрәгенә ҡаҙай.* «Ағиҙел», № 9, 2009. *Мин ҡыуам, ләкин инде тотам тигәндә, Зөләйха йылп итеп ялтана ла икенсе яҡҡа йүгерә.* Н. Мусин.

ЙЫЛПАҪ I (Р.: лежащий пластом; И.: lying on one's back; Т.: serilen) *с. диал.*

Йәйелеп, һуҙылып ятҡан, лыпын йығылған. □ Лежащий пластом; распластанный. *Йылпаҫ ятыу.*

ЙЫЛПАҪ II (Р.: валежник; И.: fallen trees; Т.: yatık) *и. диал.*

Ятыҡ *(игенгә ҡарата).* □ Валежник *(о хлебе). Борсаҡ яуһа, иген йылпаҫ булып бөтөр ҙә ҡыйыр инде.*

ЙЫЛП-ЙЫЛП (Р.: подражание мигающему огню; И.: twinkle, imitative word; Т.: ışıl ışıl) *оҡш.*

Бер һүнеп, бер ҡабынып киткән ялҡынды белдергән һүҙ. □ Подражание мигающему огню. *Шәм йылп-йылп итте лә һүнде. Йылп-йылп ҡына ҡабынған усаҡ оҙаҡ янды.*

ЙЫЛПЫ *с. ҡар.* **йылпыс.** ■ *Ишекте төртөп асты ла Камил, эстәге бәхәсте ярыҡтан тыңлап торған йылпы секретарشаны бәреп йыға яҙып, коридорға атылып сыҡты.* Ә. Хәкимов. *Медпунктта эшләгән йылпы бисә .. ҡарап та тормайынса: «Дарыуым да, бинттарым да юҡ. Ҡаратауға китергә торам. Иртәгә килерһең», — тип бороп сығармаһынмы.* Ә. Хәкимов.

ЙЫЛПЫЛДАҠ I (йылпылдағы) (Р.: коптилка; И.: (primitive) oil lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Ҡыуыҡһыҙ кәрәсин шәме; һуҡыр шәм. □ Коптилка. *Йылпылдаҡты яндырыу.*

ЙЫЛПЫЛДАҠ II (йылпылдағы) (Р.: платье с оборками; И.: frilled dress; Т.: fırfırlı elbise) *и. диал.*

Ҡатмар һалып тегелгән күлдәк. □ Платье с оборками. *Йылпылдаҡ кейеү. Йылпылдаҡ тектереү.*

ЙЫЛПЫЛДАТЫУ (йылдылдат-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йылпылдау**. *понуд. от* **йылпылдау**.

ЙЫЛПЫЛДАУ (йылпылда-) (Р.: мигать *(об огне)*; И.: twinkle; Т.: ışıldamak) *ҡ.*

1. Бер һүнеп, бер тоҡанып китеү. □ Мигать *(об огне)*. *Май шәм йылпылдай.* ■ *Аҫмалы лампаның тәҙрәнән төшкән яҡтыһында күләгәләр йылпылданы.* Һ. Дәүләтшина.

2. *диал. ҡар.* **емелдәү**. *Йондоҙҙар йылпылдай.*

3. *диал. ҡар.* **күҙ йомғолау.**

ЙЫЛПЫС I (Р.: непоседливая; И.: fidgety; Т.: yerinde durmaz) *с. һөйл.*

Ҡыланырға яратҡан, ҡыйпысыҡ *(күберәк ҡыҙ балаға ҡарата)*. □ Непоседливая, вертлявая *(о девочке)*. // Непоседа, вертушка. *Йылпыс ҡыҙ. Йылпыс булыу.*

ЙЫЛПЫС II (Р.: деревянное корыто для просеивания крупы; И.: wooden trough; Т.: ahşap tekne) *и. диал.*

Ярманы елдә иләй торған киң оҙонса ағас ялғаш, һелкеүес. □ Широкое, продолговатое деревянное корыто для просеивания на ветру крупы и т. п.

ЙЫЛТ (Р.: подражание внезапному и быстрому движению; И.: imitative word; Т.: ani hareketi bildiren kelime) *оҡш.*

Ҡапыл булған етеҙ хәрәкәтте, тиҙ-тиҙ генә эш итеүҙе белдергән һүҙ. □ Подражание внезапному и быстрому движению. *Йылт итеп килеп инеү. Йылт итеп ҡарау.* ■ *Ошо ваҡыт ниндәйҙер ҡараҫҡы юл аша йылт итеп ырғыны.* Ә. Хәкимов. *Зөфәр текә генә бер тауҙы артылғансы өндәшмәй генә руль тәгәрмәсен борғолап килде лә, тигеҙлеккә сыҡҡас, йылт итеп хужаһына ҡарап алды.* Д. Бүләков. *Тик егеттең ялтырауы булды, уның ҡарсығаныҡылай сос күҙҙәре алыҫта йылт итеп үткән ялҡын кеүек һарғылт шәүләне күреп ҡалды.* Ғ. Әмири.

ЙЫЛТАЛАУ (йылтала-) *ҡ. ҡар.* **йылтанлау 2.** *Күҙҙәре йылталап тора.*

ЙЫЛТАН *с. диал. ҡар.* **йылтанлаҡ.** ■ *Айыры ҡолаҡ, йылтан күҙ бүреһе күп Балҡантау; алпан-толпан атлаған айыуы күп Балҡантау.* Эпостан.

ЙЫЛТАНКҮҘ *и. ҡар.* **бүре I, 2.** *Йылтанкүҙ аулау. Йылтанкүҙ көсөгө.*

ЙЫЛТАНЛАҠ (Р.: кокетливая; И.: flirtatious; Т.: cilveli) *с.*

Ҡылансыҡланып, һырғаланып тороусан; ҡыйшанлаҡ *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата)*. □ Кокетливая, игривая. / Кокетка *(о женщине)*. *Йылтанлаҡ ҡатын. Йылтанлаҡ булыу.*

ЙЫЛТАНЛАТЫУ (йылтанлат-) (Р.: сверкать (глазами); И.: shine; Т.: ışıldatmak) *ҡ.*

Ялт-йолт уйнатыу *(күҙҙе, башты)*. □ Сверкать, играть *(глазами)*. *Күҙҙе йылтанлатыу.* ■ *Иҫәр кешеләй, ауыҙымды йырып, күҙемде йылтанлатып, көҙгө алдында баҫып торҙом, келәм өҫтөндә тауыш сығармай ғына бейеп алдым.* Н. Мусин.

ЙЫЛТАНЛАУ (йылтанла-) (Р.: сверкать (глазами); И.: glitter; Т.: parıldamak) *ҡ.*

1. Ялт-йолт уйнау *(күҙгә, башҡа ҡарата)*. □ Сверкать, играть *(глазами)*. ■ *[Ҡыҙҙар:] Ай, Хоҙайым, ҡайһылай матур! Йылтанлап тора бит күҙ-башы, тап Ағиҙел буҙ ташы.* М. Буранғолов. *Ғәлиәнең йәшкелт күҙҙәре йәнә мут йылтанланы.* Н. Мусин.

2. Күҙҙе йылтыратып ҡылансыҡланыу; ҡыйшаңлау. □ Кокетничать. ■ *Күрше ҡатын, ир-егет күрһә, йылтанлап китә.*

ЙЫЛТАНЛАШЫУ (йылтанлаш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йылтанлау.** *взаимн. от* **йылтанлау.** ■ *Уҡыусылар уларҙы дәррәү генә аяғүрә баҫып ҡаршы алды. Аптырауҙары ла күренеп тора: йылтанлашып берсә Зифаға, берсә Бәхтиәровкаға ҡарайҙар.* Н. Мусин.

ЙЫЛТ-ЙЫЛТ (Р.: подражание внезапному и быстрому движению; И.: imitative word; Т.: ani hareketi bildiren kelime) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат йылт иткәндә белдергән һүҙ. □ Подражание внезапному и быстрому движению. *Ҡуянҡа йылт-йылт итә.* ■ *Юҡ, туҡтаманы атыш, йылт-йылт итеп автоматтарҙан ут һибелгәне күренә, тик ниңәлер тауышы ишетелмәй.* Ә. Хәкимов. *Һанай батыр шул толпарҙы менеп, ҡоралдарын таҡҡас, көҙгөһөн алып ҡарайым тиһә, көҙгөһөндә, йылт-йылт итеп, төрлө һүрәт күренә, ти.* Әкиәттән. *Әле теге яҡта, әле был яҡта шул икәүҙең йә быныһына, йә тегеһенә йүнәлгән күҙ ҡарашы йылт-йылт итеп ҡала.* М. Кәрим.

ЙЫЛТ ҠАРА (Р.: чёрный-пречёрный; И.: pitch-black; Т.: simsiyah) *с.*

Йылтылдап торған ҡара; сөм ҡара. □Чёрный-пречёрный, очень чёрный. ■ *Татлыбай .. аҡ күлдәге өҫтөнән йылт ҡара камзулын кейҙе.* Ш. Шәһәр.

ЙЫЛТЛАТЫУ (йылтлат-) (Р.: делать блестящим; И.: make shining; Т.: parlatmak) *ҡ.*

Йылт итеп ялтыратыу. □ Делать блестящим. ■ *Ғариф эттәренең береһе, уның янына килеп, .. ҡар өҫтөндә ялбыр ҡойроғон болғап, күҙҙәрен йылтлатып. Шаһиҙәгә ҡарап торҙо.* Ғ. Хәйри. *Һалдаттар, әйтерһең, туйға йыйыналар: кейемдәрен тырышып-тырышып йыуалар, төймәләрен йылтлатып таҙарталар.* Д. Юлтый.

ЙЫЛТЛАУ (йылтла-) (Р.: блестеть; И.: shine; Т.: parlamak) *ҡ.*

1. Йылт итеп ялтырау. □ Блестеть, сверкать. // Блеск, сверкание. *Ҡуҡтә йондоҙҙар йылтлай. Яңы һалынған мәсет йылтлап тора.*

2. Йылт итеп ҡалыу, етеҙ хәрәкәт итеү. □ Быстро двигаться, передвигаться. ■ *[Әйүп] аҡын тотошлайы менән үҙенән ыскындырырға итһә лә, үткән аҙнаның ваҡиғалары бер-бер артлы кино кадрҙарылай күҙ алдынан йылтлап үтте.* Т. Ғарипова. *Ваҡыт үтә, .. станциялар йылтлап артта ҡала, унда ара-тирә кешеләр күренгеләй.* Н. Ғәйетбаев. *Йәшлек уҙған йылтлап ҡына бер тында, йәрем ҡалған йылдарымдың һыртында.* Т. Йосопов.

ЙЫЛТЫҠАЙ (Р.: коптилка; И.: wick lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. ■ *Йылтыҡайҙың майы бөткән, янмай.* Экспедиция материалдарынан.

ЙЫЛТЫЛДАҠ (Р.: блестящий; И.: bright, brilliant; Т.: parlak) *с.*

1. Йылтылдап торған. □ Блестящий, сверкающий. *Йылтылдаҡ көн. Йылтылдаҡ күлдәк.*

2. *ҡар.* **йылманлаҡ**. ■ *Хәйерле иртә, Мотал Булаттимерович! — Партия Өлкә Комитеты идеология секретарының ҡабул итеү бүлмәһендәге йылтылдаҡ хужабикә Һылыуҡайҙың мырылдаҡ бесәйҙекеләй яғымлы, ныҡыш ауазы ине.* Й. Солтанов.

ЙЫЛТЫЛДАТЫУ (йылтылдат-) (Р.: делать блестящим; И.: render shining; Т.: parıldatmak) *ҡ.*

Йылт-йылт ялтыратыу. □ Делать блестящим, сверкающим. *Тәҙрәләрҙе йылтылдатып йыуыу.*

ЙЫЛТЫЛДАУ (йылтылда-) (Р.: сверкать; И.: shine; Т.: parlamak) *ҡ.*

Йылт-йылт итеп ялтырау. □ Сверкать, блестеть, играть на свету, блеск, сверкание. *Аҫыл таш йылтылдай. Алыҫта ут йылтылдай. Йондоҙҙар йылтылдай. Ҡояшта йылтылдау.* ■ *Күҙҙәре менән тештәре генә йылтылдай ине.* Ф. Иҫәнғолов. *Шаҡман хандың һарайҙары күҙ яуын алып торорлоҡ биҙәктәр менән биҙәлгән буласаҡ, бөтә тирә-яғында алтын-көмөш йылтылдап торасаҡ уның!* К. Мәргән. *[Юламан ҡарт] ҡояш яҡтыһында аҡ ҡалай шикелле йылтылдап осҡан балыҡты тейен етеҙлеге менән эләктереп алыр ҙа, риза, ҡәнәғәт булып йырлай-мөңрәй, уны һыулы ҡунәккә ырғытыр.* З. Биишева.

ЙЫЛТЫН КҮҘ (Р.: блестящие глаза; И.: shining eyes; Т.: parlak göz) *и.*

1. Йылтанлап уйнап торған үткер күҙ. □ Живые, блестящие глаза. ■ *Кәкре ҡойроҡ, йылтын күҙ бүреһе күп Уралтау; ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ ҡуяны күп Уралтау.* Ҡобайырҙан.

2. Баланы ҡурҡыта торған бапаҡ. □ Бука.

ЙЫЛТЫН ШӘМ *и. диал. ҡар.* **һуҡыр шәм.**

ЙЫЛТЫР 1 (Р.: блестящий; И.: shining; Т.: parlak) *с.*

Йылт-йылт итеп, ялтырап торған; ялтыр. □ Блестящий. *Йылтыр күн. Йылтыр күҙ.* ■ *Уның [Ғабдулланың] ҡарашы иң тәүҙә ҡаршы стеналағы йылтыр түңәрәккә төштө.* М. Кәрим. *Күп ваҡыт ул [Мәҙинә], битенә һырылған йәш ботаҡтарҙы абайлап ҡына айыра-айыра, зөбәрйәттән йылтыр, аҡыҡтай шыма япраҡтарҙы һыйпап, ҡайҙа юл тотоуын да иҫәпләмәйенсә, атлай ҙа атлай.* Ә. Хәкимов. *Йылтыр ҙа ғына йылтыр ут күренә — юлаусынан ҡалған бер күмер.* Халыҡ йырынан.

ЙЫЛТЫР II (Р.: блеск; И.: lustre; Т.: parıltı) *и.*

1. Йылтырап торған нәмә. □ Блеск, сверкание, блёстка. *Самауырҙың йылтыры бөткән.* ■ *[Миңзифа] бүтәндәрҙән бер ни менән дә айырылмай кеүек ул. Шул уҡ йылтыры ҡаҫҡан резинка калуш, шул уҡ тоноҡ буяуға мансып иҫке простынянан тегелгән тар күлдәк.* Й. Солтанов.

2. *күсм. һөйл.* Араҡы. □ Водка. ■ *[Ғәлимә:] Ҡана, ҡәйнеште һыйларға йүгереп бара һалып, бер йылтырҙы килтерәйем.* Б. Бикбай.

ЙЫЛТЫРАҒАН *и. ҡар.* **йылтырған.** *Йылтыраған ятҡылығы.*

ЙЫЛТЫРАҠ I (Р.: блестящий; И.: shining; Т.: parlak) *с.*

Йылтырап торған. □ Блестящий, сверкающий. *Йылтыраҡ әйбер. Йылтыраҡ күҙле.*

ЙЫЛТЫРАҠ II (йылтырағы) (Р.: блёстка; И.: spangle; Т.: pul) *и.*

Йылтырап торған нәмә. □ Блёстка; блестящая вещь. *Йылтыраҡтар эләктергән ҡыҙ.*

ЙЫЛТЫРАҠ-ЙЫШЫРАҠ (йылтырак-йышырағы) *и. йыйн. ҡар.* **йылтыр-йышыр.**

ЙЫЛТЫРАМА *и. диал. ҡар.* **ялтырма.** *Йылға буйында йылтырамаға балыҡ ҡаптырып йөрөй.*

ЙЫЛТЫРАТЫУ (йылтырат-) (Р.: делать блестящим; И.: render lustrous; Т.: parlatmak) *ҡ.*

Йылт итеп балҡып торорлоҡ итеү; йылтыр итеү; ялтыратыу. □ Делать блестящим, сверкающим; придавать блеск, начищать. *Ештәрҙе йылтыратып көлөү. Самауырҙы ҡом менән ышҡып йылтыратыу.* ■ *Яҡуп, күҙҙәрен йылтыратып, Ғәбдулла күкрәгендәге миҙалға ҡарап алды.* М. Кәрим. *Унан, еҙ йүгәнен сылтыратып, көмөш эйәрен йылтыратып, ергә етеп торған оҙон ялдарын елпелдәтеп, стакан тояҡтарын тыпылдатып ала айғыр килеп сыҡһын ине.* Ф. Иҫәнғолов. *Дүрт-биш аҙымда ғына, ҡан баҫҡан күҙҙәрен йылтыратып, дер-дер ҡалтырап, ниндәйҙер януар ята.* Ә. Хәкимов. *Уларҙы теҙеп, гөлт итеп йыйыштырылған яҡты, иҙәндәре йылтыратып буялған казармаға индергәс, ҡайһы бер курсанттар тупһа эргәһендә итектәрен һала башлай.* Р. Өмөтбаев.

ЙЫЛТЫРАУ (йылтыра-) (Р.: блестеть; И.: shine; Т.: parlamak) *ҡ.*

1. Йылт итеп балҡыу; йылтырлау, ялтырау. □ Блестеть, сверкать. // Блеск, сверкание. *Ныҡ йылтырау. Быяла кеүек йылтырау. Йылтырап торған сәс. Ҡар бөртөктәре йылтырай.* ■ *Ҡатын һылыулығы өҫтөнә бик алсаҡ һәм яғымлы ине. көлгән саҡта бит остары соҡорланып ала, тигеҙ аҡ тештәре йылтырап китә.* С. Агиш. *Көлмәҫлек тә түгел шул — тегеләрҙең тештәре генә йылтырап күренә, бөтә ере баштан-аяҡ көл-күмер менән бысранып бөткән, ти.* Әкиәттән. *Ерҙең өҫтө бәрхәт кеүек йылтырар, күктә — монар, ерҙән быуҙар борҡорар.* М. Аҡмулла. ● *Йыландың йылтырағанына ышанма.* Мәҡәл.

2. Йышылып шымарыу. □ Лосниться *(о загрязнённой и потёртой одежде).* // Лоск. *Еңе йылтырап бөткән.* ■ *Керләнеп, йылтырап, ҡайышҡа әйләнгән таҡыяһын ҡырын кейеп... Әлекәй килә.* Т. Хәйбуллин.

ЙЫЛТЫРАУЫҠ I *с. ҡар.* **йылтыр I.** ■ *Ауырыу түрьяҡта, йылтырауыҡ башлы тимер карауатта, йомшаҡ түшәккә сумып ята.* М. Кәрим. *Ҡып-ҡыҙыл күҙҙән күк һәм алһыу йылтырауыҡ ялҡындар арҡыс-торҡос һалынған ҡоро ағастар буйлап үрмәләнеләр.* Я. Хамматов.

ЙЫЛТЫРАУЫҠ II (йылтырауығы) *и. ҡар.* **йылтыр II, 1.** ■ *Баҙыҡ йылтырауыҡ. Шырпы йылтырауыҡтары.*

ЙЫЛТЫРАУЫҠЛЫ (Р.: блестящий; И.: shining; Т.: parlak) *с.*

Йылтыр булып балҡыған. □ Блестящий, сверкающий. *Йылтырауыҡлы булыу. Йылтырауыҡлы күлдәк.*

ЙЫЛТЫРАШЫУ (йылтыраш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йылтырау**. *взаимн. от* **йылтырау**. *Ҡомда алтын бөртөктәре йылтыраша.* ■ *Был саҡта уның [Ғәйшәнең] киәфәте бөтөнләй үҙгәреп китте: алһыу бите бер аҙ ослая төшкәндәй булды, ҡаштары юғары сөйөлдө, нурлы күҙҙәрендә өр-яңы осҡондар йылтыраштылар.* Д. Юлтый. *Бер нисә бала, дәрес менән*

һис тә ҡыҙыҡһынмай, күҙҙәре йылтырашып, көлөп ебәрә яҙып ултыра. З. Биишева.

ЙЫЛТЫРБАШ *и. диал. ҡар.* **ялтырма.** *Йылтырбашҡа балыҡ ҡармаҡлау.*

ЙЫЛТЫРҒАН (Р.: слюда; И.: mica; Т.: mika) *и.*

1. Ҡатлауланып ҡубып торған үтә күренмәле тәбиғи минерал. □ Слюда. / Слюдяной. *Йылтырған киҫәге. Йылтырған сығарыу.*

2. *диал.* Гәлсәр таш. □ Хрусталь.

ЙЫЛТЫР-ЙЫЛТЫР I *с. ҡар.* **йылтыр I.** *Йылтыр-йылтыр уйынсыҡтар.* ■ *Балаһы бар — маҙаһы бар, бер уҫлаптай улы бар, йылтыр-йылтыр күҙе бар, әҙәм төҫлө һыны бар.* Йырҙан. *Тау башынан иңшмә аға, тулҡындары йылтыр-йылтыр. Һыуға барған һылыуҙарҙың сулпылары сылтыр-сылтыр!* Я. Хамматов.

ЙЫЛТЫР-ЙЫЛТЫР II *и. ҡар.* **йылтыр-йышыр.** *Йылтыр-йылтырға ҡыҙыу.*

ЙЫЛТЫР-ЙЫШЫР (Р.: дорогие вещи; И.: expensive things; Т.: pahalı eşya) *и. йыйн.*

Ниндәйҙер ҡиммәтҡә эйә булған арыуыраҡ нәмәләр. □ Дорогие вещи, дорогая обстановка. ■ *Өй эсе йылтыр-йышыр менән шыплап тултырылған.* Б. Бикбай.

ЙЫЛТЫР КҮҘ (Р.: блестящие глаза; И.: lustrous eyes; Т.: parlak göz) *и.*

Йылтлап уйнап торған шаян күҙ. □ Живые, блестящие глаза. ■ *Бөгәсә көн баҡсала килеп өндәшкән йылтыр күҙ уға [Мәҙинәгә] ниндәй йомош ҡушмаҡсы?* Ә. Хәкимов.

ЙЫЛТЫР ҠАРА (Р.: чёрный-пречёрный; И.: pitch-black, raven black; Т.: simsiyah) *с.*

Йылтылдап торған сөм ҡара. □ Чёрный-пречёрный, очень чёрный. *Йылтыр ҡара бәрхәт.* ■ *Әхмәт Әхмәт улы Зиннәтуллин яр ҡаяһы ҡашағаһына ҡалҡына, сал бейеклектә ҡолаҡтарҙа гөжләгән һауа ағымының тығыҙлығынан кинәнеп, йылтыр ҡара йөн костюмының төймәләрен ысҡындырып ебәрә.* Й. Солтанов.

ЙЫЛТЫРЛАНЫУ (**йылтырлан-**) *ҡ. төш. ҡар.* **йылтырлау**. *страд. от* **йылтырлау**. ■ *Бер аҙҙан ай ҙа йылтырланды.* Ғ. Хәйри.

ЙЫЛТЫРЛАТЫУ (**йылтырлат-**) (Р.: делать блестящим; И.: render lustrous; Т.: parlatmak) *ҡ.*

Йылт-йылт итеп балҡытыу; йылтыратыу. □ Делать блестящим, сверкающим. ■ *Турысай ҙа атым, ай, еләлер, йылтырлатып килгән ҡош кеүек. Үткән генә ғүмерем, ай, буш кеүек, ҡалған ғына ғүмер төш кеүек.* Халыҡ йырынан.

ЙЫЛТЫРЛАУ (**йылтырла-**) (Р.: блестеть; И.: shine; Т.: parlamak) *ҡ.*

Йылт-йылт итеп балҡыу; йылтырау. □ Блестеть, сверкать. *Ямғыр тамсылары йылтырлай.*

ЙЫЛТЫРЛАШЫУ (**йылтырлаш-**) *ҡ. урт. ҡар.* **йылтырлау.** *взаимн. от* **йылтырлау.** *Йондоҙҙар йылтырлаша.*

ЙЫЛТЫРМА *и. ҡар.* **ялтырма.** *Йылтырмалы ҡармаҡ. Еҙ йылтырма.*

ЙЫЛТЫРТАЛ (Р.: ива серебристая; И.: European willow; Т.: ak söğüt) *и. диал.*

Аҡ тал. □ Ива серебристая (лат. *Salix*). *Йылтырталдың балы асыҡ һары төҫтә була.*

ЙЫЛ УРАТАҺЫ (Р.: круглый год; И.: all the year round; Т.: yılın dört mevsiminde) *и.*

Бөтә йыл буйы; йыл әйләнәһе. □ Круглый год. ■ *Өйҙә егәрле хужабикә булыуы менән Фәриҙә ханым яҡындарын, туғандарын, дуҫтарын күптән әсир иткән. Ул үҫтергән гөлдәр йыл уратаһы сәскә ата.* «Торатау», 19 август 2010.

ЙЫЛЪЯҘМА (Р.: летопись; И.: chronicle; Т.: vakayiname) *и.*

1. Боронғо Рәсәйҙә: тарихи ваҡиғаларҙы йыл һайын теркәй барған яҙыу. □ Летопись. *Боронғо йылъяҙмалар. Йылъяҙмалар китабы.*

2. Ваҡиғаларҙың төрлө даими яҙмаһы; көндәлек, хроника. □ Летопись, хроника. *Ваҡиғалар йылъяҙмаһы.* ■ *Кешелек йылъяҙмаһында тиңдәше булмаған Беренсе донъя һуғышының хәрәкәт итеүсе көсө лә шул нәфсе ине.* М. Хужин. *Йәниҫәп — дәүерҙең алтын йылъяҙмаһы йомғаҡтары киләсәк быуындар өсөн ҡиммәт.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

ЙЫЛЪЯҘМАСЫ (Р.: летописец; И.: chronicler, annalist; Т.: vakanüvis) *и.*

Ваҡиғаларҙы йыллап яҙа барыусы. □ Летописец. ■ *Амон биләмәһенең үҙәк өлөшөндә «Йыльяҙмалар залы» төҙөлә, был залдың диуарҙарында фирғәүен алып барған яуҙарҙың шаһиты булған йыльяҙмасы Чанини тарафынан яҙылған яу тарихтары бәйән ителә.* Интернет селтәренән.

ЙЫЛЫ I [боронғо төрки *йылыг*] (Р.: тёплый; И.: warm; Т.: ılık) *с.*

1. Ғәҙәттәгенән юғарыраҡ температуралы; әҫәгә тартым; *киреһе* — һыуыҡ. □ Тёплый. *Йылы ой.* ■ *Зәңгәрһыу яулыҡтай күктә йылы нурҙар ағылйым монар һымаҡ ағыла ине.* Картотека фондынан. *Бер ваҡыт шулай марттың йылы ҡояшында Байғужа менән икәү генә ултырабыҙ.* Д. Юлтый. ● *Йылы ергә йылан да эйәләшә.* Мәҡәл.

2. Температураһы ғәҙәттәгенән юғары, бик һыуыҡ түгел. □ Горячий, тёплый. *Йылы сәй. Йылы ямғыр. Йылы ел. Йылы ағым.* ■ *Йомшаҡ ҡына йылы күк томанға төрөнгән туғайҙарҙы маҡтап, һандуғастар һайраны.* И. Насыри. *Таң менән эс йылындырырлыҡ ҡына йылы сәй эстек тә кейенеп санаға ултырҙыҡ.* Ғ. Дәүләтшин. *Яратам мин күмәк хеҙмәт яҙын, ҡымыҙ кеүек татлы һауаһын, ергә йылы ямғыр һибәләгән болоттарҙың алтын ҡанатын.* М. Кәрим. *Йылы ҡоймаҡ ашай-ашай тәүге сынаяҡ сәйҙе лә эсергә өлгөрмәнеләр, кемдер былай ҙа асыҡ торған ишеккә бер-ике шаҡыр сиртте.* Ғ. Ибраһимов.

3. Һауаһы юғары температуралы, һыуыҡтары бик булмаған *(һауа, йыл миҙгеле, тәүлеккә ҡарата).* □ Тёплый. *Йылы төн. Йылы ҡыш. Йылы көн.* ■ *Кешеләр сәсеүҙе яҡшы башҡарып сыға, ямғыр яуғас, йылы булғас, иген дә бик матур үҫә.* Ғ. Хисамов. *Ағастарҙа ҡоштар һайрай йәйҙең йылы таңында. Тәбиғәт тә башын эйә беҙҙең көстәр алдында.* Халыҡ йырынан. *Ҡойон да, йылы ел дә кешегә зыян ҡыла ала.* Ә. Сөләймәнов.

4. Һауаһы уртаса температуранан юғары *(ергә, климатҡа ҡарата).* □ Тёплый.

5. Тәндә һыуыҡтан яҡшы һаҡлай торған. □ Тёплый. *Йылы салбар. Йылы ойоҡ. Йылы түшәк.* ■ *Унан, [атаһы] ашыға-ашыға, уға [Юлдашҡа] ҡоро, йылы кейемдәр бирҙе.* З. Биишева. *Күҙгә йоҡо төйөлә. Заһиттың тиҙерәк кәләше янына, йылы юрған аҫтына сумғыһы килә.* Һ. Дәүләтшина. ● *Юлға сыҡһаң, йылы кейемеңде ҡалдырма.* Мәҡәл.

6. Һалҡын көндәрҙә лә бик һыуынмай торған, елде, һыуыҡты үткәрмәй торған *(бинаға ҡарата).* □ Тёплый. *Йылы ой. Йылы фатир. Йылы һарай.* ■ *Завод крәҫтиәндәре ыһ та итмәй, үҙ ауыҙынан өҙөп икмәген бирҙе, ылау бирҙе, йылы өйөн йәлләмәне.* Ғ. Ибраһимов. *Бындай ямғырҙа, дәрес әҙерләп, төрлө ҡыҙыҡлы китаптар уҡып, рәсемдәр төшөрөп, йылы өйҙә ултырыу ниндәй рәхәт була бит.* З. Биишева. *Бәлки, юлсы толоп йылыһында тыңлайҙыр ҙа буран йырҙарын. Ашығалыр йылы өйгә, һөйгәненең янына ҡайтырға.* Р. Ниғмәти. ● *Өй эсендә ҡабағыңдан ҡар яуҙырма, асыуыңа юл ҡуйып, йылы өйөңдө туҙҙырма, юҡ талашҡа юл ҡуйып.* Мәҡәл.

7. *күсм.* Күңелгә хуш килерлек, яғымлы; ихлас күңеллелекте, һөйөү тойғоһон сағылдырған. □ Тёплый. // Тёплое отношение, теплота. *Йылы һүҙ. Йылы хәбәр. Йылы ҡаршылау. Йылы оҙатыу. Йылы тойғо. Йылы мөнәсәбәт. Йылы тәьҫир.* ■ *Шуның өсөн дә Усманға үҙенең ерҙәштәре Муса Алиев менән Садыҡ Сәйетов йылы һүҙ ыҫҡындырмағандарҙыр, моғайын.* Ғ. Ибраһимов. *Һәм мин тоям төн ҡараһы аша ул күҙҙәрҙең йылы ҡарашын.* М. Кәрим. *Был көндәр Айбикәнең күңелендә ғүмеренең иң яҡшы, тормошоноң иң рәхәт, иң йылы ваҡыттары булып иҫендә ҡалғандар.* Һ. Дәүләтшина. *Сәйҙел йылы итеп йылмайҙы.* Ғ. Сәләм. *Тик осрашыуҙың беренсе көндәрендәге кеүек бер-береһенә һоҡланыу, ҡыуаныу менән бәйләнгән айырыуса йылы дуҫлыҡ ҡына юҡ ине хәҙер.* З. Биишева. ● *Йылы көн ҡарҙы иретер, йылы һүҙ йәнде иретер.* Мәҡәл. *Йылы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы.* Мәҡәл. *Йылы һүҙ таш иретер.* Мәҡәл. *Йылы һөйләһәң, йыланды ла өңөнә индереп була.* Мәҡәл. *Өйөң һалҡын булһа ла, күңелең йылы булһын.* Мәҡәл. *Йылы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы.* Әйтем.

8. *күсм.* Иҫкереп юйылмаған, онотолмаған; яңы. □ Свежий. ■ *Һөйләшеп улты-*

рыуҙар бер генә булманы, әлбиттә. Ләкин йылы сағында яҙып ҡалдырмағанлыҡтан, күбеһе онотолған. С. Кулибай.

♦ **Йылы ҡулда** көн йылы саҡта. □ Пока тепло. *Йылы ҡулда ҡайтып ҡалырға кәрәк.* **Йылы ҡулдан** биргән ыңғайы, ҡулдан алғас та. □ Сразу. *досл.* Из тёплых рук. ■ *[Ғариф:] Йә әле, Шәрәфи, йылы ҡулдан берҙе эсеп ебәр.* И. Насыри. **Йылы тәнеңдә туҙһын** яңы кейем кейгән кешегә әйтелгән теләк һүҙе. □ Носи на здоровье. *Ҡулдәгең матур, йылы тәнеңдә туҙһын.*

ЙЫЛЫ II (Р.: тепло; И.: warmth; Т.: ısı) *и.*

1. Эҫе менән һыуыҡ араһындағы хәл; *нимәләр* юғары температураһы һәм шул әйберҙең тыны. □ Тепло. *Ус йылыһы.* ■ *Йондоҙҙоң да икән нуры һүнә, ҡояштың да тына йылыһы.* М. Ғәли. *Сәбилә менән йәшәгән [Ихсанбайҙың] ғүмере ерек утын, арыш икмәге кеүек: уты яна — йылыһы юҡ, ашап эсең тула — кәйефең күтәрелмәй.* Т. Ғарипова. *Өй самауыр йылыһы менән йылына төштө.* С. Агиш. *Ошо ҡулдың йылыһы һәм ҡөҙрәте бынан ары ла мине бөтә ғүмерем буйы һаҡлаясаҡ һәм яҡлаясаҡ.* М. Кәрим. *Ҡояш йылыһын тойоп, һаламлыҡҡа сыҡҡан тауыҡтар, ҡуркышып, ҡытҡылдап, аҙбар ҡыйығына һибелделәр.* Г. Лоҡманов. *Ольга Ивановна ут йылыһында балаһының одеялын асты.* Б. Дим. ● *Йылы һөйәк һындырмаҫ, һыуыҡ тәнде тындырмаҫ.* Мәҡәл. *Иҫке кейемдең йылыһы юҡ.* Мәҡәл. *Түн йылыһы — иңдән төшкәнсе, дуҫ йылыһы — гүргә киткәнсе.* Әйтем.

2. Температураһы ғәҙәттәгенән юғарыраҡ булған урын. □ Тепло, тёплое место. *Йылыла тотоу. Йылыға ҡуйыу.* ● *Йылыға йылан әйәләй.* Мәҡәл. *Аяғыңды йылыла, башыңды һалҡында тот.* Мәҡәл.

3. Температураһы ғәҙәттәгенән юғарыраҡ булған йыл, тәүлек миҙгеле. □ Тепло. *Йәйҙең йылыһына тән иҙрәй.* ■ *Тапалған ҡар яҙ йылыһына бирешергә теләмәй, ныҡ ята, шуға күрә сана егеп йөрөйҙәр.* Н. Мусин.

4. *күсм.* Яғымлы, яҡын тойғоноң тәьҫире. □ Тепло, теплота. *Йөрәк йылыһы. Күңел йылыһы. Мөхәббәт йылыһы.* ■ *Айсыуаҡты һауыҡтырыу өсөн, уның күҙҙәрендә шатлыҡ нурҙарын балҡытыу өсөн ауыл тәбиғәте генә түгел, тиңдәштәренең дуҫлыҡ йылыһы ла кәрәклеген аңланы Гөлназ апай.* Ш. Янбаев. *Күрәһең, әҙәмдәр үҙенә иң яҡын, йөрәк йылыһын бүлешерҙәй кешене сәсеп үҫтерә алмай.* Н. Мусин. *[Биктимер:] Ҡаҫҡынға ҡайҙа ла бер, Шаҡман ағай, күңел йылыһы ғына етмәй.* К. Мәргән.

♦ **Йылы урын** эш, йәшәйеш өсөн үтә тыныс, ҡулай шарттар тыуҙырылған ер. □ Тёплое местечко. ■ *Уҙған йыл уҡ, йәйге каникул ваҡытында, ҡаҙаҡтар араһында булып, үҙенә дуҫ-иш, йылы урын табып ҡайтҡайны Сафа.* Б. Бикбай. **Эскә йылы инеү** ҡурҡыныс-маҙар бөтөп, күңелгә еңеллек килеү. □ *букв.* Появилась надежда на благополучный исход *чего,* отлегло от сердца.

ЙЫЛЫ III (Р.: в год; И.: in the year of ...; Т.: yılında) *р. һөйл.*

Ҡайһылыр йылда; йылды. □ В год. *Теге йылы. Һуғыш башланған йылы. Эшкә урынлашҡан йылы.*

ЙЫЛЫ АШ (Р.: горячая пища; И.: hot food; hot meals; Т.: sıcak yemek) *и.*

Бешкән аш. □ Горячая пища. *Йылы аш ашау.*

ЙЫЛЫ БИРЕҮ (Р.: отопление; И.: heating; Т.: ısıtma) *и.*

Көҙөн йорттарҙы йылытыу өсөн радиаторҙарға йылы ебәреү. □ Отопление. *Йорттарға йылы биреү башланды. Бөтә мөһим социаль объекттарға йылы биреү тамамлана.*

ЙЫЛЫ ИТ (Р.: парное мясо; И.: fresh meat; Т.: taze eti) *и.*

Яңы һуйылған мал ите. □ Парное мясо. *Баҙарҙан йылы ит алыу.*

ЙЫЛЫ КЕРЕҮ (йылы кер-) (Р.: надежда на благополучный исход; И.: hope for a good outcome; Т.: içi rahatlamak) *ҡ.*

Күңелдә ышаныс, ыңғай хис-тойғо барлыҡҡа килеү. □ Надежда на благополучный исход *чего*; отлегло от сердца. *Күңелгә йылы керҙе.*

ЙЫЛЫҠАЙ *с. ирк. ҡар.* **йылы I.** ■ *Кәримә ҡыҙының йылыҡай тығыҙ тәненән һыйпаҡлай.* М. Кәрим. *[Бибисара абыстай:] Бик тә йомшаҡ, бик тә йылыҡай ғына була*

бит инде был [Емештең ҡул эше]. З. Биишева.

ЙЫЛЫ ҠАНЛЫЛАР (Р.: теплокровные; И.: warm-blooded; Т.: sıcakkanlı hayvanlar) *и. зоол.*

Тәндәренең даими температураһын һаҡлаусы йәнлектәр. □ Теплокровные. *Һөтимәрҙәр һәм ҡоштар йылы ҡанлылар рәтенә ҡарай.*

ЙЫЛЫЛЫҠ (йылылығы) (Р.: тепло; И.: heat; warmth; Т.: ısı) *и.*

1. *физ.* Есемдең атом һәм молекулаларының температураһы күтәрелеү менән билдәләнгән энергия. □ Тепло, теплота. / Тепловой. *Йылылыҡ үлсәү бераҙмеге. Йылылыҡ энергияһы.*

2. Есемдең йылыныу дәрәжәһе; температура. □ Тепло. ■ *Көн буйынса нуры, йылыһы менән тәнгә йылылыҡ, рәхәтлек биргән ҡояш, инде байырға яҡынлашып, тау битендәге урман артына йәшеренде.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡайнар өйрә эскә йылылыҡ бирҙе.* Д. Юлтый. *Йылылыҡ теймәгән йоморҡанан себеш ярамауы һәр кемгә билдәле.* Ә. Хәкимов. *Шакира өйҙөң йылылығына, еләк, ҡарағат еҫтәре сыҡҡан һауаға ирәйеп китте, туның сисеп элеп, үҙе иҫерлеккә барып ултырҙы.* Т. Ғарипова. ● *Ҡояш янында — йылылыҡ, инә янында — изгелек.* Мәҡәл.

3. *күсм.* *Ниҙеңдер* йәнгә рәхәт биргән шауҡымы. □ Тёплое отношение, теплота. *Күңел йылылығы. Ҡараштағы йылылыҡ.* ■ *Башҡа беренсе килгән нәмә — ҡояштың йылы ҡарауы, донъяның яҡтылығы тураһындағы тәьҫир булды, йөрәкте ниндәйҙер сикһеҙ яғымлы йылылыҡ солғап алған кеүек булды. Был — йәшәү шатлығы ине, күрәһең.* А. Карнай. *Был һорауҙа күкрәк йылылығы һәм хәстәрлек бар ине.* Б. Дим. *Күҙҙән-күҙгә күсеп нур уйнаны, йөрәктәрҙән бәрҙе йылылыҡ.* М. Ғәли. *Ҡояш! Беҙ йөрәктәр йылылығын йырҙа һиңә тиңдәш итәбеҙ.* Р. Ниғмәти.

ЙЫЛЫМ I (Р.: невод; И.: seine; Т.: sürtme ağı) *и.*

Ҙур һөҙгө. □ Невод. *Йылым менән балыҡ һөҙөү. Йылым тартыу.* ■ *Бала-саға күпме ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙыра, кеше ул мурҙа, ул йылым менән балыҡты ҡыра, юлында осраған бар йыланды, кеҫәрткене үлтерә.* Ә. Әминев. *Теге йылғырҙар ҡармаҡҡа топмай бит, йылым менән уратып һөҙә лә ала.* Ә. Хәкимов. *Баҡһаң, йылым тарта балыҡсылар, кис мәлеме, яҡты таң мәллә.* М. Ғәли.

ЙЫЛЫМ II *и. диал. ҡар.* **шыя.** *Йылым ҡалҡҡан.*

ЙЫЛЫМ III *и. диал. ҡар.* **йөлөн.** *Йылым буйы.*

ЙЫЛЫМ IV *и. диал. ҡар.* **йылыу.**

ЙЫЛЫМСА *с. диал. ҡар.* **йылымыс.** ■ *Кемдер ең эсенә йылымса һыу ҡойғандай булды.* Ә. Чаныш. *Йылымса, йомшаҡ төнгө ел уларҙың [Юлдаш менән Ҡыҙырастың] биттәренән, сәстәренән һөйә.* З. Биишева.

ЙЫЛЫМ ҺӨҘӨҮ (йылым һөҙ-) (Р.: рыбачить; И.: seine; Т.: balık avlamak) *ҡ. диал.*

Балыҡ һөҙөү. □ Рыбачить *(сетью, бреднем). Иртә менән йылым һөҙөргә барабыҙ.*

ЙЫЛЫМЫҠ *с. диал. ҡар.* **илгәҙәк.** *Йылымыҡ ҡыҙ. Йылымыҡ булыу.*

ЙЫЛЫМЫС (Р.: чуть тёплый; И.: tepid; Т.: ılık) *с.*

Әҙ генә йылы *(шыйыҡлыҡҡа ҡарата).* □ Чуть тёплый, тёпленький, тепловатый. *Йылымыс һыу. Йылымыс итеү.* ■ *Тамырҙар буйлап, арыуҙан тыуған йылымыс ҡына ҡан йүгерә.* С. Агиш. *Алдар һыл аяғы буйлап йылымыс нәмә ағыуын тойҙо.* Н. Мусин. *Балды йылымыс һыуға ҡушып эсеү ҙә файҙалы.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 11, 2010. *Әсирҙәргә төш етеп килгәндә генә алюмин сеүәтәләрҙә йылымыс кәбеҫтә һурпаһы, шырпы ҡабы дәүмәлендәге икмәк бирелде.* Ғ. Хәйри.

ЙЫЛЫМЫСЛАНЫУ (йылымыслан-) (Р.: становиться тёпленьким; И.: become tepid; Т.: ılıklaşmak) *ҡ.*

Йылымысҡа әйләнеү. □ Становиться тёпленьким, чуть тёплым, слегка нагреться. ■ *Тәнәфес булдымы, арлы-бирле генә яғылғанлыҡтан сак-сак йылымысланған мейесте һырып алабыҙ.* Н. Мусин. *Ҡомғандағы һыуы йылымысланғас, хужа, күңалтаҡ ҡатаһын ҡатып, тәһәрәт алып инде.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫЛЫМЫСЛАУ (йылымысла-) (Р.: делать чуть тёплым; И.: make tepid, lukewarm; Т.: ılıklaştırmak) *ҡ.*

Йылымыс хәлгә килтереү, йылымыс итеү. □ Делать тёпленьким, чуть тёплым, слегка нагревать. *Йылымыслап кына һөт эсеү.*

ЙЫЛЫНА ТӨШӨҮ (йылына төш-) (Р.: теплеть *(о температуре)*; И.: become warmer; Т.: ısınmak) *ҡ.*

1. Һауа температураһының бер аҙ күтәрелеүе. □ Теплеть *(о температуре)*. *Көн йылына төштө. Июндә төндә йылына төштө.*

2. *күсм.* Яғымлылана барыу, йомшара барыу. □ Несколько смягчиться, стать менее суровым. *Ҡарашы йылына төштө.* ■ *[Уралдың атаһының] ҡарашы йылына төштө.* Ш. Хажиәхмәтов.

ЙЫЛЫНДЫРЫУ (йылындыр-) (Р.: согревать; И.: warm; Т.: ısıtmak) *ҡ.*

1. Йылытып, өшөгәндә бөтөрөү. □ Согревать, давать возможность согреться. *Мейес башында йылындырыу.* ■ *Тышта, көслө ямғырҙан һуң, урамдар һурҡып, икенсе көндөң ҡояшы йәш үләндәрҙе йылындырып рәхәтләндерә ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Ул [Күсәрев] ойоған аяҡтарын йыш-йыш һелккеләп йылындырҙы, яңы килеп туҡтаған поезд буйлап китте.* А. Таһиров. *Төньяҡ еле арҡаһында боҙ оҙаҡ ҡуҙғалмаһа, ел рухын йылындырырға ут янына саҡыралар.* Ә. Сөләймәнов. *[Иҫәкәй:] Осратһағыҙ, тотҡан ҡондоҙ, ҡамаларын һыпыра тартып алығыҙ, үҙҙәрен әле мин күрһәткәнсә аҙ-маҙ йылындырып алыу ҙа гөнаһ булмаҫ.* Н. Мусин.

2. *эйһ. ф. ҡар.* **йылыныу 1**. *Шәп атлағас, йылындырҙы.* ■ *[Ғәббәс:] Ныҕыраҡ ҡалтыраһаң, .. тиҙерәк йылындыра.* А. Игебаев.

ЙЫЛЫН УҠЫТЫУ (йылын уҡыт-) *ҡ. ҡар.* **йылын үткәреү 2.** *Йылын уҡытыуға йыйылыу.*

ЙЫЛЫН ҮТКӘРЕҮ (йылын үткәр-) (Р.: праздновать годовщину; И.: celebrate an anniversary; Т.: yıldönümünü kutlamak) *ҡ.*

1. Йыллыҡты байрам итеү. □ Праздновать годовщину. ■ *Унда [мөрәжәғәттә] әлеге йылдың айырым мәғәнәгә эйә булыуы — беҙҙең халыҡтың Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүенең 65 йыллығын байрам итеү һәм Республика йылын үткәреү менән әһәмиәтле икәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды.* «Юшатыр», 2 март 2010.

2. Үлгән кешене бер йылдан һуң иҫкә алыу мәжлесе. □ Справить поминки через год. *Өләсәйемдең йылын үткәрергә йыйылдыҡ.*

ЙЫЛЫНЫП КИТЕҮ (йылынып кит-) (Р.: потеплеть; И.: get warmer; Т.: ısınmak) *ҡ.*

1. Һауа температураһының күтәрелеүе. □ Повышаться *(о температуре воздуха)*, потеплеть. // Повышение температуры. *Көндәр йылынып китте.* ■ *Иртән, ҡояш күренгәс тә, көн йылынып китә.* А. Карнай.

2. *күсм.* Ҡурҡыныс, хәүеф бөтөп, күңелдә ышаныс тыуыу, күңелгә еңеллек килеү. □ Потеплеть *(в душе)*. ■ *Ҡом-ташлы ҡалҡыулыҡтар, селек, түбылғы ҡыуаҡтары осрай башлағас, [Насирҙың] күңеле йылынып киткәндәй булды.* З. Ураҡсин. *Ферма яғында тағы бер һыбайлы күренгәс кенә, күңел йылынып китте.* М. Бураҡаева.

ЙЫЛЫНЫУ (йылын-) (Р.: греться; И.: warm oneself; Т.: ısınmak) *ҡ.*

1. Йылы алып, өшөүҙән туҡтау *(тәнгә ҡарата)*. □ Греться, согреваться. // Согревание. ■ *Һәндерәлә йоҡлап ятҡан улдары Бүләкбай, сыуал утына йылынып, тулап-тулап йоҡлай.* Т. Хәйбуллин. *Ул [Мифтахетдин] тәүҙә йылына алмай интекте.* Я. Хамматов. *Ҡыҙрас .. бер кәбән аҫтына инеп, йылынып йоҡлап киткән.* Әкиәттән. *Аяҡтары яйлап йылына, рәхәтлектән ҡыҙҙың күҙҙәре йомола.* Ш. Хажиәхмәтов. ● *«Йылындым» тип, кейемен ташлаған — берләтә иҫәр, «туйҙым» тип, икмәген ташлаған — икеләтә иҫәр.* Мәҡәл. *Үҙеңдең яҡҡан утыңа үҙең йылынырһың.* Мәҡәл.

2. Һыуыҡтан йылыға әйләнеү, йылы хәлгә килеү. □ Греться, согреваться, нагреваться. // Согревание. *Һыу йылынды. Бүлмә йылынған.* ■ *Айбулат ҡаҙан быуы, самауыр боҫо менән йылынған өйөндә гимнастёркаһының иҙеүен ыскындырып, түрҙә аяҡ салып, ғаиләһе менән ыумас эсеп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина. *[Илтуғандың] бар ризығы — ус аяһындай көлсә лә таш кеүек ҡаты ҡорот йоморсаһы. Йәнә көн*

һауытта йылынып бөткән ике уртлам һыу. Ә. Хәкимов.

3. Температураһы ғәҙәттәгенән юғарыраҡ хәлгә килеү *(көнгә, һауаға ҡарата).* □ Греться, согреваться, нагреваться. ■ *Йәй етеп тә, көндәр һаман йылынмай.* Ә. Вәли. *Яҙ етеп, көндәр йылына башлағас ҡына, [Мифтахетдин] тышҡа сығып йөрөй башланы.* Я. Хамматов. *Март аҙағында һауа йылынды.* А. Таһиров. *Бына ҡояш ҡыҙҙыра башлар, көндәр йылыныр, йәшел хәтфә кеүек үләндәр йәшәреп сығыр.* С. Мифтахов. ● *Ҡышҡы көндөң йылыныуына ышанма, дошмандың көлөүенә ышанма.* Мәҡәл.

♦ **Эс йылыныу** *ҡар.* **эскә йылы инеү**. *Уны күргәс, эс йылынып китте.*

ЙЫЛЫ СЫУАҠ (сыуағы) *и. диал. ҡар.* **эбейҙәр сыуағы**. *Йылы сыуаҡ осоро.* ■ *Йылы сыуаҡ та етте. Күктең йөҙө зәңгәр, бер болот юҡ, йылы сыуаҡ ҡарҙы иретә.* Б. Вәлид.

ЙЫЛЫТҠЫ (Р.: подогретый; И.: heated; Т.: ısıtılmış) *с. һөйл.*

Йылытылған *(ашҡа ҡарата).* □ Подогретый, разогретый. *Йылытҡы былау. Йылытҡы аш.*

ЙЫЛЫТҠЫС I (Р.: нагреватель; И.: heater; Т.: ısıtıcı) *и.*

Йылылыҡ бүлеп сығарыусы, йылыта торған нәмә. □ Нагреватель, подогреватель, грелка. *Һыу йылытҡысы. Өй йылытҡысы.* ■ *[Гәлимә:] Ғәли булышты, һинең тән йылытҡысыңды мин эстән кейҙем.* А. Таһиров.

ЙЫЛЫТҠЫС II *и. зоол. диал. ҡар.* **еңгәсәй.** *Яҙ етеү менән бүрәнәләрҙә, таштарҙа йылытҡыстар күренде.*

ЙЫЛЫ ТУЛЫУ (йылы тул-) (Р.: истечь; И.: run out; Т.: vakti geçmek) *ҡ.*

Ҡуйылған ваҡыты етеү. □ Выйти, истечь *(о сроке службы). Йылы тулған документ. Йылы тулған һалдат.*

ЙЫЛЫТЫЛЫУ (йылытыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йылытыу 4.** *страд. от* **йылытыу 4.** ■ *Өйҙөң аҫҡы ҡатындағы ҙур бүлмә рәтләп йылытылмаған да.* А. Таһиров. *Уттарҙа көйгән, ҡан аралаш күҙ йәштәренә сыланған, мөхәббәт менән йылытылған, анттар менән ҡаҡтыртылған ил тупрағында бер-берећенән өс кенә аҙым арала Ерҙең ике балаһы баҫып тора.* М. Кәрим. *Күберәк «тере», йәғни, туңдырылмаған, консерваланмаған, микроволновкала йылытылмаған ризыҡ ашарға тырышығыҙ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

ЙЫЛЫТЫУ (йылыт-) (Р.: греть; И.: warm; Т.: ısıtmak) *ҡ.*

1. Йылылыҡ бүлеп сығарыу. □ Греть, нагревать. // Нагревание. *Мейес өйҙө йылыта. Пар менән йылытыу. Көҙгө ҡояш һаран йылыта.* ■ *Эй, утындар! Күпме мәрхәмәтлек һеҙҙең утта, һеҙҙең ялҡында! Һеҙ үҙегеҙ янып, кешеләрҙе йылытаһығыҙ бит һалҡында.* Н. Нәжми. *Мөрйәнән сыҡҡан төтөн донъяны йылытмаған кеүек, ата даны ла баланы биҙәмәй.* М. Кәрим. *Уның [Гилмандың] шулай етемһерәп ултырыуына Зөбәржәттең йәне әсене, бына хәҙер йүгереп инеп, ялт иттереп ут тоҡандырғыһы, тәмле итеп тамағына бешергеће, һыйлағыһы, унан ҡуйынына һыйынып, тәне менән йылытҡыһы килде.* Н. Мусин.

2. Йылыны тотоу, һыуыҡтан һаҡлау *(кейемгә ҡарата).* □ Греть. *Тун ҡаты һыуыҡтарҙа ла тәнде яҡшы йылыта.* ■ *[Вадик — Мадоннаға:] Күреп торабыҙ, дер-дер ҡалтырайһың, хатта кавалерҙың күлдәге лә йылытмай.* Д. Бүләков. *Ҡыптыр тун да Абдулланың әрнегән, өшөгән тәнен йылыта алманы.* «Йәшлек», 7 октябрь 2008.

3. Өшөгәнен бөтөрөү; йылындырыу. □ Погреть. *Аяҡты йылытыу. Ҡулды йылытыу. Арҡаны йылытыу.* ■ *Сакай әле Булгаков, әле Маһитап менән һөйләшеп, өҫтөн һалды, ҡулдарын ыуғылап йылытты, йылы мейескә яҡын барып, арҡаһын терәне.* А. Таһиров. *Барабан тирәһенә уралған тимерсыбыҡтың эҫелеге әле лә булһа күн бейәләй аша ҡулды йылытып торған кеүек.* А. Карнай. *[Мәскәй:] Ҡояшты һиңә йылытҡаны, донъяны йәнләндергәне һәм туҡландырғаны өсөн күрһәттем.* «Ҡуҙыйкүрпәс». *Тәненән һыуыҡ тулҡын үткән Ихсанбай бөрөштө, арҡа мейећенең өшөүен ныҡлап ҡыҙған усаҡ йылыһы ла йылыта алмай.* Т. Ғарипова.

4. Һыуыҡтан йылыға әйләндереү, йылы итеү. □ Разогреть, греть. *Аш йылытыу. Һыу йылытыу. Йылытып алыу. Утта йылытыу. Газда йылытыу.* ■ *[Фәүзиә:] Һыу йылыттығыҙмы? Мәрхүмәнең кәүҙәһен үҙем йыуымаҡсымын.* Т. Ғарипова. *Аталы-уллы ике аусы, ҡуян итен ишеккә һыйҙыра алмағас, уны өйгә тәҙрәнең бәләкәй өлгөһө утә алып инә; икәүһенә ҡуян ите етмәй, шул уҡ ваҡытта иртәгеһенә йылытып тағы ашарлығы артып та ҡала.* Ә. Сөләймәнов.

5. Температураһы ғәҙәттәгенән юғарыраҡ хәлгә килеү *(көнгә, һауаға ҡарата).* □ Теплеть. // Потепление. *Иртә йылытты.* ■ *Көн бер ни тиклем йылытты ла.* Ғ. Хәйри. *Иртәнсәк буранлап, һыуытыбыраҡ торған көн төшкә табан ҡапыл йылытты.* Я. Хамматов. *Ошо бер нисә сәғәт эсендә тышта ҡарлы ямғыр яуыуҙан туҡтап, көн йылытып ебәргәйне.* «Йәшлек», 6 май 2010. ● *Ялланған һуғышсы даны — йылытмаған ай яҡтыһы.* Әйтем.

6. *күсм.* Йылы тойғо уятыу, рәхәтлек биреү. □ Согревать, отогревать. *Күңелде йылытыу.* ■ *Исмаһам, хаттарым йылытһын, тип уларға [балаларына] көн һайын оҙон итеп хаттар яҙырға кереште [Дилбәр] — һағыныу тулы, һөйөү тулы хаттар.* Г. Ғиззәтуллина. *Йылы өй, йомшаҡ һуҙ урмансының йәнен йылытып ебәрҙе.* Ф. Әсәнов. *Февраль һыуығында, ҡуйының кеүек, йөрәктәрҙе йылыта һинең хат; йәйге ҡыҙыуҙарҙа, муйыл кеүек, күләгәһен бирә һинең хат.* Р. Ниғмәти.

7. *эйһ. ф. ҡар.* **йылыныу 3**. *Бөгөн йылытырға тейеш.* ■ *Марттың тәүге аҙналарында уҡ йылытып ебәрҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Арҡа йылытыу** илке-һалҡы йөрөү. □ Бездельничать. *букв.* Греть спину. *Арҡа йылытып йөрөү.*

ЙЫЛЫТЫУСАНЛЫҠ (йылытыусанлығы) (Р.: удельная теплота сгорания топлива; И.: specific heat; Т.: özgül ısı) *и. физ.*

Бер килограмм яғыулыҡ янғанда сыҡҡан йылылыҡ миҡдары. □ Удельная теплота сгорания топлива. *Ҡайын утынының йылытыусанлығы. Тапсыҡтың йылытыусанлығы.*

ЙЫЛЫУ I (йылы-) (Р.: согреваться; И.: warm (get); Т.: ısınmak) *ҡ. һөйл.*

Һыуыҡтан йылыға әйләнеү. □ Согреваться, нагреваться. *Бүлмә йылыны. Ер йылыны. Һурпа йылыны.* ● *Ерек утын яҡма, еңгә ҡатын алма: ерек утындың йылыуы юҡ, еңгә ҡатындың ҡыҙыуы юҡ.* Мәҡәл.

ЙЫЛЫУ II (Р.: полынья; И.: unfrozen patch of water; Т.: buzlar arasında açık su) *и.*

Һыуҙың ҡыш көнө туңмай ятҡан урыны; ҡаран. □ Полынья. ■ *Ат йылыуға тура килеп, санаһы менән ҡуша гөмбөрләп төшөп киткән.* Й. Солтанов. *Дим буйыҡайҙары бороу-бороу, бороуҙары һайын бер йылыу. Ебәк шәлкәйҙәрен ҡырын һалып, йылмайып та килә бер һылыу.* Халыҡ йырынан. *[Тәтәй ҡош] ҡыш көнө йылыуҙар эҙләп, күсеп йөрөй.* Э. Ишбирҙин.

ЙЫЛЫУЛАУ (йылыуыла-) (Р.: покрываться полыньями; И.: get covered with unfrozen patches of water; Т.: buzlar arası açık su ile kapanmak) *ҡ.*

Йылыуылы булыу, туңмау *(һыуға ҡарата).* □ Покрываться полыньями. *Йылға йылыулап ята.*

ЙЫЛЫ ҮТКӘРГЕС (Р.: теплопроводник; И.: heat conductor; Т.: ısı geçiren) *ҡ.*

Йылыны үҙе аша үткәрә торған ҡоролма. □ Теплопроводник; проводник тепла. *Баҡыр — иң яҡшы йылы үткәргес.*

ЙЫЛЫШ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуы араһы. □ Родовое подразделение башкир-бурзянцев. *Йылыштар араһы.*

ЙЫЛЫШТЫРЫУ (йылыштыр-) *ҡ. диал. ҡар.* **һырлыҡтырыу.** ■ *Үҙе [Гәләү ҡарт] кәмәнең ҡойроғон ярға табан йылыштыра.* А. Таһиров. *Тора-бара [Ғаяз] беләгемде ҡыҫып-ҡыҫып үҙенә йылыштыра башланы, көрһөнөп тә ҡуйғылай.* Н. Мусин.

ЙЫЛЫШЫУ (йылыш-) (Р.: тянуться; И.: reach out; Т.: uzanmak) *ҡ. диал.*

1. Яҡын килеү, һырлығыу. □ Тянуться. ■ *Ҡайҙандыр ҡабырғалары ҡөйөп бөткән, һыңар аяғы өҙөлгән бүре килеп сыҡты.*

Кешегә, мал-тыуарға теймәй, кирелһенсә, халыҡ бар ергә йылыша. Ә. Хәкимов. *Бите менән тәҙрәгә йылышҡан ҡыҙ тротуарҙағы егеткә бармағы, күҙҙәре, ирендәре менән ниндәйҙер аңлайышһыҙ ишаралар яһап өлгөрҙө.* Ф. Исәнғолов.

2. Шылышыу; яткан килеш ҡул-аяҡтар ярҙамында хәрәкәт итеү. □ Ползать, ползти. ■ *Иптәштәр бер нәмәнән дә ҡурҡмай алға йылышты.* Ш. Хоҙайбирҙин.

ЙЫЛЫ ЯҠ (яғы) *и. ҡар.* **көньяҡ.** *Йылы яҡҡа барыу. Йылы яҡтан ҡайтыу.* ■ *Күп илдәрҙе, күп ерҙәрҙе күрҙем, ғашиҡ итте мине йылы яҡ.* Р. Ғарипов. *Күп тә уҙмаҫ, ҡолан көтөүе лә яйлап-яйлап йылы яҡтарға ыңғайлар.* Ә. Хәкимов. *Ҡоштар ҙур-ҙур булып туптарға тупланды. Улар йылы яҡҡа оса.* Ғ. Ибраһимов.

ЙЫЛ ӘЙЛӘНӘҺЕНӘ (Р.: круглый год; И.: all the year round; Т.: yılın dört mevsiminde) *р.*

Бер йыл буйына. □ Круглый год. ■ *Ул [Арслан] бит йыл әйләнәһенә бер үҙе Әминә тирәһендә өйөрөләсәк!* Д. Шәрәфетдинов. *Беҙ халыҡ педагогикаһын уҡытыу нигеҙендә гимназия һәм «Артек» тибында йыл әйләнәһенә эшләй торған уҡыу һәм сәләмәтләндереү үҙәге асыу тураһында оло хыял менән пландар төҙөй башланыҡ.* М. Бураҡаева.

ЙЫМ I (Р.: гладкий; И.: smooth; Т.: düz) *с. диал.*

Шыма, йылтыр. □ Гладкий. *Йым киндер. Йым күн.*

ЙЫМ II *с. диал. ҡар.* **йыш 1.** *Йым текмә. Йым сәстек быйыл кишерҙе.*

ЙЫМ III *с. диал.*

1. *ҡар.* **бысыйы 1.** *Йым икмәк. Оном насар, шуға икмәк йым бешә.*

2. *ҡар.* **бысыйы 2.** *Йым күҙ.*

ЙЫМАЯҠ *с. диал. ҡар.* **йылмаяҡ.** *Йымаяҡ бесәй.*

ЙЫМҒЫРЫУ (йымғыр-) (Р.: загнуть; И.: turn up; bend; Т.: kıvırmak; bükmek) *ҡ.*

1. Ҡалай һауыттың ситен сүкеп бөгөү, ҡайтарыу. □ Загибать. *Ҡалайҙы йымғырыу.*

2. *күсм.* Һуғып йәмшәйтеү. □ Сплющивать, расплющивать, мять. // Сплющивание, расплющивание. *Биҙрәне йымғырыу. Аңғармаҫтан йымғырыу.*

ЙЫМЙЫЛДАУ (йымйылда-) *ҡ. диал. ҡар.* **йымылдау.** ■ *Ҡарағөләмбәт бей, йөрөй торғас, тирәһе йымйылдап торған бик матур һеләүһенгә тап була.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

ЙЫМ-ЙЫМ (Р.: подражание блеску; И.: twinkle; Т.: ışıl ışıl) *оҡш.*

Балҡып-балҡып киткән яҡтылыҡты, утты белдергән һүҙ. □ Подражание блеску, мерцанию, сверканию. *Йым-йым итеү.* ■ *Эҙҙәрендә йым-йым итә ваҡ таш, гүйә, ергә йондоҙ сәселгән.* М. Кәрим. *[Ҡыҙҙың] йым-йым итеп күренгән ваҡ ҡына тештәре Таштимергә ныҡ оҡшаны.* Ә. Хәкимов. *Һандыҡ эсе хас бер хазина... Сәйлән биҙәк йым-йым нур һибә.* М. Ғәли. *Уның [күлдең] төбөндә күҙ яуын алып, йым-йым итеп ике таш ята.* М. Өмөтбаев.

ЙЫМҠЫРАУ (йымҡыра-) *ҡ. диал. ҡар.* **йымғырыу 1.** *Һауыттың ситен йымҡырап эшләйһең.*

ЙЫМЛАНЫУ (йымлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йымлау II.** *страд. от* **йымлау II.** ■ *[Торомтай] ихатаһына сығып, ни тотоп, ни эшләргә белмәй тишек-тошоҡ түбәлеге, бүрәнәләре йымланмай ғына һалынған бурама аласығы тирәһендә тертәңләп йөрөй бирә лә тағы өйөнә инә.* Н. Мусин.

ЙЫМЛАУ I (йымла-) (Р.: делать гладким; И.: smooth out; Т.: düz yapmak) *ҡ.*

Шымартып йылтыратыу. □ Делать гладким, разглаживать, шлифовать, полировать. // Шлифование, шлифовка, полирование, полировка. *Етен йымлау.* ■ *Фәйрүзәле күктәреңдә йымлаған йондоҙ ҙа юҡ, томраған көндөҙ ҙә юҡ, ай ҙа юҡ, һис йәйҙәрендә йәй ҙә юҡ!* Д. Юлтый.

ЙЫМЛАУ II (йымла-) *ҡ. диал. ҡар.* **йышлау 1.** *Түбәне йымлап һалыу. Иҙәнде йымлау.* ■ *Ғилман ҡул осона алған тактаһын кузовка ырғытты, Нина иһә уны аяғы менән типкеләп, йымлабыраҡ һалып ҡуйҙы.* Н. Мусин.

ЙЫМЛЫ *с. диал. ҡар.* **йыш 1.** *Йымлы бура. Йымлы иҙән.* ■ *Ҡояш байышы һәм тон яғындағы өлкән тимер ҡапҡалар сыҡҡан уткеһеҙ йымлы итеп бикләнгән.* Н. Мусин.

ЙЫМШАН *и. бот. диал. кар.* **эрем.** *Кәртә артын йымшан баҫкан.*

ЙЫМЫЛДАТЫУ (йымылдат-) (Р.: вызывать мерцание; И.: cause twinkling; Т.: ışıldatmak) *ҡ.*

Йым-йым иттереү, йым-йым килтереү. □ Вызывать мерцание, мигать. *Фонарь утын йымылдатыу.* ■ *Тегеһе [ҡыҙ] утыҙ ике аҡ тешен йымылдатты.* Ә. Хәкимов. *Ә бер төндә Ҡыҙыл Ерек өҫтөн йымылдатты яңғын шаңдағы.* Ш. Бикҡол. *Атыш тынып торған ваҡытта башынан аяғынаса ҡап-ҡара туҙанға батҡан шайтан ҡиәфәтле заряжающий, ап-аҡ тештәрен йымылдатып, хихылдап көлөп ебәрҙе.* М. Кәрим.

ЙЫМЫЛДАУ (йымылда-) (Р.: блестеть; И.: shine; Т.: ışıldamak) *ҡ.*

Йым-йым итеү, йым-йым килеү. □ Блестеть, сверкать, мерцать, сверкание, мерцание. *Йондоҙҙар йымылдауы. Ысыҡ тамсылары йымылдай. Шәм йымылдай.* ■ *Үҙҙәрен [Юлдаш менән Ҡыҙыраҫты] шундай көләс, наҙлы йымылдап саҡырып алып та, аҙаҡтан йота яҙған мәкерле күл өҫтөнә теклән тынып ҡалдылар.* З. Биишева. *Байыр яҡҡа тәгәрәгән ҡояштың һарғылт нурҙары Шәрифулланың ыҫланған мыйыҡ остарына төшөп йымылдайҙар.* М. Кәрим. *Офоҡтоң бер яҡ ситендәге йымылдап торған берҙән-бер яңғыҙ йондоҙ ҙа ҡайҙалыр юғалды.* Я. Хамматов.

ЙЫМЫЛДАШЫУ (йымылдаш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йымылдау.** *взаимн. от* **йымылдау.** *Ҡар бөртөктәре йымылдаша.* ■ *Тик йондоҙҙар ғына йымылдашып торалар.* А. Таһиров. *Һөнәрсенең бөтә өйө тулып, йондоҙ кеүек йымылдашып ултырған ғәжәп зифа, ысын яһау көршәктәрҙең әле береһен, әле икенсеһен алып, баш сайҡап, тел сатылдатып торған [Өйрәнсек].* З. Биишева.

ЙЫМЫЛ-ЙЫМЫЛ *окш. ҡар.* **йым-йым.** *Йондоҙҙар йымыл-йымыл килә. Йымыл-йымыл янған уттар.*

ЙЫМЫРЛАУ (йымырла-) (Р.: кишеть; И.: swarm (with); Т.: kaynaşmak) *ҡ.*

Бер тирәлә ҡайнашып ҡыбырлау; ҡымйыу. □ Кишеть, собираться. ■ *Улар [балалар] сикһеҙ киңлектә тирмә иҙәнендә йымырлаған ҡырмыҫҡа шикелле генә күренгән атлы әҙәмдәргә, һеҙ беҙҙең илгә ҡайҙан килеп сыҡтығыҙ, тигәндәй, аптырап ҡарап ҡалалар.* Н. Мусин.

ЙЫМЫТЫР (Р.: имущество; И.: property; Т.: mal (varlığı) *и. диал.*

Кемдең йәки *нимәнеңдер* ҡарамағында булған бөтә нәмә; мөлкәт. □ Имущество. *Йымытыр бүлешеү.*

ЙЫНАЗА [ғәр. جنازة] (Р.: отпевание; И.: funeral service; Т.: cenaze töreni) *и.*

1. Үлгән кешене ислам дине ҡанундары буйынса ерләү йолаһы. □ Похороны *(по исламским традициям).* ■ *[Яҡуптың] улдары бергә йыназаға йыйылды, фәрештәләр уға оҙаҡ намаҙ ҡылды.* «Ҡиссаи Йософ». *Ҡолош халҡы саҡырыулы туйға, саҡырыуһыҙ баҙарға ихлас йөрөй, ә бына йыназаларға һайлап бара.* М. Кәрим.

2. Ҡәбергә алып китер алдынан мәйет эргәһендә уҡыла торған доға. □ Отпевание, панихида, заупокойная молитва. *Йыназа уҡыу. Йыназаһыҙ ерләү.* ■ *[Ишкәкселәрҙең] берәүҙәре өҙгөләнгән елкәндәрҙән ашығып кәфен бесә. Икенселәре ҡалтырай, ашыға, йыназа уҡый.* З. Биишева. ● *Кеше туй һөйләгәндә, ул йыназа һөйләгән.* Мәҡәл.

ЙЫНАЗА ДОҒАҺЫ *и. ҡар.* **йыназа 2.** *Йыназа доғаһы уҡыу.*

ЙЫНАЗАЛАУ (йыназала-) (Р.: отпевать *(покойника)*; И.: perform a funeral service; Т.: cenaze töreni) *ҡ.*

Йыназа уҡытыу. □ Отпевать *(покойника)*, совершать обряд отпевания. ■ *[Юлай ҡарт:] Мин һеҙҙән алда үлһәм, һеҙ мине икәүләп йыназалаһығыҙ. Ясин уҡып.* Б. Рафиҡов.

ЙЫНЫС *и. диал. ҡар.* **енес.** ■ *[Юлыш батыр:] Әммә эш кемдең ҡайһы йыныстан булыуында түгел.* Ә. Хәкимов. *Төрөк батыры йыныҫы менән төрөк түгел, уларға ялланған черкес ине.* Н. Мусин.

ЙЫПАЙТЛАП ЙӨРӨҮ (йыпайтлап йөрө-) (Р.: сплетничать; И.: gossip; Т.: dedikodu yapmak) *ҡ. диал.*

Ғәйбәт һөйләү. □ Сплетничать. *Ауыл буйлап йыпайтлап йөрөмә.*

ЙЫП-ЙЫЛТЫР (Р.: ярко блестящий; И.: very lustrous; Т.: çok parlak) *с. артыкл. дәр. кар.* **йылтыр**. *превосх. степ. от* **йылтыр**.

Бик йылтыр, саманан тыш йылтыр. □ Ярко блестящий. ■ *Ул [Һатыбал], йып-йылтыр еҙ төймәле ҡара китель кейеп, ике ҡулды кеҫәгә тығып, .. ишек алдында ары-бире йөрөй.* З. Биишева.

ЙЫП-ЙЫЛЫ (Р.: очень тёплый; И.: very warm; Т.: ipılık) *с. артыкл. дәр. кар.* **йылы**. *превосх. степ. от* **йылы**.

Бик йылы, саманан тыш йылы. □ Очень тёплый. ■ *Барс үлтерелгән, йып-йылы көйөнсә ята.* Эпостан. *Сена яҙҙарында йып-йылы күҙ, ғәжәп мәғәнәле йылмая күперҙәр.* М. Ғәли. *Йып-йылы ерҙең ҡуйынын ҡосоп, тамыры менән яҫтыҡтай ярҙар янында һаксылай тора имән.* Р. Назаров.

ЙЫП-ЙЫП (Р.: подражание миганию; И.: imitation of winking; Т.: ışıl ışıl) *окш.*

Асылып-йомолоп, йылтылдап торған нәмәне белдергән һүҙ; леп-леп. □ Подражание миганию. *Йып-йып итеү. Йып-йып килеү.*

ЙЫП-ЙЫУАН (Р.: очень толстый; И.: very thick; Т.: şipşişman) *с. артыкл. дәр. кар.* **йыуан**. *превосх. степ. от* **йыуан**.

Бик йыуан, саманан тыш йыуан. □ Очень толстый. *Йып-йыуан еп. Йып-йыуан кеше. Йып-йыуан ағас.*

ЙЫПҠЫ *и. диал.*

1. *кар.* **уйпат**. *Йыпҡы ер. Йыпҡы урын.*

2. *кар.* **ек I**. *Иҙән йыпҡыһы. Өрләк йыпҡыһы.*

ЙЫПҠЫУ *с. диал. кар.* **инҡеү**. *Йыпҡыу урын. Йыпҡыу ерҙә әле лә һыу ята.*

ЙЫПТЫР (Р.: медлительный; И.: sluggish; Т.: ağır) *с. диал.*

Мыштыр; ығыш. □ Медлительный, неповоротливый. *Йыптыр кеше. Йыптыр булыу.* ■ *Сос һайыҫҡан шул арала кәйелеп кенә ҡуйы сытыр араһына инеп юғалды, оҙон ҡойроғо ғына күренеп ҡалды. Ҡайҙа инде йыптыр ҡарғаға шырлыҡ араһында уны ҡыуып етеүе.* «Башҡортостан», 10 ғинуар 2009.

ЙЫПЫҠАС *с. диал.* **ҡыйпысыҡ**. *Йыпыҡас ҡыҙ.*

ЙЫПЫЛДАҠ *с. кар.* **йылманлаҡ**.

ЙЫПЫЛДАТЫУ I (**йыпылдат-**) (Р.: моргать; И.: blink; Т.: gözlerini kırıştırmak) *ҡ. һөйл.*

Йып-йып иттереү, йып-йып килтереү. □ Моргать. ■ *Ялаңбикә, күҙҙәрен йыпылдатып ымлап, Гөлйөҙөмдөң ҡолағына: — Сеүәтәләрен йыуа башланылар, әйҙә, сығайыҡ, — тине.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫПЫЛДАТЫУ II (**йыпылдат-**) *ҡ. диал. кар.* **йыпырыу**. *Ҡоймаҡтарҙы йыпылдатып бөттө.*

ЙЫПЫЛДАУ (**йыпылда-**) (Р.: моргать; И.: blink; Т.: gözlerini kırıştırmak) *ҡ. һөйл.*

1. Йып-йып итеү, йып-йып килеү. □ Моргать *(о глазах)*. *Күҙе йыпылдап тора.*

2. Йып-йып итеп ҡыйшанлау; ярамһаҡланыу *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата)*. □ Стараться угодить. *Йыпылдарға тырышыу.*

ЙЫПЫРТЫУ (**йыпырт-**) *ҡ.*

1. *һөйл. кар.* **йыпырыу**. *Йыпыртып ашау.* ■ *[Байғужа:] Ярар, ярар, юҡтың башын ауырттырма инде. Алдыңа ни килгән — ҡәнәғәт булып, йыпырта ғына бир.* Д. Юлтый.

2. *диал.* Һыпыртыу, ҡасыу. □ Удирать, улепётывать. *Урманға табан йыпыртты.* ■ *Рәйес килеп сыҡмаҫ элек тип, шыпырт ҡына үҙебеҙҙең ой яғына йыпырттым.* Н. Мусин.

ЙЫПЫРЫУ (**йыпыр-**) (Р.: уплетать; И.: eat up; Т.: silip süpürmek) *ҡ. һөйл.*

Ҡомһоҙланып ашау, ҡалдырмай тиҙ-тиҙ ашап бөтөү; йыпыртыу (1). □ Уписывать, уплетать. *Йыпырып ашау.* ■ *[Марат] бер ҡасан да тәмләп ҡарамаған балығын, әллә ниндәй диңгеҙ ашамлыҡтарын йыпырҙы.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

ЙЫПЫСЛАУ (**йыпысла-**) *ҡ. диал. кар.* **кепесләү**. *Күҙе йыпыслап тора.*

ЙЫР [дөйөм төрки *йыраг*] (Р.: песня; И.: song; Т.: şarkı) *и.*

1. Көй менән башҡарыла торған шиғри әҫәр. □ Песня, песнь; пение. *Моңһоу йыр. Бишек йыры. Лирик йыр. Йыр жанры. Йыр ижад итеү. Йыр башлау.* ■ *Барып еткәс, Зөләйхә ишек ҡаҡты. Өй эсендә гармун, йыр тауыштары ишетелде.* Т. Йәнәби. *Йырға һалам йәшлегемдең һағыштарын, шатлығын,*

йөрәгемә илһам биргән тәүге һөйөү сафлығын. Т. Ҡарамышева. *Аяҡтарым юлда, күңелем йырҙа, ерҙә мин бер шундай юламан, көндөҙ мин ҡояшҡа, ә төндәрен йондоҙҙарға ҡарап юл алам.* М. Кәрим. ● *Йырҙың йыртығы юҡ, һүҙҙең һүтеге юҡ.* Мәҡәл. *Йыры барҙың көйө бар.* Мәҡәл. *Кемдең йырын йырлаһаң, шуның көйөн көйләрһең.* Мәҡәл. *Мәжлес күрке йыр менән.* Мәҡәл. *Һүҙ — көмөш, йыр — алтын.* Мәҡәл. *Һәр табындың үҙ йыры.* Мәҡәл. *Йыр — йөрәккә ял.* Мәҡәл. *Йыр — күңеллегә ҡыуаныс, күңелһеҙгә — йыуаныс.* Мәҡәл. *Моңһоҙҙоң да бер йыры була.* Әйтем.

2. *күсм.* Ҡош һайрауы. □ Пение *(птиц).* ■ *Һандуғастар был яҡҡа ғына хас ярһыу дәрт менән урманды наҙлы йырға күмә.* З. Биишева. *Йырлаймы күктә балҡыған ҡояштың нурын? Әллә айға арнағанмы һандуғас йырын?* С. Юлаев. ● *Һандуғас йырын йырлайым тип, үҙ йырынды онотма.* Мәҡәл.

3. *күсм.* Тәбиғәттә, эш барышында һ. б. булған тауыштар. □ Звук *(природы, различных процессов)*; песня. *Тауҙар йыры. Йылға йыры.* ■ *Саф-саф теҙелеп бара бары ла, ҡулдарында ҡорал ялтырай. Урман, сахра барыһы гөж-шау килә, эш иртәһе йыры яңғырай.* Ғ. Амантай. *Уй томанын йырып ишетелә тракторҙың йырҙары.* Р. Ниғмәти. ● *Һәр миҙгелдең үҙ йыры бар.* Мәҡәл.

ЙЫРА (Р.: небольшой ров; И.: ditch; Т.: hendek) *и.*

1. Оҙон соҡор; канау. □ Небольшой ров, канава. ■ *Ул йылды яҙ иртә килде. Йырғанаҡтар шарылдашып һыу ташыны. Соҡорҙар күлгә, йыралар йылғаға әйләнде.* К. Мәргән.

2. *ҡар.* **йырғанаҡ 1.** *Йыра һыу менән тулды.*

ЙЫРАҒАЙТЫУ (йырағайт-) *ҡ. ҡар.* **алыҫайтыу.** *Араларҙы йырағайтыу.* ■ *«Тартып ҡына тораһың шул», — тиеп, ниңә гелгел һиңә бәйләнәм? Яҡынайтһаң — янып бөтәм бит мин, йырағайтһаң — боҙға әйләнәм.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

ЙЫРАҒАЙЫУ (йырағай-) *ҡ. ҡар.* **алыҫайыу.** *Ҡала йырағайҙы.* ■ *Бер аҙҙан атыу тауыштары йырағайҙы.* М. Хужин. *[Ғафар] һалдатҡа килгәне бирле белә: аралар йырағайған һайын, мөхәббәт ялҡыны көсәйә генә бара икән.* Н. Мусин. *Араларыбыҙ йырағайған һайын [Таңһылыу менән Петрик] нығыраҡ яманһыулаталар, нығыраҡ ҡурҡалар төҫлө.* Р. Камал.

ЙЫРАҒӘБЕЙ (Р.: бабушка со стороны матери; И.: grandmother on mother's side; Т.: anneanne) *и. диал.*

Өләсәй, әсәйҙең әсәһе. □ Бабушка со стороны матери. *Йырағәбейем килде.*

ЙЫРАҠ *с. ҡар.* **алыҫ.** *Йыраҡ ара. Йыраҡ ер. Йыраҡ юл.* ■ *Ҡояш сыҡҡан яҡта, бик йыраҡта, Башҡортостан тигән ерем бар.* М. Кәрим. *Йыраҡта, бик йыраҡта күк күкрәне.* Ф. Янышев. ● *Ағас урмандан йыраҡ үҫһә лә, шунда табан һығыла.* Мәҡәл. *Йыраҡҡа бар, яҡындан сап.* Мәҡәл. *Йыраҡ һал — яҡындан алырһың.* Мәҡәл. *Йыраҡ юл яҡындан башлана.* Мәҡәл. *Тамыры йыраҡ ағастың ғүмере оҙаҡ.* Мәҡәл.

ЙЫРАҠА (Р.: промоина; И.: gully; Т.: çukur) *и.*

Һыу йырған тәрән соҡор; йырғанаҡ. □ Промоина, рытвина. ■ *Ауыл кешеләре һыуҙы аҫта, бик тәрәндә, ҡая таш итәгендәге йыраҡанан сығып ятҡан кескәй генә шишмәнән ташып эскән.* З. Биишева. *Ауыл хәҙер яҡын ине инде. Бөтә балсыҡтар, түңгәк, йыраҡалар, суҡай таштар — барыһы ла, барыһы ла һөйөнөскә таныш.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Йыраҡаны һыу боҙор, яман арба юл боҙор.* Мәҡәл.

ЙЫРАҠАЙ (Р.: бабушка со стороны матери; И.: grandmother on mother's side; Т.: anneanne) *и. диал.*

Өләсәй, әсәйҙең әсәһе. □ Бабушка *(со стороны матери). Туғаным менән йыраҡайыма китәбеҙ.*

ЙЫРАҠАЛАНЫУ (йыраҡалан-) (Р.: покрываться промоинами; И.: get covered with gullies; Т.: çukurlanmak) *ҡ.*

Йыраҡа рәүешенә килеү, йыраҡа рәүешендә булыу. □ Покрываться промоинами, рытвинами. *Тау бите йыраҡаланды.*

ЙЫРАҠАЛАУ (йыраҡала-) (Р.: образовывать промоины; И.: form gullies; Т.: çukur oluşmak) *ҡ.*

Йыраҡа рәүешенә килтереү. □ Образовывать промоины, рытвины. *Йыраҡалап бөтөү. Яҙғы һыуҙар ерҙе йыраҡаланы.*

ЙЫРАҠБАБАЙ (Р.: дедушка; И.: grandfather; Т.: dede) *и. диал.*

Олатай, әсәйҙең атаһы. □ Дедушка *(со стороны матери).* ■ *Йыраҡбабайым һуғыштан орден-миҙалдар алып ҡайтҡан.* Экспедиция материалдарынан.

ЙЫРАҠЛАШЫУ (йыраҡлаш-) *ҡ. ҡар.* **алыҫлашыу.** ■ *Ошо мәл Исабәк менән арабыҙ йыраҡлашып киткәндәй булды, һуң, зиһен етерлекме ни?* М. Кәрим. *Саҡрымдар ҡала, саҡрымдар ауылдар, һыуҙар аша. Саҡрымдар артына боҫоп, юл башым йыраҡлаша.* Р. Назаров.

ЙЫРАҠЛЫҠ (йыраҡлығы) *и. ҡар.* **алыҫлыҡ.** *Йыраҡлыҡты үлсәү.* ■ *Ҡулымдағы балдағымдың исемдәре Зарифа. Араларҙың йыраҡлығы бер күреүгә зар итә.* Йырҙан.

ЙЫРАУ *и. ҡар.* **йыраусы.** ■ *Йыраузар думбыраларға ҡушып күңелдәргә зарлы һәм ғәйрәтле моң сифатында еткерҙеләр был ваҡиғаны, сәсәндәр ҡобайыр итеп теҙҙеләр.* К. Мәргән. *Ынйыташ, йорт эштәрен бөтөрөп, барынса кейенеп-яһанып, Йылҡыбай йырау тирмәһе янына барып еткәндә, йыйын тамамлана яҙғайны.* Ә. Хәкимов.

ЙЫРАУСЫ (Р.: сказитель; И.: narrator; Т.: meddah) *и.*

Эпос, ҡобайырҙарҙы көйләп әйткән кеше. □ Народный певец, сказитель. ■ *[Навалихин:] Был ир йыраусы инде, белмәйем, уның алдына кем сығып йырлай алыр икән?* Т. Хәйбуллин. *Тирә-яҡта даны таралған йыраусы Мәрзиә өләсәһенең ейән-ейәнсәрҙәрен самауыр сәйе менән һыйлаған арала әкиәт һөйләүе йәки моңло берәй көйҙө һуҙыуы ла зиһенен матурлыҡ менән һуғарғандыр, халыҡ ижадына мөхәббәт уятҡандыр.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 9, 2010. *Әҙерәк йыуаныс тапмаммы, тип саҡырған йыраусы ҡарт үҙенең даусыл-боласыл һамаҡтары менән әмирҙең бауырын ҡуҙғатып китте.* Ә. Хәкимов.

ЙЫРАУСЫЛЫҠ (йыраусылығы) (Р.: сказительство; И.: narrators' art; Т.: meddahlık) *и.*

Халыҡ ижадын башҡарыу сәнғәте. □ Сказительство. *Йыраусылыҡ традициялары. Йыраусылыҡ мәктәбе.* ■ *Йыраусылыҡ сәнғәтенең сәскә атҡан осоро XIV–XVI быуаттарға ҡарай.* Интернет селтәренән.

ЙЫРАУ-СӘСӘН (Р: певцы и сказители; И.: bards; Т.: meddahlar) *и. йыйн.*

Йыраузар һәм сәсәндәр. □ Певцы и сказители. ■ *Йырау-сәсән атты маҡтап йыр сығара, уны ир-егеттең ҡанаты тип алҡышлай.* Ә. Хәкимов.

ЙЫР БАШЛАУСЫ (Р.: запевала; И.: first singer; Т.: koronun solisti) *и.*

Йырҙы башлап ебәреүсе, башҡарыусы. □ Запевала. *Хәрби часта йыр башлаусы.* ■ *Йыр башлаусы йыр башлаһын, ҡумаклап күтәрәйек; йыр башлаусы юл башлаһын, иң алға үткәрәйек.* К. Кинйәбулатова.

ЙЫР БАШЫ (Р.: запев; И.: solo (part); Т.: şarkı başı) *и.*

Йырҙың башланғыс өлөшө. □ Запев. *Йыр башы көслө яңғыраны.*

ЙЫРҒАҠ (йырғағы) *и. ҡар.* **йырғанаҡ 1.** *Йырғаҡтар һыу менән тулды.*

ЙЫРҒАҠЛАНЫУ (йырғаҡлан-) *ҡ. ҡар.* **йыраҡаланыу.** ■ *Әллә ҡайһы урындарҙан борғаланып, ҡултыҡланып, йырғаҡланып килеп сыҡҡан Таштуғай йылғаһы буйының .. йәшеллек эсендә ҡалған урындары ла, таптаҡыр таулы, яланғас таштан ғына бөткән бейек ярлы урындары ла күренеп ҡалалар.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙЫРҒАҠЛАУ I (йырғаҡла-) *ҡ. ҡар.* **йыраҡалау.**

ЙЫРҒАҠЛАУ II (йырғаҡла-) *ҡ. ҡар.* **йырғыслау.** ■ *Ҡапҡанға баҫҡан бүре ҡапыл ситкә һикергән, ҡарҙы йырғаҡлап аунаған, ярһып тулаған, ахыр килеп, ҡапҡанды һөйрәп ҡыуаҡлыҡҡа ингән.* С. Кулибай.

ЙЫРҒАНАҠ (йырғанағы) (Р.: промоина; И.: gully; Т.: çukur) *и.*

1. Һыу йырған тәрән соҡор, йыраҡа. □ Промоина, рытвина, овражек *(образованный потоком воды).* ■ *Ҡарҙар иреп, һыуҙар һыуға ҡушылды, йырғанаҡтар ярылды, Ағиҙелдә боҙ китте.* Ғ. Ибраһимов. *Бер ат әсе сарылдап, ал аяҡтарын үргә күтәреп, туп-тура баҫып торҙо ла ҡурҡыуҙанмы,*

ауыртыуҙанмы күҙҙәре тышҡа атылып сыҡҡан, тештәре яман ыржайған һалдаты менән бергә текә йырғанаҡҡа ауып төшөп юҡ булды. З. Биишева. *[Перовский:] Яҙға ошо яҡтағы тупраҡ өсөн иң яраҡлы ағастарҙы һыу, йырғанаҡ буйҙарына, арҡаларға ултырттырасаҡмын.* З. Ураҡсин.

2. *диал.* Яҙын ҡар ирեүҙән йәки ямғырҙан барлыҡҡа килгән һыу; гөрләүек. □ Ручеёк, ручей. ■ *Тау һырттарынан ағып төшкән аҡ күбекле йырғанаҡтар Ташлыкүл йылғаһын болғандырып шаулатты.* Картотека фондынан. *Улар [турғайҙар] яҙҙың бик яҡынлашыуы, тиҙҙән, бына бик тиҙҙән урамдарҙан, үҙәндәрҙән йырғанаҡтар гөрләп ағасағы, ярына һыймай Иҙел ташасағы, беренсе ямғыр, беренсе күк күкрәүе тураһында һөйләйҙәр.* С. Агиш.

ЙЫРҒАНАҠЛАНЫУ (йырғанаҡлан-) (Р.: образовываться *(о промоинах)*; И.: form *(of gullies)*; Т.: çukurlanmak) *ҡ.*

Йырғанаҡ (1) барлыҡҡа килеү, йырғанаҡҡа (1) әйләнеү. □ Образовываться *(о промоинах, рытвинах). Ер йырғанаҡланып бөткән.*

ЙЫРҒАНАҠЛАУ (йырғанаҡла-) (Р.: образовывать промоины; И.: form gullies; Т.: çukurlatmak) *ҡ.*

Йырғанаҡҡа әйләндереү. □ Образовывать промоины, рытвины, овражки. *Тауҙарҙан шарлап ағып төшкән ҡар һыуҙары ерҙе нык йырғанаҡлаған.*

ЙЫРҒЫСЛАНЫУ (йырғыслан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йырғыслау.** *страд. от* **йырғыслау.** *Уҫаҡ йырғысланған.* ■ *Әхмәҙиә үҙе Азамат менән һөйләшә, үҙе сиҙәм яландың үҙгәреп, йырғысланып, боҙолоп бөтөүен сәйерһенеп кенә ҡараштыра ине.* Р. Солтангәрәев.

ЙЫРҒЫСЛАУ (йырғысла-) (Р.: точить *(о насекомых)*; И.: eat away; Т.: kemirmek) *ҡ.*

1. Ағастың ҡабыҡ аҫтын кимереп, йырып сығыу. □ Точить, повреждать *(о насекомых). Ҡуңыҙ ағасты йырғыслаған.*

2. Тегеләй-былай йырып үтеү. □ Бороздить. *Машиналар урамды йырғыслап бөткән.* ■ *[Карсыҡтың] йөҙөн тәрән йәрәхәт эҙҙәре йырғыслаған, өҫтө-башы рәтһеҙ.* Т. Ғарипова. *Боҙ өҫтө булһа ла, юл тигеҙ түгел, уны бомба, снаряд йырғыслап бөтөргән.* М. Ғиләжев.

3. *күсм. Ниндәйҙер* тойғоноң йәнде ашауы, тынғы бирмәүе. □ Не давать покоя, постоянно беспокоить. ■ *Ашамын, ахыры, сабырлыҡ арьяғын. Шик боҙо йырғыслай ғүмерем дарьяһын.* Т. Йосопов.

ЙЫРҘА (Р.: русло реки; И.: riverbed; Т.: yatak) *и.*

Һыуҙың ерҙе уйып ағып киткән юлы. □ Русло реки. *Йылға йырҙа буйлап аға.* ■ *Ерҙе уйып ағып киткән юлы [йылғаның] йырҙаһы йәки үҙәге тип атала.* Ә. Харисов.

ЙЫРҘАР ЙЫЙЫНТЫҒЫ *и. ҡар.* **йыр китабы.** *Йыл да яңы йырҙар йыйынтығы сығарырға кәрәк.*

ЙЫРҘЫРЫУ (йырҙыр-) *ҡ.*

1. *йөкм. ҡар.* **йырыу.** *понуд. от* **йырыу.** *Канал йырҙырыу. Канау йырҙырыу.* ■ *[Йыйылыштың ҡарары:] Күлде йырҙырып, наҙан халыҡҡа төбөн күрһәтеүҙе һорау өсөн, Сәләхи менән уҡытыусыны ҡалаға ебәрергә.* И. Насыри. *[Бай:] Йылғаны ла һинең өсөн бынан йырҙырмаған. Тирмән өсөн йырылған.* Я. Хамматов.

2. Ян-яҡҡа аралап, алға хәрәкәт иттереү. □ Раздвигать; прорываться через *что-л.* или промеж *чего-л. Йырҙырып барыу. Ҡуйы үләнде йырҙырып барыу.* ■ *Ҡурай еләклеген йырҙырып, Нуруллаthe аты ҡуйы урманға инеп китте.* Ш. Янбаев.

ЙЫР КИТАБЫ (Р.: песенник; И.: songbook; Т.: şarkı kitabı) *ҡ.*

Йырҙар тупланған китап. □ Песенник. ■ *Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн «Фортепьяно пьесалары йыйынтығы», «Ҡайтманығыҙ тыуған илдәргә» тип аталған хәрби-патриотик йырҙар китабы донъя күрҙе.* «Йәшлек», 4 сентябрь 2008.

ЙЫР КҮТӘРЕҮ (йыр күтәр-) (Р.: начать петь; И.: start singing; Т.: şarkı başlamak) *ҡ.*

Йырлай башлау. □ Начать петь. *Ҡунаҡтар йыр күтәреп алды. Йыр күтәреп ултырыу.*

ЙЫРЛАНЫУ (йырлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йырлау 1**. *страд. от* **йырлау 1**. ■ *Йырҙа йырланыу.* ■ *Туҡтап ҡалһа һыуҙар, тыныр донъя — йыр йырланмаҫ, уҡылмаҫ ул*

доға. Х. Назар. *Ҡобайырҙарҙың күбеһенсә тарихи әһәмиәтле хәлдәр тураһында булыуы, уларҙа тыуған илдең һәм уның данлы батырҙарының маҡталып йырланыуы .. осраҡлы хәл түгел.* Ә. Харисов. *Килмәй ҡалһаң, мине утҡа һалһаң, күпме йырым ҡала йырланмай.* Р. Ғарипов.

ЙЫРЛАТЫУ (йырлат-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йырлау 1, 2.** *понуд. от* **йырлау 1, 2.** *Йыр йырлатыу.* ■ *Уралып ятҡан Уралда .. йырсынан йыр йырлатып, эсер сәйен һыуытып, бар доньяһын онотоп, йыйылып ултырыр ҡарттар бар.* Ҡобайырҙан. *Йәриәнән йыр йырлатыу ғәҙәт булған ғәйет көн пәйғәмбәрҙең диһлизендә.* М. Аҡмулла.

ЙЫРЛАУ (йырла-) [боронғо төрки *йырла-*] (Р.: петь; И.: sing; Т.: şarkı söylemek) *ҡ.*

1. Тауыш ярылары ярҙамында моңло тауыш сығарыу, йыр башҡарыу. □ Петь, напевать. // Пение. *Башлап йырлау. Көмәкләп йырлау. Ҡушылып йырлау. Моңло йырлау.* ■ *[Мөбәрәк ағайҙар] иркен ултыралар, ахыры, көлөшәләр, булыр-булмаҫ тауыштары менән йырлап та маташалар.* Ә. Әминев. *Хакимдың ниһен маҡтайһың — яуыз йырын йырлаған; егеттең ниһен маҡтайһың — илде дошман сарлаған.* М. Аҡмулла. ● *Ерен һатҡан — йырлап тамаҡ туйҙырған.* Мәҡәл. *Йыр йырламай күңел баҫылмай.* Мәҡәл. *Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.* Мәҡәл. *Кемдең йырын йырлаһаң, шуның көйөн көйләрһең.* Мәҡәл. *Ҡорҡаҡ маҡтанып йырлар, батыр һаҡланып йырлар.* Мәҡәл.

2. Моңло итеп тауыш биреү *(ҡошҡа ҡарата)*; һайрау. □ Петь. // Пение *(о птицах).* ■ *Көндәр, айҙар үтте. Баҡһам, ҡоштоң китте көйө, һүнде моңдары. Мин үртәләм, янам, хафаланам, — түҙмәй көтәм уның йырлауын.* М. Ғәли. *Тик бер кәкүк кенә юл ситендә емдәр эҙләп йөрөй, бисараң, йырлар йырҙарыңды йырлап бөткәс, күктән ергә төшмәй ни сараң?* М. Кәрим. *Һәр яҙ һайын йылы яҡтан ҡоштар беҙгә йырлап ҡайталар, тормош үҙе алыҫ ташлаһа ла, тормош тыуған ергә ҡайтара.* Р. Ниғмәти. *Һабансылар күңелен нурлай-нурлай, һай, йырлай ҙа һуң был һабантурғай!* Р. Ғарипов.

3. *күсм.* Бер ыңғай, бер көй менән матур итеп шаулау. □ Петь; стучать в унисон. ■ *Вагон тәгәрмәстәре тимер көйөн йырлай башлағас та, теге өсәү мин ятҡан купеға инде.* Ғ. Хәйри. *Буйҙары зифа ҡамыштар шым ғына йырлап тора; күк йөҙөндә тулған айы йылмайып ҡарап тора.* Р. Ниғмәти.

4. *күсм.* Шиғыр менән маҡтап әйтеү. □ Воспевать, восхвалять. ■ *Саф көмөштәй йырҙарымды йырламайым алтын өсөн. Йырлайым тик саф көмөштәй саф йөрәк халҡым өсөн.* Ш. Бабич. *Р. Назаров, тыуған төйәгенең, иленең һоҡланғыс тәбиғәтен ҡәҙерләү һәм йырлау менән бергә, шул ер кешеләренең, яҡташтарының, ватандаштарының булмышы һәм яҙмышы менән йәшәй, шулар тураһында уйлана, борсола, уяу булырға саҡырып иҫкәртә.* Р. Мифтахов.

5. *миф.* Барлыҡ тереклеккә йоғонто яһау көсөнә эйә булған мификлаштырылған эшхәрәкәт. □ Петь *(мифологизированное магическое действие, способное воздействовать на душу всего живого).*

♦ **Кеше йырын йырлау** кеше яйын яйлап, кеше һүҙен һөйләү. □ *соотв.* Плясать под чужую дудку. *Кеше йырын йырлайым тип, үҙ йырыңды онотма.* Мәҡәл.

ЙЫРЛАУСЫ I (Р.: исполнитель; И.: performer; Т.: şarkıcı) *и.*

Йыр башҡарыусы. □ Исполнитель *(песни). Лирик йыр йырлаусы. Хорҙа йырлаусы.* ■ *Йырлаусы был ергә килгәнендә, хан бер тороп, урынына бер ултырҙы.* «Буҙйегет».

ЙЫРЛАУСЫ II (Р.: исполняющий; И.: performing, singing; Т.: şarkı söyleyen) *с.*

Йыр башҡарған, йырлаған. □ Поющий, исполняющий *(песню).* ■ *Йырлаусы ла егет йыр йырламай, үҙ хәсрәткәйҙәре булмаған.* Йырҙан.

ЙЫРЛАШЫУ (йырлаш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йырлау.** *взаимн. от* **йырлау.** ■ *Ирекле ҡоштарҙың йәйге таңға кинәнеп йырлашыуҙары Гөлйөҙөмдөң йөрәген өҙҙөләр.* Һ. Дәүләтшина. *Әхмүштең асыуы онотолған, һәтәү шаярыу һүҙҙәренән, ихахайҙарҙан өй эсе гөр килә, күкле-йәшелле тауыштар менән йырлашалар.* Б. Бикбай. *Остолар моңдар һауаға, йырлашып ҡыҙҙар менән, мин тороп ҡалдым*

көйөп, әрнеп, күңел һыҙлау менән. Ш. Бабич. *Талдар моңло дуэт йырлашалар, улар икәү тыңлап ултыра. Шул икәүҙе күрер өсөнмөләр ярға үрмәләйҙәр тулкындар.* Р. Ниғмәти.

ЙЫРЛЫ (Р.: песенный; И.: song, vocal; Т.: şarkılı) *с.*

Йыры булған. □ Песенный, вокальный. ■ *Мең йырлы матур яҙ килә, ҡырҙарҙы ҡаплай гөлдәр; көмөш тәңкәләр уйнатып, тулкына тымыҡ күлдәр.* Р. Ниғмәти. *[Илнур Муллабаев:] Йырлы ролдәрем дә булды минең. Әммә тауышты юғалтмау өсөн даими рәүештә шөғөлләнергә кәрәк.* «Шоңҡар», № 6, 2011. *Йәншишмәнең тамсы бөртөгө ул бәндәләрҙең йырлы аҙымы. Һәр яңырыу — осош! Әйтеп ҡара кешелектең күҙө, яҙымы?!.* Л. Абдуллина.

ЙЫРЛЫ-МОҢЛО (Р.: с песнями; И.: with songs and music; Т.: şarkılı, müzikli) *с.*

Йыры, моңо булған. □ С песнями и музыкой. ■ *Йырлы-моңло ауыл янында ҡош тауыштары ла, тәбиғәттә төҫтәр ҙә күркәмерәк.* М. Бураҡаева. *Мырҙабулатовтарҙың өйҙәре — мөхәббәтле, күңелдәре — йырлы-моңло.* «Юшатыр», 10 ноябрь 2009.

ЙЫРМАҠ (**йырмағы**) *и. ҡар.* **йыра.** ■ *Улар [Кинйәләр], ауылға килеп етәрәк, таллы йырмаҡ буйындағы туғайлыкта туктап, бер тирәгә туплана башланы.* Ғ. Ибраһимов. *Кисә, иртән, йәшкелт тау битендә ергә һуҙылып яткан аҡ томан күренә ине шишмә йырмағынан. Ә бөгөн ул шишмәгә ни булған?!* Ғ. Хәйри.

ЙЫРМАҠЛАНЫУ (**йырмаҡлан-**) *ҡ. төш. ҡар.* **йырмаҡлау.** *страд. от* **йырмаҡлау.** *Йырмаҡланған баҫыу. Йырмаҡланған ер.*

ЙЫРМАҠЛАТЫУ (**йырмаҡлат-**) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йырмаҡлау.** *понуд. от* **йырмаҡлау.**

ЙЫРМАҠЛАУ (**йырмаҡла-**) (Р.: бороздить; И.: cover with furrows; Т.: karık açmak) *ҡ.*

Теләһә нисек йырыу; йырғыслау, йырмалау. □ Бороздить. ■ *Сыуалдың утын һөйәп ҡуя торған урынынан йырмаҡлап, тамсы йылғалары аға.* Т. Йәнәби.

ЙЫРМАЛАҠ I (**йырмалағы**) *и. диал.*

1. *ҡар.* **гөрләүек.** *Йырмалаҡтар сылтырап аға.*

2. *ҡар.* **йырғанаҡ 1.** *Йырмалаҡтар һыу менән тулған.*

ЙЫРМАЛАҠ II (**йырмалағы**) (Р.: ширинка; И.: fly; Т.: fermuar) *и. диал.*

Салбарҙың ҡапламаһы, шәлтәү. □ Ширинка. *Йырмалаҡты эләктереү. Йырмалаҡты сисеү.*

ЙЫРМАЛАУ (**йырмала-**) *ҡ. ҡар.* **йырмаҡлау.** *Ерҙе йырмалап бөтөү. Машиналар юлды йырмалаған.*

ЙЫРМАС (Р.: узкая ложбина; И.: narrow gully; Т.: dar çukur) *и.*

1. Һыҙылып ҡына үткән соҡор. □ Узкая ложбина. *Оҙон йырмас. Тәрән йырмас.*

2. Өҫ кейеменең артында махсус ҡалдырылған йырыҡ. □ Разрез *(на одежде, на голенищах сапог). Итәктең йырмасы. Күлдәктең йырмасы. Плащтың йырмасы.*

ЙЫРМАСЛАНЫУ (**йырмаслан-**) *ҡ. төш. ҡар.* **йырмаслау.** *страд. от* **йырмаслау.** ■ *Уның [ҡарама ағасы] һымаҡ ҡарт, сырайы әрһеҙ елдәрҙән ҡарайған, йырмасланып-йыйырсыкланып бөткән.* И. Абдуллин. *[Кейәүе] механизатор икән. йөҙө тәрән сырыштар менән йырмасланған — йәшенән иртә картайғаны күренеп тора.* Т. Ғиниәтуллин.

ЙЫРМАСЛАУ (**йырмасла-**) (Р.: избороздить; И.: cover with furrows; Т.: karık açmak) *ҡ.*

Теләһә нисек йырыу; йырғыслау. □ Избороздить, изрезать. *Һуҡа менән ерҙе йырмаслау.* ■ *Йомшаҡ урман һукмағын йырмаслап йөҙәр метрға һуҙылған тәртке сыскан юлының тап ҡаты һукмаҡ аша сыҡҡан ере ҡыҙыҡһындыра беҙҙе.* Д. Шәрәфетдинов. *Ҡорошоп бөткән ябыҡ ҡатын. Йөҙөн тәрән йыйырсыҡ йырмаслаған, күҙендә нур юҡ.* Ә. Хәкимов. *Кис менән, ҡояш байыр алдынан, канонада бер аҙ тына төштө, ҡараңғы төшөр-төшмәҫтән күктә ракеталар һәм прожекторҙар йырмасларға кереште.* Д. Юлтый.

ЙЫРМАСТАУ (**йырмаста-**) (Р.: немного уметь говорить; И.: speak a little; Т.: biraz bir dilde konuşabilmek) *ҡ. диал.*

Икенсе бер телдә яҡшылап уҡый-яҙа белмәй әҙ-мәҙ һөйләү; һупалау. □ Немного

уметь говорить *(по-русски и т. д.). Белһәбелмәһә лә урыҫса йырмаҫтан тора.*

ЙЫР-МОҢ (Р.: песни, мелодии; И.: songs, melodies; Т.: şarkılar) *и. йыйн.*

Йыр һәм моңло көй. □ Песни, мелодии. ■ *Уны [башҡортто] йыр-моң да, ҡапыл иҫкә төшкән һүҙ ҙә, онотолған таныш еҫтәрҙе тәмләтеп тертләткән ел дә уята ала.* Б. Рафиҡов. *Тартып ҡына ебәр ҡурайыңды, ун бармаҡҡайҙарың уралһын. Күкрәктән сыҡҡан йыр-моңдарың тыуған илкәйемә таралһын.* Халыҡ йырынан. *Башҡорт һуғышсылары йыр-моңдары аша сал Урал, тыуған Башҡортостан менән рухи бәйләнеш тотҡан.* Р. Өмөтбаев.

ЙЫРМЫС I (Р.: петлица; И.: buttonhole; Т.: ilik) *и. диал.*

Төймә тишеге. □ Петлица. *Төймә йырмысы.*

ЙЫРМЫС II (Р.: рукав реки; И.: branch; Т.: kol) *и. диал.*

Йылға тармағы. □ Рукав реки. *Йылға йырмысына тиклем кәмәлә йөҙөп барҙыҡ.*

ЙЫРП-ЙЫРП (Р.: подражательное слово; И.: imitative word; Т.: hışırtı) *окш.*

Ҡатыраҡ йоҡа нәмә төрлө яҡҡа ҡапыл-ҡапыл ҡағылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку шуршания, хлопанья. *Йырп-йырп итеп тороу. Тәҙрәләр йырп-йырп килә.*

ЙЫРПЫЛДАУ (йырпылда-) (Р.: шуршать, хлопать; И.: rustle; Т.: hışırdamak) *ҡ.*

Йырп-йырп итеү, йырп-йырп килеү. □ Шуршать, хлопать. *Аҫҡанда ишек йырпылдап тора.* ■ *Уның [өйҙөң] ҡарындыҡ күҙле тәҙрәләре, ишекте аҫҡанда ла, япҡанда ла бер эскә, бер тышҡа һуғылып, ҡырп-ҡырп итеп йырпылдап торалар.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫРПЫСЫҠ *с. диал. ҡар.* **ҡылансыҡ.** *Йырпысыҡ ҡыҙ. Йырпысыҡ булыу.*

ЙЫРПЫСЫҠЛАНЫУ (йырпысыҡлан-) *ҡ. диал. ҡар.* **ҡылансыҡланыу.** *Йырпысыҡланып һөйләшеү.*

ЙЫРСАЙ *с. диал. ҡар.* **бысый 2.** *Бысый ҡүҙ.*

ЙЫРСАЙЫУ (йырсай-) *ҡ. диал.* **бысыйлау.** *Күҙ йырсайыу.*

ЙЫРСЫ I (Р.: певец; И.: singer; Т.: şarkıcı) *и.*

Йыр оҫтаһы. □ Певец, певица; песенник, песенница. *Танылған йырсы. Опера йырсыһы.* ■ *Уңған апайҙар, көр тауышлы йырсыларҙы иҫкә алып, ҡымыҙ бешә.* Д. Буляков. *Иң яҡшы көрәшселәр, йырсылар, ҡурайсылар, бейеүселәр, сәсәндәр йыйылған бында.* З. Биишева. ● *Йырсы барҙа ауыҙыңды тый, оҫта барҙа ҡулыңды тый.* Мәҡәл.

ЙЫРСЫ II (Р.: певчий; И.: singing; Т.: ötücü) *с.*

Матур һайраусы *(ҡошҡа ҡарата).* □ Певчий *(о птицах). Йырсы ҡоштар.* ■ *Йондоҙҙар һәм ай — серле дуҫтарым, һандуғас, турғай — йырсы ҡоштарым.* Ш. Бабич. *Ҡара ҡаурый сыйырсыҡ, һары шәлле һандуғас — йырсы ҡоштар йылы яҡтан ҡайта беҙгә яҙ булғас.* Г. Юнысова.

ЙЫРСЫ БАРҠЫЛДАҠ (барҡылдағы) (Р.: певчий дрозд; И.: throstle; Т.: öter ardıç kuşu) *и. зоол.*

Көрәнһыу һоро һыртлы, күҙәһенең аҫ яғы буй-буй таптар менән сыбарланған аҡ түштәге күсмә ҡош. □ Певчий дрозд (лат. *Turudus philomelos Brehm*). ■ *[Сыбар барҡылдаҡ] йырсы барҡылдаҡтан ҙурыраҡ булыуы менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

ЙЫРСЫ БЕЗЕЛДӘК (безелдәге) (Р.: соловьиный сверчок; И.: savi's warbler; Т.: bataklık kamışçını) *и. зоол.*

Турғайҙан бәләкәйерәк, оҙонсараҡ кәүҙәле, киң ҡанатлы, ҡара көрән һыртлы, кәүҙәһенең аҫ яғы ерәнһыу һоро булған бик һаҡ ҡош. □ Соловьиный сверчок (лат. *Turdus philomelos Brehm*).

ЙЫРСЫ ҠУРҘАЙ (Р.: соловьиная широкохвостка; И.: cetti's warbler; Т.: kamış bülbülü) *и. зоол.*

Түңәрәкләнеп торған киң ҡойроҡло, ҡыҙғылт көрән һыртлы, һорғолт аҡ түштәге күсмә ҡош. □ Соловьиная широкохвостка (лат. *Cetta cetti Marm*).

ЙЫРСЫЛ (Р.: поющий; И.: singing; Т.: şarkı söyleyen) *с.*

Йыр яратыусан, күп йырлаусан. □ Поющий, любящий петь. *Йырсыл булыу.* ■ *Йырлап туймаҫ йырсыл ҡарттарға беҙ: — Сәсән, — тибеҙ, — йәп-йәш йөрәге.* Р. Тойғонов.

ЙЫРСЫЛЫҠ (йырсылығы) (Р.: способность к пению; И.: ability for singing; Т.: şarkı söyleme yeteneği) *и.*

Йырға һәләтлек. □ Способность к пению; певческий талант. ■ *[Сәлмән:] Был ваҡытта мин үҙемдең йырсылыҡ көсөмә ул тиклем ышанмай башлағайным инде.* З. Биишева. *Шул саҡта уны [Аҡкошто], тауышы моңло тип, йырсылыҡ һөнәрен өйрәнергә Мәскәүгә ебәрергә димләп ҡаранылар.* М. Кәрим.

ЙЫРТАНАС (Р.: кокетливая; И.: flirtatious; Т.: cilveli) *с.*

1. Ҡыланып, күҙен-башын уйнатып, осоп-төшөп тороусан *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата).* □ Кокетливая, игривая *(о женщинах).* ■ *[Шаһисолтандың туған-тыумасаһы:] Анауы ҡыҙ-тәкә, йыртанас Һөйәрбикә һыу һөлөгөләй егеттең башына етте, мәсхәрәһен күтәрә алмай китте бит, бисара.* «Ағиҙел», № 5, 2010. *[Зада:] Ни эшләйһең? Оятһыҙ! Йыртанас ҡыҙҙар кеүек.* С. Кулибай.

2. Оят, намыҫты белмәй, һәр нәмәне үҙ файҙаһына тартыусы *(кеше);* өҙгөс. □ Рвач. ■ *Андрейҙың ихласлығына, бүтәндәр һымаҡ йыртанас, тупаҫ әҙәм түгеллегенә [Ғөбәйҙең] тәүҙән үк күҙе етте.* Ә. Хәкимов.

ЙЫРТАНАСЛАНЫУ (йыртанаслан-) (Р.: урвать; И.: snatch; Т.: bulmak) *и.*

Һәр нәмәне үҙ файҙаһына тартыу. □ Урвать. ■ *Мырҙабай кеүектәрҙән уҙҙырырға тырышып, яман йыртанасланып китте Сәләхетдин.* Ә. Хәкимов.

ЙЫРТАНАСЛЫҠ (йыртанаслығы) (Р.: рвачество; И.: self-seeking; Т.: kendine yontuculuk, çıkarcılık) *и.*

Өҙгөслөк, йолҡҡослоҡ. □ Рвачество. / Рваческий. *Йыртанаслыҡ ғәҙәттәре. Йыртанаслыҡ менән көрәш.*

ЙЫРТАНЛАҠ *с. диал. ҡар.* **йыртанас 1.** *Йыртанлаҡ ҡатын. Йыртанлаҡ булыу.*

ЙЫРТАНЛАУ (йыртанла-) *ҡ. диал. ҡар.* **ҡылансыҡланыу.** ■ *Был еңгәйгә ни булған? Бигерәк йөрөй йыртанлап.* Йырҙан.

ЙЫРТҠЫЛАНЫУ (йыртҡылан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йыртҡылау.** *страд. от* **йыртҡылау.** ■ *Ҡаратау башынан, һүнеп барған янғындан һуң ҡүтәрелгән ҡуйы төтөн шикелле, болоттар һөйрәлеп күккә олғаша һәм, йыртҡыланған итәктәрен йыя-йыя, ялбырлашып ауыл өҫтөнә табан ығыша.* Н. Мусин. *[Урмановтың] күҙгә ташланып торған ике билдәһе бар: береһе — һул яңағын ашанаша үтеп, кескәй генә матур ҡолағына барып тоташҡан, ситтәре йыртҡыланған иҫке яра эҙе.* М. Кәрим. *Тойғон өҫ-башы һыуланып, йыртҡыланып бөткән Ғәнәкәне һөйрәп алып инә.* М. Буранғолов.

ЙЫРТҠЫЛАУ (йыртҡыла-) (Р.: рвать; И.: tear; Т.: koparmak) *ҡ.*

Киҫәк-киҫәк итеп йыртыу. □ Рвать, разрывать на куски, в клочья. *Эт бүректе йыртҡылап ташланы.* ■ *Ул [Колбаев], үртәнеп, ҡағыҙҙы йыртҡыланы һәм ҡалын ҡарағай таҡтанан эшләнгән урнаға ташланы.* Н. Мусин. *Ул [һалдат] Кәбирҙең эске күлдәген һалдырып, уны йыртҡыланы ла сикәһенә, муйынына укмашҡан ҡанды таҙартты һәм яраһын ҡыҫып бәйләп ҡуйҙы.* Н. Мусин. *Дим төбөндә ятҡан быялаға ярҙырған ул аяҡ табанын, аҡ майкаһын йыртҡыланы Якуп, ҡаны аға тәрән яраның.* Т. Арслан. *[Сәфәрғәлиев] ишек эргәһенә еткәс, кире боролоп өҫтәл ҡаршына килде, иҙәндә ятҡан һурғыслы буш конвертты алып, ваҡ ҡына итеп йыртҡыланы, иҙәнгә сәсеп ташланы.* А. Таһиров.

ЙЫРТҠЫС I (Р.: хищник; И.: predator; Т.: yırtıcı hayvan) *и.*

1. Башҡа хайуандарҙы тотоп, итен ашап йәшәгән хайуан. □ Хищник. *Уҫал йыртҡыс. Йыртҡысты әҙәрлекләү. Йыртҡыс олоуы.* ■ *Ауыртыуға сыҙай алмай ҡоба йыртҡыс хатта үкереп ебәрҙе.* М. Кәрим. *Бүре заты — хужалыҡҡа бик ҙур зыян килтерә торған йыртҡыс.* С. Кулибай. ● *Ике йыртҡыс бер ялаңға һыйып, ике батша донъяға һыймаҫ.* Мәҡәл. *Йыртҡыс тырнағынан билгеле.* Мәҡәл. *Йыртҡысына күрә ҡапҡаны.* Мәҡәл. *Ситлеккә ябылғас, йыртҡыс та йыуашлана.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Бик ҡаты бәғерле, мәрхәмәтһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Зверь, изверг. / Жестокий, безжалостный; озверевший.

Йырткыс кеше. Йырткыска әйләнеү. ■ *[Алтынсәс:] Дүрт йыл буйы кан койоп, яуыз дошман менән алышкан батырҙарҙың илгә кайтыр көнө якынлаша. Тағы бер ынтылып, йырткыстың өңөн баҫып алырға торғанда, һеҙ ҙә һынатмағыҙ, туғандар.* Ә. Хәкимов. *Бынан 270 йыл элек, ошо яктарҙағы 51 башкорт ауылын яндырып, Тәфтиләү яуы үткән, ошондағы Һөйәнтуҙҙа йырткыс башкиҫәр, һарайға бикләп, 151 кешене терелəй яндырған.* Р. Бикбаев. *[Салауат:] Бына мин шул йыйыласак ғәскәрҙең һәммәһенә баш булып, башкорт илен йырткыстар золомонан коткарыу өсөн корбан булырға һүҙ бирәм.* Б. Бикбай. *Ер менән алыш-биреш итеү шул ук комһоҙ йырткыстарға файҙа килтерә.* М. Өмөтбаев.

ЙЫРТКЫС II *и. этн. диал. кар.* **йыртыш 2.** *Бар кешегә йырткыс өләштеләр түйҙа.*

ЙЫРТКЫСЛАНЫУ (йырткыслан-) (Р.: звереть; И.: become brutalized; Т.: canavar kesilmek) *к.*

Йырткыс кеүек аяуһыҙланыу; канһыҙланыу. □ Звереть, свирепеть. *Эт йырткысланған.* ■ *Унтер-офицер, ротныйҙарҙан башлап, һәммәһенең дә төҫтәре каскан, һәммәһе лә бик мөһим, ашығыс бер эш булған кеүек етеҙләнгәндәр, башка көндәргә карағанда әллә нисә тапкыр уҫалланғандар, йырткысланғандар ине.* М. Ғафури. *Ай ярым вакытта күпме ерҙе баҫып алды [немец], һаман йырткысланып алға ынтыла.* Ә. Хәкимов.

ЙЫРТКЫСЛЫК (йырткыслығы) (Р.: хищничество; И.: rapaciousness; Т.: sömürücülük) *и.*

1. Бер төр хайуандарҙың икенсе төр хайуандарҙы аулап, улар менән туҡланып йәшәү рәүеше. □ Хищничество, хищность. ■ *Бүтән сакта, кан еҫенән отоpo ярһып, әллә ниндәй йырткыслыкка барыр януар, әле актыккы көсөн туплап, урман эсенә йомолдо.* Ә. Хәкимов.

2. *күсм.* Сиктән, саманан тыш аяуһыҙлык, рәхимһеҙлек. □ Зверство, жестокость. ■ *[Зәки:] Башкорт халкы быуаттар буйы канһыҙ баҫкынсыларҙың йырткыслыктарынан каты ғазап сиккән, йән аямай ғәҙеллек өсөн, азатлык өсөн көрәшкән.* Н. Асанбаев.

ЙЫРТКЫСТАР (Р.: хищные; И.: predatory animals; Т.: yırtıcı) *и. зоол.*

Плацентар һөтимәрҙәр төркөмөнә караған хайуандар. □ Хищные (лат. *Carnivora*). ■ *Бөтә йырткыстар ҙа куяндарҙы ошо оҙон койроктарынан эләктереп ала торған булғандар. Һис кенә лә котолор әмәл юк икән.* Әкиәттән. *Республика урмандарында йырткыстар һаны арта.* Интернет селтәренән.

ЙЫРТКЫСТАРСА (Р.: по-зверски; И.: brutally; Т.: yırtıcılar gibi) *р.*

Каты, бәғерһеҙ, йырткыс кеүек кыланыу *(кешегә карата).* □ По-зверски. ■ *Ағастар йырткыстарса файҙаланыла, һәр кем телəгән ағасын йыға.* Я. Хамматов. *Полицейский уға башта ук йырткыстарса караны, быңдай кәбәхәт караш Анатолийҙың ирекгә сакта һис күргәне юк ине.* Ш. Шәһәр.

ЙЫРТЛАС (Р.: с ямами; И.: having pits; Т.: çukurlu) *с.*

Тәрән-тәрән булып соҡорланған. □ С ямами, рытвинами. *Йыртлас үҙән.* ■ *Мәрғүбә карсыктың иҫке өйө үҙе төҫлө булып ултыра. Бөкрө өйҙөң йыртлас мaҙраһына буран, уҫлап, кершән туштыра.* С. Кудаш.

ЙЫРТМА (Р.: отрывной; И.: tear-off; Т.: koparma) *с.*

Йыртып ала торған, өҙмә. □ Отрывной. *Йыртма календарь. Йыртма билет.* ■ *Рәсәй Президенты һайлауҙарында тауыш биреү өсөн тәғәйенләнгән теркәүҙән төшөрөү таныклығы ике өлөштән — таныклыктан һәм йыртма талондан тора.* Интернет селтәренән.

ЙЫРТМА КАЛЕНДАРЬ (Р: отрывной календарь; И.: tear-off calendar; Т.: koparma takvimi) *и.*

Биттәре йыртып алына торған календарь. □ Отрывной календарь. *Стеналағы йыртма календарь.* ■ *1986 йылда башкорт телендә йыртма календарь сыға башлай.* Интернет селтәренән.

ЙЫРТМАЛЫ КАЛЕНДАРЬ *и. кар.* **йыртма календарь.** *2012 йылғы йыртмалы календарь.*

ЙЫРТТЫРЫУ (йырттыр-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йыртыу.** *понуд. от* **йыртыу.** *Йыртыш йырттырыу.* ■ *[Мулла:] Әҙәпле ҡыҙымдың хижабын йырттырып, йыһан гиҙҙереп, кәмит уйнатып йөрөр хәлем юҡ.* И. Насыри. *Улар [малайҙар] приказчик килгәнгә ҡәҙәр үк, аяҡтарын ҡамылдан йырттыра-йырттыра, башаҡ сүпләйҙәр ҙә ата-әсәләренә килтереп бирәләр.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫРТЫҠ I [боронғо төрки *йырт-*](Р.: рваный; И.: torn; Т.: yırtılmış) *с.*

Әләгеп, тартылып һ. б. сәбәп менән айырылған, тишекле булған. □ Рваный, драный, порванный. *Йыртыҡ ҡағыҙ. Йыртыҡ дәфтәр.* ■ *Календарҙың бите йыртыҡ. Ҡағыҙ ҡалды артыҡ-бортоҡ.* Т. Искәндәриә. *Ғөбәйҙең .. пинжәк-салбары, күлдәге йыуылған, үтекләнгән, йыртыҡ ерҙәре ямалған.* Ә. Хәкимов. *Бер нисә көн үткәс, ҡырылған башына үзбәк эшләпәһе, аяғына йыртыҡ ботинка, өҫтөнә буйлы-буйлы ебәк тышлы халат кейгән, дөм ҡара янған Таһир комиссия ағзалары алдына килеп баҫа.* Р. Өмөтбаев. ● *Йыртыҡ кейем ямаулыҡ өсөн яҡшы.* Мәҡәл. *Һыуыҡ төлкө тунлы кешегә сәләм бирә, йыртыҡ тунлы кешенең ҡуйынына инә.* Мәҡәл.

ЙЫРТЫҠ II (йыртығы) [боронғо төрки *йырт-*] (Р.: дыра; И.: hole; Т.: delik) *и.*

1. Йыртылған урын. □ Дыра, прореха. *Йыртыҡты тегеп ҡуйыу. Йыртыҡ ни ҙә, тишек ни.* ■ *Йәғҙә күлдәктең йыртығын тегергә тотондо.* Ә. Хәкимов. *Ҡайһы ваҡыт аҡһыл болоттар йыртығынан ҡояш күренеп тора.* А. Таһиров. *Күҙгә күк күкрәй иренеп кенә, серек сепрәк, гүйә, йыртыла. Сепрәк йыртығынан елбер-елбер ямғыр ебе ергә тартыла.* Р. Ғарипов. ● *Ҙур йыртыҡты бәләкәй ямау ҡапламай.* Мәҡәл. *Ике ауырыу бергә килһә — әжәлеңдең еткәне, ике йыртыҡ бергә килһә — абруйыңдың киткәне.* Мәҡәл. *Йыртыҡ ҙурайһа, ямаулыҡ етмәй.* Мәҡәл. *Йыртыҡ тишектән көлгән.* Мәҡәл. *Йыртыҡты ямаһаң да беленә, ҡаплаһаң да күренә.* Мәҡәл. *Теләнсе оятын кеҫәһенә һалған, ул да йыртығынан төшөп ҡалған.* Мәҡәл. *Тишеккә — тығын, йыртыҡҡа — ямау.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Етешһеҙлек, кәмселек. □ Изъян, недостаток. *Йыртыҡ табыу.* ■ *Ай-һай, шаштырыбыраҡ ебәрҙе түгелме [Гөльямал апай]? Мин йырҙың йыртығын табам.* М. Кәрим. *Сәсән дә, Зөмрәттең ни уйлауын һиҙенгән һымаҡ: «Йырыма үпкәләмә, бикә. Йырҙың йыртығы юҡ. Йәнә... һин үҙебеҙҙеке бит...» — тип йыуата.* Ә. Хәкимов.

ЙЫРТЫҠАЙ *с. диал. ҡар.* **ҡыйпысыҡ.** *Йыртыҡай кеше. Йыртыҡайға әйләнеү.*

ЙЫРТЫҠАЙЛАНЫУ (йыртыҡайлан-) *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыйпысыҡланыу.**

ЙЫРТЫҠ-БОРТОҠ (йыртыҡ-бортоғо) (Р.: рваньё; И.: rags; Т.: paçavralar) *и. йыйн.*

Алама әйберҙәр, алам-һалам, сепрәк-сапраҡ. □ Рваньё, тряпьё. / Рваный, порванный. *Йыртыҡ-бортоҡто ташлау.*

ЙЫРТЫЛЫУ (йыртыл-) (Р.: рваться; И.: tear; break; Т.: yırtılmak) *ҡ.*

1. Әләгеп, тартылып һ. б. сәбәп менән айырылыу, тишекле булыу *(йоҡа, йомшаҡ нәмәгә ҡарата).* □ Рваться, разрываться. *Күлдәк йыртылыу. Әләгеп йыртылыу. Йыртылып ҡалыу.* ■ *Шул ваҡыт нимәләр пыр-р-р итеп йыртылып китте.* М. Кәрим. *Ғәйзулла .. ергә һикерҙе, һикергәндә, ҡайын ботағына әләгеп, ыштанының балағы йыртылды.* Я. Хамматов. *Ағас араһынан өҫ-башы йыртылып, әҙәм ҡарағыһыҙ булып бысранып бөткән, ҡобараһы осҡан Вася килеп сыҡты.* Ә. Хәкимов ● *Ир үлде — итәк йыртылды.* Мәҡәл. *Иҫке тун эт өрһә лә йыртыла.* Мәҡәл. *Йыртылһа, ямауы өҫтөндә.* Мәҡәл. *Эт талашыр, тиреһе йыртылмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡуяндың тиреһе эт өргән һайын йыртыла.* Әйтем.

2. *күсм.* Бер берәмектән бер нисә тармаҡҡа бүленеү, айырылыу. □ Рваться, разрываться. ■ *Бер-бер артлы өҙлөкһөҙ күсеп барған болоттар ҡапыл уртаға йыртылалар ҙа, йәнә ҡушылалар.* Т. Хәйбуллин.

ЙЫРТЫНЫУ (йыртын-) (Р.: перестараться; И.: overdo it; Т.: fazla gayret göstermek) *ҡ.*

Артыҡ тырышыу, кәрәгенән тыш тырышыу. □ Перестараться, лезть из кожи вон. *Ныҡ йыртыныу. Аяҡ сапырға йыртына.*

ЙЫРТЫУ (йырт-) [боронғо төрки *йырт-*] (Р.: рвать; И.: tear; Т.: yırtmak) *ҡ.*

1. Электереп, тартып айырыу, киҫәктәргә бүлеү, өҙөү *(ҡағыҙ, туҡыма кеүек нәмәләрҙе).* □ Рвать, порвать, разорвать. *Итәкте йыртыу. Ҡағыҙҙы йыртыу. Йыртып алыу. Йыртып сығарыу.* ■ *[Профессор] барлыҡ партитураны йомарлап, киҫәктәргә йыртып, Мәҙинәнең йөҙөнә ырғыта башланы.* Т. Ғарипова. *[Новиков] тәҙрә төбөндәге яҙа башлаған хатын йыртып, тәҙрә аръҡыры ырғытты.* Д. Юлтый. *Нуриханов кеҫәһенән блокнот алып, ҡағыҙ яҙҙы ла уны йыртып Зөфәргә тотторҙо.* Д. Бүләков. ● *Ашымды йотоп ултырыр, ашъяулығымды йыртып ултырыр.* Мәҡәл. *Ҡоро ҡашыҡ ауыҙ йырта.* Мәҡәл. *Торна йоморҡа һалһа, ҡауҙы эсен йыртыр.* Мәҡәл. *Эт этлеген итер, итәк-еңде йыртыр.* Мәҡәл. *Эт этлеген итте, тун сабыуын йыртты.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Ҡапыл һәм киҫкен рәүештә тынлыҡты, ҡараңғылыҡты һ.б. боҙоу *(киҫкен тауыш, ныҡ яҡты һ.б. ҡарата).* □ Порвать, разорвать; нарушать. ■ *Елгәргес, ҡалын төн пәрҙәләрен йыртып, алыҫтарға үҙенең тауышын сәсә.* И. Насыри. *Баҫыуҙа, уттарын баҙлатып, бер-береһенә эйәрешеп, ҡараңғылыҡты йыртып, тракторҙар мәж килә.* «Йәшлек», 21 май 2009.

3. Осло үткер нәмә менән йырып, эҙ һалыу, йырғыслау, ярыу. □ Рвать *(острым предметом);* бороздить. ■ *[Һуҡа бабай], ерҙе йыртып, өҙгөләп, ыҙан буйын һыҙғылап,.. күпме ерҙәр һөрһәң дә, ашлыҡтарың уңманы.* Д. Юлтый. *Йөҙәр йылдар буйына кеше ҡулы теймәгән тау биттәрен быйыл ҡабан йырта башланы.* Ә. Бикчәнтәев.

♦ **Ер йыртып ҡысҡырыу** (*йәки* **илау**) бар көсөнә аҡырыу, үкереп илау. □ Диким голосом кричать, орать; плакать навзрыд. **Йөҙ<өн> йыртыу** *кемделер* оятҡа ҡалдырыу, кәмһетеү. □ Позорить, унижать *(в присутствии кого-л.).* ■ *Вакытлы матбуғат биттәрендә тупаҫ сығыштар, йөҙ йыртыу, ғәйепләү материалдары күбәйә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы» № 10, 2011. ● *Йөҙәүҙең йөҙөн йыртма.* Мәҡәл.

ЙЫРТЫШ I (Р.: обрядовый кусок ткани; И.: piece of fabric used in Bashkir wedding rites; Т.: kumaş parçası) *и. этн.*

1. Кейәү кеше ҡыҙға ҡушылғанда, йырта баҫып, бүләк өләшеп инеп китер өсөн ике яҡтан ишеккә аръҡыры тотоп тора торған аршын самаһы туҡыма *(йыртылған остары тотҡан ҡыҙҙарҙың үҙенә була).* □ Обрядовый кусок ткани, которым загораживают жениху путь к невесте; жених, одарив родственников, наступает на ткань и, разорвав её пополам, входит в дом к невесте. *Йыртыш йыртыу.* ■ *[Ҡыҙҙар:] Әйҙә, еҙнә, кил әле. йыртыш йыртып уҙырға. Еҙнә, һиңә урын йәйҙек, бүләк биреп инергә.* Ҡ. Даян.

2. Төп ҡоҙағый туйҙа өләшә торған тартар ғына туҡыма йәки башҡа бүләк *(өләшкәндә ҡоҙалар яғының еңгәләре, ҡыҙҙары таҡмаҡ әйтеп тора).* □ Подарки, раздаваемые свахой на свадьбе. ■ *Ҡулына туй йыртышы төшмәгән кеше ҡалырға тейеш түгел туйҙа.* Халыҡ ижадынан. *Беҙгә килгән ҡоҙаларҙың еккән аттары ҡола. Йыртыш һорай тип көлмәгеҙ – борондан ҡалған йола.* Халыҡ йырынан. *[Асия:] Йә, балалар, һеҙ Гөлзифаларҙы ҡаршылағыҙ. Мин йыртыш әҙерләйем.* М. Буранғолов. ● *Ағай-энеңең тартышы – туй бүләге йыртышы.* Мәҡәл.

3. Мәрхүмдең өсөндә, етеһендә, ҡырҡында таратыла торған еп менән туҡыма киҫәге. □ Кусок ткани с нитками, раздаваемый на 3, 7, 40 дни после смерти человека.

ЙЫРТЫШ II *с. диал. ҡар.* **ҡыйпысыҡ.**

ЙЫРТЫШ III *и. диал. зоол. ҡар.* **этеш.** *Йыртыш тотоу.*

ЙЫРТЫШ БАҪЫУ (**йыртыш баҫ-**) (Р.: обряд, связанный с первой брачной ночью; И.: Bashkir wedding rite; Т.: düğün adeti) *к. этн.*

Никах төнө менән бәйле йола. □ Обряд, связанный с первой брачной ночью. ■ *Ҡыҙ янына кергән саҡта егет йыртыш баҫа.* Халыҡ ижадынан.

ЙЫРТЫШ ТАРАТЫУ (**йыртыш тарат-**) (Р.: ритуал раздачи ткани; И.: one of Bashkir wedding ceremonies; Т.: düğün adeti) *к. этн.*

Туйҙа тар тауар йәки башҡа бүләк таратыу йолаһы. □ В свадебном обряде ритуал раздачи ткани *(в целях умилостивления духов предков). Еңгәйҙәр йыртыш тарата.*

ЙЫРТЫШЫУ (йыртыш-) *к. урт. кар.* **йыртыу 1.** *взаимн. от* **йыртыу 1.**

ЙЫРЫҠ I (Р.: имеющий разрез; И.: having a slit; Т.: yırmaçlı) *с.*

Йырылып торған, йырылған. □ Имеющий разрез, с разрезом *(на одежде). Йырыҡ итәк.* ■ *Өҫтөнә йырыҡ итәкле сюртук, башына аҡ түбәле, ҡара тирәле картуз кейгән .. Иван Твердышев, сал төшә башлаған бөҙөркә һаҡалын һыпырып, үткер күҙҙәре менән тирә-яҡҡа йәһәт кенә ҡарап алды.* Ғ. Ибраһимов. *[Көлтөй ҡарт:] Анау йырыҡ бәлтә кейеп, йәдит булып, дин боҙоп йөрөгәндәр, тәмәкеһен ҡырын ҡабып, гармун тартып йөрөгән галахтары аҙмы уның [башҡорттоң].* Д. Юлтый.

ЙЫРЫҠ II (йырығы) (Р.: разрез; И.: slit; Т.: yırmaç) *и.*

1. Йырылып торған урын. □ Разрез, прорез *(на одежде). Күлдәктең йырығы.* ■ *Үҙе [Нажиә] эйелеп, түшендәге күлдәк йырығын Яхияның күҙҙәре алдына уҡ килтерҙе.* А. Таһиров.

2. *ҡар.* **ярыҡ.** ■ *Тәҙрә ҡапҡасы йырығынан ҡараңғылыҡты бысаҡ кеүек ярып ингән яҡтылыҡта Ғәшүрә иҙңы шәйләне: өй эсе бола, ҡаралты-түшәк йыйылмаған.* Р. Ҡол-Дәүләт.

♦ **Йырыҡ ауыҙ** бушҡа көлөп торған кешегә әйтелә. □ Рот до ушей *(об улыбчивом человеке);* хохотун, хохотушка. ■ *Ниса апайым сыҙаманы, ике ҡулын бөйөрөнә таянып, теге йырыҡ ауыҙҙар алдына килеп баҫты.* М. Кәрим.

ЙЫРЫЛЫУ (йырыл-) *к. төш. кар.* **йырыу 1—3.** *страд. от* **йырыу 1—3.** *Канау йырылды. Быуа йырылған.* ■ *Төн буйына нығытылған быуа икенсе көндө ирткәнсәк көслө нефть ағымдарын тота алмай йырылды, нефть тағы ла Ағиҙелгә аға башланы.* А. Карнай. *Түҙемлектең быуаһы, тим, саҡ йырылмай, килеп етте әрһеҙ ҡунаҡ саҡырылмай.* Т. Йосопов. *Әйтерһең дә, шулай донъя шаулай, шаулай йылдар, шаулай быуаттар. Тау йылғаһы ташып килһә шулай, быуа йырылыр бит, быуа тар.* Р. Ғарипов.

ЙЫРЫН (Р.: овражек; И.: small ravine; Т.: çukur) *и.*

1. Һыу йырған соҡор. □ Овражек *(прорытый водой). Тәрән йырын. Йырын башы. Йырын буйлап ағас ултыртыу.* ■ *Һуҡмаҡ тау билен уратып төшөү менән ҡуйы ағастар ҡаплаған тар ғына йырынға алып инә.* З. Ураҡсин. *Тауышынан сыңлап китә киң яландар, йырындар, күректәре кирелгәндә, һыҡтайны ни йыр-моңдар.* Т. Йосопов. *Йырындың һайыға барып, ваҡ ҡыуаҡтарҙың һирәкләнеүе, кесерткән шырлығының бөтөүе хәтерендә Ирназарҙың.* Ә. Хәкимов.

2. *диал. кар.* **гөрләүек.** *Яҙғы йырын көслө була.* ■ *Шул саҡ быуылып торған йырын асылып киттеме ни.* Т. Ғирфанов.

ЙЫРЫНДЫҠ (йырындығы) *и. кар.* **йырғанаҡ 1.**

ЙЫРЫНТЫ *и. кар.* **йырын 1.** ■ *Сәйфелмөлөк кескәй йылға ярында, ямғыр һыуы өңөүҙән хасил булған тау йырынтыһына төшөп, ҡоро-һары йәйеп, өҫтөнә һуҙылып ятыр-ятмаҫтан йоҡоға китте.* Ә. Хәкимов. *[Ҡыҙылғының] буйы йылға шикелле артыҡ киңәймәй һәм тарайҙмай биш-алты саҡрымғаса һуҙыла ла, аҙаҡ йырынты рәүешенә әйләнеп, Ҡыҙылғы йылғаһына ялғана һәм Ағиҙелгә барып тәрелә.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫРЫНЫУ (йырын-) (Р.: освобождаться; И.: free oneself (from); Т.: kurtulmak) *к.*

Ниндәйҙер эш йәки хәлдән йырып сығыу, нисек тә ҡотолоу; арыныу. □ Освобождаться, избавляться. *Хәүефле уйҙарҙан йырыныу. Эштән йырыныу.* ■ *Мин йырынып сыҡмаҫлыҡ шиктәргә баттым.* М. Кәрим. *[Гөлйөҙөм:] Беҙҙең ни ваҡ балалар менән булашып көн үтә, уларҙан тиҙ генә йырынып китеп буламы.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫРЫУ (йыр-) [дөйөм төрки *йыр-*](Р.: прорыть; И.: break (through); Т.: oymak) *к.*

1. *Ниҙәлер* өңөп, ашап, юл ярыу. □ Прорыть, прокапывать. *Канау йырыу.* ■ *Машина юлда хасил булған бысраҡты йырып сыға алмаҫ булды һәм бөтә тәгәрмәстәренә тиклем һаҙлыҡҡа инеп ултырҙы.* Б. Дим. *Тракторҙар, ҡырсын түшәлгән ишек алдын иҙеп, йырып, арттарына тағылған дүрт һабанды һөйрәп, ҡапҡанан сығып киттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

2. Эркелеп, быуылып ятҡан нәмәгә юл ярыу. □ Прорывать *(разрушая преграду). Һыу быуаны йырған. Дамбаны һыу йырған.* ■ *Шунан, быуаны йырған ташҡын шикелле ярһыулы хистәр, һүҙҙәр, һорауҙар тулҡыны ике меҫкенде күмеп китте, бәреп йығырҙай итте.* Ә. Әминев. *Ат та ҡар һыуҙары йырған баҫыу буйлап, ҡара төндөң күҙенә тура ҡарап, юрта-атлай алға ынтылыуын белде.* И. Абдуллин.

3. Кимереп, өңөп, юлаҡ яһау. □ Изъедать, истачивать *(оставляя борозды, дырки). Ҡорт бүрәнәне йырған.* ■ *Мин мөйөш-һөйөштәрен сыҫҡан кимереп, таҡталарын ҡорт йырып бөткән тутыҡҡан ҡалай ҡоршаулы ҙур ағас һандыҡҡа ҡыҙыҡһынып ҡарайым.* З. Биишева.

4. Буйға ярыу, телеү. □ Рвать, разорвать. ■ *Һаҙаҡ Аҡһаҡ колаңың һыртын ярып, бер ҡолағын йырып барып сыға.* «Аҡһаҡ ҡола».

5. *Ниҙелер* ян-яҡҡа аралап, алға хәрәкәт итеү. □ Прорывать, прокладывать дорогу. *Үлән йырып барыу. Көрт йырыу. Ҡар йырыу.* ■ *Ылаҫындар бирелергә теләмәй. Улар, ҡара болот ҡамауын йырып сығып, күккә, бейеккә күтәреләләр ҙә хәрәкәтһеҙ ҡалалар.* И. Абдуллин. *[Шәмси] ҡалын ҡарҙы йырып, алға барыуын белде.* Ғ. Хәйри. *Аҡбуҙ һыуҙы йырған, ти, юлы ҡалҡып ҡалған, ти; Урал ярған юлдарҙан халыҡ эйәреп барған, ти.* «Урал батыр».

6. Ҡаршылыҡты еңеп, алға хәрәкәт итеү. □ Пробиваться *(разрушая преграду). Халыҡ күп, йырып үткеһеҙ.* ■ *Ай үҫкәндә, әҙәм балаһы көс-ҡеүәте артыуын тоя, ул теләһә ниндәй ауырлыҡты ла йырып сығырға әҙер.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010. *Төп көстәрҙән айырылған, улар менән элемтәһеҙ өҙөлгән полк, ҡамауҙы йырып, Черкассы ҡалаһына табан сигенде.* Ә. Хәкимов. *Командир ҡамауҙы йырып сығырға ынтылып ҡарарға булды.* Яр. Вәлиев.

♦ **Йырып алғыһыҙ** мыжғып торған күп. □ Много. *Йырып алғыһыҙ күп булыу.*

ЙЫТЫҠА (Р.: сплетница; И.: gossip; Т.: dedikoducu) *с.*

Останлап, һүҙ ташып йөрөүсән *(ҡатынға ҡарата).* □ Сплетница. *Йытыҡа ҡыҙ. Йытыҡа булыу.*

ЙЫУА (Р.: дикий лук; И.: wild leek; Т.: yabani pırasa) *и. бот.*

1. Һуғанбаш үҫемлектәр төркөмөнә ингән, кеше ашай торған әсе ҡыяҡ япраҡлы үләндәрҙең дөйөм исеме. □ Общее название дикорастущих луковичных растений. *Йыуаға барыу. Йыуа йыйыу.* ■ *Оҙаҡ йырлашҡандан һуң, ҡыҙҙар йыуа йыйырға таралды.* Б. Бикбай. *Оло Эйек буйында йыуаһы ла, ҡуҙғалағы ла, ҡуянтубығы ла етерлек.* З. Биишева.

2. *миф.* Төрлө ауырыуҙарҙан, сихыр-зәхмәттән һаҡлаусы үлән. □ Мифологизированное растение, имеющее отпугивающую силу, как и все острые на вкус растения *(используют как отпугивающее средство от болезней, нечистой силы).* ■ *Йыуа таптым! Беренсе мин таптым! — тип ҡыскырһаң, зәңге сире ҡаса, тиҙәр. Ат йыуаһын ашағанда ат кеүек кешнәһәң, сир-сор килмәй.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫУАҒА СЫҒЫУ (йыуаға сыҡ-) (Р.: ритуальное хождение за первым луком; И.: traditional Bashkir ritual rite; Т.: bir âdet) *ҡ.*

Яҙ көнө беренсе йыуаға сығыу йолаһы *(сәй эсеп, сир-сор ҡыуып, күмәкләшеп һаулыҡ теләүҙән ғибәрәт).* □ Ритуальное хождение за первым луком.

ЙЫУАЙТЛАНЫУ (йыуайтлан-) *ҡ. диал. ҡар.* **ярамһаҡланыу.** *Йыуайтланып йөрөү.*

ЙЫУАЛЫ (Р.: луковое; И.: having wild leek; Т.: yabani pırasah) *с.*

Йыуа үҫкән, йыуаһы булған. □ Луковое, с диким луком. *Йыуалы урын. Йыуалы аш. Йыуалы ялан.*

ЙЫУАЛЫҠ (йыуалығы) (Р.: место, где растёт дикий лук; И.: place grown with wild leek; Т.: yabani pırasah yer) *и.*

Йыуа үҫкән ер. □ Место, где растёт дикий лук. *Һырттан төшөп, йылғаға сығыр алдынан оҙон һәм бейек ҡамышлыҡ, һаҙлыҡ аша түңәрәк йыуалыҡ ялανына сығаһың.*

ЙЫУАН [боронғо төрки *йоғ-*] (Р.: толстый; И.: thick; Т.: kalın) *с.*

1. Әйләнәһе ҙур *(оҙонса, йомро нәмәнең арҡырыһына ҡарата); киреһе* — нәҙек. □ Толстый *(об округлых продолговатых предметах). Йыуан ҡайын. Йыуан еп. Йыуан бүрәнә.* ■ *Гөлнур ҡойма буйындағы йыуан бүрәнәнең бер башына атланған да ямғыр тамсылары менән һөйләшә.* М. Кәрим. *Беҙҙең эргәләге ағастар беҙҙең ҡуҙҙәргә йыуан һәм бейек булып күренделәр.* Д. Юлтый. *Батырҙар, шулай кәңәшләшкәндән һуң, тегe баштағы ҡитмәксе булып, Уҡъюнарҙың үҙенән дә йыуанырак уғына теҙелешеп ултырғандар.* Әкиәттән. ● *Бүрәнәнең йыуан башы кемдә булһа, шуға ауыр.* Мәҡәл. *Таяҡ ике башлы була, йыуаны үҙеңә төшмәһен.* Мәҡәл.

2. Кәүҙәгә ҡалын; һимеҙ, таҙа. □ Толстый, тучный, полный. *Йыуан ир. Йыуан аяҡ.* ■ *Тик уның [Гәлиәхмәт байҙың] кәзә һаҡалы, хәйләкәр күҙҙәре, мискә кеүек йыуан ҡорһағы ғына үҙгәрмәгән.* Я. Хамматов. *Беҙҙә бәләкәйерәк булмаһа тегe йыуан ҡатын Урманцева ҡаршы алды.* С. Агиш. *Урта буйлы, тулы кәүҙәле, өлкән ҡуңыр күҙле, йыуанырак .. Өмөтбай, уның артынан Ҡарасәс килеп инде.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Бәйге алмаған йүгеректән биле йыуан бишле артыҡ.* Мәҡәл. *Йыуаштан йыуан сыға.* Мәҡәл. *Йыуан йыуанды күрә алмай.* Мәҡәл. *Беләге йыуан берҙе йығыр, белеме йыуан меңде йығыр.* Мәҡәл. *Ит ашағандың балтыры йыуан.* Мәҡәл.

3. *һөйл.* Ҡалын, түбән тембрлы *(тауыш хаҡында).* □ Низкий *(о голосе). Йыуан тауышлы.* ■ *Бөрәү йәмһеҙ, йыуан тауыш менән олой.* А. Таһиров. *Бөтә кәүҙәһе менән төшөрөлгән портрет завод эшселәренең манифестацияға йыйылыуын һәм йыуан-йыуан тауыштар менән «Боже, царя храни»ҙы йырлауын түҙемлек менән көтөп тора бирҙе.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Йыуан ҡорһаҡ** кеше хаҡын ашаған байҙарға ҡарата әйтелә. □ Толстое брюхо, толстопузый; богач. ■ *Тәүҙән үк ҡандары ҡомарып, яралары тоҙланып килгән йыуан ҡорһаҡтар, был һүҙҙе ишеткәс, ярыла яҙҙылар.* Ғ. Дәүләтшин. **Таяҡтың йыуан башы төшөү (***йәки* **эләгеү)** эш-хәлдең ауырлығын күтәргән, хөкөм, язаның ҡатырағын алған кеше. □ Основная тяжесть *(при каком-л. деле).* **Төптән йыуан сыҡҡан** эре һөйәкле, ҡыҫҡа буйлы, ныҡлы кешегә әйтелә. □ Кряжистый, приземистый, крепкого телосложения человек.

ЙЫУАНАЙТЫЛЫУ (йыуанайтыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йыуанайтыу.** *страд. от* **йыуанайтыу.**

ЙЫУАНАЙТЫУ (йыуанайт-) (Р.: утолщать; И.: thicken; Т.: daha kalın yapmak) *ҡ.*

Йыуанға әйләндереү. □ Утолщать, делать толще. // Утолщение. *Арҡандың осон йыуанайтыу.*

ЙЫУАНАЙЫУ (йыуанай-) (Р.: утолщаться; И.: become thicker; Т.: daha kalın yapılmak) *ҡ.*

1. Йыуанға әйләнеү, йыуан (1) булып китеү. □ Утолщаться. *Тирәктәр йыуанайған.* ■ *Күл өҫтөнән болотҡа олғашҡан бағана һымаҡ ҡара нәмә үҫеп сыҡты. Бер оҙоная, бер ҡыҫҡара, бер йыуаная, бер нәҙегәйә ине ул бағана.* Д. Бураҡаев.

2. Һимереү, кәүҙәгә ҡалынайыу. □ Поправиться, становиться толстым, толстеть. ■ *Ул [Хәлил] һаман да шул уҡ баҫынҡы характерлы, аҙ һүҙле, тағы ла нығырак йыуаная төшкән таҙа кәүҙәле кеше ине.* Б. Дим.

ЙЫУАН АТ (Р.: лошадь старше пяти лет; И.: nag; Т.: ihtiyar at) *и. диал.*

1. Биш йәштән үткән йылҡы малы. □ Лошадь старше пяти лет. *Йыуан атты егеү. Йыуан атты һатып ебәреү.*

2. Эшсе ат. □ Рабочая лошадь. *Йыуан атыбыҙ йөктө яҡшы һөйрәй.*

ЙЫУАНБЕЛӘК (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ырыуының араһы. □ Родовое подразделение башкир-катайцев.

ЙЫУАНДЫРЫУ (йыуандыр-) (Р.: утешать; И.: console; Т.: teselli etmek) *ҡ.*

Ауыр, күңелһеҙ хәлдәге кешелә өмөт, ышаныс уятыу. □ Утешать, забавлять, развлекать; успокаивать, тешить. // Утешение, успокоение. *Үҙ-үҙеңде йыуандырыу. Күңелде йыуандырыу.* ■ *[Әхтәмов] уларға мәғәнәле һүҙҙәр, ҡыҙыҡлы көләмәстәр һөйләп*

көлдөрә, йыуандыра, Барсакова Йәмиләнең һарыуын ҡайната ине. А. Таһиров. *[Ибне Йәмин — Мөсәлимгә:] Күренһәң, ҡайғыларҙы оноттораһың, матурлыҡ менән беҙҙе йыуандыраһың, Йософома бигерәк тә оҡшап тораһың.* «Ҡиссаи Йософ».

ЙЫУАН ҠОРҺАҠ КҮБӘЛӘКТӘР (Р.: коконопряды; И.: eggars; Т.: sarkan kurt) *и. зоол.*

Ҙур йөнтәҫ ҡорһаҡлы, һәр ерҙә йәшәй торған төнгө күбәләктәр. □ Коконопряды, толстобрюшки (лат. *Lasiocampidae*). *Йыуан ҡорһаҡ күбәләктәр ауыл хужалығына ҙур зыян килтерҙе.*

ЙЫУАН ҠОРҺАҠТАР *и. ҡар.* **йыуан ҡорһаҡ күбәләктәр**. *Йыуан ҡорһаҡтарҙы ағыулау. Йыуан ҡорһаҡтар менән көрәш.*

ЙЫУАН ҠУНЫС (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ырыуының араһы. □ Родовое подразделение башкир-тунгаурцев.

ЙЫУАНЛЫҠ (йыуанлығы) (Р.: толщина; И.: thickness; Т.: kalınlık) *и.*

1. Оҙонса, йомро нәмәнең арҡыры киҫелеш ҙурлығы; *киреһе* — нәҙеклек. □ Толщина *(круглых продолговатых предметов). Ағастың йыуанлығын билдәләү.* ■ *Урмандарҙа беләк йыуанлығы көпшәләр үҫә, аҡландарҙа торғай башы ҙурлығы еләктәр бешә.* М. Кәрим. *[Әсәһе — Сабираға:] Ошо йөндән һиңә ойоҡ бәйләр өсөн тегәр еп йыуанлығы иштереп, нәҙек кенә итеп иләйем әле.* Ғ. Хәйри. *Аяҡтар ҡум-ҡук булғандар, ҡук тамырҙар бармаҡ йыуанлығы булып ҡалҡҡандар.* Д. Юлтый.

2. Кәүҙәгә ҡалын, йыуан булыу сифаты. □ Полнота, тучность. *Йыуанлыҡтан уңайһыҙланыу.* ■ *[Ҡатын:] Минең йыуанлыҡта һеҙҙең эшегеҙ булмаһын!* К. Мәргән.

ЙЫУАННАР (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуы аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-юрматинцев.

ЙЫУАНСА *с. диал. ҡар.* **йыуантыҡ.** *Йыуанса кеше. Йыуанса булыу. Йыуанса күренеү.*

ЙЫУАНТАҠ (йыуантағы) *с. ҡар.* **йыуантыҡ.** ■ *Мифтахетдиндың кем балаһы икәнлеген һорашып белгәс, башына оло сәллә ураған, оҙонса йөҙлө, ерән һаҡал-мыйыҡлы, йыуантаҡ Лоҡман мулланың ҡырыҫ йөҙө яғымлыланды.* Я. Хамматов. *Малайҙарҙың береһе — нәҙек оҙон буйлы, ҡара сәсле, икенсеһе — ҡыҫҡа йыуантаҡ кәүҙәле, ҡуңыр сәсле.* Н. Ғәйетбаев.

ЙЫУАН ТАМЫР (Р.: сонная артерия; И.: carotid; Т.: şahdamar) *и. диал.*

Йоҡо тамыры. □ Сонная артерия. *Йыуан тамырға баҫыу.*

ЙЫУАНТЫҠ (Р.: полноватый; И.: thickset, plump; Т.: şişman) *с.*

Уртаса йыуан һәм ҡыҫҡа. □ Полноватый, толстоватый. *Йыуантыҡ ҡатын. Йыуантыҡ бармаҡтар.* ■ *Йыуантығыраҡ, олпатыраҡ кәүҙәлеһе, йөнтәҫ муйынын эскә тартып, хәрәкәтһеҙ уйланып ултырырға ярата.* Й. Солтанов. *Айбулатҡа ҡарағанда байтаҡ йәш, урта буйлы, йыуантыҡ Асатай ат өҫтөндә лә дүрткел һымаҡ булып күренә.* Һ. Дәүләтшина. *Ишекте ҡапыл асып, бүлмәгә йыуантыҡ кәүҙәле, үркәс танаулы, шаҙра йөҙлө, өҫтөнә эш кейеме кейгән бер эшсе инде.* Ғ. Ибраһимов.

ЙЫУАНЫС (Р.: утешение; И.: consolation; Т.: teselli) *и.*

1. Күңелде әүрәткән, йыуандырған тойғо. □ Утешение, утеха, отрада *(чувство). Йыуаныс эҙләү.* ■ *Бөтә ҡыуанысымды, йыуанысымды, барлыҡ өмөтөмдө йотоп бөттөң дә, миңә тағы йымылдап, йылтырап ятмаҡсыһыңмы?!* З. Биишева.

2. Күңелде йыуандыра, шатландыра торған кеше йәки нәмә. □ Утешение, утеха, отрада. ■ *Башҡорт халҡының ифрат бай һәм гүзәл йыр мираҫы бар. Борон-борондан был мираҫ халҡыбыҙҙың ҡыуанысы һәм йыуанысы булған.* С. Галин. *Миңһылыу еңгә беҙҙең ҡыуаныс булһа, әсәйҙәребеҙҙең күҙ терәп торған йыуанысы ине.* Р. Солтангәрәев. *Һөрмәле керпектәрең ни өсөн, күңел йыуанысы өсөн генә, бер тапҡыр күтәрелмәй, һылыуым?!* Т. Йәнәби. *Ярты сәғәт эсендә механик бөтә*

кешенең йыуаныҫына әйләнде, үҙе артынан бөтә цехты эйәртеп алып китте; ауыҙына ҡарата белә, хөрәсән! Ә. Бикчәнтәев. ● *Йыр күңеллегә — ҡыуаныс, күңелһеҙгә — йыуаныс.* Мәҡәл.

ЙЫУАНЫС БИРЕҮ (йыуаныс бир-) (Р.: утешить; И.: console; Т.: teselli etmek) *ҡ.*

Күңелде йыуандырыу, шатландырыу. □ Утешить *кого*, быть отрадой *кому*. *Күңелгә йыуаныс биреү.* ■ *[Мәҙинә] иҫенә килгәс, әҙме-күпме йыуаныс бирерҙәй тәүге уйы ла һөйгәненә бәйле ине.* Ә. Хәкимов. *Уның [Мәрйәм] хаҡында уйлау ғына ла ауыр минуттарҙа күңелгә еңеллек, йыуаныс бирә, өҫтөңә ябырылған ҡыйынлыҡтар, тормоштоң тупаҫлыҡтары бер нисә минутҡа онотолоп тора.* Д. Юлтый.

ЙЫУАНЫСЛЫ (Р.: утешительный; И.: consolatory; Т.: teselli verici) *с.*

Йыуаныс биргән. □ Утешительный, отрадный. *Йыуаныслы хәбәр. Йыуаныслы һүҙ. Йыуаныслы хат алыу.* ■ *[Алтынсәс] атаһының ниңәлер күңеле төшөнкө булыуын да, йыуаныслы берәй хәбәре юҡлығын да онотҡайны ул.* Ә. Хәкимов. *Юғарынан күңелде тынысландырырлыҡ йыуаныслы хәбәрҙәр килмәй.* Ғ. Хөсәйенов. *Һаман ышаныр-ышанмаҫ торған бригадир, бармаҡтарына ураған үгән теҙгенен ыҫҡындырмайынса, ғәйрәте кәмеп, йыуаныслы икенсе һүҙ ишетергә теләгәндәй, ауылдаштарына ҡараны.* Я. Хамматов.

ЙЫУАНЫС ТАБЫУ (йыуаныс тап-) (Р.: находить утешение; И.: find consolatation; Т.: teselli bulmak) *ҡ.*

Кемдәндер йәки *нимәнәндер* йәм табыу, йыуаныслы булыу. □ Найти утешение. *Эштән йыуаныс табыу. Ғаиләнән йыуаныс табып йәшәү.* ■ *[Кинйәғол] баҡыйын, әхирәтен уйлағанда дин китаптарын, хәҙистәрен, ҡасиҙәләрен күҙҙән кисереп үҙенсә йыуаныс таба.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫУАНЫСҺЫҘ (Р.: неутешительный; И.: unconsoling; Т.: tesellisiz) *с.*

Йыуаныс бирмәгән, йыуаныҫы булмаған. □ Неутешительный. ■ *Болотло төн булһа, бик яманһыу, күк нурҙарын ҡаплай болоттар; йыуаныҫһыҙ булһа төнгө тынлыҡ, ауыр үтә икән минуттар.* Ҡ. Даян. *Людмиланың көндәре һанаулы икәнен дә беләм, тойғоларымдың фажиғәле икәнен дә аңлайым, һүҙҙәремдең йыуаныҫһыҙ икәнен дә күрәм, шулай ҙа яҙам.* М. Кәрим.

ЙЫУАНЫУ (йыуан-) (Р.: утешаться; И.: seek consolation; Т.: teselli bulmak) *ҡ.*

Ауыр, күңелһеҙ хәлдә өмөт, ҡыуаныс табып, үҙеңде әүрәтеү. □ Утешаться *кем-чем*, находить утешение или отраду *в ком-чём*. // Утешение, отрада. *Балаға йыуаныу.* ■ *Пожарный алдында ла, ат һарайҙары алдында ла артыҡ йыуаныр нәмә тапманым.* Ф. Иҫәнғолов. *Ейәнсура төнөн беләһең бит — Һаҡмар йырын тыңлап йыуана.* Б. Ишемғол. *Ерҙең еҫен тойоп ләззәтләнәм, һәр берегеҙ кеүек ҡыуанам; көндән — төндө, күҙҙән яҙҙы айырам, яҙға әүрәп, моңға йыуанам.* Б. Вәлид. *[Сәлимә:] Исмаһам, әсә лә була алманым. Балаға йыуанып көнөм үтер ине.* Ә. Атнабаев. ● *Маҡтансыҡ үҙен маҡтап ҡыуаныр, бәхетһеҙ үҙен алдап йыуаныр.* Мәҡәл.

ЙЫУАН ЭСӘК (эсәге) (Р.: толстая кишка; И.: colon; Т.: kalın bağırsak) *и. анат.*

Эсәктең ас эсәктән тура эсәккә тиклемге йыуан өлөшө. □ Толстая кишка. *Йыуан эсәк ауырыуҙары.* ■ *Уның [болануттың] япрағынан әҙерләнгән ҡайнатманы йыуан эсәктең колит сире булғанда, нервылар ҡаҡшағанда ҡулланырға кәңәш итәлә.* В. Ғүмәров.

ЙЫУАСА (Р: изделие из пресного теста; И.: kind of Bashkir pastry; Т.: yemek türü) *и. кул.*

1. Ҡамырҙан йәйеп, дүрткелләп ҡырҡып, майҙа ҡайнатып бешерелгән ашамлыҡ. □ Жареные в масле кусочки теста в виде ромбиков. ■ *Ҡаҙан тултырып ит һалынды, биш-алты йәймә һалма йәйелде, тултырма, йыуаса, ләүәш, ҡумәс — береһе лә ҡалмай бешерелде.* З. Биишева. *[Ғәләм:] Беҙ, Шөкөр ҡорҙаш, ҡабарып бешкән бойҙай йыуаҫаһы ғына түгел, ҡыҙарып бешкән алма ла ашарға тейешбеҙ.* Ә. Вәли. *Эй, йыуаса, йыуаса, ниңә әле бығаса иҫләмәнем һине бик? Һай, бик тәмле инең бит!* Р. Ғарипов. *Килене берәмләп йыуаҫаһын ырғыта бара, Мәскәй әбей йота*

бара, ти. Әкиәттән. ● *Юл аҙығы — йыуаса.* Мәҡәл.

2. Ҡунаҡҡа йәки туйға күстәнәс итеп алып барылған шул ашамлыҡ. □ Гостинцы для свадебного стола или гостей. ■ *Ҡоҙа килде яҙ ғына, килгән юлы һаҙ ғына. Күргән көнө ауыр микән, йыуасаһы аҙ ғына!* Йырҙан. *Тоҡтоң ауыҙын асайыҡ, йыуасаһын сәсәйек, ҡоҙағыйҙың күңеле булһын, бөтөргәнсе ашайыҡ.* Йырҙан.

3. *диал.* Күстәнәс. □ Гостинец. ■ *Яҡуптың әсәһе кескәй банкаға һалып бал, байтаҡ ҡына йыуаса ҡуйҙы.* М. Кәрим. *[Сөнәғәт] заводтан ҡайтҡанда, еҙнәһенә гел йыуаса алып ҡайта.* Ж. Кейекбаев.

4. *этн.* Туй, ерләү йолалары менән бәйле ритуаль аш. □ Обрядовое блюдо, связанное со свадебным и поминальным обрядами.

5. *миф.* Түллек, муллыҡ символы. □ Символ плодовитости и благополучия.

♦ **Йыуаса кеүек** ныҡлы, батыр. □ Крепкий, здоровый *(обычно о мужчине).* ■ *Йыуаса ла кеүек батыр ирҙәр беҙҙән киткән инде, юҡ улар.* Халыҡ йырынан.

ЙЫУАСА ЙЫРЫ (Р.: шутливая свадебная песня; И.: jocular wedding song; Т.: düğün şarkısı) *и. этн.*

Туйҙа ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар күстәнәс күтәреп бейегәндә йырланған шаян йыр. □ Шутливая свадебная песня, исполняемая во время раздачи гостинцев и направленная на обеспечение благополучия, плодовитости.

ЙЫУАСА КӨНӨ (Р: второй день свадьбы; И.: the second day of a wedding; Т.: düğünün ikinci günü) *и. этн.*

Туйҙың икенсе көнө, йәш киленгә муллыҡ, түллек теләүгә йүнәлтелгән көн. □ Второй день свадьбы, направлен на обеспечение плодовитости и благополучия невесты. *Күршеләргә йыуаса көнөнә саҡырыу.*

ЙЫУАСАЛАУ (йыуасала-) (Р.: чаепитие с гостинцами; И.: tea-party with presents; Т.: çay içme töreni) *ҡ.*

Килтерелгән йыуаса менән теләк теләп сәй эсеү. □ Чаепитие с гостинцами и благопожеланиями, благословением. *Йыуасалап сәй эсеү.* ■ *[Фәрдебаныу:] Әйҙә, йыуасалап сәй эсәйек.* И. Абдуллин.

ЙЫУАСА СӘЙЕ (Р.: чаепитие с гостинцами родни жениха; И.: tea-party with bridegroom's presents; Т.: çay içme töreni) *и. этн.*

Кейәүҙең туғандары килтергән йыуаса менән сәй эсеү. □ Ритульное чаепитие с гостинцами родни жениха. ■ *Беҙҙә туйҙа йыуаса сәйе эсеү йолаһы бар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫУАТА (Р.: род; И.: family, clan; Т.: soy) *и.*

Нәҫел-ырыуҙың төп тамыры, заты; йоҡан. □ Род.

ЙЫУА ТЕЛЕ (Р.: заклинание лука; И.: wild onion invocation; Т.: türü büyüsü) *и. миф.*

Беренсе йыуаға барғанда әйтелә торған магик һамаҡ. □ Заклинание лука.

ЙЫУАТҠЫС I (Р.: утешение; И.: consolation; Т.: teselli) *и.*

Йыуаныс биргән кеше йәки нәмә. □ Утешение. ■ *[Ғәлиәкбәр:] Бая мәктәптән йөҙөң бик яҡтырып сығып килә инең. Һөйлә әле, ауылдаш, унда ниндәй күңел йыуатҡыс таптың?* З. Биишева. *Юҡ тиһәң дә, барҙыр әле күңел йыуатҡыстарың.* Халыҡ йырынан. *Һин йыуатҡыс, һин уятҡыс, һин миңә ысын атам, булмаһаң һин, мин һине һағынып ҡына сирләп ятам.* Ш. Бабич.

ЙЫУАТҠЫС II (Р.: утешительный; И.: consolatory; Т.: teselli verici) *с.*

Йыуаныс биргән. □ Утешительный, отрадный. *Күңел йыуатҡыс моң.*

ЙЫУАТТЫРЫУ (йыуаттыр-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йыуатыу.** *понуд. от* **йыуатыу.** *Күңелдәрен йыуаттыралар.*

ЙЫУАТЫУ (йыуат-) (Р.: утешать; И.: console; Т.: teselli etmek) *ҡ.*

1. Ауыр, күңелһеҙ хәлдә һүҙ менән әүрәтеп, тынысландырыу. □ Утешать, забавлять, развлекать; успокаивать, тешить. // Утешение, успокоение. *Илаған баланы йыуатыу.* ■ *Юҡ, хәҙер һин үкһеп илаһаң да, һис кем килеп инде йыуатмаҫ, һиҙгер ҡулы менән сәсең һыйпап, сеү, балам, тип инде һүҙ ҡатмаҫ.* Р. Ғарипов. *Илама, тип йыуатһам да, барыбер илаһыңдыр. Болоттар бит тулышҡандар — ямғырҙы тыйырһыңмы?* Ә. Атнабаев. ● *Баланы тукмап йыуатма,*

көйләп йыуат. Мәҡәл. *Мәкәл әйткән — юл өйрәткән, әйтем әйткән — күңел йыуатҡан.* Мәҡәл.

2. Онотолдороп, яҡты тойғо уятып, тынысландырыу. □ Утешать; успокаивать, тешить. // Утешение, успокоение. *Күңелде йыуатыу. Үҙеңде өмөт менән йыуатыу. Хәйләһеҙ бер сабый һымаҡ уны [Туҡайҙы] йыуатты тик яҙған юлдары.* Р. Ғарипов. *Былбыл булып һайра, күңелемде йыуат, былбылым.* Я. Ҡолмой. *Бына ул [Мазһар] төрлө иҫтәлектәр менән күңел йыуатып, хыялға батып, аҡрын ғына атлап бара.* Ш. Насыров.

ЙЫУАТЫШЫУ (йыуатыш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йыуатыу.** *взаимн. от* **йыуатыу.** ■ *Роман биреп ебәргән справканы тапшырғас, [Мәҙинәнең] хеҙмәттәштәре аһ-уһ итеп йәлләште, йыуатышты ла бүтәнсә төпсөнөп торманы.* Ә. Хәкимов.

ЙЫУАШ I (Р.: кроткий; И.: meek; Т.: halim) *с.*

Йомшаҡ, баҫынҡы, баҫымсаҡ тәбиғәтле; *киреһе* — уҫал. □ Кроткий, смирный, безропотный. *Йыуаш ат. Йыуаш холоҡло. Йыуаш ҡыҙ.* ■ *Шунан һуң мин уның йыуаш, хәрәкәтһеҙ йөҙөнә ҡарап алам да шул кешенән шундай эштәрҙең башҡарылыуына ғәжәпләнәм.* Д. Юлтый. *Якуп бөтә урамда иң йыуаш һәм тыңлаусан малай ине.* М. Кәрим. *Ғәйни ағай үҙе былай йыуаш тәбиғәтле кеше ине.* Т. Йәнәби. *Ҡәрт уйнарға быйыл ғына өйрәнгән йыуаш Әхмәҙи өндәшмәй генә тәмәке һурҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Тайба әбейҙең ире йыуаш, сиркәтәү генә кеше булды.* З. Биишева. ● *Йыуаш аттың тибеүе ҡаты булыр.* Мәҡәл. *Йыуаш ишәккә һәр кем менер.* Мәҡәл. *Йыуаш этҡә таяҡһыҙ яҡын барма.* Мәҡәл. *Тыштан йыуаш, эстән шайтанға юлдаш.* Мәҡәл.

ЙЫУАШ II (Р.: кротко; И.: meekly; Т.: halim**)** *р.*

Йомшаҡ, баҫынҡы, баҫымсаҡ тәбиғәтле булып. □ Кротко, смирно, безропотно. *Йыуаш ҡына ултырыу. Йыуаш күренеү. Йыуаш ҡарау.* ■ *Бурылдың уҫал булыуы Ғәләмшә әбейҙең йыуаш булыуынан килә.* С. Агиш. *Бибекәй әбей табындағы һәр кешегә күптән күрмәгән, һағынған ҡараш менән бала һымаҡ ҡыйыуһыҙ, йыуаш ҡына йылмайып, берәмберәм ҡарап сыҡты.* З. Биишева.

ЙЫУАШАЙТЫУ (йыуашайт-) (Р.: усмирить; И.: pacify; Т.: halimleştirmek) *ҡ.*

Йыуашҡа әйләндереү, йыуаш итеү. □ Делать кротким, смирным, усмирить. *Уҫал кешене йыуашайтыу.* ■ *Таныш мөхит шунда уҡ йыуашайтты Дилбәрҙе.* Г. Ғиззәтуллина. *Рәхимә лә, уның [Мәғфүрәнең] был һүҙҙәренән риза булып, тауышын йыуашайтты.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫУАШАЙЫУ (йыуашай-, йыуашая) (Р.: становиться смирным; И.: grow quiet, meek; Т.: halimlenmek) *ҡ.*

Йомшаҡ, баҫымсаҡ тәбиғәтлегә әйләнеү, йыуашҡа әйләнеү. □ Становиться смирным, кротким; присмиреть. *Эт йыуашайған.* ■ *Маңлайындағы һарғылт сәс өлпөһөн артҡа һыйпап, подполковникка әллә нисек йыуашайып, мөлдөрәп ҡараны егет.* А. Мағазов. *Сашаның быңдай йыуашайыуына бөтәһе лә ғәжәпләнде.* Ә. Бикчәнтәев.

ЙЫУАШБАЙ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-табынцев.

ЙЫУАШ БИЛСӘН (Р.: бодяк полевой; И.: Canada thistle; Т.: köygöçerten) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк япраҡлы ҡый үләне. □ Бодяк полевой (лат. *Cirsium arvense*). *Бал ҡорттары йыуаш билсәндең татын да, һеркәһен дә яратып йыя.*

ЙЫУАШЛАНДЫРЫУ (йыуашландыр-) *ҡ. ҡар.* **йыуашайтыу.** *Тауышты йыуашландырыу. Кешене йыуашландырыу.*

ЙЫУАШЛАНЫУ (йыуашлан-) *ҡ. ҡар.* **йыуашайыу.** ■ *Гүзәлде күргәс, Ҡаһымбай этҡә тап булған бесәй һымаҡ һырт йөнөн ҡабартып ебәргәйне лә, улай ярамағанлығын белеп, кире йыуашланды.* И. Ғиззәтуллин. *Мәхмүттең кешегә атырҙай итеп, бер ни кәҙәр мыҫҡыллы, юғары әһәңлелек менән һалҡын нур тулы элекке оҫҡор, һауалы күҙ ҡараштары хәҙер йыуашланып, меҫкенләнеп,*

хәлһеҙләнеп ҡалған. С. Поварисов. ● *Ситлеккә ябылғас, йыртҡыс та йыуаштана.* Мәҡәл.

ЙЫУАШЛАТЫУ (йыуашлат-) *ҡ. ҡар.* **йыуашайтыу.** ■ *Бындағы тыныс тормош ниңәлер йыуашлата төштө.* Д. Юлтый.

ЙЫУАШЛЫҠ (йыуашлығы) (Р.: кротость; И.: gentleness, meekness; Т.: halim) *и.*

Йыуаш булыу сифаты. □ Кротость, смиренность, безропотность. *Йыуашлыҡ күрһәтеү. Йыуашлыҡтан файҙаланыу.* ■ *Улының йыуашлығын белгән Юламан эште үҙ ҡулына алды, Бөҙрә Фәтҡулланың эсенә бауырына инеп, уны Сыртлановтар яғына ауҙарырға кереште.* Ә. Хәкимов. ● *Йыуашлыҡты беләләр, тоталар ҙа үбәләр.* Мәҡәл.

ЙЫУАШЫТЫУ (йыуашыт-) *ҡ. ҡар.* **йыуашайтыу.** *Тауышын йыуашыта төштө. Уҫал кешене йыуашытыу.*

ЙЫУАШЫУ (йыуаш-) *ҡ. ҡар.* **йыуашайыу.** *Тай йыуашып ҡалды. Малай йыуашып китте.* ■ *[Ниғмәтулла:] Ир менән оҙаҡ йәшәмәгән бисә өйрәтелмәгән тай менән бер була бит ул. Сыпырандай-сыпырандай ҙа теҙгенен ҡыҫыбыраҡ тотҡан эйәһе табылғас та йыуашый.* Я. Хамматов.

ЙЫУҒЫР *с. диал. ҡар.* **йыума.** *Йыуғыр тел. Йыуғыр ҡатын. Йыуғыр булыу.*

ЙЫУҒЫС (Р.: мочалка; И.: wisp of bast; Т.: kese) *и.*

1. *Ниҙелер* ышҡып йыуыу өсөн тәғәйенләнгән махсус нәмә. □ Мочалка, тряпка. *Йүкә йыуғыс. Ҡаҙан йыуғысы. Сепрәк йыуғыс. Иҙән йыуғысы. Йыуғысҡа әйләнеү.* ■ *[Төлшат:] Иҙән йыуыу бына иң ауыр эш инде донъяла. Йыуған саҡта йыуғыс бора-бора. биттән, арҡаларҙан тир аға.* Т. Арслан. *Тас тултырып һыу һалдым, ҡулыма йыуғыс алдым. Мин тәү ҡат иҙән йыуам, үҙем бик ҡурҡып ҡуям.* Ф. Рәхимғолова. *Хафиза ҡулындағы эҫе йыуғысын бер ҡулынан икенсеһенә күсерә-күсерә аңлатып бирҙе.* С. Агиш.

2. *күсм.* Өнһөҙ, һүҙһеҙ хеҙмәт иткән хаҡһыҙ ялсы. □ Слуга, прислужник. *Йыуғыс булыу.* ■ *[Зәлифә — Этколға:] Һиңә йыуғыс булырға килгәнем юҡ... Ана урының, һал да ят.* Т. Хәйбуллин.

ЙЫУҒЫСЛАНЫУ (йыуғыслан-) (Р.: обтрепаться; И.: become frayed; Т.: yıpranmak) *ҡ.*

Әрһеҙләнеп, туҙып, йыуғыс кеүек булыу. □ Обтрепаться, измочаливаться. *Әйбер йыуғысланып бөткән. Итәк осо йыуғысланып бөткән. Кейеме йыуғысланған.*

ЙЫУҒЫСЛАУ (йыуғысла-) (Р.: пользоваться мочалкой; И.: use a wisp of bast; Т.: kese kullanmak) *ҡ.*

Йыуғыс менән ышҡыу. □ Пользоваться мочалкой или тряпкой. *Йыуғыслап йыуыу. Йыуғыслап йыуыныу.* ■ *Гөлбаҙыян инәй тиҙ генә һыу йылыта һалды. Егерме йыл буйына файҙаланылмай ултырған килене, килеһаптарын йыуғыслап, ҡырып йыуа башланы.* Ғ. Шәрипов. *Рәхмәтулла оҙаҡ итеп йыуғыслап йыуынды.* Яр. Вәлиев.

ЙЫУҘЫРТЫУ (йыуҙырт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йыуыу 1, 2, 6.** *понуд. от* **йыуыу 1, 2, 6.** *Ҡабаттан йыуҙыртыу. Иҙәнде йыуҙыртыу.* ■ *Алтын ятышын белгән, алтынды күберәк йыуҙыртҡан шәп управляющий кәрәк буласаҡ уға [Касьяновка].* Я. Хамматов. *Яурынына сигелгән һөлгө һалып, йышып ағартылған еҙ тас, еҙ ҡомған тотоп Байрас эҫе һыу менән ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙыртып сыҡты.* З. Биишева. *[Гөлйөҙөм:] Өсөнсө көн йыуған кереме Ғәзимә: «Асылмаған, буҙартҡанһың», — тип, тотош ҡабат йыуҙыртты.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫУҘЫРЫУ (йыуҙыр-) *ҡ.*

1. *йөкм. ҡар.* **йыуыу 1, 2, 6.** *понуд. от* **йыуыу 1, 2, 6.** *Кер йыуҙырыу. Өҫтөн йыуҙырыу.* ■ *Мырҙағәле [ҡунаҡтарҙың] һәр береһен үҙ урынына ултыртты, еҙ тас менән ҡомған йөрөтөп, ҡулдарын йыуҙырып сыҡты.* З. Ураҡсин. *Ҡәмәр әбей ҡунаҡҡа барғанда кейергә ярарлыҡ кейемһалымдарын рәтләп, килешмәгән урындарын төҙәтеп, йыртыҡ урындарын ямап, түшелдеректәрен йыуҙырып, таҫтарҙарын таҙарта.* Ғ. Дәүләтшин. *Магазин эсе аш мәжлесенә әйләнә. Әмирханов минән ҡомған менән ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙырырға ҡуша.* С. Агиш.

2. Көслө һыу баҫымы йәки ағымы менән йыуыу. □ Мыть, смывать *(сильной струёй воды). Йыуҙырып төшөрөү. Машинаны йыуҙырып сығарыу.* ■ *[Аҡҡош:] Йәншишмәнән һыу алып, әсәм тәнем йыуҙырған.* «Урал батыр». *Ут һүндергәс, мискәләр алып килеп, шуның эсәктәренән һыу һиптереп, урам таштарын йыуҙырҙылар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Эсәк йыуҙырыу** файҙаһыҙға сәй, һыу эсеү. □ Полоскать кишки. ■ *[Гәзимә:] Йә, ҡатыҡ эскәс, сәй ни нәмәгә кәрәк ул, эсәк йыуҙырып.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫУМА (Р.: льстивый; И.: flattering; Т.: pohpohlayıcı) *с.*

Һүҙ менән күңелде арбаусан. □ Льстивый. *Йыума тел. Йыума кеше.* ● *Йыума тел ташты иретә.* Әйтем.

ЙЫУЫЛДЫРЫУ (йыуылдыр-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йыуылыу**. *понуд. от* **йыуылыу**. ■ *Ҡунаҡтарҙың ҡулдары йыуылдырылды. Рәтләп түңәрәкләп ултырып табын һанылар.* Т. Хәйбуллин.

ЙЫУЫЛЫУ (йыуыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йыуыу**. *страд. от* **йыуыу.** *Кер йыуылған. Машина йыуылған. Йыуылған ой.* ■ *Гольцов һуңғы йылдарҙа яҙғы ташҡын һыу ярҙамында йыуылып ташланған иҫке отвалдарҙы бутап итте.* Я. Хамматов. *Был өйҙөң түбәһе бейек, таҡта иҙәне һап-һары итеп ҡырып йыуылған.* Һ. Дәүләтшина. *Өй ғәҙәттәгенән матур итеп йыйыштырылған. Иҙән һапһары итеп йыуылған.* Т. Хәйбуллин. *Иҫәнлекһаулыҡ һорашылды, ҡул йыуылды, бишбармаҡ килтерелде.* Т. Йәнәби. ● *Ишиленең меңгәйебе йыуылыр, яңғыҙҙың бер хатаһы мең булыр.* Мәҡәл. *Йәш менән гөнаһ йыуылмай.* Мәҡәл.

ЙЫУЫН (Р.: крестец; И.: sacrum; Т.: sağrı kemiği) *и. анат.*

Һыйырҙың һигеҙгүҙ өҫтө *(быҙаулар алдынан йомшап, соҡорланып төшә).* □ Крестец *(часть туловища коровы). Һыйыр йыуыны йомшатҡан.*

ЙЫУЫНҒЫС (Р.: умывальник; И.: washstand; Т.: lavabo) *и.*

Йыуына торған элеп ҡуймалы һауыт. □ Умывальник, рукомойник. ■ *Тышҡа ҡараған ишектән ингәс тә мөйөштә йыуынғыс, уның өҫтөнә һабын ҡуйылған, стенаға аҡ һөлгө элենгән.* А. Таһиров. *Әсәйем һабын, таҫтамал алып, тышҡа йыуынырға сығып китә. Ишек алдындағы ҡарт алмағаска йыуынғыс урынына ескәй генә иҫке еҙ самауыр эленгән.* «Шоңҡар», № 9, 2010.

ЙЫУЫНДЫ (Р.: помои; И.: slops; Т.: bulaşık suyu) *и.*

Берәй нәмәне йыуған бысраҡ һыу. □ Помои. // Помойный. *Йыуынды соҡоро. Йыуындыны түгеү.* ■ *Бөгөн тик йыуынды әҙерәк булған, ахырыһы, аҡ һыйыр уны берике һемереүҙә эсеп бөттө лә шыраулы теле менән тамсыһын ҡалдырмай яларға тотонդо.* Ш. Янбаев.

ЙЫУЫНДЫ БӨРКӨҮ (йыуынды бөрк-) (Р.: магический способ лечения болезней детей от нечистой силы; И.: spell against children's diseases; Т.: büyü usülü) *ҡ. миф.*

Балаларҙы ҡара көстәрҙән һәм күҙ тейеүҙән дауалау ысулы. □ Магический способ лечения болезней детей от нечистой силы и сглаза. ■ *Бала ярһып илаһа, уға өс тәҙрәнең, ишек тотҡаһының йыуындыһын бөркәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙЫУЫНДЫҠ (йыуындығы) (Р.: помои; И.: slops; Т.: bulaşık suyu) *и.*

Йыуынды, бысраҡ һыу. □ Помои. / Помойный. ■ *Ишектән ингәс тә, мейес эргәһендә лаҡан. Уның эсендә йыуындыҡ туптулы була.* Ғ. Хәйри. *Кухняла эш тағы ла ҡыҙа төштө. Миңә лә әленән-әле йыуындыҡ һыуҙарҙы сығарып түгергә, иҙәнде бер нисә тапҡыр һеперергә тура килде.* Ғ. Ғүмәр. *Ниндәйҙер бер ҡатын, өйҙән йыуындыҡ һыу алып сығып, Мәрғүбә апайҙың башынан ҡойҙо.* Ш. Шәһәр.

ЙЫУЫНДЫРЫУ (йыуындыр-) *ҡ. ҡар.* **йыуыныу I.** *понуд. от* **йыуыныу I.** *Баланы йыуындырыу.* ■ *Ул [Ольга Ивановна] имсәк балаһын йыуындырып, йоҡларға һалғас, .. хужаның өс йәшлек улы сирле булыуын ишеткәс, икенсе бүлмәгә сығып, уны ҡараны.* Б. Дим. *Һаҡсыһы уны [Ядкәр мырҙаны] Өршәккә алып төшөп йыуындырҙы.* К. Мәргән. *[Тариф ҡарт:] Беҙҙе тәүләп шул һыуҙа йыуындырғандар, ҡустым, шуны эсеп үҫкәнбеҙ, үлһәк, шул һыу менән йыуып күмерҙәр.* Б. Бикбай.

ЙЫУЫНСА *и. диал. кар.* **йыуғыс 1.** *Йыуынса менән ышкыу. Йыуынса менән йыуыныу. Йүкә йыуынса.*

ЙЫУЫНЫУ I (йыуын-) (Р.: умываться; И.: wash (oneself); Т.: yıkanmak) *к.*

1. Бит, ҡулыңды йәки тотош тәнеңде йыуыу. □ Умываться, мыться, купаться. // Умывание, мытье, купание. *Йыуынып алыу. Мунсала йыуыныу.* ■ *Өйгә инеү менән, йыуынып та тормаҫтан, башымды мендәргә төрткәйнем, үҙем дә һиҙмәҫтән, йоҡлап киткәнмен.* Н. Мусин. *Эшелонды юлда бер кесерәк ҡала станцияһында туҡтаттылар. Йыуынып, сайынып алырға приказ булды.* Һ. Дәүләтшина. *Рамазан тиҙ генә майкаһын сисеп ташланы ла, тирә-яҡҡа һалҡын һыу сәсрәтеп, йыуынырға тотондо.* Р. Низамов. ● *Һалдат беҙ менән ҡырыныр, төтөн менән йыуыныр.* Мәҡәл.

ЙЫУЫНЫУ II (Р.: ритуальное действие, направленное на очищение; И.: ritual against evil forces; Т.: yıkanmak) *и. этн.*

Яуыз көстәрҙән таҙарыныу, арыныу йолаһы. □ Ритуальное действие, направленное на очищение от нечистой силы.

ЙЫУЫНЫУ III (йыуын-) *к. диал. кар.* **юныу.** *Таҡта йыуыныу. Ағас йыуыныу. Уҡ йыуыныу.*

ЙЫУЫНЫУ БҮЛМӘҺЕ (Р.: умывальная; И.: bathroom; Т.: lavabo) *и.*

Йыуыныу өсөн тәғәйенләнгән бүлмә. □ Умывальная, ванная комната. ■ *Лагерҙың яңы асылған бассейнында бер юлы 20-ләгән бала һыу инә ала. Шунда уҡ кейенеп-сисенеү урындары, йыуыныу бүлмәһе лә бар.* «Йәшлек», 22 июнь 2010.

ЙЫУЫУ (йыу-) [боронғо төрки *йуу*] (Р.: мыть; И.: wash; Т.: yıkamak) *к.*

1. Һыу йәки бүтән шыйыҡлыҡ менән бысраҡтан таҙартыу. □ Мыть, обмывать; омывать; смывать; стирать. // Мойка; мытьё; обмывание; стирка. *Ҡул йыуыу. Сәс йыуыу. Көл менән йыуыу. Һабынлап йыуыу. Кер машинаһында йыуыу.* ■ *Урал торған, ти, таң менән, битен йыуған, ти, һыу менән, бер табында ултырып, тамаҡланған, ти, ҡыҙ менән.* «Урал батыр». *Байморат ҡарт тауыш-тынһыҙ ғына ҡулын йыуып, ҡарсығы артынан өйгә керҙе.* Ф. Янышев. *Ғәмилә мунсаның иҙәнен, ләүкәһен йыуғас, пыхылдап барып тағы ике көйәнтә һыу килтерҙе.* Б. Бикбай. *Ап-аҡ ҡына керҙәр мин йыуҙым, әлә алманым кәртә тулғансы, атаҡайым, мине йәштән бирҙең, күрә алманым күҙем туйғансы.* Сеңләүҙән. *Емеш ҡулйыуғыс янында һалҡын һыу менән бик оҙаҡ битен йыуып торҙо.* З. Биишева. *Таһира ҡашаяҡ яғында бейәләй бәйләй. Сафура шылтыратмаҫҡа тырышып, ҡашаяҡ йыуа.* Һ. Дәүләтшина. ● *Биттәге бысраҡты йыуһаң да, күңел бысрағын йыуып булмай.* Мәҡәл. *Ҡулды ҡул йыуа.* Мәҡәл. *Ҡунаҡҡа барһаң, ҡаҙаныңды йыуып кит.* Мәҡәл. *Яҙғы ҡарҙы ямғыр йыуа.* Мәҡәл. *Һыуһыҙ йыуған — елһеҙ киптерә.* Мәҡәл. *Болот та күсер, ел ҡыуыр, ямғыр ҙа яуһа, ер йыуыр.* Мәҡәл.

2. Һыу менән таштан, ҡомдан айырыу. □ Мыть, смывать. // Мытьё. *Алтын йыуыу. Мәғдән йыуыу эше.* ■ *Былдай алтын йыуыу юлы эште еңеләйтте.* Я. Хамматов. *Өмөтбай, иртә менән китеп, ер ҡаҙып, руда әҙерләй ҙә төштән һуң Ҡарасәс менән уны йыуалар.* Ғ. Дәүләтшин. *Ул фабрикаларҙа уҙ иркенән тыш ылыҡтырылған эшселәр, ер ҡыртышын тарттырып, ботлап алтындар йыуып, бай кеҫәһенә тултыралар.* Т. Хәйбуллин. *[Башлыҡ — Илғужаға:] Атайың приискыла алтын йыумаһа ла, йыш ҡына алтын тешле кешеләргә операция яһай.* Д. Бүләков.

3. Ағып, тейеп сылатыу. □ Мыть, смывать. ■ *Үтеп барған Түрәбай барыһына, барыһына баш эйеп кенә хушлаша. Күҙенән тәгәрәп төшкән йәштәр битен йыуа.* Т. Хәйбуллин. *Ер кибә генә башлағайны, Серегәнкүл яғынан иҫкән ел ҡыуып алып килгән болот бөтә донъяны ҡапланы ла һыуһаған ағастарҙы йыуырға тотондо.* Я. Хамматов. *Ҡариҙелдән ағыр һалмы ни, йылы ямғыр йыуыр балмы ни, бер ҡараһаң, бар ҙа, юҡ та һин, күбәләк тә, һут та, ут та һин.* М. Басыров.

4. Яр ситенән ҡеуәтып ағыҙыу, ашау (II, 2). □ Размывать. *Тулҡын ярҙы йыуа.* ■ *Ҡомдағы аяҡ эҙҙәремде диңгеҙ тулҡыны йыуа бара.* «Ағиҙел», № 4, 2011. *Ауылды икегә бүлеп аҡҡан кескәй йылға һаман уҙ йы-*

рын йырлай. Уның саф һыуҙары ике як ярҙы ла тигеҙ йыуа. М. Ямалетдинов.

5. *күсм.* Кешенең күңелен арбап иретеү; юхалау. □ Умасливать *(льстивыми словами). Тел менән йыуыу. Кешене йыуа белеү.* ■ *Ҡуштан әҙәм түрәнең бер алдынан, бер артынан төшә, халыҡ тапҡыр әйткәнсә, эшләп ярамаһа, кешнәп ярай. Байрамдарҙа, мәжлестәрҙә уны өнһөҙ итер ҡылыйыуғыс тел менән йыуа.* С. Бәҙретдинов. ● *Ҡулы эшләй, теле йыуа.* Мәҡәл.

6. *күсм. һөйл. Ниҙелер* ҡотлап, эскелек һыйы ойоштороу, берәй ваҡиғаны эскелек менән билдәләү. □ Обмывать *(отмечать что-л. с выпивкой).* ■ *Табын гөрләй, һайрашалар ҡоҙасалар, ҡоҙалар, бөгөн улар берәүһенең тыуған көнөн йыуалар.* Т. Арслан. *[Барый:] Орденды бөгөн миндә йыуасаҡбыҙ, тип ышанам.* Ә. Хәкимов. *Шофёр Сафуандың ҡатыны бәпәйләгәс, гаражда йыйылышып бәпәйҙе йыуғайныҡ.* И. Абдуллин.

7. *күсм.* Ҡайғы-хәсрәттән һ. б. бушаныу, үкенеү, ғазапланыу менән ғәйеплекте, гөнаһты кисертеү. □ Смывать *(вину, горе, обиду и т. д.).* ■ *Минең эс ҡырыла. Тик быны Сәлимгә генә белгертмәйем. Ҡайғымды Етегән буйына төшөп йыуам.* И. Ғиззәтуллин. *Әгәр мөмкинлек бирһәләр, мин ғәйебемде ҡаным менән йыуыр инем.* Ғ. Әмири. *Ата юлын ҡыумаһа, биленә ҡорман быумаһа, уғын атып, дошмандың алғасҡыһын боҙмаһа, битенә килер оятты үҙе белеп йыумаһа, – атанан алтау тыуғансы, берәү ҙә бергәй тыуһа ине.* Ҡобайырҙан.

♦ **Битен йыумаған** оятһыҙ, намыҫһыҙ. □ Беззастенчивый, бессовестный; бесстыжий. *Битен йыумаған әҙәм.* **Сеүәтә йыуыу** күҙҙе йәшкәҙәтеп шым ғына илау. □ Тихо плакать; плакать беззвучно. ■ *[Ячанбикә – Гөлйөҙөмгә:] [Ҡатындар] сеүәтәләрен йыуа башланылар, әйҙә, сығайыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

ЙЫУЫУСЫ (Р.: уборщик; И.: cleaner; Т.: temizlik işçisi, çörçü) *и.*

Нимәнелер йыуыу, таҙартыу, йыйыштырыу менән махсус шөғөлләнеүсе эшсе. □ Уборщик, уборщица. *Иҙән йыуыусы.* ■ *Коридорҙар буш һәм тын, тик иҙән йыуыусыларҙың ғына биҙрә шатырлатҡандары ишетелә.* Ш. Хажиәхмәтов.

ЙЫУЫШЫУ (йыуыш-) *ҡ.*

1. *урт. ҡар.* **йыуыу 1, 2.** *взаимн. от* **йыуыу 1, 2.** *Иҙән йыуышыу.* ■ *[Маһи] Билалдың муйын, ҡолаҡтарын йыуышты.* А. Таһиров. *Клуб йыуышырға Рая килә тип әйткәс тә, бик изгелек күрһәтер инде, тигән кеүек ҡарап ҡуйғайнылар [лаборанттар].* Р. Солтангәрәев. *[Әсәһе – Миңлеғәлегә:] Бер һимеҙ йылҡы һуйғандар. Шуның эсәк-ҡарынын йыуышырға саҡырғайнылар.* Я. Хамматов.

2. *диал. ҡар.* **йыуыныу.** *Йыуышып алыу. Мунсала йыуышыу.*

ЙЫФЫУ (йыф-) *ҡ. диал. ҡар.* **йышырыу.** ■ *Ул [Ғариф] балғалаҡ алды ла ҡурған йомортҡаны йыфырға тотондо.* Н. Мусин.

ЙЫҺАД [ғәр. جهاد] *и. ҡар.* **йыһат.** *Йыһадҡа ҡалҡыу. Йыһад ойоштороу.*

ЙЫҺАЗ [ғәр. جهاز] (Р.: оборудование, мебель; И.: furniture; equipment; Т.: tesisat) *и.*

1. Өй эсендәге бөтә булған кәрәк-яраҡ нәмә; өй йыһазы. □ Мебель, оборудование, обстановка, утварь. *Бай йыһаз. Өй йыһазы.* ■ *Кейем-һалым, йорт йыһазы ла тик сифатлы булырға тейеш ине уның [Дилбәрҙең].* Ғ. Ғиззәтуллина. *Ыласынбайҙың өйөндә йыһаз күп күренмәй ине.* Ғ. Ғүмәр. *Ғәзимә артынан килгән көтөү-көтөү мал, ике ҙур ағас йорт, йөкләгән өй йыһаздары .. хәбәрҙең дөрөҫ булыуын раҫлайҙар.* Һ. Дәүләтшина. *Башҡа сығарғанда һәр береһенә һарай шикелле иркен өй һалып бирҙе. Малын да, йыһаздарын да тапты. Тырышты Ахун.* М. Кәрим. *Бүлмәлә әҙәби консультант менән машинисткаға берәр өҫтәл һәм бер нисә ултырғыс ҡына. Башҡа йыһаз юҡ.* Ғ. Ғәйнуллин.

2. Билдәле эш өсөн кәрәк булған ҡорал-ҡорамал. □ Оборудование, оснастка, прибор, аппарат, установка. *Яңы техник йыһаз. Яңы йыһаздар ҡуйыу. Электр йыһаздары.* ■ *Өс бала табыу залы ла уңайлы йыһаздар менән тәьмин ителгән.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 4, 2010.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫЛЫУ (йыһазландырыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **йыһазландырыу.**

страд. от **йыһазландырыу.** *Бүлмә йыһазландырылған.* ■ *Ул [Хәйретдин] йомшаҡ күн менән ҡапланған креслолар, ултырғыстар, төрлө приборҙар торған өҫтәл һәм келәмдәр менән йыһазландырылған бүлмәне тәүге тапҡыр күрә.* Я. Хамматов. *Ур планетаһында кешеләр матур итеп йыһазландырылған махсус урында ашай.* Н. Ғәйетбаев. *Ғәбитовтың кабинеты шул ҡәҙәр ябай йыһазландырылған.* Ф. Иҫәнғолов. *Ярлы ғына йыһазландырылған, төрлө урынына ҡара тамып бөткән ҡыҙыл сепрәк менән ҡапланған өҫтәл артында бер-ике көн ултырғандан һуң, ҡапыл килеп тыуған ғәҙәттән тыш мөһим ваҡиға уның [Таһир Күсемовтың] тормош юлын ҡырҡа бороп ебәрә.* Р. Өмөтбаев.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ (йыһазландыр-) (Р.: оборудовать; И.: furnish; equip; Т.: donatmak) *к.*

1. Йыһаз (1) менән тәьмин итеү, йыһазлы итеү; йыһазлау. □ Обставлять, меблировать. *Фатирҙы йыһазландырыу.* ■ *Яңы йылда Йылан йондоҙлоғо аҫтында тыуғандарҙың күптәре йорттарын төҙөкләндереү, йыһазландырыу менән мәшғүл булыр.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

2. Эш өсөн кәрәкле ҡорал-ҡорамалдар алып урынлаштырыу, йыһазлау. □ Оборудовать, оснащать. // Оборудование, оснащение. *Физика бүлмәһен йыһазландырыу.* ■ *Йыйылыш ата-әсәләр көсө менән мәктәп мастерскойын йыһазландырырға, шулай уҡ биш йөҙ һумлыҡ инструменттар алып бирергә ҡарар сығарҙы.* Н. Мусин.

ЙЫҺАЗЛАНЫУ (йыһазлан-) (Р.: быть оборудованным; И.: be furnished; Т.: donatılmak) *к.*

Йыһаз менән тәьмин ителеү, йыһазландырыу. □ Быть обставленным, оснащённым. *Ойошма компьютерҙар менән йыһазланған.* ■ *Рәсми осрашыуҙар үткәреү өсөн, күптән түгел генә төҙөлөп бөтөп, күркәм итеп йыһазланған, биҙәтелгән ҙур бүлмәгә күҙ йөрөтөп, Иҙеүкәй ғорурланып ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов.

ЙЫҺАЗЛАП ҠУЙЫУ (йыһазлап ҡуй-) (Р.: обставить полностью; И.: furnish completely; Т.: döşemek) *к.*

Кәрәкле йыһаз менән тәьмин итеүҙе тамамлау. □ Обставить, оснастить полностью, завершить меблирование. *Етәксе бүлекте кәрәкле техника менән йыһазлап ҡуйҙы.*

ЙЫҺАЗЛАТЫУ (йыһазлат-) *к. йөкм. ҡар.* **йыһазлау.** *понуд. от* **йыһазлау.** *Бүлмәне йыһазлатыу.* ■ *[Таһир] арыу кеше яҡын юламаҫ бысраҡ, иҫке бинаны ипкәһапҡа килтерҙе, ер-яңынан йыһазлатты, тәжрибәле аш-наҡсылар тапты.* Ә. Хәкимов.

ЙЫҺАЗЛАУ (йыһазла-) *к. ҡар.* **йыһазландырыу.** *Йыһазлап биреү.* ■ *[Карам] көнөнә икешәр-өсәр ҡат юллап, район үҙәгенә иген ташыны, иген бөткәс, таҡта, шифер, кирбес кеүек төҙөлөш ҡорамалдары килтерҙе йә, машина кузовын эскәмйәләр менән йыһазлап, сыр-сыулашҡан ҡатын-ҡыҙҙы эш урынына йөрөттө.* Ә. Хәкимов. *Һис кем һиңә аҙыҡ-түлеген әҙерләп ҡуймаған, карурманды йәшәр өсөн йыһазламаған.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫҺАЗЛЫ (Р.: обставленный; И.: furnished; Т.: döşeli, tefriş edilmiş) *с.*

Йыһаз менән тәьмин ителгән. □ Обставленный *(мебелью)*, оборудованный. *Йыһазлы өй. Йыһазлы фатир.* ■ *Бүлмәләр бөтәһе лә шундай иркен, яҡты, бай йыһазлы.* З. Биишева. *Хәйретдиндең өйө лә, артыҡ бай йыһазлы булмаһа ла, ҙур һәм таҙа итеп йыйыштырылғайны.* Ә. Вәли.

ЙЫҺАЗҺЫҘ (Р.: необставленный; И.: not furnished; Т.: tefriş edilmemiş) *с.*

Йыһазы булмаған, йыһаз менән тәьмин ителмәгән. □ Необставленный *(мебелью)*, необорудованный. *Йыһазһыҙ фатир. Йыһазһыҙ кабинет. Йыһазһыҙ бүлмә.*

ЙЫҺАН I [ғәр. جهان] (Р.: Вселенная; И.: Universe; space; Т.: cihan) *и.*

1. *(баш хәреф менән)* Ҡояш, йондоҙҙарҙы эсенә алған бөтә донъя, ғаләм. □ Вселенная, космос, весь мир. *Йыһан арауығы. Йыһанды өйрәнеү.* ■ *Ул [Дукаш] Әмиләнең Йыһан һәм Ер планетаһы хаҡындағы һорауҙарына ялҡмай яуап бирҙе.* Н. Ғәйетбаев. *Әйтерһең, ҡырыҫ ҡаялар, алыҫ Ҡаҙаяҡ буйҙары, хатта уй етмәҫ Йыһандың үҙе, сабый һымаҡ, иңрәп илай ине.* Ә. Хәкимов. *Йыһан өсөн был — бер һулыш ҡына, ауылым өсөн — бөтөн бер заман.* М. Кәрим.

2. Бөтә ер йөҙө. □ Весь мир, весь свет. *Йыһан гиҙеү.* ■ *Бынан [Кыҙҙар тауынан] бөтә йыһандың бөтә ауылдары, бөтә калалары күренеп торасак.* М. Кәрим. *Егет булһаң, йондоҙҙай бул, йондоҙҙо кыҙҙар күҙләй. Йондоҙ күрһәтә якты юл, бар йыһанды балкыта ул, зәңгәр күк йөҙөн биҙәй.* М. Хәй. ● *Илдән биҙҙергән дә мал, йыһан гиҙҙергән дә мал.* Мәкәл.

3. *күсм. һөйл. Ниҙеңдер* сикһеҙ, иҫәпһеҙ күп һаны. □ Несметное, бесчётное количество; большой объём. *Йыһан халык.* ■ *Күҙ асып йомғансы, йыһан ғәскәр йыйылған.* Риүәйәттән.

ЙЫҺАН II *р. диал. кар.* **оҙак**. *Йыһан йәшәү. Йыһан итеп сәй эсеү.*

ЙЫҺАНГИР [фарс. جهانگیر] (Р.: завоеватель; И.: conqueror; Т.: cihangir) *и. иҫк.*

Баҫып алыусы, баҫкынсы. □ Завоеватель. ■ *Ул [Тимур] үҙенең бөтөн барымталарын Алла исеменән башкарырға яраткан, ислам йыһангиры булырға һүҙ биргән.* Ә. Хәкимов. *Уғыҙ төркиҙәренең уртак дастаны иҫәпләнгән «Уғыҙнамә»лә башкорттарҙың .. һис бер йыһангирға баш эймәгән кәүем сифатында иҫкә алыныуы ла Әхмәтзәки Вәлидиҙең иғтибарынан ситтә калмаған.* Ә. Сөләймәнов.

ЙЫҺАНДАР [фарс. جهان دار] (Р.: правитель; И.: ruler; Т.: yönetici) *и. иҫк.*

Хөкөмдар, батша. □ Правитель, властелин, владыка, джихангир. *Йыһандар әмерен үтәү. Йыһандар хөкөмө.*

ЙЫҺАНИ (Р.: вселенский; И.: universal; Т.: cihani) *с.*

Йыһанға хас. □ Вселенский. *Йыһани аң. Йыһани көй.* ■ *Уйландырған етди, йыһани мәсьәләләр хакында шағирә [Т. Ғарипова] «Йыһан» тигән поэмаһын яҙҙы.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫҺАННАМА КИТАБЫ *и. кар.* **йыһаннамә китабы.** *Йыһаннама китабын төҙөү. Йыһаннама китабына таянып эш итеү.*

ЙЫҺАННАМӘ КИТАБЫ [ғәр. جهاننامه كتابى] (Р.: древняя книга о Вселенной; И.: ancient book on the universe; Т.: cihannüma) *и.*

Бөтә йыһан тураһында төрлө мәғлүмәт биргән боронғо китап. □ Древняя книга о Вселенной. ■ *Йыһаннамә китаптарын төҙөүҙең Көнсығыш халыктарында үҙ традициялары бар.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙЫҺАТ [ғәр. جهاد ‘көрәш’] (Р.: джихад; И.: Moslem holy war, jihad; Т.: cihat) *и. иҫк.*

Дин өсөн изге һуғыш. □ Джихад, священная война за веру; газават. ■ *Алға табан барырға кылғыл йыһат.* М. Ғафури. *[Сәйфелмөлөк:] Дәүрән мырҙа килә! Йыһат кылысы ялтлай!.. Эй, дәрүиш, килтер аттарҙы!* Ә. Хәкимов.

ЙЫШ I (Р.: частый; И.: frequent; Т.: sık) *с.*

1. Бер-беренә якын урынлашкан бер төрлө нәмәләрҙән йәки өлөштәрҙән торған. □ Частый, густой. *Йыш рәшәткә. Йыш тарак. Йыш карағайлык.*

2. Бер төрлө хәрәкәттәрҙең, тауыштарҙың һ. б. тиҙ алмашыныуынан торған. □ Частый. *Йыш һулыш. Йыш пульс.*

3. Кыҫка вакыт һайын кабатланып, булып торған. □ Частый. *Йыш осрашыуҙар. Йыш күренеш.*

ЙЫШ II (Р.: часто; И.: frequently; Т.: sık) *р.*

1. Якын урынлашып. □ Часто, густо. *Йыш сәсеү. Йыш ултыртыу.* ■ *[Тауҙытауғаһуғар:] Бынау ерҙә тау бик йыш ултырған, ә тегендә һирәк булған. Шуларҙы тигеҙләп ултыртып йөрөйөм.* Әкиәттән. ● *Карама ағас йыш булмай, карттар һүҙе буш булмай.* Мәкәл.

2. Шәп, кыҙыу итеп. □ Часто. *Йөрәк йыш-йыш тибә.* ■ *Уның [Зәйтүнәнең] уйҙары сыбалды, хистәре таралды, йөрәге күкрәгенән сығырға етешеп йыш типте.* Ф. Әсәнов. *Хәйернисаның йөрәге йыш тибә, ә күҙҙәре йәшләнгәйне.* Ғ. Лоҡманов.

3. Кыҫка вакыт һайын. □ Часто. *Йыш кайтыу. Йыш алыу. Йыш күрешеү. Йыш ишетеү. Йыш карау.* ■ *Былдай шаярыуҙар, көлкө һүҙҙәр тора-бара мәктәптә лә йыш кына ишетелә башланы.* М. Тажи. *Һыуҙар ҙа унда бик шаян аға, бик йыш боролоп, кая таштар аҫтына инеп китергә яраталар, әллә кайҙа барып, тағы килеп сығалар.* Һ. Дәүләтшина. *Яйыктан килтерелгән атлы казактар менән крәҫтиәндәр араһында канлы бәрелештәр йыш була торҙо.* Б. Бикбай.

ЙЫШАЙТЫУ (йышайт-, йышая) (Р.: уплотнять; И.: compact; Т.: sıkılaştırmak) *к.*

1. Бер төрлө нәмәләрҙең йәки өлөштәрҙең урынлашыу араларын кәметеү, тығыҙлау. □ Уплотнять *(приближая друг к другу). Йышайтып ҡуйыу. Йышайтып сығыу. Ултырғыстарҙы йышайтып ултыртыу.*

2. Бер төрлө хәрәкәттәрҙең, тауыштарҙың һ. б. алмашыныу ваҡытын кәметеү; йыш-йыш итеү. □ Учащать, убыстрять, ускорять. *Һулышты йышайтыу.* ■ *Сәлихәнең һүҙҙәре уның, Фатиманың, бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән тыныс ҡына сығып китә алманы, уның йөрәк тибешен йышайтты.* Ж. Кейекбаев. *Теге [Шәйҙи] ҡыҙарған, бүртенгән, һулыш алыуҙарын йышайтып, минең ҡаршыма килде.* К. Мәргән.

3. *Нимәнеңдер* тиҙлеген, хәрәкәт темпын арттырыу. □ Учащать, убыстрять, ускорить. // Учащение, убыстрение, ускорение. ■ *Миңлеямал, уттың үҙ яҡтарында булғанлығынан шикләнеп, йөрәге ҡубып, аҙымдарын йышайта башланы.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡәҙретдинов, әлеге эс бошорғос ҡап-ҡоп ҡабатланмаһын өсөн, һул аяғын шыуҙырып баҫа-баҫа, аҙымын йышайтты.* Ф. Иҫәнғолов. *Шул ваҡытта арттан йүгереп килгән аяҡ тауышы ишетелде. Хисмәтулла менән Михаил да аҙымдарын йышайтты.* Я. Хамматов.

ЙЫШАЙЫУ (йышай-, йышая) (Р.: уплотняться; И.: move closer together; Т.: tıkızlaşmak) *к.*

1. Бер төрлө нәмәләрҙең йәки бер нәмә өлөштәренең урынлашыу аралары кәмеү; тығыҙланыу. □ Уплотняться, становиться густым. *Ағастар йышайҙы. Өйҙәр йышая бара.*

2. Бер төрлө хәрәкәттәрҙең, тауыштарҙың һ. б. алмашыныу ваҡыты кәмеү; йыш ҡабатланыу. □ Учащаться, частить. // Учащение. *Пульс йышайҙы. Һулышы йышайҙы.* ■ *[Мәҙинә] усаҡ эргәһендәге бактан һалҡын һыу алып эскәс, йышайған йөрәк тибеше урынына ултырғандай, башына һиллек килгәндәй булды.* Т. Ғарипова. *Уның [Хамматтың] тын алышы үтә йышайып китте, шешенмәкләнеп торған күҙ ҡабаҡтары, ҡурғаш кеүек ауырайып, йомолдолар.* З. Биишева.

3. Ҡабатланып, булып торған күренештәрҙең ваҡыт араһы кәмеү; тиҙ-тиҙ ҡабатланыу. □ Учащаться, частить. // Учащение, убыстрение, ускорение. ■ *Бомбалар ҙа һирәгәйҙеләр. Беҙҙән арттараҡ уҙып төшкән снарядтар йышайҙылар.* Д. Юлтый. *Ваҡиғалар теҙмәһе шул хәтле йышая, хатта улар һуңынан бер тарихи факт булып ҡына күҙ алдына килә башлайҙар.* С. Галин.

ЙЫШ-ЙЫЛТЫРАҠ (йыш-йылтырағы) *и. йыйн. ҡар.* **йылтыр-йышыр.** *Йыш-йылтырак менән биҙәү. Күлдәккә йыш-йылтырак тегеү.*

ЙЫШҠЫ I (Р.: рубанок; И.: plane; Т.: rende) *и.*

Ағастан булған нәмәләрҙең өҫтөн юнып шымарта торған ҡорал. □ Рубанок, струг. *Йомро йышҡы. Ҡул йышҡыһы. Тырнаҡ йышҡы. Кәкре йышҡы.* ■ *[Хәйернас] бесәнен дә саба, балта, быскы, йышҡы менән дә оҫталай.* Р. Солтангәрәев. *[Мифтахетдин Аҡмулла] магазинға барып балта, быскы, сүкеш, йышҡы һатып алды ла ике тәгәрмәсле арбаһын киңәйтеп, уның бер ситенә — китаптар, икенсеһенә оҫталыҡ ҡоралдары һалып йөрөтөрҙәй айырым-айырым бүлексәләр яһаны.* Я. Хамматов. ● *Быскы һорағанға йышҡы тотторған.* Мәҡәл.

ЙЫШҠЫ II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ырыуының араһы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-тунгаурцев.

ЙЫШҠЫЛАТЫУ (йышҡылат-) *к. йөкм. ҡар.* **йышҡылау.** *понуд. от* **йышҡылау.** *Таҡтаны йышҡылатыу. Йышҡылатып алыу. Йышҡылатып биреү.*

ЙЫШҠЫЛАУ (йышҡыла-) *к. ҡар.* **йышыу**. *Таҡтаны йышҡылау. Йышҡыларға ҡушыу.* ■ *Ана [Баллыбанаттың] өлкән улы, атаһына эйәреп, ниҙер йышҡылап ултыра.* М. Кәрим.

ЙЫШҠЫЛАШЫУ (йышҡылаш-) *к. урт. ҡар.* **йышҡылау.** *взаимн. от* **йышҡылау.** *Йышҡылашып йөрөү. Йышҡылашырға барыу. Малай атаһына таҡталар йышҡылаша.*

ЙЫШҠЫН *с. диал. ҡар.* **шыр I, 1.** *Йышҡын урман. Йышҡын ҡайын.*

ЙЫШҠЫС *и. диал. ҡар.* **йышҡы I.** *Ҙур йышҡыс. Ҡул йышҡыс. Оҙон йышҡыс.*

ЙЫШҠЫ ТАБЫ *и. диал. ҡар.* **юнысҡы.** *Йышҡы таптарын һепереп алыу.*

ЙЫШЛАНЫУ (йышлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **йышлау 1.** *страд. от* **йышлау 1.** *Йышланған иҙән.* ■ *Немецтар, күрәһең, уларҙың [халдаттарҙың] ябырылып килгәнен һиҙеп ҡалды; пулемёт уты байтаҡ көсәйҙе, бер үк ваҡытта улар өҫтөнә снарядтар ҙа йышланып яуа башланы.* Д. Юлтый.

ЙЫШЛАТЫУ (йышлат-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йышлау 1, 2.** *понуд. от* **йышлау 1, 2.** *Аҙымды йышлатыу. Иҙәнде йышлатыу.* ■ *Заурҙың буйволға ҡысҡырған әсе тауышы теге кешене һиҫкәндереп ебәрә, һәм ул, килеүселәрҙе күреп, атының аҙымын йышлата.* Ә. Чаныш. *Ғәбиҙә, танауын йышлатып, еүеш күҙҙәрен ҡулъяулығы менән һөртә.* Ә. Хәкимов.

ЙЫШЛАУ (йышла-) (Р.: уплотнять; И.: compact; Т.: tokmalamak) *ҡ.*

1. Бер-беренә яҡын килтереү, араларын яҡын итеү. □ Уплотнять. *Иҙәнде йышлау. Һайғауҙы йышлау.* ■ *Тау ҡыуышына һайғауҙан йышлап һалған өйҙөң сыуалы янында нимәләр ямап ултырған, йөҙөн һаҡалмыйыҡ баҫҡан ир һәндерәлә салҡатан ятҡан ҡунағына ҡараны.* Т. Ғарипова. *[Рәйфә:] Кешеләрҙең ирҙәре бына тигән итеп йорт ултыртып ҡуйҙы, әйтһәң, аҙәмгә оят, иҙән таҡталарын үҙем йышлап ҡағып ҡуйҙым бит.* Р. Солтангәрәев.

2. *Ҡайҙалыр* йыш-йыш йөрөү, йыш-йыш барыу. □ Зачастить. ■ *Әптелғәлимдең улы ауылдан ун ике-ун өс саҡрымдағы Крапкау баярының утарына йышлай.* Ф. Иҫәнғолов. *Анфиса ир кереткәс, староста был йортҡа айырыуса йышланы.* Д. Исламов. *[Зәйнулла:] Мөхәббәттең төп хужаһы ҡайтты. Ә ул уҫал. Ҡылығы ҡырҡыу уның. Елкәләп тә сығарыуы мөмкин, һөмһөҙөрәк ҡунаҡ йышлай ҡалһа.* М. Кәрим.

3. *ҡар.* **йышайтыу 3.** *Аҙымын йышлай.* ■ *Ул [Сурағол] тағы ла аҙымын йышлабыраҡ алға ҡарай ашыҡтыра.* Т. Хәйбуллин.

ЙЫШЛЫҠ (йышлығы) (Р.: частота; И.: frequency; Т.: sıklık) *и.*

1. *Нимәнеңдер* йыш ҡабатланыу дәрәжәһе. □ Частота; частотность. *Һүҙҙең ҡулланылыш йышлығы.* ■ *Пулемёт утының йышлығына, миномёттарҙың ҡотороноп атыуына ҡарағанда, дошман бер төрлө лә зыян күрмәгәнгә оҡшай.* Ә. Хәкимов. *Сибай аэропорты рейстар йышлығын арттырырға ниәтләй.* Интернет селтәренән.

2. Билдәле бер ваҡыт эсендәге хәрәкәттең, тирбәлештең һаны, ҙурлығы. □ Частота. *Пульстың йышлығы. Тирбәлеүҙәрҙең йышлығы. Тауыш йышлығы. Ун килогерц йышлыҡ.* ■ *Көлгән ваҡытта һулыш йышлығы ғәҙәттәгенән өс-дүрт тапҡырға юғарыраҡ була.* «Йәшлек», 18 сентябрь 2008. *Яҙғыһын, көҙгө көнгә ҡарағанда, тын алыу йышлығы уртаса өстән бергә юғарыраҡ була.* «Башҡортостан», 13 май 2011.

3. *Нимәнеңдер* бер-береһенә бик яҡын, тығыҙ урынлашыуы. □ Густота, плотность. *Ағастарҙың йышлығы. Ултырғыстарҙың йышлығы. Ашханалағы өҫтәлдәрҙең йышлығы.*

ЙЫШЛЫҠ ҺҮҘЛЕГЕ (Р.: частотный словарь; И.: frequency dictionary; Т.: sıklık sözlüğü) *и. лингв.*

Билдәле бер телдәге һүҙҙәрҙең статистик мәғлүмәттәр аша һан яғынан торошон күҙаллаусы һүҙлек. □ Частотный словарь. *Йышлыҡ һүҙлеге төҙөү. Башҡорт теленең йышлыҡ һүҙлеге.*

ЙЫШЫЛЫУ (йышыл-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йышыу.** *страд. от* **йышыу.** *Таҡта йышылған.* ■ *Ҡоймалар яңы ғына бысылған, дүрт яғы ла йышылған таҡталарҙан, яҫы бурсаларҙан һалған.* Интернет селтәренән. *Тимер мейестең һис ваҡытта төтөндө ҡыҙғанмауы арҡаһында, өй стенаһының йышылмаған, бары балта менән генә юнылған бүрәнәләре .. төтәҫләнгәндәр, ҡарайғандар.* Ғ. Хәйри. *Ғәләү йышылмаған таҡталарҙан әтмәләнгән өҫтәлгә ике көрәшкә ҡуйҙы, көл араһынан сипсы менән тартып бер нисә картуф сығарҙы.* Т. Ғарипова.

2. Күп тотоноуҙан шымарып ялтырау. □ Отполироваться, стать (быть) гладким

(от долгого употребления). Балта һабы йышылып киткән. ■ *Айбикә мөрйә өҫтөндәге өлкән ташты, уның аҫтындағы өлкән көл тоҡсайын алып, мөрйә янына ҡуя ла, йышылып бөткән боҙло баҫҡыстан шыуып төшөп, өйгә инә.* Һ. Дәүләтшина. *Фәғилә, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, күптән инде һыйыр һауып, көтөүгә сығарған, хәҙер инде йәштәрсә өҙә баҫып, боҫо борҡоп торған һары алтындай йышылған, йыуан ҡорһаҡлы еҙ самауырҙы еңел генә күтәреп, сәй урыны әҙерләй.* «Йәшлек», 19 август 2008.

3. *күсм.* Күпте күреп, төрлө эшкә, хәйләгә оҫтарыу; шымарыу. □ Становиться опытным, искушённым. *Йышылған кеше.* ■ *[Ниғмәтулла:] Элеккегә ҡарағанда ла боҙолған ул бәндә! Боҙолған да, йышылған да [Хисмәтулла].* Я. Хамматов. *Йөрәкле кеше булып сыкты был балыҡсы, донъя күреп йышылған.* Б. Рафиков. *[Мәрйәм Ҡәнзәфәровна] күрәһең, ауыл советында эшләп, йышылып алғайны.* Д. Бүләков.

ЙЫШЫНЫУ I (йышын-) *ҡ. диал.*

1. *ҡар.* **ышҡыныу**. *Мунсала йышыныу. Йышынып алыу. Йыуғыс менән йышыныу.*

2. *ҡар.* **һырығыу**. *Мөйөшкә йышыныу. Әсәһенә йышыныу.*

ЙЫШЫНЫУ II (йышын-) *ҡ. диал. ҡар.* **әрсеү**. *Бүрәнәне йышыныу. Картуф йышыныу.*

ЙЫШЫУ (йыш-) (Р.: строгать; И.: plane; Т.: yontmak) *ҡ.*

1. Ағас нәмәләрҙең өҫтөн юнып шымартыу. □ Строгать, стругать. // Строгание. *Йышҡы менән йышыу. Бүрәнә йышыу.* ■ *[Атайым] уны [һәнәкте] йышып, шымартып, йәптәрен һелкәүесләндереп бөгөп, шундайын матур итеп эшләгән, бесәнде күбәнән һоҫоп ҡына алмалы.* Н. Мусин. *[Председатель:] Яубаҫаров, их Яубаҫаров!.. Ҡаҙаҡты былайтып ҡағалармы инде? Ә бына таҡталарҙы матурлап йышып, шыплап эшләгән.* Ә. Хәкимов.

2. Ҡом, көл кеүек онтаҡ нәмә менән ышҡып йылтыратыу; ағартыу. □ Тереть, чистить *(для наведения блеска). Тас йышыу. Ҡаҙанды йышыу.* ■ *Сыуаҡай әбей, йылтыратып йышып ҡуйылған еҙ таҫка йылы һыу һалып, мулла алдына алып килеп ултыртты.* З. Биишева. *Өҫкө һикәлтәлә яңы ғына ҡом менән йышып ялтыратылған еҙ тас, ҡомған ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӘ I [фарс. يا] (Р.: или ..., или; И.: or ... or; Т.: veya) *терк.*

1. *бүл.* Яңғыҙ йәки ҡабатланып килеп, мәғәнә яғынан бер-береһен алмаштырған һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла. □ *Союз разд.* Или ... или; либо ... либо; то ... то. ■ *Йә еләп ямғыр һибәләй, йә ҡараңғы тымыҡ төн була, йә ай нуры төшә Иҙелгә.* М. Кәрим. *Ҡайһы бер яралы һалдаттар йә аяҡтарын, йә ҡулдарын, йә эстәрен тотоп ҡысҡыралар, ыңғырашалар, ярҙам һорайҙар.* Д. Юлтый. *Ҡайһы ваҡытта ҡабаланыу йә иғтибарһыҙлыҡ арҡаһында ситса төргәктәре эсендәге талондар төшөп ҡала.* С. Агиш. *Беҙҙең арала ла йыш ҡына йә берәй әҙәби китап тураһында, йә халыҡ-ара хәл, йә мөхәббәт тураһында бәхәстәр китә торғайны.* Ф. Әсәнов. ● *Ике килен бешергән аш йә гел тоҙ булыр, йә гел тоҙһоҙ булыр.* Мәҡәл.

2. *бүл.* Ҡабатланып килеп, мәғәнә яғынан бер-береһен инҡар иткән һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла. □ *Союз разд.* Или ..., или; либо ..., либо; то ..., то. *Йә һин, йә мин. Йә үлем, йә йәшәү. Йә йәшәйбеҙ, йә айырылышабыҙ. Йә бөгөн, йә иртәгә.* ■ *[Ҡыҙ:] Иртәгә йә һинең башың бөтә, йә мин һинең ҡатының булам.* Әкиәттән. *Нурмыштың бар өмөтө ошо күк байталда ине. Йә баш, йә мал!* Ғ. Лоҡманов. *[Ҡарағол:] Йәгеҙ, туғандарым, ир булығыҙ, нык булығыҙ. Йә үлем, йә ирек!* Д. Юлтый. ● *Икенең бере: йә ир, йә ҡатын баш булһын.* Мәҡәл. *Тик тормаҫ йә теләнән табыр, йә ҡулынан табыр.* Мәҡәл. *Йә эшең үлһен, йә үҙең үл.* Мәҡәл. *Кешене йә туҡлыҡ ҡыша, йә юҡлыҡ ҡыша.* Мәҡәл.

3. *Ниндәйҙер* фаразды белдереү өсөн ҡулланыла. □ А то, вдруг. *Көлмә, йә үпкәләр. Ҡайтайыҡ, йә ямғыр яуып ебәрер.* ■ *[Сәлмән:] Быларға ышанһаң, йә ултыртҡан картуфты һуплап бөтөрҙәр.* Әкиәттән. *[Әсәйем:] Ярар, бөгөнгә барма, йә ныҡлап ауырып китерһең.* Н. Мусин.

4. *кәс. Ниндәйҙер* үкенесте белдереү өсөн ҡулланыла. □ И, к тому же. ■ *Йә, исмаһам, һин килмәнең.* ■ *Бер нәмә күренмәй, йә ай ҙа ҡалҡмай. Ҡарап барыр инек, йә, исмаһам, ут күренмәй алғы ҡаланан.* Ғ. Сәләм.

♦ **Йә (***йәки* **бына) инде** *ниндәйҙер* эш-хәбәргә аптырап ҡалғанда әйтелә. □ Выражает удивление: вот тебе и на. ■ *Ҡәйүм күптән инде көнләшеүҙән шартлар сиккә етеп йөрөй, йә инде, һинең танау төбөндәге хазинанан икенсе берәү игелек күреп ятһын әле, ә?* Ғ. Лоҡманов.

ЙӘ II (Р.: ладно; И.: O.K.; Т.: tamam) *киҫ.*

1. Йомошто йәки һүҙҙе тыңлап, үтәргә ризалыҡ белдергәндә әйтелә; ярар. □ Ладно, хорошо. *Әйҙә, магазинға барып ҡайтайыҡ. – Йә. – Тиҙ генә ҡайт. – Йә.* ■ *Бар, әсәңә ҡайт, йәме? – Йә.* Экспедиция материалдарынан.

2. Ҡеүәтләү, әйҙәләү, өндәүҙе белдергәндә әйтелә; әйҙә. □ Ну, ну-ка, а ну. ■ *[Тимербай:] Ғүмәров иптәш, йә, һанап тор, мин оҙаҡ сумырмынмы икән?* С. Агиш. *[Тикшереү органы вәкиле – Фатимаға:] Йә, уҡы әле, тыңлайыҡ, нимә яҙғанһың икән?* Ғ. Хәйри. *[Ерәнсә:] Йәгеҙ әле, егеттәр, бер ҡыҙыҡ булһын, беҙ ҙә уларҙың [ҡаҙаҡтарҙың] йәйләүҙәренә барымта яһап ҡайтайыҡ.* Халыҡ ижадынан. *[Ҡараса батыр:] Йәгеҙ, йоҡлайыҡ хәҙер, һәйбәтләп хәл йыяйыҡ, – ти.* Әкиәттән.

3. Һүҙгә, яуапҡа ыңғайлатып, һорау биргәндә әйтелә; шунан. □ Ну. ■ *[Никольский:] Йә, Юлия Ивановна, аҙырак хәл алдығыҙмы?* Һ. Дәүләтшина. *[Талипов:] Йә, еңгәләр, эш барамы?* М. Тажи. *Шул көндәрҙә дуҫым менән икәү яуыз яман телдән төшмәнек; йә әйтегеҙ инде, йә әйтегеҙ, беҙ һуң ниндәй ғәйеп эшләнек?* М. Кәрим. *[Мәрфуға:] Йә нихәл, Сурағол, мал-йәнең, йорт-ҡаралдың, бала-сағаларың имендәрме, күрше-күләндәрең һауҙармы, бәлә-ҡазанан именһеңдер?* Т. Хәйбуллин.

4. Мөрәжәғәткә ҡаршы өндәшкәндә әйтелә. □ Ну, да. – *Кәрим! – Йә!*

5. Киҫәтеү, сикләүҙе белдергәндә әйтелә; етер. □ Ну, а ну. *Йә, етәр, шауламағыҙ!* ■ *Йә, күп сыуылдашмағыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

6. Һығымталағанда, эште йәки һүҙҙе тамамлағанды белдергәндә әйтелә; ярар. □ Ну, ладно. ■ *[Өләсәйем – атайыма:] Йә, улайһа, хәйерле юл. Ҡустәнәстәреңде ҡойма.* Р. Низамов. *[Бибекәй:] Йә, хәҙергә хуш булығыҙ! Мин ҡайтам инде.* Б. Бикбай.

ЙӘ III (Р.: ну; И.: well; Т.: al işte) *ымл.*

Ҡәнәғәтһеҙлек белдергәндә әйтелә. □ Ну. ■ *[Миңлекәй – Истебайға:] Йә, ни бында аламаң ялпылдап, түр боҙоп йөрөйһөң, әйҙә, бар ана аш өйөнә!* Һ. Дәүләтшина. *Йә, ошо кешегә Юламан ҡарт ҡалай итеп ышанып, берҙән-бер ейәнсәрен – Зөлхизәһен биреп ебәрергә риза булһын?!* З. Биишева. *[Яппаровтың ҡатыны:] Йә инде ошоно, ҡунаҡҡа килгәнлегеңде онотма, исмаһам. Холоҡһоҙ!..* Д. Бүләков. *Йә, сабынға барып етмәҫ элек һәнәк йәбен һындыр инде, эшкинмәгән.* Н. Мусин.

ЙӘБЕЛЕК (йәбелеге) [рус. *яблоко*] *и. диал. ҡар.* **картуф.** *Йәбелек ҡаҙыу. Йәбелек бешереү. Йәбелек әрсеү.*

ЙӘБЕР [ғәр. جبر] (Р.: гнёт; И.: oppression; Т.: cebir) *и.*

Физик йәки рухи ғазап, яфа. □ Гнёт, притеснение, угнетение, насилие, тирания. *Баш йәберҙән сыҡмау.* ■ *Донъя бөткәнсе, Хоҙай, ғүмеремде бир, барыбер мәңге ғазап, мәңге йәбер.* Ш. Бабич. *Сөйәлбай бер ваҡытта ла үгәй әсәнән йылы һүҙ ишетмәгән, яҡты сырай күрмәгән, башы йәберҙән сыҡмаған.* Әкиәттән. *Ҡағылып һуғылдым, күнмәнем йәбергә. Шик боҙо килә лә бәрелә бәгергә.* «Ағиҙел», № 4, 2010. *Гөлгөнәгә иң күп йәбер күрһәткән малай Ромашка булды.* Ш. Янбаев. *Һорур һөйөүен [аҡҡош] үҙенең бирмәйенсә йәбергә, һауалай ҙа зәңгәр күктән ташлана, тиҙәр, ергә.* Р. Ғарипов.

ЙӘБЕР-ЗОЛМӘТ *и. йыйн. ҡар.* **йәбер-золом.** *Йәбер-золмәт күреү. Йәбер-золмәттән интегеү.*

ЙӘБЕР-ЗОЛОМ (Р.: притеснения; И.: oppression; Т.: zulüm) *и. йыйн.*

Һәр төрлө йәбер һәм золом; йәбер-золмәт. □ Притеснения, гнёт; насилие. ■ *Хайуандар әҙәмдәрҙән күргән һәр төрлө йәбер-золомдарға бер ниһайәт биреү, донъяла рәхәт һәм тыныслыҡ менән көн күреү ..*

ниәте менән бер ергә йыйылышып, кәңәш мәжлесе янамаксы булдылар. М. Ғафури. *Ауыр күтәреүҙән, аслыктан, йәбер-золомдан тоткондар тиҫтәләп, йөҙләп кырыла.* Ә. Хәкимов. *Беҙ, батша түрәләренә хеҙмәт итеп, ни кушһалар, шуны эшләп караныҡ. Быныҡ менән түрәләрҙеҡ йәбер-золомо туктаманы.* Ә. Харисов.

ЙӘБЕР ИТЕҮ (йәбер ит-) (Р.: притеснять; И.: oppress; Т.: cebir kullanmak) *к.*

Физик йәки рухи ғазап, яфа сиктереү; йәберләү. □ Притеснять. ■ *Тәбиғәт артык йәбер ҙә итмәй, ләкин уның ысулын ғына белеп алырға кәрәк.* М. Ғафури. ● *Куршеһенә йәбер иткән — көнкүрешен кәметкән.* Мәкәл.

ЙӘБЕР-ЙОБОР *и. йыйн. кар.* **йәбер-золом.** ■ *«Яҙығына күрә яҙаһы», — тип ул [Әсғәт] телен дә тыйманы, йәбер-йоборға ла иҫе китмәне.* М. Кәрим.

ЙӘБЕР КҮРЕҮ (йәбер күр-) (Р.: терпеть притеснения; И.: suffer oppression; Т.: zulüm görmek) *к.*

Йәберләнеү, яфа сигеү. □ Терпеть притеснения, гнёт *от кого,* притесняться *кем-л.* ■ *Уның [Зәйнәптең] арҡаһында нисәмә кабат йәбер күргән, етмәһә, ауыр йәрәхәт алып, больницала ғазап сигеп яткан кеше кисерә буламы?!* Ғ. Лоҡманов. *Күңелдәре йомшак, кулдар каты, бер булғандай ғүмер — һүҙ ҙә бер. Максатына барып етер өсөн сәсрәп үтә, күрә йөҙ йәбер.* М. Басыров.

ЙӘБЕР КЫЛЫУ (йәбер кыл-) *к. кар.* **йәбер итеү**. ■ *Тиҙ үлһәм дә, шуға саклы бир һин сабыр, кылдылар кәрҙәштәрем беҙгә йәбер.* М. Ғафури.

ЙӘБЕРЛЕК (йәберлеге) (Р.: обида; И.: oppression; Т.: öfke) *и.*

Йәберҙән килгән кыйынлык; ыҙа. □ Обида, притеснение. *Йәберлек күреү. Йәберлек кисереү. Йәберлек сиктереү.*

ЙӘБЕРЛӘНЕҮ (йәберлән-) (Р.: терпеть притеснения; И.: suffer oppression; Т.: zulüm görmek) *к.*

1. Йәбер күреү, йәбер кисереү. □ Терпеть притеснения, гнёт *от кого,* притесняться *кем-л.* ■ *Фәкирлек һаман артты. Асяланғас, ғазапланған, йөҙәгән һәм йәберләнгән халык баш күтәрә.* Һ. Дәүләтшина. *Һөргөнсөләр кайғы уртаклаша, ялсы килә нужа һөйләргә, йәберләнгән катын ярҙам һорап, илап килә кесе бүлмәгә.* М. Хәй.

2. *диал. кар.* **рәнйеү I**. ■ *Дәүләт бөйөк, кеүәтле, ләкин бәғзе кешеләр нахакка йәберләнә.* «Ағиҙел», № 2, 2010. *Был хәлдән һуң катын-кыҙ үҙен мең кат йәберләнгән, кәмһетелгән итеп тоя, аҙак үҙен кулға ала алмай.* «Башкортостан кыҙы», № 11, 2010.

ЙӘБЕРЛӘП КИЛЕҮ (йәберләп кил-) *к. кар.* **йәберләп тороу.** *Балаларын ғүмер буйы йәберләп килде.*

ЙӘБЕРЛӘП ТОРОУ (йәберләп тор-) (Р.: постоянно притеснять; И.: keep oppressing; Т.: daima zulüm etmek) *к.*

Даими рәүештә яфа сиктереп, ғазаплау. □ Постоянно притеснять, обижать. *Катынын йыш йәберләп тора.* ■ *Йәмәғәтеңде тукмап, йәберләп торһаң, ни яуап бирерһең Алла карышыһында?!* «Йәшлек», 18 июль 2009.

ЙӘБЕРЛӘТЕҮ (йәберләт-) *к. йөкм. кар.* **йәберләү.** *понуд. от* **йәберләү.** ■ *[Әнүәр:] Йә, шул йырткыстан тағы ла күпме йәберләтергә була халыкты?* Ғ. Лоҡманов. *[Хәсбиямал əбей:] Мин иремә тоғро калдым, улдарымды үгәй атайҙан йәберләткем килмәне, башкаса кейәүгә сыкманым.* «Йәшлек», 3 апрель 2008.

ЙӘБЕРЛӘҮ (йәберлә-) (Р.: притеснять; И.: oppress; Т.: cebir kullanmak) *к.*

Йәбер күрһәтеү, йәбер сиктереү; йәбер итеү. □ Притеснять, обижать. // Притеснения, обиды. *Йәберләүҙәр кисереү.* ■ *Ул [Родионов] .. офицерҙарҙың һалдаттарҙы йәберләгәне кеүек унтерҙарҙың да яфалауҙарын, юк кына нәмә өсөн ғәйепләп, үҙенең фронтка ебәрелеүен һөйләй ине.* А. Таһиров. *Кешеләр ғәҙелһеҙлек һәм йәберләүҙәргә карыш бергә сығырға тип королтайҙарҙа килешкән.* «Башкортостан кыҙы», № 7, 2010. *Вәзирҙе нахакка йәберләүе өсөн ул [Башлык] эсенән бик бошона ине.* М. Кәрим.

ЙӘБЕРЛӘҮСЕ (Р.: притеснитель; И.: oppressor; Т.: zorba) *и.*

Залим, иҙеүсе. □ Притеснитель, угнетатель; деспот, тиран. ■ *Шакир Ғилман мулла, уның улы Нәғим йөҙөндә ярлы халыкты*

йәберләүселәрҙе күрергә күнегә, муллаға бил бөгөргә теләмәйенсә, ҡыҙыл һалдат булып, байҙар донъяһына ҡаршы һуғыша. Һ. Дәүләтшина. *Һөҙөмтәлә ир ҡатынын йәберләүсе һәм ғаиләлә кем баш булыуын тикшереүһеҙ иҫбат итеүсе яуыз хакимға әйләнә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

ЙӘБЕРСӘК (йәберсәге) *и. диал. ҡар.* **йәрпесәк I.** *Ҡолаҡ йәберсәге. Йәберсәге йыртылған.*

ЙӘБЕРҺЕНЕП ҠАЛЫУ (йәберһенеп ҡал-) (Р.: обидеться; И.: take offence; Т.: öfkelenmek) *ҡ.*

Рәнйеп, йөрәге әрнеп ҡалыу. □ Обидеться, почувствовать себя притеснённым, остаться униженным. *Күңеленән йәберһенеп ҡалды. Дуҫына йәберһенеп ҡалды.*

ЙӘБЕРҺЕНЕП ҠУЙЫУ (йәберһенеп ҡуй-) (Р.: принять за обиду; И.: take offence; Т.: öfkelenmek) *ҡ.*

Ғәҙелһеҙлектән, ҡаты һүҙҙән рәнйеү. □ Принять за обиду *что,* обидеться *на что,* чувствовать себя униженным. *Әйткән һүҙҙәренә йәберһенеп ҡуйҙы.*

ЙӘБЕРҺЕНЕҮ (йәберһен-) (Р.: принимать за обиду; И.: resent; Т.: öfkelenmek) *ҡ.*

Йәбер итеп күреү, йәбергә һанау; рәнйеү. □ Принимать за обиду *что,* обижаться *на что,* чувствовать себя притеснённым. ■ *Шул минут минең йөрәк тағы ла тулҡынланды, йәберһенгән балалар кеүек, эскә йыйылған бөтә ауыр төйөндәрҙе сиске .. килде.* Д. Юлтый. *Ат ҡараусы Баттал бөтөнләй йәберһенгән төҫ алды.* И. Ғиззәтуллин. *[Алһыу:] Быға бер ахмаҡ, тапҡан әйтер һүҙ... Бер уйлаһаң, йәберһенерлек урын да юҡ.* Ф. Рәхимғолова.

ЙӘБЕРҺЕТЕЛЕҮ (йәберһетел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәберһетеү.** *страд. от* **йәберһетеү.** *Йәберһетелгән кеше.* ■ *Лётчик үҙен ғәйепһеҙ йәберһетелгән кеше кеүек тота.* Х. Мохтар. *Йәберһетелгән балаларҙың аталары, нәзирҙәр, берәй сара күреүҙе һорап, Мәхмүт ханға килгәндәр, ти.* Әкиәттән. *Риүәйәттәрҙә шулай уҡ фажиғәле яҙмыш (урланған ҡыҙҙар, йәберһетелгән килендәр), батырлыҡ йәки берәй иҫтә ҡалырлыҡ эш эшләгән йәки ҡылыҡ күрһәткән ир-егеттәр, ҡатын-ҡыҙҙар образы ла сағылыусан.* Ф. Нәҙершина. *Оялсан һәм йәберһетелгән малай түргә уҙырға баҙнат итмәне.* Я. Хамматов.

ЙӘБЕРҺЕТЕҮ (йәберһет-) (Р.: обижать; И.: hurt smb's feelings; Т.: incitmek) *ҡ.*

Ғәҙелһеҙлек, ҡаты һүҙ йәки ҡылыҡ менән рәнйетеү. □ Обижать, притеснять. *Баланы йәберһетеү.* ■ *Ул [Арынбаҫаров] сығышын кемделер ғәйепләп, йәберһетеп түгел, ә көтөлмәгәнсә тамамланы.* Д. Бүләков. *Бел һин: мин үҙемә үҙем хаким, бер ҡасан да ғорур иркемде йәберһетер өсөн башҡаларҙан ҡулдарына бирмәм бер кемдең!* Р. Ғарипов.

ЙӘБЕР-ЯФА [ғәр. جبر-جفاء] (Р.: принуждения и притеснения; И.: harassment; Т.: cebir) *и. йыйн.*

Төрлө йәбер һәм яфа. □ Принуждения и притеснения. *Йәбер-яфа күреү.* ■ *Дәғүәселәр дәғүә менән уға [Йософҡа] килер, бай-ярлыны ғәҙел, дөрөҫ хөкөм ҡылыр, һис берәүгә йәбер-яфа ҡылмаҫ имде.* «Ҡиссаи Йософ». *Торабара мишәр ауылдары Башҡортостанда арта килгән, мишәр волостары хасил булған, башҡорт менән мишәр тығыҙыраҡ аралашҡан, батшалыҡтың бар йәбер-яфаларын бергә кисергәндәр.* Ғ. Хөсәйенов. *Йәбер-яфа күргән ҡатын-ҡыҙҙар Айһылыуға тура киләләр; сиселмәгән һәр бер мәсьәлә Айһылыуға килеп терәлә.* Д. Юлтый.

ЙӘБЕШЕП СЫҒЫУ (йәбешеп сыҡ-) (Р.: выйти замуж без согласия родителей; И.: marry without parent's consent; Т.: aileden gizli evlenmek) *ҡ. һөйл.*

Ата-әсәнең рөхсәтенән тыш кейәүгә барыу; ҡасып сығыу. □ Выйти замуж без согласия родителей. ■ *[Хисмәтулла:] Ҡасайыҡ, һөйөклөм. Был йолаға ҡаршы килеү түгел бит. Бер беҙҙең генә баштан үтмәгән, «йәбешеп сыҡты» тип, тылҡыр-тылҡырҙар ҙа төңөлөрҙәр.* Я. Хамматов.

ЙӘБЕШЕП ЯТЫУ (йәбешеп ят-) (Р.: проявлять сильную привязанность; И.: take (to); Т.: dadanmak) *ҡ. һөйл.*

Нимә менәндер ныҡ мауығып, шуға бирелеп китеү. □ Проявлять сильную привязанность *к кому-чему,* пристраститься, держаться за *что-л. Ҡалаға йәбешеп ятыу. Урынға йәбешеп ятыу.* ■ *Был йорттарҙың*

хужалары күсенергә күнмәй, торған урындарына йәбешеп ята. Ф. Иҫәнғолов.

ЙӘБЕШЕҮ (йәбеш-) [боронғо төрки *йав-, йап-*] (Р.: прилипать; И.: stick (to); Т.: yapışmak) *ҡ.*

1. Ҡуша һылашып, тығыҙ булып тоташыу. □ Прилипать, липнуть, приставать. *Нык йәбешеү. Йәбешеп ҡатыу.* ■ *Бура һуғыу беләктәрҙе талдыра, тирләүҙән күлдәктәр арҡаға лыпып йәбешә.* Н. Мусин. *Ҡышлаҡтың тирә-яғын, баҡсаларын уратып алған алмағастар, ағастарға йәбешеп үҫкән виноградтар, үҙҙәренең ҡосағында йәй буйы һаҡлап үҫтергән емештәренең тиҙҙән ҡойоласағын һиҙепме, уҡтарын түбән эйгәндәр ҙә киске һалҡын елдә уйсан ғына һелкенәләр.* Б. Хәсән. *Асыуланып, һәнәгемде көс менән өҫкә күтәргәйнем, бер яҡҡа туҙышып бесән ырғыны, һәнәк осона йәбешкән тупраҡ күҙемә һирпелде.* Н. Мусин. ● *Бер киҫелгән икмәк кире йәбешмәй.* Мәҡәл. *Киҫелгән баш кире йәбешмәҫ.* Мәҡәл. *Майһыҙ ҡоймаҡ табаға йәбешә.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Урын-еренә килеү; килешеү. □ Идти, быть к лицу, подходить; сидеть как влитой. ■ *[Барсынһылыу] һөйләһә, һүҙе килешеп тора, ти, кейһә, кейеме йәбешеп тора, ти.* Халыҡ ижадынан.

3. Сәнселеп эләгеү; ҡаҙалыу. □ Прицепляться, приставать. *Һөлөк йәбешкән. Дегәнәк йәбешкән.* ■ *Ас һөлөктәр тәнгә йәбешә лә ҡан һура башлай.* Һ. Дәүләтшина. *Шәйхи ҡарт теҙҙәренә тиклем төшөп торған оҙон киндер күлдәгенә йәбешкән ваҡ йүкә һүйындыларын төшөрҙө.* Ғ. Хәйри. *Рамазан, ҡапҡаға һөйәлеп, сәйер тынлыҡҡа сумған ауылды күҙәтеп торған арала, ҡуранан өҫбашына, һаҡал-мыйығына суп-сар йәбешеп бөткән теремек сулаҡ ҡарт килеп сыҡты.* Ә. Хәкимов. ● *Насар буҫтауға йөн йәбешә.* Мәҡәл.

4. Ыҫҡынмаҫлыҡ итеп эләктереү; тотоноу. □ Хвататься, держаться. *Ҡулға йәбешеү. Йәбешеп ултырыу.* ■ *Тызрайышып бер-береһенең яғаһына йәбешкән, күҙҙәре аларған, аһылдашҡан малайҙарҙың ғәйрәте ҡапыл ҡайта, икеһе ике яҡҡа атлай.* Н. Мусин. *Ғазраилдың шашка һабына тотонғанын, Ҡәнзәфәрҙең тегенең ҡулына йәбешкәнен күрҙе лә бер уҡ ваҡытта тиерлек һалдаттарҙың яурындарынан мылтыҡтарын ала башлағанын абайланы.* Б. Рафиҡов. *Үҙенең сәсенә йәбешеп уйнай башлаған туғаны менән айпашты [ҡыҙ].* Һ. Дәүләтшина. ● *Һыуға батҡан һаламға йәбешкән.* Мәҡәл. *Үлеп барған үләнгә йәбешер.* Мәҡәл.

5. Терәк, ярҙам өмөт итеп, *кемгәлер* һырлығыу; тағылыу. □ Хвататься, держаться. ■ *Киләбеҙ. Минең һул ҡулға Сәлимә, уңға Разия йәбешкән.* Ғ. Хәйри. *Милиционер Ҡотлоҡайҙы алып сыға башлағас, эште һиҙеп ҡалып, Эреҫ еңгә, иламһырап барып, Ҡотлоҡайҙың итәгенә йәбеште.* Ғ. Дәүләтшин.

6. Тиҙ генә алыр өсөн ҡул һалыу; тотоноу. □ Браться, хвататься. *Ҡоралға йәбешеү.* ■ *Рамазан үҙ-үҙен белмәй дилбегәгә йәбеште. — Туҡтат аттарҙы!* Ә. Хәкимов. *Ат алға ташланды, Сергей, теҙгенде ҡулынан ысҡындырып, инде осоп ҡалам тигәндә, эйәр ҡашына йәбешеп өлгөрҙө.* И. Абдуллин.

7. *күсм.* Һәләтләп, ихласлап керешеү; тотоноу. □ Приниматься, браться. *Уйынға йәбешеү. Ашарға йәбешеү. Эшкә йәбешеү.* ■ *Тәфкилев бигерәк тә Әбелхәйер хан мәсьәләһенә нык йәбешкәйне.* Ғ. Ибраһимов.

8. Аймап алып, ҡулды йәки теште батырыу. □ Брать, хватать *за что. Боғаҙға йәбешеү. Алҡымға йәбешеү.* ■ *Ҡайһы берәүҙәрҙең бәйләнеп өлгөрмәгән быҙауҙары көтөүгә ҡарышы сабып киләләр ҙә, инәләрен табып алып, ҡабалана-ҡабалана имергә йәбешәләр.* Һ. Дәүләтшина. *Ошо ҡурҡыныс хәлдә күреп ҡалған Ҡарабай батыр, атынан һикереп төшә һалып, инде Сарыбайҙың алҡымына йәбешкән йыртҡыстың уң аяғын бер һелтәүҙә өҙә саба.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Ул [Тарасов], минең машинаның автолын ағыҙып, подшипниктарҙы иретергә лә, мине ғәйепле яһамаҡсы булған. Шунда уҡ барып йәбешәһе, бәйләп ташлайһы килде.* А. Карнай. ● *Көсө еткәнгә көсөк тә йәбешә.* Мәҡәл. *Яман эт итәккә йәбешә, яман кеше яғаға йәбешә.* Мәҡәл.

9. *күсм.* Даулап йәки әрләп *кемгәлер* ташланыу. □ Набрасываться, накидываться

на кого (с упрёками, бранью и т. п.). Ярҙам итмәйһең, тип миңә йәбеште. ■ *[Сәмиғулла — Илгизгә:] Ул самолёт, поезд, пароходтарҙа минең ни ҡыҙыҡһыныуым бар һуң? Һин упсым ысын судтағы ише йәбешәһең, әйтерһең, уларына ла мин ғәйепле.* Ә. Әминев.

10. *күсм.* Талар, көсләр өсөн ҡул һалыу. □ Набрасываться, накидываться. ■ *Үҙем күрше ауылға мөрйә сығарырға киткәс, бер төндә, етмәһә, [Заир] бисәгә йәбешергә уйлаған да, бисә бумала менән ҡыуып сығарған.* А. Карнай.

11. *күсм.* Йоғоу, эләгеү *(ауырыуға ҡарата).* □ Приставать, передаваться, переходить, заражаться *(о болезни). Уның [взвод командирының] бөтә тәндәре ҡалтырай. Һөйләгәндә, тапма йәбешкән кеше кеүек, тотлоғоп-тотлоғоп һөйләй.* Д. Юлтый. ● *Сирләмәгән сир тапҡан: кире сире йәбешкән.* Мәҡәл.

12. Ҡапыл тотоп, ныҡ ауыртыу. □ Схватывать *(о боли). Башҡа йәбешеү. Эскә йәбешеү. Ашҡаҙанға йәбешеү.*

ЙӘБЕШКЕ (Р.: отгадка; И.: clue; Т.: cevap) *и.*

1. Йомаҡтың мәғәнәһе, йомаҡтың яуабы. □ Отгадка загадки. *Йомаҡтың йәбешкеһе. Йәбешкеһен әйтеү.* ■ *Һабрау ҡарттың йомағын ишеткәс, Иҙеүкәй артыҡ уйланып тормаған, шунда уҡ йомаҡтың йәбешкеһен әйтеп биргән.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

2. *Ниҙеңдер* асылына тоҫмал яһалған нәмә. □ Подсказка, зацепка, намёк. ■ *[Аҡҡоломбәт] бисәләренән, улы Бабсаҡтан һорашҡан, күмәкләп уйлашҡандар, [хәлдең] һис йәбешкеһен таба алмағандар.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

ЙӘБЕШКӘ *и. диал.*

1. *зоол. ҡар.* **йәбешкәк II.** *Йәбешкәләрҙе үлтереү.*

2. *ҡар.* **йәбешке 1.** ■ *Йомаҡты ҡойғас, уға йәбешкәһен әйтәләр.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘБЕШКӘК I (Р.: липкий; И.: sticky; Т.: yapışık) *с.*

1. Һылашып, йәбешеп тороусан. □ Липкий, клейкий; вязкий. *Йәбешкәк ҡағыҙ. Йәбешкәк ҡар.* ■ *Мин, йәбешкәк ту-малсайҙарҙан күҙ алмай, ҡасан уларҙың ҡап уртаһында ғына көрән ҡыҙыл сәскә ишараты моронлар икән, тип ашҡынып көт тә йөрө!* Ш. Янбаев. *Беҙ майҙанға барып етеү менән йәбешкәк ҡар яуа башланы.* А. Таһиров. *Ғәбит уларҙың [кешеләрҙең] йөҙөн күрә алманы, шәүләләрен генә шәйләне — томан ҡуйы һәм йәбешкәк.* М. Ямалетдинов.

2. *күсм.* Кешегә һырлығып, йәбешеп барыусан. □ Прилипчивый, навязчивый. *Йәбешкәк бала.* ■ *Зифа апайҙың үҙенә ҡыҙығып йөрөүсе «кейәүҙәр» ҙә күп булған. Ҡайһы бер йәбешкәгерәктәрен һөрөп тә сығарғылаған, бугай.* К. Мәргән.

3. *диал.* Йоғошло, йоғоусан. □ Заразный, прилипчивый *(о болезнях).*

ЙӘБЕШКӘК II (йәбешкәге) (Р.: вошь мелкая; И.: small louse; Т.: yavşak) *и. зоол.*

Ваҡ бет, һеркә. □ Вошь мелкая, гнида. ■ *[Һатыусылар:] Был тараҡ менән башыңды тараһаң, йәбешкәген, һеркәһен дә ҡалдырмай һыпырып төшөрә.* Н. Мусин.

ЙӘБЕШКӘК III (йәбешкәге) *и. бот. диал.*

1. *ҡар.* **энәлек.** *Йәбешкәк ағасы. Йәбешкәк тамыры. Йәбешкәк сәскәһе.*

2. Бесәй үләненең борсағы. □ Плоды валерианы.

ЙӘБЕШКӘК IV (йәбешкәге) (Р.: снежная буря; И.: snowstorm; Т.: kar fırtınası) *и. диал.*

Һыулы буран, һырма буран. □ Снежная буря.

ЙӘБЕШКӘК БӨРМӘКӘЙ (Р.: подмаренник цепкий; И.: cleavers; Т.: tırmanıcı yoğurtotu, yapışkan otu) *и. бот.*

Һәр быуынынан уратып сыҡҡан ваҡ ҡыяҡ япраҡлы, аҡ өйкөм сәскәле, йөнтәҫ ҡуш орлоҡло болон үләне. □ Подмаренник цепкий (лат. *Galium aparine*). *Йәбешкәк бөрмәкәй борондан бөйөр, биҙ ауырыуҙарына ҡаршы ҡулланылған.*

ЙӘБЕШКӘК ҠАҒЫҘ (Р.: липкая лента; И.: adhesive tape; Т.: yapıştırıcı bant) *и.*

Себенде йәбештереп тота торған ҡағыҙ. □ Липкая бумага, лента. *Йәбешкәк ҡағыҙға себен тулған. Йәбешкәк ҡағыҙ һатып алыу.*

ЙӘБЕШКӘКЛӘНЕҮ (йәбешкәклән-) (Р.: стать липким; И.: gum; Т.: yapışık olmak) *ҡ.*

Һыланып, йәбешеп тороусанға әйләнеү. □ Стать липким, вязким, клейким. *Ҡар йәбешкәкләнде. Аяҡ аҫты йәбешкәкләнде.*

ЙӘБЕШКӘКЛӘҮ I (йәбешкәклә-) (Р.: вшиветь; И.: become lousy; Т.: bitli olmak) *ҡ.*

Йәбешкәклегә, ваҡ бетлегә әйләнеү. □ Вшиветь. *Башы йәбешкәкләп киткән. Йәбешкәкләй башлау.*

ЙӘБЕШКӘКЛӘҮ II (йәбешкәклә-) (Р.: слипаться; И.: stick together; Т.: yapışmak) *ҡ.*

Һыланып, йәбешеп тороу. □ Слипаться. ■ *Йәбешкәкләп торған ҡайын бөрөләре бер тиндәй генә япраҡ яралтты.* С. Ильясов.

ЙӘБЕШТЕРЕЛЕҮ (йәбештерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәбештереү 1, 2.** *страд. от* **йәбештереү 1, 2.** ■ *Бер түгел, рәттән биш листовка йәбештерелгән ҡоймаға күҙ төшөрөп, күҙ йөрөтәләр [үткенселәр].* Д. Бүләков. *Ат ауыр иттереп атлай, ти, инде хәҙер: өҫтөндә утыҙ айғыр тиреһе йәбештерелгән, етмәһә, аяҡтарында берәр ботло даға бит инде.* Әкиәттән. *[Хат] бик ныҡ йәбештерелгән, мөһөр урынына ғәрфиә акса баҫылған.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘБЕШТЕРЕҮ (йәбештер-) (Р.: скреплять; И.: fasten (together); Т.: yapıştırmak) *ҡ.*

1. Ҡуша һалып, тығыҙ итеп тоташтырыу. □ Скреплять, прикреплять, паять *(различными способами). Иретеп йәбештереү. Ҡойоп йәбештереү.* ■ *Ҡулына тәгәрмәс камераһынан йәбештереп эшләнгән биҙрәһауыт тотоп, .. аяғына итек кейгән кеше йәһәт кенә ишмәгә табан төшә башланы.* Д. Бүләков. *Шәрифә ишлай ҡыҙып һөйләй башлағас, Ғәмир башын эйеп, ни эшләргә белмәй, аптыраулыҡтағы икмәк валсыҡтарын бер-береһенә йәбештереп, бармаҡ биттәре менән тәгәрәтеп йомарлай башланы.* Б. Бикбай.

2. Елем һ. б. менән беркетеү. □ Приклеить. *Иғлан йәбештереү. Марка йәбештереү. Тәҙрә йәбештереү.* ■ *Делегаттар арлыбирле клуб таҙартырға керешеп киттеләр. Ҡайһыһы һепертке эһан алып һеперергә, ҡайһыһы эскәмйәләрҙе теҙергә, ә ҡайһыһы лозунг йәбештерә башланы.* И. Насыри. *Ҡотлояр һаман ҡырын ятҡан көйө, тәмәке төрөп, ҡағыҙын ялап йәбештерҙе лә, тоҡандырмай һөйләнде.* Һ. Дәүләтшина. *Арҡанан, биттән аҡҡан әсе тир, тәнде әсеттереп, мунса сабынып сыҡҡандағы һымаҡ яндырып, күлдәктәрҙе тәнгә йәбештерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

3. *ҡар.* **ҡаҙалтыу.** *Һөлөк йәбештереү. Талпан йәбештереп ҡайтыу.*

ЙӘБЕШТЕРЕҮСЕ (Р.: расклейщик; И.: billsticker; Т.: yapıştıran kimse) *и.*

Афишалар, белдереүҙәр йәбештереп йөрөүсе. □ Расклейщик. *Йәбештереүсе булып эшләү. Иғландар йәбештереүселәр талап ителә.*

ЙӘБЛЕК (йәблеге) [рус. *яблоко*] *и. диал. ҡар.* **картуф.** *Йәблек йыйыу. Йәблек ҡоймағы. Йәблек сәсеү. Йәблек бутҡаһы.*

ЙӘБЛЕК СОҠОРО (Р.: погреб; И.: cellar; Т.: mahzen) *и. диал.*

Картуф баҙы. □ Погреб, ям. *Йәблек соҡоро ҡаҙыу. Йәблек соҡорона һалыу. Йәблек соҡорон таҙартыу.*

ЙӘ БУЛМАҺА (Р.: или ... или; И.: or ... or; Т.: veya, yahut) *терк.*

Мәғәнә яғынан бер-береһен алмаштырған һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла; йәки. □ *Союз разд.* Или ... или; либо ... либо. ■ *Әгәр ҙә Әхмәтовта аҙ ғына булһа ла бюрократлыҡ, йә булмаһа Тимербайҙың күрергә теләгән сараларына ҡаршы килеү кеүек ғәҙәттәр булһа ине, ул уның менән талашыуҙан да баш тартмаҫ ине.* С. Агиш. *Пётрҙан һуң килгән батшалар ҙа әле Төркөстанға, үзбәк ханлыҡтарына айырым хәрби экспедициялар ойошторо у йә булмаһа сауҙа алыш-бирештәре менән генә сикләнергә мәжбүр була.* Р. Байымов. *Һуңғы ваҡытта төрлө темаларға лекциялар уҡырға әүәҫләнеп китте Фәһим. Йә булмаһа төрлө китаптар аҡтарып ултырыр булды.* И. Ғиззәтуллин.

ЙӘБӘЛДӘШ *с. диал. ҡар.* **йомро I, 3.** *Йәбәлдәш кәүҙәле. Йәбәлдәш беләк. Йәбәлдәш ҡыҙ.*

ЙӘГҮР *и. диал. ҡар.* **һыла.** *Йәгүр майы. Йәгүр тотоу.*

ЙӘҒНИ (Р.: то есть; И.: that is; Т.: yani) *анықл. терк.*

Әйтелгән һүҙ йәки фекерҙең мәғәнәһен асыҡлап килгән һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла. □ То есть. *Имзаңды, йәғни ҡултамғаңды ҡуй.* ■ *Твердышев .. Белорет тирәһендәге өс йөҙ мең дисәтинә ерҙе өс йөҙ һумға, йәғни ун дисәтинәһен бер тингә төшөрөп һатып алған.* Н. Мусин. *Ҡасандыр кешеләр ҙә, йәғни уларҙың тәүге күҙәнәктәре, бына шулай тупраҡты тишеп сыҡҡандыр һымаҡ тойолдо миңә.* М. Кәрим. *Әхмәҙиәләрҙең өйө, ауылдағы күп йорттар һымаҡ, ике яҡлы, йәғни алты мөйөшлө.* Р. Солтангәрәев.

ЙӘҒНИ МӘҪӘЛӘН *терк. ҡар.* **йәғни.** ■ *[Хасбулат олатай:] Герман һуғышы ваҡытында, йәғни мәҫәлән Беренсе донъя һуғышы мәлендә, фронтта осраштыҡ беҙ уның менән.* З. Биишева.

ЙӘҒРӘФИ [ғәр. جغرافى] (Р.: географический; И.: geographic(al); Т.: coğrafi) *с. иҫк.*

Географик. □ Географический. *Йәғрәфи атамалар. Йәғрәфи урынлашыуы.*

ЙӘҒРӘФИӘ [ғәр. جغرافية] (Р.: география; И.: geography; Т.: coğrafya) *и. иҫк.*

География. □ География. *Тәбиғи йәғрәфиә. Иҡтисади йәғрәфиә. Физик йәғрәфиә. Башҡортостан йәғрәфиәһе.* ■ *Әгәр ҙә, йәғрәфиә мөғәллиме өйрәткәнсә, Ер ҙә, бүтән планеталар ҙа Ҡояш тирәләй әйләнә икән, ниңә улар бер-береһе менән бәрелешмәй?* Ә. Хәкимов. *Бында уҡылған нәмәләрҙең миненң өсөн иң мөһиме — ғәрәп әҙәбиәтенән «Мәҡамәти Хәрири» менән Йософ Аҡчура тарафынан уҡытылған йәғрәфиә менән тарих ине.* М. Ғафури.

ЙӘҒФӘР (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-усерганцев.

ЙӘДИДИ I [ғәр. جديدى] *и. тар. ҡар.* **йәҙит I, 1.** ■ *Ҡәдимиҙәр менән йәдидиҙәр араһында көрәш барған мәл ине.* Ф. Иҫәнғолов.

ЙӘДИДИ II [ғәр. جديدى] *с. тар. ҡар.* **йәҙит II.** *Йәдиди йүнәлеше. Йәдиди мәктәп.*

ЙӘДИТ [ғәр. جديد 'яңы, өр-яңы'] *и. тар. ҡар.* **йәҙит.** *Йәдит мәктәбе.* ■ *Ә. Инан .. мәҙрәсә ҡаршыһында Силәбе ҡалаһының алдынғы фекерле сауҙагәрҙәре һәм байҙары тарафынан төҙөлөп, йәдит ысулы менән уҡытыу индерелгән мәктәптең мөғәллимдәре менән күрешеп, уларҙан уҡыу өсөн китаптар алып тороуы тураһында яҙа.* Р. Шәкүр. *Ауыл балалары булыуға ҡарамаҫтан, шәкерттәр ятаҡта ятып уҡый торған был мәҙрәсә Мөғәллим әл-әүүәлдән алып Ҡөрьән шәрифенә тиклем өйрәтә торған ысул йәдит мәктәбе була.* Р. Өмөтбаев.

ЙӘДИТЛӘНЕҮ (йәдитлән-) *ҡ. тар. ҡар.* **йәҙитләнеү.** *Йәштәр йәдитләнә бара.*

ЙӘДИТСЕ *и. тар. ҡар.* **йәҙитсе.** ■ *[Ғаббасов] заманында реаль училище тамамлаған, йәдитселәр хәрәкәтендә ҡатнашҡан, һуңғы осорҙа губернатор канцелярияһында сәркәтип-тылмас вазифаһын атҡарған.* Ә. Хәкимов.

ЙӘДИТСЕЛЕК (йәдитселеге) *и. тар. ҡар.* **йәҙитселек.** *Йәдитселек хәрәкәте.* ■ *[Таһиров] уҡытыу эшендә шул уҡ йәдитселек идеяларын алға һөрә, яңы мәктәптәр асыуға өлгәшә.* Р. Шәкүр. *Фәтхелҡадир үҙенең тыуған ауылында олатаһы Мөхибулла хәҙрәттең ҡыҙына өйләнгән Ғәлим әфәнденең йәдитселек ысулы менән эшләүсе мәктәбендә башланғыс белем ала.* Р. Шәкүр.

ЙӘДКӘР [боронғо төрки *йәд* 'хәтирә, хәтер'] (Р.: память; И.: memory; Т.: yâd) *и.*

Хәтирә, иҫтәлек. □ Память. // Памятный. *Йәдкәр итеп ҡалдырыу. Йәдкәр дәфтәре.* ■ *Бөйөк шәһәрҙең байтаҡ урындарында йөрөргә, килгән һайын әллә күпме атаҡлы ҡомартҡыларын, тарихи йәдкәрҙәрен күрергә насип булғайны.* Р. Бикбаев. *Әммә ерҙә көллө ғәләм һаман да ниҙер көтә — һуңғы һүҙҙе, йәдкәр итеп, шиғриәт илгә әйтә.* Х. Назар. *Был әҫәр [Әхмәт Ибн Фаҙландың әҫәре] ғилем тарих ғашиҡтары өсөн ҡиммәтле бер йәдкәрҙер.* Р. Фәхретдинов.

ЙӘДКӘР ДӘФТӘРЕ *и. иҫк. ҡар.* **иҫтәлек дәфтәре.** *Йәдкәр дәфтәренә яҙып барыу.*

Йәдкәр дәфтәре башлау. Йәдкәр дәфтәрен уҡыу.

ЙӘҘБӘ [ғәр. جذبة 'ара, алыҫлыҡ'] (Р.: циркуль; И.: compasses; Т.: pergel) *и.*

Түңәрәк һыҙа торған ҡорал; циркуль. □ Циркуль. *Йәҙбә менән түңәрәк һыҙыу. Йәҙбә ҡулланыу.*

ЙӘҘИТ I [ғәр. جديد 'яңы, өр-яңы'] (Р.: джадид; И.: Jadid; Т.: cedid) *и.*

1. Яңылыҡ, йәҙитселек яҡлы кеше. □ Джадид, джадидист, сторонник джадидизма. *Йәҙит булыу.* ■ *«Ишми» һөйөнә. Доностарым менән йәҙиттәрҙең ҡойроғон шиңдерәм, тип һөйөнә. Йәҙиттәр йәһәннәмгә төшөп бөтөрҙәр ҙә, миңә ожмахта түптерергә урын буш ҡалыр, тип һөйөнә.* Ш. Бабич.

2. *ҡар.* **йәҙитселек.** *Йәҙит хәрәкәте.*

ЙӘҘИТ II [ғәр. جديد 'яңы, өр-яңы'] (Р.: джадидистский; И.: jadid; Т.: cedid) *с.*

Йәҙитселеккә бәйле, йәҙитселеккә ҡараған. □ Джадидистский. ■ *Әбйәлил районының Ҡаҙмаш ауылында беренсе йәҙит ысулы мәктәбен асҡан Усман мулла Ниязғолов аҙаҡ Тамъян-Ҡатай кантонының тәүге мәғариф бүлеге мөдире булып китҡән.* «Шоңҡар» № 8, 2010. *Ғүмер буйҡа уҙмаға, кейем юҡҡа туҙмаға, ғилемлеккә истифтахтыр ысул йәҙит.* Ғ. Кейеков.

ЙӘҘИТЛӘНЕҮ (йәҙитлән-) (Р.: становиться джадидом; И.: become a jadid; Т.: cedid olmak) *ҡ. тар.*

Йәҙиткә (1) әйләнеү; яңыға, йәҙитселеккә ынтылыу. □ Становиться джадидом; быть сторонником джадидизма. *Йәҙитселек осоронда күберәк йәштәр йәҙитләнә бара.*

ЙӘҘИТСЕ *и. ҡар.* **йәҙит I.** ■ *Иҫке мәсет эргәһендә Насибулла хәҙрәт быуат башында уҡ инде беренсе мәҙрәсә асҡан. Һуңынан унда йәҙитсе мулла Моратов эшләгәне билдәле.* «Йәшлек», 19 ноябрь 2009.

ЙӘҘИТСЕЛЕК (йәҙитселеге) (Р.: джадидизм; И.: Jadidism; Т.: Ceditlik) *и. тар.*

XIX быуат аҙағында – XX быуат башында мәктәптәргә реформа индереүҙе талап итеп сығыш яһаған ижтимағи ағым. □ Джадидизм *(общественное движение, выступающее за просвещение, реформирование школы в конце XIX и начале XX веков).* / Джадидистский. ■ *XIX быуаттың 90-сы йылдарында йәҙитселек хәрәкәте баҫымында мәҙрәсәләрҙә донъяуи предметтарҙы уҡыта башлау халҡыбыҙҙың күп кенә арҙаҡлы зыялыларын үҫтерергә ҙур мөмкинлектәр биргән.* Интернет селтәренән.

ЙӘҘРӘ I [рус. *ядро*] (Р.: ядро; И.: shot; Т.: top mermisi) *и.*

1. Борондо шыма көбәкле туптың тумалаҡ снаряды; туп йәҙрәһе. □ Ядро. *Йәҙрә ярылыу.* ■ *Һауала шрапнелдар шартлай, крепосты штурмлаусылар өҫтөнә йәҙрәләр, снаряд ярсыҡтары сәселә.* Б. Хәсән. *Ике һалдат яраланды, өсөнсөһө, ҡулын йәҙрә өҙөп, күп ҡан юғалтыуҙан аҙаҡтан үлде.* Я. Хамматов. *Дошман тарафынан яуҙырылған уҡ, йәҙрә, ҡаяға атҡан борсаҡ шикелле, ете батырҙың күкрәгенә барып тейеү менән кире һикерә.* И. Абдуллин. *Ир-егеткәй өсөн, ай, яуҙарҙа күкрәккәйен тишер ҙә йәҙрә юҡ.* Халыҡ йырынан.

2. Һунар мылтығының эре хайуанға ата торған ҡурғаш пуляһы; мылтыҡ йәҙрәһе. □ Дробь. *Мылтыҡ йәҙрәһе. Айыу йәҙрәһе.* ■ *Йәҙрә [рәйестең] сикәһен сыйып үткән.* Д. Буләков. ● *Бер йәҙрә берҙе үлтерер, бер һүҙ меңде үлтерер.* Мәҡәл.

ЙӘҘРӘ II [рус. *ядро*] (Р.: ядро; И.: shot; Т.: gülle) *и. спорт.*

Еңел атлетикала алыҫлыҡҡа ташлау өсөн тәғәйенләнгән снаряд. □ Ядро, снаряд. *Йәҙрә ташлау. Йәҙрә ауырлығы. Йәҙрә ташлау буйынса ярыш.*

ЙӘҘРӘЛЕ (Р.: дробовой; И.: with small shot; Т.: saçmalı) *с.*

Йәҙрә һалып ата торған. □ Дробовой, с дробью. *Йәҙрәле мылтыҡ.* ■ *Ошо уйҙарҙан алйып, Ыраҫ Ғибат ҡушкөбәген алды, ҡарбуз ҡарағына тәғәйенләнгән эре тоҙ йәҙрәле яһауын тыҡты.* Й. Солтанов.

ЙӘҘРӘ ҺАЛҒЫС (Р.: кожаный или матерчатый мешочек для пуль; И.: leather bag for bullets; Т.: saçma torbası) *и.*

Йәҙрә һалыу өсөн күндән йәки туҡыманан тегелгән тоҡсай. □ Кожаный или матерчатый мешочек для пуль, пыжей. *Йәҙрә һалғыс тегеү. Башҡорт яугирҙары үҙҙәре*

менән ҡайыштарына йәҙрә һалғыстар бәйләп йөрөткәндәр.

ЙӘҘҮӘЛ [ғәр. جدول] (Р.: таблица; И.: table; Т.: cetvel) *и. иҫк.*

1. Төрлө мәғлүмәтте тәртип менән теҙеп биргән яҙма йәки һыҙма; таблица, график. □ Перечень, список, реестр, таблица. *Ҡабатлау йәҙүәле.* ■ *Йәшерәк һәм тәжрибәһе самалыраҡ шоферҙар страховка полисы өсөн күберәк түләйәсәк. Аңлайышлыраҡ булһын өсөн түбәндә был мәғлүмәтте йәҙүәл итеп күрһәтәбеҙ.* «Башҡортостан», 27 июль 2010.

2. Эш башҡарылыу ваҡытын һәм урынын теҙеп күрһәткән яҙма; расписание. □ Расписание, график. *Дәрестәр йәҙүәле.* ■ *Нимәнимә, юлда ашамайынса булмай (Пруссия короле Фридрих Вильгельм I әйтмешләй, һуғыш һуғыш менән, ә төшкө аш йәҙүәл буйынса).* «Йәшлек», 14 сентябрь 2010.

ЙӘҘӘК (**йәҙәге**) (Р.: помощь государства населению во время голода; И.: relief food; Т.: yedek) *и. тар.*

Аслыҡ ваҡытта дәүләттән ярҙамға алынған аҙыҡ-түлек. □ Помощь государства населению во время голода. *Йәҙәк ашы ойоштороу.* ■ *Күрәһең, ул [Ишбулды] был йәҙәк ашын да хәҙер үк күтәреп әсеп куйырға уйлай ҙа, аяҡтарына үтеп барған һыуыҡҡа сыҙамайынса, алға ынтыла.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘҘӘС *и. диал.* **йәтәс.** *Йәҙәс айырыу. Йәҙәс отоу. Йәҙәс һөйәге.*

ЙӘЖӘНКӘ [рус. *лежанка*] *и. диал. ҡар.* **ләжәнкә.** *Сана йәжәнкәһе. Йәжәнкә йүнәтеү. Тәпәш йәжәнкә. Киң йәжәнкә.*

ЙӘЗБӘ [ғәр. جنبة ‘ара, алыҫлыҡ’] *и. ҡар.* **йәҙбә.** ■ *Уҡыусының муҡсаһында дәфтәре менән ҡәләме лә, йәзбәһе лә булыр.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘЗИТ I (Р.: злой; И.: wicked; Т.: kasıtlı) *с. диал.*

Кешегә насарлыҡ, яманлыҡ ҡылыусан; уҫал, яуыз. □ Злой, зловредный. *Йәзит кеше. Йәзит булыу.*

ЙӘЗИТ II (Р.: ябеда; И.: slanderer; Т.: gammaz) *и.*

Ошаҡ, һүҙ йөрөтөүсе, бәләсел. □ Ябеда. *Йәзит булып йөрөмә!*

ЙӘЗҮР [ғәр. جزور ‘ынтылыш; теләк’] (Р.: жертвенное животное; И.: sacrificial animal; Т.: kurbanlık hayvan) *и. иҫк.*

Дин буйынса, ҡорбанға тәғәйенләнгән мал. □ Жертвенное животное. *Йәзүр итеп аҫрау. Йәзүргә тәғәйенләү.*

ЙӘИҺӘ (Р.: или; И.: or; Т.: veya) *бул. терк.*

Мәғәнә яғынан береһен береһе алмаштырған ике һөйләм йәки һөйләм киҫәген теркәү өсөн ҡулланыла; йәки. □ *Союз разд.* Или, либо, или же. *Бөгөн йәиһә иртәгә.* ■ *Беҙ [һалдаттар], күндәм кешеләрсә, трубкаларҙы һалып ҡуябыҙ ҙа, күңелдән хәтирәләр дәфтәрен аҡтарып йәиһә киләсәккә хыяли пландар ҡороп, ваҡыт үткәрәбеҙ.* Д. Юлтый. *Сөнәғәткә, әлбиттә, атаһы менән бер туған Ваһап бабаһына йәиһә Әҙһәм бабаһына тура- лап та ҡайтырға мөмкин ине.* Ж. Кейекбаев.

ЙӘЙ I [дөйөм төрки *йай*] (Р.: лето; И.: summer; Т.: yaz) *и.*

1. Йылдың яҙ менән көҙ араһындағы иң йылы ваҡыты. □ Лето. *Иртә йәй.* ■ *Айбулат был кешене бөтә йәй буйына ни бары өсөнсө таптҡыр күрә ине.* Һ. Дәүләтшина. *Инде октябрь айҙары, ә көндәр һаман, йәй аҙағындағы һымаҡ, сыуаҡ, йылы.* Б. Бикбай. *Сәйҙел, Зәйнәп китте Ҡырымға, ниндәй рәхәт йәйгә сығыуы!* ● *Йәйгә сыҡҡан йән үлмәҫ.* Әйтем. *Йәй эшләмәһәң, ҡыш ашарға тапмаҫһың.* Мәҡәл. *Йәй эшләһәң, ҡыш ашарһың.* Мәҡәл. *Йәйҙең бер көнө ҡыштың бер аҙнаһына тора.* Мәҡәл. *Йәйҙең өйө киң.* Мәҡәл. *Йәйе барҙың ҡышы бар.* Мәҡәл.

2. *миф.* Барлыҡ йылды билдәләүсе йәнләндерелгән миҙгел. □ Олицетворённое время года, определяющее весь год. ● *Йәй ҡышты туйҙыра.* Әйтем.

ЙӘЙ II (Р.: летний; И.: summer; Т.: yaz) *с.*

Йәйгә хас, йәй булған. □ Летний. *Йәй айҙары.* ■ *Йәй көнө күп кеше ут алып тормай ятырға ғәҙәтләнгән.* Д. Буләков. ● *Вайымһыҙ йөрөһәң йәй көнө, алымһыҙ булырһың көҙ көнө.* Мәҡәл.

ЙӘЙ III (Р.: слово-обращение мужа и жены между собой; И.: word of address; Т.: karı kocanın bir birine seslenme kelimesi) *өндш. диал.*

Ир менән ҡатындың бер-береһенә өндәшеү һүҙе. □ Слово-обращение мужа и жены между собой: эй. *Йәй, ишетмәйһеңме әллә?*

ЙӘЙ АТАҺЫ *и. миф. ҡар.* **йәй тәңре.**

ЙӘЙ БАШЫ *и. диал. ҡар.* **яҙ.** *Йәй башында ҡайтыу. Йәй башы быйыл йылы килде.*

ЙӘЙГЕ (Р.: летний; И.: summer(y); Т.: yaz) *с.*

1. Йәй көнөндәге, йәйгә хас. □ Летний. *Йәйге ваҡыт. Йәйге кис. Йәйге ҡояш. Йәйге ямғыр. Йәйге каникулдар.* ■ *Йәйге йомарт ҡояш нурҙары апаруҡ йылытырға өлгөргән таш нигеҙгә арҡаны терәп, кисәге уйындарҙа кемдең еңеүе, кемдең еңелеүе .. хаҡында бәхәсләшеүгә байтаҡ ваҡыт китә.* Н. Мусин. *Беҙҙең яҡта хатта йәйге ямғырҙар ҙа ултырып яуа.* М. Кәрим. *Хатын үҙе менән алып килә тыуған яҡтың таныш еҫтәрен, сирень сәскәләрен, һыу буйҙарын, талғын елле йәйге кистәрҙе.* Р. Ниғмәти. ● *Йәйге көн бер йылды туйҙыра.* Мәҡәл. *Сирлегә йәйге селлә лә һыуыҡ.* Мәҡәл.

2. Йәй өсөн тәғәйенләнгән, йәйен файҙаланыла торған. □ Летний. *Йәйге күлдәк. Йәйге кейем. Йәйге театр.* ■ *Көн яҡшы уҡ эҫе булһа ла, костюм өҫтөнән плюш яғалы иҫке фасон йәйге пальто кейгән, .. оло ҡолаҡлы, ҡыҙыл сырайлы бер әү өс киҫәк багажы менән минең янға килде.* Ғ. Ғүмәр. *«Өфө трикотаж фабрикаһы» асыҡ акционерҙар йәмғиәте йәйге кейем коллекцияһын әҙерләгән.* «Йәшлек», 22 апрель 2008.

ЙӘЙГЕЛЕК (йәйгелеге) (Р.: летнее время; И.: summer time; Т.: yaz mevsimi) *и.*

Йәйге ваҡыт, йәй осоро. □ Летнее время, летний сезон. *Йәйгелеккә әҙерләнеү. Йәйгелеккә ҡайтыу.* ■ *Шәңгәрәйҙең донъя теүәл, ялан тулы йылҡыһы, йәйгелеге — ҡымыҙ ҙа ит, ҡалъя ла бал — ҡышлығы.* С. Кулибай. *Мөлкәтенең күпселек өлөшөн аҡсаға әйләндереп, йәйгелектә үк сит илгә күсереп өлгөргәйне ул [Вәлишин].* Ә. Хәкимов. *Аҡ ҡуянкайҙарҙан тун тектерҙем, тышҡынайын ниҙән тыштайым? Йәйгелеген бында, ай, йәйләнем, ҡышҡынайын ҡайҙа ҡышлайым?* Халыҡ йырынан.

ЙӘЙГЕС *и. диал. ҡар.* **йәймә.** *Бер йәйгес туҡмас. Йәйгес йәйеү.*

ЙӘЙГЕ СЕЛЛӘ (Р.: середина лета; И.: hot season; heat; Т.: yaz sıcağı) *и.*

25 июндән 5 августа тиклем булған йәйҙең иң эҫе ҡырҡ көнлөк осоро. □ Середина лета, межень, пора летней жары. ■ *[Туҡ батыр — әсәһенә:] Яурынындан дошмандың уғы үтә сыҡҡанда; йәйге селлә көндәрҙә һыу табалмай ҡаңғырып, тамаҡтарың кипкәндә, .. атама юлдаш булғанһың.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

ЙӘЙГЕҺЕН (Р.: летом; И.: in summer; Т.: yazın) *р.*

Йәйге ваҡытта. □ Летом, в летнюю пору, летней порой. *Йәйгеһен барыу. Йәйгеһен ҡайтыу. Йәйгеһен ултыртыу.* ■ *Каникулға ҡайтҡанда, Искәндәр ҡышҡыһын ҡар торорға, баҫыуға тиреҫ, көл сығарырға йөрөнө, йәйгеһен бесән сапты, урғыс машинала эшләне.* Ә. Хәкимов. *Йәйгеһен аша ырғып сығырлыҡ ҡына ятҡан ишмә, мин дә ата балаһы тигәндәй, ҡоторған да китҡән, оло бер ярһыу йылға ишкелле, туғарланып-туғарланып ағып ята.* Р. Солтангәрәев.

ЙӘЙҒОР I (Р.: радуга; И.: rainbow; Т.: gökkuşağı) *и.*

1. Ямғыр тамсыларында ҡояш нурҙары сағылыуынан яһалып, күк йөҙөндә барлыҡҡа килгән атмосфера күренеше. □ Радуга. *Йәйғор ҡалҡты. Йәйғор сағылышы. Йәйғор төҫтәре.* ■ *Кешеләрҙе хайран ҡалдырып, күпер һалынған һаҙлыҡ өҫтөнә мең-мең нурҙан яралған йәйғор төшә.* Ә. Вахитов. *Көтмәгәндә генә яуа башлаған ямғыр көтмәгәндә генә уҙып та китте. Ике осон ике офоҡҡа терәп, йәйғор ҡалҡты.* Р. Ғабдрахманов. *Һаумыһығыҙ! — тип өндәшәм шифа ләйсән ямғырға, яҙғы күкрәү менән килгән күк биҙәге — йәйғорға.* А. Игебаев.

2. *миф.* Алланың көйәнтәһе кеүек ҡабул ителгән, ямғыр менән бәйле мифик күренеш *(башҡорттар ышаныуынса, кешенең енесен үҙгәртеү көсөнә эйә).* □ Мифологизированное небесное явление, связанное с дождём, воспринимаемое как коромысло Бога *(по представлениям башкир, радуга способна изменить пол человека).*

ЙӘЙҒОР II (Р.: радужный; И.: rainbow; versicolored; Т.: rengarenk) *с.*

Төрлө-төрлө төҫтә булған. □ Радужный, многоцветный. ■ *Йәйғор канатлы күбәләк осоп йөрөй болонда.* Г. Юнысова.

ЙӘЙҒОР ҠАЛҠЫУ (йәйғор ҡалҡ-) (Р.: появление радуги; И.: appearance of a rainbouw; Т.: gökkuşağı çıkmak) *к.*

Йәйғор күтәрелеү, сығыу. □ Появление радуги. ■ *Йыртығынан болоттоң алтын һаҡал һоноп көлдө ал Ҡояш, һаҡал нурын һирпелдереп ауылға; ҡалҡты йәйғор, көмрәйтеп арҡаһын, ут-һаҡалға батырылған тараҡтай.* Й. Солтанов.

ЙӘЙҒОРОН *и. диал. ҡар.* **йәйғор.** *Йәйғорон сығыу.* ■ *Йәйғорондо аша сыҡҡан ҡыҙ малайға әйләнә, ти.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘЙҒУР ТАШЫ *и. диал. ҡар.* **йәй ташы.**

ЙӘЙҘЕРЕҮ (йәйҙер-) *к. йөкм. ҡар.* **йәйеү.** *понуд. от* **йәйеү.** *Балаҫ йәйҙереү. Кейеҙ йәйҙереү. Урын йәйҙереү.* ■ *Дүрт аяҡлы януарға төйәк булған Уралым; яусыл булған атама ата булған Уралым; икеһен дә йоп ҡылып, тул йәйҙергән Уралым; аҫыл ағас үҫтереп, ҡош үрсеткән Уралым.* «Урал батыр». *Хатта ҡолас етмәҫ имәндәрҙән күпер ҙә йәйҙереп ҡарағандар [ауылдаштар], тик уларҙы ла Ямаш баткағы йоткан.* Н. Мусин. *[Боғара] .. иҫкерә төшкән һигеҙ ҡанатлы аҡ тирмә урынына яңыһын текләтте, уның эсен биҙәтеп, иҙәненә ҡыйбатлы келәмдәр йәйҙерҙе.* Ә. Хәкимов.

ЙӘЙҘӘҮ *и. диал. ҡар.* **тирмә.** ■ *[Алдар:] Ырыҫбай ҙа, Сәйетбай ҙа, Көҫәп тә, Алдарға эйәреп, яуға сығырға тора, әле минең йәйҙәүгә ябырылып, үҙемде сабырға итәләр, тигән. Унан арҡа көтөп, атлы казактар ебәреүен һораған.* Г. Ибраһимов.

ЙӘЙҘӘҮКӘ *и. диал. ҡар.* **йәйләүес.** *Көтөүҙә йәйҙәүкәләр күп. Йәйҙәүкәне эт ашаған.*

ЙӘЙЕК I (йәйеге) (Р.: ветвь; И.: branch; Т.: budak) *и.*

Ылыҫлы ағастың тарбаҡлы ботағы. □ Ветви, ветки, лапы (*хвойных деревьев*). *Шыршы йәйеге. Киң йәйекле ҡарағай.* ■ *Аҫҡа йәйек итеп артыш ҡыуаҡтары һындырып һалынды, улән йолҡоп түшәлде.* Г. Ибраһимов. *Был арала ат туҡтаны, ҡолаҡтарын һерәйтеп, башын уңға борҙо. Унда, мөгөҙҙәре артыш йәйектәре һымаҡ, армыт-армыт үҫкән ике дәү һәм бер бала болан тора ине.* С. Кулибай.

ЙӘЙЕК II (Р.: большой; И.: large, big; Т.: geniş) *с.*

Арҡырыға йәйелгән; йәйенке; киң. □ Большой, широкий. *Йәйек ҡойроҡ.* ■ *Йәйек ҡойроҡ кир бейә, ти, тайҙар менән ул да юҡ, ти.* «Аҡһаҡ ҡола». *Аҫылбикә уны [киленен] ҙурланы: тана-торпонан ғына түгел, көмөш ҡыялы эйәр һалынған, .. ошо көнгә тип күптән инәүләнгән ялбыр ялы, дуға муйынлы, йәйек ҡойроҡло ерән юрға бейәне етәкләп килтерҙе.* Г. Ибраһимов.

ЙӘЙЕК III (йәйеге) *и. диал. ҡар.* **йәйет.** *Йәйек ваҡыты. Йәйек башланды.*

ЙӘЙЕК IV (йәйеге) (Р.: вешние воды; И.: spring water; Т.: bahar suları) *и. диал.*

Яҙғы һыу. □ Вешние воды. *Йәйек кисеү. Йәйек ташыу. Йәйек ҡалҡыуы.*

ЙӘЙЕЛДЕРЕЛЕҮ (йәйелдерел-) *к. төш. ҡар.* **йәйелдереү.** *страд. от* **йәйелдереү.** ■ *Был эшмәкәрлек элекке социалистик системаны тәшкил иткән башҡа илдәрҙә лә ныҡ йәйелдерелгәнгә оҡшай.* Р. Бикбаев. *АҠШ тарафынан һуғыштан һуңғы осорҙа йәйелдерелгән был шәфҡәтһеҙ сәйәсәт бөгөнгө шарттарҙа ла әҙмә-әҙлекле дауам итә.* «Ағиҙел», № 2, 2010. *30-сы йылдар башынан ҡулаҡ һәм урта хәлләләргә ҡаршы золом киң йәйелдерелә.* М. Хужин.

ЙӘЙЕЛДЕРЕҮ (йәйелдер-) (Р.: раскидывать; И.: stretch out; Т.: yaymak) *к.*

1. Ян-яҡҡа киң итеп йәйеү. □ Раскидывать, простирать, расстилать. *Итәктәрҙе йәйелдереү.* ■ *Суртан ҡарпый шаптыр итеп, йәйелдереп ҡулсалар, аҡ сабаҡтар ауларға тип, аҡсарлаҡтар осалар.* Р. Ғарипов.

2. *күсм.* Киң күләмдә таратыу. □ Развёртывать. // Развёртывание. *Ярышты киң йәйелдереү. Халыҡтың ижади әүҙемлеген йәйелдереү. Эшмәкәрлекте йәйелдерә барыу. Колхозсылар баҫыу эштәрен киң ҡолас менән йәйелдерә барҙылар.* ■ *Киң күләмдә мелиоратив эштәр йәйелдереп ебәреү ҙә күҙ уңында тотола, яҡшы йыһазландырылған район-ара ремонт мастерскойы төҙөләсәк.* Н. Мусин. *Сара станцияһы, Ҡуяш ауылы*

эргәһендә, Ҡыштым, Екатеринбург йүнәлешендә улар [милли хәрәкәт яҡлылар] ҡыҙылдарға ҡаршы көрәш йәйелдереп ебәрә. Р. Насыров. *Атаҡлы шарлатан, авантюрист Григорий Распутин егерменсе быуат башында, йәмғиәттә буталсыҡ көсәйгәс, ижтимағи ҡапма-ҡаршы тороу айырыуса киҫкен төҫ алғас, эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәргән.* М. Ҡотлоғәлләмов.

ЙӘЙЕЛЕҮ (йәйел-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йәйеү.** *страд. от* **йәйеү.** *Һалмалар йәйелде. Ҡамыр йәйелде. Урын йәйелде.* ■ *Урындыҡ өҫтөнә түшәлгән балаҫтар ҙа алыштырылып йәйелгән.* Т. Хәйбуллин. *Малай мышҡылдап илап, иҙәнгә йәйелгән урынға ятып, үлек кеүек йоҡлап китте.* Б. Бикбай. *Урамдарға асфальт йәйелгән, еңел машиналар, мотоциклдар йөрөй.* Т. Ғиниәтуллин.

2. Арҡырыға киң булыу, иркен ерҙе биләү. □ Раскидываться, простираться, стлаться, расстилаться. *Киң ялан йәйелеп китә. Йәйелеп үҫкән ағас. Тирә-яҡта диңгеҙ йәйелеп ята. Йылға бик киң йәйелгән.* ■ *Тауҙарҙан арынып, тигеҙлектәргә барып сыҡҡас ҡына ул [Аҡнөгөш] йәйелеп, ирәйеп китеп аға башлай.* Д. Бүләков. *Әйтерһең, ул [Һабрау] күҙ етмәҫ киңлектәргә йәйелгән даръя һеүәненә эләккән дә, ағым ихтыярына бирелеп, ҡайһы ярға һуғылырға белмәй баш вата.* Ә. Хәкимов.

3. *күсм.* Иркен, рәхәт тойоу; иркенләү, кинәнеү. □ В форме деепричастия на *-п* выражает неторопливое, размеренное действие: раскинуться. *Йәйелеп ятыу. Йәйелеп ултырыу. Йәйелеп һөйләшеү. Йәйелеп ултырып сәй эсеү.* ■ *Юлдыбай менән Таймаҫ, бер нисә тапҡыр һүҙ башлап ҡараһалар ҙа, иркенләп, йәйелеп һөйләшеп китә алманылар.* Һ. Дәүләтшина. ● *Ҡыш — ҡыҫыл, яҙ — яҙыл, йәй — йәйел, көҙөн үҙең белерһең.* Мәҡәл.

4. Ян-яҡҡа киң булып таралыу. □ Разливаться, растекаться. *Нефть һыу өҫтөнә йәйелде. Буяу йәйелде.* ■ *Төтөн киске тынлыҡ менән һирпелеп, яйлап йәйелде лә Ирәндек өҫтөндә аҫылынып торған ап-аҡ көмөш болоттарға үрләп барып ҡушылды.* Һ. Дәүләтшина. *Ут көсәйҙе, ул икенсе өйҙәргә йәйелде.* Д. Юлтый. *Дим буйҙарына, мамыҡ һымаҡ, ап-аҡ томан йәйелгән.* М. Тажи.

5. *күсм.* Киң күләмдә таралыу. □ Распространяться. *Хәбәр тиҙ йәйелде.* ■ *Ҡолморҙа старшина урыҫ байҙарына ер һатыу тураһында хәбәрләшеп ята тигән хәбәр ил араһына йәйелеп китте.* Т. Хәйбуллин. *Был фекер [хөкүмәт ғәскәрен еңеү] муллалар арҡылы Башҡортостандың бөтә мөйөштәренә йәйелә башлай.* Картотека фондынан. *«Фермер илде туйҙырасаҡ» — 90-сы йылдар башында, тәү башлап фермерлыҡ хәрәкәте йәйелә башлағас, шундай оптимистик лозунг бар ине.* «Башҡортостан», 23 март 2012.

ЙӘЙЕЛЕШЕҮ (йәйелеш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йәйелеү 2—3.** *взаимн. от* **йәйелеү 2—3.** *Йәйелешеп ултырыу.* ■ *Трамвайҙа китеп бара ике малай. Йәйелешеп ултырғандар, рәхәт ҡалай.* М. Кәрим. *Табындар Ағиҙел буйҙарынан алып Урал тауҙарынаса, Урал арьяҡтарынаса әллә ҡайҙарға тиклем йәйелешеп яталар.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘЙЕМ (Р.: раскатка; И.: roll; Т.: yufkalık) *и.*

Нимәнеңдер баҫып йәйелгән бер өлөшө. □ Раскатка *(теста, глины и т. п.)* ■ *Бер йәйем һалма. Ҡаҙан ултырып ит һалынды, биш-алты йәйем һалма йәйелде.* З. Биишева. *Мәғфүрә усаҡ яҡтыһына яҡын килеп он ашъяулығын йәйҙе һәм туҡмас таҡтаһын һалып, үҙе тубыкланып тороп, кипкән һалма йәйемдәрен ҡырҡырға кереште.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘЙЕН I [дөйөм төрки *жаған*] (Р.: сом; И.: sheatfish; Т.: yayın, yağbalığı) *и. зоол.*

1. Киң ялпаҡ ауыҙлы, оҙон мыйыҡлы, сөсө һыуҙа йәшәгән шыма тәнле, тәңкәһеҙ бик эре йыртҡыс балыҡ. □ Сом (лат. *Silurus glanis*). *Йәйен тотоу. Йәйен ҡармағы.* ■ *Йәйендәй дулап, һыу ярып, ҡойон-дауыл ҡуптарып, тау-таштарҙы тетрәтеп, ҡошҡорттарҙы өркөтөп, балыҡтарҙы ҡурҡытып, Шүлгән күле төбөнән Һәүбән донъяға сыҡҡан.* «Урал батыр». *Юғалды ҡуйҙы суртан, нишләргә белмәй Солтан. Ғәләмәт ҙур йәйендәр ҡалҡындылар һис юҡтан.* М. Ғәли. ● *Йәйендең башын ашама, ҡойроғон аша.* Мәҡәл.

2. *миф.* Им-томда ҡулланылған балыҡ. □ Сом *(мифологизированная рыба; используется в магической медицине.) Йәйен мыйығы имгә һәйбәт.*

♦ **Йәйен ауыҙ** *мыҫҡ.* ҙур ауыҙлы кешегә мыҫҡыллап әйтелә. □ Большеротый. *Йәйен ауыҙ инде лә үҙе, бигерәк килешһеҙ.*

ЙӘЙЕН II (Р.: летом; И.: in summer; Т.: yazın) *р.*

Йәйге көндә, йәйге ваҡытта. □ Летом. ■ *Быны изге билдә, тиҙәр, шуға ышаныр инем, — ҡыш уҡ шулай хәбәр итә, йәйен иген уңасаҡ.* М. Кәрим. *Урамдарың буйлап сабып үтте, йәйен — туҙан, ҡыш ҡар туҙҙырып, баллы кәрәҙ кеүек шаҙра малай, үҫтем һиндә гармун һыҙҙырып.* Н. Нәжми. *Ҡышын да, йәйен дә [Тәңребирҙе шишмәнең] һалҡынлығы бер сама була: туңмай ҙа, йылымай ҙа.* Т. Ғарипова. ● *Йәйен айранһыҙ булма, ҡышын юрғанһыҙ булма.* Мәҡәл. *Йәйен аҡтан кейен, ҡышын ҡаранан кейен.* Мәҡәл.

ЙӘЙЕН III (Р.: отмель; И.: shoal; Т.: sığlık) *и. диал.*

Йылғаның һай урыны. □ Отмель. *Йәйендә кер сайҡау. Балалар, йәйендә генә йөҙөгөҙ.*

ЙӘЙЕН IV (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуы аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-юрматинцев.

ЙӘЙЕНКЕ (Р.: плоский и широкий; И.: flat and wide; Т.: yaygın, yayık) *с.*

Арҡырыға киң булып йәйелгән; киң. □ Плоский и широкий; раскидистый, развесистый. *Йәйенке һауыт. Ботаҡтары йәйенке ағас. Йәйенке танау.* ■ *Мырҙаш — бөкрөрәк айыу кәүҙәле, шаҙра табаҡ битле, кәгес танаулы, шағыр күҙле кеше, уның ҡуйы көрәк һаҡалы битен тағы йәйенке күрһәтә.* Д. Юлтый. *Ҡарама — йылалар ғаиләһенә ингән оҙонсараҡ япраҡлы, йәйенке ботаҡлы, ҡубырсып торған ҡытыршы ҡабыҡлы эре ағас.* Интернет селтәренән.

ЙӘЙЕНКЕЛЕК (йәйенкелеге) (Р.: развесистость; И.: state of being flat; Т.: yayvanlık) *и.*

Йәйенке булыу сифаты, хәле. □ Развесистость и раскидистость. *Ағастың йәйенкелеге. Танауҙың йәйенкелеге.*

ЙӘЙЕН-ҠЫШЫН (Р.: зимой и летом; И.: both in summer and winter; Т.: yazın ve kışın) *р.*

Йәй көнө лә, ҡыш көнө лә; йыл әйләнәһенә. □ Зимой и летом, круглый год. ■ *Кеше араһына сыҡҡан саҡта йәйен-ҡышын уның [Ҡотлояр мәзиндең] башында — йәшел түбәле ап-аҡ сәллә, өҫтөндә — салғыйҙары сүсәрә башлаған ҡыҙыл буйлы зәңгәр үзбәк сапаны .. булыр.* М. Кәрим. *[Азамат] йәйен-ҡышын йылҡы көтөп, атаһын уйлап, ауыр тормошто ҡәһәрләп йөрөгән.* Ә. Чаныш.

ЙӘЙЕНЛЕК (йәйенлеге) (Р.: жерлица; подпуск (крючок на сома); И.: fish hook for a sheatfish; Т.: yayın için kancalı uç) *и.*

Ем ҡуйып йәйен тота торған ҡорал. □ Жерлица; подпуск (крючок на сома). *Йәйенлек һалыу. Йәйенлек ҡороу.*

ЙӘЙЕҢКЕ САБАҠ (сабағы) (Р.: лещ; И.: bream; Т.: çapak) *и. зоол. диал.*

Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған эре аҡ тәңкәле, яҫы, сөсө һыу балығы; ҡорбан балыҡ. □ Лещ (лат. *Abramis brama*). *Йәйеңке сабаҡ тотоу. Йәйеңке сабаҡ үрсетеү.*

ЙӘЙЕП ЕБӘРЕҮ (йәйеп ебәр-) (Р.: распростереть; И.: spread out; Т.: yaymak) *ҡ.*

1. Ян-яҡҡа һуҙып ебәреү. □ Распростереть, разметать, простирать, свободно раскинуть в разные стороны. *Ҡанаттарҙы йәйеп ебәреү.* ■ *Аҡмал көтөлмәгән һорауҙан өнһөҙ ҡалды, ҡулдарын йәйеп ебәрҙе, тик әйтерлек һүҙ тапманы.* Б. Рафиҡов.

2. *Ниҙеңдер* өҫтөнә таратып, тағатып һалыу. □ Раскатать, раскрыть; накрыть. *Өҫтәлгә ашъяулыҡ йәйеп ебәреү.* ■ *Турысай ҙа һыуынып өлгөргәс, камытын һыпырып уны тышаны ла, тула сәкмәнен йәйеп ебәреп, тамаҡ алырға ултырҙы.* Т. Хәйбуллин. *Таҙ ашъяулыҡты йәйеп ебәргән, ашамлыҡ тауҙай өйөлөп киткән.* Әкиәттән.

3. Эште киң йәйелдереп ебәреү, ҡолас йәйеү *(эшкә).* □ Размахнуться, развёртывать. *Эште киң итеп йәйеп ебәреү.*

ЙӘЙЕТ (Р.: весеннее половодье; И.: spring flood; Т.: bahar taşkını) *и.*

Йәйелеп ятҡан яҙғы ташҡын һыу. □ Весеннее половодье. *Йәйет башланды. Йәйет йылға ярҙарын ағыҙып алып китте.*

ЙӘЙЕҮ (йәй-) [борондо төрки *йәд-* 'таратыу'] (Р.: раскидывать; И.: stretch out; Т.: yaymak) *ҡ.*

1. Ян-яҡҡа иркен итеп һуҙыу. □ Раскидывать, простирать. *Ҡанат йәйеү. Ҡолас йәйеү.* ■ *Ярһыған арыҫлан кеүек атылып барып, сейфҡа һалған күк папкалағы ҡағыҙҙарҙы алыу ниәте менән Нигмәтулла ҡулдарын йәйҙе.* Я. Хамматов. *Тотош аҡтан кейенеп, билен көмөшлө ҡәмәр менән быуып ебәргән Аҙнагол, ҡоласын киң йәйеп, кәмәлә аяҡ үрә баҫып килә.* З. Биишева. *Агиҙелгә төшә яҙҙым, тотманың беләгемдән. Тамыр йәйгән гөлдәр кеүек, китмәнең йөрәгемдән.* Халыҡ йырынан. *Мине ҡосаҡларға торған кеүек, ҡолас йәйгән таныш имәндәр.* Р. Ниғмәти.

2. Йоҡа, киң нәмәне тағатыу; яҙыу. □ Развёртывать, раскрывать *(свёрнутое, сложенное). Төрөлгән ҡағыҙҙы йәйеп һалыу. Келәм йәйеү. Балаҫ йәйеү. Таратып йәйеү.* ■ *Әсәйем ашъяулыҡ йәйеп, ашарға ултыртып йөрөй.* Н. Мусин. *Йәмле өҫтәл өҫтөнә йәйгән матур аҡ эскәтер, эскәтер өҫтөндә ҡоймаҡтар нәфис еҫ еҫкәтер.* Ш. Бабич. *[Өлкән агроном менән Ғәҙел] колхоздың баҫыуҙар картаһын алдарына йәйеп һалғандар.* Ғ. Лоҡманов.

3. Ятыр йәки ултырыр өсөн аҫҡа түшәү. □ Стлать, стелить, расстилать, устилать, застилать. *Урын йәйеү. Түшәк йәйеү.* ■ *Аҫылбикә шунда уҡ Айымдың аяҡ аҫтына үҙ ҡулдары менән аҡ кейеҙ йәйҙе.* Ғ. Ибраһимов. *Урындыҡ өҫтөнә йәйгән алама кейеҙ өҫтөндә [Айбикәнең] атаһы һәр ваҡыт итек тегеп, итек ямап, бейма табанлап ултыра.* Һ. Дәүләтшина. ● *Йомшаҡ йәйә, ҡатыға ултырта.* Мәҡәл. *Йөрәк ашъяулыҡ түгел, һәр кем алдында йәйеп булмай.* Мәҡәл.

4. Ҡоршап, теҙеп һалыу, түшәү. □ Настилать. *Иҙән йәйеү. Түбәгә таҡта йәйеү.* ■ *Күперлә йәйелгән таҡталар менән ошо арҡыры урҙалар араһында ике метр самаһы ара бар.* Н. Мусин. *Аҡ асфальт йәйәләрме ни — урамдарға аҡ ҡар яуа.* Б. Бикбай. *Һуңғы йылдарын ремонтсылар бригадаһында эшләп (фатирҙар ремонтлаусылар, паркет йәйҙеләр, обой йәбештерҙеләр), Сәмиғ пенсияға сыҡты.* Т. Ғиниәтуллин.

5. Тәгәрләтеп йоҡартыу. □ Раскатывать. *Туҡмас йәйеү. Ҡамыр йәйеү. Кейеҙ йәйеү.* ■ *[Хәмдиә] самауыр алып бара, шәшкеләр, туҫтаҡ, ҡалаҡтар ташый. Һалма баҫа, һалма йәйә, ҡайта һалып, Гөлйөҙөмгә ашығып шыбырлап хәбәр итеп тора.* Һ. Дәүләтшина.

6. Йоҡа итеп таратыу. □ Тонко разложить. *Ҡаҡ йәйеү. Ҡорот йәйеү.* ■ *Гөлйөҙөм туҡмас таҡтаһын алып сығып ҡорот йәйергә әҙерләнде.* Һ. Дәүләтшина. *Алма иҙелмәһен, 5—7 миллиметрлыҡ ҡалынлыҡта йәйеп, май һөртөлгән йә пергамент ҡағыҙ өҫтөнә һылап, ҡалайға һалып киптерергә ҡуйырға.* «Йәшлек», 23 август 2011.

7. Киптереү өсөн таратып һалыу, тағатып элеү. □ Раскидывать, развешивать. *Кер йәйеү. Бесән йәйеү. Иген өйөмөн йәйеү.* ■ *Сейәле майҙы әҙерләү ябай ғына. Иң алда сейәне, таҙартып, һалҡын һыуҙа йыуып, кран аҫтында сайҙырып, ашъяулыҡҡа йәйеп һалып һурыҡтырағың.* «Башҡортостан», 7 октябрь 2011.

8. Төрлө ергә, ҙур майҙанға күсеү, үрсеп таралыу. □ Размножаться, появляться в большом количестве. ■ *Торна, өйрәк, ҡыр ҡаҙҙар, туғаҙаҡ менән сел, ҡорҙар бала сығарып, түл йәйеп, балалары ҡош бул[ған].* Ҡобайырҙан. *Байтаҡ йылдар уҙған һуң, Һомай Уралын һағынған: уның юлы буйынан осоп йөрөп, талпынған, тауға килеп, ҡаяла Уралды уйлап, моң сәскән, аҡҡош булып түл йәйеп, аҡҡош тыуын үрсеткән.* «Урал батыр». *Ай, Уралым, Уралым — ил һаҡлаған ҡоралым! Ятып ҡалған төнөң бар, балҡып янған көнөң бар, мең йыл йәйгән түлең бар, түл йәйҙергән телең бар.* Р. Ғарипов.

ЙӘЙ ЙӨРӨМ (Р.: нагульный; И.: fattening; Т.: yaz serbest bırakılan mal) *с.*

Йәй буйы иркендә йөрөгән. □ Нагульный *(о скотине)*, летнего нагула. *Йәй йөрөм мал. Йәй йөрөм ат.*

ЙӘЙКӘ (Р.: блюдце; И.: saucer; Т.: fincan tabağı) *и. диал.*

Сәй эсә торған парлы һауыттың аҫҡа ҡуйылған йәйпәк өлөшө; сынаяҡ аҫты. □ Блюдце. *Йәйкәгә һалып эсеү. Йәйкәгә һалып һыуытыу.*

ЙӘЙЛЕК (йәйлеге) *и. кар.* **йәйгелек.** ■ *Үҙҙәренә тормош теләгән, йылы ҡояш яҡтыһынан үбелеүҙе өмөт иткән үҫемлектәр баш күтәреп үҫергә, йәйлек ғүмерҙәренә эйә булырға маташалар.* А. Таһиров.

ЙӘЙЛЕКТӘ *р. диал. кар.* **йәйгеһен.** *Йәйлектә барыу. Йәйлектә ҡайтыу. Йәйлектә осрашырға һөйләшеү.*

ЙӘЙЛӘП АЛЫУ (йәйләп ал-) (Р.: залетовать; И.: spend the summer; Т.: yazlamak) *ҡ.*

Йәйләүҙә бер аҙ йәйләп китеү. □ Залетовать *(некоторое время). Йәйләүҙә йәйләп алыу.*

ЙӘЙЛӘП КИТЕҮ (йәйләп кит-) (Р.: залетовать; И.: spend the summer; Т.: yazı bir yerde geçirmek) *ҡ.*

Йәйләүҙә йәйҙе үткәреп ҡайтыу. □ Залетовать. *Йәйләүҙә йәйләп китеү.*

ЙӘЙЛӘП ЯТЫУ (йәйләп ят-) (Р.: летовать; И.: live on a summer camp; Т.: yaylamak) *ҡ.*

Йәйләүҙә тороу. □ Летовать, жить в летовке. *Хисам ғаиләһе менән йәйләп ята.* ■ *Имештер, бәшнәктәр ҡайҙалыр Алатау яғынан, аҙаҡ диңгеҙ буйы тигән, үткенселәр өмөткә сакматаш һуктырған ер-һыуға күсә килә ятҡанда, оҙаҡ ҡына Урал тауы итәгендә йәйләп ятҡандар, йәйләп алғандар.* Әкиәттән.

ЙӘЙЛӘҮ I (йәйлә-) (Р.: летовать; И.: to graze (one's flock) on a mountain pasture; Т.: yaylamak) *ҡ.*

Ҡайҙалыр йәй тороу. □ Летовать, жить на летовке, жить на летних пастбищах. *Йәйләп йөрөү. Ауылда йәйләү.* ■ *Был ерҙәрҙә сарыш ырыуы йәйләй икән.* Ә. Хәкимов. ● *Сүлдә йөрөгән ҡуңыр ҡаҙ күл ҡәҙерен белмәҫ, күлдә йөрөгән ҡара өйрәк сүл ҡәҙерен белмәҫ, тауҙа йәйләп, ташта үҫкән ил ҡәҙерен белмәҫ.* Мәҡәл.

ЙӘЙЛӘҮ II [төрки телдәренән] (Р.: летовка, джейлау; И.: tableland; Т.: yayla) *и. этн.*

1. *тар.* Ауыл менән ҡырға күсеп, йәй тора торған урын. □ Летовка, джейлау *(летняя стоянка кочевника). Йәйләүгә сығыу. Йәйләүгә йыйыныу.* ■ *Арыҫлан бер ыңғай улының йәйләүенә лә һуғылырға уйланы.* Ғ. Ибраһимов. *Аҡташ йәйләүенең өҫтө лә, аҫты ла лысма һыуға әйләнгән.* К. Мәргән. *Яланда унлап тирмә — башҡорт йәйләүе.* Ғ. Хәйри. *Элегерәк ялан яҡ ҡаҙаҡтары малтыуарҙары менән Урал буйҙарына йәйләүгә килер булғандар.* Ғ. Аллаяров. *[Һәүбән] йәйләүгә ҡайтһа, бөтә тирмә аҡтарылып бөткән, бала-саға, ҡарт-ҡоро, әбей-һәбей, бисә-сәсә, ҡыҙ-ҡыркын — барыһы ла бергә йыйылып, аптырашып һөйләшеп торалар, ти.* «Аҡбуҙат». ● *Ағайым өйө — аҡ йәйләү, энем өйө — өң төбө.* Мәҡәл. *Йәйләүгә туғай яҡшы, кәңәшкә ағай яҡшы.* Мәҡәл. *Һаҙлыҡ аҫты йәйләүгә ярамай, ҡыҫҡа еп бәйләүгә ярамай.* Мәҡәл.

2. Ферма малын аҫрай торған йәйге урын. □ Летнее пастбище. ■ *Күп хужалыҡтар малдарҙы йәйләүгә сығара башланы.* Т. Ғарипова. *[Сабир:] Йәйләү яғынан йөрөп килһәк, Түбылғы буйында сәй ҡайнатырбыҙ.* Д. Шәрәфетдинов. *Мәликә йәйләүен бөтә һыйыр һауыусылар өсөн дә тәжрибә мәктәбе итеп ҡуйыу уйы тыуҙы Әхнәфтә.* Д. Исламов.

ЙӘЙЛӘҮ III (Р.: противень; И.: baking tray; Т.: fırın tepsisi) *и. диал.*

Икмәк бешереү өсөн киң итеп дүрткелләп эшләнгән тимер таба. □ Противень; лист для выпечки хлебных изделий. *Йәйләүгә йәйеп һалыу. Йәйләүҙә икмәк бешереү.*

ЙӘЙЛӘҮ IV (Р.: летняя кухня; И.: outdoor kitchen; Т.: летняя кухня) *и. диал.*

Йәй көнө аш бешерә торған асыҡ урын; тышҡы усаҡ. □ Летняя кухня *(под открытым небом). Йәйләүҙә аш бешереү. Йәйләүҙә һыу йылытыу. Йәйләүҙе йыйыштырыу.*

ЙӘЙЛӘҮЕК (йәйләүеге) *и. кар.* **йәйләүлек.** ■ *Йәйләүектәр, һунар биләмәләре, солоҡлоҡтар ҡыҫылды; әлегәсә ишетелмәгән әллә ниндәй төрлө һалымдар һалынды.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘЙЛӘҮЕС (Р.: ягнёнок или козлёнок, родившийся летом; И.: kid, ewe, lamb born in summer; Т.: yazın doğmuş kuzu) *и.*

Йәй тыуған бәрәс. □ Ягнёнок или козлёнок, родившийся летом. ■ *[Йомабикә:] Мәхмүт анау төпкө өйөнә инеп йылынып ултырған арала, юрғаһы һарайҙы ярып сыҡҡан да бер йәйләүесте тибеп үлтергән, шуның өсөн бахырҙы һыу эскеһеҙ итеп тыҡмағандар.* Т. Хәйбуллин.

ЙӘЙЛӘҮЕСЛӘҮ (йәйләүеслә-) (Р.: ягниться или котиться летом; И.: lamb in summer; Т.: yazın kuzulamak) *ҡ.*

Йәй бәрәсләү. □ Ягниться или котиться летом *(о козе, овце). Һарыҡтар йәйләүесләй.*

ЙӘЙЛӘҮ ҠЫНАҺЫ (Р.: бальзамин; И.: balsamine; Т.: kınaçiçeği) *и. бот. диал.*

Ҡына гөлө. □ Бальзамин. *Йәйләү ҡынаһы орлоғо. Йәйләү ҡынаһын сәсеү.*

ЙӘЙЛӘҮЛЕК (йәйләүлеге) (Р.: место летовки; И.: place for Bashkir summer camp; Т.: yayla) *и.*

Йәйләүгә сыға торған урын. □ Место летовки; летовля, летовище, летник. ■ *[Кәбәк:] Әптекәй, Аҡмәмбәт еҙнәмдәр менән дүртәүләп, Көтөргә Таштуғайҙан йәйләүлек бирәйек тә ырыуынан ситләтәйек.* М. Буранғолов. *Ҡайтышлай ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың Бөгөнбай батырына һуғылырға ине уйҙары [Алдарҙарҙың]. Ләкин батырҙың йәйләүлектәренә етеп, Жим йылғаһы буйына ҡуна тыҡтаған ерҙәрендә юл баҫҡынсыларға юлыҡтылар.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘЙМӘ I (Р.: лепёшка; И.: flat cake; Т.: lavaş) *и.*

1. *кул.* Ҡамырҙы йәйеп, табала бешереп алынған икмәк; көлсә. □ Лепёшка. *Йәймә бешереү.*

2. *этн.* Йоҡа ғына итеп, майға йәки һурпаға бешереп, мәрхүмдең өсөн, етеһен, ҡырҡын уҡытҡанда ҡуя торған ашамлыҡ. □ Тонко раскатанное тесто из пшеничной муки *(ритуальное блюдо, выпекаемое на третьины, седьмины, сороковины). Йәймәгә саҡырыу.* ■ *Өсөнә өс йәймә, етеһенә ете йәймә бешереү йолаһы бар.* Башҡорт мифологияһынан.

3. Йоҡа итеп йәйелгән нәмә. □ Тонко раскатанный лист *чего-л.* ■ *Ҡорбанбикә еңгә осормалағы йөн араһына йәшергән ҡарағат ҡағынан бер оло йәймә алып бирҙе.* М. Кәрим. *Бына ҡаҙан тултырып ит һалынды, бишалты йәймә һалма йәйелде, тултырма, йыуаса, ләүәш, ҡумаҫ — береһе лә ҡалмай бешерелде.* З. Биишева.

ЙӘЙМӘ II (Р.: покрывало; И.: bedspread; Т.: örtü, çarşaf) *и.*

1. Өҫтән йәйеп, ҡаплай торған нәмә; япма. □ Покрывало; скатерть. ■ *Бәләкәй өҫтәлдәргә сигелгән йәймәләр йәйелгән, өҫтөнә диңгеҙҙең матур тәлмәрйен ҡабырсаҡтары ҡуйылған.* А. Таһиров.

2. Түшәк өҫтөнән йәйә торған йоҡа аҡ нәмә. □ Простыня. *Түшәккә йәймә йәйеү.* ■ *Рәттән теҙелеп киткән бер төҫлө караваттарҙың өҫтәре бер төҫлө һоро одеялдар менән ябылып ҡуйылғандар ҙа, уларҙың баш остары ҡайтарылып, уның аҫтындағы аҡ йәймәләре менән ҡымтылып ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Азат үҙе генә һуҙендә ныҡ торҙо: кейәү менән килен өсөн сымылдыҡлы караватҡа түшәлгән йәймәгә, ҡушлап һалынған эре биҙәкле сатин тышлы мендәрҙәргә дүртенсе тәүлектә генә килеп башын һалды.* Т. Ғарипова.

ЙӘЙМӘЛЕК (йәймәлеге) (Р.: простынное полотно; И.: sheeting; Т.: çarşaflık) *и.*

Йәймәгә яраҡлы туҡыма. □ Простынное полотно. *Йәймәлек алыу. Йәймәлек ҡырҡыу.*

ЙӘЙНӘҮ (йәйнә-) *ҡ. диал. ҡар.* **йәйрәү**. *Йәйнәп ултырып сәй эсеү. Йәйнәп ятыу.*

ЙӘЙПЕ I *с. диал.*

1. *ҡар.* **йәйпәк 1.** *Йәйпе ҡаҙан. Йәйпе һауыт.*

2. *ҡар.* **йәйенке.** ■ *Тека тауҙың аҫтында иҫәпһеҙ ҙур ҡуңыр йылан һымаҡ борғоланып һуҙылып киткән киң, йәйпе, салҡып ағып ятҡан матур йылға.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӘЙПЕ II (Р.: блюдце; И.: saucer; Т.: fincan tabağı) *и. диал.*

Сәй эсә торған парлы һауыттың аҫҡа ҡуйылған йәйпәк өлөшө; сынаяҡ аҫты. □ Блюдце. ■ *Хужа минән иҫәп-хисап алғанда стакан ватҡан өсөн ете тин, йәйпе ватҡан өсөн алты тин тотоп алып ҡалды.* Ғ. Гүмәр. *Атай кеше Өфөләге Гүзәл ҡыҙы алып ҡайтҡан кәнфитте ҡабынан алып, Байрамғолдоң сынаяҡ йәйпеһенә һалды.* Ф. Янышев.

ЙӘЙПЕС *с. диал. ҡар.* **йәйпәк 1.** *Йәйпес сеүәтә.*

ЙӘЙПӘК I (Р.: плоский; И.: flat; shallow; Т.: yalpık, yayvan) *с.*

1. Киң, йәйенке ауыҙлы *(һауытҡа ҡарата).* □ Плоский, неглубокий. *Йәйпәк һауыт. Йәйпәк булыу.* ■ *Йәйпәк тәрилкәгә ҡат-ҡат өйөлгән майлы ҡабартма шаҡмаҡлы ашъяулыҡ уртаһынан килбәтле урын биләй.* Й. Солтанов.

2. Киң, ялпаҡ булып йәйелгән. □ Плоский. ■ *Йонсоу ҡиәфәтле кеше, Ҡаскынтау итәгендә туҡтап, йәйпәк ташҡа ултырҙы ла ҡарашын күп тигәндә бер саҡрымдағы ауылға төбәне.* Ә. Хәкимов. *Буфетсы асыҡ сырайлы, йәйпәгерәк битле .. бер ҡыҙ ине.* Б. Бикбай. *Йылғаның йәйелеп киткән еренә Ихсанбай йәйпәк таштар елгәрә.* Т. Ғарипова.

ЙӘЙПӘК II (йәйпәге) (Р.: плошка; И.: earthen saucer; Т.: çanak) *и.*

Киң ауыҙлы һай һауыт. □ Плошка. *Йәйпәк менән ҡымыҙ эсеү. Йәйпәккә ҡойоп биреү.*

ЙӘЙПӘК БӘШМӘК (бәшмәге) (Р.: блюдцевик; И.: mushroom species; Т.: fincanmantar) *и.*

Ылыҫлы һәм япраҡлы урмандарҙа үҫеүсе ҡыҫҡа һабаҡлы, ялпаҡ ҡалпаҡлы ашай торған бәшмәк. □ Блюдцевик (лат. *Disciotis*). *Йәйпәк бәшмәк йыйыу. Йәйпәк бәшмәкте ҡурыу.*

ЙӘЙПӘКЛӘНДЕРЕҮ (йәйпәкләндер-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

Йәйпәккә (I, 2) әйләндереү, йәйпәк итеү; йәйпәкләү. □ Сплющивать, делать плоским. *Йәйпәкләндереп ҡуйыу.*

ЙӘЙПӘКЛӘНЕҮ (йәйпәклән-) (Р.: становиться плоским; И.: become flat; Т.: yassılanmak) *ҡ.*

Йәйпәккә (I, 2) әйләнеү. □ Сплющиваться, становиться плоским. *Танауы йәйпәкләнгән.* ■ *Таш быуатта йәшәгән боронғолар һуғыуҙан йәйпәкләнеп нығынған, әсе утта йомшарған таштар булыуын да белгән.* М.Моталов.

ЙӘЙПӘКЛӘҮ (йәйпәклә-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

Йәйпәк (I, 2) итеү. □ Сплющивать, делать плоским. *Балсыҡты йәйпәкләү.* ■ *Ҡуш ҡайындан метр ярым ерҙә ҡаҡ имән бағана, уның бер яғы йәйпәкләп юнылған да шыма итеп йышылған.* Б. Хәсән.

ЙӘЙРӘ (Р.: дикобраз; И.: Old World porcupine; Т.: oklu kirpigiller) *и. зоол.*

Арҡаһы, ҡабырғаһы бик оҙон энәләр менән ҡапланған кимереүсе йәнлек. □ Дикобраз (лат. *Hystricidae*). *Йәйрә энәләре. Һинд йәйрәһе.*

ЙӘЙРӘН (Р.: джейран; И.: Persian gazelle; Т.: İran ceylanı) *и. зоол.*

Алғы һәм Урта Азияның сүллек һәм ярым сүллектәрендә, шулай уҡ Кавказ артында һәм Ҡаҙағстанда осраған илек төрөнә ҡараған хайуан. □ Джейран (лат. *Gazella subgutturosa*). ■ *Ул [юлбарыҫ] туҡ булғандыр: йәй буйы көтөүе менән һыулауға килгән йәйрәндәр – уға еңел табыш.* «Ағиҙел», № 6, 2011.

ЙӘЙРӘП ЯТЫУ (йәйрәп ят-) (Р.: простираться; И.: spread; Т.: uzanmak) *ҡ.*

Ҙур майҙанды биләү, тирә-яҡҡа йәйелеү. □ Простираться, раскидываться. ■ *Алтын диңгеҙ йәйрәп ята ҡаршыла, күҙҙәр, күҙҙәр башаҡтарға тартыла.* Р. Назаров. *Йәйрәп ятҡан ҡеүәтле йылғаның буйынан йөҙҙәрсә урындан туҡтауһыҙ төтөн күтәрелә, нимәләр яна, нимәләр шартлай.* Р. Шәкүр.

ЙӘЙРӘТЕҮ (йәйрәт-) (Р.: дать свободно расположиться; И.: let spread; Т.: yayıldırmak) *ҡ.*

1. Иркен, киң итеү, киң ерҙе биләтеү; йәйелдереү. □ Дать свободно располагаться, чувствовать приволье. *Малды йәйрәтеп ебәреү.*

2. *күсм.* Иркенлек, рәхәтлек биреү, киләндереү, иркенләтеү. □ Делать с удовольствием; блаженствовать. *Йәйрәтеп йоҡлау. Йәйрәтеп ултырып сәй эсереү. Йәйрәтеп ултырып һөйләштереү.* ■ *Солтанов түңәрәк битен йәйрәтеп көлә.* Н. Мусин.

ЙӘЙРӘҮ (йәйрә-) (Р.: раскидываться; И.: spread out; Т.: yayılmak) *ҡ.*

1. Иркен, киң булыу; киң ерҙе биләү; йәйелеү. □ Раскидываться, простираться. *Йәйрәп үҫеү. Дала йәйрәп ята. Һыу баҫыуҙа йәйрәп ята.* ■ *Ағиҙелкәй көткән килер*

көнөн, ул теләгән йәйрәп ағырға. Р. Ниғмәти. *Көньяк-көнсығышта кырғыныше калмыктар ябырылып килә, ә төньякта оло Рәсәй биләмәләре йәйрәй.* «Ватандаш», № 1, 2012.

2. *күсм.* Иркенлек, рәхәтлек тойоу; кинәнеү, йәйелеү. □ В форме деепричастия на *-п* выражает чувство удовольствия, удовлетворения. *Йәйрәп ятып йоклау. Йәйрәп йөрөү. Йәйрәп ултырыу. Йәйрәп китеп эшләү.* ■ *Аҡһаҡалдар был юлы кыҫынып-кымтынып торманы. Йәйрәп ултырып, кымыҙ эстеләр, ихласланып һимеҙ һарык итен ашанылар.* Ә. Хәкимов. *Халыкка менеп йөрөргә, йәйрәп хәл йыйырға ҙур бер яман тау булған.* Эпостан.

ЙӘЙРӘШЕҮ (йәйрәш-) *к. урт. кар.* **йәйрәү 2.** *взаимн. от* **йәйрәү 2.** ■ *Мораҙым яуҙы таркатты, яуҙы йыйып, бер эште хан яуына аңлатты. Ике яу ҙа аңлашып, аттан төшөп йәйрәшеп, татлы ялға талыкты.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

ЙӘЙ СЕЛЛӘҺЕ *и. кар.* **йәйге селлә.**

ЙӘЙСӘН *и. кар.* **ләйсән.** ■ *«Йәйсән» һүҙен алайык. Исеменән ук күренеүенсә, ул йәйге, кояшлы ямғырҙы аңлата.* М. Ямалетдинов.

ЙӘЙТАШ *и. кар.* **йәй ташы.** ■ *Йәйташ ярҙамында ямғыр яуҙырып, ямғыр туктатып була.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘЙ ТАШЫ (Р.: дождевой камень; И.: rain stone; Т.: Yada Taşı) *и. миф.*

Халык ышаныуынса, һыу һипһәң йәки һуҡһаң, ямғыр яуҙыра торған тылсымлы таш. □ Дождевой камень, камень лета *(по поверью, имеет волшебную силу, помогает вызвать дождь).* ■ *XI быуатта ук төрөк ғалимы Мәхмүд Кашғари «Диван лөғәт әттөрөк» («Төрки һүҙҙәренә аңлатма») тигән хеҙмәтендә йәй ташы (ядаташ) тураһында яҙа: короло к вакытында кешеләр таштарҙы һыу менән йыуалар, туктамай ямғыр яуһа, таштарҙы һары май менән майлайҙар.* Интернет селтәренән. *Белорет районының Береш тигән ауылы янында йәй ташы бар.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘЙ ТӘҢРЕ (Р.: божество лета; И.: summer deity; Т.: Yaz Han, Yaz Tanrısı) *и. миф.*

Башҡорттарҙың ун ике тәңреһенең береһе. □ Божество лета *(одно из двенадцати божеств башкир).* ■ *Йәй тәңре менән бәйле ышаныуҙар исламғаса осорға барып тоташа.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘЙ ХУЖАҺЫ *и. миф. кар.* **йәй тәңре.**

ЙӘЙ ЭЙӘҺЕ *и. миф. кар.* **йәй тәңре.** ■ *Уларҙың [башкорттарҙың] кайһы берҙәре үҙенең ун ике эйәһе бар тип әйтә: кыш эйәһе, йәй эйәһе.* Картотека фондынан.

ЙӘЙӘ I [боронғо төрки *йа*] (Р.: лук; И.: bow; Т.: yay) *и.*

1. Уҡ атыу өсөн бөгөп кереш тарткан ҡорал, ян. □ Лук *(оружие для метания стрел в виде гибкой дуги, стянутой тетивой). Йәйә тартыу. Йәйә кереү. Йәйәнән атыу. Йәйә бөгөү.* ■ *[Акмал Етембайҙан] һыҙмаһын кире индертеп, йәйәһе менән ук корманын сығарттырҙы.* Б. Рафиков. *Егеттәр, йәйәләрҙән ыскындырылған уктарҙай, алға атылдылар.* Р. Низамов. *Егет риза булып алған да карттың һаҙағынан бер ук алып, йәйәһен киреп, керешен тартып караған.* «Алпамыша». ● *Ата алмаған йәйәһенән күрер.* Мәкәл. *Уғын аткас, йәйәһен йәшермә.* Мәкәл. *Һуғышка барған сукмарын онотҡан, яуға барған йәйәһен онотҡан.* Мәкәл. *Яман кешенән йәйә буйы булһа ла кас.* Мәкәл. *Яңғыҙҙың йәйәһе лә юғалыр, күмәктең уғы ла юғалмаҫ.* Мәкәл.

2. *миф.* Мифлаштырылған, сакраль һаҡлау функцияһына эйә булған ҡорал. □ Лук *(мифологизированный сакральный предмет; выполняет обережную функцию. В целях защиты новорождённого мальчика под его подушку кладут лук и стрелы).* ■ *Ир балаға йәйә, ук һалыу йолаһы бар.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘЙӘ II (Р.: скобка; И.: bracket; Т.: parantez) *и.*

Ярым түңәрәк йәки ярым квадрат рәүешендәге тыныш билдәһе. □ Скобка *(знак препинания). Түңәрәк йәйә. Квадрат йәйә. Фигуралы йәйә. Йәйә тышына сығарыу. Йәйә эсенә алыу. Йәйәне ябыу.* ■ *Текстарҙы әҙерләү барышында, һөйләмдәрҙең мәғәнәләренән сығып өҫтәлгән һүҙҙәр – квадрат,*

ә аңлатмалар һәм иҫкәрмәләр ябай йәйәләр эсенә алынды. Ғ. Ҡунафин.

ЙӘЙӘ III (Р.: крылья саней-розвальней; И.: sledge fender; Т.: kızağın kanatı) *и. диал.*

Сана терһәге. □ Крылья саней-розвальней. *Сана йәйәһе.*

ЙӘЙӘ БУЙЫ (Р.: длина лука; И.: bow's length; Т.: yay kadar mesafe) *и.*

Йәйәнең оҙонлоғо тиклем ер, арауыҡ. □ Расстояние, равное длине лука. ■ *Эй, китте, ти, эй, китте, ти, артына әйләнеп ҡараһа — йәйә буйы ер киткән, ти.* Әкиәттән.

ЙӘЙӘ КЕРЕШЕ (Р.: тетива; И.: bowstring; Т.: kiriş) *и.*

Уҡ-һаҙаҡтағы тарттырыусы бау. □ Тетива. *Йәйә керешен тартыу.*

ЙӘЙӘЛЕ (Р.: имеющий лук; И.: having a bow; Т.: yaylı) *и.*

1. Йәйәһе булған. □ Обладающий луком, имеющий лук.

2. Йәйә менән ҡоралланған. □ Вооруженный луком. *Йәйәле яугир.*

ЙӘЙӘЛӘНЕҮ (йәйәлән-) (Р.: принять форму лука; И.: adopt a bow form; Т.: yaylanmak) *ҡ.*

Йәйә формаһын алыу. □ Принять форму лука.

ЙӘЙӘСЕ (Р.: лучник; И.: bowman; Т.: tirendaz) *и.*

1. Йәйә менән ҡоралланған һуғышсы. □ Лучник. *Йәйәселәр дошманға уҡ яуҙырҙы.*

2. *спорт.* Йәйә атыу ярышында ҡатнашыусы спортсы. □ Лучник *(спортсмен). Йәйәселәр ярышы башланды. Йәйәсе дипломы менән бүләкләнеү.*

ЙӘЙӘҮ [боронғо төрки *йадаг*] (Р.: пешком; И.: on foot; Т.: yaya) *р.*

Үҙ аяғың менән атлап. □ Пешком. *Йәйәү барыу. Йәйәү йөрөү. Йәйәү китеү.* ■ *Зарлы Йософ унан ары йәйәү барҙы, ҡәрҙәштәренең яуыз уйын белеп алды.* «Ҡиссаи Йософ». *[Хашимдың] район үҙәгенән сыҡҡаны бирле йәйәү атлаған аяҡтарының балтырҙары тартышып-тартышып ҡуйҙы шул саҡ, табандары ла ут кеүек яна.* Т. Ғарипова. ● *Ас ҡалмаған аш ҡәҙерен белмәҫ, йәйәү йөрөмәгән ат ҡәҙерен белмәҫ.* Мәҡәл. *Сирле булып атҡа ултырып йөрөгәнсе, таҙа булып йәйәү йөрөгәнең артыҡ.* Мәҡәл. *Яман атҡа менгәнсе, йәйәү йөрө талғансы, яман ҡатын алғансы, буйҙаҡ йөрө ҡанғансы.* Мәҡәл.

♦ **Ҡара йәйәү** бөтөнләй атһыҙ. □ Безлошадный. *Ҡара йәйәү ҡалыу.* ■ *Атайымдың ҡара йәйәү интеккән сағы ине. Йәғни Ҡолағашҡа әле юҡ тигән һүҙ.* С. Кулибай. ● *Ҡарт атын маҡтаған кеше ҡара йәйәүгә ҡалған.* Әйтем.

ЙӘЙӘҮЛЕ I (Р.: пеший; И.: pedestrian; Т.: yaya) *с.*

1. Йәйәү барған, йәйәү йөрөгән. □ Пешеходный, пеший. *Йәйәүле кеше.* ■ *Юл буйынса һирәклән йәйәүле һәм һыбайлы юлсылар тап булдылар.* Б. Дим. ● *Йәйәүле ҡунаҡ тыныс йоҡлар.* Мәҡәл.

2. *хәрби.* Йәйәү хеҙмәт иткән. □ Пеший *(солдат, войско). Йәйәүле һалдат. Йәйәүле ғәскәр.* ■ *Дошман һуғышсылары, арттағы төп көстөң ҡасан килеп етеүен көтөп, һөжүмгә барыусы йәйәүле һалдаттарҙың өҫтөнә картечтар, уҡтар менән ҡурғаштар яуҙырырға тотондо.* Я. Хамматов.

ЙӘЙӘҮЛЕ II (Р.: пеший; И.: pedestrian; Т.: yaya) *и.*

1. Йәйәү барған, йәйәү йөрөгән кеше. □ Пеший, пешеход. ■ *Киң ялан уртаһынан һуҙылған ҡарлы юлдан бер йәйәүле атлай.* Ғ. Лоҡманов. *Йәйәүлеләрҙең ҡайһы берҙәре ары-бире һуғылды ла, өҫ-баштарын да сисеп тормай, һыуға ташланды.* Ә. Хәкимов. ● *Атлыға йәйәүле юл бирер.* Мәҡәл. *Йәйәүлегә янсыҡ та ауыр.* Мәҡәл. *Йәйәүленең аты арымай.* Мәҡәл. *Йәйәүленең ризығын һыбайлы ашаған.* Мәҡәл. *Йәйәүленең хәлен көтөүсенән һора.* Мәҡәл. *Яңғыҙҙың өнө сыҡмаҫ, йәйәүленең саңы сыҡмаҫ.* Мәҡәл.

2. *хәрби.* Йәйәү хеҙмәт итеүсе. □ Пехотинец. ■ *Йәйәүле, атлы, тупсы һәм башҡалар, сафтарҙы боҙмай ғына, тауыштынһыҙ килеп туҡтайҙар.* Б. Хәсән.

ЙӘЙӘҮЛЕ АДВОКАТ (Р.: общественный адвокат; И.: public barrister; Т.: dava vekili) *и.*

Суд билдәләүе буйынса йәмәғәт ойошмаһы йәки коллективтың мәнфәғәттәрен

яҡлаусы кеше; йәмәғәт яҡлаусыһы. □ Общественный адвокат, защитник. *Йәйәүле адвокат булып эшләү. Йәйәүле адвокатҡа мөрәжәғәт итеү.*

ЙӘЙӘҮЛЕ БУРАН (Р.: позёмка; И.: blizzard accompanied by ground wind; Т.: tipi) *и.*

Өҫтән яумай, ҡар өҫтөнән йүгергән буран. □ Позёмка. ■ *Йәйәүле буран йүгерә-йүгерә, елдәрҙе ҡыуа-ҡыуа. Ғүмеркәйҙәр гөрләп уҙа, йәшәүҙән һуң кем туя?!* Йырҙан. *Был юлы ла шулай булды: төштән һуң яуа башлаған ҡар бер аҙҙан йәйәүле буранға күсте, тора-бара һепертмәгә әйләнде.* «Башҡортостан», 17 ғинуар 2012.

ЙӘЙӘҮЛЕ ҒӘСКӘР (Р.: пехота; И.: infantry; Т.: piyade) *и. хәрби.*

Ҡоралды көстәрҙең йәйәү хеҙмәт иткән төрө. □ Пешее войско, пехота. ■ *Юлсының тын алырлыҡ та хәле ҡалмай. Ярҙам итерҙәй берәй йән эйәһе юҡмы икән, тип, тирә-яғына күҙ һала. Ҡапыл йәйәүле ғәскәрҙең биш һалдаты күренә.* «Йәшлек», 21 июль 2009.

ЙӘЙӘҮЛЕК (**йәйәүлеге**) (Р.: хождение пешком; И.: being pedestrian; Т.: yayalık) *и.*

Йәйәү булыу хәле. □ Хождение пешком. ● *Ат ҡәҙерен белмәгәнгә йәйәүлек бирер яҙаһын, аш ҡәҙерен белмәгәнгә аслыҡ бирер яҙаһын.* Мәҡәл.

ЙӘЙӘҮЛЕ ҠОРТ (Р.: пешая пчела; И.: sick bee; Т.: malul arı) *и. умарт.*

Ҡанаттары ныҡынып етмәгән йәш ҡорт йәки төрлө ауырыуҙан ҡанаттары зарарланған зәғиф ҡорт. □ Пешая пчела.

ЙӘЙӘҮЛЕ-ЯЛПЫЛЫ (Р.: пеший; И.: pedestrian; Т.: yaya) *с.*

Йәйәүләп килгән. □ Пеший. *Йәйәүле-ялпылы кешеләр.* ■ *[Таптыбикә:] Ҡоҙағый, көнө-төнө ятмай тигәндәй, йәйәүле-ялпылы килеп, хәлем дә, аяғым да ҡалмағас, ҡайҙа барайым инде, килеп йығылдым инде.* М. Буранғолов. *Ләкин йәйәүле-ялпылы, туҡтауһыҙ эш менән үткән ғүмер, уның [Миңлебайҙың] һаҡалына ҡырау төшөрһә лә, йөрәгенә ҡырау төшөрә алмаған.* С. Ҡудаш.

ЙӘЙӘҮЛӘТЕЛЕҮ (**йәйәүләтел-**) *ҡ. төш. ҡар.* **йәйәүләтеү 1.** *страд. от* **йәйәүләтеү 1.** ■ *Йылға ярында йәйәүләтелгән эскадрондар ята.* Ә. Ихсан.

ЙӘЙӘҮЛӘТЕҮ (**йәйәүләт-**) (Р.: отправить пешком; И.: send on foot; Т.: yaya gitmek) *ҡ.*

1. Йәйәү атлатыу. □ Отправить пешком. *Йәйәүләтеп ебәреү.* ■ *[Немецтар] иҫән ҡалған биш-алты йөҙ әсирҙе иһә йәйәүләтеп Дахау тигән лагерға алып киттеләр.* Ә. Хәкимов. *Дамелла икәнегеҙ иҫебеҙҙә, фәҡирҙе лә алығыҙ иҫегеҙгә. Аҡрын, йәйәүләтеп, артҡа төштөк, Аҡмулла — фәлән-төгән, тиһәгеҙ ҙә.* М. Аҡмулла.

2. *диал. ҡар.* **кинәнеү 2.** *Йәйәүләтеп ултырып сәй эсеү.*

ЙӘЙӘҮЛӘТӘ *р. ҡар.* **йәйәү.** *Йәйәүләтә йөрөү. Йәйәүләтә барып ҡайтыу.*

ЙӘЙӘҮЛӘҮ (**йәйәүлә-**) (Р.: идти пешком; И.: walk; Т.: yaya gitmek) *ҡ.*

Йәйәү атлау. □ Идти пешком, топать. *Йәйәүләп китеү. Йәйәүләп үтеү. Өс саҡрым йәйәүләү.* ■ *Тороу түгел, бармаҡты ла ҡыбырлатҡы килмәй. Сабынлыҡҡа йәйәүләп барырға, көн буйы тирләп-бешеп бесән йыйырға, унан арыған көйө тағы һәлпәнләп ҡайтырға.* Н. Мусин. *Йәйәүләргә тура килгәс нишләрһегеҙ икән, тип битараф ҡына уйлап ҡуйҙы ул [ҡарт].* Б. Рафиҡов. *Ҡырҡатар ҡатынды эйәртә лә, йәйәүләп, ҡайныһына китә.* Әкиәттән.

ЙӘЙӘҮЛӘШЕП (Р.: пешком; И.: on foot; Т.: yaya) *р.*

Йәйәүләп бергә. □ Пешком. *Йәйәүләшеп ҡайтыу. Йәйәүләшеп барыу.* ■ *Улар [Айбулаттар] бер аҙ кәңәшләшкеләр ҙә, Алтынбайҙың бойҙайлы тоҡтарын өс-дүрт йөккә бүлеп тейәп, .. үҙҙәре йөктәре янында йәйәүләшеп, ҡалаға үрләй башланылар.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘКИ |фарс. یکی| (Р.: либо; И.: or; Т.: veya) *терк.*

Мәғәнә яғынан береһен береһе алмаштырған ике һөйләм йәки һөйләм киҫәген алмаштырып теркәү өсөн ҡулланыла; йәиһә. □ *Союз разд.* Либо, или. *Бөгөн йәки иртәгә. Ул йәки мин.* ■ *Икенсе отряд Ҡаҙаҡкол тирәһендә, өсөнсөһө Тирлән йәки Уразай ауылында булырға тейеш.* Я. Хамматов. *Һуғым малын бысаҡ менән салыу йәки бысаҡлау башҡорттарға, һис шикһеҙ, һуңыраҡ ингән бер йола булып һанала.* Ж. Ке-

йекбаев. *[Флүрә] ҡай саҡ Вил Ваһапович теге йәки был һүҙҙең мәғәнәһен аңлатҡанда йылмая.* Ш. Хажиәхмәтов.

ЙӘКМӘ *и. диал. ҡар.* **йәмкә.** *Йәкмә менән болғау.*

ЙӘКҮН [ғәр. يكون 'булыу, булмыш'] (Р.: итог; И.: result; Т.: sonuç) *и. иҫк.*

Йомғаҡ, һөҙомтә. □ Итог, вывод. *Йәкүн яһау. Эштең йәкүне.* ■ *Мазлумов бығаса әйткәндәренә йәкүн яһағандай һөйләп китте.* Г. Ғүмәр.

ЙӘКШӘМБЕ [фарс. يكشنبه] (Р.: воскресенье; И.: Sunday; Т.: Pazar (günü)) *и.*

Аҙнаның һуңғы, етенсе көнө; дөйөм ял итеү көнө. □ Воскресенье. / Воскресный. *Йәкшәмбе көн. Йәкшәмбегә ҡайтыу. Йәкшәмбе килеп етте.* ■ *Һуңғы ваҡытта христиандарҙы дин байрамдарында, ябай йәкшәмбе көндәрендә лә сиркәүгә барырға, хәйер йыйып ҡайтырға ысынлап сығара башланылар.* Б. Рафиҡов. *Йәкшәмбе көн булғанлыҡтан, урамда халыҡ ҡайнай.* Г. Хәйри. *Үткән йәкшәмбелә поезда уҡ башында ярала биреп ҡуйған ниәте [Дилбәргә] өс көн буйы тынғы бирмәне.* Г. Ғиззәтуллина. ● *Бер күҙе — шәмбегә, икенсеһе — йәкшәмбегә.* Мәҡәл.

ЙӘКӘЙ *и. диал. ҡар.* **иҙеү.**

ЙӘКӘЛ (Р.: щиколотка; И.: ankle; Т.: ayak bileği) *и.*

1. *диал.* Бәкәл, бәкәлсәй. □ Щиколотка, лодыжка; бабка. *Йәкәл быуыны.*

2. Уйын өсөн файҙаланылған һөйәк. □ Бабка *(кость для игры).* ■ *Йәкәл, туп, ҡасышлы уйындары малайҙарҙы туйҙырып бөттөләр инде. Ә ҡармаҡҡа йөрөргә иртәрәк әле.* Х. Мохтар. *Ғога кеҫәһенән йәкәлен сығарып, ҡапҡаға һуға башланы.* Й. Мостафин. *Ашығаяҡ, йәкәл уйнай икән, ул [Әмин] ота, мәрәйгә атһа — ул мәргән.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘКӘЛБАШ *с. диал. ҡар.* **бәйләнсек.** *Йәкәлбаш кеше.*

ЙӘЛ I [рус. *жаль*] (Р.: жаль; И.: it is a pity; Т.: yazık) *р. хәб. функц.*

1. Әсенеү, һыҙланыу, үкенеү, аяу тойғоһон белдерә. □ Жаль, жалко. *Йәл булыу. Йәл түгел.* ■ *Таңғы аһәң, киске моңғәм... Барыһы үтә, барыһы йәл — яңырып гел килһә лә ул, юҡ, туҡталмай гүзәл мәл.* Х. Назар. *Һәр ваҡытта йыйнаҡ, таҙа, ыҡсым тип танылған был «һары әбей»ҙең былай туҙынып китеүе Гөлйөҙөмгә бик йәл тойолдо.* Һ. Дәүләтшина. *Мәҙинә ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарған Ғәлимәгә күтәрелеп ҡараны: йәл уға, йәл әхирәте.* Т. Ғарипова.

2. *Ниҙәләр* бирергә, исраф итергә ҡыҙғаныу тойғоһон белдерә. □ Жаль, жалко. *Түккән көс йәл. Үткән ғүмер йәл.* ■ *[Айсыуаҡ:] Минең һуңғы батырлығым ил аҙаматтарының һәләк булыуына сәбәп булған икән, уға гөнаһлы мин. Талашмағыҙ, күбәләктәй йәнем илдең берлеге өсөн йәл түгел.* М. Буранғолов. *Үҙебеҙҙең башҡорт ғәскәренә бер ни ҙә йәл түгел, тип Ғарифулла бай бер өйөр йылҡыһын бүләк иткән, имеш.* М. Хужин. *Кәкүк кенә саҡырһа, яҙҙар була, йәш ғүмерҙең үтеүе йәл була.* Халыҡ йырынан. ● *Кеше малы мал түгел, ата малы йәл түгел.* Мәҡәл. *Ҡаҙ өсөн тауыҡ йәл түгел.* Мәҡәл. *Һөймәгән йәр йәр түгел, ташлаһаң да, йәл түгел.* Мәҡәл.

ЙӘЛ II (Р.: жалкий; И.: pitiful; Т.: acınacak) *с.*

Ҡыҙғаныу тойғоһо уятҡан. □ Жалкий. *Йәл кеше. Йәл күренеш. Йәл тормош. Йәл ваҡиға.*

ЙӘЛБЕР-ЙӨЛБӨР (Р.: подражание лёгкому колебанию предмета; И.: imitation word; Т.: tir tir) *оҡш.*

Ваҡ-ваҡ ҡына, еңел генә һелкенгәнде белдергән һүҙ *(йоҡа нәмәгә ҡарата).* □ Подражание лёгкому колебанию предмета. *Йәлбер-йөлбөр итеү. Йәлбер-йөлбөр килеү.*

ЙӘЛБЕРСӘК (йәлберсәге) (Р.: мелкие оборки; И.: small frill; Т.: farbala) *и. этн. диал.*

Итәктәге ваҡ ҡатмар. □ Мелкие оборки, воланы. *Йәлберсәк ҡуйып тегеү.*

ЙӘЛДӘК I (Р.: изворотливый; И.: dodgy; Т.: açıkgöz) *с.*

1. Хәйләле, йылғыр, алдай торған. □ Изворотливый; увёртливый, ловкий.

2. Ялҡау. □ Ленивый. *Йәлдәк әҙәм.* ■ *[Фәхри:] Фермаға күҙ һалып ҡайтырға кәрәк, ул йәлдәктәргә ышаныс юҡ.* Б. Бикбай.

3. Сибек, көсһөҙ. □ Слабый. *Бигерәк йәлдәк ат еккәнһең бит.*

ЙӘЛДӘК II (йәлдәге) *и. диал. кар.* **йәлдәү.**

ЙӘЛДӘК III (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of a Bashkir clan name; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында йәшәгән башҡорт ырыуының исеме. □ Название одного из рода башкир, проживающих в северо-западной части Башкортостана. ■ *1937 йылдарҙа Благовещен ерҙәренә Бүздәк районы йәлдәк ҡәбиләһе башҡорттары ла күсеп килә. Әйткәндәй, йәлдәк башҡорттары – иң көслө ҡәбиләләрҙең береһе.* «Йәйғор», 17 июнь 2010.

ЙӘЛДӘКЛӘНЕҮ (йәлдәклән-) (Р.: изворачиваться; И.: dodge; T.: açıkgözlü olmak) *ҡ.*

Ниндәйҙер хәйлә менән теге йәки был эштән ҡасып ҡалыу. □ Изворачиваться, увёртываться. *Һәр эштән йәлдәкләнә.*

ЙӘЛДӘТ I *с. кар.* **йәлдәк I.** *Йәлдәк кеше.*

ЙӘЛДӘТ II *и. кар.* **йәлдәү.**

ЙӘЛДӘҮ (Р.: горло, горловина, воронкообразный вход верши; И.: funnel-shaped mouth fish trap; T.: sepetin ağzı) *и.*

Мурҙаның ауыҙланып, эскә инеп торған өлөшө. □ Воронкообразный вход верши. ■ *Йәлдәү топҡан саҡта ярһып ҡаҡҡан йөрәк, мурҙа өҫкә сыҡҡас, туҡтап ҡалғандай булды: һуҡыр сабаҡ та төшмәгән бит, исмаһам!* Й. Солтанов.

ЙӘЛЕМБӘТ (Р: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуы аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-юрматинцев.

ЙӘЛЕП ИТЕҮ (йәлеп ит-) [ғәр. جلب 'үҙенә тартыу'] (Р.: привлекать; И.: draw, attract; T.: çekmek) *ҡ.*

Ылыҡтырыу, тартыу. □ Привлекать *кого-что к кому-чему*, вовлекать *кого-что во что*, располагать к себе. *Һүҙгә йәлеп итеү. Эшкә йәлеп итеү. Иғтибарҙы йәлеп итеү.* ■ *Гәрсә бите ҡапланған булһа ла, уның [ҡыҙҙың] матур ҡыланыштары, һыны, тығыҙ аҡ беләктәре, ҡара янып торған сәсе кенәздең диҡҡәтен йәлеп итә.* И. Насыри. *Уның [Зөһрәнең] эшсән һәм шулай аңлы булыуы минең диҡҡәтемде йәлеп итте.* М. Ғафури.

ЙӘЛЕП ҠЫЛЫУ (йәлеп ҡыл-) *ҡ. кар.* **йәлеп итеү.** ■ *[Ғәли:] Уның [ҡыҙҙың] мөхәббәтен йәлеп ҡылыр өсөн ни эштәр ҡылмаһың.* М. Ғафури.

ЙӘЛЕПЛЕ *с. кар.* **килешле.** *Йәлепле төҫ. Йәлепле эш.* ■ *Егеттең ауыҙы һаҡал-мыйыҡ араһында булһа ла, маңлайында бер генә йыйырсыҡ та юҡ — бәлки, шыма, ялтырап торған йәлепле тире.* Г. Хәйри.

ЙӘЛИЛ [ғәр. جليل] (Р.: великий; И.: great; T.: celil) *с. иҫк.*

1. Тиңдәшһеҙ юғары; бөйөк. □ Великий, величественный. *Йәлил Алла.* ■ *Ғәзиз ата балаһы инем, булдым заил, айырылмаҡты тәҡдир ҡылды мәүләм йәлил.* Халыҡ ижадынан.

2. Алланың туҡһан туғыҙ исеменең береһе — Йәлилүн-Яппар. □ Одно из имён Аллаха. ■ *Былар*ҙың *оло бабаһы — данлы хәлил, уттарға атты уны Нәмруд яһим, ут эсендә лә һаҡланы уны йәлил: хәлил өсөн утты баҡса ҡылды имде.* «Киссаи Йософ». *Йәлилдән Ябраилға килде тағы фарман, сәфәргә сыҡты унан, ожмахҡа табан. Ожмахтан алып килде кейем, тәғәм, өҫтөнә кейеп, Йософ ашҡа тотонор имде.* «Киссаи Йософ».

ЙӘЛКЕ [рус. *жалко*] *р. хәб. функ. һөйл. кар.* **йәл.** *Балалар йәлке.* ■ *[Закир:] Миңә ни барыбер ҙә ул... Тик бына әсәйем генә йәлке...* З. Биишева. *[Мәликә:] Бушты һөйләмәсе, балам... Миңә икегеҙ ҙә тиң, йәлке.* Я. Хамматов. *Ауылдаш дуҫтарының береһе хатта: «Фашистың томшоғон емерәбеҙ, әй! Йәлке, күрмәй ҡалаһың инде», — тип Әхтәмдең ғәрсел күңеленә тоҙ һибеп ебәргән.* Ә. Хәкимов.

ЙӘЛЛӘТ [ғәр. جلاد] (Р.: палач; И.: executioner; T.: cellat) *и. иҫк.*

1. Баш киҫеүсе, палач. □ Палач. / Палаческий. *Йәлләт ҡылысы.* ■ *Ҡанаттарын йәйгән яңы быуат, һин үткәрмә уны үҙ түреңә, ҡарама һин йәлләт күҙе менән кеше йәне, кеше ғүмеренә!* М. Ғәли. *Алдарбайҙы тәҙрәһеҙ, май шәм генә янған яланғас*

бүлмәгә алып инделәр ҙә, киң бер ширлеккә һуҙып һалып, йәлләт шыйлан тимерсыбыҡ менән ярырға тотондо. Н. Мусин. *Башҡорт яугирҙарының үле кәүҙәләре быуа быумалы булып ятып ҡала. Батша йәлләттәренән шунан башҡаны көтөп тә булмай.* Эпостан.

2. *күсм.* Ҡанһыҙ, мәрхәмәтһеҙ кеше. □ Безжалостный, жестокий человек. / Деспот. ■ *Ике тин дә тормаҫлыҡ йәлләттәргә башын һатып, тамаҡ туйҙырмаҡ була [доноссы].* М. Ғафури. *Белсе, гонаһ тыуа гонаһһыҙҙар йәнен емереп, тик әүрәтер бер мәл йәлләттәрҙе паклыҡ менән үткән ғүмерем.* М. Ғәли.

ЙӘЛЛӘТ БАЛТАҺЫ (Р.: топор палача; И.: hangman's axe; Т.: celladın satırı) *и.*

Баш киҫә торған махсус балта. □ Топор палача. *Йәлләт балтаһын үткерләү.*

ЙӘЛЛӘТЕҮ (**йәлләт-**) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йәлләү 1.** *страд. от* **йәлләү 1.** *Үҙеңде йәлләтеү. Йәлләтергә тырышыу.* ■ *Әсәһенән йәлләтеп торорға был әлекке Яҡуп түгел инде инде.* М. Кәрим. *Гөлнара битен усы менән ҡаплап, танауын мыш-мыш тартып иларға тотондо. Айнур өсөн яңылыҡ түгел был, бүтән саҡтағы кеүек, йәлләтергә, уның күңелен йомшартырға тырыша.* Н. Мусин.

ЙӘЛЛӘТКЕС (Р.: жалобно; И.: sorrowfully; Т.: hazin hazin; acıklı acıklı) *р.*

Йөрәк әрнеткес, ҡыҙғаныслы. □ Жалобно. ■ *[Аҡтуш] төнө буйы йәлләткес шыңшып сыҡты, хатта илаған кеүек тойолдо өйҙәгеләргә.* «Ағиҙел», № 6, 2011. *[Йорттоң] иҫке ҡапҡаһы, көндәрем бөттө тигәндәй, йәлләткес шығырланы.* Ә. Әминев.

ЙӘЛЛӘТЛЕК (**йәллӘтлеге**) (Р.: палачество; И.: hangman's trade; Т.: cellatlık) *и. иҫк.*

Йәлләт эшмәкәрлеге, йәлләт булыу хәле. □ Палачество. *Йәлләтлек вазифаһы. Йәлләтлек эше.* ■ *1920 йылда башҡорт халҡының С.Ш. Мырҙабулатов етәкселегендәге ҡоралты баш күтәреүен ҡанға батырып баҫтырыуыуҙа йәлләтлек тәжрибәһен мул туплап .. үҙен ифрат ләззәтләнеп кеше үлтереүсе — садист итеп таныта.* Й. Солтанов.

ЙӘЛЛӘҮ I (**йәллә-**) (Р.: жалеть; И.: feel sorry (for); Т.: acımak) *ҡ.*

1. Аяныс хәлдә күреп әсенеү, ҡыҙғаныу. □ Жалеть, сострадать. *Балаларҙы йәлләү. Йәлләп илау. Үҙен йәлләмәү.* ■ *Уны [Мөхәммәтсәлимде] уятырға йәлләгән Ғәбиҙә, саҡ ҡына булһа ла йәнә йоҡлатырға теләп, иҙән уртаһында оҙаҡ хәрәкәтһеҙ торҙо.* Я. Хамматов. *Өйрәнсек, бер ҡатлы Һөнәрсенең күңеле тамам йомшарып етеүенә, үҙен ихлас йәлләй башлауына тамам төшөнөп алғас, күптән уйлап килгән хәйләһен тормошҡа ашырырға керешкән.* З. Биишева. *Һаман иҫтә: йәп-йәш ҡайындарҙы шаҡармаға киҫтем йәлләмәй.* Р. Йәнбәк. ● *Яҙға сыҡҡан атты яуҙан да йәлләмә, көҙгә кергән атты кейәүеңә лә бирмә.* Мәҡәл. *Ат йәлләгән ергә ҡарар, ҡош йәлләгән күккә ҡарар.* Мәҡәл.

2. Бирергә, исраф итергә йәл күреү, ҡыҙғаныу. □ Жалеть. *Аҡса йәлләү. Йәлләп тормау. Ваҡытты йәлләү. Көстө йәлләү.* ■ *[Навалихин бай:] Әгәр ҙә шуны эшләй алған кеше булһа, мин ул кешенән һис ваҡытта ла аҡса йәлләмәгән булыр инем.* Т. Хәйбуллин. *Ереккәнде ер ярата, тигәндәй, Шафиҡ тыуған ере өсөн үҙ көсөн йәлләмәне.* Я. Хамматов. *Дан сығарыр ирҙәр йән йәлләмәҫ, йәнде йәлләү менән дан булмаҫ.* Халыҡ йырынан. ● *Сәтләүек ашағың килһә, тешеңде йәлләмә.* Мәҡәл.

ЙӘЛЛӘҮ II (Р.: жалость; И.: pity; Т.: acıma) *и.*

Ҡыҙғаныу хисе, аяу. □ Жалость. *Йәлләү тойғоһо. Йәлләү уятыу.* ■ *Миңлебикәһен һағыныу һәм юҡһыныу тойғоһо көсәйә барҙы [Шәғәленең] күңелендә һәм, аҙаҡ килеп, тағы йәлләү тойғоһо өҫтәлде.* К. Мәргән.

ЙӘЛЛӘҮЕС (Р.: вызывающий чувство жалости; И.: pitiful; Т.: acıtıcı) *с.*

Әсенеү, аяу тойғоһо уятҡыс; йәл. □ Вызывающий чувство жалости, сострадание, жалкий. ■ *Байраҡ артта ҡалған йәйәүлеләр уҙа башлай, ғүйә, улар беҙгә йәлләүес ҡараштарын ташлай.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

ЙӘЛЛӘШЕҮ (**йәлләш-**)

1. *урт. ҡар.* **йәлләү 1.** *взаимн. от* **йәлләү 1.** ■ *Мәҙинә справканы тапшырғас, хеҙмәттәштәре аһ-уһ итеп йәлләште, йыуатышты ла бүтәнсә төпсөнөп торманы.* Ә. Хәкимов. *[Мәғфүрә:] Улар [урыҫтар-*

ҙың ҡайһыһы] хатта бер туғаның кеүек, йәлләшеп, ярҙамлашып торалар ул. Һ. Дәүләтшина.

2. *диал.* Йәлләү. □ Жалеть. ■ *Пристав үҙе лә бик йәлләшкән һымаҡ, йомшаҡ тауыш менән: — Эйе, эйе, йәл, — тип һуҙып һөйләнде лә, тәҙрәгә ҡарап, тағы ла папиросын һурҙы.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘЛП (Р.: подражание быстрому, резкому движению; И.: imitative word; Т.: ani hareketi bildiren kelime) *оҡш.*

Етеҙ, еңел хәрәкәтте йәки һалбырап торған еңел нәмәнең хәрәкәтен белдергән һүҙ. □ Подражание быстрому, резкому движению. *Йәлп итеп боролоу. Йәлп итеп ҡалыу. Йәлп итеп күтәреү.* ■ *Аллаяр ат егелә торған тимер тырмаларҙы йәлп иттереп арбаға күтәрә лә һала, күтәрә лә һала.* Ф. Исәнғолов. *Ауыр кәүҙәле атайым йәлп итеп тороп ишеккә ҡарай юрғаланы.* Ә. Вахитов.

ЙӘЛПЕЛДӘТЕҮ (йәлпелдәт-) (Р.: развевать; И.: blow about; Т.: dalgalandırmak) *ҡ.*

Йәлп-йөлп иттереү, йәлп-йөлп килтереү. □ Развевать, колыхать. *Итәк-еңде йәлпелдәтеү. Йәлпелдәтеп күтәреү.* ■ *Бына уның [Ирғәленең] күҙ алдынан ҡулына фанеранан эшләнгән сумка тотҡан ҡыҙ, ҡалын ҡара толомдарын йәлпелдәтеп, ялан аяҡ йүгереп үтә.* Н. Мусин. *Баш врачтың аҡ халатының итәген йәлпелдәтеп әле тегеләй, әле былай елеп үткәне күренеп ҡала.* Н. Мусин.

ЙӘЛПЕЛДӘҮ (йәлпелдә-) (Р.: развеваться; И.: flutter; Т.: dalgalanmak) *ҡ.*

Йәлп-йөлп итеү, йәлп-йөлп килеү. □ Развеваться, колыхаться. *Йәлпелдәп атлау. Ҡолаҡтары йәлпелдәп тора. Атлағанда итәге йәлпелдәп тора.* ■ *Атау Яхъяның да санаһын үтеп киткән дә йәлпелдәп завод яғына һалдыра.* Н. Мусин. *Шәһүрә үҫмер ҡыҙҙарса йәлпелдәп атлап килде лә әсәһенең ҡуйынына һыйынды.* Н. Мусин.

ЙӘЛПЕЛДӘШЕҮ (йәлпелдәш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йәлпелдәү.** *взаимн. от* **йәлпелдәү.** *Йәлпелдәшеп килеү.*

ЙӘЛПЕСӘК (йәлпесәге) *и. диал. ҡар.* **балитәк.** *Йәлпесәк тегеү.*

ЙӘЛП-ЙӨЛП (Р.: подражание быстрому и лёгкому движению; И.: imitative word; Т.: calt) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат йәлп иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. □ Подражание быстрому и лёгкому движению. *Йәлп-йөлп баҫыу. Йәлп-йөлп итеү.* ■ *Ни эшләптер ул [Ирназар] үтә яй атлай, ә Фәйрүзә ашыға, — уға ҡул болғаны ла, йәлп-йөлп итеп, алға йүгерҙе.* Ә. Хәкимов. *Ҡыҙ көмөш ҡыңғырауҙар тауышы сығарып көлдө лә, зәңгәр күҙҙәренең ҡарашы менән бер өтөп алғас, еңел ситса күлдәгенең итәктәрен йәлп-йөлп иттереп, түбәнгә төшөп китте.* Н. Мусин.

ЙӘЛП-ЙӘЛП *оҡш. ҡар.* **йәлп-йөлп.** *Йәлп-йәлп итеү. Йәлп-йәлп килеү.* ■ *Ул [Нәсимә] йәһәт кенә һоҫаһын бер уңға, бер һулға елдереп шыуҙыра, табансаларын бер өҙлөкһөҙ йәлп-йәлп баҫа башланы.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘЛПӘЙЕҮ (йәлпәй-) (Р.: сплющиваться; И.: become flat; Т.: yassılmak) *ҡ.*

Йәлпәккә әйләнеү, йәлпәк булыу; йәлпәшеү. □ Сплющиваться, расплющиваться. *Бүрек йәлпәйгән.* ■ *Һаптың йәлпәйгән ерендә Байназаровтарҙың ырыу тамғаһы — «ҡуян эҙе» ярылып ята.* М. Кәрим.

ЙӘЛПӘЙЕШЕҮ (йәлпәйеш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йәлпәйеү.** *взаимн. от* **йәлпәйеү.**

ЙӘЛПӘЙТЕП ҠУЙЫУ (йәлпәйтеп ҡуй-) (Р.: сплюснуть; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

Йәлпәккә әйләндереү. □ Сплюснуть, расплющить. *Эшләпәне йәлпәйтеп ҡуйыу.*

ЙӘЛПӘЙТЕҮ (йәлпәйт-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

Йәлпәккә әйләндереү, йәлпәк итеү. □ Сплющивать, расплющивать. *Эшләпәне йәлпәйтеү. Йәлпәйтә һуғыу.* ■ *Ҡартлығына ҡарамай, ялтырап торған күҙле, туңәрәк аҡ һаҡаллы, еп кеүек сирткән мыйыҡлы Солтан, танауын йәлпәйтеп йылмайып, ат туғарып, арбаһын тартып урынлаштырып йөрөгән Заһит янына килде.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘЛПӘК (Р.: плоский; И.: flat; Т.: yassı) *с.*

Яҫы булып йәйелгән; йәйпәк. □ Плоский; приплюснутый, низкий. *Йәлпәк таш. Йәлпәк бит. Йәлпәк ой. Йәлпәк танау. Йәлпәк булыу.* ■ *Салауат атаһын ишек алды май-*

ҙансығының бер мөйөшөндә ятҡан йәлпәк ташҡа ултыртып, үҙе уның эргәһенә баҫып тирә-яҡты күҙәтә ине. Б. Рафиҡов. *Тап шул ваҡытта уның [Вәзирҙең] йәлпәк танауына бер серәкәй килеп ҡунды.* М. Кәрим.

ЙӘЛПӘКЛӘНДЕРЕҮ (йәлпәкләндер-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

Йәлпәккә әйләндереү, йәлпәк итеү. □ Сплющивать, делать плоским. *Һауытты йәлпәкләндереү.*

ЙӘЛПӘКЛӘНЕҮ (йәлпәклән-) (Р.: становиться плоским; И.: become flat; Т.: yassılanmak) *ҡ.*

Йәлпәккә әйләнеү, йәлпәк булыу. □ Становиться плоским, сплющиваться. *Балсыҡ йомарламы йәлпәкләнде.* ■ *Тимер торбаның йәлпәкләнгән осо йыуан бүкәнгә беркетелгән, уның ике тәгәрмәсе лә бар.* Я. Хамматов.

ЙӘЛПӘКЛӘҮ (йәлпәклә-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

Йәлпәккә әйләндереү, йәлпәк итеү. □ Сплющивать, делать плоским. *Кәбәнде йәлпәкләү. Тупраҡ өйөмөн йәлпәкләү.*

ЙӘЛПӘН-ЙӨЛПӘН (Р.: прыг-прыг; И.: hop-hop; Т.: patır patır) *оҡш.*

Йәлп-йөлптән оҙайлыраҡ хәрәкәтте белдергән һүҙ. □ Подражание лёгкому подпрыгивающему движению: прыг-прыг. *Йәлпән-йөлпән атлау. Йәлпән-йөлпән килеү. Йәлпән-йөлпән ҡайтып барыу.*

ЙӘЛПӘНЛӘТЕҮ (йәлпәнләт-) (Р.: подпрыгивать; И.: jump up; Т.: hoplamak) *ҡ.*

Йәлпән-йөлпән иттереү, йәлпән-йөлпән килтереү. □ Подпрыгивать. *Йәлпәнләтеп барыу.*

ЙӘЛПӘНЛӘҮ (йәлпәнлә-) (Р.: подпрыгивать; И.: jump up; Т.: zıplamak) *ҡ.*

Йәлпән-йөлпән итеү, йәлпән-йөлпән килеү. □ Подпрыгивать. ■ *[Рәйсә:] Бына һин әле! Көн дә ошо ваҡытта йәлпәнләп ҡайтып инер ҙә, .. йылмайып өндәшер ине, бөгөн ни эшләне?* Р. Низамов.

ЙӘЛПӘНЛӘШЕҮ (йәлпәнләш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йәлпәнләү.** *взаимн. от* **йәлпәнләү.** *Йәлпәнләшеп барыу.*

ЙӘЛПӘШ (Р.: сплющенный; И.: flattened out; Т.: yassılmış) *с.*

Яҫы булып йәйелгән; йәлпәк. □ Сплющенный, приплюснутый. *Йәлпәш танау.* ■ *Уның [Колсобайҙың] күҙ төптәре күгәргән, битен һаҡал ҡаплаған, йәлпәш танауы һыҙырылған.* Я. Хамматов.

ЙӘЛПӘШЕҮ (йәлпәш-) (Р.: сплющиваться; И.: become flat; Т.: yassılmak) *ҡ.*

Йәлпәшкә әйләнеү, йәлпәш булыу; ялпашыу. □ Сплющиваться, расплющиваться. *Биҙрә йәлпәшкән. Тас йәлпәшкән. Йәлпәшеп барып ятыу.* ■ *[Фәриә:] Оҙаҡ ятмаһаң, үлән шул тиклем йәлпәшмәй ул.* Н. Мусин.

ЙӘЛПӘШТЕРЕҮ (йәлпәштер-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

Йәлпәшкә әйләндереү, йәлпәш итеү. □ Сплющивать, расплющивать. *Тәгәрмәс тирәсен сүкеп йәлпәштереү. Йәлпәштерә һуғыу. Йәлпәштереп һалыу.* ■ *[Егеттәр:] Беләктәрен күрсе, ул тондорһа, йәлпәштерә һуғасаҡ.* Я. Хамматов. *Күп тә үтмәне, .. башына ҡыйыҡ ҡына итеп һалам эшләпә йәлпәштергән, шаҡмаҡлы күлдәгенең еңдәрен һыҙғанған, аяғына итек кейгән кеше йәһәт кенә шишмәгә табан төшә башланы.* Д. Бүләков. *Әхмәт иһә ҡыҙып-ҡыҙып һөйләүен белде, хатта бүркен йәлпәштергәнсе рәйестең өҫтәленә күтәреп бәрҙе.* Н. Мусин.

ЙӘЛСЕТЕҮ (йәлсет-) (Р.: удовлетворять; И.: satisfy; Т.: memnun etmek) *ҡ.*

1. Файҙаһын күрерлек, кинәнерлек итеү; кинәндереү. □ Удовлетворять, обеспечивать *кого чем (в достаточном количестве, в нужном объёме и т.д.). Ул йәлсетеп эшләмәне.* ■ *Мәҙинәнең йөҙөн мыҫҡыллы йылмайыу ҡыйып үтте: «Бахыр... Йә, үҙең бында саҡта бесән әҙерләп, утын ҡырҡып йәлсеттең».* Т. Ғарипова.

2. *Ниммәгәлер* булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндереп, шатландырыу; кинәндереү. □ Удовлетворять, обеспечивать *кого чем (в достаточном количестве, в нужном объёме и т.д.). Ул беҙҙе утынға йәлсетмәне.* ■ *Хәҙисә, ағаһының Ҡыҙыл Армияла булыуына өмөтләнеп, төрлө ойошмаларға, хатта главком штабына хат яҙып, уны юллап ҡарағайны. Юҡ, бер ерҙән дә йәлсетерлек хәбәр ала алманы.* Ә. Хәкимов.

3. Тыныслыҡ, иркенлек менән йәшәтеү. □ Не беспокоить, не трогать. ■ *[Фазыл:] Миҫалға, һин үҙең дә совет власын йәлсетер кеше түгелһең.* Ә. Хәкимов. *[Мулла:] Мин күрше ауылдағы штабҡа барам. Мин ул йөҙө ҡаралар ҙы йәлсетмәм!* Ғ. Дәүләтшин. ● *Өргән эт тешләмәҫ, әрләгән дуҫ кәмһетмәҫ, көлһә лә дошман йәлсетмәҫ.* Мәҡәл.

ЙӘЛСЕҮ (йәлсе-) (Р.: получать удовольствие; И.: enjoy; Т.: memnun olmak) *ҡ.*

1. *ҡүбр. юкл.* Файҙа, рәхәт күреү; кинәнеү. □ Получать удовольствие, наслаждение, испытывать радость; наслаждаться, радоваться. ■ *[Алтынсәс:] Ҡулы ҡороп, ергә һыймай йөрөгән Хәби бай Сурағолдо ҡыуып ебәрһә лә, барыбер йәлсемәне, үҙе ҡороно.* Т. Хәйбуллин. ● *Баталы ҡол арымаҫ, батаһыҙ ҡол йәлсемәҫ.* Мәҡәл.

2. *ҡүбр. юкл. Нимәгәлер* булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндереп, шатланыу; кинәнеү. □ *обычно в отриц. форме.* Достигнуть желаемого, иметь желаемое или необходимое; везти *кому в чём. Аҡсаға йәлсемәү. Мин был баҡсанан йәлсемәнем.* ■ *Беҙ шәм ҡабыҙыр өсөн кәрәсингә лә йәлсемәй интеккән саҡта, күрше Вятский утарында, төндәрен күҙҙе ҡамаштырып, йәнде арбап, электр уттары тоҡаныр ине.* М. Ямалетдинов. ● *Тимерсе бысаҡҡа йәлсемәҫ.* Мәҡәл.

♦ **Йәлсемәгер!** ҡарғағанда әйтелә. □ Чтоб тебе не было удачи!

ЙӘЛСЕҮҺЕҘ (Р.: неутомимый; И.: indefatigable; Т.: yorulmak (nedir) bilmeyen) *с. диал.*

Тырыш, әрһеҙ. □ Неутомимый, неприхотливый. *Йәлсеүһеҙ ир.*

ЙӘЛТ [фарс. چالاک 'мут, хәйләкәр'] (Р.: проворный; И.: nimble, quick; Т.: çevik) *с. иҫк. кит.*

Етеҙ, өлгөр. □ Проворный, ловкий. *Йәлт кеше.*

ЙӘЛТЛӘҮ (йәлтлә-) (Р.: торопить; И.: hurry; Т.: acele ettirmek) *ҡ. иҫк. кит.*

Тиҙләтеү, һәләтләү. □ Торопить, поторапливать, подгонять. // Поторапливание. *Йәлтләп тороу. Эшкә йәлтләү.*

ЙӘЛТӘКӘЙ (Р.: слабоумный; И.: imbecile; Т.: aklı zayıf) *с. диал.*

Аҡылға еңел. □ Слабоумный. *Йәлтәкәй бала.*

ЙӘЛТӘНЛӘТЕҮ (йәлтәнләт-) (Р.: двигаться быстро и легко; И.: move fast and easy; Т.: hızlı davranmak) *ҡ.*

Тиҙ-тиҙ генә, еңел ҡуҙғалыу. □ Двигаться быстро и легко. ■ *[Сурағол] Әлкәйҙең, Ҡолморҙа старшина ҡапҡаһынан сығып, йәлтәнләтә баҫып, яҡ-яғына ҡарана-ҡарана доверенный Әкбәрҙең йортона инеп китҡәнен күрҙе.* Т. Хәйбуллин. *Сыйырсыҡтың .. ҡанаттарын йәлтәнләтеп, ҙур энергия менән һайрауҙары — барыһы ла, барыһы ла яҙ баштарының күңелле тойғоларын йөрәккә ҡайһылай сиртәләр.* Т. Йәнәби.

ЙӘЛТӘНЛӘҮ (йәлтәнлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **елтәнләү.** *Йәлтәнләп сығып китеү. Йәлтәнләп йөрөү.*

ЙӘЛӘҮКӘР *с. диал. ҡар.* **арамъя.** ■ *[Сәлиха:] Ҡуҙ асып күҙ йомғансы юҡ була был ҡыҙ. Был тикле йәләүкәр булыр икән.* Ж. Кейекбаев.

ЙӘМ (Р.: красота; И.: beauty; Т.: güzellik) *и.*

1. Төҫ, күренеште матурлаған сифат; күрк. □ Красота, краса, прелесть, привлекательность. *Тәбиғәт йәме. Йәм биреү. Йәм өҫтәү.* ■ *Матур һындар, матур ҡыҙҙар, матур сыңдар, әйткән саҡта, исемегеҙ матур сыңлар. Һеҙҙе күреп, йәмгә сумып, киттем иреп, аҡылһыҙҙар: «аҡылһыҙ», — тип баҡырһындар.* Ш. Бабич. ● *Ас кешегә ут йәм, таҙ кешегә бүрек йәм.* Мәҡәл. *Күлдең йәме ҡаҙ менән, туйҙың йәме ҡыҙ менән.* Мәҡәл. *Яҙҙың йәме сәскә менән, көҙҙөң йәме көлтә менән.* Мәҡәл. *Тәмһеҙҙе балға һалһаң да тәмле булмаҫ, йәмһеҙҙе йәмгә манһаң да йәмле булмаҫ.* Мәҡәл.

2. Күңелгә ҡыуаныс, рәхәтлек биргән сифат. □ Красота, краса, прелесть, привлекательность. *Бала — тормош йәме. Донъя йәме. Йәм табыу.* ■ *Тирә-яғы, бар ҡыҙ ҙа, һарай алды, бар ер ҙә шул һылыуҙан [Һомайҙан] йәм алған, бары шунан йәнләнгән.* «Урал батыр». *Яҙғы шарлауыҡтарҙан көҙгө ҡырауҙарға тиклем тынмай һайраған ҡоштар йәм өҫтөнә йәм өҫтәй.* М. Кәрим.

Сал тулҡынлы һыуымдан, икмәгемдән тәм алдым, тыуған-үҫкән яғымдан мин донъяла йәм алдым. А. Игебаев. *Һинән башҡа миңә йәм юҡ, ят һыуҙарҙа бындай тәм юҡ.* Ғ. Рамазанов. *Колхоздың алдынғы тракторсыһы иҫәпләнгән Абдулла ағай эштән йәм табып йәшәй торған кешеләрҙең береһе ине.* Н. Мусин. ● *Ағай-эне талашһа, ятҡа йәм.* Мәҡәл. *Күп аштың тәме юҡ, күп һүҙҙең йәме юҡ.* Мәҡәл. *Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ.* Мәҡәл.

ЙӘМАЛ *и. ҡар.* **ямал.** *Йәмал булыу. Йәмал табыу.*

ЙӘМБИЛ (Р.: рубанок; И.: plane; Т.: rende) *и. иҫк.*

Бәләкәй ҡул йышҡыһы; ҡыҫҡа йышҡы. □ Рубанок. *Бер яҡлы йәмбил. Ике яҡлы йәмбил. Ҡыя йәмбил.*

ЙӘМБУЛАТ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Миң ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений минцев.

ЙӘМҒЕ I [ғәр. جمع ‘йыйылма’] (Р.: сбор; И.: sum; Т.: toplam) *и. иҫк.*

Йыйылма, берләшмә. □ Сбор; сумма. *Сығымдарҙың дөйөм йәмғеһе.*

ЙӘМҒЕ II [ғәр. جمع] (Р.: весь; И.: all; Т.: tüm) *билд. а.*

Бөтә, барлыҡ. □ Весь, вся, все; объединённый. *Йәмғе донъя. Йәмғе халыҡ.* ■ *Ихтилал Башҡортостандың йәмғе дүрт юлында ла дөрләгәнлектән һәм ҡыш башланыу сәбәпле, И.К. Кириловҡа Өфө ҡалғаһына ҡайтырға һәм, барлыҡ көстәрҙе туплап, киң фронтлы һөжүм ойоштороу тураһында уйларға кәрәк була.* Й. Солтанов. *Йыраҡтан йәм-йәшел булып күренһә лә, тау битләүе бигүк йәшел түгел, йәмғе үҫенте ҡыҫҡа, һарғылт шырт үләндән ғибәрәт.* «Ағиҙел», № 3, 2010.

ЙӘМҒЕ БУЛЫУ (йәмғе бул-) (Р.: собраться; И.: gather (together); Т.: toplanmak) *ҡ.*

Йыйылыу, берләшеү. □ Собраться. ■ *Әгәр йәннәт менән тамуҡты әүсаф ҡылыуға йәмғе булһа ҡаф та ҡаф.* М. Ғафури.

ЙӘМҒЕ ҠЫЛЫУ (йәмғе ҡыл-) (Р.: собрать; И.: gather; Т.: toplamak) *ҡ.*

Йыйыу, берләштереү. □ Собрать. ■ *[Руҫтар] турғайҙың ҡырғыҙҙарын йәмғе ҡылды.* Бәйеттән.

ЙӘМҒЕҺЕ (Р.: всего; И.: in all; Т.: tümü) *билд. а.*

Бөтә булғаны, барлығы. □ Всего, итого. ■ *Ай календары буйынса, ай был күк есеме яңы тыуғанда башлана ла икенсеһе тыуғанға тиклем дауам итә, йәмғеһе 30 көн килеп сыға.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010. *[Мировой – Ҡотлоғужаға:] Һеҙ Лаптиндан утыҙ мең дисәтинә самаһы артыҡ ер өсөн дисәтинәһенә етмешәр тиндән йәмғеһе егерме бер мең һум неустойка түләтәһегеҙ.* Н. Мусин. *Ағиҙелде ике яҡлап, Ҡыуғанаҡ тамағынан Һәүәлекүл тамағына тиклем, Ағиҙелгә ҡойған һыуҙарҙың башынан урап, йәмғеһе әүәле заманда Кесе Табын тип аталған.* М. Өмөтбаев.

ЙӘМҒИӘТ [ғәр. جمعية] (Р.: общество; И.: society; Т.: cemiyet) *и.*

1. Матди тормоштоң дөйөм булған конкрет-тарихи шарттары ерлегендә күмәге бер бөтөнгә берләшкән халыҡ. □ Общество. / Общественный. *Йәмғиәт королошо. Йәмғиәт тормошо. Йәмғиәт үҫеше. Кешелек йәмғиәте. Демократик йәмғиәт. Йәмғиәткә ҡаршы. Йәмғиәт өсөн хәүефле.* ■ *Төрлө дәүерҙәрҙә лә йәштәр йәмғиәт үҫешенең стратегик таянысы һәм прогрестың этәргесе булып тора.* Р. Бикбаев. *Әлбиттә, әҙәбиәт – бөгөнгө йәмғиәт емеше: йәмғиәт торошо, йәмғиәт кимәле әҙәбиәттә лә сағылыш таба.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

2. Уртаҡ эш, уртаҡ маҡсат йәки башҡа нәмә нигеҙендә берләшкән кешеләр төркөмө. □ Общество. *Спорт йәмғиәте. Ғилми йәмғиәт. Айыҡлыҡ йәмғиәте. Акционерҙар йәмғиәте. Ҡулланыусылар йәмғиәте.* ■ *Бөгөн килеп Торатауға оло ҡаза янай: Стәрлетамаҡтың «Сода» йәмғиәте уны «ашарға» йыйына.* М. Ямалетдинов. *[Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев] Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлегенә ағза итеп һайланғас, ул бөтөнләй ял итмәне тиерлек.* Я. Хамматов.

ЙӘМҒИӘТЕ ХӘЙРИӘ (Р.: благотворительное общество; И.: charitable institution; Т.: hayır kurumu) *и. тар.*

Мохтаж кешеләргә ярҙам күрһәтеү маҡсатын тотҡан ойошма. □ Благотворительное общество. ■ *Әллә ниндәй әһел булмаған кемсәләр ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ яһап сәхнәгә меңәләр ҙә, «Йәмғиәте хәйриә» файҙаһына тип, берәй нәмә ҡуялар.* Ш. Бабич.

ЙӘМҒИӘТЛӘШТЕРЕЛЕҮ (йәмғиәтләштерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәмғиәтләштереү.** *страд. от* **йәмғиәтләштереү.** *Йәмғиәтләштерелгән мал.* ■ *Өйҙөң ҡаршыһында ҡатар береһе ағас, береһе кирбес ике келәт. Ағас келәттә колхозсыларҙың йәмғиәтләштерелгән һыйырҙарының һөтө өсөн сепарат ҡуйылған.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘМҒИӘТЛӘШТЕРЕҮ (йәмғиәтләштер-) (Р.: обобществлять; И.: socialize; Т.: toplumsallaştırmak) *ҡ.*

Йәмғиәт (1) ҡарамағына берләштереү. □ Обобществлять. // Обобществление. *Ойошмаларҙы йәмғиәтләштереү.*

ЙӘМҒИӘТСЕ (Р.: общественник; И.: voluntary group activist; Т.: toplumsal yaşama faal biçimde katılan) *и. иҫк.*

Йәмәғәт эштәрен алып барыусы. □ Общественник. ■ *Голшат әхирәттәре араһында сибәрлеге менән дә айырылып торманы, уҡыуҙа ла әллә ни уңыштар ҡаҙанманы, егеттәрҙең һушын алып, иғтибар үҙәгендә йөрөгән йәмғиәтсе лә булманы.* Д. Шәрәфетдинов.

ЙӘМҒИӘТ ФӘНДӘРЕ (Р.: общественные науки; И.: social sciences; Т.: toplum bilimleri) *и.*

Кешене һәм уның мәҙәниәтен өйрәнә торған фәндәр *(тарих, сәйәси иҡтисад, филология һ. б.)* □ Общественные науки *(история, политология, филология и т. д.). Йәмғиәт фәндәрен өйрәнеү.*

ЙӘМЕ (Р.: ладно; И.: all right, O.K.; Т.: tamamı) *киҫ. һөйл.*

Үтенеүҙе, үтенесле өндәүҙе белдергәндә әйтелә; яраймы. □ Ладно, хорошо, обязательно. *Кил, йәме!* ■ *[Әхәт:] Һин мине лә уйнарға өйрәтерһең инде, йәме.* Д. Бүләков. *[Исмәғил:] Әсәй, атты һин туғар әле, минең ваҡыт юҡ. Туғар, йәме, әсәй!* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘМИҒ [ғәр. جميع] (Р.: всего; И.: in all; Т.: tümü) *билд. а. иҫк. кит.*

Бөтә, барлыҡ; йәмғе. □ Всего, весь, вся, все, всё. *Йәмиғ халыҡ.*

ЙӘМИЛ I [ғәр. جميل] (Р.: красивый; И.: beautiful; Т.: cemil) *с. иҫк.*

Матур, гүзәл. □ Красивый, прекрасный, миловидный, привлекательный. *Йәмил булыу. Йәмил ҡыҙ.*

ЙӘМИЛ II [ғәр. جميل] (Р.: милость; И.: mercy, charity; Т.: lütuf) *и. иҫк.*

Мәрхәмәт, шәфҡәт, рәхимлелек; хөрмәт. □ Милость, любезность. ■ *Тотҡонлоҡта яналыр йөрәктәрем, Хоҙа беҙгә сабыр йәмил бирһен имде.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘМИН [ғәр. يمين] (Р.: клятва; И.: oath; Т.: yemin) *и. иҫк.*

Ҡәтғи, тантаналы һүҙ менән ныҡытылған вәғәҙә; ант. □ Клятва, присяга. *Йәмин ҡағыҙы.* ■ *Был серле йәмин ҡағыҙының төбө ҡайҙа бара тигән һөҙләрҙе уйламай, яҙмышҡа буйһоноп, ҡолдар кеүек хеҙмәт итергә вәғәҙә бирҙеләр.* М. Ғафури.

ЙӘМИН ИТЕҮ (йәмин ит-) (Р.: клясться; И.: swear; Т.: yemin etmek) *ҡ.*

Ант итеү. □ Клясться, давать клятву. ■ *Ғәһет ҡылдым, йәмин иттем тотоп ҡыҙыл байраҡ ҡулға.* М. Ғафури.

ЙӘМ-ЙӘШЕЛ (Р.: ярко-зелёный; И.: bright green; Т.: açık yeşil) *с. артыҡл. дәр. ҡар.* **йәшел.** *превосх. степ. от* **йәшел.**

Бик ныҡ йәшел, асыҡ йәшел. □ Ярко-зелёный. *Йәм-йәшел үлән. Йәм-йәшел булыу.* ■ *Уларҙың [баҫыуҙарҙың] ҡайһыны һөрөлгән, ҡайһыһында көҙ сәсеп ҡалдырған арыш ҡурпыһы, йәм-йәшел келәм булып, йәйелеп ята.* Һ. Дәүләтшина. *Батша Риуан төш күрә. Ете бешкән бойҙай башағы, ете йәшел бойҙай күрә. Етеһе лә уралып йәм-йәшел була ла ҡуя.* Эпостан.

ЙӘМКӘ [рус. *емки*] (Р.: емки; И.: (pair of) tongs; Т.: maşa) *и.*

Күмер ҡыҫҡыс. □ Емки *(щипцы для угля).* ■ *Был юлы әбей бесәйгә йәмкә менән киҙәнмәне.* Ғ. Ғүмәр. *Сәйҙеямал усаҡ эсендәге күлдә йәмкә менән бер яҡ ситкә һыпырҙы.*

Я. Хамматов. *Бөтәһе лә шымып ҡалғайны, хатта Бәҙғольямал әбей ҙә, усаҡ аҫтындағы утты ҡағыштырыуҙан туҡтап, йәмкәһен тотҡан көйө бөксәйә биреп, ҡыбырламай баҫып тора.* Н. Мусин.

ЙӘМКӘГӘ БАҪЫУ (йәмкәгә баҫ-) (Р.: наступить на совок; И.: magic way to summon one's soul; Т.: bir büyü) *ҡ. миф.*

Әруахтарҙы саҡырыу ысулы. □ Наступить на совок *(магический способ вызывания улетевшей души).* ■ *Ҡот оҙаҡ төшмәһә, йәмкәгә баҫып ҡояһың. Аяҡ менән баҫаһың, шунан ҡот төшә.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘМКӘ ТАШЛАУ (йәмкә ташла-) (Р.: выбрасывание совка; И.: spell against hail; Т.: bir âdet) *ҡ. миф.*

Борсаҡ яуыуын туҡтатыуға йүнәлтелгән йола. □ Выбрасывание совка *(магическое действие, направленное на остановку града).* ■ *Борсаҡ яуһа, урамға йәмкә ташлайҙар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘМ-ҠОТ (Р.: внешняя красота; И.: outer beauty; Т.: dış güzellik) *и. диал.*

Тышҡы матурлыҡ. □ Внешняя красота. ■ *Ауылдың ҡап уртаһында ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән белем усағы тирә-йүнгә йәм-ҡот биреп ултыра.* «Башҡортостан», 3 ноябрь 2011.

ЙӘМЛЕ (Р.: красивый; И.: beautiful; Т.: güzel) *с.*

1. Ҡарар күҙгә йыуаныс бирерлек төҫө, күренеше булған; күркле, күркәм. □ Красивый, живописный. *Йәмле ер. Йәмле йәй. Йәмле тормош. Йәмле күреныш.* ■ *Ағиҙелкәй буйы бигерәк йәмле, аҡ тирмәләр ҡороп йәйләүгә. Ҡайҙа ғына барма, дуҫ-иш кәрәк, атҡайыңды төшөп бәйләүгә.* Халыҡ йырынан. *Йәмле Ҡырым ерендә ҡараңғыла, кис булғас, йыраҡта, тирәк аҫтында һайрар була һандуғас.* М. Өмөтбаев. *Йәмле генә Урал буйын ташлап киткеләрем килмәй илемдән.* Халыҡ йырынан. ● *Йәмһеҙ ҡыҙҙы ҡосаҡлағансы, йәмле ҡыҙҙың янында тор.* Мәҡәл. *Тәмһеҙҙе балға һалһаң да, тәмле булмаҫ, йәмһеҙҙе йәмгә манһаң да, йәмле булмаҫ.* Мәҡәл. *Этҡә эт йәмле, ҡошҡа ҡош йәмле.* Мәҡәл.

2. Күңелгә йыуаныс, рәхәтлек бирерлек. □ Красивый. *Йәмле донья.* ■ *Йәйҙең йәмле төнө, саф һауаға таралған тәмле сәскә еҫтәре тәнде иркәләй, тын ял итергә саҡыра.* Һ. Дәүләтшина. *Төндәр була бик йәмле, таң йондоҙо сыҡҡанда. Был бәйетте яҙҙым мин, эскәйҙәрем бошҡанға.* Бәйеттән. *Шул йәмле доньяла кешенең йәшәгеһе килеп кенә тора, ти.* «Урал батыр». ● *Сәмле эш йәмле.* Мәҡәл.

3. *диал. ҡар.* **матур 1.** *Йәмле ҡыҙ. Йәмле бала.*

ЙӘМЛЕЛЕК (йәмлелеге) (Р.: красота; И.: beauty; Т.: güzellik) *и.*

Матурлыҡ, йәмле булыу сифаты. □ Красота, живописность. *Тәбиғәттең йәмлелеге.* ■ *Эй, шул йылғы йәйҙең йәмлелеге, байлығы!* Т. Ғарипова. *[Фирҙәүес:] Донъя әллә ҡайҙарға һуҙылған... Ул болондарҙың йәмлелеге... Бөтә ерҙә ап-аҡ сәскә...* Н. Асанбаев. ● *Йәмлелек — йән аҙығы.* Мәҡәл.

ЙӘМЛӘНДЕРЕҮ (йәмләндер-) (Р.: делать красивым; И.: make beautiful; Т.: güzelleştirmek) *ҡ.*

Йәмлегә, күркәмгә әйләндереү, йәмле итеү; йәмләү. □ Делать красивым, украшать. *Баҡсаны йәмләндереү. Тормошто йәмләндереү.* ■ *Әгәр өйөңдә аңлайҙар, яраталар, һәр башланғысыңды хуплап торалар икән, өҫтәүенә, күҙ нурындай ҡәҙерле балаларың тормошоңдо йәмләндереп, күңелеңдә иретеп, янында йүгереп йөрөһә, теләктәр ҙә, маҡсаттар ҙа яҡтыраҡ, киңерәк була бара ул.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 1, 2010.

ЙӘМЛӘНЕҮ (йәмлән-) (Р.: хорошеть; И.: grow prettier; Т.: güzelleşmek) *ҡ.*

Йәмлегә, күркәмгә әйләнеү, йәмле булыу. □ Хорошеть, становиться красивым. *Донъя йәмләнде. Ағастар йәшәрҙе, тирә-яҡ йәмләнде.* ■ *Ана бит тирә-яҡ ҡайһылай йәмләнде: сыйырсығы-турғайы сырҡылдаша, кәрниз буйҙарында тыҡылдашып, бер-берен ҡыуып, күгәрсендәр тормош көтә.* Т. Ғарипова. *Бына [Фазылетдин] тупһаны аша атлар ҙа көр тауышы өйҙө тултырыр, Рәшиҙәнең донъяһы киңәйеп, көнө йәмләнеп китер.* Р. Камал.

ЙӘМЛӘТЕҮ (йәмләт-) *ҡ. ҡар.* **йәмләндереү.** ■ *Донъяны йәмләтеү.* ■ *[Миңлекәй*

еңгә:] Ошо Акйондоҙҙоң урамдарҙы йәмләтеп бер үтеп китеүе үҙе ни тора. М. Кәрим.

ЙӘМЛӘҮ (йәмлә-) *к. кар.* **йәмләндереү.** *Бала тормошто йәмләй. Ғөл бүлмәне йәмләй.* ■ *Ғәм алдына сығып баһа ала, майҙан йәмләй кыҙҙар асылы.* Т. Ғәниева. *[Азамат:] Молодец, Салауат! Бына һинең кеүек кешеләр йәмләй ҙә инде донъяны.* Р. Солтангәрәев.

ЙӘМПӘЙЕС (Р.: низкорослый; И.: undersized; Т.: kısa boylu) *с. диал.*

Буйға бәләкәй. □ Низкорослый *(о человеке). Йәмпәйес кеше. Йәмпәйес булыу.*

ЙӘМРӘЙЕҮ (йәмрәй-) (Р.: хмуриться; И.: frown; Т.: somurtmak) *к.*

Кәйефһеҙләнеп, асыуланып, төҫтө боҙоу; емерелеү. □ Хмуриться, супиться, насупливаться. *Йәмрәйгән ҡаш. Йәмрәйеп ҡарау. Йәмрәйеп тороу.* ■ *Ҡул күтәргәс, машина ла әлегесә йәйләнды. Кабинанан шофёрҙың йәмрәйгән йөҙө күренде.* Ф. Иҫәнғолов. *Иҫәкәйҙең ялбыр ҡашы күҙен ҡаплай яҙып йәмрәйгән, асыуы йөҙөнә сыҡҡан.* Ә. Хәкимов. *Баймораттың ниҙер әйтергә теләүен тик яҫы ҡара ҡаштарының берсә йәмрәйеп, берсә юғары сөйөлөүенән һәм ирендәренең ҡыбырлауынан ғына белергә мөмкин ине.* Н. Мусин.

ЙӘМРӘЙТЕҮ (йәмрәйт-) (Р.: хмурить; И.: frown; Т.: çatmak) *к.*

Йәмрәйергә сәбәп биреү. □ Хмурить, супить, насупливать. *Ҡашты йәмрәйтеп ҡарау.* ■ *Бабай, ҡалын ҡаштарын йәмрәйтеп, эшен ҡыҙыулатты.* И. Ғиззәтуллин. *Ғибадулла бөгөн беҙҙең эшләгән ергә барыу менән, ҡаштарын йәмрәйтеп, туктап ҡалды.* Н. Мусин. *Сырым, йөҙөн йәмрәйтеп, әсирҙең башына тоҫмаллап, йән асыуы менән һуғырға киҙәнде.* Ә. Хәкимов.

ЙӘМ-ТӘМ (Р.: прелесть; И.: charm; Т.: çekicilik) *и. йыйн.*

Ниҙеңдер бөтә матурлығы, ҡәҙере, йәм һәм тәм. □ Прелесть, удовольствие. *Эштән йәм-тәм табыу.* ■ *Эштән өркмәй Мөхәмәтша, киреһенсә, эштә ул йәм-тәм таба.* М. Хужин. *Ҡулдарығыҙ һаран ерҙән йәм-тәмдәр ала торған, күҙ нурығыҙ, йәнгә үтеп, яралар һала торған.* М. Ғәли.

ЙӘМҺЕҘ I (Р.: некрасивый; И.: unattractive; Т.: çirkin) *с.*

1. Ҡарар күҙгә йыуаныс бирерлек төҫө, күренеше булмаған; күркһеҙ. □ Некрасивый, неприглядный, непривлекательный, неприятный. *Йәмһеҙ кеше.* ■ *Әсәйем ос һәнәгеҙ һатып ебәрһә, уның менән ошо һаҡалтай, йәмһеҙ кеше кәбән ҡойоп йөрөрмө икән?* Н. Мусин. *Ҡәтфәр батша төҫкә-башка бик йәмһеҙ, ҡара, шаҙра кеше икән.* Эпостан. ● *Йәмһеҙ ҡыҙҙы ҡосаҡлағансы, йәмле ҡыҙҙың янында тор.* Мәҡәл. *Белмәгән сибәрҙе алғансы, белгән йәмһеҙҙе ал.* Мәҡәл. *Бер матурға — бер йәмһеҙ, бер йәмһеҙгә — бер матур.* Мәҡәл. *Йәмһеҙҙең күҙгөһө насар, булдыҡһыҙҙың ҡоралы насар.* Мәҡәл.

2. Күңелгә йыуаныс, рәхәтлек бирер сифаты булмаған. □ Некрасивый, неприятный. *Йәмһеҙ ҡараш. Йәмһеҙ тауыш. Йәмһеҙ ҡыланыш.* ■ *Директор менән йәмһеҙ һөйләшеүҙән аҙаҡ күңеле болоҡһоп торғанлыҡтан, Зөһрә бер һүҙһеҙ риза булды.* Н. Мусин. *Әммә сәхнәнән һәм экрандарҙан яңғыраған әшәке һүҙҙәрҙең, йәмһеҙ ҡыланыштарҙың мәҙәниәт менән һис уртаҡлығы юҡ.* «Йәшлек», 19 февраль 2011.

ЙӘМҺЕҘ II (Р.: некрасиво; И.: ungracefully; unprettily; Т.: biçimsiz) *р.*

1. Төҫкә-башҡа шыҡһыҙ ҡиәфәттә. □ Некрасиво, неприглядно, непривлекательно, неприятно. *Төҫкә-башка йәмһеҙ булыу. Йәмһеҙ күренеү.* ■ *Ғәзимәнең төҫкә йәмһеҙ, үҙе уҫал булыуына ҡарамай, Ныязғол байҙың уны икенсе бисәлеккә алып тороуына күп кеше ғәжәпкә ҡала.* Һ. Дәүләтшина. ● *Йөҙөң йәмһеҙ булһа, көҙгө гәйепле түгел.* Мәҡәл. *Йәмһеҙ булһа ла — бай ҡыҙы матур, ярлы ҡыҙы матур булһа ла — йәмһеҙ.* Мәҡәл. *Ямауҙың үҙе түгел, эҙе йәмһеҙ күренә.* Мәҡәл.

2. Күңелгә йыуаныcһыҙ итеп. □ Некрасиво, неприятно. *Йәмһеҙ ҡыланыу. Йәмһеҙ ҡарау.* ■ *Һүҙ ҡушманым башҡа уға, кәрәкмәй, йәмһеҙ була.* Р. Ғарипов. *Ҡапҡа йәнә йәмһеҙ итеп сыйылдап ҡуйҙы.* Н. Ғәйетбаев.

ЙӘМҺЕҘЛЕК (йәмһеҙлеге) (Р.: непривлекательность; И.: unattractiveness; Т.: çirkinlik) *и.*

Шыҡһыҙлыҡ, йәмһеҙ булыу сифаты. □ Непривлекательность. ■ *[Һөнәрсе:] Үҙ тамағың туҡ булһын өсөн генә кешеләрҙең күңелен йәмһеҙлеккә, тупаҫлыҡҡа күнектерергә яраймы ни?!* З. Биишева. *Мин был ерҙе матурларға тыуҙым һәм күрергә тыуҙым гүзәллектең күккә үрләрен. Закондан тыш тип иғлан итәм йәмһеҙлектең бөтә төрҙәрен.* Ә. Атнабаев. *Әклимә өйөнә нисек ҡайтҡанын да белмәне. Шунда ғына ниндәй ҡот осҡос аҙым эшләгәнен бөтә йәмһеҙлеге менән күҙ алдына килтерҙе.* «Ағиҙел», № 9, 2009. ● *Матурлыҡ морат түгел, йәмһеҙлек оят түгел.* Мәҡәл.

ЙӘМҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ (йәмһеҙләндер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йәмһеҙләнеү.** *понуд. от* **йәмһеҙләнеү.** *Донъяны йәмһеҙләндереп, ямғыр яуа.*

ЙӘМҺЕҘЛӘНЕҮ (йәмһеҙлән-) (Р.: становиться некрасивым; И.: become unattractive; Т.: çirkinleşmek) *ҡ.*

1. Йәмһеҙгә (1, 2) әйләнеү, йәмһеҙ булыу. □ Становиться некрасивым, непривлекательным, неприглядным; дурнеть. *Ныҡ йәмһеҙләнеү. Япраҡтар ҡойолдо, урман йәмһеҙләнде.* ■ *Шулай былар [егет менән ҡыҙ] бер урманға килеп керҙеләр, ти, урманға кергәс, теге егет бөтөнләй йәмһеҙләнеп, шөкәтһеҙләнеп ҡалды, ти.* Әкиәттән. *Бая Роман, уның [Миңлеғолдоң] йәмһеҙләнгән йөҙөн күргәс, ҡурҡҡан шикелле, сырайы ҡасып, артына сигенгәйне.* Н. Мусин.

2. Үҙеңде насар, әҙәпһеҙ тотоу. □ Вести себя недостойно, некрасиво. *Бала йәмһеҙләнеп тора.*

ЙӘМҺЕҘЛӘТЕҮ (йәмһеҙләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йәмһеҙләү.** *понуд. от* **йәмһеҙләү.** ■ *Ҡыҙыл ут шәүләһе, ҡубәләктәй елпенеп, [Зәйнизең] ҡырынмаған ҡырыҫ бите өҫтөндә уйнай. Күк һипкелгә оҡшаған дары төртөктәре уғата йәмһеҙләтә.* Й. Солтанов. *Бөтөрөлгән мыйыҡлы сауҙагәрҙәр, приказчиктар, .. оҙон ыштан балағын йоҡа ойоҡ ҡунысына ҡыҫтырып, элек тә йөрөргә белмәгән аяҡтарын йәмһеҙләткән мулла, мәзин ҡатындары .. – барыһы ла йыйналғандар.* А. Таһиров.

ЙӘМҺЕҘЛӘҮ (йәмһеҙлә-) (Р.: делать некрасивым; И.: render unattractive; Т.: çirkinleştirmek) *ҡ.*

Йәмһеҙгә (1, 2) әйләндереү, йәмһеҙ итеү. □ Делать некрасивым, непривлекательным, неприглядным, неприятным. *Баҡсаны йәмһеҙләү. Өйҙө йәмһеҙләү.* ■ *Кеше донъяны йәмһеҙләү өсөн түгел, матурлау өсөн йәшәй.* З. Биишева. *Кеме һуғышта, кеме ауырып, тотош ғаиләләре менән ҡырылған өйҙәрҙең тәҙрәләренә таҡталар ҡаҙаҡланып, былай ҙа йәме булмаған урамдарҙы тағы ла йәмһеҙләй төшә.* М. Хужин.

ЙӘМҺЕҘЛӘШЕП КИТЕҮ (йәмһеҙләшеп кит-) (Р.: поругаться; И.: quarrel (with); Т.: kavga etmek) *ҡ.*

Үҙ-ара мөнәсәбәтте боҙоу; асыуланышыу. □ Поругаться, испортить отношения *с кем. Күршеләр йәмһеҙләшеп китте. Ҡатын ире менән йәмһеҙләшеп китте.*

ЙӘМҺЕҘЛӘШЕҮ (йәмһеҙләш-) *ҡ. диал. ҡар.* **яманлашыу.** ■ *Ғәйниямал ҡалаға ҡунаҡҡа килгәндә лә матурлыҡ өсөн генә ҡуйылған йәндәй күргән йыһаздарына барып ултырыр ҙа килене Зәйтүнә, йәғни Гүзәлдең әсәһе менән йәмһеҙләшеп тә алыр.* Ф. Рәхимғолова.

ЙӘМШЕГӘН (Р.: боярышник; И.: hawthorn; Т.: akdiken) *и. диал.*

Ҡыҙыл йәки һары емешле, эре энәле ҡыуаҡ ағас; энәлек. □ Боярышник (лат. *Crataegus*). ■ *Йәмшегәндәр, баландар, гөлйемештәр тәлгәш-тәлгәш һығылып ултыра.* Й. Солтанов.

ЙӘМШЕК (Р.: сплющенный; И.: flattened out; Т.: yassılmış) *с.*

1. Емерелеп, йәнселеп, рәүеше боҙолған; йәлпәшкән. □ Сплющенный, сплюснутый. *Мороно йәмшек ҡомған. Түбәһе йәмшек эшләпә.* ■ *Бәләкәс кенә йәмшек еҙ самауырға ҡаҙандан әҫе һыу ҡойоп, шаулатырға күҙ һалып, самауыр соҡалағына ҡуялар.* Һ. Дәүләтшина. *Күҙ алдына килә йәмшек өйҙәр, кисә генә булып үткәндәр.* Х. Ҡунаҡбай.

2. Йәлпәшеп торған. □ Приплюснутый. *Йәмшек танау.* ■ *Рәмилдең тос йоҙроғо уның [Радиктың] йәмшек танауына бер-ике мәртәбә килеп ҡуныуы булды, борлап ҡан*

китте. Р. Ҡол-Дәүләт. *Бына уң флангыла йәмшегерәк танаулы, түңәрәк битле Ҡәнзәфәров фамилиялы егет баҫып тора.* Н. Мусин.

ЙӘМШЕЛДӘҮ (йәмшелдә-) *ҡ. диал. ҡар.* **бәлшәйеү 2.** *Ауыҙы йәмшелдәп төшкән. Бер һүҙ әйтеп булмай, йәмшелдәп тора.*

ЙӘМШӘЙЕҮ (йәмшәй-) (Р.: сплющиваться; И.: become flat; Т.: yassılmak) *ҡ.*

Йәмшеккә әйләнеү, йәмшек булыу. □ Сплющиваться, расплющиваться, мяться. // Сплющивание, расплющивание. *Йәмшәйеп бөтөү. Самауырҙың ҡабырғаһы йәмшәйгән. Йәмшәйә төшөү.* ■ *Улар [Хөсәйен менән Әхсән] солан таҡтаһының ситендә, тышта ултырған, ҡорһағы йәмшәйеп бөткән еҙ ҡомған менән алмаш-тилмәш ҡойоп, биттәрен йыуҙылар һәм өйгә инделәр.* Ж. Кейекбаев. *Икенсе атыуҙа түбәтәй, йәмшәйеп, тағы ла килеп төштө.* М. Кәрим. *Таш тейгән урын, еңел генә йәмшәйеп, яп-ялтыр булып ҡалды.* Я. Хамматов. *Арыҫландың әсәһе, ҡолаҡ яғынан үтә нык йәмшәйгән, һыу тамсылап торған еҙ самауырҙы алып килде.* З. Биишева.

ЙӘМШӘЙТЕҮ (йәмшәйт-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

1. Йәмшеккә әйләндереү; йәмшек итеү. □ Сплющивать, расплющивать, мять. // Сплющивание, расплющивание. *Йәмшәйтә һуғыу.* ■ *[Яҡуп] һул күрше Йомабикә ҡарсыҡтың үлән өҫтөндә ултырған еҙ ҡомғанын йәмшәйтергә лә өлгөрҙө.* М. Кәрим. *[Колсобай:] Шунда танауымдың һеңерен онтап, йәмшәйтә һуҡтылар.* Я. Хамматов.

2. Ҡыйшайтыу *(ауыҙ тураһында).* □ Кривить *(рот).* ■ *Бала әсәһе өҫтөнән ҡарын ҡаҡҡанды ла көтмәне, ауыҙын йәмшәйтеп илай башланы.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘМӘҒӘТ [ғәр. جمعيت] (Р.: общество; И.: society; Т.: cemiyet) *и.*

1. Үҙ-ара *нindәйҙер* мөнәсәбәте, бәйләнеше булған халыҡ төркөмө. □ Общество. / Общественный. *Йәмәғәт вәкиле. Йәмәғәт милке. Йәмәғәт ойошмаһы. Йәмәғәт эше. Йәмәғәт эшмәкәре. Йәмәғәт эше рәүешендә.* ■ *Пленар ултырыштың төп өлөшөн танылған дин әһеле, йәмәғәт эшмәкәре, шул уҡ ваҡытта уңған эшҡыуар Сан Мен Мундың телмәре алды.* Р. Бикбаев. *Өфө эшҡыуарҙар берләшмәһенең йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә бушлай консультациялар үткәрелә башланы.* «Башҡортостан», 12 август 2011. *Хәбибуллин йәмәғәт игене һаҡланған амбарға ут төртөүҙә ҡатнашҡаны өсөн ҡулға алынды.* Ә. Вәли. *Хәҙерге замanda ул [ҡатын-ҡыҙ] ғаилә мәнфәғәттәрен ҡайғыртып ҡына йәшәй алмай: эшләй, йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнаша.* «Шоңҡар», № 7, 2011.

2. *өндш.* Йыйылған халыҡҡа өндәшкәндә әйтелә. □ Люди, граждане, народ. ■ *[Мулла-сотник:] Йәмәғәт, тынысланығыҙ, бадишаһ хәҙрәттәре һаулығына доға ҡылабыҙ.* Ғ. Ибраһимов. *[Мулла хәҙрәт:] Йәмәғәт, көн хәстәре — беҙҙең түрәләребеҙҙең шөғөлө.* Ғ. Хөсәйенов. *[Шымбай ҡарт:] Алйыған ҡарсыҡтың һүҙенә ҡолаҡ һалмағыҙ, йәмәғәт!* З. Биишева.

3. Никахлы ғаилә иптәше. □ Супруга, жена. *Йәмәғәт алыу. Йәмәғәтле булыу. Хәләл йәмәғәт.* ■ *[Батшаның ярандары:] Эй, бадишаһ, һинән генә ҡалмаған бит, һин башҡа бер йәмәғәт ал, бәлки, балаң булыр.* «Сәйфелмөлөк».

ЙӘМӘҒӘТ БАШЛАНҒЫСЫ МЕНӘН (Р.: на общественных началах; И.: on a voluntary basis; Т.: ücretsiz) *и.*

Үҙ теләге менән түләүһеҙ эшләү. □ На общественных началах. *Йәмәғәт башланғысы менән эшләү. Йәмәғәт башланғысы менән барыу.*

ЙӘМӘҒӘТ ҒӘЙЕПЛӘҮСЕҺЕ (Р.: общественный обвинитель; И.: public prosecutor; Т.: başsavcı) *и. юр.*

Судта берәй ойошма исеменән ғәйепләүсе булып сығыш яһаусы. □ Общественный обвинитель. ■ *Йәмәғәт ғәйепләүсеһе вазифаһын башҡарырҙай йүнле кеше табылмағас, ҡаза күргән абруйлы иптәштең үҙенә һүҙ бирелде.* Й. Солтанов.

ЙӘМӘҒӘТ ЙЫЙЫНЫ (Р.: сход; И.: gathering; Т.: toplantı) *и.*

Йәмәғәттең ижтимағи мәнфәғәттәрен бергәләшеп ҡарау өсөн йыйылған ултырыш.

□ Сход. *Йәмәғәт йыйылышында ҡатнашыу. Йәмәғәт йыйылышына делегат булып барыу.*

ЙӘМӘҒӘТЛЕ (Р.: женатый; И.: married; Т.: evli) *с.*

Ҡатынлы, йәмәғәте булған. □ Женатый. *Йәмәғәтле ир.*

ЙӘМӘҒӘТЛЕ БУЛЫУ (йәмәғәтле бул-) (Р.: жениться; И.: marry; Т.: evlenmek) *ҡ.*

Өйләнеү, ҡатын алыу. □ Жениться. *Үткән йыл егет йәмәғәтле булды.*

ЙӘМӘҒӘТЛӘНЕҮ (йәмәғәтлән-) (Р.: жениться; И.: marry; Т.: evlenmek) *ҡ.*

Өйләнеү. □ Жениться, обзаводиться семьёй. ■ *[Улы:] Әсәй, һиңә эшләргә кеше кәрәк, шуның өсөн мин йәмәғәтләнергә торам.* Әкиәттән.

ЙӘМӘҒӘТЛӘШЕҮ (йәмәғәтләш-) (Р.: пожениться; И.: get married; Т.: evlenmek) *ҡ.*

Өйләнешеү. □ Пожениться. *Һөйгәне менән йәмәғәтләшеү.*

ЙӘМӘҒӘТЛӘШТЕРЕЛЕҮ (йәмәғәтләштерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәмәғәтләштереү.** *страд. от* **йәмәғәтләштереү.** *Милек йәмәғәтләштерелде.*

ЙӘМӘҒӘТЛӘШТЕРЕҮ (йәмәғәтләштер-) (Р.: обобществлять; И.: socialize; Т.: toplumsallaştırmak) *ҡ.*

Йәмәғәт (1) ҡарамағына берләштереү. □ Обобществлять. // Обобществление. *Милекте йәмәғәтләштереү.* ■ *Бурыстарҙың береһе: тотош колхозға күскән ауылдарҙың малдарын, ҡорал, машиналарын йәмәғәтләштереүҙе тиҙләтеү.* А. Таһиров.

ЙӘМӘҒӘТ МИЛКЕ (Р.: общественная собственность; И.: public property; Т.: toplumsal mülkiyet) *и.*

Коллективтың уртаҡ милке. □ Общественная собственность. *Йәмәғәт милкенә ҡараған.* ■ *Көндөҙҙәрен үҙ йортомдоң эштәренә мауығып йөрөгәс ни, ҡара төндә керпек ҡаҡмай йәмәғәт милкен һағауыллап ултырыуы ҡыйынығараҡ төшә.* Й. Солтанов.

ЙӘМӘҒӘТСЕ (Р.: общественник; И.: voluntary group activist; Т.: toplumsal yaşama faal biçimde katılan) *и.*

Йәмәғәт эшендә ҡатнашҡан кеше. □ Общественник, общественница. *Әүҙем йәмәғәтсе.* ■ *Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә бай әҙәби мираҫ ҡалдырған йәмәғәтсе, көрәшсе Бабич исемә тапҡыр кире ҡағылды. Әммә халыҡ күңелендә, хәтерендә йәшәгәнгә күрә, уның исеме лә, ижады ла заман елдәре аша үтеп, бөгөнгө аша киләсәккә йүнәлде.* «Йәшлек», 30 март 2007.

ЙӘМӘҒӘТСЕЛ (Р.: общественно активный; И.: socially active; Т.: sosyal olarak faal) *с.*

Йәмәғәт эшен ҡайғыртыусан. □ Заботящийся о делах общества, общественно активный. *Йәмәғәтсел кеше. Йәмәғәтсел булыу.*

ЙӘМӘҒӘТСЕЛЕК (йәмәғәтселеге) (Р.: общественность; И.: the community; Т.: kamuoyu) *и.*

Йәмәғәт эсендәге күмәк халыҡ. □ Общественность. / Общественный. *Йәмәғәтселек фекере. Йәмәғәтселек ярҙамы. Донъя йәмәғәтселеге. Йәмәғәтселек тормошо.* ■ *Ул [«Кәмһетелгәндәр» романы] уҡыусылар һәм йәмәғәтселек тарафынан бик йылы ҡабул ителде һәм авторға киң танылыу алып килде.* «Ағиҙел», № 6, 2011. *Республикабыҙ йәмәғәтселеге экология көрәшендә ҡайһы бер һөҙөмтәләргә өлгәште.* Р. Бикбаев. *Киң мәғлүмәт саралары – йәмәғәтселек аңын формалаштырыусы сығанаҡ.* «Ағиҙел», № 3, 2010.

ЙӘМӘҒӘТ УРЫНЫ (Р.: общественное место; И.: public place; Т.: umumi yer) *и.*

Йәмәғәттең бөтә ағзалары файҙалана торған урын. □ Общественнное место. ■ *Кеше күп йыйылған йәмәғәт урындарына барыуҙан тыйылып тороу ҙа киҙеүҙән һаҡлар.* «Йәшлек», 22 ғинуар 2009.

ЙӘМӘҒӘТ ФЕКЕРЕ (Р.: общественное мнение; И.: public opinion; Т.: kamuoyu) *и.*

Күпселек яҡлаған фекер. □ Общественное мнение. *Йәмәғәт фекерен булдырыу.* ■ *Рәсәйҙең йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге ил халҡы өсөн нимәләр егерменсе быуат уңайлылыҡтары булыуын иҫәпләп сығарған.* «Шоңҡар», № 9, 2010.

ЙӘМӘҒӘТ ЭШЕ (Р.: общественная работа; И.: public work; Т.: bayındırlık işleri) *и.*

Йәмәғәттең ижтимағи мәнфәғәттәрен хеҙмәтләндереү менән бәйле эш. □ Общественная работа. ■ *Земство мәшәҡәттәре һәм йәмәғәт эше бик күп ваҡытын алыуға*

ҡарамаҫтан, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев туған халҡының тарихын, мәҙәниәтен ныҡышмалы рәүештә өйрәнеүенән туҡтаманы. Я. Хамматов.

ЙӘМӘҒӘТ ӘЙТТЕРЕҮ (йәмәғәт әйттер-) *ҡ. диал. ҡар.* **кәләш әйттереү.** *Улына йәмәғәт әйттерҙеләр. Күрше ауылдан йәмәғәт әйттереү.*

ЙӘМӘРӘ [ғәр. جمرة] (Р.: горящий уголёк; И.: burning coals; Т.: kor) *и. иҫк. кит.*

Ҡуҙ, утлы күмер. □ Горящий уголёк, головня, жар. *Ҡайындың йәмәрәһе. Йәмәрәгә әйләнеү.*

ЙӘМӘТ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Меҥ башҡорттары аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-минцев.

ЙӘН I [фарс. جان] (Р.: душа; И.: soul; Т.: can) *и.*

1. Кешенең эске донъяһы, уй-фекере, кисереше, тойғоһо; күңел. □ Душа. / Духовный. *Йән рәхәтлеге. Йән теләгән нәмә.* ■ *Һин барында – һин генә йәндең түрендә, һин генә, һин юғында – һине һағынып уйлайым мин гел генә.* Ш. Бабич. *Өҫтәл оҙон, ләкин табын түңәрәк, һый иҫәпһеҙ – йәндәреңә ни кәрәк.* М. Кәрим. *Йөрәгемдә – уты һүнмәҫ сарсау, йәнем һыуһауына юҡ дауа!* Р. Бикбаев.

2. *Ниндәйҙер* үҙенсәлекле тәбиғәтле, холоҡло кеше тураһында. □ Душа *(человек, с теми или иными свойствами характера). Түбән йән булыу. Һатлыҡ йәнгә әйләнеү.* ■ *Быларҙың таянысы түрәләр, муллалар, һатлыҡ йәндәр – барыһы ла ҡаты ҡайғы тулҡынында айҡалдылар.* Т. Хәйбуллин. *Көслө мөхәббәтенең ҡорбанына әйләнгән Зилбәрҙе лә һатлыҡ йәнгә һанамай, был бәләнең Тәңренән килеүен иҫәпкә алып, ҙурлап ерләнеләр, ҡорбандар килтерҙеләр.* З. Ураҡсин. *Легендаларҙа ул [Үсбай], .. Хыҙыр Ильяс кеүек, арығанға ат, һыуһағанға һыу биреүсе изге йән итеп тә ҡәүҙәләндерелгән.* З. Биишева.

3. Кеше һәм башҡа тереклектәрҙең йәшәүе, ғүмере. □ Душа. *Йәнде аямау. Йәнем бар саҡта. Тере йән.* ■ *[Фәйрүш:] Ошо ун көн эсендә бөтөн сәсеү орлоҡтарын таҙартып бөтөрөргә тип йәнде сығарып алып баралар.* Ҡ. Даян. *Беҙҙә ике хайуан тойғоһо бар ине: береһе – йәнде һаҡлау, икенсеһе – ас ҡарынды туҡландырыу.* Д. Юлтый. *Бөтә нәмәләрҙең дә йәндәре бар – ағастарҙың да, таштарҙың да, үләндәрҙең дә.* М. Кәрим.

4. *Кемдер* бераү. □ Душа, человек. ■ *Йыйылды бер урынға аҡһаҡалдар, ишан, хәҙрәт, имамдар, хәлфә йәндәр. Һөйләштеләр былар хажға китергә, таң атҡас та хажға ниәт итергә.* Ш. Бабич. *Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ, Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.* Халыҡ йырынан. *Ярлылар ҙа, бай кеүек, рәхәт теләүсе йәндәр бит.* Ш. Бабич.

5. Кеше һанын иҫәпләү берәмеге. □ Подушное число. *Йән башынан бүлешеү. Бер бүлмәлә ете йән тора. Йән башынан түләнә торған һалым.* ■ *Элек йән башына өсәр бот иген булғанда артыҡ алыусыларға хәҙер иген теймәне.* Б. Бикбай. *Айырылып киткән төрки ҡәбиләләре йән иҫәбе яғынан күмәгәйеп китеп, йәнә бер нисә ҡәбиләгә бүленгән.* Ж. Кейекбаев. *Ерҙе община менән файҙаланыу хатта бик файҙалы буласаҡ, сөнки ул ваҡытта ер йән хисабына бүленәсәк.* М. Өмөтбаев.

6. *әйл. ф. һөйл.* **йәнем** (*йәки* **йәнкәйем, йәнгенәйем**). Иркәләп мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. □ Сердце моё, дорогая, душенька, дорогой. ■ *Көмөш йөҙөгөңдө һурып бир, йәнем алып ҡалды, тиерһең. Һары ла сәсем үрермен дә һине йәндәй күрермен.* Халыҡ йырынан. *Шундай бер көн килер һиңә, йәнем, һыу йөҙөнән һиңә ҡарармын. Юҡһынһа ла мине тулҡындарҙан, эҙләп табалмаҫ шул ҡарашың.* Ф. Туғыҙбаева.

7. *миф.* Кешелә йәшәүсе мифик зат. □ Душа *(по представлениям башкир, может жить автономно, улететь после смерти человека, войти в нового человека).* ■ *Кеше үлгәс, уның йәне бәләкәй генә себен йә күбәләк булып осоп сыға.* Экспедиция материалдарынан.

♦ **Йән асыуы менән** йөрәктән сыҡҡан ҡаты асыу менән. □ Со страшным гневом. ■ *[Аҡмырҙа] .. йән асыуы менән һуңғы уғын төҙәп, атып ебәргән, ти.* Әкиәттән.

Сәмләнеүҙең сигенә еткән Вәзир йән асыуы менән Ғабдулланың салбар ҡайышынан эләктереп алды. М. Кәрим. **Йән асыуы сығыу** бик ныҡ асыуланыу, ярһыу. □ Очень сердиться, быть озлобленным. **Йәнгә ауыр булыу** уй-тойғоға, күңелгә насар тәьҫир итеү; күңелһеҙләндереп тороу. □ Лежать тяжёлым камнем на душе. ■ *Аҡыл, кәңәш һорап һиңә килдек, йәнгә ауыр булған саҡтарҙа. Кисер беҙҙе, өлөшөбөҙ булһа сәстәреңә төшкән аҡтарҙа.* «Башҡортостан», 7 сентябрь 2011. **Йәнгә дарман** (*йәки* **дарыу**) ауыр хис-тойғоларҙан, борсолоуҙарҙан арындыра торған сара. □ Лекарство для души. **Йәнгә йомшаҡ** (*йәки* **яғымлы**) йәнде иркәләй, күңелгә тыныслыҡ бирә торған. □ Нежный, ласковый. ■ *Йәнгә яғымлы, күңелгә яҡын булған был һүҙҙәрҙән ул [Айбикә] батырланып киткән кеүек булды.* Һ. Дәүләтшина. **Йәнгә йылы биреү** күңелде наҙлау, тынысландырыу. □ Вдохнуть тепло в душу *кого*. **Йәнгә тоҙ һибеү** күңелде әрнетеү, теңкәгә тейеү. □ Надоедать; докучать. **Йәнде ҡайҙа ҡуйырға белмәү** ҡурҡып, ни эшләргә белмәү. □ Растеряться от страха. *Йәнемде ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөйөм.* **Йәнде ҡорбан итеү** (*йәки* **ҡылыу**) *кем* йәки *нимә* өсөн йәнде аямау, үлергә әҙер булыу. □ Жертвовать собой. ■ *Тыуған иле өсөн йәнен ҡорбан итергә лә әҙер торған, ти, ул [батыр].* Әкиәттән. **Йәнде ҡулға** (йәки **уҫҡа**) **тотоп** (*йәки* **алып**) ныҡ ҡурҡып. □ Душа ушла в пятки. ■ *Аҫта упҡын, өҫтә күк тын, бер хәүефләп, бер кинән... Ҡайсын йырлай, мин йәнемде усымда тотоп киләм.* М. Кәрим. **Йәнде ус төбөндә тотоп** (*йәки* **ҡуйып**) *кар.* **йәнде ҡулға тотоп**. ■ *Йәнен ус төбөндә тотҡандай булып ҡурҡышынан саҡ ултырған Касьянов кашауайҙан һикереп торҙо.* Я. Хамматов. *Йәнде ус төбөнә ҡуйып йәшәй торған ҡот осҡос заманалар килде. Төндәр шомло, түҡтауһыҙ эттәр өрә.* Ф. Рәхимғолова. **Йәнде ярып бирергә әҙер тороу** бер нимәне лә ҡыҙғанмау. □ Ничего не жалеть. ■ *Яратҡан кешеңдең һәр ваҡыт янында булыуыңды, әллә берәү өсөн йәнеңде урталай ярып бирергә әҙер булыуыңмы?* «Салауат», 15 ғинуар 2010. **Йән дә тән** бар көскә, бөтә көстө, тырышлыҡты һалып. □ Изо всех сил, что есть мочи. *Йән дә тән эшләү. Йән дә тән тырышыу.* **Йәне бар** 1) үлмәгән, иҫән булыу. □ Быть живым (*не мёртвым*). *Иҫән, йәне бар әле ҡарттың;* 2) тере булыу, йәнле булыу. □ Быть живым, одушевлённым. ■ *Хәйер, урмандың үҙенең дә йәне бар бит әле ул.* С. Поварисов. **Йәне генә юҡ** яҡшы эшләнгән, юғары сифатлы. □ Высокого качества. *Сәғәт ялтырап тора, йәне генә юҡ.* **Йәне йөрәк төбөндә** (*йәки* **түрендә**) ғүмере бик аяулы, бик ҡәҙерле. □ Драгоценная жизнь. ● *Кәмәгә ултырғандың йәне ус төбөндә, атҡа менгәндең йәне йөрәк түрендә.* Мәҡәл. **Йәне керле булыу** намыҫы таҙа булмау. □ Иметь нечистую совесть. **Йәне лә ҡалмау** һау ере, бөтөн ере ҡалмау. □ Стать негодным, прийти в плохое состояние. *Машинаның йәне лә ҡалмаған.* **Йәнен ҡуймау** (*йәки* **ҡалдырмау**) һау ерен, бөтөн ерен ҡалдырмау. □ Живого места не оставить. **Йәнен мамыҡҡа ураған** һис бошонмаҫ кешегә ҡарата әйтелә. □ Неунывающий, жизнерадостный. *Йәнен мамыҡҡа ураған кеше.* **Йәнен усына йомоп** ныҡ ҡурҡып, ҙур хафа аҫтында. □ Дрожа от страха. *Йәнде уҫҡа йомоп күпме барылғандыр, белмәйем.* Й. Солтанов. **Йәнең нимә теләй** теләгән нәмә барлығын белдергәндә әйтелә. □ Что душа пожелает. ■ *Бер генә һан, китапхана 350(!) төр гәзит-журнал алдыра. Йәнең нимә теләй, барыһын да табырға мөмкин, тимәк.* «Йәшлек», 25 февраль 2010. **Йәне рәхәт** (*йәки* **тыныс**) ҡайғымоң юҡ, күңеле тыныс. □ Душа спокойна. ■ *Ғишыҡһыҙҙың йәне тыныс: ятһа, үлеп йоҡлайҙыр.* Халыҡ йырынан. ● *Ярлының йәне тыныс.* Мәҡәл. *Ғишығы юҡтың йәне тыныс.* Мәҡәл. **Йәне-тәне менән** бар булмышы менән. □ И душой, и телом, всем существом. *Йәне-тәне менән ҡарышы. Йәне-тәне менән күрә алмау.* ■ *Беҙ уны [апайымды] «Мир әсәһе» тип кенә йөрөтәбеҙ. Бөтә йәне-тәне менән халыҡтыҡы ул.* К. Кинйәбулатова. *Һағынып ҡайтҡан һайын урап сығам ауылымдың алты урамын, өйҙәренән шатлыҡ эркелгәнен йәнем-тәнем менән тоямын.* М. Кәрим. **Йәне юҡ** 1) иҫе юҡ,

моңһоҙ. □ Бездушный; 2) кешене йәлләр бәғере юҡ; ҡаты бәғерле. □ Жестокий, немилосердный. ■ *[Төлиемеш апай:] Эсендә йәне юҡтыр был докторҙың.* М. Кәрим. **Йән кеүек (*йәки* шикелле) күреү** яҡын итеү, үҙ итеү. □ Считать своим, близким. **Йән ҡайғыһы** үлем янағанда иҫән ҡалырға тырышыу тураһында. □ Печётся только о себе, думать только себе. **Йән ҡыл өҫтөндә тороу (*йәки* булыу, ҡалыу)** бик хәүеф-хафалы хәлдә булыу. □ Быть на волоске от *чего-л.*, быть на краю гибели. ■ *Йәне ҡыл өҫтөндә генә ҡалғанда ла, ул [ҡатын] сараһын табып йәшәргә тырышҡан.* «Һаҡмар», 17 май 2011. **Йән теләгән** кәрәк булған, оҡшаған. □ Что пожелает душа. ■ *Йәне теләгән саҡта йәне теләгән кешеләр менән генә аралашты һәм яҡынлашты ул [Б. Бикбай].* М. Кәрим. **Йән теләгән ерҙән** теләһә ҡайҙан *(һайлау мөмкинлеге булғанда).* □ Откуда душа пожелает, откуда захочется. ■ *Тағы шуны әйтеү ҙә мотлаҡ: был мәҡәләләрҙе һис тә әҙмә-эҙлекле уҡыу кәрәкмәй. Улар бер-береһенә бәйләнмәгән, шуға күрә йәнең теләгән ерҙән алып уҡырға мөмкин.* «Ағиҙел», № 1, 2011. **Йән теләгән ҡәҙәр** күңелең күпме теләй, шул тиклем *(күләмгә ҡарата).* □ Сколько душа пожелает, сколько захочется. **Йән урынында булмау** күңел тыныслығы булмау, борсолоу. □ Душа не на месте *у кого.* **Йән ус төбөнә (*йәки* боғаҙға) килеү** *ҡар.* **йән. Йән үксәгә (*йәки* табан аҫтына) китеү (*йәки* төшөү)** бик ныҡ ҡурҡыу. □ *соотв.* Душа ушла (упала) в пятки. *Ҡурҡыштан йәне үксәһенә киткәндәй булды.* **Ни йәнең <менән>** бәғерһеҙлек, моңһоҙлоҡҡа ҡарата әсенеп әйткәндә ҡулланыла. □ Как?; С каким сердцем? *(сделать что-л. жестокое).* ■ *Шуға ҡарамаҫтан, иркәгеңде шулай хәүефле юлға ебәреп, ни йәнең менән тыныс ятмаҡ кәрәк?* Ғ. Ибраһимов. *[Янусаҡ карт:] Ә һин, Хажиғәли, ни йәнең менән был эшкә баҙнат иттең?* М. Тажи.

ЙӘН II (Р.: душевный; И.: soulful; Т.: can) *с.*

Иң яҡын, ҡәҙерле. □ Душевный, духовный, близкий. *Йән дуҫ. Йән ҡәрҙәш. Йән серҙәш.*

ЙӘНАҒА *и. диал. ҡар.* **ҡәйнеш.** *Йәнаға менән барыу. Йәнағаны күреү. Йәнағаһына кейәүгә сығыу.*

ЙӘН АҘЫҒЫ (Р.: духовная пища; И.: spiritua nourishment; Т.: gönül gıdası) *и.*

Күңелде күтәргән, ҡәнәғәтлек, рәхәтлек биргән нәмә. □ Духовная пища. ■ *Кешегә икмәк менән бергә башҡаһы — йән аҙығы ла кәрәк.* Й. Солтанов. *Сумаҙан төбөнә һалып алып килгән китаптар ҙа уҡылып бөттөләр; техникумда саҡта иптәштәре менән төшкән рәсемдәрҙән башҡа йән аҙығы алырлыҡ, күңел йыуанысы табырлыҡ бер нәмә лә ҡалмаған кеүек ине.* М. Тажи. ● *Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы.* Әйтем.

ЙӘН АЛҒЫС (Р.: надоедливый; И.: vital; Т.: can alıcı) *с.*

Бер нәмәне ай-вайға ҡуймай ныҡыҡҡан кешегә әйтелә. □ Надоедливый. *Йән алғыс әҙәм.*

ЙӘН АЛҠЫМҒА КИЛЕҮ (йән алҡымға кил-) (Р.: быть в тяжёлом состоянии; И.: to avert death narrowly; Т.: öleyazmak) *с.*

1. Ауыр хәл-кисерештең һуңғы сигенә етеү; үлә яҙыу. □ Быть в тяжёлом состоянии *(от переживаний, трудностей и т. п.).* ■ *Күптән түгел генә көйөнөп, йәне алҡымына килерҙәй булып йөрөгән бригадир Яҡуп Мырҙабаев иркен тын алды.* Б. Бикбай. *Гәрәй күҙҙәрен йомдо, йәне алҡымына килгәндәй булды.* Б. Бикбай.

2. Ныҡ ҡурҡыу. □ Испугаться; душа уходит в пятки. ■ *Анау яурынына уҡ баҫҡандары килгән саҡта, төптө йәнең алҡымыңа килә торғайны.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӘН АЛЫУСЫ (Р.: Азраил; И.: death angel; Т.: Azrail) *и.*

1. *дини.* Ғәзраил, кеше үлгәндә йәнен ала торған зат. □ Азраил, ангел смерти. *Йән алыусы килеү.*

2. Үлем хөкөмөн башҡара, тән язаһы бирә торған кеше; йәлләт. □ Палач. *Йән алыусы балтаһы.*

ЙӘНАСЫҒЫНА *р. ҡар.* **йәнәсыҡҡа.** *Йәнасығына ҡысҡырыу. Йәнасығына һуғып ебәреү. Йәнасығына бәреү.*

ЙӘН АҪРАУ (йән аҫра-) (Р.: влачить жалкое существование; И.: live; Т.: yaşamak) *ҡ.*

Тереклек һаҡлау, йәшәү; аслы-туҡлы йәшәү. □ Влачить жалкое существование, еле-еле перебиваться. ■ *[Әптелғәлимдең] келәтенә инһәң, аҫыулы торған туң түшкәләргә бәреп, маңлай тишерһең. Ә хеҙмәтселәр ҡатыҡ эсеп йән аҫрай.* Ф. Иҫәнғолов. *Олораҡ кешеләр, алда ҡот оскос хәлдәр торғанлығын һиҙеп, ҡаты ҡайғырышалар: «Ҡайһылай итеп йән аҫрарбыҙ икән?»* Б. Бикбай.

ЙӘН АТЫУ (йән ат-) (Р.: стремиться всей душой; И.: crave; Т.: can atmak) *ҡ.*

1. Бик ныҡ теләү; елкенеү. □ Стремиться всей душой, жаждать. ■ *Аһ, белмәйем, ниңә ҡайтыр өсөн, ҡайтыр өсөн йәнем аттым мин.* Д. Юлтый. *«Тиҙерәк атла!» — тиеп, тыуған йорттоң мөрйәһе бит тора йән атып.* Х. Назар.

2. Бөтә күңелде биреү; өҙәләнеү. □ Переживать сильно. *Минең өсөн йән ата. Дуҫ тип йән атыу.* ■ *Иштуған йән атып йүгереп килгән ыңғайға һеңлеһен күтәреп алды.* З. Биишева. *Юҡ, тиҙерәк әллә ҡайҙағы сит ҡалаға, ят кешеләр араһына китәм, тип йән ата [Ҡасим].* Ш. Янбаев.

ЙӘН АЯМАУ (йән аяма-) (Р.: не жалеть себя; И.: to live without thinking of one's own comfort; Т.: canına acımamak) *ҡ.*

Көрәштә, эштә үҙеңде йәлләмәү, йәнеңде бирергә әҙер булыу. □ Не жалеть, не щадить себя; стоять насмерть. ■ *Ил-йорт ирке тип йәнен аямаҫ ир-егеттәр ғәййәр батырҙары, сая старшиналары тирәһенә ойошто, аҙаҡҡаса сигенмәҫкә ҡарар итте.* Ғ. Хөсәйенов. *Әлибаев окоптан окопҡа йөрөп атлыларҙың рухын күтәреү, һәр кемдең үҙ урынында йәнен аямай һуғышыу бурысын аңлата.* Р. Өмөтбаев.

ЙӘН БЕЛМӘҮ (йән белмә-) (Р.: находиться в полном забытьи; И.: inanimately; Т.: cansız olmak) *ҡ.*

Иҫ белмәү, иҫһеҙ булыу. □ Находиться в полном забытьи. ■ *[Айбулат:] Рәхмәт, атай, йән белмәй йоҡланым.* Ғ. Ибраһимов. *Етем үҫмер ҡаҡ һикелә, бүркенә башын һалып, ҡолас ташлап, йән белмәй йоҡлай ине.* Ф. Иҫәнғолов.

ЙӘН БИҘҘЕРГЕС (Р.: отталкивающий; И.: bothersome; Т.: can sıkıcı) *с.*

Үҙенән биҙҙерә, нәфрәт уята торған. □ Отталкивающий, надоедливый. ■ *Йән биҙҙергес, ялҡытҡыс юл булды был.* А. Игебаев.

ЙӘН БИҘЕҮ (йән биҙ-) (Р.: надоедать; И.: be bored; Т.: canı sıkılmak) *ҡ.*

Бөтөнләй туйыу, күрергә, кисерергә теләмәү. □ Надоедать, приедаться, охладеть душой, набить оскомину *кому.* ■ *Полтаваның бысраҡ урамдарын йөҙгәндә, һуғышынан, бөтә әмеренән, ирегенән йәндәр биҙгәндә — һуғыш бөтһөн!* Д. Юлтый.

ЙӘН БИРЕҮ I (йән бир-) (Р.: дать жизнь; И.: inspirit; Т.: can vermek) *ҡ.*

1. Донъяға яратыу. □ Дать жизнь *кому-чему,* оживить *кого-что,* вдохнуть душу *в кого, во что.* ● *Йән биргәнгә йүн биргән.* Әйтем.

2. Ҡеүәтләү. □ Воодушевить, ободрить. ■ *Һауа матур, яҙғы йылы елдәр үлән, япраҡтарға йән бирә.* Д. Юлтый.

ЙӘН БИРЕҮ II (йән бир-) (Р.: умереть; И.: perish; Т.: can vermek) *ҡ.*

Үлеү. □ Умереть, отдать богу душу, отдать концы. ■ *Күпме ҡоҙғон күпме йылдар буйы йән биреүен көткән халҡымдың.* Р. Бикбаев. *Хәбәр килтергән күҙәтсе иһә күҙен йомдо, арҡаһына ҡаҙалған ағыулы уҡтан йән бирҙе.* Ә. Хәкимов. *Ҡарт ыһ та итмәгән, күҫәген тотҡан көйө йән биргән.* Ә. Вахитов. *Яуыз уйлы һөт күле батшаһының йән биреүе ана шулай булды, ти.* Әкиәттән.

ЙӘН-БИШУЛ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын башҡорттары аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-табынцев.

ЙӘН БӨРКӨҮ (йән бөрк-) (Р.: вдохнуть жизнь; И.: animate; Т.: can vermek) *ҡ.*

Йәм өҫтәү. □ Вдохнуть жизнь, оживить. *Ямғыр тирә-яҡҡа йән бөрктө.*

ЙӘНГӘ ИНЕҮ (йәнгә ин-) (Р.: утешать; И.: solace; Т.: teselli etmek) *ҡ.*

Йылы һүҙ, яҡшы эш менән кешенең күңелен йылытыу. □ Утешать. *Балаҡың йәненә инеү.*

ЙӘНГӘ ТЕЙЕҮ (йәнгә тей-) (Р.: раздражать; И.: to hit/touch the spot; Т.: canına değmek) *ҡ.*

Теңкәгә тейеү, аптыратыу. □ Раздражать, вытягивать *(выматывать)* душу *кому,* стоять над душой *чьей, у кого,* надоедать, назойливо приставать. ■ *[Ильяс:] Уҫал булғас, ҡыҙҙың ҡолағын игә, минең йәнгә теймә!* Б. Бикбай. *Был һөмһөҙ ҡатынды теге көндө үк оҡшатмағайны Инсаф. Юл буйы уның әрһеҙ ҡарашы уҡырға ҡамасаулап, йәнгә тейеп килде.* Г. Ғиззәтуллина.

ЙӘНГӘ ЯҠЫН (Р.: близкий; И.: amiable; Т.: cana yakın) *с.*

Үҙ итеп ҡабул ителгән. □ Близкий, родной, свой. ■ *Ҡайһылай ҙа хозур, йәнгә яҡын икән тыуып үҫкән яҡтар!* «Ватандаш», № 3, 2009. *Йәнгә яҡын ерҙәремдең ағымлы елдәренә, онотоп үҙем-үҙемде тын ғына ҡолаҡ һалһам – шунда уҡ бөтә тәнемдә утъялҡын солғап ала.* Р. Назаров.

ЙӘНГӘ ЯТЫУ (йәнгә ят-) (Р.: нравиться; И.: enjoy; Т.: hoşuna gitmek) *ҡ.*

Хис-тойғоларға хуш килеү, оҡшау. □ Нравиться, быть по душе. *Китап йәнгә ятты.*

ЙӘН ҒАЗАБЫ (Р.: душевные муки; И.: anguish; Т.: ızdırap) *и.*

Кешенең эске намыҫ, әхләҡи хис-кисереше. □ Душевные муки. ■ *Йән ғазабы тән ғазабынан әсерәк була ул.* М. Кәрим.

ЙӘНДЕ АЛЫУ (йәнде ал-) (Р.: убивать; И.: kill; Т.: öldürmek) *ҡ.*

1. Үлтереү. □ Убивать, взять душу.

2. *күсм.* Теңкәгә тейеү, ыҙалау. □ Надоедать, докучать. ■ *Уҫалыраҡ малайҙар Вәхит ҡарт күренһә: – Ана һинең бабаң! – тип йәнде ала.* Д. Юлтый.

ЙӘНДЕ АШАУ (йәнде аша-) (Р.: изводить упрёками; И.: bore; Т.: can sıkmak) *ҡ.*

Тынғы бирмәй текемләп әрләү. □ Изводить упрёками. ■ *[Азамат – Бәхтиәровҡа:] Ағай, әлегә һиңә бер зыян да эшләгәнем юҡ, ниңә шул тиклем минең йәнде ашайһығыҙ?* Р. Солтангәрәев.

ЙӘНДЕ ЙОЛҠОУ (йәнде йолҡ-) (Р.: ругаться; И.: curse; Т.: sövmek) *ҡ.*

1. Бик ныҡ асыуланып әрләү. □ Ругаться. ■ *Ул [хужа] һаран, берәй ғәйебеңде күрһә, йәнеңде йолҡоп алырҙай булып асыулана, пыр туҙа.* Г. Гүмәр.

2. Намыҫ белмәй кешенекен алыу. □ Присваивать чужое.

ЙӘНДЕ ЙӘРӘХӘТЛӘҮ (йәнде йәрәхәтлә-) (Р.: обижать; И.: hurt; Т.: incitmek) *ҡ.*

Рәнйетеү. □ Обижать, ранить душу.

ЙӘНДЕ ҠЫЙНАУ (йәнде ҡыйна-) (Р.: мучить упрёками; И.: hurt; Т.: canını acıtmak) *ҡ.*

Ыҙалатыу. □ Мучить упрёками, причинять душевные муки. ■ *Ябыҡтым ҡайғы менән, уйлай-уйлай, был ерҙә һис берәүгә һүҙем һыймай. Ҡазаға тәрип бәндә сыҙай икән – залимдар Аҡмулланың йәнен ҡыйнай.* М. Аҡмулла.

ЙӘНДЕ ҠЫЙЫУ (йәнде ҡый-) *ҡ.*

1. *ҡар.* **йәнде алыу 1.**

2. Ерле-юҡҡа үртәү. □ Изводить попрёками. *Юҡҡа йәнде ҡыя.* ■ *Дошман менән осрашыуҙы көтөп, нервылар тартылған бер мәлдә, сана шаҡлауы йәнде ҡыя ине.* И. Ғиззәтуллин.

ЙӘНДЕ ӨҘӨҮ (йәнде өҙ-) (Р.: убить; И.: kill; Т.: öldürmek) *ҡ.*

Үлтереү. □ Убить, лишить жизни. ■ *Һауаға атҡан уҡҡайым тау, урмандар аша уҙһасы. Ҡарлуғаскай ҡошто үлтергәнсе, бер дошмандың йәнен өҙһәсе.* С. Юлаев. *[Мөҙәристең] йәнен өҙә яҙып тәненә ҡаҙалған ярсыҡтарҙы суплап алғандан һуң, йәрәхәттәрен бәйләп, артабан дауаланыу өсөн уны тылға ебәрҙеләр.* «Йәшлек», 1 май 2010.

ЙӘНДЕ ӨЙКӘҮ (йәнде өйкә-) *ҡ. ҡар.* **йәнде тырнау.** ■ *Мирасовтың түш кеҫәһендәге бер хат һис тыныслыҡ бирмәйенсә, йәнен өйкәп торған һымаҡ ине.* Г. Ибраһимов.

ЙӘНДЕ ТЫРНАУ (йәнде тырна-) (Р.: беспокоить; И.: worry; Т.: endişelendirmek) *ҡ.*

Эсте бошороп, тынғы бирмәү, тынғыһыҙлау. □ Беспокоить, тревожить. *Бөгөнгө хәл йәнемде тырнап тик тора.* ■ *Ултырҙым да шиғыр яҙҙым, теҙҙем йөрәк ҡушҡанды.*

Йәнде ниҙер тырнай ине, яҙғас, бер аҙ үс ҡанды. Картотека фондынан.

ЙӘНДЕ ҮРТӘҮ (йәнде үртә-) (Р.: заставлять переживать; И.: worry; Т.: endişelendirmek) *ҡ.*

Утҡа һалыу, көйәләндереү. □ Заставлять переживать, страдать. ■ *Үҙе [ҡустым] ир бауыры булып сыҡты, тик ҡылтым бисәһе генә эре ҡыланып йәнде үртәне.* Ә. Бикчәнтәев. *Субудай баһадир тураһындағы көйлө хикәйәт айырыуса йәнен үртәне уның [Еҙукәйҙең].* Ә. Хәкимов.

ЙӘНДЕ ҺАТЫУ (йәнде һат-) (Р.: терять совесть; И.: conscienceless; Т.: yüzsüz olmak) *ҡ.*

Намыҫҡа ҡаршы эш итеү. □ Терять совесть. ■ *[Әлмәт — Рыҫҡолға:] Алланан оял аҙыраҡ, йәнеңде һатма.* Б. Бикбай.

ЙӘН ДУҪ (Р.: закадычный друг; И.: close, intimate friend; Т.: arkadaş) *и.*

1. Үтә ҡәҙерле, иң яҡын кеше. □ Закадычный (задушевный) друг. *Йән дуҫтай күреү.* ■ *Был – ҡиммәтле комарҡҡы. Мин һиңә, йән дуҫыма, үҙ еремдән бүләк итеп алып килер өсөн ошонан да ҡәҙерлерәк нәмә таптаныым, – тине Аҡбулат.* З. Биишева. *[Алтынша:] Мин дә, ошо аҡҡоштай, йән дуҫымдан айырылдым, йәп-йәш батыр улым менән шыпа етемгә ҡалдым.* Халыҡ ижадынан.

2. Һөйгән йәр. □ Возлюбленный; возлюбленная. *Йән дуҫым минең.*

ЙӘНДӘЙ КҮРЕҮ (йәндәй күр-) (Р.: души не чаять; И.: love; Т.: sevmek) *ҡ.*

Бик яҡын, бик ҡәҙерле күреү. □ Души не чаять *в ком*, очень любить, дорожить *кем-чем.* ■ *[Алтын өйрәк:] Егет, атҡан һунарың өйрәк түгел, белһәң һин, күлдә йөҙөп уйнаған, данлы Шүлгән батшаның йәндәй күргән ҡыҙы мин.* «Аҡбуҙат». *[Ханбикә:] Иҙеүкәй әйтеп ҡуймаҫ ул, йәндәй күргән ҡыҙыңды ҡалыммаҙар түләмәй алып китмәй ҡалмаҫ ул.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘНДӘН АРТЫҠ (Р.: очень близкий; И.: deary; Т.: candan yakın) *с.*

Бик ҡәҙерле, бик яҡын. □ Очень близкий, дорогой. *Йәндән артыҡ күреү.* ■ *Ул ҡыҙ — күрше ҡыҙы Көләмбәттең, уны мин йәндән артыҡ яратамын. Үтенесем шул, батыр, минең һинән — шул ҡыҙҙы ҡатынлыҡҡа һоратамын.* Халыҡ ижадынан. *Үҙ илемде, үҙ еремде йәндән артыҡ һөйәмен.* М. Ғафури.

ЙӘНДӘН БИҘЕҮ (йәндән биҙ-) (Р.: устать от жизни; И.: get tired; Т.: yorulmak) *ҡ.*

Яҡты донъянан туйыу, үлем эҙләү. □ Устать от жизни, искать смерть. *Йәндән биҙҙе ул, донъянан бер йәм тапмай.*

ЙӘНЕН АЛЫУ (йәнен ал-) (Р.: убить; И.: morder; Т.: öldürmek) *ҡ.*

1. Үлтереү. □ Лишать жизни, убивать. ■ *Дошман һыртын биреп ҡасһа ла, йәнен алыр өсөн барырбыҙ.* Д. Юлтый. *[Наза:] Туҡта әле, мин һинең йөрәгеңә ут һалайым, йәнеңде алайым!* Б. Бикбай.

2. Бик ныҡ әрләү; кәрәкте биреү. □ Выматывать душу, надоедать, тянуть за душу *кого.* ■ *[Сәрбиямал:] Әгәр берәр бәпкәм юғала торған булһа, йәнеңде алырмын.* З. Биишева. *Ә бындағы түрә, Накышев, уға [Касьяновка] һылтана, ҡыҙа. Йәнебеҙҙе ала.* Я. Хамматов.

ЙӘНЕН ЙӘҺӘННӘМГӘ ЕБӘРЕҮ (йәнен йәһәннәмгә ебәр-) (Р.: убить; И.: kill; Т.: öldürmek) *ҡ.*

Үлтереү, һәләк итеү. □ Убить, отправить на тот свет.

ЙӘНЕН ФИҘА ИТЕҮ (йәнен фиҙа ит-) *ҡ. ҡар.* **йәнен фиҙа ҡылыу.**

ЙӘНЕН ФИҘА ҠЫЛЫУ (йәнен фиҙа ҡыл-) (Р.: отдать жизнь; И.: spare the life of; Т.: canını bağışlamak) *ҡ.*

Һис ни менән иҫәпләшмәй, үҙеңде тотош бағышлау. □ Отдать жизнь, пожертвовать собой. ■ *Һиңә бер кеше генә, бер батша ғына бөтә мәмләкәткә баш булып, әһсе-крәҫтиән балаларының йәндәрен фиҙа иткәнсе хеҙмәт иттерә икән?* М. Ғафури. *Атайым ер эштәренә йәнен фиҙа ҡылған кеше.* К. Кинйәбулатова.

ЙӘНЕП (йәнебе) [ғәр. جنب] (Р.: сторона; И.: direction, side; Т.: yan) *и. иҫк.*

Яҡ, тараф. □ Сторона, направление. ■ *Мөмкин булманы ул тарлыҡ хәлендә халайыҡтарҙы өндәп, нәсихәтләп, үҙ йәнебемә алырға.* «Батыршаның хаты».

ЙӘН ЕР (Р.: мужской половой орган; И.: mens' member; Т.: erkeklik) *и.*

Ирҙәрҙең йоморткалыҡы. □ Мужской половой орган.

ЙӘН ИНДЕРЕҮ (йән индер-) (Р.: оживить; И.: revive; Т.: canlandırmak) *и.*

Кешенең күңелен йылытыу, йәшәү дәрте уятыу. □ Оживить, вдохнуть душу, жизнь. ■ *Был һүҙ ҡаушап ҡалған балаларға йән индерҙе.* З. Биишева.

ЙӘН ИНЕҮ (йән ин-) (Р.: оживать; И.: revive; Т.: canlanmak) *и.*

1. Терелеү. □ Оживать, воскреснуть. ■ *Декабрь ҡояшының һаран нурҙарын күргәс, туңып барған Һиммәткә йән ингәндәй, йылынып киткәндәй булды.* Р. Өмөтбаев. *Айыусаптҡан йылғаһы буйындағы ҡарағай урманына йән ингән бөгөн.* Н. Мусин. *Утялҡындан тирә-йүн бер аҙ яҡтырып китте, һалҡын шыҡһыҙ ыҙбаға йән инә башлағандай булды.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Иҫкә килеү, терелекте күрһәтеү, теремекләнеү. □ Становиться живым, подвижным. ■ *Быға тиклем ҡурҡып ҡына ултырған Ҡәсәй ҡартҡа йән ингәндәй булды.* И. Көҫәпҡол. *Бағыҙаға лә йән инде. Ҡайын ботағын һындырып, ҡыуыш тирәһен һеперергә лә тотондо.* Ш. Янбаев. *Баш гаупвахта тәңгәлендә лә туҡталманылар. Илмырҙаға йән инеп, тағы икеләнеү тойғоһо тыуҙы.* Я. Хамматов.

3. Хәрәкәткә килеү, ҡуҙғалыу. □ Прийти в движение. ■ *Һүрелеп барған утҡа йән инде.* Я. Хамматов.

4. Инә ҡарынындағы баланың ҡуҙғалыуы. □ Шевелиться *(о ребёнке в утробе матери). Балаға йән инеү.*

ЙӘН ИРЕМӘҮ (йән иремә-) (Р.: обижаться; И.: get angry; Т.: öfkelenmek) *ҡ.*

Кисерә алмау, рәнйеү. □ Обижаться. // Сильная обида. *Һүҙҙәренә йәнем иремәй.*

ЙӘН ИРЕТЕРЛЕК (Р.: трогательный; И.: touching; Т.: duygulandırıcı) *с.*

Күңелдәге асыу, һалҡынлыҡты иретеү көсөнә эйә булған, мөләйем. □ Трогательный, приводящий в умиление, смягчающий душу. ■ *Унда [Грузияла] беҙгә, йәнде иретерлек йомшаҡ тәбиғәттән тыш, йомарт, алсаҡ, һине һәр ваҡыт ҡунаҡ күреп ҡаршы алырҙай кешеләр йәшәй һымаҡ ине.* «Йәшлек», 4 декабрь 2010.

ЙӘН ИРЕҮ (йән ире-) (Р.: умиляться; И.: be touched; Т.: rahatlamak) *ҡ.*

1. Рухи ләззәт кисереү, кинәнеү. □ Умиляться, таять от удовольствия. ■ *Йәнем ирей, күктәр шаулатып, ямғыр ҡойоп болот елгәндә.* М. Ғәли. *[Садрисламдың] күкрәгендә һаман Гөлйөҙөмдөң йылы тыны йәнен иретеп торғандай.* Ф. Иҫәнғолов. *Аһ, һинең тауышың, ҡанун, ысын сихырлы мөғжизә, ысын рәхәт, йәндәр ирей, ҡандар таша, бәгерең өҙә.* Ш. Бабич.

2. Асыу бөтөү; йомшарыу. □ Перестать сердиться, отходить *(душой).* ■ *[Горячев:] Еңеүселәр киң күңелле була, тиҙәр. Шайтан белһен, минең йәнем иремәй.* М. Кәрим.

ЙӘНИҪӘП (йәниҫәбе) (Р.: перепись; И.: census; Т.: sayım) *и.*

Кемдең йәки *нимәләр* һанын билдәләү өсөн үткәрелгән тулы иҫәп. □ Перепись. ■ *Йәниҫәп — дәүерҙең тап ошо мәлендә илдә йәшәүселәрҙе, уларҙың тормошон нисек бар шулай итеп тарих йылъяҙмаһында сағылдырыу ул.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010. *1907—1908 йылдарҙа үткәрелгән йәниҫәп кампанияһы Мөхәмәтша [Буранғолов] көткән форсаттың үҙе булып сыға.* Ә. Сөләймәнов.

ЙӘН ИШАРАТЫ *и. ҡар.* **йән әҫәре.**

ЙӘН ЙОТТОРОУ (йән йоттор-) (Р.: мучить; И.: torment; Т.: canını çıkarmak) *ҡ.*

Ныҡ ғазаплау. □ Мучить, терзать.

ЙӘН ЙЫЛЫҺЫ (Р.: душевное тепло; И.: soul; Т.: can) *и.*

Йөрәк хисе, үҙ итеү хисе. □ Душевное тепло. ■ *Ҡыраүҙарҙан ҡурсый йән йылыһы, йөрәк ҡаны менән һуғарам, ергенәйем түлһеҙ ҡалмаһын тип, эш аттарын һирәк туғарам.* Г. Ситдиҡова.

ЙӘН КИБЕҮ (йән кип-) (Р.: измучиться; И.: grate; Т.: ızdırap çekmek) *ҡ.*

Ныҡ йонсоп, сараһыҙ сиккә етеү. □ Измучиться. *Йәне кибеп бөткән.*

ЙӘН КИҪЕҮ (йән киҫ-) *ҡ. ҡар.* **йән ҡыйыу.**

ЙӘН КИҪӘК (киҫәге) *и.*

1. *кар.* **йәндүҫ 2.** ■ *[Төхомбаев – Дусяға:] Һинең йән киҫәгең дә, моғайын, берәй ерҙә бына шулай беҙҙең кеүек ашыға-ашыға, китеп баралыр әле.* Ғ. Ибраһимов. *Ирҙәр ҡәһәрле һуғыш арҡаһында йыраҡта ҡалған ҡатынын, бала-сағаларын юҡһына, егеттәр һөйөклөләрен, мөхәббәт утында дөрләп янған йән киҫәктәрен һағына.* Р. Өмөтбаев.

2. *эйл. ф.* **йән киҫәгем.** Ҡәҙерлем, һөйөклөм. □ Сердце моё, душа моя.

ЙӘНКИҪӘР (Р.: палач; И.: hangman; Т.: cellat) *и. иҫк.*

Үлем хөкөмөн башҡара торған кеше. □ Палач. *Йәнкиҫәр балтаһы.*

ЙӘН КИТЕҮ (йән кит-) *ҡ. кар.* **йән биреү II.**

ЙӘН КӨЙҘӨРӨҮ (йән көйҙөр-) *ҡ. йөкм. кар.* **йән көйөү.** *понуд. от* **йән көйөү.** ■ *Иң йәнде көйҙөргәне – һаран ирҙәр, әҙерәк тулләргә тырышыуҙары бер әле, өҫтәлдәге ҡунаҡтарға тигән тәмәкене, хушбуйфәләнде сәлдерергә маташалар.* «Ағиҙел», № 6, 2011.

ЙӘН КӨЙӨГӨ (Р.: зануда; И.: bore; Т.: can sıkıcı adam) *и.*

1. Асыуға тейгән, асыуҙы килтергән кеше. □ Зануда. ■ *Берәү ҙә сығыш яһамағас, класс етәксеһе булараҡ, Фәзилә Илһамовна һүҙ һораны. Директорҙың йөҙө ҡара янды. Тағы нимә һөйләр был йән көйөгө?* Л. Яҡшыбаева.

2. Үкенес. □ Досада. ■ *Ҡыл да ҡыбырлатмайым бит, йән көйөгө, мин – үшән. Ҡайҙа минең яҡты доньям – ай-йондоҙло күк-түшәм?* Т. Йосопов.

ЙӘН КӨЙӨҮ (йән көй-) (Р.: раздражаться; И.: fume; Т.: öfkelenmek) *ҡ.*

Асыу килеп, көйәләнеү. □ Раздражаться, чувствовать раздражение, досадовать, быть недовольным. // Досада, раздражение. ■ *Әллә ҡайҙан әйттем шул маҡтансыҡҡа, тип йәнем көйөп ултыра инем, тәңгәлемә генә бер ҙур бәрҙе килеп ятты.* Н. Мусин. *Шәрип, үҙе лә һиҙмәҫтән, ығы-зығылана башланы. Юҡҡа-барға йәне көйә.* Ә. Вахитов. *Әллә ҡайҙа йөрөгән Тимерйәнгә йәне көйҙө Үмәр ҡарттың.* Ш. Янбаев. *Таштар, ышҡылып, тупраҡтары ҡойолоп, ағарып бөткән. Миһрандың уларға ниңәлер йәне көйҙө.* Р. Солтангәрәев.

ЙӘНКӘЙ (Р.: душенька; И.: my dear; Т.: canım) *и. өндш.*

Яратып, иркәләп әйткәндә ҡулланыла. □ Душенька, душечка, милый, милочка. ■ *Ай янында Зөһрә йондоҙ, ҡалҡыр булһаң, ҡалҡ инде. Йәнкәй, һине бик һағындым, ҡайтыр булһаң, ҡайт инде.* Халыҡ йырынан. *Алтын балдаҡ бармаҡта, әйләнәләр һалмаҡҡа. Әйтер һүҙең булһа, йәнкәй, әйҙә сыҡтыҡ аулаҡҡа.* Халыҡ йырынан. *Әйҙә, йәнкәй, әйҙә, гөлкәй, әйҙә, тим гөл-баҡсаға, унда һайрай һандуғастар, ғишыҡ, йыр, моңдар аға.* Д. Юлтый.

ЙӘНКӘЙ-ЙӘНӘШ (Р.: любимый; И.: dear; Т.: sevgili) *и.*

Яратҡан, һөйгән кеше; йәр. □ Любимая, возлюбленная; любимый, возлюбленный; душечка, душенька, милый, милочка. ■ *Йөрәгемдә минең дөрләп яна йәнкәй-йәнәш ҡайғы ла һағышы.* Халыҡ йырынан. *Бик күп ыҙалыҡтар кисерә-кисерә юғалған йәнкәй-йәнәшен эҙләй торғас ҡына, өрйәңынан ҡауыша улар.* Ә. Сөләймәнов. *Шул йырыңды һинең тыңлай-тыңлай үҫеп еттек беҙ ҙә бер заман. Аҙаҡ белдек: йәнкәй-йәнәшең бит ауҙан түгел, яуҙан ҡайтмаған.* М. Ямалетдинов.

ЙӘНКӘШ (Р.: любимый; И.: dear; Т.: sevgili) *и.*

Һөйгән йәр. □ Любимый, возлюбленный; любимая, возлюбленная. ■ *Беҙҙең йәнкәш йүгерә, аҡ бүймаһы туҙғансы. Беҙҙең йәнкәш хаттар яҙа, ҡағыҙ бите тулғансы.* Халыҡ йырынан. *Егет менән ҡыҙ һөйөшә торған ниндәйҙер бер пьесала Маһира егеттең һөйгән ҡыҙы ролен алып бара, йәғни минең йәнкәш тейешле ҡыҙ сифатында ҡатнаша ине.* К. Мәргән.

ЙӘН ҠАЙЫШЫУ (йән ҡайыш-) (Р.: болеть душой; И.: to feel pain; Т.: canı acımak) *ҡ.*

Йөрәк һыҙлау, ныҡ әсенеү. □ Болеть душой, кручиниться, сокрушаться. ■ *Атаҡайым мине йәштән бирҙе, ҡайышмай микән уның йәндәре.* Сеңләүҙән.

ЙӘН ҠАРАЙЫУ (йән ҡарай-) (Р.: раздражаться; И.: fume; Т.: öfkelenmek) *ҡ.*

Бик ныҡ асыу килеп үртәнеү. □ Испытывать чувство сильного раздражения *(от досады, недовольства).* ■ *Улар [ирҙәр] араһында Әхмәтханды ла күреп, Әнүәрҙең йәне ҡарайҙы.* Р. Камал.

ЙӘН ҠОТОЛОУ (йән ҡотол-) (Р.: остаться живым; И.: get off; Т.: can kurtarılmak) *ҡ.*

Иҫән ҡалыу. □ Остаться живым.

ЙӘН ҠУЙЫУ (йән ҡуй-) (Р.: умереть; И.: die; Т.: can vermek) *ҡ.*

Үлеү. □ Скончаться, испустить дух. ■ *Дейеү, ҡот осҡос үкереп, шул урында йән ҡуйған.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘН ҠЫҘҒАНМАУ (йән ҡыҙғанма-) *ҡ. ҡар.* **йән аямау.** ■ *Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай һинең улдарың, Урал; шулар менән дошман ҡырҙы Шайморатов генерал.* Ҡ. Даян.

ЙӘН ҠЫЙЫЛЫУ (йән ҡыйыл-) (Р.: страдать; И.: suffer; Т.: acı çekmek) *ҡ.*

Яфа сигеү, тәҡәтһеҙ булыу. □ Страдать, мучиться. ■ *Был бәйетте беҙ яҙҙыҡ, нисә һалдат йыйылып. Көнө-төнө һуғыша-һуғыша бөттө йәндәр ҡыйылып.* Бәйеттән.

ЙӘН ҠЫЙЫУ (йән ҡый-) (Р.: убивать; И.: kill; Т.: cana kıymak) *ҡ.*

1. Үлтереү. □ Убивать, умерщвлять. ■ *Ҡан өсөн — ҡан ағыҙырға; йән өсөн — йән ҡыйырға!* Ғ. Әмири. *Бер төндө немецтар һөжүм яһап, бер нисә кешенең йәнен ҡыйып, бер нисә кешене яраланылар.* Ғ. Гүмәр.

2. Кешене яфалау, үртәндереү. □ Мучать, терзать, тянуть душу. ■ *[Рәбиға:] Ҡарасы, Һандуғас еңгә, бынау Алаҡай һауҙырмай ҙа ҡуя, суҡынсыҡ. Шуның йәнемде ҡыйыуы барҙыр мәгәр.* Яр. Вәлиев.

ЙӘН ҠӘРҘӘШ (Р.: близкий друг; И.: dear friend; Т.: can) *и.*

1. Яҡын дуҫ. □ Близкий друг.

2. Туған. □ Родственник. *Йән ҡәрҙәшем ҡунаҡҡа килде.*

ЙӘНЛЕ (Р.: живой; И.: living; Т.: canlı) *с.*

1. Йәне булған, йәшәгән; тере; *киреһе* — үле. □ Живой. ■ *Гөлнәзирәнең Күсем хаҡында оҙон кистәр буйы һөйләгән мауыҡтырғыс хикәйәләре аша малай .. үҙенең атаһын йәнле итеп күҙ алдына баҫтыра ине.* Ғ. Әмири. *[Мәүлет бай:] Бисә, мин таңһыҙ ҡайтмам, йоҡлама, өйгә күҙ-ҡолаҡ бул. Өй эсендә минең ҡайҙалығымды йәнле әҙәм белмәһен, ҡолағың менән ишет.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Хайуандар йәки үҫемлектәр донъяһына ҡараған. □ Живой, одушевлённый. *Йәнле тәбиғәт.* ■ *Йәнле сәскәләр йәйен дә, ҡышын да бер туҡтамай үҫә бында.* Ғ. Хәйри.

3. Тасуирлы, образлы. □ Живой, образный. *Йәнле һөйләү теле. Йәнле агитация.* ■ *«Айбикә» повесында Дәүләтшина заманының тормошсан проблемаһын күтәреп сыға, уны йәнле образдар, бай һүрәтләү саралары менән хәл итә.* М. Минһажетдинов.

4. Хәрәкәткә тулы, шаулап торған. □ Живой; оживлённый. ■ *Йәнле йәйҙең йәмле иртәһендә селпәрәмә килде уйҙарым.* Ш. Бикҡол. *Бөгөн күрше Яҡуп ауылында баҙар. Шуға күрә Илсеғол урамы ла ғәҙәттәгенән йәнлерәк, шаулыраҡ.* З. Биишева.

5. Күмәк кеше ҡатнашлығында бик интенсив барған, ҡыҙыҡлы һәм күңелле булған *(эш-хәлгә, төрлө ваҡиғаға ҡарата).* □ Оживлённый, весёлый, увлекательный, занимательный. ■ *Шул ваҡыт шаһ, юғарынан тороп, мәжлестең етерлек тиклем йәнле бармауын күрә икән, һәм Ғүмәр Хәйәмгә шуны күтәреп ебәрерлек бер шиғыр әйтергә ҡушҡан.* И. Насыри. *Һуңғы ваҡытта айырыуса йәнле, шау-шыулы тормошҡа күнеккән Сәғидуллин өсөн күңелһеҙ булды.* А. Карнай. *Юлдаштың әле, бынан бер генә сәғәт элек, тын, ҡотһоҙ, йәмһеҙ күренгән бүлмәһе ҡапыл шундай күңелле, шаулы, йәнле булып китте.* З. Биишева.

6. Кешегә хас булған үҙенсәлекле сифат, һыҙат; кешенең тәбиғәте, холҡо. □ Душевный, духовный, близкий. *Изге йәнле кеше.* ■ *Бала саҡтан да бер нәмәгә лә артыҡ иҫе китмәй торған, бошонмаҫ йәнле ҡыҙ булып үҫте ул [Тоня].* Ғ. Әхмәтшин.

7. Кешене һәм башҡа тереклекте белдергән һүҙҙәр менән килеп, шулар өсөн өҙөлөп торғанды белдерә. □ Любящий; сострадательный, сердобольный. *Ат йәнле кеше. Бала йәнле кеше. Кеше йәнле. Мал йәнле. Туған йәнле.* ■ *Ата болан бала йәнле була.* Т. Килмөхәмәтов. *Бала йәнле әсәһенең иркә уланы ине ул [Әмин].* Г. Хөсәйенов.

♦ **Йәнле ҡорал** ҡарауһыҙ, башҡа кешеләр ихтыярына буйһоноп хеҙмәт итеүсе кеше. □ Живое оружие. **Йәнле ҡурсаҡ** бер генә хоҡуҡҡа ла эйә булмаған, үҙ теләге менән бер эш тә башҡара алмаған кеше. □ Живая кукла. **Йәнле миҫал** теге йәки был уй-фекерҙе, хәлде туранан-тура иҫбатлай, күрһәтә торған факт. □ Живой пример. *Йәнле миҫал килтереү.* **Йәнле тарих** 1) ысынбарлыҡтағы хәл-ваҡиғалар. □ Живая история. ■ *Әле генә ниндәй моңло ине, бер бөйөк йән ине баяғы! Хәҙер үлде, өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡалды йәнле тарих, тылсым таяғы.* Р. Ғарипов; 2) *ҡар.* **йәнле шаһит**. ■ *Кинйәнең олатаһы Аҡкол да йәнле тарих һымаҡ ине. Һөйләй башлаһа, төн үткәне һиҙелмәй ҡала торғайны.* Ғ. Ибраһимов. **Йәнле шаһит** 1) *ниндәйҙер* ваҡиғаны үҙ күҙе менән күргән, яҡшы белгән кеше. □ Живой свидетель. ■ *Ҡунаҡ ҡатындар көслө ғәжәпләнеү, көслө икеләнеү араһында тороп ҡалдылар. Шау килешеп, күңелһеҙ хәлдең йәнле шаһиттары булып, йорттарына тараллылар.* Ғ. Хәйри. *Бына Айбулат алдында уның көтөүсе дуҫы Асатай, уларҙың йәнле шаһиты, үҙҙәренең походтары тураһында һөйләп, күҙҙәре эрелек менән янып ултыра.* Һ. Дәүләтшина; 2) *ҡар.* **йәнле миҫал**. ■ *Һүҙ сәнғәтенең аҫыл үрнәктәре булған мәҡәл һәм әйтемдәр — быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға күсеп, халҡыбыҙҙың үткән тормошо, ижад кеүәһе тураһында хәбәр алып килеүсе йәнле шаһиттар ул.* Ф. Нәҙершина. *Ҡәнәш тауы үткәндәргә йәнле шаһит булып ҡалған.* Й. Солтанов.

ЙӘНЛЕ-ЙӘНҺЕҘ (Р.: одушевлённый и неодушевлённый; И.: animate and inanimate; Т.: canlı ve cansız) *с.*

Донъялағы бөтә тере һәм тере булмаған *(нәмәләр).* □ Одушевлённый и неодушевлённый. *Йәнле-йәнһеҙ предметтар.*

ЙӘНЛЕК (йәнлеге) (Р.: зверь; И.: wild animal; beast; Т.: hayvan) *и.*

Өйҙәге эт, бесәй һәм ҡырҙағы бөтә булған һөтимәр йән эйәһе. □ Зверь / Звериный. *Йорт йәнлектәре. Йыртҡыс йәнлек. Ҡыр йәнлектәре. Йәнлек тиреһе. Йәнлек аулау. Йәнлек эҙе.* ■ *Әлегерәк ҡамсат ҡондоҙоноң тиреһе донъяла иң ҡиммәтле йәнлек тиреһе һаналған.* Ж. Кейекбаев. *Бик оҫта булған, ти, был һунарсы, ауламаған йәнлеге, атмаған ҡошо, тотмаған балығы ҡалмаған, ти, бының.* Әкиәттән. *Байсура итәгендәге сауҡалыҡтарҙың төҫө тағы ла ҡуйыланды, уларҙың эсендәге ваҡ-ҡына йәнлектәрҙең шыптырлауы тағы ла серлеләнде.* Һ. Дәүләтшина. *Аҡмалдың ҡышҡылыҡҡа солоҡтарын тикшереп-барлап, ваҡ йәнлеккә тәпе, тоҙаҡ ҡороп ҡайтырға тип китеп барыуы.* Б. Рафиҡов.

ЙӘНЛЕКСЕ (Р.: зверолов; И.: trapper; Т.: avcı) *и.*

Йәнлек аулаусы; һунарсы. □ Зверолов, охотник. *Оҫта йәнлексе. Йәнлексе булыу. Йәнлексе булып эшкә инеү.*

ЙӘНЛЕКСЕЛЕК (йәнлекселеге) (Р.: звероводство; И.: animal breeding; Т.: kürk hayvanı yetiştirme) *и.*

Йәнлек аҫраусылыҡ, ҡиммәтле тире менән тәьмин итеүсе йәнлек үрсетеү хужалығы. □ Звероводство. / Звероводческий. *Йәнлекселек тармағы. Йәнлекселек менән шөғөлләнеү. Йәнлекселек хужалығы.*

ЙӘНЛЕЛЕК (йәнлелеге) (Р.: оживлённость; И.: liveliness; Т.: canlılık) *и.*

1. Төрлө эшкә бәйле шау-шыу, хәрәкәт. □ Оживлённость, оживление, живость. *Киске йәнлелек.* ■ *Шәрғиә булмаһа, кем унда шартына килтереп табын яраштырыр? Кем уйын-көлкөгә самимилыҡ, йәнлелек өҫтәр?* Ә. Хәкимов. *Уның [Аҡмалдың] ағас араһынан килеп сығыуы табынға яңы йәнлелек, яңы шау-шыу өҫтәне.* Б. Рафиҡов. *Беренсе класс уҡыусыларының ҡотлауы залда айырыуса йәнлелек тыуҙырҙы.* З. Биишева.

2. Тормошҡа хас тулылыҡ, тәбиғилек. □ Живость. *Йәнлелек өҫтәү.* ■ *Мосолман шураһының киң залында, элекке көндәрҙәге кеүек, йәнлелек күренмәй.* А. Таһиров. *Төш ваҡыттары булыуға ҡарамаҫтан, ауылда һис ниндәй йәнлелек һиҙелмәй.* Н. Мусин. *Ауылда хәрәкәт, йәнлелек бөтөнләй юҡ.* Т. Хәйбуллин.

ЙӘНЛӘНДЕРГЕС (Р.: оживляющий; И.: life-enhancing; Т.: canlandıran) *с.*

Дәртләндергес, рухландырғыс, йәшәү көсө биргән. □ Оживляющий, животворный. *Йәнләндергес рух.*

ЙӘНДӘНДЕРЕП ЕБӘРЕҮ (йәнләндереп ебәр-) (Р.: оживить; И.: reanimate; Т.: canlandırmak) *ҡ.*

1. Шаулап торған урынға әйләндереү, күңеллелек биреп ебәреү. □ Оживить, внести оживление. ■ *Ҡурай, йыр беҙҙең палатка тирәһен йәнләндереп ебәрҙе.* М. Ғафури. *Кистәрен улар [Зинченколар] йыш ҡына, ғәжәйеп украин йырҙарын йырлап, сәй табынын йәнләндереп ебәрәләр.* Ә. Хәкимов. *Атайым янына килгән ағайҙар әргәһенә тағы бер кешенең өҫтәлеүе табынды йәнләндереп ебәрҙе.* М. Бураҡаева.

2. *Ниндәйҙер* эште көсәйтеп, үҫтереп ебәреү. □ Оживить, активизировать. *Эште йәнләндереп ебәреү.* ■ *Күп ерҙәрҙә быҫҡып ҡына янған мәҙәниәт усаҡтары эшен йәнләндереп ебәреү мөһим.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 11, 2010.

ЙӘНЛӘНДЕРЕП ТОРОУ (йәнләндереп тор-) (Р.: оживлять; И.: revive; Т.: canlandırmak) *ҡ.*

Даими рәүештә тын яткан урынға йәнлелек индереү. □ Оживлять, вносить оживление. *Тирә-яҡты йәнләндереп тора.*

ЙӘНЛӘНДЕРЕҮ (йәнләндер-) (Р: оживлять; И.: revive; Т.: canlandırmak) *ҡ.*

1. Тынлыҡҡа йәнлелек индереү; күңеллелек биреү. □ Оживлять, вносить оживление. ■ *Әле генә тынлыҡты йәнләндереп торған төрлө ҡоштар тауышы ергә һеңгәндәй юғалды.* Б. Хәсән. *Тымыҡ күкте йәнләндереп, шарҡылданы балҡып йәшнәү. Үҙүҙеңдән көлә белһәң, һис күңелһеҙ түгел йәшәү.* Г. Юнысова.

2. Йәнһеҙ предметтарҙы йәнле итеп күрһәтеү. □ Одухотворять, одухотворить, одушевлять. // Одухотворение, одушевление. ■ *Сәғәттәр буйына шул рәсемдәр алдында, уларға һоҡланып, уларҙан тәм алып, уларҙан йәм алып, уларҙың иң эске урындарына тиклем төшөнөп, уларҙы күҙ алдында кәүҙәләндереп, йәнләндереп ултыраһың.* Б. Ишемғол. *Уның [Аҫылғужаның] шиғырҙарына тәбиғәтте йәнләндереп ҡарау хас.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

3. Дәртләндереү, дәрт биреү. □ Воодушевлять, вдохновлять. // Воодушевление. ■ *Алда әрем өлпөләре, шулар артында ҡанауҙар күренде. Ул беҙҙе йәнләндерҙе. Ашыға-ашыға шуға табан шыуыштыҡ.* Д. Юлтый.

4. Теге йәки был эште көсәйтеп, үҫтереп ебәреү. □ Оживлять, вносить оживление, активизировать. // Оживление, активизация. *Эште йәнләндереү.* ■ *[Нурисламдың] уйлауынса, совет власы тыуҙырған наҡыҫ мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырырға ярамай; фән-мәғрифәт эштәрен йәнләндерергә, халыҡтың аң-белемен, мәҙәниәтен күтәрергә кәрәк.* Ә. Хәкимов. *Бынан һуң Тоҙтүбә тоҙон ташыуҙы көсәйтергә лә, Шәреҡ илдәре менән сауҙа итеүҙе йәнләндереүгә лә ҙур мөмкинлектәр тыуыр һымаҡ ине.* Г. Ибраһимов.

5. Элек булғанды күҙ алдына килтереү, иҫкә төшөрөү. □ Воскрешать. *Үткәндәрҙе йәнләндереү.*

6. *әҙ.* Һүрәтләү сараларының бер төрө: тәбиғәт күренештәрен йәки йәнһеҙ әйберҙәрҙе кешегә хас сифаттарҙа йәнле итеп тасуирлау. □ Олицетворение. *Йәнләндереү сараһы.* ■ *Йәнләндереү — метафора кеүек үк, әйберҙәрҙең үҙ-ара оҡшашлығына нигеҙләнгән троптарҙың береһе.* К. Әхмәтйәнов. *Ситләтелгән төшөнсәләр, тәбиғәт күренештәрендә кешеләрҙә була торған сифаттарҙы күреү, йәғни йәнләндереү алымы мәҡәләләрҙә шаҡтай йыш осрай.* Ф. Нәҙершина.

ЙӘНЛӘНДЕРЕҮСЕ (Р.: оживляющий; И.: animating; Т.: canlandıran) *с.*

Йәнлелек индереүсе. □ Оживляющий; вдохновляющий. ■ *20 йәшлек «Йәшлек» — йөмһүриәтебеҙҙең йылъяҙмаһын йәнләндереүсе йәүһәр йөҙөк, йәмғиәтебеҙҙе йәшәртеүсе йәшмә, йәшәйешебеҙҙе йәмләүсе йәйғор, йорт-илебеҙҙәге йәншишмә, йыһанда йым-йым йылтыраған йондоҙ.* «Йәшлек», 8 ғинуар 2011.

ЙӘНЛӘНЕП КИТЕҮ (йәнләнеп кит-) (Р.: ожить; И.: revive; Т.: canlanmak) *ҡ.*

1. Тәбиғәттең уяныуы. □ Ожить, возродиться. *Тирә-як йәнләнеп китте.*

2. Күңелләнеп, әүҙемләшеп китеү. □ Ожить, активизироваться. *Әңгәмәсем йәнләнеп китте.* ■ *Приказ алғас, Новиков йәнләнеп китте.* Д. Юлтый. *Юлай ҡарт та йәнләнеп китте: шуны күптән уйламай, башҡортҡа һыбайланыу ныҡырак килешә инде!..* Б. Рафиҡов.

ЙӘНЛӘНЕП ҠУЙЫУ (йәнләнеп ҡуй-) (Р.: оживиться; И.: become more active; liven up; Т.: canlanmak) *ҡ.*

Әүҙемләшеп ҡуйыу. □ Активизироваться, оживиться. ■ *Кинйәнең мөләйем күҙҙәрен балҡытып, йылмайып баш ҡағыуына бөтәһе лә йәнләнеп ҡуйҙы.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘНЛӘНЕҮ (йәнлән-) (Р.: оживать; И.: return to life; Т.: canlanmak) *ҡ.*

1. Йәнлегә әйләнеү, йәнле булыу. □ Оживать, возрождаться. *Тәбиғәт йәнләнде.* ■ *Гүйә, улар [сәскәләр] шунда йәнләнделәр, нурҙар сәсеп ем-ем көлдөләр.* М. Ғафури. *Шыр ялан ғас ятҡан киң яландар, тын яландар бына йәнләнер, һибелер ҙә орлоҡ һөргән ергә, ер йәшәреп, донъя йәмләнер.* Т. Йәнәби. *Әгәр улар [ҡоштар] бергәләшеп һайраша башлаһа, урман ниндәй йәнләнә, тыңлап туйғыһыҙ бер сихри моңға күмелә.* Р. Низамов.

2. Күңелле төҫ алыу; күңелләнеү, әүҙемләшеү, үҫеп китеү. □ Оживиться, активизироваться. ■ *Халыҡ йәнләнде, бала-саға ҡаршы йүгерҙе.* Д. Бүләков. *Ғүмәр тағы ла йәнләнде, яңы башлаған пакетын бөтөрмәй һүҙгә кереште.* С. Агиш.

ЙӘНЛӘНӘ БАРЫУ (йәнләнә бар-) (Р.: постепенно оживать; И.: return to life by and by; Т.: canlanmak) *ҡ.*

Әкренләп йәнлегә әйләнеү. □ Постепенно оживать, возрождаться, активизироваться. *Урам яйлап йәнләнә барҙы. Тәбиғәт көндән-көн йәнләнә бара.* ■ *Ҡарт дейеү, был [Әминбәк] уйнаған һайын, йәнләнә бара икән.* Әкиәттән.

ЙӘНЛӘНӘ БАШЛАУ (йәнләнә башла-) (Р.: начать оживать; И.: begin returning to life; Т.: canlanmak) *ҡ.*

Йәнлегә (4, 5) әйләнә барыу. □ Начать оживать, возрождаться; начать активизироваться. *Тирә-як йәнләнә башланы. Илебеҙҙең иҡтисады күрсәткән һуң йәнләнә башланы.* ■ *Бөлгөнлөккә төшкән ауылдарҙа ла тормош йәнләнә башлай.* «Башҡортостан», 17 февраль 2012.

ЙӘНЛӘНӘ ТӨШӨҮ (йәнләнә төш-) (Р.: повеселеть; И.: grow merry; Т.: keyiflenmek) *ҡ.*

Бер аҙ күңелләнеп китеү. □ Немного ожить, повеселеть, выйти из состояния уныния. ■ *Әкренләп табын йәнләнә төштө.* «Йәшлек», 26 ғинуар 2008.

ЙӘННӘТ I [ғәр. جنة] (Р.: рай; И.: paradise; Т.: cennet) *и.*

1. *миф.* Диндар, гөнаһһыҙ кешеләр үлгәндән һуң бара торған икенсе рәхәт донъя; ожмах. □ Рай. / Райский. *Йәннәткә инеү.* ■ *[Салих бабай:] Бик изге ҡарт ине меңкен, урыны йәннәттә булһын.* А. Карнай. *Быуат! Иҫеңдәме икән: Әҙәм — һауа йәннәт баҡсаһының тат-тәғәмен алыштырғас ләззәт алмаһына, тәҡдиренә алған ғазап тәме?* Т. Ғәниева. *Хәсән менән Хөсәйендер — ике шаһит, йәшләй йәннәт эйәһе булдылар имде.* «Ҡиссаи Йософ».

2. *күсм.* Рәхәт, матур тормош йәки урын. □ Райская жизнь. ■ *Йәннәт бит Аҡҡолай тирәһе!* Т. Килмөхәмәтов. *Урмандарҙа минең үҙ дәүләтем, дәүләт кенәме һуң — йәннәтем.* М. Ғәли. *Беҙ бергәбеҙ тағы! О, тәңреләр, нисек насип миңә был йәннәт?* Х. Назар.

ЙӘННӘТ II *и. диал. ҡар.* **йәлдәү**. *Мырҙаның йәннәте. Йәннәт ҡуйыу.*

ЙӘННӘТ АҒАСЫ (Р.: райское дерево; И.: paradise tree; Т.: cennet ağacı) *и. миф.*

Йәннәттә үҫкән ағастарҙың береһе. □ Финик. *досл.* Райское дерево *(по представлениям башкир, одно из деревьев, которое растёт в раю).*

ЙӘННӘТ ЕМЕШЕ (Р.: райские плоды; И.: paradise fruit; Т.: cennet yemişleri) *и. миф.*

Йәннәттә хур ҡыҙҙары биргән төрлө емештәр. □ *досл.* Райские плоды *(по представлениям башкир, в раю гурии подают особые плоды). Йәннәт емешен ауыҙ итеү.*

ЙӘННӘТИ (Р.: райский; И.: paradise; Т.: cenneti) *с.*

Йәннәткә хас. □ Райский. *Йәннәти утрау. Йәннәти тормош.*

ЙӘННӘТ ИШЕГЕ (Р.: врата рая; И.: gates of paradise; Т.: cennet kapıları) *и. миф.*

Ожмахҡа инеү урыны. □ Врата рая. ■ *Йома көн үлгәндәргә йәннәт ишеге асыҡ.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘННӘТ КҮЛДӘГЕ (Р.: саван; И.: shroud; Т.: kefen) *и.*

Мәйеткә кәфен эсенән текмәй генә яһап кейҙерелә торған күлдәк. □ Саван *(нижнее погребальное одеяние покойника в виде длинной незашитой рубахи). Йәннәт күлдәген кейҙереү.*

ЙӘННӘТ ҠОШО (Р.: душа умершего; И.: soul of the dead; Т.: cennet kuşu) *и. дини.*

Ожмахта йәшәгән ҡош. □ Райская птица. ■ *Үлгән кешенең йәне йәннәт ҡошона әүерелә.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘННӘТ ҠЫҘЫ *и. ҡар.* **хур ҡыҙы.** *Йәннәт ҡыҙы кеүек сибәр.*

ЙӘННӘТЛЕ *с. ҡар.* **ожмахлы.** ■ *Унда [Ҡөрьәндәге 2-се сүрәнең 153-сө аятында] «Әй, мөьминдәр, доньяла һиҙиәтле, ахирәттә йәннәтле булыу өсөн көрәшеүегеҙҙә Аллаһынан ярҙам һорағыҙ», – тиелгән.* «Башҡортостан», 27 сентябрь 2011.

ЙӘННӘТТЕҢ ЕТЕНСЕ ҠАТЫ *и. ҡар.* **фирҙәүес йәннәте.**

ЙӘННӘТТӘГЕСӘ (Р.: как в раю; И.: like in paradise; Т.: cennette gibi) *р.*

Йәннәттә кеүек. □ Как в раю, по-райски. *Йәннәттәгесә йәшәү. Аллаға шөкөр, йәннәттәгесә торабыҙ.*

ЙӘННӘТ ХУРЫ *и. ҡар.* **хур ҡыҙы.**

ЙӘН ӨҘГӨС (Р.: душераздирающий; И.: heartrending; Т.: yürek parçalayıcı) *с.*

Йәнгә үтеп инерлек, бик ныҡ тәьҫир итерлек; тетрәткес. □ Душераздирающий. ■ *Уның [Миңнеямалдың] йән өҙгөс тауыш менән ҡысҡырғанын ишетеп, Нигмәт ағай, ҡулындағы балтаһын ергә быраҡтырып, өйгә табан сапты.* Картотека фондынан.

ЙӘН ӨҘӨЛӨҮ (йән өҙөл-) (Р.: проголодаться; И.: get hungry; Т.: acıkmak) *ҡ.*

Асығыу. □ Проголодаться. *Йәне өҙөлөп, хәлдән тайып ҡайтып йығылды.*

ЙӘН ӨРӨҮ (йән өр-) (Р.: оживить; И.: animate; Т.: can vermek) *ҡ.*

1. Хәл индереү, терелтеү. □ Оживить, воскресить, вдохнуть душу *во что, в кого. Тәбиғәткә йән өрөү.* ■ *[Илдус:] Һеҙ кешеләргә кәрәк, һеҙҙең ҡулдарығыҙ һулып бөткән кеше ғүмеренә йән өрҙө бөгөн.* Ә. Мирзаһитов. *Таш һынға йән өргән тылсымлы һүҙ кеүек булды Гөлгөнәнең өндәшеүе.* Ш. Янбаев.

2. Күтәренкелек, йәнлелек биреү. □ Вдохнуть душу. ■ *Түбәндә бала-сағаларҙың сыр-сыуы ошо бер ҡараштa артыҡ тын тойолған, кешеһеҙлектән бер моңһоуланып киткән тирә-йүнгә йән өрөп ебәргәндәй тойола.* Ә. Вахитов.

ЙӘН ӨШӨТКӨС (Р.: леденящий душу; И.: freezing; Т.: buz gibi) *с.*

Тетрәндергес, бик яман, ауыр. □ Леденящий душу, оцепеняющий. *Йән өшөткөс хәбәр. Йән өшөткөс хәл.* ■ *Май аҙағы еткәс, йән өшөткөс хәбәр килде: «Көтөп ҡаңғырма...».* Р. Сафин. *Ядкәр баҫҡаҡ әлеге йән өшөткөс хәбәрҙе әйткәнгә тиклем хан булырға әҙерләнгән йәш егет бер аҙға ана шундай татлы хыялдар эсендә йөҙөп алды.* К. Мәргән.

ЙӘН ӨШӨҮ (йән өшө-) (Р.: находиться под страхом; И.: be afraid; Т.: korkmak) *ҡ.*

Аяныс хәлдән ҡурҡып ҡалтырау. □ Находиться под страхом; похолодеть. *соотв.* Душа ушла в пятки. ■ *[Кыраубикә:] Эшең уң сыҡмаһа, бәләһе үҙеңә булыр. Былай ҙа йән өшөп бөткән.* Д. Юлтый. *Шиктәренде ташла ситкә, йылмая күр, йәнем өшөй, ҡараштарың алманы – таш, ташты алма итер кешем.* Р. Бикбаев.

ЙӘН РӘХӘТЕ (Р.: блаженство; И.: bliss; Т.: üsmut) *и.*

Тыныслыҡ, бик рәхәт. □ Блаженство, очень приятное. ■ *Йән рәхәте һөйгән йәр менән.* Халыҡ йырынан.

ЙӘНСЕ БАРМАҠ (бармағы) (Р.: безымянный палец; И.: fourth finger; Т.: yüzük parmağı) *и. диал.*

Сығанаҡ бармаҡ. □ Безымянный палец. *Йәнсе бармаҡҡа шырау ҡаҙалды.*

ЙӘНСЕК (Р.: сплющенный; И.: flattened out; Т.: yassılmış) *с.*

1. Йәнселгән; йәмшек. □ Сплющенный, вмятый, имеющий вмятину. *Йәнсек һауыт. Йәнсек таба.* ■ *Яу ҡайтарыр дәртем бар ҙа — ҡылыс йәнсек, уҡ һыныҡ.* Т. Дәүләтбирҙина.

2. Йәмшек *(танау).* □ Приплюснутый *(нос).* ■ *Тәпәшәк буйлы, йәнсек танаулы, һөйләгәндә һүҙен асыҡ әйтә алмай, бер нисә ҡапҡыр әйтә торған йөмһүриәт башлығы Ҡасим ҡарый королтайҙы асты.* А. Таһиров.

ЙӘНСЕЛЕҮ (йәнсел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәнсеү.** *страд. от* **йәнсеү.** ■ *Беҙҙең ғашиҡ булғандарҙың бәхетенә, кеше ҡорбаны булмаһа ла, машинаның өҫтө ярайһы уҡ ныҡ йәнселгән.* Д. Исламов. *Йорттө һалғанда, балсыҡ, ағас, кирбес ярсыҡтары йәнселеп, машиналар тапап, таштай булып ҡатҡан ерҙе, ломдар менән аҡтарып, йомшартабыҙ.* Ф. Иҫәнғолов. ● *Эт ауыҙына төшкән таш та йәнселмәй сыҡмаҫ.* Мәҡәл.

ЙӘНСЕҮ (йәнсе-) (Р.: сплющивать; И.: flatten; Т.: yassıltmak) *ҡ.*

1. Баҫып, ҡыҫып, һуғып, рәүешен боҙоу; йәмшәйтеү. □ Сплющивать, расплющивать, вдавить. *Тимерҙе йәнсеү. Консерва банкаһын йәнсеү.* ■ *Үҙ ҡулдарың менән ҡүрһәттең һин: «Тарырак ал, – тинең, – алдыңды, иплән кенә өйөрөп сап шулай, йөҙөн йәнсеп ҡуйма салғыңдың!..»* Р. Ғарипов.

2. Баҫып, тапап иҙеү, емереү. □ Крепко побить, избить; рушить. ■ *Ауыр танк .. юлында осраған барлыҡ нәмәне иҙеп, йәнсеп, ут сәсеп, дошман сафтарын тарҡатып йөрөй башланы.* Ғ. Әмири. *Ҡара, ҡара, тиҙерәк таймаң, ҡас тиҙ, һине тапап һытмаһын. Эләктереп һине көпсәгенә, йәнсемәһен, йәнең сыҡмаһын!* М. Ғафури. *Ул [дошман] шашынһа, һин дә шаш, асыуҙан аяу белмә, ҡыйрат, йәнсе, ҡыр!* Ғ. Гүмәр.

3. *күсм.* Рәнйетеү, йөрәкте әрнетеү. □ Глубоко обижать, сильно уязвлять, причинять страдание. ■ *Йөрәгемде йәнсеп ҡуҙ яна — күңел түрендәге шул бала.* К. Кинйәбулатова.

ЙӘН СЫҒЫУ (йән сыҡ-) (Р.: умереть; И.: die; Т.: can vermek) *ҡ.*

1. Үлеү. □ Умереть, испустить дух. ■ *Хыялбайға керҙе мылтыҡ йәҙрәһе, сыҡты йәне, ҡалды үлек кәүҙәһе.* Ш. Бабич. *Күңелдәрең һинең сабыр булғас, уйламайһың кеше хәлдәрен, минең быуа кеше ҡайғыһынан сығып китер төҫлө йәндәрем.* К. Кинйәбулатова. ● *Ҡара кешенең тире сыҡҡансы, һары кешенең йәне сығыр.* Әйтем.

2. Бик ныҡ арыу, йонсоу. □ Доходить до изнеможения, изнуряться. ■ *Быуа беҙҙең Айбикә киленде әйтәм әле, бер эш мәнеһе белмәй бит бахырҡай. Әйтә-әйтә, өйрәтә-өйрәтә йәнең сыға.* Һ. Дәүләтшина.

3. Ҙур хафа кисереү, өҙәләнеү. □ Беспокоиться, тревожиться, терзаться. ■ *Күршефәләнгә сыҡһаң, былар сыуалышып бер нәмә ҡуптармаһындар, тип йәнең сыға.* Т. Хәйбуллин.

ЙӘНҪАРЫ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-усерганцев.

ЙӘНТ (Р.: старание; И.: diligence; Т.: çaba) *и. диал.*

Тырышлыҡ, хәстәрлек. □ Старание, усердие. *Йәнт күрһәтеү. Йәнт менән алдырыу.*

ЙӘН ТАЛАШЫУ (йән талаш-) (Р: быть при смерти; И.: be at death's door; Т.: can çekişmek) *ҡ.*

Үлемесле хәлдә булыу. □ Быть при смерти, на смертном одре.

ЙӘН ТАПШЫРЫУ (йән тапшыр-) *ҡ. ҡар.* **йән биреү II.** ■ *Дошман ҡулынан йән тапшырып [Бабсаҡ батыр] ятты шулай.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘН ТАРТЫУ (йән тарт-) (Р.: испытывать расположение; И.: attract; Т.: gönül çekmek) *ҡ.*

Ыңғай хистәр уятып, үҙенә йәлеп итеп тороу, күңел тартыу. □ Испытывать расположение, влечение *к кому-чему,* тянуть *к кому-чему.* ■ *Йән тартмаһа ла, ҡан тарта тигәндәй, Дәүрәндең ошо фани доньяла ҡалған ҡаны йөрөтөүсе берҙән-бер һәм иң һуңғы зат бит ул.* М. Хужин. *Алтын алҡа ауыр тарта, алты мыҫҡалдан арта. Ҡайҙа тыуһаң, ҡайҙа үҫһәң, йәнде шул ерҙәр тарта.*

Халыҡ ижадынан. ● *Йән тартмаған, тән дә тартмай.* Мәҡәл.

ЙӘНТЕРӘК (йәнтерәге) (Р.: опора; И.: support; Т.: dayanak) *и.*

Ярҙам итерлек, таянып эш итерлек кеше йәки бер нәмә; таяныс. □ Опора, поддержка в жизни. *Йәнтерәкһеҙ йәшәүе ҡыйын.*

ЙӘН ТЕТРӘҮ (йән тетрә-) (Р.: волноваться; И.: be agitated; Т.: heyecanlanmak) *ҡ.*

1. Бик ҡыҙғаныс йәки ҡурҡыныс нәмәнән ҡаты кисерешкә төшөү. □ Волноваться, сильно переживать *из-за чего.* ■ *Рәҫкә сыҡты күрәҙәлек ҡылыуым да, йәнем тетрәп, ҡалтыранып ҡалыуым да ошо һүҙҙән.* «Шоңҡар», № 1, 2009.

2. Ныҡ тулҡынланыу. □ Волноваться, сильно переживать *из-за чего.* ■ *Бөрөләр ҙә түҙмәй күҙен асыр, һәр тарафҡа сихри моң тулғас; йәнем тетрәп моңға талпынғанда, тел аҫҡысы бирһен һандуғас.* С. Әлибаев. *Шундай бер йыр йырлармын — ҡыҙҙарҙың йәне тетрәр.* Р. Шәкүр.

ЙӘНТЕҮ (йәнте-) (Р.: стараться; И.: endeavour; Т.: çabalamak) *ҡ. диал.*

Тырышыу, хәстәрләү. □ Стараться, усердствовать, проявлять усердие.

ЙӘН ТИР (Р.: усталость; И.: weariness; Т.: yorgunluk) *и.*

Ҡаты көсөргәнештән булған арманһыҙ хәл; ҡара тир. □ Усталость, изнеможение. *Йән тиргә төшөү.* ■ *Ҡәҙермәт, сит илдә эшләнгән туфли һатҡан саҡтарына юлығып, магазинда ике сәғәттән артыҡ, йән тирҙәре сыҡҡансы сиратта тороп, шуны алып ҡайтҡайны.* Н. Мусин.

ЙӘН ТИРГӘ БАТЫУ (йән тиргә бат-) (Р.: сильно устать; И.: yearn; Т.: halsiz düşmek) *ҡ.*

Ныҡ арыу, хәлдән тайыу. □ Сильно устать, изнемогать.

ЙӘН ТИРГӘ ТӨШӨҮ (йән тиргә төш-) *ҡ. ҡар.* **йән тиргә батыу.** ■ *Ҡоласын йәйеп уларға ташланған ыңғайға, Зәһиҙә әбей йән тиргә төшөп уянып китте.* Н. Мусин.

ЙӘНТ ИТЕҮ (йәнт ит-) (Р.: стараться; И.: endeavour; Т.: çabalamak) *ҡ.*

Тырышыу, хәстәрләү. □ Стараться, проявить усердие. ● *Йәнт иткән йәр табыр.* Әйтем. *Йәнт итмәгән – тапмаған.* Әйтем.

ЙӘНТӨЙӘК (йәнтөйәге) (Р.: родина; И.: motherland, homeland; Т.: anavatan) *и.*

Тыуған яҡ, тыуған ил. □ Родина, родная земля. ■ *Йәнтөйәккә кемдәр хужа икән, урҙа кеүек ирҙәр ҡолағас?* Т. Ғәниева. *Сумыр инем ошо йәнтөйәккә һыу төбөнә төшкән таш булып.* Т. Ғарипова. *Йәнтөйәктә атай-олатайҙар тормош дарьяларын кискәндә, бергә булдың, геройҙарың һинең михнәт һурпаларын эскәндә.* Р. Шәкүр.

ЙӘН ТУҘМАУ (йән туҙмә-) (Р.: рваться, стремиться; И.: wish for; Т.: heveslenmek) *ҡ.*

Сыҙай алмау, ашҡыныу. □ Рваться, стремиться *к кому-чему.* ■ *Юл ауыр булды, шулай ҙа тик ятып йән туҙмәне.* М. Ғафури.

ЙӘН ТЫНЫСЛАНЫУ (йән тыныслан-) (Р.: успокоиться; И.: calm down; Т.: sakinleşmek) *ҡ. диал.*

Торло ҡайғы-хәсрәт бөтөү, күңел тынысланыу. □ Успокоиться *(о душе).* ■ *Күҙ терәрҙәй берәр бөртөк кенә балалары тыуһа ла Хөсәйеновтың йәне тынысланыр ине.* Й. Солтанов.

ЙӘН ТЫНЫСЛЫҒЫ (Р.: душевный покой; И.: comfort of mind; Т.: huzurluluk) *и. диал.*

Күңел тыныслығы, ҡайғы-хәсрәттәрҙең булмауы. □ Душевный покой. ■ *Шундай ҡәнәғәтлек, тормош менән ризалыҡ бар ине әбейҙең ҡиәфәтендә, йән тыныслығы һирпелә ине.* Г. Ғиззәтуллина.

ЙӘНТӘМӘҮ (йәнтәмә-) (Р.: не стремиться; И.: not to wish; Т.: çabalamamak) *ҡ. диал.*

Теләмәү, тырышмау. □ Не стремиться, не стараться. *Эшләргә йәнтәмәү.*

ЙӘН-ТӘН (Р.: душа и тело; И.: body and soul; Т.: can ve ten) *и. йыйн.*

Кешенең барлыҡ булмышы, йәне һәм тәне. □ Душа и тело, (всё) существо. *Йән-тән менән. Йән-тән биреп уҡыу. Йән-тән менән бирелеү.* ■ *Аяманы улар [Башҡортостан егеттәре] йән-тәндәрен Тыуған илдең иркен һаҡларға.* Ҡ. Даян.

ЙӘНТӘСЛИМ [фарс.-ғәр. جان تسليم] (Р.: изо всех сил; И.: with all one's strength; Т.: çalapala) *р.*

Бөтә көс менән, йән көскә. □ Изо всех сил, во всю мощь. *Йәнтәслим эшләү. Йәнтәслим һуғышыу.* ■ *Фазылетдин, күрәһең, айкашҡандыр, йәнтәслим көрәшкәндер.* Р. Камал. *Өлкән кеше әйткәс, тегеләре лә [егеттәр ҙә] тыңлаштылар, ҡаршылашмай Батырҙың үҙе кеүек йәнтәслим эшләнеләр.* И. Ғиззәтуллин. *Әбделхаҡ ағай килеп еткәндә, былтырғы һалам өҫтөндә [Садыйҡ менән Әхмәт] икәү йәнтәслим айкаша, көрмәкләшә ине.* Ш. Янбаев.

ЙӘНТӘСЛИМГӘ *р. ҡар.* **йәнтәслим.** *Йәнтәслимгә йүгереү.* ■ *Шиһап йәнтәслимгә ҡыҫҡырһа ла, Атаһулла ярҙамға бармаған.* Н. Мусин. *Сабырлыҡтың да сиге бар бит: бесәйҙең йәне көйә башланы. Аҡтыҡ көсөн ҡолағына йүнәлтеп, уны [себенгә] йәнтәслимгә һелкте йорт хайуаны.* Р. Сәғитов.

ЙӘНТӘСТЕМ [фарс.-ғәр. جان تسليم] *р. диал. ҡар.* **йәнтәслим.** ■ *Ә Тәфтизан юлын дауам итте... Берсә йәнтәстем ул йүгереп барҙы, берсә лыпын ятып шыуышты. Берсә боҫто... Берсә сығып баҫты... Әҙен белдермәҫкә тырышты.* А. Игебаев.

ЙӘНҮБ [ғәр. جنوب] (Р.: юг; И.: south; Т.: cenup) *и. иҫк.*

Көньяҡ. □ Юг. *Йәнүбкә йүнәлеү.* ■ *[Сәйфелмөлөк:] Юҡ, һис кисекмәй китергә кәрәк был ҡырағай илдән, йәнүб тарафына, мәҙәниәт-мәғрифәт усаҡтарына юл тоторға.* Ә. Хәкимов. *Улар [коштар] беҙҙең яҡта бик һирәк күренеп, тик йәнүбтә генә йәшәйҙәр.* И. Насыри. *Йәнүбтә — Аҡһаҡ Тимер, ҡояш байышында — урыҫ кенәздәре, көнсығышта — тынғыһыҙ яугир, мәкерле сәйәсмән Иҙеүкәй.* Ә. Хәкимов.

ЙӘНҮБИ [ғәр. جنوبى] (Р.: южный; И.: south; Т.: cenubi) *с. иҫк.*

Көньяҡта урынлашҡан, көньяҡтағы. □ Южный. *Йәнүби ел. Йәнүби илдәр. Йәнүби Америка.*

ЙӘНҮР (Р.: тля; И.: greenfly; Т.: bit) *и. зоол. диал.*

Ағас ҡорто. □ Тля. *Йәнүр баҫҡан. Баҡсасылар ҙы йәнүр интектерә.*

ЙӘН ҮРТӘЛЕҮ (йән үртәл-) *ҡ. ҡар.* **йән әсеү.** *Юҡҡа ғына йәне үртәлде.*

ЙӘН-ФАРМАН [фарс. جانفرمان] (Р.: изо всех сил; И.: with all one's strength; Т.: çalapala) *р.*

Бөтә көс менән, йән көскә, бик шәп *(хәрәкәт итеп).* □ Изо всех сил, что есть силы, во всю мочь; сломя голову, во весь дух, со всех ног, на всех парах *(о беге). Йән-фарман йүгереү. Йән-фарман сабыу.* ■ *Гөлйөҙөм, тик ошо һуңғы һүҙҙе генә ишеткән кеүек, көйәнтә-биҙрәләрен, аяғы менән тибеп, ситкә тәгәрәтте лә йән-фарман яр аҫтына йүгерҙе.* Һ. Дәүләтшина. *[Айҙар:] Ниңә шул тиклем йән-фарман сабаһың, аяҡтарыңды ҡыҙғанып инең саҡ ҡына.* М. Кәрим. *[Карабай] тирмәнән сығыуға, алыҫтан йән-фарман сабып килгән бер һыбайлы күренә.* «Ҡуҙыйкүрпәс». ● *Аш тигәндә — йән-фарман, эш тигәндә — юҡ дарман.* Мәҡәл.

ЙӘН-ФАРМАН ЭШЛӘҮ (йән-фарман эшлә-) (Р.: работать что есть силы; И.: work with all one's strength; Т.: çalapala çalışmak) *ҡ.*

Барлыҡ көстө һалып эшләү. □ Работать что есть силы. ■ *Ҡасим Ҡәмәр менән Мариәнең йән-фарман эшләүҙәрен, Андрейҙың Һамар менән Ырымбур араһында Дутовҡа ҡаршы һуғышыуҙарын, Хәристы чехтарҙың Өфөнән Себергә оҙатыуҙарын һөйләне.* А. Таһиров. *[Сергей:] Үҙе лә [Ғибадулла] йән-фарман эшләй, бисәһен дә егә белә.* Н. Мусин.

ЙӘН ҺАҠЛАҒЫС (Р.: амулет; И.: amulet, charm; Т.: muska) *и.*

Халыҡ медицинаһында ауырыуҙан, яраланыуҙан һаҡлау, дауалау маҡсатында ҡулланылған әйбер; бетеү. □ Амулет. ■ *Атай һуғышҡа киткәндә, бер оло инәй 20 тинлек көмөш тәңкә биреп ебәргән, йән һаҡлағыс, тип.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘНҺАҠСЫ (Р.: телохранитель; И.: bodyguard; Т.: koruma) *и.*

Шәхси һаҡсы, һаҡлап йөрөтөүсе. □ Телохранитель. ■ *[Хан] эргәһенә шунда уҡ оҙон һөңгө тотҡан, кәкре ҡылыс таҡҡан ике йәнһаҡсы килеп баҫты.* Б. Рафиҡов. *[Батша:] Бул, әйҙә, йәнһаҡсым. Хеҙмәт ит. Онотмам, ҙурлармын!* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘН ҺАҠСЫҺЫ *и. ҡар.* **йәнһаҡсы.** *Йән һаҡсыһын беркетеү.*

ЙӘНҺЕҘ I (Р.: мёртвый; И.: dead; Т.: cansız) *с.*

1. Йәне юҡ, тере түгел. □ Неживой, бездушный, безжизненный. *Йәнһеҙ нәмә.* ■ *Риманың кәүҙәһе, йәнһеҙ нәмә кеүек, ҡулдан ҡулға эләгеп, һауала сайҡалды. Ул, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, һауала бәүелде.* Б. Хәсән.

2. Үлгән, үле. □ Мёртвый, неживой, безжизненный, бездыханный. *Йәнһеҙ кәүҙә. Йәнһеҙ кеше.* ■ *Уң яҡта — ҡулдарын артҡа ташлап салҡан ауған, доньяуи мәшәҡәттәрен түңәрәкләгән комиссарҙың йәнһеҙ кәүҙәһе.* Х. Ирғәлин.

3. Хайуан һәм үҫемлектәр донъяһына ҡарамаған. □ Неживой, неорганический. *Йәнһеҙ тәбиғәт.* ■ *Һәр кем үҙенең хисси типкене арҡаһында, йәнһеҙ тәбиғәт ҡаршыһында уға көндәш итеп, йәнле тәбиғәтте тыуҙыра.* Ғ. Хәйри.

4. Тын торған, тормош әҫәре сағылмаған. □ Мёртвый, безжизненный. *Йәнһеҙ тынлыҡ. Йәнһеҙ дала.* ■ *Тикшереүселәр йәнһеҙ планетала әле ялағайҙар уйнауын, әле күк йә ҡыҙыл ут йәки ниндәйҙер ҡараңғы таптар күреп ҡала.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010. *Тирә-йүндә үҙе Емештән үс алырға уңайлы тип ҡыуанған йәнһеҙ тынлыҡ хөкөм һөрә ине.* З. Биишева. *Ул [Мотаһар], йәнһеҙ урам сихырына юлыҡҡандай, тәнтерәкләп саҡ барҙы, аяҡ бармаҡтары араһына үлән уралып һөрләктө.* Й. Солтанов. *Урман ситтән ҡарап торғанда ғына буш, йәнһеҙ тынлыҡҡа сумған төҫлө.* Н. Мусин.

5. Дәртһеҙ, илһамһыҙ, һүлпән. □ Вялый, инертный, пассивный, бездеятельный. *Йәнһеҙ ҡиәфәт. Йәнһеҙ йөҙ.* ■ *Йөктәрҙе тейәгәнсе өйҙән бераҙ ҙа күренмәне. Тик тәҙрә аша ғына Ҡәйүмдең ташитан киҫеп яһалғандай йәнһеҙ йөҙө күҙгә салынғылап ҡалды.* Ғ. Лоҡманов. *Уның [Диңгеҙхандың] ҡаршыһында ап-аҡ сәсле, һап-һары йөҙлө, алашаныҡы төҫлө сығыңҡы яңаҡлы, һүнгән күмерҙәй йәнһеҙ күҙле, урттары эскә батҡан ҡарсыҡ ултыра.* Т. Ғарипова.

6. *күсм.* Ҡыҙыҡһыҙ, һүлпән. □ Серый, тусклый; неинтересный, скучный. *Йәнһеҙ тормош.* ■ *«Уғата йәнһеҙ уйын тапҡан. Үҙен үҙе интектереп ултырыуҙың ни ҡыҙығын таба икән?» — тип ҡустыһы тәҡдименән баш тартҡан Тимерғәле көлдө генә.* Я. Хамматов.

7. *күсм.* Аяуһыҙ, мәрхәмәтһеҙ, рәхимһеҙ. □ Бездушный, жестокий. *Йәнһеҙ әҙәм. Йәнһеҙ мөнәсәбәт.* ■ *[Шәһиҙә әбей:] Бына шул йәнһеҙ бәндәләр әҙәм балаларын эт урынына ла күрмәй ҡырҙылар.* Һ. Дәүләтшина. *Улының атаһына ҡарата булған был йәнһеҙ мөнәсәбәтенә Ныязғолдоң кәйефе бик ҡаты ҡырылды.* Һ. Дәүләтшина. *Ерем! Күгем! Әйтсе, йәнһеҙ палач нисек әйләнмәй һуң тораташҡа?!* Ф. Туғыҙбаева. *Яшинский ... ҡот осҡос йәнһеҙ ауыр һүҙҙәр менән Дәүериәне тетеп сыҡты.* З. Биишева.

♦ **Йәнһеҙ шаһит** ниндәйҙер хәл-ваҡиға булып үткән урындағы йәнһеҙ әйберҙәр, тәбиғәт. □ Неживой свидетель. ■ *Йылғаның тау яҡ ярҙарында, күп йылдарҙы күреп, йәнһеҙ шаһит булып үткәргән өйәңкеләр бар.* Ғ. Хәйри.

ЙӘНҺЕҘ II (Р.: замертво; И.: (drop) dead; Т.: cansız) *р.*

1. Йәнһеҙ булып, йәне сығып. □ Замертво, бездыханно, безжизненно. *Йәнһеҙ йығылыу. Йәнһеҙ ауыу.* ■ *Ер һелкенгәндәй булған: Әҙрәкә йәнһеҙ йығылған, имәнес ҙур кәүҙәһе һыуҙы урталай бүлгән.* «Урал батыр».

2. Аяуһыҙ, ҡанһыҙ (булып). □ Бездушно, жестоко. *Йәнһеҙ ҡыланыу. Йәнһеҙ яҙалау.*

ЙӘНҺЕҘЛЕК (йәнһеҙлеге) (Р.: безжизненность; И.: lifelessness; Т.: cansızlık) *к.*

1. Тынлыҡ, хәрәкәтһеҙлек. □ Безжизненность, мёртвенность. *Тирә-яҡ йәнһеҙлеге.*

2. Һүлпәнлек, ашыҡмаусанлыҡ. □ Неторопливость, нерасторопность, медлительность. *Эштә йәнһеҙлек күрһәтеү.*

3. *күсм.* Аяуһыҙлыҡ, ҡанһыҙлыҡ. □ Бездушие, жестокость. *Йәнһеҙлек күрһәтеү.* ■ *Юҡ, ниәтенән кире һунмәне [Рамазан], был йәнһеҙлек булыр ине.* Ә. Хәкимов. *Шәмсиә, аңына килеп, әхирәтенә шундай ауыр хәбәрҙе ғәфү итәлмәҫлек йәнһеҙлек, ғәмһеҙлек менән еткереүенә үкенеп әҙләп сыҡҡанда, ул бер ерҙә лә юҡ ине.* З. Биишева.

ЙӘНҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ (йәнһеҙләндер-) (Р.: умертвить; И.: mortify; Т.: öldürmek) *к.*

Йәнһеҙгә әйләндереү. □ Мертвить, умертвить. *Нервыны йәнһеҙләндереү. Рухты йәнһеҙләндереү.*

ЙӘНҺЕҘЛӘНЕП КИТЕҮ (йәнһеҙләнеп кит-) (Р.: становиться жестоким; И.: become cruel; Т.: amansız olmak) *ҡ.*

Аяуһыҙға әүерелеү. □ Превратиться в жестокого, бессердечного. *Ул бигерәк йәнһеҙләнеп китте.*

ЙӘНҺЕҘЛӘНЕП ҠАЛЫУ (йәнһеҙләнеп ҡал-) (Р.: опустеть; И.: get devastated; Т.: boşalmak) *ҡ.*

Йәмен юғалтыу; бушап ҡалыу. □ Опустеть, стать пустым, безжизненным. *Тормош йәнһеҙләнеп ҡалды. Тирә-яҡ йәнһеҙләнеп ҡалды.*

ЙӘНҺЕҘЛӘНЕҮ (йәнһеҙлән-) (Р.: становиться безжизненным; И.: become lifeless; Т.: cansızlanmak) *ҡ.*

1. Йәнһеҙгә әйләнеү. □ Становиться безжизненным, мёртвым. ■ *Шаулап торған урмандар йәмһеҙләнгән, ҡороғандар. йәнһеҙләнгән. үлгәндәр. яу. яу, тимен. яу. ямғыр!* Ш. Бабич. *Аҙбарҙағы башмаҡтар, һөрөлөшөп, бер мөйөшкә үкмәшкән, эстәре үткәшкән, күҙҙәре йәнһеҙләнгән, тояҡтары ҡуша баҫылған.* Й. Солтанов.

2. *күсм.* Ҡыҙыҡһыҙға әйләнеү, йәмен юғалтыу. □ Становиться скучным, неинтересным, серым. ■ *Уның [Гәйшә] өсөн тормош йәнһеҙләнеп, тотошлай бушап ҡалды, донъя һүнде.* «Йәшлек», 20 июнь 2009.

3. *күсм.* Аяуһыҙға әйләнеү, ҡанһыҙланыу; йәнһерәү. □ Становиться жестоким, бесчеловечным, бессердечным.

ЙӘНҺЕҘЛӘНӘ БАРЫУ (йәнһеҙләнә бар-) (Р.: превращаться в безжизненное; И.: get lifeless gradually; Т.: cansızlanmak) *ҡ.*

1. Әкренләп йәнһеҙгә (4) әйләнә барыу. □ Превращаться в безжизненное, мёртвое. *Көҙ етеү менән, тирә-яҡ йәнһеҙләнә бара.*

2. Ҡыҙыҡһыҙға, һүлпәнгә әйләнеү, йәмен юғалта барыу. □ Постепенно превращаться в серое, неинтересное, скучное. *Тормош йәнһеҙләнә бара.*

3. *күсм.* Ҡанһыҙлана, яуыҙға әйләнә барыу. □ Постепенно становиться жестоким, бесчеловечным, бессердечным. *Ир көндән-көн йәнһеҙләнә барҙы, өйҙәгеләргә көн күрһәтмәне.*

ЙӘНҺЕҘЛӘНӘ БАШЛАУ (йәнһеҙләнә башла-) (Р.: становиться жестоким; И.: become cruel; Т.: cansızlanmak) *ҡ.*

Йәнһеҙгә (7) әйләнә барыу. □ Становиться жестоким, бесчеловечным, бессердечным.

ЙӘНҺЕРӘҮ (йәнһерә-) (Р.: ослабевать; И.: slacken; Т.: zayıflamak) *ҡ.*

1. Арыу, хәлдән тайыу. □ Ослабевать, терять силы. ■ *[Һарыҡай] асығып, тамам йәнһерәп, тоҙло ерлекте лә ялап ҡараны.* С. Ильясов.

2. *ҡар.* **йәнһеҙләнеү 2.** ■ *[Ҡатил:] Ҡанһыраған икән был, йәнһерәгән икән был. Һарайымды күтәргән үгеҙемде килтерең! Үгеҙ ҡылыр ҡылыҡты, һеҙ, батырҙар, тик тороң!* «Урал батыр».

ЙӘН ҺӨЙГӘН (Р.: любимый; И.: darling; Т.: sevgili) *с.*

1. Бик ныҡ яратҡан кеше. □ Любимый, возлюбленный. ■ *Аҙнағоло — йән һөйгәне барында уға [Зөлхизәгә] ниндәй ҡурҡыныс булыуы мөмкин!* З. Биишева. *Илгә ҡыран һалғандың, илде тар-мар ҡылғандың, таш аттырып ҡая тауға, дейеүгә ут һалғандың йән һөйгәне Һомаймы?* «Урал батыр». *Матур ҙа күп, сибәр ҙә күп — йән һөйгәне бер булыр.* Халыҡ ижадынан.

2. Күңелгә ятышлы. □ Приятный, располагающий, любимый. *Йән һөйгән эш. Йән һөйгән хеҙмәт.* ■ *Тормошонда иң татлыһы нимә һуң? — тиһәң әгәр, — татлы нәмә юҡ донъяла йән һөйгән хеҙмәт ҡәҙәр.* Р. Ғарипов. ● *Донъяла ни татлы — йән һөйгән хеҙмәт татлы.* Мәҡәл.

ЙӘН ҺӨЙМӘҮ (йән һөймә-) (Р.: ненавидеть; И.: hate; Т.: sevmemek) *ҡ.*

Бик ныҡ яратмау, оҡшатмау. □ Ненавидеть, презирать, претить, испытывать чувство отвращения *к кому-чему.* ■ *Былдай күңелһеҙ тынлыҡты йәне һөймәгән Ҡыҙырас, сынаяғын түңкәреп, тороп китергә булды.* З. Биишева.

ЙӘН ҺУЙҒЫС (Р.: беспощадный; И.: unmerciful; Т.: acımasız) *с.*

Аяуһыҙ йолҡҡос. □ Беспощадный, безжалостный. *Йән һуйғыс кеше.*

ЙӘНҺҮРӘТ (Р.: мультфильм; И.: animated cartoon; Т.: çizgi filmi) *и.*

Һүрәттәр йәки ҡурсаҡтар ярҙамында төшөрөлгән фильм; мультфильм. □ Мультфильм. / Мультипликационный. *Башҡорт йәнһүрәте. Йәнһүрәт ҡарау. Йәнһүрәт төшөрөү.* ■ *Бүре, айыу, толко, ҡуян, терпе һымаҡ уҡ, был йәнлек тә [кондоҙ] күңелебеҙгә бала саҡтан йәнһүрәттәр, төҫлө-төҫлө һүрәтле китаптар аша үтеп ингән.* «Башҡортостан», 15 март 2012. *Бала, беренсенән, йәнһүрәт ярҙамында яманды яҡшынан айырырға өйрәнһә, икенсенән, уның ҡыҙыҡһыныусанлығы арта.* «Йәшлек», 5 сентябрь 2009.

ЙӘНҺӘР *с. иҫк. ҡар.* **йәнһеҙ 2.** *Йәнһәр булыу.* ■ *Һуғыш алдынан ғына яланда көтөү көтөп йөрөгән ун алты йәшлек үҫмерҙе йәшен ата. Уның йәнһәр тип әйтерлек кәүҙәһен ергә күмеп ҡотҡарып алып ҡалалар.* М. Ямалетдинов.

ЙӘНҺӘР БУЛЫУ (йәнһәр бул-) (Р.: быть безжизненным; И.: be lifeless; Т.: cansız olmak) *ҡ.*

Йәнһеҙ булыу. □ Быть безжизненным, мёртвым. *Йәнһәр булып ауҙы.*

ЙӘНШИШМӘ [фарс. جانچشمه] (Р.: животворный родник; И.: life-giving spring; Т.: can verici kaynak) *и.*

Әкиәттәге тереклек шишмәһе. □ Животворный родник, родник с живой водой. ■ *Доньяң һинең — йәншишмәнең тамсыһындай, күпме йортта һыу эсәләр ихсаныңдан.* М. Аҡмулла. *Ул [сәсән], әйтерһең, йәншишмә һыуын эсеп, беләгенә көс, ярһыу йөрәгенә дәрт йыйҙы.* Ә. Хәкимов. *[Урал:] Кеше ашар дейеүҙән бар кешене ҡотҡарыу, Йәншишмәнән һыу алып, үлгәндәрҙе терелтеү өсөн тыуған батырмын!* «Урал батыр». *Йәншишмәнең һуңғы тамсылары үҙенә тәғәйен булһа ла .. Урал батыр бар кешелек, бар тереклек, бөтә доньямәңгелеге хаҡына, услап алып, уны тирә-йүнгә һирпә.* Ә. Сөләймәнов. *Урал батыр бөрккән йәншишмәнән ҡотайғандай йәшел был ҡырҙар.* Х. Назар.

ЙӘН ШИШМӘҺЕ *и. ҡар.* **йәншишмә.**

ЙӘН ЭЙӘҺЕ (Р.: живое существо; И.: alive; Т.: canlı) *и.*

Кеше һәм бөтә тереклек. □ Живое существо. ■ *Йорт алдында бер генә тауыш сыҡһа ине, исмаһам. Йән эйәһе лә юҡ.* Ә. Бикчәнтәев. *Бөгөн ҡояш сығыу менән, ауылдың ҡулына салғы тоторҙай бөтә йән эйәһе туғайға ҡарай ағылды.* И. Насыри.

ЙӘНӘ I (Р.: опять; И.: again; Т.: yine) *р.*

1. Яңынан, ҡабаттан. □ Опять, снова, вновь. *Йәнә килеү. Йәнә осрашыу.* ■ *Яр буйындағы маяҡтар, төн килһә, балҡый йәнә.* Ә. Вәли. *Иң кәрәк саҡта йәнә бәйләнеш өҙөлдө.* И. Ғиззәтуллин. *Ҡыҙырас, ҡашын төйөп, күңелһеҙләнеп, йәнә иҙәнгә ҡараны.* З. Биишева. *Шунан һуң улар [дуҫтар] йәнә хушлашып, оҙаҡламай ҡайтанан күрешергә һүҙ бирешеп, үҙ юлдарына китәләр.* «Ҡуҙыйкүрпәс». ● *Ҡыш үтте, тип тун һатма, йәнә ҡыш бар.* Мәҡәл.

2. Өҫтәмә рәүештә, тағы ла. □ Ещё. *Йәнә бер ай үтте.*

ЙӘНӘ II (Р.: опять; И.: and also; Т.: yine) *йыйн. терк.*

1. Һәм, тағы. □ И, да ещё. *Мин, әсәйем йәнә ике ағайым.* ■ *Уның [Һарыбайҙың] бер улы йәнә Маҡтымһылыу исемле бер ҡыҙы булған.* Халыҡ ижадынан. *Тау батыр, Урман батыр йәнә Уғатар батыр — өсәүләп доньяны ҡыҙырып йөрөй, ти.* Әкиәттән.

2. Шулай уҡ, һәм дә. □ Также, и также. ■ *Йәнә һәр кем тәкәббер булһа, маҡтансыҡ булһа, доньяла хурлыҡ күрмәй китмәҫ.* М. Өмөтбаев.

ЙӘНӘЙ (Р.: название башкирского племени; И.: name of a Bashkir tride; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бер башҡорт ырыуының исеме. □ Еней (*название башкирского племени*). *Йәнәй батыры. Йәнәйҙәр ере.*

ЙӘНӘЙ БАШҠОРТО (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Йәнәй ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений енейцев.

ЙӘНӘЙ ТИПТӘРЕ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one

of Bashkir clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Йәнәй ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-енейцев.

ЙӘНӘЛӘ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән башҡорттары аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-бурзянцев.

ЙӘНӘП [ғәр. جناب] (Р.: превосходительство; И.: excellency; T.: efendi) *и. иҫк.*

Кемделер ололап әйтелә торған һүҙ; әфәнде. □ Господин, превосходительство. ■ *[Урмансы:] Батырша яуынан һуң батша йәнәптәре аяуһыҙ үс алған, беҙҙең иң матур ҡыҙҙарыбыҙҙы тоғро ярандарына таратып биргән.* Ғ. Яҡупова. *Ерҙә яу-яр ҡупһа, фарман килә ғали йәнәптәрҙән: яугир кәрәк!..* М. Ғәли. *Бүгәс-батша, йәғни император Петр III ғали йәнәптәре үҙе килеп керҙе.* Б. Рафиҡов.

ЙӘН ӘРНЕТКЕС (Р.: щемящий; И.: fateful; T.: can alıcı) *с.*

Ғазаплы, үҙәкте өҙә торған. □ Щемящий, горестный. *Йән әрнеткес хәбәр.* ■ *Бурылдың тормошо тын. Бурылдың тормошо, Ғәләмшә ҡортҡа тормошо кеүек, борсоулы, йән әрнеткес түгел.* С. Агиш.

ЙӘН ӘРНЕҮ (йән әрне-) *ҡ. ҡар.* **йән әсеү.** ■ *Йәне әрнеп, асыуы сигенән ташып сыҡҡан Зөлфиә йоҙроҡтары менән машинаһын туҡмарға тотондо.* Ф. Әсәнов.

ЙӘН ӘСЕҮ (йән әсе-) (Р.: болеть душой; И.: to feel pain; T.: canı acımak) *ҡ.*

Ауыр рухи ғазап кисереү, аҙарыныу. □ Болеть душой *за кого-что*, испытывать чувство тревоги *за кого-что* или чувство жалости *к кому;* огорчаться. ■ *Йөрәгем һурылып бара. Күҙем күрмәһә, әллә, бәлки, улай булмаҫ та ине. Күҙ күргәс, йән әсей бит.* Ғ. Дәүләтшин. *Саптар айғырҙы һәр ваҡыт Ғилаждың оло улы Мансур менеп йөрөй. Ул юҡ саҡта уның энеләре Шакир менән Закир менеп йөрөй. Сөнәғәттең йәне әсей, әлбиттә.* Ж. Кейекбаев.

ЙӘНӘСЫҠҠА (Р.: изо всех сил; И.: with all one's strength; T.: bütün gücüyle) *р.*

1. Бөтә көстө һалып, бөтә көс менән. □ Изо всех сил, во всю мочь. *Йәнәсыҡҡа тырышыу. Йәнәсыҡҡа ҡысҡырыу.* ■ *[Шамилов] йәнәсыҡҡа сикәһен ышҡыуына ҡарағанда, үҙ хәстәрен онотоп, шәкертен бәлә-ҡазанан ҡурсыу әмәлен эҙләүе күренә.* Ә. Хәкимов. *Ул [арбалы кеше], атының дилбегәһен тартҡылап, йәнәсыҡҡа ҡыуаланы һәм, киҫеүҙе сыҡҡанда, хайуанға һонолоп һыу эсергә лә ирек бирмәне.* Ж. Кейекбаев.

2. Сиктән тыш, бигерәк. □ Чересчур, слишком, чрезмерно. *Йәнәсыҡҡа ҡатмарлы. Йәнәсыҡҡа күп. Йәнәсыҡҡа ҙур.* ■ *Убыр күлендә борон-борондан балыҡ күп булды. Йәнәсыҡҡа ҡамыш баҫа торғайны ул күлде.* Д. Бураҡаев.

ЙӘН ӘҪӘРЕ (Р.: живая душа; И.: soul; T.: can) *и.*

Бер бөртөк йән эйәһе. □ Живая душа. *Бер йән әҫәре лә юҡ.* ■ *Ауылда һис бер йән әҫәре юҡ.* М. Ғафури. *Айсыуаҡ килеп еткәндә, больница тирәһендә йән әҫәре ҡалмағайны.* Т. Килмөхәмәтов.

ЙӘНӘҮЕЛГӘ *р. диал. ҡар.* **йәнәсыҡҡа.** *Йәнәүелгә ышҡыу. Йәнәүелгә йүгереү. Йәнәүелгә сабыу.* ■ *Өйҙә тәғәм ризыҡ юҡ. Күмәк инек бит йәнәүелгә.* Яр. Вәлиев.

ЙӘНӘҺЕ (Р.: будто бы; И.: supposedly; T.: sanki) *инш.*

Кешенең ҡылығынан йәки һүҙенән бер мәғәнә сығарып, шуны мыҫҡыллаған һымағыраҡ итеп һөйләгәндә ҡулланыла. □ Будто бы, якобы; дескать, мол. *Йәнәһе, былай ҙа аңлашыла. Йәнәһе, ваҡыты юҡ.* ■ *Ғимран бабай аҙ ғына уйланып торғандай итә: йәнәһе, беҙҙе бында ҡалдырырғамы-юҡмы, шуны хәл ҡыла.* Н. Мусин. *Йәш бөркөттәр ҡыйыуһыҙ ғына бер ни тиклем әйләнделәр ҙә үҙ урындарына барып сүктеләр, йәнәһе, ергә барып төштөләр.* Ғ. Әмири. *Нисек тә шатлана әле [турғай], күрһәгеҙ үҙен. Йәнәһе, ул киләсәккә ҡалдыра эҙен.* Р. Назаров.

ЙӘНӘШ I (Р.: любимый; И.: dear; T.: sevgili) *и.*

һөйгән йәр. □ Любимый, возлюбленный. ■ *Китәйемме, йәнәшем, китмәйемме? — Мин киттениһәм, ҡуйының ишл буш ҡала.* Халыҡ йырынан. *Йәндән артыҡ күргән йәнәшем, ғәзиз йәрем, күҙ нурым, ожмах хурым, — тип, ләззәтләнеп, теҙеп уҡыны ул [Сәхибә]. — Күк күгәрсенем, аҡ күбәләгем, хәләл ефетем.* З. Биишева.

ЙӘНӘШ II (Р.: рядом; И.: near; Т.: yanında) *р.*

1. *Кемдер* йәки *нимәләр* менән бер рәттән, йәнәшә, ҡатар. □ Рядом, около, бок о бок. *Йәнәш барыу. Йәнәш тороу. Йәнәш ултырыу. Минең йәнәшемдә.* ■ *Ҡәнзәфәр, былай, һүҙ ҡутәрә торған кеше, әммә үҙен теге мөртәттәргә йәнәш ҡуйыуҙы ҡабул итмәй, ҡыҙып китә.* Б. Рафиҡов. *Был ауылда Өйрәнсек менән йәнәш тағы бер оҫта йәшәгән.* З. Биишева. *Командир атлыларға юл ҡатыһынан сыҡмаҫҡа, икәүҙән артыҡ йәнәш бармаҫҡа, артта ҡалмаҫҡа бойорҙо.* Ә. Вахитов.

2. Бер-береһенә яҡын итеп, күрше итеп. □ Рядом, по-соседству. *Йәнәш йәшәү.* ■ *Әнүәр ризалығын белдергәс, Ҡәйүм .. оҙон аҙбар менән йәнәш һалынған мунса һымаҡ кескәй генә өйҙө күрһәтте.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӘНӘШ III (Р.: соседний; И.: neighbourly; Т.: komşu) *с.*

Ниҙеңдер янындағы, рәттән торған; күрше. □ Находящийся рядом, соседний; смежный. *Йәнәш бүлмә. Йәнәш баҡса. Йәнәш йорт.* ■ *[Малкин менән Мәҙинә] нисә йыл бер өйҙә, йәнәш бүлмәләрҙә йәшәп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашыуҙан уҙманылар.* Ә. Хәкимов. *Кәмә менән йәнәш һал өҫтөндә барған гвардия старшинаһы Ҡәйүм Әхмәтшин боҙло һыуға һикереп төшә лә, кәмәгә менеп, уҙ ҡулдәге менән кәмә тишеген тыға.* Р. Өмөтбаев.

ЙӘНӘШКӘ (Р.: рядом; И.: near; Т.: yanında) *р.*

Кем йәки *ни менәндер* йәнәш ергә, *кемдеңдер* йәки *ниҙеңдер* янына; йәнәшәгә, ҡатарға, эргәгә. □ Рядом, около. *Йәнәшкә ултырыу.* ■ *Ете йәштә ине ул аҡ ҡайын, апа инем уға ун йәшкә; иптәш булһын тип йәш имәнгә, ултырттым мин уны йәнәшкә.* Ҡ. Даян. *Йәнәшкә аттарҙы дилбегәләргә бәйләп, тышаулап утларға ҡуйҙылар.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘНӘШЛӘП *р. ҡар.* **йәнәш II**. ■ *Бишалты ҡатлы мөһабәт йорттар менән йәнәшләп, ергә сүгеп бөткән бер ҡатлы иҫке ағас йорттар ултыра.* Д. Юлтый. *Быны ризалыҡ тип аңлап, ялбыр ҡартлас йәнәшләп үк юрта башланы.* М. Кәрим. *Йәнәшләп, ярҙам итеп йөктө тартышҡан ҡуштан булһа, арба еңелерәк була ла бит.* С. Ильясов. *Әле бына бер үк яу юлдарынан атларға тура килде ул малҡайҙарға. Бер-береһенән айырылмай, томшоҡто томшоҡҡа тейҙереп, йәнәшләп кенә барырға яраталар.* Г. Ибраһимов.

ЙӘНӘШЛӘШЕҮ (йәнәшләш-) (Р.: расположиться рядом; И.: be next to; Т.: yanında yerleşmek) *ҡ.*

Йәнәш (II, 1) урынлашыу; ҡатарлашыу. □ Расположиться рядом, жить рядом. *Алдағылар менән йәнәшләшеү. Дуҫы менән йәнәшләште.* ■ *[Салауат] Билал менән йәнәшләште.* А. Таһиров.

ЙӘНӘШМӘ (Р.: раскаты у саней; И.: sledge spreader; Т.: kızağın kanatları) *и. диал.*

Сана үрәсәһе. □ Разводы, отводы, раскаты *(у саней). Йәнәшмә эшләү. Сананың йәнәшмәһе. Йәнәшмәгә йәбешеп барыу.*

ЙӘНӘШТӘ (Р.: рядом; И.: near; Т.: yanında) *р.*

Кем йәки *нимә менәндер* йәнәш ерҙә, *кемдеңдер* йәки *ниҙеңдер* янында; йәнәшәлә, ҡатарҙа, эргәлә. □ Рядом, около, возле. *Йәнәштә барыу. Йәнәштә ултырыу.* ■ *Тегенселәр кейем тегә, әҙерҙәрен ҡылдан нәҙек көмөш ептәр менән нағышлай, йәнәштә төрлө төҫтәге йөн йомғаҡтарын тағатып, келәм-балаҫ һуғалар.* Ә. Хәкимов. *Минең йәнәштә Вафин фамилиялы бер татар һалдаты ята.* Д. Юлтый. *Ерән бейә һис тартмай, йәнәштә уйнап, тыпылдап ҡына килә.* С. Ильясов.

ЙӘНӘШТӘГЕ (Р.: находящийся рядом; И.: neighbouring; Т.: yanındaki) *с.*

Кемдеңдер йәки *ниҙеңдер* янында, йәнәшендә булған, йәнәштә булған. □ Находящийся рядом, соседний, смежный. *Йәнәштәге урман. Йәнәштәге урам.* ■ *Ул [Николай Григорьевич] ғаиләгеҫә шунда, йәнәштәге*

бүлмәләрҙең береһендә йөрөйҙәр. Р. Камал. *Йәштәр ярышын туктатып торҙо. Мәрйәҙе йәнәштәге йыуан ҡарт ҡайынға билдәләне.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘНӘШТӘН (Р.: рядом; И.: nearby; Т.: yanında) *р.*

1. *Кемгәлер* йәки *нимәгәлер* йәнәш ерҙән, *кемдеңдер* йәки *нимәнеңдер* янынан. □ Рядом, около. *Йәнәштән атлау. Йәнәштән барыу.* ■ *Эш, тибеҙ, сәсәйбеҙ, тормош һиҙҙермәй йәнәштән үтә.* Р. Камал. *[Фәниә Ғилметдин ҡыҙы:] Беҙ уның [министр Попов] менән Өфөләге бер конференцияла осраштҡайнык. Президиумда бергә ултырҙык. Һуңынан аш өҫтәле янында ла йәнәштән урын алдык.* «Башҡортостан», 29 март 2012.

2. Бер рәттән, йәнәш ҡуйып. □ Рядом, около. ■ *Ватан! Ошо бер һүҙ ҡаныбыҙға әсә һөтө менән һеңешкән. Ғәҙәтләндек әйтеп Ватан һүҙен әсә һүҙе менән йәнәштән.* Т. Морат.

ЙӘНӘШӘ *р. ҡар.* **йәнәш II.** *Йәнәшә ултырыу. Йәнәшә атлау.* ■ *Ҡараңғы булһа ла, Ғәйнулла, Кинйәбай, бер-береһенән айырылмаҫҡа тырышып, йәнәшә киләләр.* Б. Хәсән. *Сурайып сығып торған ташҡа бәке осо менән тәрән итеп соҡоп, Зиннәт икеһенең исемен йәнәшә яҙғайны.* Ф. Иҫәнғолов. *Яхъя ҡарт — ауылдың муллаһы. Уның өйө мәсет ҡаршыһында, Ғәзизгә йәнәшә.* Ғ. Хәйри. *Илмырҙа менән Хөсәйенгә һөрөнтө ерҙе лә, бесәнлекте лә, үҙ теләктәренән тыш, шулай йәнәшә алырға тура килде.* К. Мәргән.

ЙӘНӘШӘГӘ *р. ҡар.* **йәнәшкә.** ■ *Ерән ҡашҡа ат ектем, йәнәшәгә тай ектем. Ҡаш һикерттем, күҙ йүгерттем, бер егетте тилмерттем.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘНӘШӘЛЕК I (йәнәшәлеге) (Р.: соседство; И.: vicinity; Т.: komşuluk) *и.*

Йәнәш булыу, күршелек. □ Соседство, смежность. *Йәнәшәлектә йәшәү.* ■ *Романдың иртәнгеләй дыуамалланып алыуҙарын кәләштең йәнәшәлеге менән дә, тыуған яктың серле тәьҫире менән дә аңлатырға мөмкин.* Б. Рафиҡов.

ЙӘНӘШӘЛЕК II (йәнәшәлеге) (Р.: примыкание; И.: parataxis; Т.: eklenme) *и. лингв.*

Эйәреүсе һүҙҙең эйәртеүсе һүҙгә грамматик йәһәттән түгел, мәғәнә йәһәтенән генә бәйләнеше (мәҫәлән, *көмөш йөҙөк, бик ҙур*). □ Примыкание. *Йәнәшәлек юлы менән бәйләнеү. Сифаттар үҙҙәре асыҡлап килгән исемгә йәнәшәлек юлы менән бәйләнә.*

ЙӘНӘШӘЛЕК III (йәнәшәлеге) (Р.: параллелизм; И.: parallelism; Т.: paralellik) *и. әҙ.*

Бер-береһенә оҡшаш йәки, киреһенсә, ҡапма-ҡаршы күренештәрҙе, төшөнсәләрҙе йәнәш ҡуйып һүрәтләү. □ Параллелизм. *Тематик йәнәшәлек. Ауаздашлыҡ йәнәшәлеге. Күп быуынлы йәнәшәлек.* ■ *Фольклорҙағы йәнәшәлектәр, күпселектә, тәбиғәт күренештәрен кеше тормошондағы хәл-ваҡиғалар менән рәттән ҡуйып һүрәтләйҙәр.* К. Әхмәтйәнов. *Ике шағирҙың һөйөү лирикаһындағы ана шундай йәнәшәлектәр образдар уртаҡлығында ғына түгел, ә эстетик идеалды кәүҙәләндереү ысулдарында ла күҙәтелә.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

ЙӘНӘШӘЛӘ *р. ҡар.* **йәнәштә.** ■ *Иңкеү урындарҙа, уйһыулыҡтарҙа уҙған йылғы ҡуйы ҡылған туҙҡынлана, .. түбәндәрәк ер биҙәге — зәңгәр күл ялтырай, йәнәшәлә сылтырап шишмә аға.* И. Абдуллин. *Йәнәшәлә генә бер снаряд ярылды, һәм уның тулҡыны Мөхәмәтшаны бер яҡ ситкә алып ырғытты.* М. Хужин.

ЙӘНӘШӘЛӘГЕ *с. ҡар.* **йәнәштәге.** ■ *Был ваҡытта бабай ҙа йәнәшәләге таш өҫтөнә сүгәләп алғайны.* Д. Бүләков. *Йәнәшәләге ҡапҡаһыҙ ихата эсендә төптә үк торған бәләкәс кенә тәпәш өйгә һығылырға булдыҡ.* М. Кәрим. *[Гилман] йәнәшәләге Ҡыҙҙар тауын, зәңгәрләнеп күренгән алыҫтағы урмандарҙы, ап-аҡ яландарҙы күҙенән үткәргәс, атаһы менән әсәһенең ҡәберҙәренә тағы ла хәтһеҙ ҡарап торҙо ла ҡайтыр яҡҡа ыңғайланы.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӘНӘШӘЛӘШЕҮ (йәнәшәләш-) *ҡ. ҡар.* **йәнәшләшеү.** *Алдағы төркөм менән йәнәшәләшеү.* ■ *Билал алда нимәлер уйлап барған Шадринды ҡыуып етте. Уның менән йәнәшәләшкәндән һуң: — Был ауылда ҡайһы ерҙә туктарбыҙ икән, иптәш комиссар? — тине.* А. Таһиров.

ЙӘНӘШӘНӘН *р. ҡар.* **йәнәштән.** ■ *[Хәсән ағай] киң йөҙөм япраҡтары аҫтына аяҡтары тимерҙән, тирә-яғы семәрләп эш-*

ләнгән киң һике өҫтөнә менеп ултырҙы ла [Сөмбөлгә] йәнәшәнән урын күрһәтте. «Ағиҙел», № 4, 2010. *Беҙ еләбеҙ. Йәнәшәнән әкрен генә тауы шыла. Туктап колак һалабыҙ беҙ тояктарҙың тауышына.* Т. Йосопов. *[Иштуғандың] Айһылыуы уның биленән йомшак кына косаклап, өнһөҙ-һүҙһеҙ йәнәшәнән бара ине.* З. Биишева.

ЙӘН ЮЛДАШ (Р.: неразлучный друг; И.: bosom friend; Т.: can yoldaşı) *и.*

Һәр вакыт бергә булған дуҫ. □ Неразлучный друг. *Йән юлдашым минең. Йән юлдаш менән барыу. Серҙәремде тик йән юлдашыма һөйләйем.*

ЙӘП I (йәбе) (Р.: зуб; И.: cog; Т.: çatal) *и.*

1. Осо тармакланып торған нәмәнең бер айырсаһы; сата. □ Зуб, зубец, рожок *(раздвоённых, вилообразных предметов).* ■ *Уны [ос һәнәген] әсәйем .. йәптәре тарбағайланмаһын өсөн, йүкә менән бөрөп бәйләп, һыу тешмәҫлек ергә — өй кыйыҕы эсенә һалып куя.* Н. Мусин. *[Якуп] киҫкәгә сабылған балтаны көс-хәл менән һурып алып, ике йәпте таманлап кыҫкартырға тотондо.* М. Кәрим. *[Әхмәҙулла мулла] һәнәк йәптәре шикелле бармактарын хәтәр тырпайтып, бәке янып ултыра.* З. Биишева. ● *Һабы килһә — йәбе килмәй, йәбе килһә — һабы килмәй.* Мәкәл.

2. Бер нисә бысаклы бәкенең бер бысағы. □ Лезвие *(складного ножа). Бәкенең өс йәбе бар. Бәкенең бер йәбе һынып сыкты.*

ЙӘП II (йәбе) (Р.: удачный момент; И.: good moment; Т.: başarılı an) *и.*

Урын-еренә килеп, килешеп торған бер хәл. □ Удачный момент *для чего-л.;* выход *из чего-л.* ■ *Мин йылымды үҙ йәбе менән генә һауып сығарып, яр башындағы акланға йәйеп һалдым.* Ф. Иҫәнғолов.

ЙӘП III (Р.: удачный; И.: fortunate; Т.: başarılı) *с.*

Уңай, ыңғай. □ Удачный; подходящий. *Йәп вакыт. Йәп мәлде табып барыу.*

ЙӘП IV (Р.: удачно; И.: fortunately; Т.: başarıyla) *р.*

Урын-еренә килеп, килешеп торған. □ Удачно; подходяще. *Йәп булыу. Йәп килеү. Йәп төшөү.* ■ *Байморат была әле үҙенең эше йәп килеүенә кыуанып кайтып килә.* Н. Мусин. *Көтөлмәгәнлек менән кыҙыкһырланған была ошо йөкмәтке үҙенә йәп килерлек поэтик форма, үҙенә хас композиция талап иткән.* К. Әхмәтйәнов. *[Хоҙайбирҙе мулла:] Кәҙерле Айсыуак солтан тәксирҙең иңендә көмөш кәмәренә йәп килһен!* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘПЕШ (Р.: блюдце; И.: saucer; Т.: bardak tabağı) *и. диал.*

Сәй эсә торған парлы һауыттың аҫка куйылған йәйпәк өлөшө; сынаяк аҫты. □ Блюдце. *Сәйҙе йәпешкә һалып эсеү. Йәпеште ватыу. Йәпеште төшөрөп ебәреү.*

ЙӘП-ЙӘШ (Р.: молоденький; И.: very young; Т.: çok genç) *с. артыкл. дәр. кар.* **йәш.** *превосх. степ. от* **йәш.**

Бик йәш. □ Очень молодой, молоденький. *Йәп-йәш кыҙ.* ■ *Наҙлы яҙҙың кайнар ирене үбеп асты йәп-йәш бөрөнө.* Р. Назаров. *Карт шунда ук йәп-йәш егет булған да куйған, ти.* Әкиәттән. *Тал-тирәктәр ташкын Иҙел кисеп баҫып тора һыңар аякта. Ағастарҙың һәр ботағы буйлап йүгереп йөрөй йәп-йәш япрактар.* Р. Ғарипов.

ЙӘП-ЙӘШЕЛ (Р.: зелёный-презелёный; И.: bright green; Т.: yemyeşil) *с. артыкл. дәр. кар.* **йәшел.** *превосх. степ. от* **йәшел.**

Асык йәшел, йәм-йәшел. □ Зелёный-презелёный, ярко-зелёный. *Йәп-йәшел ялан.* ■ *Алда йәп-йәшел булып Өршәк туғайлығы йәйрәп ята.* Ф. Әсәнов. *Йәп-йәшел кырҙар йәшәрҙе, ярҙы япрак бар ағас.* Ш. Бабич.

ЙӘП КИЛЕҮ (йәп кил-) (Р.: прийтись по месту; И.: convenient; Т.: denk gelmek) *к.*

Урын-еренә килеү, килешеү. □ Быть, прийтись к месту. *Йәп килеп тора. Күлдәгең үҙеңә йәп килеп тора.*

ЙӘПЛЕ I (Р.: удобный; И.: convenient; Т.: rahat) *с.*

1. Тотоноу, файҙаланыуға уңайлы; йәтеш. □ Удобный, соответствующий, подходящий. *Тәпкенең һабы йәпле.* ■ *Үҙем бәйләгән [түбәтәйҙе] Бүреһуккан олатайға бүләк иткәйнем, ул, калай йәпле, йәй кейерем, эҫе кабып бара хәҙер башыма, тип һөйөнгәйне.* Г. Якупова.

2. Урын-еренә килешле; йәтеш. □ Удобный, соответствующий, подходящий. *Йәпле*

урын табыу. Йәпле ваҡыт. ■ *Башҡорт яугирҙары үткелдең ике башына йәпле урындарҙы һайлап, яйлашып ятыуҙарына әллә ни күп тә үтмәне, Атанғол туғандың һыбайлылары ла килеп етте.* Ғ. Хөсәйенов. *Һин мосолман халҡының башынан кисергән хәлдәрен моңланып әйтеп тороусы йәпле һәйкәлһең, ҡанун.* Ш. Бабич.

ЙӘПЛЕ II (Р.: удобно; И.: conveniently; Т.: rahat) *р.*

1. Тотоноу, файҙаланыуға уңайлы; йәтеш. □ Удобно, соответствующе. *Йәпле итеп яһау. Тотоуға йәпле.* ■ *Ул [Ғиззәт] ҡабыҡтары ҡубып төшкән, тимерҙәй ҡатҡан йыланы ике-өс сабыуҙа йыҡты ла бик матурлап, йәпле итеп һәргәү эшләп алды.* Н. Мусин.

2. Килешле; йәтеш. □ Удобно, соответствующе. ■ *Алдар батыр тирә-яғына күҙ йүгертте. Ҡаршы яҡтағы тау ҡуйыныа һыйынып көтөп тороп, ошо үҙән буйында дошманды ҡаршылау йәпле түгелме һуң?* Н. Мусин.

ЙӘПЛЕ III (Р.: зубчатый; И.: forked; Т.: çatalı) *с.*

1. Саталы, айырсалы. □ ...зубчатый, с ... зубцами; развилистый. *Өс йәпле һәнәк. Өс йәпле ҡармаҡ.* ■ *[Яҡуп] ике йәпле ағас эҙләп тапты.* М. Кәрим. *Ныҡ ҡына таушалған өс карап .. Астара ҡалаһына етеп, ике йәпле туҡтатҡыс ырғаҡтарҙы һыу төбөнә батырҙылар.* Ә. Хәкимов.

2. Бер нисә бысаҡлы (бәке). □ С ... лезвиями. *Ике йәпле бәке.* ■ *Тикшереү үткәндә күп йәпле, күп функциялы швейцар бәкемде тартып алдылар.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

ЙӘПЛӘНЕҮ (йәпләнн-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йәпләү II, 2.** *страд. от* **йәпләү II, 2.** *Йәпләнгән мылтыҡ. Таҫма менән йәпләнгән кәпәс.*

2. *ҡайт. ҡар.* **йәпләү II, 1.** *возвр. от* **йәпләү II, 1.** *Йәпләнеп ятыу. Йәпләнеп ултырыу.* ■ *Ғәлимә, сумаҙанын ергә ҡуйып, шул бүкәнгә йәпләнде.* Й. Солтанов.

ЙӘПЛӘҮ I (йәплә-) (Р.: сделать развилину; И.: make a fork; Т.: çatal yapmak) *ҡ.*

Йәп ҡуйыу, сата яһау. □ Сделать развилину. *Һәнәк йәпләү. Йәпләп ҡуйыу. Йәпләп биреү.* ● *Һәнәгә ҡыйбат түгел, йәпләгәс ҡыйбатлана.* Әйтем.

ЙӘПЛӘҮ II (йәплә-) (Р.: делать удобным; И.: make comfortable; Т.: rahat etmek) *ҡ.*

1. Уңайлы, йәтеш итеү; ҡулайлау. □ Сделать удобным, аккуратным. *Йәпләп ултыртыу. Йәпләп ятыу.* ■ *Фәтхулла яныа йәпләп ултырып алып, уның менән һөйләшә башларға ғына йыйынғайным. бүлмәгә .. теремек бер малай шаулап килеп инде.* Д. Юлтый. *Зифа инде юлға сығыуға әҙерләп, йәпләп тултырып ҡуйған әйберҙәрен дә аҡтарып ташланы.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Урын-еренә килтереү, йәтешләп ҡуйыу; ҡулайлаштырыу. □ Делать удобнее, приспосабливать *что.* ■ *Ике бәйләм арҡан ҡыйыҡ аҫтынан төшөрөлгән, остары ике сатлы оҙон ҡолғалар ҡырҡып килтерелгән — шуларҙы ботаҡтарҙан таҙартып, йәпләп маташа [Етембай].* Б. Рафиҡов.

3. *диал. ҡар.* **йөкмәү I, 1.** *Тоҡ йәпләү. Йәпләп алып килеү. Биштәргә һалып йәпләү.*

ЙӘПЛӘШЕҮ (йәпләш-) (Р.: совпадать; И.: coincide (with); Т.: raslamak) *ҡ.*

Үҙ-ара йәтеш кенә тап килеү. □ Совпадать, прийтись к месту *(при сложении, стыковке и т. п.). Дүңгәләктәр йәпләште.* ■ *Тоташтырып ҡараһалар, уҡтың ике яртыһы йәпләшеп тора, ти.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘПЛӘШКӘ (Р.: чехол для пики или ножа; И.: sheath; Т.: kılıf) *и. диал.*

Һөңгө йәки бысаҡ ҡыны, тышлығы. □ Чехол для пики или ножа. *Һөңгө йәпләшкәһе. Бысаҡ йәпләшкәһе. Йәпләшкәнән һурып алыу.*

ЙӘПЛӘШТЕРЕҮ (йәпләштер-) *ҡ. ҡар.* **ҡулайлаштырыу.** ■ *Беҙ, аяҡтарҙы ныҡ терәп баҫып, тағы ла бер тапҡыр көсәндек, картерҙы, күтәреп, трактор ҡорһағына уҡ йәпләштерҙек.* Й. Солтанов.

ЙӘПМӘЛЕ *с. диал. ҡар.* **асалы.** *Йәпмәле ағас. Йәпмәле ботаҡ. Йәпмәле ботаҡ тәҙрәне ҡаплай.*

ЙӘПРӘЙ I (Р.: разросшийся; И.: spreading, branchy; Т.: yalay dallı, geniş) *с.*

Йәпрәйеп торған. □ Разросшийся; развесистый, раскидистый. *Йәпрәй ҡыуаҡ.*

Йәпрәй ҡаш. ■ *Тирмә ишеге асылды. Йәпрәй ҡашлы бер ҡарт күренде.* Ш. Шәһәр.

ЙӘПРӘЙ II (Р.: мелкие оборки; И.: small frill; Т.: firfir) *и. диал.*

Бала итәк, ҡатмар. □ Мелкие оборки, воланы. *Йәпрәй һалыу. Күлдәктең итәген йәпрәй итеп тегеү.*

ЙӘПРӘЙЕҮ (йәпрәй-) (Р.: широко разрастаться, раскинуться; И.: spread out, stretch out; Т.: dallanıp büyümek) *ҡ.*

1. Боҙолоп аҫҡа һалбырау. □ Широко разрастаться. *Йәпрәйеп үҫкән ҡаш. Ағас йәпрәйеп үҫкән. Йәпрәйгән ботаҡ.*

2. Боҙолоп йәмшәйеү, формаһын юғалтыу. □ Сплющиваться, расплющиваться. *Кәпәс йәпрәйеп бөткән.* ■ *Бабай, аяҡ тауыштарын ишетеп, малайҙар киләме икән, тип асыуланып, йәпрәйгән ҡалпағы аҫтынан ҡыҙҙар яғына боролоп ҡараны.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘПРӘЙЕШЕҮ (йәпрәйеш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йәпрәйеү.** *взаимн. от* **йәпрәйеү.** *Ағастың ботаҡтары йәпрәйешеп үҫкән. Ҡаштары йәпрәйешеп төшкән.*

ЙӘПРӘЙТЕҮ (йәпрәйт-) (Р.: свешиваться; И.: hang down; Т.: sarkmak) *ҡ.*

1. Боҙоп аҫҡа һалбыратыу. □ Свешиваться, болтаться. *Ҡаштарын йәпрәйтеү. Еңен йәпрәйтеп бара.*

2. Боҙоп йәмшәйтеү. □ Сплющивать, расплющивать. *Танауын йәпрәйтеү. Йәпрәйтә һуғыу. Йәпрәйтеп бөтөү.*

ЙӘПТӘШ (Р.: удобный; И.: convenient; Т.: rahat) *с. диал.*

Килешле, йәтеш. □ Удобный; подходящий, соответствующий. ■ *«Перовский» Ғаббас Сынбулатовтың кәүҙәһе өсөн ысынлап та йәптәш килеп торған көй булып сыҡты.* М. Тажи.

ЙӘПҺЕҘ I (Р.: неудобный; И.: inconvenient; Т.: rahatsız) *с.*

1. Тотоноу, ҡулланыу өсөн уңайһыҙ; йәтешһеҙ. □ Неудобный *(для пользования). Йәпһеҙ һәнәк. Йәпһеҙ һап. Йәпһеҙ тәпке менән картуф күмеп, ҡулдарым ауыртып бөттө.*

2. Урын-ере, торошо йәтешһеҙ; уңайһыҙ. □ Неудобный. *Йәпһеҙ ултырғыс. Йәпһеҙ диван.* ■ *Шунда уҡ йәпһеҙ ярҙан абынаһөрөнә, тая-тая, күлдең аръяғына йүгерҙем.* Ф. Иҫәнғолов.

3. *күсм.* Күңелгә ятышһыҙ; уңайһыҙ. □ Неудобный; неприятный. *Йәпһеҙ күренеш.* ■ *Бөтәһенә лә Морат үҙе ғәйепле, ҡыҙҙар күрҙеме, .. тегенең иғтибарын үҙенә ауҙарырға тырыша, тегеләй итә, былай итә, шунан берәй йәпһеҙ һүҙ әйтеп, йә берәй ҡылығы менән эште боҙоп ҡуя.* Р. Солтангәрәев. *Йәпһеҙ тынлыҡты боҙоп, Сәкинә генә .. танауын сирылтты.* Ә. Хәкимов. *[Егеттәрҙең] өсөһөнөң дә күңелендә ауыр тойғо ҡалдырған йәпһеҙ һөйләшеү ошо рәүешле осланды.* «Йәшлек», 18 август 2010.

ЙӘПҺЕҘ II (Р.: неудобно; И.: inconveniently; Т.: rahatsız) *р.*

1. Тотоноу, ҡулланыу өсөн уңайһыҙ; йәтешһеҙ. □ Неудобно. *Йәпһеҙ эшләнгән.* ■ *Урыны менән батҡаҡ һылашҡан, йөрөүе уғата йәпһеҙ.* «Ағиҙел», № 9, 2009. *Ә һин [Петруха] алабарман ҡыланаһың, һөмһөҙ, йәпһеҙ итеп тотонаһың, рыяһыҙ.* Р. Камал.

2. Урын-ере, торошо йәтешһеҙ; уңайһыҙ. □ Неудобно. *Йәпһеҙ ултырыу. Йәпһеҙ ятыу.* ■ *Улар [эшселәр] йөҙәрләгән бүрәнәне нимәгәлер йәпһеҙ килеп ҡаҙалған бер ағастың ғына тотоп торғанын да белә.* Н. Мусин.

3. *күсм.* Күңелгә ятышһыҙ; уңайһыҙ. *Йәпһеҙ килеп сыҡты.* □ Неудобно; неприятно. ■ *Алтынбайҙың бөгөлөп-һығылып баш эйеүе нисектер бик йәпһеҙ килеп сыҡты.* З. Ураҡсин. *Ҡыҙ урынына егет үҙе оялды. Әллә нисек, йәпһеҙ әйтелде, шикелле.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘПӘКӘЙЛӘНЕҮ (йәпәкәйлән-) (Р.: угодничать; И.: be obsequious; Т.: birine yaltaklanmak) *ҡ. диал.*

Ярамһаҡланыу, юхаланыу. □ Угодничать *перед кем-л.*, льстить *кому*, подхалимничать *перед кем. Етәксегә йәпәкәйләнеү. Йәпәкәйләнеп йөрөү. Кәрәкле кешеләргә йәпәкәйләнә белә.*

ЙӘПӘКӘЙЛӘҮ (йәпәкәйлә-) (Р.: лицемерить; И.: play the hypocrite; Т.: riyakarlık etmek) *ҡ. диал.*

Юхалау. □ Льстить, подхалимничать. // Лесть, подхалимство. *Йәпәкәйләп йөрөү. Йәпәкәйләп яуап биреү.*

ЙӘПӘТЕКЛӘНЕҮ (йәпәтеклән-) (Р.: угодничать; И.: fawn (upon); Т.: birine yaranmaya çalışmak) *к. диал.*

Кемгәлер ярарға, яҡшы күренергә тырышыу, яҡшатланыу. □ Угодничать, заискивать, лебезить *перед кем*, льстить *кому*. *Хужаға йәпәтекләнеү. Йәпәтекләнә белеү. Йәпәтекләнеп йөрөү.*

ЙӘПӘТӘЙ *с. диал. ҡар.* **ярамһаҡ**. *Йәпәтәй кеше. Йәпәтәй бала. Йәпәтәй булыу.*

ЙӘР [фарс. یار ‘дуҫ’] (Р.: возлюбленный; И.: sweetheart; Т.: yâr) *и.*

Күңел һөйгән, ғишыҡ уятҡан кеше. □ Возлюбленный; возлюбленная. *Йәр булыу. Йәр һөйөү.* ■ *Алдарымда һалҡын иши-мә, һалҡын булһа ла ҡуйы. Һинән башҡа йәр һөймәмен, алтын булһа ла буйы.* Халыҡ йырынан. *Менгән дә атым туры булһа, сабыр инем билем талғансы. Һөйгән дә йәрем тоғро булһа, ай-һай ҙа, гүзәлем, һөйөр инем зауҡым ҡанғансы.* Халыҡ йырынан. *[Недосека:] Ну, Гриша, үҙең хеҙмәтте ташлырып ҡайтыуға йәрең университетты тамамлар.* Н. Мусин. ● *Гәйепһеҙ йәр эҙләгән йәрһеҙ ҡалыр.* Мәҡәл. *Донъя күрке йәр менән.* Мәҡәл. *Екмәһәң дә ат яҡшы, һөймәһәң дә йәр яҡшы.* Мәҡәл. *Еренән айырылған ете йыл илар, йәренән айырылған ғүмер буйы илар.* Мәҡәл. *Йыйған малың, һөйгән йәрең ятҡа китмәһен.* Мәҡәл. *Йән аҙығы йәр булыр.* Мәҡәл. *Йәнең уртаҡ булһа ла, йәрең уртаҡ булмаһын.* Мәҡәл. *Йәр бирмәк — йән бирмәк.* Мәҡәл.

ЙӘР БУЛЫУ (йәр бул-) (Р.: быть возлюбленным; И.: be one’s sweetheart; Т.: sevgili olmak) *к.*

Кемдеңдер һөйгәне булыу. □ Быть *чьим-то* возлюбленным, возлюбленной. ■ *Илдәге бер иң сибәрҙең һөйгән йәре булғым килде.* М. Кәрим. *[Һомай — Шүлгәнгә:] Шундай батыр булалһаң — буҙым бүләк ҡылайым; атама әйтеп туй яһап, үҙеңә йәр булайым.* «Урал батыр».

ЙӘРБӘНДӘК *с. диал. ҡар.* **ҡаҡса.** *Йәрбәндәк ҡарт. Йәрбәндәк битле кеше. Йәрбәндәк яңаҡлы. Йәрбәндәк булыу.*

ЙӘРЕНГӘ *р. ҡар.* **йәрингә.** ■ *Искәндәр йәренгә рабфакка китергә, уны тамамлап, тыуған ауылына уҡытыусы булып ҡайтырға хыяллана.* Ә. Хәкимов. *[Рәхимов:] Ҡоштар һаның йәренгә ете-һигеҙ тапҡырға арттырырға кәрәк.* Ғ. Ибраһимов. *[Кеше — бал ҡорттарына:] Әгәр мин балығыҙҙы ашаған булһам, үҙегеҙгә ҡыш ашауға нимә ҡалыр ине? Һеҙ ҙә астан үлер инегеҙ, йәренгә мин дә балһыҙ ҡалыр инем.* Әкиәттән.

ЙӘРЕҮ (йәре-) *к. диал. ҡар.* **йәлсеү**. *Йәреп йәшәү. Утынға йәреү. Эсәр һыуға йәремәү.*

ЙӘРЕШ *с. диал. ҡар.* **иҫәр**. *Йәреш кеше. Йәреш булыу.*

ЙӘРИДӘ [ғәр. جريدة] (Р.: газета; И.: newspaper; Т.: gazete) *и. иҫк.*

Көндәлек ваҡиға һәм яңылыҡтар баҫыла торған ваҡытлы матбуғат; гәзит. □ Газета. *Йәридә сығарыу. Йәридә алдырыу.* ■ *Былдай урынһыҙ фекерҙәрҙе йәридә сәхифәләренә яҙып ғаләмгә иҙһар ҡылыуға ла оятлыр.* М. Ғафури.

ЙӘРИН (Р.: будущий год; И.: next year; Т.: gelecek sene) *и. иҫк.*

Киләһе йыл. □ Будущий год. *Быйылдың йәрине бар. Йәрин Эт йылы була.*

ЙӘРИНГӘ (Р.: на будущий год; И.: next year; Т.: seneye) *р.*

Киләһе йылға. □ На будущий год, в будущем году. *Йәрингә ҡалдырыу. Ул йәрингә уҡырға бара.* ■ *Ҡыҙ булырмы, әллә ул булырмы, шундай уйҙар килә Кәримгә, көлә белерме икән һәм дә үҙе тәпәй йөрөрмө икән йәрингә?* Т. Арслан. ● *Быйылғы эште йәрингә ҡалдырма.* Әйтем.

ЙӘРИӘ [ғәр. جارية] (Р.: рабыня; И.: female slave; Т.: cariye) *и. иҫк.*

1. Ҡол ҡатын; хеҙмәтсе ҡатын. □ Раба, рабыня; наложница; служанка. *Йәриә тотоу.* ■ *Берме-икеме ай үтә, ике төркөм ике тарафтан ике-өс әсир йәриә табып ҡайтмыштар, ти.* М. Өмөтбаев. *Оҙаҡламай уларҙың [йәйләү ирҙәренең] йәшерәк, матурыраҡ ҡатын-ҡыҙҙары әйелгә, йәриәгә әйләндерелер, бала-сағалары мал урынына һатылыр.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Күңел һөйгән, ғишыҡ уятҡан ҡатын-ҡыҙ; һөйәркә. □ Возлюбленная, любимая; любовница. ■ *Быға [әсәһенең үлеменә] йәнә*

[Саматовтың] шәхси тормошта уңмауы, яратҡан йәриәләре менән йә ҡауыша алмауы, йә күңел уртаҡлығы тапмауы килеп өҫтәлә. Ә. Хәкимов. *Атаман Василий Гугняның йәриәһе — Фатима. Үҙе һылыу, үҙе аҡыллы, ярай ҙа, ярата ла белгән.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘР-ЙӘР (Р.: вид свадебного фольклора; И.: sort of Bashkir nuptial folklore; Т.: düğün töreni) *и. этн.*

Туй йолаһы фольклорының төрө. □ Вид свадебного фольклора. *Йәр-йәр йыры. Йәр-йәр әйтеү.*

ЙӘР-ЙӘР ӘЙТЕҮ (йәр-йәр әйт-) (Р.: песня, исполняемая на свадьбе; И.: wedding song; Т.: yar yar) *и.*

Туйҙа ҡыҙҙы ҡаршы алғанда йырланған йыр. □ Песня, исполняемая на свадьбе. *Килен ҡаршылағанда йәр-йәр әйтеү.* ■ *Ул [«Буҙйегет»] ҡобайыр шиғыр-теҙемдәренә ҡоролған һамаҡ, әйтеш, «йәр-йәр әйтеү», сеңләү, һыҡтау йырҙары, мөнәжәт жанрҙары формаларында .. ижад ителгән романтик рухлы, күләмле эпик әҫәр — дастан-поэма булып тора.* Ғ. Ҡунафин.

ЙӘРКӘЙ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡаңны ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений канглы.

ЙӘРЛЕ (Р.: имеющий возлюбленного; И.: having a sweetheart; Т.: yârli) *с.*

Йәре булған. □ Имеющий возлюбленного, возлюбленную. *Йәрле булыу.* ■ *[Хәфизә:] Хаҡ Тәғәлә яҙған һуң, кемдәр йәрле булманы?! Туп тубынан айырылһа, кемдәр зарлы булманы?!* «Буҙйегет». *Тал тибрәтәм, тал тибрәтәм, талдарым һыу эсендә. Йәр һөймәйем, йәнем тыныс, йәрлеләр ут эсендә.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘРЛЕК (йәрлеге) *и. ҡар.* **ярлыҡ.** *Йәрлек йәбештереү. Тауарҙың йәрлеге. Багажға йәрлек йәбештереү.*

ЙӘРМИНКӘ [рус. *ярмарка* < поляк. *Jarmark* < нем. *Jahrmarkt* 'йыл да була торған баҙар'] (Р.: ярмарка; И.: fair; Т.: fuar) *и.*

Билдәле бер ваҡытта билдәле бер урынға бөтә яҡтан йыйылған оло баҙар. □ Ярмарка. *Көҙгө йәрминкә. Йәрминкәгә барыу. Йәрминкәләге хаҡтар.* ■ *Ғариф, Табын йәрминкәһенә барып, еңелгә егеп йөрөү өсөн, бер саптар юрға һатып алды.* Ж. Кейекбаев. *Өфөлә баҙар көндәрен, ҡышҡы йәрминкәлә Мөхәммәтсәлим ҡатыны менән кәрәк-ярак, аҙыҡ-түлек алырға, ауылдаштарын күргеләргә сыҡҡаны бар.* Ғ. Хөсәйенов. *Тауыштар күбәйгәндән-күбәйҙе, көсәйгәндән-көсәйҙе, бара торғас, һис бер һүҙ аңлашылмай торған йәрминкә шауына әйләнде.* Д. Юлтый. ● *Ике ҡатын бергә килһә — баҙар була, өсәү бергә килһә — йәрминкә.* Мәҡәл. *Бер ҡатын — ҡатын, ике ҡатын — баҙар, өс ҡатын — йәрминкә.* Әйтем.

ЙӘРМӘС *и. диал. ҡар.* **ошаҡсы.** *Йәрмәс булма. Йәрмәс булғаны өсөн уны яратмайҙар. Йәрмәстәрҙе йәнем һөймәй.*

ЙӘРМӘСЛӘНЕҮ (йәрмәслән-) *ҡ. диал. ҡар.* **ошаҡлашыу.** *Әсәһенә ҡайтып йәрмәсләнгән. Йәрмәсләнергә генә тора.*

ЙӘРМӘШЕҮ (йәрмәш-) *ҡ. диал. ҡар.* **йәбешеү.** *Нык йәрмәшеү. Итәккә йәрмәшеп йөрөү.*

ЙӘРПЕС *и. диал. ҡар.* **йәрпесәк II.** *Йәрпес һалыу. Күлдәккә йәрпес ҡуйып тегеү. Еңгә таҫманан йәрпес ҡуйыу.*

ЙӘРПЕСӘК I (йәрпесәге) (Р.: мочка; И.: ear lobe; Т.: kulak memesi) *и.*

Ҡолаҡтың аҫҡы, кимерсәкһеҙ өлөшө; ҡолаҡ йомшағы. □ Мочка *(уха). Ҡолаҡ йәрпесәктәренә алҡалар тағыу. Йәрпесәк шешеп сыҡты. Йәрпесәкте тотоу.*

ЙӘРПЕСӘК II (йәрпесәге) (Р.: узкая оборка; И.: narrow frill; Т.: dar fırfır) *и.*

Ҡыҙҙар күлдәгенең түшенә, еңенә бөрөп баҫҡан тар ғына ҡатмар. □ Узкая оборка. *Йәрпесәк ҡуйып тегеү. Йәрпесәккә тукыма киҫеү. Еңлек йәрпесәк.*

ЙӘРПЕСӘК ҠУЙЫУ (йәрпесәк ҡуй-) *ҡ. ҡар.* **йәрпесәкләү.** *Күлдәккә йәрпесәк ҡуйып тегеү.*

ЙӘРПЕСӘКЛӘҮ (йәрпесәклә-) (Р.: шить с оборками; И.: sew with frills; Т.: farbalalı dikmek) *ҡ.*

Йәрпесәк (II) ҡуйыу. □ Шить *что-л.* с оборками. *Йәрпесәкләп итәк тегеү. Күлдәкте йәрпесәкләү.*

ЙӘРСӘ [рус. *ярица*] (Р.: ярица; И.: spring rye; Т.: yazlık buğday) *и.*

Яҙ сәсә торған арыш; яҙғы арыш. □ Ярица, яровая рожь. / Яровый. *Йәрсә культураһы. Йәрсә сәсеү. Йәрсә үҫтереү.* ■ *[Степан — катынына:] Ҡунаҡ алдына йәрсә икмәге ҡуйырҙар. Юҡмы ни?* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘРСӘ БАШ (Р.: житняк; И.: agropyron; Т.: bitki) *и. бот.*

Арышҡа оҡшаған үлән. □ Житняк (лат. *Agropýron*). *Йәрсә баш тамыры. Йәрсә баш һабағы. Йәрсә баш сәсеү.*

ЙӘРҺЕҘ (Р.: не имеющий возлюбленного; И.: without a sweetheart; Т.: sevgilisiz) *с.*

Йәре булмаған. □ Не имеющий возлюбленного, возлюбленной; без возлюбленного, возлюбленной. ■ *Тыуған ерһеҙ, һөйгән йәрһеҙ — телһеҙ, мин етем. Тыуған ерем, һөйгән йәрем, тик һеҙ — бәхетем.* Р. Ғарипов. *Һөйгән йәрһеҙ йәшәү кеүек, айкояшһыҙ ҡыйын икән.* М. Кәрим.

ЙӘР ҺӨЙӨҮ (йәр һөй-) (Р.: иметь возлюбленного; И.: have a sweetheart; Т.: sevmek) *ҡ.*

Кемделер яратыу, мөхәббәт тотоу. □ Иметь возлюбленного, возлюбленную; любить. ■ *Ләкин нисек Саһаръярҙы туң йөрәк әҙәм тиһең? Туң йөрәкле булған кеше ҡайһылай йәрҙәр һөйһөн?* Р. Назаров. *Йәрҙәрҙе лә һөйһәң, һөй матурын, матур йәргә яусы кәрәкмәҫ.* Халыҡ йырынан.

ЙӘРӘБӘ I [рус. *жребий*] (Р.: жребий; И.: lot; Т.: kura) *и.*

1. *Нимәлер* бүлешкәндә, *ҡайҙалыр* ебәреүҙе билдәләгәндә ғәҙел булһын өсөн араһынан берҙе тәүәккәлләп тартып ала торған ваҡ ҡына бер иш нәмәләр. □ Жребий. *Йәрәбәгә сығыу. Йәрәбә һалыу. Йәрәбә алыу. Йәрәбә тартыу.* ■ *[Илмырҙа менән Хөсәйен] юл башынан уң яҡтағы өлөштөң үләне ҡуйыраҡ булғанға күрә, йәрәбә һалырға ҡарар итәләр.* К. Мәргән. *Ә һин беҙгә шундай кәрәк, балам, өлөшөбөҙ, бәхет йәрәбәбеҙ.* Т. Ғәниева. *Йәшәү йә үлем — йәрәбә ҡала. Иген — игенме, гәрәбә ҡала.* Т. Йосопов. *Мин көнләштем хатта шул мәхлүҡтән, ул мәңгегә тороп ҡалғанға. Эйе, мин — мәңгелек тигәндәй ул, өлөшөнә төшкәс йәрәбә.* Р. Ғарипов.

2. *миф.* Тәҡдир, яҙмыш, өлөш менән бәйле предмет. □ Жребий *(мифологизированный предмет, связанный с получением доли). Йәрәбә тартып сығарыу.*

ЙӘРӘБӘ II [ғәр. جراب] *и. диал.*

1. *ҡар.* **гәрәбә.** *Йәрәбә алҡа. Йәрәбә ҡашлы йөҙөк. Йәрәбә төҫө.*

2. *ҡар.* **эре мунсаҡ.** *Йәрәбә тағыу. Йәрәбә бүләк итеү. Нәҙек муйынлы кешегә йәрәбә тағыу килешмәй.*

3. *ҡар.* **муйынса.** *Йәрәбә тағып йөрөү. Тәңкәләрҙән йәрәбә эшләү.*

ЙӘРӘБӘ АЛЫУ (йәрәбә ал-) *ҡ. ҡар.* **йәрәбә тартыу.** ■ *Ҡыҙыл йорт алдында бик күп һәм төрлө крәҫтиән йәштәре йыйылып, йәрәбә алырға теҙелеп, ишектең асылғанын көтөп торалар ине.* М. Гафури.

ЙӘРӘБӘГӘ СЫҒЫУ (йәрәбәгә сыҡ-) (Р.: достаться по жребию; И.: fall out on one's lot; Т.: kura çekmek) *ҡ.*

1. Йәрәбә тотҡанда өҫкә сығыу. □ Достаться по жребию. *Йәрәбәгә машина сыҡты. Йәрәбәгә һыуытҡыс сыҡты.*

2. *миф.* Тәҡдиргә яҙылған өлөш. □ Достаться по жребию; доставшаяся доля, судьба.

ЙӘРӘБӘЛӘҮ (йәрәбәлә-) (Р.: бросать жребий; И.: cast lots; Т.: yazı tura atmak) *ҡ.*

Йәрәбә һалыу. □ Бросать жребий. *Йәрәбәләп бүлешеү.*

ЙӘРӘБӘ ТАРТЫУ (йәрәбә тарт-) (Р.: тянуть жребий; И.: draw lots; Т.: kura çekmek) *ҡ.*

1. Йәрәбә сығарыу. □ Тянуть жребий. *Йәрәбә тартыу сираты етте. Йәрәбәгә балаҫ тартып сығарҙы.*

2. *миф.* Яҙмышыңа төшкән өлөштө сығарыу. □ Тянуть жребий, вытаскивание доли, судьбы. ■ *Таяҡлап үлсәп, йәрәбә һалып ер өләшкән, тәүләп сәсеүгә төшкән көндәр ҙә артта ҡалды.* Ғ. Лоҡманов. *[Айыу:] Йәрәбә һалайыҡ. Йәрәбә кемгә сыҡһа, арыҫланға шуны ашатырбыҙ.* Әкиәттән.

ЙӘРӘМБӘТ-БӘҘРӘК (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-табынцев.

ЙӘРӘХӘТ [ғәр. جراحة] (Р.: рана; И.: wound; Т.: yara) *и.*

1. Тәндең йәки эске бер ағзаның ҡыр-ҡылып, тишелеп, зыянланған урыны; яра. □ Рана, ранение; травма, повреждение. *Ауыр йәрәхәт. Пуля йәрәхәте. Йәрәхәтте бәйләү. Йәрәхәтте дауалау.* ■ *Бүрәнәнән сөрөк алып, Яҡуп йәрәхәтенә һипте, күп итеп һипте.* М. Кәрим. *Тәнем булды йәрәхәт, сыға алмай башым кәбабтан.* М. Аҡмулла. *Ул [Зәбир ағай] быяла менән йәрәхәт урынын ярып ебәрҙе һәм ағыулы ҡанды һығып сығарҙы.* Д. Бүләков. *Яралыларҙың йәрәхәттәренә көйгән кейеҙ баҫып ҡанын туҡтатып, ҡалға эсенә алып инделәр.* З. Ураҡсин. ● *Тел йәрәхәте уҡ йәрәхәтенән яман.* Әйтем. *Һөңгө йәрәхәте китер, тел йәрәхәте китмәҫ.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Күңел рәнйеше. □ Рана, травма *(душевная). Күңел йәрәхәте.* ■ *Йыры менән ул [Рауза] кешеләрҙең асыҡ йәрәхәттәренә ҡағылды, ахыры.* М. Кәрим. *Йәрем йәндең бар тәҡәтен алып китте, йәрем йәнгә йәрәхәтен һалып китте.* Р. Бикбаев. ● *Яҡшы һүҙ йәнгә рәхәт, яман һүҙ йәнгә йәрәхәт.* Әйтем.

♦ **Йәрәхәткә тоҙ һибеү** (*йәки* **һалыу, баҫыу**) онотолған ауыр кисерештәрҙе иҫкә төшөрөп, күңелгә ауыр итеү. □ Бередить рану, сыпать соль на рану *кому.* ■ *Күптән башлаған һәм мәңге төҙәлмәй һәр саҡ һулҡылдап һыҙлай торған йәрәхәткә тоҙ һалыу ине был [Суртмаҡ баҫҡаҡтың һүҙҙәре].* К. Мәргән. *Йәрәхәткә тоҙ һипмәҫ өсөн ул [Йәнтимер], иптәшенең хәленә кергән булып, аһ-ваһ ҡилмәне.* М. Кәрим.

ЙӘРӘХӘТ АЛЫУ (йәрәхәт ал-) *ҡ. ҡар.* **йәрәхәтләнеү.** ■ *Көҙ көнө Кинйә менән киткәндәр бөтәһе һаҡланмаһа ла, яуҙа ауғандар урынына ла, ауыр йәрәхәт алып ҡайтарылғандар урынына ла яңылар килә торҙо.* Ғ. Ибраһимов. *Синфи дошман ҡулынан йәрәхәт алған кешеләр тураһында ул [Урманов] әүәлерәк айырым ҡарашта бул-ды.* М. Кәрим.

ЙӘРӘХӘТ БӘЙЛӘҮ (йәрәхәт бәйлә-) (Р.: перевязать рану; И.: dress the wound; Т.: yarayı sarmak) *ҡ.*

Йәрәхәткә махсус бәйләмес һалыу. □ Перевязать рану, наложить повязку. ■ *[Галя] шунда уҡ [өлкән лейтенанттың] йәрәхәттәрен бәйләне лә, носилкаға һалып, бында оҙатты.* Ә. Хәкимов.

ЙӘРӘХӘТЛЕ (Р.: раненый; И.: injured; Т.: yaralı) *с.*

1. Йәрәхәте булған, йәрәхәте бар, йәрә-хәтләнгән. □ Раненый; травмированный. ■ *Шуны ла онотоғға ярамай: йәрәхәтле януар, күҙен ҡан баҫып, теләһә ниндәй йыртҡыслыҡҡа барыусан.* Ә. Хәкимов. *Атыу туҡтағас, бөтмөләр, күрәһең, тип уйланы-мы [ҡаҫҡын], йәрәхәтле аяғын һөйрәңкерәп, сатанлай-сатанлай, яҡын уҡ ҡалған ҡыйы ҡыуаҡлыҡҡа табан йүгерҙе.* Ә. Хәкимов. *Шакир йәрәхәтле ҡулын күрһәтергә тип, медсанбатҡа килгәйне.* Ә. Чаныш.

2. *күсм.* Күңел йәрәхәте булған. □ Раненый, травмированный *(о душевной боли). Йәрәхәтле йән.* ■ *Йылҡыбай уны [Һабрауҙы] ҡүтәреп алды. Йәрәхәтле күңеленә ҡағылмаҫҡа тырышып, һүҙҙе уның ҡайғыһынан алыҫыраҡ нәмәләргә борҙо.* Ә. Хәкимов.

ЙӘРӘХӘТЛӘНЕП БӨТӨҮ (йәрәхәтләнеп бөт-) (Р.: израниться; И.: get covered with wounds; Т.: yaralanıp bitmek) *ҡ.*

Бөтә тәне йәрәхәт менән ҡапланыу; күп йәрәхәт алыу. □ Израниться, травмироваться *(сильно). Консерва асам тип, йәрәхәтләнеп бөттө. Һуғышта йәрәхәтләнеп бөттө.*

ЙӘРӘХӘТЛӘНЕП ҠАЛЫУ (йәрәхәтләнеп ҡал-) (Р.: получить ранение; И.: become wounded; Т.: yaralanmak) *ҡ.*

Йәрәхәт алып, эҙе, яраһы һаҡланып ҡалыу. □ Получить ранение, травму. *Һуғышта алышта йәрәхәтләнеп ҡалды. Аяғы йәрәхәтләнеп ҡалды.*

ЙӘРӘХӘТЛӘНЕП ЯТЫУ (йәрәхәтләнеп ят-) (Р.: лежать раненым; И.: lie wounded; Т.: yaralanmak) *ҡ.*

Йәрәхәт алып, түшәктә ятыу. □ Быть лежачим раненым, лежать раненым, получить

ранение. *Ҡаты алыштан һуң йәрәхәтләнеп ята. Дауаханала йәрәхәтләнеп ята.*

ЙӘРӘХӘТЛӘНЕҮ (йәрәхәтлән-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йәрәхәтләү.** *страд. от* **йәрәхәтләү.** *Йәрәхәтләнгән аяҡ. Йәрәхәтләнгән йән.* ■ *[Биктимер] башын тотоп ҡараны, ҡәүҙәһен барлап сыҡты, йәрәхәтләнгән ер тапманы.* К. Мәргән. *Был палатала тағы ике ауырыу: төҙәлөштә башына кирбес төшөп, маңлай һөйәге йәрәхәтләнгән урта йәштәрҙәге бер ханым, йығылып беләген һындырған бер уҡыусы ҡыҙ ята ине.* Ф. Әсәнов. *Алтынсәс яу менән бик ныҡ һуғышһа ла, уң ҡулы йәрәхәтләнеү сәбәпле, кире ҡайтҡан.* М. Ғафури.

2. Йәрәхәт алыу, яралы булыу. □ Получать ранение, травмироваться, получать повреждение. *Һуғышта йәрәхәтләнеү.* ■ *[Илғужа ағай] айыу менән алышҡанда ҡаты йәрәхәтләнгән.* Д. Бүләков. *Шулар [генерал-офицерҙар] бойороғо менән һалдаттар меңәрләп ҡырыла, йәрәхәтләнеп аяҡ-ҡулһыҙ ҡалғандарҙың иҫәбе юҡ.* Ә. Хәкимов.

3. *күсм.* Күңелдә, йөрәктә тәрән борсолоуҙан, ҡайғы-хәсрәттән эҙ барлыҡҡа килеү. □ Получать душевную рану, травму. ■ *Ни генә әйтмә, йөрәк йәрәхәтләнгән, күңел китек. Үткәндәрҙән күңелдә һағыш һәм моң ғына тороп ҡалған.* Ғ. Лоҡманов. *[Сәхибә:] Йәрәхәтләнгән йөрәккә ағыу һалалар [ирем-дең улдары].* Ғ. Хәйри.

ЙӘРӘХӘТЛӘП БӨТӨРӨҮ (йәрәхәтләп бөтөр-) (Р.: нанести многочисленные раны; И.: inflict multiple wounds; Т.: yaralamak) *ҡ.*

Тәнгә күп һанлы йәрәхәттәр һалыу. □ Поранить сильно, нанести многочисленные раны. *Ҡулды йәрәхәтләп бөтөрҙөм.*

ЙӘРӘХӘТЛӘП ЕБӘРЕҮ (йәрәхәтләп ебәр-) (Р.: поранить; И.: wound, hurt; Т.: yaralamak) *ҡ.*

Тәндә йәрәхәт барлыҡҡа килтереү. □ Поранить, нанести рану, травму, нанести ранение, травмировать. *Ҡолағын йәрәхәтләп ебәрҙе.*

ЙӘРӘХӘТЛӘҮ (йәрәхәтлә-) (Р.: ранить; И.: injure; Т.: yaralamak) *ҡ.*

1. Тәнде *ни менәндер* зыянлау, йәрәхәтле итеү; яралау. □ Ранить, нанести рану, травму, нанести ранение, травмировать. *Атып йәрәхәтләү. Хәнйәр менән йәрәхәтләү. Ҡулды йәрәхәтләү.* ■ *Ситтән килгән илсене йәрәхәтләп, хатта ҡурҡытып ебәреү ҙә егетлек һаналмай.* К. Мәргән. *Әле кисә генә бер өйөр бүре өс-дүрт көтөү һарыҡты боғаҙлап, йәрәхәтләп ташлаған.* Ә. Чаныш. *Ҡарабай, иң элек һин үҙең йыртҡысты йәрәхәтләп көсөн алғанһың, тип дуҫын маҡтай.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

2. *күсм.* Рәнйетеү, йөрәкте әрнетеү. □ Ранить душу, травмировать душу. *Күңелде йәрәхәтләү.* ■ *Бигерәк тә Зөбәйҙәнең, йәнәһе, үҙ ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәре нескә күңелдәрҙе нык йәрәхәтләне.* М. Кәрим. *[Вазифа:] Әгәр ҙә [Ғимай] шул килмәүе менән генә йәрәхәтләһә, был тиклем дә ауыр булмаҫ ине.* И. Насыри. *Йәшлек, йәшлек... Үҙ юлыңа үҙең яһалма кәртәләр ҡораһың бит... Һуңынан ҡайһындай үкенестәр баҫа һине, һағыш төйөнө йөрәгеңде өйкәй ҙә йәрәхәтләй!* Й. Солтанов.

ЙӘРӘХӘТ ҺАЛЫУ (йәрәхәт һал-) *ҡ. ҡар.* **йәрәхәтләү.** ■ *Яу яҙмышы уны [Рамазанды] аяп килде, хатта кескәй генә йәрәхәт һалып интектермәне.* Ә. Хәкимов.

ЙӘРӘШЕЛЕҮ (йәрәшел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәрәшеү.** *страд. от* **йәрәшеү.** ■ *Нишләһен инде Зөләйха, йәрәшелгән ҡыҙ Мысыр батшаһына кейәүгә сығырға мәжбүр була.* «Йософ китабы». *[Камал — Йәғҙәгә:] Беҙ һинең менән туғыҙ йәштән йәрәшелгәнбеҙ бит.* И. Абдуллин. *Шул ҡыҙ менән бер туған, унан ике генә йәшкә ҙурыраҡ Һөйәрбикә Әлибайға йәрәшелгән.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘРӘШЕҮ (йәрәш-) (Р.: сосватать; И.: ask in marriage; Т.: kız istemek) *ҡ.*

Ҡоҙалау, яусы (ҡоҙа) ебәреү, ҡыҙ һоратыу (әйттереү). □ Сосватать, помолвить. *Ҡыҙ йәрәшеү.* ■ *Мәҙәк Шәмғолдың уртансы улы кәләш йәрәште.* Р. Камал. *Бына тиҙҙән арыш урағы етә, арыш урағына төшөр алдынан уллы кешеләр, килен йәрәшеп, туйҙа йөрөргә ашығырҙар, кәйефләнеп ҡалырҙар.* Ғ. Хәйри. *Йәрәшеп, ҡалым түләнелгәнен алып бирегеҙ тиһә, ҡаршы килмәҫ [атаһы].* Ғ. Ибраһимов. *Йәрәшкән кәләше батырҙы ғүмеренең һуңғы сигенә тиклем ошонда*

көтә. Д. Буләков. ● *Егет инем — солтан инем, йәрәштем — хан булдым, катын алдым — хур булдым.* Мәҡәл.

ЙӘРӘШТЕРЕҮ (йәрәштер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йәрәшеү.** *понуд. от* **йәрәшеү.** ■ *[Ш. М. Ибраһимовтың] «Ҡырғыҙҙар. Этнографик очерк» .. тигән хеҙмәте ҡаҙаҡ халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, .. ҡыҙ менән егетте йәрәштереү, туй йолалары, бала тыуыу, баланы һаҡлау менән бәйле йолаларҙы бик ентекләп теркәүе менән етди ғилми әһәмиәткә эйә.* Р. Шәкүр. *[Тәнкәбикә:] Шул ҡорҙа Ырыҫҡол бей менән Илмырҙа бей, һеҙҙе йәрәштереп, туҫтаҡ эсте.* М. Кәрим.

ЙӘСАРӘТ [ғәр. جسارة] (Р.: смелость; И.: courage; Т.: cesaret) *и. иҫк. кит.*

Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ. □ Смелость, храбрость, мужество, неустрашимость. *Йәсарәт ҡылыу.* ■ *Был беренсе муафәҡиәттән йәсарәт алып, бик дәрт менән ижтиһад ҡылырға керештем.* М. Ғафури.

ЙӘСАРӘТ ИТЕҮ (йәсарәт ит-) (Р.: осмелиться; И.: dare; Т.: cesaret etmek) *ҡ. иҫк. кит.*

Баҙнат итеү, ҡыйыуланыу, баҙыу. □ Осмелиться, набраться храбрости. ■ *Уларҙың [ҡыҙҙарҙың], электрҙың ағып торған нурҙары араһында, балҡып торған йөҙҙәрен нисек итеп шаҙра айға тәшбиһ итергә йәсарәт итәйем?* М. Ғафури.

ЙӘСАРӘТЛӘНЕҮ (йәсарәтлән-) (Р.: осмелиться; И.: dare; Т.: cesaretlenmek) *ҡ. иҫк. кит.*

Баҙнат итеү, батырсылыҡ итеү. □ Осмелиться, решиться. ■ *Музыка быларҙың [гүзәл ханымдарҙың] ғишҡына нисек матур тауыш сығара, әллә ниндәй айырылышыуҙарҙы, бик ҡыҙыҡ гүзәл манзараның тиҙ генә бөтөүен иҫкә төшөрөп, йәсарәтләнә.* М. Ғафури. *Һис бер инсан уға ҡаршы торорға йәсарәтләнмәҫ ине.* М. Аҡмулла.

ЙӘСИҒ [ғәр. وسيع 'киске намаҙ'] (Р.: вечерние сумерки; И.: gloaming; Т.: alaca karanlık) *и. иҫк.*

1. Эңер төшкән, киске шәфәҡ байыған ваҡыт. □ Вечерние сумерки. *Йәсиғ етте.* ■ *Оҙаҡ та үтмәне, йәсиғ ваҡыттарында, поезд гөжләп торған ҙур бер вокзалға барып туҡтаны.* А. Таһиров. *Йәсиғ уҙған, төн уртаһы яҡынлашҡан, тирә-яҡты ҡараңғылыҡ тамам баҫҡан.* Ш. Бабич.

2. *дини.* Шул ваҡытта уҡыла торған намаҙ. □ Вечерняя молитва, вечерний намаз. *Йәсиғ уҡыу. Йәсиғ ваҡыты етте. Йәсиғ уҡырға әҙерләнеү.*

ЙӘСИҒ НАМАҘЫ (Р.: вечерняя молитва; И.: evening prayer; Т.: akşam namazı) *и. дини.*

Ҡояш байыған уҡыла торған киске намаҙ. □ Вечерняя молитва, вечерний намаз *(совершается после захода солнца).* ■ *[Ҡарамыш:] Ашап-эсеп, бер аҙ ял иткәндең һуңында хужам йәсиғ намаҙына йыйына башланы.* И. Насыри. *[Мәрйәм:] Ғәлләм ағай, ни эшләйбеҙ, йәсиғ намаҙы еткән икән?* М. Ғафури. *Эткол .. кирәгә башындағы ҡыҙыл башлы ҙур һөлгөнө алды ла, һөртөнөп, намаҙлығын йәйеп, йәсиғ намаҙын уҡырға керешә.* Т. Хәйбуллин.

ЙӘСИН АҒАСЫ (Р.: ясень; И.: ash; Т.: dişbudak) *и. бот.*

Зәйтүн ағастар ғаиләһенә ҡараған ҡыйғас япраҡлы, ҡаты олонло бейек ағас; ҡорос ағас. □ Ясень (лат. *Fraxinus*). ■ *Был [киң япраҡлылар] төркөмгә саған, бук, йәсин ағасы, эвкалипт һ. б. ҡарай.* Интернет селтәренән.

ЙӘСЛӘ [рус. *ясли*] (Р.: кормушка; И.: (feeding-)rack; Т.: yemlik) *и. диал.*

Малға бесән һала торған урын. □ Кормушка. *Бесәнде йәсләгә һалыу. Йәслә эшләү. Йәсләне һыйыр баҫып емергән.*

ЙӘСМИН I [ғәр. ياسمين] (Р.: жасмин; И.: jasmin; Т.: yasemin) *и. бот.*

Хуш еҫле аҡ сәскә ата торған ҡыуаҡ. □ Жасмин, чубушник. / Жасминный (лат. *Jasminum*). *Баҡса йәсмине. Йәсмин үҫтереү.* ■ *Бар тәбиғәт биҙәкләнгән йәсмин менән, нәркәс гөлө ғәжәпләнеп ергә баҡҡан, гүйә, былбыл әсәһенә бүләк өсөн ауыҙына алһыу ҡыҙыл сәскә ҡапҡан.* М. Сөндөклө.

ЙӘСМИН II (Р.: жасминный; И.: jasmin; Т.: yasemin) *с.*

Йәсмингә хас; йәсмингә ҡараған. □ Жасминный, жасминовый. *Йәсмин еҫе. Йәсмин майы.*

ЙӘСМИН III (Р.: дух ячменя; И.: spirit of the sty; Т.: arpacık ruhu) *и. миф. диал.*

Күҙгә сыҡҡан арпа эйәһе. □ В башкирской мифологии: дух ячменя на глазу. ■ *Йәсмин, Йәсмин! Мә, күкеш!* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘСТИК *и. ҡар.* **йәсиғ.** *Йәстик намаҙын уҡыу.* ■ *[Юлдыбикә:] Кисә бик әйбәтләп йәстик намаҙымды уҡып алғас, Хөснөтдин хәҙрәтте .. уйлап ултырҙым.* Т. Хәйбуллин.

ЙӘСТҮ [фарс. جستی] *и. ҡар.* **йәсиғ.** ■ *Бына ҡарттар йәстү намаҙынан сыҡты.* З. Биишева. *[Олуғ әмир:] Мин иһә йәстү намаҙы үтеү менән, Шәйхелислам хәҙрәттең хәлен белергә барырмын.* Ә. Хәкимов. *Фәүзиә, сығып эштәргә аш ҡуйғас, тәһәрәт алды, йәстү намаҙын уҡыны ла түшәк йәйеп, йоҡларға әҙерләнде.* Т. Ғарипова.

ЙӘТЕШ I (Р.: удобный; И.: easy-to-use; Т.: rahat) *с.*

1. Тотоноу, файҙаланыуға уңайлы; йәпле. □ Удобный. *Йәтеш ҡорал. Йәтеш көрәк. Йәтеш бысаҡ.*

2. Ҡуйыу, урынлаштырыу өсөн уңайлы; йәпле. □ Удобный. *Йәтеш шкаф.* ■ *Юлдаш йәтеш кенә һикәлтә булып һыу эсенә ослайып ингән яҫмаҡ ташҡа атланып ултырҙы ла аяҡтарын һыуға тыҡты.* З. Биишева. *Кешеләр, йәтеш урын һайлап, йәшел үләнгә ултырҙылар, сход тыныс булды.* Ж. Кейекбаев.

3. Төрөш, килбәте килешле. □ Складный, аккуратный; удобный. *Йәтеш кәүҙәле.* ■ *Белорет вокзалында уларҙы, Таһир ҡулына бер моҙға сейәле май, киптерелгән ит тоттороп, Зияфтың үҙе кеүек йәтеш кенә кәүҙәле атаһы оҙатып ҡала.* Р. Өмөтбаев.

4. Эш-хәлгә яйлы. □ Удачный, подходящий, хороший.

5. Урыны, яйына килешле; ҡулай. □ Удобный. ■ *[Ғабдулла:] Ҡылыстың арғы башында һәләк йәтеш ҡамышлыҡ бар.* М. Кәрим.

6. Ҡатмарлы түгел, мәшәҡәтһеҙ; анһат. □ Лёгкий, необременённый; удобный. *Йәтеш тормош.* ■ *Эште сүрәкәй уйнауҙан башлап алып китәбеҙ. Тәнде яҙыу, сәм ҡуҙғатып алып китеү өсөн, һәләк йәтеш уйын ул.* Н. Мусин.

ЙӘТЕШ II (Р.: удобно; И.: easy-to-use; Т.: rahat) *р.*

1. Тотоноу, файҙаланыуға уңайлы итеп; йәпле итеп. □ Удобно. *Эләктерергә йәтеш булыу.*

2. Ҡуйыу, урынлаштырыу өсөн уңайлап; йәпле итеп. □ Удобно. *Йәтеш ҡуйыу. Йәтеш һалыу. Йәтеш урынлаштырыу.*

3. Төрөш, килбәтен килешле итеп. □ Аккуратно, удобно. *Йәтеш ятыу. Йәтеш ултырыу.*

4. Эш, хәлгә яйлы итеп. □ Удачно, хорошо. ■ *Йәтеш булды — [Гүмәр Ҡырымғужин] алам тигән бөтә нәмәһе бер үк хужалыҡ тауарҙары магазинында бар икән.* Н. Мусин.

5. Урыны, яйына килешле итеп; ҡулайлап. □ Удобно. ■ *Салауат образы Эльбрус Ниғмәтуллинға — башҡорт егете данын күтәргән замандашыбыҙға — бик йәтеш тура килә.* «Йәшлек», 4 сентябрь 2010.

6. Ҡатмарлы түгел, мәшәҡәтһеҙ; анһат. □ Лёгко, удобно. *Йәтеш тормош.* ■ *Эште сүрәкәй уйнауҙан башлап алып китәбеҙ. Әбей менән бабай йәтеш кенә итеп торор ятарлар, ти.* Әкиәттән. *[Сынтимер] һыңар ҡуллы булыуына ҡарамаҫтан, ғәжәп йәтеш итеп тәмәке яһаны ла төтөнөн ситкә өрөп ебәрҙе.* Ә. Хәкимов.

ЙӘТЕШ ИТЕҮ (йәтеш ит-) (Р.: правильно сделать; И.: do right; Т.: iyi etmek) *ҡ.*

Кемдеңдер эшен хуплағанда әйтелә; яҡшы итеү. □ Правильно сделать. *Ҡайтып йәтеш иткәнһең.* ■ *[Мырҙабай:] Бына, бисәнең тыйыуына ҡарамайынса, Имәнҡулға барып йәтеш иттем дә баһа.* Н. Мусин.

ЙӘТЕШ КЕШЕ (Р.: спокойный человек; И.: quiet person; Т.: sakin kişi) *и.*

Ығы-зығыһыҙ, мәшәҡәтһеҙ, анһат ҡына, ипле генә йөрөгән кеше. □ Спокойный, покладистый человек. *Күршем йәтеш кеше булып сыҡты. Йәтеш кеше менән эш итеүе үҙе бер бәхет.*

ЙӘТЕШЛЕ (Р.: удобный; И.: convenient; Т.: rahat; kullanışlı) *с.*

Йәтеш килгән, уңайлы. □ Удобный, подходящий. *Йәтешле ваҡытты көтөү.*

■ *Мылтыҡлылар тау үркәсенең сусайышып үҫкән гранит таштары араһынан һәр ҡайһыһы үҙенсә йәтешле урын һайлап, юлға ҡарап боҫоп ятты.* З. Биишева. *Үҙенең [Гөлбаныуҙың] ун биш йәшендә тиңдәштәренән буйсанлығы менән айырылып торған ҡыҙға итектәренә тиклем йәтешле булды.* Т. Ғарипова. *[Шаҡман түрә] улына исем, үҙенеке кеүек йәтешле исем эҙләне.* К. Мәргән.

ЙӘТЕШЛЕК (йәтешлеге) (Р.: удобство; И.: conveniency; Т.: kolaylık; rahatlık) *и.*

Йәтешле булыу, уңайлыҡ. □ Удобство. *Юл йәтешлеге.* ■ *[Николай Петрович] ат арбалы юлдың оҙонлоғонан, форсаттың йәтешлегенән файҙаланып, оҙаҡламай барып етһә ауыл хәлдәрен алданыраҡ белә торорға сәмләнеп, һәләк булған полкташының һуғышҡа тиклемге ғүмер юлын барланы.* Й. Солтанов.

ЙӘТЕШЛӘНДЕРЕҮ (йәтешләндер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йәтешләнеү.** *понуд. от* **йәтешләнеү.** *Йәтешләндереп ҡуйыу. Йәтешләндереп һалыу.*

ЙӘТЕШЛӘНЕҮ (йәтешлән-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йәтешләү 2.** *страд. от* **йәтешләү 2.** *Урын йәтешләнде.* ■ *Ярыҡ кирбестәр йәтешләнгән урындарынан ҡуптарылып, ситкә ырактырылды.* Й. Солтанов.

2. *ҡайт. ҡар.* **йәтешләү 1.** *возвр. от* **йәтешләү 1.** *Юлға йәтешләнеп тороу. Йәтешләнеп ятыу.* ■ *[Байрас] унан ситән буйына барып, аяҡ бөкләп, йәтешләнеп ултырҙы.* З. Биишева. *«Осмайым, барыбер менәм!» — тигән сәмсел уй үтә баштан һәм тағы бер ысырғанып тырмашыуым була — мин аттың өҫтөнә йәтешләнеп менеп ултырам.* Н. Мусин.

ЙӘТЕШЛӘҮ (йәтешлә-) (Р.: готовить; И.: prepare (for); Т.: hazırlamak) *ҡ.*

1. Тейешле, әҙер хәлгә килтереү; әҙерләү. □ Готовить, приготавливаться. *Урын йәтешләү. Тамаҡҡа йәтешләү. Бесән йәтешләү.* ■ *Тимер ҡарауатты индереп, Фәриҙәгә урын йәтешләй башланылар.* Р. Солтангәрәев. *Хужалар ятыр урын йәтешләй башланы.* З. Ураҡсин.

2. Уңайы, яйына килтереү; килештереү. □ В форме деепричастия на *-п* выступает в функции наречия «удобно, аккуратно». *Йәтешләп ятыу. Йәтешләп теҙеү. Йәтешләп һөйләү.* ■ *Сәлих урынынан торҙо. Төйөнсөгөн арҡаһына бестерәүләп йәтешләп аҫты.* С. Агиш. *Походка китәсәк ир-егеттәр уҡ башаҡтарын үткерләй, янға яңынан кереш тарта, сәп атып ҡарап, уҡ һайлап, уларҙы йәтешләп һаҙаҡтарына тултыра.* Н. Мусин. *Ул туры атҡа һуйылы менән берҙе һыҙырҙыла, ҡырандасҡа йәтешләп ултырып, Рабиғаға ни әйтәсәген уйларға тотондо.* М. Хужин.

ЙӘТЕШ ТОРОУ (йәтеш тор-) (Р.: быть готовым; И.: be ready; Т.: hazır olmak) *ҡ.*

Әҙер тороу. □ Быть готовым *к чему-л. Юлға йәтеш тороу. Китергә йәтеш тороу. Бесәнгә йәтеш тороу.*

ЙӘТЕШҺЕҘ (Р.: неудобный; И.: uncomfortable; inconvenient; Т.: rahatsız, elverişsiz) *с.*

Йәтеш килмәгән; килешһеҙ, уңайһыҙ. □ Неудобный, неподходящий. *Йәтешһеҙ ваҡыт. Йәтешһеҙ урын.* ■ *[Камил — Рәуефкә:] Ә һин шул йәтешһеҙ дөрөҫлөктөң эҙенә төшкәнһең.* Ә. Хәкимов. ● *Ҡоро һүҙ ҡолаҡҡа йәтешһеҙ.* Мәҡәл.

ЙӘТЕШҺЕҘЛЕК (йәтешһеҙлеге) (Р.: неудобство; И.: inconvenience, discomfort; Т.: rahatsizlık) *и.*

Йәтешһеҙ, уңайһыҙ булыу. □ Неудобство. *Йәтешһеҙлек тыуҙырыу. Йәтешһеҙлектәргә күнеү. Йәтешһеҙлектәре күп.*

ЙӘТИМ I [ғәр. يتيم] (Р.: сирота; И.: orphan; Т.: yetim) *и.*

1. Ата-әсәһе йәки икеһенең береһе булмаған бала йәки үҫмер. □ Сирота. *Йәтим яҙмышы. Үкһеҙ йәтим. Йәтимдәр йортона урынлаштырыу.* ■ *Ҡартатайым үлеп китҡәс, атайым алпауытта эшен ташлап ҡайтырға, өс йәтимде ҡарап үҫтерергә тейеш була.* «Ағиҙел», № 3, 2010. *[Малайҙар:] Беҙ — йәтимдәр, тәрбиәһеҙ урамда ҡалған балалар, торор еребеҙ, кейер кейемебеҙ юҡ. Хәлегеҙҙән килгән тиклем бирһәгеҙ ине.* И. Насыри. *Йәтимдәрҙең иң кескәйе Йосоп исемле булған.* «Йософ менән Зөләйха тарихы». ● *Йәтимдең ауыҙы ашҡа тейһә, мо-*

роно ҡанар. Әйтем. *Инәһе юк ҡыҙ — йәтим, атаһы юк ул — йәтим.* Әйтем.

2. *Нимәнәндер* мәхрүм булған кеше. □ Сирота, обделённый *чем-л.* ■ *Туғанынан яҙған — ярты йәтим, туған теленән яҙған — мең йәтим.* Р. Бикбаев.

ЙӘТИМ II [ғәр. يتيم] (Р.: осиротелый; И.: orphaned; Т.: yetim) *с.*

1. Ата-әсәһе йәки икеһенең береһе булмаған. □ Осиротелый, осиротевший; сиротский. *Йәтим бала.* ■ *Көскә ултырып та еңмәгән йәтим үҫмерҙәр — әсәләренең, кесе туғандарының берҙән-бер таянысы.* Ә. Хәкимов. *Рәис беҙҙең арала берҙән-бер йәтим малай ине.* Н. Мусин. *[Хөсәйен:] Мин йәтим кеше, илем дә, һыуым да, төбәп барған ерем дә юк.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Яңғыҙ. □ Одинокий, сирота. ■ *[Ел] иманһыҙ, үкһеҙ йәтим япраҡтарҙы ҡайһылай теләй, шулай бырaҡтыра.* И. Абдуллин. *Башын һалып Зәки эшкә кергән йәтим Башҡортостан бәхетенә, валлаһи, ул һатмаҫ тыуған илен донъя аҡсаһына, тәхетенә.* Ш. Бабич.

ЙӘТИМ БИСӘ (Р.: вдова; И.: widow; Т.: dul) *и. диал.*

Тол ҡатын. □ Вдова. *Йәтим бисәне ҡыйырһытһаң, ҡарғышы төшә. Күршемдә йәтим бисә йәшәй.*

ЙӘТИМДӘР (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мырҙалар ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир рода мурзалар.

ЙӘТИМДӘР ЙОРТО (Р.: детский дом; И.: children's home; Т.: kimsesiz çocuklar yurdu; yetiştirme yurdu) *и. диал.*

Балалар йорто. □ Детский дом, сиротский приют. *Йәтимдәр йортона тапшырыу.* ■ *Бер көндө Зөлфәт иртәләп ҡайтты ла Сәйҙәне алғы яҡҡа саҡырып сығарҙы. «Гөлнара баланы йәтимдәр йортона бирергә ниәтләй», — тине ул.* «Шоңҡар», № 4, 2011.

ЙӘТИМ-ЕЛПЕ *и. диал. йыйн. ҡар.* **йәтим-еһер.** *Йәтим-елпенең күҙ йәше төшә. Йәтим-елпене ҡыйырһытма.*

ЙӘТИМ-ЕҺЕР (Р.: сироты; И.: orphans; Т.: yetimler) *и. йыйн.*

Йәтим балалар; йәтимдәр. □ Сироты. *Йәтим-еһер йыйылған. Йәтим-еһерҙе эш менән тәьмин итеү.*

ЙӘТИМ ҠАЛЫУ (йәтим ҡал-) (Р.: осиротеть; И.: become an orphan; Т.: öksüz kalmak) *ҡ.*

Ата-әсәһеҙ йәки икеһенең береһенән ҡалыу. □ Осиротеть. ■ *Уныңсы йәшенә сыкмыш улан Әсмә ата вә әсәнән, һәм дә иң ғәзиз вә иң мәрхәмәтле ата вә әсәнән, йәтим ҡалды.* Р. Фәхретдин. *Еңеү яҙы. Хәтер һандығынан аҡ мәрйендәр ҡатыш ҡара мәрйен алып таға йәтим ҡалғандар.* Т. Ғәниева.

ЙӘТИМЛЕК (йәтимлеге) (Р.: сиротство; И.: orphanhood; Т.: yetimlik) *и.*

Йәтим хәле; йәтим булыу. □ Сиротство. *Йәтимлектә үткән балалыҡ.* ■ *Әле шып-шым, тып-тын, ғүйә, теге сәүкә балалары, йәтимлектәрен тойоп, бер мөйөшкә һырығышҡан.* Р. Камал. *Әхмәтте ул да [үгәй атаһы] үҙ балаһы кеүек күрә ине, уға йәтимлек елен ҡағылдырмаҫҡа тырышты.* З. Ураҡсин.

ЙӘТИМСЕЛЕК (йәтимселеге) *и. ҡар.* **йәтимлек.** *Йәтимселек тойғоһо. Йәтимселектә йәшәү.*

ЙӘТИМҺЕРӘТЕҮ (йәтимһерәт-) (Р.: постоянно обижать; И.: keep offending; Т.: incitmek) *ҡ.*

Йәтим итеп ҡарау; йәтимһетеү, ситләтеү, тибеү. □ Относиться как к сироте *к кому,* постоянно обижать *кого.* *Балаларҙы йәтимһерәтеү.* ■ *[Айбулат — Гөлйөҙөмгә:] Илама. Балаларҙы яҡшы ҡара, йәтимһерәтмә.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘТИМҺЕРӘҮ (йәтимһерә-) (Р.: чувствовать себя сиротой; И.: feel as an orphan; Т.: kendini yetim gibi hissetmek) *ҡ.*

1. Йәтимлектә йонсоп бойоғоу, үҙеңде йәтим итеп һиҙеү; йәтимһеү. □ Чувствовать себя сиротой. *Бала йәтимһерәп йөрөй. Йәтимһерәп китеү.*

2. *күсм.* Ташландыҡ, буш, күңелһеҙ хәлдә булыу. □ Осиротеть. *Йорт йәтимһерәп ҡалған.* ■ *Байгилдин тәҙрә ҡапҡастары бик-*

ләнеп, йәтимһерәп ултырған бер өйҙө күрһәтте. Х. Ғиләжев.

ЙӘТИМҺЕТЕҮ (йәтимһет-) *ҡ. ҡар.* **йәтимһерәтеү.** *Баланы йәтимһетеү. Йәтимһетеп ҡарау. Үҙ балаһы булмағанға, ҡыҙҙы йәтимһетә.*

ЙӘТИМҺЕҮ (йәтимһе-) *ҡ. ҡар.* **йәтимһерәү 1.** *Ҡыҙ йәтимһеп йөрөй. Ата-әсәһе ҡайтып киткәс, бала йәтимһей.*

ЙӘТИМӘ [ғәр. يتيمة] (Р.: девочка-сиротка; И.: orphan girl; Т.: yetim) *и.*

Йәтим ҡыҙ. □ Девочка-сиротка. *Йәтимә өйө.*

ЙӘТИМӘК (Р.: осиротевший; И.: orphaned; Т.: yetim) *с. диал.*

Йәтим ҡалған *(мал йәки ҡош-ҡорт балаһына ҡарата).* □ Осиротевший, осиротелый. *Йәтимәк бәрәс.*

ЙӘТИНКЕ *с. диал. ҡар.* **сәүек 1.** *Йәтинке эт. Йәтинке эт абалауы. Йәтинке эт өрә.*

ЙӘТМӘ I (Р.: самострел; И.: crossbow; Т.: mancınık) *и.*

Яны менән сиртеп ҡыҫа торған ҡорал *(ваҡ йәнлеккә, ҡуянға ҡуйыла).* □ Самострел *(вид ловушки).* ■ *Мылтыҡтар, йәтмәләр, тоҙаҡтар, шалтырауыҡтар менән ҡоралланған кешеләр турғайҙарға ҡаршы ҡот осҡос ҡанһыҙ һуғыш иғлан итәләр.* Ә. Ишбирҙин.

ЙӘТМӘ II (Р.: сачок; И.: net; Т.: kepçe) *и.*

1. Тоҡ рәүешендәге ваҡ ау йәки йылымдың тоҡо. □ Сачок. *Йәтмә менән күбәләк тотоу. Балыҡ йәтмәһе. Йәтмә ҡороу.* ■ *Бер лапаҫ алдында, кибергә эленеп, йыйып алырға онотолған балыҡсы йәтмәһе тора.* Б. Рафиҡов. *[Даль] һыуға эйелгән ҙур тирәк төбөнән йәтмә менән балыҡ аулаусыларҙы күреп ҡалды, улар эргәһенә барып, мөңгөр-мөңгөр һөйләшеүҙәренә ҡолаҡ һалып торҙо.* З. Ураҡсин.

2. *күсм.* Кешене алдар өсөн эшләгән хәйлә. □ Ловушка, хитрая уловка. *Берәүҙең йәтмәһенә эләгеү.* ■ *Әлбиттә, Боғара ғәскәре ҡырылып бөтәсәк, ә нуғайҙар, йәтмәнән ысҡынып, хан урдуғаһына имен-аман барып етәсәк.* Ә. Хәкимов. *Башҡортостан бер ҡоллоҡтан ҡотолоп өлгөрмәне, икенсеһенә, йәтмәнең ҡатырағына эләкте.* Ә. Хәкимов. *[Ағинәй:] Харап итә инде баланы [Сәхипгәрәй]. Уның йәтмәһе шундай .. эшләнгән, ҡайһы яҡтан барып ингәнеңде лә һиҙмәй ҡалаһың.* И. Ғиззәтуллин.

ЙӘТМӘ III *и. диал. ҡар.* **ейәк.** *Ҡатмар ситенә йәтмә баҫыу. Йәтмәне бәйләү. Ебәк йәтмә. Йәтмә тағыу.*

ЙӘТМӘ IV *и. диал. ҡар.* **йәтсә.** *Аҡ йәтмә. Йәтмә өңө.*

ЙӘТМӘ V (Р.: перепонка *(гусиных лап)*; И.: web; Т.: zar) *и. диал.*

Яры. □ Перепонка *(гусиных лап). Ҡаҙ йәтмәһе.*

ЙӘТМӘ-ЙЫЛЫМ (Р.: сачки и сети; И.: landing nets and fishing nets; Т.: kepçe) *и. йыйн.*

Йәтмә һәм йылымдар. □ Сачки и сети. *Йәтмә-йылым әҙерләү.* ■ *Өй беренсә — ау, йәтмә-йылым, йәй буйы һыу буйынан кеше өҙөлмәй.* М. Ямалетдинов.

ЙӘТМӘЛӘҮ I (йәтмәлә-) (Р.: добыть при помощи самострела; И.: get with a crossbow; Т.: mancınık ile avlamak) *ҡ.*

Йәтмә (I) ҡороу. □ Добыть при помощи самострела, самострелом. *Төлкөнө йәтмәләп тотоу. Ҡуян йәтмәләү. Ҡыш көнө шәшкене йәтмәләйҙәр.*

ЙӘТМӘЛӘҮ II (йәтмәлә-) (Р.: ловить сачком; И.: fish with a landing net; Т.: kepçe ile tutmak) *ҡ.*

Йәтмә (II, 1) ҡороу. □ Ловить сачком. *Балыҡ йәтмәләү. Бәрҙәне йәтмәләп тотоу. Күлдә йәтмәләү.*

ЙӘТМӘЛӘҮ III (йәтмәлә-) (Р.: скрестить; И.: cross one's arms; Т.: kollarını göğsünde çaprazlamak) *ҡ. диал.*

Ҡулды ҡаушырыу. □ Скрестить *(о пальцах, руках). Ҡулдарын йәтмәләп ултырыу. Ҡулдарҙы йәтмәләп тороу.* ■ *Миһран ҡулдарын йәтмәләп эләктереп елкәһенә ҡуйған да, салҡан төшөп диванда ята.* Картотека фондынан.

ЙӘТМӘ МУҠСА (Р.: сетка; И.: netting; Т.: ağ) *и.*

Бәләкәй ау, йылым. □ Сетка *(для ловли рыбы). Йәтмә муҡсаһы алып балыҡҡа барыу. Йәтмә муҡсаһы үреү.*

ЙӘТМӘ ҮРЕҮ (йәтмә үр-)

1. *кар.* **йәтмәләү II.**

2. Хәйлә ҡороу. □ Плести интригу; придумывать уловку. *Күрше йәтмә үрергә оҫта. Бармаҡ өсөн йәтмә үреү.*

ЙӘТМӘ ҺАЛЫУ (йәтмә һал-) (Р.: поставить сеть; И.: net; Т.: kerçe koymak) *ҡ.*

Балыҡ тотоу өсөн йәтмә ҡороу. □ Поставить сеть. *Балыҡҡа йәтмә һалыу. Йәтмә һалып ҡайтыу. Йәтмә һалырға барыу.*

ЙӘТСӘ (Р.: ласка; И.: least weasel; Т.: gelincik) *и. зоол.*

Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған бәләкәй генә нәҙек оҙон йыртҡыс йәнлек. □ Ласка (лат. *Mustela nivalis*). *Аҡ йәтсә. Йәтсә өңө.* ■ *[Рәшит – Гнедковка:] Ана, күрәһеңме, йәтсә ҡарҙан башын сығарып ҡарап тора.* Ә. Бикчәнтәев. *Һайғаҡ аҫтынан сығып, шаулап йөрөргә башланы барса сысҡандар, ҡомаҡтар, аҫ вә әрлән, йәтсәләр.* Ш. Бабич. *Элегерәк заманда ылаһын менән һунарлағандар, шәшкегә, аҫ һәм йәтсәгә – тәпе, ә эре йәнлеккә – бүрегә, төлкөгә – ҡапҡан һалғандар.* Р. Өмөтбаев.

ЙӘТТӘ (Р.: пчелиная обножка; И.: pollen load; Т.: polen, çiçek tozu) *и.*

Бал ҡорттарының аяҡтарына йәбешеп ҡайтҡан үҫемлек һеркәһе. □ Пчелиная обножка. *Йәттә үҙенсәлектәре. Йәттә витаминдарға бай. Йәттә сифаты.*

ЙӘТӘС I (Р.: дужка; И.: aifoil section; Т.: kuşların göğüs kemiği) *и.*

1. *анат.* Ҡоштоң саталы түш һөйәге. □ Дужка *(грудная кость у птиц). Ҡаҙ йәтәсе. Тауыҡ йәтәсе.* ■ *Ғәҙәтемә ингән, өҫтәлгә бешкән тауыҡ ҡуйыуҙары була, мин уға-быға ҡарамай, йәтәсен айырып алам.* Картотека фондынан. *Фриц, ни эшләгәнен үҙе лә аңламаҫтан, гранатаның шартлаусы запалына ҡуйылған ҡулсаһын тартып өҙҙө. Хәҙер ни ҡаҙ йәтәсенә оҡшап торған ике сатлы һаҡлағыстан бармаҡты ыскындырырға ғына кәрәк.* Ғ. Ибраһимов. *Уйылдан сыңарсаҡ бармағы менән йәтәстең бер асаһын ҡыҫты.* Н. Мусин.

2. *этн.* Шул һөйәкте айырышып уйнай торған отош уйыны *(отҡан кешегә нимәлер бирергә алдан һөйләшеп, йәтәс һөйәген ике сатаһынан икәү тотоп һындыралар ҙа, бер-береһенә үҙ ҡулынан ниндәйҙер әйбер тоттороорға тырышалар; тотҡан саҡта «иҫемдә» тип әйтһә, отолмай, онотҡан булып, шуны әйтмәһә, «йәтәс» тип, уны оталар).* □ Держать пари, ломая куриную дужку *(игра, рассчитанная на забывчивость одного из спорящих). Йәтәс айырышыу.* ■ *[Прокурор] отоша алмай бик оҙаҡ йөрөгәндән һуң, ҡапыл: «Йәтәс!» – тигәндәй булды.* С. Агиш. *Йәтәс айырып оттом ағайымды.* Экспедиция материалдарынан.

3. *тех.* Сәп алыҫлығына ҡарап, мылтыҡтың ҡалҡытып төшөрмәле мәрәйлеге. □ Прицел ружья. *Мылтыҡтың йәтәсе. Винтовканың йәтәсе. Йәтәс планкаһы.*

4. Саталап сигелгән биҙәк. □ Узор вязки в форме дужки. *Йәтәс биҙәге. Йәтәс биҙәген бәйләү.*

5. *миф.* Ырым-ышаныуҙарҙа ҡулланылған, өлөш төшөнсәһе менән бәйле ҡош һөйәге. □ Мифологизированная кость птицы, связанная с понятием доли и применяемая в гаданиях, розыгрышах, играх.

ЙӘТӘС II *и. диал. кар.* **сапҡы.** *Йәтәс менән кәбеҫтә турау. Йәтәсте үткерләү. Йәтәс менән сабыу.*

ЙӘТӘС АЙЫРЫШЫУ (йәтәс айырыш-) (Р.: держать пари; И.: bet; Т.: bahse tutuşmak) *ҡ.*

Йәтәс (I, 2) уйынында йәтәсте һындырыу. □ Держать пари, ломая куриную дужку. *Һеңлем менән йәтәс айырыштыҡ.* ■ *[Миңлегөл:] Уйылдан ағай, йәтәс айырышайыҡ.* Н. Мусин.

ЙӘТӘСЛЕ (Р.: с прицелом; И.: with an eyesight; Т.: nişangahı olan) *с. тех.*

Йәтәсе (I, 3) булған. □ С прицелом. *Йәтәсле мылтыҡ. Йәтәсле винтовка алыу. Йәтәсле мылтыҡтан атыу.*

ЙӘТӘС ОТОУ (йәтәс от-) (Р.: выиграть пари; И.: win a bet; Т.: oyunu kazanmak) *ҡ.*

Йәтәс уйынында еңеү. □ Выиграть пари *(в игре «Йәтәс»). Ағайымды йәтәстә оттом.*

ЙӘТӘС ҺӨЙӘГЕ *и. анат. кар.* **йәтәс I, 1.** *Йәтәс һөйәге эләгеү. Тауыҡтың йәтәс һөйәге. Йәтәс һөйәген айырыу.*

ЙӘҮҘӘТ [ғәр. جودة] (Р.: превосходство; И.: advantage; Т.: cevdet) *и. иҫк. кит.*

Юғары сифат, өҫтөнлөк. □ Превосходство; высокое качество, достоинство; преимущество. *Йәүҙәт күрһәтеү.*

ЙӘҮЖӘ *и. астр. кар.* **жәүзә.** *Йәүжә бөрөжө. Йәүжә йондоҙлоғо аҫтында тыуыу.*

ЙӘҮКӘ [рус. *явка*] (Р.: весть; И.: news; Т.: haber) *и.*

Һаҡырыу, өндәү йәки юғалған нәмәне эҙләү хәбәре. □ Весть, молва, огласка. *Йәүкә һалыу.* ■ *[Сәлиха — Мырҙашка:] Әлимәм дә Әлимәм тип, бөтә донъяға йәүкә һалдың бит!..* Д. Юлтый. *[Ғәләү] инспектор менән бергә капканан сығып, союзға йәүкә һалырға китте.* Т. Йәнәби. *Немец буржуйҙары йәүкә һала, сит илдәрҙән ғәскәр сакыра.* Д. Юлтый.

ЙӘҮКӘЛӘҮ (йәүкәлә-) (Р.: оповещать; И.: notify; Т.: duyurmak) *к.*

1. Халыҡҡа берәй хәбәр һалыу; йәүкә һалыу. □ Оповещать, извещать *(всех)*; поднимать шум, тревогу. // Оповещение, извещение. *Йәүкәләп эҙләү.* ■ *Осланмаған эштәре, әйтелмәгән һүҙҙәре уны [аҡһаҡалды] шулай дәртләндереп, йәүкәләп йөрөтә был донъяла.* Г. Яҡупова. *[Фәйзрахман ағай:] Көн элгәре йәүкәләмәгеҙ, ҡыҙҙар.* Н. Мусин. *[Мәҙинә] һыу буйҙарын байҡаны башта, эргәләге һауҡалыҡҡа инеп йәүкәләне — һис берәү тауыш бирмәне.* Т. Ғарипова.

2. *диал.* Ошаҡлау. □ Ябедничать, доносить. *Йәүкәләп йөрөү. Хужаға йәүкәләү.* ■ *Осраған бер кешегә йәүкәләп йөрөй торған эш түгел.* Н. Мусин.

ЙӘҮКӘСЕ (Р.: ябедник; И.: squealer; Т.: gammaz) *и. диал.*

Ошаҡсы. □ Ябедник; ябедница. *Йәүкәсе булыу. Йәүкәсегә оҡшаған.*

ЙӘҮЛӘҮ (йәүлә-) *к. диал. кар.* **ниәтләнеү.** ■ *Ташбатҡан халҡы эштең әрәсәһенә төшөнөп алған. Баҡтиһәң, улар Ташбатҡан ауылының урманын алырға йәүләгәндәр.* Ж. Кейекбаев.

ЙӘҮМ [ғәр. يوم] (Р.: день; И.: day; Т.: gün) *и. иҫк. кит.*

Көн, тәүлек. □ День, сутки. ■ *Сөн тигән ауылға еткәнебеҙҙә, [Ялсығол] донъянан үтте, алтмыш биш йәшендә, рәжәб айында, жәүзәнең егерме алтынсы йәүмендә, тарих һижри 1200 йылында, ҡуй йылында.* М. Өмөтбаев.

ЙӘҮҺӘР I [ғәр. جوهر] (Р.: драгоценности; И.: jewels; Т.: mücevher) *и.*

1. Аҫыл таш. □ Драгоценности; сокровища. ■ *Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр, беҙҙә һәр бер ашлыҡтар.* Ш. Бабич. *Беҙ — дарьяның гәүһәре, бер булырбыҙ йәүһәре.* «Буҙйегет». *Сағыу ҡояш көлә-көлә йәүһәр нурын ҡойғанда, йүгерә-йүгерә йыуа йыйҙым яҙғы йәшел урманда.* А. Игебаев. ● *Хеҙмәт — тормош йәүһәре.* Әйтем.

2. *кар.* **гәүһәр.** *Йәүһәр ҡашлы йөҙөк. Йәүһәр муйынсаҡ.*

ЙӘҮҺӘР II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-усерганцев.

ЙӘҮҺӘРЛӘНЕҮ (йәүһәрлән-) (Р.: гранить; И.: facet; turn into a jewel (of brilliants); Т.: cevherlenmek) *к.*

Алмастың йәүһәргә әйләнеүе. □ Гранить. // Превращение алмаза в бриллиант. *Алмастың йәүһәрләнеүе.*

ЙӘҮҺӘРЛӘҮ (йәүһәрлә-) (Р.: превращать алмаз в бриллиант; И.: facet; Т.: cevherlemek) *к.*

Алмасты йәүһәргә әйләндереү. □ Превращать алмаз в бриллиант. *Йәүһәрләү процесы.*

ЙӘҮҺӘРСЕ *и. кар.* **зәргәр.** *Оҫта йәүһәрсе. Йәүһәрсе эше. Йәүһәрсе булып эшләү.*

ЙӘҮШӘН (Р.: латы; И.: armour; Т.: zırh) *и. иҫк.*

Һуғышта уҡ, ҡылыстан һаҡланыу өсөн күкрәк менән арҡаға кейелгән ике яҡлы киң япҡыс *(борон ҡаты күн тышлы ҡалын кейеҙҙән, һуңыраҡ тимерҙән эшләнгән).* □ Латы; кираса; зерцало *(двусторонняя широкая накидка из войлока, позднее железа, надеваемая на грудь и спину для защиты от меча и стрел на войне).* ■ *Ут яҡтыһында [яугирҙарҙың] баштарындағы тимер торҡалар, өҫтәрендәге йәүшәндәр, һарайталар, һөңгө остары күҙҙе сағылдырып*

ялтлап китә. Ә. Хәкимов. *[Ирем] Итбай дуҫына .. кәмәр билбаулы, терһәкле-еңсәле бик нык йәүшән, башына көмөш көмбәҙле ҡорос төркәй, шуның өҫтәүенә ҡалъяны менән әҙерлә-йәйә, уғы тулы һаҙаҡ бүләк итте.* «Алдар менән Зөһрә».

ЙӘХМӘРЕШ (Р.: неряшливый; И.: slovenly; Т.: çapaçul) *с. иҫк.*

Шамтыр, эшлекһеҙ. □ Неряшливый; ленивый. ■ *Йәхмәреш ҡыҙҙар менән мин урамдарҙа йөрөйөм, эҫе яҙҙа ҡалтырайым, сөнки бурандарҙа йөрөйөм.* Ш. Бабич.

ЙӘҺӘЛӘТ [ғәр. جهالة] (Р.: невежество; И.: ignorance; Т.: cehalet) *и. иҫк. кит.*

Белемһеҙлек, наҙанлыҡ. □ Невежество, необразованность, невежественность; глупость. ■ *Беҙҙәрҙе йәһәләткә тоташтырған замана ҡалай булһа — барыу шулай, сығайыҡ шул тарихтан аҙаштырған.* М. Аҡмулла.

ЙӘҺӘЛӘТЛЕК (йәһәләтлеге) (Р.: невежество; И.: ignorance; Т.: cehalet) *и. иҫк. кит.*

Наҙанлыҡ. □ Невежество, необразованность, невежественность. ■ *Мәғарифтан булып ҡаплы күҙегеҙ һәм дә йөҙөгөҙ, аталып: «ҡыҫҡа аҡылдар», йәһәләтлектә йөҙҙөгөҙ.* Д. Юлтый.

ЙӘҺЕД [ғәр. جهد] (Р.: старательность; И.: application; assiduity; Т.: çalışkanlık) *и. иҫк. кит.*

Тырышлыҡ. □ Старание, усердие, усилие. *Йәһед күрһәтеү. Йәһед менән алдырыу.*

ЙӘҺЕД ИТЕҮ (йәһед ит-) (Р.: стараться; И.: endeavour; Т.: çabalamak) *ҡ. иҫк. кит.*

Тырышыу. □ Стараться, проявлять старательность, усердствовать, проявлять усердие. *Уҡыуҙа йәһед итеү.*

ЙӘҺЕЛ I [ғәр. جاهل] (Р.: невежественный; И.: ignorant; Т.: cahil) *с. иҫк. кит.*

Аҡылһыҙ; наҙан; хәреф танымаған. □ Невежественный; необразованный, непросвещённый. *Йәһел кеше. Йәһел булыу. Йәһел ҡалыу. Йәһел ҡалдырыу.*

ЙӘҺЕЛ II [ғәр. جهل] (Р.: невежество; И.: ignorance; Т.: cahillik) *и. иҫк. кит.*

Аҡылһыҙлыҡ; наҙанлыҡ. □ Невежество, невежественность; необразованность, непросвещённость. ■ *Эй, китап, мин аңраны төҙ юлға күндерһәнә, мине баҫҡан йәһел утын һыу һибеп һүндерһәнә.* Ш. Бабич. *[Мөхәмәтсәлим:] Иҫеңдәме, Мифтахетдин: элегерәк әһле ислам булды күпкә ғилемлерәк. Бөгөнгө мәғишәткә күҙ ташлаһаҡ, илде йәһел баҫып бара, белем һирәк.* М. Өмөтбаев.

ЙӘҺЕЛ МӨРӘККӘБ [ғәр. جهل] (Р.: необразованный; И.: uneducated; Т.: cahil) *с. иҫк. кит.*

Ҡара наҙан. □ Необразованный, неграмотный. *Йәһел мөрәккәб булыу. Уҡымай йөрөп, йәһел мөрәккәб булып ҡалыу.*

ЙӘҺЕННӘМ *р. диал. ҡар.* **күп.** *Халыҡ йәһеннәм йыйылды. Йәһеннәм килеү. Йәһеннәм таралыу.*

ЙӘҺҮД [ғәр. يهود] (Р.: иудей; И.: Jew; Т.: Yahudi) *и.*

Тарихи яҡтан сәмит телдәре төркөмөнөң боронғо халыҡтарының береһенә ҡараған, хәҙерге көндә Израилдә, шулай уҡ төрлө илдәрҙә төп халыҡтың дөйөм тормошо менән йәшәгән халыҡтарҙың дөйөм этник иseme һәм шул халыҡтарҙың бер кешеһе; еврей. □ Иудей, еврей. / Иудейский, еврейский. *Йәһүд халҡы. Йәһүд теле.* ■ *Курсанттар араһында башҡорт, латыш, йәһүд, осетин, татар, хатта немец та бар.* С. Ҡулибай. *Мәскәүгә сауҙа эше менән барыусы йәһүдтәр ҡайҙан арзан нәмә алыу хаҡында һөйләшеп баралар.* Д. Юлтый. *Йәһүдтәр үҙҙәренең телен һәм яҙмаһын тергеҙә, бер нисә кеше башлаған эш тотош милләттең мөҡәддәс бурысына әйләнә.* Р. Бикбаев.

ЙӘҺҮДИ I [ғәр. يهودى] (Р.: иудей; И.: Jew; Т.: Yahudi) *и. этн.*

Йәһүд халҡының бер кешеһе. □ Иудей, еврей. ■ *[Офицер] коммунистар, комиссарҙар һәм йәһүдиҙәр ҡотҡоһона бирелмәҫкә, еңеүсе фюрер армияһына төрлөсә ярҙам күрһәтергә ҡуша.* Ә. Хәкимов.

ЙӘҺҮДИ II [ғәр. يهودى] (Р.: иудейский; И.: Judaic; Т.: Yahudi) *с.*

Йәһүдкә мөнәсәбәтле. □ Иудейский, еврейский. *Йәһүди дине. Йәһүди йәмғиәттәре. Йәһүди мәктәбе.*

ЙӘҺҮДИЛЕК (йәһүдилеге) (Р.: иудаизм; И.: Judaism; Т.: Yahudilik) *и.*

1. Донъялағы өс монотеистик диндең береһе. □ Иудаизм, иудейство. *Йәһүдилек*

дине. Йәһүдилек байрамдары. Йәһүдилектең төп шарттары.

2. Йәһүд халҡының дини, милли һәм әхлаҡи яҡтан донъяға ҡарашы. □ Еврейство. *Йәһүдилек буйынса белгес.*

ЙӘҺӘННӘМ [ғәр. جهنم] (Р.: ад; И.: hell; Т.: cehennem) *и.*

1. *миф.* Гөнаһлы кешеләр үлгәндән һуң мәңге утта яна торған икенсе донъя; тамуҡ. □ Ад; геенна огненная, преисподня. *Йәһәннәмгә инеү. Йәһәннәм соҡоро.* ■ *Бер аҙымын яҙа атланымы — йәһәннәм соҡорона осоп төшәсәк [Кәҙриә].* Ә. Хәкимов. *[Шакир:] Имаҡаев үҙе атты, йәне йәһәннәмдә булғыры!* А. Карнай. *Башҡа ваҡытта хатта йоҡларға ирек бирмәй шаулашып йөрөгән кешеләр әллә йәһәннәмдәренә олаҡҡан!* Р. Солтангәрәев. *Ҡазан яғына киткән поездар, хатта саналар ҙа Мәрйәмгә йәннәткә киткән нәмәләй күренһәләр, ул ултырған поезд уны йәһәннәмгә алып барған кеүек күренә ине.* М. Ғафури.

2. *күсм.* Ғазаплы, тыныcһыҙ, ауыр тормош. □ Ад, адская жизнь. ■ *Был йәһәннәм тормошо кешеләрҙе фекер йөрөтөү ҡеүәһенән мәхрүм итә.* Д. Юлтый.

3. *күсм. ҡар.* **йәһәннәм аръяғы.** ■ *[Байгилде:] Нимә, мин һине көтөп, иртәгә тиклем ятайыммы ни был йәһәннәмдә?* Д. Бүләков. *Уға [Ирина Платоновнаға] ышанһаң, ижад кешеһе өсөн йәһәннәмдә ятҡан шул ҡаланан да йәтеш урын юҡ икән, тиерһең.* Ә. Хәкимов.

♦ **Йәнең йәһәннәмгә киткер** *ҡарғ.* үл, юҡҡа сыҡ. □ Чтоб ты сдох. **<Йәнен> йәһәннәмгә оҙатыу** үлтереү. □ Убить, отправить на тот свет *кого,* отправить к праотцам *кого.* ■ *[Томсон — Браунға:] Тағы ла бер һүҙ әйтһәң, мин һинең яҡты донъяла тап булып йөрөгән ҡара үләкһәңде туп-тура йәһәннәмгә оҙатам.* Ғ. Ғүмәр.

ЙӘҺӘННӘМ АРТЫ *и. ҡар.* **йәһәннәм аръяғы.** *Йәһәннәм артында тороу.* ■ *Малай кеше арый тиме ни, атайымды күреү өсөн йәһәннәм артына китер инем әле.* Р. Низамов.

ЙӘҺӘННӘМ АРЪЯҒЫ (Р.: у чёрта на куличках; И.: in some neck of the woods; Т.: cehennemin dibinde) *и.*

Бик алыҫ ер. □ У чёрта на куличках; за тридевять земель *(об очень отдалённом и глухом месте). Йәһәннәм аръяғында йәшәү. Йәһәннәм аръяғына барыу.* ■ *[Батырҙы] ара ҡумтаға индереп бикләйәсәктәр ҙә йәһәннәм аръяғында ятҡан Ур планетаһына алып китәсәктәр.* Н. Ғәйетбаев.

ЙӘҺӘННӘМ АҪТЫ *и. ҡар.* **йәһәннәм аръяғы.** ■ *[Мәҙинә:] Ниңә Зинченколар йәһәннәм аҫтындағы анау Муриноға күсенә?* Ә. Хәкимов. *[Ирназар] йәһәннәм аҫтындағы Ярыҡташ станцияһына элеваторға оло-лар ыңғайында ҡыш буйы иген ташыны.* Ә. Хәкимов.

ЙӘҺӘННӘМГӘ ЕБӘРЕҮ (йәһәннәмгә ебәр-) (Р.: убить; И.: kill; Т.: öldürmek) *ҡ.*

Үлтереү, һәләк итеү. □ Убить, отправить на тот свет, в ад. *Йәнен йәһәннәмгә ебәреү.* ■ *[Сәрбиямал — Емешкә:] Эй, динһеҙ! Сиған балаһы, ниңә эт муйынсағы тағып алдың? Йәнеңде йәһәннәмгә ебәрәм бит хәҙер!* З. Биишева.

ЙӘҺӘННӘМГӘ КИТЕҮ (йәһәннәмгә кит-) (Р.: умереть; И.: die; Т.: ölmek) *ҡ.*

1. Үлеү, юҡҡа сығыу. □ Умереть. *Йәһәннәмгә киткер.* ■ *Аяуһыҙ хаким үҙенең рәхимһеҙ ҡулы менән ҡанһыҙ ишара яһаһа, күҙ асып йомған арала йәһәннәмгә китеүебеҙ бар.* Р. Бикбаев. *Әгәр ҙә арбаның бер тәгәрмәсе ярға табан шылһа, арбаң-атың менән йәһәннәмгә китерлек.* Г. Хәйри.

2. Китеп, ғәйеп булыу. □ Пропасть, исчезнуть, уйти неизвестно куда. *Йәһәннәмгә китеп юғалды. Йәһәннәмгә киткән кеүек булды.*

ЙӘҺӘННӘМГӘ ОСОУ (йәһәннәмгә ос-) *ҡ. ҡар.* **йәһәннәмгә китеү 1.** *Күперҙе нығытмаһаҡ, яҙын йәһәннәмгә осабыҙ.*

♦ **Йәнең йәһәннәмгә осһон** *ҡарғ.* үл, дөмөк. □ Гореть тебе в аду.

ЙӘҺӘННӘМ ҒАЗАБЫ (Р.: адское мучение; И.: hell's torment; Т.: cehennem azabı) *и.*

1. *дини.* Тамуҡта күргән ғазаптар. □ Адское мучение, адское страдание. *Йәһәннәм ғазабы кисереү. Йәһәннәм ғазабы күреү.*

2. *күсм.* Бик ҡаты яза, этлек. □ Адское мучение, адское страдание.*Йәһәннәм ғазабын күрһәтеү. Йәһәннәм ғазабында йәшәү.*

ЙӘҺӘННӘМДӘ ЯНЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ (Р.: жестокий; И.: cruel; Т.: cehennem kütüğü) *с.*

Ҡылған яуызлыҡтары өсөн яуап алырға тейешле; яманлыҡ ҡылыусы, яуыз. □ Жестокий, бессердечный. *Йәһәннәмдә янырға тейешле әҙәм. Барлыҡ ҡылған яуызлыҡтары өсөн йәһәннәмдә янырға тейешле ул.*

ЙӘҺӘННӘМИ [ғәр. جهنمى] (Р.: адский; И.: hellish; Т.: cehennemi) *с.*

Йәһәннәмгә хас, йәһәннәмдәге. □ Адский. *Йәһәннәми ғазап. Йәһәннәми ғазап сигеү.*

ЙӘҺӘННӘМЛЕК *с. ҡар.* **йәһәннәми.** *Йәһәннәмлек гөнаһ.*

ЙӘҺӘННӘМ ТИШЕГЕ *и. ҡар.* **йәһәннәм аръяғы.** *Йәһәннәм тишегенә барыу.* ■ *Әлеге минутта йәһәннәм тишегенә китеп барған үҙе түгел, Илғужа тураһында уйлай ине ул [Төлпан].* Д. Бүләков.

ЙӘҺӘННӘМ ТӨБӨ (Р.: нижняя часть ада; И.: hell's lower part; Т.: cehennemin dibi) *и.*

1. *дини.* Йәһәннәмдең иң аҫҡы етенсе ҡаты. □ Нижняя, самая страшная часть ада. *Йәһәннәм төбөндә яныу.* ■ *Ата-инәһенә ҡул күтәргән кешеләр йәһәннәм төбөндә яна икән.* Башҡорт мифологияһынан.

2. *күсм. ҡар.* **йәһәннәм аръяғы.** ■ *Унан, батырҙың ҡулынан етәкләп, был йәһәннәм төбөнән һөйрәп килтергәндә, хәлдән тайған тотҡон, бөләңгерт кенә көн яҡтыһына ла түҙә алмай, иҫтән яҙып йығылды.* Халыҡ ижадынан.

ЙӘҺӘННӘМ УТЫ (Р.: геенна огненная; И.: Gehenna; Т.: cehennem ateşi) *и.*

1. *миф.* Йәһәннәмдәге гөнаһлы кешеләрҙе яндыра торған ут. □ Геенна огненная. *Йәһәннәм утында яныу.* ■ *Был донъянан киткәс тә үҙен ябай уттан әллә күпме тапҡыр көслөрәк һәм ҡурҡынысыраҡ йәһәннәм уты көтәсәген белгән кеше үҙүҙенә ҡул һалырҙан алда тап ана шул хаҡта фекер итәсәк.* «Киске Өфө», № 6, 2012. *Ул [мулла] Сәлимәнең был ҡырағай ғәҙәтенә йәберһенергә йәки уға мең төрлө йәһәннәм уты менән янарға ла өлгөрмәне, Сәлимә уның арҡаһына ла тәртешкә менән берикене биргеләп, ишектән төрткөләп сығарып ебәрҙе.* З. Биишева.

2. *күсм.* Бик эҫе урын. □ Жара, зной. ■ *Йәһәннәм утында интегеп йөрөгән урақсылар яландың төрлө еренә төрлөсә һибелгән.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘҺӘРЕҮ (йәһәр-) [ғәр. جهر] (Р.: разговаривать громко; И.: speak loud(ly); Т.: yüksek sesle konuşmak) *ҡ. иҫк. кит.*

Кешегә ишеттереп, ҡысҡырып һөйләү. □ Разговаривать громко. *Бала йәһәреп һөйләй. Шиғырҙы йәһәреп һөйләү.*

ЙӘҺӘРТЕҮ (йәһәрт-) *ҡ. иҫк. кит. йөкм. ҡар.* **йәһәреү.** *понуд. от* **йәһәреү.** *Йәһәртеп әйтеү. Шиғырҙы йәһәртеү.*

ЙӘҺӘТ I [ғәр. جهة] (Р.: сторона; И.: side; Т.: yan) *и.*

1. Эш, хәлдең йүнәлеше; яҡ, тараф. □ Сторона, направление, особенность *(характеризующее что-л. в каком-л. отношении). Ғилми йәһәттән ҡарағанда. Һәр йәһәттән уңайлы.* ■ *Йыйынтыҡҡа шиғыр, текстологик йәһәттән эшләнеп, уҡыусыға еңел аңлашылырлыҡ итеп бирелде.* Ғ. Ҡунафин. *Ошо йәһәттән маҡсатҡа тулыһынса өлгәшеп булды һымаҡ ине, тик бөгөн килеп Янаралдың күңеленә шик төштө.* Б. Рафиҡов.

2. *Ниҙеңдер* йүне, яйы. □ Возможность *(наличие условий для чего-то). Күңел асыу йәһәтен генә уйлау. Аҡса эшләү йәһәтен ҡарау.* ■ *Барсынбикә ҡапыл һалҡынайып киткәндәй булған өйҙән тышҡа сығыу йәһәтен күрҙе.* Т. Ғарипова. *Тик, әллә ни эшләптер, һәр кем үҙенең ғүмерен һаҡлап алып ҡалыу йәһәтен генә уйлап тик ята.* Д. Юлтый.

ЙӘҺӘТ II (Р: быстро; И.: quick; Т.: hızlı) *р.*

Тиҙ хәрәкәт менән, тиҙ генә; етеҙ, тиҙ. □ Быстро, проворно, шустро. *Йәһәт булыу.* ■ *Кәмәнән йәһәт кенә әҙмәүерҙәй ӧс ир төштө.* Т. Килмөхәмәтов. *Мәғфүрә менән килен Рәхимәнең бөтә ҡушҡандарын йәһәт эшләп торҙолар.* Һ. Дәүләтшина. *[Нурмыш] таң һарыһы менән тороп, атын эсерҙе, йәһәт кенә арба тәгәрмәстәрен майланы.* Ғ. Лоҡманов. *Ғәҙелбанат .. сикәләре яна башлауын тойоп, йәһәт кенә китеп барҙы.* Н. Мусин.

ЙӘҺӘТЛЕК (йәһәтлеге) (Р.: быстрота; И.: quickness; Т.: hız) *и.*

Етеҙ хәрәкәт, тиҙлек, етеҙлек. □ Быстрота, скорость *(движения),* проворность. ■ *Ул арала Әшрәф маймыл йәһәтлеге менән Әсмә эргәһенә үрмәләп менеп тә китте.* М. Һибәт. *Йорттан асыҡ диңгеҙгә ҡарап дозор кәмәһе күҙ етмәҫлек йәһәтлек менән йөҙә.* А. Таһиров.

ЙӘҺӘТЛӘНЕҮ I (йәһәтлән-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәһәтләү I.** *страд. от* **йәһәтләү I.** *Кискеһен тамаҡҡа йәһәтләнде. Тиҙ арала утын йәһәтләнде.*

ЙӘҺӘТЛӘНЕҮ II (йәһәтлән-) (Р.: ускоряться; И.: quicken; Т.: hızlanmak) *ҡ.*

Йәһәт хәрәкәт алыу; етеҙләнеү. □ Ускоряться, становиться более быстрым. *Кискә табан эш йәһәтләнде.* ■ *[Карактар] тиҙерәк был тирәнән тайырға, Хиуа ҡарай йүнәлергә йәһәтләнделәр.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘҺӘТЛӘНЕҮ III (йәһәтлән-) (Р.: быть услужливым; И.: be obliging; Т.: yardımsever olmak) *ҡ. диал.*

Өлтөрәп тороу. □ Быть услужливым, приветливым. *Эргәлә йәһәтләнеп тора. Йәһәтләнеп ҡаршы алыу. Хужаһы янында йәһәтләнә.*

ЙӘҺӘТЛӘП АЛЫУ (йәһәтләп ал-) (Р.: получить быстро; И.: get quickly; Т.: çabuk almak) *ҡ.*

Тиҙләтеп алыу. □ Получить быстро, за короткие сроки. *Фатирҙы йәһәтләп алыу. Журналды йәһәтләп алыу.*

ЙӘҺӘТЛӘП БИРЕҮ (йәһәтләп бир-) (Р.: вернуть быстро; И.: return quickly; Т.: çabuk vermek) *ҡ.*

Тиҙ арала тапшырыу, кире ҡайтарыу. □ Вернуть, возвратить быстро. *Китапты йәһәтләп биреү. Бурысты йәһәтләп биреү. Аҡсаны йәһәтләп биреү.*

ЙӘҺӘТЛӘП ЕБӘРЕҮ (йәһәтләп ебәр-) (Р.: поторапливать; И.: hurry; Т.: acele ettirmek) *ҡ.*

Кемделер йәки *нимәнелер* ашыҡтырыу, ҡабаландырыу. □ Поторапливать, торопить. *Балаһын йәһәтләп ебәрҙе. Көндәрҙең һыуыныуы эште йәһәтләп ебәрҙе.*

ЙӘҺӘТЛӘТЕҮ I (йәһәтләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **йәһәтләү I.** *понуд. от* **йәһәтләү I.** *Ашарға йәһәтләтеү. Утын килтереүҙе йәһәтләтеү.*

ЙӘҺӘТЛӘТЕҮ II (йәһәтләт-) (Р.: ускорять; И.: hasten; Т.: hızlandırmak) *ҡ.*

Тиҙләтеү, тиҙ-тиҙ итеү. □ Ускорять, убыстрять. *Аҙымды йәһәтләтеү.* ■ *Ул [Билал] аяҡ атлауын йәһәтләтте.* А. Таһиров. *[Сәхипгәрәй:] Улайһа, бесәнгә төшөүҙе йәһәтләтергә лә ярайҙыр?* Я. Хамматов. *Уның [юлаусының] тойоҡҡа батасағынан хәүефләнгән Арыҫлан менән Кинйә аттарын йәһәтләттеләр.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘҺӘТЛӘҮ I (йәһәтлә-) (Р.: готовить; И.: prepare; Т.: hazırlamak) *ҡ.*

Хәстәрлек итеп тиҙ генә әҙерләү; йүнләү. □ Готовить *что (в быстром темпе). Тамаҡҡа йәһәтләү. Бесән йәһәтләү.* ■ *[Мозафар:] Ярай, киске эштән төш яҡшы, ти, иртәгә күҙ күрер. Йә, тамаҡҡа йәһәтләй һал да, клубка барырға кәрәк бит.* Н. Мусин.

ЙӘҺӘТЛӘҮ II (йәһәтлә-) (Р.: ускорять; И.: hasten; Т.: hızlandırmak) *ҡ.*

1. Тиҙләтеү, тиҙ-тиҙ ашыҡтырыу. □ Ускорять, торопить, поторапливать. *Аҙымды йәһәтләү. Эште йәһәтләү.* ■ *На, хайуан! — тип атты йәһәтләне Иштуған.* З. Биишева.

2. Ашығыу, тиҙ-тиҙ ҡуҙғалыу. □ Спешить, торопиться. ■ *Йәһәтләп бара торған ерҙәренән улар [һалдаттар] ҡапыл кире боролдолар.* М. Ғафури. *Ишмәмәт йәһәтләп быға [Мәҙинәгә] ярҙамға килде.* Т. Ғарипова. *Иштуған оҙон-оҙон баҫып, йәһәтләп, өйөнә ҡайтып китте.* З. Биишева. *Әллә таныманы Бәгиҙә [Ғәмбәровты], әллә икенсе кеше тип уйланы, һирпелеп кенә ҡараны ла, аҙымын йәһәтләп, һарайға инде лә китте.* Ш. Янбаев.

ЙӘҺӘТЛӘШЕҮ (йәһәтләш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йәһәтләү I.** *взаимн. от* **йәһәтләү I.** *Туғандары ҡайтып, бесән йәһәтләштеләр. Һыйҙы тиҙ арала йәһәтләшеп әҙерләнеләр.*

ЙӘҺӘТСЕЛ (Р.: предприимчивый; И.: enterprising; Т.: girişken) *с.*

Эште һ. б. хәстәрләп, ваҡытында башҡарыусан; йүнсел. □ Предприимчивый, энергичный, находчивый. *Йәһәтсел ҡатын. Йәһәтсел эшҡыуар. Йәһәтсел етәксе. Йәһәтсел булыу.*

ЙӘШ I [дөйөм төрки *йаш*] (Р.: молодой; И.: young; Т.: genç) *с.*

1. Ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере әле әҙ; *киреһе* — ҡарт. □ Молодой, юный. *Йәш бала. Йәш ҡыҙ. Йәш егеттәр.* ■ *Ҡунаҡ ҡаршыларға уңған йәш ҡатындың бар нәмәһе әҙерләнеп бөттө: өй йыйнаҡ, аш-һыу бешкән.* Б. Бикбай. *Яңылбикә әҙәп һаҡлағанда ла, матурыраҡ егеттәрҙе, йәш кешеләрҙе күҙ осо менән ҡарап ҡалырға онотмай.* Ғ. Дәүләтшин. *Боҫон борҡоратып, өймәләмә бер табаҡ йәш һарыҡ ите алда ултыра.* Б. Бикбай. ● *Йәш ваҡыт — сәскә ваҡыт.* Мәҡәл. *Аҡылһыҙ кеше алтмышта ла йәш була, аҡыллы алтыла ла баш була.* Мәҡәл.

2. Бүтән берәү менән сағыштырғанда, ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере кәм, кесе; *кире*һе — оло. □ Младший. *Йәш килен. Йәш ҡоҙаса.* ■ *Йәш килендәр Мәғфүрәнең һүҙҙәрен бик оҙаҡ иғтибар менән тыңланылар.* Һ. Дәүләтшина. *Больницала минән башҡа йәшерәк кеше юҡ.* С. Агиш. ● *Йәш ҡатынға йәнен бирер, ҡарт ҡатынға йүнен бирер.* Мәҡәл.

3. *күсм.* Ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере әҙ кешегә хас. □ Юный, молодой. *Йәш йөрәк. Йәш күңел.* ■ *Йәш күңел бит инде, миңә тәү башлап ҡалаға барыу ҙа бик ҡыҙыҡ булып тойолдо.* Т. Йәнәби. *Мифтахетдин Аҡмулланың ошоғаса мөхәббәт тәмен татырға өлгөрмәгән йәш йөрәге талпынды, ниңәлер Алтынсәскә тартылды.* Я. Хамматов. *Урамдарҙан уҙайыҡ, йәшел ебәк һуҙайыҡ. Йәшел ебәк, йәштәр йөрәк, нисек итеп түҙәйек.* Халыҡ йырынан. ● *Үҙең ҡарт булһаң да, күңел йәш.* Мәҡәл.

4. Күптән түгел барлыҡҡа килгән, күптән түгел йәшәй, үҫә башлаған. □ Незрелый, неспелый, молодой, зелёный. *Йәш ыршы. Йәш алма. Йәш һыйыр.* ■ *Һыу өҫтөндә йәш ай йөҙә йылмылдап.* С. Әлибаев. *Йәш талда тамға уңалыр бер нисә йылдан, ә йөрәктә тамға ҡалыр уңалмай торған!..* Б. Бикбай.

5. Яңы ойошторолған, яңы төҙөлгән. □ Молодой, недавно созданный. *Йәш әҙәбиәт. Йәш республика.* ■ *Утыҙ йылдан ашыуыраҡ ижад ғүмерендә Рәшит Ниғмәти йәш башҡорт совет әҙәбиәте хазинаһына бай әҙәби мираҫ ҡалдырҙы, башҡорт поэзияһын бына тигән поэтик әҫәрҙәр менән зиннәтләне.* Ғ. Хөсәйенов.

6. Берәй өлкәлә эшмәкәрлекте күптән түгел башлап ебәргән, тәжрибәһеҙ. □ Молодой, неопытный, недавно появившийся, недавно начавший деятельность. *Йәш ғалим. Йәш тарихсы. Йәш менеджер. Йәш уҡытыусы.* ■ *Зоотехникка килгәндә, уныһы — юғары мәғлүмәтле йәш белгес, колхоздың көтөп алған кәҙерле ҡунағы.* Ә. Хәкимов. *Вафин йәш белгесте яҡшы ҡаршыланы.* Р. Камал.

7. Кибеп ҡатмаған, ҡоромаған; сей, яңы. □ Свежий, только что появившийся, молодой. *Йәш утын.* ■ *Ҡыш көнө генә ҡырҡып килтерелгән йәш утын быҙдай ел, буран менән көрәшә алмай.* Ғ. Дәүләтшин.

8. Кибен һарғаймаған; йәшел. □ Зелёный; свежий, сырой. *Йәш япраҡ. Йәш бесән. Йәш үлән.* ■ *Ул япраҡтар йәштәр, яҙғылар, яҙғы булған өсөн наҙлылар.* М. Кәрим. *[Емеш] ҡояштың сағыу нурҙарына күҙҙәре сағылып, йылы дымлы ер, йәш үлән еҫенә иҫереп, башы әйләнгән һымаҡ булып, ишек төбөндә оҙаҡ туктап торҙо.* З. Биишева. *Әхмәҙиә .. түҙмәне, ҡымыҙҙан ҡайтып, ҡатынына ит бирҙе лә, егеүле арбаһына йәш бесән һалып, Ҡуғанаҡҡа ҡарай китте.* Р. Солтангәрәев. *[Миңлеямал] һыйыр алдына яңы сабып алып килгән йәш үләнде һалды ла өйөнә ҡайтты.* Я. Хамматов.

9. Иҫкереп үҙгәрмәгән; яңы. □ Свежий, только что появившийся, молодой. ■ *Ҡайҙа ҡарама, күҙҙе ҡамаштырып, йәш ҡар ялтырай.* Б. Рафиҡов. *Ҡара ергә аҡ ҡар яуа, ҡарт тупраҡҡа йәш ҡар яуа.* М. Кәрим.

10. *миф.* Кеше ғүмеренең ыңғай семантикаға эйә осоро. □ Молодой, юный *(в башкирской мифологии имеет положительную семантику).*

ЙӘШ II [дөйөм төрки *йаш*] (Р.: возраст; И.: age; Т.: yaş) *и.*

1. Йәшәгән ғүмер оҙонлоғон билдәләгән йыл иҫәбе. □ Возраст; год. *Кесе йәштәге балалар. Оло йәштә. Илле йәштә. Йәш етмәҫ борон. Һиңә нисә йәш?* ■ *Ибраһимбәктең муллалары ҡыҙҙарҙың ризалығына, йәше*

етмәүенә, уларҙың күҙ йәштәренә ҡарап тормайҙар, никах уҡыйҙар. Б. Хәсән. *Аҡъял, тирә-яҡты таң ҡалдырып, ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып етешкән.* Әкиәттән. *Аҙнағолдо тәү тапҡыр күргәндә Зөлхизәгә ун алты йәш кенә ине.* З. Биишева. ● *Яҡшы аттың тешен ҡарама, яҡшы кешенең йәшен һорама.* Мәҡәл. *Ирҙең йәше ике утыҙ.* Әйтем. *Һыйырҙың йәше мөгөҙ һырынан билгеле.* Мәҡәл.

2. Ғүмерҙең билдәле бер мәле. □ Возраст. *Пенсия йәшенә етеү. Мәктәп йәшендәге балалар.* ■ *[Сәмиғ менән Надежда Ивановнаның] тормоштары нисек үткәнен һәм пенсия йәшенә килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалдылар, .. тормоштары арыу булды.* Т. Ғиниәтуллин.

♦ **Ҡара йәштән** бик бәләкәй саҡтан. □ С малых лет. ■ *[Гөлйөҙөм — Ғәзимәгә:] Ҡара йәштән төшөп һеҙгә эшләнем, һеҙ ағыу сәсеп оҙатаһығыҙ!* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘШ III [дөйөм төрки *йаш*] (Р.: слеза; И.: tear; Т.: yaş) *и.*

Күҙ биҙҙәренән бүленеп сыҡҡан төҫһөҙ әскелтем шыйыҡлыҡ; күҙ йәше. □ Слеза. *Йәште һөртөү. Күҙгә йәш килеү. Күҙ йәше түгеп илау. Йәш бөртөгө.* ■ *Өйөбөҙ янды беҙҙең, иланым мин, атай үлде минең — йәш тыҡтем.* Ғ. Сәләм. *[Вәлетдиндең] ике яңағы буйлап күҙ йәштәре тыҡтауһыҙ аға бирҙе.* М. Кәрим. *Бары ла көлөштөләр. Айбулат күҙенән йәш сыҡҡансы рәхәтләнеп көлдө.* Һ. Дәүләтшина. *Зөлхизәнең йондоҙҙай шат күҙҙәрен йәш бөркөй.* З. Биишева. ● *Бер күҙгә төртһәң, икенсе күҙҙән йәш сығыр.* Мәҡәл. *Йәш менән гөнаһ йыуылмай.* Мәҡәл. *Ихлас илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға.* Мәҡәл. *Юрғаның тире кипмәҫ, иркәнең йәше кипмәҫ.* Әйтем. *Иҫке дуҫ килгәнгә яңы дуҫтың күҙенән йәш сыға.* Мәҡәл.

♦ **Күҙ йәше төшөү** кешене рәнйетеүҙең ҡоһорон күреү. □ Быть проклятым. **Ҡанлы (**йәки **ҡан) йәш** әсе ғазаптан булған күҙ йәше. □ Кровавые слёзы. ■ *Арбаға дүртәр-бишәр кеше тейәлеп, һуғышҡа киттек. Бөтә ауыл ҡара көйөп, ҡалтырап, ҡан-йәш түгеп, беҙҙе оҙатып ҡалды.* Ғ. Ғүмәр. *Тағы яфа, тағы ҡайғы баҫты, илем халҡы ҡанлы йәш түгә.* Б. Бикбай.

ЙӘШАҒАР (Р.: слёзный мешочек; И.: lacrimal glands; Т.: gözyaşı bezi) *и. анат. диал.*

Күҙ тоҡсайы. □ Слёзный мешочек. *Йәшағарҙың шешеүе. Йәшағарҙы таҙартыу. Йәшағар эренләне.*

ЙӘШ АРАЛАШ (Р.: сквозь слёзы; И.: through laughter; Т.: gözyaşları ile) *р.*

Илай-илай, иламһырап. □ Сквозь слёзы. ■ *Егет эйәргә һикерә, алға оса ҡара юрға. Ә Нәфисә йәш аралаш ҡарай ул киткән юлға.* М. Кәрим. *Уның [Закирҙың] йөҙөндә йәш аралаш әсе йылмайыу сағыла.* З. Биишева. *Уның [Зөбәржәттең] күҙҙәре йәш аралаш зәһәрле оскон сәсеп йылтырайҙар ине инде.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӘШ БАЛА (Р.: младенец; И.: baby; infant; Т.: bebek) *и.*

Имсәк ташламаған бәләкәй бала. □ Младенец, грудной ребёнок, малолетнее дитя. ■ *Гөлйөҙөм, ҡыҙын эйәртеп, сәңгелдәктәге йәш балаһын күтәреп алып, түгелеп илап, оҙата китте.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘШБИКӘ (Р.: молодая жена; И.: young wife; Т.: genç karı) *и. диал.*

Көндәштәрҙең йәше; йәш бисә. □ Молодая жена *(при многожёнстве). Ҡунаҡҡа йәшбикә менән китте. Йәшбикә булып барыу. Йәшбикәнән көнләшеү.*

ЙӘШ БИСӘ (Р.: молодая жена; И.: young wife; Т.: genç karı) *и.*

Күп ҡатынлы кешенең иң һуңынан алған ҡатыны. □ Молодая жена. ■ *Ҡотлоҡай, тертләп, йәш бисәһенә әйләнеп ҡараны.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӘШ БЫУЫН (Р.: молодёжь; И.: youth; Т.: gençlik) *и.*

Йәштәр, йәш кешеләр. □ Молодёжь, молодое поколение. ■ *Хаммат аслыҡ, яланғаслыҡ күрмәй .. үҫкән шат, көләс йәш быуынды тиҙерәк күреү теләге менән тағы ла түҙемһеҙ уйланып, үҙе лә һөйләр һүҙен башлай алмай ултырҙы.* З. Биишева. *[Талипов:] Йәш быуын — ана шул оло быуындың эшен дауам иттереүселәр, беҙгә алмашҡа килеүселәр.* М. Тажи.

ЙӘШ ЕГЕТ (Р.: юноша; И.: youngster; Т.: yiğit, delikanlı) *и.*

Бала йәшенән сыҡҡан, өлгөрлөк осорона еткән, өйләнмәгән ир кеше. □ Юноша, молодой человек. ■ *Ул [Хәмит] йәш егеттәр шикелле ҡыҙарыныл-бүртенеп бик оҙаҡ өндәшмәй ултырҙы.* З. Биишева. *Шул ваҡыт йәш егет тәңөндәге дейеү батша, әтәскә әйләнеп, ярма бөртөктәрен суплай башланы, ти.* Әкиәттән.

ЙӘШЕКӘЙ *и. диал. ҡар.* **зыярат.** *Йәшекәйҙе кәртәләү. Мосолман йәшекәйе. Яңы йәшекәй.*

ЙӘШЕЛ [дөйөм төрки *йашил*] (Р.: зелёный; И.: green; Т.: yeşil) *с.*

1. Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе — һары менән зәңгәр араһындағы төҫ; үлән, йәш япраҡ төҫө. □ Зелёный. *Йәшел төҫ. Ҡара йәшел. Йәшелгә буятыу. Йәшел төҫ алыу. Йәшел туҡыма.* ■ *Мәсет кенә Айбикәләр ауылыныҡына ҡарағанда бейегерәк, түбәһе лә йәшелгә буялған.* Һ. Дәүләтшина. *Ул [Муса мулла], камалы йәшел туныныҡ салғыйын тотоп, сананан төштө.* М. Кәрим. *Моратшаның, атаһына оҡшап, аҫтан һөҙөп ҡараған йәшел күҙҙәрендә мәкерле ут баҙлап китте.* З. Биишева. ● *Йәшел төҫ — күҙ яны.* Әйтем.

2. Үлән үҫкән, йәшеллек ҡаплаған. □ Зелёный, покрытый зеленью. *Йәшел ялан. Йәшел һуҡмаҡ.* ■ *[Фәрзәнә] йәшел туғайҙарҙа үткән ҡыҙ сағын, Ғәлимйәне менән бергә булғандағы бәхетле көндәрен һағынып иҫкә алды.* Ф. Әсәнов. *Тау өҫтөнә менгәс, алда киң иген ҡырҙары, йәшел көтөүлектәр йәйелеп китте.* Ғ. Лоҡманов. ● *Йәшел сирәм сир ҡыуыр.* Мәҡәл.

3. Кибеп һарғаймаған; йәш. □ Зелёный, свежий. *Йәшел бесән. Йәшел япраҡ.* ■ *Яландың урта ерендәгеләре кипһә лә, уларҙың [бесәндең] урман ситендәге баш-баштарының аҫты шәмәреп, йәшел ята ине әле.* Н. Мусин. *Япраҡтар ҡойолмағандар, япраҡтар әле йәшел. Ямғыр ҙа быйыл аҙ яуа, ялт та йолт итмәй йәшен.* Р. Ниғмәти. *[Карт] арбанан йәшел бесән ҡосаҡлап алып, ат алдына илтеп һалды, арҡалыҡты бушатты, ыштыяны рәтләне, аттың янбашынан һөйҙө.* Ғ. Лоҡманов.

4. Яңы сабылған үләндән, япраҡтан торған. □ Зелёный, состоящий из зелени. *Йәшел аҙыҡ. Йәшел масса.* ■ *[Диктор:] Вәлиевте беҙ, аҡрын ғына йырлай-йырлай, һыйырҙарға йәшел аҙыҡ өләшеп йөрөгән сағында осраттыҡ.* Ғ. Лоҡманов. *[Сибаев:] Кукурузды ферма артында үҫтерһәк, йәшел массаны ташып алырға ла яҡын.* Й. Солтанов. *Яландың буйынан-буйына һутлы үлән һәм сәскә еҫе аңҡытҡан йәшел баҡуйҙар һуҙылды.* Я. Хамматов.

5. Бешмәгән, өлгөрмәгән *(елək-емеш, йәшелсә тураһында).* □ Зелёный, незрелый, неспелый. *Алмалар әле йәшел. Йәшел помидор. Йәшел борос. Йәшел ҡауын.* ■ *Тимурҙың сырайы йәшел помидор ҡапҡандағылай йәмшәйҙе.* Й. Солтанов.

6. Ҡолаҡҡа ятышһыҙ әсе *(тауыш тураһында).* □ Визгливо-писклявый *(о голосе).* ■ *Ишбулды быныһын [был һүҙҙәрҙе] күтәрә алманы, ырғып торҙо ла, йәшел тауыштар сығарып, ҡысҡырып ебәрҙе.* Ғ. Әмири.

7. *миф.* Семантикаһы менән *йәш* һүҙенә яҡын, төрлө тыйыуҙар менән бәйле төҫ. □ Зелёный *(мифологизированный цвет, семантически связанный с йәш 'молодой', входящий в ряд запретов).* ■ *Йәшел япраҡты утҡа яҡһаң, иренең ҡутырлай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘШЕЛ БИЛЕТ (Р.: зелёный билет; И.: green chit; Т.: askerlik cüzdanı) *и. тар.*

Хәрби хеҙмәттән ваҡытлыса ҡалдырыу хоҡуғы биргән йәшел төҫлө документ. □ Зелёный билет *(свидетельство о временном освобождении от военной службы).* ■ *Был арала тағы ла бер тапҡыр призывҡа барырға тура килһә лә, һаман да «йәшел билет»ҡа ҡалдым.* Т. Йәнәби. *Егеттәр тигәне лә ҡайһыһы «аҡ», ҡайһыһы «йәшел» билет менән йөрөүсе бер нисә ир заты ла әле ябағаһын ҡойорға өлгөрмәгән йыйын тай-тулаҡ ине.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӘШ-ЕЛБӘҘӘК (Р.: беззаботный; И.: light-hearted, carefree; Т.: kaygısız) *с.*

Йәш, шат, вайымһыҙ. □ Беззаботный, беспечный. *Йәш-елбәҙәк булыу.* ■ *Йәш-елбәҙәк сағыңда болан кеүек елеп ҡал.* Халыҡ йырынан.

ЙӘШЕЛҒОРТ (Р.: светлячок; И.: glow-worm; Т.: ateş böceği) *и. зоол. диал.*

Төнөн быҙлап яктырып йөрөгән бәләкәй генә ҡуңыҙ; быҙлауыҡ. □ Светляк, светлячок. *Тирә-якты йәшелҒорттар яктыртып оса. Йәшелғорттар быҙлай. Йәшелғорт — ҡаты ҡанатлы ҡуңыҙ.*

ЙӘШЕЛҒОШ (Р.: золотистая щурка; И.: European bee-eater; Т.: Avrupa arı kuşu) *и. зоол.*

Һары һыҙыҡлы көрән арҡалы, йәшел ҡойроҡло, сыйырсыҡ ҙурлығындағы күсмә ҡош. Күберәк сағыусы бөжәктәр менән туҡланғас, умартасыларға зыян килтерә. □ Золотистая щурка (лат. *Merops apiaster Pall*). ■ *[Йәшелғош] яландарҙағы балсыҡлы һәм ҡомло ҡабаҡтарҙа йәшәй. Төрлө бөжәктәр менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

ЙӘШЕЛ ДУҒА (Р.: радуга; И.: rainbow; Т.: gökkuşağı) *и. миф.*

Йәйғорҙоң табулаштырылған (тыйылған) исеме. □ Табуированное название радуги. ■ *Йәшел дуғаны аша атлаһаң, малай-ға әйләнәһең.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘШЕЛДӘР (Р.: зелёные; И.: partisans; Т.: gerilla) *и.*

1. *тар.* Граждандар һуғышы ваҡытында интервенттарға ҡаршы күтәрелгән партизандар. □ Зелёные. ■ *Бөтә тауҙар «йәшелдәр», икенсе төрлө әйткәндә, партизандар менән ҡайнай башланы.* И. Насыри.

2. Планетала экологик хәлде яҡшыртыу өсөн көрәшкән сәйәси фирҡәләр. □ Партия зелёных. ■ *Тоpатауға ла шул яҙмыш янай, әлегә ижтимағи, милли ойошмаларҙың, «йәшелдәр»ҙең ҡаршы төшөүе генә туҡтатып тора.* М. Ямалетдинов. *Профессор, Кения Йәшелдәр партияһын нигеҙләүсе Вангари Мута Маатаи 1940 йылда Кенияның бәләкәй генә Ниери ҡаласығында хәлле ғаиләлә тыуа.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 11, 2010.

ЙӘШЕЛ-ЗӘҢГӘР I (Р.: медный купорос; И.: blue vitriol; Т.: bakır sülfat) *и.*

Көкөрт баҡыр тоҙо, тәбиғәттә кристалдар йәки иретмә хәлендә икенсел матдә буларак осрай; баҡыр купорос. □ Медный купорос. *Йәшел-зәңгәрҙе ҡулланыу. Йәшел-зәңгәрҙе иретеү. Йәшел-зәңгәрҙе һатып алыу.*

ЙӘШЕЛ-ЗӘҢГӘР II (Р.: бирюзовый; И.: turquoise; Т.: firuze rengi) *с.*

Фирүзә төҫлө, йәшел менән зәңгәр араһындағы төҫ. □ Бирюзовый, цвета морской волны. *Йәшел-зәңгәр таш. Йәшел-зәңгәр күлдәк.* ■ *[Хандың] ҡарашы йәшел-зәңгәр көмбәҙҙәргә, бейек манараларға һирпелеп үҙҙы ла ҡаршылағы урман һыҙатына төртөлдө.* Ә. Хәкимов.

ЙӘШЕЛЙЫЛАН (Р.: ящерица; И.: lizard; Т.: kertenkele) *и. зоол.*

Оҙонса кәүҙәһе ҡаты тәңкә ҡау менән ҡапланған оҙон ҡойроҡло, йылғыр хәрәкәтле, һөйрәлеүсе ваҡ йәнлек; кеҫәртке. □ Ящерица (лат. *Lacertilia*). *Йәшелйылан ҡояшҡа ҡыҙынырға сыҡҡан. Йәшелйыландың ҡойроғо өҙөлгән. Урамға йәшелйылан әйләшкән.*

ЙӘШЕЛ ЙӘҮҺӘР (Р.: изумруд; И.: emerald; Т.: zümrüt yeşili) *и.*

Үтә күренеп торған асыҡ йәшел төҫтәге аҫыл таш. □ Изумруд, хризолит. / Изумрудный, хризолитовый. ■ *Йәшел йәүһәр кеүек мең төрлө үләндәр, хәҙер йәйге, йылы ҡояштың һөйөп, иркәләп үҫтереүе арҡаһында .. үҫеп, буйға ла етеп өлгөрҙөләр.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӘШ-ЕЛКЕНСӘК (**йәш-елкенсәге**) (Р.: молодёжь; И.: youth; Т.: gençler) *и. йыйн.*

Йәш кешеләр, йәштәр. □ Молодёжь, молодые люди. ■ *Көн етмәне йәш-елкенсәккә, Һабрау ҙа төн таңға ауышҡан, көнтыуыштa офоҡ аллана башлаған мәлдә генә ҡайтып ятты.* Ә. Хәкимов. *[Розалия] йәш-елкенсәк менән бергә, ҡыҙара-бүртеп, ашлыҡ бушатты.* Р. Низамов. *Тимербайҙың был ҡылығын мәҙәк күреп, кистәрен йәш-елкенсәк уның йылҡы көткән еренән ҡайтмай ине.* З. Биишева. *Тыҡрыҡтарҙа, ҡунаҡ тотоп, йәш-елкенсәк һаҡта тора, буш үткәрмәй берәүҙе лә — аңғармаҫтан ҡойондора.* Р. Бикбай.

ЙӘШЕЛ ҠӘРТӘ (Р.: живая изгородь; И.: green fence; Т.: yeşil çit) *и.*

Теге йәки был урынды уратып алыу, һаҡлау, сиктәрен билдәләү өсөн ултыртылған үҫемлектәрҙән торған ҡәртә *(ғәҙәттә, бер буйҙағы ағастарҙан йәки ҡыуаҡтарҙан, шулай уҡ сырмалыусы үҫемлектәрҙән тора).*

□ Живая изгородь. *Йәшел кәртә менән уратып алыу. Йәшел кәртә ултыртыу. Йәшел кәртәне тәрбиәләү.*

ЙӘШЕЛ ҠУҢЫҘ (Р.: светлячок; И.: glowworm; Т.: ateş böceği) *и. зоол. диал.*

Төнөн быҙлап яҡтырып йөрөгән бәләкәй генә ҡуңыҙ; быҙлауыҡ. □ Светлячок, светляк. *Йәшел ҡуңыҙ ҡанаты. Йәшел ҡуңыҙ оса. Өйгә йәшел ҡуңыҙ тулған.*

ЙӘШЕЛЛЕК (йәшеллеге) (Р.: зелень; И.: greenery; Т.: yeşillik) *и.*

1. Йәшел төҫ, йәшел төҫтә булыу. □ Зелень; зелёный цвет. *Күҙҙәренең йәшеллеге.* ■ *Арыштар ҙа, баш ҡоҫҡан мәлендәге ҡарағусҡыл йәшеллектәрен юғалтып, һарғылт көкөрт төҫкә әйләнеп, ем йыйып ултыралар.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡойма буйҙарында оҙаҡҡараҡ ҡала торған үләндәр генә йәшеллектәрен тулы һаҡлайҙар.* С. Агиш.

2. Йәшел үҫемлек. □ Зелень; зелёные растения, растительность, деревья. *Тәбиғәт йәшеллеккә сумды. Йәшеллеккә күмелеү. Урман йәшеллеге.* ■ *Ҡом сахраһы төҫлө ҡыуарған, йәшеллеге кипкән ер ине.* Т. Йәнәби. *Урмандарҙың йәшеллеге хәтерләтә миңә йәшлегемде.* Ҡ. Даян. *Ҡалала йәшеллек юҡ тиерлек. Урамда тирәк, саған япраҡтары осалар.* С. Агиш. *Йәшеллеккә күмелгән йәйге баҫыу өҫтөндә монар үйнай.* Ф. Әсәнов.

ЙӘШЕЛЛЕ-КҮКЛЕ (Р.: сине-зелёный; И.: blue-green; Т.: mavi yeşil) *с.*

1. Йәшел менән күк төҫ аралаш. □ Сине-зелёный. *Йәшелле-күкле күлдәк. Йәшелле-күкле яулыҡ. Йәшелле-күкле туҡыма.* ■ *Яҙғы ҡояш, дымлы ер өҫтөнә күтәрелгән күкһел быуҙарҙан үтә төшөп, уларҙы йәшелле-күкле, юлаҡ-юлаҡ төрлө төҫтәге матур нурҙарға әйләндерҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Унан мин дә ҡошҡа әйләнмәмме тип өмөт итеп, тирәктең йәшелле-күкле уҡтын өҫтөнә эйелгән һығылмалы ботағында тағы бик оҙаҡ тирбәлеп ултырҙы [Емеш].* З. Биишева.

2. *күсм.* Йәмһеҙ әсе *(тауыш тураһында).* □ Визгливо-писклявый *(о голосе).* ■ *Түрәнең был йәшелле-күкле тауышын берәү ҙә ишетмәне.* Р. Камал. *Мотаһар, боролоп, сығырға йүнәлгәйне, йөрәге дөп-дөп ҡаҡҡан килеш иренен тешләп ҡатып торған Йәүҙәт әллә ниндәй йәшелле-күкле тауыш сығарып туҡтатты.* Й. Солтанов.

ЙӘШЕЛЛӘНДЕРЕЛЕҮ (йәшелләндерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәшелләндереү.** *страд. от* **йәшелләндереү.** *Урамдар йәшелләндерелә. Яҙ көнө ҡала йәшелләндерелә, төрлө төҫтәге сәскәләр ултыртыла.*

ЙӘШЕЛЛӘНДЕРЕҮ (йәшелләндер-) (Р.: озеленять; И.: plant trees and shrubs; Т.: yeşillendirmek) *ҡ.*

Ағас, ҡыуаҡ һ. б. ултыртып, йәшел итеү. □ Озеленять. // Озеленение. *Ҡалаларҙы йәшелләндереү. Йорт эргәһен йәшелләндереү.* ■ *Тирә-яҡты һаҡлау, сафландырыуҙа йәшелләндереүҙең мөһимлеген аңлап, шул маҡсатта уҙҙәре ултыртҡан йәш урмандар, баҫыу һаҡлағыс һыҙаттар район буйлап тиҫтәләрсә саҡрымдарға һуҙылған.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010. *Был сәхрә ҡалаһында йәшелләндереү эшенә айырыуса ҙур иғтибар итәләр.* Ғ. Әмири.

ЙӘШЕЛЛӘНЕҮ (йәшеллән-) (Р.: зеленеть; И.: become green; Т.: yeşillemek) *ҡ.*

1. Япраҡ, үлән менән ҡапланыу, йәшел төҫ алыу. □ Зеленеть, зеленеться, позеленеть. *Ағастар йәшелләнде.* ■ *Тағы ла йәй килде йәшелләнеп, урмандарҙа ҡоштар йырлайҙар. Алһыуланып йәйге таңдар ата, көмөшләнеп аға йылғалар.* Ж. Кейекбаев. *Сейә һәм муйыл сәскә атты, тау башындағы урман йәшелләнде.* Ә. Бикчәнтәев. *Көндәр әҫе торҙо. Күҙ күреме етмәҫтәй алыҫлыҡтағы дала йәшелләнеп, көндән көнгә йәмләнде.* Я. Хамматов.

2. Йәшел төҫтә булыу, йәшел төҫкә инеү. □ Стать зелёным, позеленеть. *Йәшелләнеп тороу.* ■ *Һуңғы йылы ямғырҙарҙан һуң, арыш күҙгә күренеп йәшелләнде.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӘШЕЛЛӘТЕҮ (йәшелләт-) (Р.: озеленять; И.: arrange green spaces; Т.: yeşillendirmek) *ҡ.*

Ағас, ҡыуаҡ һ. б. ултыртып, йәшел итеү. □ Озеленять. // Озеленение. *Йылы тирә-яҡты йәшелләтте. Урамдарҙы йәшелләтеү. Ҡаланы йәшелләтеүгә барлыҡ көсте һалыу.*

ЙӘШЕЛЛӘҮ (йәшеллә-) (Р.: зеленить; И.: paint green; Т.: yeşillendirmek) *ҡ.*

Йәшел төҫкә буяу. □ Зеленить, красить в зелёный цвет. *Эскәмйәне йәшелләү. Соланды йәшелләү.* ■ *Аҡлы ситса күлдәгемдең ең осон йәшелләйем.* Халыҡ йырынан.

ЙӘШЕЛ СЕБЕН (Р.: зелёная падальная муха; И.: green bottle fly; Т.: altın sinek) *и. зоол. диал.*

Ябай себендән саҡ ҡына ҙурыраҡ (8 мм) йәшел төҫтәге себен. Күҙҙәре ҡыҙыл, яңаҡтары аҡ, эсе йомро, һимеҙ. Иң беренселәрҙән булып үләкһәгә ҡуна; рәшә. □ Зелёная падальная муха (лат. *Lucilia caezar*). *Йәшел себенде ағыулау. Йәшел себен быйыл күбәйҙе.*

ЙӘШЕЛСӘ (Р.: овощ; И.: vegetable; Т.: sebze) *и.*

Ашамлыҡ өсөн баҡсала үҫтерелгән төрлө үлән үҫемлек һәм уның емештәре *(ҡыяр, кишер, помидор, сөгөлдөр һ.б.).* □ Овощ, овощи, зелень. / Овощной. *Яңы йәшелсә. Йәшелсә баҡсаһы. Йәшелсә бешереү. Йәшелсә үҫтереү. Йәшелсә ултыртыу.* ■ *Баҡсала студенттар сиратлап эшләй. Картуф, ҡыяр, помидор кеүек йәшелсә аҙығы күпме теләйһең, шул тиклем үҙҙәренеке.* З. Биишева. *Өйҙөң артына терәлеп яланға ҡарай емеш һәм йәшелсә баҡсалары һуҙыла.* Ғ. Дәүләтшин. *Беҙ килгәндә, баҡсалағы ҡыҙҙар йәшелсәләргә һыу һибеп йөрөйҙәр ине.* Ф. Әсәнов. *Асығыраҡ урындарға тип-тигеҙ итеп бөхтәләп яһалған, ҡыяр, кишер, сөгөлдөр, шалҡан һәм башҡа әллә ниндәй йәшелсәләр сәселгән түтәлдәрҙә суп аҫәре күрмәҫһең.* Н. Мусин.

ЙӘШЕЛСӘ БАҠСАҺЫ (Р.: огород; И.: vegetable garden; Т.: sebze bahçesi) *и.*

Йәшелсә ултыртылған ер. □ Огород. ■ *Уң яҡта, Сейәлетау итәгенә табан, күл эргәһендәге эре ҡайынлыҡты уҙғас та, колхоздың йәшелсә баҡсаһы.* Ф. Әсәнов. *Күр, йәшелсә баҡсаһында ниндәй ҡыҙыу, күмәк эш, күҙ етеүгә инде унда тәгәрәп үҫер емеш.* М. Кәрим.

ЙӘШЕЛСӘ-ЕМЕШ (Р.: овощи и фрукты; И.: vegetables and fruit; Т.: sebze meyve) *и. йыйн.*

Ашамлыҡ өсөн үҫтерелгән төрлө йәшелсә һәм емештәр, баҡса емеше. □ Овощи и фрукты. ■ *[Баймораt] баҡсалағы йәшелсә-емештәргә һыу һибергә уйлап өлгөрмәне, өй яғынан ярымлы тауыш ишетелде.* Ф. Янышев. *Оҙон ҡыш буйы йәшелсә-емеш күрмәй талсыҡҡан йәш тән уны бик күпләп талап итә.* З. Биишева.

ЙӘШЕЛ СӘЙ (Р.: зелёный чай; И.: green tea; Т.: yeşil çay) *и.*

Сәй ҡыуағы япраҡтарынан эшләнгән сәй төрө *(япраҡтар йыйылыу менән ҡыҙҙырылып, тиҙ генә киптерелә, кислород менән реакцияға инеүенә юл ҡуйылмай).* Бешергәндә йәшкелт булып сыға, тәме әскелтем. □ Зелёный чай. ■ *Сын-сынаяҡ тулы, ай, йәшел сәй, мин әсәмен әсем көйгәнгә. Яҙыу ғына яҙып хат ебәрҙем, йәнекәйем, һине һөйгәнгә.* Халыҡ йырынан. *Йәшел сәйҙәге фтор тештәр өсөн файҙалы, ә эфир берләшмәләре ауыҙҙан насар еҫте ала.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

ЙӘШЕЛСӘСЕ (Р.: овощевод; И.: vegetable grower; Т.: bahçivan) *и.*

Йәшелсә баҡсаһында эшләүсе, йәшелсә үҫтереүсе белгес. □ Овощевод. ■ *Былай минең күршем үҙе йәшелсәсе-бригадир. Әрем ботағында емеш, бәлки, шуға үҫәлер?* Р. Назаров.

ЙӘШЕЛСӘСЕЛЕК **(йәшелсәселеге)** (Р.: овощеводство; И.: vegetable growing; Т.: bahçıvanlık) *и.*

Йәшелсә, емеш үҫтереү эше. □ Овощеводство, огородничество. / Овощеводческий. *Йәшелсәселек тармағы. Йәшелсәселек фермаһы. Йәшелсәселектә үҫтереү.* ■ *Әхмәттең ғаиләһе йәшелсәселек менән мауығып шөғөлләнә, йәй буйы баҡсаларында кәбеҫтә, ҡыяр, ҡыҙыл сөгөлдөр үҫтереп, шәхси магазиндарында һаталар.* «Башҡортостан», 20 ғинуар 2012.

ЙӘШЕЛСӘ ТУРАҒЫС (Р.: овощерезка; И.: vegetable slicer / cutter; Т.: sebze doğrama makinası) *и.*

Йәшелсәләрҙе турау өсөн ҡулланылған ҡулайлама. □ Овощерезка. *Кишерҙе йәшелсә турағыстан үткәреү. Йәшелсә турағыс һатып алыу. Йәшелсә турағыс менән турау.*

ЙӘШЕЛСӘ ҮҪТЕРЕҮ (Р.: овощеводство; И.: vegetable growing; Т.: sebzecilik) *и.*

Йәшелсәселек менән шөғөлләнгән ауыл хужалығы тармағы. □ Овощеводство. *Йә-*

шелсә үҫтерәү серҙәре. ■ *Эшһеҙ йөрөп өйрәнмәгән егет үҙенә ят булған шөғөлгә тотона – йәшелсә үҫтерәү теләге менән яна башлай.* «Башҡортостан», 16 март 2012.

ЙӘШЕЛСӘ ҮҪТЕРЕҮСЕ *и. ҡар.* **йәшелсәсе.** *Йәшелсә үҫтереүсе булып эшләү. Йәшелсә үҫтереүсе һөнәрен алыу. Йәшелсә үҫтереүсе ҡыҙ.*

ЙӘШЕЛ ТӨЙӨТ (Р.: зелёная пеночка; И.: greenish warbler; Т.: yeşil çivgin) *и. зоол.*

Һырт яғы көрәнһыу йәшел, ҡабырғалары асыҡ йәшкелт һары төҫтәге күсмә ҡош. □ Зелёная пеночка (лат. *Phylloscopus trochiloides Sund*). ■ *Йәшел төйөт башҡа төйөттәрҙән йәшел төҫө күберәк булыуы менән һәм үҙенсәлекле һайрауы менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

ЙӘШЕЛ ТУМЫРТҠА (Р.: зелёный дятел; И.: European green woodpecker; Т.: yeşil ağaçkakan) *и. зоол.*

Күгәрсендән бәләкәйерәк, һырты көрәнһыу һарғылт йәшел, кәүҙәһенең аҫ яғы йәшкелт аҡ төҫтәге ултыраҡ ҡош. □ Зелёный дятел (лат. *Picus viridis*). ■ *Йәшел тумыртҡа бөҙ тумыртҡанан йәшел төҫө һәм түбәһе тотош ҡыҙыл булыуы менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

ЙӘШЕЛ ТУРҒАЙ (Р.: зеленушка; И.: European greenfinch; Т.: florya) *и. зоол.*

Арҡаһы йәшел, ҡанаттары һәм ҡойроғо һары һыҙатлы көрәнһыу ҡара төҫтәге турғайҙар төркөмөнә ҡараған турғай ҙурлығындағы ҡош. □ Зеленушка (лат. *Carduelis chloris*). ■ *Йәшел турғай йылы яҡҡа китмәй, бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөй.* Э. Ишбирҙин.

ЙӘШЕЛҮҢӘС (Р.: пищевод; И.: gullet; Т.: yemek borusu) *и. анат. диал.*

Ашҡаҙанға төшкән аш юлы; ҡыҙыл үңәс. □ Пищевод. *Йәшелүңәс ауырыуҙары. Йәшелүңәс шеше. Яһалма йәшелүңәс.*

ЙӘШЕЛ ҺУҒАН (Р.: зелёный лук; И.: green onion; Т.: yeşil soğan) *и.*

Һуғандың йәшел һабаҡ өлөшө; ҡыяғы. □ Зелёный лук. ■ *[Салауат] түтәл башында туҡталып, усын тултырғансы йәшел һуған йолҡоп алды.* Й. Солтанов. *[Миңлеямал] икенсе урынға барып, бер кило картуф, бер тиҫтә йомортҡа, йәшел һуған, бер нисә ҡыяр алды.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӘШЕЛҺУРПА (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-усерганцев.

ЙӘШЕЛҺЫУ (Р.: зеленоватый; И.: greenish; Т.: yeşilimsi) *с. аҙһ. дәр. ҡар.* **йәшел.** *уменьш. степ. от* **йәшел.**

Тоноҡ йәшел, йәшелгә тартым; йәшкелт. □ Зеленоватый. *Йәшелһыу күлдәк. Йәшелһыу яулыҡ.*

ЙӘШЕЛ-ҺӘҢГӘР (Р.: зелень бриллиантовая; И.: brilliant green; Т.: antiseptik anilin boyası) *и.*

1. Тәндәге үлекләү, сабыртыу кеүек ауырыуҙарҙы дезинфекциялау, зарарһыҙландырыу сараһы итеп ҡулланыла торған антисептик дарыу. □ Зелень бриллиантовая, зелёнка. *Малдың ҡортлаған еренә йәшел-һәңгәр һөртәләр. Дауахананан йәшел-һәңгәр һатып алыу.*

2. *ҡар.* **йәшел-зәңгәр I.**

ЙӘШЕЛ ЫЛЫМЫҠТАР (Р.: зелёные водоросли; И.: chlorophytes; Т.: yeşil algler) *и. бот.*

Һайыраҡ урындарҙа һыу төбөнә еп һымаҡ һуҙылып, түшәлеп үҫкән, саң-һеркә ярҙамында үрсей торған йәшел төҫтәге үҫемлек. □ Зелёные водоросли (лат. *Chlorophyta*). ■ *[Норош] ярының буйҙарын шыр баҫҡан, һыу йышып шымартҡан әреле-ваҡлы таштарҙы йәшел ылымыҡ ҡаплаған йә ләм баҫҡан.* Н. Мусин.

ЙӘШЕЛ ЯР *и. ҡар.* **йәшел-һәңгәр 1.**

ЙӘШЕН [дөйөм төрки *йашин*] (Р.: молния; И.: lightning; Т.: yıldırım) *и.*

1. Атмосфера электрының һауала зарядһыҙланыуы ваҡытында барлыҡҡа килгән сатҡы. □ Молния; гроза. / Молнийный; грозовой. *Йәшен атыу. Йәшен уты. Йәшен тубы. Тирәкте йәшен атты.* ■ *Йәшен ялтлай. Күк яҡында ғына дөһөрләй.* Ш. Янбаев. *Күк көмбәҙен йәшен телгеләне, ҡойоп ямғыр яуҙы ҡырҙарға.* Р. Ниғмәти. *Баяғы бөркөт һаман*

мәғрур төςтә кәйелеп оса, йәшендәй атылып, сырҡылдатып баςып алаһы ҡорбанын аңдый ине. Ә. Хәкимов. ● *Аяҙ көндө йәшен һуҡты.* Мәҡәл. *Аяҙ көндөң йәшененән ҡурҡ.* Мәҡәл. *Йәшен йәшнәмәй — күк күкрәмәй.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Шатлыҡ-ҡыуаныс йәиһә нәфрәт кеүек хис-тойғолар кисергәндә йөҙҙә сағылып киткән сатҡы. □ Искра. ■ *Кәкүк һағышы ла бар уларҙа, бар уларҙа нәфрәт йәшене, бар дәһшәтле тәүәккәллек, сабыйлыҡ та илай, йәшенеп...* Р. Ғарипов.

3. *күсм.* Етеҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ О проворном человеке. ■ *Берәү йәшәй йәшен булып, берәү донъя ҡыуа ҡалтырап.* В. Әхмәҙиев.

4. *миф.* Мифлаштырылған, Хоҙайҙың сыбыртҡыһы тип ҡабул ителгән тәбиғәт күренеше. □ Молния *(мифологизированное явление природы; сверкание молнии башкиры связывают с кнутом божества Күк тәңре).* ■ *Йәшен — Тәңре ҡамсыһы, ут ялсыһы, тигәндәр.* Экспедиция материалдарынан. *Йәшен атҡан ағаска теймәйҙәр. Уны һыу менән һүндерергә ярамай.* Экспедиция материалдарынан.

♦ **<Аяҙ көндә> йәшен һуҡҡандай (*йәки* атҡандай) булыу** көтмәгән бер хәл, хәбәр булғанда әйтелә. □ *соотв.* Как гром среди ясного дня. ■ *Был хәбәр Гәрәевкә йәшен һуҡҡан кеүек тәьҫир итте.* И. Насыри. **Йәшендән ҡасҡан <шайтан> һымаҡ** ныҡ ҡурҡып ҡасыуға ҡарата әйтелә. □ Убежать, сильно испугавшись. **Йәшен уйнатыу** ҡеүәт, ғәйрәт сәсеү; ут уйнатыу. □ Устрашать сильным натиском, наступать. ■ *Әлфиә Рәхимовнаны тыйып тороп булмаҫ ине, күҙҙәрендә йәшен уйнатты.* Д. Бүләков.

ЙӘШЕН АТЫУ (йәшен ат-) (Р.: ударить *(о молнии)*; И.: strike (of lightning); Т.: yıldırım çarpması) *ҡ.*

1. Йәшен тейеп зарарлау. □ Ударить *(о молнии).* // Удар молнии. *Ағасты йәшен атҡан.* ■ *Күҙҙе сағылдырып йәшен йәшнәне. Эргәлә генә гөрһөлдәп йәшен атты.* З. Ураҡсин. *Тикшереү Буранбай менән Фазыл иҫәп тотҡан һөҙөмтәне бирмәне, әҫкертте йәшен атыуы билдәле булды.* Ә. Хәкимов. *[Әклимә:] [Балалар] бала саҡтарында, йылғаға батып ҡуймаһындар, йәшен атып ҡуймаһын, тип дер ҡалтырайһың, ҡанаттары үҫеп, ҡала тарафтарына осоп киткәс, тағы ла шомлораҡ.* Т. Ғиниәтуллин.

2. *миф.* Хоҙай Тәғәләнең шайтанды атыуы. □ Удар молнии *(наказание шайтана небесным божеством).* ■ *Йәшен шайтанды атам тип кешене ата.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘШЕН БЫЛҠЫУ (йәшен былҡы-) *ҡ. диал. ҡар.* **йәшен йәшнәү 1.** *Яҡында ғына йәшен былҡыны. Йәшен былҡып, күк күкрәп, ямғыр яуа башланы.*

ЙӘШЕНГӘ ҺЫҒЫНЫУ (йәшенгә һығын-) (Р.: ютиться; И.: huddle together; take shelter; Т.: barınmak) *ҡ. диал.*

Ярҙам өмөт итеп яҡынлау; һыйыныу. □ Ютиться, укрываться. ■ *«Бисмиллаһиррахманир-рахим, ут-уҡтарыңдан һаҡла», — тип йәшенгә һығынабыҙ.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘШЕНДЕРЕҮ (йәшендер-) (Р.: дать возможность спрятаться; И.: let find shelter; Т.: yaşmak) *ҡ.*

Йәшенергә булышлыҡ итеү; йәшереү. □ Дать возможность спрятаться, укрыть. *Баланы йәшендереү.* ■ *Кейәүҙең килгәнен ишеткәс, Фатиманы йәшендерҙеләр.* Ж. Кейекбаев.

ЙӘШЕН ДОҒАҺЫ *и. диал. ҡар.* **йәшен теле.** *Йәшен доғаһын уҡыу.* ■ *Ҡырҡ кеше араһында берәү йәшен доғаһын уҡыһа, йәшен атмай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘШЕНЕП-БОҪОНОП (Р.: тайно; И.: secretly; Т.: gizlice) *р.*

Кеше күҙенә күренмәҫкә, һиҙҙермәҫкә тырышып; ҡасып-боҫоп. □ Тайно, тайком, украдкой, скрытно. *Йәшенеп-боҫоноп ауылға инеү.* ■ *Улар [дошмандар] былтыр үҙҙәренең ерәнес эштәрен асыҡтан-асыҡ эшләй алһалар, хәҙер йәшенеп-боҫоноп ҡына эшләй башланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

ЙӘШЕНЕҮ (йәшен-) [боронғо төрки *йаш-*] (Р.: прятаться; И.: hide; Т.: saklanmak) *ҡ.*

1. Күҙҙән ҡасып ышыҡланыу, ышыҡланып боҫоу. □ Прятаться, скрываться, укрываться, таиться. *Йәшенеп ҡалыу. Йәшенеп ултырыу. Ағас артына йәшенеү.* ■ *[Үҫмер:] Коломбәттең йәшенгән ерен күреп әйтәйем*

тип, батыр, һине көткән инем. Әкиәттән. *Акйеләк шул күл буйында йәшенеп кенә йылкыларҙың һыулауға килгәнен һағалап яткан.* Әкиәттән. *Ике кыҙ кураға сығып, сыуал арттарына йәшенеп, күпме вакыт хат укығандарҙыр.* Һ. Дәүләтшина.

2. Ышыкланып, күҙҙән юғалыу. □ Прятаться, скрываться. ■ *Таң яктынлашты. Шаян йондоҙҙар тағы ярты айға әйәреп, берәм-берәм диңгеҙ төбөнән сыктылар ҙа, куккә менеп йәшенделәр.* З. Биишева. *Кояш тау артына йәшенеп, эңер төшә башлағас кына, капыл тертләп, урынынан куҙғалды.* М. Хужин.

ЙӘШЕН ЙӘШНӘҮ (йәшен йәшнә-) (Р.: сверкать *(о молнии)*; И.: flash (of lightning); Т.: yıldırım oyunu) *к.*

1. Саткы уйнатыу. □ Сверкать *(о молнии)*. // Сверкание молнии. ■ *Күҙҙәр камашырлык якты була, тиҙ булһа ла йәшен йәшнәүе.* Р. Ғарипов. *Шомло тынкыслык — йәшен йәшнәү артынан буласак көслө күк күкрәүен көтөү менән бер ине.* Я. Хамматов.

2. *миф.* Күк тәңренең сыбыртҡы шартлатыуы, сыбыртҡы осондағы таштың ялтырауы. □ Сверкание молнии *(башкиры связывают его с кнутом небесного божества)*.

ЙӘШЕН ҠАЙТАРҒЫС (Р.: молниеотвод; И.: lightning conductor; Т.: yıldırımsavar) *и.*

Йәшен атмаһын өсөн бейек ҡоролмаларҙың башына күтәреп, бер осо ергә тоташтырып ҡуйылған йыуан тимерсыбыҡ. □ Молниеотвод, громоотвод. ■ *Йәшен ҡайтарғыстай, үтә һиҙгер, яланғас шул минең йөрәгем. Хәйләһеҙ ҙә донъя файҙаһыҙ шул, көтмәгәндә бирә кәрәгем.* Х. Назар.

ЙӘШЕНЛЕ (Р.: грозовой; И.: storm; Т.: bora) *с.*

Йәшене булған. □ Грозовой, с грозой. *Йәшенле ямғыр. Йәшенле болот.* ■ *Бына әле генә йәшенле ямғыр уҙған. Уның артынса ҡояш балкып сыҡҡан.* З. Биишева. *Йәшенле ямғыр тиҙ үтә бит ул — тағы аяҙыны. Йондоҙҙар йымылдашты.* З. Хисмәтуллин. *Бер бабай йәшенле ямғыр мәлендә урман юлы буйлап китеп барһа, ниндәйҙер ҡыҙ бала илап ултыра, ти.* Әкиәттән. *Төнгө йәшенле ямғырҙан һуң һауа сафланған.* Ғ. Лоҡманов.

ЙӘШЕНЛӘҮ (йәшенлә-) (Р.: сверкать молниями; И.: flash; Т.: şimşek çakmak) *к.*

Йәшен йәшнәү. □ Сверкать молниями, блистать *(о молнии)*. ■ *Була бит шундай хәлдәр: ҡара болоттар бөтә күк йөҙөн ҡаплап алалар, дәһшәтле йәшендәр йәшенләй, ер һелкетеп күк күкрәй.* Х. Мохтар. *Ҡаты күк күкрәй, йәшен йәшенләй, ҡойоп ямғыр яуа.* Һ. Дәүләтшина.

ЙӘШЕНМӘК (йәшенмәге) (Р.: прятки; И.: hide-and-seek; Т.: saklambaç) *и.*

Балалар уйыны *(берәү күҙен ҡаплай, бүтәндәре йәшенә; кем иң беренсе табыла, шул артабан гөргөлдәй)*. □ Прятки. *Йәшенмәк уйнау.* ■ *Төшкә тиклем уйнап өлгөрмәгән уйындар байтаҡ әле: соҡор туп, көтөү бураһы, әлгес, сәкән, һәпәләк, йәшенмәк һәм тағы ла әллә ниндәй уйындар.* Н. Мусин. *Вәт, исмаһам, Таулыҡайҙың урамдарын урам тиһәң дә ярай. Рәхәтләнеп йәшенмәк уйнарлыҡ.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡояш, әйтерһең, ҡыҙҙар менән йәшенмәк уйнаны: берсә баҙырайып ҡалҡып сыҡты, берсә упҡынға батып юҡ булды.* З. Биишева.

ЙӘШЕН ОСОҒО *и. диал. ҡар.* **йәшен.** ■ *Быума булһа, йәшен осоғо һорағандар.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘШЕН ТАШЫ (Р.: шаровая молния; И.: fire ball lightning; Т.: ateşten top) *и.*

1. Туп булып тәгәрәп йөрөгән йәшен. □ Шаровая молния. ■ *Юҡҡамы ни берсә тынам, бер дауыл булып туҙам. Берсә болоттар сорғолтҡан йәшен ташындай ҡыҙам.* М. Ғәли. *Японадарҙың халҡы ғәйәт үткер икән, һәмишә ҡоралдары үткен икән, туптары йәшен ташы кеүек икән, егерме биш — утыҙ саҡрымдан ала икән.* Бәйеттән.

2. *мин.* Йәшел төҫтәге аҫыл таш; йәшмә. □ Яшма. ■ *Аллаяр мулла һандыҡ кеүек нәмәһен асты ла, зөбәржәт, фирүзә, .. йәшен ташы, ҡояш күҙе кеүек ҡиммәтле таштарын Мавринға күрһәтеп сыҡты.* Ш. Шәһәр.

3. *миф.* Йән һаҡлағыс, амулет. □ Амулет, оберег. ■ *Күҙ уғынан йәшен ташы йөрөтә инек.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘШЕН ТЕЛЕ (Р.: заговор молнии; И.: spell against lightning; Т.: yıldırım büyüsü) *и. миф.*

Йәшенде әпсенләү. □ Заговор, заклинание молнии *(применяется от удара молнии).* ■ *Йәшен теле тигән доға халыҡта әле лә киң таралыш алған.* Ф. Хисамитдинова.

ЙӘШЕН ТИҘЛЕГЕНДӘ (Р.: молниеносно; И.: with lightning speed; Т.: yıldırım hızıyla) *р.*

Ҡапыл, тиҙ арала, күҙ асып йомғансы. □ Молниеносно. ■ *Был саҡырыу бөтә төпкөл ауылдарға тиклем йәшен тиҙлегендә таралды.* Р. Өмөтбаев. *«Бүреләр! Айғырға бүреләр йәбешкән!» — Был уй йәшен тиҙлегендә Фәрзәнәнең йөрәгенә аша үтте.* Ф. Әсәнов.

ЙӘШЕН ТОТҠОС *и. ҡар.* **йәшен ҡайтарғыс.** *Йәшен тотҡос ҡуйыу. Йәшен тотҡос һатып алыу. Йәшен тотҡос эшләү.*

ЙӘШЕН ТУБЫ *и. ҡар.* **йәшен ташы 1.** ■ *Сатыр-сотор итеп ҡалды: яҡында ғына йәшен тубы ярылды.* З. Ураҡсин.

ЙӘШЕН ТӘҢРЕҺЕ (Р.: божество молнии; И.: lightning deity; Т.: yıldırım tanrısı) *и. миф.*

Йәшен менән идара итеүсе юғары зат *(уҡтары шайтандарға төбәлгән).* □ В башкирской мифологии: божество молнии *(его удары направлены против шайтана).* ■ *Башҡорттарҙа йәшен тәңреһе оло тәңреләрҙән һанала.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘШЕН УТЫ (Р.: огонь от удара молнии; И.: fire after lightning stroke; Т.: yıldırım ateşi) *и.*

1. Йәшен атҡандан һуң барлыҡҡа килгән ут. □ Огонь от удара молнии. ■ *Самат үлеменең Ҡыҙрас ҡартҡа нисек ныҡ тәьҫир итеүен, йәшен утының һис көтмәгәндә ҙур ныҡ иманде ҡолата атыуы менән генә сағыштырып булыр ине.* Ә. Чаныш. *Бик алыҫта, бейек-бейек тауҙарҙың арьяғында, йәшен уты балҡыны.* Я. Хамматов. *Дауылланып ел туланы, уйнаны йәшен уты.* А. Игебаев. *Осһаң икән, ҡанаттарың менән ҡайтарып та йәшен уттарын.* Ф. Туғыҙбаева.

2. *миф.* Изгеләштерелгән, магик көскә эйә булған ут. □ Огонь от удара молнии *(по представлениям башкир, огонь от молнии нельзя тушить водой. Его тушат только молочным продуктом).* ■ *Йәшен утын һөт, ҡатыҡ менән генә һүндерәләр.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘШЕН ҺУҒЫУ (йәшен һуҡ-) (Р.: ударять *(о молнии)*; И.: strike (of lightning); Т.: yıldırım çarpması) *ҡ.*

1. Йәшен атыу. □ Ударять (о *молнии*). // Удар молнии. ■ *[Хәмәтдин ағай] яр буйындағы йәшен һуҡҡан имәнгә төбәлеп бик оҙаҡ һүҙһеҙ торҙо.* Ф. Әсәнов. *Бер аҙҙан һуң, ҡартайғанлыҡтанмы, йәшен һуғыуҙанмы .. ергә йығылған йыуан ағас өҫтөнә ултырып, Ғәли гармун уйнай башланы.* А. Таһиров.

2. *миф.* Йәшен тәңреһенең шайтанды, яман заттарҙы атыуы. □ Удар молнии *(воспринимается как наказание злых духов, напускаемое небесным божеством).*

ЙӘШЕН ЭЙӘҺЕ (Р.: дух молнии; И.: lightning spirit; Т.: yıldırım tanrısı) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында йәшен хужаһы. □ Дух молнии *(в башкирской мифологии).* ■ *Йәшен эйәһе айғыр ҡиәфәтендә осрай.* Башҡорт мифологияһынан.

ЙӘШЕРЕЛЕҮ (йәшерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәшереү.** *страд. от* **йәшереү.** *Йәшерелгән иген.* ■ *Һалам аҫтынан күп кенә йәшерелгән ашлыҡ табылды.* Б. Ишемғол. *[Вәзир] дүртбиш йәшлек саҡта уҡ әле мендәр араһына йәшерелгән арыш көлсәһен тапты.* М. Кәрим. *Нишләһәк тә яуапҡа тарттырмайҙар, байлыҡ аша йәшерелә бөтә хатам.* М. Ғафури.

ЙӘШЕРЕН I (Р.: тайный; И.: secret, clandestine; Т.: gizli) *с.*

1. Кемдән дә булһа йәшерелә торған, күптәргә билдәле булмаған. □ Тайный, секретный, скрытный. *Йәшерен эш. Йәшерен хат.* ■ *Немец штабы офицерын тереләй ҡулға төшөрөп булмаһа ла, документтарын, йәшерен карталарын эләктерҙек.* А. Мағазов. ● *Асыҡ дошман йәшерен дошмандан хәйерле.* Мәҡәл. *Йәшерен яуҙы юҡҡа һанама.* Мәҡәл.

2. Тыш яҡтан беленмәгән, бүтәндәрҙән йәшерелә торған *(уй, хис, фекергә ҡарата).* □ Тайный, секретный *(о чувствах, мыслях).* *Йәшерен уй. Йәшерен фекер.* ■ *Фатимаға ҡарата тыуа башлаған йәшерен мөхәббәтен бер кемгә әйтмәй, үҙе менән алып китте Хөсәйен.* Ж. Кейекбаев. *[Шәһүрә] ятһа ла, торһа ла, өйҙә лә, урманда ла йәшерен һағыш*

алыр, кемгәлер тартылыу тойғоһо уны һис кенә лә ташлап китмәй. Н. Мусин. *Йәғҙәнең иҫе-аҡылы китте. Тоняның томанлы йөҙөнән йәшерен уйҙарын белергә теләгәндәй, уға төбәлде.* И. Абдуллин.

3. Закон тарафынан рөхсәт ителмәй торған, йәшереп эш итә торған. □ Тайный, нелегальный, подпольный. *Йәшерен ойошма. Йәшерен йәмғиәт.* ■ *Нурали хан үҙ нөгәрҙәрен эйәртеп йәйләүенә ҡайтып китер алдынан солтандар менән йәшерен кәңәшмә ҡорҙо.* Ғ. Хөсәйенов. *Эйе, һәр төрлө бандаларға, революцияны, Совет дәүләтен аҫтыртын емерергә маташыусы йәшерен ойошмаларға ҡаршы көрәш осоро күптән үҙғайны инде.* Ә. Хәкимов.

4. Бик йәшереп йөрөтөлгән. □ Тайный. *Йәшерен китаптар. Йәшерен хаттар.* ■ *Йәшерен яҙыуҙарҙың бер нисәһе һалдаттарҙың ҡулына төшкән.* М. Ғафури.

5. Сәйәси енәйәтселәрҙең эштәрен һ. б. алып барыу өсөн тәғәйенләнгән, хеҙмәт иткән. □ Тайный, секретный. *Йәшерен бүлек. Йәшерен агент. Йәшерен агентура. Йәшерен полиция.* ■ *НКВД-ла сит илгә сыҡкан сәйәси дошмандарҙы юк итеү менән шөғөлләнгән йәшерен бүлек ойошторола.* М. Хужин. *Империя икән — кан түгеүһеҙ булмай. Үҙе баш булған Йәшерен канцелярия — шуның бер ҡоралы бит.* Ғ. Хөсәйенов. *Егет мәҙрәсә башлығының тулы ышанысына инде. Ул ғына ла түгел, ҡала жандармерияһына саҡыртып алып, уны йәшерен агент итеп ҡуйҙылар.* Ғ. Лоҡманов.

♦ **Донъя йәшерендәре** донъяның һәр кем аңлай алмаған төрлө мутлыҡ һәм хәйләләре. □ Хитрости жизни. ■ *[Абыстай:] Мин әле йәп-йәш, кеше ҡорона яңы еттем, донъя йәшерендәрен яңы еҫкәй башланым.* Т. Хәйбуллин.

ЙӘШЕРЕН II (Р.: тайно; И.: secretly; Т.: gizlice) *р.*

1. Кемдән дә булһа йәшерелеп. □ Тайно, секретно, скрытно. *Йәшерен итеү. Йәшерен һөйләү.* ■ *Ҡара яныл, йәшерен генә тештәрен ҡыҫып, ишек төбөндә ҡарап торған Ҡарабаш бер урынға ла һайланманы.* И. Насыри. *Юлай ҡай саҡ карателдәр ҡулына эләкмәгән Кинйәнең илгә йәшерен генә ҡайтҡанын күҙ алдына килтерә.* Б. Рафиков.

2. Тыш яҡтан беленмәгән рәүештә *(уй, хис, фекергә ҡарата).* □ Тайно, секретно (о *чувствах, мыслях*). *Йәшерен һөйөү.*

ЙӘШЕРЕН-БАТЫРЫН I (Р.: тайно; И. secretly; Т.: gizlice) *р.*

Кемдән дә булһа йәшерелә торған, йәшереп эш ителә торған; йәшерен. □ Тайно, исподтишка, скрытно. ■ *[Искәндәр:] Кеше яҙмышын йәшерен-батырын хәл итергә ярамай.* Ә. Хәкимов. *Йәшерен-батырын түгел, һәр кемдең үҙ аллы эштә йөрөгөһө, эш күрһәткеһе килә.* Р. Солтангәрәев.

ЙӘШЕРЕН-БАТЫРЫН II (Р.: секретное, тайное; И.: secret; Т.: gizlilik) *и.*

Йәшереп эшләй торған нәмә. □ Секретное, тайное, секрет. ■ *Йәшерен-батырыны юк: көрәүсе диуарҙы хәҙер инде мөмкин тиклем бейегерәк итергә тырыша — ҡаршы юҫыҡтағы ҡарҙы ла, әйләндереп килтереп, шул тарафҡа бырактыра.* Р. Сәғитов. *[Хәтирә еңгә — Айбулатҡа:] Һинең алда йәшерене-батырыны юк инде. Һөйләшегеҙ, килешегеҙ ҙә, үҙең киткәнсе, туйлап ҡуяйыҡ.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘШЕРЕН-БОШОРОН (Р: тайно; И.: secretly; Т.: gizlice) *р.*

Кешеләргә белдермәй, һиҙҙермәй эш ителә торған; йәшерен; йәшерен-батырын. □ Тайно, скрытно, исподтишка. *Йәшерен-бошорон эш итеү. Йәшерен-бошорон һөйләшеү.* ■ *[Ҡыраубикә — Ҡарағолға:] Ундай ваҡытта ил ҡарттары кәңәш итә торғайнылар, һеҙ йәшерен-бошорон ғына эш итергә уйлайһығыҙ.* Д. Юлтый. *Кәңәшмә йәшерен-бошорон түгел, шуға теләгән кешеләр ҙә кергеләгән-йыйылғандар шаҡтай — иркен өй тулы.* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘШЕРЕНЕҮ (йәшерен-) *ҡ.*

1. *диал. ҡар.* **йәшенеү.** *Өй артына йәшеренеү.* ■ *Урман араһына инеп, кеше күҙенән йәшеренгәс кенә, Айҙар, ҡош һайрауына оҡшатып, һыҙғырып алды.* М. Кәрим. *Ауыл ҡуйы һаҙлыҡ, тау-таш араһына йәшеренгән дә, иркәләнеп тыныс йоҡоға сумған.* Т. Хәйбуллин. *Ниғмәтулла менән Ҡолсобай әрәмәлеккә йәшеренгәс тә, Ғәйзулла*

ҡалған яланға өс кешене эйәртеп килгән Хәйретдин күренде. Я. Хамматов.

2. *Кемдең дә булһа* яҡлауына таяныу. □ Прятаться *за кем*, скрываться *за кем*; опираться *на кого*. *Ата-әсәһенең арҡаһына йәшеренеү.* ■ *[Һалдат:] Үҙе [Марат] утҡа керһә керҙе, кеше арҡаһына йәшеренмәне.* Ә. Хәкимов.

ЙӘШЕРЕНЛЕК (йәшеренлеге) (Р.: секретность; И.: secrecy; Т.: gizlilik) *и.*

Йәшерен булыу хәле. □ Секретность, скрытность; тайна. ■ *Осрашыуҙың йәшеренлеген һаҡлау вәғәҙә ителде.* Й. Солтанов. *Был йәшеренлек, серлелектең ҡасан да бер сиге булыр, көндән-көн ҙурая, киңәйә барған отрядҡа уны таныусы кешеләр ҙә килеп сығыр, шуның менән бөтә план емерелер тип хафаланған ул [Хәбир].* З. Биишева.

ЙӘШЕРЕН ТАУЫШ БИРЕҮ (Р.: тайное голосование; И.: secret ballot; Т.: gizli oylama) *и. юр.*

Ғәҙәттә, бюллетендәр, шарҙар йәки махсус машиналар ярҙамында тауыш биреүҙә ҡатнашыусыларҙың ихтыярын күҙәтеп булмаған тауыш биреү төрө. □ Тайное голосование. *Йәшерен тауыш биреү ойошторола.* ■ *Унда [партия райкомы бюроһында] әлеге пленум ҡарамағына йәшерен тауыш биреп беренсе секретарь һайлау өсөн ике кандидатура тәҡдим ителде.* Д. Бүләков.

ЙӘШЕРЕҮ (йәшер-) [боронғо төрки *йашыр-*] (Р.: прятать; И.: hide; Т.: saklamak) *ҡ.*

1. Сит күҙ күрмәҫлек урынға йыйыу, сит күҙҙән ҡасырыу. □ Прятать, скрывать, утаивать, укрывать. // Утаивание, утайка. *Әйберҙе йәшереү. Эҙҙе йәшереү. Йәшереп ҡуйыу.* ■ *Элекке зәңгәр күлдәкте соландағы һандыҡ артына йәшереп, Вәзир өйгә инде.* М. Кәрим. *Айыу-бүренән йәшереп була малды, ә баҫҡаҡтан йәшереп булмай.* К. Мәргән. *Шул саҡ егет теге етенсеһенең мамыҡ туның алып йәшергән.* Әкиәттән. ● *Айран һорап килһәң, туҫтағыңды йәшермә.* Мәҡәл. *Уғын атҡас, йәйәһен йәшермә.* Мәҡәл. *Яуға барһаң, ҡоралыңды йәшермә.* Мәҡәл.

2. Ышыҡҡа алыу, ышыҡлау. □ Прятать *от чего-л.*; укрывать. *Битте елдән йәшереү.* ■ *Йәш килендәр күлгә һыуға бара, йәшергәндәр ярым йөҙҙәрен.* Ғ. Хәйри. *Сурков ҡапыл ағарып китте. Йөҙөн йәшереү өсөн түбән эйелеп, үлән йолҡоп, ботинкаларын таҙартып булашты.* И. Насыри.

3. Кешегә белдермәй йөрөү, сер итеп һаҡлау. □ Скрывать, утаивать. *Йәште йәшереү. Серҙе йәшереү.* ■ *Талҡаҫ унан [Юлдаштан] бөтә серҙе йәшереп, зәңгәрләнеп, ғәмһеҙ тынып тик ятты.* З. Биишева. *Ҡыйыу, тура һүҙле йәш ҡатын мөхәббәтен бер кемдән йәшермәне, киреһенсә, бәхетен барыһы ла күрһен, күҙҙәре ҡыҙһын тигән һымаҡ, асыҡтан-асыҡ һөйҙө, кешеләрҙән тартынманы.* Б. Бикбай. ● *Өндәшмәү – алтын икән тип, алтын һүҙең йәшермә.* Мәҡәл. *Сереңде дошманыңдан йәшерәйем тиһәң, дуҫыңа ла һөйләмә.* Мәҡәл. *Ғәйебен йәшергән уңмаҫ.* Мәҡәл. *Хатаһын йәшергән ауырымай үлгән.* Мәҡәл.

ЙӘШЕРМӘЙЕНСӘ (Р.: без утайки; И.: openly; Т.: gizlemeden) *р.*

Йәшереп тормай. □ Без утайки, ничего не скрывая. *Серҙе йәшермәйенсә һөйләү.* ■ *Ҡолсобай ҡыҫҡаса ғына, бер ни ҙә йәшермәйенсә, һуңғы йылдарҙа үткәргән тормошон һөйләне.* Я. Хамматов. *Ҡыҙ, таныш машинаны күргәс, йылмайғайны ла, руль артындағы кешегә ҡарағас, аптырауын йәшермәйенсә, ҡаштарын яҙып ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев.

ЙӘШЕРМӘЛӘҮ (йәшермәлә-) (Р.: прятать; И.: hide; Т.: saklamak) *ҡ.*

Кешенән ҡыҙғанып, күрһәтмәҫкә тырышып ҡыланыу. □ Прятать, припрятывать *что от кого. Аҡсаны йәшермәләү. Йәшермәләп йөрөү.*

ЙӘШЕРТЕН I *с. диал. ҡар.* **йәшерен I.** *Йәшертен бойороҡ бирелде.* ■ *Зәйтүнә Гирфановна ҡыҫылып ҡына һуңа биргән хәбәрҙең йәшертен мәғәнәһе нығыраҡ асылғандай ине.* Ә. Хәкимов.

ЙӘШЕРТЕН II *р. диал. ҡар.* **йәшерен II.** ■ *Һылыуым, йәшертен генә бер һирпелеп ҡарауың ишеттермәҫ ине хатта һандуғастар һайрауын.* Х. Назар. *Бер кем дә бер тауыш-өн сығармай, тик йәшертен генә һирәк-һаяҡ һыҡтаған, көрһөнгән тауыштар ғына ишетелә.* Т. Хәйбуллин.

ЙӘШЕРТЕН-БОШОРТОН *р. диал. ҡар.* **йәшерен-бошорон.** *Йәшертен-бошортон түгел. Йәшертен-бошортон эшләү.* ■ *Кинйәгә лә, бөтә уҫал күҙҙәрҙән ҡасып, .. йәшертен-бошортон осраштып, Айым менән һөйләшеүе еңел түгел ине, әлбиттә.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘШЕТ *и. диал. ҡар.* **йәштәш.** ■ *[Әхмәткирәй — Таһирға:] Әйҙә, балам, минең һиңә йәшет Дәүләткирәй тигән улым бар, шуның менән бергәләп уйнарһығыҙ.* Р. Өмөтбаев.

ЙӘШ ЙОТОУ (йәш йот-) (Р.: глотать слёзы; И.: swallow one's tears; Т.: gözyaşlarını yutmak) *ҡ.*

Илар ерҙән иламай түҙеү *(нык ҡайғынан).* □ Глотать слёзы. ■ *Ҡапыл Зәбиҙәнең күңеле йомшарып китте, килеп тығылған күҙ йәштәрен йоторға тырышып, оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ торҙо ул.* Г. Әмири. *Кемде эҙләй һуң ел, кемде эҙләй? Ҡайһы дуҫын шулай һағынған? Сеү... Йәш йотоп: «Шаһит... Шаһит...» — тиеп, моңһоу ғына үтә янымдан.* Р. Назаров.

ЙӘШ ЙӘШЕРЕҮ (йәш йәшер-) (Р.: скрывать возраст; И.: conceal one's age; Т.: yaşını gizlemek) *ҡ. этн.*

Күҙ теймәһен өсөн оло йәштәгеләрҙең ысын йәшен әйтмәүе. □ Скрывать возраст *(обычно скрывается пожилыми людьми, чтобы не сглазили). Ҡарттар йәш йәшерә.*

ЙӘШКЕ (Р.: юные; И.: early in life; Т.: gençlik) *с. диал.*

Йәш саҡтағы. □ Юные, молодые. *Йәшке хыялдар. Йәшке кисерештәр. Йәшке минминлек.*

ЙӘШКЕЛТ (Р.: зеленоватый; И.: greenish; Т.: yeşilimsi) *с. аҙһ. дәр. ҡар.* **йәшел.** *уменьш. степ. от* **йәшел.**

Тоноҡ йәшел, йәшелгә тартым, йәшел төҫ ҡатыш; йәшелһыу. □ Зеленоватый. *Йәшкелт төҫ. Йәшкелт күҙ. Йәшкелт туҡыма. Йәшкелт булыу.* ■ *Ҡаҙ бәпкәһе төҫлө йәшкелт улар, ҡаҙ бәпкәһе кеүек наҙлылар.* Р. Ғарипов. *Вәзир ҡулында ҡат-ҡат бөкләнгән йәшкелт ҡағыҙ ғына тороп ҡалды.* М. Кәрим. *Һирәк ботаҡлы ҡарағайҙар төҙ һәм юғары күтәрелеп үҫкәндәр. Уларҙың ҡойолмай торған йәшкелт ылыҫтары ҡарағылт төҫкә инеп, елһеҙ һауала тын һәм тәрән уйҙарға батып ултыралар.* Д. Юлтый.

ЙӘШКЕЛТ-ЗӘҢГӘР (Р.: сине-зелёный; И.: blue-green; Т.: mavi yeşil) *с.*

Йәшел һәм зәңгәр төҫтәре булған, йәшел һәм зәңгәр төҫтәр ҡушылған. □ Сине-зелёный. ■ *[Валяның] буй-һыны ла заказ менән эшләнгән шиеһең, тик күҙҙәре генә йәшкелт-зәңгәр.* «Ағиҙел», № 6, 2011.

ЙӘШКЕЛТЛӘНЕҮ (йәшкелтлән-) (Р.: превратиться в зеленоватый цвет; И.: become greenish; Т.: yeşilimsi olmak) *ҡ.*

Йәшкелт төҫ алыу, йәшкелткә әйләнеү. □ Превратиться в зеленоватый цвет, зеленеть. ■ *Бәрҙе ике сиректәй булыр. Арҡаһы йәшкелтләнеп, ҡанаттары ҡыҙарып ята.* Н. Мусин.

ЙӘШКЕЛТ-ҺАРЫ (Р.: зеленовато-жёлтый; И.: khaki; Т.: haki) *с.*

Йәшеле булған һары. □ Зеленовато-жёлтый; хаки. ■ *Ирмәләгән йәйге ҡояш Сусаҡтау башындағы иң бейек ҡарағайҙарҙың осон ғына йәшкелт-һары төҫкә буяған саҡта уятты мине әсәйем.* Д. Шәрәфетдинов.

ЙӘШКӘ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир-тунгаурцев.

ЙӘШКӘҘӘТЕҮ (йәшкәҙәт-) (Р.: вызывать слёзы; И.: draw tears from smb; Т.: yaşartmak) *ҡ.*

1. Күҙ йәше килтереү, йәшле итеү. □ Вызывать слёзы. *Күҙҙе йәшкәҙәтеү.* ■ *Ғәлиәнең әле генә көслөп йәшкәҙәткән күҙендә яман асыу сағылды, ҡыҙыл яҡҡан ирендәре турһайҙы.* Н. Мусин.

2. *йөкм. ҡар.* **йәшкәҙәү 2.** *понуд. от* **йәшкәҙәү 2.** *Йәшкәҙәтеп тороу.* ■ *Көҙгө күк йөҙөн йәшкәҙәтеп һәлмәк ҡара болот ҡаплап алған, быҫҡаҡлап ямғыр яуа.* Н. Иҙелбай.

ЙӘШКӘҘӘТКЕС ГАЗ (Р.: слезоточивый газ; И.: tear gas; Т.: gözyaşartıcı gaz) *и.*

Кешенең күҙен әсеттереп, ваҡытлыса күреү һәләтен юғалта, әммә кешенең һаулығына етди зарар килтермәй торған газ.

□ Слезоточивый газ *(вызывает обильное слезотечение, тем самым временно ослепляя человека, однако не причиняет серьёзного (долговременного) ущерба здоровью). Йәшкәҙәткес газ ебәреү.*

ЙӘШКӘҘӘҮ (йәшкәҙә-) (Р.: слезиться; И.: water; Т.: yaşarmak) *ҡ.*

1. Күҙ йәшенә мансылыу; йәшләнеү. □ Слезиться, наливаться слезами. *Күҙ төтөнгә йәшкәҙәй.* ■ *Мәрүсә көрһөнә, күҙе йәшкәҙәүен күрһәтмәҫ өсөн, башын ситкә бора.* Н. Мусин. *[Амантаевтың] үҙенең танауҙары ҡыҙарып, шешенеп бөткән, күҙҙәре йәшкәҙәп тора.* Р. Солтангәрәев. *Бабай йоҡонан тонған, йәшкәҙәп торған йәшкелт күҙҙәрен асты ла, үҙенең ҡайҙа, ни өсөн был хәлдә икәнлеген төшөнөп алырға теләгәндәй, тирә-яғына ҡараны.* Ғ. Дәүләтшин.

2. *күсм.* Ауыр ҡара болот булып, дымға тулышыу. □ Быть пасмурным, сумрачным, хмуриться. *Йәшкәҙәп тороу. Көн йәшкәҙәү. Тирә-яҡты болоттар ҡаплап алды, көн йәшкәҙәп кенә тора.*

3. *күсм.* Дымға, ямғырға насарайыу; күгәреү, тутығыу. □ Плесневеть, ржаветь. ■ *Йорттарҙың йәшкәҙәп ҡарайған ҡыйыҡтары быуланып кибә.* Ф. Иҫәнғолов. *Үтәнән-үтәгә йәшкәҙәп бәҫәргән ҡапҡаһы, бына ауам, бына ауам тип, ел ыңғайына эс бошорғос иңрәп, ығырлап ултыра.* Ф. Иҫәнғолов.

ЙӘШКӘК (Р.: слезящийся; И.: running; Т.: sulu göz) *с.*

1. Гел йәшкәҙәп торған, йәше кипмәгән. □ Слезящийся. *Йәшкәк күҙ. Йәшкәк күҙле ҡыҙ.*

2. *күсм.* Яуынлы, йонсоу. □ Ненастный, пасмурный. *Йәшкәк көн. Йәшкәк көндө өйҙә генә ултырырға кәрәк. Көн йәшкәккә әйләнде.*

ЙӘШКӘКЛӘНЕҮ (йәшкәклән-) *ҡ. төш. ҡар.* **йәшкәкләү.** *страд. от* **йәшкәкләү.** *Күҙҙәре йәшкәкләнеп тора. Йәшкәкләнгән күҙҙәре менән ҡарап ултыра.*

ЙӘШКӘКЛӘҮ (йәшкәклә-) (Р.: слезиться; И.: water; Т.: gözden yaşarmak) *ҡ.*

1. Туҡтамай йәшкәҙәү. □ Слезиться. *Күҙ йәшкәкләй. Бесәйҙең күҙе йәшкәкләп тик тора.*

2. *күсм.* Болотлап, ара-тирә ямғыр һибәләү; йонсоулау. □ Быть дождливым; моросить. *Йәшкәкләп тороу. Йәшкәкләй башлау. Көн боҙолдо, йәшкәкләне.*

ЙӘШКӘЛӘК (Р.: пасмурный; И.: cloudy; Т.: bulutlu) *с. диал.*

Яуынлы, йонсоу. □ Пасмурный. *Йәшкәләк төн. Бөгөн көн йәшкәләк. Йәшкәләк көндө бесән сабыу.*

ЙӘШ ҠАР (Р.: свежий снег; И.: fresh snow; Т.: taze kar) *ҡ.*

Яңы яуған ҡар. □ Свежий снег, пороша. ■ *Әйтерһең, бөтә ғаләм йәш ҡар бөртөктәре менән ергә өйөрөлөп, иҙрәп йоҡлай.* «Йәшлек», 12 апрель 2008. *Ҡараңғы төштө, йәш ҡарға өҫ-баш һыуланды.* Й. Солтанов. *Һуңғы япраҡ һыйғыр һабағынан өҙөлөп төштө йәш ҡар өҫтөнә.* Р. Ғарипов.

ЙӘШЛЕ (Р.: заплаканный; И.: tear-stained; Т.: gözyaşı ile ıslanmış) *с.*

Күҙ йәшкә тулышҡан, йәшләнгән. □ Заплаканный; слезящийся, в слезах, со слезами. *Йәшле күҙ.* ■ *Уның [Исабәктең] йәшле күҙҙәренә ҡарағас, күҙҙәремдән мөлдөрәп йәштәрем тәгәрәне.* М. Кәрим. *Ғүмер гөлөнә яҙғы ямғыр түгел, ҡырау булып төшә йәшле күҙ.* Ғ. Сәләм. *Ята ине кәҫәрнә, ҡыҙыу йоҡлап ҡыҙҙарҙай, күҙе йәшле, асыҡлығы таң һарыһы яҙҙарҙай.* М. Өмөтбаев. ● *Иренмәгәндең ирене ашлы, иркәнең күҙе йәшле.* Мәҡәл.

ЙӘШЛЕК I (йәшлеге) (Р.: молодость; И.: youth; Т.: gençlik) *и.*

1. Үҫмер саҡтан алып үҫеп еткәнгә, бәлиғ булғанға тиклемге саҡ; йәш саҡ; *киреһе* — ҡартлыҡ. □ Молодость, юность. / Молодой, юный. *Йәшлек дәрте. Йәшлек йылдары. Йәшлек үтте. Йәшлектең ҡәҙерен белеү.* ■ *Минең йәшлек тә ялтыраған йәшен кеүек кенә булып ҡалды.* Ғ. Хәйри. *Йәшлек – шат ғүмер шишмәһе, һиҙмәнем килгәнендә, тик беләм бөтә йөрәктән өҙөлөп һөйгәнемдә.* М. Харис. *Алтын төҫлө һары аяҙ таңда йәшлегемдән ҡайттым ҡунаҡтан, быға шаһит күптән йырға ингән яҡут йондоҙ, ғорур ҡуранттар.* Ғ. Рамазанов. ● *Бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта.* Мәҡәл. *Йәшлегендә иренгән ҡартлығында эшләр.* Мәҡәл. *Йәшлегеңде йәшәй бел.* Мәҡәл.

Йәшлегендә ғүмер үткәрмә, үкенерһең. Мәҡәл. *Йәшлегеңдә ни сәсһәң, ҡартлығыңда шуны урырһың.* Мәҡәл. *Йәшлек бер генә килә.* Мәҡәл.

2. Йәш (I, 2) булыу хәле йәки сифаты. □ Молодость, юность. *Бил ауыртып йөрөгән, йәшлек менән иғтибар ителмәгән икән.* ■ *Күк Уралда күкрәп тамыр йәйҙем, үҫтерҙе, — ти [сәскә], — тыуған тупрағым. Ил бәхете — күркәмлегем минең, ил йәшлеге — йәшел япрағым.* Р. Ғарипов.

ЙӘШЛЕК II (Р.: -летний; И.: aged; Т.: yaşlık) *с.*

Күпмелер йәштә булған; йәштәге. □ -летний, -годовалый. *Ун йәшлек. Бер йәшлек бала. Алтмыш йәшлек юбилей менән ҡотлау.* ■ *Күршеһе, алты йәшлек Сәлимгәрәй, оло барабанды ҡойма бағанаһына элеп ҡуйған да сукмар башлы таяҡ менән һуға.* Ф. Янышев. *Ирйегеттең ун йәшлек улы Аҙнағол хәҙер бөтөнләй тип әйтерлек Бураншаларҙа була.* З. Биишева.

ЙӘШЛӘЙ (Р.: с юных лет; И.: from one's youth; Т.: gençliğinden beri) *р.*

Йәш саҡтан, йәш көйө. □ С юных лет, смолоду, в молодом возрасте. *Йәшләй эшләй башлау. Йәшләй йәтим ҡалыу.* ■ *[Һабрауҙың] бүтән туғандары төрлө сир-сорҙан йәшләй үлеп бөткәйне.* Ә. Хәкимов. *Тыуған ауылыма ҡайтҡан һайын, мин ҡасандыр йәшләй генә белгән, уларҙың эшләп йөрөгәненә үҙем шаһит булған ҡарттарҙың бер-бер артлы үлә барғанын күрәм.* Т. Гиниәтуллин. *Йәшләй йәтим үҫтем, ата йөҙөн, әсә мәрхәмәтен күрмәнем.* Ғ. Амантай. ● *Күпте күргән йәшләй ҡартайыр.* Мәҡәл.

ЙӘШЛӘНДЕРЕҮ (йәшләндер-) *к. ҡар.* **йәшкәҙәтеү.** *Күҙҙе йәшләндереү.* ■ *Ниңә миңә күҙгә төкөрөк һөртөп йәшләндерергә, ниңә миңә йөҙгә кершән һөртөп алландырырға, ниңә миңә иренгә бал һөртөп балландырырға — кемдәрҙелер алдандырырға?* Й. Солтанов.

ЙӘШЛӘНЕҮ (йәшлән-) (Р.: слезиться; И.: draw tears from smb; Т.: yaşarmak) *к.*

Йәш менән сыланыу, йәшкә тулыу *(күҙгә ҡарата).* □ Слезиться, вызывать слёзы. *Шатлыҡтан күҙҙәре йәшләнде.* ■ *Латип Заһиттың һыуыҡ менән йәшләнгән күҙҙәренә ҡарап торҙо.* С. Агиш. *Гөлзифаның осҡондар һикергеләп торған күҙҙәре йәшләнде, йоҡа ирендәре ҡымтылды.* Н. Мусин. *Вәли ҡарт, асыуланып, йоҙроғо менән өҫтәлгә һуҡты. Ун дүрт йәшлек Шафиҡтың күҙҙәре йәшләнде.* Ш. Шәһәр.

ЙӘШЛӘТЕҮ (йәшләт-) *к. ҡар.* **йәшкәҙәтеү.** ■ *Әсәйемде тол ҡалдырып, ике күҙен йәшләтеп, ҡайна булған Уралым.* Ҡобайырҙан.

ЙӘШЛӘҮЕК (йәшләүеге) (Р.: молодая трава; И.: green grass; Т.: yeşillik) *и.*

1. Йәшел генә үлән булып ятҡан урын; йәшән. □ Молодая трава, зелень. ■ *Хәтфә кеүек түшәлгән тау битендә йәшләүек, йәшләүекте матурлай сыбарлатып сәскәлек.* С. Ҡудаш.

2. *диал.* Сауҡалар үҫкән ер; сауҡалыҡ. □ Молодой березняк. *Йәшләүектә еләк йыйыу. Йәшләүектә бәшмәк күп була. Йәшләүектә ял итеү.*

ЙӘШМӘ [ғәр.- фарс. يشب/ يشم] (Р.: яшма; И.: jasper; Т.: yeşimtaşı) *и. мин.*

Биҙәрләнеп торған ҡыҙыл, йәшел һ. б. төҫтәге ҡаты таш *(төрлө матур нәмәләр яһау өсөн ҡулланыла).* □ Яшма. / Яшмовый. *Йәшел йәшмә. Ҡыҙыл йәшмә. Һарғылт йәшмә. Йәшмә ташы. Йәшмә таҡтаһы.* ■ *Уларҙың [аҫыл таштарҙың] ниндәйҙәре генә юҡ: ахағы, аҡығы, фирүзәһе, гәрәбәһе, йәшмәһе, бәлләүере...* Ғ. Хөсәйенов.

ЙӘШМӘЛЕ (Р.: с яшмой; И.: with jasper; Т.: yeşimtaşlı) *с.*

Йәшмә менән, йәшмә булған. □ Яшмовый, с яшмой. *Йәшмәле тауҙар. Йәшмәле йөҙөк.* ■ *[Эрнест] туранан-тура әйтмәһә лә, сиптәтеп, һаман шул йәшмәле тауҙарға дәғүә итеүе.* Л. Яҡшыбаева.

ЙӘШНИК (йәшниге) [рус. *ящик*] (Р.: ящик; И.: box; Т.: kutu) *и.*

1. *Нимәнелер* һалыу, һаҡлау өсөн таҡта, ҡатырға кеүек нәмәнән дүрткелләп яһалған төрлө ҙурлыҡтағы һауыт. □ Ящик. *Почта йәшниге. Бер йәшник балыҡ. Йәшник эшләү.* ■ *Күп ваҡыт үткәс, түҙемһеҙлек менән көтөлгән грузовик, йәшниктәр тейәгән хәлдә, станция йорто алдына килеп туҡтаны.*

Б. Дим. *Улар [йәнлектәр] йәшел төҫтәге махсус йәшниктәргә һалынды.* Н. Ғәйетбаев. *Янғын-фәләп сыға ҡалғанда, һүндерергә тип йәшник менән ҡом, биҙрә, балта, лом ҡуйғандар.* Ш. Янбаев.

2. Өҫтәл, шкаф кеүек нәмәнең тартып сығармалы эске ҡумтаһы; тартма. □ Выдвижной ящик, полка. *Яҙыу-һыҙыу әйберҙәрен өҫтәл йәшнигендә һаҡланым.*

3. *инф.* Электрон хаттарҙы ебәреү һәм алыу мөмкинлеген биргән яйланма. □ Ящик. *Электрон йәшник. Электрон йәшниккә яҙыу. Яндекста йәшник асыу.*

ЙӘШНИКЛЕ (Р.: в ящиках; И.: in boxes; Т.: kutulu) *с.*

1. Йәшниктәге, йәшниккә һалынған. □ Ящиковый, в ящиках. *Йәшникле балыҡ. Йәшникле алма.* ■ *[Котлозаман:] Ҡайҙа кисә ҡабул ҡылынған йәшел йәшникле компот?* Й. Солтанов.

2. Йәшниктәр тейәгән, махсус йәшник ултыртҡан. □ С ящиками, гружёный ящиками. *Йәшникле арба.* ■ *Унан [капканан] вагонға оҡшаш дәү йәшникле машина күренде.* Ә. Хәкимов.

ЙӘШНИКЛӘП (Р.: ящиками; И.: by boxes; Т.: kutulu) *р.*

Йәшниктәр менән, йәшниктәргә һалып. □ Ящиками. ■ *[Хаммат:] Йәшникләп, йөкләп йыйылған халыҡ байлығы кооперацияға оялаған кулактар ҡулына һеңеп торған.* З. Биишева. *Бер яҡтан — Вафил, икенсе яҡтан ҡатыны ташый. Аҙыҡтың иң һәйбәте өйгә тоҡлап та йәшникләп ҡайта.* Н. Мусин.

ЙӘШНИКҺЕҘ (Р.: без ящиков; И.: without boxes; Т.: kutusuz) *р.*

Йәшниккә һалынмаған. □ Без ящиков. *Йәшникһеҙ йөрөтөү. Йәшникһеҙ тотоу. Йәшникһеҙ ҡалдырыу.*

ЙӘШНӘТЕҮ (**йәшнәт-**) (Р.: вызывать раскаты грома; И.: produce peals of thunder; Т.: gök gürültüsü oluşturmak) *ҡ.*

1. Сатҡылы итеү, сатҡыландырыу *(йәшенде).* □ Вызывать раскаты грома, молнии. ■ *Күлдә һыуҙар ҡайнаны, иретеп ташҡаяны; ерҙә баштар тәгәрәп, йәшен йәшнәтә ғәжәп!* Эпостан. *Бына бер ваҡыт ел-дауыл ҡуптарып, йәшендәр йәшнәтеп дейеү ҡайтып килә, ти.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Дер һелкетеү, ҡеүәт сәсеү. □ Сотрясать. ■ *Йәшнәтеп булат ҡылысты, айҡаныҡ дошман яуын, йәшәһен, дуҫтар, тыныслыҡ, ҡупмаһын яңы дауыл!* Ғ. Әмири. *Салауат йәшәй беҙҙең йөрәктәрҙә рухи көсөбөҙҙө йәшнәтеп.* Т. Ҡарамышева.

ЙӘШНӘҮ (**йәшнә-**) (Р.: сверкать; И.: flash; Т.: şimşek çakması) *ҡ.*

1. Сатҡы уйнатыу *(йәшенгә ҡарата).* □ Сверкать, блистать *(о молнии).* ■ *Ҡара ғына урман, ҡараңғы төн, йәшен генә йәшнәй ялтырап. Салауат та батыр йыр йырлаһа, дошмандары тора ҡалтырап.* Халыҡ йырынан. *Ирәндек тауы аша башланып ҡайнап-ҡайнап сыҡҡан ҡара болоттарҙың да күскәне күҙгә салына. Һирәк-һаяҡ йәшен йәшнәп, күк күкрәп китә.* Т. Хәйбуллин. ● *Йәшен йәшнәмәй — күк күкрәмәй.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Дәрт, ҡеүәт сәсеү. □ Сверкать, блистать, испытывать сильное чувство, потрясение. ■ *Елдәй еңел йәшәүҙән, тик табында йәшнәүҙән .. ҡурсып ҡалһа намыҫың, яҡты һинең яҙмышың.* «Ағиҙел», № 6, 2011. *Үтте йәшлек, үтһен әйҙә, — кем һуң һәр саҡ йәш йөрөр? Әйҙә үтһен, үкенмәйем, — күк күкрәтеп, ер тетрәтеп, йәшнәп үтте йәш ғүмер.* Ҡ. Даян. *Йәшлегемде уйлап рухланам, гел ул юлдаш булыр юлымда; йәшлек йәшнәүе йәшнәп торор ижад иткән һәр бер йырымда.* А. Игебаев.

ЙӘШ САҠ (**йәш сағы**) *и. ҡар.* **йәшлек I.** ■ *Йәш саҡтағы хаталары өсөн терһәген тешләрҙәй була Ғилман, ләкин һуң.* Д. Буләков. *Йәш саҡта кеше бәхәсләшеүсән була.* Ф. Әсәнов. *Ҡасан ғына яныр яҡты булып йәш саҡта һүнгән сыраҡ шәме.* М. Өмөтбаев. ● *Йәш сағыңда уйна ла көл.* Мәҡәл. *Йәш сағыңдың ҡәҙерен бел.* Мәҡәл.

ЙӘШ ТУЙЛАУ (**йәш туйла-**) *и.*

1. *диал. ҡар.* **исем туйы.** *Баланың йәшен туйлау. Йәш туйларға саҡырыу. Йәш туйларға килеү.*

2. Нисәләр йәш тулыуға арнап үткәрелгән мәжлес. □ Праздник в честь дня рождения. *Әсәйемдең илле йәшен туйларға йыйылдыҡ.*

ЙӘШТӘГЕ (Р.: -летний; И.: ...age old; Т.: yaşlık) *с.*

Күпмелер йәштә булған; йәшлек. □ -летний. / Лет *(о возрасте). Урта йәштәге. Оло йәштәге.* ■ *Кинйә яуап бирер өлгөрмәне, өлкән генә йәштәге ир кеше уның ҡаршыһына сыҡты.* Ғ. Ибраһимов. *Шунан һуң майҙанға урта йәштәге көрәшсе, баҙыҡ кәүҙәле Көслөбай батыр сыға, аяҡтарын кирә баҫып, бәһлеүәндәрҙе үҙе менән көрәшкә саҡыра.* «Ҡуҙыйкүрпәс». *Ун алты йәштәге Сибәрҙе үҙҙәренең ауылына кейәүгә бирҙеләр.* Һ. Дәүләтшина. ● *Һигеҙ йәштәге холоҡ һикһән йәшкә ҡәҙәр.* Мәҡәл.

ЙӘШТӘК (йәштәге) *и. диал. ҡар.* **йәштәш 1.** *Улымдың йәштәге. Йәштәк дуҫым. Минең йәштәгем.*

ЙӘШТӘН (Р.: смолоду; И.: from one's youth; Т.: gençliğinden beri) *р.*

Йәш саҡтан, йәш ваҡыттан. □ Смолоду; с малолетства. ■ *Йәштән үк ирҙәр эшенә егелгән, аслыҡты, һыуыҡты үткәргән .. Рәсәй һалдаттарының береһенең үлеме ине был.* Т. Ғиниәтуллин. *Атаҡайым миңә ат бирҙе маңлайҙары ҡашҡа булһын тип, атаҡайым мине йәштән бирҙе, күңелдәре башҡа булһын тип.* Халыҡ йырынан. *Тимер, йәштән ситтә күп йөрөгәнлектән һәм байтаҡ ҡына ауырлыҡтар кисергәнлектән, ҡыпсаҡтарға хас күңелсәклелектән мәхрүм ине.* Б. Бикбай. ● *Аҡыл йәштән сыға, аҫыл нәмә таштан сыға.* Әйтем. *Баланы йәштән тый, ҡатынды баштан тый.* Әйтем.

ЙӘШТӘР (Р.: молодёжь; И.: youth; Т.: gençler) *и. йыйн.*

Йәш кешеләр. □ Молодёжь. / Молодёжный. *Ҡала йәштәре. Башҡорт йәштәре. Йәштәр кисәһе. Йәштәр театры.* ■ *Һабрау көн буйы ҡурай тартып, думбыра сиртеп, йәштәрҙең күңелен асты, үҙе лә уларға ҡушылып бейене, отоп алған ҡобайырҙарын әйтте.* Ә. Хәкимов. *Был йырҙарҙы күкрәп үҫкән йәштәр өсөн яҙамын.* Ғ. Сәләм. *Йәштәр, аттарҙы һыуытып алып килер өсөн, саналарға тейәлеп, урам буйына ат йөрөтөргә киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Йәштәр ғүмер көтә, ҡарттар үлем көтә.* Мәҡәл. *Йәштәр килһә, эш башлай, ҡарттар килһә, һүҙ башлай.* Мәҡәл. *Ҡартайғаныңды йәштәргә ҡарап бел.* Мәҡәл. *Ҡарттар һүҙен тоҡҡа һал, йәштәр һүҙен янсыҡҡа һал.* Мәҡәл. *Ҡарттар элек тыуған, йәштәр белеп тыуған.* Мәҡәл.

ЙӘШТӘРСӘ (Р.: по-молодёжному; И.: like the youth; Т.: gençler gibi) *р.*

Йәштәр кеүек. □ По-молодёжному, по-молодецки. *Йәштәрсә бейеү. Йәштәрсә ҡылаҡыу.* ■ *Еңел кәүҙәһенә, йәштәрсә баҙыҡ, тигеҙ тештәренә ҡараһаң, уға [Хасбулат олатайға] хатта алты тиҫтәне биреүе лә ҡыйын.* З. Биишева. ● *Ҡарт янында ҡарттарса, йәш янында йәштәрсә.* Мәҡәл.

ЙӘШТӘҮЕК (йәштәүеге) *и. диал. ҡар.* **йәшеллек.** *Урмандарҙың йәштәүеге. Йәштәүеккә күмелгән урам. Баҡса йәштәүеккә күмелгән.*

ЙӘШТӘШ (Р.: сверстник; И.: peer; Т.: yaşıt) *и.*

1. Кем менән дә булһа бер йәштәге, бер йылғы кеше. □ Сверстник, ровесник; одногодок. *Йәштәш балалар. Минең йәштәшем. Йәштәштәр осрашыуы.* ■ *[Сәхипъямал апайҙарҙың] иң оло улдары, Миңнулла исемлеһе, минең менән йәштәш ине.* К. Мәргән. *Ул [Кинйә] минең менән йәштәш, буйыһыны килешле, үҙе бик таҫыллы булһа ла, көс яғынан миңә тиңләшерлек түгел ине.* «Алдар менән Зөһрә».

2. *миф.* Ышаныуҙар буйынса, яҙмыштары бәйле кешеләр. Ғәҙәттә, береһенең үлеүе ихтимал. □ Одногодки, чьи судьбы взаимосвязаны. ■ *Йәштәшеңә тормошка сыҡма. Береӊ ҡыҫҡа ғүмерле була.* Экспедиция материалдарынан.

ЙӘШУЛАН (Р.: новорождённый; И.: newborn; Т.: yeni doğan bebek) *и. диал.*

Яңы тыуған бала. □ Новорождённый. *Йәшуланды ҡарау. Йәшулан йыш илай. Бер айға тиклем баланы йәшулан тиҙәр.*

ЙӘШҮҢӘС *и. анат. диал. ҡар.* **йәшелүңәс.** *Йәшүңәс төҙөлөшө. Йәшүңәс шешеүе. Йәшүңәс — аш һеңдереү системаһының бер өлөшө.*

ЙӘШҮР [рус.] (Р.: ящур; И.: murrain; Т.: aft humması) *и. диал.*

Бешмә, иҙелмә. □ Ящур. *Йәшур ауырыуы. Йәшурҙән дауалау. Йәшур менән ауырыған мал.*

ЙӘШ-ҮҪТЕРМӘ *и. диал. ҡар.* **йәш-елкенсәк.** *Йәш-үҫтермәне йыйыу. Ауылдың йәш-үҫтермәһе йыйылып, концерт ҡуйҙы. Йәш-үҫтермә менән бергә.*

ЙӘШӘГӘН (Р.: старый; И.: old; Т.: ihtiyar) *с.*

Оло йәштәге; ҡарт. □ Старый, пожилой. *Йәшәгән кеше. Йәшәгән ҡарт.* ■ *Күсәк бейгә күлдәк-ыштанды йәшәгән үгеҙ тиреһенән тегеп биргәндәр.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

ЙӘШӘЙЕШ (Р.: бытие; И.: being; Т.: varlık) *и. фәлс.*

Йәшәү, тормош шарты. □ Бытие. *Ижтимағи йәшәйеш.* ■ *Хан исеме алыу .. дәрт бирә ине уға [Шаҡманға], йәшәйешен ниндәйҙер йөкмәткеле, маҡсатлы яһай ине.* К. Мәргән. *«Ғүмер бер бирелгән, һәр яҡты көндөң файҙаһын күрергә» тигән төшөнсә — минең өсөн яңғырауыҡлы буш һүҙ түгел, ә йәшәйеш һәм тормош ҡағиҙәһе.* Н. Мусин. *Йота барам донъя әрнеүҙәрен, йәшәйештең әсе һыуыҡтарын.* М. Ғәли.

ЙӘШӘЛЕҮ (йәшәл-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **йәшәү 1—3.** *страд. от* **йәшәү 1—3.** ■ *Әллә йәшәлмәгән көндәребеҙ күҙ алдыңдан һинең уҙамы? Әллә тәүге малайыбыҙ беҙҙең кескәй ҡулын һиңә һуҙамы?* Р. Ғарипов. *Йәшәлгән һәр көн, ярланған һәр еңеү менән ысынбарлыҡты тәрәнерәк аңлай барып, кеше рухын юғары күтәрә алырлыҡ шағир булырға әҙерләнә ине ул [Сергей].* И. Абдуллин. *Ер йөҙөндә һәр кешенең тормошо үҙенсә ҡорола. Бирәүҙәр Хоҙай тарафынан бирелгән ғүмерҙең ҡәҙерен белеп кенә йәшәһә, икенселәр йәшәлгән көн хаҡында әллә ни уйланмай ҙа китә.* «Урал», 8 ноябрь 2010.

2. *эйһ. ф. ҡар.* **йәшәү 1—3.** ■ *Маҡсаттарым, ахры, мираж булған, буштан ғына, ахры, йәшәлгән. Иртәгәне ҡыуып еталманым, һәм ҡотолоу булмаҫ әжәлдән.* Р. Йәнбәк. *Элек бында [улпырыштарҙа] күберәк тышҡы күренештәрҙе тамаша ҡылып йөрөлһә, был юлы күберәк эске кисерештәр, тынғыһыҙ уйҙар менән йәшәлде.* Р. Бикбаев.

ЙӘШӘМЕШ I (Р.: долго живший, много видавший; И.: experienced; wise; Т.: görmüş geçirmiş) *с.*

1. Күп йәшәп, күпте белгән. □ Долго живший, много видавший; мудрый. *Йәшәмеш бабайҙар. Һәр бер ауылда йәшәмеш ҡарттар бар.*

2. Күп йәшәгән кешеләй күпте белеүсән. □ Опытный; чрезмерно рассудительный. *Йәшәмеш уҡыусы. Йәшәмеш кеше. Йәшәмеш булыу.*

3. Күп йыллыҡ. □ Многолетний. ■ *[Күсер:] Кедр сәтләүеге ағасы. Йәшәмеш ағас икән был.* Т. Ғарипова.

ЙӘШӘМЕШ II (Р.: карлик; И.: dwarf; Т.: cüce) *и. миф.*

Иргәйел *(табын ырыуы вәкилдәре ышаныуы буйынса, был ҡурҡыныс йәндәр йәшерен белемдәргә эйә булып, бала алмаштырыу, һыйырҙарҙың һөтөн бөтөрөү кеүек зыян килтерәләр).* □ Карлик, мифологизированное лицо *(по представлениям башкир-табынцев, опасное существо, колдун, который, владея тайными знаниями, вредит человеку: подменивает ребёнка, отнимает молоко у коров).*

ЙӘШӘН (Р.: зелёный луг; И.: green meadow; Т.: yeşil çayır) *и.*

Йәшел үләнле ер. □ Зелёный луг. *Йәшәндә йөрөү.* ■ *Иртәнсәкәй тороп ҡолон ҡыуҙым Һаҡмар ғына буйы йәшәнгә.* Халыҡ йырынан.

ЙӘШӘНГЕҘӘҮ (йәшәнгеҙә-) *ҡ. диал. ҡар.* **йәшкәҙәү 1.** *Күҙҙәре йәшәнгеҙәп тора. Йәшәнгеҙәгән күҙҙәре менән мөлдөрәп ҡарай.*

ЙӘШӘНКӘ *и. диал. ҡар.* **терһәк 2.** *Сана йәшәнкәһе. Санаға йәшәнкә ҡуйыу. Йәшәнкә эшләү.*

ЙӘШӘНЛЕК (йәшәнлеге) *и. ҡар.* **йәшән.**

ЙӘШӘРЕҮ I (йәшәр-) (Р.: зеленеть; И.: turn green; Т.: yeşermek) *ҡ.*

1. Йәшелгә әйләнеү; йәшелләнеү. □ Зеленеть, зеленеться. ■ *Тау битләүендә үлән йәшәреүгә Ҡалҡандың һыуы йылынып та өлгөрә.* М. Кәрим. *Донъялар йәшәреп килә; ләкин, көн болотло булғанлыҡтан, яҙғы матурлыҡ әллә ни күҙгә ташланмай.* Н. Му-

син. *Үләндәр йәшәргән, йәмләнгән, ужымдар ҡояшҡа үрелгән, баҡсала сәкәләр күренгән!* Р. Назаров.

2. Йәшел булыу. □ Зеленеться; быть зелёным. ■ *Күперепкәй ятҡан күк арҡала йәшәрепкәй үҫкән кәрешкә.* Халыҡ йырынан. *Ишеккәйем асып мин ҡараһам, йәшәрепкәй ята арышы, һағыныпҡай мин килгәндә, кемдәр сығыр икән ҡар(ы)шы?* Халыҡ йырынан. *Йәшәреп бойҙай ҡырҙары елгә елпенә; башта уйҙар... уйҙар... уйҙар!, уйҙар елкенә.* М. Кәрим.

ЙӘШӘРЕҮ II (йәшәр-) (Р.: молодеть; И.: become younger; Т.: gençlenmek) *ҡ.*

Йәш (I, 1) булыу, йәшкә әйләнеү. □ Молодеть. *Йәшәреп китеү. Яңынан йәшәреү.* ■ *Ишмырҙа бөгөн алмаштырып ҡуйған шикелле ине: ихлас һөйләшә, көлә, еңел баҫып атлап йөрөй, хатта йәшәреп киткән кеүек.* Н. Мусин. *Был көндәрҙә ул [Таиба әбей] тотош яҡтырып, йәшәреп киткәндәй булды.* З. Биишева. *Мин йәшәрәм йәшен йәшнәгәндә, күк күкрәй минең күкрәктә. Биттәремә ямғыр һыҙырғанда, мин шатлыҡтан шашам бигерәк тә.* Р. Ғарипов.

ЙӘШӘРЕҮ III (йәшәр-) *ҡ. диал. ҡар.* **йәшләнеү.** *Күҙҙәр һыуыҡҡа йәшәрә. Күҙҙәре йәшәреп бөткән. Баланың күҙҙәре йәшәрергә генә тора.*

ЙӘШӘРЕҮ IV (йәшәр-) (Р.: быть пасмурным; И.: be cloudy; Т.: bulutlanmak) *ҡ. диал.*

Йонсоу булыу *(көнгә ҡарата).* □ Быть пасмурным. *Йәшәрә башлау. Йәшәреп китеү. Көн йәшәрә, ксскә яуыр.*

ЙӘШӘРЕШЕҮ (йәшәреш-) *ҡ. урт. ҡар.* **йәшәреү I.** *взаимн. от* **йәшәреү I.** *Йәшәрешеп сығыу. Ҡайындар йәшәрешеп үлтыра. Ямғырҙан һуң парктағы ағастар йәшәрешеп ҡалды.*

ЙӘШӘРТЕҮ I (йәшәрт-) (Р.: освежать; И.: refresh; Т.: yeşertmek) *ҡ.*

Йәшелгә әйләндереү, йәшел итеү. □ Освежать, покрасить или дать обрести зелёный цвет. *Ямғыр үләндәрҙе йәшәртте.* ■ *[Ямғыр] ҡыҙыулыҡтан, яңғыҙ ысыҡһыҙлыҡтан ләпһерәйгән ағас, үләндәрҙе йәшәртте, сағдарын йыуҙы.* А. Таһиров. ● *Ямғыр ер йәшәртә, яҡшылыҡ ир йәшәртә.* Әйтем.

ЙӘШӘРТЕҮ II (йәшәрт-) (Р.: омолаживать; И.: rejuvenate; Т.: gençleştirmek) *ҡ.*

Йәш (I, 1) итеү, йәшкә әйләндереү. □ Омолаживать, молодить. *Йәшәртеп ебәреү. Йәшәртеү ысулы.* ■ *Таҡыр итеп ҡырынған йөҙө, танау аҫтында бармаҡ бите тиклем генә ҡалдырылған ҡара мыйығы уны [Шакирҙы] йәшәртеп күрһәтә.* А. Таһиров. *Иркем булғас, тарихтарҙы меңәр йылға йәшәрттем мин. Хыялымда кешеләрҙе киләсәктә йәшәттем мин.* М. Кәрим. ● *Яҡшылыҡ ирҙе йәшәртә.* Әйтем. *Йәш ҡыҙ алыу йәшәртә.* Мәҡәл. *Яҡшы ҡатын йәшәртер, яман ҡатын ҡартайтыр.* Мәҡәл.

ЙӘШӘРТЕҮСЕ (Р.: омолаживающий; И.: rejuvenating; Т.: gençleştirici) *с.*

Йәшкә әйләндерә торған. □ Омолаживающий. ■ *Был эсемлек [йәшел сәй] организмды йәшәртеүсе сара булараҡ та билдәле.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010. *Кем булырға хыял итәһеңдер, мәктәбеңде бөткәс, белмәйем. Кешеләрҙең ғүмерен йәшәртеүсе доктор булыуыңды теләйем.* Р. Ғарипов. *Дауалау курстарын, йәшәртеүсе сараларҙы ла ай үҫкәндә үтергә кәрәк.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010.

ЙӘШӘТЕҮ (йәшәт-) *ҡ.*

1. *йөкм. ҡар.* **йәшәү.** *понуд. от* **йәшәү.** ■ *Баш өҫтөндә әле түбәң дә юҡ. Тик ас күҙҙәр һиңә ҡарайҙар... Шул саҡ хыялландың кешелекте йәшәтергә мәрмәр һарайҙа.* М. Кәрим. *Ғәйепйән менән Хәлимәгә никах уҡытып, ҡуша йәшәтә лә башлайҙар.* Ғ. Хисамов.

2. Үлтермәй, тереклек иттереү. □ Дать возможность жить. *Имен йәшәтеү.* ■ *Өмөт кенә йәшәтә был һоро шинелле йәндәрҙе.* М. Хужин. *Бәндәне өмөт йәшәтә, тип үҙен сыҙамлы булырға, туғарылып төшмәҫкә өндәне Сәйф.* Ә. Хәкимов. ● *Әҙәмде өмөт йәшәтә, ғәм ҡаҡшата.* Мәҡәл.

3. Тыныс йәшәргә ирек биреү. □ Дать возможность спокойно жить, оставить в покое. *Тыныс йәшәтмәҫ ул беҙҙе.* ■ *Хан булып алғас, Хөсәйен халыҡҡа ирек биреп, рәхәт йәшәтә башлаған, ти.* Әкиәттән. *Төймәләй*

ҙә минең башымды йәшәтмәҫ булдың, атакайым. Сеңләүҙән.

ЙӘШӘҮ (йәшә-) [боронғо төрки *йаша-*] (Р.: жить; И.: live; Т.: yaşamak) *ҡ.*

1. Тереклек итеү, тереклек һаҡлау. □ Жить, проживать, обитать, существовать. // Жизнь, житьё, обитание, существование. *Оҙаҡ йәшәү.* ■ *Борон-борон заманда булған, ти, бер бабай менән бер әбей. Оҙаҡ йәшәгәндәр, ти, улар, көнкүрештәре лә хәлле генә булған, ти.* Әкиәттән. *Әмер алып илаһи бер көстән, ғәййәр был күс шундай елкенде, ул геүләне, осто, һөжүм итте, беҙ йәшәгән заман шикелле.* М. Ғәли.

2. Ғүмер үткәреү, ғүмер һөрөү. □ Жить, проживать, существовать. // Жизнь, житьё, существование. *Ҡалала йәшәү. Айырым йәшәү.* ■ *Урманда шурәле йәшәй, бәләкәй һәм йәшел төҫтәге утә лә шаян урман рухы.* Ш. Хажиәхмәтов. *Борон-борон заманда, илдә батшалар хөкөм һөргән ваҡытта, бер ауылда Йәләл исемле бер ҡарт бабай йәшәгән.* Әкиәттән. *Күптән, күптән булған ваҡиға был. Ул саҡта әле беҙҙең ата-бабалар күсмә тормошта йәшәгән.* З. Биишева.

3. Донъя көтөү, көн итеү. □ Жить, поживать. *Ярлы йәшәү. Бай йәшәү. Яңыса йәшәү.* ■ *Бер нисә ғаилә Сейәлек, Туғай ауылдарына нигеҙ һалып, яңы урында хәллерәк йәшәргә дәртләнгәйне.* М. Хужин. *Мең михнәттәр менән йәшәгәнсе, яуҙа үлеү артыҡ дан менән.* Халыҡ йырынан. *Аҙым һайын ғәйебең асылыуҙы көтөп, ҡурҡып йәшәгәнсе, арығансы эшләп, барыһын онотоп, тыныс йоҡлауыңа нимә етә ул.* Б. Бикбай.

4. *күсм.* Онотолмай тороу, онотолмау, һаҡланыу. □ Жить; храниться. ■ *Ҡайҙа ғына булһаҡ та, беҙ юғалтмайыҡ дуҫлыҡ йәшәүен!* Р. Ғарипов. *Уны [Сергейҙы] тәрән таң тынлығы сорнау менән, аҡрынлап уның үткән көндәренә йән керә, күңелендә йәшәгән тойғолар ыңҡәрмәҫтән уяна башланы.* И. Абдуллин.

5. Сифат ҡылымдың *-р* формаһында һан менән бергә килеп, йәште белдерә. □ В форме деепричастия на *-р* вместе с числительными означает возраст. *Йөҙйәшәр ҡарт.*

♦ **Ашын ашаған, йәшен йәшәгән** оҙон ғүмер юлы үткән кешегә әйтелә. □ Он прожил свой век. ■ *Нимә әйтерен Сания ла, хәтерен ҡалдырған бүтәндәр ҙә белә алманы. Шшо серен ул [ҡарт] ашын ашап, йәшен йәшәп бөткәс, үҙе менән әхирәткә алып китте.* М. Кәрим. **Йәшә!** маҡтағанда, һоҡланып ҡотлағанда әйтелә. □ Живи! ■ *[Юлия:] Бик дөрөҫ аңлайһың, Ишбулды, бик дөрөҫ эшләйһең. Йәшә, туғанкайым!* Һ. Дәүләтшина. **Йәшәй ҙә китә** берәү бер нәмәгә ҡыуанып, маһайып китер булғанда әйтелә. □ Зазнаваться. ■ *Ҡомарткыларын һанларҙай кеше килһә, йәшәй ҙә китә ул Хасбулат апам.* З. Биишева. **Йәшәһен!** данлау, ҡотлау һүҙҙәрендә, лозунгыларҙа әйтелә. □ Да здравствует! ■ *Башҡортостан йәшәһен, сөнбөлөстан йәшәһен! Шунда тыуып, шунда үҫкән арыҫландар йәшәһен!* Ш. Бабич. **Күп (йәки йөҙ) йәшә!** берәүҙе нык маҡтағанда, ҡотлағанда әйтелә. □ Долгих лет жизни. ■ *Бөтәһе лә [тыңлаусылар] баш ҡағыу менән сәсәндең мәрәкә һүҙҙәрен хуплайҙар һәм .. бер тауыштан: «Һай, ирҙәң аҫылы! Йөҙ йәшә!» — тип ҡыскырып ебәрәләр.* Эпостан. **Тиң йәшәгеҙ** өйләнешкән кешеләргә теләк итеп әйтелә. □ Живите в согласии. ■ *[Төлйөҙөм инәй:] Бик ҙурланығыҙ, Райхан ҡыҙым, Шакир улым... Ғүмерле булығыҙ, бәхетле, тиң йәшәгеҙ...* Р. Солтангәрәев.

ЙӘШӘҮСЕ I (Р.: житель; И.: inhabitant; Т.: sakin) *и.*

Ҡайҙалыр йәшәгән, торған кеше. □ Житель, обитатель. *Ҡалала йәшәүселәр. Көнсығышта йәшәүсе.* ■ *Башҡорт Бөркөтө ауылында йәшәүселәр ҙә, был тирәләге бүтән ауылдағылар кеүек, һуғып елгәрелгән, киптерелгән игенде йөҙ саҡрым йыраҡлыҡтағы элеваторға ташый.* Ғ. Хисамов. *Донъяла ғәмһеҙ йәшәгән, «яҙмыш шулай ҡушҡандыр инде» тип, кәмһетеүҙәргә, кешеләге тапалыуҙарға риза булып йәшәүселәр аҙ түгел.* А. Карнай. *Тәүҙә ул [Әпкадир мулла] малын илдең өлөшһөҙөрәк яғында йәшәүселәр менән бер көтөүҙә йөрөттө.* К. Мәргән.

ЙӘШӘҮСЕ II (Р.: живущий; И.: living; Т.: yaşayan) *с.*

Ҡайҙалыр йәшәгән, торған. □ Живущий, проживающий, обитающий. *Ауылда йәшәүсе ҡыҙ.* ■ *[Кейеҙбай — хеҙмәтсегә:] Бына ошо алты ылауҙың береһен үҙеңә ал, береһен минең фәлән ауылда йәшәүсе атайыма илтеп бир, ҡалған дүртеһендәге байлыҡты юл буйына, осраған бирәүгә өләшеп бар.* Әкиәттән. *Ялмауыҙ нисек булһа ла Алтындуға батырҙы бында килтертеп, уның арҡылы үҙенә Ҡаф тауы артында йәшәүсе дейеү ҡыҙын алдыртмаҡсы була икән.* Әкиәттән.

ЙӘШӘҮСӘН (Р.: живучий; И.: viable; Т.: uzun ömürlü) *с.*

Йәшәүгә һәләтле, бирешмәй торған; ғүмерле. □ Живучий, жизнеспособный. *Йәшәүсән булыу. Йәшәүсән организм.* ■ *[Ғимай:] Йыландың өҙгөләнгән киҫәктәре лә йәшәүсән була, тиҙәр.* И. Насыри. *Талпандар булған ерҙә йөрөгәндә иң яҡшыһы — бер нисә сәғәт һайын тәнде тикшереп тороу. Әгәр талпан тапһағыҙ, уны утҡа яғырға кәрәк. Талпандар шул тиклем йәшәүсән, уларҙы хатта иҙеп тә үлтереп булмай.* «Йәшлек», 15 май 2008.

ЙӘШӘҮСӘНЛЕК (йәшәүсәнлеге) (Р.: живучесть; И.: vitality; Т.: hayatiyet) *и.*

Йәшәүгә һәләтлек. □ Живучесть, жизнеспособность. ■ *Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ ижады йәшәүсәнлеге менән айырылып тора.* Н. Бикбулатов. *Ырым-юрауҙарҙың халыҡ хәтерендә беҙҙең көндәргәсә һаҡланып килеүе бороңғо ышаныуҙарҙың йәшәүсәнлеге хаҡында һөйләй.* С. Галин.

ЙӘЬЖҮЖ [ғәр. ياجوج] *и. ҡар.* **мәжүси.** ■ *[Морат мулла — Ҡараһаҡалға:] Ислам динен йәйергә, ҡуҡтән төшөр Ғайсаның юлын асып бирергә, йәьжүждәрен ҡырырға, өлөшөнә булырға, Ҡөрьән менән йөрөргә ебәрелгән илсе һин.* Эпостан.

ЙӘЬЖҮЖ ВӘ МӘЬЖҮЖ [ғәр. ياجوج و ماجوج] *и. иҫк. кит. ҡар.* **йәьжүж-мәьжүж.**

ЙӘЬЖҮЖЛЕК (йәьжүжлеге) *и. ҡар.* **мәжүсилек.** ■ *Сирмештәр, арҙар ҙа бик асыулы. Уларҙың йәьжүжлектәренә лә көн юҡ.* Ғ. Ибраһимов.

ЙӘЬЖҮЖ-МӘЬЖҮЖ [ғәр. ياجوج-ماجوج] (Р.: Гог и Магог; И.: Gog and Magog; Т.: Yecüc ve Mecüc) *и. дини. иҫк. кит.*

Ерҙе ябып, донъяны ҡырып килгән бик яман, ҡырағай ике халыҡ. □ Гог и Магог. ■ *[Өсөнсө аҡһаҡал:] Көткәнебеҙ килде.Донъя бөтә, йәьжүж-мәьжүж айҙы кимерә.* М. Кәрим. *[Бибисара абыстай:] Ҡоҙағый, шуны әйтәм әле, ахырзаман еткәс, ҡиәмәт ҡупҡас, ергә йәьжүж-мәьжүждәр сығып, ти.* З. Биишева. *Бигерәк тә халыҡты .. Баҡырғаниҙың «Ахыр заман китабы» ҡыҙыҡһындырҙы... Дәжжәл, Мәһди, Йәьжүж-Мәьжүж, Исрафил, Ғазраил һымаҡ мифик образдарҙы күптәр ысын тип ҡабул итте.* Л. Яҡшыбаева.

К

К [кә] (Р.: четырнадцатая буква башкирского алфавита; И.: the fourteenth letter of the Bashkir ABC; Т.: Başkurt alfabesinin on dördüncü harfi)

Башҡорт алфавитының ун дүртенсе хәрефе, шартлаулы, урта тел тартынҡы [к] өнөн билдәләй. Ҙур (баш) хәреф — К, бәләкәй — к формаһында яҙыла. Нумерацияла ҡулланыла. □ Название четырнадцатой буквы башкирского алфавита.

КАБАЛА [рус.] (Р.: кабала; И.: bondage; Т.: esirlik) *и.*

1. Ҡоллоҡ, бойондороҡ. □ Кабала. ■ *Һуғыш ваҡытындағы договорҙарҙың бөтәһе лә кабалаға бәйләнгән була.* Д. Юлтый. *Ғариф — күп ер биләүсе ауыл кулагы, империалистик һуғыш башланғас, ул ярлы крәҫтиәндәрҙең ерен юҡ хаҡҡа үҙенең ҡулына төшөрөп, үҙҙәрен кабалаға батыра.* Ғ. Хәйри.

2. *тар.* Рәсәйҙә XIV—XVI быуаттарҙа булған шәхси ҡоллоҡ формаһы. □ Кабала, рабство. / Кабальный.

3. *күсм.* Ирек-ихтыярҙан мәхрүм, *кемдеңдер* ҡул аҫтында булыу хәле. □ Кабала, полная зависимость от *кого-л.* / Кабальный. *Кабалаға эләгеү. Кабалала булыу.*

КАБАЛАЛЫ (Р.: кабальный; И.: serving to enslave; Т.: esir edici) *с.*

Кабалаға нигеҙләнгән, кабалаға бәйле. □ Кабальный. *Кабалалы шарттар. Кабалалы килешеү. Кабалалы тормош.*

КАБАРДА (Р.: кабардинец; И.: kabarda; Т.: Kabardalı) *и. этн.*

Кабарда-Балкар Республикаһының төп халкы һәм шул халыктың бер кешеһе *(ибе-рий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә).* □ Кабардинец. / Кабардинский. *Кабарда теле. Кабарда халкы йолаһы. Кабарда кыҙы. Кабарда бейеүе. Кабарда ауылы.*

КАБАРЕ [рус. < фр. *cabaret*] (Р.: кабаре; И.: cabaret; Т.: kabare) *и.*

Эстрадалы бәләкәй ресторан. □ Кабаре. *Төнгө кабаре. Кабареға барыу. Кабарела бейеү. Кабаре бейеүселәре. Кабарела күңел асыу.*

КАБЕЛЬ [рус. < гол. *kabel*] (Р.: кабель; И.: cable; Т.: kablo) *и.*

Бер-береһенән изоляцияланып, һаҡлағыс ҡатлау менән ҡапланған бер йәки бер нисә үткәргес; ғәҙәттә, электр энергияһын ер йәки һыу аҫтынан үткәреү өсөн ҡулланыла. □ Кабель. / Кабельный. *Телефон кабеле. Һыу кабеле. Электр кабеле. Элемтә кабеле. Юғары йышлыҡ тогы кабеле. Кабель телевидениеһы. Кабель һуҙыу.* ■ *Ана, элемтәселәр алғы һыҙыҡҡа кабель һуҙалар.* Д. Исламов. *Ғәлимдең йәштәрҙән генә ойошторған бригадаһы ауыл араһына бағаналар ултыртып бөтөп, сымдар һуҙып, өйҙәргә кабель үткәрә башлағайны инде.* Н. Мусин. *Электриктар әле булһа трансформатор пунктынан кабель дә үткәрмәгәндәр.* Р. Солтангәрәев.

КАБЕРНЕ [рус. < фр. *cabernet*] (Р.: каберне; И.: Cabernet; Т.: Cabernet Sauvignon) *и. бот.*

1. Йөҙөмдөң ҡуйы зәңгәр төҫтәге төрө. □ Каберне *(сорт винограда). Бер кило каберне. Каберне йөҙөмө.*

2. Шул йөҙөмдән әҙерләнгән ҡыҙыл шарап. □ Вино, производимое из винограда Каберне. *Бер шешә каберне. Каберне ҡойоу. Каберне әҙерләү.*

КАБИНА [рус. < фр. *cabine*] (Р.: кабина; И.: booth; cab, cabin; Т.: kabin) *и.*

Бәләкәй махсус бүлмә. □ Кабина. *Душта йыуыныу кабинаһы. Телефондан һөйләшеү кабинаһы. Йөк машинаһы кабинаһы. Лётчик кабинаһы. Герметик кабина.* ■ *Кемдер бераү автомобиль менән ҡаршыбыҙға килеп туҡтаны, һәм беҙ күрҙек шунда кабинанан бер йәш кенә ҡатын сыҡҡанын.* Г. Сәләм. *Хайуандарҙың герметик кабинала йәшәй алыу, катапульта ярҙамында ҡотҡарыу мөмкинлеген раҫлаусы дәлилдәр алынды.* «Башҡортостан», 6 июль 2002. *Полковник Шөғәйепов, пистолетын ҡороп, плащ кеҫәһенә һалды ла кабинанан сыҡты.* Д. Бүләков.

КАБИНЕТ [рус. < фр. *cabinet*] (Р.: кабинет; И.: study; Т.: oda) *и.*

1. Өйҙә, эш урынында булдырылған махсус эш бүлмәһе. □ Кабинет. / Кабинетный. *Етәксе кабинеты. Рәйес кабинеты. Кабинет йыһаздары.* ■ *Ҡотлобаев ҡапыл көлөүенән тыйылды, тороп китеп, ишекле-түрле председатель кабинеты буйлап йөрөргә тотондо.* Д. Бүләков. *Сергей ишекте асҡан мәлдә, кабинетта телефон шылтыраны. .. Ғайсин уны күреп алып, ҡулы менән ишаралап инергә ҡушты ла трубкаға эйелде.* И. Абдуллин.

2. Айырым бер эш өсөн йыһазландырылған бүлмә. □ Кабинет *(для специальных занятий с необходимым для них оборудованием).* / Кабинетный. *Башҡорт теле кабинеты. Физкультура кабинеты. Физика кабинеты. Теш врачы кабинеты. Массаж кабинеты.*

3. Мебель комплекты. □ Кабинет *(комплект мебели). Ҡиммәтле кабинет. Кабинет менән йыһазландырыу.*

4. Рестарандарҙа дөйөм залда ултырырға теләмәгәндәр өсөн айырым бүлмә. □ Кабинет *(в ресторане). Кабинетка алдан заказ биреү.*

5. Ҡайһы бер илдәрҙә хөкүмәт тәшкил итеүсе министрҙар составы. □ Кабинет *(наименование правительства или его части). Министрҙар кабинеты. Яңы кабинет төҙөү.*

КАБЛОГРАММА [рус. < фр. *câblogramme*] (Р.: каблограмма; И.: cablegramme; Т.: kablo yazısı) *и. махс.*

Һыу аҫты кабеле аша бирелеүсе телеграмма. □ Каблограмма. *Каблограмма ҡабул итеү.*

КАБОТАЖ [рус. < фр. *cabotage*] (Р.: каботаж; И.: cabotage; Т.: kabotaj) *и. диңг.*

1. Бер илдең порттары араһында карап-тар, суднолар йөрөшө. □ Каботаж. / Каботажный. *Бәләкәй каботаж. Ҙур каботаж.* ■ *Тымыҡ океан диңгеҙҙәренең каботаж йөрөтөү өсөн генә түгел, бәлки тышҡы бәйләнештәр өсөн дә әһәмиәте бик ҙур.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2002.

2. Яр буйы флоты. □ Прибрежный флот.

КАБРИОЛЕТ [рус. < фр. *cabriolet*] (Р.: кабриолет; И.: cab; Т.: kabriyole) *и.*

1. Еңел автомобилдең асылмалы кузовы. □ Кабриолет *(тип кузова автомобиля).*

2. *иҫк.* Бер ат егелә торған ике тәгәрмәсле кузлаһыҙ еңел арба. □ Кабриолет *(повозка).*

КАВАЛЕР I [рус. < фр. *cavalier*] (Р.: кавалер; И.: cavalier; partner; Т.: süvari; kavalye) *и.*

1. Урта быуаттарҙа рыцарҙар ордены ағзаһы. □ Кавалер.

2. Ҡатын-ҡыҙ менән парлап бейегән ир. □ Кавалер *(партнёр в танце). Кавалерҙар ҡыҙҙарҙы бейеүгә саҡырҙы. Кавалер менән бейеү. Кавалер һайлау.*

3. *һөйл.* Ҡатын-ҡыҙҙың күңелен күрергә тырышҡан ир-ат. □ Кавалер *(поклонник, ухажёр).* ■ *Мәрйәмдең кавалер тигән һүҙе һәм бик яҡын килеп ултырыуы минең [Булаттың] йөрәкте тулҡынландырҙы.* Д. Юлтый. *«Нимә, мадонна, кавалерыңды һағынып илайһыңмы?» — тип ауыҙын салышайтты Вадик тигәне.* Д. Бүләков.

КАВАЛЕР II [рус. < ит. *cavaliere*] (Р.: кавалер; И.: holder, knight; Т.: nişan sahibi) *и.*

Орден менән бүләкләнгән кеше. □ Кавалер *(человек, награждённый орденом). «Алтын йондоҙ» кавалеры. Салауат Юлаев ордены кавалеры.* ■ *Был данлыҡлы Конгресты .. бөтә донъяға танылған ғалим, Истанбул, Манчестер, Бонн, Геттинген университеттарының профессоры, Иран Мәғариф йәмғиәтенең I Дәрәжә Ордены кавалеры Әхмәтзәки Вәлиди Туған аса!..* Н. Асанбаев.

КАВАЛЕРГАРД [рус. < фр. *cavalier* 'һыбайлы' + *garde* 'һаҡсы'] (Р.: кавалергард; И.: cavalier garde; Т.: atlı şövalye) *и. тар.*

1. Батша армияһында атлы гвардия полкында хеҙмәт иткән кеше. □ Кавалергард. / Кавалергардский. *Кавалергард мундиры. Кавалергард полкы.*

2. Тантаналы сараларҙа Рәсәй императорын, уның ғаилә ағзаларын һаҡлаусы төркөм. □ Кавалергард.

КАВАЛЕРИСТ [рус.] (Р.: кавалерист; И.: cavalryman; Т.: süvari, atlı) *и. хәрби.*

Атлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткән һалдат; атлы һалдат. □ Кавалерист. / Кавалерийский. *Кавалеристар полкы. Кавалерист эйәре.* ■ *Кавалеристар ғәжәп ҡыйыу һуғышалар ине.* Ә. Ихсан. *Салауаттың атаһы тәрән көрһөнә лә стеналағы ҙур фотоһүрәткә — толпар аты янында ялтыр ҡылысын тотоп төшкән мыҡты кәүҙәле, мыйыҡлы кавалерисҡа ҡарап ала.* Й. Солтанов. *Кисәге айбарлы кавалерист, ҡыҙыл комиссар ғәскәргә ярарҙай аттарҙы йыйып фронтҡа оҙатырға тейеш булды.* Ә. Хәкимов. ● *Кавалерист батыр булһын, аты таҙа, матур булһын.* Мәҡәл.

КАВАЛЕРИСТАРСА (Р.: по-кавалерийски; И.: cavalryman like; Т.: süvari gibi) *р.*

Кавалеристар кеүек. □ По-кавалерийски, как кавалеристы. *Кавалеристарса ҡыланыу. Ат өҫтөндә кавалеристарса ултырыу.*

КАВАЛЕРИЯ [рус. < ит. *cavalleria*] (Р.: кавалерия; И.: cavalry; Т.: süvari) *и. хәрби.*

Атлы ғәскәр. □ Кавалерия. / Кавалерийский. *Кавалерия дивизияһы. Еңел кавалерия. Кавалерияла хеҙмәт итеү. Кавалерия һөжүме.* ■ *[Гөлбикә — Буранголға:] Аптырайым, нисек итеп һине кавалерияға алғандар! Йүнләп атҡа ла атлана алмайһың бит һин!* К. Мәргән. *Атайым район үҙәгенәсә еңел кавалерия булып ҡарауыллап бара, халыҡ дошмандары аттарҙы алып ҡасмаһын өсөн.* Й. Солтанов. *Тирә-яҡ ауылдарҙан кавалерия аттары һайлау барғанлыҡтан, Саматовтың ике-өс көндән генә ҡайтасағын ишетте лә Шәрғиә эшкә тотондо.* Ә. Хәкимов.

КАВАЛЬКАДА [рус. < ит. *cavalcata*] (Р.: кавалькада; И.: cavalcade; Т.: atlılar alayı) *и.*

Бергә барыусы һыбайлылар төркөмө. □ Кавалькада *(группа всадников). Атлы кавалькада.*

КАВАТИНА [рус. < ит. *cavatina*] (Р.: каватина; И.: cavatina; Т.: kavatina) *и. муз.*

Операла үтә моңло бәләкәй лирик ария. □ Каватина. *Каватина башҡарыу. «Фигаро туйы» операһында Фигаро каватинаһы.*

КАВЕРНА [рус. < лат. *caverna* 'ҡыуыш'] (Р.: каверна; И.: cavity; Т.: mağara, kavern) *и.*

1. *мед.* Ауырыу һөҙөмтәһендә эске ағза туҡымаһында барлыҡҡа килгән ҡыуышлыҡ. □ Каверна. *Үпкә каверна һы. Эренле каверна. Һөйәк каверна һы.*

2. *геол.* Тау тоҡомонда барлыҡҡа килгән ҡыуышлыҡ. □ Каверна *(в горных породах). Ҡомташ каверна һы.*

КАВЕРНОПЛАСТИКА [рус. < лат. *caverna + plastike*] (Р.: кавернопластика; И.: caverne plastics; Т.: ameliyat türü) *и. мед.*

Ир енес ағзаһының көпшәкле тәненә яһалған пластик операция. □ Кавернопластика. *Кавернопластика яһау.*

КАВКАЗЛЫ (Р.: кавказец; И.: Caucatian; Т.: Kafkaslı, Kafkasyalı) *и. этн.*

Кавказда йәшәүсе, сығышы менән Кавказдан булған кеше. □ Кавказец. / Кавказский. *Кавказлылар менән осрашыу. Кавказлылар йолаһы.*

КАВКАЗСА (Р.: по-кавказски; И.: Caucatian like; Т.: Kafkaslılar gibi) *р.*

Кавказлылар кеүек. □ По-кавказски. *Кавказса ҡунаҡ итеү. Кавказса бейеү. Кавказса бешереү.*

КАГАТ [рус.] (Р.: кагат; И.: clamp; Т.: yığın) *и. а. х.*

Ҡышҡылыҡҡа һаҡлар өсөн ергә өйөп, ҡаплап ҡуйылған картуф, кишер, сөгөлдөр өйөмө. □ Кагат. *Сөгөлдөр кагаты. Бәрәңге кагаты. Кишерҙе кагатҡа өйөп һаҡлау. Кагатҡа һалыу.* ■ *Ҡабул итеү пункттарына сөгөлдөр саф көйө оҙатылып, кагаттарға өйөлә.* Картотека фондынан.

КАГАТЛАУ (кагатла-) (Р.: кагатировать; И.: heap; Т.: toplamak) *ҡ.*

Кагатҡа өйөү. □ Кагатировать. // Кагатирование. *Бәрәңгене кагатлау. Кишерҙе кагатлау. Сөгөлдөрҙө ҡышҡылыҡҡа кагатлау.*

КАГОР [рус. < фр. *Cahors*] (Р.: кагор; И.: Cahors wine; Т.: kagor) *и.*

Йөҙөм һутынан яһалған ҡыҙыл десерт шарап. □ Кагор. *Бер шешә кагор.*

КАДАСТР [рус. < фр. *cadastre*] (Р.: кадастр; И.: cadastre, land survey; Т.: kadastro) *и.*

1. *Нимәнеңдер* исемлеге, берәй нәмә тураһында мәғлүмәттәр йыйылмаһы. □ Кадастр *(опись чего-л., свод сведений о чём-л.).* / Кадастровый. *Кадастр төҙөү.*

2. Объекттарҙы күләм һәм сифат яғынан баһалаған, уларҙың уртаса килеме тураһындағы мәғлүмәттәрҙе туплаған исемлек. □ Кадастр *(совокупность данных о количественном и качественном состоянии каких-л. природных ресурсов). Ер кадастры. Һыу кадастры. Файҙалы ҡаҙылмалар ятҡылыҡтары кадастры. Промыслалар кадастры.*

3. Һалым һалыу өсөн билдәләнгән объекттар исемлеге. □ Кадастр *(для исчисления налогов).*

КАДЕТ I [рус. < фр. *cadet*] (Р.: кадет; И.: Cadet; Т.: Kadetler) *и. тар.*

Рәсәйҙә 1905 йылда барлыҡҡа килгән конституцион демократия фирҡәһе ағзаһы. □ Кадет. / Кадетский. *Кадеттар партияһы.* ■ *Бында, революциянан үҙ кәрәктәрен алып тынысланған һәм эшсе-крәҫтиәндәрҙең революцияһынан ҡото осҡан либераль буржуазия, кадеттар, батша менән берләшеп алып, ҡара реакцион роль уйнанылар.* Һ. Дәүләтшина. *Урындағы меңәүәрҙәрҙе кадеттар ҡәнәғәтләндергән хәлдә лә, ауылдан килгән, зиһене үҫешкән үзбәк, ҡаҙаҡ һәм төркмәндәр кадеттарға ҡарата бик һаҡ булдылар.* Ә.-З. Вәлиди.

КАДЕТ II [рус.] (Р.: кадет; И.: cadet; Т.: kadet) *и.*

Кадет корпусы уҡыусыһы. □ Кадет. / Кадетский. ■ *Әйтерһең, һин кадет, йәки гимназист.* Ә. Чаныш. *Кадеттар, йәғни шәриктәребеҙ лагерҙа ине.* Ғ. Хөсәйенов.

КАДЕТ КОРПУСЫ (Р.: кадетский корпус; И.: cadet school; Т.: Rus İmparatorluğunda askeri okul) *и.*

1. *тар.* Революцияға тиклем Рәсәйҙә дворян балаларын офицерлыҡҡа әҙерләй торған ябыҡ урта хәрби уҡыу йорто. □ Кадетский корпус. ■ *Кадеттар корпусын, хәрби училищены тамамлап сыҡҡан офицер*

булһа ла, Зөфәр үтә либераль фекерле, ярлы халыҡҡа миһырбанлы ине. Ә. Хәкимов.

2. Хәҙерге Рәсәйҙә хәрби йүнәлештәге урта уҡыу йорто. □ Кадетский корпус. *Ишембай кадет корпусы. Кадет корпусында уҡыу.*

КАДМИЙ [рус. < лат. *kadmeia* ‘цинк мәғдәне’] (Р.: кадмий; И.: cadmium; Т.: kadmiyum) *и. хим.*

1. Химик элемент, көмөш аҡ төҫтәге йомшаҡ металл. □ Кадмий *(химический элемент).* / Кадмиевый. *Кадмий ҡулланып яһалған аккумулятор.*

2. Шул металдан яһалған һары буяу. □ Кадмий *(краска).* / Кадмиевый. *Кадмий менән буяу.*

КАДР I [рус. < фр. *cadre*] (Р.: кадр; И.: shot; cadre; Т.: kare) *и.*

1. Кино-, видео- йәки фотоплёнкалағы айырым бер һүрәт. □ Кадр *(на плёнке). Томоҡ кадр. Фотографияға ярашлы кадр.* ■ *Кинопроекторҙы туҡтатып, таҫманы кире урағас, кадрҙарҙы яңынан ҡараныҡлар.* Картотека фондынан.

2. Кинофильмда бер ваҡиға өлөшөн алған күренеш. □ Кадр *(эпизод из кинофильма). Кадрға эләгеү. Киножурналдан алынған кадрҙар.* ■ *Һуңғы йылдарҙа фильмдарҙың сигаретһыҙ бер кадры ла булмауы уны [Гәлиҙе] айырыуса алйытты, шуның арҡаһында драма театрын да үҙһенмәне (унда гел тартмалар ине).* Й. Солтанов. *[Әйүптең] аҡын тотошлайы менән үҙенән ыскындырырға итһә лә, үткән аҙнаның ваҡиғалары бер-бер артлы кино кадрҙарылай күҙ алдынан йылтлап үтте.* Т. Ғарипова.

КАДР II [рус. < фр. *cadre*] (Р.: кадры; И.: cadres; Т.: kadro) *и.*

1. *хәрби.* Хәрби частарҙың тыныс ваҡытта ла демобилизацияға эләкмәй торған даими составы. □ Кадры. / Кадровый *(в войсковых частях). Хәрби флот кадрҙары. Һуғыштан һуң кадрҙа ҡалыу.*

2. *Ниндәйҙер* предприятие, ойошма, фирҡә йәки профессия кешеләренең тәжрибәле төп составы. □ Кадры. / Кадровый *(о составе работников предприятий). Кадрҙар әҙерләү.* ■ *Типография өсөн йорт юҡ, кадрҙар юҡ.* Б. Бикбай. *Стәрлетамаҡта бер юғары уҡыу йорто һәм медицина мәктәбе асыу өсөн уҡытыусылар, статистика идараһы булдырыу өсөн кадрҙар йыйҙыҡ.* Ә.-З. Вәлиди. *Арынбаҫаров үҙенең тирәһенә, үҙе етәкселек иткән дөйөм хирургия һәм, ниһайәт, эшләшеп йөрөп, үҙенең абруйы, тырышлығы арҡаһында асып ебәргән микрохирургия бүлегенә кадрҙар ҙа туплаНы.* Д. Бүләков.

КАДРҘАР БҮЛЕГЕ (Р.: отдел кадров; И.: personnel department; Т.: personel bölümü) *и.*

Ойошмаларҙы, предприятиеларҙы хеҙмәткәрҙәр менән тәьмин итеү бүлеге. □ Отдел кадров. *Кадрҙар бүлегендә эшләү. Кадрҙар бүлеге етәксеһе.* ■ *Төлкөбаевты эшкә алып кадрҙар бүлеге хата эшләгән.* А. Карнай.

КАДРИЛЬ [рус. < фр. *quadrilli*] (Р.: кадриль; И.: quadrille; Т.: kadril) *и.*

Алтышар фигуранан торған парлы күмәк бейеү һәм шуға яҙылған музыка әҫәре. □ Кадриль. *Башҡорт кадриле. Кадриль бейеү. Кадриль уйнау.*

КАДРОВИК (кадровиғы) [рус.] (Р.: кадровик; И.: member of permanent staff; Т.: astsubay) *и.*

1. *хәрби.* Кадр (II, 1) составындағы һалдат. □ Кадровик *(военный, служащий в кадровых войсках).* ■ *Котлубан лагерынан аҡһаҡ-туҡһаҡ һалдаттар килеп төштө. Былар — кадровиктар.* С. Поварисов.

2. Кадрҙарға, төп хеҙмәткәрҙәр иҫәбенә ингән кеше. □ Кадровик *(тот, кто принадлежит к основным кадрам какого-л. предприятия, учреждения и т. п.). Элекке кадрҙар.*

3. Кадрҙар бүлеге хеҙмәткәре. □ Кадровик *(сотрудник отдела кадров). Кадровик булып эшләү.*

КАЖАН [рус. *кожан*] (Р.: кожанка; И.: leather jacket(coat); Т.: deri manto) *и.*

Күндән тегелгән пальто. □ Кожанка. *Кажан кейеү.* ■ *Көтөүсе иңгә кажан һалған, күн итек кейеп алған.* Картотека фондынан. *Яңы ингән ҡунаҡ өҫтөндәге итәктәренән, ең остарынан шабырлап һыу ағып торған кажанды һалдырып алдылар.* И. Насыри. *Ул [Хөббөямал] барып ингәндә, йәштәр*

төргәктәге гәзитте актара, ә Хәбрәй өҫтөндәге кажанын һалып маташа ине. С. Агиш.

КАЗА ЙЫЛАН *и. диал. ҡар.* **каза йылан.**

КАЗАК (казагы) [рус. < төрк. *ҡасаҡ*] (Р.: казак; И.: Cossack; Т.: kazak) *и.*

1. *тар.* Батша Рәсәйендә XV—XVII быуаттарҙа крепостной крәҫтиән, ҡала ярлыларынан дәүләт сиктәренә *(Дон, Яйыҡ, Запорожье)* ҡасып киткән ирекле кеше. □ Казак. / Казацкий, казачий. *Казак егете. Казак кейеме.*

2. *тар.* Шул кешеләрҙән ойошҡан, XVIII быуаттан Рәсәй дәүләтенең сик буйҙарын һаҡларға тейеш булған айырым хәрби сословие. □ Казак. / Казацкий, казачий. *Казак ғәскәре. Казак атаманы. Казак булып китеү. Запорожье казактары. Терек казактары.* ■ *Бынан егерме йыл самаһы элек Йәнәсәй буйы казактарынан ике тыу бейә биреп алған еҙ самауыр сажлап ултыра.* Н. Мусин.

3. *тар.* Шул сословиенан ойошҡан ғәскәрҙең һалдаты. □ Казак. *Казак офицеры.* ■ *Ҡамсы айҡап ажарланған атлы казактар илде мәсет эргәһенә өйөрҙө.* Й. Солтанов. *Казактар ҡамсыларын һелтәнеп ҡаса башланылар.* Д. Юлтый. *Батыршаны иллегә яҡын драгун һәм һыбайлы казак һаҡлап бара.* Ғ. Хөсәйенов. *Емельян Пугачёв — ябай атлы казак.* Б. Бикбай.

4. *этн.* Урыҫ, украин, башҡорт һ. б. халыҡтарҙың составындағы этник ҡатлам. □ Казак. / Казачий. *Башҡорт казагы.*

КАЗАКИ *и. диал. ҡар.* **кәзәкей.**

КАЗАКИТУН *и. диал. ҡар.* **билле тун.**

КАЗАҢКА (Р.: отсек в чулане; И.: black goose;Т.: kiler) *и. диал.*

Соландағы бүлмә. □ Отсек в чулане. *Кәрәкте казаңкаға керетеп ҡуйыу.*

КАЗАРКА I [рус.] *и. зоол. ҡар.* **ҡара ҡаҙ.** *Ала казарка. Инә казарка.* ■ *Йылға һәм күлдәрҙә ял итер өсөн туҡтай-туҡтай төньяҡҡа һәм кире көньяҡҡа аҡҡоштар, һоро ҡыр ҡаҙҙары, казаркалар, төрлө өйрәктәр, көйөлдөләр осоп үтә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 10, 2008.

КАЗАРКА II [рус.] (Р.: казарка; И.: beetle species; Т.: böcek türü) *и. зоол.*

Урта һәм көньяҡ Европала таралған, баҡса ҡоротҡосо булған ҡуңыҙ. □ Казарка (лат. *Rhynchites bacchus*). *Казаркаға ҡаршы көрәш.*

КАЗАРМА [рус. < ит. *caserma*] *и. ҡар.* **ҡаҙарма.** ■ *[Нәфисә:] Нимә булғанын үҙем дә аңлап етмәнем әле. Мин әллә төрмәлә, әллә һалдат казармаһында — һаҡ аҫтында йәшәйем.* Н. Асанбаев. *Ниндәйҙер казарма кеүек урында бер нисә көн биклә́п тотоп, поляктарҙың хәрби формаһына кейендерҙеләр ҙә йәнә көнбайышҡа алып киттеләр.* Н. Мусин. *Надеждин тигән бер һалдат менән яҡындан танышкас ҡына, был һоро казарма тормошо әҙерәк йәнләнә, мәғәнәлегә әйләнә башлағандай итте, күңел төшөнкөлөгөм кәмеүгә китә башланы.* Д. Юлтый.

КАЗБИКШӘЛ (Р.: тонкая шаль; И.: thin shawl; Т.: ince şal) *и. диал.*

Йоҡа шәл төрө. □ Тонкая шаль. *Казбикшәл ябыныу. Казбикшәл бәйләү.*

КАЗБӘПКӘ (Р: суслон из десяти снопов; И.: bunch of ten sheaves; Т.: on demet) *и. диал.*

Ун көлтәнән һалынған һоҫлан. □ Суслон из десяти снопов.

КАЗЕИН [рус. < лат. *caseus* 'сыр'] (Р.: казеин; И.: casein; Т.: kazein) *и.*

Һөттөң эреткәндә бүленеп сыҡҡан аҡһым матдәһе, фосфопротеид ҡушылмаһы *(буяу, елем, лак яһағанда ҡулланыла).* □ Казеин. / Казеиновый. *Казеин елеме.* ■ *Замазканы ул [Нина] олиф урынына казеин келәйе менән иҙеп ҡараны.* Картотека фондынан.

КАЗЕМАТ [рус. < фр. *casemate*] (Р.: каземат; И.: casemate; Т.: kazamat) *и.*

1. Туп йәҙрәләренән һәм авиация бомбаларынан һаҡланыу өсөн эшләнгән ҡоролма. □ Каземат *(оборонительное сооружение).* / Казематный. ■ *Казематтар еүеш, һалҡын, ҡараңғы. Бында көндөҙ ҙә, төндә лә ут кәрәк булған.* Картотека фондынан.

2. Төрмәлә ябып ҡуйыу өсөн бер кешелек бүлмә. □ Каземат *(одиночная камера для заключённых).* / Казематный. ■ *Һуңғы тапҡыр Өфө магистратының казематында аңына килгәс, Салауат ҡараңғыла үҙенең янында һалҡын һыулы көршәкте һәрмәп*

тапты ла кибеп ярылған иренен уға теръне. Картотека фондынан. *Әсирлеккә алынған урыҫ һалдаттарын йыйып, бер казематҡа бикләнеләр.* Н. Мусин.

3. *иҫк.* XIX–XX быуат башында хәрби караптарҙа орудие һәм снарядтар һаҡлай торған бронялы ябыҡ урын. □ Каземат *(защищённое помещение на броненосном корабле для размещения артиллерийских орудий). /* Казематный.

КАЗЁНКА I [рус.] (Р.: казёнка; И.: liquor store; Т.: dükkan) *и. иҫк.*

Революцияға тиклем Рәсәйҙә араҡы һата торған кибет. □ Казёнка.

КАЗЁНКА II [рус.] (Р.: домик на плоту; И.: hut on a raft; Т.: sal üstünde küçük ev) *и. иҫк.*

Ҡыуығын ҡыуыусыларға ял итер өсөн һал өҫтөнә эшләнгән бәләкәй өй. □ Домик на плоту. ■ *Көн шундай матур, бер ҙә генә лә һал өҫтөндәге казёнкаларға инеп ултырғы килмәй.* Г. Ғүмәр.

КАЗЁННЫЙ [рус.] *с. һөйл. ҡар.* **ҡаҙна.** *Казённый ерҙәр. Казённый заводтар. Казённый фатир. Казённый мөлкәт.*

КАЗИНО [рус. < ит. *casino* 'бәләкәй өй'] (Р.: казино; И.: casino; Т.: gazino) *и.*

Үҙендә рестораны булған кәйеф-сафа ҡороу һәм ҡомарлы уйындар уйнау йорто. □ Казино. ■ *Сит илдәрҙә казинола фотоға төшөрөү тыйылған.* «Башҡортостан», 10 октябрь 2002. *Рәсәйҙә казиноларҙы, уйын залдарын илдә айырым билдәләнгән уйын зоналарына күсереү тураһында закон үҙ көсөнә инде.* «Башҡортостан», 20 май 2011.

КАЗЛАУ *и. диал. ҡар.* **мөшкә.**

КАЗНАЧЕЙ [рус.] (Р.: казначей; И.: treasurer; Т.: haznedar) *и.*

1. Берәй учреждение, йәмәғәт ойошмаһының аҡсаһын йәки ҡиммәтле нәмәләрен һаҡлаусы; ҡаҙнасы. □ Казначей *(в организациях и учреждениях). Профком казначейы. Урындағы комитет казначейы.*

2. Армия часында аҡса, кейем, ашамлыҡ һаҡлау һәм өләшеү эштәрен башҡарыусы кеше. □ Казначей *(в армии).* ■ *Шул ваҡыт Карташов ҡайтанан сыкты ла мине өндәшеп алды: — Һеҙ казначей эргәһенә проколға ҡул ҡуйырға барығыҙ, унда һеҙҙе саҡыралар, — тине.* Д. Юлтый.

КАЗНАЧЕЙСТВО [рус.] *и. ҡар.* **ҡаҙнасылыҡ.** ■ *Иҫәпләнгәне менән казначействолға килгән сумманың тура килеүен тикшергәндән һуң, финанс ағымы Пенсия фонды иҫәбенә ебәрелә.* Интернет селтәренән.

КАЗУИСТ [рус. < лат. *casus* 'ваҡиға'] (Р.: казуист; И.: casuist; Т.: safsatacı) *и.*

1. Оҫта бәхәссе, дөрөҫ булмағанды дөрөҫ тип иҫбатлай алған кеше. □ Казуист *(склонный к казуистике). Казуист булыу.*

2. Суд практикаһында ҡатмарлы эштәрҙе оҫта үтәй алған хоҡуҡсы. □ Казуист *(в судебной практике). Оҫта казуист.*

КАЗУИСТИКА [рус. < лат. *casus* 'ваҡиға'] (Р.: казуистика; И.: casuistics; Т.: perendebazlık) *и.*

1. *юр.* Ҡанундың дөйөм статьяларын төрлө хоҡуҡи хәлдәрҙә ҡулланыу. □ Казуистика *(применение общих статей закона к различным юридическим случаям).*

2. Урта быуат схоластикаһында осраҡлы күренештәрҙе дөйөм ҡанун итеп күрһәтеү ысулы. □ Казуистика *(приём средневековой схоластики).*

3. Дөрөҫ булмағанды оҫта итеп дөрөҫ тип иҫбатлау. □ Схоластика *(крючкотворство).*

КАЗУЛ (Р.: лайка; И.: kid(skin); Т.: glase) *и.*

Йоҡа итеп эшкәртелгән күн төрө. □ Кожа тонкой выделки, лайка.

КАЗУС [рус. < лат. *cāsus* 'ваҡиға'] (Р.: казус; И.: incident, extraordinary occurrence; Т.: vaka, olay) *и.*

1. Суд практикаһында ҡатмарлы һәм буталсыҡ эш. □ Казус *(сложное, запутанное, необычное дело в судебной практике).*

2. *күсм.* Көтөлмәгән, осраҡлы хәл, ғәҙәттән тыш ваҡиға. □ Случай, необыкновенное происшествие.

КАЗЫРУК *и. диал. ҡар.* **шәм селтәре.**

КАИНАТ [ғәр. كائنات] (Р.: мир; И.: World; Т.: kainat) *и. иҫк.*

Бөтә донъя. □ Мир.

КАЙМАН [рус. < исп. *cayman*] (Р.: кайман; И.: cayman; Т.: kayman) *и. зоол.*

Үҙәк һәм Көньяҡ Америка биләмәләрендә йәшәгән крокодил төрө. □ Кайман (лат.

Caiman). *Ҡара кайман. Күҙлекле кайман. Кайман эҙе. Кайман теше.*

КАЙНОЗОЙ [рус. < гр. *kainoc* ‘яңы’ + *zoe* ‘тормош’] (Р.: кайнозой; И.: Age of Mammals; Т.: neozoik devir) *и. геол.*

Ерҙең геологик тарихында иң яңы дәүер. □ Кайнозой. *Кайнозой дәүере.* ■ *Кайнозой эраһында (етмеш миллион йыл) яңы шарттарға нығырак күнеккән имеҙеүселәр һәм ҡоштар хужа булып ала.* Картотека фондынан.

КАЙРА [рус.] (Р.: кайра; И.: guillemot; Т.: bir cins martı) *и. зоол.*

Арҡаһы ҡара, ҡорһаҡ тирәләре аҡ төҫтәге төньяҡ диңгеҙ ҡошо. □ Кайра (лат. *Uria*). *Кайра ҡанаты. Кайра себеше. Оҙон суҡышлы кайра. Кайра ите.*

КАКАДУ [рус. < нем. *kakadu*] (Р.: какаду; И.: cockatoo; Т.: Avustralya papağanı) *и. зоол.*

Австралияла, Индонезияла таралған бүрекле тутыйҡош төрө. □ Какаду (лат. *Cacatuidae*). *Какаду аҫрау. Какаду ситлеге. Ҡара какаду.*

КАКАО [рус. < исп. *cacao*] (Р.: какао; И.: cocoa; Т.: hintbademi, kakao) *и.*

1. *бот.* Орлоғо шоколад эшләүгә файҙаланыла торған мәңге йәшел тропик ағас. □ Какао *(дерево)*. *Какао ағасы. Какао орлоғо. Какао үҫтереү.*

2. Шул үҫемлек орлоғонан эшләнгән онтаҡ. □ Какао *(порошок)*. *Какао етештереү. Бер балғалаҡ какао.*

3. Какао онтағынан ҡайнатылған эсемлек. □ Какао *(напиток)*. *Какао ҡайнатыу. Какао ҡойоу.*

КАКОФОНИЯ [рус. < гр. *kakos* ‘йәмһеҙ’ + *phōnē* ‘тауыш’, ‘аһәң’] (Р.: какофония; И.: cacophony; Т.: kakofoni) *и.*

Ҡолаҡҡа ятмаған йәмһеҙ өндәр йыйылмаһы; аһәңһеҙлек. □ Какофония, неблагозвучие.

КАКСЫ (Р.: вяленое мясо; И.: hung-beef; Т.: et) *и. диал.*

Ҡаҡланған ит. □ Вяленое мясо. *Каксы бешереү. Каксы әҙерләү. Каксы ашау.*

КАКТУС [рус. < лат. *cactus*] (Р.: кактус; И.: cactus; Т.: kaktüs) *и. бот.*

Япраҡһыҙ, итләс һабаҡлы, сәнскәкле көньяҡ үҫемлеге. □ Кактус. / Кактусовый (лат. *Cactaceae*). *Кактус сәскәһе. Кактус әнәһе. Кактус үҫтереү.*

КАЛАКУЛ [рус. *колокол*] (Р.: барабан сепаратора; И.: separator bowl; Т.: ayırıcı detayı) *и. диал.*

Сепаратор барабаны. □ Барабан сепаратора.

КАЛАҠАПҠА (Р.: большие дощатые ворота; И.: large gate; Т.: büyük kapılar) *и. диал.*

Ҙур таҡта ҡапҡа. □ Большие дощатые ворота.

КАЛАМАШКА [рус.] (Р.: колымага; И.: heavy, unwieldy carriage; Т.: kağnı, karosa) *и. диал.*

Иген ташыу өсөн йәшникле арба. □ Колымага *(телега с ящиком)*. *Каламашка менән ташыу.*

КАЛАМБУР [рус. < фр. *calembour*] (Р.: каламбур; И.: pun; Т.: cinas) *и.*

Әйтелеше яғынан оҡшаш булған төрлө мәғәнәле һүҙҙәрҙе шаяртып бутап ҡулланыу. □ Каламбур. / Каламбурный. *Каламбур һөйләү.* ■ *Методик ҡулланмала балаларҙың интеллектуаль һәләтен үҫтереү өсөн төрлө дидактик уйындар, ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс күнегеүҙәр, шаян һорауҙар, .. каламбурҙар һ. б. тәҡдим ителә.* Интернет селтәренән.

КАЛАМБУРЛАУ (каламбурла-) (Р.: каламбурить; И.: play upon words; Т.: cinasla konuşmak) *ҡ.*

Каламбур ҡулланыу. □ Каламбурить, применять каламбур. *Каламбурлап һөйләү. Каламбурлап яҙыу.*

КАЛАМБУРСЫ (Р.: каламбурщик; И.: punster; Т.: cinasçı) *и.*

Каламбур ҡулланырға яратыусы кеше. □ Каламбурщик, каламбурист, остряк, любитель каламбура. *Оҫта каламбурсы.*

КАЛАН [рус.] *и. ҡар.* **ҡамсат.**

КАЛАНЧА [рус.] (Р.: каланча; И.: watch tower; Т.: sırık, kule) *и.*

Тирә-яҡты күҙәтеү өсөн эшләнгән баҫҡыслы бейек ҡоролма. □ Каланча. *Янғын каланчаһы.* ■ *Тик каланчаға менергә һис тартмай минең күңел, каланча башы ул һеҙгә йылы мейес башы түгел.* Т. Арслан. *Ауыл*

уртаһында, ҡарауыл өйө менән йәнәштә, пожар каланчаһы тора. В. Исхаков.

КАЛАПУШ (Р.: детская шапка; И.: children's hats; Т.: çocuklar şapkası) *и. диал.*

Балалар өсөн баш кейеме. □ Детская шапка. *Калапуш кейҙереү.*

КАЛДУН *и. диал. ҡар.* **эбәк.**

КАЛДЫ *и. диал. ҡар.* **саңдау.**

КАЛЕЙДОСКОП (калейдоскобы) [рус. < гр. *kalos* 'матур' + *eidos* 'төҫ, рәүеш'] (Р.: калейдоскоп; И.: kaleidoscope; Т.: kaleydoskop) *и.*

1. Әйләндергән һайын төрлө төҫтәге фигуралар, биҙәктәр күрһәтә торған оптик прибор; уйынсыҡ. □ Калейдоскоп *(оптический прибор). Калейдоскоп аша ҡарау.* ■ *Ҡайтҡан саҡта вагон тәҙрәләре калейдоскоп кеүек күренә.* Й. Гәрәй.

2. *күсм.* Тиҙ алмашынып торған хәл-ваҡиға, күренеш. □ Калейдоскоп *(о смене событий). Ваҡиғалар калейдоскобы.*

КАЛЕНДАРЬ [рус. < лат. *calendarium* 'айҙың тәүге көнө'] (Р.: календарь; И.: calendar; Т.: takvim) *и.*

1. Йылдың бар көндәрен тәртип менән теҙеп, айҙарға, аҙналарға бүлеп төҙөлгән таблица. □ Календарь *(справочная таблица дней года с делением на месяцы и недели).* / Календарный. *Өҫтәл календары. Өҙмә календарь. Йыртмалы календарь.* ■ *[Сәғит] өҫтәлдәге ҡайтармалы календарҙы аса.* Й. Солтанов. *Малай, стена янына барып, календарҙың биттәрен һанарға кереште.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Йылдың көн тәртибе менән бергә төрлө тәбиғәт күренеше йәки башҡа нәмә тураһында мәғлүмәт биргән белешмә. □ Календарь *(таблица или книжка, дающая сведения о каких-л. явлениях).* / Календарный. *Ҡатын-ҡыҙҙар календары. Баҡсасы календары. Башҡортса календарь. Астрономик календарь.*

3. Күк есемдәренең хәрәкәте нигеҙендә төҙөлгән оҙайлы ваҡыт араһын иҫәпләү системаһы. □ Календарь *(система счисления промежутков времени). Ай календары. Григорий календары. Юлий календары.*

4. Башҡарыла торған эштәрҙе айҙар, көндәргә бүлеү. □ Календарь *(распределение отдельных видов деятельности). Спорт ярыштары календары. Хоккей уйындары календары.*

КАЛЕНДАРЬ ЙЫЛЫ (Р.: календарный год; И.: calendar year; Т.: takvim yılı) *и.*

Ҡабул ителгән календарь буйынса иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо. □ Календарный год.

КАЛИБР [рус. < фр. *calibre*] (Р.: калибр; И.: calibre; Т.: çap, kalibre) *и.*

1. Атыу ҡоралы көбәге каналының диаметры. □ Калибр *(диаметр канала ствола огнестрельного оружия). Эре калибрлы мылтыҡ.* ■ *[Мырҙабай:] Туҡта әле, был бит егермәнсе калибр, минеке ун алтылы ине.* Н. Мусин.

2. *тех.* *Ниндәйҙер* деталдең, әйберҙең тейешле дәүмәле. □ Калибр *(размер детали). Торба калибры.*

3. *тех.* Эшләнгән нәмәнең дәүмәлен, формаһын үлсәй торған ҡорамал. □ Калибр *(прибор). Үлсәгәндә калибр ҡулланыу. Көпшә диаметрын калибр менән үлсәү.*

КАЛИБРЛАНЫУ (калибрлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **калибрлау.** *страд. от* **калибрлау.** *Калибрланған орлоҡ.* ■ *Ике мең биш йөҙ центнер бойҙай орлоғо калибрланған.* Картотека фондынан.

КАЛИБРЛАУ (калибрла-) (Р.: калибровать; И.: calibrate; Т.: çap vermek) *ҡ.*

1. Тейешле калибрға килеү-килмәүен билдәләү. □ Калибровать. // Калибрование, калибровка. *Торбаларҙы калибрлау.*

2. Орлоҡтарҙы билдәләнгән эрелектәре буйынса айырыу. □ Калибровать. *Бәрәңге орлоҡтарын калибрлау.* ■ *Сәсеү алдынан орлоҡто калибрлауға ҙур иғтибар бирәбеҙ.* Картотека фондынан.

КАЛИБРЛЫ (Р.: калибровый; И.: having the right calibre; Т.: çaplı) *с.*

Тейешле калибры бар, калибры булған. □ Калибровый, имеющий нужный калибр, калиберный. *Эре калибрлы. Ун алтынсы калибрлы мылтыҡ.* ■ *Төрлө калибрлы орудиелар нисек кенә ҡоторонмаһын, улар диңгеҙ яры буйында ныҡынып өлгөргән матростарға әллә ни зыян килтермәне.* «Башҡортостан»,

5 май 1998. *Урманда уның бәләкәй калибрлы мылтығының «серт» иткән тауышы ишетелгеләп кала, һәм осоп барған һуйыр йә ҡор, бауын ҡырҡҡан шикелле, уның [Баймораттың] аяҡ аҫтына килеп төшә.* Н. Мусин.

КАЛИЙ [рус. < лат. < ғәр. كالى] (Р.: калий; И.: calium; Т.: potasyum) *и. хим.*

Химик элемент, аҡ төҫтәге металл. □ Калий. / Калийный. *Калий тоҙҙары.* ■ *Һуңғы йылдарҙа республикабыҙ территорияһында бер нисә калий ятҡылығы табылды.* М. Хисмәтов.

КАЛИЙЛЫ (Р.: калийный; И.: calium; Т.: potash) *с.*

Составында калий элементы булған. □ Калийный, калиевый. *Калийлы ашлама ҡулланыу. Калийлы тоҙҙар. Калийлы селитра.*

КАЛЛИГРАФ [рус. < гр. *kalligraph*] (Р.: каллиграф; И.: penman; Т.: hattat, kaligraf) *и.*

Матур, асыҡ итеп яҙыусы кеше; хаттат. □ Каллиграф. *Оҫта каллиграф.*

КАЛЛИГРАФИК (Р.: каллиграфический; И.: calligraphic; Т.: hattatlığa ait) *с.*

Каллиграфияға мөнәсәбәтле. □ Каллиграфический. *Каллиграфик яҙыу.*

КАЛЛИГРАФИЯ [рус. < гр. *kalligraphia* < *callos* 'матур' + *grapho* 'яҙыу'] (Р.: каллиграфия; И.: calligraphy; Т.: kaligrafi, hüsnühat, hattatlık) *и.*

Матур, оҫта яҙыу сәнғәте йәки һөнәре. □ Каллиграфия. ■ *Яҙырға өйрәтеү алымдарын белмәй тороп, балаларҙа дөрөҫ каллиграфия булдырыу мөмкин түгел.* Картотека фондынан. *Ул [Ғәбделнасыр] йәш сағында Дағстанда уҡыған, шунда каллиграфия оҫталығына өйрәнеп ҡайтҡан.* Ә. Харисов.

КАЛЛУС [рус. < лат. *callus* 'ҡалын тире'] *и. ҡар.* **оро.**

КАЛМАРЙЫН (Р.: кармазин; И.: Karmazin; Т.: dokuma türü) *и. диал.*

Яҡшы сифатлы ҡыҙыл буҫтау. □ Кармазин.

КАЛОРИЙ [рус.] *и. һөйл. ҡар.* **калория.**

КАЛОРИМЕТР [рус. < лат. *calor* 'йылы' + *metreo* 'үлсәйем'] (Р.: калориметр; И.: calorimeter; Т.: ısıölçer, kalorimetre) *и. физ.*

Йылылыҡ миҡдарын үлсәү ҡоралы. □ Калориметр *(прибор). Матдәнең сағыштырма йылылығын калориметр менән билдәләү.*

КАЛОРИМЕТРИЯ [рус. < лат.] (Р.: калориметрия; И.: calorimetry; Т.: kalorimetri, ısıölçüm) *и. физ.*

Төрлө процестарҙа бүленеп сығарылған йәки йотолған йылылыҡ миҡдарын үлсәү ысулдары. □ Калориметрия. / Калориметрический.

КАЛОРИФЕР [рус. < лат. *calor* 'йылы' + *terre* 'йөрөтөү'] (Р.: калорифер; И.: heater; Т.: kalorifer) *и. тех.*

Биналарҙы йылы һауа менән йылытыу өсөн тәғәйенләнгән ҡоролма. □ Калорифер. / Калориферный. *Быу калориферы. Шыйыҡсалы калорифер.*

КАЛОРИЯ [рус. < лат. *calor* 'йылы', 'эҫе'] (Р.: калория; И.: calory; Т.: ısın, kalori) *и. физ.*

Йылылыҡ миҡдарының системанан тыш берәмеге; температураһы Цельсий буйынса 19,5 градус булған 1 г саф һыуҙы 20,5 градусҡа йылытыу өсөн тотонолған йылылыҡ миҡдары. □ Калория.

КАЛОРИЯЛЫ (Р.: калорийный; И.: rich in calories; Т.: kalori, kalorili) *с.*

Калорияһы күп, калорияға бай. □ Калорийный. *Калориялы яғыулыҡ. Юғары калориялы аҙыҡ.* ■ *Ит, май, йомортҡа кеүек юғары калориялы аҙыҡтар — килер быуындар файҙаһына ҡалдырылһын.* Й. Солтанов.

КАЛОРИЯЛЫЛЫҠ (калориялылығы) (Р.: калорийность; И.: calories; Т.: kalorilik) *и.*

1. Бер килограмм ҡаты яғыулыҡ йәки бер куб метр газ яндырғанда барлыҡҡа килгән йылылыҡ миҡдары. □ Калорийность *(количество теплоты). Күмерҙең калориялылығы.*

2. Бер грамм аҙыҡ менән туҡланғанда тере организмда барлыҡҡа килгән энергия миҡдары. □ Калорийность *(пищи). Аҙыҡтың калориялылығы.*

КАЛУШ [рус. < фр.] (Р.: галоши; И.: rubber shoes; Т.: lastik) *и.*

1. Резинанан эшләнгән аяҡ кейеме. □ Галоши. *Ҡуныслы калуш. Калуш кейеү. Кейеҙле калуш.* ■ *Малай ни өсөндөр, кире әйләнеп*

килеп, өләсәһенең калушындағы һуған ҡыяҡтарын баҙ янына түкте, иҫке калушты, ҡорполдатып, үҙенең аяҡтарына эләктереп алды. Й. Солтанов. *Ҡулында полиэтилен күнәк, башында сит-ситтәре суҡлы панама, аяғында йомшаҡ табанлы үзбәк калушы.* Д. Бүләков. *Ул [Сабира] күлдәк алыу менән генә ҡалманы, аяғына тәрән калуш, башына аҡ яулыҡтар ҙа алды.* Ғ. Хәйри.

2. Аяҡ кейеме һыуланмаһын өсөн өҫтөнән кейелә торған резина ҡата. □ Галоши. *Быйма калушы.*

КАЛУША (Р.: валенки; И.: valenki; Т.: çizme) *и. диал.*

Ҡыҫҡа ҡуныслы быйма. □ Валенки с короткими голенищами. *Калуша кейеү.*

КАЛУШ ҠАТА (Р.: кожаные галоши; И.: rubber shoes; Т.: lastik) *и. диал.*

1. Күндән тегелгән ҡыҫҡа ҡуныслы ҡата. □ Кожаные галоши с короткими голенищами. *Калуш ҡата кейеү.*

2. Бейек үксәле ҡата. □ Галоши на высоких каблуках.

КАЛЫШНАЙ (Р.: коровник; И.: the cowshed; Т.: ahır, ineklik) *и. диал.*

Һыйыр аҙбары. □ Коровник. *Малды калышнайға ябыу. Һыйырҙы калышнайға керетеү. Калышнайҙы таҙартыу.*

КАЛЫЯР (Р.: щебень; И.: macadam; Т.: moloz, kırma taş) *и. диал.*

Юлға түшәү өсөн ватылған ҡая ташы; ваҡ таш. □ Щебень. *Калыяр һалыу. Калыяр бушатыу. Юлға калыяр түшәү.*

КАЛЬКА [рус. < фр. *calque*] (Р.: калька; И.: calque Т.: saman kağıdı, kopya) *и.*

1. Һүрәт һәм һыҙмалар күсермәһен алыу өсөн ҡулланыла торған үтә күренмәле йоҡа ҡағыҙ йәки туҡыма. □ Калька *(прозрачная бумага или ткань). Калькаға күсереү. Кальканан төшөрөү.*

2. *лингв.* Сит тел һүҙен туранан-тура тәржемә итеп яһаған яңы һүҙ (мәҫәлән, «*варенье*» — «*ҡайнатма*»). □ Калька *(способ словообразования).* ■ *Дыуан ҡантураттарын боронғо ҡытай тарихсылары иероглифынан «потокровные лошади» рәүешендә уҡыйҙар хәҙер, ә был иһә башҡортса «көнтурат»тың боҙоҡ калькаһы булып тора, буғай.* Й. Солтанов.

КАЛЬКАЛАШТЫРЫУ (**калькалаштыр-**) (Р.: калькировать; И.: calque; Т.: geçirmek, kopya etmek) *ҡ.*

1. Калькаға (1) төшөрөү. □ Калькировать. // Калькирование *(рисунка, схемы). Схеманы калькалаштырыу.*

2. *лингв.* Бер телдән икенсе телгә туранан-тура тәржемә итеп һүҙ яһау. □ Калькировать. // Калькирование *(о словообразовании).*

КАЛЬКОГРАФ [рус. < гр. *chalkos* 'баҡыр' + *grapho* 'яҙыу'] (Р.: калькограф; И.: chalcographer; Т.: bakır hakkakı) *и. махс.*

Калькография белгесе. □ Калькограф. *Калькограф һөнәре.*

КАЛЬКОГРАФИЯ [рус. < гр. *chalkos* 'баҡыр' + *grapho* 'яҙыу'] (Р.: калькография; И.: chalcography; Т.: bakır hakkaklığı) *и. махс.*

Баҡырҙы соҡоп биҙәктәр төшөрөү. □ Калькография. *Калькография менән шөғөлләнеү.*

КАЛЬКУЛЯТОР [рус. < лат. *calculation* 'хисап(лау)'] (Р.: калькулятор; И.: calculator; Т.: muhasip) *и.*

1. Иҫәп сығарыу белгесе. □ Калькулятор *(специалист по расчёту).*

2. Калькуляция яһау әсбабы. □ Калькулятор *(прибор для калькуляции). Калькулятор менән һанау. Электрон калькулятор.*

КАЛЬКУЛЯТОРЛЫҠ (**калькуляторлығы**) (Р.: калькуляция; И.: calculation; Т.: muhasebeci görevi) *и.*

Калькулятор (1) хеҙмәте. □ Калькуляция, занятие *(должность)* калькулятора.

КАЛЬКУЛЯЦИЯ [рус. < лат. *calculation* 'хисап(лау)'] (Р.: калькуляция; И.: calculation; Т.: hesaplama) *и. махс.*

Башҡарылған эштең, тауарҙың үҙкиммәтенә һәм һатыу хаҡына иҫәп сығарыу. □ Калькуляция. / Калькуляционный. *Калькуляция яһау. Калькуляция төҙөү. Тауар калькуляцияһы.*

КАЛЬМАР [рус. < фр. *calmar*] (Р.: кальмар; И.: calmar; Т.: mürekkep balığı) *и. зоол.*

Баш һәм һәрмәүестәрҙән торған эре диңгеҙ әкәм-төкәме. □ Кальмар (лат. *Teuthida*). *Кальмар ите.*

КАЛЬСОН [рус. < фр. *cale, cons* < ит. *calzoni* 'ыштан']. (Р.: кальсоны; И.: cale, cons; Т.: iç donu) *и.*

Салбар эсенән кейә торған оҙон балаҡлы ирҙәр ыштаны. □ Кальсоны. *Йылы кальсон. Эстән кальсон кейеү.*

КАЛЬЦИЙ [рус. < лат. *calx (calcis)* 'эзбиз'] (Р.: кальций; И.: calcium; Т.: kalsiyum) *и. хим.*

Химик элемент, көмөш кеүек ялтырауыҡлы аҡ металл. □ Кальций. / Кальциевый. *Көкөртлө кальций. Кальций тоҙо. Кальций селитраһы.*

КАЛЬЦИЙЛАНЫУ (кальцийлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **кальцийлау.** *страд. от* **кальцийлау.** *Кальцийланған сода.*

КАЛЬЦИЙЛАУ (кальцийла-) (Р.: кальцинировать; И.: calcinate; Т.: kireçsilemek) *ҡ.*

Кальцинация яһау. □ Кальцинировать. // Кальцинирование. *Электрофорез менән кальцийлау.*

КАЛЬЦИЙЛЫ (Р.: кальцинированный; И.: calcinated; Т.: kalsiyumlu) *с.*

Составында кальций булған. □ Кальцинированный, содержащий кальций. *Кальцийлы ашламалар. Кальцийлы эремсек.*

КАЛЬЦИНАЦИЯ [рус.] (Р.: кальцинация; И.: calcination; Т.: yakarak toz haline getirme) *и. хим.*

Химик матдәләрҙе әселәндереү йәки тарҡатыу өсөн ҡыҙҙырыу. □ Кальцинация. *Кальцинация юлы менән тарҡатыу.*

КАЛЬЦИТ [рус. < лат. *calcis*] (Р.: кальцит; И.: calcite; Т.: kalsit) *и. мин.*

Эзбиз, мәрмәр таштарының составын тәшкил иткән минерал, эзбиз шпаты. □ Кальцит. *Кальцит ятҡылыҡтары. Кальцит – ерҙә иң күп таралған минерал.*

КАЛЬЯН [фарс. قلیان] (Р.: кальян; И.: Hookah; Т.: nargile) *и.*

Төтөнө һыулы һауыт аша үтеп таҙарған тәмәке тартыу приборы. □ Кальян *(вид курительной трубки). Кальян тартыу. Еҙ кальян. Кальян һатып алыу.*

КАМАР БИЛҒАУ *и. диал. ҡар.* **ҡәмәр билбау.**

КАМА-ҺЫУА *р. диал. ҡар.* **баштан-аяҡ.** *Мин уларҙы кама-һыуа беләм.*

КАМБАЛА [рус. < фин. *kampela* 'балыҡ исеме'] (Р.: камбала; И.: plaice; Т.: köpekdili) *и. зоол.*

Ике күҙе лә бер яҡта урынлашҡан яҫы ялпаҡ диңгеҙ балығы. □ Камбала. / Камбаловый (лат. *Pleuronectes platessa*). *Камбала консерваһы.* ■ *Алыҫ Көнсығыш диңгеҙҙәре һөмбаш балыҡтары: кетаға, көмрө балыҡҡа (горбушаға), шулай уҡ трескаға, камбалаға бай.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 3, 2008.

КАМБАЛАУ (камбала-) *ҡ. диал.*

1. *ҡар.* **сигеү.**

2. Канва менән сигеү. □ Вышивать по канве.

КАМБИЗМ [рус. < ингл.] (Р.: камбизм; И.: cambistry; Т.: kambiyo) *и. икт.*

Сит илгә валютаны отошлораҡ сығарыу ысулы. □ Камбизм.

КАМБИЙ ЕБЕ *и. диал. ҡар.* **мулинә.**

КАМБУЗ [рус. < гол. *kombuis*] (Р.: камбуз; И.: Caboose; Т.: gemi mutfağı) *и. махс.*

Карапта аш бүлмәһе. □ Камбуз. / Камбузный. *Камбузда йыйылыу.* ■ *Кисен камбузда уңлап кеше сиратта торабыҙ.* Ә. Гәрәев.

КАМВОЛЬ [рус. < нем. *Kammwolle* 'таралған йөн'] (Р.: камволь; И.: kamvol; Т.: yün) *и. махс.*

Шыма, йоҡа туҡымалар эшләү өсөн тарап эшкәртелгән йөн. □ Камволь. / Камвольный. *Камволь фабрикаһы. Камволь комбинаты. Камволь еп. Камволь туҡыма.*

КАМЕЛИЯ [рус. < фр. *camellia*] (Р.: камелия; И.: camellia; Т.: kamelya) *и. бот.*

Ҡыҙыл йәки аҡ төҫтәге хуш еҫле сәскәле, ҡалын ҡаты япраҡлы йылы яҡ ағасы. □ Камелия (лат. *Camellia*). *Япон камелияһы. Камелия үҫтереү. Камелия ултыртыу.*

КАМЕРА I [рус. < лат. *camera* 'бүлмә'] (Р.: камера; И.: cell; Т.: oda) *и.*

1. Учреждениеларҙа махсуслаштырылған айырым бүлмә. □ Камера *(помещение в учреждениях).* / Камерный. *Багаж һаҡлау камераһы. Дезинфекция яһау камераһы.*

2. Төрмәлә бер кешелек бүлмә. □ Камера *(в тюрьме).* ■ *Карактарҙың һәр береһе айырым камерала тотола ине.* Ғ. Әмири. *Хәмзә, үҙенә яҙаның ауыр булаһағын алдан уҡ белгәнгә күрә, судты көтөп тормай, бер ҡап-ҡараңғы төндә, төн уртаһында, фонары менән камераға инеүсе төрмәсене һуғып йығала ҡасыу яғын ҡарай.* Ғ. Хәйри.

3. *махс.* *Ниндәйҙер* машина, ҡорамал, эске ағзалар эсендәге ябыҡ ҡыуыш арауыҡ. □ Камера *(закрытое пространство внутри какого-л. прибора, аппарата, органа). Фотоаппарат камераһы. Йөрәк камераһы. Күҙ камераһы. Шлюз камераһы. Газ камераһы.*

4. Шина, туп кеүек нәмәләрҙең һауа тултырыу өсөн резинанан эшләнгән эске ҡаты. □ Камера *(внутренняя резиновая оболочка шины, мяча и т. п., наполняемая воздухом). Камераға һауа тултырыу. Тишек камера.*

5. Фото йәки кино аппараты. □ Камера *(кино-, фотоаппарат).* ■ *Көнәлгәре акса һалышҡайнылар: һыу аҫтында киноға төшөрә торған ҡиммәтле камера һайланылар.* Й. Солтанов.

КАМЕРА II [рус. < лат. *camera* 'бүлмә'] (Р.: камерный; И.: chamber; Т.: oda (müziği) *с. муз.*

Музыкант-солистар, бер нисә башҡарыусынан торған ансамблдәр башҡарыу өсөн билдәләнгән. □ Камерный. *Камера ансамбле. Камера әҫәре.*

КАМЕРАЛАШ (Р.: сокамерник; И.: cell mate; Т.: hücre arkadaşı) *и.*

Камерала бергә ултырыусы. □ Сокамерник. *Камералаш менән аралашыу.*

КАМЕРАЛЫ (Р.: камерный; И.: chamber; Т.: bölümlü) *с.*

Камераһы булған. □ Камерный. *Коштарҙың йөрәге дүрт камералы була. Камералы мейес.*

КАМЕРАЛЬ [рус. *камерный*] (Р.: камерный; И.: Chamber; Т.: oda) *с. махс.*

Лабораторияла, кабинетта эшкәртелә торған. □ Камеральный. *Камераль эштәр. Камераль тикшеренеүҙәр.*

КАМЕРА МУЗЫКАҺЫ (Р.: камерная музыка; И.: chamber music; Т.: oda müziği) *и муз.*

Яңғыҙ һәм ансамбль менән башҡарылған музыка әҫәре. □ Камерная музыка.

КАМЕРГЕР [рус.< нем. *Kammerherr*] (Р.: камергер; И.: Chamberlain; Т.: teşrifatçı, kâhya) *и. тар.*

1. Батша һарайында хеҙмәт итеүсенең камер-юнкерҙан юғары дәрәжәһе. □ Камергер *(придворное звание).*

2. Шул дәрәжәгә эйә кеше. □ Камергер *(лицо, носящее такое звание).*

КАМЕРДИНЕР [рус. < нем. *Kammerdiener*] (Р.: камердинер; И.: Valet; Т.: erkek oda hizmetçisi) *и.*

Рәсәйҙә 1917 йылға тиклем дворяндарҙың шәхси ир хеҙмәтсеһе. □ Камердинер. *Камердинер булып хеҙмәт итеү.*

КАМЕРИСТКА [рус.] (Р.: камеристка; И.: gentlewoman; Т.: hanımefendi) *и.*

Дворяндар йорттарында хужа ҡатыны бүлмәһендә хеҙмәт итеүсе аҫрау. □ Камеристка.

КАМЕРТОН [рус. < нем. *Kammerton*] (Р.: камертон; И.: tuning fork; Т.: akort çatalı) *и. муз.*

Билдәле бер юғарылыҡта тауыш биреүсе ҡорал *(музыка ҡоралдарын көйләгәндә, медицина ҡорамалдарында ҡулланыла).* □ Камертон. *Медицина камертоны. Ҡурайҙы камертон менән көйләп яһау.*

КАМЕР-ЮНКЕР [рус.< нем. *Kammerjunker*] (Р.: камер-юнкер; И.: kamerûnker; Т.: kahya) *и.*

1. Батша һарайында һәм ҡайһы бер монархиялы дәүләттәрҙә камергерҙан түбәнерәк дәрәжә. □ Камер-юнкер *(придворное звание).*

2. Шул дәрәжәләге кеше. □ Камер-юнкер *(лицо, носящее такое звание).*

КАМЕЯ [рус. < фр. *camee*] (Р.: камея; И.: cameo; Т.: işlemeli akik) *и.*

1. Өҫтө сығынҡы һүрәттәр менән биҙәкләнгән аҫыл таш йәки ҡабырсаҡ. □ Камея *(камень).*

2. Шул таш менән эшләнгән биҙәүес. □ Камея *(брошь). Камея һатып алыу. Камея эшләү үҙенсәлектәре.*

КАМЗУЛ [рус. < фр. *camisole*] (Р.: камзол; И.: camisole; Т.: ceket) *и.*

Эсләп тегелгән еңһеҙ ҡыҫҡа өҫ кейеме. □ Камзол. *Бәрхәт камзул. Биш билле камзул. Тәңкәле камзул. Уҡалы камзул. Батшай камзул.* ■ *Янүҙаҡ карт камзул төймәләрен ыскындырып елләнеп алды.* М. Тажи. *Иртән һалҡын әле, ә көндөҙ бынан, алтын уҡаларын емелдәтеп, камзул тәңкәләрен сылтыратып-көләп әллә ҡайҙа ашҡынып йүгергән йәш киленсәктәрҙәй, йылғанаҡтар йырлап ағасаҡ.* Т. Ғарипова.

КАМЗУЛЛЫҠ (камзуллығы) (Р.: отрез на камзол; И.: camisole; Т.: ceketlik) *и.*

Камзул тегергә яраҡлы туҡыма; камзулға етерлек. □ Отрез на камзол. / Камзольный. *Камзуллыҡ бәрхәт. Камзуллыҡ барса. Камзуллыҡ алыу.*

КАМИКАДЗЕ [рус. < япон.] (Р.: камикадзе; И.: kamikaze; Т.: intihar pilotu) *и.*

1. Япон армияһының II донъя һуғышы осорондағы үлемдар осоусыһы. □ Камикадзе *(японский лётчик-смертник).*

2. Үлемдар. □ Камикадзе.

КАМИЛ I [ғәр. كامل] (Р.: совершенный; И.: perfect; Т.: mükemmel) *с.*

Сифаты яғынан тейешле дәрәжәлә булған. □ Совершенный, безукоризненный. *Камил эш. Камил матурлыҡ. Һәр яҡтан камил булыу.* ■ *Аҡылым камил, зиһенем уяу, дәртем егерме йәшлек егет дәртенән кәм түгел.* Ш. Насыров. *Еҙсәлем бит быуаса донъяла булмаған, үҙенең ғорур хыялы ғына һүрәтләгән, һәр яҡтан да иҫ киткес камил, төгәл ысын хур ҡыҙын һағына.* Й. Солтанов. ● *Камилды камил белер.* Мәҡәл.

КАМИЛ II [ғәр. كامل] (Р.: в полной мере; И.: fully; Т.: tam) *р.*

1. Тулы, теүәл. □ В полной мере, полностью. ■ *Үҙемдең хәрби вазифаларымды өлгөлө үтәй алыуыма ышанысым да камил түгел ине.* Ғ. Әмири. *Шиғыр яҙҙым. Юлдарында күңелем түгелмәле. Ҡарамаҡҡа шиғыр ҙа ул, тик камил түгел әле.* Х. Назар. *Әммә уға [Сәйфетдингә] Ҡөрьән Кәрим теле ғәрәпсәне лә, бөйөк шағирҙар теле фарсыны ла тәрәнерәк, камилыраҡ өйрәнергә кәрәк ине әле.* Ә. Хәкимов.

2. Бөтөнләй, тамам. □ Очень, в сильной степени. *Камил арытты. Камил аяҡтан яҙыу. Камил теңкәгә тейҙе. Камил ышаныу.*

♦ **Иманы (*йәки* иманым) камил** 1) ышанысы ныҡ. □ Поверь! ■ *[Ғәзиз:] Юҡҡа иҫең киткән, нимәнән ҡурҡырға. Тик иманың камил булһын!* Ғ. Хәйри; 2) һүҙҙе, антты, вәғәҙәне нығытыу өсөн әйтелә. □ Я искренне верю.

КАМИЛЛАНЫУ (камиллан-) *ҡ. ҡар.* **камиллашыу.**

КАМИЛЛАУ (камилла-) (Р.: завершать; И.: fail; Т.: tamamlamak) *ҡ.*

Нимәнелер башҡарыу, үтәү. □ Завершать, кончать, доводить до конца. // Завершение. ■ *Һинең һүҙеңде беҙ камиллай алмайбыҙ.* «Батыршаның хаты».

КАМИЛЛАШТЫРЫУ (камиллаштыр-) (Р.: совершенствовать; И.: improve; Т.: geliştirmek) *ҡ.*

Сифатын камил хәлгә килтереү, камил итеү; яҡшыртыу. □ Совершенствовать, усовершенствовать. // Совершенствование. *Үҙ белемеңде камиллаштырыу.* ■ *Нинә үҙ һөнәрен камиллаштырмай был Өйрәнсек? Әллә һәләте юҡмы?* З. Биишева.

КАМИЛЛАШЫУ (камиллаш-) (Р.: совершенствоваться; И.: improve; Т.: mükemmelleşmek) *ҡ.*

Камил хәлгә килеү, яҡшырыу, һәйбәтләнеү. □ Совершенствоваться, усовершенствоваться. // Совершенствование, усовершенствование. *Оҫталығы камиллаша бара.* ■ *Беҙҙең хәрби оҫталыҡ яуҙан яуға камиллаша барҙы.* М. Гәрәев. *Һөнәрсе үҙ һөнәрендә көндән-көн үҫкән, камиллашҡан.* З. Биишева.

КАМИЛЛЫҠ (камиллығы) (Р.: совершенство; И.: perfection; Т.: mükemmellik, ekmeliyet, kemal) *и.*

Камил хәл, теүәллек. □ Совершенство. *Камиллыҡҡа ынтылыу.* ■ *Һабрауҙың үҙе сығарған шиғырҙары камиллыҡтан алыҫ ине әле.* Ә. Хәкимов. *Был тиклем камиллыҡҡа ирешеү өсөн халыҡ был ырыу сәнғәте менән ҡайһы дәүерҙәрҙән алып шөғөлләнергә тейеш булды икән?* Т. Ғарипова. *Юҡтыр, йәмғиәтте камиллыҡҡа илтеү юлы былдай авантюраға королорға тейеш түгел.* Н. Мусин. ● *Наҙан*

дәрәжәгә ынтыла, ғалим – камиллыҡҡа. Мәҡәл.

КАМИН [рус. < гр. *kaminos* 'мейес, усаҡ'] (Р.: камин; И.: fire-place; Т.: şömine) *и.*

Яғыу өсөн ауыҙы киң итеп эшләнгән мейес төрө. □ Камин. / Каминный. *Камин рәшәткәһе. Камин яғыу.* ■ *Ғүмәр электрҙы тоҡандырҙы ла каминға ут яғып ебәрҙе.* Н. Мусин.

КАМИР ҺЫУЫҠ (һыуығы) (Р: холодный день с заморозками; И.: cold day; Т.: soğuk gün) *и. диал.*

Ҡыраулы һыуыҡ. □ Холодный день с заморозками.

КАМПАНИЯ [рус. < фр. *campagne*] (Р.: кампания; И.: campagne; Т.: kampanya) *и.*

1. *хәрби.* Дөйөм стратегия маҡсатынан сығып, билдәләнгән урында бер ваҡытта башҡарылған киң күләмле хәрби сара. □ Кампания *(совокупность военных действий). Урыҫ-япон кампанияһы.*

2. Хәрби диңгеҙ флотының туҡталышһыҙ йөҙгән ваҡыт арауығы. □ Кампания *(период непрерывного плавания или похода военно-морского флота). Йәйге кампания.*

3. Ижтимағи-сәйәси йәки хужалыҡ маҡсаттарын бойомға ашырыу өсөн билдәле ваҡытта алып барылған эш. □ Кампания *(работа, проводимая для осуществления общественно-политических или хозяйственных целей). Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһын уңышлы үткәреү. Ҡоролтайға депутаттар һайлау. Ер тетрәүҙән зыян күргәндәргә аҡса йыйыу буйынса кампания үткәреү.* ■ *Һайлау кампанияһының иң яуаплы осоро – депутатлыҡҡа кандидаттар күрһәтеү.* Интернет селтәренән. *Йыл һайын, яҙғы сәсеү йәки ураҡ кампанияларының ағышын күҙәтеп, Ғәлим шундай фекергә килә торғайны.* Й. Солтанов. *Бына хәҙер иген йыйыу кампанияһы бара.* Ғ. Хәйри.

КАМПАНИЯСЫЛ (Р.: кампанейский; И.: sociable, companionable; Т.: düzensiz) *с.*

Кампания (3) рәүешендә, эҙлекһеҙ һәм планһыҙ, һирәк-мирәк кенә үткәрелә торған. □ Кампанейский. *Кампаниясыл эш ысулы.*

КАМПАНИЯСЫЛЫҠ (кампаниясылығы) (Р.: кампанейщина; И.: come-and-go style; Т.: düzensizlik) *и.*

Эштә планһыҙлыҡ, системаһыҙлыҡ. □ Кампанейщина. *Кампаниясылыҡ менән мауығыу. Кампаниясылыҡ күренештәре.*

КАМСА *и. ҡар.* **ҡамса.** *Камса тотоусылар диңгеҙгә сыҡты.*

КАМУФЛЯЖ [рус. < фр. *camouflage*] (Р.: камуфляж; И.: camouflage; Т.: alalama, kamufle) *и.*

Хәрби биналарҙы, орудиеларҙы, караптарҙы һ. б. дошман күҙенән йәшереү ысулы *(төрлө һыҙыҡтар, таптар төшөрөп).* □ Камуфляж. *Камуфляж яһау. Самолёттарға камуфляж яһау.*

КАМУФЛЯЖЛЫ (Р.: камуфляжный; И.: camouflage; Т.: kamufle) *с.*

Камуфляж ысулы менән маскировка яһалған. □ Камуфляжный. *Камуфляжлы костюм. Камуфляжлы плащ. Камуфляжлы кейем.*

КАМФАРА [рус. < лат. *camphora* < ғәр.] (Р.: камфара; И.: camphor; Т.: kafur) *и. мед.*

Медицинала һәм техникала ҡулланыла торған ҡырҡыу еҫле төҫһөҙ кристаллик матдә. □ Камфара. / Камфарный. *Камфара уколы. Камфара еҫе.* ■ *Камфара медицинала ғына түгел, шулай уҡ төрлө плёнкалар һәм лактар етештереүҙә лә киң ҡулланыла.* «Башҡортостан», 12 май 2008.

КАМФАРА АҒАСЫ (Р.: камфарное дерево; И.: camphoric tree; Т.: kafur ağacı) *и. бот.*

Лавр һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған мәңге йәшел ағас. □ Камфарное дерево (лат. *Cinnamomum camphora*). *Камфар ағасын үҫтереү. Камфар ағасы ултыртыу.*

КАМФАРАЛЫ (Р.: камфарный; И.: camphoric; Т.: kafurlu) *с.*

Составында камфара булған. □ Камфарный. *Камфаралы крем.*

КАМФАРА МАЙЫ (Р.: камфарное масло; И.: camphoric oil; Т.: kafur yağı) *и. мед.*

Үҫемлек майына ҡушылған камфара эретмәһе, дарыу булараҡ ҡулланыла. □ Камфарное масло. *Камфара майын һөртөү. Камфара майы менән ыуыу.*

КАМФАРА МӘРЙЕН (Р.: искусственный коралл; И.: artificial coral; Т.: yapay mercan) *и. диал.*

Оҙонса яһалма мәрйен. □ Искусственный коралл.

КАМФАРАТЫР *и. диал. кар.* **камка.**

КАМФАРКА [рус. < гол. *komfoor* ‘ут яғыу ҡулайламаһы’] (Р.: конфорка; И.: ring, burner; Т.: ızgara) *и.*

1. Самауырҙың сәйнүк ултырта торған иң өҫкө өлөшө. □ Конфорка *(у самовара).* ■ *Байбисә сәйгүнде камфарка өҫтөндә тотоп әҙерәк бешерҙе лә сынаяҡтарға бүлеп яһай башланы.* Я. Хамматов. *Әсмә апай самауыр ҡапҡасын шап иттереп япты ла сәйгүнде камфарка өҫтөнә ҡуйҙы.* Х. Мохтар. *Гөлйөҙөм ваҡыт таба һалып, үҙе самауырҙарҙың ағармай ҡалған ерҙәрен тиҙ генә ағартты ла, камфаркаларын, табансаларын, ҡыҙҙарҙан күтәртеп барып, йылғала йыуҙы.* Һ. Дәүләтшина.

2. Газ плитаһында яна торған урындағы тишекле тупалсаҡ. □ Конфорка *(у плиты). Дүрт камфаркалы плита.*

3. *күсм. һөйл.* Күлдәк еңенең бөрөп, ҡабартып тегелгән манжеты. □ Манжет в сборку *(у женского платья). Камфаркалы ең.*

КАМФАРКАЛАУ (камфаркала-) (Р.: пришить манжету; И.: sew a cuff on; Т.: manşet dikmek) *ҡ.*

Күлдәк еңенә камфарка (3) ҡуйыу, камфаркалы итеү. □ Пришить манжету. *Еңде камфаркалап тегеү.*

КАМЫШИТ [рус.] (Р.: камышит; И.: reed-fiber mat; Т.: bir cins inşaat malzemesi) *и. махс.*

Ҡамышты преслап яһалған төҙөлөш материалы. □ Камышит. / Камышитовый. *Камышит етештереү. Камышит стена. Өйҙө камышиттан төҙөү.*

КАНАЛ [рус. < лат. *canalis* ‘торба’] (Р.: канал; И.: channel; canal; Т.: kanal, suyolu) *и.*

1. Һыу юлдарын бер-береһе менән тоташтырыу йәки ер һуғарыу өсөн эшләнгән яһалма һыу юлы. □ Канал *(водный). Волга-Дон каналы. Ер һуғарыу каналдары. Канал йырыу. Канал ҡаҙыу.* ■ *Атталарыбыҙ күп ерҙә, бәләкәй кәмәләргә мендерелеп, канал һәм күлдәр аша сығарылды.* Ә.-З. Вәлиди.

2. Торба рәүешендәге оҙон тар арауыҡ. □ Канал *(длинное полое пространство). Кабель каналы.*

3. Кешелә, тере йәнлектәрҙә тамыр, нервы һ. б. үтеү, үҫемлектәрҙә аҙыҡ матдәләре йөрөү юлы. □ Канал *(сосуд, орган, полость). Күреү нервыһы каналы. Бәүел каналы. Аш һеңдереү каналы. Арҡа мейеһе каналы.*

4. Мәғлүмәт алыу, тапшырыу юлдары. □ Канал *(линия связи). Бөтә каналдар аша элемтә тотоу.*

5. Ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү, *ниндәйҙер* эште башҡарыу юлдары, ысулдары. □ Канал *(способы достижения, выполнения чего-л.) Һөйләшеүҙәрҙе дипломатик канал аша алып барыу.*

КАНАЛИЗАЦИЯ [рус. < лат. *canalis* ‘торба’] (Р.: канализация; И.: sewerage (system); Т.: kanalizasyon) *и.*

Бысраҡ ташландыҡ һыуҙарҙы йыйыу һәм халыҡ йәшәгән ерҙән ситкә оҙатыу өсөн санитария һәм техник ҡорамалдар комплексы. □ Канализация. / Канализационный. *Канализация үткәреү. Канализация селтәре. Канализация ҡойоһо. Канализация торбалары.*

КАНАЛИЗАЦИЯЛАУ (канализацияла-) (Р.: проводить канализацию; И.: drain; plumb; Т.: kanalizasyon yapmak) *ҡ.*

Канализация үткәреү. □ Проводить канализацию, канализировать. // Канализация. *Бинаны канализациялау. Канализацияланған йорт.*

КАНАПЕ [рус. < фр. *canape*] (Р.: канапе; И.: canapes; Т.: kanape) *и.*

Бәләкәй диван. □ Канапе *(маленький диван). Залға канапе ҡуйғандар.*

КАНАПИ [рус. < фр. *canape*] (Р.: скамья со спинкой; И.: canapes; Т.: bank) *и. диал.*

Артлы эскәмйә. □ Скамья со спинкой. *Ихатала канапи эшләнгән.*

КАНАРЕЙКА [рус.] *и. зоол. кар.* **кәнәри.**

КАНАТ [рус.] (Р.: канат; И.: rope; Т.: halat) *и.*

Йыуан сүс йәки ҡорос арҡан. □ Канат. ■ *Ауыр суйын тәкмәк менән һуҡҡанда канат бер һыуға сума, бер өҫкә ҡалҡып сыға.*

М. Тажи. *Колхозда канаттарҙы һүтеп, һәйбәт сусенән спорт йәмғиәттәре өсөн яңы арҡандар ишә инеләр.* А. Абдуллин. *Ғәлиә Вәлиевнаның юҡлығынан файҙаланып, һәр кем үҙенсә күнегеүҙәр яһай башланы: берәүҙәр матраста тәкмәс атты, икенселәр канат буйынса үрмәләне, өсөнсөләр баҫҡыстар тирәһендә уралды.* Ғ. Байбулатов.

КАНАУ [рус.] (Р.: канава; И.: ditch; Т.: hendek) *и.*

Ҡаҙылған оҙон тар соҡор. □ Канава. *Тәрән канау. Канау йырыу. Канау ҡаҙыу. Канау ҡаҙғыс.* ■ *Канау буйлап аҡкан ҡар һыуының сылтырауы ишетелә.* Х. Мохтар. *Уның [Сәхибәнең] күҙҙәре урамда ҡайнаған халыҡтарға, канау буйҙарында әллә ни ҡәҙәре балаларын эйәртеп йөрөгән сускаларға төшһә лә, күңеле башҡа бер эшлеккә бәйләнде.* Ғ. Хәйри. *Ошо һәйбәт йортҡа еткәнсе бынан ике йөҙ метр самаһындағы оло юлдан ҡалын үк итеп ҡырсынташ һибелгән, ике яҡлап канау ҡаҙылған юл һуҙыла.* Н. Мусин.

КАНАУЛАУ (канаула-) (Р.: делать канавки; И.: make small ditches; Т.: hendek yapmak) *ҡ.*

Канау яһау. □ Делать канавки. *Түтәлдәрҙе канаулау. Өй алдын канаулау. Һыуҙы канаулап ситкә ағыҙыу.*

КАНАУЫС [фарс. قناوېز] (Р.: канаус; И.: taffeta; Т.: tafta) *и.*

Төрлө төҫкә инеп йымылдап торған ебәк туҡыма. □ Канаус. / Канаусовый. *Канауыстан тегеү. Канауыс эслек.*

КАНВА [рус. < фр. *canevas*] (Р.: канва; И.: canvas; groundwork, outline; Т.: taslak) *и.*

1. Сигеү эшендә ерлек итеп ҡулланыла торған һирәк туҡыма. □ Канва. *Ваҡ канва. Канваға сигеү.*

2. *Нимәнеңдер* төп нигеҙе, үҙенсәлеге. □ Канва *(основа чего-л.). Хикәйәнең канваһы. Ваҡиғалар канваһы.*

3. *ҡар.* **ҡайма.**

КАНДАУАЙ [рус. *кондовый*] (Р.: кондовое дерево; И.: solid, close grained; Т.: çam) *и. һөйл.*

Ботаҡһыҙ төҙ ҡарағай ағасы. □ Кондовое дерево. *Кандауайҙан бурау.*

КАНДИДАТ [рус. < лат. *candidates* 'аҡ кейенгән'] (Р.: кандидат; И.: candidate; Т.: aday) *и.*

1. *Ҡайҙалыр* һайланырға, *ниндәйҙер* эшкә һ. б. тәғәйенләнгән, билдәләнгән кеше. □ Кандидат *(намеченный для избрания, назначения или приёма куда-л., для получения чего-л. и т. п.). Депутатлыҡҡа кандидат итеп һайлау. Ағзалыҡҡа кандидат. Президентлыҡҡа кандидат.* ■ *[Бәр:] Минеңсә, базала минән дә ҡулайлыраҡ кандидат юҡ. Анкетам таҙа, исемем почёт таҡтаһында.* И. Абдуллин. *Күп кенә кандидаттар күрһәтелеп, тауышҡа ҡуйылғандан һуң, правлениеға Ғәзиз Латипов, Шафиҡ Арсланов, тирмән арендаторы Санька һайланды.* Ғ. Хәйри.

2. Ғилми дәрәжә һәм шул дәрәжәне алған кеше. □ Кандидат *(учёная степень). Техник фәндәр кандидаты. Филология фәндәре кандидаты. Фән кандидаты дипломы. Оло улым диссертация яҡланы, техник фәндәр кандидаты дипломын алды.* ■ *Мәскәүҙән философия фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжә алып ҡайтҡас, ул [Сәғәҙиев] берәй юғары уҡыу йортона эшкә ебәрерҙәр тип көткәйне.* Н. Мусин.

КАНДИДАТЛЫҠ (кандидатлығы) (Р.: положение, звание кандидата; И.: candidate's rank; Т.: adaylık) *и.*

Кандидат булған хәл. □ Положение, звание кандидата. / Кандидатский. *Кандидатлыҡ стажы. Кандидатлыҡ диссертацияһы.* ■ *Солтановтың кандидатлыҡ диссертацияһының темаһы — һыу һәм нефть йүнәлешен тикшереү.* Т. Сәғитов. *Байғусҡаровты ул ваҡытта Өфөлә лә ишеттеләр. ошо Арынбаҫаров ағай, элекке уҡытыусыһы, күсеп килергә, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡларға ярҙам итте.* Д. Буләков.

КАНДИДАТЛЫҠ МИНИМУМЫ (Р.: кандидатский минимум; И.: qualifying examination for the candidate degree; Т.: sınav) *и.*

Диссертация яҡлағанда белем күләмен күрһәткән һынау. □ Кандидатский минимум. *Кандидатлыҡ минимумы тапшырыу.*

КАНДИДАТУРА [рус. < лат.] (Р.: кандидатура; И.: candidature; candidacy; Т.: adaylık) *и.*

Кандидат (1) итеп билдәләнгән кеше. □ Кандидатура. *Эшкә кандидатура табыу. Кандидатураһын күрһәтеү. Үҙ кандидатураңды алыу. Яраклы кандидатура.* ■ *[Яманһаров:] Ғәйнияр Ғәйнуллович, беҙҙең кандидатура бирәү инде ул.* Д. Бүләков. *[Тәлимә:] Ни бит, Заһир, .. урыныңа кандидатура уйламаныңмы әле?* Т. Ғарипова.

КАНДИЛЬ [рус.] (Р.: кандиль; И.: apple species; Т.: elma türü) *и. бот.*

Оҙонса формалы, һутлы алма бирә торған алмағас сорты. □ Кандиль *(сорт яблок)* (лат. *Malus 'Kandil'*). *Кандиль ултыртыу. Кандиль үҫтереү.*

КАНДРАТ БӘКЕҺЕ (Р.: бритва; И.: razor; Т.: ustura) *и. диал.*

Сәс бәкеһе. □ Бритва. *Кандрат бәкеһе менән сәс алыу.*

КАНИКУЛ [рус. < лат. *caniculares dies* 'иң эҫе көндәр'] (Р.: каникулы; И.: vacations; Т.: tatil) *и.*

1. Уҡыусыларҙың, студенттарҙың уҡыуҙан туҡтап ял иткән ваҡыты. □ Каникулы. *Йәйге каникул. Ҡышҡы каникул. Яҙғы каникул. Каникул башланыу. Каникулға туктау.* ■ *Яҙғы каникулдың тәүге көнө ямғырлы булһа ла, аҙаҡтан һауа һәйбәтләнде, йылы көндәр башланды.* Ф. Әсәнов. *Йәйге каникулға сығыу менән шул аттарҙы көтөргә, яйын тура килтереп, Ғиниәтулла ағайымдар кеүек итеп, һыбай фронтка ла китергә хыяллана инем.* Й. Солтанов. *[Көнһылыу:] Каникул етһә, мин ҡайтыр инем, тик коляскала ғына ултырған Марияны кем ҡарар?* Т. Ғарипова.

2. Депутаттарҙың эштән туктап ял итеп алыуҙары. □ Каникулы.

КАНИСТР [рус. < ингл. *canister* 'ҡалай (һауыт)'] (Р.: канистра; И.: can; Т.: teneke) *и.*

Шыйыҡ яғыулыҡ һалыу өсөн тар ауыҙлы ялпаҡ һауыт. □ Канистра. *Тимер канистр. Полиэтилен канистр. Бензин канистры.* ■ *Машинала бер нисә канистр бензин табылды.* Картотека фондынан. *Сәләмғол цистерна аҫтынан канистр һөйрәп сығарғайны, көтмәгәндә килеп юлыҡкан Ғәлим канистрға аяғы менән баҫты.* Й. Солтанов.

КАНИФАС [рус. < нем.] (Р.: канифас; И.: dimity; Т.: kabartmalı pamuklu bez, dimi) *и. иҫк.*

Ебәк ҡатыш йоҡа тауар. □ Канифас *(ткань с примесью шёлка). Канифас күлдәк. Канифастан тегеү.*

КАНИФОЛЛЕ (Р.: канифольный; И.: colophony, rosin; Т.: reçinalı) *с.*

Канифолдән яһалған, канифоль ҡушылып яһалған. □ Канифольный. *Канифолле һабын.*

КАНИФОЛЛӘҮ (канифоллә-) (Р.: канифолить; И.: rosin; Т.: reçina sürmek) *ҡ.*

Канифоль һөртөү. □ Канифолить. *Скрипка һыҙғысын канифоллэү. Канифоллэп йәбештереү.*

КАНИФОЛЬ [рус. < гр. *kolophonia* 'ыҫмала төрө'] (Р.: канифоль; И.: colophony, rosin; Т.: reçina, kolofan) *и. махс.*

Сайыр ҡыуып алына торған ҡаты йылтыр һары матдә *(келәйләү һәм изоляциялау, ҡыллы музыка ҡоралдарының һыҙғыстарын ышҡыу өсөн ҡулланыла).* □ Канифоль. / Канифольный. *Канифоль ышҡып тереү.* ■ *Ул [карт Вольф] урамға ҡараған тәҙрәләрҙең береһе янына барып баҫты ла скрипканы көйләп алды, смычокка канифоль ышҡыны.* А. Карнай. *Ағастан сығаралар: күмер ҙә һәм дегет тә, каучук та, ебәк тә, канифоль дә, спирт та.* Г. Ғүмәр.

КАНКАН [рус. < фр. *cancan*] (Р.: канкан; И.: cancan; Т.: kankan) *и.*

Француз эстрада бейеүе *(тиҙ хәрәкәттәр яһау, аяҡтарҙы юғары күтәреү менән билдәләнә).* □ Канкан *(французский эстрадный танец). Канкан ҡарау. Канканда ҡатнашыу.*

КАННА [рус. < гр.] (Р.: канна; И.: canna; Т.: tesbih çiçeği) *и. бот.*

Тропиктарҙа үҫеүсе эре сағыу төҫтәге сәскәле үҫемлек. □ Канна *(растение)* (лат. *Canna*). *Канна үҫтереү. Канна ултыртыу. Канна сәскәһе.*

КАННИБАЛ [рус. < фр. *Cannibale*] (Р.: каннибал; И.: cannibal; Т.: yamyam) *и.*

1. Кеше ашаусы, вәхши кеше. □ Каннибал. / Каннибальский.

2. *күсм.* Мәрхәмәтһеҙ, рәхимһеҙ кеше. □ Каннибал *(крайне жестокий человек).*

КАННИБАЛЛЫҠ (каннибаллығы) (Р.: каннибализм; И.: cannibalism; Т.: yamyamlık) *и.*

1. Кеше ашау хәле. □ Каннибализм. / Каннибальский. *Каннибаллыҡ осраҡтары.*

2. *күсм.* Вәхшилек, яуызлыҡ. □ Каннибализм *(зверство)*. / Каннибальский. *Каннибаллыҡ ҡылыу.*

КАНОН [рус. < гр. *kanon* 'ҡағиҙә'] (Р.: канон; И.: canon; Т.: kanon) *и.*

1. *дини.* Сиркәү тарафынан изге тип ҡабул ителгән дини китаптар йыйылмаһы. □ Канон.

2. *муз.* Музыкаль теманы төрлө тауыштар менән бер-бер артлы ҡабатлап йырлау. □ Канон *(повторение музыкальной темы разными, последовательно вступающими друг за другом голосами)*. *Канон менән йырлау.*

КАНОНАДА [рус. < фр. *canonade*] (Р.: канонада; И.: cannonade; Т.: top ateşi) *и. хәрби.*

Күп туптарҙан бер туҡтауһыҙ алып барылған атыш. □ Канонада. *Артиллерия канонадаһы.* ■ *Бик оҙаҡ булып тойолған бер нисә минутлыҡ канонада ваҡытында ҡолаҡтары тонған Ғабдулла һаҡланып ҡына башын ҡалҡытты.* Ғ. Әхмәтшин. *Мәрхүмдең кәүҙәһен ҡәбергә төшөргәс, винтовка һәм автоматтарҙан өс мәртәбә бирелгән залп тауышы, урман тынлығын йыртып, бик алыҫтан ишетелгән артиллерия канонадаһына барып ҡушылды.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2002.

КАНОНЕРКА [рус. < фр. *canonniere*] (Р.: канонерка; И.: gun boat; Т.: topçeker, gambot) *и. хәрби.*

Урта ҙурлыҡтағы бер нисә туплы бәләкәй хәрби карап *(яр буйында ҡулланыла)*. □ Канонерка. *Канонерканан һөжүм итеү.*

КАНОНИК [рус. < лат. *canonicus*] (Р.: каноник; И.: canon; Т.: kilise heyeti üyesi) *и. дини.*

Католик соборындағы рухани. □ Каноник.

КАНОНИР [рус. < нем. *Kanonier*] (Р.: канонир; И.: gunner; Т.: topçu) *и. хәрби.*

1917 йылға тиклем Рәсәй армияһында һәм әлеге көндә ҡайһы бер илдәрҙә артиллерия һалдаты. □ Канонир; пушкарь. *Канонир булыу.*

КАНОЭ [рус. < исп. *canoa*] (Р.: каноэ; И.: canoe; Т.: kano) *и. спорт.*

Бер аяҡҡа тубыҡланып, һыңар ишкәк менән ишә торған спорт кәмәһе. □ Каноэ. *Каноэларҙа ярышыу.*

КАНТ [рус. < нем. *Kante*] (Р.: кант; И.: edging; piping; Т.: zıh) *и.*

Кейем ситенә йәки йөйгә ҡыҫтырып тегелгән тар таҫма; ҡайма. □ Кант, окантовка *(краёв, швов одежды)*. *Күлдәкте кант менән биҙәү. Кант һалыу.*

КАНТАТА [рус. < лат. *cantare* 'йырлау'] (Р.: кантата; И.: Cantata; Т.: kantat) *и.*

1. *муз.* Оркестр ҡатнашлығында хор менән йәки яңғыҙ йырлана торған тантаналы ҙур музыкаль әҫәр. □ Кантата *(музыкальное произведение)*. ■ *Композиторҙар бынамын тигән симфониялар, кантаталар, ораториялар, опералар, балеттар, хор йырҙары һәм башҡа әҫәрҙәр ижад иттеләр.* Картотека фондынан. *Заманыбыҙ башҡорт композиторҙары тарафынан күп һанлы романстарҙа һәм йырҙарҙа, инструменталь, хор әҫәрҙәрендә һәм кантаталарҙа йырлана.* Т. Әхмәҙиев.

2. *әҙ.* Тантаналы лирик шиғыр. □ Кантата *(лирическое стихотворение)*. *Кантата яҙыу. Кантата уҡыу.*

КАНТИЛЕНА [рус. < ит. *cantilena* 'йырлау'] (Р.: кантилена; И.: cantilena; Т.: melodi) *и. муз.*

Һалмаҡ моңло көй. □ Кантилена. *Көйҙө башҡарыусыға кантилена етешмәй.*

КАНТИР (Р.: небольшая лопата; И.: small spade; Т.: küçük kürek) *и. диал.*

Бәләкәй көрәк. □ Небольшая лопата. *Кантир менән ҡаҙып алыу. Һарына тамырын кантир менән соҡоп алыу.*

КАНТКОМ [рус. *кантонный комитет*] (Р.: канткон; И.: canton committee; Т.: Kanton komitesi) *и. иҫк.*

Кантон комитеты. □ Кантком. *Канткомға инеү. Кантком тәртиптәре.*

КАНТЛАУ I (кантла-) (Р.: кантовать; И.: edge; Т.: çerçevelemek) *ҡ.*

Кант ҡуйыу, кант тегеү. □ Кантовать, обшивать, окаймлять кантом. *Кантлап алыу.*

Кантлап бөтөрөү. Кантлап ҡуйыу. Кантлап сығыу.

КАНТЛАУ II (кантла-) (Р.: кантовать; И.: cant; Т.: devirmek) *ҡ. махс.*

Нимәнелер эшкәрткәндә йәки йөктө күсергәндә уны өҫ яҡтан аҫ яҡҡа әйләндереү. □ Кантовать *(перевернуть, переворачивать). Йөктө кантларға рөхсәт ителмәй!* ■ *Махсус шыуҙырғыстар менән бүрәнә станға алып барыла. Ҡуҙғалып йөрөүсе өҫтәл, кантлау механизмы һәм башҡа нәмәләр хәрәкәткә килә.* Картотека фондынан.

КАНТЛЫ (Р.: с окантовкой; И.: with an edging; Т.: zıhlı) *с.*

Кант тегелгән, кантланған. □ С окантовкой, с кантом. *Кантлы салбар. Кантлы алъяпҡыс.*

КАНТОН [рус. < фр. *canton*] (Р.: кантон; И.: canton; Т.: kanton) *и.*

1. Швейцария республикаһы составына ингән ерҙәрҙең атамаһы. □ Кантон *(земли, входящие в состав Швейцарии).*

2. Франция һәм Бельгияла төп административ берәмек. □ Кантон *(административное деление во Франции и Бельгии).*

3. *тар.* XVIII быуаттың аҙағынан XIX быуаттың урталарына һәм 1917 йылдан 1930 йылға тиклем Башҡортостанда булған административ-территориаль берәмек. □ Кантон *(административно-территориальное деление Башкортостана в XVIII–XIX вв.). Тамъян-ҡатай кантоны. Күҙәй кантоны.* ■ *Ырыу королошо заманынан ҡалған иҫке волостар урынына кантондар төҙөлә.* Т. Әхмәҙиев. *Мәнди ҡурайсының Абдулла ахунды яманлап йыр сығарыуын, шуның илгә таралыуын ишетеп, ғәйепләнө кантон идараһына килтерҙеләр.* Й. Солтанов. *Ата-бабаларының ҡайһы ханға, ҡайһы кантонға табиғ вә мөнсүб икәнен дә һораштым.* Н. Асанбаев.

4. Шул берәмек башында торған рәсми кеше. □ Кантон *(глава административного деления).* ■ *Сибай кантонға баярҙар бүләк итеп алтын сәғәт биргәндәр.* Т. Хәйбуллин. *[Моратша:] Ныязғолдоң ата-бабаһының сабата кейеп бесән сабып йөрөгән сағы бына ғына тора. Ә беҙҙең тоҡом борон-борондан Бузыҡай кантондан килә.* Һ. Дәүләтшина. *Ай яҡтылары бик яҡты, көмөшлө лә әйәр ялтырай. Мирхәй кантон ҡысҡырғанда, йыйындағы халыҡ ҡалтырай.* Халыҡ йырынан.

КАНТОНЛЫҠ (кантонлығы) *и.*

1. *ҡар.* **кантон 1–3.** ■ *Революцияға тиклем ул [Темәс] Икенсе Бөрйән-Түңгәүер кантонлығының, 1922 йылдан Темәс волосының үҙәге булып торҙо.* Картотека фондынан.

2. Кантон булып эш иткән дәүер. □ Период, время исполнения обязанности главы кантона. ■ *Петербурҙан урап ҡайтҡас, өс төн яткан уфтаныр. Йоҡлар йоҡоһон йоҡламай, кантонлығын иҫкә алып.* Халыҡ йырынан.

КАНЦЕЛЯРИЯ [рус. < лат. *cancellaria*] (Р.: канцелярия; И.: office; Т.: kançılarya) *и.*

1. Ойошманың ҡағыҙ, документ эштәрен алып барған бүлеге һәм шул бүлек урынлашҡан бүлмә. □ Канцелярия. / Канцелярский. *Канцелярия хеҙмәткәре. Канцелярия эше. Канцелярия стиле.* ■ *Ул [Мәликә ҡарсыҡ] килгән саҡта Сөләймән ҡарт өйҙә юҡ ине, Фатима ла үҙенең канцелярияһына сығып киткәйне.* Ғ. Хәйри.

2. Рәсәйҙә XVIII – XX быуаттар башындағы ҡайһы бер дәүләт учреждениеларының исеме. □ Канцелярия. ■ *Йыйынға килеүселәр иртәнсәк аттарын ҡарап, тамаҡ туйҙырып алыуға, воевода канцелярияһынан ике кеше килеп етте.* Н. Мусин.

КАНЦЕЛЯРИЯСЫ (Р.: канцелярист; И.: clerk; Т.: memur) *и.*

Канцелярия хеҙмәткәре. □ Канцелярист. *Канцелярияһы булып эшләү. Канцелярияһы бурыстары.*

КАНЦЕР [рус. < лат. *cancer* ‘яман шеш’] (Р.: канцер; И.: Cancer; Т.: kanser) *и. мед.*

Рак, яман шеш. □ Канцер, рак, злокачественная опухоль.

КАНЦЕРОГЕН [рус. < лат. *cancer* ‘яман шеш’] (Р.: канцероген; И.: carcinogen; Т.: kanser yapıcı) *и. махс.*

Яман шеште барлыҡҡа килтереүсе химик матдә. □ Канцероген.

КАНЦЛЕР [рус. < нем. *Kanzler* < лат. *cancellarius* ‘сәркәтип’] (Р.: канцлер; И.: chancellor; Т.: şansölye) *и.*

1. Ҡайһы бер Көнбайыш Европа илдәрендә иң юғары вазифа һәм шул вазифалағы кеше. □ Канцлер *(административная должность)*. / Канцлерский. *Германия канцлеры.*

2. *тар.* Рәсәйҙә 1917 йылғы инҡилапҡа тиклем юғары вазифалы кешеләргә бирелә торған чин. □ Канцлер *(чин)*. / Канцлерский.

КАНЬОН [рус. < исп. *caon* 'көпшә'] (Р.: каньон; И.: canyon; Т.: kanyon) *и. геогр.*

Һыу менән ашалған тәрән, тар үҙән буйы. □ Каньон. *Колорадо йылғаһының каньоны.*

КАНЮЛЯ [рус.] (Р.: канюля; И.: cannula; Т.: kanül) *и. мед.*

Кеше организмының ҡыуыш ағзаларына керетеү өсөн тәғәйенләнгән көпшәләр *(инъекция яһау, эрен сығарыу кеүек процедуралар өсөн)*. □ Канюля. *Ҡан тамырына канюля ҡуйыу. Канюля аша дарыу ебәреү. Канюля аша ҡан ағыҙыу.*

КАОЛИН [рус. < ҡыт.] (Р.: каолин; И.: kaolin; Т.: kaolin) *и. махс.*

Балсыҡлы минералдарҙан торған тау тоҡомо; аҡ балсыҡ *(фарфор яһау өсөн ҡулланыла)*. □ Каолин *(горная порода)*.

КАПЕЛЛА [рус. < лат. *capella*] (Р.: капелла; И.: capella; Т.: kapella) *и.*

1. *муз.* Йырсылар һәм музыканттар ансамбле, хор. □ Капелла *(ансамбль, хор)*. *Музыкаль капелла. Хор капеллаһы.*

2. *дини.* Католиктарҙа танылған ғаиләләр өсөн айырым ғибәҙәтхана йәки бүлмә. □ Капелла *(часовня или помещение для молитв)*.

КАПЕЛЬДИНЕР (Р.: капельдинер; И.: box keeper; Т.: loca görevlisi) *и. иҫк.*

Театрҙа билет тикшереп, тәртип күҙәтеп торған хеҙмәткәр. □ Капельдинер. *Капельдинер булып эшләү.*

КАПЕЛЬМЕЙСТЕР [рус. < нем. *Kapellmeister*] (Р.: капельмейстер; И.: bandmaster; Т.: bando şefi) *и.*

Хәрби оркестр дирижёры. □ Капельмейстер *(военный дирижёр)*. / Капельмейстерский. *Оҫта капельмейстер. Оркестр капельмейстеры.*

КАПИЛЛЯР [рус. < лат. *capillaris*] (Р.: капилляр; И.: capillar; Т.: kılcal damarlar) *и. махс.*

1. Үтә нәҙек көпшә; ҡылтамыр. □ Капилляр *(трубочка с узким каналом)*. / Капиллярный.

2. Төрлө нәмә эсендәге ҡыл һымаҡ нәҙек кенә юл. □ Капилляр *(всякий узкий канал)*. / Капиллярный. *Тупраҡтағы капилляр.*

3. Бик ваҡ ҡан тамыры. □ Капилляр *(тончайший кровеносный сосуд)*. / Капиллярный. *Капиллярҙар селтәре.* ■ *Үпкәләрҙә кислород менән байыҡҡан ҡан артериялар буйлап бара, капиллярҙа матдәләр һәм газдар алмашына.* Картотека фондынан.

КАПИТАЛ [рус. < лат. *capitalis* 'төп'] (Р.: капитал; И.: capital; Т.: sermaye) *и.*

1. Өҫтәмә файҙа килтерә торған ҡиммәт *(милек, аҡса, ер)*. □ Капитал *(средства, приносящие прибыль)*. *Даими капитал. Төп капитал. Үҙгәреүсән капитал. Финанс капиталы.* ■ *Кешеләр үҙҙәренең артыҡ капиталдарын законлы бизнесҡа (акционер йәмғиәттәренә һәм компанияларға) һала.* «Башҡортостан», 15 август 2010.

2. Ҙур аҡса, күп аҡса. □ Капитал *(значительная сумма денег)*. *Ҡулдағы капитал. Файҙаһыҙ ятҡан капитал.* ■ *[Кәрим:] Сит ил капиталы менән бәйле булғанға, беҙҙең менән сауҙа итергә шикләнәләр.* Н. Асанбаев. *Коммунист түгелмен, әммә әйҙәргә намыҫым ҡушмай капитал ҡоллоғона.* Т. Ғәниева.

3. Мөһим ҡаҙаныш, ҡиммәт. □ Капитал *(большая ценность, важное достояние)*. *Ғилми капитал. Сәйәси капитал.*

КАПИТАЛИЗМ [рус. < лат.] (Р.: капитализм; И.: capitalism; Т.: kapitalizm) *и.*

Етештереү сараларының шәхси ҡулда булыуына, баҙар иҡтисады һәм граждандыҡ йәмғиәтенә нигеҙләнгән ижтимағи-сәйәси ҡоролош. □ Капитализм. *Дәүләт капитализмы. Монополистик капитализм.* ■ *[Саяф:] Халыҡты байға, ярлыға бүлгән капитализмды яҡын ебәрмәҫкә кәрәк!* Т. Ғарипова.

КАПИТАЛИСТ [рус. < лат.] (Р.: капиталист; И.: capitalist; Т.: sermaye sahibi) *и.*

Капиталистик йәмғиәттә үҙенең шәхси етештереү саралары нигеҙендә хеҙмәткәрҙәр

яллатып табыш алыусы эре капитал хужаһы. □ Капиталист. *Ҡуртымсы капиталист. Концессионер капиталист.* ■ *Шулай итеп, буласаҡ капиталистың ғәзиз хыялдары бойомға ашҡан: ҡултыҡ ситендә Башҡортостандағы беренсе судно ремонтлау мастерскойы, тартынып ҡына булһа ла, зәңгәр күккә мөрйәһенән ҡуйы төтөн көлтәһе урғылтып ебәргән.* Й. Солтанов. *Беҙҙең совет һандығына һеҙҙең баҡса һәм йорт ҡына түгел, капиталистарҙың бөтә завод, фабрика һәм башҡалары ла бик шыма ғына инеп ултырҙы.* Ғ. Хәйри.

КАПИТАЛИСТИК (Р.: капиталистический; И.: capitalist; Т.: kapitalist) *с.*

1. Капитализм ҡанундарына, принциптарына нигеҙләнгән. □ Капиталистический *(основанный на принципах капитализма). Капиталистик система. Капиталистик илдәр. Капиталистик етештереү саралары.*

2. Капитализмға хас, капитализмға бәйле. □ Капиталистический *(характерный для капитализма). Капиталистик әхлаҡ нормалары. Капиталистик етештереү мөнәсәбәттәре. Капиталистик мораль.*

КАПИТАЛЛАШТЫРЫУ (капиталлаштыр-) (Р.: капитализировать; И.: capitalize; Т.: çıkar sağlamak) *ҡ. иҡт.*

Өҫтәмә ҡиммәтте капиталға әйләндереү, килем килтерә торған итеү. □ Капитализировать. // Капитализация. *Аҡсаны капиталлаштырыу. Ерҙе капиталлаштырыу. Һалымды капиталлаштырыу. Рентаны капиталлаштырыу.*

КАПИТАЛЬ (Р.: капитальный; И.: fundamental; Т.: esas) *с.*

Төплө, нигеҙле, ныҡлы, әһәмиәтле. □ Капитальный. *Капиталь йорт.*

КАПИТАЛЬ АКЦИЯЛАР (Р.: капитальные акции; И.: capital shares; Т.: hisseler) *и. иҡт.*

Ойошманың төп, әһәмиәтле акциялары. □ Капитальные акции.

КАПИТАЛЬ МИЛЕК (Р.: капитальное имущество; И.: capital property; Т.: sermaye malları) *и. иҡт.*

Ниндәйҙер ойошманың, йәмғиәттең төп милке. □ Капитальное имущество.

КАПИТАЛЬ РЕМОНТ (Р.: капитальный ремонт; И.: major maintenance; Т.: tamir) *и.*

Бөтә яҡлап эшләнгән тулы ремонт *(йорт, машина, станок һ.б.).* □ Капитальный ремонт. *Капиталь ремонт яһау.*

КАПИТАЛЬ СТЕНА (Р.: капитальная стена; И.: main wall; Т.: esas duvar) *и.*

Ҡоролманың түбәһенә терәк булған төп стена. □ Капитальная стена.

КАПИТАЛЬ СЫҒЫМДАР (Р.: капитальные затраты; И.: capital outlays; Т.: yatırım) *и. иҡт.*

Төп капиталға һәм запастарҙың артыуына йүнәлтелгән аҡса. □ Капитальные затраты. *Капиталь сығымдарҙың артыуы.*

КАПИТАЛЬ ТӨҘӨЛӨШ (Р.: капитальное строительство; И.: capital construction; Т.: inşaat) *и.*

Үҙәк капиталь һалыуҙар иҫәбенә башҡарыла торған төҙөлөш. □ Капитальное строительство. *Капиталь төҙөлөштө тамамлау.* ■ *Башҡортостан Президенты капиталь төҙөлөш мәсьәләһенә лә ентекләп туҡталды.* «Башҡортостан», 16 декабрь 2011.

КАПИТАЛЬ ФОНД (Р.: капитальный фонд; И.: capital stock; Т.: esas vakıf) *и.*

Бөтә яҡлап тулы ремонт эшләү өсөн тәғәйенләнгән фонд. □ Капитальный фонд.

КАПИТАЛЬ ҺАЛЫУҘАР (Р.: капитальные вложения; И.: (capital) investments; Т.: yatırım) *и. иҡт.*

Төп фондтарҙы ҡайтанан етештереүгә йүнәлтелгән сығымдар. □ Капитальные вложения.

КАПИТАН [рус. < фр. *capitaine*] (Р.: капитан; И.: captain; Т.: kaptan) *и.*

1. *хәрби.* Өлкән лейтенанттан юғары офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. □ Капитан. *Авиация капитаны. Капитан погоны. Капитан званиеһын алыу.* ■ *Беҙ блиндаждан баштарҙы сығарып, капитан йүгергән яҡҡа ҡараныҡ.* Д. Юлтый. *Ошо мәлдә яурынына аҡ халат ҡына ябынған милиция формаһындағы ир кеше килеп инде. Врач сығып китергә итҡәйне лә, ишара яһап, капитан уның ҡалыуын үтенде.* Д. Бүләков.

2. Карап командиры. □ Капитан. *Пароход капитаны. Капитан каютаһы. Капитан ярҙамсыһы. 3-сө дәрәжәле капитан — флоттағы капитан-лейтенанттан һуң килгән офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.* ■ *Мин капитан, ер йөҙөнөң һыуҙарын үттем йөҙөп.* Ф. Рәхимғолова. *Әгәр капитан алдында бер маяҡ түгел, ә төрлө яҡҡа күрһәтеп яҡтыртҡан ике маяҡ икән, авария ҡотолғоһоҙ.* И. Абдуллин.

3. Спорт йәки башҡа төрлө ярыштарҙа ҡатнашыусы команданың башлығы. □ Капитан. *Волейбол командаһының капитаны. ШТК командаһы капитаны.* ■ *[Сираев:] Әгәр полкта футбол командаһы булһа, капитан итеп ҡуйһағыҙ ҙа һынатмам. Мин техникум командаһында ла капитан инем, тине.* Н. Мусин.

КАПИТАН-ЛЕЙТЕНАНТ [рус.] (Р.: капитан-лейтенант; И.: lieutenant commander; Т.: deniz yüzbaşı) *и. хәрби.*

Флотта ҡабул ителгән хәрби офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше: өлкән лейтенанттан юғары офицер. □ Капитан-лейтенант.

КАПИТЕЛЬ [рус. < лат. *capitellum* ‘бәләкәй баш’] (Р.: капитель; И.: capital, cap; Т.: sütun başlığı) *и. архит.*

Терәк бағананың өрлөкятҡан иң өҫкө өлөшө. □ Капитель *(верхняя часть колонны или пилястра).*

КАПИТУЛЯНТ [рус.] (Р.: капитулянт; И.: defeatist; Т.: teslimiyetçi) *и.*

Ауырлыҡтарға ҡаршы көрәш алып барыуҙан хыянатсыл рәүештә баш тартыусы. □ Капитулянт. *Капитулянт тактикаһы.*

КАПИТУЛЯЦИЯ [рус. < лат. *capitulatio*] (Р.: капитуляция; И.: capitulation; surrender; Т.: teslimiyet) *и.*

1. Һуғыш туҡтатылып, еңеүсе ҡуйған шартҡа риза булып, еңелгән яҡтың баш һалыуы. □ Капитуляция. *Капитуляция яһау. Капитуляция акты.* ■ *Капитуляция һүҙе һуғыштың бөтөүе тигәнде аңлатырға, Гитлер Германияһының юҡ ителеүе тураһында бөтә донъяға хәбәр итергә тейеш ине.* Картотека фондынан.

2. *күсм.* Үҙеңдең еңелеүеңде, хаҡһыҙлығыңды таныу, сигенеү. □ Капитуляция *(отступление, отход).*

КАПИТУЛЯЦИЯЛАУ (**капитуляция-ла-**) (Р.: капитулировать; И.: capitulate, surrender; Т.: teslim olmak) *ҡ.*

Капитуляция яһарға мәжбүр булыу, капитуляция яһау. □ Капитулировать. *Капитуляциялау актына ҡул ҡуйыу.*

КАПОНИР [рус. < фр.] (Р.: капонир; И.: caponier; Т.: koruyucu tesis) *и.*

1. *хәрби.* Ике ҡапма-ҡаршы яҡҡа ла ут асырға мөмкинлек биргән ҡурғауыл ҡоролма. □ Капонир.

2. *авиа.* Аэродромдағы самолёттарҙы ҡурғау өсөн ышыҡлағыс. □ Капонир.

КАПОТ [рус. < фр. *capote*] (Р.: капот; И.: hood, bonnet; Т.: kapot) *и.*

1. *тех.* Төрлө механизмдарҙы саң-туҙандан, һыуҙан һаҡлау өсөн ҡулланылған асылмалы ҡаплауыс. □ Капот. *Автомобиль капоты. Самолёт капоты.* ■ *Радиатор һәм мотор яҡшылап йылы капот менән ҡапланған булһа, улар һыуынмайҙар, машинаны бик тиҙ эшләтә алыу мөмкинлеге тыуа.* Картотека фондынан. *Өҫтағы ҡабат баҫыу ҡапҡаһын үтеп, бригадир өйрәткән ергә барып еткәндә, Боғаҙ Бәҙәмша тигәндәре, башын трактор капоты аҫтына тығып, нимәлер соҡсона ине.* Й. Солтанов. *Илгужа күп уйлап торманы, капот өҫтөнә ташланды.* Д. Бүләков.

2. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың халат һымағыраҡ киң өҫ кейеме. □ Капот.

КАПОТАЖ [рус. < фр.] (Р.: капотаж; И.: nose over; Т.: burnu üzerine çakılmak) *и. тех.*

Аварияның бер төрө: самолёттың һауаға осоу йәки һауанан төшөү ваҡытында алға табан баш түбән әйләнеүе. □ Капотаж *(вид аварии самолёта). Капотаждан сығыу.*

КАППЫ [рус.] (Р.: каппы; И.: sealed end; Т.: kapak) *и. мед.*

Ортодонтик дауалау ваҡытында *(теш торошон үҙгәртеү, яңаҡ һыныҡтарын нығытыу)* тешкә кейҙереү өсөн тутыҡмай торған металдан йәки полимерҙан эшләнгән ҡалпаҡ. □ Каппы.

КАПРАЛ [рус. < фр. *caporal*] (Р.: капрал; И.: corporal; Т.: onbaşı) *и. хәрби.*

XVII–XIX быуаттарҙа рус ғәскәрендә һәм әлеге көндәрҙә ҡайһы бер сит ил ғәскәрҙәрендә иң кесе командир дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. □ Капрал. / Капральский. *Капрал погондары.* ■ *Һуңынан комиссарҙы дошманға биргән хыянатсының Пильсудский бандаһының элекке капралы булыуы беленде.* Яр. Вәлиев.

КАПРИЗ [рус. < фр. *caprice*] (Р.: каприз; И.: caprice; Т.: kapris) *и.*

Холоҡһоҙлоҡ, көйһөҙлөк, үҙһүҙлелек, еңмешлек. □ Каприз. / Капризный. *Бала капризы.* ■ *Байғужа уның [Буранбайҙың] капризына ҡараманы, аяғынан һөйрәп торғоҙҙо.* Д. Юлтый.

КАПРИЧЧИО [рус. < ит. *capriccio* 'каприз'] (Р.: каприччио; И.: capriccio; Т.: serbest biçimde parça) *и. муз.*

Ирекле формала, үҙенсәлекле һәм киҫкен боролоштар менән яҙылған музыкаль әҫәр. □ Каприччио *(род музыкальных произведений). Каприччио башҡарыу. Итальян каприччиоһы.*

КАПРОН [рус.] (Р.: капрон; И.: kapron; Т.: kapron) *и.*

1. Синтетик еп төрө. □ Капрон *(искусственное волокно).* / Капроновый. *Нәҙек капрон. Капрон ау. Капрон бау. Капрон еп.*

2. Шулептән эшләнгән туҡыма. □ Капрон *(ткань из волокна).* / Капроновый. *Аҡ капрон. Капрон күлдәк. Капрон ойоҡ.* ■ *Бик ҡупшы кейенеп йөрөргә ярата, хатта ул [Зөбәржәт] эшкә лә яҡшы күлдәк, туфли кейеп, сәскәле капрон яулыҡ бәйләп килә.* Н. Мусин.

3. *һөйл.* Шулептән бәйләнгән ойоҡ. □ Капрон *(чулки). Капрон кейеү.* ■ *Ул [Таңсулпан] сәсен ыҡсым күн курткаһының тышына сығарған, эре күҙәнәкле ҡара капрон менән еңел туфли кейгән.* Н. Мусин.

КАПРОНЛЫ (Р.: капроновый; И.: kapron; Т.: kapron) *с.*

Капрон ҡатнашҡан, капроны булған. □ Капроновый. *Капронлы туҡыма. Капронлы еп. Капронлы ойоҡ.*

КАПСУЛА [рус. < лат. *capsula* 'бәләкәй ҡап'] (Р.: капсула; И.: capsule; Т.: kapsül) *и.*

1. *мед.* Эсенә дарыу һалып ҡуша йотоу өсөн желатиндан һ. б. матдәнән яһалған еңел ирей торған көп. □ Капсула *(оболочка лекарства). Капсуланы һыу менән йотоу. Дарыулы капсула.*

2. *анат. ҡар.* **көп 2.**

3. *тех.* Герметик ябылған һауыт рәүешендәге нәмә. □ Капсула *(герметическое вместилище). Катапультланған капсула.*

КАПСЮЛЬ [рус. < лат. *capsula*] (Р.: капсюль; И.: percussion cap; Т.: kapsol) *и.*

Патрон, туп, мина эсендәге шартлатҡысты тоҡандырыусы матдәле ҡалпаҡса. □ Капсюль. *Патрон капсюле. Снаряд капсюле.* ■ *Әсәһе сығып китеүе булған, Әсләм атаһының ҡороулы мылтығынан бер патрон алып, ҡаҙаҡ менән капсюленә һуҡҡан. Патрон шартлаған.* Картотека фондынан. *Уларҙа [балаларҙа] һаман балалыҡ, төрлө уйынсыҡтар менән мауығыусанлыҡ бар: кеҫәләрендә әллә ни тиклем патрон, обоймалар, снаряд баштары, бомба капсюлдәре йөрөтәләр.* Д. Юлтый.

КАПТАЖ [рус. < фр. *captage*] (Р.: каптаж; И.: captation, capping; Т.: toplama) *и. тех.*

Ер аҫты һыуын, нефтте, газды сығарыу эштәрендә торба менән бетон ҡойонан торған махсус ҡоролма. □ Каптаж. / Каптажный. *Каптаж ҡойоһо.*

КАПТАЖЛАУ (каптажла-) (Р.: каптировать; И.: capture; Т.: toplamak) *ҡ.*

Каптаж ҡуйыу. □ Каптировать, производить каптаж. / Каптирование. *Шишмәне каптажлау. Каптажлау эшен башҡарыу.*

КАПТЕНАРМУС [рус. < фр. *capitaine d'armes*] (Р.: каптенармус; И.: quartermaster;Т.: levazım subayı) *и. хәрби.*

Ғәскәрҙә аҙыҡ, кейем-һалым, ҡорал менән тәьмин итеү һәм уларҙы һаҡлау эшен башҡарыусы кеше. □ Каптенармус. *Каптенармус булып хеҙмәт итеү.* ■ *Алынған нәмәләрҙе яҙып тороу өсөн шул уҡ йортта йәшәүсе каптенармусты саҡырып сығарҙылар.* И. Насыри.

КАПТЁРКА [рус.] (Р.: каптёрка; И.: depot, store room; Т.: deppoy) *и.*

1. Хәрби частарҙа кейем-һалым, ҡорал һәм башҡа нәмәләрҙе һаҡлау урыны. □ Каптёрка. *Каптёрканан ҡорал алыу.*

2. Эшселәрҙең йылыныу, ял итеү урыны. □ Каптёрка.

КАПЮШОН [рус. < лат. *cappa* ‘баш кейеме’] (Р.: капюшон; И.: hood; Т.: gabin, kapüşon) *и.*

Кейем яғаһына ҡуша беркетелгән баш кейеме; башлыҡ. □ Капюшон. *Плащ капюшоны. Капюшонды күтәреү.* ■ *Егеттәр плащтарының капюшондарын күтәреп, ҡыуышты нығытырға тотондолар.* Ф. Лоҡманов.

КАРАБИН [рус. < фр. *carabine*] (Р.: карабин; И.: carabine; Т.: filinta, karabina) *и.*

1. Ҡыҫҡа көбәкле винтовка төрө. □ Карабин *(род винтовки). Карабиндан атыу.* ■ *Ибрай оҙаҡ уйлап торманы, урамда ятҡан казак эргәһенә йүгереп барҙы, уның карабинын алды, ҡылысын елкә аша кейҙе.* А. Таһиров. *Тәкбиров карабинын яурынынан алып, Гөлсөмгә һонды.* Н. Мусин.

2. Механик эләктергес, ҡыҫтырғыс. □ Карабин *(зажим, зацепка). Карабин менән эләктереү. Тимер карабин.*

КАРАБИНСЫ (Р.: карабинёр; И.: car(a) bineer; Т.: karabinalı asker) *и.*

Карабин менән ҡоралланған һалдат. □ Карабинёр. *Карабинсы булыу.*

КАРАКАТИЦА [рус.] (Р.: каракатица; И.: cuttlefish; Т.: supya) *и. зоол.*

Хәүефле ваҡытта һыуға көрән буяу сығарып йәшенә торған ҡыҫҡа һәрмәүесле диңгеҙ әкәм-төкәме. □ Каракатица *(морской моллюск)* (лат. *Sepia apama*).

КАРАКҮЛ *и. ҡар.* **ҡаракүл.**

КАРАМЕЛЬ [рус. < фр. *caramel*] (Р.: карамель; И.: caramel; Т.: kavrulmuş şeker, karamela) *и.*

1. Эсе баллы ҡаты кәнфит. □ Карамель. *Сейә карамеле. Карамель һурыу.*

2. Көйҙөрөлгән шәкәр. □ Карамель.

КАРАНДАС [рус.] *и. ҡар.* **ҡырандас.**

КАРАННАЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **үгеҙбалыҡ.**

КАРАНТИН [рус. < фр. *quarantaine*] (Р.: карантин; И.: quarantine; Т.: карантин) *и.*

1. Киҙеү ауырыуҙары таралмаһын өсөн, сирлеләрҙе һәм улар менән аралашыусыларҙы ваҡытлыса айырыу сараһы. □ Карантин *(временная изоляция больных).* / Карантинный. *Бешмә карантины. Карантин ваҡыты. Карантинда тотоу. Карантин иғлан итеү.* ■ *Бешмәгә ҡаршы алышыс рәүештә карантин иғлан ителә, уны бөтөрөү саралары күрелә.* Ф. Ғиләжев. *[Кәләмдир:] Ғәфү итегеҙ... Иптәштәр, ауылда карантин иғлан ителде. Бер кемде индермәҫкә, бер кемде сығармаҫҡа!* Ә. Мирзаһитов.

2. Киҙеү таралған ерҙән килгән кеше һәм нәмәләрҙе тикшереү урыны. □ Карантин *(санитарный пункт).* / Карантинный. *Карантинда тороу.* ■ *Самара станцияһының ветеринария хеҙмәте уны [Таһирҙы] карантинда ҡалдырҙы, .. иң күбе аҙна-ун көнгә тотҡарланыр.* Й. Солтанов.

КАРАОКЕ [рус. < япон. *kara* ‘буш’ + *okesutora* ‘оркестр’] (Р.: караоке; И.: karaoke; Т.: karaoke) *и.*

1. Музыкаль фонограммаға һәм йырҙың һүҙҙәре менән субтитрҙар бирелгән видеоклипҡа популяр йырҙарҙы башҡарыу. □ Караоке.

2. Шул рәүешле йырҙар башҡарыу өсөн тәғәйенләнгән электрон музыкаль ҡулайлама. □ Караоке.

КАРАП [рус.] (Р.: корабль; И.: ship; Т.: gemi) *и.*

1. Диңгеҙҙә йөҙә торған ҙур судно. □ Корабль *(крупное морское судно). Сауҙа карабы. Пассажирҙар карабы. Йөк карабы.* ■ *Тулҡындарҙы яра-яра карап йөҙә Балтик буйлата.* Ә. Вәли. *Төндәрен диңгеҙҙә барғанда, караптың нәк артында, винт аҫтынан ҡайнап урғылған һыуҙың өҫтө күҙ күреме офоҡҡаса һыҙатланып ҡыҙыл нурға мансыла.* Й. Солтанов. *Ҙур диңгеҙҙә ҙур караптар йөҙөргә тейеш.* Д. Бүләков.

2. Ҡеүәтле осоу аппараты. □ Корабль *(летательный аппарат). Космос карабы.* ■ *Космосты өйрәнеү өсөн осороп ебәрелгән караптар һәм спутниктар төндәрен асыҡ күренә.* Ф. Мәҡсүтов.

КАРАТ [рус. < ит. *carato*] (Р.: карат; И.: carat; Т.: kırat) *и.*

1. Аҫыл таштарҙың ауырлығын үлсәү берәмеге. □ Карат. *Ике каратлы алмас ташы.*

2. Иретмәлә алтын миҡдары. □ Карат.

КАРАТЭ [рус. < япон. *karate* ‘буш ҡул’] (Р.: каратэ; И.: karate; Т.: karate) *и.*

Үҙ-үҙеңде ҡоралһыҙ һаҡлау көрәш төрө. □ Каратэ. *Каратэ секцияһына йөрөү. Каратэ ярышында ҡатнашыу.*

КАРАУАТ [рус.] (Р.: кровать; И.: bed; Т.: yatak) *и.*

Оҙон рамға тояҡтар беркетелеп эшләнгән, өҫтөнә түшәк, япма һалып йоҡлау йыһазы. □ Кровать. *Ағас карауат. Тимер карауат. Йыйылмалы карауат. Ике ярыслы карауат. Балалар карауаты. Ике кешелек карауат.* ■ *Тәнзилә әбей аяҡтарын сисеп ташланы ла ишек төбөндә торған ағас карауатҡа менеп ятты.* М. Тажи. *Сәлимә йөҙө менән аҡ одеял ҡапланған карауатҡа ауҙы.* Ғ. Хәйри.

КАРАУАТ АЯҒЫ (Р.: кружева; И.: laces; Т.: dantel) *и. диал.*

Карауат япмаһы аҫтынан ҡуйылған селтәр. □ Кроватные кружева, прикрывающие пространство от покрывала до пола.

КАРБАМИД [рус. < лат. *carbo* ‘күмер’] (Р.: карбамид; И.: carbamide; Т.: karbamit) *и. махс.*

Тере йәнлектәр организмында, шул иҫәптән кешелә лә, аҡһым алмашыныуынан барлыҡҡа килгән азотлы кристаллик матдә *(тәү таҡҡыр бәүелдә табыла).* □ Карбамид. *Карбамид ыҫмалаһы. Карбамид менән ашлау.*

КАРБИД [рус. < лат. *carbo* ‘күмер’ + гр. *cidos* ‘төҫ’] (Р.: карбид; И.: carbide; Т.: karbit) *и. хим.*

Металл йәки металлоид менән углерод берләшмәһе. □ Карбид. *Кальций карбиды. Тимер карбиды. Карбид лампаһы.*

КАРБОЛКА [рус.] *и. һөйл. ҡар.* **карбол һабыны.**

КАРБОЛ КИСЛОТАҺЫ [рус. < лат. *carbo* ‘күмер’ + *oleum* ‘май’] (Р.: карболовая кислота; И.: carbolic acid; Т.: asit fenik) *и. мед.*

Дезинфекция һәм башҡа өсөн ҡулланылған әсе шыйыҡса. □ Карболовая кислота; фенол.

КАРБОЛ ҺАБЫНЫ (Р.: карболовое мыло; И.: carbol soap; Т.: fenol sabunu) *и.*

Карбол кислотаһы ҡушылған һабын. □ Карболовое мыло.

КАРБОН [рус. < лат. *carbo (carbonis)* ‘күмер’] (Р.: карбон; И.: carbon; Т.: karbon) *и. геол.*

Таш күмер дәүере *(таш күмер ятҡылыҡтары барлыҡҡа килгән осор).* □ Карбон; каменноугольный период, каменноугольная система. *Түбәнге карбон. Юғарғы карбон.* ■ *Арлан, Саҡмағош райондарында иһә нефть карбон ҡатламдарының ҡомташтарында һәм эзбизташтарында урынлашҡан.* Картотека фондынан. *Ер аҫты байлыҡтарын эҙләүселәрҙең күп көс һалыуы арҡаһында 1937 йылдың 10 майында Туймазы тирәһендә аҫҡы карбондың күмерле ҡатламынан нефть табылды.* Интернет селтәренән.

КАРБОНАД [рус. < фр. *carbonade*] (Р.: карбонад; И.: carbonade; Т.: kavrulmuş domuz eti) *и.*

Һарымһаҡ һәм башҡа тәмләткестәр менән ҡыҙҙырылған һөйәкһеҙ суҡа ите. □ Карбонад.

КАРБОНАТ [рус. < лат. *carbo (carbonis)* ‘күмер’] (Р.: карбонат; И.: carbonate; Т.: fahmiyet, karbonat) *и.*

1. *хим.* Күмер кислотаһының урта тоҙҙары *(сода, поташ һ. б.).* □ Карбонат *(соль углекислоты).* / Карбонатный. *Натрий карбонаты.*

2. *хим., геол.* Металдар менән күмер кислотаһы ҡушылып барлыҡҡа килгән минералдарҙың атамаһы. □ Карбонат *(углекислотные минералы).* / Карбонатный. *Тәбиғи карбонаттар.*

КАРБОНАТЛЫ (Р.: карбонатный; И.: carbonate; Т.: karbonat) *с. махс.*

Составында карбонат булған. □ Карбонатный. *Карбонатлы тупраҡ. Карбонатлы тоҡомдар.* ■ *Күсмә урман-дала зонаһында урыны-урыны менән уңдырышлы ҡара тупраҡ һәм карбонатлы тупраҡ осрай.* «Башҡортостан», 12 октябрь 2009.

КАРБОНЛАУ (карбонла-) (Р.: карбонизировать; И.: carbonate; Т.: karbonatlamak) *ҡ. махс.*

Иретмәләрҙе, шыйыҡсаларҙы углекислый газ менән эшкәртеү. □ Карбонизировать. // Карбонизация.

КАРБОРУНД [рус. < лат.] (Р.: карборунд; И.: carborundum; Т.: zımpara, korindon) *и. махс.*

Кремний менән углерод берләшмәһе, бик ҡаты матдә (*утҡа сыҙамлы нәмәләр яһау, тау тоҡомдарын бырауълау, ҡайрау өсөн ҡулланыла*); кремний карбиды. □ Карборунд. *Карборундтан яһалған бырау.*

КАРБОФОС [рус.] (Р.: карбофос; И.: malathion; Т.: tarımsal alanda insektisid olarak kullanılan organik bir fosfor bileşiği) *и. вет.*

Зарарлы бөжәктәрҙе ағыулау өсөн ҡулланылған препарат. □ Карбофос. *Карбофос менән эшкәртеү.*

КАРБУЗ *и. диал. ҡар.* **ҡарбуз.**

КАРБУНКУЛ [рус. < лат. *carbunculum* ‘бәләкәй күмер’] *и. ҡар.* **ҡуш сиҡан.**

КАРБЮРАТОР [рус. < фр. *carburateur*] (Р.: карбюратор; И.: carburet(t)or; Т.: karbüratör) *и.*

Эске януулы двигателдәрҙә шыйыҡ яғыулыҡ менән һауанан яныусан ҡушылма барлыҡҡа килтерә торған яйланма. □ Карбюратор. / Карбюраторный. *Карбюраторҙы таҙартыу. Карбюратор заводы.* ■ *Боҙоҡ карбюратор — яғыулыҡ-майлау материалдарын артыҡ тотоноуҙың сәбәбе булыуын онотмағыҙ.* «Башҡортостан», 18 август 2010. *[Сергей:] Эштән сыҡҡан карбюраторҙы ғына йыйып эшкә яратҡанда ла, ғорурланып ҡуяһың. Ә ул карбюратор түгел — ҡеше.* И. Абдуллин.

КАРБЮРАТОРЛЫ (Р.: карбюраторный; И.: carburetor, carburettor; Т.: karbüratörlü) *с.*

Карбюраторы булған, карбюратор менән эшләгән. □ Карбюраторный. *Карбюраторлы двигатель.*

КАРДАН [рус. < ит. *Cardano* ‘итальян математигы Дж. Кардано фамилияһынан’] (Р.: кардан; И.: cardan; Т.: kardan) *и. тех.*

Үҙәктәре тап килмәгән осраҡта бер күсәрҙең әйләнеү хәрәкәтен икенсе күсәргә уҙғарыу механизмы йәки шул механизмдың күсәре. □ Кардан. / Карданный. *Кардан күсәре.* ■ *Кардандың прокладкаһын алмаштырырға кәрәк.* Н. Мусин.

КАРДИНАЛ I [рус. < лат. *cardinalis* ‘баш’, ‘төп’] (Р.: кардинал; И.: cardinal; Т.: kardinal) *и. дини.*

Католиктар сиркәүендә папанан һуң иң юғары рухани дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. □ Кардинал *(духовное лицо).*

КАРДИНАЛ II [рус. < лат.] (Р.: кардинал; И.: cardinal; Т.: Kardinal lorisi) *и. зоол.*

Америка ҡитғаһында таралған һайраусы ҡош. □ Кардинал *(певчая птица)* (лат. *Cardinalis*).

КАРДИНАЛЬ [рус. < лат. *cardinalis* ‘баш, төп’] (Р.: кардинальный; И.: cardinal; Т.: esaslı) *с. ким.*

Үтә мөһим, иң әһәмиәтле. □ Кардинальный. *Кардиналь мәсьәлә. Кардиналь үҙгәрештәр. Кардиналь сара ҡулланыу.*

КАРДИО- (Р.: кардио-; И.: cardio-; Т.: kardiyo-)

Ҡушма һүҙҙәр составында «йөрәк» мәғәнәһендәге һүҙ (мәҫәлән, *кардиология, кардиолиз, кардионевролог*). □ Кардио- *(первая часть составных слов, обозначающих отнесённость к сердцу человека).*

КАРДИОГРАММА [рус. < гр. *kardia* ‘йөрәк’ + *gramma* ‘хәреф’] (Р.: кардиограмма; И.: cardiogram; Т.: kardiyogram) *и. мед.*

Махсус ҡорамал аша яҙып алынған, йөрәк тибешен күрһәткән һыҙма. □ Кардиограмма. *Кардиограмма тикшереү. Кардиограмма төшөрөү.*

КАРДИОГРАФ [рус. < гр. *kardia* ‘йөрәк’ + *grapho* ‘яҙыу’] (Р.: кардиограф; И.: cardiograph; Т.: kardiyograf) *и. мед.*

Йөрәк тибешен теркәүсе прибор; физиологик тикшереүҙәрҙә ҡулланыла. □ Кардиограф. *Яңы кардиограф ҡуйыу. Ультра тауыш кардиографы.*

КАРДИОГРАФИЯ [рус. < гр. *kardia* ‘йөрәк’ + *grapho* ‘яҙыу’] (Р.: кардиография; И.: cardiography; Т.: kardiyografi) *и. мед.*

1. Йөрәк эшсәнлеген график һүрәткә ҡарап өйрәнеү. □ Кардиография *(раздел медицины).* / Кардиографический. *Кардиография буйынса белемде камиллаштырыу.*

2. Йөрәк эшмәкәрлегенән килгән күкрәк һелкенеүенең график һүрәте. □ Кардиография *(графика). Кардиографияны тикшереү.*

КАРДИОИДА [рус. < гр. *kardia* 'йөрәк'] (Р.: кардиоида; И.: cardioid, heart shaped curve; Т.: kardioit) *и. мат.*

Алгебра өлкәһендәге дүртенсе дәрәжәләге кәкре һыҙыҡ төрө *(йөрәккә оҡшаған).* □ Кардиоида. *Кардиоида һыҙыу.*

КАРДИОЛОГ [рус. < гр. *kardia* 'йөрәк' + *logos*] (Р.: кардиолог; И.: cardiologist; Т.: kardioloji uzmanı) *и. мед.*

Йөрәк ауырыуҙары табибы. □ Кардиолог. *Кардиологҡа күренеү. Кардиолог кәңәше.*

КАРДИОЛОГИЯ [рус. < гр. *kardia* 'йөрәк' + *logia*] (Р.: кардиология; И.: cardiology; Т.: kardiyoloji) *и.*

Медицинаның йөрәк, ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмау һәм дауалау ысулдарын өйрәнеүсе бүлеге. □ Кардиология. / Кардиологический. *Кардиология бүлегендә дауаланыу. Кардиология үҙәге. Кардиология шифаханаһы.*

КАРҘЫ *и. диал. ҡар.* **саңдау.**

КАРЕ I [рус. < фр. *carre*] (Р.: каре; И.: square; Т.: kare) *и. хәрби.*

XIX быуат уртаһына тиклем атлылар һөжүмен бөтә яҡтан да кире ҡағыу маҡсаты менән йәйәүле ғәскәр һалдаттарын дүртмөйөшләп теҙеү. □ Каре *(боевое построение пехоты четырёхугольником).*

КАРЕ II [рус. < фр. *carré*] (Р.: каре; И.: style of wormen's hair-do; Т.: kare) *и.*

1. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың причёскаһы төрө. Каре *(стиль дамской стрижки). Сәсте каре итеп киҫтереү.*

2. Ҡатын-ҡыҙҙар күлдәгенең дүртмөйөш яға уйымы. □ Каре *(квадратный вырез ворота женского платья).*

КАРЕЛ (Р.: карел; И.: Karel; Karelian; Т.: Karelyalı) *и. этн.*

Фин телдәренең береһендә һөйләшкән Карелияның төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе. □ Карел. / Карельский. *Карел халҡы. Карел ҡатыны. Карел теле.*

КАРЕЛ ҠАЙЫНЫ (Р.: карельская берёза; И.: Karelian birch; Т.: Karelya huşu) *и. бот.*

Карелияла таралған ҡайындың бер төрө. □ Карельская берёза (лат. *Betula verrucosa*).

КАРЕТА [рус. < пол. *kareta*] *и. ҡар.* **көймә.** ■ *Беҙҙең карета менән йөк арбаһын паромға индерә башланылар, ә үҙебеҙгә еңел йөрөй торған ҙур кәмә бирҙеләр.* Картотека фондынан.

КАРЕТКА [рус.] (Р.: каретка; И.: carriage, frame; Т.: şaryo) *и.*

Ҡайһы бер механизмдарҙың шыуып йөрөүсе өлөшө *(яҙыу, бәйләү машинкаларында).* □ Каретка.

КАРИАТИДА [рус. < гр. *karyatis*] (Р.: кариатида; И.: caryatid; Т.: kadın şeklindeki taş sütun) *и. архит.*

Ҡатын-ҡыҙ рәүешендәге терәк скульптура, колонна. □ Кариатида. *Боронғо грек кариатидалары. Мәрмәр кариатида.*

КАРИЕС [рус. < лат. *caries* 'серек'] (Р.: кариес; И.: tooth decay; Т.: diş çürümesi) *и. мед.*

Теш һөйәгендәге ҡаты туҡыманың серееүе. □ Кариес. *Теш кариесы. Тәрән кариес. Киҫкен кариес. Кариестан дауалау.*

КАРИЕСЛЫ (Р.: кариозный; И.: carious; Т.: irinli, çürük) *с. мед.*

Кариес булған, серегән. □ Кариозный. *Кариеслы теш. Кариеслы ҡыуышлыҡ.*

КАРИКАТУРА [рус. < ит. *caricare* 'артыҡ тейәү'] (Р.: карикатура; И.: caricature; cartoon; Т.: karikatür) *и.*

1. Сатирик йәки юмористик характерҙағы рәсем, һүрәт. □ Карикатура *(рисунок).* / Карикатурный. ■ *Ул [Р. Ғүмәров] яһаған ҡыҙыҡлы карикатуралар һалдаттарҙың күңелен күтәрә, дошманға ҡарата нәфрәттәрен көсәйтә.* Картотека фондынан. *Стеналарға йыуан ҡорһаҡлы буржуйҙарҙы мыҫҡыл итеп эшләнгән төрлө карикатуралар, һүрәттәр һәм плакаттар йәбештерелгән.* Я. Хамматов.

2. *күсм.* Ысынбарлыҡҡа тап килмәгән, көлкөлө килеп сыҡҡан оҡшашлыҡ. □ Карикатура *(смешное, убогое подобие кого-л., чего-л.).*

КАРИКАТУРАЛАШТЫРЫУ (карикатуралаштыр-) (Р.: нарисовать карикатуру; И.: draw a cartoon; Т.: karikatürleştirmek) *и.*

Кире сифаттарҙы сатирик йәки юмористик характерҙа тасуирлау. □ Нарисовать карикатуру, создать карикатуру. *Образды карикатуралаштырыу.*

КАРИКАТУРСЫ (Р.: карикатурист; И.: caricaturist; cartoonist;Т.: karikatürcü) *и.*

Карикатура яһаусы рәссам. □ Карикатурист. *Оҫта карикатурсы.*

КАРИКАТУРСЫЛЫК (карикатурсылығы) (Р.: занятие карикатурой; И.: cartoonist business; Т.: karikatürcülük) *и.*

1. Карикатуралар төшөрөү шөғөлө, эше. □ Занятие карикатурой, карикатура. *Карикатурсылыҡ менән мауығыу.*

2. Сәнғәттә карикатуралаштырыу күренеше. □ Карикатура *(в искусстве).*

КАРКАС [рус. < ит. *carcassa*] (Р.: каркас; И.: frame(work); Т.: iskelet, karkas) *и.*

Берәй ҡоролманың, бинаның һ. б. металдан, тимер-бетондан йәки ағастан эшләнгән һөлдәһе. □ Каркас. / Каркасный. *Мунсаның каркасы. Караптың каркасы. Тимер-бетон каркас. Ағас каркас.*

КАРЛИК [рус.] *и. ҡар.* **кәрлә.**

КАРМА [рус. < санскр. *karma* 'ғәмәл'] (Р.: карма; И.: karma; Т.: karma) *и.*

1. Индуизм һәм буддизмда: үткәндә башҡарылған бөтә ғәмәлдәр өсөн ғәҙел түләү принцибы; хәҙерге тормош һәм киләсәк тыуыу уға ярашлы билдәләнелә. □ Карма. / Кармический. *Карма законы.*

2. Яҙмыш, тәҡдир. □ Карма. / Кармический. *Үҙеңдең кармаңа буйһоноу.*

КАРМАЗИН [ғәр. قرمزى] (Р.: кармазин; И.: crimson; Т.: koyu kırmızı dokuma) *и.*

Бурлат ҡыҙыл төҫтәге буҫтау. □ Кармазин. / Кармазиновый, кармазинный. *Кармазиндан тегеү. Кармазин бишмәт. Кармазин яға.* ■ *Кармазинкәй яға, ай, күк сәкмән, килбәтһеҙ ҙә иргә килешмәй.* Халыҡ йырынан.

КАРМАНАЙ [рус. *карманный*] *и. диал. ҡар.* **кулъяулыҡ.**

КАРМАНЙЫЛ *и. диал. ҡар.* **кармазин.**

КАРНАВАЛ [рус. < фр. *carnaval*] (Р.: карнавал; И.: carnival; Т.: karnaval) *и.*

1. Ҡайһы бер Европа һәм Латин Америкаһы илдәрендә үткәрелә торған яҙғы байрам. □ Карнавал *(праздник).* / Карнавальный. *Бразилия карнавалы. Карнавалда ҡатнашыу.*

2. Күмәк халыҡтың уйын-көлкө, маскарад менән күңел асыуы. □ Карнавал *(народное гулянье).* / Карнавальный. *Яңы йыл карнавалы. Карнавал кейеме.* ■ *Ушаков баҡсаһындағы лоунтеннис майҙансығы каток ҡа әйләндерелгән, унда ҡала байҙарының малайҙары һәм ҡыҙҙары Яңы йыл карнавалы уҙғаралар.* Х. Мохтар.

КАРОТАЖ [рус. < фр. *carottage*] (Р.: каротаж; И.: logging; Т.: geofizik inceleme) *и. геол.*

Бур тишеп үткән скважиналағы геологик тоҡомдарҙы геофизик яҡтан тикшереү. □ Каротаж. *Каротаж яһау. Каротаж һөҙөмтәләре.*

КАРОТАЖСЫ (Р.: каротажник; И.: logger; Т.: geofizik inceleme uzmanı) *и. геол.*

Каротаж буйынса белгес. □ Каротажник. *Тәжрибәле каротажсы.*

КАРОТЕЛЬ [рус. < лат. *carota* 'кишер'] (Р.: каротель; И.: carrot; Т.: havuç) *и. бот.*

Ҡыҫҡа йомро формалы кишер сорты. □ Каротель (лат. *Carota*). *Каротель сортын ултыртыу.*

КАРОТИН [рус. < лат. *carota* 'кишер'] (Р.: каротин; И.: carotene, carotin; Т.: karoten) *и.*

Йомортҡа һарыһында, һөттә һәм ҡайһы бер үҫемлектәр күҙәнәгендә була торған каротиноидтар төркөмөнә ҡараған ҡыҙғылт һары пигмент, организмға аҙыҡ менән инеп, А витаминына әйләнә. □ Каротин. *Каротинға бай йәшелсәләр.* ■ *Билдәле булыуынса, каротин малдың тиҙ үҫеүенә ярҙам итә.* Интернет селтәренән.

КАРОТИНЕМИЯ [рус.] (Р.: каротинемия; И.: carotenemia; Т.: karotenemi) *и. мед.*

Ҡанда каротиндың артыҡ булыуы. □ Каротинемия.

КАРП [рус.] *и. зоол. ҡар.* **һаҙан.**

КАРСТ [рус. < *нем. Karst* 'урын исеме'] (Р.: карст; И.: karst; Т.: karst) *и. геол.*

Тау тоҡомдарының һыуға иреп, мәмерйә, ҡыуышлыҡ, соҡор яһалыуы менән бәйле

күренештәр. □ Карст. / Карстовый. *Балсыклы карст. Карст катламы. Карст мәмерйәһе.* ■ *Мәмерйә үҙе лә ана шул тау йылғаһының, бик күп миллион йылдар буйынса карст тоҡомдарын ирелә-ирелә, үҙе өсөн яһаған юлдарынан барлыҡҡа килгән.* Ғ. Ибраһимов. *Ләкин был ерҙәрҙәге күлдәр аҫтындағы эҙбизташ тоҡомдарында карст мәмерйәләре йыш осрай.* Д. Бураҡаев.

КАРТ [рус. < ингл. *cart* 'арба'] (Р.: карт; И.: cart; Т.: ufak yarış arabası) *и. спорт.*

Мотоцикл двигателе ҡуйылған, кузовһыҙ кескәй уҙыш машинаһы. □ Карт. *Картта ярышыу. Картта йөрөү.*

КАРТА [рус. < фр. *carte*] (Р.: карта; И.: map; Т.: harita) *и.*

1. Бөтә Ер йөҙөнөң йәки уның өлөшөнөң, *ниндәйҙер* үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, бәләкәйләтеп эшләнгән һүрәтләнеше. □ Карта *(чертёж земной поверхности). География карталары. Топография картаһы. Физик карта. Контур картаһы. Сәйәси карта. Синоптик карта. Этнографик карта. Ҡоштарҙың миграция картаһы. Ҡаҙылма байлыҡтар картаһы. Үҫемлектәр картаһы.* ■ *Комиссар картаһын асты. Ары барыу мөмкин түгел. Ориентировка юҡ, белмәгән юл, төн ҡараңғы, картанан ҡарап булмай.* С. Әлибаев. *«Ярай, ағай, мин китәм. Әсәйемде ҡайтып күрәйем инде», — тине Ғиндулла, күлдәк аҫтына йәшергән тыуған ерҙәр картаһын йөрәге менән тойоуҙан елкенеп.* Й. Солтанов. *Картанан ҡарап ҡына белгән яҡтарға иҫәүәнләнеп сығып киткәйнем, бына хәҙер йылдан ашыу Төньяҡ боҙло океан яры буйында йәшәп ятам.* Н. Мусин.

2. *астр.* Күк йөҙөн сағылдырған һыҙма. □ Карта *(чертёж звёздного неба). Астрономик карта. Йондоҙҙар картаһы.*

3. Белгес тарафынан төрлө мәғлүмәт яҙыу өсөн графаларға бүленгән ҡағыҙ. □ Карта *(разграфлённый лист бумаги). Амбулатория картаһы. Шифахана картаһы. Технология картаһы. Санитария күҙәтеү картаһы.*

КАРТ-БЛАНШ [рус. < ингл. *carte blanche* 'аҡ бланк'] (Р.: карт-бланш; И.: carte blanche; Т.: açık kart) *и.*

1. *юр.* Бер кеше тарафынан икенсе кешегә тексын үҙенсә тултырыу хоҡуғы менән ҡул ҡуйып бирелгән таҙа бланк. □ Карт-бланш *(чистый подписанный бланк). Карт-бланш биреү.*

2. *күсм.* Ышаныусының ышанылған кешегә сикләнмәгән вәкәләттәр, эш итеүгә тулы ирек биреү документы. □ Карт-бланш *(неограниченные полномочия).*

КАРТВЕЛ (Р.: картвели; И.: Georgian; Т.: Gürcü) *и. этн.*

1. Грузиндарҙың ерле атамаһы. □ Картвели. *Картвел телдәре. Картвел халҡы.*

2. Киң мәғәнәлә: Кавказ аръяғы халыҡтары төркөмө *(грузин, лаз, мингрел һәм сван халыҡтары).* □ Картвели.

КАРТЕЛЬ [рус. < фр. *cartel*] (Р.: картель; И.: cartel; Т.: kartel) *и.*

Сәнәғәт, банк ойошмаларының килешеү нигеҙендә берләшеүе. □ Картель. *Картелдәр берләшмәһе. Нефть картеле. Эре картель.*

КАРТЕР [рус. < ингл. *carter*] (Р.: картер; И.: casing, receptacle; Т.: karter) *и. махс.*

Двигателдең механизмдарын зарарланыуҙан, саңдан һаҡлау өсөн яһалған ҡоролма. □ Картер. *Картерға май һалыу.* ■ *Трактор көйһөҙләнеп йонсотто. Тәүҙә ҡабынмайынса йөҙәтте, унан картерҙан май ағып маҙаға тейҙе.* Ғ. Лоҡманов.

КАРТЕЧЬ [рус. < гол. *kartecza*] (Р.: картечь; И.: case shot, grape shot; Т.: misket) *и.*

1. Яҡын араға атыу өсөн эсенә йомро пулялар тултырылған снаряд. □ Картечь, снаряд. *Картечь тубы.* ■ *Казак туптары ике яҡтан Оренбург пехотаһына картечь менән ата башланылар.* Картотека фондынан.

2. Һунар мылтығының ҙур йәҙрәһе. □ Картечь, пуля. *Картечь менән яһау.* ■ *Сергей Васильевич мылтыҡ алып килде, уны картечь яһауы менән ҡорҙо һәм, резина итеге менән һыуға кереп, суртанға төбәп атып ебәрҙе.* Д. Бураҡаев.

КАРТИНА [рус.] *и.*

1. *ҡар.* **һүрәт.**

2. *һөйл. ҡар.* **кинофильм.**

3. *күсм.* Күҙ алдындағы күренеш. □ Картина, видение. ■ *Исмәғил ошо күңелле йәшлек*

дәүеренең матур картиналарын, буласаҡ һылыу еңгәһен дә күҙ алдына килтереп, үҙҙәренең ҡапҡаһына ингән саҡта, оло юлдан сабып төшөп килгән пар туры ат уның иғтибарын алды. Һ. Дәүләтшина.

4. Драматик әҫәр бүлексәһе; күренеш. □ Картина *(часть драматического произведения). «Башҡорт туйы» спектакленең икенсе шаршауының беренсе картинаһы.*

КАРТИНГ [рус. < ингл. *carting*] (Р.: картинг; И.: carting; Т.: karting) *и. спорт.*

1. Карт машиналарында уҙыш ярышы. □ Картинг. *Картингта сығыш яһау. Картинг буйынса донъя чемпионаты.*

2. Карт машиналарында уҙғарылған ярыш урыны. □ Место для проведения соревнований по картингу.

КАРТОГРАММА [рус.] (Р.: картограмма; И.: cartogram; Т.: harita türü) *и.*

График юл менән *(штрихтар, төҫ ҡулланып)* биләмәләр буйынса *ниндәйҙер* статистик мәғлүмәттәр төшөрөлгән карта. □ Картограмма. *Халыҡтың тығыҙлыҡ картограммаһы. Агрохимия картограммаһы. Ер эштәре картограммаһы.*

КАРТОГРАФ [рус.] (Р.: картограф; И.: cartographer; Т.: haritacı) *и.*

Карта төшөрөү белгесе. □ Картограф. *Тәжрибәле картограф.*

КАРТОГРАФИК (Р.: картографический; И.: cartographic; Т.: haritacılık) *с.*

1. Картография өсөн, картографияға бәйләнешле. □ Картографический. *Картографик экспедиция. Картографик тамғалар.*

2. Географик карталар эшләп сығарыу менән шөғөлләнә торған. □ Картографический. *Картографик фабрика.*

КАРТОГРАФИЯ [рус. < гр.] (Р.: картография; И.: cartography; Т.: haritacılık) *и.*

Географик карталар төҙөү эше һәм шул туралағы фән. □ Картография. / Картографический. *Картография тамғалары. Картография фабрикаһы.*

КАРТОН [рус. < фр. *carton*] *и.* ҡар. **ҡатырға.**

КАРТОТЕКА [рус. < гр. *theke* 'йәшник'] (Р.: картотека; И.: card index; Т.: kartotek) *и.*

1. *Ниндәй ҙә* булһа мәғлүмәттәрҙе эсенә алған карточкаларҙың билдәле бер тәртиптәге йыйылмаһы. □ Картотека *(свод карточек). Китапхана картотекаһы. Яңы килгән китаптар картотекаһы. Картотека шкафы.* ■ *Зөһрә бөгөн .. китапхана китаптарын рәткә килтерергә, картотека кеүек нәмәләрҙе тултырып ҡуйырға тип ҡалғайны.* Н. Мусин.

2. *йыйн.* Шул карточкаларҙы һаҡлай торған тартмалар. □ Картотека *(ящики для карточек).*

КАРТОЧКА [рус.] (Р.: карточка; И.: card; Т.: kart) *и.*

1. *Ниндәйҙер* мәғлүмәт яҙыу өсөн дүрт мөйөшлө итеп киҫелгән ҡатырға киҫәге. □ Карточка *(для занесения каких-л. сведений, данных). Иҫәп карточкаһы. Карточкаға яҙыу.* ■ *Әҫәрҙең телен өйрәнеү буйынса уҡыусыларға өйҙә карточкалар яҙып килергә биреп ҡайтарырға ла мөмкин.* М. Ғималова. *Үҙе өҫтәл артына барып ултырҙы ла асығып ниндәйҙер бер ауырыуҙың карточкаһын тултырырға кереште.* Д. Бүләков.

2. Йәмғиәттең иҡтисади үҫешенең көрсөккә терәлеп, аҙыҡ-түлек, әйберҙәргә норма ҡуйылғанда, уларҙы билдәле бер тәртиптә алыу өсөн талондарға бүленгән бланк. □ Карточка *(талоны). Аҙыҡ карточкаһы. Икмәк карточкаһы.* ■ *Беҙҙең, студенттарҙың, донъя тотҡаһы ине бит ул саҡтарҙа икмәк карточкаһы!* Ф. Иҫәнғолов. *Әй карточкаңды юғалтһаң йә алдан алып ашап бөтһәң, ауыҙыңды сөйгә элеп, тешеңдең һыуын һурып ултыраһың.* Й. Солтанов.

3. *һөйл.* Фотография рәсеме; фото. □ Карточка *(фотокарточка). Карточкаға төшөү.* ■ *Альбомда Буранбайҙың карточкаларын Әлфиә гел үҙенең фотолары менән бер биткә ҡуйған.* Ф. Әсәнов. *[Атаһы:] Нәғимә, һин Аҡсәскәне матур итеп кейендереп ҡуй, мин ҡайтҡас, беҙ карточкаға төшөргә барырбыҙ, – тип сығып китте.* Б. Бикбай.

КАРТОЧКА СИСТЕМАҺЫ (Р.: карточная система; И.: food rationing; Т.: kart sistemi) *и.*

Аҙык-түлекте, тауарҙы карточка менән биреү системаһы. □ Карточная система. *Карточка системаһы индереү.*

КАРТРИДЖ [рус. < ингл. *cartridge* 'патрон'] (Р.: картридж; И.: cartridge; Т.: karma) *и. тех.*

Ниндәйҙер приборҙың эшендә ҡулланылған алыштырмалы контейнер, тотонола торған материалдар *(магнит таҫма, фотоплёнка, ҡара һ. б.)* менән кассета. □ Картридж. *Принтерҙың картриджы.*

КАРТУЗ [рус. < гол. *kardoes*] (Р.: картуз; И.: cap; Т.: kasket) *и.*

Күнҡағарлы (козырёклы), текә тирәсле ирҙәрҙең баш кейеме. □ Картуз. / Картузный. *Картуз күнҡағары.* ■ *Лотфулланың ҡапыл ситкә һикергән башынан төшкән картузы тәгәрмәс аҫтында ҡалып иҙелде.* Ф. Әсәнов. *[Шафик:] Бына мин шулай инемме ни, тип ҡаҡса битен һыпырҙы, картузын маңлайына батырыбыраҡ кейҙе.* Я. Хамматов.

КАРТУН (Р.: сторожка; И.: lodge; Т.: bekçi kulübesi, alacık) *и.*

Урман ҡарауылсыһы өйө. □ Сторожка, домик сторожа.

КАРТУПМӨР *и. диал. ҡар.* **картуф алмаһы.**

КАРТУФ [рус. < нем. *Kartoffel*] (Р.: картофель; И.: potatoe; Т.: patates) *и.*

1. Эт ҡарағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, тамырындағы йоморса, крахмаллы бүлбеләре ашау өсөн ҡулланылған баҡса үҫемлеге; бәрәңге. □ Картофель *(огородное растение).* / Картофельный. *Картуф күмеү. Картуф сәсеү. Картуф сәскәһе.* ■ *Ауыл осондағы кәртәләнгән картуф баҡсаһын үткәс, йылға буйында үҫкән ағастар шәүләһе күренде.* Я. Хамматов. *Ҡоролоҡ йылды улар картуфтың һәр төбөнә һыу ҡойоп үҫтерҙеләр.* Т. Ғарипова. *Әлеге урыҫ белештәргә барып төшкәс, кәртә артындағы картуф баҡсаларына күҙ һалдым. Ул замандарҙа беҙҙең яҡтарҙа картуф сәсеү булмағас, уның ҡайһылай үҫкәнен күрге килгәндер инде.* Н. Мусин.

2. Шул үҫемлектең ашарға яраҡлы бүлбеһе. □ Картофель *(клубни растения). Ҡыҙыл картуф. Һары картуф. Эре картуф. Ярмалы картуф. Картуф бәлеше. Картуф бешереү. Картуф ҡурыу.* ■ *Хәбибуллин апаһы бешергән ярмалы картуфтың тәмен дә татып ҡарамай юлға сыҡты.* Х. Ғиләжев. *«Һәйбәт ҡурылған!» — тип баһа бирҙе Сергей, картуфты арыш икмәге менән ашарға тотоноп.* И. Абдуллин. *Мәҙинә, иртәнсәктән ҡалған бер сынаяҡ бүрткән бойҙай һәм картуфты ҡабығы-ние менән ҡуша төйөп, игеҙәктәрҙең ауыҙына ҡаптыра башланы.* Т. Ғарипова.

КАРТУФ АЛМАҺЫ (Р.: плод картофеля; И.: potatoe fruit; Т.: patates) *и.*

Картуф сәскәһенең бәләкәй генә алма рәүешендәге емеше. □ Плод картофеля.

КАРТУФ БАҘЫ *и. диал. ҡар.* **мөгәрәп.**

КАРТУФ ГӨЛ (Р.: разновидность бегонии; И.: begonia; Т.: bir cins begonya) *и. бот. диал.*

Умырзая кеүек күк төҫтә сәскә атҡан гөл. □ Разновидность бегонии.

КАРТУФЛЫҠ (картуфлығы) (Р.: картофельное поле; И.: potatoe field; Т.: patates tarlası) *и.*

Картуф баҡсаһы. □ Картофельное поле. ■ *Картуф баҡсалары бер нисә сакрым ситтә. Киселёвтарҙың да картуфлығы бар — ун сотый.* Картотека фондынан. *Зиннәт тышҡа атылды, картуфлыҡ аша Юшатыр буйына сапты.* З. Ураҡсин.

КАРТУФ ОНО (Р.: картофельная мука; И.: potatoe flour; Т.: patates unu) *и.*

1. Кипкән картуфты тартып яһаған крахмал. □ Картофельная мука.

2. *һөйл.* Картуф крахмалы. □ Картофельный крахмал.

КАРУАН [фарс. کاروان] (Р.: караван; И.: caravan; Т.: kervan) *и.*

1. Йөк артып, аллы-артлы теҙелеп барған артмаҡлы хайуандар һәм кешеләр сафы. □ Караван. *Дөйә каруаны. Каруан башлығы. Каруан менән юлға сығыу. Каруан юлы.* ■ *Тиҙ үк әлеге юл сатына йәнә бер ҙур каруан килеп туҡтаған.* Әкиәттән. *Арҡа өҫтәренән каруан килә, Бохаранан түгел Хиуанан.* Халыҡ йырынан. *Бер офоҡто икенсегә бәйләп, сылбыр кеүек каруан һаҡ ҡына ырыҫ*

йөкләп, хәтер-үй артмаҡлап, үтеп бара тауҙар артмаҡлап. Т. Ғәниева. ● *Эт өрөр, каруан йөрөр.* Мәҡәл. *Каруан күсер — ут ҡалыр, халыҡ күсер — йорт ҡалыр.* Мәҡәл. *Юл белгән каруанға ҡушылмаҫ.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Аллы-артлы теҙелеп барған ҡоштар төркөмө. □ Стая. *Ҡоштар каруаны. Ҡаҙҙар каруаны.*

3. *күсм.* Бер-бер артлы теҙелеп барған караптар, машиналар төркөмө. □ Караван *(группа судов, машин). Караптар каруаны. Баржалар каруаны.*

КАРУАНСЫ (Р.: караванщик; И.: caravanner; Т.: kervancı) *и.*

Каруан менән барыусы кеше. □ Караванщик. ■ *Бейек кенә тауҙың ай башынан каруансылар килә Хиуанан.* Халыҡ йырынан. *Каруансылар ҡабаланып дөйәләренә йөктәрен артмаҡлай.* Н. Мусин. ● *Күлдең данын балыҡсы сығара, сүлдең данын каруансы сығара.* Мәҡәл.

КАРУАН СӘЙЕ (Р.: индийский чай; И.: Indian tea; Т.: Hint çayı) *и. иҫк.*

Көнсығыштан килтергән сәй; һинд сәйе. □ Индийский чай. *Каруан сәйе һатып алыу. Каруан сәйе эсеү.*

КАРУАН-ҺАРАЙ [фарс. كاروانسراى] (Р.: караван-сарай; И.: inn which accommodates caravans; Т.: kervan saray) *и.*

Каруан һәм каруансылар туҡтай торған йорт. □ Караван-сарай. ■ *Сәлимйән түҙмәне, йәшеренгән төйәгенән ҡубынып, ҡаса-боҫа, тигәндәй, Каруан-һарайға йүнәлде.* Й. Солтанов. *Каруан-һарайҙың таш ҡойма менән әйләндерелеп алынған, ҡуйы сирень һәм башҡа эре ағастар менән тулған ҙур баҡсаһына барып бер аҙ йөрөгәс тә баҡсаның арғы башынан, япраҡтар араһынан, көҙгө ай һалҡын ғына күтәрелә башланы.* Ғ. Хәйри. ● *Каруан күсһә лә, каруан-һарай — урынында.* Мәҡәл.

КАРУСЕЛСЕ (Р.: карусельщик; И.: merry-go-round operator; Т.: atlı karınca çalışanı) *и.*

Карусель әйләндереүсе, карусель хеҙмәткәре. □ Карусельщик. *Паркта каруселсе булып эшләү.*

КАРУСЕЛЬ [рус. < фр. *carrousel*] (Р.: карусель; И.: merry-go-round; Т.: atlı karınca, dolap) *и.*

1. Өҫтөнә аттар, кәмәләр һ. б. төрлө нәмә рәүешендәге ултырғыстар уратып ҡуйылған әйләнмәле түңәрәк ҡоролма. □ Карусель. / Карусельный. ■ *Әйләнә карусель, әйләнә, карусель ҡоролған хәйләгә.* М. Кәрим. *Бигерәк тә балалар кинәнде: улар сәғәттәр буйына каруселдә әйләнделәр, бәүелсәктәрҙә бәүелделәр, уйынсыҡ самолёттарға ултырып остолар.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 6, 2007.

2. *күсм. кар.* **калейдоскоп 2.** *Ваҡиғалар каруселе.*

КАРЦЕР [рус. < лат. *carcer*] (Р.: карцер; И.: punishment room; Т.: zindan hücresi) *и.*

Төрмәлә, хәрби казармаларҙа билдәләнгән режимды боҙоусыларҙы яңғыҙ тотоу өсөн махсус камера. □ Карцер. *Карцерға ябып ҡуйыу. Карцерҙа тотоу. Ҡараңғы карцер.*

КАРЬЕР I [рус. < фр. *carrière*] (Р.: карьер; И.: quarry; Т.: ocak) *и.*

Өҫтөн ҡаҙып файҙалы ҡаҙылма байлыҡтар сығарыу урыны. □ Карьер. *Ҡом карьеры. Күмер карьеры. Мәрмәр карьеры. Карьерҙа эшләү.* ■ *Рамазан Ниғмәтуллиндың экскаваторы асыҡ карьерҙың алтынсы баҫҡысында эшләй икән.* М. Хәйҙәров. *Фәриә, Шәмсиә, Бикә тигән ҡыҙҙар минең машинаға карьерҙан таш тейәп килтереп, шуны бушаталар.* Н. Мусин.

КАРЬЕР II [рус. < фр. *carrière*] (Р.: карьер; И.: gallop; Т.: dörtnal) *и.*

Аттың иң шәп сабышы. □ Карьер.

КАРЬЕРА [рус. < фр. *carrière*] (Р.: карьера; И.: career; Т.: kariyer) *и.*

1. *Ниндәйҙер* эшмәкәрлек өлкәһендә вазифа буйынса үрләү, абруй һәм дан ҡаҙаныу. □ Карьера *(продвижение в служебной деятельности). Карьера яһау.* ■ *Карьера хаҡында хыялланған йәш инспектор баш вата: тырышлығыңды, эш өсөн йән аямауыңды етәксе кешегә нисек күрһәтергә икән?* Ш. Насыров. *Әммә экономиканың әхлаҡ, иман үлсәмен асыҡламай тороп, уның әһәмиәтен, шулай уҡ Сәғәҙиевтең карьераһындағы бороҡмаларҙы ла аңлап булмай.* А. Абдуллин. *Ә, дөрөҫөн әйткәндә, уға [Ҡаҙнабаевҡа] юл бирергә лә мөмкин булыр ине, әммә уның карьера өсөн дер ҡалтырап*

торғанын күрә тороп, Арынбаҫаров быға юл ҡуя алмай. Д. Бүләков.

2. *Ниндәйҙер* бер өлкәләге эш, хеҙмәт. □ Карьера *(деятельность на каком-л. поприще). Хәрби карьера. Ғилми карьера.* ■ *[Әйүп:] Һуғыштан һуң хәрби карьеранан баш тартып (ә миңә ҙур карьера яһарға мөмкин ине) бала сағым өҙөлөп ҡалған, ата-әсәмдең ҡанына буялған ошо ергә ҡайттым.* Т. Ғарипова.

КАРЬЕРАСЫ (Р.: карьерист; И.: self seeker; Т.: kariyerist) *и.*

Карьеризмға бирелгән кеше. □ Карьерист. *Карьерасы әҙәм.*

КАРЬЕРИЗМ [рус. < фр. *carriere*] (Р.: карьеризм; И.: careerism self seeking; Т.: yükselme hırsı) *и.*

Шәхси уңыштар артынан ҡыуыу. □ Карьеризм. *Хеҙмәт карьеризмы.* ■ *[Нәғимә:] Ә мин беләм... Карьеризм арҡаһында килеп сыҡҡан ул.* Н. Асанбаев.

КАРЬЕРИСТ [рус. < фр. *carriere*] *и. ҡар.* **карьерасы**. ■ *[Ротов — Недосекаға:] Мин һине ҡурҡаҡ йәки карьерист кеше тип уйламай инем.* Н. Мусин.

КАСА [фарс. کاسه] (Р.: пиала; И.: mug, bowl; Т.: kupa) *и.*

1. Тар төплө, өҫ яҡҡа киңәйә барған тотҡаһыҙ сынаяҡ. □ Пиала. *Каса менән сәй эсеү.* ■ *Ире мискәне табынға килтереп ҡуйғас ҡына, ул бал һөҙгөс, каса, ижау алып килеп бирҙе.* Әкиәттән. *Күп тә үтмәй, Фәүзиә боҫо бәрелеп торған касаны килененә һуҙҙы ла төпкө бүлмәгә, Ихсанбай ятҡан яҡҡа йүнәлде.* Т. Ғарипова.

2. *диал.* Сепарат тәрилкәһе. □ Барабанная тарелка сепаратора.

КАСАК [рус. *косяк*] (Р.: швартов; И.: hawser, cord; Т.: palamar) *и. махс.*

Карапты, һалды тарттыра йәки ярға бәйләй торған йыуан арҡан. □ Швартов *(канат для закрепления плота или судна к берегу).* ■ *[Һалсылар] алтмыш метр оҙонлоғондағы сүс касаҡты канат аҫтынан уратып алдылар ҙа, ҡотороп аҡҡан ташҡын уртаһындағы ҡуҙланан аша тарттылар.* М. Тажи.

КАСАР [рус.] (Р.: косарь; И.: large knife; Т.: pala) *и. һөйл.*

Иҙән ҡырып йыуа торған ҙур бысаҡ. □ Косарь. *Касар менән ҡырып йыуыу.*

КАСАФАТ [ғәр. كثافت] (Р.: последствие *(чего-л. плохого)*; И.: consequence (of smth evil); Т.: sonuç) *и.*

Ниҙеңдер тәьҫиренән килгән насар һөҙөмтә; шауҡым. □ Последствие, результат *(чего-л. плохого). Һуғыш касафаты. Яңғыҙлыҡ касафаты.* ■ *Ситйылға буйы ла тамам яланғасланып ҡалған. Һуғыштар үткән мәлдәге бөлгөнлөк касафаты икәнен аңлауы ҡыйын түгел.* Ф. Иҫәнғолов. *Был әңгәмә лә ана шул өмә касафатынан килеп сыҡты.* С. Кулибай. *[Хөсәйен] шул ҡайғы касафатынан хатта бер аҙға руссаһын онотоп торҙо!* Т. Ғарипова.

КАСА ЯПРАҒЫ (Р.: чашелистик; И.: sepal; Т.: çanakyaprağı) *и. бот.*

Сәскә тажын тышҡы яҡтан уратып торған япраҡтар. □ Чашелистик (лат. *Calyx*).

КАСИР (Р.: нож для чистки ульев; И.: special kind of knife (used in bee-keeping); Т.: bıçak) *и. диал.*

Умартаның эсен ҡырыу өсөн ҡулланылған ҙур бысаҡ. □ Нож для чистки внутренности ульев. *Рамдарҙы касир менән ҡырыу.*

КАСКА [рус. < фр. *casque* < исп. *casco* 'баш һөйәге'] (Р.: каска; И.: helmet; Т.: kask) *и.*

Металл, пластмасса һ. б. эшләнелгән башты йәрәхәтләнеүҙән һаҡлаусы шлем формаһындағы баш кейеме. □ Каска. *Янғын һүндереүсе каскаһы. Һалдат каскаһы. Каска кейеү.* ■ *Бер нисә һалдатҡа каскаларын, штык осона элеп, өҫкә ҡалҡытырға ҡуша Коломбәтов.* Картотека фондынан. *Үткән һуғыш ҡомартҡыһы, ана, тимер каска ята алдымда: пуля тишеп үткән ошо каска ятмаһа, тим, әгәр был ерҙә, мин дә бәлки бында килмәҫ инем атай юлы буйлап ғүмерҙә.* Р. Тойғонов. *Ғабдулла күпме ваҡыт үткәнлеген дә онота, башынан каскаһы төшкәнен дә һиҙмәне.* Картотека фондынан.

КАСКАД [рус. < фр. *cascade*] (Р.: каскад; И.: cascade; Т.: kaskat) *и.*

1. Һикәлтә-һикәлтә рәүешендә ағып төшкән шарлауыҡ. □ Каскад *(водопад, система водопадов). Ғәҙелша каскады.*

2. Опереттала йыр менән башҡарыла торған ҡыҙыу темптағы бейеү. □ Каскад *(быстрый танец, сопровождаемый пением).*

3. Бер-бер артлы теҙелеп киткән бер төрҙәге ҡулайламалар, ҡоролмалар һ. б. □ Каскад *(группа однотипных устройств, сооружений). Бөрө, Быуа, Таныш йылғаларында һәм уларҙың ҡайһы бер ҡушымдарында колхоз ГЭС-тарынан торған каскадтары бар.* М. Хисмәтов.

4. *Ниҙеңдер* бер-бер артлы тиҙ үҙгәреше. □ Каскад *(стремительный поток чего-л.). Мәғлүмәт каскады. Донъя рекордтары каскады.*

КАСКАДЁР [рус. < фр. *cascadeur*] (Р.: каскадёр; И.: stuntman; Т.: dublör) *и.*

1. Циркта төрлөсә йығылып кеше көлдөрөүсе акробат. □ Каскадёр *(в цирке). Каскадёр сығышы.*

2. Кинофильм төшөргәндә хәүефле трюктарҙа актёрҙы алыштырыусы кеше. □ Каскадёр *(при съёмке фильма). Каскадёр профессияһы. Тәжрибәле каскадёр.*

КАСКАЛЫ (Р.: имеющий каску; И.: with a helmet; Т.: kasklı) *с.*

Каскаһы бар, каска кейгән. □ Имеющий каску. *Каскалы һалдат. Каскалы янғын һүндереүсе.*

КАСКЕТКА [рус. < фр. *casquette*] (Р.: каскетка; И.: sort of a cap; Т.: kasket) *и.*

Еңел фуражка төрө. □ Каскетка. *Каскетка кейеү. Балаға каскетка кейҙереү.*

КАСНУЙ [рус.] (Р.: косная лодка; И.: large ferry boat; Т.: gemi) *и. диал.*

Ҙур таҡта кәмә. □ Косная лодка, паромная лодка.

КАССА [рус. < ит. *cassa* 'йәшник'] (Р.: касса; И.: pay desk, cash desk; Т.: kasa) *и.*

1. Аҡса һәм ҡиммәтле нәмәләр һаҡлау өсөн махсус тимер ҡумта, шкаф. □ Касса *(ящик или шкаф для хранения денег и ценных бумаг). Кассаға бикләү.*

2. Һатып алыусыға алынған аҡса күләмен күрһәтеп талон бирә торған аппарат һәм шул аппарат ҡуйылған урын, кабина. □ Касса *(аппарат, на котором отпечатываются талоны и место, где стоит этот аппарат). Кассаға аҡса түләү.*

3. Ойошма, учреждениеның аҡса алыу-биреү, билет һатыу кеүек эштәрен башҡарған бүлеге һәм шул бүлек урынлашҡан урын, бүлмә. □ Касса *(отделение, где производятся денежные операции, помещение такого отделения). Театр кассаһы. Тимер юл кассаһы. Билет кассаһы.* ■ *Теге кеше кинотеатрға кергәс, Шәмси ҙә, күп уйлап тормайынса, тиҙ генә кассанан билет алып, залға инде.* Ғ. Хәйри. *Аҙаҡ, яңы рейсҡа билет ала алмағанда ла, Фәйрүзә касса ҡаршыһында илап күрһәтте.* Д. Буләков.

4. Ойошманың, учреждениеның ҡулаҡсаһы. □ Касса *(денежная наличность учреждения, предприятия). Кассаны барлау. Ҡырҡтырам тиһәң, ағасы юҡ, участкаларҙағы ярты кеше эшһеҙ йөрөй, эшләгәндәренә түләргә касса буш.* Н. Мусин.

5. *типогр. иҫк.* Типографик хәрефтәр һалынған бүлкәле-бүлкәле ҡумта; хәреф кассаһы. □ Касса *(ящик с набором шрифта).*

КАССА АППАРАТЫ (Р.: кассовый аппарат; И.: cash register; Т.: otomatik kasa) *и.*

Ҡулдан индерелгән аҡсаны ҡабул итеп, чек бирә торған ҡоролма. □ Кассовый аппарат. *Механик касса аппараты. Электрон касса аппараты. Чекты касса аппаратынан сығарыу. Касса аппараты чегы. Касса аппаратында эшләү.*

КАССАТОР [рус. < лат. *cassator*] (Р.: кассатор; И.: appellant; Т.: fesih veren) *и. юр.*

Кассация (2) биреүсе кеше. □ Кассатор. *Кассатор ғаризаһын ҡарау. Кассаторға яуап ҡайтарыу.*

КАССАЦИОН (Р.: кассационный; И.: appeal; Т.: fesih) *с.*

Кассацияға бәйләнешле. □ Кассационный. *Кассацион ғариза. Кассацион протест. Кассацион мөҙҙәт.*

КАССАЦИЯ [рус. < лат. *cassatio* 'юҡҡа сығарыу'] (Р.: кассация; И.: cassation; Т.: fesih) *и.*

1. *юр.* Суд хөкөмөнә риза булмайынса, юғары судҡа ялыу биреү һәм шуның нигеҙендә юғары судтың эште яңынан ҡарауы. □ Кассация *(пересмотр высшим судом судебных решений и приговоров). Кас-*

сация һорау. Кассация тәртибендә ялыу биреү. Кассация ваҡыты.

2. Суд ҡарарҙарын яңынан ҡарау тураһында ғариза; кассация ялыуы. □ Кассация *(заявление о пересмотре судебного решения). Кассация биреү.* ■ *Ғәбеш менән Нурый үҙҙәренең кассацияларын иртән үк тапшырҙылар.* Г. Әмири.

3. Һайлауҙарҙың һөҙөмтәһен законһыҙ тип табып, кире ҡаҡҡан ҡарар. □ Кассация *(признание выборов недействительными). Һайлауҙар кассацияһы. Һайлауға кассация яһау.*

КАССЕТА [рус. < фр. *cassette* 'бәләкәй ҡап'] (Р.: кассета; И.: cassette;Т.: kaset) *и.*

1. Фото йәки кино плёнкаһын яҡтылыҡтан һаҡлай торған һауыт. □ Кассета *(светонепроницаемый футляр для фото- и киноплёнки).* ■ *Мәхмүт яҡтылыҡ һиҙеүсәнлеге иң көслө пластинкалар һалынған кассеталарҙы алып, һәр һүрәтте, төрлө алыҫлыҡтан һәм төрлө мөйөштән тороп, ҡат-ҡат төшөрҙө.* Ф. Лоҡманов. *Альгис кистән үк кассетаға яңы плёнка һалып, фотоаппаратының объективын ҡоро сепрәк менән һөртөргә лә онотманы.* Ҡ. Ибәтуллин.

2. Эсендә магнитофон таҫмаһы булған ялпаҡ һауыт. □ Кассета *(коробка с магнитофонной лентой). Кассета уйнатыу.* ■ *Ул [Рәүф ағай] кескәй өҫтәлдәге магнитофонды барып асты, кассета һайлап алып ҡуйҙы ла уны әйләндереп ебәрҙе.* Н. Мусин.

КАССИР [рус. < ит. *cassa*] (Р.: кассир; И.: cashier; Т.: kasiyer) *и.*

Кассала (2—4) эшләүсе, касса хеҙмәткәре. □ Кассир *(работник кассы). Кассир булып эшләү. Кассир ҡатын-ҡыҙ.* ■ *Бер ай ҙа үтмәй, баш бухгалтер эштән китә, оҙаҡламай кассир, аңы алмашынып, психбольницаға эләгә, һеҙ ҙә эшегеҙҙе ташлайһығыҙ, — Илгиз һөйләүенән туҡтаны ла «гәйепләнеүсе»гә ҡараны.* Ә. Әминев. *Кассир справкаға күҙ йүгертеп сыҡты ла: «Эй-йе, йәш кенәһең бит әле», — тигәндәй, миңә ҡыҙғаныулы ҡараш ташлап алды.* Ш. Бикҡол.

КАСТА [рус. < порт. *casta* 'быуын'] (Р.: каста; И.: caste; Т.: sınıf) *и.*

1. Һиндостанда һәм ҡайһы бер көнсығыш илдәрендә сығышы, йолалары һәм йәмғиәттә булған хоҡуҡтары менән айырымланған ижтимағи төркөм. □ Каста *(замкнутая общественная группа, связанная происхождением, единством наследственной профессии и правовым положением своих членов). Брахмандар кастаһы. Түбән каста. Дини каста.*

2. *күсм.* Үҙҙәренең ҡатлам айырымлығын, башҡа өҫтөнлөклө төркөм мәнфәғәттәрен ныҡ һаҡлаусы йомоҡ ижтимағи төркөм. □ Каста *(сословная или профессиональная группировка). Эшлекле кешеләр кастаһы.* ■ *[Гәйнияр:] Ә-ә, бына нисек, һин кастаға буләһең икән кешеләрҙе.* Д. Бүләков.

КАСТАНЬЕТА [рус. < исп. *castanetas*] (Р.: кастаньета; И.: castanets; Т.: kastanyet) *и.*

Бау менән тоташтырылған ике ҡабырсаҡ рәүешендәге пластинкаларҙан торған музыка ҡоралы *(Испания, көньяҡ Италия һәм Латин Америкаһы илдәрендә бейегәндә шаҡылдатып ритм биреү өсөн ҡулланыла).* □ Кастаньета. *Кастаньета менән бейеү.*

КАСТЕЛЯНША [рус. < урта лат. *castellanus*] (Р.: кастелянша; И.: linen-keeper; Т.: çamaşıra bakan kadın) *и.*

Ятаҡхана, ҡунаҡхана кеүек йорттарҙағы урын-ер ҡаралдыһына хужа ҡатын. □ Кастелянша. *Кастелянша булып эшләү.*

КАСТЕТ [рус. < фр. *casse-tete* < *casser* 'ватыу' + *tete* 'баш'] (Р.: кастет; И.: knuckleduster; Т.: demir muşta) *и.*

Металл пластина рәүешендә усҡа кейә торған һуғышыу ҡоралы. □ Кастет. *Кастет менән һуғыу.*

КАСТИНГ [рус. < ингл. *casting*] (Р.: кастинг; И.: casting; Т.: rol dağıtımı) *и.*

Шоу-бизнеста кино, телевидение, театр өсөн башҡарыусыларҙы, актёрҙарҙы, мода кейемдәрен күрһәтеүселәрҙе, моделдәрҙе, манекенщицаларҙы һайлап алыу. □ Кастинг *(отбор исполнителей). Кастингта ҡатнашыу. «Башҡортостан» киностудияһы яңы проект өсөн кастинг үткәрә.*

КАСТОРКА [рус.] (Р.: касторка; И.: castor oil; Т.: hint yağı) *и.*

Кенә уты орлоғонан алынған май *(медицинала ҡулланыла).* □ Касторка. ■ *[Шөһ-*

рәт:] Улайһа, эшең мөшкөл. Ярамаған нәмә ашағанһың. Касторка эс. И. Абдуллин.

КАСТОРКА МАЙЫ *и. ҡар.* **касторка.**

КАСТРАТ [рус. < лат. *castratus*] *и. ҡар.* **алашар.**

КАТАКЛИЗМ [рус. < гр. *kataklysmos* 'туфан'] (Р.: катаклизм; И.: cataclysm; Т.: felâket) *и.*

Тәбиғәттә һәм кешелек йәмғиәтендә киҫкен, ҡапыл килеп сыҡҡан емергес үҙгәреш, һәләкәт. □ Катаклизм. *Тормош катаклизмы. Катаклизмға дусар булыу.*

КАТАКОМБА [рус. < ит. *catacomba* < урта лат. *catacumba*] (Р.: катакомбы; И.: catacomb; Т.: yeraltı mezarlığı) *и.*

1. Боронғо Рим империяһындағы эҙәрләнгән христиандарҙың ер аҫтындағы йәшенә, ғибәҙәт ҡыла торған урындары. □ Катакомбы *(обширные подземелья искусственного или естественного происхождения).*

2. Ер аҫтынан таш ватып сығарғанда барлыҡҡа килгән оҙон тар коридорҙар рәүешендәге юлдар. □ Катакомбы *(заброшенные каменоломни). Одесса катакомбалары.*

КАТАЛАЖКА [рус.] (Р.: каталажка; И.: nick, jail; Т.: zindan) *и. һөйл.*

Төрмә. □ Каталажка. *Каталажкала ултырыу. Каталажкаға ябыу.* ■ *Ниғмәтйән ҡартты шунда уҡ ҡулға алдылар һәм теге мулла менән икеһен волость идараһындағы каталажкаға — иҫке мунсаға — илтеп бикләнеләр.* Ғ. Хәйри.

КАТАЛИЗ [рус. < гр. *katalysis* 'ватыу, емереү'] (Р.: катализ; И.: catalysis; Т.: kataliz) *и.*

Катализатор ярҙамында химик реакцияның көсәйеүе йәки уның тиҙлегенең үҙгәреше. □ Катализ. *Ыңғай катализ. Кире катализ.*

КАТАЛИЗАТОР [рус. < гр. *katalysis*] (Р.: катализатор; И.: catalyzer; Т.: katalizör) *и. хим.*

Химик реакцияны тиҙләтә йәки аҡрынайта торған матдә. □ Катализатор. *Катализатор ҡулланыу. Шыйыҡ катализатор.*

КАТАЛИТИК [рус. < гр. *katalysis* 'емереү'] (Р.: каталитический; И.: catalytic; Т.: katalitik, katalizle ilgili) *с. хим.*

Катализға мөнәсәбәтле. □ Каталитический. *Каталитик реакция. Матдәнең каталитик үҙенсәлектәре.*

КАТАЛОГ [рус. < гр. *katalogos* 'исемлек'] (Р.: каталог; И.: catalogue;Т.: liste) *и.*

1. *Ниндәйҙер* бер билдә буйынса йыйылған предметтар исемлеге. □ Каталог *(список, перечень). Китап каталогы. Йондоҙ каталогы. Каталог төҙөү.*

2. Шундай исемлекте эсенә алған белешмә баҫма. □ Каталог *(справочное издание).* ■ *Исхаҡ хәҙрәт бик тулы каталогтар нәшер итә һәм яңы нәшриәт хаҡында хат аша ла хәбәр ебәрә торғайны.* Ә.-З. Вәлиди.

3. *инф.* Мәғлүмәт һаҡлау дискыһында, флеш-картала файлдарҙы туплаған тамғалы логик урын. □ Каталог. *Файлды каталогта һаҡлау. Каталогты юйыу. Буш каталог.*

КАТАЛОГ ТӨҘӨҮСЕ (Р.: каталогизатор *(составитель каталога)*; И.: cataloguer; Т.: katalogcu) *и.*

1. Бер төр нәмәләрҙең билдәле тәртиптә исемлеген төҙөүсе белгес. □ Каталогизатор *(составитель каталога). Каталог төҙөүсе булып эшләү.*

2. *инф.* Бер төр нәмәләрҙең билдәле тәртиптә исемлеген төҙөүсе компьютер программаһы. □ Каталогизатор.

КАТАМАРАН [рус. < там.] (Р.: катамаран; И.: catamaran; Т.: katamaran) *и.*

Ике корпустан һәм уларҙы тоташтырған палубанан торған судно. □ Катамаран. *Елкәнле катамаран. Катамаранда йөҙөү.* ■ *Һал яһап ағыусылар ҙа, автомашина тәгәрмәстәренең камераларын бергә уҡмаштырып, өҫтөнә иҙән һымаҡ нәмә йәйеп, катамаран яһап ағыусылар ҙа осрай.* Ғ. Ибраһимов.

КАТАПУЛЬТ [рус. *катапульта* < лат. *catopulta* < гр. *katapeltes*] (Р.: катапульта; И.: catapult; ejection seat; Т.: mancınık) *и.*

1. *тар.* Снаряд урынына ҡулланылған таш, бүрәнә кеүек нәмәне ҡәлғә эсенә ырғыта торған боронғо һуғыш ҡоралы; мәнжәник. □ Катапульта *(древнее метательное оружие).*

2. *тех.* Осоу майҙанынан, мәҫәлән, карап палубаһынан, самолётты осорта торған ҡоролма. □ Катапульта *(механизм для ускорения старта самолёта).*

3. Хәүефле осраҡтарҙа осоусы аппараттан экипажды парашют менән автоматик рәүештә тышҡа атып сығара торған ҡоролма. □ Катапульта *(устройство для автоматического спуска на парашюте).* ■ *Ерҙән самолётты ҡалдырырға ла, катапульт ярҙамында һикерергә приказ булды.* Ғ. Ибраһимов.

4. *тех.* Космонавтарға, осоусыларға ауырлыҡ артыуы буйынса күнекмә үткәрә торған ер өҫтөндәге ҡоролма. □ Катапульта *(установка для тренировки лётчиков и космонавтов на ударные перегрузки).*

КАТАПУЛЬТЛАНЫУ (катапультлан-) *ҡ. ҡайт. ҡар.* **катапультлау.** *страд. от* **катапультлау.** ■ *Карапта ике космонавт оса икән, катапультланыу сигналын уларҙың ҡайһыһы бирһә лә ярай.* «Башҡортостан», 27 июль 2009.

КАТАПУЛЬТЛАУ (катапультла-) (Р.: катапультировать; И.: catapult; bale out Т.: fırlatmak) *ҡ.*

Катапульт (3) менән атып сығарыу. □ Катапультировать.

КАТАР [рус. < гр. *katarrhoos* ‘ағып төшөү’] (Р.: катар; И.: catarrh; Т.: catarrhal) *и. мед.*

Эске ағзаларҙа лайлалы тиресәнең шешеүе. □ Катар. *Тамаҡ катары. Тын юлы катары. Катарҙан дауаланыу.* ■ *Ташлағыҙ, — тине бирәү, — күңелде болғатаһығыҙ. Миндә катар, ул ерәнгес нәмәне һөйләүҙе яратмай.* С. Агиш. *Урғанда ла бөкөрәйеп йөрө, ашағанда ла бөкләнеп ултырыу эшме ни ул. Ашҡаҙаныңа катар ауырыуы һуғылыуы бар.* М. Тажи.

КАТАРАКТА [рус. < гр. *katarrhaktes* ‘шарлауыҡ’] (Р.: катаракта; И.: cataract; Т.: katarakt) *и. мед.*

Күҙ яҫмығы һәм уның капсулаһының тотош йәки бер өлөшөнөң тоноҡланыуы менән үткән күҙ ауырыуы; ҡылау. □ Катаракта. *Тыумыштан килгән катаракта. Диабетик катаракта.*

КАТАСТРОФА [рус. < гр. *katastrophe* ‘әйләнеш, ахыр’] *и. ҡар.* **һәләкәт.** ■ *Асыҡ әйтәм, ялатманым мин был поэманың бөтөүен, катастрофа менән килеп бөтә ике йәш иптәштең ғүмере.* Ғ. Сәләм. *Быйыл яҙ атаһының автомобиль катастрофаһында һәләк булыу фажиғәһен Айсыуаҡ бик ауыр кисерҙе.* Ш. Янбаев.

КАТАСТРОФАЛЫ *с. ҡар.* **һәләкәтле.**

КАТАФАЛК [рус. < ит. *catafalco*] (Р.: катафалк; И.: catafalque; hearse; Т.: katafalk) *и.*

1. Мәйетте оҙата торған арба йәки автомобиль. □ Катафалк *(повозка или автомобиль).* ■ *Марттың һуңғы көндәрендә ҡала нәпмандарынан бирәү үлгәйне. Уны йылтыр катафалкка һалып, ҡаланың үҙәк урамдары аша алып киттеләр.* И. Насыри.

2. Мәйет менән хушлашҡанда табут ҡуйыу өсөн ҡалҡыу урын. □ Катафалк *(возвышение, на которое ставится гроб).*

КАТЕГОРИЯ [рус. < гр. *kategoria*] (Р.: категория; И.: category; Т.: kategori) *и.*

1. *фәлс.* Матди донъялағы күренештәрҙең иң дөйөм үҙенсәлектәрен һәм бәйләнештәрен сағылдырған төшөнсә. □ Категория *(понятие, отражающее наиболее общие свойства и связи явлений материального мира). Ваҡыт категорияһы. Сифат һәм һан категорияһы.*

2. Фәндең төрлө өлкәләрендә күренештәрҙең төрөн йәки дөйөм уртаҡ үҙенсәлеген билдәләгән төшөнсә. □ Категория *(в научной терминологии). Грамматик категория. Ҡылым категорияһы. Фәлсәфә категориялары.*

3. Бер төрлө нәмә һәм күренештәрҙең төркөмө. □ Категория *(группа однородных предметов, явлений, лиц). Категорияға бүлеү. Айырым категория эшселәренә эш хаҡын күтәреү.* ■ *Ярыштарҙа, еңел, урта, ярым һәм ауыр ауырлыҡтарҙағы категориялар буйынса йөҙҙән ашыу спортсы көс һынашты.* «Башҡортостан», 9 август 2011. *Сергей уға директорҙың «Беренсе категориялы белгесте биш көнгә аҙыҡ-түлек менән тәьмин итергә» тип яҙған ҡағыҙын һуҙҙы.* И. Абдуллин.

КАТЕР [рус. < ингл. *cutter*] (Р.: катер; И.: cutter; Т.: bot) *и.*

1. Бәләкәй генә карап. □ Катер *(небольшое судно).* ■ *Тулҡын ярып һыуҙа катер йөҙә, — ҡайҙа барғанлығын кем белгән.* Н. Иҙелбай.

2. Бәләкәй махсус хәрби карап. □ Катер *(военный корабль).* ■ *Фомин казарма эргәһенән дошман катерының үтеп китеүен аңланы.* Яр. Вәлиев.

КАТЕТ [рус. < гр. *kathetos*] (Р.: катет; И.: leg (of a triangle); Т.: dikkenar) *и. мат.*

Тура мөйөшлө өсмөйөштә тура мөйөш яһаусы һыҙыктарҙың береһе. □ Катет. *Катет оҙонлоғо. Катетты хисаплап сығарыу.*

КАТЕТЕР [рус. < гр. *katheter*] (Р.: катетер; И.: catheter; Т.: sonda) *и. мед.*

Ҡыуышлы йәки көпшәле ағзаларҙы дауалау өсөн ҡулланылыусы нәҙек көпшә рәүешендәге ҡорал. □ Катетер. *Катетер индереү. Ирҙәр катетеры.*

КАТЕХИЗИС [рус. < гр. *katēchēsis* 'тәғлимәт'] (Р.: катехизис; И.: catechism; Т.: kateşizm) *и. кит.*

1. Ғәҙәттә һорауҙар һәм яуаптар формаһында булған христиан дине дәреслеге. □ Катехизис. *Православие сиркәүе катехизисы. Йәһүдтәр катехизисы. Католиктар катехизисы.*

2. *Ниндәй ҙә* булһа тәғлимәтте һорау-яуап формаһында аңлатыу. □ Катехизис.

КАТНАР *и. диал. ҡар.* **өй түбәһе.**

КАТОД [рус. < гр. *kathodos* 'аҫҡа барған юл'] (Р.: катод; И.: cathode; Т.: katot) *и.*

1. Электр тогы сығанағының кире полюсы менән тоташтырыла торған электрод; *кireһе* — анод. □ Катод *(отрицательный полюс).*

2. Электр-вакуум приборҙарында электрондар сығанағы. □ Катод *(прибор, источник электронов).*

КАТОД НУРҘАРЫ (Р.: катодные лучи; И.: cathode rays; Т.: elektron ışınları) *и. махс.*

Һирәк газ аша трубканан ток үткәндә катодтың өҫкө йөҙөнән сығыусы нурҙар — электрондар. □ Катодные лучи, поток электронов.

КАТОК [рус.] *и.*

1. *ҡар.* **һыргалаҡ.**

2. Ерҙе, юлды тигеҙләй торған яҫы ауыр тәгәрмәсле машина. □ Каток *(строительная машина).*

3. Ауыл хужалығында ерҙе тигеҙләү өсөн ҡулланылған ҡорал. □ Каток *(устройство для выравнивания сельскохозяйственных угодий). Дискылы каток. Тешле каток. Шыма каток.*

КАТОКЛАУ (катокла-) (Р.: выравнивать катком; И.: roll out; Т.: açmak) *ҡ.*

Каток (2, 3) менән тапатыу. □ Выравнивать катком. *Юлды катоклау. Ерҙе катоклау. Катоклап алыу. Катоклап барыу. Катоклап бөтөрөү. Катоклап сығыу. Катоклап тороу.*

КАТОЛИК [рус. < гр. *katholikos*] (Р.: католик; И.: Catholic; Т.: katolik) *и.*

Католицизм йүнәлешен ҡабул иткән кеше. □ Католик. *Католиктар сиркәүе.* ■ *Төрөксәһе бик ентекле ине, русса тәржемәһе католиктарға ҡарата нәфрәт тойғоһо менән һуғарылған.* Ә.-З. Вәлиди.

КАТОЛИЦИЗМ [рус. < гр. *katholikos*] (Р.: католицизм; И.: Catholicism; Т.: katoliklik) *и.*

Христиан диненең бер йүнәлеше *(православие, протестантизмдан үҙенсәлекле йолалары, сиркәүҙәре, Рим папаһын баш тип иҫәпләүҙәре менән айырылып тора).* □ Католицизм. *Католицизм тәғлимәте.*

КАТОРГА [рус.] (Р.: каторга; И.: hard labo(u)r; Т.: sürgün) *и.*

1. *тар.* Рәсәй империяһында тотҡондарҙы алып китеп, насар шарттарҙа ауыр эш эшләтеү язаһы һәм хөкөм ителеүселәрҙең торған урыны. □ Каторга *(вид наказания). Каторгаға ебәреү. Каторганан ҡасыу.*

2. күсм. Ауыр эш, насар көнкүреш. □ Каторга *(непосильный, изнурительный труд, тяжёлая жизнь).*

КАТОРЖАН [рус.] (Р.: каторжник; И.: (State) onvict;Т.: mahkum) *и. тар.*

Каторгаға ебәрелгән, каторгала булған кеше. □ Каторжник. *Каторжан йыры. Каторжан яҙмышы. Каторжан булыу.*

КАТУК I (катугы) (Р.: каток бельевой; И.: skating rink linen; Т.: sürgü) *и. диал.*

Киндерҙе тигеҙләү өсөн ҡулланылған ҡытырлы туҡмаҡ. □ Каток бельевой.

КАТУК II (катугы) *и. диал. ҡар.* **тәпке.**

КАТУН *и. диал. ҡар.* **ҡамғаҡ.**

КАТУШКА [рус.] (Р.: катушка; И.: reel; Т.: makara) *и.*

Бау, тимерсыбыҡ кеүек әйберҙәр уратыла торған цилиндр; ҙур сүре. □ Катуш-

ка. ■ *Ҡырғысты өҫкә күтәреү өсөн катушканы яңынан әйләндерә башлағайны, Ләйләнең ҡулдары, беләктәре бик тиҙ талып, күҙ алдары ҡараңғыланып китте.* С. Поварисов. *Өҫтәлдең уң яғына ҙур ғына тисҡи ҡуйылған, һул яғында төрлө тимер һәм баҡыр сыбыҡтарҙы катушкаға сорнау өсөн эшләнгән ябай ғына йайлама.* Ә. Вәли.

КАТЫЛЫК *и. диал. ҡар.* **ужым.**

КАТЮША [рус.] (Р.: катюша; И.: Katyusha, multiple rocket launcher; Т.: Katyuşa) *и. һөйл.*

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда реактив миномёттың яратып, шаяртып әйтелә торған атамаһы. □ Катюша. *Катюша залпы. Катюшанан атыу.*

КАУЗ (Р.: жёлоб водяной мельницы; И.: water-mill trench; Т.: su değirmeni oyuğu) *и. диал.*

Һыу тирмәне улағы. □ Жёлоб водяной мельницы.

КАУСТИК СОДА [рус. < гр. *kaustikos*] (Р.: каустическая сода; И.: caustic soda Т.: kostik soda) *и.*

Һыуҙа яҡшы ирей торған төҫһеҙ кристаллик матдә; зәһәр натр. □ Каустическая сода.

КАУЧУК (каучугы) [рус. < ингл. *caoutchouc*] (Р.: каучук; И.: rubber; caoutchouc; Т.: kauçuk) *и. махс.*

Резина яһау өсөн файҙаланылған ҡатмарлы матдә *(үҫемлек һутынан йәки химик синтез менән алына).* □ Каучук. / Каучуковый. *Тәбиғи каучук. Синтетик каучук. Каучук етештереү. Каучук табанлы итек.* ■ *Ана шул Хикмәтулла ауыҙ һыуын ҡоротоп һөйләгән автомобиль покрышкаһын, әйткәс әйтәйем, синтетик каучук заводында быуа быуырлыҡ итеп сығарып була.* Д. Бүләков.

КАУЧУКЛЫ (Р.: каучуковый; И.: rubber; Т.: kauçuklu) *с.*

Каучугы бар, каучуктан эшләнгән. □ Каучуковый. *Каучуклы үҫемлектәр. Каучуклы елем. Каучуклы шланг.*

КАФЕ [рус. < фр. *cafe*] (Р.: кафе; И.: cafe, coffee shop; Т.: kahvehane) *и.*

Сәй, ҡәһүә, еңел ашамлыҡтары булған дөйөм туҡланыу урыны; бәләкәй ресторан. □ Кафе. *Туңдырма кафеһы. Кафела туҡланыу.* ■ *Юл буйындағы кафеға һуғылып тамаҡ ялғағас, күңелдәре күтәрелеп, билеттары алдан уҡ алып ҡуйылған киноға киттеләр [егеттәр].* Й. Солтанов. *Саҡ ҡына һөйләшеп ултырған арала, аҫтағы кафеның хужабикәһе шыпан-шыпан инеп, алғы бүлмәгә бер коробка ҡуйҙы, өҫтәлгә алма, әфлисун, тауыҡ ите һәм башҡа ашамлыҡтар теҙҙе.* Н. Мусин.

КАФЕДРА [рус. < гр. *kathedra* 'ултырғыс'] (Р.: кафедра; И.: chair; platform, pulpit; Т.: kürsü) *и.*

1. Телмәр менән сығыш яһау өсөн тәғәйенләнгән бейек урын. □ Кафедра *(возвышенное место для выступающего). Кафедраға сығыу. Кафедранан һөйләү.*

2. Вуз факультетының айырым бер фән йүнәлешен тәшкил иткән берәмек һәм шул берәмек тирәһендә тупланған уҡытыусылар төркөмө. □ Кафедра *(структурное подразделение факультета высшего учебного заведения). Башҡорт теле кафедраһы. Физика кафедраһы. Кафедра етәксеһе. Кафедра ултырышы.* ■ *Үҙе уҡытҡан медицина институтында кафедра мөдире лә булғас, һис бушай алмай Лидия.* Т. Ғарипова.

3. *дини.* Сиркәүҙә доға, өгөт уҡыу урыны. □ Кафедра *(возвышение в церкви, с которого произносятся проповеди).*

4. *дини.* Епархия менән етәкселек иткән епископ вазифаһы. □ Кафедра *(должность епископа, управляющего епархией).*

КАФЕДРАЛЬ СОБОР. (Р.: кафедральный собор; И.: cathedral; Т.: büyük kilise) *и. дини.*

Епископ етәкләгән ҙур собор. □ Кафедральный собор.

КАФЕЛЛӘҮ (кафеллә-) (Р.: покрыть кафелем; И.: tile; Т.: fayans döşemek) *ҡ.*

Кафель менән ҡаплау, көпләү. □ Покрыть кафелем, обложить кафелем. *Кухняны кафелләп эшләү. Иҙәнде кафелләү. Кафелләп ҡуйыу.*

КАФЕЛЬ [рус. < нем. *Kachel*] (Р.: кафель; И.: tile; Т.: fayans) *и.*

Стена, мейес һ.б. йөҙләү өсөн эзбизле балсыҡтан эшләнгән махсус плита. □ Кафель. / Кафельный. *Кафель менән йөҙләү.*

Кафель түшәү. Кафель мейес. Кафель стена. ■ *[Харис:] Кухняға кафель йәбештереп сыктым. Күҙгөн дә кәрәкмәй, ялт итеп тора.* Ш. Янбаев.

КАФЕТЕРИЙ [рус. < исп. *cafeteria*] (Р.: кафетерий; И.: cafeteria; Т.: kafeterya) *и.*

Кафеның бер төрө *(ғәҙәттә, официантһыҙ).* □ Кафетерий. *Магазинда кафетерий асыу.*

КАФТАН [рус. < фарс. كافتان] (Р.: кафтан; И.: caftan; Т.: kaftan) *и.*

Боронғо ирҙәр кейеме *(оҙон итәкле).* □ Кафтан. ■ *Башындағы ярты айға окшаш башлығының түбәһенә күкле-йәшелле каурый каҙалған, кафтанының яғаһына, иҙеүенә алтын йүгертелгән, сафьян итеге йылкылдап тора.* Н. Мусин.

КАФЫР [ғәр. كافر] (Р.: гяур; И.: giaour; Т.: gâvur) *и.*

1. Христиан динендәге кешеләргә мосолмандар тарафынан бирелгән исем. □ Гяур, неверный *(с точки зрения мусульман).* ■ *Кағыҙға әҙәмде төшөрөү, ағастан юнып йә балсыктан койоп кеше һынын эшләү — ҙур гөнаһ, ул Алла эшенә кыҫылыу, һүрәткә табынған кафырҙар артынан эйәреү, тип өйрәткәндәр дин әһелдәре.* Картотека фондынан. *Бабаларыбыҙ ике быуат буйынса бит ятбауырҙар талауына каршы кылыс айкап карышкан, фәкәт уның аркаһында Башкортостан тигән аҫаба ерен, башкорт тигән исемен, телен, динен кафыр тәреһенән тапатмай курсалап калдыра алған.* Й. Солтанов. *Сәйет батыр булмаһа, яһактарҙы ла арттырған булыр ине әле кафырҙар.* Н. Мусин.

2. Әрләгәндә, шелтәләгәндә әйтелә. □ Вероотступник. ■ *Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа күк үләнде буйлатып, батша кафыр һалдат ала, йәш егетте илатып.* Һ. Дәүләтшина. ● *Үҫер илдең балаһы береһен-береһе «батыр», ти, бөлөр илдең балаһы береһен-береһе «кафыр», ти.* Мәҡәл.

КАФЫР КИТЕҮ (кафыр кит-) (Р.: умереть безбожником; И.: die as an atheist; Т.: gâvur olmak) *к.*

Алланың барлығын, берлеген танымай үлеү. □ Умереть безбожником.

КАХЫР-БОХОР *с. диал. кар.* **алама I, 3.** *Кахыр-бохор һүҙ. Кахыр-бохор эш.*

КАЧАЛКА [рус.] (Р.: качалка; И.: pumping unit; Т.: pompalama ünitesi) *и. һөйл.*

Скважинанан нефть һурҙыра торған короолма. □ Качалка. ■ *Эргәһендә, койо һиртмәһен хәтерләтеп, бер иңкәйеп, бер күтәрелеп, качалка хәрәкәтләнә.* Картотека фондынан. *Качалкалар бөгөлөп-һығылып, ер куйынынан байлык ташыйҙар, кара алтын һуралар.* Р. Шаммас.

КАШАЛОТ [рус. < фр. *cachalot* < порт. *cachalotte* 'ҙур башлы балык'] (Р.: кашалот; И.: cachalot; Т.: ispermeçet balinası) *и.*

Тешле киттар төркөмөнә караған иң эре диңгеҙ хайуаны. □ Кашалот. ■ *Кашалоттар һыу аҫтында йөҙ алтмыш минут самаһы тора ала.* «Башкортостан», 3 февраль 2010.

КАШАР [рус.] (Р.: кошара; И.: sheepyard; Т.: ahır) *и. һөйл.*

Һарык кәртәһе. □ Кошара. *Кашарға индереү.*

КАШАУАЙ [рус. *кошева*] (Р.: кошевка; И.: sledge; Т.: kaşevka) *и.*

Артлы, киң еңел сана. □ Кошевка. ■ *Аттар баштарын сайкай-сайкай, кашауайҙа толопка ураныл ултырған кешеләрҙе карһыҙ урам буйлап приискыға карай алып китте.* Я. Хамматов. *Назаровтың канатлап эшләнгән, тышы йәшелгә буялған, эсе, аҫтына сүбәк тултырып, дермантин менән көпләнгән кашауайға аллы-артлы итеп егелгән аттары, урындарынан куҙғалып китергә түҙмәйенсә, карҙы сапсып, ауыҙлыктарын сәйнәп торалар.* Н. Мусин.

КАШАУАР [рус. *кашевар*] (Р.: кашевар; И.: cook; Т.: aşçı) *и. һөйл.*

Аш бешереүсе, ашнаксы. □ Кашевар. ■ *Рәмзиә апай ғүмере буйы кашауар булды. Кыҙы Минзилә әсәһе юлынан китте — колхоз ашханаһында повар.* Ә. Хәким. *Кашауар көттө, көттө бик оҙак, усактарҙа күмер өргөләп.* Х. Ғиләжев.

КАШКИ [фарс. كاشكى] (Р.: если; И.: if; Т.: keşke) *терк. иҫк. кит.*

Әгәр, гәрсә. □ Если *(союз).* ■ *Кашки булһа һәр әҙәм дә эстә кер-пап тотмаған.* Д. Юлтый.

КАШНЕ [рус. < фр. *cache-nez* < *cachez* ‘йәшереү’ + *nez* ‘танау’] (Р.: кашне; И.: (neck) scarf; Т.: eşarp) *и.*

Йоҡа шарф, муйын яулығы. □ Кашне. *Ирҙәр кашнеһы. Ебәк кашне. Йөндән бәйләнгән кашне.* ■ *Ҡыҙҙың муйынына уралған аҡ мамыҡ кашне артҡа табан ташлана, елберләй.* Р. Ниғмәти. *Өсөнсөһө – егерме ике йәштәрҙәге рус егете. Өҫтөндә инглиз костюмы, муйынында аҡ, бурлат буйлы ебәк кашне.* Г. Хәйри.

КАШПО [рус. < фр. *cache-pot* < *cachez* ‘йәшереү’ + *pot* ‘сүлмәк’] (Р.: кашпо; И.: ornamental flowerpot; Т.: saksı) *и.*

Биҙәкле ваза. □ Кашпо *(декоративная ваза). Аҫылмалы кашпо.*

КАШТАН [рус. < лат. *castanea*] (Р.: каштан; И.: chestnut; Т.: kestane) *и. бот.*

1. Буктар ғаиләһенә ҡараған аҡ сәскәле эре көньяҡ ағасы. □ Каштан *(дерево)*. / Каштановый (лат. *Castánea*). *Каштан ағасы. Каштан ултыртыу.* ■ *Каштандарҙың ынйы алҡалары байрам уты булып тағылған.* М. Ғәли. *Каштан сәскә атты Дүрмәндә, күҙ алдында, ҡояш күргәндә, ботаҡ һайын яңы шәмдәлдәр, шәм-сәскәләр, гүйә, ал шәлдәр.* М. Басыров. *Тап ун дүрт яҙ әүәл шундай кистә, яман төштән ауыр өнөмдә бер йәш һылыу ҡанға сәсәп ауҙы, ауҙы, каштан, һинең төбөңдә.* М. Кәрим.

2. Шул ағастың ашарға яраҡлы сәтләүеге. □ Каштан *(плод). Ҡурылған каштан.*

КАЮТА [рус. < гол. *kajuit*] (Р.: каюта; И.: cabin, state room; Т.: kabin) *и.*

Караптарҙа команда йәки пассажирҙар өсөн тәғәйенләнгән бүлмә. □ Каюта. *Беренсе класс каютаһы. Капитан каютаһы. Пассажирҙар каютаһы.* ■ *Командир, каютаһына инеп, өҫтәлендәге диңгеҙ юлын күрһәткән һыҙыҡтарға – картаға ҡарай.* А. Таһиров. *Әсе тормош тәжрибәһен етерлек татыған Сәғит, өйҙәрендәге үҙенең бүлмәһендә лә, теплоход каютаһында ла һис тәмәке еҫенә түҙмәһә лә, бындай күмәк ерҙең быуылы һөрөмөнә күҙҙе йомоп барып инергә, кәрәгенсә сыҙамлыҡ һаҡларға күнектергәйне үҙен.* Й. Солтанов. *Каютаға әйберҙәремде урынлаштырып, палубаға сыҡҡанда, һуңғы һыбыҙғы булған һәм пароход та әкрен генә ҡуҙғала башлаған ине инде.* Г. Хәйри.

КАЮТ-КОМПАНИЯ [рус. < гол. *kajuit* + фр. *compagnie* ‘йәмғиәт’] (Р.: кают-компания; И.: chief cabin, saloon; Т.: salon (yolcu gemisinde) *и.*

Караптарҙа пассажирҙарҙың дөйөм туҡланыу, ял итеү бүлмәһе. □ Кают-компания. ■ *Кают-компанияла ла нимәгәләр тынғандар. бер-берене ңә аҫтыртын ғына ҡарашып алалар ҙа өндәшмәй-нитмәй ашай бирәләр.* Р. Низамов.

КВАДРАНТ [рус. < лат. *quadrans* ‘дүрттән бер өлөш’] (Р.: квадрант; И.: quadrant; Т.: daire rub’u, kuadrant) *и.*

1. *мат.* Түңәрәктең дүрттән бер өлөшө. □ Квадрант *(четвёртая часть круга.)*

2. *тех.* Күк есемдәренең бейеклеген үлсәй торған боронғо ҡоролма. □ Квадрант *(астрономический прибор)*.

3. *тех.* Артиллерияла прицелды аныҡ билдәләү ҡоролмаһы. □ Квадрант *(прибор для определения прицела в артиллерии)*.

КВАДРАТ [рус. < лат. *quadratus* ‘дүрт мөйөшлө’] (Р.: квадрат; И.: square; Т.: kare, dörtgen) *и.*

1. Оҙонлоғо һәм киңлеге бер тигеҙ булған дүртмөйөш; дүрткел. □ Квадрат *(равносторонний прямоугольник). Квадрат һыҙыу. Квадраттың майҙанын хисаплау.*

2. *мат.* Һандың үҙенә үҙен арттырған ҡабатландығы. □ Квадрат *(произведение от умножения числа на самого себя.) Туғыҙ – өстөң квадраты. Квадрат тамыры.*

3. *мат.* Икегә тиң дәрәжә күрһәткесе. □ Квадрат *(степень). Биште квадратҡа күтәреү.*

4. *геол.* Топография картаһындағы координаттар сеткаһына тап килгән ер биләмәһе. □ Квадрат *(участок местности, соответствующий координационной сетке на топографической карте). Экспедицияның ҡайһы квадратта булыуын хәбәр итеү.* ■ *Белов, самолёттарҙың беренсе налётынан уҡ, улар бомба ташлаясаҡ квадратты билдәләп алды һәм боецтарҙы хәүефһеҙ урынға сығарҙы.* Ә. Ихсан.

КВАДРАТ ЙӘЙӘ (Р.: квадратные скобки; И.: square brackets; Т.: köşeli parantez) *и.*

[ ] формаһындағы йәйә. □ Квадратная скобка. *Квадрат йәйә асыу.*

КВАДРАТ МЕТР (Р.: квадратный метр; И.: square metre; Т.: metre kare) *и.*

Майҙан үлсәү берәмеге *(иңе һәм буйы берәр метр булған майҙан).* □ Квадратный метр. *Квадрат метр менән иҫәпләү.* ■ *[Байғускарова:] Ә мин... санитарка... тол ҡатын, өс бала әсәһе... бараҡтың бер бүлмәһендә ун ике квадрат метрҙа йәшәйем.* Д. Бүләков.

КВАДРАТ ОЯ ЫСУЛЫ (Р.: квадратно-гнездовой способ; И.: square cluster method; checkrow; Т.: checkrow) *и. а. х.*

Үҫемлектәрҙе, бер-береһенән ара ҡалдырып, шаҡмаҡ тәртибендә ултыртыу алымы. □ Квадратно-гнездовой способ. *Квадрат оя менән сәсеү. Квадрат оя ысулы. Квадрат оялап сәсеү.* ■ *Квадрат оя ысулын ҡанунлаштырып, етешһеҙлек арттырҙыҡ.* Й. Солтанов.

КВАДРАТ ТИГЕҘЛӘМӘ (Р.: квадратное уравнение; И.: quadratic (equation);Т.: ikinci dereceden denklem) *и. мат.*

Аргументтарҙың береһе квадратта булған тигеҙләмә төрө. □ Квадратное уравнение. *Квадрат тигеҙләмәһен сисеү.*

КВАДРАТУРА [рус. < лат. *quadratura* < *quadrare* 'дүрткел яһау'] (Р.: квадратура; И.: quadrature; Т.: kare) *и.*

1. *мат.* Билдәле бер йомоҡ фигураның квадрат берәмектәрҙә һаналған майҙаны. □ Квадратура *(площадь замкнутой фигуры). Иҙән квадратураһы. Бакса ере квадратураһы. Балаҫ квадратураһы. Квадратураһын иҫәпләү.*

2. *Ниндәйҙер* бер фигураның майҙанына тиң квадрат һыҙыу. □ Квадратура *(построение квадрата, равновеликого данной фигуре). Квадратураһын һыҙыу.*

КВАЛИФИКАЦИЯ [рус. < лат. *qualification*; *quails* + *facere*] (Р.: квалификация; И.: qualification; level of proficiency; Т.: ihtisas) *и.*

1. Хеҙмәткәрҙәрҙең һөнәре буйынса әҙерлек дәрәжәһе. □ Квалификация *(степень подготовленности к какому-л. виду деятельности).* / Квалификационный. *Юғары квалификацияға эйә булыу. Квалификация талап иткән хеҙмәт. Квалификацияны күтәреү. Квалификация талаптары. Квалификация күрһәткестәре.* ■ *Үткән йылдың майынан алып бер йыл эсендә заводта техник уҡыу түңәрәктәрендә йөҙләп эшсе әҙерләнде, ете йөҙ ҡырҡ һигеҙ кеше квалификацияһын күтәрҙе.* «Һаҡмар», 16 июль 2012. *Был ғәжәп яҡшы заводта эшләгән белгестәрҙең юғары квалификацияһы беҙҙә ғәҙәттән тыш ҙур тәьҫир ҡалдырҙы.* «Башҡортостан», 19 сентябрь 2011.

2. Махсус белем, һөнәр. □ Квалификация *(профессия, специальность). Квалификация талап иткән хеҙмәт. Квалификация танытмаһы.* ■ *«Квалификацияһын үҙгәртергә», — тип яуап бирҙе кемдер берҙәм көлөү аҫтында.* И. Абдуллин.

КВАЛИФИКАЦИЯ АЛЫУ (квалификация ал-) (Р.: получить квалификацию; И.: receive qualification; Т.: ihtisas yapmak) *ҡ.*

Махсус белем, һөнәр алыу. □ Получить квалификацию. *Инженер-технолог квалификацияһын алыу.* ■ *Ғилман хеҙмәт дәресе уҡытыусылары әҙерләй торған факультатив занятиеға йөрөп, столяр квалификацияһы алды.* Н. Мусин.

КВАЛИФИКАЦИЯ БИРЕҮ (квалификация бир-) *ҡ. ҡар.* **квалификациялау 1.** ■ *Өфө нефть институтының нефтемеханик факультетын тамамлаусыларға инженер-механик квалификацияһы бирелә.* Интернет селтәренән.

КВАЛИФИКАЦИЯЛАУ (квалификацияла-) (Р.: квалифицировать; И.: qualify(for); Т.: ihtisasını tayin etmek) *ҡ.*

1. Квалификация үткәреү. □ Квалифицировать, дать квалификацию. *Квалификациялау комиссияһы.*

2. Характерлау, баһа биреү, ҡылыҡһырлау. □ Квалифицировать, характеризовать. *Енәйәтте квалификациялау. Эште квалификациялау.*

КВАЛИФИКАЦИЯЛЫ (Р.: квалифицированный; И.: qualified; Т.: mütehassıs) *с.*

Квалификацияға эйә, квалификацияһы булған. □ Квалифицированный. *Юғары*

квалификациялы белгес. Квалификациялы инженер. ■ *Өлкә күләмендәге иң ҙур район дауаханаларының береһе, хәҙерге заманса итеп йыһазландырылған, юғары квалификациялы врачтар эшләгән ысын һаулыҡ төйәге ине был.* Й. Солтанов. *Бында килгәс, Козин уны [Ғилманды], юғары квалификациялы белгес булараҡ, лесхоз дирекцияһында ҡалдырмаҡсы булғайны ла, тегеһе Ҡаратау лесничествоһына барырға теләүен әйтте.* Н. Мусин.

КВАЛИФИКАЦИЯЛЫЛЫҠ (квалификациялылығы) (Р.: квалифицированность; И.: proficiency; Т.: mütehassıslık) *и.*

Әҙерлек. □ Квалифицированность. *Юғары квалификациялылыҡ.*

КВАЛИФИКАЦИЯҺЫҘ (Р.: неквалифицированный; И.: unskilled, unqualified; Т.: vasıfsız) *с.*

Квалификацияһы булмаған. □ Неквалифицированный. *Квалификацияһыҙ хеҙмәт. Квалификацияһыҙ эш. Квалификацияһыҙ булыу.*

КВАНТ [рус. < лат. *quantum* 'нисә'] (Р.: квант; И.: quantum; Т.: kuant) *и. физ.*

Энергияның иң бәләкәй өлөшсәһе. □ Квант. / Квантовый. *Квант механикаһы. Квант тәғлимәте. Квант генераторы. Квант һандары. Квант физикаһы.*

КВАРТА [рус. < лат. *quarta* 'дүртенсе'] (Р.: кварта; И.: quart; Т.: kuart) *и.*

1. Англияла һәм инглиз телендә һөйләшкән илдәрҙә шыйыҡ йәки бөртөклө матдәләрҙе үлсәү берәмеге. □ Кварта *(единица измерения жидких и сыпучих веществ). Бер кварта һыра. Ике кварта шәкәр.*

2. *муз.* Диатоник гаммала ноталар араһын баҫҡыс менән билдәләгәндә *ниндәйҙер* бер баҫҡыстан дүртенсе баҫҡыс (мәҫәлән, *ми нотаһын алғанда, ля-бемоль нотаһы дүртенсе баҫҡыска тап килә*). □ Кварта *(ступень в диатонической гамме). Квартаға юғарыраҡ тауыш.*

3. *муз.* Диатоник гаммала билдәле бер баҫҡыстан дүртенсе баҫҡыска тиклемге ара (мәҫәлән, *ми нотаһынан ля-бемоль нотаһына тиклем ара: ми-фа-соль-ля бемоль*). □ Кварта *(интервал в диатонической гамме).*

КВАРТАЛ [рус. < лат. *quartus* 'дүртенсе'] (Р.: квартал; И.: quarter; Т.: üç aylık süre) *и.*

1. Йылдың дүрттән бер өлөшө *(өс ай).* □ Квартал *(четвёртая часть года).* / Квартальный. *Икенсе квартал. Эште кварталдарға бүлеп башҡарыу. Квартал планын үтәү. Квартал премияһы.* ■ *Беҙҙең ауыл магазины һуңғы өс көн эсендә квартал планын тағы ике йөҙ илле процентҡа үтәне.* Й. Солтанов. *Идара ултырышында һуңғы квартал йомғаҡтары ҡаралды.* Р. Камал. *[Фәйзрахман ағай:] Ғибад кейәүҙе әйтәм, һиңә һөйләнмәнеме, Ғаяз ҡустым, был квартал планы йөҙ ҙә утыҙ биш процентҡа үтәлде, беренсе премияны эләктерергә иҫәп бар, тип шапырына ине.* Н. Мусин.

2. Ҡаланың дүрт яктан киҫешкән урамдар йәки майҙандар менән сикләнгән өлөшө. □ Квартал *(часть города, ограниченная четырьмя пересекающимися улицами). Квартал аша үтеү. Күрше квартал. Ҡала кварталы. Төҙөк квартал. Кварталды төҙөкләндереү.* ■ *[Сәлих:] Урамға сығып бер квартал самаһы ер киткәс, артымдан килмәйҙәрме, тип ҡарап торҙом.* С. Агиш. *Ошо уҡ урамдың икенсе кварталында Шәмсиҙең ауылдашы Һажәр тора.* Ғ. Хәйри. *Лиданың фатирына тиклем өс-дүрт квартал үтәһе бар ине әле.* Н. Мусин. *Шул көн эсе кварталдарҙа көслө тентеү һәм арестар барыуы ишетелде.* Д. Юлтый.

3. *Нимәлер* ултыртылған дүрт мөйөш формаһындағы ер майҙаны. □ Квартал *(участок засаженной земли). Сөгөлдөр кварталы. Алмағас кварталы. Урман кварталы.* ■ *Козин хужалыҡтағы һәр кешене тиерлек үҙ күҙе менән күреп белә, бер ҡараш ташлауҙа уларҙың тын алышын самалай; лесхоз территорияһындағы һәр квартал, уларҙа ниндәйерәк ағастар үҫеүе лә таныш.* Н. Мусин.

КВАРТАЛЛАУ (кварталла-) (Р.: делить на кварталы; И.: divide into quarters; Т.: mahalleye bölmek) *ҡ.*

Кварталға бүлеү, кварталға һалыу. □ Делить на кварталы, располагать в виде квартала. *Планды кварталлап үтәү. Йорттарҙы кварталлап төҙөү. Ағастарҙы кварталлап*

ултыртыу. Ике квартал сөгөлдөр сәсеү. ■ *Йорттар әле бер, әле икенсе урында һалына. Кварталлап төҙөгәндә, эштең сифаты яҡшырыр, хаҡы осһоҙораҡҡа төшөр ине.* Интернет селтәренән.

КВАРТАЛЛЫҠ (Р.: квартальный; И.: quarter(ly); Т.: üç aylık) *с.*

Бер кварталға билгеләнгән, бер кварталда башҡарыла торған. □ Квартальный. *Кварталлыҡ премия. Кварталлыҡ эш. Кварталлыҡ план.*

КВАРТЕТ [рус. < ит. < лат. *quartus* ‘дүртенсе’] (Р.: квартет; И.: quartet(te); Т.: kuartet) *и. муз.*

1. Дүрт инструмент йәки дүрт тауыш менән башҡарыла торған музыка әҫәре. □ Квартет *(музыкальное произведение).* / Квартетный. *Квартет башҡарыу. Квартет яҙыу. Хөсәйен Әхмәтов квартеты. Ҡатын-ҡыҙ тауышы өсөн яҙылған квартет.*

2. Дүрт музыканттан йәки дүрт йырсынан торған ансамбль. □ Квартет *(музыкальный ансамбль). Флейталар квартеты. Ҡурайсылар квартеты. Танылған квартет. Квартет өсөн әҫәр яҙыу.* ■ *Ҡурайҙан дуэт, трио һәм квартет төҙөп була тигән ышаныс һаман ныҡый барҙы.* Интернет селтәренән.

КВАРТИРА [рус. < нем. *Quartiez*] *и. ҡар.* **фатир.** *Өс бүлмәле квартира. Иркен квартира. Коммуналь квартира. Яңы квартираға күсеү. Йөҙ квартиранан торған йорт. Квартираға ремонт яһау. Өсөнсө ҡатта урынлашҡан квартира.* ■ *Заһитов лесхоздың дүрт квартиралы йортоноң бер бүлмәһендә яңғыҙы йәшәй ине.* Н. Мусин.

КВАРТИРАНТ [рус. < нем. *Quartiez*] *и. ҡар.* **фатирсы.** *Фатирға квартирант индереү. Квартирант ҡыҙ тотоу. Квартирант менән торлаҡ яллау килешеүен төҙөү. Квартирант бурыстарын билдәләү.* ■ *Хәжәр апай үҙ өйөндә квартиранттар хужа булғанын яратмай.* Ш. Янбаев. *Квартира хужаһы, йөҙгә һылыу, телгә сәсән татар ҡатыны Нәфисә, йәш квартиранткаһының буй-һынын һынсыл ҡараш аша үткәрҙе.* Т. Ғарипова.

КВАРТИРМЕЙСТЕР [рус. < нем. *Quartiermeister*] (Р.: квартирмейстер; И.: quartermaster; Т.: levazım subayı, serdümen) *и. хәрби.*

Ғәскәрҙе аҙыҡ, фатир менән тәьмин итеүсе. □ Квартирмейстер.

КВАРТИРЬЕР [рус < нем. *Quartier* ‘фатир’ + *Herr* ‘әфәнде’] (Р.: квартирьер; И.: billeting officer; Т.: konakçı subayı) *и. хәрби.*

Ғәскәри, төҙөүсе, турист төркөмөнә алдан йәшәү урыны әҙерләп тороусы кеше. □ Квартирьер. *Квартирьер бурыстары. Квартирьер булыу.*

КВАРЦ [рус. < нем. *Quarz*] (Р.: кварц; И.: quartz; Т.: kuars) *и.*

1. Кристалл йәки бөртөклө масса рәүешендә осрай торған төҫһөҙ быяла һымаҡ минерал. □ Кварц. / Кварцевый. *Кварц комо. Кварц сығарыу. Кварц ятҡылыҡтары. Тау гәлсәре — кварцтың бер төрө. Кварц кристалы.* ■ *Кварц, билдәле булыуынса, алтындың юлдашы. Ләкин кварц табылған һәр ерҙә алтын булмауы ла ихтимал.* Я. Хамматов. *Үрге Мотал ауылынан аҫтараҡ тап-таҙа кварц комо сығып ятҡан урындар бар.* Д. Бураҡаев.

2. *һөйл.* Кварц лампаһы нурҙары. □ Кварц *(излучение кварцевой лампы). Кварц менән дауалау. Кварцта тотоу.*

КВАРЦИТ [рус. < нем. *Quarz*] (Р.: кварцит; И.: quartzite; Т.: kuvarsit) *и. геол.*

Кварцлы тау тоҡомо. □ Кварцит. *Кристаллы кварцит. Кварцит сығарыу. Кварцит ятҡылығы. Кварцты кварциттан айырып алыу.* ■ *Руда булмаған ҡаҙылмаларҙан бында тотош һырттар яһап ятыусы ҡомташ һәм кварцит ҡатламдары күп.* М. Хисмәтов.

КВАРЦ ЛАМПАҺЫ (Р.: кварцевая лампа; И.: quartz lamp; Т.: kuvars lâmbası) *и.*

Ультрафиолет нурҙарын таратыу өсөн быялаһы кварцтан яһалған электр лампаһы. □ Кварцевая лампа. *Ҡеүәтле кварц лампаһы. Кварц лампаһын ҡабыҙыу. Кварц лампаһы менән дезинфекциялау. Кварц лампаһы менән дауалау.*

КВАРЦЛАУ (кварцла-) (Р.: кварцевать; И.: quartz; Т.: kuvars lâmbası ile dezenfeksiyon yapmak) *ҡ.*

Кварц лампаһын яҡтыртып, уның ультрафиолет нурҙары менән бүлмәне йәки

башҡа нәмәне дезинфекциялау. □ Кварцевать. // Кварцевание. *Бүлмәне кварцлау. Шешкән тамаҡты кварцлау. Кварцлау үткәреү. Кварцлау һөҙөмтәһе. Кварцлау кабинеты.*

КВАРЦЛЫ (Р.: кварцевый; И.: quartz; Т.: kuvars) *с.*

Составында кварц минералы булған, кварцтан яһалған. □ Кварцевый. *Кварцлы ҡомташ ятҡылығы. Кварцлы мәғдән. Кварцлы сәғәт. Кварцлы йылытҡыс. Кварцлы резонатор. Кварцлы тоҡомдар.*

КВАС [рус.] *и. ҡар.* **кеүәҫ.** *Бер литр квас. Һыуыҡ квас. Квас эсеү. Квас әҙерләү.*

КВИНТА [рус. < лат. *quinta* 'бишенсе'] (Р.: квинта; И.: quint; Т.: kvinta) *и.*

1. *муз.* Диатоник гаммала ноталар араһын баҫҡыс менән билдәләгәндә, *ниндәйҙер* бер баҫҡыстан бишенсе баҫҡыс (мәҫәлән, *до нотаһын алғанда, соль нотаһы бишенсе баҫҡыска тап килә*). □ Квинта *(пятая ступень от данной в диатонической гамме). Квинта төрҙәре. Беренсе квинта.*

2. *муз.* Диатоник гаммала билдәле бер баҫҡыстан бишенсе баҫҡыска тиклемге ара (мәҫәлән, *до нотаһынан соль нотаһына тиклем ара: до-ре-ми-фа-соль*). □ Квинта *(интервал в диатонической гамме).*

3. *муз.* Скрипка йәки башҡа ҡыллы инструменттарҙың иң нәҙек тауышлы ҡылы. □ Квинта *(самая высокая по тону струна).*

4. *спорт.* Фехтованиела спортсының һөжүмде кире ҡағыу һәм үҙе һөжүм итеү ысулдарының бишенсе төрө. □ Квинта *(пятый способ отражения и нанесения удара).*

КВИНТЕТ [рус. < лат. *quintus* 'бишенсе'] (Р.: квинтет; И.: quintet(te); Т.: kuintet) *и. муз.*

1. Биш инструмент йәки биш тауыш менән башҡарыла торған музыка әҫәре. □ Квинтет *(музыкальное произведение для пяти исполнителей). Салауат Низаметдинов квинтеты. Квинтет башҡарыу. Ҡыллы инструменттар өсөн яҙылған квинтет. Квинтет яҙыу.*

2. Биш музыканттан йәки биш йырсынан торған ансамбль. □ Квинтет *(ансамбль из пяти исполнителей). Йырсылар квинтеты. Скрипкасылар квинтеты. Ҡурайсылар квинтеты. Ирҙәр квинтеты.*

КВИНТИЛЛИОН [рус. < лат. *quintus* 'бишенсе'] (Р.: квинтильон; И.: trillion; Т.: trilyon) *и.*

Бер артынан ун һигеҙ нуль менән бирелгән һан. □ Квинтильон *(число, изображаемое единицей с 18-ю нулями). Бер миллиардты бер миллиардҡа ҡабатлаһаң, бер квинтиллион була.*

КВИНТЭССЕНЦИЯ [рус. < лат. *quinta essentia* 'бишенсе асыл'] (Р.: квинтэссенция; И.: quintessence; Т.: cevher) *и.*

Асыл, нигеҙ, төп. □ Квинтэссенция; основа, сущность *чего-л. Телмәрҙең квинтэссенцияһы.*

КВИТАНЦИЯ [рус. < ит. *quitanza*] (Р.: квитанция; И.: receipt; ticket; Т.: makbuz) *и.*

Аҡса, ҡиммәтле ҡағыҙ, документ һ. б. тапшырғанда бирелә торған рәсми ҡағыҙ. □ Квитанция. / Квитанционный. *Аҡса түләгәнгә квитанция. Багажды квитанция менән алыу. Квитанция яҙып биреү. Торлаҡ өсөн түләү квитанцияһы.*

КВОРУМ [рус. < лат. *quorum*] (Р.: кворум; И.: quorum; Т.: yetersayı) *и.*

Рәсми йыйылышты, ултырышты тулы хоҡуҡлы итеп һанау өсөн кәрәк булған ағзалар һаны. □ Кворум. *Кворумды билдәләү. Йыйылыш үткәреү өсөн кворум етмәү. Кворум юҡ. Кворум булдырыу.* ■ *Өс көн рәттән клубҡа бер нисә кеше килә лә, кворум етмәйенсә, йыйылышты үткәрә алмай ҡайтып китәләр.* Интернет селтәренән. *Йыйылыусы ата-әсәләр һаны бик аҙ булһа ла, кворумға тулды тип, йыйылышты асыҡтырып астылар.* Й. Солтанов. *[Сибәғәтуллина:] Бына бөгөн беҙҙең коллектив та бер кеше күрһәтергә тейеш. Кворум бар.* Д. Бүләков.

КВОТА [рус. < лат. *quota* 'күпме'] (Р.: квота; И.: quota; Т.: kota) *и. иҡт.*

1. Өлөш, күләм, нисбәт, рөхсәт ителә торған норма. □ Квота. *Импорт квотаһы. Квота алыу. Юғары уҡыу йортона квота буйынса инеү. Квота биреү.*

2. Синдикатта йәки картелдә ҡатнашыусыларҙың һәр ҡайһыһы етештерергә

йәки һатырға хаҡлы булған тауарҙар күләме. □ Квота. *Квота буйынса етештереү. Һатыу квотаһы. Квота ҡуйыу.*

КЕБИ (Р.: как будто; И.: as if; Т.: gibi) *бәйл. иҫк. кит.*

Кеүек. □ Как будто, как, будто *(послелог, употребляющийся с основным падежом существительных, прилагательными, родительным падежом местоимений).* ■ *Шул саҡ залимдар ҙа әсәнән тыумыштай вә ғәләмәт баш күтәрмәмеш кеби булырҙар ине, бәлкем.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡасан ғына яҡтырыр ҡара юлым, күләс йөҙлө юлдашым кеби?* М. Өмөтбаев.

КЕБЛӘ (Р.: тля; И.: plant louse; Т.: yaprak biti) *и. зоол.*

Үҫемлек һуты менән туҡлана торған ваҡ бөжәк; ағас бете, үлән бете. □ Тля. *Ҡыяр кебләһе. Кебләне бөтөрөү.* ■ *Ҡомһоҙ ҡуңыҙҙар, ҡамҡалар һәм уларҙың ҡарышлауыҡтары ағас-үлән кебләләрен бөтөрә.* Интернет селтәренән.

КЕГЛИ [рус. < нем. *Kegel*] (Р.: кегли; И.: skittles; Т.: çomak) *и. спорт.*

1. Билдәле тәртиптә урынлаштырылған ҡыҫҡа таяҡтарҙы шар менән һуғып уйнай торған уйын. □ Кегли *(игра). Кегли уйынында еңеү. Кегли тубы. Кегли буйынса ярыш үткәреү.*

2. Кегли уйыны өсөн яһалған ҡыҫҡа таяҡтар. □ Кегли *(деревянные или пластмассовые столбики для этой игры). Кеглиҙарҙы теҙеп ҡуйыу. Кеглиҙарҙы туп менән бәреп йығыу. Ағас кегли.*

КЕГЛЬ [рус. < нем. *Kegel*] (Р.: кегль; И.: point; Т.: punto) *и. полигр.*

Баҫмаханала ҡабул ителгән хәрефтәр үлсәме. □ Кегль. *Һигеҙенсе кегль. Уныңсы кегль менән баҫыу. Текст хәрефтәренең кеглен алыштырыу.*

КЕГЛЬБАН [рус. < нем. *Kegelbahn* 'кегли өсөн юл'] (Р.: кегльбан; И.: bowling/skittle alley; Т.: kiy oyunu alanı) *и.*

Кегли уйнағанда эре шарҙарҙы тәгәрәтеү өсөн махсус юл йәки шундай юлы булған бина. □ Кегльбан. *Кегльбанға барыу. Кегльбан төҙөү.*

КЕГҮҘӘК (кегүҙәге) *и. диал. ҡар.* **боғарлаҡ.**

КЕДА [рус.] (Р.: кеды; И.: gym shoes; Т.: kes) *и.*

Спорт аяҡ кейеме. □ Кеды. *Ирҙәр кедаһы. Ҡатын-ҡыҙҙар кедаһы. Балалар өсөн кеда.*

КЕДР [рус. < гр. *kedros*] *и. бот. ҡар.* **эрбет.** ■ *Кедрҙың изге ағас икәнен кемдәндер ишеткәйне Мәҙинә.* Т. Ғарипова.

КЕҘГЕТ (Р.: удод; И.: hoopoe; Т.: çavuş-kuşu, ibibik) *и. зоол. диал.*

Супайлы, кәкре суҡышлы сыбар ҡош; һөҙһөт. □ Удод (лат. *Phoeniculus bollei*). ■ *Кеҙгеттең бүркендә һәм ҡанаттарында сөм ҡара һыҙыҡтар бар.* Э. Ишбирҙин.

КЕҘҘӘҮЕК (кеҙҙәүеге) (Р.: полынья; И.: ice hole; Т.: oyuk) *и. диал.*

Һыуҙың ҡыш көнө туңмай ятҡан урыны; йылыу. □ Полынья.

КЕҘЕ I *и. диал. ҡар.* **кеҙә I.**

КЕҘЕ II (Р.: упрямый; И.: obstinate, stubborn; Т.: inatçı) *с. диал.*

Үҙ һүҙле, әйткәнде ҡабул итмәҫ, ҡарышмал. □ Упрямый, непослушный. *Кеҙе бала. Кеҙе ҡатын. Ул үтә кеҙе кеше.* ■ *[Усманов:] Иллә кеҙе кешеһең икән, Йәнтимер, — тип әйтеп ҡуйҙы ул, ахыр сиктә асыуын йәшермәйенсә.* Ғ. Вәлиев. *[Азамат менән Рәйфә] бик матур итеп һөйләшеп ултырҙылар, быға саҡ кеҙе тойолған Рәйфә лә асылып киткәндәй булды.* Р. Солтангәрәев. *Яуымбайҙың үҙ һүҙле, кирегә бөткән кеҙе әҙәм икәнлеген белһә лә, секретарь уның шулай өҙә һөйләшеүенә, уҫал ҡыланыуына аптырабыраҡ ҡалды.* Н. Мусин.

КЕҘЕЛЕ *с. ҡар.* **кеҙе II.**

КЕҘЕЛЕК (кеҙелеге) (Р.: упрямство; И.: stubbornness; Т.: inat) *и.*

Кирелек, тиҫкәрелек, үҙһүҙлелек. □ Упрямство, непослушание. *Кеҙелек күрһәтеү. Кеҙелеге ялҡытты.* ■ *Бәлки, был Гөлсөмдөң ҡыҙҙар кеҙелеген күрһәтергә теләү генә булғандыр.* Н. Мусин.

КЕҘЕЛӘНЕҮ (кеҙелән-) (Р.: упрямиться; И.: be obstinate; Т.: inat etmek) *ҡ.*

Киреләнеү, тиҫкәреләнеү, ҡарышыу; сығынлау. □ Упрямиться, стать упрямым, стать непослушным. *Кеҙеләнеп ултырыу.*

Кеҙеләнеп йөрөү. Ҡыҙ кеҙеләнә. Кеҙеләнеүҙе туҡтатыу. ■ *Гөлсөм ниңә кеҙеләнә икән?* Н. Мусин.

КЕҘЕЛӘҮ (кеҙелә-) *ҡ. диал. ҡар.* **кеҙәләү I.**

КЕҘЛӘҮ (Р.: исток родника; И.: spring head; Т.: pınar) *и. диал.*

Шишмә сыҡҡан урын. □ Исток родника, начало родника. *Кеҙләүҙе таҙартыу. Кеҙләү табыу. Кеҙләүҙе картәләп ҡуйыу.*

КЕҘӘ I (Р.: путы; И.: hobble; fetterlock; Т.: köstek) *и.*

Бейәне һауған саҡта артҡы һыңар аяғын муйынына тарттырып бәйләй торған бау. □ Путы для подтягивания задней ноги кобылы к шее при дойке. *Ҡайыш кеҙә. Сус кеҙә. Яҫы кеҙә. Кеҙәне бушатыу.*

КЕҘӘ II *и. диал. ҡар.* **келә 1.** ■ *Ике-өс ҡыҙ ишекте астырмаҫҡа була кеҙәгә килеп йәбеште.* Ж. Кейекбаев.

КЕҘӘЛӘҮ I (кеҙәлә-) (Р.: наложить путы; И.: clog; tether; Т.: köstek vurmak) *ҡ.*

Кеҙә (I) һалып бәйләү. □ Наложить путы. *Кеҙәләп һауыу.* ■ *Ир-ат һайт-һайтлап йылҡы өйөрә, ҡатын-ҡыҙ бейә кеҙәләргә, һыйыр һауырға ашыға.* Ә. Хәкимов.

КЕҘӘЛӘҮ II (кеҙәлә-) (Р.: запирать на крючок; И.: hook; Т.: kilitlemek) *ҡ. диал.*

Келә һалыу. □ Запирать на крючок *(дверь). Ҡапҡаны кеҙәләү. Эстән кеҙәләү. Мунса ишеген кеҙәләү.*

КЕҘӘҮ I (кеҙә-) *ҡ. ҡар.* **кеҙәләү I.**

КЕҘӘҮ II *и. диал. ҡар.* **ҡаяу.** *Ҡорт кеҙәүе.*

КЕҘӘҮ III *и. диал. ҡар.* **энә күҙе.** *Кеҙәүгә еп үткәреү.*

КЕҘӘҮ IV *и. диал. ҡар.* **тышау.** *Атты кеҙәп яланға ебәреү.*

КЕЖЛӘҮ (кежлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **көйөү.**

КЕЙ *киҫ. диал. ҡар.* **бит.**

КЕЙГЕҘЕҮ (кейгеҙ-) *ҡ. диал. ҡар.* **кейҙереү.**

КЕЙҘЕРЕЛЕҮ (кейҙерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **кейҙереү 1–4.** *страд. от* **кейҙереү 1–4.** ■ *Йүгерек батыр бер көнләк юлда йоҡлап ята, тын алыуына ҡарағанда, башына әллә нәмә кейҙерелгән булһа кәрәк.* Әкиәттән. *«Жигули» янында ҡулына наручник кейҙерелгән егет ерҙә йөҙ түбән ята ине.* Д. Бүләков.

КЕЙҘЕРЕҮ (кейҙер-) (Р.: надевать; И.: put on; Т.: giydirmek) *ҡ.*

1. *Кемгәлер* кейем кейергә ярҙам итеү. □ Надевать *что-л.* на *кого-л. Йылы свитер кейҙереү. Бүрек кейҙереү. Салбар кейҙереү. Эске күлдәк кейҙереү.* ■ *Яланбикә үҙенең көпөһөн ҡабаланып сисеп, уға [Гөлйөҙөмгә] кейҙерҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Таиба ҡоҙағыйы [Бибешкә] биш билле ҡыҙыл соға камзул теген кейҙерҙе.* З. Биишева. ● *Күңелһеҙгә күлдәк кейҙермәйҙәр.* Мәҡәл.

2. Берәй нәмәне өҫтән көпләү, тышлау. □ Надеть, натянуть, надвинуть *что-л. на кого-л., что-л. Мендәр тышын кейҙереү. Юрғанға тыш кейҙереү. Гитараға көп кейҙереү.* ■ *Ҡолондо өшөтмәҫ өсөн бабай менән әбей көпө тегә һалып кейҙергән.* Әкиәттән.

3. *күсм.* Кейем бүләк итеү. □ Подарить *что-л. кому-л. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға күлдәк кейҙереү.* ■ *Ебәк елән кейҙермәне яҙмыш, уҡа менән биҙәп, ҡайытып, ғүмерлеккә һалды минең билгә туҙмай торған һалдат ҡайышын.* М. Кәрим.

4. *Нимәлер* аша үткәреп йәки эләктереп өҫтән ҡуйыу. □ Надеть, насадить. *Алҡа кейҙереү. Атҡа йүгән кейҙереү. Арба күсәренә тәгәрмәс кейҙереү. Ҡороҡ кейҙереү. Атҡа ауыҙлыҡ кейҙереү. Ҡамыт кейҙереү. Генератор шкифына ҡайыш кейҙереү.* ■ *Ен ҡыҙы Әлеүкәйҙең бармағына балдаҡ кейҙереп киткән, ти.* Әкиәттән. ● *Бер атҡа ике ҡамыт кейҙермәйҙәр.* Мәҡәл. *Йүнһеҙгә йүгән кейҙермә.* Мәҡәл. *Бармаҡ йөрөт — аҡ эйҙер, бәке йөрөт — ҡын кейҙер.* Мәҡәл. *Һыйырға ҡамыт кейҙермәйҙәр.* Мәҡәл.

КЕЙҘЕРЕШЕҮ (кейҙереш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кейҙереү.** *взаимн. от* **кейҙереү.**

КЕЙЕҘ [боронғо төрки *кечә*] (Р.: войлок; И.: felt; Т.: keçe) *и.*

Һарыҡ йөнөнән махсус эшкәртеп баҫылған ҡаралды әйбере. □ Войлок, кошма. / Войлочный. *Кейеҙ түшәү. Кейеҙ йәйеү. Ҡамыт кейеҙе. Ыңғырсаҡ кейеҙе. Ҡалын кейеҙ. Кейеҙ олторак. Кейеҙ ҡалпаҡ.* ■ *Ишек төбөнә еткерелеп түшәлгән кейеҙҙәр тирмә эсенә айырым һын биргән, ҡунаҡтар үҙҙәренең дәрәжәләренә ҡарап бүлеп ултыртылған.* Т. Хәйбуллин. *Һармыттар яғынан да ҡорбан*

байтаҡ ине. Яралыларҙың йәрәхәттәренә көйгән кейеҙ баҫып ҡанын туктатып, ҡалғә эсенә алып инделәр. З. Ураҡсин. *Биктимер .. ит-май еҫенә ыҫланған аласыҡтың түптәге мөйөшөндәрәк ҡатҡан кейеҙ киҫәгенә һуҙылып, эйәр аламаһына башын терәп, ғәмһеҙ йоклай ине.* К. Мәргән. ● *Кейеҙ өйөм — буҙ өйөм, керһәм-сыкһам — үҙ өйөм.* Мәҡәл. *Дуҫың бысағы менән мөгөҙ киҫ, дошманың бысағы менән кейеҙ киҫ.* Мәҡәл. *Ҡара кейеҙ ағармай.* Мәҡәл. *Куктән кейеҙ яуһа ла, ҡолға олторак теймәҫ.* Мәҡәл. *Тукмағы ҙур булһа, кейеҙ ҡаҙыҡ та ергә керә.* Мәҡәл.

КЕЙЕҘ БАҪЫУ (кейеҙ баҫ-) (Р.: изготовить войлок; И.: make felt; Т.: keçe yapmak) *ҡ.*

Һарыҡ йөнөн махсус эшкәртеү. □ Изготовить войлок, валять (катать) кошму. *Кейеҙ баҫырға өйрәнеү. Кейеҙ баҫыу тәртибе. Кейеҙ баҫыу һөнәре.*

КЕЙЕҘ БАҪЫУСЫ (Р.: кошмовал; И.: fuller; Т.: keçeci) *и.*

Кейеҙ баҫыу оҫтаһы. □ Кошмовал, валяльщик. *Кейеҙ баҫыусы булыу.*

КЕЙЕҘГАЛУШ (Р.: валенки с короткими голенищами; И.: boots with short tops; Т.: keçe çizme) *и. диал.*

Ҡыҫҡа ҡуныслы быйма. □ Валенки с короткими голенищами.

КЕЙЕҘГӘ БАҪТЫРЫУ (кейеҙгә баҫтыр-) (Р.: обряд стилания белой кошмы перед невестой; И.: to lay a white rug in front of the bride; Т.: gelinin ayağı altına beyaz keçe sermek) *и. этн.*

Төшкән килендең аяҡ аҫтына аҡ кейеҙ һалыу. □ Обряд стилания белой кошмы перед невестой. ■ *Беҙҙең яҡта килендәрҙе аҡ кейеҙгә баҫтыралар.* Экспедиция материалдарынан.

КЕЙЕҘГӘК (Р.: сбитый; И.: tangled; Т.: karışık) *с. диал.*

Кейеҙләнгән, ойошҡан. □ Сбитый, спутанный *(о шерсти).*

КЕЙЕҘҒАТА *и. ҡар.* **кейеҙ ҡата.**

КЕЙЕҘҒОЛАҠ (кейеҙғолағы) (Р.: своенравный человек; И.: crotchety man; Т.: inatçı) *и. диал.*

Үҙ һүҙле кеше. □ Своенравный, упрямый человек. ■ *Беҙҙең Тимеркәй бик кейеҙғолаҡ, бер ҙә әйткәнде ишетмәй.* М. Буранғолов. *Донъяның һаҡсыһы, ҡараусыһы булып өсөн осло күҙ, һаҡ ҡолаҡ кәрәк, ә күрәғарау, кейеҙғолаҡ түгел.* Р. Солтангәрәев.

КЕЙЕҘҘӘ ТӘГӘРӘТЕҮ (Р.: катание на войлоке; И.: roll the felt; Т.: hamile kadının keçede yuvarlanması) *и. этн.*

Ауырлы ҡатынды тулғаҡ ваҡытында хәлен еңеләйтеү өсөн кейеҙҙә тәгәрәтеү йолаһы. □ Катание беременной женщины во время схваток в войлоке для облегчения родов.

КЕЙЕҘ ИТЕК (итеге) *и. диал. ҡар.* **быйма.**

КЕЙЕҘ КАЛУШ *и. ҡар.* **кейеҙ ҡата.**

КЕЙЕҘ ҠАТА (Р.: войлочные боты; И.: felt boots; Т.: keçe çizme) *и.*

Ҡыҫҡа ҡуныслы итеп баҫылған быйма. □ Войлочные боты. *Кейеҙ ҡата баҫыу. Кейеҙ ҡата кейеү.*

КЕЙЕҘҠОРҺАҠ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени кыпчак.

КЕЙЕҘЛӘНДЕРЕҮ (кейеҙләндер-) (Р.: свалять; И.: felt; Т.: keçe yapmak) *ҡ.*

Кейеҙгә әйләндереү, кейеҙ һымаҡ итеү. □ Свалять, превратить в кошму. *Ойоҡто кейеҙләндереү.*

КЕЙЕҘЛӘНЕҮ (кейеҙлән-) (Р.: сваляться; И.: felt; Т.: keçe yapmak) *ҡ.*

Кейеҙ һымаҡҡа әйләнеү, кейеҙ һымаҡ булыу. □ Сваляться, спутываться; сбиваться, садиться. *Свитер кейеҙләнгән. Йыуа-йыуа шәл кейеҙләнде. Баланың сәсе кейеҙләнгән. Үлән кейеҙләнеп ята.* ■ *Йөн әйберҙәргә бер ваҡытта ла ҡайнар һыу һибергә, эҫе һыуҙа йыуырға ярамай, сөнки ул кейеҙләнә.* «Башҡортостан», 14 май 2005. *Улар [Шәүрә менән Емеш] ситән буйында айырыуса йомшаҡ ҡалын булып кейеҙләнеп ятҡан бөҙрә ҡаҙ үләндәре өҫтөнә һуҙылып яттылар.* З. Биишева. *Нисек тура килһә, шулай ғына тамаҡланып, туйҙырылып йөрөгән сыҙамлы*

аттар һамһырағандар, яҙға карыш уларҙың йөндәре оҙонайып, ябағалары ҡойола, ҡыҙыл-армеецтарҙың салбар, салғыйҙарына кейеҙләнеп йәбешәләр. А. Таһиров.

КЕЙЕҘЛӘҮ (кейеҙлә-) (Р.: обивать войлоком; И.: felt; Т.: keçe ile kaplamak) *ҡ.*

Кейеҙ ҡуйыу, кейеҙ менән көпләү. □ Обивать войлоком. *Мунса ишеген кейеҙләү. Ыңғырсаҡ кейеҙләү. Ҡамыт кейеҙләү.* ■ *[Сәлих:] Ҡамыттарыңды ла ебәр, яңынан мөйәтләп, кейеҙләп бирермен.* Ф. Иҫәнғолов.

КЕЙЕҘ ОЙОҠ (ойоғо) (Р.: суконные чулки; И.: stockings made of cloth; Т.: keçe çorap) *и. диал.*

Кейеҙҙән яһалған ойоҡ; тула ойоҡ. □ Суконные чулки. *Кейеҙ ойоҡ бәйләү. Кейеҙ ойоҡ кейеү.*

КЕЙЕҘСЕ *и. ҡар.* **кейеҙ баҫыусы.**

КЕЙЕҘ ТИРЛЕК (тирлеге) (Р.: войлочный потник; И.: felt sweat cloth; Т.: keçe eğre) *и.*

Эйәрҙең үҙлеге аҫтынан һалына торған кейеҙ. □ Войлочный потник. *Эйәр аҫтына кейеҙ тирлек һалыу.*

КЕЙЕҘ ЭНӘҺЕ (Р.: войлочная игла; И.: needle felted; Т.: keçe iğnesi) *и.*

Ҙур йыуан энә. □ Войлочная игла, используемая в войлочных работах.

КЕЙЕК I [боронғо төрки *кәгик*] (Р.: дикий; И.: wild; Т.: vahşi) *с.*

Кешегә эйәләшмәгән; ҡырағай. □ Дикий, неприрученный. *Кейек ҡаҙҙар. Кейек йәнлектәр. Кейек йырткыстар.* ■ *Ҡош юлдары калкһа күк йөҙөндә, кейек ҡоштар осор төньякка.* Халыҡ йырынан. *Буранлы ҡыш касан үтер әле, касан килер кейек ҡаҙҙарың.* Картотека фондынан. *Яуап биреп, кейек ҡаҙҙар оса, тулҡын ҡаға, ярһып, ҡаяға.* Х. Назар.

КЕЙЕК II (кейеге) (Р.: дикие животные; И.: wild animals; Т.: av hayvanları) *и.*

1. Ҡырағай йәнлек. □ Дикие животные; зверь; дичь. *Кейек атып алыу. Кейек ҡыуыу. Дала кейеге. Кейеккә осрау. Урман кейеге.* ■ *Сырылдатып бүре олотоп, оран һалдырып кейек ҡыуҙырып, сутылдатып мең төрлө ҡош-ҡорт һайраткан был ялан ул миҙгелен юғалтты.* Т. Хәбибуллин. *Заповедникта бит кеше менән кейек араһында яҡын дуҫлыҡ булырға тейеш.* Н. Мусин. *Кейектәрҙең артынан, өйөрмәләй булып, туҙан бағанаһы күтәрелеп ҡала.* Ә. Хәкимов. ● *Оскан ҡош, йүгергән кейек — һәр береһе «ризыҡ» ти.* Мәҡәл. *Бер тау бер кейекте туйҙырмаҫ.* Мәҡәл. *Ышанған тауҙа кейек юҡ.* Мәҡәл.

2. *диал.* Ҡоралай, илек. □ Косуля.

КЕЙЕК ЙӘНЛЕК (йәнлеге) *и. диал. ҡар.* **кейек II, 1.**

КЕЙЕК ҠОРТ (Р.: одичавший рой; И.: gone wild bee; Т.: yabanileşmiş oğul) *и. диал.*

Ҡырға ҡунған күс. □ Одичавший рой. ■ *Кейек ҡорттарҙың балы шифалы була.* Экспедиция материалдарынан.

КЕЙЕКЛЕ (Р.: имеющий зверей; И.: having game; Т.: av hayvanları olan) *с.*

Ҡырағай йәнлектәре булған *(урман, яландар һ. б.).* □ Имеющий зверей, богатый дикими животными *(о лесах, степях и т. п.). Кейекле урманда йөрөүе ҡурҡыныс.*

КЕЙЕКЛӘНЕҮ (кейекллән-) (Р.: дичать; И.: turn wild; Т.: vahşileşmek, yabanileşmek) *ҡ.*

Ҡырағайға әйләнеү; кейекһеү. □ Дичать, стать диким. *Кеше күрмәгән мал кейекләнә.* ■ *Улар [йылҡылар] күмәгәйгән, кеше күрмәй кейекләнеп киткән, ти.* Әкиәттән.

КЕЙЕКСЕ (Р.: охотник; И.: trapper; Т.: avcı, sayyat) *и.*

Һунарсы, аусы. □ Охотник, зверолов. *Тәжрибәле кейексе.* ■ *Гөлсөм заповедникта тәүҙә кейексе, унан һаҡсы булып ун һигеҙ йәшенән (бына хәҙер дүрт йыл инде) эшләй.* Н. Мусин.

КЕЙЕКҪЕҮ (кейекҫе-) *ҡ. диал. ҡар.* **ҡырағайланыу.** *Кейекҫегән мал.*

КЕЙЕКҺЕҘ (Р.: без дичи; И.: with no game; Т.: av hayvanları olmayan) *с.*

Кейеге юҡ. □ Без дичи, без зверей. *Кейекһеҙ урман.* ● *Кейекһеҙ ер булмаҫ.* Мәҡәл.

КЕЙЕКҺЕҮ (кейекһе-) *ҡ. ҡар.* **ҡырағайланыу.** *Кейекһегән эт. Кейекһегән мал.*

КЕЙЕК-ЯНУАР (Р.: дичь; И.: game; Т.: av hayvanları) *и. йыйн.*

Ниндәй ҙә булһа ҡырағай йәнлек. □ Дичь, дикие животные. *Урман тулы кейек-януар.* ■ *Ә уға [Мәликәгә] был хәлендә буран олоуын, уның бихисап кейек-януар*

ауаздары сығарып .. тулағанын тыңлай-тыңлай бауырына һары һауҙырған алыҫ хәтирәләренә бирелеүҙән башка һис бер әмәл юк. Т. Ғарипова. *Яралы егет һаман да шул кейек-януарҙар менән мәшғүл икән, — тип шаяртты Колансәс.* Ғ. Хөсәйенов.

КЕЙЕЛГӘН (Р.: ношеный; И.: second hand worn; Т.: eskimiş) *с.*

Өр-яңы түгел, кейеп йөрөлгән, *ниндәйҙер* кимәлдә таушалған. □ Ношеный, поношенный. *Кейелгән салбар. Кейелгән тун. Кейелгән быйма.* ■ *Мырҙакай башындағы күп кейелгән тәүәккәл бүркен күтәреберәк кейҙе.* Г. Дәүләтшин. *Һалдаттар хужаға бер пар һалдат күлдәк-ыштаны, бер кейелгән сукно гимнастёрка бирергә булдылар.* Д. Юлтый. *[Ғата] тәүҙә, аҙна буйы унда-бында һуғылып, ят каланы түйғансы тамаша кылды, бер матростан кейелгән күн пинжәк, кәбеҫтәле (краблы) фуражка һатып алды.* Ә. Хәкимов.

КЕЙЕЛЕҮ (кейел-) *к. төш. кар.* **кейеү.** *страд. от* **кейеү.** ■ *Балдак шунда ук кыҙҙың бармағына үҙенән-үҙе кейелгән дә куйған.* Әкиәттән. *Аяктағы резина итек һалкын ысыктан коткарыр, трико тышынан кейелгән буҫтау салбар, куртка, калын фуражка тәүҙә серәкәйҙән, аҙак күгәүендән һаклар.* Д. Шәрәфетдинов. ● *Якшы катын тун текһә, йөй-йөйөнән кителер; яман катын тун текһә, бер кейелмәй һүтелер.* Мәкәл.

КЕЙЕМ I [боронғо төрки *кәдүү; кәдим*] (Р.: одежда; И.: clothes; Т.: giyim) *и.*

1. Тәнде каплау һәм йылылык өсөн тукыма, йөн, тиренән һ. б. тегелгән нәмә. □ Одежда, одеяние. / Одёжный. *Ирҙәр кейеме. Катын-кыҙҙар кейеме. Эш кейеме. Юл кейеме. Йәйге кейем. Кышкы кейем. Йока кейем. Иҫке кейем. Купшы кейем. Тышкы кейем. Эске кейем. Йылы кейем. Затлы кейем. Хәрби кейем. Аяк кейеме. Баш кейеме. Өҫ кейеме. Кейем шкафы. Кейем щёткаһы.* ■ *Урамдағы бөтә нәмәләр, тәҙрәләр, стеналар, хатта кешеләрҙең кейемдәре лә күҙҙе сағылдыралар.* С. Агиш. *Салауаттың кейгән кейемкәйе корос кына күлдәк-түңгәләк.* Халык йырынан. *Бәкерҙең шундай эшкә кейә торған махсус кейеме бар: ак күлдәк, һоро салбар.* Н. Ғәйетбаев. ● *Кейемдең яңыһын макта, дуҫтың иҫкеһен макта.* Мәкәл. *Кейемде кейеүҙә түгел, элеүҙә.* Мәкәл. *Кешене кейеменә карап баһалама, эшенә карап баһала.* Мәкәл. *Киң кейем туҙмаҫ, кәңәшле ил аҙмаҫ.* Мәкәл. *Атыу-тороу байҙарса, өҫтә кейем йокарак.* Мәкәл. *Ак кейем кер тотмай.* Мәкәл. *Кейемгә карап каршы алалар, акылға карап оҙаталар.* Мәкәл. *Ғүмер уҙа, кейем туҙа.* Мәкәл. *Якшы кейемде кейеүең — бер ғүмер.* Мәкәл.

2. Һан менән кулланғанда, өҫ-башка кейеп йөрөй торған ишле нәмәне аңлата. □ При употреблении с числительными выражает парные одеяния; пара. *Бер кейем туфли. Бер кейем күлдәк-ыштан. Дүрт кейем башалтай.* ■ *Гөлзәғифә инәй — бер кейем йөн ойок, дебет шарф, карағат кағы, ә Туктук бабай үҙенең якшы тире бейәләйен бирҙе.* Й. Солтанов. *[Көнбикә:] Бәй-бәй, иртә менән хәрәпселәп кайҙа сығып киттеләр икән? Үҙе, йәһәтләп тағы бер кейем сарык тегәйек, тигән була бит әле.* Н. Мусин. *«Бүтәндәр бер кейем сабата туҙҙырғанда, миңә бер һыңары етә», — тип шапырына [Шәрәй].* М. Кәрим.

3. Кешенең статусын, матди хәлен һ. б. белдереүсе әйбер. □ Форма, одежда. *Хәрби кейем. Тимер юлсы кейеме. Кимммәтле кейем.*

4. *миф.* Ышаныуҙар буйынса, яҙмышты билдәләү, һаклау, түл арттырыу функцияһына эйә әйбер. □ Мифологизированные предметы, выполняющие обережную и отгонную функции. ■ *Йығылып ауырыған баланың кейемен систереп, әле генә һуйылған тауык канына буяп, далаға, ете юл сатына ташлағандар.* Экспедиция материалдарынан.

КЕЙЕМ II (Р.: постельные принадлежности; И.: bedding; Т.: yatak çamaşırı) *и. диал.*

Түшәк кәрәк-ярағы. □ Постельные принадлежности.

КЕЙЕМ-КАРА (Р.: одежда; И.: clothes; garment; Т.: giyim) *и. йыйн.*

Тәнгә кейә торған төрлө кейем; кейемһалым. □ Одежда, одеяние. *Кейем-кара әҙерләү. Кеше араһына сығырға кейем-караһы юк. Өр яңы кейем-кара кейгән.*

КЕЙЕМЛЕ (Р.: одетый; И.: clad; Т.: giyimli) *с.*

1. Кейеме бар, кейем кейгән. □ Одетый, имеющий одежду, в одежде. *Иҫке кейемле ярлы-ябаға. Кейемле булыу. Ап-аҡ кейемле ҡыҙ.* ■ *Ул [Төлйөҙөм] ярға еттем тигәндә, баҫҡыста бер ҙур кәүҙәле ҡара кейемле кеше осраны.* Һ. Дәүләтшина. *Бына ап-аҡ һаҡаллы, ап-аҡ кейемле, таяҡлы һәм оло кәрзинле Ҡыш бабай менән Миңлебикә апай килеп инде.* Р. Солтангәрәев.

2. Кейемгә бай, кейеме күп. □ Богатый на одежду, имеющий много одеяний. *Кейемле кеше. Ул бик кейемле.* ■ *Шул иҫәптән Емеш тә эске күлдәктән алып пальтоға хәтле кейемле булды.* З. Биишева.

КЕЙЕМЛЕК (кейемлеге) (Р.: ткань; И.: stuff; length (of material); T mensucat) *и.*

1. Кейемгә етерлек итеп ҡырҡылған туҡыма. □ Ткань *(отрез товара для шитья одежды). Кейемлек һатып алыу. Өс метр ебәк кейемлек.* ■ *Бержандың юлдаштарына кейемлек ебәк менән хәтфә бирелде.* Картотека фондынан. *Әллә апайыңдар менән баярға ураҡҡа китәһеңме? Күңелең дә асылып ҡалыр, өҫ-башыңа кейемлек аҡсаң да булыр.* Д. Юлтый.

2. *диал. ҡар.* **кәфенлек.** *Кейемлек әҙерләү.*

КЕЙЕМЛӘҮ (кейемлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **кәфенләү.**

КЕЙЕМНЕК (кейемнеге) *и. диал. ҡар.* **кәфенлек.**

КЕЙЕМ ТАРТМАҺЫ I (Р.: оберег для установления связи между домами невесты и жениха; И.: amulet; T.: muska) *и. этн.*

Туй йолаһында килен менән кейәү өйҙәрен яҡынайтыу өсөн ҡулланылған сакраль бау. □ Мифологизированный предмет, оберег для установления связи между домами невесты и жениха.

КЕЙЕМ ТАРТМАҺЫ II (Р.: верёвка для перетягивания сложенных постельных принадлежностей; И.: rope for dragging linen; T.: yatak çamaşırlarını bağlayan bağ) *и. диал.*

Өйөлгән урын әйберҙәрен тарттырып бәйләп ҡуйған бау. □ Верёвка для перетягивания сложенных постельных принадлежностей.

КЕЙЕМ-ҺАЛЫМ (Р.: одежда; И.: clothes; garment; T.: giyim) *и. йыйн.*

Тәнгә кейә торған төрлө кейем; кейем-ҡара. □ Одежда, одеяние. *Кейем-һалымы юҡ. Кейем-һалым алыу. Кейем-һалымға бай.* ■ *Ул [Әхмәш] ҡупшы кейем-һалымға ла бик әүәҫ кеше.* Б. Бикбай. *Ялбыр баш егет унан-бынан йөрөп өҫтәлендәге ҡағыҙҙарҙы йыйҙы, кейем-һалым туҙышып ятҡан карауатын тәртипкә килтереп маташты, шунан алғы яҡҡа йүгереп сыҡты.* Н. Мусин. *Шулай ҡаңғырып йөрөй торғас, ул [Шәрғиә] ҡайһы бер кейем-һалымын аҙыҡҡа алмаштырырға уйлап, баҙарға китте.* Ә. Хәкимов.

КЕЙЕМҺЕҘ (Р.: без одежды; И.: with no clothes on; T.: giyimsiz) *с.*

1. Кейеме булмаған, кейем киймәгән. □ Без одежды, не одетый. ■ *[Һолтанбай:] Ҡыш башланған, өҫ кейемһеҙ ҡайһылай итеп йөрөйһөң?* Н. Мусин ● *Һыуыҡ эт менән кейемһеҙгә үс булыр.* Мәҡәл. *Яҙын аҙыҡһыҙ, көҙөн кейемһеҙ юлға сыҡма.* Мәҡәл.

2. Кейемгә ярлы. □ Бедный на одеяние. *Кейемһеҙ интегеү.* ■ *Кейемһеҙ, өйҙә ултырған етем бала таралды урмандарға сәскә тиреп.* М. Аҡмулла. *Кейемһеҙлек арҡаһында оҙон ҡыш буйына өйгә бикләнергә мәжбүр булған бала-саға, ҡояш йылыта башлау менән, оянан яңы сыҡҡан тауыҡ себештәре шикелле, тышҡа һибелә.* З. Биишева.

КЕЙЕМ ШАРШАУЫ (Р.: занавес; И.: rope for dragging linen; T.: perde, dışperde) *и. диал.*

Эленгән өҫ кейемдәрен ҡаплап торған шаршау. □ Занавес, прикрывающий одежду на вешалках.

КЕЙЕМ ЭЛГЕС (Р.: вешалка; И.: peg, rack, stand; T.: portmanto) *и.*

Кейем элеү өсөн тәғәйенләнгән нәмә. □ Вешалка. *Шифоньерҙан кейем элгесте алыу. Салбарҙы кейем элгескә элеү.*

КЕЙЕН *бәйл. диал. ҡар.* **кире, һуң.**

КЕЙЕНДЕРЕҮ I (кейендер-) (Р.: одевать; И.: dress (in), clothe (in); T.: giyindirmek) *ҡ.*

1. *Кемгәлер* кейем-һалым кейҙереү, кейенергә ярҙам итеү. □ Одевать, помогать одеться. // Одевание. *Балаларҙы кейендереү. Олатайҙы кейендереү. Кейендереп сығарыу.* ■ *Тирмәлә Рәхимә ҡыҙҙарҙы үҙе кейендерҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Шәхми, шунда*

ук Мәрғүпте сакырып алып, Ғәләүгә үҙенең кейемдәрен кейендерергә ҡушты. Т. Йәнәби. *[Һолтанбайҙың] ҡатынын сабып, ҡойондороп, кейендереп сығарғас ҡына үҙенә сират етә.* Т. Ғарипова. *Тик ғәжәп хәл, һуңғы көндәрҙә иртәһен йылымыс һыу менән йыуындырып, сәстәрен тарап үргәндә лә, өҫ-башына кейендергәндә лә Зөмрәт элеккеләй көйләтмәй башланы.* Ә. Хәкимов.

2. Кейем менән тәьмин итеү, яҡшы кейем кейендереү. □ Одевать, обеспечить одеждой. // Одевание, снабжение (обеспечение) одеждой. *Баштан-аяҡ кейендереү. Матур кейендереү. Затлы итеп кейендереп йөрөтөү.* ■ *Нурбулат әсәһе менән Кинйәкәү баҙарына барғанда ишеткән: Стәрлелә үҙҙәре ашатып, үҙҙәре кейендереп уҡыта торған урын бар икән.* Н. Мусин. *Ашыҡ-бошоҡ сәй эскәс тә, бөтә амуниция менән кейендереп, ҡала ситенә киң майҙанға алып киттеләр.* А. Таһиров.

КЕЙЕНДЕРЕҮ II (кейендер-) *ҡ. диал. ҡар.* **егеү.**

КЕЙЕНДЕРЕШЕҮ (кейендереш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кейендереү I.** *взаимн. от* **кейендереү I.** *Балаларҙы кейендерешеү.*

КЕЙЕНЕП ЯҺАНЫУ (кейенеп яһан-) (Р.: наряжаться; И.: dress up, smarten (oneself) up; Т.: zarif giyinmek) *ҡ.*

Ҡупшы кейенеү; матур кейемдәр кейеү. □ Наряжаться, принаряжаться, разодеться. ■ *Халыҡ көлөшкән арала Камилә бейеп бөттө, ә сәхнәгә кейенеп яһанған, битенә ҡып-ҡыҙыл итеп һандал һөрткән, ҡашына ҡыйылдырып һөрмә тартҡан Ғәлиә сығып баҫты.* Н. Мусин.

КЕЙЕНЕҮ (кейен-) (Р.: одеваться; И.: dress (oneself); put smth. on, wear smth.; get dressed; Т.: giyinmek) *ҡ.*

1. Кейем-һалым кейеү. □ Одеваться *во что-л.* // Одевание. *Һыу ингәндән һуң кейенеү. Йоҡонан тороп кейенеү. Ашыҡ-бошоҡ кейенеү. Ҡарттарса кейенеү. Йәштәрсә кейенеү. Йоҡа кейенеү. Йылы кейенгән бала. Кейенеп сығыу.* ■ *Ғәләү, кейем булғас, уны-быны ҡарап тормай кейенде лә алды.* Т. Йәнәби. *Ошо саҡ Фәйрүзәһе лә кейенә башланы.* Д. Бүләков. *Малай шатлығынан үрле-ҡырлы һикерә, ҡыҙыҡай ашыҡ-бошоҡ кейенә башлай.* Т. Ғарипова. ● *Кейенгәнгә — кейем, ашағанға — аш.* Мәҡәл. *Алдан аяғын кейенгән — алға сыҡҡан.* Мәҡәл. *Ҡыҙҙар кейенһә, гөлгә оҡшай, ҡатындар кейенһә, ҡыҙҙарға оҡшай.* Мәҡәл.

2. Өҫ-башты бөтәйтеү, затлы кейем кейеү. □ Одеваться нарядно, наряжаться. *Кейенергә яратҡан ҡыҙ. Ҡупшы кейенеп йөрөү.* ■ *Хисамый әле лә ҡупшы кейенә, яҡшы ашай, иркен йәшәй.* Т. Йәнәби. *Матур итеп кейенәһе лә, ресторан-кафеларҙа күңел асаһы ла килә.* Н. Ғәйетбаев. *Ҡупшы кейенеп, сәсен ҡырын тарап, күтәренке рухта ул [Сергей] академияға юл тотто.* А. Абдуллин.

3. *күсм.* Тотош солғаныу, эсендә ҡалыу; төрөнөү. □ Одеваться, покрываться *чем-л.* *Бөтөн ер йәшеллеккә кейенгән. Бөтә тирә-яҡ аҡҡа кейенгән.*

КЕЙЕНЕШЕҮ (кейенеш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кейенеү.** *взаимн. от* **кейенеү.** ■ *Урамда кейенешкән ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡултыҡлаған хәрбиҙәр күренә.* Ә. Чаныш. *Кейенешеп алғас, [Вәсил менән Римма] түбыҡтарын килешле генә бөкләп янына килеп ултырған ҡыҙға телефон аппаратын яҡынайтты.* Д. Бүләков. *Бер аҙҙан инде нефтселәр, хәлдән килгәнсә кейенешеп, яһанышып, ағас склад тирәһендә урамғылай ҙа башланылар.* Р. Солтангәрәев.

КЕЙЕРЕҮ (кейер-) *ҡ. диал. ҡар.* **киреү.**

КЕЙЕҮ (кей-) [боронғо төрки *кед-; кәй-*] (Р.: одеть; И.: dress (in), clothe (in); Т.: giymek) *ҡ.*

1. Кәүҙәнең *ниндәйҙер* бер өлөшөн кейем менән ҡаплау. □ Одеть, надевать. *Аяҡҡа итек кейеү. Башҡа бүрек кейеү. Ҡулға кейеү. Тун кейеү. Салбар кейеү.* ■ *Әмирханов эш ваҡытында кейә торған теге кәзәкей кеүек нәмәһен ташлап, тройка кейгән.* С. Агиш. *Талипов ишек төбөндә эленеп торған пальтоһын алып кейгәндә, Сәғиҙә уның һул ҡулын нисектер ипһеҙерәк тотоуына иғтибар итте.* М. Тажи. *Күк йөҙөн ярып ялтлаған ялағай яҡтыһында былар҇ҙың береһенең аҡ кофта, ҡара юбка кейгән ҡыҙ, икенсеһенең ҡыҙыҡайҙан саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ егет икәнлеге айырым-асыҡ төҫмөрләнде.* Д. Бүләков. ● *Киймәгәнде ке-*

йеп булыр, кейгәнең өҫтөңдән төшмәһен. Мәҡәл. *Ҡыш көнө ете елән кейгәнсе бер тун кей.* Мәҡәл. *Ат аяған ат менер, тун аяған тун кейер.* Мәҡәл. *Егетлек бүрек кейеүҙә түгел, батырлыҡта.* Мәҡәл. *Ат менмәгән ат менһә, саба-саба үлтерер, тун киймәгән тун кейһә, ҡаға-ҡаға туҙҙырыр.* Мәҡәл.

2. Тән өлөшөнә эләктереп, үткәреп ҡуйыу. □ Надеть, нацепить. *Балдаҡ кейеү. Беләҙек кейеү. Мунсаҡ кейеү. Күҙлек кейеү. Саңғы кейеү.* ■ *Ҡатын-ҡыҙҙар беләҙектәрҙе уның уҫал күҙҙән, яуызлыҡтан һаҡлай торған көсөнә ышанып кейгәндәр.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2008. *Самат Сафарович, китергә йыйынған кеүек, ашығып күҙлеген кейеп ҡуйҙы.* Д. Бүләков. *Шунан һуң һәр ваҡыт Гөлбикә апайҙың самауыр төбөндә сәй яһауына, беләҙек кейгән беләгенә, ҡыҙыл ҡашлы йөҙөк кейгән бармаҡтарына ҡарайым.* Д. Юлтый.

3. *күсм.* Тотош солғау, эсендә ҡалыу. □ Одеть, покрыть. ■ *Ап-аҡ күлдәк кейгән йәш ҡайын.* А. Таһиров.

КЕЙМӘ *с. диал. ҡар.* **тотош.**

КЕЙМӘСӘ *и. диал. ҡар.* **таҫтар.**

КЕЙӘ I (Р.: леток; И.: bee entrance; Т.: arı kovanı deliği) *и. умарт.*

Умартаның ҡорт инә торған ере. □ Леток. *Кейәне ябыу. Кейәһе асыҡ.* ■ *Умартаның кейәһенән өлкәнерәк ҡорттар бер туҡтауһыҙ инеп тора.* Ф. Иҫәнғолов. *Кейәһе түбәнерәк солоҡтарға олоно тирәләй берәр сажин бейеклегендә осло имән сөйҙәр ҙә ҡаҡаныдар.* Н. Мусин.

КЕЙӘ II (Р.: возмездие; И.: retribution; requital; Т.: ceza) *и.*

Насарлыҡ эшләүҙән, гөнаһ ҡылғандан һуң килгән яза; ҡоһор. □ Возмездие; плата за содеянное, за грехи. *Кейәһе башына еткән. Кейәһе төшкән. Кейәһен күрер.* ■ *Бына ул — юлдашын ташлап китеүҙең кейәһе!* Ш. Бикҡолов.

КЕЙӘ III (Р.: присмотр; И.: care, surveillance, supervision; Т.: bakım, gözetim) *и. һөйл.*

Күҙ-ҡолаҡ, хәстәр. □ Присмотр, надзор. *Кейәһеҙ ҡалыу. Кейәһеҙ булыу. Кейәһеҙ бала.*

КЕЙӘ IV *и. зоол. диал. ҡар.* **балауыҙ көйәһе.**

КЕЙӘКӘЙ (Р.: одеваемый; И.: the often dressed; Т.: giyecek) *с. диал.*

Кейә торған. □ Одеваемый, для повседневной носки. *Кейәкәй күлдәк. Кейәкәй кофта.*

КЕЙӘ ҠАПҠАСЫ (Р.: задвижка; И.: latch; Т.: sürme) *и. умарт. диал.*

Умартаның кейәһен ҡаплау йә асыу өсөн эшләнгән шыуҙырма. □ Задвижка летка улья. *Кейә ҡапҡасын асыу. Кейә ҡапҡасын ябыу.*

КЕЙӘЛЕК (кейәлеге) *и. ҡар.* **кейә II.**

КЕЙӘНАНА *и. зоол. диал. ҡар.* **ҡамҡа.**

КЕЙӘНКЕ I (Р.: недержание мочи у лошадей; И.: enuresis, incontinence; Т.: atların idrarını tutamaması) *и.*

1. *вет.* Йылҡы малы ауырыуы. □ Недержание мочи у лошадей *(болезнь, сопровождаемая самопроизвольным мочеиспусканием).*

2. *миф.* Йылҡы малы ауырыуҙары эйәһе. □ Киянки; дух конской болезни. *Айғырымды кейәнке баҫты.*

КЕЙӘНКЕ II (Р.: развратница; И.: harlot, meretrix; Т.: zina eden kadın) *и. һөйл.*

Ир-егетте йыш алмаштырыусы, еңел холоҡло ҡатын-ҡыҙ; уйнашсы. □ Развратница, блудница.

КЕЙӘПАПА *и. зоол. диал. ҡар.* **ҡамҡа.**

КЕЙӘҮ [боронғо төрки *күдәгү*] (Р.: жених; И.: bridegroom; Т.: güvey) *и.*

1. Өйләнергә йөрөгән егет, буласаҡ тормош иптәше. □ Жених. *Кейәү менән кәләш. Кейәүгә ҡыҙға ҡуйыу.* ■ *Һуғыштан һуң ир-ат һаны ҡыҫҡарған, ҡатын-ҡыҙ һаны артҡан — ҡыҙ-ҡырҡынға кейәү етмәгән саҡ ине.* Й. Солтанов. *Уларға [Илғужа менән Гөлшанға], кейәү менән кәләш булараҡ, урынды айырым һалған булдылар.* Д. Бүләков. *Ҡыҙ йортона туй ылауы килеп етеүе булды, ҡапҡанан йүгереп сығып Зөлбоһарҙың әнеһе Мостафа кейәү аты теҙгененә үрелде, ҡапҡаға атты етәккә борҙо.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Еткән ҡыҙ кейәүҙән ҡурҡмаҫ.* Мәҡәл.

2. Яңы өйләнешкән йылдарҙа ҡатындың ире, тормош иптәше. □ Молодой муж.

■ *Яланбикәбеҙ анаулай булып үлеп ҡалды. Кейәүен актар атҡан, ти. Балалар үкһеҙ етем ҡалдылар, — тип өҫтәне Сәғиҙә.* Һ. Дәүләтшина.

3. Ҡыҙыңдың, һеңлеңдең йәки балдыҙыңдың ире. □ Зять. *Ҡайны менән кейәү. Ҡәйнәһе кейәүҙән уңды. Уртансы кейәү.* ■ *Әгәр баш балалары торған булһа, ҡартайған көндәрендә Мәғфиә әбей ҙә яңғыҙ булмаҫ, ейән-ейәнсәрҙәре тыпырҙап йөрөрҙәр, килендәре, кейәүҙәре булыр ине.* Б. Бикбай. *Рәшиҙә, мәрхүмдең ҡатыны, таш бағанамы ни; уны төпсөгө Нурания менән ситтән ҡайтҡан ҡыҙҙары, кейәүҙәре уратып алған.* Р. Камал. ● *Кейәү кергәнсә ҡыҙың һаҡла, кейәү кергәс, өйөң һаҡла.* Мәҡәл. *Килен ҡәйнә буҫағаһынан, кейәү ҡайны буҫағаһынан яралыр.* Мәҡәл. *Атаһыҙҙы кейәү итмә, инәһеҙҙе килен итмә.* Мәҡәл.

КЕЙӘҮ АҘЫҒЫ (Р.: еда жениха; И.: kind of ritual food; Т.: düğün gıdası) *и. этн.*

Кейәүгә туйға һуйылған малдың ҡайныһы тарафынан бирелә торған алғы һаны. □ Еда жениха *(ритуальная еда, представляющая собой переднюю часть туши животного, отдаваемая отцом невесты жениху перед его отъездом в дом своего отца).*

КЕЙӘҮ АҠСАҺЫ (Р.: деньги жениха; И.: bridegroom's money; Т.: güveyin hediyesi (para) *и. этн.*

Туй ваҡытында килендең туғандарына кейәү тараткан бүләк, аҡса. □ Подарки, деньги жениха, предназначенные для раздачи родственникам невесты. *Кейәү аҡсаһы һорау. Кейәү аҡсаһы йыйыу. Кейәү аҡсаһын иҫәпләү.*

КЕЙӘҮ АҠЫҒЫ (Р.: ритуальный сердолик для жениха; И.: kind of ritual decoration; Т.: düğünde güveyin fincanına koyulmuş para) *и. этн.*

Туй ваҡытында кейәү туҫтағына һалынған тәңкә. □ Сердолик жениха *(монета, положенная в чашку жениха на свадьбе).*

КЕЙӘҮ АТЫ (Р.: конь жениха; И.: horse of the groom; Т.: güveyin atı) *и. этн.*

Туйҙа кейәүгә ҡайныһы бүләк иткән ат. □ Конь, подаренный жениху отцом невесты.

КЕЙӘҮ АШЫ (Р.: гостинцы жениха; И.: kind of ritual food; Т.: güvey hediyeleri) *и. этн.*

Туйға кейәү яғынан алып килгенгән күстәнәс. □ Гостинцы жениха *(еда, привезённая на свадьбу со стороны жениха).*

КЕЙӘҮ БАЛА (Р.: жених; И.: bridegroom; Т.: güvey) *и.*

Кейәүләп йөрөгән егет *(ҡыҙҙың атаәсәһе. оло туғандарына ҡарата).* □ Жених. ■ *Буласаҡ кейәү балаҡай ҡайһы ырыуҙан?* Я. Хамматов. *Аҙаҡтан Гөлнисаның атаһы менән әсәһе йыуасаларын тейәп: «Кейәү балаҡай, иҫән генә тораһығыҙмы?» — тип килеп етмәҫтәрме үҙҙәре.* Ж. Кейекбаев.

КЕЙӘҮ БАУЫРҺАҒЫ (Р.: баурсаки жениха; И.: kind of ritual food; Т.: düğün yemeği) *и. этн.*

Туйға кейәү яғынан алып килгенгән бауырһаҡ. □ Баурсаки жениха *(привезённые на свадьбу со стороны жениха). Кейәү бауырһағы бешереү. Кейәү бауырһағын ауыҙ итеү. Кейәү бауырһағын таратыу.*

КЕЙӘҮ БИРНӘҺЕ *и. диал. этн. ҡар.* **кейәү бүләге.**

КЕЙӘҮ БҮЛӘГЕ (Р.: подарок от жениха; И.: bridegroom's present; Т.: güvey hediyesi) *и. этн.*

Киленгә, уның ата-әсәһенә кейәү тарафынан биреләсәк бүләк. □ Подарок от жениха *(невесте и её родителям).* ■ *Бейек үксәле, еҙ дағалы ҡыҙыл итек, селтәр, ҡашмау, шау уканан торған тәңкәле, мәрйенле ҡара атлас елән — былар бөтәһе лә кейәү бүләге ине.* З. Биишева.

КЕЙӘҮГӘ БАРЫУ (кейәүгә бар-) *ҡ. ҡар.* **кейәүгә сығыу.** *Күрше ауыл егетенә кейәүгә барыу. Бик иртә кейәүгә барыу. Атайҙың рөхсәтенән тыш кейәүгә барыу.* ● *Ашыҡҡан ҡыҙ кейәүгә барһа ла мантымаҫ.* Мәҡәл.

КЕЙӘҮГӘ БИРЕҮ (кейәүгә бир-) (Р.: выдать замуж; И.: to marry; Т.: evlendirmek) *ҡ.*

Ҡыҙҙы егет менән никахлаштырыу. □ Выдать замуж. *Көсләп кейәүгә биреү. Ваҡытында кейәүгә биреү.* ■ *Бына әле күптән*

түгел генә Бәҙри ҡарт ҡыҙын кейәүгә бирҙе. Ғ. Хәйри.

КЕЙӘҮГӘ КИТЕҮ (кейәүгә кит-) *ҡ. ҡар.* **кейәүгә сығыу.** *Алыҫҡа кейәүгә китеү. Иртә кейәүгә китеү.*

КЕЙӘҮГӘ СЫҒЫУ (кейәүгә сыҡ-) (Р.: выйти замуж; И.: marry; Т.: evlenmek) *ҡ.*

Ир-егет менән никахлашыу. □ Выйти замуж. *Үҙ теләгең менән кейәүгә сығыу.* ■ *Элек, ошо Сибәғәт-Диңгеҙханға кейәүгә сығырға йөрөгәнендә, бер диуананың «ҡыҙың-ды миңә бир», тип, өләсәһен ҡаңғыртҡаны хәтерендә.* Т. Ғарипова. ● *Бер ҡыҙ кейәүгә сыҡһа, ҡырҡ ҡыҙ төш күрә.* Мәҡәл.

КЕЙӘҮ ЕГЕТ (Р.: жених; И.: suiter; Т.: sözlü) *и.*

Кәләш әйттергән егет. □ Жених. ■ *Әйтерһең, һин — кәләш, ә мин — өйләнергә йөрөгән кейәү егет.* Я. Хамматов.

КЕЙӘҮ ЕГЕТЕ (Р.: шафер; И.: best man; Т.: sağdıç) *и. этн.*

Кейәүҙең туй ваҡытында янында йөрөгән дуҫ егете. □ Шафер. ■ *[Бәшәр:] Һеҙ инде. Шәһәрбаныу ҡарындаш, кейәү егете менән бергә ҡыҙ һорарға килгәнгә асыуланып китмәгеҙ.* Т. Ғарипова. *Өлкән усаҡ яғып, ер туңын иретеп, киптереп, һәйбәтләп яңы тирмә ҡорғайнылар, ҡыҙ йәшереш, ҡыҙ табыш йолалары үткәс, еңгәйҙәр, кейәү егеттәре йәштәрҙе шунда оҙатты, һәм Бөрйән ерендә йәнә бер бәләкәй генә ғаилә ояһы хасил булды.* Н. Мусин. *Ауыҙынан ҡайнар күбек сәсеп үрәпсегән арғымаҡтар менән үткер, шуҡ кейәү егеттәре ҡайҙа ла, бар донъяны шеңә күтәргән һымаҡ, олпат ҡына баҫып, һауалыраҡ төҫтә тамаҡ ҡырыусы ағалары, күбәләктәй осоп, килен тирәһендә өйрөлөүсе сәсән телле еңгәләре ҡайҙа!* Ә. Хәкимов.

КЕЙӘҮ ЕҪЕ *и. бот. ҡар.* **кейәү үләне.**

КЕЙӘҮЙЕҢГӘ (Р.: сваха; И.: matchmaker; Т.: dünür, görücü) *и. этн. диал.*

Ҡыҙ менән егетте ҡушҡан еңгә. □ Сваха.

КЕЙӘҮ ЙЫУАСАҺЫ (Р.: свадебные гостинцы жениха; И.: bridegroom's gifts; Т.: güvey yemeği) *и. диал. этн.*

Туйға кейәү исеменән килтерелгән күстәнәс. □ Свадебные гостинцы жениха.

КЕЙӘҮ КӨРӘГӘҺЕ (Р.: бочонок жениха; И.: tub of mead from the bridegroom; Т.: güvey hediyesi) *и. этн.*

Туйға кейәү алып килгән әсе бал. □ Бочонок жениха *(медовуха, привезённая женихом родственникам невесты).* ■ *Йыуаса тоғо асылғас, кейәү көрәгәһен сығаралар.* Экспедиция материалдарынан.

КЕЙӘҮ КӨСӨГӨ *и. этн. ҡар.* **кейәү егете.**

КЕЙӘҮ КУБӘТӘҺЕ (Р.: денежные дары жениху на свадьбе; И.: cash gifts to the groom at the wedding; Т.: düğünde güveye verilen para) *и. этн. диал.*

Туйҙа кейәү эскән туҫтаҡҡа аҡса һалыу йолаһы. □ Денежные дары жениху на свадьбе *(по обычаю кладут в чашу жениха).*

КЕЙӘҮ КУЛДӘГЕ (Р.: ритуальная рубашка для жениха; И.: kind of ritual shirt; Т.: güvey gömleği) *и. этн.*

Кейәүгә ҡыҙҙың ата-әсәһе бүләк иткән кейем. □ Ритуальная рубашка для жениха *(подарок родителей невесты жениху).*

КЕЙӘҮ КҮРЕНЕШЕ (Р.: ритуальный подарок жениха; И.: bridegroom's first present; Т.: güvey hediyesi) *и. этн.*

Ҡыҙҙың яҡын туғандарына беренсе күрешкәндә кейәү биргән бүләк. □ Ритуальный подарок жениха *(родственникам при первой встрече с невестой).*

КЕЙӘҮ ҠАМСЫҺЫ I (Р.: ритуальный кнут жениха; И.: kind of ritual whip; Т.: güvey kamçısı) *и. этн.*

Ҡыҙҙы кейәүләп барғанда егеттең ҡулында була торған ҡамсы. □ Ритуальный кнут жениха *(который сопровождает его при сватании невесты как элемент придания мужественности).*

КЕЙӘҮ ҠАМСЫҺЫ II (Р.: лихнис халцедоновый; И.: Maltese cross campion; Т.: Kadıköy karanfili) *и. бот.*

Быуын-быуын теҙелеп торған алһыу күк суҡ сәскәле баллы үлән; майсыбыҡ. □ Лихнис халцедоновый (лат. *Lychnis chalcedonica*).

КЕЙӘҮ ҠУШАҒАҺЫ *и. этн. диал. ҡар.* **кейәү егете.**

КЕЙӘҮЛӘҮ (кейәүлә-) (Р.: посещение женихом невесты; И.: bridegroom's visitations; Т.: güveylik) *ҡ. этн.*

Туйҙан һуң оҙатып алғанға тиклем кәләш янына килеп йөрөү *(элекке йола)*. □ Посещение женихом невесты после свадьбы до переезда в дом жениха. *Кейәүләп йөрөү. Кейәүләп ятыу.* ■ *Әле катыны тырт-мырт сығып киткәс, ул [Уйылдан] кыҙ кейәүләргә барасағын иҫенә төшөрҙө.* Н. Мусин. *Ә бына Хәмзәнең «кәләш кейәүләргә» йөрөүе бөтөнләй тип әйтерлек һиҙелмәне.* М. Кәрим. ● *Көйһөҙ кейәү кейәүләп яткансы, көйлө кейәү кәләшен алып кайткан.* Мәкәл.

КЕЙӘҮ НӨГӘРЕ *и. диал. кар.* **кейәү егете.**

КЕЙӘҮ ӨЙӨ (Р.: дом первой брачной ночи; И.: wedding night house; Т.: gerdek evi) *и. этн.*

1. Туйҙан һуң кейәү менән килен беренсе төндәрен бергә үткәргән өй. □ Дом, предназначенный для первой брачной ночи. ■ *Улар [кыҙҙар] йырлап, бейеп, кумыҙ тартып, кискә хәтле кейәү өйөндә уйнап ултырҙылар.* З. Биишева.

2. *диал. кар.* **кейәү түре.**

КЕЙӘҮ ӨҢӨРӨ *и. этн. кар.* **кейәү егете.**

КЕЙӘҮ СӘЙЕ (Р.: ритуальный чай от жениха; И.: kind of ritual tea; Т.: düğün yemeği) *и. этн.*

Кейәү беренсе тапкыр килгәндә алып килгән күстәнәсе менән килен яктың сәй эсеү мәжлесе. □ Ритуальный чай от жениха *(чаепитие с гостинцами жениха среди родственников невесты при первом посещении им невесты). Кейәү сәйенә сакырыу. Кейәү сәйенә барыу. Кейәү сәйе үткәреү.*

КЕЙӘҮ ТУҪТАҒЫ (Р.: ритуальная чаша жениха; И.: kind of ritual bowl; Т.: güvey fincanı) *и. этн.*

Туй вакытында кыҙҙың еңгәләре бал койоп биргән туҫтак *(уны эскәс, акса, бүләк һалалар)*. □ Ритуальная чаша жениха. *Кейәү туҫтағына акса һалыу. Кейәү туҫтағынан эсеү.*

КЕЙӘҮ ТҮРЕ (Р.: ритуальное место для подарков от жениха; И.: ritual place for gifts; Т.: hediyeler köşesi) *и. этн.*

Кейәү бүләктәрен күрһәтеү өсөн махсус билдәләнгән урын. □ Ритуальное место для подарков от жениха. *Кейәү түре әҙерләү.*

КЕЙӘҮ ТӘҢКӘҺЕ (Р.: ритуальная монета жениха; И.: bridegrom's ritual coin; sort of ritual coin; Т.: güvey hediyesi) *и. этн.*

Килендең һеңлеләренә кейәү тараткан тәңкә. □ Ритуальная монета жениха *(денежные дары жениха младшим сёстрам невесты). Кейәү тәңкәһе таратыу. Кейәү тәңкәһе алыу.*

КЕЙӘҮ ҮЛӘНЕ (Р.: тимьян; И.: thyme; Т.: kekik) *и. бот.*

Өйкөм-өйкөм булып тауҙа, калкыу урында үҫкән вак япраклы, алһыу вак сәскәле, хуш еҫле дарыу үләне. □ Тимьян, чабрец (лат. *Thymus*). *Кейәү үләне киптереү. Кейәү үләне төнәтмәһе.* ■ *[Сәрбиназ] йәй йыйып киптереп, колаксын мендәр эсенә тултырған хуш еҫле кейәү үләнен дә һуккыслап-каккыслап еҫен сығарҙы.* Т. Ғарипова.

КЕЙӘҮ ҮҢӘРЕ *и. этн. кар.* **кейәү егете.**

КЕЙӘҮ ҺАНДЫҒЫ (Р.: ритуальный сундук жениха; И.: brideroom's ritual chest; Т.: güvey sandığı) *и. этн.*

Туйҙа килен яғына таратыу өсөн бүләктәр һалып алып килгән кейәү һандығы. □ Ритуальный сундук жениха *(со свадебными подарками).* ■ *Туйҙың икенсе көнөндә кейәү һандығын сығаралар.* Экспедиция материалдарынан.

КЕЙӘҺЕ ЕТЕҮ (кейәһе ет-) *к. диал. кар.* **коһоро төшөү.**

КЕКС [рус. < ингл. *cake*, күплектә *cakes*] (Р.: кекс; И.: cake; Т.: kek) *и.*

Йөҙөм кушып, майға баҫылған татлы икмәк. □ Кекс. *Кекс бешереү. Йөҙөмлө кекс.*

КЕЛЕ-ГЕЛЕ (Р.: слово для подзывания гусей; И.: word for touting geese; Т.: kazları çağırma ünlemi) *окш. диал.*

Каҙҙарҙы сакырыу һүҙе. □ Слово для подзывания гусей.

КЕЛЕН (Р.: язвенная болезнь ротовой полости у лошадей; И.: kind of veterinary condition; Т.: bir at hastalığı) *и.*

1. *вет.* Малдың ауыҙ кыуышлығында барлыкка килгән сей яра ауырыуы. □ Язвенная болезнь ротовой полости у лошадей.

2. *миф.* Мал ауырыуҙары эйәһе. □ Дух болезни животных.

КЕЛЕН АЛЫУ (келен ал-) (Р.: болеть язвенной болезнью ротовой полости; И.: hurt ulcers of the mouth; Т.: atın hastalanması) *ҡ. вет.*

Малдың келен менән ауырыуы. □ Болеть язвенной болезнью ротовой полости. ■ *Келен алған мал мантымай.* Экспедиция материалдарынан.

КЕЛЕШӘ [рус. *клещи*] *и. диал. ҡар.* **ҡыпсыуыр.** *Келешә менән һурып алыу.*

КЕЛОИД [рус. < гр. *kele* 'шеш' + *éidos* 'төр'] (Р.: келоид; И.: keloid; Т.: keloit) *и. мед.*

Тиреләге тоташтырғыс туҡыманың шеш рәүешендә үҫеүе. □ Келоид. / Келоидный. *Келоид йөйө. Келоидты дауалау. Келоид сире.*

КЕЛТ (Р.: тик; И.: crack; snap; Т.: tik, seğirme) *оҡш.*

Сиртмәле тимер нәмә ҡапыл асылғанда йәки ябылғанда сыҡҡан йомшаҡ тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку щёлканья, тиканья: тик. *Йоҙаҡ келт итеп ябылды.* ■ *[Өммикамал менән Гөльямал:] Инеүебеҙ булды, Хәбибрахман еҙнәм келт иттереп ишектең келәһен элеп тә ҡуйҙы.* М. Кәрим.

♦ **Келт итеп иҫкә төшөү** ҡапыл иҫкә төшөү. □ Вспомнить вдруг, неожиданно. ■ *[Нигмәтулланың] кемдәндер, бүреләр ут-тан ҡурҡа, имеш, тип ишеткән һүҙ келт итеп иҫенә төштө.* Я. Хамматов.

КЕЛТЕЛДӘҮ (келтелдә-) (Р.: тикать; И.: tick; Т.: tik tak etmek) *ҡ.*

Келт-келт итеү. □ Тикать. *Сәғәт келтелдәй.* ■ *Иҙәндән түшәмгә етерҙәй булып торған сәғәт кенә һаман келтелдәүен белде.* Б. Бикбай.

КЕЛТЕМБАЙ *и.*

1. *диал. ҡар.* **ваҡһыу I.**

2. Үсегеп барыусан; ҡылтым. □ Обидчивый человек.

КЕЛТЕРҘӘҮ (келтерҙә-) *ҡ. ҡар.* **келтерләү.** ■ *Тояҡтарҙың баҙыҡ тупырҙа-шыуы, тәгәрмәстәрҙең ваҡ ҡырсынташлы тигеҙ юлды шайлатып күндәм келтерҙәүеме, иртәнге саф һауаның иҫерткес наҙыны — сәфәргә сығырҙан алда бер-ике сәғәт кенә баш төртөр әмәл тапҡан һалдаттарҙы рәхәт серемгә талдыра.* Ә. Хәкимов.

КЕЛТЕР-КЕЛТЕР (Р.: дрын-дрын; И.: tinkle; Т.: tak tak) *оҡш.*

Тимер, ағас нәмәләр еңелсә сайҡалып бер-береһенә бәрелгәндә сыҡҡан йомшаҡ тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку однообразного, ритмичного дребезжания: дрын-дрын. *Келтер-келтер килеү. Келтер-келтер итеү.* ■ *Тирмән келтер-келтер әйләнә.* Ә. Хәкимов. *Ана, келтер-келтер юрттырып, бер атлы килә.* В. Исхаҡов. *Эш мәшәҡәтен онотоп, келтер-келтер юл йыры тыңлап барғанда, Йәүҙәт күңелен килделе-киттеле төрлө уйҙар сыуалата.* Й. Солтанов. *Келтер-келтер килгән арба тауышы ла, моңһоу, тоноҡ тауыш менән йырланған йыр ҙа Һарыҡайға таныш төҫлө.* С. Ильясов.

КЕЛТЕРЛӘТЕҮ (келтерләт-) (Р.: издавать звук дребезжания; И.: jar; Т.: zan girdatmak) *ҡ.*

Келтер-келтер иттереү, келтер-келтер тигән тауыш сығарыу. □ Издавать звук однообразного, ритмичного дребезжания. ■ *Йәй булһа, япраҡтарын келтерләтеп, көҙ булһа, аяҡ аҫтыма һары ебәк йәймә түшәп ҡаршы ала ул [аҡ тирәк].* Ш. Янбаев.

КЕЛТЕРЛӘҮ (келтерлә-) (Р.: дребезжать; И.: tinkle; Т.: zangırdamak) *ҡ.*

Келтер-келтер итеү, келтер-келтер килеү. □ Дребезжать, слегка трястись, дрожать. *Тәгәрмәстәр келтерләй. Арба келтерләп кенә бара.* ■ *Яҡында ғына тракторҙарҙың гөрләүе, сапҡыстарҙың келтерләүе ишетелә.* Картотека фондынан. *Йыраҡта, Дим арьяғында, косилкаҡың тигеҙ генә келтерләүе ҡолаҡҡа салына, үрҙә лә, түбәндә лә ял итеүселәрҙең шатлыҡлы ауаздарынан йылға өҫтө яңғырап тора.* Д. Бүләков.

КЕЛТЕРНИСА (Р.: очень приветливый; И.: very affable; Т.: güleryüzlü) *и. диал.*

Үтә итәғәтле, өлтөр. □ Очень приветливый, открытый.

КЕЛТЕРӘТЕҮ (келтерәт-) *ҡ. ҡар.* **келтерләтеү.**

КЕЛТЕРӘҮ (келтерә-) (Р.: дребезжать; И.: jingle; Т.: zangırdamak) *ҡ.*

1. Келтер-келтер килеү. □ Слегка трястись, дрожать; дребезжать. ■ *Вагон тәгәрмәстәренең келтерәп барыуҙары пассажир-*

ҙарҙың уйын тыныс бер юлға һалып ебәрҙе. Б. Ишемғол.

2. *күсм.* Тигеҙ генә ашыҡмай дауам итеү *(эш, тормошҡа ҡарата);* тәгәрләү. □ Продолжать потихоньку, медленно своим чередом продолжить *что-л. Көндәр келтерәп кенә уҙа. Эштәр келтерәп кенә бара.*

3. Һелкенеп тороу *(сак-сак эләктереп ҡуйылған ҡалай, тимер киҫәк нәмәләргә ҡарата).* □ Еле держаться *(не срываясь). Ҡалай келтерәп тора. Өй ҡыйығының бер тимере келтерәп сак тора.*

КЕЛТЕРӘШЕҮ (келтерәш-) *ҡ. урт. ҡар.* **келтерәү.** *взаимн. от* **келтерәү.** ■ *Йомшаҡ рессорлы кырандас йышыраҡ бәүелтә, тимерле нык тәгәрмәстәр күҫеләрҙәк келтерәшә башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

КЕЛТИФУН (Р.: собачка; И.: pawl, catch; Т.: kilit çengeli) *и. һөйл.*

Ҡоролмаларҙа, механизмдарҙа эләктереп торған бәләкәй генә нәмә; ҡаптырма. □ Собачка *(маленькое приспособление в механизмах для зацепки). Йоҙаҡтың келтифуны тотмай. Сәғәттең келтифуны ыскынған.*

КЕЛТ-КЕЛТ (Р.: тик-тик; И.: tick-tack; Т.: tik tak) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат келт иткән тауышты (мәҫәлән, *механик сәғәттең эшләгәнен*) белдергән һүҙ. □ Подражание ритмическому звуку наподобие тиканья часов: тик-тик. ■ *Келт-келт йөрөй сәғәт теле, ваҡыт үтә.* М. Хәй. *Стенала келт-келт итеп иҫке сәғәт кенә тел ҡаға, әйтерһең, ул малайҙың көпә-көндөҙ яңғыҙ үҙе генә өйҙә йоҡлап ятыуынан көлә.* Й. Солтанов. *Өҫтәлдәге сәғәттең келт-келт һуғыуы баш осонда ғына саң ҡаҡҡан төҫлө тойола.* Н. Мусин. *Стеналағы иҫке сәғәт кенә, келт-келт, минут-секундтарҙы һанай.* Ә. Хәкимов.

КЕЛТЛӘҮ (келтлә-) *ҡ. ҡар.* **келтелдәү.** ■ *Сеү, келтләмә, сәғәткенәм! Килде дуҫҡайым, әйткәндәй булды шунда ул: — Ярар, туҡтайым.* Ф. Рәхимғолова.

КЕЛТӘ I *р. диал. ҡар.* **ҡырҡа.** *Келтә боролоу. Келтә хәрәкәт яһау.*

КЕЛТӘ II *и. диал. ҡар.* **һикәлтә.** *Келтә аша үтеү. Юл келтәләре.*

КЕЛЬВИН [рус. < ингл. *Kelvin* 'инглиз физигы У. Томсон (Кельвин) фамилияһынан'] (Р.: кельвин; И.: Kelvin degree, kelvin; Т.: Kelvin) *и. махс.*

Халыҡ-ара берәмектәр системаһында (СИ) термодинамик температураны үлсәү берәмеге. □ Кельвин *(единица измерения температуры).*

КЕЛЬМА [рус. < нем. *Kelle*] (Р.: кельма; И.: trowel; Т.: mala) *и.*

Бәләкәй көрәк рәүешендәге төҙөлөш ҡоралы *(иҙелмә һалыу өсөн ҡулланыла).* □ Кельма, мастерок. *Кельма менән эшләү. Кельма менән стенаны тигеҙләү.*

КЕЛЬТ [рус. < гр. *Keltói*] (Р.: кельты; И.: Celts; Т.: Kelt) *и. этн.*

Боронғо замандарҙа Көнбайыш Европала йәшәгән ҡәбиләләр төркөмө. □ Кельт. / Кельтский.

КЕЛӘ (Р.: щеколда; И.: latch; catch; Т.: mandal) *и.*

1. Ырғаҡҡа оҡшатып эшләнгән бик, элгес. □ Щеколда; крюк, крючок. *Ҡапҡа келәһе. Ишекте келәгә бикләү. Келәһе эленмәгән. Келәне ыскындырыу.* ■ *Шәһәрбаныу ишектең келәһен ыскындырып ебәреүгә Хашим, тағы ла уның атаһы менән бер туған ҡустыһы килеп инделәр.* Т. Ғарипова. *Былтыр минең түбәм ишек тотҡаһына сак етә ине, ә хәҙер келәһенән булдым.* Б. Бикбай.

2. Таяҡ рәүешендәге шылдырып ҡына бикләй торған бик. □ Задвижка. *Келәне этәреп ҡуйыу. Ишек келәһе. Тәҙрә келәһе.* ■ *Ҡапҡаның келәһен Федора ҡарсыҡ үҙе этәреп ҡуйҙы.* М. Кәрим.

3. Ҡаптырып йоҙаҡ элә торған атлама. □ Засов. *Йоҙаҡты келәгә элеү.* ■ *Йәш егет ишектәге йоҙаҡты алып ташламаҡсы булды, тик көсө етмәне — йоҙаҡ ишек келәһен бик нык ҡымтып алған булып сыҡты.* Й. Солтанов.

4. *диал. ҡар.* **күгән.**

КЕЛӘГӘ *и. диал. ҡар.* **тоба.** *Келәгәлә һыу инеү.*

КЕЛӘЙ (Р.: перга; И.: beebread; Т.: arıların topladığı çiçektozu) *и. диал.*

Бал менән тулған күҙәнәктәрҙе һылап ҡуя торған сайыр һымаҡ аҡ балауыҙ. □ Перга

(белого цвета, которым пчёлы запечатывают наполненные мёдом соты).

КЕЛӘЙМӘ [рус. *клеймо*] (Р.: клеймо; И.: brand; Т.: marka) *и.*

1. Етештерелгән тауарҙың, аҙыктың вакытын, урынын һәм башкаһын күрһәткән билдә; тамға. □ Клеймо (*печать. знак на изделии, товаре). Фабрика келәймәһе. Келәймә һуғыу.* ■ *Караһалар – уға [ултырғыска] беҙҙең мастерской келәймәһе баҫылған!..* Ф. Иҫәнғолов.

2. Малды таныр өсөн тәненә яндырып баҫылған билдә; тамға. □ Клеймо. *Йылкыларға келәймә баҫыу. Көтөүгә сығарыр алдынан малдарға келәймә һуғалар.*

3. *тар.* Боронғо заманда кулға алынған боласыларға яза рәүешендә яндырып баҫылған билдә; тамға. □ Клеймо *(знак, обычно в форме букв, выжигавшийся на теле осуждённого как дополнительная мера наказания).* ■ *1775 йылдың сентябрендә Салауат менән Юлайҙы .. сыбырткы менән һуктырып язалайҙар, танауҙарын кыркып, маңлайҙарына келәймә һуғып, Рогервик утрауына ғүмерлек каторгаға ебәрәләр.* Ә. Харисов.

4. Шул билдәләрҙе һуға торған корал; тамға. □ Клеймо *(инструмент для таврения).*

5. *күсм. Кемделер* кәмһетеү, хурлау менән бәйле билдә. □ Клеймо *(знак, свидетельство о чём-л. позорящем, унижающем). Хурлык келәймәһе. Келәймә йөрөтөү.*

КЕЛӘЙМӘ БАҪЫУ (келәймә баҫ-) *к. кар.* **келәймәләү.**

КЕЛӘЙМӘК (келәймәге) [рус. *клеймо*] (Р.: дроги; И.: perch; Т.: yük arabası) *и.*

Һалам, бесән ташый торған бейек үрәсәле оҙон арба; айҙыр. □ Дроги, сноповозка.

КЕЛӘЙМӘЛЕ (Р.: клеймённый; И.: branded; Т.: işaretli) *с.*

Келәймә һуғылған, тамғалы. □ Клеймённый, имеющий клеймо. *Келәймәле мал. Келәймәле тауар. Келәймәле каторжан.*

КЕЛӘЙМӘЛӘТЕҮ (келәймәләт-) *к. йөкм. кар.* **келәймәләү.** *понуд. от* **келәймәләү.** *Малды келәймәләтеү.*

КЕЛӘЙМӘЛӘҮ (келәймәлә-) (Р.: клеймить; И.: brand; Т.: damgalamak, dağlamak) *к.*

1. Марка, тамға куйыу. □ Клеймить, заклеймить, ставить клеймо. // Клеймение. *Тауарҙарҙы келәймәләү.*

2. Тамға һуғыу, тамғалау. □ Клеймить, таврить, затаврить *(скот). Йылкыларҙы келәймәләү. Келәймәләнгән мал.*

КЕЛӘЙМӘ ҺАЛЫУ (келәймә һал-) *к. кар.* **келәймәләү.**

КЕЛӘЙМӘ ҺУҒЫУ (келәймә һуҡ-) *к. кар.* **келәймәләү.**

КЕЛӘЛӘҮ (келәлә-) *к. кар.* **келә һалыу.**

КЕЛӘМ I [фарс. گلیم] (Р.: ковёр; И.: carpet; Т.: halı) *и.*

1. Төрлө биҙәктәр һалып йөндән һуғылған каралды; балаҫ. □ Ковёр. / Ковровый. *Аҫалы келәм. Буй(лы) келәм. Сепрәк келәм. Келәм түшәү. Келәм йәйеү. Келәм һуғыу. Келәм биҙәге.* ■ *Өйрәнсек шул һүҙҙәрҙе әйткән дә, Һөнәрсе янына келәмгә ултырып, бала шикелле үкһеп илай башлаған: – Эй Аллам, ниңә һин мине шундай илаһи таланттан мәхрүм иттең!* З. Биишева. *Һике яртыһына сит-ситтәре кителеп бөткән затлы тажик келәме, ә икенсе яртыһына тош-тош ерҙән иҙерәгән мамык одеял түшәлгән, буйлатып корак түр юрғаны йәйелгән.* Й. Солтанов. *Ул арала йәшел үләнгә йәйелгән келәмдәр өҫтөнә табактар куйылып, бешкән иттәр бүлеп һалынған була.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Тирәклелә һуғылған келәмдәр, бында баҫылған быймалар, бында эшкәртелгән тире – донъяның бөтә илдәренә тарала һәм юғары сифатлы тип баһалана.* Т. Ғарипова.

2. *диал.* Сепрәк балаҫ. □ Тряпичный палас.

КЕЛӘМ II *и. диал. кар.* **селбәрә.**

КЕЛӘН *с. диал. кар.* **шыма 1.** *Келән боҙ. Келән иҙән.*

КЕЛӘНДӘҮ (келәндә-) (Р.: свёртывать холст; И.: rolling canvas; Т.: tuvalı dürmek) *к. диал.*

Һуғылған киндерҙе тәҫләп төрөү. □ Свёртывать холст. *Келәндәп һалыу. Келәндәп куйыу.*

КЕЛӘНКӘЙ (Р.: дягиль; И.: angelica; Т.: melekotu) *и. бот.*

Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған шыма ҡабыҡлы, сәскәһе баллы үҫемлек. □ Дягиль, дудник лесной (лат. *Angelica*). *Келәнкәй йыйыу. Келәнкәй менән дауаланыу.*

КЕЛӘПӘ *с. диал. ҡар.* **көрәш.** *Келәпә кеше.*

КЕЛӘТ [рус. *клеть*] (Р.: клеть; И.: storeroom; Т.: depo, ambar) *и.*

1. Иген, аҙыҡ-түлек йәки башҡа нәмә һаҡлай торған йорт ҡаралтыһы. □ Амбар, клеть. *Кирбес келәт. Ағас келәт. Игенде келәткә һалыу.* ■ *Ауылды артта ҡалдырып, йылға түбәненә тағы өс-дүрт саҡрымдай киткәс, — шундай уҡ ыҫ, көл-күмер, ҡәбер ташылай ҡатып ҡалған мейестәр, һөрөмлө таш келәттәр һәм ҡоймалар.* Й. Солтанов. *Фураж һалынған келәт янына еткәс, санала бесән өҫтөндә нимәләр ҡарайып ятҡан кеүек булғас, Хашим шунда йүнәлде.* Т. Ғарипова. ● *Ир — келәт, ҡатын — йоҙаҡ.* Әйтем. *Иген келәттә, кеше хеҙмәттә күренә.* Мәҡәл. *Йөгөң күп булһа, келәтең тулы булыр.* Мәҡәл. *Ырҙыныңда булмаһа, келәтеңдә лә булмаҫ.* Мәҡәл. *Келәте бикле күршеһе менән тыныс.* Мәҡәл.

2. *диал. ҡар.* **соланса.**

3. *диал.* Йәй аш бешерә торған бәләкәй өй. □ Летняя кухня.

КЕЛӘТСЕ (Р.: кладовщик; И.: storekeeper; stockman; Т.: ambar memuru) *и.*

Келәттәге нәмә өсөн яуаплы кеше; келәт мөдире. □ Кладовщик. *Келәтсе булып эшләү.* ■ *Бригадир һәм МТФ мөдире итте келәтсе Ғәйзулла аркылы үлсәтеп алып, һәр береһе үҙ ҡаҙандарына бүлеп бирҙеләр.* Й. Солтанов.

КЕЛӘҮЕЗ [рус. *кляуза*] *и. диал. ҡар.* **ошаҡ.** *Келәүез йөрөтөү. Келәүез ташыу. Келәүез һатыу.*

КЕЛӘҮЕЗНИК [рус. *кляузник*] *с. диал. ҡар.* **аҫтыртын I.** *Келәүезник ҡатын.*

КЕЛӘҮЕК I (келәүеге) (Р.: плёнка; И.: film; Т.: ince tabaka) *и.*

1. Үтә күренеп торған йоҡа ғына нәмә; яры. □ Плёнка, тонкая кожица. *Яра келәүек менән ҡапланған. Яраны келәүек менән ҡапланғансы таҙартып торорға кәрәк.*

2. Йоҡа ғына боҙ ҡатламы. □ Тонкая ледяная корка.

3. *диал.* Һыуланып, көскә генә утрышҡан ҡатыҡ. □ Неудавшийся катык. *Келәүек кенә булған ҡатығым.*

КЕЛӘҮЕК II (Р.: тонкий; И.: thin; Т.: ince) *с.*

Үтә күренеп торған, бик йоҡа. □ Тонкий. *Келәүек боҙ. Келәүек ҡағыҙ.*

КЕЛӘҮЕК III *и. диал. ҡар.* **бәҫ.** ■ *Келәүек көҙгә табан ағас баштарын ҡыраулытып, боҙландырып тора ул.* Экспедиция материалдарынан.

КЕЛӘҮЕКЛӘНЕҮ (келәүеклән-) (Р.: затягиваться плёнкой; И.: delayed wound crust; Т.: ince tabaka ile kapanmak) *ҡ.*

1. Яры менән ҡапланыу (*йәрәхәткә ҡарата*). □ Затягиваться, покрываться плёнкой, коркой (*о ране*). *Яра келәүекләнә башлаған.*

2. Йоҡа ғына боҙ менән ҡапланыу. □ Покрыться ледяной коркой. *Йылға келәүекләнеп туңа башлаған.*

КЕЛӘ ҺАЛЫУ (келә һал-) (Р.: запирать; И.: lock; Т.: kilitlemek) *ҡ.*

Келә һалып ябыу; бикләү. □ Запирать, закрывать. // Запирание, закрывание. ■ *[Фатима] ҡойма бүйлап барып бәләкәй өйгә инде лә, ишекҡә келә һалды һәм тәҙрә төбөндә бик оҙаҡ уйланып ултырҙы.* Ж. Кейекбаев.

КЕЛӘШ-КЕЛӘШ (Р.: возглас, которым подзывают жеребят; И.: word for beckoning colts; Т.: tayları çağırma ünlemi) *саҡ.*

Ҡолон саҡырғанда әйтелә торған һүҙ. □ Возглас, которым подзывают жеребят.

КЕЛӘШШӘ [рус. *клещи*] *и. ҡар.* **ҡыпсыуыр.** ■ *Ғерҙәренә ҡушымтаға йөн еп менән иҫке йоҙаҡ, башы һыныҡ келәшшә һәм тишекле таш аҫылған.* Й. Солтанов.

КЕМ I [боронғо төрки *кәм*] (Р.: кто; И.: who; Т.: kim) *а.*

1. *һор.* Кешенең исемен йәки ниндәй кеше булыуын һорағанда ҡулланыла. □ Вопросительное местоимение *кто. Исеме кем? Кем алды? Кем килгән? Кемдән һорарға? Кемгә бирергә.* ■ *Айбулат аптырап ҡырап, Мәғфүрәнең һүҙен бүлде: Кем ул Урал әбейе?* Һ. Дәүләтшина. *Әгәр мин барып етмәҫ борон, олатайың үҙе һағынып ҡайтып килһә, кем уға ишек асыр?* Й. Солтанов. *[Һаҡсы:] Һеҙ кем булаһығыҙ?* Н. Асанбаев. ● *Кешенең*

кем икәнен белгең килһә, төҫөнә ҡарама, дуҫына ҡара. Мәҡәл. *Әйтмәгәнде кем белә, асмағанды кем күрә.* Мәҡәл.

2. *һор.* Риторик һорауҙа ҡулланылып, яуабында «һәр кеше» мәғәнәһе фараз ителә. □ Используется в риторических вопросах, ответом в которых являются значения *все*. ■ *Ил тигәндең кеме юҡ, кеме юҡ та ние юҡ.* Ҡобайырҙан. *Ҡайғы уртаҡлашҡанда кем ҡосаҡлашмай ҙа, кем бер-беренә һыйынмай?!* Т. Ғарипова. ● *Ҡымыҙҙы кем яратмай, ҡыҙҙы кем һоратмай.* Мәҡәл.

3. Риторик һорауҙа ҡулланылып, яуабында «бер кеше лә» мәғәнәһе фараз ителә. □ Используется в риторических вопросах, ответом в которых являются значения *никто*. *Кем уйлаған уны.* ■ *Ҡар китеп тә бөтмәгәндә кем балаһын ялан аяҡ, етмәһә баҫыуға сығарһын?* Т. Ғарипова. *Бына донъя! Кем уйлар быларҙы айырылған ир менән ҡатын тип.* Р. Солтангәрәев.

4. *билдһ.* Атап әйтелмәгән бер шәхесте белдерә. □ Употребляется для образования неопределённого местоимения. *Кем дә булһа.* ■ *Кабина эсендә кемдер бар.* Н. Ғәйетбаев. *Роман иһә был сетерекле хәлдәрҙең береһен дә белмәй ине, шуға күрә ҡулындағы йөҙөктө кем дә булһа таныр тигән уй башына ла инеп сыҡҡаны юҡ.* Н. Мусин.

5. Үҙенә генә хас сифаты булған бер кешене белдерә. □ Употребляется для обозначения личности с определёнными качествами. ■ *Бына мин кем,– тигән теге ҡыҙ.– Мин әбей ҙә була алам, теләгән бер нәмә һүрәтенә инә алам.* Әкиәттән. *Шулай ҙа кемдең кем икәнлеген бер ни тиклем беләм инде.* Н. Мусин.

6. Баш һөйләмдең эйәһен асыҡлаусы эйәрсен һөйләмдә эйә вазифаһын үтәй. □ Выполняет роль подлежащего в придаточном предложении. ■ *Кем юлдан үтә, шул таяҡты юл ситенә ҡаҙап китә.* Д. Шәрәфетдинов. ● *Кем эшләмәй, шул ашамай.* Мәҡәл. *Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.* Мәҡәл. *Кемдең ҡулында — шуның ауыҙында.* Мәҡәл.

7. *һөйл.* Яңғыҙлыҡ исемдәр алдынан килеп, өҫтәмә өндәш һүҙ вазифаһын үтәй. □ Употребляется в функции обращения. ■ *Кем, Шакирйән түгелме һуң? — Гөлйөҙөм инәй, был кешене танымай ҡалһам килешмәҫ тигәндәй, һарығын да онотоп, Шакирға текәлде.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Кем белә <бит>** булыры-булмаҫы икеле булғанда әйтелә; белмәҫһең, ҡайҙан беләһең. □ Кто его знает. ■ *[Зәки:] Әйҙәгеҙ, хушлашайыҡ, арҡадаштар! Кем белә, бәлки, беҙ бер-беребеҙҙе ҡабат күрә алмабыҙ.* Н. Асанбаев. **Кем булыуына ҡарамаҫтан** теләһә ниндәй кеше. □ Кто бы ни был, невзирая на лица. *Кем булыуына ҡарамаҫтан, уға ярҙам итергә кәрәк.* **Кемгә барып бәрелергә белмәү** кемдән кәңәш, ярҙам һорарға белмәй аптырау. □ Не знать куда деться. ■ *[Ильяс] кемгә барып бәрелергә, ҡайғыһын кем менән уртаҡлашырға белмәй яфаланды.* Ғ. Ибраһимов. **Кемдеке — шуныҡы** исем һатмаҫҡа өндәгәндә әйтелә. □ Употребляется при предостережении беречь доброе имя. *Кемдеке — шуныҡы, йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килтерәһе булма, илла.* **Кемдең кем икәнен аңлау** ысын йөҙөн асыу. □ Понять истинное лицо. **Кемдең үҙе** һүҙ үҙе хаҡында барғанды белмәй, «кем дә кем» тип һораған кешегә ҡарата шаяртып әйтелә. □ Употребляется в шуточной форме для указания задающему вопрос «кто?», что он сам есть. **Кем дә кем** «кем» һүҙен көсәйтеү өсөн ҡулланыла. □ Кто-либо, кто-нибудь. ■ *Кем дә кем миңә буйһона — шул иркен тын алып, рәхәт йәшәй; кем дә кем буйһонмай — шул тыны ҡыҫылып, интегеп үлә.* Әкиәттән. **Кем етте шуға** кем теләһә, шул; төрлө кеше. □ Всякому, кому угодно. ■ *Өфө һәм Ырымбур губерналарындағы ваҡиғаларҙы өҫтән-мөҫтән, кем етте шунан ишетеп кенә белә [Хисмәтулла].* Я. Хамматов. **Кем етте шул** теләһә ниндәй кеше. □ Всякий, любой, кто угодно. *Кем етте шул эшләй алмай был эште.* **Кем менән уртаҡ** бөтә кеше лә файҙалана ала, берәү ҙә тыймай. □ Ничейный, общий. ■ *Вагон түбәләре, буферҙар кем менән уртаҡ, тинек тә, алмаш күлдәктәр һалынған төйөнсөктәрҙе алып, юлға сыҡтыҡ.* С. Агиш.

КЕМ II (Р.: аж; И.: hey; Т.: ki) *инш.*

Хәл, ваҡиғаның көсөргәнешле булыуына баҫым яһау, тыңлаусының иғтибарын тартыу өсөн ҡулланыла. □ Употребляется для усиления значения выражения и привлечения внимания слушателя. *Шундай күкрәне, кем, хатта тәҙрәләр зыңғырлап китте.* ■ *Аҡбуҙ асыуланып, Уралды шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти, кем, теге атылып төшөп, биленә тиклем ергә батты, ти.* «Урал батыр». *Ямғыр шул тиклем шәп яуҙы, кем, һыуланмаған еребеҙ ҡалманы.* Ж. Кейекбаев. *Беҙҙең танк етеҙерәк булып сыҡты, кем.* Н. Мусин.

КЕМБРИЙ ОСОРО [рус. < лат. *Cambria* ‘географик атама, Уэльстың элекке исеме’] (Р.: кембрийский период; И.: Cambrian; Т.: Kambriyen dönem) *и. геол.*

Палеозой дәүеренең тәүге осоро. □ Кембрийский период. ■ *И. М. Губкиндың теорияһы буйынса, нефть боронғо кембрий осоронан алып хәҙерге дәүергә тиклем туктауһыҙ барлыҡҡа килгән, һәм ул әле лә барлыҡҡа килә.* Д. Бураҡаев.

КЕМГӘЛЕК (Р.: кто первый; И.: who the first; Т.: kim birinci) *өндш. диал.*

«Кем алда?» мәғәнәһен биргән өндәш һүҙ. □ Позывное слово, передающее смысл «кто первый?» ■ *Уйында «кемгәлек» тип ҡыскыра инде балалар.* Экспедиция материалдарынан.

КЕМДЕР (Р.: кто-то; И.: somebody; Т.: kimdir) *билдһ. а.*

Билдәһеҙ шәхес: әллә кем. □ Кто-то, некто *(неопределённое местоимение). Кемдер килде. Кемдер йырлай. Кемдер ҡыскырып илай. Кемдер әйткән.* ■ *Байназарға кемдер йоҙроҡ менән ҡаты ғына төртөп үтте.* Б. Бикбай. *Шулай итеп халыҡ үҙ-ара аҡыл һатып торғанда, кемдер берәү бик ҡабаланаҡабалана, һөрлөгә-йығыла шәпләп ҡапҡа төбөндә өйөлөп торған халыҡҡа ҡарай килә.* Т. Хәйбуллин. *Кемдер һыҙғырып ебәрҙе.* А. Абдуллин. *Трубкала бер нәмә лә ишетелмәй. Кемдер тын алғаны һиҙелеп тора.* Д. Буләков.

КЕМИКАР (Р.: кемикар; И.: sort of agricultural poison; Т.: aşı) *и. хим.*

Иген культураларын ауырыуҙарҙан һаҡлау өсөн химик препарат, орлоҡ ағыулағыс. □ Кемикар *(препарат для травления зерновых культур). Орлоҡтарҙы кемикар менән эшкәртеү.*

КЕМИТҺАН (Р.: кто попало; И.: any; Т.: kimse) *и. диал.*

Кем етте шул. □ Кто попало. ■ *Кемитһандан һүҙ ишетеп ултырып булмай.* Экспедиция материалдарынан.

КЕМЛЕК I (кемлеге) (Р.: сущность *кого-л.*; И.: somebody’s essense; Т.: kimlik) *и.*

Кешенең кем икәнлеге, асылы. □ Сущность *кого-л.*, кем он является. *Сәфәрҙә кемдең кемлеге беленә.* ■ *Новиков юлда һөйләнеп бара: «Ярай әле, үҙенең кемлеген белгертте».* Д. Юлтый. *Ул [айғыр] хужаларына иғтибар итмәне, минең кемлекте күрҙегеҙме, тигәндәй, ярһыуынан һаман тыйыла алмай, муйынын дуғаландырып, ҡупшы башын түшенә табан тарта биреп, тояҡ аҫтарынан ҡаҙ ырғытып өйөрөнә ҡарай елде.* Н. Мусин. ● *Әүәл әйт дуҫыңды, әйтермен кемлегеңде.* Мәҡәл. *Ир-егеттең кемлеге эшендә беленер.* Мәҡәл.

КЕМЛЕК II (кемлеге) (Р.: удостоверение; И.: certificate; Т.: kimlik) *и.*

Кем булыуҙы күрһәткән рәсми документ. □ Удостоверение. *Кемлекте күрһәтеү.*

КЕМПИНГ [рус. < ингл. *Camping, camp* ‘лагерь булып урынлашыу’] (Р.: кемпинг; И.: camping; Т.: kamp) *и.*

1. Автотуристар өсөн йәйге лагерь. □ Кемпинг. *Кемпингта туҡталыу. Кемпинг төҙөү.*

2. Юл буйҙарында урынлашҡан осһоҙ ҡунаҡхана. □ Кемпинг.

КЕМСӘ (Р.: кто-то; И.: somebody; Т.: kimse) *а. иҫк.*

Кем икәне аныҡ түгел, кем дә булһа берәү; кемдер. □ Кто-то. ■ *Шаптыраған, ялтыраған кемсәләрҙең исеменә окшатып теҙмәккә уйланым, хәл ҡәҙәр, был тиҫбене.* Ш. Бабич.

КЕМСӘНӘ *а. иҫк. ҡар.* **кемсә.**

КЕМТЕРЛӘҮ (кемтерлә-) (Р.: ходить с трудом; И.: walk with difficulty; Т.: çok ağır yürümek) *ҡ.*

Яй генә хәрәкәтләнеү (*хәлһеҙ кешегә ҡарата*). □ Ходить, передвигаться с трудом. *Кемтерләп йөрөү.* ■ *Бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ кемтерләп кенә йөрөгәндәр, ти.* Әкиәттән.

КЕМУҘАРҘАН (Р.: наперегонки; И.: racing one another; Т.: yarışın) *р.*

Үҙ-ара тиҙлектә ҡыуышып, береһен-береһе уҙышып. □ Наперегонки. *Кемуҙарҙан йүгереү. Кемуҙарҙан эшләү. Кемуҙарҙан ҡысҡырышыу.* ■ *Барыһы үҙенең егәрлелеген күрһәтергә теләй, кемуҙарҙан тырыша.* Б. Бикбай. *Яҡшыһы күп, яманы ла юҡ түгел, әммә ләкин бөтәһе донъя ҡыуа, мал йыя. Кемуҙарҙан ҡыланалар.* Ә. Хәкимов. *Кемуҙарҙан ҡысҡырышҡан ҡоштар тауышы баҫылғас, кеше тауышына оҡшатып, әрәмәлек яғынан өкө оһолданы.* Я. Хамматов.

КЕМҺӘНӘ *а. иҫк. ҡар.* **кемсә.** ■ *Өфө ҡалаһын һәм Һамарҙы һалдыртмаҫҡа нуғай халҡының кенәзе Урус исемле кемһәнә Әстрхан губернаторына дәғүәләр йөрөткән һәм яу сығарған.* Ғ. Хөсәйенов.

КЕМӘЙ *и. диал. ҡар.* **әхирәт 2.** ● *Матур ҡыҙҙың кемәйе йәмһеҙ булыр.* Әйтем. *Ҡыҙҙың кемлеге кемәйенән билгеле.* Мәҡәл.

КЕНАФ [рус. < лат. *cannabis* ‘киндер’] *и. ҡар.* **кәнәп.**

КЕНГУРУ [рус. < ингл. *kangaroo*] *и. зоол. ҡар.* **көнгөрә.** *Инә кенгуру. Кенгуру балаһы.*

КЕНДЕГЕ БЕРЕШ (Р.: соединённый; И.: connected; Т.: bağlı) *с. диал.*

Нимәгәлер бәйле булыу, айырыла алмау. □ Соединённый, связанный. *Үткәндәрҙең бөгөнгөгә кендеге береш.*

КЕНДЕГЕ КИҪЕЛЕҮ *и.*

1. *ҡар.* **кендек ҡырҡыу.** *Ата-олатайҙарҙың кендеге киҫелгән ер.*

2. *ҡусм.* Ир ҡорона етеү. □ Стать совершеннолетним, достигнуть совершеннолетия.

КЕНДЕГЕ СИСЕЛЕҮ (Р.: опущение живота; И.: drooping belly; Т.: göbek düşmesi) *и. диал.*

Эс-ҡарын түбәнәйеп ауырыу; эс төшөү. □ Опущение живота.

КЕНДЕГҮЛӘН (Р.: пупочник; И.: stomach omission; Т.: omphalodes çiçeği) *и. бот.*

Күп йыллыҡ яҫы япраҡлы күк ваҡ сәскәле үҫемлек. □ Пупочник, омфалодес (лат. *Omphalodes*). *Кендегеүлән — күп йыллыҡ үлән. Кендегүлән май айында сәскә ата.*

КЕНДЕГӘНЕЙ *и. диал. ҡар.* **кендек инәһе.**

КЕНДЕК I (кендеге) [урал-алтай телдәренән] (Р.: пупок; И.: navel; Т.: göbek) *и.*

1. *анат.* Ҡорһаҡ уртаһында соҡорайып торған урын. □ Пупок. *Кендеге күренә. Салбарҙы кендектән юғары тартыу. Кендек соҡоро.* ■ *Тәүге алты айҙа, унан һуң да баланы кендеге төҙәлгәнсе ҡайнаған һыу менән ҡойондороғоҙ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 6, 2010. *Миңлеғәле яҡынлашҡан взвод командирын күрмәмешкә һалышты, кендек тәңгәленә саҡлы тәрәнәйтелгән траншеянан ҡомлоташлы һары балсыҡты һоҫоп алды ла юрамал уның өҫтөнә һирпте.* Р. Солтангәрәев.

2. *анат.* Ҡарындағы баланы, яралғыны әсә ҡарынына тоташтырып, уны туҡландырыу хеҙмәтен үтәгән нәҙек кенә эсәк. □ Пуповина. / Пупочный. *Кендек артерияһы. Бәпестең кендеген бәйләү.* ● *Ата-бабам баҡҡан ер — кендек ҡаным аҡҡан ер.* Мәҡәл.

3. *миф.* Һаҡлау, түлләндереү көсөнә эйә тип һаналған ағза. □ Мифологизированная часть тела, которая охраняет, оберегает человека, поэтому, высушив, его носят в качестве оберега. ■ *Кипкән кендек ғаиләлә балалар, кәртәлә мал үрсетеүгә булышлыҡ итә.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Донъя кендеге** тормош көтөүҙә, йәшәүҙә төп көс, терәк. □ Пуп земли. **Кендеге ҡанай** кемгәлер берәү гел тағылып йөрөгәндә әйтелә. □ Быть неразлучными друзьями. *Айырылһа, кендеге ҡанай.* **Кендек йәбешеү (***йәки* **кендек бәйләнеү)** берәй кешегә йәки урынға эйәләшеп, айырыла алмаҫ булыу. □ Быть привязаным *к чему-л. Бер-береһенә кендектәре йәбешкән.* ■ *Шул тупраҡтан сыҡкан малайҙар беҙ, кендегебеҙ шуға йәбешкән.* Ә. Атнабаев. *Артыҡ .. һорама, билдәле бит кемлегем. Ары китәм, киләсәккә бәйләнгән бит кендегем.* Т. Йосопов. **Кендек ҡаны тамған ер (***йәки* **кендек киҫкән ер)** тыуған ил. □ Родина. **Кендек ҡатҡан мәл** яҙ аҙағы, йәй башы. □ Конец весны, начало

лета. **Үҙ кендеген үҙе киҫеү** үҙен-үҙе ҡарай алыу. □ Быть в состоянии ухаживать за собой.

КЕНДЕК II (кендеге) [урал-алтай телдәренән] (Р.: шкворень; И.: pin; Т.: kingbolt) *и.*

1. Арбаны алтәкмәккә тоташтырған үҙәк. □ Шкворень, сердечник, стержень. *Кендек һыныу. Алтәкмәк кендектән ысҡынды. Кендекте алыштырыу. Арбаны кендектән ысҡындырыу.* ■ *Ул [Әбделкәбир] ишек алдында, итегенең эсенә арба кендеге кейҙереп, уксәһенә сыҡҡан ҡаҙауҙарҙы төйөп булаша.* Ф. Иҫәнғолов. *Сәмит арба төбөнән ярты-лаш һынған тимер кендек табып алды.* Ш. Шәһәр.

2. Һал ишкәген беркеткән үҙәк. □ Шкворень, стержень, куда надевается весло плота.

КЕНДЕК БАУЫ *и. анат. ҡар.* **кендек I, 2.**

КЕНДЕК БОРОУ (Р.: вправление пупка; И.: navel reposition; Т.: tedavi usülü) *и. миф.*

Балаһы булмаған ҡатынды имләү ысулы. □ Вправление пупка *(мифологизированное лечение бесплодной жещины).* ■ *Бала таба алмаған ҡатындың кендеген уңға борорға кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

КЕНДЕК БЫРАУ (Р.: большой бур; И.: large bore; Т.: büyük matkap) *и. диал.*

Йыуан ҙур бырау. □ Большой бур, бур большого размера.

КЕНДЕК ИБЕ *и. ҡар.* **кендек бороу.**

КЕНДЕК ИНӘҺЕ (Р.: повивальная бабка; И.: midwife; Т.: ebe) *и.*

Тыуған баланы ҡабул итеп, кендеген ҡырҡҡан ҡатын-ҡыҙ. □ Повивальная бабка. *Кендек инәһен саҡырыу.* ■ *Тыуған ҡыҙ баланы ҡулына алып, Муйылбикә үҙе кендек инәһе булды.* Һ. Дәүләтшина. *Кендек инәһе үҙ эшен ихлас башҡарҙы.* Я. Хамматов.

КЕНДЕК ҠАРСЫҠ (ҡарсығы) *и. диал. ҡар.* **кендек инәһе.**

КЕНДЕК ҠЫҘ (Р.: ребёнок женского пола по отношению к повивальной бабке; И.: female child; Т.: ebeye göre kız çocuk) *и.*

Кендек әбейгә ҡарата ҡыҙ кеше. □ Ребёнок женского пола по отношению к повивальной бабке.

КЕНДЕК ҠУЙЫУ (Р.: ритуальное закапывание пупка; И.: ritual action; Т.: ritüel) *и. этн.*

Ҡырҡҡан кендекте һуңғылыҡ менән бергә ергә күмеү йолаһы. □ Ритуальное закапывание пупка *(вместе с последом).*

КЕНДЕК ҠЫРҠЫУ (Р.: перерезание пуповины; И.: to cut off an umbilical cord; Т.: göbek bağını kesmek) *и.*

Бала тыуғас, кендеген ҡырҡыу. □ Перерезание пуповины. *Сабыйҙың кендеген ҡырҡыу.* ■ *Шул сәғәт эсендә һыуыҡ ҡурала бәпесләп, үҙе [Яланбикә] баланың кендеген ҡырҡып, шунда ятҡан, ти.* Һ. Дәүләтшина. *Гәүһәргә бит бынау дала түгел, кендек ҡырҡҡан ере кәҙерле.* Т. Ғәниева.

КЕНДЕК НӘНӘЙ *и. диал. ҡар.* **кендек инәй.**

КЕНДЕКСЕ *и. диал. ҡар.* **кендек инәһе.** ■ *Әммә ҡарамаҡҡа эре һөйәкле, кәүҙәгә лә таҙа Любаша ни сәбәптәндер балаһын тыуҙыра алмай. Тирәклеләге кендексе ҡарсыҡты барып килтергәнсе әсә үҙе лә, тыуыр бала ла донъя менән хушлашып өлгөрә.* Т. Ғарипова.

КЕНДЕК СЫҒЫУ (Р.: выпирание пупка; И.: protrude (of the navel); Т.: göbeğin bozulması) *и.*

Кендек боҙолоп ҙурайыу, кендек бүҫере сығыу. □ Выпячиваться, выпираться *(о пупке при грыже). Баланың кендеге сыҡҡан.*

КЕНДЕК ТАҪТАРЫ (Р.: ритуальный подарок; И.: ritual gift; Т.: ebeye hediye) *и. этн.*

Кендек ҡырҡҡан ҡатынға бирелгән бүләк. □ Ритуальный подарок повивальной бабке. *Кендек таҫтарына күлдәклек биреү.*

КЕНДЕК УЛ (Р.: ребёнок мужского пола по отношению к повивальной бабке; И.: male child; Т.: ebeye göre oğlan çocuk) *и.*

Кендек әбейгә ҡарата малай кеше. □ Ребёнок мужского пола по отношению к повивальной бабке.

КЕНДЕК ХАҠЫ *и. этн. ҡар.* **кендек таҫтары.**

КЕНДЕК ҺАҒЫ *и. диал. ҡар.* **тәҡдир.**

КЕНДЕК ҺАУЫУ (Р.: доение пупка; И.: ritual action; Т.: ritüel etki) *и. миф.*

Бала тыуғас та ҡысҡырмаһа, уның йәнен саҡырыу ысулы. □ Доение пупка *(магический обряд вызывания души новорождённого).*

КЕНДЕК ҺҮТЕЛЕҮ (Р.: не забеременеть; И.: not to become pregnant; Т.: hamile olmamak) *и.*

Ауырға ҡалмау. □ Не беременеть.

КЕНДЕК ӘБЕЙЕ *и. ҡар.* **кендек инәһе.** ■ *Хәмзә йортона ҡайтҡанда, уны кендек әбейе ҡаршы ала, шаршау артында ятҡан ҡатыны Ҡәмәр янына алып инә.* Ғ. Хәйри.

КЕНДЕКӘЙ *и. диал. ҡар.* **кендек инәһе.**

КЕНДЕКӘЙ ҠАРТЫЙЫ *и. диал. ҡар.* **кендек инәһе.**

КЕНЕМБАЙ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Һалйоғот ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени сальюгут.

КЕНТ [фарс. شهر 'ҡала'] *и. иҫк. кит. ҡар.* **ҡала.**

КЕНӘ I [алтай телдәренән] (Р.: месть; И.: revenge; Т.: kin) *и.*

Күңелдә һаҡланып килгән асыу; үс. □ Месть, затаённая злоба. ■ *Эйе, кенә ҡыуыусыны — яуызлыҡты эшләүсе менән бер дәрәжәлә күрә бит беҙҙең халыҡ.* З. Биишева. ● *Дуҫ-ишле булайым тиһәң, кенә тотма.* Мәҡәл.

КЕНӘ II *киҫ. ҡар.* **ғына.** ■ *Салауатҡа биш йәш кенә әле.* Й. Солтанов. *Тау башынан бөтә тирә-яҡ аяҡ аҫтында ятҡан кеүек кенә күренә.* Ж. Кейекбаев.

КЕНӘГӘ [рус.] (Р.: книга *(для записи)*; И.: book; Т.: defter) *и.*

Рәсми рәүештә иҫәп-хисап алып барыу өсөн тәғәйенләнгән махсус эш дәфтәре. □ Книга, книжка *(для записи). Ялыу кенәгәһе. Чектар кенәгәһе. Эш кенәгәһе. Килем һәм сығым кенәгәһе. Счёт-фактураларҙы теркәү кенәгәһе. Келәт кенәгәһе.* ■ *Приказчик кенәгәләрен аҡтарып, ҡайһы делянкала ҡанса ағас ҡырҡылғанын, күпме*һе *ҡайын, күпмеһе ҡарағай, уҫаҡ, йүкә булып сыҡҡанын оҙаҡ итеп һанай башлағайны, хужа уны ҡапыл туҡтатты.* З. Ураҡсин. *Уҡытыусы Әптеләхәт имтихан кенәгәһен үҙендә алып ҡалған, ә иртәгеһенә .. ҡулға алынды.* Т. Ғарипова.

КЕНӘЗ [рус.] (Р.: князь; И.: prince; Т.: şehzade) *и.*

1. Боронғо Рәсәйҙә ғәскәр һәм өлкә башлығы. □ Князь *(предводитель войска, правитель).* ■ *Имештер, Болғар хандарының береһе ҡыҙын рус кенәзенә кейәүгә биргәс, уға иптәш булырҙар тип, йәриәләрен, ялсыларын да эйәртеп ебәргән, ти.* Ғ. Ибраһимов. *[Алдарбай:] Ниндәй кенәз кешеләре икән? Улары тағы нимәгә темеҫкенеп йөрөй?..* Н. Мусин. *Байып-сереп, ҙур даими ғәскәр йыйып, Мәскәүҙең бөйөк кенәзе Василий Дмитриевич Урҙаны бөтөнләй һанға һуҡмай ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов.

2. Шул башлыҡтарҙың нәҫеленә бирелгән дәрәжә. □ Князь *(наследственный титул).* ■ *Ниҙә, ана Ҡараһаҡал ҡайтҡан бит, хатта Ур тамағына Урус кенәздең башҡорттарҙы яҙалағанын ҡарарға барып, яуҙаштарын ныҡлыҡҡа өндәп йөрөгән, тиҙәр.* Ғ. Ибраһимов. *Ураҡов тигән кенәз етәкләгән, ике йөҙләп һалдаттан торған урыҫ отрядынан Яйыҡ менән Һаҡмар араһындағы ауылдар буйынса түбән табан ҡуҙғалыуҙары билдәле.* Н. Мусин. *Бер мәл Йүрүҙән заводтарындағы баш-баштаҡлыҡты тикшерергә генерал-прокурор кенәз Вяземский килә.* Р. Шәкүр.

КЕНӘЗЛЕК (кенәзлеге) (Р.: княжество; И.: princedom; Т.: prenslik) *и.*

Кенәз хаким итҡән өлкә. □ Княжество. ■ *Бер заман, Сыңғыҙ үлгәс, Батый хан Болғар дәүләтен ҡыйратып, ауылдарын көлкүмер итеп, ҡалаларын хараба хәленә ҡалдырып, Оло иҙелде аша сыҡҡан да урыҫ кенәзлектәре еренә инеп киткән.* Ғ. Хөсәйенов. *Башҡорт — рус кенәзлектәренең сәйәси ваҡиғаларында әүҙем ҡатнашыусы ҡыпсаҡ ханы.* Р. Шәкүр.

КЕНӘ ҠЫУЫУ (кенә ҡыу-) (Р.: мстить; И.: take revenge; Т.: kin tutmak) *ҡ.*

Кемгәлер асыу һаҡлап, үс алырға тырышыу. □ Мстить, таить злобу. ■ *[Әнүәр:] Үҙемдең дә асыуланышып, холоҡһоҙ малайҙар кеүек, кенә ҡыуып йөрөгө килмәй ине.* Н. Мусин. *Мәҙинәнең кешегә үсләшкәне лә, этлек*

ҡылғаны ла, үткәнде хәтерләп, кенә ҡыуғаны ла юҡ. Т. Ғарипова. *Ә һин рәнйемәнең, рәнйеһәң дә һиҙҙермәнең. Кенә ҡыуманың.* М. Кәрим.

КЕНӘМ *с. диал. ҡар.* **кенәсел.** *Кенәм кеше.*

КЕНӘРИ [рус. < фр. *canari*] (Р.: канарейка; И.: canary; Т.: kanarya kuşu) *и. зоол.*

Һары йөнлө һайрар ҡош *(бүлмә ҡошо булараҡ таралған).* □ Канарейка. *Кенәри тауышы. Кенәри ситлеге. Кенәри аҫрау.*

КЕНӘСЕЛ (Р.: мстительный; И.: revengeful; Т.: hınçlı) *с.*

Кенә ҡыуыусан, үс һаҡлаусан. □ Мстительный, злопамятный. *Кенәсел кеше.* ■ *Кем, кем, Нурихановрайон күләмендә абруйлы ғына түгел, ул кенәсел дә кеше.* Д. Буләков. *[Ырыҫҡол:] Ай-һай, кенәсел дә икәнһең.* М. Кәрим.

КЕНӘ ТОТОУ (кенә тот-) (Р.: держать злобу; И.: bear a grudge; Т.: kin tutmak) *ҡ.*

Күңелдә үс алыу тойғоһон тотоу. □ Держать злобу. ■ *Ишкилде карт — ҡарттың шундайы: юҡҡа уның эсе бошманы, тура һүҙгә кенә тотманы.* С. Кулибай. *Әхмәди әнеһенә ҡарата былай ҙа үс һакламай, кенә тотмай ине.* Ж. Кейекбаев.

КЕНӘ УТЫ (Р.: клещевина; И.: castor oil plant; Т.: Hint yağı bitkisi) *и. бот.*

Һөтлөгәндәр ғаиләһенә ҡараған сүк сәскәле, сәнскәк орлоҡло ағас һымаҡ үҫемлек *(орлоғонан кастор майы, һабағынан сүс алалар).* □ Клещевина (лат. *Ricinus*).

КЕНӘҮ (кенә-) (Р.: истощаться от долгого голода; И.: starve; Т.: açlıktan kıvranmak) *ҡ.*

Оҙайлы ваҡыт ас йөрөүҙән эс ныҡ тартылыу. □ Истощаться от долгого голодания. *Яҙға табан мал кенәп китте.*

КЕНӘ ҺАҠЛАУ (кенә һаҡла-) *ҡ. ҡар.* **кенә тотоу.** ■ *Әгәр ҙә Таңһылыу уны, теләгән яҡҡа бороп, һыуҙан арҡан ишергә мәжбүр итә икән, егет [Ғата] быға бер ниндәй ҙә кенә һаҡламай.* Ә. Хәкимов.

КЕНӘ ҺАҠЛАУСАН *с. ҡар.* **кенәсел.** *Кенә һаҡлаусан кеше.*

КЕНӘҺЕҘ (Р.: незлопамятный; И.: forgiving; Т.: kin beslemeyen) *с.*

Асыуы тиҙ ҡайтыусан, күңелдә үс алыу тойғоһон йөрөтмәүсе; ҡайтымһаҡ. □ Незлопамятный, отходчивый. *Кенәһеҙ кеше. Кенәһеҙ булыу.*

КЕНӘШЕҮ (кенәш-) (Р.: обессилеть от голода; И.: pine with hunger; Т.: açlıktan halsiz düşmek) *ҡ.*

Оҙаҡ ас йөрөүҙән эс тартылып, ашай алмаҫ хәлгә килеү. □ Обессилеть, ослабеть от голода, стать немочным. *Аҫҡа кенәшеү.*

КЕПЕС (Р.: часто моргающий; И.: blinking often; Т.: kırık) *с.*

Ҡыҫылып бөткән, сейләнеп, сырт-сырт йомолоп торған *(күҙгә ҡарата).* □ Болезненно чувствительный к свету, слезящийся; часто моргающий *(о глазах). Кепес күҙ.*

КЕПЕСЛӘНЕҮ (кепеслән-) (Р.: становиться болезненым к свету; И.: become painful to light; Т.: kırık olmak) *ҡ.*

Кепескә әйләнеү, кепес булыу. □ Становиться болезненно чувствительным к свету, слезиться. *Күҙ кепесләнде.*

КЕПЕСЛӘТЕҮ (кепесләт-) (Р.: часто моргать; И.: blink; Т.: sıkça göz kırpmak) *ҡ.*

Күҙҙе сырт-сырт йомоу. □ Часто моргать глазами из-за болезненного восприятия света. // Моргание. ■ *Аптыраған да, ҡурҡҡан да һымаҡ күҙҙәрен кепесләтеп үҙенә текләп ҡалған Хөснөлхаҡҡа ҡарап, Әхмәтша ауыҙын бер яҡҡа ҡыйшайтып мыҫҡыллы йылмайҙы.* З. Биишева.

КЕПЕСЛӘҮ (кепеслә-) (Р.: моргать глазами; И.: twinkle eyes; Т.: göz kırpmak) *ҡ.*

Күҙҙе сырт-сырт йомоу. □ Моргать *(о глазах).* ■ *Бәләкәс кенә төҫһөҙ күҙҙәр сәйер кепесләп тора.* З. Биишева.

КЕПКА [рус.] (Р.: кепка; И.: cap; Т.: kasket) *и.*

Көнҡағарлы йәйге баш кейеме; кәпәс. □ Кепка. / Кепочный. *Күндән тегелгән кепка. Ирҙәр кепкаһы. Кепка кейеү.* ■ *Зөфәр машина ишеген бәреп япты ла башына кепкаһын кейҙе.* Д. Буләков. *Кепкаһын һалып, Сергей сәсен ургә һыпырҙы һәм Йәгҙәнең алһыуланған йөҙөнә күҙ төшөрҙө.* А. Абдуллин.

КЕПКАЛЫ (Р.: в кепке; И.: with a cap on; Т.: kasketli) *с.*

Кепка кейгән. □ В кепке, имеющий кепку. *Кепкалы малай. Кепкалы ҡыҙ.*

КЕР I [дөйөм төрки *кир*] (Р.: грязь; И.: dirt; Т.: kir) *и.*

1. Тәндәге, кейемдәге бысраҡ. □ Грязь *(на теле и на белье). Сәс кере. Ҡулдағы керҙе йыуып төшөрөү. Керҙән таҙартыу. Кергә ҡатҡан салбар. Керен таҙартҡансы йыуыу.* ■ *Ғөбәй ни күҙе менән күрһен, уның кергә ҡатып бөткән пинжәк-салбары, күлдәге йыуылған, үтекләнгән, йыртыҡ ерҙәре ямалған.* Ә. Хәкимов. ● *Керҙең йыуған һайын кере сыға.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Эстәге, күңелдәге насарлыҡ. □ Дурная, плохая мысль. ■ *Элекке дуҫлыҡ, бығаса һис бер кер төшмәгән кеүек, ҡабаттан ҡайтты.* С. Агиш. *Беҙгә иң тәүҙә эс керен паклау мөһим.* Я. Хамматов. *[Шәһүрә:] Мин намыҫ тигән төшөнсәне бер төрлө генә аңлайым: ул саф булырға тейеш, уға кер төшмәмә, намыҫың зылфарама килә, әшәкелек, боҙоҡ күңеллелек кенә тороп ҡала.* Н. Мусин. *Өлкән лейтенант күңелендә кер һаҡлай торған кеше булып сыҡманы.* Ш. Бикҡол. ● *Күңел кере, әйтһәң, бөтөр, күлдәк кере, йыуһаң, бөтөр.* Мәҡәл.

♦ **Кер күтәреү** керләнгәне һиҙелмәй торған булыу. □ Быть немарким. *Кер күтәргән күлдәк.* **Кер төшөрөү** хурлыҡ килтереү; тап төшөрөү. □ Запятнать *кого-л.* **Тырнаҡ аҫтынан кер эҙләү** юҡ ғәйепте табырға тырышыу. □ Придираться, искать повод для придирки. ● *Тырнаҡ аҫтынан кер эҙләмә.* Мәҡәл.

КЕР II [дөйөм төрки *кир*] (Р.: бельё; И.: linen; washing; Т.: çamaşır) *и.*

Йыуылған йәки йыуырға айырылған кейем, ҡаралды әйбере. □ Бельё. / Бельевой. *Таҙа кер. Йыуылған кер. Кер ҡайнатыу. Кер киптереү. Кер элеү.* ■ *Маһира дәрестән ҡайтты ла кисә йыуып ҡуйған керҙәрен үтекләргә тотондо.* С. Абдрахманов. *Дауахананың керен шунда килтерәләр, Сәбилә уларҙы йыуып-үтекләп ҡуйғас, алып китәләр.* Т. Ғарипова. *Бер ҡосаҡ аҡ кер күтәреп, Тоня ашығып килеп инде лә тупһала туҡтап ҡалды.* А. Абдуллин. *Тау аҫтынан шишмә аға керҙе ағарта торған.* Халыҡ йырынан.

КЕР III [дөйөм төрки *кир*] (Р.: сера в шерсти; И.: sulfur in wool; Т.: yün yağı) *и. диал.*

Йөн сайыры. □ Сера в шерсти. *Йөндө керҙән таҙартыу.*

КЕРАМЗИТ [рус. < гр. *keramos* ‘балсыҡ’] (Р.: керамзит; И.: claydite; Т.: keramzit) *и.*

Ҡыҙыл балсыҡ ҡатыш тау тоҡомдарын махсус эшкәртеп яһалған күҙәнәкле еңел таш рәүешендәге төҙөлөш материалы. □ Керамзит. *Керамзит етештереү. Өй башына керамзит һалыу. Бетонға керамзит ҡушыу.* ■ *Күрше өлкә белгестәре беҙҙең Башҡортостан предприятиеларында керамзит етештереү тәжрибәһен өйрәнеп ҡайтҡандар.* «Башҡортостан», 16 сентябрь 2007.

КЕРАМИК (Р.: керамический; И.: ceramic; Т.: seramik) *с.*

Балсыҡтан үртәп яһалған. □ Керамический. *Керамик торба. Керамик ваза. Керамик әйберҙәр етештереү. Ихата еренә керамик плита түшәү.* ■ *Башҡортостанда күмер сығарыу менән бергә брикет, кирбес, керамик плита һәм күмер һелтеһе реагенты етештереү ҙә артты.* «Башҡортостан», 12 март 2011.

КЕРАМИКА [рус. < гр. *keramos* ‘балсыҡ’] (Р.: керамика; И.: ceramics; Т.: seramik) *и.*

1. Балсыҡтан төрлө нәмә яһау сәнәғәте һәм сәнғәте. □ Керамика *(гончарное производство, гончарное искусство).* / Керамический. *Керамика эшләп сығарыу. Керамика сәнғәте белгесе. Керамика цехы.*

2. *йыйн.* Балсыҡтан яһалған төрлө нәмәләр. □ Керамика *(изделия из обожжённой глины). Керамика менән һатыу итеү.*

3. Төрлө әйберҙәр яһау өсөн ҡулланылған балсыҡ. □ Керамика *(масса, из которой изготовляются керамические изделия). Керамиканан эшләнгән плитка. Керамиканан торбалар етештереү.* ■ *Бер-ике һүрәт, ҙур булмаған скульптура, керамиканан эшләнгән башҡа берәй сәнғәт әҫәре булмаға нур өҫтәй.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 3, 2008.

КЕРАМИСТ [рус.] (Р.: керамист; И.: ceramist; Т.: seramikçi) *и.*

Керамика (1) менән шөғөлләнгән кеше. □ Керамист. *Керамист булыу.*

КЕРАМИТ [рус. < гр. *keramos*] (Р.: керамит; И.: keramit; Т.: keramit) *и.*

Юлға түшәй торған кирбес. □ Керамит. *Керамит түшәү. Керамит етештереү. Керамит заводы.*

КЕРАТИН [рус. < гр. *keras* 'мөгөҙ'] (Р.: кератин; И.: keratin; Т.: kerat) *и. биол.*

Сәс, тырнаҡ, тән тиресәләре составына ингән аҡһым матдә. □ Кератин. *Кератинға бай. Кератинлы капсулалар.*

КЕРАТИТ [рус. < гр. *keras* 'оро'] (Р.: кератит; И.: keratitis; Т.: göz iltihabı) *и. мед.*

Күҙҙең мөгөҙсә шекәрәһенең шешеүе. □ Воспаление роговицы глаза. *Кератиттан дауаланыу.*

КЕРАТОМА [рус. < ингл. *keratome*] (Р.: кератома; И.: horny growth; Т.: keratoma) *и. мед.*

Тире ҡатламында барлыҡҡа килгән ябай шеш. □ Кератома *(доброкачественная опухоль кожи). Ҡартлыҡ кератомаһы. Кератоманы лазер менән алыу.*

КЕРБӘЛӘК (кербәләге) *и. диал. ҡар.* **кер туҡмағы.** ■ *Мәрйәм кербәләген таш өҫтөнә ҡуйып, ҡыҙарған йөҙөн һөртөштөрөп алды.* Р. Низамов.

КЕРГЕЛӘҮ (кергелә-) (Р.: захаживать; И.: drop in; Т.: uğramak) *ҡ.*

Ваҡыты-ваҡыты менән, һирәк-һаяҡ кереү. □ Захаживать, заходить время от времени. *Күршеләргә кергеләү.* ■ *Мин был магазинға йыш ҡына кергеләйем.* Р. Низамов.

КЕРГӘЗИН *и. ҡар.* **кармазин.**

КЕРҘЕКӘЙ *и. диал. ҡар.* **әрпеш.**

КЕРҘЕМ *и. диал. ҡар.* **килмешәк.**

КЕРҘӘШ I (Р.: припущенник; И.: (re) settler; migrant on Bashkir lands; Т.: yerleşimci) *и.*

Ерле, аҫаба халыҡтан ер алып ингән сит ырыу, сит тоҡом. □ Припущенник. *Керҙәш булыу.*

КЕРҘӘШ II (Р.: примак; И.: roommate; Т.: kadının evinde oturan erkek) *и. диал.*

Йортҡа кергән ир. □ Примак.

КЕРЕГЕҮ (керек-) (Р.: пачкаться; И.: soil; Т.:kirlenmek) *ҡ.*

Бысрау, керләнеү. □ Загрязняться, пачкаться. *Өҫ-башы кереккән. Керекҡән күлдәк.* ■ *Аҡлы ситса күлдәгемдең яғалары кереккән.* Халыҡ йырынан.

КЕРЕКТЕРЕҮ (керектер-) (Р.: пачкать; И.: dirty; Т.: kirletmek) *ҡ.*

Бысратыу; керләндереү. □ Загрязнять, пачкать *(одежду).* ■ *Инәкәйемдең яулығын керектермәй йыуып тороғоҙ.* Сеңләүҙән.

КЕРЕКТӘН *и. ҡар.* **кәркәдән.**

КЕРЕЛДӘК (керелдәге) (Р.: крачка; И.: tern; Т.: sumru) *и. зоол.*

Ваҡ аҡсарлаҡ төрө. □ Крачка (лат. *Sterna paradisaea*). *Керелдәк ояһы. Керелдәк себеше.*

КЕРЕЛДӘК САРЛАҠ (сарлағы) (Р.: чайконосая крачка; И.: billed tern; Т.: gülen sumru) *и. зоол.*

Ҡыҫҡа суҡышлы, аяҡтары ҡара, башында елкәһенә төшөп торған ҡара «бүрке» булған күгәрсен ҙурлығындағы сарлаҡ төрө. □ Чайконосая крачка (лат. *Gelochelidon nilotica*). *Керелдәк сарлаҡ күсмә ҡош.*

КЕРЕЛДӘК СӨРӘГӘЙ (Р.: чирок-трескунок; И.: garganey; Т.: çıkrıkçın) *и. зоол.*

Йорт өйрәгенән бәләкәйерәк, йылға һәм күлдәрҙә йәшәүсе күсмә ҡош. □ Чирок-трескунок (лат. *Anas querquedula*). *Керелдәк сөрәгәйҙе ите өсөн аулайҙар.*

КЕРЕМ (Р.: прибыль; И.: gain; Т.: kâr) *и.*

Билдәле бер хеҙмәттән килгән һәм бухгалтер кенәгәһенә теркәлгән матди байлыҡ йәки аҡса. □ Прибыль, доход, приход. / Приходный. *Һатыу эшенән килгән керем. Нефть сәнәғәт кереме. Акционерҙар йәмғиәте кереме. Керем артты. Керемдән һалым түләү. Керем буйынса декларация тултырыу.* ■ *Республика буйынса тотош алғанда, әйләнеш һалымынан килгән керемдәр планы тулды.* «Башҡортостан», 15 март 2011. *Ҡоролоҡ арҡаһында баҫыусылыҡтан керем аҙ булды.* «Йәшлек», 2 октябрь 2010. ● *Керемнә күрә сығымы.* Мәҡәл.

КЕРЕМ-СЫҒЫМ (Р.: приход и расход; И.: receipts and expenditure; Т.: kâr ve gider) *и. йыйн.*

Ингән һәм сарыф ителгән аҡса йәки матди байлыҡ. □ Приход и расход. *Керем-сығым кенәгәһе. Хужалыҡтың керем-сығымы. Акционерҙар йәмғиәте йыйылышында керем-сығым буйынса отчёт биреү. Йыллыҡ*

керем-сығымды иҫәпләү. ■ *Әңгәмә алыш-биреш, баҙар хаҡы, һәр төрлө керем-сығым кеүек хужалыҡ хәстәрҙәренән башлап, илдәге бола-болғаныштарҙы, сит мәмләкәттәр менән элемтә мәсьәләләрен аймап ала.* Ә. Хәкимов.

КЕРЕНДЕРЕҮ (керендер-) *ҡ. диал. ҡар.* **тиргәү.**

КЕРЕНКА [рус.] (Р.: керенка; И.: Kerenka; Т.: Kerenka) *и. иҫк.*

Башында Керенский торған Ваҡытлы хөкүмәт сығарған ҡағыҙ аҡса *(әйләнештә үткән быуаттың 17–20-се йылдарында йөрөгән).* □ Керенка. *Егерме һумлыҡ керенка. Керенка менән иҫәпләшеү.*

КЕРЕСӘ I *и. һөйл. ҡар.* **бүҫер.**

КЕРЕСӘ II *и. һөйл. ҡар.* **ҡомаҡ.**

КЕРЕТЕҮ (керет-) *ҡ. ҡар.* **индереү.** *Өйгә керетеү. Ҡыуып керетеү. Залға керетеү. Төҙәтмә керетеү. Өҫтәмә керетеү.* ■ *Ҡарсыҡҡа сәйҙе үҙенең бәләкәс самауырында ҡайнатып керетәләр, ятҡан ерендә генә табын йәйеп бирәләр.* Й. Солтанов. *Назаров приёмныйҙа ултырған ҡыҙҙы саҡырып алды ла өсөнсө секретарҙы бында керетергә ҡушты.* Н. Мусин. ● *Ҡүҙ малды ҡаҙанға, кешене гүргә керетә.* Мәҡәл.

КЕРЕҮ (кер-) [дөйөм төрки *кир*] *ҡ. ҡар.* **инеү.** *Килеп кереү. Өйгә кереү. Йомошҡа кереү. Һуғышҡа кереү. Фатирға кереү. Фиркәгә кереү. Иҫәпкә кереү. Күк төҫкә кереү. Рәткә кереү. Ҡул араһына кереү.* ■ *Нина өйгә кереп китте.* Ә. Хәкимов. *Ҡаймаҡтан аҡ ҡатыҡ һарғылт төҫкә кергән.* Й. Солтанов. ● *Кереүеңдән алда сығыуыңды уйла.* Мәҡәл. *Ҡолаҡтан кергән һалҡын һүҙ йөрәккә етһә, боҙ була.* Мәҡәл. *Ауыҙыңа кергәнде сәйнәргә иренмә.* Мәҡәл. *Ишектән кереп, төнлөктән сыҡма.* Мәҡәл.

КЕРЕШ I [дөйөм төрки *кириш*] (Р.: тетива; И.: bowstring; Т.: kiriş) *и.*

1. Яндың сирттереп ебәрә торған бауы. □ Тетива. *Кереш тартыу. Екте керешкә эләктереү. Уҡ кереше.* ■ *Тимербулат өсөнсө сәпкә атырға һыҙмаһын ян өҫтөнә һалып, кереште саманан тыш тартып ебәреүгә, кереш сыҙаманы, шар итеп өҙөлөп китте.* Картотека фондынан.

2. Айырым эш ҡоралдарының тартты- рып ҡуйған бауы. □ Тетива инструментов. *Бысҡы кереше. Бысҡыға кереш тартыу.*

3. *анат.* Тел аҫтындағы тартылып торған яры. □ Уздечка. *Кереште киҫеү.*

4. *анат.* Умрау һөйәгенең барлау тамыры аҫтындағы тарамышы. □ Связка.

5. *диал. ҡар.* **карама II.**

6. *диал. ҡар.* **ҡарағош II.**

КЕРЕШ II [дөйөм төрки *кириш*] (Р.: лучок; И.: appliance for scutching the wool; Т.: kiriş) *и.*

Янға оҡшатып эшләнгән йөн теткес ҡорал. □ Лучок, смычок для трепания шерсти.

КЕРЕШ III (Р.: помолвка; И.: engagement; Т.: nişanlanma) *и. этн. диал.*

Туй алдынан була торған кәңәш. □ Помолвка. ■ *Инәйем әле генә керешкә барып ҡайттыҡ, тип яҙған.* Экспедиция материалдарынан.

КЕРЕШЕҮ I (кереш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кереү.** *взаимн. от* **кереү.** *Хәл-әхүәлде белешеп, керешеп йөрөү.*

КЕРЕШЕҮ II (кереш-) (Р.: приступить; И.: get to do smth; Т.: girişmek) *ҡ.*

Берәй эште эшләй башлау, эшләргә тотоноу. □ Приступить *к чему,* начинать *что-то,* приниматься, браться за *что. Яҙырға керешеү. Диплом эшенә керешеү. Кәсепкә керешеү. Кейендерергә керешеү. Иларға керешеү. Ихлас күңелдән керешеү. Тел сарларға керешеү.* ■ *Фәйзуллин менән Ғәрифуллин ҡыҙыу һүҙгә керешеп киттеләр.* С. Агиш. *Малай, кинәт ярһып китеп, үксәләре менән ерҙе төйгөсләп иларға керешә.* Й. Солтанов. *Аяғөҫтө торған Әмирҙең эйәк ҡағыуынан уҡ хужаһының теләген аңлап, Ҡаратай уны кейендерергә керешә.* Ә. Хәкимов. *Абдрахман ҡара сәүкә кеүек ябырылып килгән дошман яуына атырға керешкән.* Ә. Вахитов. ● *Ике ҡулыңа бер эш — ал да кереш.* Мәҡәл.

КЕРЕШЕҮ III (кереш-) *ҡ. диал. ҡар.* **ултырыу.**

КЕРЕШКЕ *и. диал. ҡар.* **кереш I, 1.**

КЕРЕШ ҠАРАМАҺЫ (Р.: передние санные вязки; И.: front knit toboggan; Т.: kızağın önü) *и. диал.*

Сананың алғы яҡ башындағы ҡарама. □ Передние санные вязки. *Кереш ҡарамаһын алыштырыу.*

КЕРЕШЛЕ *с. диал. ҡар.* **һыйышлы.**

КЕРЕШЛӘҮ (керешлә-) (Р.: натягивать тетиву; И.: nock, stretch a bow; Т.: kirişlemek) *ҡ.*

Кереш (I, 1) ҡуйыу. □ Натягивать тетиву на *что,* стягивать тетивой *что. Янды ебәк менән керешләү. Бысҡыны керешләү.* ■ *Егеттең яны мөгөҙҙән яһалып, бүре тарамышы менән керешләнгән.* Әкиәттән.

КЕРЕШӘ *и. диал. ҡар.* **йоҡа таҡта.**

КЕРИНКӘ [рус. *крынка*] *и. диал. ҡар.* **банка.** ■ *Сәйгә лә йүгереп кенә тау битенән берәр керинкә еләк апкилә һала инек.* Экспедиция материалдарынан.

КЕРИТЕТ (Р.: племенной бык; И.: breeding bull, herd bull; Т.: damızlık boğa) *и.*

Тоҡомло үгеҙ. □ Племенной бык.

КЕРЙЫУҒЫС *и. ҡар.* **кер машинаһы.** *Керйыуғыс һатып алыу.*

КЕР ЙЫУЫУ (кер йыу-) (Р.: стирать; И.: wash; Т.: çamaşır yıkamak) *ҡ.*

Кейем, ҡаралды әйберҙе һыу менән таҙартыу. □ Стирать. *Ҡул менән кер йыуыу. Кер машинаһында кер йыуыу. Һабын менән кер йыуыу.* ■ *Кер йыуыу бүлмәһенә ингәндә, ул [Локман] Сәбилә менән бындай һөйләшеү булыр тип тә уйламағайны.* Т. Ғарипова. *Алтынбай ыңғырсаҡ-ҡамыттарҙы төҙәткеләп йөрөй, ә ике ҡүҙе кер йыуған ҡатын-ҡыҙ араһынан аҡ сарафан кейгән, сәс толомдарын билендәге бауға ҡыҫтырған ҡыҙҙа.* З. Ураҡсин.

КЕР ЙЫУЫУСЫ (Р.: прачка; И.: laundress; Т.: çamaşırcı) *и.*

Эш хаҡына кер йыуыу һәм үтекләү менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙ. □ Прачка. ■ *Ирманың атаһы юҡ, әсәһе беҙҙең училищела кер йыуыусы булып эшләй ине.* Ш. Бикҡол. *Жирников: «Кер йыуыусы Ғаня менән мауығып йөрөй икән әле ул маңҡа, һеҙҙән хатта шул ҡыҙҙың ҡулын һорарға ла баҙнат итмәксе, имеш».* З. Ураҡсин.

КЕРКӘ *и. зоол. диал. ҡар.* **ташбаш.**

КЕР ҠЫҪТЫРҒЫС (Р.: прищепка; И.: clothes peg; Т.: çamaşır mandalı) *и.*

Керҙе киптерергә элгәндә бауға беркетеп ҡуя торған махсус ҡулайлама. □ Прищепка для белья. *Кер ҡыҫтырғыс һатып алыу. Кер ҡыҫтырғыс менән эләктереү.*

КЕРЛЕ (Р.: грязный; И.: soiled; Т.: kirli) *с.*

Керләнгән; бысраҡ. □ Грязный, загрязнённый. *Керле алъяпҡыс. Керле яулыҡ. Керле ҡулъяулыҡ.* ■ *Хәлимов уҡып бөткәндә, уның маңлайынан тирҙәр сыҡҡайны, ул, керле яулығын ҡеҫәһенән сығарып битен, һөрттө.* Д. Юлтый. *Атаһының хәлен абайламаған сабый .. сибек ҡулдары менән уның керле салбар балағын бөрөштөрөп услаған килеш, терттерт юртаҡлаған булды.* Й. Солтанов. *Аҡлы ситса ҡулдәгемде, ҡулым керле, томмайым.* Халыҡ йырынан.

КЕРЛӘНДЕРЕҮ (керләндер-) (Р.: загрязнять; И.: soil; Т.: kirletmek) *ҡ.*

Керле итеү; бысратыу, керектереү. □ Загрязнять, пачкать *(одежду, тело). Халатты керләндереү. Яулыҡты керләндереү. Сәсте керләндереү.* ■ *Нисә бер мәртәбә лә иҙән йыуғысы томманы, үҙе керләндергән ҡулдәкте үҙе йыуманы, ашарға әҙерләүҙең ни икәнен дә белмәне.* С. Поварисов.

КЕРЛӘНЕҮ (керлән-) (Р.: загрязняться; И.: get dirty; Т.: kirlenmek) *ҡ.*

Керлегә әйләнеү; бысрау, керегеү. □ Загрязняться, пачкаться. *Керләнгән ҡулдәк. Керләнгән салбар. Керләнгән сәс. Муйын керләнгән. Өҫ-баш керләнеү. Эш ваҡытында ҡулдар бик тиҙ керләнә.* ■ *Ҡулъяулығым аҡ ине, ҡүҙ йәше менән керләнде, был хәлдәрҙе ишеткәс, күңелдәрем төрләнде.* Халыҡ йырынан. *Фельдшер, керләнеп бөткән бинтты һүтеп, Амантаевтың яраһын ҡараны.* Р. Солтангәрәев.

КЕРЛӘҮ (керлә-) *ҡ.*

1. *ҡар.* **керләндереү.** *Кейемде керләү.*

2. *ҡусм.* Исемгә, намыҫҡа бысраҡ яғыу, хурлыҡ килтереү. □ Обливать грязью, обесславить. *Выжданды керләү. Исемде керләү.*

КЕР МАШИНАҺЫ (Р.: стиральная машина; И.: washing machine; Т.: çamaşır makinesi) *и.*

Кер йыуа торған машина. □ Стиральная машина. *Кер машинаһын ебәреү. Кер машинаһы керҙе үҙе киптерә.* ■ *Ул газ, ван-*

на, ялтырап торған ағас карауаттар, шкафтар, радио, телефон, кер йыуыу машиналары тиһеңме, юҡ нәмәләре юҡ. Б. Бикбай.

КЕРН [рус. < нем. *Kern*] (Р.: керн; И.: core, male; Т.: karot örneği) *и. геол.*

Ер быраулағанда сыҡҡан тау тоҡомоноң өлгөһө. □ Керн. *Керн алыу.* ■ *Михаил Васильевич көндәрен .. микроскоп аша керндарҙы тикшереп, ә төндәрен ғилми теоретик әҙәбиәт уҡып үткәрҙе.* И. Абдуллин.

КЕРНЕР [рус. < нем. *Korner*] (Р.: кернер; И.: punch; Т.: nokta zımbası) *и. махс.*

Деталдәргә билдә ҡуйыу өсөн ҡулланыла торған конус һымаҡ осло, ҡыҫҡа ҡорос инструмент. □ Кернер. *Кернер менән билдәләү. Кернер менән һыҙыу.*

КЕРНИС [рус. *крыса*] *и. диал. ҡар.* **ҡомаҡ.**

КЕРНИСӘ [рус. *крыльцо*] *и. диал. ҡар.* **күтәрмә II.** ■ *Бейек кенә бейек кернисәләрҙән тайып барып төштөм аңһыҙҙан.* Экспедиция материалдарынан.

КЕРНӘ (Р.: мигрень; И.: migraine; Т.: migren) *и. һөйл.*

Ҡаты баш ауырыуы. □ Мигрень, болезнь головы. *Кернә менән йонсоу.*

КЕРНӘКӘ (Р.: слизистая эпителия; И.: epithelium mucous membrane; Т.: epitelin sümükdokusu) *и.*

Эсәк эсендәге лайла. □ Слизистая эпителия *(слизь во внутренней части кишки).*

КЕРНӘ ТАРТЫУ (Р.: лечение мигрени с помощью заклинаний; И.: headache exorcism; Т.: büyü ile baş ağrısını tedavi etmek) *и. миф.*

Баш ауыртыуын имләү йолаһы. □ Лечение мигрени с помощью заклинаний *(магический заговор).* ■ *Баш ауыртһа, әбейҙәр кернә тарта ине.* Экспедиция материалдарынан.

КЕРОГАЗ [рус.] (Р.: керогаз; И.: kerosene stove; Т.: gaz ocağı) *и.*

Кәрәсин менән эшләгән аш-һыу бешергес. □ Керогаз. *Керогазда сәй ҡайнатыу.* ■ *Кеше эшләгәндә һерәйеп тормаҫ өсөн, Ғиндулла соланға сығып, керогазға сәйгүн ҡуйҙы.* Й. Солтанов.

КЕРПЕ I *и. диал.*

1. *ҡар.* **терпе 1.** ■ *Тән һыҙлағанда, керпе майы килешә.* Экспедиция материалдарынан. ● *Ҡарға ла балаһына «аппағым» тиер, керпе лә балаһына «йомшағым» тиер.* Мәҡәл.

2. *ҡар.* **морондоҡ I, 3.** ■ *Һыйырҙы иммәһен өсөн башмаҡҡа ҡаҙау ҡағылған ағас керпе кейҙереп ҡуялар.* Экспедиция материалдарынан.

КЕРПЕ II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән, ҡыпсаҡ ырыуҙарына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племён бурзян, кыпчак.

КЕРПЕ III *и. диал. ҡар.* **шыршы.**

КЕРПЕК I (керпеге) [дөйөм төрки *кирпик*] (Р.: ресница; И.: eye lash; Т.: kirpik) *и.*

1. Күҙ ҡабаҡтары осонда үҫкән шырт. □ Ресница. / Ресничный. *Бөҙрәләнеп торған керпектәр. Керпек буяу. Ҡуйы керпектәр. Яһалма керпек.* ■ *[Сафураның] ҡара күҙҙәренән эре йәш тамсылары оҙон керпектәре буйлап алһыу битенә тәгәрәнеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Малай ҡара йоҙроғон күҙенә килтерә, керпектәрен ыуалап, бер аҙ өндәшмәй тора.* Й. Солтанов. *Зөһрә үҙен бик эре тоткан был тәтәй егетте оҙон керпектәре аҫтынан ҡыҙыҡһынып күҙәтте һәм, икеһе бергә хеҙмәт иткәндәр булһа кәрәк, тип уйлап ҡуйҙы.* Н. Мусин. *Йөҙ илле лә керпек күҙен йомоп, йоҡлай минең һылыуым төш күреп.* Халыҡ йырынан. ● *Керпеге оҙонға күҙ тейә.* Мәҡәл.

2. *миф.* Һаҡлау көсөнә эйә тип ҡабул ителгән тән ағзаһы. □ Ресница *(часть тела, имеющая обережную силу).*

♦ **Керпегенән гөл тама** бик матур, ифрат та мөләйем, гүзәл. □ Прекрасный, красивый. ■ *Урамдан уҙып бара, ҡашынан күҙе ҡара; керпегенән гөлдәр тама, күрһәм, йөрәгем яна.* Халыҡ йырынан. **Керпек ҡағыу** күҙ асып йомоу. □ Подмигнуть. **Керпек ҡаҡҡансы** бик тиҙ, йәһәт. □ Мгновенно, очень быстро. ■ *Керпек ҡаҡҡан тиклем ғүмеремдә ирек алған халыҡ эсендә, иркен ерҙә, иркен ҡалһа инем өнөмдә, ләкин түгел төшөмдә.* Д. Юлтый.

Керпек сәнсеү текләү. □ Смотреть внимательно, уставиться. **Керпек тә ҡаҡмау** 1) күҙ ҙә йоммау. □ Глаз не смыкать. ■ *Тулған ай ҙа, иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар ҙа, уның [Емештең] тыныс йоҡоһона һоҡланып, таң атҡансы керпек тә ҡаҡмай ҡарап торҙолар.* З. Биишева; 2) саҡ ҡына ла йоҡламау, серем дә итмәү. □ Ни капли не спать. ■ *Төнө буйы керпек тә ҡаҡманы Төлкөсура, үҙенең бөтә тормош юлын ҡайтанан барлап, күҙ алдынан үткәрҙе, күп нәмәләр тураһында уйланды.* Н. Мусин.

КЕРПЕК II (керпеге) *и. диал. ҡар.* **балитәк.**

КЕРПЕК СЫҒЫУ (Р.: появление ложных ресниц; И.: false eyelashes; Т.: takma kirpik) *и.*

Ҡабаҡ эсенә ваҡ керпек сығыу. □ Появление ложных ресниц. ■ *Күҙенә керпек сыға, тей, аны сүпләтә, тей.* Экспедиция материалдарынан.

КЕРПЕКСӘ (Р.: реснички; И.: cilia; Т.: kirpik) *и. биол.*

Үсемлек һәм тереклек күҙәнәктәрендәге ваҡ ҡына үсенделәр. □ Реснички *(у растения). Кесерткән керпексәләре.*

КЕРПЕЛДӘҮ (керпелдә-) (Р.: вздрагивать; И.: startle; Т.: kıpırdamak) *ҡ.*

Ҡалтырап китеү *(күҙ бәбәктәренә ҡарата).* □ Вздрагивать *(о веках глаз).*

КЕР САЙҠАУ (кер сайҡа-) (Р.: полоскать бельё; И.: rinse linen; Т.: çamaşır çalkalamak) *ҡ.*

Керҙе йыуғандан һуң таҙа һыуҙа сайҡау. □ Полоскать бельё. // Полоскание белья. *Йылғала кер сайҡау.* ■ *Бәхетемә күрә, мин осоп төшкән саҡта күперҙән өҫтәрәк бер апай кер сайҡап тора икән.* Н. Мусин. *[Хажисолтан] Кәжән йылғаһы буйында сукәйеп кер сайҡаған Сәйҙеямал эргәһенә барҙы.* Я. Хамматов.

КЕРСЕК (керсеге) *и. диал. ҡар.* **тубырсыҡ.**

КЕРСЕКЛӘНЕҮ (керсеклән-) (Р.: становиться перисто-слоистым; И.: become cirrostratus; Т.: tüy şeklinde bulut oluşmak) *ҡ.*

Бөҙрә-бөҙрә булып ойошоу *(болотҡа ҡарата).* □ Становиться перисто-слоистым *(об облаках). Болоттар керсекләнә.*

КЕРСЕКТӘНЕҮ (керсектән-) *ҡ. диал. ҡар.* **аяҙыу.**

КЕРСЕЛ (Р.: маркий; И.: easily soiled; Т.: kolay kirlenen) *с.*

Тиҙ керләнеүсән. □ Маркий, быстро марающийся. *Керсел күлдәк. Керсел яулыҡ. Аҡ кейем керсел була.* ● *Кеше малы тирсел, кеше кейеме керсел.* Мәҡәл.

КЕРСӘЙЕҮ (керсәй-) *ҡ. диал. ҡар.* **тызрайыу.**

КЕРСӘН *с. диал.* **керсел.** ● *Кеше аты тирсән, кеше кейеме керсән.* Мәҡәл.

КЕР СӘПӘҮЕСЕ *и. диал. ҡар.* **кер туҡмағы.**

КЕРТ (Р.: хруп; И.: sound imitative word; Т.: kıtır) *оҡш.*

Ҡатыраҡ нәмәне ҡырҡҡанда, ҡаты-ҡото аҙыҡты тешләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку хрустения: хруп. ■ *Гөлнәзирә еңгә сәйҙе лә бик яратып, шәкәрҙе керт итеп тешләп ҡабып, сынаяҡҡа өрә-өрә эсте, хатта саҡ ҡына тирләп үк китте.* Г. Әмири.

КЕРТЕЛДӘК (Р.: хрустящий; И.: crackle; Т.: kıtırtılı) *с. диал.*

Кертелдәп торған. □ Хрустящий. ■ *Ҡуй ҡойроғоноң майы, түш майы кертелдәк була.* Экспедиция материалдарынан.

КЕРТЕЛДӘТЕҮ (кертелдәт-) (Р.: хрустеть; И.: crunch; Т.: kıtırdamak) *ҡ.*

Керт-керт иттереү. □ Издавать хруст, хрустеть. *Сохариҙарҙы кертелдәтеү. Кертелдәтеп ашау.* ■ *Аттар, бороноғо дуҫтарса, башҡа баш терәшеп тороп алалар ҙа таң атҡансы кинәнеп кертелдәтәләр генә ризыҡты.* Й. Солтанов.

КЕРТЕЛДӘҮ (кертелдә-) (Р.: хрустеть; И.: crunch; crackle; Т.: kıtırdamak) *ҡ.*

Керт-керт тигән тауыш сығарыу, керт-керт итеү. □ Хрустеть. ■ *Өҫтө быялаланып туңған ҡытырмаҡ ҡар уның [Сәлимәнең] йөрәгенә яра яҙған, төндәге кеүек аяҡ аҫтында шыҡһыҙ ҡыштырлай, кертелдәй.* З. Биишева. *Ҡарсыҡ, балға түтәһен тупһаға ҡуйып, малай ауыҙынан сыҡҡан кертелдәү ауазын ireп*

тыңлай, йөҙөнә якты нурҙар йәйелә. Й. Солтанов.

КЕРТ-КЕРТ (Р.: хруп-хруп; И.: crunch; Т.: kıtır kıtır) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат керт иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку хрустения: хруп-хруп. ■ *Мөхәмәтулла бабай бүртәгә бесән ташланы ла һиҫкәнеп киткән йәш, ҡайнар ҡанлы айғырҙың, тынысланып, керт-керт ашана башлауын күҙәтеп торҙо.* Ә. Вахитов. *Баҡыр күҙҙәрен ялтыратып, өс йәйҙәүес бәрәсе менән кәзәһе лә нигеҙ буйында керт-керт «һағыҙ» сәйнәп ята.* Т. Ғарипова. *Күкрәктауҙың көньяҡ битләүендә Шәрифулланың һарыҡтары керт-керт үлән ашап йөрөй.* М. Кәрим.

КЕРТЛӘТЕҮ (кертләт-) *ҡ. ҡар.* **кертелдәтеү.** ■ *Аҙбар эсендә, тештәрен йыш-йыш кертләтеп, һарыҡтар көйшәй.* Р. Ғабдрахманов. *Бына ул [Сәлимә] ҡатырмаҡ ҡарҙы кертләтеп, уя-емерә баҫып, йүгерәатлай урам буйлап китте.* З. Биишева.

КЕРТЛӘҮ (кертлә-) *ҡ. ҡар.* **кертелдәү.** ■ *Көндөҙ ирей бирел, өҫтө быяланып ҡатҡан ҡатырмаҡ ҡар аяҡ аҫтында кертләп, сатнап ята.* З. Биишева.

КЕР ТУҠМАҒЫ (Р.: бельевая колотушка; И.: dolly; Т.: tokaç) *и.*

Кер йыуыуҙа ҡулланыла торған ағас туҡмаҡ. □ Бельевая колотушка *(для стирки).*

КЕР ТӘГӘРЛӘТКЕС (Р.: бельевой валёк; И.: linen roller; Т.: çamaşır tokacı) *и.*

Уҡлауға ураған киндер нәмәне тәгәрләтеп йомшарта торған ҡырлы-ҡырлы ағас. □ Бельевой валёк *(для размягчения).*

КЕРТӘПӘ *и. диал. ҡар.* **иргәйел.** *Кертәпә булыу.*

КЕРҮШӘ (Р.: дроги; И.: perch; Т.: yük arabası) *и. диал.*

Оҙон билле арба. □ Дроги *(вид телеги). Керүшә эшләү. Керүшәгә тейәү.*

КЕРФЕК (керфеге) *и. диал. ҡар.* **керпек I.** *Оҙон керфектәр. Ҡара керфек.*

КЕР ҺАБЫНЫ (Р.: хозяйственное мыло; И.: laundry soap; Т.: çamaşır sabunu) *и.*

Кер йыуа торған махсус һабын. □ Хозяйственное мыло. ■ *[Солтан:] Нимәнән башлайбыҙ? Кер һабынынанмы? Был һабындың күбеге, Әли Сәлих әфәнде, аҡҡош мамығы кеүек күперә!* Н. Асанбаев. *Ҡарамаҡҡа кер һабынын хәтерләтеүсе һап-һары һәлмәк таш киҫәге ҡуйылды.* Ә. Хәкимов.

КЕРҺЕҘ (Р.: чистый; И.: clean; Т.: temiz) *с.*

1. Кере юҡ, бысраҡ, туҙан ҡатышмаған, таҙа *(кейем, тән һәм башҡаға ҡарата).* Чистый *(о теле, белье и т. п.). Керһеҙ сәс. Керһеҙ күлдәк. Керһеҙ кейем.* ■ *Капитан йәнә балаларҙың өҫ-башына иғтибар итеп, кейемдәре иҫкергән, сепрәк-сапраҡтан ғына ҡоршалған булһа ла, был өйҙөң бысаҡ менән ҡырсып йыуылған иҙән һәм өҫтәле, бишегә кеүек үк керһеҙ таҙа икәнен иҫәпкә алды.* Й. Солтанов. ● *Ҡулы керһеҙҙең күңеле көр.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Әхлаҡи яҡтан боҙолмаған, намыҫына тап төшмәгән, тотанаҡлы. □ Чистый, невинный. *Керһеҙ сабый. Керһеҙ күңелле кеше.* ■ *Керһеҙ дуҫлыҡ менән тормош йәмле, тик шул дуҫлыҡ менән аш-һыу тәмле.* Х. Кәрим. *Ҡасандыр яҡты маҡсаттар менән йәшәүсе, үҙенең киләсәген ап-асыҡ күргән керһеҙ күңелле Зөләйха.* Н. Мусин. *Атаһының мираҫын, керһеҙ исемен яҡлау — ғәҙеллек өсөн көрәшеү тигән һүҙ.* Ә. Хәкимов.

КЕРШТАУЫ *и. диал. ҡар.* **ялғаш.**

КЕРШӘН [боронғо төрки *киршән*] (Р.: крем; И.: cream; Т.: krema) *и.*

1. Биткә яға торған май. □ Крем *(для лица). Кершән яғыу.* ■ *Мөғәллимә елкәһе көмөрәйеберәк торған йыуан кәүҙәле, ҡалын ҡарағусҡыл иренле, әллә кершәнде күп яҡҡанға, ҡанһыҙ аҡ йөҙлө ҡатын ине.* З. Биишева. *Унан [Рәсимәнән] күңелдә ҡытыҡлағыс кершән, хушбуй еҫтәре аңҡый, бөҙрә, йомшаҡ сәстәре рәхәт иттереп битте ҡытыҡлай.* Н. Мусин.

2. Биткә һөртә торған аҡ онтаҡ. □ Пудра. *Кершән һөртөү.* ■ *Өлкән һатыусының йәшкелт күҙҙәрен йылдар тоноҡлатҡан, кершән аҫтынан йөҙөндәге йыйырсыҡтары белене.* Ш. Янбаев. *Ап-аҡ итеп кершән яҡһаң, битең ҡояш ашамаҫ.* Халыҡ йырынан.

КЕРШӘҮ (кершә-) *ҡ. диал. ҡар.* **иксәү.**

КЕРӘБИРЕШ *и. диал. ҡар.* **үткелек.**

КЕРӘКӘ (Р.: болотистое место; И.: boggy place; Т.: bataklı yer) *и.*

1. Һаҙамыҡ урын, батҡыл ер. □ Болотистое место. *Керәкәгә батыу.* ■ *Еҙ йыланы һыҙғыра керәкәлә, мүклектә.* Халыҡ йырынан.

2. Үлән, мүк баҫҡан күл. □ Заросшее мёртвое озеро.

КЕРӘКӘЛЕК (керәкәлеге) *и. диал. ҡар.* **һаҙлыҡ.**

КЕРӘН [рус. *хрен*] (Р.: хрен; И.: horse radish; Т.: acırga) *и. бот.*

1. Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, оҙонса яҫы япраҡлы, йыуан тамырлы баҡса үләне. □ Хрен *(растение)* (лат. *Armorácia*). *Керән тамыры. Ҡыярҙы керән япрағы менән тоҙлау. Керән үҫтереү.*

2. Шул үҫемлектең аш тәмләү өсөн файҙаланылған әсе тамыры. □ Хрен *(корень). Әсле керән менән тәмләү. Икмәккә керән яғыу.* ● *Бер керән ашап ике аҙна кикергән.* Мәҡәл.

КЕРӘНДИЛ [рус. < нем. *kringeln* 'бөгөү'] (Р.: крендель; И.: pretzel; Т.: simit) *и.*

Сөсө ҡамырҙан дүңгәләк яһап бешерелгән аҙыҡ. □ Крендель. *Мәкле керәндил. Йомшаҡ керәндил. Бер кило керәндил. Керәндилләп сәй эсеү.* ■ *Ә унда [ауыл пекарняһында] бешкән керәндилдәрҙе бөтә район халҡы яратып ала, уны хатта район үҙәгенә илтереп тә һаталар.* Картотека фондынан. *Бөгөн уйынға сығыр булғас, егеттәр үҙ-ара өсәр-бишәр тин аҡса йыйнап, Ғәлимйән купецтың лавкаһынан керәндилдәр килеп алып киттеләр.* Ж. Кейекбаев. *Галина, шулай һөйләнә-һөйләнә йөрөп, өҫтәлгә сынаяҡ, ул саҡта ауыл ерендә бик һирәк күстәнәс булған керәндил, ҡағыҙлы кәнфиттәр килтереп ҡуйҙы.* Н. Мусин.

КЕРӘНЛӘҮ (керәнлә-) (Р.: заправлять хреном; И.: add horse radish to food; Т.: acırga katmak) *ҡ.*

Керән менән тәмләү. □ Заправлять хреном. *Итле аш ты керәнләү. Керәнләп ашау.*

КЕРӘС I *и. зоол. диал. ҡар.* **яр ҡарлуғасы.**

КЕРӘС II *и. диал. ҡар.* **һиҙәп.**

КЕРӘШ I [рус. *кряж*] (Р.: длинное кряжистое бревно; И.: sturdy log; Т.: uzun kalın kütük) *и.*

Оҙон йыуан бүрәнә. □ Длинное кряжистое бревно. ■ *Тимер бик ҙур керәштәрҙе .. ботамай-нитмәй генә арбаһына тейәп бөтөрҙө, ти.* Әкиәттән.

КЕРӘШ II *с. диал. ҡар.* **беше.**

КЕРӘШЕН I [рус.] (Р.: крещёный; И.: baptized; Т.: vaftiz) *и.*

1. Мосолмандан христиан диненә күскән кеше. □ Крещёный. ■ *Егерме-егерме биш кенә йәштәр самаһындағы был Яйыҡ казагы башҡортса ап-асыҡ итеп һөйләшһә лә, муйынына тәре таҡҡайны. Шуны күреп торған Кинйә: «Керәшендә иман юҡ», — тип асығын әйтмәҫкә булды.* Г. Ибраһимов. *Был керәшен мырҙа ҡурҡытмаҡсы итә түгелме? — тине бер старшина.* Г. Хөсәйенов.

2. *ҡусм.* Үҙ һүҙле, тиҫкәре кешене шелтәләгәндә әйтелә. □ Упрямый человек. ■ *Әсәйни миңә асыулана: — Һаҡлап кейә белмәйһең, туныңды фронтҡа оҙатам, керәшен! — ти.* Картотека фондынан.

КЕРӘШЕН II (Р.: кряшены; И.: Kryashens; Т.: Keräşen) *и. этн.*

Башҡортостанда, Татарстанда һәм Рәсәйҙең ҡайһы бер өлкәләрендә компакт рәүешендә йәшәгән төрки телле, христиан динле халыҡ һәм шул халыҡтың бер вәкиле. □ Кряшены. ■ *Керәшендәр 2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында халыҡтар һәм милләттәр исемлегенә индерелде.* Интернет селтәренән.

КЕРӘШЕН III (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени тунгаур.

КЕРӘШӘ *и. зоол. диал. ҡар.* **яр ҡарлуғасы.** ■ *Көҙ яҡынлашыу билдәләре һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә булған ваҡыттан уҡ керәшәләр китеп юғала.* Экспедиция материалдарынан.

КЕС I (Р.: пис; И.: piss; Т.: çiş) *өндәш.*

Йәш баланы кесе яраууға өндәгәндә әйтелә торған һүҙ. □ Слово, которым вызывают у детей мочеиспускание: пис, пис-пис.

КЕС II *и. зоол. диал. ҡар.* **селбәрә.**

КЕСАҘНА (Р.: четверг; И.: Thursday; Т.: Perşembe) *и.*

1. Аҙнаның дүртенсе көнө. □ Четверг. *Кесаҙна көнө. Кесаҙнала йыйылыш үткәреү.* ■ *[Ҡыҙырастың әсәһе:] Кесаҙна көндө башланды, кесаҙнаға хәтле яуыр, ахырыһы, — тиһә лә, дөрөҫ килмәне.* З. Биишева. *Ҡышҡы түйҙан һуң килен төшөрөүгә тиклем кейәү кеше һәр кесаҙна һайын ҡыҙ йортона ҡуна бара.* М. Кәрим. *Уйылдан кесаҙна көн Хажы ауылынан йәш кәләш алып ҡайтырға йыйына.* Н. Мусин.

2. *миф.* Яҡшы семантикаға эйә, ҙур эштәр башҡарыу өсөн ыңғай һаналған, яманлыҡтарҙан тыйылып тора торған көн. □ Четверг *(мифологизированный день, имеющий положительную семантику).*

КЕСБАРМАҠ (кесбармағы) *и. диал. ҡар.* **сәтәкәй.**

КЕСБӘЙЕЛЛЕ *с. диал. ҡар.* **кесе бәйелле.**

КЕСЕ [боронғо төрки *кичиг*] (Р.: младший; И.: junior; Т.: küçük) *с.*

1. Йәш яғынан бәләкәй; *киреһе* — оло. □ Младший *(по возрасту). Өс йәшкә кесе булыу. Кесе йәштән. Кесе йәштәге балалар.* ■ *Ике йәшкә кесе булһа ла, ул [Юлай] теремегерәк һәм сосораҡ булғанға, беҙ тиҫтерҙәр һымаҡбыҙ.* Д. Шәрәфетдинов. *Әнүәр Зиннурович Ғәйниярҙан бер-ике генә йәшкә кесерәктер, былай донъяны күргән кеше.* Д. Бүләков. ● *Бер олонокон, бер кесенекен тыңла.* Мәҡәл. *Кесе ҡатын — кеше ҡатыны.* Мәҡәл. *Оло килен ҡатаһы кесе киленгә ярамай.* Мәҡәл. *Ҡоштоң кесеһе булғансы, эттең көсөгө бул.* Мәҡәл.

2. Йәшкә иң бәләкәй; кинйә. □ Младший *(о ребёнке). Кесе ҡыҙҙың уйынсыҡтары. Өлкән ул менән кесе ул.* ■ *Булған, ти, Аҡбулат тигән бер бабай менән Һылыубикә тигән бер әбей. Уларҙың булған, ти, өс улы, таҙ булған, ти, кесе улы.* Әкиәттән. *Шулай бер көндө, әле лә хәтерендә, кесе һеңлеһе мәктәптән илап ҡайтты.* А. Абдуллин.

3. Вазифа, дәрәжә яғынан бәләкәй. □ Младший *(по званию, должности). Кесе сержант. Кесе ғилми хеҙмәткәр. Кесе инспектор.* ■ *Отряд командиры Мурзин, кесе командирҙарҙы йыйып алып, бандиттар араһынан тулы мәғлүмәт алып килеү өсөн ауылға кеше ебәреү тураһында кәңәште.* Һ. Дәүләтшина. *Ут һүнә, прожектор нурҙары кесе лейтенант Сәлим Яруллинға төшә.* Н. Асанбаев.

4. *ҡар.* **бәләкәй 1.** ■ *Эшелонды юлда бер кесерәк ҡала станцияһында туҡтаттылар.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡыҙыҡ, тап Фәүзиә-Барсынбикәнең бала сағында йәшәгән йорто кеүек, тик бында үлсәмдәр башҡа, кесерәк.* Т. Ғарипова. ● *Оло өйгә ни кәрәк — кесе өйгә лә шул кәрәк.* Мәҡәл. *Өлкән өйҙә көлгәнгә, кесе өйҙәге ыржайған.* Мәҡәл.

♦ **Кесе телгә лә йоҡмау** бик аҙ булыу *(аҙыҡ, эсәр һыу тураһында).* □ Очень мало *(о еде, питье).* ■ *Бирелгән аштар елп итеп ҡалды, кесе телгә лә йоҡманы, аппетит шундай күтәрелеп китте, баяғынан да нығыраҡ асыҡтырҙы.* Д. Юлтый.

КЕСЕ БӘЙЕЛЛЕ (Р.: учтивый; И.: civil, courteous; Т.: tatlı dilli) *с.*

Кеселекле, түбәнселекле; олоно оло тип белеүсән. □ Учтивый.

КЕСЕҒЫҘ *и. диал. ҡар.* **ҡайынһеңле.**

КЕСЕ ЕТЕГӘН (Р.: Малая Медведица; И.: Dog's tail; Т.: Küçükayı) *и.*

1. *(баш хәреф менән) астр.* Күктең төньяғында сүмес һымаҡ урынлашҡан ете яҡты йондоҙҙан торған йондоҙлоҡ. □ Малая Медведица.

2. *миф.* Изгеләштерелгән, яҙмышҡа тәьҫир итә алған күк есеме. □ Малая Медведица *(небесные светила, имеющие влияние на судьбу).*

КЕС ИТЕҮ (кес ит-) (Р.: отправлять естественную малую надобность; И.: urinate; Т.: çiş yapmak) *ҡ.*

Кесе ярау итеү. □ Отправлять естественную малую надобность.

КЕСЕ ЙОМА *и. ҡар.* **кесаҙна.** ■ *Ашлыҡ ойоу эше һис бер туҡтауһыҙ, үҙгәрешһеҙ алты көнгә тартылды. Тик кесе йома көнө генә, ысыҡтың шәп төшөүе сәбәпле, ҡояш ауалағас ҡына, сәғәт етеләрҙә генә эште башларға тура килде.* Ғ. Дәүләтшин.

КЕСЕ ЙЫЛ (Р.: малый год; И.: the lesser year; Т.: verimlilik bayramı) *и. этн.*

Ырыҫ, муллыҡ, түллек булдырыуға йүнәлтелгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың йола байрамы. □ Малый год *(обрядовый праздник женщин, направленный на обеспечение плодовитости, благополучия).*

КЕСЕЙӘ [рус. *кисея*] (Р.: кисея; И.: muslin; Т.: muslin) *и.*

Үтә күренмәле йоҡа нәфис туҡыма. □ Кисея *(ткань).* / Кисейный. *Кесейә халат. Кесейә юбка.* ■ *[Сауҙәгәрҙәр:] Эй, егет, кил, үҙемдән ал. Ситсаның, кесейәнең иң шәбе миндә генә.* З. Биишева. *Баҙарҙарға барып ниҙәр алдың? Ун алты ла аршын кесейә.* Халыҡ йырынан. *Билдән бөрөп, күпертеп тегелгән ал кесейә күлдәк, ҡара бәрхәт камзул, балаҡ остары семәкәйләп сигелгән ҡыҙыл сатин ыштан, ҡулдан баҫҡан йомшаҡ аҡ бүйма.* З. Биишева.

КЕСЕ ЙӘШТӘН (Р.: с детства; И.: from one's childhood; Т.: küçük yaştan beri) *р.*

Бәләкәйҙән, бала саҡтан. □ С детства. ■ *Беренсенән, ун-ун ике йәшлек балалар ҡушылған эшкә ғәжәп етди яуаплылыҡ менән ҡараусан, икенсенән, балала кесе йәштән яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләү — мәктәп, ата-әсәләр, йәмәғәтселек алдында торған иң мөһим бурыстарҙың береһе бит.* Н. Мусин. *Ата йортонда саҡта кесе йәштән әйләнә-тирәһенең ҡан ҡалтырап тороуына, ярамһаҡланыуына күнеккән Зөмрәттең быға асыуы килә.* Ә. Хәкимов.

КЕСЕКЛӘР (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени мин.

КЕСЕКӘЙ *и. диал. ҡар.* **сүмесбаш.**

КЕСЕЛЕК (кеселеге) (Р.: почтение; И.: respect; Т.: saygı) *и.*

Үҙеңде кесе итеп тотоу; түбәнселекле, ихтирамлы мөғәмәлә. □ Почтение, уважительное отношение. *Кеселек менән мөрәжәғәт итеү. Ололар алдында кеселек күрһәтеү.* ● *Ололоғоң артҡан һайын кеселегең артһын.* Мәҡәл.

КЕСЕЛЕКЛЕ (Р.: почтительный; И.: respectful; Т.: saygılı) *с.*

Кеше алдында үҙен итәғәтле итеп тотоусан; түбәнселекле. □ Почтительный, уважительный. *Кеселекле һөйләшеү. Үҙеңде кеселекле тотоу.* ■ *Ҡаһымдың ата-олатайҙар йолаһын онотмауы, ололарға ҡарата ихтирамлы һәм кеселекле булыуы ауыл ҡарттары өсөн үтә ҡыуаныслы хәл ине.* Я. Хамматов. *Йәғҙә тәүге минуттан уҡ үҙен ябай һәм иркен тотто: юҡ-барға ҡыҙыҡмаҫы, сабыр, кеселекле ине.* А. Абдуллин.

КЕСЕЛЕКЛЕК (кеселеклеге) (Р.: почтительность; И.: respect, respectfulness; Т.: saygı) *и.*

Ихтирамлы, үҙеңде кесе итеп һанау сифаты. □ Почтительность. ■ *Йәш батыр, кеселеклек күрһәтеп, тәүҙә [көрәштән] баш тарта, әммә халыҡ һүҙен ерғә йыҡмай, .. уртаға сыға һәм Көслөбай менән алыша башлай.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

КЕСЕЛӘҮ (кеселә-) (Р.: проявлять снисходительность; И.: display indulgence; Т.: saygı göstermek) *ҡ.*

Кесе тип, бәләкәй тип ҡарау. □ Проявлять снисходительность *(к младшим по возрасту, должности).* ■ *Әйтергә теләгән һүҙем шул: һәр кем олоно ололәй, кесене кеселәй белһен ине.* Картотека фондынан. *Һине кеселәп түгел, һине уйнатып, түбәнһетеп түгел, ололауыбыҙҙан сығып әйтәбеҙ.* Т. Хәйбуллин.

КЕСЕ МӨРЙӘ *и. диал. ҡар.* **йүшкә.**

КЕСЕРТКӘН I (Р.: крапива; И.: nettle; Т.: ısırgan) *и.*

1. *бот.* Киртләс япраҡлы, оҙон ҡаты һабаҡлы, саға торған үҫемлек. □ Крапива. / Крапивный (лат. *Urtica*). *Кесерткән һабағы. Кесерткән орлоғо. Кесерткәндән сағылыу. Ҡош-ҡортҡа кесерткән ашатыу. Кесерткән йолҡоу. Кесерткән япрағынан аш бешереү.* ■ *Бер аҙҙан тән, кесерткән саҡҡандай, әрней башланы.* Ә. Бикчәнтәев. *Ул сәнскеле ҡыуаҡ, кесерткән шырлығын һаҡ ҡына айырып атлаған малайға эйәрҙе.* Ә. Хәкимов. ● *Оло һүҙен тотмаған — оролған да бәрелгән, кеше һүҙен тотмаған — кесерткәнгә йығылған.* Мәҡәл. *Ялаңғас аяҡҡа — кесерткән.* Мәҡәл.

2. *бот.* Шул үләндең һабағынан алынған сүс. □ Крапивное волокно. / Крапивный. *Кесерткән иләү. Кесерткән ҡапсыҡ.* ■ *Шунан бай өс ҙур кесерткән тоҡ табып килтерергә ҡушҡан.* Әкиәттән.

3. *миф.* Яман заттарҙы ҡыуыу көсөнә эйә булған мифлаштырылған үлән. □ Крапива *(мифологизированное растение, выполняющее обережную и отгонную функцию).* ■ *Әүәле, яман заттар килмәһен тип, бәш осона кесерткән һала торғайнылар.* Экспедиция материалдарынан.

♦ **Кесерткән тел (***йәки* **телле)** үтә зәһәр, төртмә һүҙле, үткәргәнсе әйтә торған. □ Злоязычный, злой на язык. *Кесерткән телле ҡатын.*

КЕСЕРТКӘН II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени мин.

КЕСЕРТКӘН БИҘГӘГЕ (Р.: крапивница; И.: nettle rash; T.: kurdeşen) *и. мед.*

Тәндә ҡабарынҡы сабыртма ҡалҡыу менән билдәләнгән аллергик тире ауырыуы. □ Крапивница, крапивная лихорадка. *Кесерткән биҙгәген дауалау.*

КЕСЕРТКӘН ГӨЛ (Р.: петуший гребешок; И.: cockcomb; T.: horozibiği çiçeği) *и. бот.*

Бегониялар ғаиләһенә ҡараған, япрағы тимгел-тимгел йәшел, күк йәки ала төҫтәге сәскәле үҫемлек. □ Петуший гребешок (лат. *Celosia cristata L.*).

КЕСЕРТКӘН ЕБӘГЕ (Р.: повилика; И.: convolvulus; T.: küsküt) *и. бот.*

Тамырһыҙ һәм япраҡһыҙ, йылтыр еп һабаҡлы паразит үлән *(башҡа үләндәргә сырмалып, шуларҙың һутын һурып үҫә).* □ Повилика, кускута (лат. *Cuscuta*). *Кесерткән ебәген утау. Баҡсаны кесерткән ебәгенән таҙартыу.*

КЕСЕРТКӘН ЙЫЛАНЫ *и. диал. ҡар.* **кеҫәртке.**

КЕСЕРТКӘН ҠАПСЫҠ (ҡапсығы) (Р.: холщовый мешок; И.: linen bag; T.: keten bezinden çuval) *и. диал.*

Тарма киндеренән тегелгән өс бот ярым һыйышлы ҡапсыҡ. □ Холщовый мешок.

КЕСЕРТКӘН ҠЫНАҺЫ *и. бот. диал. ҡар.* **кесерткән ебәге.**

КЕСЕРТКӘНЛЕК (кесерткәнлеге) (Р.: крапивник; И.: place grown with nettles; T.: ısırgan otu çok olan yer) *и.*

Кесерткән баҫҡан урын. □ Крапивник. ■ *Шунан ул [Лилиә] ҡоймаға килеп һөйәлде. Баҡсаға ҡараны. Унда япраҡтары бөтөрөлөп, уйҙыҡ-уйҙыҡ булып уҡмаша башлаған кесерткәнлек.* Р. Ғабдрахманов.

КЕСЕРТКӘН МАЙЫ *и. бот. диал. ҡар.* **кесерткән ебәге.**

КЕСЕРТКӘН ТАЛЫ *и. бот. диал. ҡар.* **кесерткән ебәге.**

КЕСЕРТКӘН ТУРҒАЙЫ (Р.: крапивник; И.: jenny wren; T.: bayağı çit (ya da çıt) kuşu) *и. зоол.*

Һырты ҡара арҡыры һыҙыҡтар менән сыбарланған, ҡыҫҡа ғына ҡойроғон текә тотоусы турғайҙан бәләкәй ҡош. □ Крапивник, подкоренник, орешек (лат. *Troglodytes troglodytes*). *Кесерткән турғайының ояһы ерҙә йәки ҡыуаҡтар араһында.*

КЕСЕРТКАН *и. бот. диал. ҡар.* **һаңғырау кесерткән.**

КЕСЕРТТЕРЕҮ (кесерттер-) *ҡ. диал. ҡар.* **сағыу II, 2.** *Кесерткән кесерттерә.*

КЕСЕРӘЙЕҮ (кесерәй-) *ҡ. ҡар.* **бәләкәсәйеү.** ■ *Йылдар уҙғас, кесерәйҙе минең кейгән таҡыям.* Ғ. Дәүләтов. *Ай болоттарҙан ҡотолған саҡтарҙа, күл буйындағы сиҙәмлек өҫтөндә күләгәләр ҙә бер оҙонайып, бер кесерәйеп йүгергеләне.* Ғ. Хәйри. *Айһылыу, бала шикелле кесерәйеп, иренә һыйынды.* З. Биишева.

КЕСЕРӘЙТЕҮ (кесерәйт-) *ҡ. ҡар.* **бәләкәсәйтеү.** ■ *Уны [Мәҙинәне] кесерәйтә, тәпәшәйтә, меҫкенләтә торған көс юҡ кеүек донъяла.* Т. Ғарипова. *Лесничийҙың үҙенә кесерәйтеп өндәшеүе ҡыҙға оҡшаманы, ахырыһы, зәңгәрһыу күҙҙәрен асыулы уйнатты.* Н. Мусин.

КЕСЕРӘЙТЕҮ ЯЛҒАУЫ (Р.: аффикс уменьшительности; И.: dimunitive affix; T.: küçültme eki) *и. лингв.*

Һүҙгә бәләкәйлек төшөнсәһе бирә торған грамматик ялғау. □ Аффикс уменьшительности.

КЕСЕ ТАБЫН (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени табын.

КЕСЕ ТЕЛ (Р.: нёбный язычок; И.: palatine uvula; Т.: küçük dil) *и. анат.*

Йомшаҡ аңҡауҙың артҡы өлөшө. □ Нёбный язычок. ■ *Ағас калаҡтың тумалаҡ башын ҡатыҡҡа һыйпап алған һайын, ике иле ягылып сыға, ауыҙ тултырып алғанда баҙҙан килгән һалҡынлығы менән, уҙәккә үткес ләззәтләндереп, оло телдән кесе телгә йылтая.* Й. Солтанов.

КЕСКЕ *и. диал. ҡар.* **ҡыпсыуыр.**

КЕСКЕНӘ *с. ҡар.* **бәләкәс.** ■ *Ауылды икегә бүлеп кескенә йылға аға.* Ф. Әсәнов. *Фәүзиәнең мал өйөнөң кескенә тәҙрәһенән тышҡа ҡарауы булды, уға үҙенең күңеле кеүек үк шомло, шөбһәле ҡара төн баҡты.* Т. Ғарипова. *Улар, ҡайғылы әсә менән кескенә бала, үлемде еңделәр.* Б Бикбай.

КЕСКЕНӘ БҮБӘК *и. диал. ҡар.* **сыңғарсай.**

КЕСКӘЙ I (Р.: малые дети; И.: small children; Т.: küçükler) *и. күпл.*

Ваҡ балалар. □ Малые дети. *Кескәйҙәр өсөн әкиәт. Кескәйҙәр тураһында.*

КЕСКӘЙ II *с. ҡар.* **бәләкәс.** ■ *Юламан ҡарт кескәй баланың йөрәген яраламаҫ өсөн, теге ваҡытта уның әсәһе хаҡындағы дөрөҫлөктө йәшергәйне шул.* З. Биишева. *Мотаһар ботинкаһын һалды, түр башында ятҡан кескәй мендәрҙе ҡолаҡ аҫтына ҡыҫтырып, стена буйына ятты.* Й. Солтанов.

КЕСКӘЙ БИҘРӘ *и. диал. ҡар.* **сирпәк.**

КЕСКӘЙ БЫСҠЫ *и. диал. ҡар.* **ҡул бысҡыһы.**

КЕСКӘЙ БӘПЕС *и. диал. ҡар.* **сәтәкәй.**

КЕСКӘЙ СЫПҠАЙ *и. диал. ҡар.* **йөрәк.**

КЕСКӘЙ ЯБАЛАҠ (ябалағы) *и. диал. ҡар.* **һаҡ.**

КЕСКӘНТӘЙ (Р.: крохотный; И.: tiny; Т.: küçücük) *с. диал.*

Бәләкәс кенә. □ Крохотный, малюсенький. ■ *[Мөғәллимә:] Бөгөн үҙ-ара беҙ кескәнтәй генә бер байрам яһайбыҙ.* Д. Юлтый.

КЕССОН [рус. < фр. *caisson*] (Р.: кессон; И.: caisson; Т.: keson) *и.*

1. *махс.* Һыу аҫтында эшләү өсөн һыу үтмәҫлек итеп эшләнгән камера. □ Кессон *(для подводных работ).*

2. *махс.* Металлургия мейестәрендә һыу менән һыуытыу өсөн эшләнгән тимер короб-ка. □ Кессон *(в металлургических печах).*

3. *архит.* Түбә түшәмендә йәки көмбәҙҙең эске яғында дүрткел, күпмөйөш рәүешендәге уйымдар *(биҙәү, тауыш яңғырашын көсәйтеү өсөн).* □ Кессон *(углубление на потолках, внутренних поверхностях сводов).*

КЕССОН АУЫРЫУЫ (Р.: кессонная болезнь; И.: caisson disease; Т.: vurgun ya da dekompresyon hastalığı) *и. мед.*

Юғары баҫымлы мөхиттән түбән баҫымлыға күскәндә барлыҡҡа килә торған ауырыу. □ Кессонная болезнь.

КЕССОНСЫ (Р.: рабочий кессонной камеры; И.: caisson operator; Т.: keson çalışanı) *и. махс.*

Кессон (1) менән эшләй торған эшсе. □ Рабочий кессонной камеры, кессонщик.

КЕСӘБИКӘ *и. ҡар.* **әмәйлек.**

КЕСӘЙ *и. зоол. диал. ҡар.* **ташбаш.**

КЕСӘТЕҮ (кесәт-) (Р.: побуждать *(ребёнка)* мочиться; И.: to induce to urinate; Т.: çiş yaptırmak) *ҡ. диал.*

Баланы һейҙереү. □ Побуждать *(ребёнка)* мочиться.

КЕҪӘ [фарс. کيسه] (Р.: карман; И.: pocket; Т.: cep) *и.*

1. Төрлө нәмә һалып йөрөтөү өсөн кейемдең эске йәки тышҡы яғына ҡуша тегелгән моҡсай. □ Карман. / Карманный. *Өҫтән һалынған кеҫә. Йәшерен кеҫә. Күлдәк кеҫәһе. Костюм кеҫәһе. Ҡулды салбар кеҫәһенә тығыу. Түш кеҫәһендә йөрөтөү. Күлдәкте кеҫә ҡуйып тегеү. Тун кеҫәһенән алыу. Буш кеҫә. Аҡсаны эске кеҫәгә һалыу. Кеҫәлә йөрөтөү.* ■ *Тәртип һаҡсыһы кеҫәһенән ҡара төҫтәге кескәй генә телефон сығарҙы, кәрәкле но-*

мерҙы йыя-йыя, ниндәй мәсьәлә буйынса килгәндәрен һораны. Ә. Әминев. *Ҡарсыҡ, ике һөйләмәйәсәген белдереп, аҡсысты кире бора, һурып алып, күкрәксәһендәге серле кеҫәһенә йәшерә.* Й. Солтанов. *[Мәҙинә] әсәһенең һырмаһы кеҫәһенән өскөл хатты алды ла тәҙрә эргәһенә килде.* Т. Ғарипова. ● *Ярлының күңеле тулы, кеҫәһе буш.* Мәҡәл. *Күңел бай, кеҫә һай.* Мәҡәл.

2. *күсм. һөйл.* Аҡса менән иҫәпләнгән байлыҡ; аҡса. □ Средства, деньги. *Кеҫә яғы мул. Кеҫә һай. Кеҫә яғы самалы булыу.* ■ *[Айҙар:] Иҫкә төшөү ҡайҙа ул, унда инде тиҙерәк кеҫә яғыңды ҡарайһың да үҙ ирлегеңә ныҡыраҡ таянаһың.* З. Биишева. *Хужа, мыйыҡ аҫтынан ғына, Фәсхиҙең кеҫә яғын һиҙҙермәҫтән һорашып ултырҙы.* Т. Йәнәби. ● *Ярлы башы менән уйлай, бай кеҫәһе менән уйлай.* Мәҡәл.

♦ **Кеҫәгә инеү (***йәки* **төшөү)** 1) аҡса, мал-мөлкәт килеү. □ Прибыль; 2) аҡсаны, мал-мөлкәтте үҙләштереү. □ Залезть в карман, украсть. *Кеҫәгә төшөү күп осраҡта халыҡ күп йыйылған ерҙә була.* **Кеҫәгә һуғыу** аҡсаға көс килеү, аҡсаны кәметеү. □ Бить по карману. ■ *[Аҙнағол:] Сауҙаны шунан да оҙаҡҡа һуҙыу кеҫәгә ныҡ һуғасаҡ, — тип белдерҙе.* З. Биишева. **Кеҫә ҡалынайтыу** аҡса туплау, байлыҡ йыйыу. □ Набить карман, накопить денег. *Алдаҡ юл менән кеҫә ҡалынайтыусылар.* **Кеҫәлә елдәр уйнау** бер тин аҡса ла булмау. □ В кармане ветер играет, денег нет. *Минең кеҫәлә елдәр уйнай.* **Кеҫәнән йоҙроҡ күрһәтеү** эстән генә үсләшеү. □ Показать кулак в кармане. *Кеҫәнән йоҙроҡ күрһәтеп тороу.* **Кеҫә һай** аҡсаһы аҙ. □ Денег мало. *Студенттарҙың кеҫәһе һай.* **Кеҫә һайығыу (***йәки* **таҡырайыу)** аҡса әҙәйеү, аҡса бөтөү. □ Остаться без денег. *Кеҫә таҡырайҙы.* **Кеҫәһе ҡалын (***йәки* **ҡалын кеҫә)** аҡсаға бай, байлығы күп. □ Карман толстый, денег много. *Һәр кемдең дә кеҫәһе ҡалын түгел.* ■ *Уның [Ныяҙғолдоң] төрмәгә алынған тигән хәбәрен ишетһәләр ҙә, күбеһе: «Йә, һыуға батмаҫ, утҡа янмаҫ, уларға ни булыр тиһең, уларҙың кеҫәләре ҡалын, теләһәләр ике донъяны бер юлы һатып алырҙар», — тип ҡул һелтәйҙәр ҙә үҙ хәсрәттәренә керешәләр.* Һ. Дәүләтшина.

КЕҪӘ БУРЫ (Р.: карманник; И.: pickpocket; Т.: yankesici) *и.*

Кешеләрҙең кеҫәһенән әйбер, аҡса урлау менән шөғөлләнеүсе. □ Карманник, карманный вор. ■ *Йәп-йәш кенә егеттәр араһында кеҫә буры, телефон талаусылар йыш осрай, улар мәктәп уҡыусыларының да, ҡарткороноң да мөлкәтен урлауҙан оялып тормай.* «Йәшлек», 13 апрель 2010.

КЕҪӘ ДӘФТӘРЕ (Р.: блокнот; И.: blocknote; Т.: bloknot) *и.*

Төрлө нәмәләрҙе яҙып барыу өсөн тәғәйенләнгән бәләкәй генә кенәгә. □ Блокнот. ■ *Ул урынынан етеҙ генә ҡуҙғалды ла өҫтәл тартмаһынан матур тышлы бер кеҫә дәфтәре алды.* Д. Юлтый. *Һүҙ ҡатыусы булмаһа, көндәр буйы һөйләшмәй, бик һирәк кенә кеҫә дәфтәренә һыҙғылап ҡуя [Морозов].* А. Таһиров.

КЕҪӘКӘЙ *и. зоол. диал.* **кеҫәртке.**

КЕҪӘЛ [рус. *кисель*] (Р.: кисель; И.: kissel; Т.: kisel) *и.*

1. Һоло ононан әсетеп, ҡайнатып бешерелгән һалҡын аш. □ Кисель *(сваренный из овсяной опары). Кеҫәлгә һөт өҫтәү. Кеҫәл әсетергә ҡуйыу. Кеҫәл бешереү.* ■ *Һөйгәем ныҡыныһын тиһәң, ярата күр кеҫәлде, шунан үҙең дә белерһең мин шифалы икәнде.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

2. Крахмалға шәкәр, емеш һуты ҡушып ҡайнатҡан эсемлек. □ Кисель *(сладкий). Сейә кеҫәле. Кеҫәл эсеү. Шәшкеләргә кеҫәл ҡойоу.*

3. *күсм.* Урамдағы батҡаҡ. □ Жижа, грязь, слякоть. ■ *Көҙ ине. Күктең төбө тишелгән һымаҡ туҡтауһыҙ ямғыр яуа. Ерҙә баҫыр урын юҡ — аяҡ аҫты кеҫәлгә әйләнгән.* В. Исхаҡов.

КЕҪӘЛЛӘНДЕРЕҮ (кеҫәлләндер-) (Р.: сделать киселеподобным; И.: to make as kissel; Т.: kisel gibi yapmak) *ҡ.*

Кеҫәл хәленә килтереү. □ Сделать киселеподобным.

КЕҪӘРТКЕ (Р.: ящерица; И.: lizard; Т.: kertenkele) *и.*

1. *зоол.* Оҙонса кәүҙәһе ҡаты тәңкә ҡау менән ҡапланған, оҙон ҡойроҡло, дүрт аяҡлы, һөйрәлеүсе ваҡ йәнлек. □ Ящерица (лат. *Lacertilia). Кеҫәртке ҡойроғо. Йылғыр кеҫәртке.* ■ *Танауҙы сәскә еҫе ҡытыҡлай, ҡыуаҡтан ҡыуаҡҡа пырылдашып ҡош-ҡорт оса, аяҡ аҫтынан әле кеҫәрткеләр сығып ҡаса; әле, ут төҫлө ҡанаттарын йәйеп, бәләкәс аждаһаға оҡшаш сиңерткәләр, ҡуңыҙҙар һикерешә.* Ә. Хәкимов. *Юҡ-юҡ тиһәң дә, һары кеҫәртке йә йылан шыптырлап, дөйә үләне, әрем араһына шыуышып инеп китә.* З. Ураҡсин.

2. *миф.* Мифлаштырылған, төрлө тыйыу, ышаныуҙар менән бәйле йән эйәһе. □ Мифологизированное животное, имеющее отрицательную семантику. ■ *Кәҫәрткене үлтерһәң, зыян күрәһең.* Экспедиция материалдарынан.

КЕҪӘСЕ (Р.: карманник; И.: pickpocket; Т.: yankesici) *и.*

Кеҫә ҡарағы. □ Карманник. *Кеҫәсене тотоу.*

КЕҪӘ ТЕЛЕФОНЫ (Р.: мобильный телефон; И.: mobile phone; Т.: cep telefonu) *и.*

Кеҫәлә йөрөтә торған бәләкәй телефон. □ Мобильный телефон. *Кеҫә телефонынан шылтыратыу. Ҡиммәтле кеҫә телефоны. Кеҫә телефоны һатып алыу.*

КЕҪӘҮ *и. диал. ҡар.* **тәртешкә.** ● *Ике йортҡа — бер кеҫәү.* Әйтем.

КЕТА [рус. < нан. *keta* 'балыҡ'] (Р.: кета; И.: dog salmon; Т.: somon balığı) *и. зоол.*

Ите һәм ыуылдырығы ҡыҙғылт алһыу төҫлө һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған эре диңгеҙ балығы. □ Кета *(рыба)* (лат. *Oncorhynchus keta). Кета итен ҡаҡлау. Кета һөҙөү. Кета тоҙлау. Алыҫ Көнсығыш диңгеҙҙәре кетаға бай.*

КЕТЕЙ-КЕТЕЙ *сак. диал. ҡар.* **сип-сип 2.**

КЕТЕЙ-МЕТЕЙ *и. ҡар.* **ҡыты-мыты.**

КЕТЕК (кетеге) *и. диал. ҡар.* **көсөк.**

КЕТЕ-МЕТЕ *и. ҡар.* **ҡыты-мыты.** ■ *[Дәүләтбай:] Бик яңғыратырға тырышмағанда ла, баҡсағыҙ, ишек алдығыҙ ҡойоп ҡуйған кеүек (өҫтәлгә ҡарап), тик өҫтәлегеҙҙә кете-мете аҙыраҡ түгелме һуң?* Н. Нәжми.

КЕТЕРҘӘҮ (кетерҙә-) *ҡ. диал. ҡар.* **ҡорҡолдау.**

КЕТЕРКЕ *и. диал. ҡар.* **кетерләүек II.**

КЕТЕР-КЕТЕР (Р.: хруп-хруп; И.: crunch; Т.: kıtır kıtır) *оҡш.*

Ҡаты нәмәне ваҡлағанда, кимергәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Хруп-хруп *(подражание звуку дробления чего-л., хруста при разгрызании сахара, сухариков). Кетер-кетер шәкәр ашау.* ■ *Йәмбикәһенең хырылдауына, Минираһының ҡулына кетер-кетер көйшәнеп йөрөүенә ҡарамаҫтан Ибраһан йоҡоға китергә тырышты.* А. Ғирфанов. *Мирхәйҙәров һирәгәйгән, салланған һаҡалын һелкетеп, кетер-кетер көлдө.* Т. Ғарипова.

КЕТЕРЛӘК (кетерләге) (Р.: кожная болезнь; И.: skin condition; Т.: cilt hastalığı) *и. миф.*

Ауырыу эйәһе Кетерләктән килгән тире ауырыуы. □ Кожная болезнь *(у детей, насылаемая духом болезни Кетерляк). Кетерләк имләү. Кетерләк өтөү.* ■ *Кетерләген өтмәһәң, бала илаҡ була.* Экспедиция материалдарынан.

КЕТЕРЛӘТЕҮ (кетерләт-) (Р.: хрустеть; И.: crunch; Т.: çıtırdatmak) *ҡ.*

Кетер-кетер иттереү, кетер-кетер иткән тауыш сығарыу. □ Хрустеть, издавать хруст. *Ҡыяр кетерләтеү. Кетерләтеп сохари кимереү. Кишерҙе кетерләтеп ашау.* ■ *[Табындағылар] барыһы ла, сәнскескә элеп, ауыҙҙарына яйлап ыҫланған ит тултырҙы, унан һуң тоҙланған ҡыяр кетерләтте.* Ф. Янышев. *Әйтерһең дә — [Гөлбикәнең] күкрәгенә ялтыр күҙле, үткер теште бәләкәй генә һоро сысҡан инеп ҡалған да, бер туҡтауһыҙ кетерләтеп кимерә лә тора.* С. Ҡудаш.

КЕТЕРЛӘҮ (кетерлә-) (Р.: хрустеть; И.: crunch; Т.: çıtırdamak) *ҡ.*

Кетер-кетер килеү, кетер-кетер итеү. □ Хрустеть. *Сәйнәгәндә кетерләп тороу. Кетерләп торған ҡар.* ■ *Ваҡ ҡуләүектәр йоҡа ғына боҙ ярыһы менән ҡапланған, аяҡ аҫты кетерләп тора.* Р. Ғабдрахманов. *Тәмле нәмә ул әтлек тигәне, киптерһәң, шәкәр кеүек, сәйнәгәндә кетерләп тора, һап-һары үҙе.* Ә. Чаныш.

КЕТЕРЛӘҮЕК I (Р.: хрустящий; И.: crunching; Т.: kıtırtılı) *с.*

Кетерләп торған. □ Хрустящий. *Кетерләүек ҡоймаҡ.*

КЕТЕРЛӘҮЕК II (кетерләүеге) (Р.: пушок на теле ребёнка; И.: pappus; Т.: ince tüy) *и.*

Бала йөнө. □ Пушок на теле ребёнка.

КЕТЕРЛӘҮЕК III (кетерләүеге) *и. диал. ҡар.* **туңғаҡ.**

КЕТЕРНӘС *и. диал. ҡар.* **төпөш.** *Кетернәс кенә бабай.*

КЕТЕРТЕК (кетертеге) *и. диал. ҡар.* **туңғаҡ.** *Киске кетертек.*

КЕТИ-КЕТИ *оҡш. ҡар.* **ҡытый-ҡытый.** *Кети-кети уйнау. Кети-кети итеү.*

КЕТКЕЛДӘК (кеткелдәге) (Р.: хохотун; И.: merry fellow; Т.: kahkahacı) *и.*

Кеткелдәп көлгән кеше. □ Хохотун, хохотушка.

КЕТКЕЛДӘҮ (кеткелдә-) (Р.: хихикать; И.: giggle; Т.: kıkırdama) *ҡ.*

Кет-кет итеп йомшаҡ ҡына көлөү. □ Хихикать, мягко смеяться. *Рәхәтләнеп кеткелдәү. Кеткелдәп ебәреү. Кеткелдәп ҡуйыу. Кеткелдәп тороу.* ■ *Был хәбәрҙән Оморҙаҡов ҡулдары менән эсен һыйпай-һыйпай, артҡа саңҡайып китеп, күҙҙәренән йәше сыҡҡансы кеткелдәп көлдө.* Д. Бүләков. *Салауаттың әсәһе быға, һис иҫе китмәй генә, кеткелдәп көлә.* Й. Солтанов. *Ҡарсыҡ яулыҡ осо менән ауыҙын ҡаплап, кеткелдәп көлдө.* Т. Ғарипова.

КЕТКЕЛДӘШЕҮ (кеткелдәш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кеткелдәү.** *взаимн. от* **кеткелдәү.** ■ *Хандарының кәйефен уртаҡлашып, Сафағәрәйҙең ярандары тағы кеткелдәшеп алдылар.* К. Мәргән.

КЕТ-КЕТ (Р.: хи-хи; И.: sound imitation word; Т.: kıkır kıkır) *оҡш.*

Йомшаҡ ҡына итеп ихлас көлгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку мелкого заливистого смеха: хи-хи. *Кет-кет көлөп ебәреү.* ■ *Көмөшбикә, йәнәһе, оялыуынан, ҙур башын ситкә бороп, неҫкә генә тауыш менән кет-кет көлгән булды, ә үҙенең эсендә һандуғастар һайрап, кәкүктәр саҡырҙы.* М. Кәрим. *Ай-һай-һай, тамам бөлгәнһең икән дә баһа, ҡоҙа! — Боғара, кәйефләнеп, кет-кет көлөп ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов. *Баш бухгалтер, күҙен ҡыҫып, кет-кет көлөп ебәрҙе, бәпес имеҙлеге кеүек бәләкәс кенә һук бармағын Карамдың танауы янында уйнатып алды.* Д. Бүләков.

КЕТМЕР I *с. ҡар.* **бөтмөр.** *Балалары кетмер генә.* ■ *[Әхирәттәре:] Бәхетлеһең, Ләйлә. Даның илгә таралды, герой булдың. Бигерәк тырыш, бигерәк кетмер инең шул бала сағыңдан, — тиештеләр.* Р. Шаммас.

КЕТМЕР II (Р.: кличка собаки; И.: paradise dog's name; Т.: Kıtmir) *и.*

1. *дини.* Ожмахта йәшәйәсәк изге эт. □ Кличка собаки, которая будет жить в раю. *Кетмер алты изге менән бергә мәмерйәлә өс йөҙ йылға ҡалған.*

2. *(баш хәреф менән)* Эт исеме. □ Кличка собаки. ■ *Күргең килһә, хәҙер күрһәтәйем әле, — тип, асыуланған Ниғмәтулла ҙур һары этте бәйенән ысҡындырҙы.— Кетмер, һөс!* Я. Хамматов.

КЕТМЕР III *с. диал. ҡар.* **бәләкәй.** *Кетмер буйлы.*

КЕТМЕР IV (Р.: имя самого маленького шайтана; И.: the name of the smallest feature; Т.: en küçük şeytan) *и.*

Ышаныуҙар буйынса, иң бәләкәй шайтандың исеме. □ Имя самого маленького шайтана.

КЕТМЕРЛӘҮ (кетмерлә-) (Р.: жить потихоньку; И.: lead a life; Т.: hayat sürmek) *ҡ. диал.*

Әкренләп көн итеү. □ Жить потихоньку. *Кетмерләп кенә донья көтөү.*

КЕТМӘ [фарс. کتمه] (Р.: фальшивка; И.: faked document; Т.: sahte belge) *и.*

Ялған документ. □ Фальшивка, поддельный документ. *Кетмә менән тотоу.* ■ *Ул [ҡағыҙ] аҫтыртын ҡултамғалар һалдырып, аныҡланған бер кетмә ине.* Т. Хәйбуллин.

КЕТНӘҮ (кетнә-) *ҡ. диал. ҡар.* **хихылдау.** *Кетнәп көлөү.*

КЕТТӘКӘ (Р.: туфли на высоком каблуке; И.: high heel shoes; Т.: topuklu) *и. диал.*

Бейек үксәле туфли. □ Туфли на высоком каблуке. ■ *Кеттәкә кейеп йығылып ятма.* Экспедиция материалдарынан.

КЕТЧУП (кетчубы) [рус. < ингл. *ketchup* < ҡыт. *koe* 'балыҡ' + *tsiap* 'соус'] (Р.: кетчуп; И.: ketchup; Т.: domates sosu) *и.*

Томат, уксус һәм тәмләткестәрҙән яһалған әсе соус. □ Кетчуп. *Кетчуп менән тәмләү. Кетчупҡа манып ашау. Буҙҙәк кетчубы. Кетчуп әҙерләү.*

КЕТӘК (кетәге) (Р.: насест; И.: perch; Т.: tünek) *и.*

1. Тауыҡтар төнәй торған урын. □ Насест *(в курятнике). Кетәккә ҡунаҡлау.* ■ *Ҡурала иһә һауылмаған һыйыр үрһәләнеп мөңрәй, ни эшләптер, әлегәсә тыныслана алмай, кетәктәге тауыҡтар ҡыткылдаша.* Ә. Хәкимов.

2. Тауыҡтар торған оя. □ Курятник. ■ *Ике тәпәйлеләрҙең зил-зилә ҡупҡандай сырылдап ҡысҡырғаны, ярһып ҡыткылдағандары һағайтты — кетәккә бүре төшкәндәй.* Й. Солтанов.

КЕҮ *и. диал. ҡар.* **көй.**

КЕҮЕК [боронғо төрки *кеби*] (Р.: как; И.: as if; Т.: gibi) *бәйл.*

1. Төп килештәге исем йәки эйәлек килештәге алмаш менән килеп, берәй сифатты, ҡылыҡты икенсе менән сағыштырғанда, уға оҡшатҡанда ҡулланыла; һымаҡ, шикелле. □ Как, как будто, будто, словно, вроде, подобно, наподобие. *Боҙ кеүек һалҡын. Йәшел хәтфә кеүек болон. Көҙгө кеүек йылтыр. Шәм кеүек шыршы. Уның кеүек эшләү.* ■ *Ҡуян кеүек, күҙенә ҡуш күренгәс, ҡойроғон һыртҡа һалған.* Р. Камал. *Беҙҙең кеүектәр аҡыл һатһа, һеҙҙең кеүектәр ауыҙын аса ла тора.* Ә. Вахитов. *Тырышыуым бушҡа китмәне, юртағым сер бирерлек түгел: бөрсәләй етеҙ, туп кеүек тумалаҡ, сөм-ҡара ялдары түҙып тора, ҡолаҡтары ҡайсылай, арҡаһы һумалалай йылкылдай.* Д. Бүләков.

2. Шартлы фараз төшөнсәһе биреү өсөн ҡулланыла. □ Употребляется в условных конструкциях. *Эшләп булмаҫ кеүек.* ■ *Бик һағынған, күрәһең — һөйләп һүҙе бөтмәҫ кеүек.* Ғ. Ибраһимов. *Шулай итеп, бер ҙә үтмәҫ кеүек тойолған оҙон көн үтеп, төн етеп, ҡараңғы төшөп тә китте.* З. Биишева. *Кешеләр Сәғидуллин тураһында бөтөнләй онотҡандар кеүек булды — үҙ-ара талаш китте.* А. Карнай. *[Кәбир] алыҫтан төнгө тынлыҡ менән йомшаҡ ишетелгән тауыштарҙы тыңланы һәм былдай төндө үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр күргән кеүек тойҙо.* Картотека фондынан.

3. Самалап, икеләнеп әйткәндә ҡулланыла. □ Употребляется в конструкциях, выражающих неуверенность, двойственность. *Ҡыҙыҡ кеүек булды.* ■ *Был эштәр башта беҙгә, малайҙарға, ҡыҙыҡ кеүек күренде.* М. Ғафури. *Ҡайһылай бәләкәй икән ул йөрәк! Ҡулдан ҡулға йөрөп осҡанда ул бик ҙур кеүек ине.* Т. Ғарипова.

4. Сағыштырыу эйәрсән һөйләмдәрен теркәү өсөн ҡулланыла. □ Употребляется в придаточных сравнительных предложениях в функции сказуемого. ■ *Һис көтмәгәндә аяҙ көндө күк күкрәгән кеүек, яҡындағы өйҙә кемдер ҡурай уйнап ебәрҙе.* Ә. Ихсан. *Кеше бала сағына әйләнеп ҡайта алмаған кеүек, кешелек тә талғынырак, вайымһыҙыраҡ йәшәгән дәүерҙәренә кире сигенә алмай.* Р. Бикбаев. *Хажиҙәр ҡәғбәне күрмәгә мохтаж булған кеүек, һинең яҡты йөҙөңә бағырға теләп, алыҫ ерҙәрҙән шатланып килдем.* Ғ. Ибраһимов. ● *Шәриғәт сей тире кеүек: күпме тартһаң да һуҙыла.* Мәҡәл. *Ҡыҙҙың күңеле ҡыл кеүек, көйләмәһәң — тиҙ китер.* Мәҡәл. *Яҡшы ҡатын йән кеүек, яман ҡатын ен кеүек.* Мәҡәл. *Ирем һүҙе аш кеүек, балам һүҙе таш кеүек.* Мәҡәл.

КЕҮӘЛ *и. диал. ҡар.* **ҡауаҡ.**

КЕҮӘЛДӘК (кеүәлдәге) *и. диал. ҡар.* **ҡауаҡ.**

КЕҮӘЛДӘНЕҮ (кеүәлдән-) *ҡ. диал. ҡар.* **ҡауаҡланыу.**

КЕҮӘН *и. зоол. диал. ҡар.* **һуна өйрәк.**

КЕҮӘҪ [рус. *квас*] (Р.: квас; И.: kvass; Т.: kvas) *и.*

Арыш икмәге йәки арыш ононан сүпрә һалып әсетеп эшләнгән эсемлек. □ Квас. *Һыуыҡ кеүәҫ. Кеүәҫ эсеү. Кеүәҫ һалып биреү. Һыуһынды кеүәҫ менән ҡайтарыу.* ■ *Көнбағыш, кеүәҫ һата торған кешеләрҙе хәҙер мин теләһә ҡасан һәм теләһә ниндәй урында ла таный алырмын.* С. Агиш. *[Һалдат:] Их, хәҙер алдыма ике ҡаҙаҡ һимеҙ һарыҡ ите менән боҫрап торған картуф кил-*

тереп ҡуйһындар ине! Ну һуғыр ҙа инем! Шунан, тын алмай, бер сүмес кеүәҫ һемерәһе лә ятып йоҡлайһы ине!.. Д. Юлтый.

КЕҮӘТӘ *и. диал.* **сеүәтә.**

КЕҮӘШНӘ [рус. *квашня*] *и. диал.* *ҡар.* **икмәк күнәге.**

КЕФАЛЬ [рус. < гр. *kephale*] (Р.: кефаль; И.: grey mullet; Т.: kefal) *и. зоол.*

Кефалдәр ғаиләһенә ҡараған ялпаҡ ҡына оҙонса диңгеҙ балығы. □ Кефаль (лат. *Mugil*). *Ҡаҡланған кефаль. Тоҙланған кефаль. Кефаль консерваһы.*

КЕФИР [рус.] (Р.: кефир; И.: yoghurt; Т.: kefir) *и.*

Үҙенсәлекле әсетә торған бәшмәк һалып ойотолған һөт аҙығы. □ Кефир. *Кефир эсеү. Кефир ойотоу.* ■ *[Нефтселәр] Батыргәрәйгә тағы кефир эсерҙеләр.* Р. Солтангәрәев. *Имеҙгән әсәләр һәр көндө ике стакан һөт йә кефир эсеүҙе үҙҙәренә ҡағиҙә итеп ҡуйһындар.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 9, 2011. *Йәне көйә [Гүмәрҙең] һәм, шул тойғонан ҡотолоу өсөн, тап-топ атлап йөрөп аҙыҡтарын бер тәрилкәгә һала, икенсе ҡулына кефир пакетын тота ла үрге ҡатҡа күтәрелә.* Н. Мусин.

КЕҺ-КЕҺ (Р.: кхе-кхе; И.: titter; Т.: kıkır kıkır) *оҡш.*

Йомшаҡ ҡына йүткергәндә, көлгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание лёгкому кашлю, смеху: кхе-кхе. *Кеһ-кеһ көлөп алыу.*

КЕШ I (Р.: соболь; И.: sable; Т.: samur) *и. зоол.*

1. Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған аҫыл тиреле йыртҡыс йәнлек. □ Соболь. / Соболиный. (лат. *Martes zibellina*). *Асыҡ көрән кеш. Ҡараһыу кеш. Кеш балаһы.* ■ *Кештең буйы 37–38 сантиметрҙан алып 56–57 сантиметрға тиклем ҙурлыҡта, төҫө ҡараһыу көрән, ҡайһы бер өлкәләрҙә аҡһыл көрән, башы, кәүҙәһенә ҡарағанда, аҡһыл төҫтә була.* Интернет селтәренән. *[Ишмөхәмәт:] Ҡасаҡ булып... үлгем килмәй, инәй... Анау малайҙың башына кейҙерермен тип, кеш тиреһенән бүрек теккән булғайным.* Т. Ғарипова.

2. Шул йәнлектең тиреһе. □ Шкура соболя. *Иләнгән кеш. Кештән тектерелгән тун.* ■ *[Иҙеүкәй — Мораҙымға:] Һин яманды тыуҙырып, ҡалҡай ҡамҡа түшәттем, ҡалҡай ҡамҡа ҡаты тип, ҡара кешкә биләттем.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым». *Өҫтөндә — ҡондоҙ яғалы йәшел сәкмән, башында — кештән тегелгән бүрек, ҡуңысына биҙәктәр төшөрөлгән өр-яңы сарығын өҙәңгегә ныҡ терәп, өлкән кәүҙәһен артҡа саңҡайта биреп, эйәрендә ғәжәп бер мәғрур ҡиәфәттә ултыра.* Н. Мусин.

КЕШ II (Р.: соболиный; И.: sable; Т.: samur) *с.*

Кештең тиреһенән тегелгән. □ Соболиный, соболий. *Кеш яға.* ■ *Ҡыны, һабы алтын менән биҙәлгән ҡылыска, йылтырап торған кеш тунға, ҡара төлкө тиреле бүреккә, әллә ни саҡлы ҡыҙыл малға кемдең генә күҙе ҡыҙмаған икән.* Ғ. Хөсәйенов.

КЕШАЛЫУ (кешал-) (Р.: звать в гости; И.: to invite; Т.: misafirliğe davet etmek) *ҡ. диал.*

Ҡунаҡҡа саҡырыу. □ Звать в гости.

КЕШЕ [боронғо төрки *киси*] (Р.: человек; И.: man; person; Т.: kişi) *и.*

1. Иң юғары аҡыл кеүәһенә эйә йән эйәһе; әҙәм. □ Человек. ■ *Бынан 1–1,5 миллион йыл элек Ерҙә кеше барлыҡҡа килә.* Д. Бураҡаев. *Гүмере башында, йәғни йәшлегендә, кеше үҙен һәр саҡ түмәләстә, артылышта торған һымаҡ хис итә.* А. Абдуллин. *Кеше, һиҫкәнеп, башын юғары күтәрҙе, уйҙарынан айнып, ҡая ситенә табан бер-ике аҙым атланы.* Н. Мусин.

2. Йән башынан иҫәпләү берәмеге. □ Человек, лицо. *Ун ике кеше килде. Биш кешенән торған ғаилә.* ■ *Иртәгеһенә белгестәр иртүк идара йортона килһә, колхоз рәйесе, Хаким, уның ике урынбаҫары, бөтөнләй таныш булмаған тағы ике кеше ултыра.* Ә. Әминев. *Мине ун бер кешегә баш итеп һайланылар.* Ғ. Хәйри. *Ошо мәлдә, ниһайәт, ҡайынлыҡ араһынан ике кеше һыны пәйҙә булды.* Д. Буләков.

3. Туғанлыҡ мөнәсәбәте, йәш һәм енес яғынан бүленеү буйынса билдәле бер төркөмгә ҡарағанлыҡты белдерә. □ Человек. *Ир кеше. Бала кеше. Ҡатын кеше. Оло кеше. Йәш кеше. Ҡарсыҡ кеше. Ауыл кешеһе. Фән*

кешеһе. Ҡала кешеһе. ■ *Батыр ошо минутта әсә кешегә балаһын юғалтыуҙың оло ҡайғы икәнлеген аңлағандай булды.* Н. Ғәйетбаев. *Ҡытай кешеһе баҫты, итәгәтле генә итеп билен бөктө, йылмайҙы, йылмайғанда күҙҙәре бөтәште, ирендәре урынында һыҙыҡ ҡына ҡалды.* Ә. Әминев. *Әсәй кеше ҡапыл ғына етдиләнә.* Й. Солтанов. ● *Ҡыҙым — ҡыҙ кеше, килер йөҙ кеше, алыр бер кеше.* Мәҡәл. *Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.* Мәҡәл. *Ир кешенең бер һүҙе — ҡатын кешенең йөҙ һүҙе.* Мәҡәл.

4. Юғары рухи һәм мораль сифаттарға эйә булған шәхес. □ Личность. *Ипле кеше. Көслө кеше. Күңелле кеше. Тырыш кеше. Тәртипле кеше. Кеше итеү.* ■ *Иплегә иптәш күп, яҡшы кешегә һәр ерҙә ишек асыҡ.* Ғ. Ибраһимов. *Иң мөһиме: кеше кеше булып ҡалһын.* Т. Сәғитов. *Вәлидов кеүек аҡыллы, төплө фекерле һәм уҡымышлы кешеләр милли төбәктәрҙә күп түгел, улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ.* Н. Асанбаев.

5. Күмәк шәхес; халыҡ. □ Люди. *Кеше йыйылғас. Кеше алдына сығыу.* ■ *[Атаһы — Байраҡҡа:] Улым, хәҙер үк туры атты ҡырҙан әҙләп ҡайт, кеше күҙенә бик үк салынмаҫҡа тырыш.* З. Биишева. *Кеше алдында үҙен шулай ыҡсым тоторға күнеккәйне ул [Арыҫлан].* Ғ. Ибраһимов. *Шиғырға нөктә төртмәйек инде, кеше көтә лә баһа!..* Картотека фондынан.

6. Туғанлығы, яҡынлығы булмаған сит кеше. □ Чужой. *Кеше балаһы. Кеше нәмәһе.* ■ *Кеше балаһын ғәйепләү анһатыраҡ шул.* З. Биишева. *Артабан уҡып тормаһы Мәҙинә: атаһының һуғышҡа тиклем ниндәй булғанын ул һыҙ ҙа белә ул, ә бына үҙенә ҡағылған һүҙҙәрҙән тәне семерҙәне, тыны ҡыҫылды: кеше балаһы!* Т. Ғарипова. *[Килдебәк:] Саҡ йәндәрен аҫраған малҡайҙарҙы бер аҙ тәрбиәләп аяҡҡа баҫтырыуың була, уларҙы, икенсе ҡураға күсереп, башҡа кешегә тапшыралар, ә миңә яңынан сибектәрен килтереп бирәләр.* А. Абдуллин. ● *Кеше ҡайғыһы төштән һуң.* Әйтем. *Кеше менән кеше араһы — ер менән күк араһы.* Әйтем. *Кеше була бесән менән, һин булаһың бисәң менән.* Мәҡәл.

7. *миф.* Алла (Хоҙай) тарафынан үҙенә оҡшатып балсыҡтан әүәләп булдырылған йән эйәһе. □ В башкирской мифологии: созданное Аллахом по своему подобию существо.

♦ **Кеше айырыу** 1) кешеләрҙе таный белеү. □ Разбираться в людях; 2) төрлө кешегә төрлөсә ҡарау; берәүгә яҡшы, берәүгә насар булыу. □ Делить людей *(на нужных и ненужных)*. **Кеше араһына инеү** 1) тормошта үҙ урыныңды табыу. □ Найти своё место в обществе. 2) кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡыҫылыу; □ Вмешиваться в чужие отношения. **Кеше аяғы тыныу** тулы тынлыҡ урынлашыу. □ Полная тишина. **Кеше аяҡ баҫмаған (урын, ер)** бер кем дә булмаған, ҡырағай. □ Место, куда не ступала нога человека; глушь. ■ *Борон-борон, Уралда әле кеше аяҡ баҫмаған урмандар булған сакта, Янһары тигән бер кеше булған, ти.* Әкиәттән. **Кеше булыу** 1) үҫеп, үҙ көнлө булыу. □ Достигнуть совершеннолетия, стать самостоятельным. *Балалар кеше булып бөттө.* ■ *Бында беҙҙең мосолмандарға ғаилә мәсьәләһе ҡыйын, бына балаларҙы үҫтерәһең, улар кеше булалар, уҡып сығалар, егеттәребеҙ рус ҡыҙҙарына өйләнәләр, ҡыҙҙарыбыҙ рус офицерҙарына сығалар.* Д. Юлтый; 2) һауығыу, шәбәйеү. □ Выздороветь. **Кешегә баҙ ҡаҙыу** яуызлыҡ теләү. □ Желать зла. **Кешегә үлә яҙыу** кешелекле булыу. □ Быть человечным. **Кешегә һанау** *кемделер* ихтирам итеү, фекерен иҫәпкә алыу. □ Уважать *кого*, считаться *с кем*. **Кеше иҫәбенә йәшәү** сит кеше ярҙамында көн күреү. □ Жить за счёт других. **Кеше итеп ҡарау** иҫәпләшеү, һанлау. □ Считать за человека. **Кеше итеү** 1) *кемделер* үҫтереп, уҡытып, үҙ аллы йәшәрлек хәлгә еткереү. □ Поставить на ноги, сделать человеком, дать воспитание и образование. *Балаларҙы кеше итеү бурысы.* ■ *[Новиков:] Разве һиңә һуғышҡа китергә кәрәк! Һинең уҡый торған ваҡытың — кеше булыу өсөн әҙерләнә торған ваҡытың.* Д. Юлтый; 2) *кемделер* ауырыуҙан тергеҙеп, аяҡҡа баҫтырыу. □ Вылечить, выходить. ■ *[Карам:] Мин кеше булыуҙан уҙғанмын. Тыныс ҡына үлергә ирек бирегеҙ.* Р. Хөсәйенов. **Кеше**

йырын йырлау үҙ фекере булмау, башҡаларға ғына эйәреү. □ Петь под чужую дудку. *Кеше йырын да йырла, үҙеңдекен онотма.* **Кеше йәнле** кешегә яҡшы мөнәсәбәтле, кешелекле. □ Человечный, добрый. ■ *Хәстәрлекле, кеше йәнле, төплө фекер йөрөтә белгән етәксе колхозсыларҙы үҙенең шәхси өлгөһө, үҙ эшенә мөнәсәбәте, эште дөрөҫ ойоштора белеүе, колхоз активистары, белгестәр, тәжрибәле өлкән йәштәгеләр менән һәр ваҡыт кәңәшләшеп эшләүе менән үҙенә ылыҡтыра.* «Торатау», 27 январь 2011. **Кеше көлдөрөп, эт өрҙөрөп йөрөү** көлкөгә, мыҫҡылға ҡалып, *ниндәйҙер* эш ҡылып йөрөү. □ Насмешить своим поступком, делами. **Кеше көлкөһө** мәсхәрә, хурлыҡ. □ Осмеяние, насмешка. **Кеше көнлө булыу** сит әҙәм ярҙамына мохтаж булыу. □ Быть не в состоянии себя обслужить, быть зависимым от *кого-л.* ■ *Баштан уҡ ошолай тәбиғәт ҡосағында тәбиғи ысул — үләндәр менән дауаланһам, ҡош тауыштарын тыңлаһам, эргәмдә ошолай моң ишетелеп, баш осомда туп-туп итеп алмалар яуып торһа, ҡартайған көнөмдә кеше көнлө булып та ҡалмаҫ инем.* М. Бураҡаева. **Кеше күҙендәге сүпте күреү** башҡаларҙың ғәйебен асып, үҙеңдекенә иғтибар итмәү. □ Видеть только чужие недостатки. ● *Кеше күҙендәге сүпте күргәнсе, үҙ күҙеңдәге сүпте алып ҡуй.* Әйтем. **Кеше ҡулына ҡалыу** сит кеше тәрбиәһенә, кеше ҡарамағына ҡалыу. □ Остаться на чужих руках, стать иждивенцем. **Кеше рәтенә инеү** 1) тормошта, йәмғиәттә башҡалар кимәленә күтәрелеү, үҙ урынын алыу. □ Найти своё место; 2) ҡаты сирҙән ҡотолоп шәбәйеү, йүнәлеү. □ Выздороветь, стать на ноги. **Кеше һүҙе** ғәйбәт. □ Сплетни, пересуды. **Кеше ыңғайлы** күндәм, әйткәнде тыңлаусан. □ Сговорчивый.

КЕШЕ ЕЛӘГЕ *и. бот. диал. ҡар.* **ер еләге.**

КЕШЕ ИНДЕРЕҮ *ҡар.* **кеше тотоу 1.**

КЕШЕ-КӨН (Р.: трудодень; И.: workday unit; Т.: işgünü) *и.*

Кешенең тулы эш көнөнә нигеҙләп алынған хеҙмәт үлсәү берәмеге. □ Трудодень. *Яҙғы ашлыҡты тамамлар өсөн бер-ике кешекөн кәрәк.*

КЕШЕ КҮҢЕЛЛЕ (Р.: человечный; И.: humane; Т.: insanca, insansever) *с.*

Башҡаларға ихлас мөнәсәбәтле, кеше көйөнә тора торған, кеселекле. □ Человечный, почтительный.

КЕШЕКӘЙ (Р.: некто; И.: somebody; Т.: biri) *и. һөйл.*

Таныш түгел, билдәһеҙ кеше. □ Кто-то, некто. ■ *Толоп яғаһын күтәреп, елгә арҡаһын ҡуйып, бесән санаһына ҡырын ятҡан кешекәй килә.* Б. Бикбай. *[Шәүрә:] Был партизан тигән кешекәйҙәр менән Урал эсе туп-тулы, ти.* З. Биишева. *Атаҡайымдың өйөндә ултырғайным тәҙрә төбөндә. Ят кешекәйҙәрҙең өйөндә ултырырмын ишек төбөндә.* Йырҙан.

КЕШЕ-ҠАРА (Р.: кто-либо; И.: some one; Т.: bir kimse) *и. йыйн.*

Ниндәй ҙә булһа кеше; кеше-фәлән. □ Кто-либо, кто-нибудь. ■ *Хәйрулла өндәшеп торманы, тиҙерәк кеше-ҡара күргәнсе атын эҙләп китте.* Д. Бүләков. *Хәҙер иһә, йәй уртаһы булыуға ҡарамаҫтан, көтөү сыҡмай, ауылдарҙа ни һарыҡ-кәзә баҡырғаны, ни эт өргәне ишетелмәй, кеше-ҡара ла һирәк күренә.* Ә. Хәкимов. *[Батыр:] Был ҡара ҡумта менән ни эшләргә? Ошонда ғына ташлап китер ине, кеше-ҡараның күреп ҡалыуы бар.* Н. Ғәйетбаев.

КЕШЕ ҠУШТАН *с. диал. ҡар.* **алсаҡ.**

КЕШЕЛЕК I (кешелеге) (Р.: человечество; И.: humanity; Т.: insanlık) *и.*

1. Бөтә донъя кешеләре, кешеләр йәмғиәте. □ Человечество, человеческое общество. / Человеческий. *Кешелектең үҫеүе. Кешелек донъяһының ҡанундары.* ■ *Ер йөҙөндәге бөтә кешелектең тәү атаһы — Әҙәм, әсәһе — Һауа.* Т. Ғарипова. *[Азамат:] Беләһеңме, күрәш кешенең үҙен дә, кешелекте лә таҙарта.* Р. Солтангәрәев.

2. Кешегә хас сифаттар. □ То, что свойственно, присуще человеку. / Человеческий. ■ *Кешене тышҡы күренеше менән таныу бик еңел булһа ла, уның кешелеген таныу ифрат дәрәжәлә ауыр.* Ғ. Хәйри. *Яугир үҙенең изге бурысын, кешелек бурысын, хатта хәрби бурысын башҡарып ҡуйҙы.* З. Ураҡсин. *Беҙ законға ла, кешелек выжданына ла хилафлыҡ*

ҡылманыҡ! — тине сәркәтип, ҡашын төйөп. Ә. Хәкимов.

3. Кешене аяу, ҡыҙғаныу тойғоһо, йомшаҡ күңеллелек. □ Человечность. *Кешелек тойғоһо. Кешелек менән мөғәмәлә итеү. Кешелек күрһәтеү.* ■ *[Юлия:] Ә кешелек яғынан мин һеҙҙән уларҙы язаһыҙ ҡалдырыуығыҙҙы үтенеп һорар инем.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Кешелектән сығарыу** 1) бик ныҡ яманлау. □ Хулить, сильно поносить; 2) эшлектән сығарыу (мәҫәлән, *туҡмап, сиргә дусар итеп һ. б.*). □ Вывести из строя, лишить трудоспособности. **Кешелектән сығыу** 1) эшкә яраҡһыҙланыу. □ Потерять трудоспособность. ■ *[Сәмиғуллин:] Минең йөрәкте беләһең бит, картуф сәсәм тип, кешелектән сығыр хәлем юҡ.* Ә. Вәли; 2) бик ныҡ арыу, йонсоу. □ Утомляться, изнуряться, обессилеть; 3) кешелек сифаттарын юғалтыу. □ Потерять человеческий облик, лицо. ■ *Кеше булыуы, өҫкә үрләүе генә ҡыйын — йылдар үтә, ә кешелектән сығыу өсөн бер нисә ай ваҡыт етә.* «Йәшлек», 22 ғинуар 2008.

КЕШЕЛЕК II (Р.: рассчитанный на ... человек; И.: for ... persons; Т.: kişilik) *с.*

Күпмелер кешегә иҫәпләнгән. □ Рассчитанный на столько-то человек. *Өс-дүрт кешелек. Ике кешлек. Өс кешелек бүлмә. Ике кешелек караүат.*

КЕШЕЛЕК III (кешелеге) (Р.: зрачок глаза; И.: pupil (of the eye); Т.: gözbebeği) *и.*

Күҙҙең иң уртаһындағы, шәүлә төшкән ҡара нөктә. □ Зрачок глаза. *Кешелеген шекәрә ҡаплаған.*

КЕШЕЛЕК ҠАТАРЫНА КЕРЕҮ (кешелек ҡатарына кер-) (Р.: стать совершеннолетним; И.: to become full age; Т.: ergenleşmek) *ҡ.*

Ир ҡорона тулыу. □ Стать совершеннолетним. *Егет кешелек ҡатарына кергән.*

КЕШЕЛЕКЛЕ (Р.: человечный; И.: humane; Т.: insanca, insansever) *с.*

Ярҙамсыл, мәрхәмәтле, шәфҡәтле; кеше йәнле. □ Человечный, гуманный, отзывчивый. *Кешелекле булыу. Кешелекле итеп тәрбиәләү. Кешелекле ҡатын. Кешелекле табип.* ■ *Сержант Щербань тырыш, эшлекле, курсанттарға ҡарата талапсан, ғәҙел, кешелекле.* Я. Хамматов. ● *Кешенеке менән кешелекле булма.* Мәҡәл.

КЕШЕЛЕКЛЕК (кешелеклеге) (Р.: человечность; И.: humaneness; Т.: insanlık) *и.*

Башҡа кешеләргә ярҙамсыл, мәрхәмәтле, шәфҡәтле булыу сифаты. □ Человечность, гуманность, доброта. *Кешелеклек күрһәтеү. Кешелеклек сифаты.* ■ *Кешелеклек, аяу тигән нәмә онотолған, әҙәмдең күҙенә генә түгел, йәненә ҡан һауған.* Б. Рафиҡов. *Ирлеген, кешелеклеген яҡлап ант итеп, хаҡлыҡ өсөн нахаҡҡа һәләк булған ҡыйыу Тимербай.* Һ. Дәүләтшина. *Бер ҡыҙ баланы санитарка йәки телефонистка итеп алыу уға [Вардгес Сергеевичҡа] бер ни тормай ине. Кешелеклеге, һиҙгерлеге етмәне.* М. Кәрим. *Зәйнулла хәҙрәт кеүек эскерһеҙ инсандарҙы, әхлаҡ һәм кешелеклек өлгөһө булғандарын хөрмәт итмәм.* Ә.-З. Вәлиди.

КЕШЕЛЕКЛЕЛЕК (кешелеклелеге) *и. ҡар.* **кешелеклек.** ■ *Сәлим үҙенең сабыр тәбиғәте, кешелеклелек сифаттары, кәрәк саҡта мәргән һүҙ әйтеүе менән һалдаттарҙы еңде.* С. Поварисов. *Иштуған Хаммат батыр менән ғорурланырға, тәрән ихтирам итергә, уның йөҙөндә бөтә булған кешелеклелек, дөрөҫлөк, намыҫлылыҡтың ҡаҡшамаҫ яҡлаусыһын күрергә өйрәнгән бит.* З. Биишева.

КЕШЕЛЕКҺЕҘ (Р.: бесчеловечный; И.: inhuman; Т.: insafsız) *с.*

Бер кемгә лә ярҙам итергә тырышмаған, мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ. □ Бесчеловечный, жестокий. ■ *Бергенәһенең, ир ҡорона кереп еткән малайының, шундайын да кешелекһеҙ булыуына төшөнөп бөтә алмай ҡарт: ни сәбәп?* Й. Солтанов. *[Зөлхәбирә:] Кеше эшенә, кеше тормошона шулай һөмһөҙ килеп тығылыу — нindәй тупаҫлыҡ, наҙанлыҡ? Нindәй кешелекһеҙ ҡырағай әхлаҡ, әрһеҙ ғәҙәт!* М. Кәрим.

КЕШЕЛЕКҺЕҘЛЕК (кешелекһеҙлеге) (Р.: бесчеловечность; И.: inhumanity; Т.: insafsızlık) *и.*

Бер кемгә лә ярҙам итергә тырышмау, мәрхәмәтһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек. □ Бесчеловечность, жестокость. ■ *Аслыҡ йылдың зарары, бер татарҙың кешелекһеҙлеге менән*

Мәрйәм шул рәүештә Кавказға китте. М. Ғафури. *Иртәгеһенә Кирилдың сатан эте гәйеп була... Әгәр уны йыртҡыс хайуандарға ашатыу өсөн зверинецка ебәрһәләр? Ниндәй ҡанһыҙлыҡ, ниндәй йәнһеҙлек, кешелекһеҙлек!* Картотека фондынан.

КЕШЕЛӘРСӘ (Р.: по-человечески; И.: humanly; Т.: insanca) *р.*

Дөйөм кешеләргә хас кеүек; әҙәмсә. □ По-человечески; как человек (люди). *Кешеләрсә мөғәмәлә итеү. Кешеләрсә эш итеү.* ■ *Гармунын түшенә аҫҡан Ирғәле көҙле кешеләрсә баҙыҡ атлап алдан сыҡты, уның артынан Менәүәрә күренде.* Н. Мусин. *Тимашев Алтынбайҙың ҡалынайып килгән яурынын оло кешеләрсә ҡағып ҡуйҙы.* З. Ураҡсин.

КЕШЕЛӘШТЕРЕҮ (кешеләштер-) (Р.: очеловечивать; И.: turn human; Т.: insanlaştırmak) *ҡ.*

1. Әҙәми зат һүрәтенә килтереү, кеше итеү. □ Очеловечивать *(наделить кого-л., что-л. свойствами человека).* // Очеловечивание. *Йәнһеҙ әйберҙәрҙе кешеләштереп һүрәтләү.*

2. Кешелекле итеү, мәрхәмәтле итеү. □ Очеловечивать *(смягчить, сделать человечным, гуманным).* // Очеловечивание.

КЕШЕ-МАҘАР *и. ҡар.* **кеше-ҡара.** ■ *Кеше-маҙар булһа ла – күрерлекме ни, дөм ҡараңғы.* Ғ. Ибраһимов. *[Әнйебикә:] Килеп йығылғас, Хоҙай хәйерле юл бирһен тип кенә ебәреп булмай бит. Ат, кеше-маҙар әҙерләгәнсе, йөрәк ялғап ал.* М. Буранғолов.

КЕШЕ МӨСӘЛЕ (Р.: цикл жизни человека; И.: human life cycle; Т.: on iki yıl) *и.*

Ун ике йылдан торған кеше ғүмеренең дәүерҙәре. □ Цикл жизни человека *(двенадцатилетний).*

КЕШЕН (Р.: мешок из шкуры телёнка; И.: bag from a skin of a calf; Т.: buzağu derisinden çuval) *и. диал.*

Быҙау тиреһенән йөнлө яғын тышҡа ҡуйып тегелгән тоҡ. □ Мешок из шкуры телёнка, сшитый мехом наружу. ■ *Һыйырымды кешен ҡуйып ҡына һауам, ҡуймаһам, тибә.* Экспедиция материалдарынан.

КЕШЕНЛӘТЕҮ (кешенләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кешенләү.** *понуд. от* **кешенләү.** *Бейәне кешенләтеү.*

КЕШЕНЛӘҮ (кешенлә-) *ҡ.*

1. *ҡар.* **кешнәү.** ■ *Ауылды яңғыратып кешенләй-кешенләй Бәләкәй һарайғыр сабып йөрөй ине. Уның тауышы ҡайһы саҡта йыраҡта, һырт арьяғында, ишетелә, шунан тағы ла нәҙек, ләкин ғәйрәтле кешенләү тәҙрә быялаларын зыңғырлата.* Н. Мусин.

2. *диал.* Аттың өс аяғын тышау. □ Треножить.

КЕШЕ НУРЫ (Р.: луч человека; И.: beam of the person; Т.: kişi nuru) *и. миф.*

Кеше иҫән саҡта, уға эйәреп йөрөгән яҡтылыҡ. □ Луч человека *(мифический).* ■ *Кеше нуры ут булып осоп йөрөй, ти.* Экспедиция материалдарынан.

КЕШЕРӘТ *и. диал. ҡар.* **киҙеү.**

КЕШЕ СҮРӘТЕ *и. диал. ҡар.* **ҡараҫҡы.**

КЕШЕ ТОТОУ (кеше тот-) (Р.: держать квартирантов; И.: take in lodgers; Т.: kiracı almak) *ҡ.*

1. Килем алыу маҡсаты менән фатирға кеше керетеү. □ Держать квартирантов. *Фатирҙа кеше тотоу.*

2. Хеҙмәтсе, йомошсо тотоу. □ Держать прислугу. ■ *Квартираһын ҡарау һәм ашарға әҙерләү өсөн махсус кеше тота.* И. Насыри.

КЕШЕ-ФӘЛӘН *и. йыйн. ҡар.* **кеше-ҡара.** ■ *Ут һүнгәнен күргәс, ҡыҙҙы ҡурҡыу алған: тышта ҡараңғы төшөп килә, ә яҡындарҙа кеше-фәлән юҡ икән.* Халыҡ ижадынан.

КЕШЕ ХАҠЫ *и. диал. ҡар.* **хәрәм.**

КЕШЕ ХУЖАҺЫ (Р.: дух, хозяин человека; И.: owner of the person; Т.: kişi ruhu) *и. миф.*

Кешегә эйәреп йөрөгән рух, эйәрсән. □ Дух, хозяин человека. ■ *Кешенең, һәр кемдең эйәрсәне була, шуны кеше хужаһы, тиҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

КЕШЕ ЮҪЫҒЫНА *р. диал. ҡар.* **кеше ыңғайына.**

КЕШИЛЕ *и. диал. ҡар.* **сит ил.**

КЕШКӘЙ-КЕШКӘЙ (Р.: кыш-кыш; И.: shoo!; Т.: git!) *сак.*

Бейә ҡыуғанда әйтелә торған һүҙ. □ Возглас, которым отгоняют кобылу: кыш-кыш.

КЕШМИР I [ғәр. كشمير] (Р.: кашемир; И.: cashmere; Т.: kaşmir) *и.*

Йөн йәки йөн ҡатыш йоҡа туҡыма. □ Кашемир *(ткань)*. *Кешмирҙан туҡылған яулыҡ.* ■ *[Мин:] Баһау бабай, ҡара әле, шәфәк нисек ҡыҙыҡ булып күренә, француз яулыҡ кеүек тә, кешмирға оҡшаған ерҙәре лә бар.* Ә. Чаныш.

КЕШМИР II (Р.: кашемировый; И.: cashmere; Т.: kaşmir) *с.*

Кешмир туҡыманан тегелгән. □ Кашемировый. ■ *Башына ябынған шау биҙәк зәңгәр кешмир яулығы, төрлө ебәк таҫмалар баҫып, билдән бөрөп, мул итеп тегелгән һары сатин күлдәге, уҡалы ҡыҙыл бәрхәт камзулы менән ул [Таибә әбей] хәҙер хужа ҡатынға түгел, ә ҡунаҡ ҡоҙағыйға оҡшап ултыра.* З. Биишева. *Шәмси үҙе лә һиҙмәҫтән, шул бүлмәгә табан ынтылып торғанда, бүлмәнән көрән шәльяулыҡ бәйләгән, кешмир күлдәк һәм аяҡтарына «сирбек» кейгән Йыһан сыҡты һәм аш бешереүсе янына уҙҙы.* Ғ. Хәйри.

КЕШМӘК (кешмәге) (Р.: палица; И.: club; Т.: topuz) *и. диал.*

Йәнлек һуға торған суҡмар. □ Палица. *Кешмәк менән бүре алыу.*

КЕШНӘТЕҮ (кешнәт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кешнәү.** *понуд. от* **кешнәү.** ■ *Күп тә үтмәй, былар [Күсәрхандар] өйөр-өйөр, көтөү-көтөү малдарын әйҙәп, йылҡыларын кешнәтеп, һыйырҙарын мөңрәтеп, ҡуй-һарыҡтарын баҡыртып, баш һуҡҡан яҡҡа күсеп тә киттеләр, ти.* Әкиәттән. *Теш араһынан сыйылдатып өҙлөкһөҙ көй һыҙғырып йөрөгән Шәмситдиндең тимер атты кешнәткәнен көттөләр.* Й. Солтанов.

КЕШНӘҮ (кешнә-) (Р.: ржать; И.: neigh; Т.: kişnemek) *ҡ.*

1. Ҡысҡырып тауыш биреү *(йылҡы малына ҡарата)*; кешенләү. □ Ржать, издавать ржание *(о лошади)*. *Айғыр кешнәүе. Кешнәп ебәреү.* ■ *Әлегәсә ҡойма буйында ымһынлап тороусы бала-саға, һөрән һалып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, кешнәгән ат тауышына ҡарай йүгерҙеләр.* Я. Хамматов. *Төнө буйы ашап инде һыуһаған аттар Хашимды тыныс, ләкин ҡыуанысты кешнәү менән ҡаршы алды.* Т. Ғарипова. *Аттар ни эшләргә белмәй кешнәп үрәпсей, Федотов шарт та шорт сыбыртҡы шартлата.* Ә. Хәкимов. ● *Бейә кешнәмәй — айғыр тешләмәй.* Мәҡәл. *Бейә кешнәмәһә, айғыр һикермәй.* Мәҡәл. *Кешнәгән айғырҙың өйөрөн күр, маҡтанған ирҙең өйөн күр.* Мәҡәл.

2. *күсм. мыҫҡ.* Йәмһеҙ итеп, ихахайлап көлөү. □ Громко хохотать.

3. *миф.* Мифлаштырылған яман заттарҙы, ауырыу эйәләрен ҡурҡыта торған тауыш, хәрәкәт. □ Ржать. // Ржание *(по представлениям башкир, имеет отгонную и охранительную силу; в магической медицине используется для отпугивания духов болезней)*.

КЕШНӘШЕҮ (кешнәш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кешнәү.** *взаимн. от* **кешнәү.** ■ *Ары-бире һуғылған аттар, айғылдап кешнәшеп, берен-береһе ҡыҫты, бөтәһе бергә буталды.* Ғ. Ибраһимов. *Даланы тояҡ тупырлауы, аттарҙың аҡҡырып кешнәшеүе, яраланған һуғышсыларҙың үҙәк өҙгөс тауыш менән ыңрәүе яңғыратты.* Ә. Хәкимов. *Кәҙә-һарыҡ тәҙелдәшкән, һыйырҙар баҡырышҡан, аттар кешнәшкән, ҡош-ҡорт ҡыҡылдашҡан тауыштар, исмаһам, саҡ ҡына ла баҫылмай.* Я. Хамматов. ● *Ат кешнәшеп, кеше һөйләшеп танышыр.* Мәҡәл. *Алыҫ булһа, кешнәшер, яҡын булһа, тешләшер. Мәҡәл.*

КЕШТЕРТ-КЕШТЕРТ *оҡш. ҡар.* **ҡыштыр-ҡыштыр**. *Аяҡ аҫтында япраҡтар кештерт-кештерт итеп тора.*

КЕШТӘК (кештәге) (Р.: ластовица; И.: gusset; Т.: apışlık) *и.*

Күлдәктең ҡултыҡ аҫтына, ыштандың балаҡ төбөнә ҡыҫтырып тегелә торған дүрткел ҡорама. □ Ластовица, подмышник. ■ *Шул саҡ уның [Емештең] хәтеренә ҡасандыр Ҡарасәс инәйҙән ишеткән бер мәҡәл килде: үҙ ҡайғыһы — үҙәктә, кеше ҡайғыһы — кештәктә.* З. Биишева. ● *Үҙеңдеке — үҙәктә, кешенеке — кештәктә.* Мәҡәл. *Үҙ балаң — үҙәктә, кеше балаһы — кештәктә.* Мәҡәл. *Кешенеке менән кештәкле булма.* Мәҡәл.

КЕШТӘКЛӘҮ (кештәклә-) (Р.: шить с ластовицей; И.: put a gusset; Т.: apışlık eklemek) *ҡ.*

Кештәк ҡуйыу. □ Шить с ластовицей. *Кештәкләп салбар тегеү.*

КЕШШӘ (Р.: кыш; И.: shoo!; Т.: hişt, hoşt, kış kış) *сак.*

Ҡош-ҡорт ҡыуғанда әйтелә торған һүҙ. □ Возглас, которым отгоняют птиц: кыш.

КЕШӘМЕШ (Р.: лодыжка у лошади; И.: horse's fetterlock; Т.: aşık) *и.*

Ат аяғының тышау һала торған бәкәлдән юғары ере, тупырсыҡ. □ Лодыжка у лошади (*место наложения пута*).

КЕШӘН (Р.: путы; И.: fetterlock; Т.: köstek) *и.*

1. Йылҡы малының алғы аяғын артҡы аяғының бөгәр өҫтөнә тарттырып бәйләгән бау. □ Путы (*для стреноживания лошади*). *Кешән ҡайыш.* ● *Кешәнле ат кәрәгенән ары йөрөмәҫ.* Мәҡәл. *Атай — кешән менән тышау, инәй — йөрәк менән үҙәк.* Мәҡәл. *Кешегә ышанма, кешәнгә төшөрһөң.* Мәҡәл. *Үҙ аҡылың — үҙәк менән бау, кеше аҡылы — кешән менән тышау.* Мәҡәл.

2. *миф.* Яман заттарҙы ҡыуыуҙа ҡатнашҡан предмет. □ Путы (*мифологизированный предмет; используется для отпугивания нечистой силы и защиты скота в помещениях для молодняка).*

КЕШӘНАТ (Р.: необъезженная лошадь; И.: unbroken horse; Т.: evcilleşmemiş at) *и.*

Өйрәтелмәгән ат. □ Необъезженная лошадь.

КЕШӘН ҠЫРҠЫУ *и. этн. ҡар.* **тышау киҫеү.**

КЕШӘНЛЕ (Р.: с путами; И.: with fetterlocks; Т.: köstekli) *с.*

Кешән менән бәйләнгән. □ С путами. ● *Кешәнле ат кәрәгенән ары йөрөмәҫ.* Мәҡәл. *Кешәнле атың — бар атың, кешәнһеҙ атың — юҡ атың.* Мәҡәл.

КЕШӘНЛӘНЕҮ (кешәнлән-) *ҡ. төш. ҡар.* **кешәнләү.** *страд. от* **кешәнләү.** ■ *Дөйәләр уртала, шулар эргәһендә үк ҡулдары артҡа бәйләнгән, аяҡтары үрәләнгән (кешәнләнгән) баҫмасылар ҙа ҡуйылған.* А. Таһиров.

КЕШӘНЛӘТЕҮ (кешәнләт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кешәнләү.** *понуд. от* **кешәнләү.** *Айғырҙы кешәнләтеү.*

КЕШӘНЛӘҮ (кешәнлә-) (Р.: накладывать путы; И.: hobble, clot; Т.: kösteklemek) *ҡ.*

1. Кешән һалып тышау *(йылҡы малын).* □ Накладывать путы. ■ *Тамам киреләнгән атты кешәнләп тә артыҡ эш ҡыйрата алманылар.* Р. Солтангәрәев. *Ә йылҡы малын арҡанлап та, тышап та, бик аҙғандарын кешәнләп тә ҡуйып була.* Ж. Кейекбаев. *Аттарҙы кешәнләп, үлән утларға ебәрҙем.* Ә.-З. Вәлиди. ● *Кеше балаһы кешәнләһәң дә тормаҫ, үҙ балаң үҙәгенә типһәң дә китмәҫ.* Мәҡәл.

2. *диал. ҡар.* **кеҙәләү I.** *Кешәнләп бейә һауыу.*

КЕШӘН ҺАЛЫУ (кешән һал-) *ҡ. ҡар.* **кешәнләү.**

КЕШӘНӘҮ (кешәнә-) *ҡ. ҡар.* **кешнәү.**

КЕШӘНӘ *и. диал. ҡар.* **сәтләүек тышы.** *Кешәнәһе менән ойошоп тора.*

КИ (Р.: что; И.: that; Т.: ki) *терк. иҫк.*

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдә эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә теркәү өсөн ҡулланыла. □ *Союз* что, как, который. ■ *Бер заман ул миңә шундай һүҙҙәр әйтте ки, улар минең хәтеремә, ташҡа соҡоп яҙылған кеүек, тәрән инеп урынлаштылар, мейемдә балҡып янған усаҡ тоҡандырҙылармы ни.* Д. Юлтый. *Ә утрауҙың тәрән эске байлығын өйрәнеү эше, мәғлүм ки, тәүҙә уның тәңгәлдәрен билдәләүҙән, унан һуң сик һыҙыҡтарын — әйләндереп алған ярҙарын байҡап барлауҙан башлана.* Й. Солтанов.

КИБАР [ғәр. كبار] (Р.: великий; И.: great; grand; Т.: kibar) *с. иҫк. кит.*

Ҙур, бөйөк. □ Великий, значимый. *Кибар кеше.* ■ *Ғәжәптер: күрә тороп, фәкирҙе күҙенә алмаҫ, вә ләкин байҙарҙы бик күңел түренән кибар итер.* М. Аҡмулла. *Бик ҙур ғына магазины һалынғас, кибар йорттар булғас, мәскәүлеләргә лә туранан-тура үҙе ҡатышып, «господин Ихсанов» тип шөһрәт таҡҡас, иҫке нәмәләрен тамырынан үҙгәртте.* М. Ғафури.

КИБАРИ [ғәр. كبارى] (Р.: высокомерный; И.: haughty; Т.: kibirli) *с. иҫк. кит.*

Эре, ғорур. □ Высокомерный, важный, гордый, надменный. *Кибари йөрөш. Кибари йөҙ.*

КИБЕГЕҮ (кибек-) (Р.: сохнуть; И.: be thirsty; Т.: susamak) *к.*

1. Нык сарсап, тамаҡ кибеү; һыуһау. □ Сохнуть; испытывать сильную жажду. ■ *Һыуһыҙ кибеккән зәғиф гөлгә ҡандырышлы ямғыр һымаҡ булды был.* Й. Солтанов.

2. Нык ябығыу, һулыу *(ауырыуҙан, моң-зарҙан).* □ Сохнуть, худеть, иссыхать *(от болезни, переживаний).* ■ *Зарығып ултыра торғас, Хәлимә кибегеп бәләкәйләнә башлаған, ти.* Әкиәттән. *[Күрәҙә:] Ул ҡошто атып үлтерергә кәрәк. Ҡошто ете көн эсендә үлтереп, ҡыҙыңа үҙе һайлаған алманы ашата алмаһаң, ҡыҙың кибегеп үләсәк!* Әкиәттән.

КИБЕЖӘ [ҡаҙ.] *и. ҡар.* **кибәҙә 2.**

КИБЕКТЕРЕҮ (кибектер-) (Р.: вызвать жажду; И.: make thirsty; Т.: susatmak) *к.*

1. Тамаҡты киптереү; сарсатыу. □ Вызвать жажду. *Ауыҙҙы кибектерҙе.* ■ *Эҫе көн хәлдән алды, тамаҡты кибектерҙе.*

2. Ябыҡтырыу; ҡаҡ һөйәккә ҡалдырыу. □ Истощать. *Мөхәббәт кибектерҙе.*

КИБЕНЕҮ (кибен-) (Р.: сушиться; И.: dry out; Т.: kurulanmak) *к.*

Өҫ-башты, өҫтәге кейемде киптереү. □ Сушиться, обсушиваться. *Ҡояшта кибенеү. Ут яғып кибенеү. Мейестә кибенеү.* ■ *«Йә, ярар, көн ҡыҙыу бит. Кибенермен әле», — тине почтальон.* З. Биишева. *Ҡыҙҙың ҡараһыу түҫтәге сәстәре ҡоро, күрәһең, ул әле һыуға төшмәгән йәки кибенгән.* М. Хужин.

КИБЕР I [ғәр. كبر] (Р.: гордость; И.: pride; Т.: kibir) *и. иҫк. кит.*

Ғорурлыҡ, тәкәбберлек. □ Гордость, надменность.

КИБЕР II [рус. < пол. *kiwior* 'баш бәйләмесе'] (Р.: кивер; И.: shako; Т.: sorguçlu asker şapkası) *и.*

Европа илдәрендә XVIII–XIX быуаттарҙағы осло башлы, тирәсһеҙ хәрби бүрек. □ Кивер.

КИБЕР III *с. диал. ҡар.* **изгелекһеҙ.**

КИБЕР IV [рус. < ингл.] (Р.: кибер-; И.: cyber; Т.: güdübilim) *и.*

Кибернетикаға мөнәсәбәтле ҡушма һүҙҙәрҙең беренсе өлөшө (мәҫәлән, *киберспорт, киберараурыҡ һ. б.*). □ Первая часть сложных слов со значением «кибернетический».

КИБЕРЕҺЕҘ *с. диал. ҡар.* **һөйкөмһөҙ.**

КИБЕРНЕТИК I (кибернетигы) [рус. < ингл.] (Р.: кибернетик; И.: cyberneticist; Т.: güdübilim uzmanı) *и. махс.*

Кибернетика буйынса белгес. □ Кибернетик. *Кибернетик һөнәрен һайлау. Тәжрибәле кибернетик. Кибернетиктар кәңәшмәһе.*

КИБЕРНЕТИК II (Р.: кибернетический; И.: cybernetic; Т.: güdübilim) *с. махс.*

Кибернетикаға мөнәсәбәтле, кибернетикаға бәйле. □ Кибернетический. *Кибернетик ысул. Кибернетик системалар. Кибернетик ҡараш. Кибернетик протез.*

КИБЕРНЕТИКА [рус. < гр. *kybernetike* 'идара итеү сәнғәте'] (Р.: кибернетика; И.: cybernetics; Т.: güdübilim) *и. махс.*

Төрлө процестарҙағы үҙкөйләнештең һәм автоматик контролдең дөйөм теорияһы. □ Кибернетика. *Кибернетика факультеты. Кибернетика даирәһе. Кибернетика ҡанундары. Кибернетика буйынса реферат яҙыу. Иҡтисади кибернетика.* ■ *Беҙҙә ядро энергияһы, электрон-иҫәпләү машиналары һәм кибернетик ҡоралдар практикала торған һайын киңерәк һәм төрлөрәк өлкәләрҙә ҡулланыла.* «Башҡортостан», 8 июнь 2009. *Кибернетика хаҡында ул [оратор] зерә матур һөйләй.* Т. Арслан. *Клара тәүҙә институттың математика факультетын тамамланы, унан иң һәләтле студенттар иҫәбенән электроника һәм кибернетика буйынса аспирантурала уҡыны.* Картотека фондынан.

КИБЕРНЕТИКАЛАШТЫРЫУ (кибернетикалаштыр-) (Р.: кибернетизировать; И.: cybernetize; Т.: güdübilimi kullanmak) *к. махс.*

Кибернетика ысулдарын йәмғиәт тормошона керетеү, төрлө тармаҡтарҙа киң ҡулланыу. □ Кибернетизировать. // Кибернетизация. *Медицина өлкәһе әүҙем кибернетикалаштырыла. Фәнде кибернетикалаштырыу. Йәмғиәт тормошон кибернетикалаштырыу. Етештереүҙең айырым тармаҡтарын әүҙем кибернетикалаштырыу.*

КИБЕРҺЕҘ (Р.: невзрачный; И.: plain, homely; Т.: cazibesiz) *с. диал.*

1. Һынһыҙ, шыҡһыҙ. □ Невзрачный, неприглядный. *Киберһеҙ генә ҡыҙ бала.*

2. Тыңлауһыҙ. □ Непослушный. *Киберһеҙ кеше.*

КИБЕС [ҡаҙ.] *и. диал. ҡар.* **кәүеш I.** *Кибес кейеү. Кибес һатып алыу.*

КИБЕСЛЕ ҠАТА (Р.: высокие галоши; И.: high overshoes; Т.: yüksek arkalı lastik) *и. диал.*

Арты бейек ҡата. □ Высокие галоши. *Кибесле ҡата һатып алыу.*

КИБЕТ [боронғо төрки *кебит*] (Р.: лавка; И.: store; Т.: dükkan) *и. һөйл.*

Төрлө нәмәне берәмекләп һата торған сауҙа бинаһы; магазин. □ Лавка, магазин, ларёк. / Магазинный. *Бәләкәй кибет. Ике ҡатлы кибет. Кейем-һалым кибете. Икмәк кибете. Көнкүреш кәрәк-ярағтары кибете.* ■ *Ям станы эргәһендә Мырҙағолдоң дегет-маҙар һата торған кибете бар.* Ғ. Ибраһимов. *Уралбай өйөнөң аҫҡы ҡатында кибет асҡан, әммә сауҙа эшен үҙе алып бармай, бисәһенә ҡушҡан.* Әкиәттән. *Кибеттә һатыусы булып эшләй башлағас, үҙенә беренсе бурыс итеп Рауза атлауын үҙгәртеүҙе ҡуйҙы.* Т. Ғарипова. *Баҙарҙа, кибеттәрҙә аҙыҡ-түлек әллә ни ҡиммәт түгел кеүек.* Ғ. Хөсәйенов.

КИБЕТСЕ (Р.: хозяин магазина; И.: store keeper; Т.: dükkancı) *и. иҫк.*

Кибет хужаһы. □ Хозяин магазина, лавочник, хозяин ларька. ■ *Полк штабы Ҡорман ауылын имеп ятҡан Хәйбулла кибетсенең өйөнә урынлашты.* А. Таһиров.

КИБЕҮ (кип-) [боронғо төрки *кәп*-] (Р.: сохнуть; И.: dry; Т.: kurumak) *ҡ.*

1. Берәй *нәмәнең* һыуы, дымы, тәбиғи лайлаһы бөтөп еүеш хәлдән ҡороға әйләнеү. □ Сохнуть, высыхать, сушиться. *Кипкән күлдәк. Тамаҡ кипкән. Ирендәр кипкән. Мейескә кипкән утын өҫтәү.* ■ *Бер көндө, яҙ етеп, ер-һыу кипкәс, күршеһе Ғизелбанат та әйләнеп ҡайтты.* Ғ. Ибраһимов. *Таштимер, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡояшта күп йөрөүҙән ярғыланып бөткән кипкән ирендәре менән шул сейәләргә һаҡ ҡына ҡағылды.* Д. Бүләков. *Ғәли ҡыҙарып елһенгән күҙ ҡабаҡтарын көскә асып ҡараны, кипкән теле менән ирендәрен яланы.* Й. Солтанов. *Тамағы кипкән Гөлбаныу күҙен асып тирә-яғына ҡараны.* Т. Ғарипова.

● *Тирең кипмәһә, байлығың китмәҫ.* Мәҡәл. *Иренсәктең ирене кибер.* Мәҡәл. *Тырыштан тир кипмәҫ, ялҡауҙан сир китмәҫ.* Мәҡәл. *Юрғаның тире кипмәҫ.* Мәҡәл. *Бер бейәнең ике имсәге — береһе кипһә, һөтө юҡ.* Мәҡәл.

2. Дымы, һуты бөтөп, ҡороға, ҡатыға әйләнеү. □ Высушиться. *Кипкән ҡорот. Компотҡа еләк киптереү. Иҙәндең буяуы кипмәгән.* ■ *Кипкән көпшәнән шундай көй сығыуы бик тә ғәжәп!* Я. Хамматов. *Баҫыуҙарҙың кипкән тупрағын ҡойон осора.* Ә. Вәли.

3. Ҡорошоп, үле хәлгә килеү; ҡороу, ҡыуарыу. □ Засохнуть, высохнуть, вянуть *(о растениях). Гөлдәр һулып кипкән.* ■ *Болондағы кипкән бесән еҫе танауҙы ҡытыҡлай.* С. Поварисов. *Бына ул [Бәкер] кипкән ағас ботағы табып алды, шуны торған еренә ҡаҙай башланы.* Н. Ғәйетбаев. *Мәҙинә уларҙы үлән йыйырға ла өйрәтә, шуға күрә бында кипкән сәскә, япраҡ еҫтәре.* Т. Ғарипова.

4. *күсм.* Нык ябығыу. □ Худеть *(от болезни, переживаний, непосильной работы). Ауырыуҙан кибеү.* ■ *Беҙҙең оста бер ҡатын бар, яуыҙлығынан кибә.* Т. Арслан. *Бара-бара бөтөнләй йоҡонан мәхрүм ҡала. Һарғайып кибә башлай был.* Әкиәттән. *[Әптеләхәттең] әсәһе, ҡасандыр бик һылыу булып, хәҙер инде аслыҡтан, нужанан асҡаҡ яңаҡлы, һарғайып кипкән ҡатын, йылғаға төшөп бәпәйҙең сепрәк-сапрағын йыуып, ағаска элә.* Т. Ғарипова. *Уның [Сәғүрәнең] һарғайып кипкән йөҙөнән илауға оҡшаш ғазаплы шәүлә йүгереп үтте.* З. Биишева.

5. Эсендәге һыуы, шыйыҡлығы быуға осоп юҡҡа сығыу, ҡороға ҡалыу. □ Высохнуть, испариться. ■ *Таңдан тороп хәҙер ҡырға сығам ысыҡ кипмәҫ борон гөлдәрҙә.* М. Кәрим. *Ниндәйҙер хикмәт менән күҙҙәргә эркелгән йәш бөрсөктәре кипте.* Ғ. Ибраһимов.

КИБЕШЕҮ (кибеш-) *ҡ. диал. ҡар.* **кибенеү.**

КИБОРГ [рус. < ингл.] (Р.: киборг; И.: cyborg; Т.: sibernetik organizma) *и.*

Кешегә оҡшатып эшләнгән робот. □ Киборг.

КИБРИЯ [ғәр. كبريا] (Р.: гордость; И.: pride; Т.: kibir) *и. иҫк.*

Ғорурлыҡ. □ Гордость, высокомерие, гордыня. ■ *Төхфәтуллин йырсы, баҡырыусы, мөфәссир кибрия. Үпкәләһәң, үпкә ашарһың: һәммә эштәрең рыя.* Ш. Бабич.

КИБӘ *и. диал. ҡар.* **сәсә 3.** *Кибә ҡуйыу.*

КИБӘҘӘ (Р.: фанера; И.: plywood; Т.: kontrplak) *и.*

1. *һөйл.* Шыр таҡта; фанер. □ Фанера.

2. Шыр таҡтанан эшләнгән ҡапҡаслы йәшник, ябай һандыҡ. □ Фанерный ящик.

3. *диал.* Оҙон күнәсек, көбө. □ Посуда, сделанная из полого ствола дерева, высотой больше метра, предназначенная для приготовления кумыса и сбивания масла.

КИБӘТӘ *и. диал. ҡар.* **тирмә.** ■ *Кейеҙ кибәтәнең эстәрендә була икән егет солтаны.* Халыҡ йырынан.

КИВЕР *и. иҫк. ҡар.* **кибер II.** ■ *Улар [һалдаттар] ҡулбаштары аша мылтыҡ аҫҡандар, баштарына киверҙәр кейгәндәр.* Картотека фондынан. *Ҡуйы төтөн һәм һәр саҡ һикерәнләгән киверҙәр ағымы өҫтөндәге осо алтынға ялатылған ағас һаптарға беркетеүле, өс төҫкә буяулы француз байраҡтары өҙлөкһөҙ сайҡалды һәм ҡурҡынған һымаҡ ҡалтыранды...* Я. Хамматов.

КИВИ I [рус. < маори *kiwi*] (Р.: киви; И.: kiwi; Т.: kivi) *и. зоол.*

Яңы Зеландияла ғына йәшәгән ҡанаттары үҫешмәгән, оҙон нәҙек суҡышлы осмай торған ҡоштарҙың береһе. □ Киви (лат. *Apteryx australis*).

КИВИ II (Р.: киви; И.: kiwi; Т.: kivi) *и. бот.*

1. Оҙонса формалы, йәшкелт-һоро тышлы емеш бирә торған тропик ағас. □ Киви (лат. *Actinidia*). *Киви сәсеү. Киви үҫтереү.*

2. Шул ағастың емеше. □ Киви. *Киви ашау. Киви һатыу.*

КИВӘК (кивәге) *и. зоол. диал. ҡар.* **ҡандала.** ■ *Ҡандаланы кивәк тиһәң, кибә, бөтә.* Экспедиция материалдарынан.

КИГЕРЛӘЙ *и. диал. ҡар.* **боғарлаҡ.**

КИГЕРЛӘК I (кигерләге) *и. диал. ҡар.* **боғарлаҡ.**

КИГЕРЛӘК II (кигерләге) *и. диал. ҡар.* **кигермәк 1.** *Ағас кигерләге.*

КИГЕРМӘК I (кигермәге) (Р.: пробка; И.: cork; Т.: mantar) *и.*

1. Ҡайһы бер ағастарҙың үле туҡыманан барлыҡҡа килеп, суғырмаҡланып торған ҡалын ҡаты ҡабығы. □ Пробка. *Имән кигермәге. Кигермәктән тығын яһау.* ■ *Ҡарағай ҙа ағас бик ҙур ағас, юнып ҡына алһаң — кигермәк.* Халыҡ йырынан. *Терәктәрҙе яһау өсөн һәр төрлө шыйыҡса, пружина, резина, кигермәк һәм уларҙың ҡушылмалары ҡулланыла.* «Башҡортостан», 18 август 2005.

2. *диал. ҡар.* **ҡалҡыуыс.** *Ҡармаҡ кигермәге. Йылымға кигермәк ҡуйыу.*

КИГЕРМӘК II (Р.: пробковый; И.: cork; Т.: mantar) *с.*

Кигермәктән эшләнгән. □ Пробковый. *Кигермәк тығын. Кигермәк ҡалҡыуыс.*

КИГЕРМӘКЛӘНЕҮ (кигермәклән-) (Р.: превращаться в пробку; И.: to turn into cork; Т.: mantarcıl olmak) *ҡ.*

Кигермәк хәленә килеү, кигермәклегә әйләнеү. □ Превращаться в пробку *(о коре)*. *Ағас ҡайыры кигермәкләнгән.*

КИГЕРТӘ *и. диал. ҡар.* **киртләс.**

КИҘАЙ *и. диал. ҡар.* **ауылсы.**

КИҘҘЕК (кигеҙҙеге) *и. диал. ҡар.* **киҙе.**

КИҘҘУТ *и. диал. ҡар.* **күҙлут.**

КИҘҘӘҮ *и. диал. ҡар.* **шишмә.** *Киҙҙәүгә барып һыу алыу.*

КИҘЕ I (Р.: выемка; И.: indentation; Т.: çukur) *и.*

1. Уҡтың тупаҡ башында керешкә эләктереү өсөн эшләнгән киртегә; киҙәү. □ Выемка, вырез *(на тупом конце стрелы)*. ■ *Уҡтың керешкә ҡуя торған сатлы киҙеһе янында тамға бар.* Ғ. Ибраһимов. *Лоҡман һаҙағынан осло һөйәк башаҡлы, бөлдөргәһе ҡанатлы һыҙғыр уғын һайлап алды, киҙеһен килешле итеп керешкә ултыртты.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Уйып, киртеп алған урын; киртек. □ Зарубка, насечка. *Мылтыҡ һабындағы киҙе.*

КИҘЕ II *с. диал. ҡар.* **тиҫкәре.**

КИҘЕЛӘҮ (киҙелә-) *ҡ. диал. ҡар.* **кеҙәләү I.**

КИҘЕҮ I (Р.: очередь; И.: queue; Т.: kuyruk) *и.*

1. Бер-бер артлы алмашынып килгән тәртип һәм шул тәртип эсендәге урын; нәүбәт, сират. □ Очередь. *Киҙеүгә яҙылыу. Киҙеүгә баҫыу. Киҙеү буйлап эшләү.* ■ *Фәһим менән Низай аҫҡы урам малын көтә, өйҙән өйгә йөрөп, киҙеү буйынса ашай.* Ф. Иҫәнғолов. *Ирназаров, үҙ киҙеүендә, бер генә минут та ваҡытын әрәм итмәне, кескәй генә яҙыу яҙып, Исламгәле ҡарт ялсыларынан берәһен ат мендереп, Күл ауылындағы комиссарға саптырҙы.* И. Насыри.

2. Бер-бер артлы алмашлап башҡарылған эш. □ Дежурство. *Киҙеү атҡарыу. Киҙеүгә тороу. Киҙеү етеү. Киҙеүе етмәгән.*

3. *һөйл.* Эште сират буйынса башҡарған кеше; дежур. □ Дежурный. ■ *Өсөнсө көнөнә өйҙә киҙеү булып Ҡамыр батыр ҡалған.* Әкиәттән. *Киҙеүгә ҡуйылған ике немец арыраҡта тәмәке тартып тора.* Ә. Хәкимов.

4. Хужаға эш ҡоралын алып тороп файҙаланған өсөн бирелгән өлөш; түләү, гәрнис. □ Гарнцевый сбор *(плата хозяину за использование его орудия труда). Киҙеү өлөшө.* ■ *Ике күнәк һөт һыйышлы сепарат алды Гәрәй. Күршеләр сепаратҡа йөрөй, аҙна һайын киҙеү түләй.* Б. Бикбай.

КИҘЕҮ II (Р.: эпидемия; И.: epidemy; Т.: salgın) *и.*

1. Айырым биләмәлә бер үк осорҙа билдәле бер йоғошло ауырыуҙың таралыуы. □ Эпидемия, повальная болезнь. *Һары киҙеүе.* ■ *Тапма киҙеүе уҙып, [Емеш] күҙен асканда, уның янында бойоғоп ҡына Бибеш апаһы ултыра ине...* З. Биишева. *Мең дә туғыҙ йөҙ ҙә дүртенсе йылғы яман киҙеүҙән ата-әсәһе, ҡусты-һеңлеләре үлеп бөткәс, ун йәшлек Шәрғиәне һары сиренән баш ҡалҡытыуы менән ҡалаға яҡын ғына нәҫелдәре — бай сауҙагәр Вәлишин йортона аҫраулыҡҡа оҙаталар.* Ә. Хәкимов.

2. *Ниндәй ҙә* булһа йоғошло инфекцион ауырыу. □ Инфекционная болезнь. *Киҙеү тейгән.* ■ *Хәйерһеҙ киҙеү аяҡтан ауҙарҙы.* Й. Солтанов. *Бабай ҡайтыуға өс улының өсөһө лә киҙеү менән ауырып үлгән.* Әкиәттән.

3. *миф.* Ауырыу эйәһе. □ Дух болезни.

КИҘЕҮЛӘҮ I (киҙеүлә-) (Р.: чередоваться; И.: alternate; take turns; Т.: nöbetleşmek) *ҡ.*

Билдәләнгән тәртип буйынса алмашлау; сиратлау. □ Чередоваться, делать *что-л.* по очереди. *Өй эшен киҙеүләп эшләү. Һаҡта киҙеүләп тороу. Тамаҡҡа киҙеүләп әҙерләү.* ■ *[Арҫлан]: Яныңа кешеләр ал. Күнған ереңдә төнгә йәшерен бағауыл ҡуй. Киҙеүләп торһондар.* Ғ. Ибраһимов. *Башҡалар ҙа йоланы һаҡланылар: киҙеүләп ит һоғондороу китте.* Ж. Кейекбаев.

КИҘЕҮЛӘҮ II (киҙеүлә-) (Р.: болеть инфекционной болезнью; И.: be sick; Т.: salgın hastalığına uğramak) *ҡ.*

Киҙеү менән ауырыу. □ Болеть, заболеть *(инфекционной болезнью).* ■ *Балаларым сирҙең ни икәнен дә белмәйҙәр. Берәйһе киҙеүләһә, хәҙер фельдшерға алып барам — ауылда медпункт эшләй.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 3, 2008.

КИҘЕҮЛӘШЕҮ (киҙеүләш-) *ҡ. урт. ҡар.* **киҙеүләү I.** *взаимн. от* **киҙеүләү I.** *Киҙеүләшеп өй йыйыштырыу. Киҙеүләшеп көтөү көтөү.*

КИҘЕҮ ТЕЙЕҮ (киҙеү тей-) (Р.: заболеть инфекционной болезнью; И.: be sick; Т.: salgın hastalığına uğramak) *ҡ.*

Киҙеү менән ауырыу. □ Заболеть инфекционной болезнью.

КИҘЛӘҮ (киҙлә-) *ҡ. иҫк. ҡар.* **йәшереү.**

КИҘӘГӘЙ (Р.: ганаши; И.: horse's lower jaw bone; Т.: at çenesinin alt kısmı) *и.*

1. Йылҡының аҫҡы яңаҡ һөйәге. □ Ганаши *(нижняя челюсть лошади).*

2. *диал.* Теш ите. □ Десна. ■ *Атаң тирләп мал табыр, тере иткәнен ҡоро итмәҫ. Әсәң балдан ҡот табыр, киҙәгәйеңдә ҡоротмаҫ.* Йырҙан.

3. *миф.* Эре мөгөҙлө малдың ауырыу эйәһе. □ В мифологии: дух болезни коров.

КИҘӘГӘЙ ШЕШЕҮ *и. диал. ҡар.* **зәңге.**

КИҘӘК I (киҙәге) *и. ҡар.* **киҙеү I, 1, 2.** ■ *Кинйәнең киҙәк биреү ваҡытына өлгөрмәһәләр ҙә, имен-аман булыуына бик нык ҡыуаныштылар.* Ғ. Ибраһимов. *Директор, үҙ киҙәгендә, бригадир Шамилға шелтә бирҙе.* Х. Мохтар.

КИҘӘК II (киҙәге) *и. ҡар.* **тиҙәк 2.** *Киҙәк яғыу. Киҙәк көлө.*

КИҘӘКСЕ (Р.: дежурный; И.: person on duty; orderly; Т.: nöbetçi) *и.*

Эште бер-бер артлы алмашлап башҡарыусыларҙың береһе, дежур. □ Дежурный. *Киҙәксе саҡыртыу. Киҙәксене билдәләү.*

КИҘӘМ (Р.: упрямый; И.: stubborn; Т.: dikkafalı) *с. диал.*

Кире холоҡло, кеҙе. □ Упрямый. *Киҙәм кеше.*

КИҘӘНЕҮ (киҙән-) (Р.: замахиваться; И.: lift one s arm (against); Т.: keskenmek) *ҡ.*

Һуғырға атлығып, ҡулды һелтәү. □ Замахиваться. *Һуғырға киҙәнеү. Киҙәнмәйенсә һуғыу.* ■ *Һыбайлы француз һалдаты ҡылысы менән киҙәнгән сакта, хужаһын һаҡлап, Буранбайҙың аты бик йыш ситкә тайпылды, янтайҙы йәки алғы аяҡтарын юғары күтәрҙе.* Г. Ибраһимов. *Халыҡ араһында шау-шыу көсәйгәндән-көсәйҙе, ҡайһы берәүҙәр уларҙың алдына уҡ барып йоҙроҡтары менән киҙәнеп тә алды.* М. Тажи. *Сырым, йөҙөн йәмрәйтеп, әсирҙең башына тоҫмаллап, йән асыуы менән һуғырға киҙәнде.* Ә. Хәкимов. *Ғабдрахмандың күҙҙәре ҡанланды, үңәс тамырҙары бүртенде, ҙур көслө ҡулдары йомарланды, Ғабдрахман әсен тотоп көлә торған хужа улына киҙәнде, ләкин һуҡманы, тик әсенә төрттө.* А. Таһиров. ● *Күркһеҙ биҙәнер, йөрәкһеҙ киҙәнер.* Мәҡәл. *Уң ҡулың киҙәнһә, һулы менән тот.* Мәҡәл.

КИҘӘНЕШ (Р.: замах; И.: swing; Т.: keskenme) *и.*

1. Ҡулды һелтәү. □ Замах. ■ *[Фәғилә:] Их һин, әллә шөрләйһең инде! — тип, шаян киҙәнеш менән, башымды түбән эйелдерҙе.* Й. Солтанов.

2. *күсм.* Киң даирә, таралыш. □ Размах, диапазон. ■ *Әгәр ҙә [Шнейдер] уны киңерәк киҙәнеш алыу, ҙур нефть майҙаны тыуҙырырға тырышыу маҡсаты менән эшләгәнен һөйләһә, ышанырҙармы?* И. Насыри.

КИҘӘҮ I (киҙә-) (Р.: насадить стрелу на тетиву; И.: put an arrow to the bowstring; Т.: oku kirişe yerleştirmek) *ҡ.*

1. Уҡты атыу өсөн киҙеһе менән керешкә ҡуйыу. □ Насадить стрелу на тетиву зарубкой, приладить стрелу к тетиве. ■ *Ҡуҙыйкүрпәс уғын йәйәһенә киҙәп, шундай көслө һәм мәргән атып ебәрә, уҡ көпшәне ҡуҙғатмай-нитмәй тишегенән үтә сыға һәм бөкөнө үҙе менән йәнә йөҙ аҙымға ары алып китә.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

2. Тоҫҡап атырға йәки бәрергә йүнәлтеү. □ Нацеливать *что-то* на *кого-л. Уҡты киҙәү. Мылтыҡты киҙәү. Киҙәп атыу.*

3. *күсм.* *Нимәгәлер* тоҫҡау, йүнәлтеү. □ Направлять. *Дошманға нәфрәтте киҙә.*

КИҘӘҮ II *и. ҡар.* **киҙе.**

КИЖЕ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡаңлы ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-канглы.

КИЗЕ [фарс. کیزه] (Р.: бумажная пряжа; И.: spun cotton; Т.: iplik) *и.*

1. Сигеү өсөн тәғәйенләнгән төрлө төҫтәге мамыҡ еп. □ Бумажная пряжа *(фабричная, слабого кручения). Төрлө төҫтәге кизе. Йәшел кизе менән сигеү. Кизе менән сигелгән.* ■ *Өй эсе бик һәйбәт итеп йыйыштырылған, стеналарға, сөйҙәргә кизенән, дебеттән сигеп һуҡкан таҫтамалдар эленгән.* Ж. Кейекбаев. *Хеҙмәтсе ҡатын ҡыҙыл кизенән шаҡмаҡлап һуғылған ашъяулыҡ менән ябылған өҫтәлгә аш әҙерләне.* Г. Хәйри. *Ҡул йыуҙырып бөткәндән һуң, ҡыҙыл кизеләр менән матурлап, етен ебенән һуғылған ҙур яңы ашъяулыҡ уртаға йәйелде.* З. Биишева.

2. Шундай ептән һуғылған туҡыма. □ Ткань из такой пряжи. *Ҡулдәклек кизе. Кизе ашъяулыҡ. Кизенән һуғылған шаршау. Кизе яулыҡ.*

3. *диал. ҡар.* **тыжым I.**

КИЗЕЛЕ (Р.: бумажный; И.: spun cotton; Т.: pamuk, kâğıt) *с.*

Кизе ҡатыштырып һуғылған. □ Бумажный *(из фабричной пряжи, на основе бумажной или шерстяной нити). Кизеле ашъяулыҡ. Кизеле шаршау.* ■ *Гөлбикә ҙур һандыҡтан кизеле таҫтамалдар алып, уларҙы көҙгө башына, кәштәләргә элә.* Н. Асанбаев. *[Ишбулдин] тирле елкәһен төрлө гәрез менән сиккән кизеле ҡыҙыл башлы таҫтамалға һөртә-һөртә урынынан ҡуҙғалды.* Ә. Вәли.

КИЗЕЛЕ ТАҪТАМАЛ (Р.: вышитое холщовое полотенце; И.: linen towel; Т.: ketenden nakışlı havlu) *и. диал.*

Сигеүле киндер таҫтамал. □ Вышитое холщовое полотенце.

КИЗЕ-МАМЫҠ (Р.: хлопчатобумажная пряжа; И.: cotton yarn; Т.: iplik) *и.*

1. Мамыҡ еп. □ Хлопчатобумажная пряжа. / Хлопчатобумажный. ■ *Ойоҡ һәм ойоҡбаштың һалҡын миҙгелдә йөндән, ә йылы ваҡытта кизе-мамыҡтан бәйләнгәне яҡшы.* В. Ғүмәров.

2. Кизе, мамыҡтан туҡыма. □ Хлопчатобумажная ткань, хлопчатка. / Хлопчатобумажный. *Кизе-мамыҡ күлдәк.*

КИЗЕМИР БИЛҒАУ (Р.: пояс жениха; И.: belt of the groom; Т.: damat kemeri) *и. этн. диал.*

Кейәү билбауы. □ Пояс жениха.

КИЗЕҮ *и. диал. ҡар.* **киҙәксе.**

КИЗЕ ШӘЛ (Р.: кашемировая шаль; И.: cashmere shawl; Т.: kaşmir şal) *и. диал.*

Сәскәле кешмир шәл. □ Кашемировая шаль *(с узором).*

КИЗЛӘҮ *и. диал. ҡар.* **күҙләүек.**

КИЙ [рус. < пол. *kij*] (Р.: кий; И.: (billiard) cue; Т.: bilardo sopası) *и. спорт.*

Бильярд уйнай торған оҙон таяҡ. □ Кий. *Кий менән төртөү.*

КИЙЕҘГОЛАҠ *с. диал. ҡар.* **тыңлауһыҙ.**

КИЙЕМ *и. диал. ҡар.* **пар.**

КИЙӨКЛӨК (кийөклөгө) *и. диал. ҡар.* **үртән.**

КИК (киге) (Р.: месть; И.: revenge; Т.: kin) *и. кит.*

Үс, кенә. □ Месть, мщение. ■ *Кирелектә башыма килгән бәлә — кисектермәй дошмандан кик алығыҙ, асыуланып хан инде ярлыҡ ҡылды.* Картотека фондынан. *Минең юҡ яҡшығыҙға эсемдә кик.* М. Аҡмулла.

КИКЕЛ (Р.: чёлка; И.: forelock; Т.: kakül) *и.*

1. Йылҡы малының маңлай сәсе. □ Чёлка *(у лошади).* ■ *Ат бик бейек, аяҡтары оҙон, муйын ялы ҡырҡылған, кикел сәсе матур итеп үрелгән.* Ә. Ихсан. *Көйөнмә, — тине Көмөш Тамсы, атының кикелен һыйпап.* Ә. Хәкимов. *Ҡолон сағынан уҡ ҡарап үҫтергән һәм әлеге мәшәҡәтле юлды бергә үткәргән оҙон торокло, кикел сәсле Турысайы, юғалтҡан хужаһын танырға теләгәндәй, икеләнеп ҡарап тора.* К. Мәргән.

2. *диал. ҡар.* **кикерек.**

3. *диал. ҡар.* **супай 1.**

КИКЕЛ СӘС *и. диал. ҡар.* **тауыҡ бүреге.**

КИКЕЛ ЯЛ *и. диал. ҡар.* **кикел.**

КИКЕРҘӘК (кикерҙәге) *и. диал. ҡар.* **боғарҙаҡ.**

КИКЕРЕК (кикереге) (Р.: отрыжка; И.: belch(ing); Т.: geğirme) *и.*

Ашҡаҙандан ауыҙ аша бүленеп сыҡҡан һауа. □ Отрыжка. *Кикерек сығарыу. Кикерек менән яфаланыу.*

КИКЕРЕНЕҮ (кикерен-) (Р.: отрыгиваться; И.: belch; Т.: geğirmek) *ҡ.*

Ваҡыт-ваҡыт кикереп ҡуйыу. □ Отрыгиваться. *Туҡтауһыҙ кикеренеп ултырыу.* ■ *Ир-аттар, олораҡтар сиҙәм өҫтәрендә келәм-балаҫтар йәйеп, һыйлашып, ара-тирә кикеренеп, әлхәмделиллаһын әйтеп сайран килделәр.* Ғ. Хөсәйенов.

КИКЕРЕҮ (кикер-) (Р.: рыгать; И.: belch out; Т.: geğirmek) *ҡ.*

Ашҡаҙандан бүленеп сыҡҡан һауаны ауыҙ аша сығарыу. □ Рыгать. ■ *[Заһретдин] кирелә биреп бөтә вагонға ишетелерлек итеп кикерҙе, ашъяулығын йыйып, сумаҙанына кире тыҡты.* Р. Солтангәрәев. *Вәләүетдин, туйып, ҡарҡ кикереп, кире урындыҡ шығырлегенә ултырҙы, ашыҡмай ғына тәмәке урап, береһен ағаһына тотторҙо, икенсеһен тешенең араһына ҡыҫып, мөрйәне асып, мейес алдына сүгәләне.* Т. Ғарипова. *Изге ике бәндәнең тырышлығы менән әҙерләнгән һыйхөрмәт ғарыҡ итеп кикергәнсе туйырлыҡ мул ине, һәм табын ярты төнгә хәтлем һуҙылды.* Б. Бикбай. ● *Ас кикерер, туҡ һикерер.* Әйтем.

КИКЕРТЕҮ (кикерт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кикереү.** *понуд. от* **кикереү.** ■ *[Игелек:] Бар ул сыҡҡан яҫтығын [картуфты] ҡабып ҡарағаным: һаҫыҡ кикертә. Беҙ уны сәсмәйбеҙ ҙә, ашамайбыҙ ҙа.* Б. Бикбай.

КИКЛӘҮ (киклә-) *ҡ. диал. ҡар.* **кенә тотоу.**

КИКРЕК (кикреге) (Р.: гребень; И.: crest; Т.: ibik) *и.*

Ҡайһы бер ҡоштарҙың башындағы киртләсләнеп торған таж ите. □ Гребень, гребешок. ■ *Һылыу әтәстәр, кикректәре ҡыҙарып еткән, инәлек тойғоһо менән шатланған тауыҡтар йүгерешеп йөрөп, ҡышҡы күлдәрҙе тибеп аунайҙар.* Ғ. Дәүләтшин. *Кикрек һытылыр сиккә етеп ҡыҙарған, ә ҡаурыйҙарына ҡараһаң, күҙ ҡамаша.* Т. Ғарипова.

♦ **Кикреген төшөрөү** (*йәки* **шиңдереү**) Берәй кемдең тәкәбберлеген ҡыйратыу, артыҡ маҡтаныуына сик ҡуйыу. □ Сбивать спесь. **Кикрек киреү** мин дә мин тип маһайыу; кәпәренеү. □ Кичиться, чваниться. **Кикрек төшөү** (*йәки* **һалыныу, шиңеү**) бойоғоу, күңелһеҙләнеү. □ Упасть (*о настроении*). ■ *[Ғәфүр Дауытҡа:] Ни булды һиңә? Нимәгә кикрегең төштө?* Ш. Янбаев. *Иҫән ҡалған атамандарҙың кикрек шиңгән.* Ғ. Хөсәйенов.

КИКРЕКЛЕ (Р.: имеющий гребешок; И.: crested; Т.: ibikli) *с.*

Кикреге булған. □ Имеющий гребешок. *Ҙур кикрекле күркә. Итләс кикрекле әтәс. Кикрекле тутый ҡош.* ■ *Үткер суҡышлы, ҡыҙыл кикрекле ҡупшы әтәс һыңар күҙе менән ситәндәге торғайҙарҙы ҡарап ала.* Й. Солтанов. *Ҡып-ҡыҙыл кикрекле аҡ әтәс кенә, егетлек күрһәтеп, шындуҡ ашарға йәбешмәне, тамағын ғолҡолдатып, ҡанаттарын түбән һалындыра биреп, муйын йөндәрен ҡабартып, тауыҡ өйөрөн бер әйләнеп сыҡты.* Н. Мусин.

КИКРИ-КҮК (Р.: кукареку; И.: cock a doodle doo; Т.: üüüürüü) *оҡш.*

Әтәс ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание крику петуха: кукареку. ■ *Әтәс Сафуан мине мискә өҫтөнә баҫтырҙы. Бына хәҙер ошонда торған көйө, ике ҡулыңды елпеп, бер Мәүлетбайға, бер Сафуанға төбәп: Ғолдор-ғолдор кикри-күк! Ғолдор-ғолдор кикри-күк! Ғолдор-ғолдор кикри-күк! — тип йөҙ тапҡыр, юҡ, мең тапҡыр ҡысҡырырға ине.* М. Кәрим.

КИЛА [рус.] *и. диал.*

1. *ҡар.* **сырхыуат.**

2. *миф.* Башҡорт мифологияһында аяҡ, енес-бәүел юлдарының ауырыуҙары эйәһе. □ В башкирской мифологии дух болезней ног и мочеполовых путей.

КИЛА ҠАҒЫЛЫУ (**кила ҡағыл-**) (Р.: болеть рожей; И.: fall ill; Т.: hastalanmak) *ҡ.*

Кила ауырыуы менән сирләү. □ Болеть рожей, заболеть рожей. ■ *Кила ҡағылһа, ете төрлө нәмәне ергә уҡынып күмәһең.* Экспедиция материалдарынан.

КИЛБӘҘӘ *и. ҡар.* **кибәҙә.** ■ *Һәр кайһы землянкала тип әйтерлек ҡаҙан, йыуылмаған табаҡ, кейеҙ, кейеҙ менән тышланған килбәҙә, бер нисә тун, итек, һәр өйҙә ике-өс бисә, күбеһе йәштәр.* А. Таһиров.

КИЛБӘТ [фарс. كلبت] (Р.: образ; И.: image; Т.: suret) *и.*

1. Тышҡы ҡиәфәт; төҫ-баш. □ Образ, облик, внешность. ■ *Буранбай дәү килбәтенә ярашһыҙ нескә тауыш менән ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.* Ә. Хәкимов. *Бына, исмаһам, директор тиһәң дә директор! Буйы-һыны, килбәте генә ни тора!* З. Биишева. ● *Килбәте килмәгәндән кәңәш һорама.* Мәҡәл. *Килбәт — кейемдә.* Мәҡәл.

2. Тышҡы төҙөлөш; рәүеш. □ Форма, внешний вид. ■ *Януарҙың ҡырҡылған телен урынына ҡуйып ҡараһалар — килбәте килде, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк». ● *Килбәте ниндәй — күләгәһе шундай.* Әйтем.

КИЛБӘТЛЕ (Р.: статный; И.: stately; Т.: endamlı) *с.*

Һыны, рәүеше килешле, матур. □ Статный, хорошо сложенный. *Килбәтле һын.* ■ *Сөнәғәт әллә шатлыҡтан, әллә Фатиманың килбәтле һынына, матурлығына һоҡланыуҙан бер аҙ өндәшмәй йылмайып ҡарап торҙо.* Ж. Кейекбаев. *Егет бик килбәтле, үҙе мөһабәт, дәү кәүҙәле икән.* «Алып батыр». ● *Килен килбәтле булһын, һүҙе шәрбәтле булһын.* Әйтем. *Киткән килен килбәтле.* Мәҡәл.

КИЛБӘТЛЕЛЕК (**килбәтлелеге**) (Р.: стройность; И.: slenderness; Т.: zariflik) *и.*

Матурлыҡ, һомғоллоҡ, зифа буйлылыҡ. □ Стройность, статность, складность. ■ *Сығышы яғынан да, дәрәжә яғынан да һәм килбәтлелек яғынан да ул [Ядкәр] үҙенән дә йәтешлерәк кеше күрмәне.* К. Мәргән.

КИЛБӘТЛӘНЕҮ (**килбәтлән-**) (Р.: подходить; И.: just right; Т.: yakışmak) *ҡ. диал.*

Тап килеү. □ Подходить.

КИЛБӘТҺЕҘ (Р.: некрасивый; И.: unattractive, plain; Т.: çirkin) *с.*

Һыны, рәүеше килешһеҙ, ямаҡ. □ Некрасивый, неуклюжий, нескладный. *Килбәтһеҙ егет. Килбәтһеҙ тотоноу.* ■ *Мәктәп яғынан ике малай килә. Береһе йыуантаҡ, килбәтһеҙ кәүҙәле.* Н. Ғәйетбаев. *Хамбал тигәндәре атта килбәтһеҙ ултыра — ике аяғын ике яҡҡа тарбайтып ебәргән, үҙе артҡа ҡайҡайған, тағы бер аҙ елпенһә, елгә осор ҙа ҡалыр төҫлө.* Р. Солтангәрәев.

КИЛБӘТҺЕҘЛЕК (килбәтһеҙлеге) (Р.: непривлекательность; И.: lack of attractiveness; Т.: çirkinlik) *и.*

Һөмһөҙлөк, йәмһеҙлек. □ Непривлекательность, безобразность, уродливость. ■ *Ҡыҙ Кәлиҙең .. килбәтһеҙлеген күреп, ҡырт ҡына Кәшфи ҡоҙаларға кереп киткән.* Интернет селтәренән.

КИЛБӘТҺЕҘЛӘНЕҮ (килбәтһеҙлән-) (Р.: становиться некрасивым; И.: become unattractive; Т.: çirkinleşmek) *ҡ.*

Һыны, рәүеше килешһеҙ, йәмһеҙгә әйләнеү. □ Становиться (стать) некрасивым, уродливым, неуклюжим. *Килбәтһеҙләнә барыу. Килбәтһеҙләнеп бөтөү. Килбәтһеҙләнеп йөрөү. Ҡартайғас, хәрәкәттәр килбәтһеҙләнә.* ■ *Әхтәм буйға тартылып, килбәтһеҙләнгән һайын, Сания матурлана барҙы.* Ә. Хәкимов.

КИЛБӘҮ (килбә-) (Р.: придать форму; И.: to form; Т.: şekillendirmek) *ҡ. диал.*

Билдәле бер формаға килтереү. □ Придать форму.

КИЛГЕ *и. диал. ҡар.* **килмешәк.**

КИЛГЕЛӘҮ (килгелә-) (Р.: приходить; И.: drop in (at); Т.: uğramak) *ҡ.*

Килеп-китеп йөрөү, ваҡыт-ваҡыт килеп китеү. □ Приходить, приезжать, посещать, захаживать *(иногда, время от времени, изредка).* ■ *Тары бешә башлағас, Ваһаптың ҡарсығы ара-тирә килгеләп башаҡ алды, башаҡты күҙәп, ҡыҙҙырып, килелә төйөп, бутҡа бешерҙе.* Ж. Кейекбаев. *Аҙнаевтың өйөнә Әхмәҙулла ҡарттың әбейе менән килене алмаш-тилмәш килгеләп торҙо: мейесенә ут яғып, өйөн йыйыштыралар, сәй ҡайнаталар, ыңғайҙарына өйҙәренән йылы аш алып киләләр.* Н. Мусин.

КИЛГЕН *и. диал. ҡар.* **килмешәк.**

КИЛГӘН-КИТКӘН (Р.: приходящие-уходящие; И.: coming and going; Т.: gelen giden) *с.*

Килеп-китеп йөрөгән *(кешегә ҡарата).* □ Приходящие-уходящие *(о посетителях).* *Килгән-киткән кешеләр. Килгән-киткән ысынлап та ишәйҙе.* ■ *[Аҫылбикә] килгән-киткәнде яҡты йөҙ менән ҡунаҡ итте, ҡымыҙ ҡойолған баҙыян сеүәтәләрҙе үҙ ҡуллап бирҙе, һоғондораһын һоғондорҙо, тоҙлоҡло һурпаһын эсерҙе.* Ғ. Ибраһимов. *Өҫтәлмә электр уттарын да балҡыткас, кетәк эсе ысынлап та ожмахҡа әйерелде: килгән-киткән түрәләргә күргәҙмәгә ҡулайлаштырылған махсус бүлексә ине был.* Й. Солтанов.

КИЛГӘН МАЛ *и. этн. ҡар.* **бирнә.**

КИЛДЕКӘЙ *с. диал. ҡар.* **мәғәнәһеҙ.**

КИЛДЕ-КИТТЕ I (Р.: ненормальный; И.: abnormal; Т.: anormal) *с.*

1. Аҡылға бер төрлө, аҡылға еңелерәк булған; килделе-киттеле. □ Ненормальный, не в своём уме. *Килде-китте әҙәм.* ■ *Һөйләүеңә ҡарағанда, Зәлифә килен бер ҙә улай килде-китте кешегә оҡшамай.* З. Ураҡсин.

2. Етди булмаған, еңел, теләһә ниндәй; килделе-киттеле. □ Не заслуживающий внимания, нестоящий; плохой. *Килде-китте хәбәр.* ■ *Ҡара күҙ ине. Күндәрҙең дә килде-киттеле булып торған сағы.* Н. Мусин. *Заманаһы шулай килде-киттеле ине шул.* З. Ураҡсин.

КИЛДЕ-КИТТЕ II (Р.: ненормально; И.: abnormally; Т.: anormal) *р.*

Етди түгел, еңелсә, сәйер. □ Ненормально, несуразно, странно. *Килде-китте һөйләнеү. Килде-китте эшләү.* ■ *[Мәрфуға — Ғәйнуллаға:] Теләмәһәң, эсмә, ҡыҫтамайым, әлеге, килде-китте һөйләнмә.* Картотека фондынан. «*Дә-әәә...— тип көрһөнә Ғәбдеян. — Былай минең малайҙың килде-китте генә уйлап өйләнер сағы үткән инде».* Н. Мусин.

КИЛДЕЛЕ-КИТТЕЛЕ *с. ҡар.* **килде-китте I.** ■ *Эш мәшәҡәтен онотоп, келтер-келтер юл йыры тыңлап барғанда, Йәүҙәт*

күңелен килделе-киттеле төрлө уйҙар сыуалта. Й. Солтанов.

КИЛДЕЛӘР (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡырғыҙ ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-киргизов.

КИЛДЕРҮШ *с. диал. ҡар.* **килде-китте.** *Килдерүш хәбәр. Килдерүш кеше.*

КИЛЕ (Р.: ступа; И.: mortar; Т.: havan) *и.*

1. Төрлө нәмәне төйөп онтай, йомшарта торған тирәсе бейек һауыт. □ Ступа. *Киләлә онтау. Фарфорҙан яһалған киле. Киләлә бойҙай төйөү. Киләлә шәкәр онтау.* ■ *Ошо киләлә тары ярмаһы ярып, Гөлбаҙыян уларҙы тары бутҡаһы менән һыйлар, байрамдарҙа тары онлап, күпертеп тары ҡоймағы бешерер ине.* Картотека фондынан.

2. *миф.* Күрәҙәселектә, им-томда ҡулланылған предмет. □ Предмет, применяемый в гаданиях. ■ *Баҡсы уларҙы урындыҡ шырлегендә бәләкәй генә киләлә ниҙер төйөп ултырған хәлендә ҡаршыланы.* Т. Ғарипова.

КИЛЕ БУТҠАҺЫ *и. ҡар.* **талҡан.**

КИЛЕЙЕК (килейеге) (Р.: славка-завирушка; И.: lesser whitethroat; Т.: küçük akgerdan) *и. зоол.*

Турғайҙан бәләкәйерәк, түбәһе һоро, арҡаһы көрән, ҡанаттарының осонда нәҙек арҡыры һыҙыҡтар булған ҡош. □ Славка-завирушка *(птица)* (лат. *Sylvia curruca*).

КИЛЕМ (Р.: доход; И.: income; Т.: gelir) *и.*

Хеҙмәттән йәки йыйымдан аҡсалата, әйберләтә төшкән файҙа. □ Доход, прибыль. *Юғары килем. Килем иҫәбенә. Килем алыу.* ■ *Буласаҡ көрәштең ҙур килем биререн аңдып алып, цирк администрацияһы билет хаҡын арттырҙы.* Т. Килмөхәмәтов. *Уның [Ныязғолдоң] хужалығының төп килеме өйөр-өйөр малда.* М. Минһажетдинов. *Матди яҡтың көндән-көн насарланыуы, эшһеҙ булыу, килем булмау .. арҡаһында, быға ҡәҙәр ҙә яҡшы булмаған ғаиләлә тормошо тағы ла насарланды.* Ғ. Хәйри.

КИЛЕМ-КИТЕМ (Р.: гости; И.: visitors; Т.: misafir) *и. йыйн.*

Килгән киткән кеше; ҡунаҡ-төшөм. □ Гости. ■ *Ҡунаҡ, туй-фәлән — бөтәһе лә уратып үтә Биксәндәрҙе. Килем-китем юҡ.* Р. Солтангәрәев. *Алдарбайға килем-китем булғанда, тип ҡороп ҡуйылған айырым тирмә тәғәйенләнгәйне.* Н. Мусин.

КИЛЕМЛЕ (Р.: доходный; И.: profitable; Т.: gelirli) *с.*

Килеме булған; төшөмлө. □ Доходный, прибыльный. *Килемле кәсеп. Килемле предприятие. Килемле вазифа. Килемле эшкә урынлашыу.* ■ *Уҡытыусы, Йәрмит уйынса, иң еңел хеҙмәтле, шул уҡ ваҡытта ҙур килемле интеллигент ине.* Й. Солтанов.

КИЛЕМ-ТӨШӨМ (Р.: доход; И.: income; Т.: gelir) *и. йыйн.*

Ниндәйҙер хеҙмәттән йәки йыйымдан төшкән файҙа. □ Доход, прибыль *(собирательно). Килем-төшөм юҡ. Йыллыҡ килем-төшөм. Килем-төшөм алыу.* ■ *[Фәйзулла ҡарт:] Килем-төшөмдө лә, сығымды ла рәйес менән бер рәттән тракторсы ла, һауынсы ла белеп торорға тейеш.* Ә. Әминев.

КИЛЕМТӘК I (Р.: сговорчивый; И.: compliant; Т.: uyuşkan) *с. диал.*

Кеше ыңғайына килеүсән, яйлы. □ Сговорчивый, податливый. *Килемтәк кеше. Килемтәк булыу.*

КИЛЕМТӘК II (килемтәге) *и. диал. ҡар.* **килмешәк.** ■ *Килемтәктәр тулды башҡорт иленә.* Экспедиция материалдарынан.

КИЛЕМҺЕҘ (Р.: недоходный; И.: unprofitable; Т.: kârsız) *с.*

Килеме юҡ; төшөмһөҙ. □ Недоходный, неприбыльный. *Килемһеҙ етештереү. Килемһеҙ ширкәт. Килемһеҙ тамамланған йыл. Килемһеҙ эш.*

КИЛЕН [боронғо төрки *келин*] (Р.: сноха; И.: daughter-in-law; Т.: gelin) *и.*

1. Улдың ҡатыны. □ Сноха, невестка. *Уртансы килен. Уңған килен. Йәш килен. Килен менән ҡәнәғәт булыу. Килен менән татыу йәшәү.* ■ *Айым килен Арыҫлан ауылына яңы йәм өҫтәгән төҫлө булды.* Ғ. Ибраһимов. *Үҙ һүҙҙәренә мауыҡҡан килен менән бейем, малайҙарҙы күрмәй, бәхәстәрен дауам итте.* З. Биишева. ● *Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла.* Әйтем. *Байҙың килене булғансы,*

ярлының ҡыҙы бул. Мәҡәл. *Атаһыҙҙы кейәү итмә, инәһеҙҙе килен итмә.* Мәҡәл. *Ҡыҙ оҙатҡан яланғас ҡалыр, килен алған түренә урын һалыр.* Мәҡәл. *Бер килен алһаң, биленде бер ерҙән, ике килен алһаң, ике ерҙән, өс килен алһаң, өс ерҙән быуырһың.* Мәҡәл.

2. Кесе туғандың йәки үҙеңдән кесе таныш-белеш кешенең ҡатыны. □ Молодица, молодуха, молодая женщина *(только что вышедшая замуж).* ■ *Халыҡ кәҙимге тормошо менән йәшәне: бала-саға, йәш килендәр көтөү ҡыуҙы, кистәрен ҡарышыланы, йәшелсә, картуф баҡсаһында булашты.* Б. Бикбай. *Ауылдың өйләнмәгән йәш егеттәре, үткерерәк килендәре, һирәк-һаяҡ ҡына булһа ла, йәш ҡыҙҙары Ғарифтың бейек ҡоймалы баҡсаһы йәнәшәһенән уҙған тыҡрыҡ буйлап яҙ көнө яһала торған киске уйынға ағылдылар.* Ғ. Хәйри.

3. Ололарҙың йәш килендәргә өндәшеү һүҙе. □ Обращение старших к молодым замужним женщинам. ■ *[Йәноҙаҡ бабай:] Хәтирә килен, бөгөн баҡуйҙы тешкә тиклем йыйып бөтһәк, кәбән ҡойоп ҡайтырмын тигәйнем.* Н. Мусин. *Минзәлә килен, һиҙә бер башмаҡ, – тине [Шаҡман түрә] һәм, табындың хуплауын көтөп, яҡ-яғына ҡарап алды, – яҡшы йәшәгеҙ, бәхетле булығыҙ, инсафлы хеҙмәт итегеҙ.* К. Мәргән.

4. *миф.* Башҡа ырыуҙан килгән кеше булараҡ яҡлауға, һаҡлауға мохтаж кеше. □ Мифологизированное лицо *(в свадебном обряде наиболее уязвимое, подверженное воздействию нечистой силы, потому наиболее оберегаемое лицо).*

КИЛЕН АЛЫУ (килен ал-) *ҡ. этн. ҡар.* **өйләндереү.**

КИЛЕН БИРНӘҺЕ (Р.: приданое невесты; И.: bride's ritual gift; Т.: çeyiz) *и. этн.*

1. Ҡыҙҙың артынан килгән мал-мөлкәт. □ Приданое невесты.

2. Ҡыҙ яғынан егеттең ата-әсәһенә бирелгән бүләк. □ Ритуальный подарок невесты *(родителям жениха).*

КИЛЕН БИТЕН АСЫУ (килен битен ас-) *ҡ. этн. ҡар.* **килен күреү.** ■ *[Шаҡман түрә:] Килен битен асыу көндәрен әҙәм рәтлерәк үткәрербеҙ тигәйнем...* К. Мәргән. *Килен килде, күрегеҙ, күрмәлеген бирегеҙ. Килен битен асабыҙ. Өлөшөн әйтеп инегеҙ.* Йырҙан.

КИЛЕН БҮЛӘГЕ (Р.: ритуальный подарок невесты; И.: bride's ritual present; Т.: gelin hediyesi) *и. этн.*

Оҙатылып килгәс, килен тараткан бүләк. □ Ритуальный подарок невесты *(родственникам жениха).* ■ *[Бәҙғольямал – Өркиәгә:] Бына ошонда килен бүләктәре, ижап уҡығас, һин таратырһың.* Н. Мусин.

КИЛЕНДӘШ (Р.: сношеница; И.: sister-in-law; Т.: elti) *и.*

Бер туған ағай-эненең ҡатындары *(бер-береһенә ҡарата)*; апһын. □ Сношеница, жёны родных братьев. ■ *Ике килен – килендәш, береһе ялҡау, береһе йәш.* Халыҡ йырынан. *Беҙҙән дүрт өй аша Ғәйшә менән Гөлсирә исемле ике килендәш тора.* М. Кәрим. ● *Килен – килендәшкә көндәш.* Мәҡәл. *Ағай-эне татыу булһа, менергә ат етә, килендәштәр татыу булһа, ашарға аш етә.* Мәҡәл.

КИЛЕН ЕБЕ (Р.: ритуальный подарок невесты; И.: bride's ritual sewing; Т.: gelin hediyesi) *и. этн.*

Килен исеменән апай-инәйҙәргә таратылған еп. □ Ритуальный подарок невесты *(нитки, раздаваемые от имени невесты пожилым женщинам).*

КИЛЕНЕҮ (килен-) *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **килеү 2, 3, 12, 22.** *Һыңлап киленгән. Ҡәтғи ҡарарға киленде. Был эш алдан тикшереп киленде. Ул һәр ваҡыт телгә алынып киленде.* ■ *Һөйләшкәс-кәңәшкәс, ҡомо юҡ һыу булмаҫ, бейе юҡ ил булмаҫ, тип, бер кешегә күҙ төбәргә, ил өсөн яуаплы мәлдә шуның ҡушыуын тыңларға кәрәк тигән уйға киленде.* Ғ. Ибраһимов. *Беренсе донъя һуғышы барышында Көнбайыш Рәсәйҙән алып киленгән «ваҡытлы күскенселәр»ҙең иң күбеһе көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда Үҫәргән волостарында, ундағы рус ауылдарында ереккәйне.* Ә.-З. Вәлиди. *Бына хәҙер, иҫемә килгәс, йөрәгем жыу итеп китә. Уйын эш түгел: ни әйтһәң дә, үлем ояһына киленгән бит...* Ш. Бикҡолов.

КИЛЕН ЙӘРӘШТЕРЕҮ *и. диал. ҡар.* **килен әйттереү.**

КИЛЕН-КИЛТӘН (Р.: молодухи; И.: young (peasant) women; Т.: genç kadınlar) *и. йыйн. һөйл.*

Йәш ҡатындар, килендәр. □ Молодухи, молодицы.

КИЛЕН-КИРКЕН *и. диал. ҡар.* **килем-китем.**

КИЛЕН КҮРЕНЕСЕ (Р.: ритуальный подарок; И.: ritual present; Т.: gelin hediyesi) *и. этн.*

Килен яғынан кейәүҙең туғандарына таратылған бүләк. □ Ритуальный подарок *(раздаваемый от имени невесты родственникам жениха).* ■ *Ҡәйнә кеше ҡарсыҡтарға килен күренесе тип түшелдерек тарата.* Халыҡ ижадынан.

КИЛЕН КҮРЕҮ (килен күр-) (Р.: показ невесты; И.: traditional ceremony of meeting a bride; Т.: gelin görmek) *ҡ. этн.*

Киленде тәүге күреү, бүләктәр биреү йолаһы. □ Показ невесты *(обряд знакомства с невестой и взаимного одаривания в доме жениха).* ■ *Ҡоҙалар ҡайтҡас, егеттең еңгәләре килен күреү йолаһына бөтә килендәрҙе саҡыралар.* Халыҡ ижадынан.

КИЛЕН КҮРЕШТЕРЕҮ (Р.: показ невесты; И.: traditional ceremony of meeting a bride; Т.: gelini tanıştırmak) *и. этн.*

Киленде егеттең туғандары менән таныштырыу йолаһы. □ Показ невесты *(родственникам жениха).*

КИЛЕН КҮРМӘЛЕГЕ (Р.: ритуальный подарок для невесты; И.: ceremonial present for the bride; Т.: geline hediye) *и. этн.*

Килен күреү ваҡытында киленгә бирелгән бүләк. □ Ритуальный подарок для невесты *(которыми одаривают невесту с пожеланиями счастья, плодовитости).*

КИЛЕНКӘС *и. ҡар.* **киленсәк.**

КИЛЕНЛЕК (киленлеге) (Р.: статус невесты; И.: bride's status; Т.: gelin olma durumu) *и.*

1. Килен булыу хәле, килен булыу. □ Статус невесты (невестки), быть невестой (невесткой). *Киленлеккә яраҡлы табыу. Киленлек мөнәсәбәте.*

2. *этн.* Килендең туй кейемдәре. □ Свадебный наряд невесты.

КИЛЕН МАЛЫ *и. диал. этн. ҡар.* **килен бирнәһе 2.**

КИЛЕН СӘЙЕ (Р.: ритуал чаепития; И.: tea party ceremony; Т.: gelin çayı) *и. этн.*

Килен төшкәс, нәҫел-ырыуҙы саҡырып һыйлау. □ Ритуал чаепития *(обряд угощения женщин из рода жениха чаем и гостинцами невесты).* ■ *Ҡәйнә килен алып килгән һыуҙан сәй ҡайнатып, килен сәйенә ҡатындар саҡыра.* Халыҡ ижадынан.

КИЛЕНСӘК (киленсәге) (Р.: сношенька; И.: dear daughter-in-law; Т.: gelin) *и. ирк.*

Киленде иркәләтеп атау һүҙе *(йышыраҡ йәш киленгә әйтелә).* □ Сношенька, молодица. ■ *Әйҙә, матур киленсәк, булма улай оялсаҡ.* Халыҡ йырынан. *Иртән һалҡын әле, ә көндөҙ бынан, алтын уҡаларын емелдәтеп, камзул тәңкәләрен сылтыратып-көлөп әллә ҡайҙа ашҡынып йүгергән йәш киленсәктәрҙәй, йырғанаҡтар йырлап ағасаҡ.* Т. Ғарипова. *Күрәһең, көндөҙгө хәлдәрҙе барлап, бөгөн Ыһйыташтан башҡа бер кемдең дә кер йыумауын хәтерләнеләрме — тын алырға ла баҙнат итмәй торған ҡыҙыҡайҙы ҡапыл ике беләгенән ике киленсәк әләктермәһенме!* Ә. Хәкимов. ● *Килен – киленсәк, ҡыҙ – ҡырҡынсаҡ.* Мәҡәл.

КИЛЕН ТАЯНДЫРЫУ (Р.: ритуал одаривания невестки свекровью; И.: ceremony of presenting the bride with cattle; Т.: düğün âdeti) *и. этн.*

Килен төшкән ваҡытта ҡәйнә тарафынан һыйыр малын бүләк итеү, шул малға таяндырыу йолаһы. □ Ритуал одаривания невестки свекровью *(крупным рогатым скотом в день её приезда).* ■ *Киленде ҡәйнәһе малға таяндыра. Шул малды таянсыҡ, тиҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

КИЛЕН ТӨШӨРӨҮ (килен төшөр-) (Р.: свадебный обряд; И.: weedding ritual; Т.: düğün âdeti) *и. этн.*

Ҡыҙҙы егет йортона күсереп килтереү йолаһы. □ Свадебный обряд *(проводимый в доме жениха, направленный на принятие в род нового члена).* ■ *Ҡаршы йортта, Ихсанбайҙар өйөндә лә йоҡламанылар — унда килен төшөрҙөләр.* Т. Ғарипова. *Хәйбулла китергә бер аҙна ҡалғанда, йортона килен*

төшөрөп алды. Ә. Хәкимов. *[Мәстүрә еңгәй:] Аллаһы Тәғәлә бойороп, иҫән-имен ҡайтһаң, ҡарт көнөмдә әллә, өйгә килен төшөрөп, игелек күрһәтер инең, донъя мәшәҡәттәренән арындыртыр инең...* Й. Солтанов.

КИЛЕН ТУНЫ (Р.: ритуальная шуба невесты; И.: bride's fur coat; Т.: gelin kürkü) *и. этн.*

Кейәүҙең туй ваҡытында киленгә бүләк иткән туны йәки башҡа кейем-һалым. □ Ритуальная шуба невесты *(подарок жениха невесте в виде одежды).*

КИЛЕН ҺАНДЫҒЫ (Р.: ритуальный сундук невесты; И.: bride's ritual chest; Т.: gelinin sandığı) *и. этн.*

Туйҙа кейәү яғына таратыу өсөн бүләктәр һалып алып килгән килен һандығы. □ Ритуальный сундук невесты *(с подарками для раздачи родственникам жениха и его сородичам).* ■ *Килен һандығын егет яғынан иң яҡын апаһы бүләк әйтеп аса.* Халыҡ ижадынан.

КИЛЕН ҺӨЙӨҮ (килен һөй-) (Р.: обряд посвящения невесты в невестки; И.: sort of ethnographic wedding ceremony; Т.: düğün âdeti) *ҡ. этн.*

Яңы төшкән киленде һөйөп, теләк теләп, бүләк биреү. □ Обряд посвящения невесты в невестки свекровью. ■ *Ата йорто менән хушлашыуға арналған «килен һөйөү», «бит асыу» күсөргәнешле йолаларында ҡыҙға психологик йоғонто яһау ниәте менән әйтелгән һүҙ айырым көскә эйә булған.* Р. Солтангәрәева.

КИЛЕН ӘЙТТЕРЕҮ (Р.: обряд сватания; И.: brocage ceremony; Т.: kız istemek) *и. этн.*

Ҡыҙҙы һөйләшеп ҡоҙалашыу. □ Обряд сватания невесты. ■ *[Хисмәтулла:] Мин... мин килен әйттерергә уйлайым, әсәй.* Я. Хамматов. *[Котлоғужа:] Һай, улым, улым, оло мәшәҡәт ул килен әйттереү: яусыларға, килештергә, никахын, туйын үткәрергә кәрәк... Был турала һүҙ ҡуҙғатыр йәшкә еткәс, йомшарып торма, шартлатып һөйләш.* Н. Мусин.

КИЛЕП (Р.: вдобавок; И.: in addition; Т.: üstelik) *р.*

1. *Ниндәйҙер* фекерҙе, төп төшөнсәне көсәйтеү өсөн ҡулланыла; өҫтәүенә. □ Вдобавок, да ещё. ■ *Әйтерһең, уларҙың [ауыл кешеләренең] һәр береһе, кәм тигәндә, ысын губернатор нәҫеле. Етмәһә, килеп тороп маҡтансыҡтар.* М. Кәрим. *Гөрһөлдәп туптар ярыла, килеп төроп, шарт-шорт йәшен ата.* Ә. Хәкимов. *[Атаһы:] Миңлеғәле өсдүрт йәшкә ҡыҙымдан олораҡ булһасы! Ох та тимәҫ инем. Килеп тороп, ата-әсәһе, туғантыумасалары ла һәйбәт...* Я. Хамматов.

2. Рәүештәр менән бергә эш-хәрәкәттәге үҙгәреште күрһәтеү өсөн ҡулланыла. □ Используется с наречиями для передачи изменений в процессе. ■ *Аҙаҡ килеп, Сыуаҡ батырҙың ғәскәре ҡырылып бөтә яҙа, Тамъян ханынан яңы көс килерен көтөп, иплəп-иплəп, дошманды ҡыра-ҡыра сигенә башлай.* Н. Мусин. *Лидия Николаевна зәңгәрһыу күҙҙәрен түшәмгә текләп уйлана бирҙе лә бер хәбәр һалды: «Мин уның [Сәбиләнең] бер көн килеп айнығып китеүенән... ҡурҡам!»* Т. Ғарипова. ● *Донъя мине алданы: бер көн килеп, «ал», тине, бер көн килеп, «һал», тине.* Мәҡәл.

КИЛЕП КИТЕҮ (килеп кит-) (Р.: временами приходить; И.: visit occassionaly; Т.: uğramak) *ҡ.*

Бер килеп, бер китеү, килгеләү. □ Временами приходить, приезжать *куда-н.*, бывать *где-н.*, посещать *кого-н. (на короткое время). Бер нисә тапҡыр килеп китеү. Йыш килеп китеү. Ул һирәк килеп китә.* ■ *Ҡыям һаман әлекке һымаҡ килеп китеп йөрөнө.* Р. Солтангәрәев. *Ҡыҙылдар менән бәрелеш туҡталды. Делегаттар һөҙөмтәһеҙ килеп-китеп йөрөй.* Ә.-З. Вәлиди. *Сабаҡлы ауылынан һирәк-һаяҡ һыбай килеп киткеләгән ирегеттә ине уның күңеле.* Т. Ғарипова.

КИЛЕР I (Р.: будущее; И.: the future; Т.: gelecek) *и.*

Алдағы тормош; киләсәк. □ Будущее. *Килере яҡты булыр. Килере хәйерле булһын. Килерҙе фаразлау.* ■ *Үткәндәре артыҡ алыҫлаша, килерҙәре бигерәк ашыға.* М. Ғәли.

КИЛЕР II *и. ҡар.* **килем.** ■ *Халыҡтың килерҙәре артыу менән бергә аҙыҡ һәм сәнәғәт тауарҙарын һатыу ҙа артасаҡ.* «Башҡортостан», 10 сентябрь 1998.

КИЛЕРЕ *и. диал. ҡар.* **килем.**

КИЛЕР ЕР (Р.: источник дохода; И.: income; Т.: gelır) *и.*

Килем сығанағы, файҙа алыу мөмкинлеге. □ Источник дохода.

♦ **Килер ерең киң булһын** мал-мөлкәт, табыш күп булһын, тип теләгәндә әйтелә. □ Пожелание добра и благосостояния. ■ *Тир ағыҙып, күкрәк киреп эшләһәң, килер ерең дә киң булыр, ғүмерең, бәхетең дә тиң булыр.* А. Игебаев. *Көнсөлдөң йәне ком булһын, байлығым минең сикһеҙ, килер ере лә киң уның, китер ере лә сикһеҙ.* Р. Хисаметдинова.

КИЛЕҮ (кил-) [боронғо төрки *кәл-*] (Р.: идти; И.: come; Т.: gelmek) *к.*

1. Былай табан, *нимәлер* янына хәрәкәт итеү, яҡынлау. □ Идти, двигаться *куда. Йәйәүле килә. Машина килә. Трактор килә. Шәп килеү. Яй килеү. Етеп килеү. Балыҡ әркеүе килә.* ■ *Артта саң-туҙан борҡотоп, шәп тиҙлектә кранлы машина етеп килә ине.* Д. Бүләков. *Уға табан (кемдәр тиһегеҙме?) Батыр менән Хәлит килә ята ине.* Н. Ғәйетбаев. *Бына, нимәгәләр ҡаты һыҡранып, аһылдай-ухылдай Бибисара абыстай йүгерә-атлай килеп инде.* З. Биишева.

2. *Нимәлер* ярҙамында былайға табан хәрәкәт итеү, яҡынлау. □ Приезжать, прибывать, приплывать, прилетать, передвигаться *на чем-то. Санала килеү. Автомобилдә килеү. Пароходта килеү. Мотоциклда килеү.* ■ *Килен дә ҡупшы ауыл санаһында килә.* Б. Бикбай. *Ғибадулла төш етә яҙғас ҡына һыбай килде.* Н. Мусин. *Ана, һаҙ юлынан берәү ат менән килеп сыҡты.* Т. Ғарипова.

3. Һауа менән йәки башҡа төрлө ағым менән бирегә хәрәкәт итеү, бирегә табан ағылыу *(болот, томан, һыу һ. б. ҡарата).* □ Идти, надвигаться *(об облаке, тумане). Ямғыр килә. Томан килә.* ■ *Килә болот, килә ямғыр, китһен урман буйына.* Халыҡ йырынан. *Шул саҡ ямғыр күҙе төшә башланы. Әллә ҡайҙан болот килеп сыҡҡан.* Н. Мусин. *Ҡыҙы менән кейәүе китеп бер аҙ торғас, ҡайҙандыр өйөрөлөп ҡара болот килеп сыҡты.* Ф. Янышев.

4. Ҡоштарҙың осоп килеүе тураһында. □ Прилетать *(о перелётных птицах).* // Прилёт. ■ *Матур моңло ҡоштар килә башлар инде аҡрынлап.* Ш. Бабич. *Туғайға ҡайҙандыр ҡоштар килеп тула һәм көн үҙгәндә лә, кисен ҡояш байығанса моңло итеп һайрай.* М. Хужин.

5. Хәрәкәт итеп, билдәле бер урынға етеү. □ Приходить, подойти, прибывать, добраться до *какого-то* места. *Йылғаға килеү. Клубҡа килеү. Кеше килгән.* ■ *[Фәүзиәнең] йылғаға килеп етеп, баҫмаға күҙ һалыуы булды, яр аҫтынан Шәңгәрәйҙең йомро ҡаҡ башы күренде.* Т. Ғарипова. *Өйәңке кешеләргә йәл, ауылдыҡылар бында килгән һайын уға әсенеп ҡарап китә.* Р. Солтангәрәев.

6. Берәй маҡсат менән ҡайҙалыр юл тотоу. □ Пойти *куда-то* с целью *(пойти в гости, учиться и т.д.). Эшкә килеү. Бесәнгә килеү. Ял итергә килеү. Ярышҡа килеү.* ■ *Егеттәрҙең береһенең дә Сәмигә зыяны тейгәне юҡ былай, киреһенсә, йомошҡа килһәң йәки берәй эш ҡушһаң, ярҙамлашырға әҙер торалар.* Ә. Әминев. ● *Ялҡау ашҡа килер, уңған эшкә килер.* Мәҡәл.

7. Ҡатын булып ғаиләгә инеү, кейәүгә сығыу. □ Становиться женой или невестой. *Ҡатын булып килергә ризалашыу.* ■ *[Көнбикә] көндәш өҫтөнә килеп төшөүенә күңеле кителеберәк, үҙе менән рәтләп һөйләшмәй йөрөгән Ғилмиязаға икәүҙән-икәү ҡалған саҡтарында әйтте: «Һин көйһөҙләнеп йөрөмә, Ғилмияза. Алдар икебеҙгә лә етер, ул бисәне хур итә торған ир түгел. Үҙебеҙ татыу йәшәйек».* Н. Мусин.

8. *күсм. Ниндәйҙер* эш, хеҙмәт өлкәһенә инеү. □ Приходить, поступать, зачисляться, становиться *кем. Шиғриәткә килеү. Спортҡа килеү. Драматургияға килеү. Фәнгә йәш көстәр килде.*

9. *Ҡайҙандыр* ебәрелеп, тәғәйенләнгән ергә етеү, бирегә алыныу *(хат, хәбәр, әмер, әйбер һ. б. ҡарата).* □ Идти, прибывать, поступать. *Почта аша аҡса килде. Гәзит килде. Телефонограмма килде. Хәбәр килде. Яуап килде. Пенсия килде.* ■ *Һуғыш башланғас, Әхмәдиҙән «һуғышҡа керәбеҙ» тигән бер генә хат килде лә, ҡабат хәбәре-хәтере булманы.* Ж. Кейекбаев. *Әбүбәкере өсөн күңеле*

тыныс. Һөйөнөслө хәбәр килер кеүек үҙенән. Т. Ғарипова.

10. Керем рәүешендә ҡулға инеү. □ Идти, поступать *(о пользе, процентах). Акцияларҙан файҙа килә. Аҡсанан процент килә.*

11. Таралып, йәйелеп йәки берәй нәмә эсенән былай табан етеү *(еҫ, тауыш, төтөн, һ. б. ҡарата).* □ Идти, исходить *откуда-то,* распространяться, доноситься, раздаваться. *Төтөн килә. Әсе еҫ килә. Мейестән йылы килә. Тәҙрәнән һыуыҡ килә. Тауыш килә. Торбанан әсе һыу килә. Ярыҡтан яҡты килә.* ■ *Һалам өйөмө... Эсенән йылы бөркөлә, үҙенән бойоҡ йөҙлө, Күкбүрене түйындырған, башынан иркәләп һыйпаған еҫ килә.* Т. Ғарипова. *Ирҙәр йыйып итеп тауыш килгән яҡҡа ҡараны.* Н. Ғәйетбаев.

12. Организмдан, эстән бүленеп тышҡа сығыу *(ҡан, йәш һ. б. ҡарата).* □ Идти, течь, выделяться. *Яранан ҡан килә.* ■ *Ауыҙына ҡапҡан ҡыяҡты ул сәйнәп бөтөрә алманы, күҙенән йәш килеп, кире төкөрҙө.* Й. Солтанов. *Емеш күҙҙәренән йәш килгәнсе айға текләне.* З. Биишева.

13. Бирегә табан үтеү, уҙыу, һуҙылыу *(юл, һуҡмаҡҡа ҡарата).* □ Проходить, протягиваться, пролегать. *Ауылға асфальт юл килә. Һуҡмаҡ һырт буйлап килә.*

14. Тормошта билдәле бер ваҡыт тыуыу, осор етеү, хәл тыуыу. □ Идти, наступать. // Наступление, приход, подступ. *Бәхетле көн килде. Ауыр көндәр килде. Беренсе мөхәббәт килде. Ҡайғы килде. Шатлыҡ килде.* ■ *Был ғүмерҙәр беҙгә ике килмәй, уйнап-көлөп кенә ҡалайыҡ.* Халыҡ йырынан. *Шулай уҡ мөхәббәт килде микән Таңдысаға?! Юҡ, юҡ!* Т. Ғарипова. *«Берәй бәлә килеп тыуҙымы икән ни?» — тип уйланы Ҡаҙанбаев.* Н. Мусин. *Тирә-яҡтағы үҙгәрештәрҙең шаңдауы ишетелмәҫ, шойҡаны бында ла килеп етмәҫ тимә.* Я. Хамматов.

15. Миҙгелдең билдәле бер ваҡыты башланыу, булыу. □ Идти, наступать *(о временах года). Йәй килде. Көҙ килде. Ғинуар килде. Бесән ваҡыты килде. Яҙ һуңлап килде.* ■ *Ни ғәжәп: иртә ҡыш килһә, иҙел өҫтө лә ҡара көҙҙән үк сайрап ағара.* Й. Солтанов. *Ҡарҙар ирене, йәмле яҙ килде.* Ғ. Хәйри. *Яҙ иртә килһә, йәй яҡшы булмай, һыуыҡ була.* Һынамыш. ● *Эшең булһа йөҙ, туҡлыҡлы килер көҙ.* Мәҡәл.

16. Ҡасандыр башланып, әлеге ваҡытта дауам итеү, ғәмәлдә йөрөү. □ Передаваться, переходить *кому-л. другому. Ата-бабанан килгән ғәҙәт. Күптән килгән йола. Былтырҙан килгән бурыс. Нәҫелдән килеү. Былтырҙан килгән эш.* ■ *Был мулланың, хохол һыйырҙары шикелле, эре нәҫелдән килгән биш баш ҡатыны булып, биш ҡатынға биш өйө бар.* Ғ. Хәйри. *[Әпкәләй:] Һәй, алйот, ул хикмәт тигән нәмә өйрәтә торған нәмә түгел. Ул нәҫелдән килә.* Д. Юлтый.

17. Талапҡа ярашлы, тейешенсә булыу, килешеү. □ Подходить, соответствовать *(по размеру, росту и т.д.). Буй-һыны менән килгән. Бар ере менән дә килгән. План буйынса тап килмәй.* ■ *«Була бит булғас ошондай матур ҡыҙҙар» — тип [Исмәғилев] уйлаһа, һис тә ғәжәп түгел, сөнки ысынлап та килмәгән ере юҡ ине Таңһылыуҙың.* Ә. Хәкимов. *[Ҡыҙрасов:] Ҡырҡҡа ла инмәгән был ҡатынды Ғәлимә нисә күрә алмай әле? Ахыры, көнләшәләр. Бигерәк һылыу шул үҙе лә. Килмәгән ере юҡ.* Т. Ғарипова.

18. Билдәле бер ауырлыҡта, оҙонлоҡта йәки башҡа бер кимәлдә булыу. □ Весить, тянуть, потянуть. *Был аҡсаға ике метр ситса килә.*

19. *грам.* Ҡулланылыу, йөрөү *(һүҙ йәки ялғауға ҡарата).* □ Употребляться, использоваться. *Ҡылым алдынан килеү. Сифат менән килеү. Һөйләм киҫәктәренең килеү тәртибе. Өндәрҙең сираттлашып килеүе.*

20. Төбәү килештәге исемгә эйәреп, билдәле бер фекергә тукталыуҙы йәки билдәле бер тойғо, фекерҙең яралыуын аңлата. □ Приходить, возникать, проявляться *что-л., у кого-л. Бәлә килде. Ваҡиғалар иҫкә килде.* ■ *Ғиндулла тиҙ генә асыҡ ҡарарға килә алмай ыҙаланды.* Й. Солтанов. *Тимәк, төпсөй башлаһаң, һалдат та офицерҙарҙы ҡурҡыта ала икән тигән уйға килдем.* А. Таһиров.

21. Эш-хәлде белдереүсе төбәү килештәге исем менән ниндәйҙер бер хәлгә күскәнде аңлата. □ Приходить в ... . *Һушҡа килеү. Аңға килеү. Ипкә килеү. Тейешле рәүеш-*

кә килеү. ■ *Бөтәһе лә хәрәкәткә килде.* Т. Ғарипова. *Сираев яйға килмәгәнлектән, һуңғы көндәрҙә уның [Каҙанбаевтың] сабырлығы өҙөлә башлағайны инде.* Н. Мусин.

22. 3-сө заттағы эйәлек ялғаулы исем менән ҡулланғанда, *нимәгәлер* мөмкинлек табылыуын, уңайы сығыуын аңлата. □ Совместно с существительными с аффиксами категории принадлежности в 3-м лице выражает возможность *чего-л. Яйы килгәндә кереп сығыу. Барып сығырға ыңғайы килмәй. Көйө килеү.* ■ *[Һәр кем] йүне килһә, элергә әҙер тора, ҡармағы алыҫ түгел бармағында.* М. Аҡмулла.

23. Төбәү килештәге сифат менән торғанда, эш-хәлдең башҡарылыу шартын белдерә. □ Совместно с прилагательными в направительном падеже выражает условие реализации *чего-л. Бесән эштәре ауырға тура килде. Имтихан тапшырыу еңелгә тура килде. Бурыс үтәү ҡыйынға килде. Барыһы ла тығыҙға килә.* ■ *Боғара, билдәле, нуғайҙар менән асылышлы булмаҫҡа, ауырға килһә лә, өҫтәге бурыстан бер әмәлен табып ҡотолорға өндәне.* Ә. Хәкимов. *Парад формалары кейеп, ҡылыстар тағып сыҡҡан тәртип һаҡлаусыларға аҙаҡтан эш еңелгә килде.* Ж. Кейекбаев. *Бибеш апаһында йәшәй башлағас та был ураҙа айы [Емешкә] еңелгә килмәй.* З. Биишева.

24. Сығанаҡ килештәге исем менән ҡулланғанда, эш-хәрәкәтте башҡарыу мөмкинлеген аңлата. □ Идти, происходить, возникать от *чего-л. Көстән килеү. Ҡулдан килеү. Теленән дә, ҡулынан да килә.* ■ *Был иһә иң ҙур һәҙиә булды, һәр ике әҫәрҙәге мәҡәләләрҙе мин хәлдән килгәнсә атайыма һәм олатайыма, бер-бер артлы тәржемә итеп, аңлата инем.* Ә.-З. Вәлиди. *Тәүҙә беҙ ындағы тәртипһеҙлектәргә аптырап ҡарағайныҡ; шунан, бер ни тиклем күнегә төшкәс, ҡуйылған иректән файҙаланып, шаярыша, хәлдән килгәнсә күңел аса башланыҡ.* Д. Юлтый.

25. Төп килештәге исем, сифат, рәүеш һ. б. һүҙҙәр менән ҡушма ҡылым яһай. □ Совместно с существительными, прилагательными, наречиями образует сложные глаголы. *Дөрөҫ килеү. Тура килеү. Тап килеү. Сыр-сыу килеү. Ыңғай килеү. Мәж килеү. Йоҡо килеү. Илһам килеү. Нәфрәт килеү. Үс килеү. Бәлә килеү. Зарар килеү.* ■ *Новиковка бер яҡтан асыу килә. Икенсе яҡтан күңелде йылытам.* Д. Юлтый. *Ер өҫтөндәге йәнлектәр генә түгел, ер аҫтындағы сысҡандар ҙа уға зыян килтерер кеүек тойолдо.* Т. Ғарипова. *Был барлы-юҡлы көстө бүлгеләү, леспромхоз үтәргә тейешле төп эшкә зыян килтереү булыр ине.* Н. Мусин. *Һуңғы көндәрҙә күпме йөрөлдө, ныҡ йонсолһа ла, күҙгә йоҡо килмәне.* Р. Солтангәрәев. *Арғаяшҡа ла, Ҡоншаҡҡа ла ҡайғы килә һорамайса, урау юлдан урамайса.* Ф. Туғыҙбаева. *Эштең уңай килеп тороуына шатланып, йүгерә-атлай тышҡа сыҡтым.* Н. Мусин. ● *Батыр кәрәк яу килгәндә, түрә кәрәк дау килгәндә.* Мәҡәл.

26. *-ғы* формаһындағы ҡылымға ҡушылып, теләкте белдерә. □ Совместно с формой глагола на *-ғы* выражает желание *чего-л. Йоҡлағы килә. Барғы килә. Әйткө килә. Ишеткө килә. Бейеге килә.* ■ *Шулай ҙа был аҙымды яһарға мулланы мәжбүр иткән сәбәпте белге килә.* З. Биишева. *Был ни эшләп шулай икән, уны әҙерәк күрмәһәң дә тороп була бит инде, ә шулай ҙа күрге килә, — тип уйлай Сөнәғәт.* Ж. Кейекбаев. *Абай байрамы хаҡындағы яҙмаларымды ундағы тәүге тәьҫораттар менән тамамлағы килә.* Р. Бикбаев. *Ана шундай саҡтарҙа әй илап алғы килә, әммә ир кешенең тәбиғәте башҡа — бер тамсы йәш һығып сығарырмын тимә.* Д. Бүләков.

27. Хәл ҡылымдың *-п* формаһына ҡушылып, эш-хәрәкәттең бирегә йүнәлешен белдерә. □ Совместно с формой деепричастия на *-п* выражает направленность действия к говорящему. *Хат алып килеү. Тышта йөрөп килеү. Күршеләргә әйтеп килеү.* ■ *Малайҙың бындай хәлгә тарығаны бар: йоҡлағанында йыш ҡына уны өләсәһе тыштан бикләп, күршеләргә йомош-фәләнгә йөрөп килә.* Й. Солтанов. *Мәҙинәне һыйыр һауырға уятып, самауыры әргәһенә кире урап килгәнендә игеҙәктәр уянып, буҙ турғай кеүек һайраша башлағайны.* Т. Ғарипова.

28. *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, эш-хәрәкәттең башланғыс мәлен һәм барышындағы дауамлылыҡты белдерә.

□ Совместно с формой деепричастия на *-п* выступает в роли вспомогательного глагола и указывает на начало и продолжение действия. *Таң атып килә. Йоҡонан яңы тороп килә. Эштән ҡайтып килеү. Көтөү ҡыуып килеү.* ■ *Батырҙың ҡулында сумка, магазиндан ҡайтып килә, күрәһең.* Н. Ғәйетбаев. *Көтөүселәр малды һауынға ҡыуып килтергән.* Т. Ғарипова.

29. Хәл ҡылымдың *-п* формаһына ҡушылып, эш-хәрәкәткә ҡапыллыҡ мәғәнәһен бирә. □ Совместно с формой деепричастия на *-п* придает оттенок неожиданности, внезапности действия. *Сынаяҡ килеп төшөү. Ятҡан ерҙән килеп тороу. Ҡабаланып килеп инеү.* ■ *Сеү, ни булды һиңә, балам? Ҡуй, ҡолонсағым, рәнйетмә әпәкәйҙе, ярамай! — тип йүгереп килеп етте Нәкиә.* Й. Солтанов. *Ҡара бәрәстең бәхетенә көнләшеп, һандыҡ өҫтөнә һикереп килеп менгән бөҙрә йөнлө аҡ бәрәнде лә Сәрбиямал итәгенә һыйҙырҙы.* З. Биишева.

30. Хәл ҡылымдың *-а* формаһында шул уҡ формала торған төп ҡылымға ҡушылып, дауамлы эш-хәрәкәттең икенсе эш-хәрәкәткә булған мөнәсәбәтен белдерә. □ Совместно с формой деепричастия на *-а* выражает значение попутного действия. *Иҫкәртә килеү. Әйтә килеү. Үҫә килә аҡылға ултырыу.* ■ *Әллә ни итеп, үҫә килә Ишмырҙа артынан ҡалышмаҫ булды Рәмилә.* Н. Мусин. *Мәрхүмдәрҙең зауыҡтары, ынтылыш-маҡсаттары бер булған кеүек, ҡартая килә, сирсырхауҙары ла оҡшашҡа әйләнде.* Ә. Хәкимов.

31. Төбәү килештәге исем һәм исем урынында килгән һүҙгә *килгәндә, килһәк, киләйек* формаһында эйәреп, уға иғтибар йүнәлткәнде белдерә. □ С формами на *килгәндә, килһәк, киләйек* выступает в роли наречия «насчёт, относительно» *кого-чего. Торлаҡ мәсьәләһенә килгәндә. Ашауға килгәндә. Уҡыу мәсьәләһенә килһәк.* ■ *[Юлтыев:] Хәҙер йыйылышҡа ҡуйылған мәсьәләгә киләйек.* Ғ. Әмири.

КИЛЕП СЫҒЫУ (килеп сыҡ-) (Р.: получиться; И.: turn out (to be); Т.: görünmek) *ҡ.*

1. Хасил булыу, барлыҡҡа килеү. □ Получиться, проявиться. ■ *Алтынбайҙың бөгөлөп-һығылып баш эйеүе нисектер бик йәпһеҙ килеп сыҡты.* З. Ураҡсин.

2. *Ҡайҙалыр* барып сығыу, күренеү. □ Прийти, появиться, оказаться. ■ *Егет ауыр йөк менән килеп сыҡҡан был яҡҡа, артынан шаҡтай ҙур һәм ҡара шәүләһе һуҙылған икән уның.* К. Мәргән. *Бына бөгөн станцияла эш юҡлыҡтан аптырап йөрөгән Әмилә йәнә карап янына килеп сыҡты.* Н. Мусин. *Бына бер мәл урман ауыҙынан ашҡынып бүре өйөрө килеп сыға.* Г. Яҡупова.

КИЛЕҺАП (килеһабы) *и. диал. ҡар.* **төйгөс.** ■ *[Бай:] Улым, алтын тау бар икән. Шул тауҙа алтын киле менән алтын килеһап ята икән, алып ҡайтып бир әле, — ти.* Әкиәттән.

КИЛЕШ I (Р.: падеж; И.: case; Т.: hal) *и. лингв.*

Исемдәрҙең, исемләшкән һүҙҙәрҙең башҡа һөйләм киҫәктәренә бәйләнешен күрһәткән, ялғауҙар менән билдәләнгән грамматик категория. □ Падеж. *Төп килеш. Эйәлек килеш. Төшөм килеш. Төбәү килеш. Сығанаҡ килеш. Урын-ваҡыт килеш. Килеш менән үҙгәреү. Килеш ялғауы. Исем һүҙ төркөмө алты килеш менән үҙгәрә.*

КИЛЕШ II (Р.: облик; И.: look, aspect; Т.: kılık) *и.*

Тышҡы ҡиәфәт, килбәт. □ Облик, внешний вид. ■ *Туп, пулемёттарҙан атылыу менән ҡаршыланған казактар ғәйрәтле килештәрен юғалттылар.* А. Таһиров.

КИЛЕШ III *бәйл. ҡар.* **көйө.** ■ *Съезд протоколдарында ла был һүҙҙәрем шул килеш теркәлгән.* Ә.-З. Вәлиди. *Быйыл йәй яланда үҫкән сәскәне, күпме аҡса биреп булһа ла, шул килеш ҡалдырып булмай.* Ғ. Хәйри.

КИЛЕШЕЛГӘН (Р.: согласованный; И.: agreed on(upon); Т.: mutabakat) *с.*

Килешеп ҡуйылған, һөйләшелгән, ризалыҡ бирелгән. □ Согласованный. *Килешелгән эш. Алдан килешелгән осрашыу.*

КИЛЕШЕҮ I (килеш-) *ҡ. урт. ҡар.* **килеү 25, 28.** *взаимн. от* **килеү 25, 28.** *Сыр-сыу килешеү. Алып килешеү.*

КИЛЕШЕҮ II (килеш-) [боронғо төрки *кәлиш-*] (Р.: подходить; И.: fit; become; Т.: yakışmak) *ҡ.*

1. Йәтеш булып тура килеү, буй-һынына тап килеү *(кейем йәки ҡылыҡ-хәрәкәт тураһында)*. □ Подходить, идти, быть к лицу, гармонировать. *Күлдәк килешә. Итек килешә. Бейергә кәүҙәһе килешеп тора.* ■ *Ҡәмәр әбей ҡунаҡҡа барғанда кейергә ярарлыҡ кейем-һалымдарын рәтләп, килешмәгән урындарын төҙәтеп, йыртыҡ урындарын ямап, түшелдеректәрен йыуҙырып, таҫтарҙарын таҙарта.* Ғ. Дәүләтшин. *Көмөш кенә эйәр бик килешә, менгән генә атың кир булһа.* Йырҙан. ● *Эшкә ҡулы килешә, һөйләргә теле килешә.* Мәҡәл. *Ҡатындарға сәс, ирҙәргә мыйыҡ килешә.* Мәҡәл. *Күркәмгә күмер ҡабы ла килешә.* Мәҡәл.

2. Әҙәп, тәртип йәһәтенән урынлы булыу. □ Быть уместным, соответствовать *(правилам приличия, обстановке и т. п.)*. ■ *Был урында тороу килешеп бөтмәҫ, тип, икенсе ситкәрәк барып халыҡты күҙәтә башланым.* С. Агиш. *Юҡ, юҡ, инәй, — тине Сәғиҙә, — оло кешене борсоу килешмәҫ. Ат торорлоҡ берәй малай булһа, үҙем генә китермен.* М. Тажи. *Әллә йырлай алмайым тип әйтергәме икән ағайыма? Килешмәҫ шул.* З. Биишева. ● *Атлыға тай менһә лә килешә.* Мәҡәл. *Ҡылыс ҡында килешә.* Мәҡәл. *Бейегеһе килмәгәнгә туй килешмәй.* Мәҡәл. *Тиңең менән тибешһәң дә килешә.* Мәҡәл.

3. Файҙалы булыу, ыңғай йоғонто яһау. □ Помогать, идти на пользу. *Дарыу килеште. Ял итеү килешкән.* ■ *Әлфиәгә Ирәндек буйҙары килеште. Ул таҙарып, тулыланып китте.* Ф. Әсәнов. *Һабантуй алдынан алыҫ араға йөрөп килеү килеште Һарайғырға.* Т. Ғарипова. ● *Эт эсенә һары май килешмәй.* Мәҡәл. *Бейей белмәгәнгә көй килешмәй.* Мәҡәл.

КИЛЕШЕҮ III (килеш-) (Р.: договариваться; И.: arrange things (with); agree on smth; Т.: anlaşmak) *ҡ.*

1. Кешеләр менән аңлашып уртаҡ фекергә килеү. □ Договариваться, сговариваться, уславливаться *с кем-то, о чём-то. Үҙ-ара һөйләшеп килешеү. Алдан килешеп ҡуйыу. Эште килешеп башҡарыу.* ■ *Бағымсы батша менән килешелгән һүҙҙе баш яранға еткерҙе.* З. Ураҡсин. *[Ғабдулла:] Өләсәй менән килешеү әллә ни ҡыйын булмаясаҡ. Бер һуҡраныр ҙа бер бөтөр.* М. Кәрим.

2. Һатыулашып, үҙ-ара ризалашыу. □ Сторговываться, сходиться. *Йөҙ һумға килешеү. Хаҡын алдан килешеү. Килешкән хаҡҡа һатыу.* ■ *Шулай итеп, былар килешәләр. Көтөүсе байға үҙенең төшөн бирә.* Әкиәттән.

3. Риза булыу, күнеү. □ Соглашаться, ладить с кем. *Үҙ-ара килешеп йәшәү.* ■ *Коммунист кеше етешһеҙлектәр менән килешеп йәшәмәне, бригадалағы урлыҡ, ялҡаулыҡ менән аяуһыҙ көрәште.* Р. Камал. *Эйе шул! — тип килеште дуҫы менән Хәлит.* Н. Ғәйетбай.

4. Ике аралағы дошманлыҡты бөтөрөү, ярашыу, татыулашыу, солох булдырыу. □ Мириться, прийти к согласию. *Үҙ-ара килешеү. Килешеп ҡалыу.* ■ *Ғаббас мулла тоҡомо ла, бәлки, беҙҙең кеүек ярлы-ялпы менән килешеп йәшәүҙе артыҡ күрә башлағандыр?..* З. Биишева. ● *Ас һуғышыр, туҡ килешер.* Мәҡәл.

5. Үҙ-ара аңлашып уртаҡ тел табыу. □ Найти общий язык. ■ *Ағай менән килешеп киттек. Ул, ашығыуынан тукталып, сиселеп һөйләшә башланы.* Ф. Рәхимғолова. *Тәүге иптәш — совхоз агрономы, ул съезддан ҡайта, шикелле. Бер каютала ике дуҫ кеүек, һүҙ менән дә бик тиҙ килештек.* Ғ. Сәләм.

КИЛЕШЕҮ IV (Р.: договор; И.: treaty; Т.: anlaşma) *и.*

1. Дәүләт, юридик йәки физик шәхестәрҙең үҙ-ара һөйләшеп төҙөгән рәсми йөкләмә ҡағыҙы. □ Договор *(официальный документ). Килешеүҙе өҙөү. Килешеү төҙөү. Дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам килешеүе. Халыҡ-ара килешеү. Алдан төҙөлгән килешеү. Ҡуртым килешеүе.* ■ *Совет хөкүмәте менән килешеү төҙөгәнбеҙ икән, ундай хәлдә бурыс үтәүҙән ситләшеү уйыма ла инеп сыҡманы.* Ә.-З. Вәлиди. *[Дилбәр:] Мин баштан уҡ килешеүҙе асыҡлап ҡуйғым, хаҡ-баһамды белгем килә.* Р. Камал.

2. Үҙ-ара һөйләшеп килешеү. □ Договорённость. ■ *Тәғзимә менән Тимерғәле көндөҙгө килешеү буйынса икеһе бер үк мәлдә тал сыбыҡ өйкөмөнә килде.* Н. Мусин.

КИЛЕШЕҮСӘН (Р.: сговорчивый; И.: compliant; Т.: uysal) *с.*

Үҙ фекерен яҡлай алмаған, төрлө һүҙгә, тәҡдимгә килешеп, ризалыҡ менән ҡараусан. □ Сговорчивый, уступчивый. *Килешеүсән әҙәм. Килешеүсән тауыш.* ■ *[Закиров:] Беҙҙең өсөн йыш ҡына, номенклатураға инеп, күп тапҡыр эште бөлдөргән, урындан урынға күсереп йөрөтөлгән, мамыҡ кеүек йомшаҡ, һәр тарафта килешеүсән әҙәм ҡиммәтлерәк.* А. Абдуллин.

КИЛЕШЕҮСӘНЛЕК (килешеүсәнлеге) (Р.: сговорчивость; И.: compliancy, tractability; Т.: uyuşkanlık) *и.*

Төрлө яйға, һүҙгә, тәҡдимгә килешеп, ризалыҡ менән ҡараусанлыҡ. □ Сговорчивость, уступчивость. ■ *[Вәләйхә әбей], килененә килешеүсәнлек менән йылмайып ҡарап: «Килен ҡайнә боҫҡағынан ярала», — тип ҡуйҙы.* З. Биишева.

КИЛЕШ-КИЛБӘТ (Р.: облик; И.: look, aspect; Т.: kılık) *и. йыйн.*

Тышҡы ҡиәфәт, төҫ-баш. □ Облик, внешний вид. *Матур килеш-килбәт.* ■ *Ҡайнашыу, ығы-зығы. Йөҙҙәр бойоҡ, килеш-килбәт нисектер таушалған.* Ғ. Ғүмәр. *Әкрәм Хөббі Абитовтың йөҙөндә, килеш-килбәтендә ялағайлыҡ күрҙе.* А. Таһиров.

КИЛЕШЛЕ (Р.: подходящий; И.: befitting; Т.: uygun) *с.*

1. Килбәткә, ҡиәфәткә тап килгән, йәтешле, килешеп торған. □ Подходящий, гармонирующий *(по цвету, по виду и т. п.). Килешле салбар. Килешле итек. Килешле тегелгән күлдәк.* ■ *Малайҙың күҙгә пальтоһы шаҡтай иҫкергән, башындағы кепкаһы ла бәләкәс күренә, әммә бик бөхтә, үҙенә килешле.* Ә. Хәмәтдинова. *Баһау урта буйлы, төҫкә килешле, еңел кәүҙәле, яғымлы һүҙле кеше ине.* Картотека фондынан. *Ысыҡтай саф күҙ йәштәре атылып сыҡты ла Зифаның килешле неСкә танауының түбәнән түбәнгә ҡарай тәгәрләне.* Н. Мусин.

2. Йәтеш булып оҡшап торған *(ҡылыҡ, хәрәкәттәргә ҡарата).* □ Ладный. *Атлап китеүҙәре килешле. Килешле йылмайыу. Килешле хәрәкәттәр яһау.* ■ *Мөслим бейеп китте. Уның хәрәкәттәре бик етеҙ һәм килешле.* Ғ. Лоҡманов. *[Гөлбаныуҙың] һәр хәрәкәте килешле булған кеүек, өйөндә лә бөтә нәмә ыҡсым, урынлы ине бит уның.* Т. Ғарипова.

3. Урын-еренә лайыҡлы, тура килеп торған; урынлы, яраҡлы. □ Уместный, подходящий, соответствующий, приличный. *Килешле вазифа. Килешле исем.* ■ *Ҡайҙа йөрөйһөң? Нимә бында?.. — Мастер шофёрын әрләргә итҡәйне лә, килешле һүҙ таба алманы.* Р. Солтангәрәев. ● *Өлөшлө ҡул килешле.* Мәҡәл.

КИЛЕШЛӘЙ (Р.: попутно; И.: in passing; Т.: yol üzere) *р.*

Юл ыңғайында, ҡайҙалыр барышлай. □ Попутно, по пути. *Килешләй инеп сығыу.* ■ *Бер көндө һауынсылар, фермаға киске эшкә килешләй, әҙерәк йылынып сығыу ниәте менән малсылар йортона ингәйнеләр.* Ф. Әсәнов. *Сәрбиназ менән Азат армиянан ҡайтып килешләй осраштылар.* Т. Ғарипова.

КИЛЕШМӘҮСӘН (Р.: непримиримый; И.: irreconcilable; Т.: uzlaşmaz, barışmaz) *с.*

Үҙ фекерендә тороусан, риза булмаған. □ Непримиримый, несговорчивый. *Килешмәүсән булыу. Килешмәүсән ҡарашлы.* ■ *Ғәбит менән Сәғитов араһындағы килешмәүсән ҡаршылыҡ әҙмә-әҙлекле, баҫҡыс-баҫҡыс үҫтерелә килә.* Г. Гәрәева.

КИЛЕШМӘҮСӘНЛЕК (килешмәүсәнлеге) (Р.: непримиримость; И.: irreconcilability; Т.: uzlaşmazlık) *и.*

Төрлө яйға, һүҙгә, тәҡдимгә килешмәү, риза булмау. □ Непримиримость, несговорчивость. *Килешмәүсәнлек күрһәтеү.* ■ *Ике туған араһындағы килешмәүсәнлек, хатта дошманлыҡҡа яҡын насар мөнәсәбәттәр бер ваҡыт аҙаҡ сиккә килеп етте.* А. Карнай.

КИЛЕШТЕРЕҮ I (килештер-) (Р.: делать *что-л.* умело; И.: make skil(l)fully; Т.: iyi yapmak) *к.*

1. Килбәткә, ҡиәфәткә йәки ҡылыҡ-хәрәкәткә тап килтереү; килешле итеү. □ Делать *что-л.* умело, хорошо. *Портретты килештереп эшләү. Килештереп кейеү. Килештереп тегеү. Килештереп тегелгән костюм. Бейеүҙе килештереп башҡарыу.* ■ *Азамат ни тип һүҙ башларға ла белмәй, тик һиҙҙермәй генә күршеһенә ҡарап ала: саф алһыу йөҙ, килештереп таралған ҡара сәс, балаларҙыҡы*

шикелле бүлтәйеп торған ирен һәм эскерһеҙ күҙҙәр был ҡыҙға бер сихри матурлыҡ бирә. Р. Солтангәрәев. *Ярлы нәҫелдән булһа ни, хәлле йортҡа килен итеп төшөргәс, нисек тә килештереп, байбисә булып йөрөр ине әле Айһылыу.* Ә. Хәкимов.

2. *Кем* йәки *нимәнеңдер* ҡылығын оҡшатып, оҫта итеп ҡабатлау. □ Умело подражать *кому-то. Әтәс булып килештереп ҡысҡырыу. Олатаһы булып килештереп атлай.*

3. Юҡлыҡ формаһында әҙәп, тәртипкә ярашлы, урынлы тип тапмау; оҡшатмауҙы белдерә. □ В отрицательной форме выражает неуместность, неодобрение. ■ *Гөлйөҙөм Садрисламды үҙ өйҙәренә тура алып барыуҙы килештермәне.* Ф. Иҫәнғолов. *Шофёр юлда йөрөгәндә бик һөйләшергә яратыусан кеше булһа ла, башҡаса төпсөнөп тороуҙы нисектер килештермәне.* Ф. Әсәнов. *Тиҫтерҙәре хәрби хеҙмәткә алынғас, үҫмерлектән сығып ҡына килгән сөрсөктәр араһында йөрөүҙе килештермәне Ирназар.* Ә. Хәкимов.

4. *мыҫҡ.* Берәй эш башҡарған булып ҡыланыу, оҡшатҡан булыу. □ Выражает отношение унижения, неодобрения *к какому-л.* действию. ■ *Күршем Ибраһимды ғына алайыҡ. Эшем әйәһе. Иртәнсәк китә, кис ҡайтҡан була. Килештерә.* Картотека фондынан. *«Килештергәнһең инде, шәп кеше», — тине ҡатыны, аяу һәм асыу аралаш көйөнөп.* Б. Бикбай. *«Ну килештерә был — йылан аяғы ҡырҡҡан...», — тип уйлап алды Арынбаҫаров.* Д. Бүләков.

КИЛЕШТЕРЕҮ II (килештер-) (Р.: мирить; И.: reconcile; Т.: barıştırmak) *ҡ.*

Үҙ-ара яраштырыу, татыулаштырыу. □ Мирить, примирить. *Килештерергә тырышыу.* ■ *Айбулаттың Ныязғол менән яңынан ҡатнашыуы ана шулай башланды. Тәүҙә ике араны Мәғфүрә килештереп йөрөнө, шунан Тимерғәле ҡарт килде.* Һ. Дәүләтшина. ● *Фәҡирлек һуғыштырһа, байлыҡ килештерер.* Мәҡәл.

КИЛЕШҺЕҘ (Р.: нескладный; И.: awkward, clumsy; Т.: biçimsiz) *с.*

1. Килбәткә, ҡиәфәткә, ҡылыҡ-хәрәкәткә тура килмәгән, килешмәгән. □ Нескладный, несоразмерный, неуклюжий; несуразный. *Килешһеҙ яулыҡ. Килешһеҙ костюм. Килешһеҙ хәрәкәт. Килешһеҙ аҙым.* ■ *Хисбулла мәҙрәсәнән тап-таҡыр итеп ҡырылған баш, килешһеҙ оҙон елән, килбәтһеҙ суфый ҡыланышынан башҡа бер нәмә лә алып сыҡманы.* З. Биишева. *Яратмаған эш — килешһеҙ тегелгән күлдәк менән бер ул.* Яр. Вәлиев. *Собой, килешһеҙ хәрәкәттәр яһап, әллә тороп баҫырға .. маташты.* Н. Мусин.

2. Йәмғиәттә ҡабул ителмәгән, килешле булмаған; урынһыҙ. □ Неуместный, неподходящий. *Килешһеҙ иҫкәртеү. Килешһеҙ көлөп ебәреү.* ■ *Таңһылыуҙың килешһеҙерәк ҡылығы председателде тамам сығырынан сығарҙы.* Д. Бүләков. *Хәҙерге минутта һәр бер һүҙ артыҡ һәм килешһеҙ.* Д. Юлтый.

КИЛКАБЫҘ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡырғыҙ ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-киргизов.

КИЛКЕ (Р.: раз; И.: time(s); Т.: kez) *р.*

Һан менән ҡулланылып эштең күпме ҡабатланғанын белдерә; тапҡыр, ҡабат. □ Раз. *Өс килке һыуға барҙым. Дүрт килке сәй ҡайнатып алыу.*

КИЛКЕЙ *и. диал. ҡар.* **селбәрә.**

КИЛКЕ-КИЛКЕ (Р.: время от времени; И.: on and off; Т.: bazen) *р.*

Ваҡыты-ваҡыты менән, ваҡыт-ваҡыт. □ Время от времени, временами. *Килке-килке ел иҫә.* ■ *Йөрәгемде килке-килке урталға бүлгән ул шом бик оҙаҡ йылдар буйынса мине ташлап китмәйәсәк.* М. Кәрим. *Һултан йылғаһының буйына сыбайлап үҫкән ҡайынлыҡтар буран ыңғайына серәнеп ялҡауланһалар ҙа, килке-килке ойоҡһотоп сапҡан ел уларҙы сайҡай.* Т. Хәйбуллин. *Төньяҡтан килке-килке һалҡын ел иҫте.* З. Биишева.

КИЛКЕМ *и. ҡар.* **килке.**

КИЛЛЕ-КИТТЕ *с. диал. ҡар.* **аумаҡай.**

КИЛМЕШӘК I (килмешәге) (Р.: пришелец; И.: newcomer; Т.: yabancı) *и.*

Ситтән килгән, сит ырыу кешеһе, сит яҡ кеше. □ Пришелец, пришлый. ■ *Йәмилә Тирәкле кешеһе түгел, урман яғынан килен*

булып төшкән, шуға ла Хаммат уны «килмешәк» тип кәмһетеп маташа. Р. Солтангәрәев. *Мифтахетдиндың ололарҙан ишетеп белеүенсә, олатаһы кеүек аҫаба башҡорттарҙан башҡа, Туҡһанбай ауылында ситтән күсеп килгән килмешәктәр ҙә бар.* Я. Хамматов. *Инә бүре көсөгөнөң береһенең башына үҙе етте, ҡалған икәүһе ана шул килмешәктәр арҡаһында һәләк булды.* Т. Ғарипова. ● *Китә белмәҫ килмешәк.* Мәҡәл.

КИЛМЕШӘК II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-тунгаурцев.

КИЛМӨХӘММӘТ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-табынцев.

КИЛМӘКӘЙ *с. диал. ҡар.* **ыңғай.**

КИЛО [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* 'мең'] *и. һөйл. ҡар.* **килограмм.** *Бер кило алма. Ун кило шәкәр.* ■ *Бәрән һарыктың ни ҡоро ите күп булһа ла, ун кило самаһылыр, — тине Әхмәҙиә иҫе китмәй генә.* Р. Солтангәрәев. *[Сергей:] Аҙна араһында мин [капитанға] кәмендә биш-алты кило балыҡ алып ҡайтырға тейешмен.* Ә. Хәкимов.

КИЛОАМПЕР [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* 'мең' + фр. *Ampère* 'француз физигы А. М. Ампер фамилияһынан'] (Р.: килоампер; И.: kiloampere; Т.: kiloamper) *и. физ.*

Электр тогының көсөн үлсәү берәмеге *(бер килоампер 1000 ампераға тигеҙ).* □ Килоампер.

КИЛОБАЙТ [рус. < фр. *kilo* + ингл. *byte* (Binary Term)] (Р.: килобайт; И.: kilobyte; Т.: kilobayt) *и. махс.*

Мәғлүмәт миҡдарын үлсәү берәмеге *(бер килобайт 1024 байтҡа тигеҙ).* □ Килобайт. *Йөҙ килобайттан торған текст мәғлүмәте.*

КИЛОВАТТ [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* 'мең' + ингл. *Watt* 'инглиз физигы Дж. Уатт фамилияһынан'] (Р.: киловатт; И.: kilowatt; Т.: kilovat) *и. физ.*

Электр тогының ҡеүәтен үлсәү берәмеге *(бер киловатт 1000 ваттҡа тигеҙ).* □ Киловатт. ■ *Төҙөләсәк гидроэлектр станцияһының ҡеүәте ун ике мең киловатт буласаҡ.* Картотека фондынан.

КИЛОВАТТ-СӘҒӘТ (Р.: киловатт-час; И.: kilowatt-hour; Т.: kilovat saat) *и.*

Бер киловатлыҡ электр тогының бер сәғәтлек эшенә тигеҙ булған энергия үлсәү берәмеге. □ Киловатт-час. ■ *Яңы йылдан газ плиталәре булған ҡала фатирҙарында йәшәүселәр ҡулланылған 1 киловатт-сәғәт энергия өсөн хаҡты күберәк түләйәсәк.* «Башҡортостан», 20 ғинуар 2010.

КИЛОВОЛЬТ [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* 'мең' + ит. *Volta* 'итальян физигы А. Вольта фамилияһынан'] (Р.: киловольт; И.: kilovolt; Т.: kilovolt) *и. физ.*

Электр тогының көсөргәнешен үлсәү берәмеге *(бер киловольт 1000 вольтҡа тигеҙ).* □ Киловольт. ■ *Оҙонлоғо бер мең километрға, ә көсөргәнеше һигеҙ йөҙ киловольтҡа еткән электр тапшырыу линиялары башҡа бер генә илдә лә юҡ.* Картотека фондынан.

КИЛОГЕРЦ [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* 'мең' + нем. *Hertz* 'немец физигы Г. Герц фамилияһынан'] (Р.: килогерц; И.: kiloherz, kilocycle; Т.: kilohertz) *и. физ.*

Тирбәлеш йышлығын үлсәү берәмеге *(бер килогерц 1000 герцҡа тигеҙ).* □ Килогерц. ■ *Ун алты герцтан егерме ике килогерц араһындағы тирбәлеш тауыш тирбәлеше тип атала.* «Йәшлек», 15 май 2009.

КИЛОГРАМЛАП (Р.: килограммами; И.: do smth by kiloes; Т.: kilogram ile) *р.*

Килограмға һалып. □ Килограммами. *Килограмлап һатыу. Килограмлап үлсәү. Килограмлап һатып алыу. Бишәр килограмлап ташыу.* ■ *Судноларҙа һаҡлыҡ бактар булмау сәбәпле, һәр йөҙ сәғәт эш һайын двигателдәрҙә иҫкергән майҙы йөҙәр килограмлап ауҙаралар ине бахыр Ағиҙелгә.* Й. Солтанов.

КИЛОГРАМЛЫ (Р.: килограммовый; И.: weighing one kilogram(me); Т.: kilolu) *с.*

Килограмға һалынған, килограмм менән үлсәүле. □ Килограммовый. *Илле килограмлы тоҡ.* ■ *[Арынбаҫаров:] Хәтерегеҙҙәме, икмәккә нисек ике мәртәбә хаҡ күтәрелде? Күптәребеҙ һиҙмәй ҙә ҡалды. Тәүҙә бер килограмлы буханкаларҙы, ҡулланыу өсөн ҙур, тигән булдыҡ, ете йөҙгә ҡалдырҙыҡ.* Д. Бүләков.

КИЛОГРАММ [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* ‘мең’ + фр. *gramme*] (Р.: килограмм; И.: kilogram(me); Т.: kilo, kilogram) *и.*

Ауырлыҡ үлсәү берәмеге *(бер килограмм 1000 грамға тигеҙ).* □ Килограмм. *Бер килограмм алма. Биш килограмм бәрәңге.* ■ *Пётр Иванович һораша, Марфуша Вознесен рудниктарында ниндәй артелдәр эшләүен, бер тонна руданан ҡасан, күпме килограмм алтын йыуыуҙарын һөйләне.* А. Таһиров. *Эш былай була. Әлеге ҡатын, астан шешмәкләнгән өс балаһын үлемдән һаҡлар бүтән әмәл тапмағас, бөгәсә көн колхоз келәтендә орлоҡ дарыулаған саҡта, ике килограмм бойҙай урлап тотола.* Ә. Хәкимов.

КИЛОГРАММ-МОЛЕКУЛА [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* ‘мең’+ *molecula* ‘ауырлыҡ’] (Р.: килограмм-молекула; И.: kilogram-molecule; Т.: kilogram molekül) *и. хим.*

Матдәнең миҡдарын үлсәү берәмеге *(бер килограмм-молекула 1000 молгә тигеҙ).* □ Килограмм-молекула.

КИЛОДЖОУЛЬ [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* ‘мең’ + ингл. *Joule* ‘инглиз физигы Дж. Джоуль фамилияһынан’] (Р.: килоджоуль; И.: kilojoule; Т.: kilojul) *и. физ.*

Энергияны үлсәү берәмеге *(бер килоджоуль 1000 джоулгә тигеҙ).* □ Килоджоуль. *Килоджоуль менән үлсәү. Ике килоджоуль энергия.*

КИЛОКАЛОРИЯ [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* ‘мең’ + лат. *calor* ‘йылылыҡ’] (Р.: килокалория; И.: kilocalorie; Т.: kilokalori) *и.*

Йылылыҡ үлсәү берәмеге *(1 кг саф һыуҙың температураһын Цельсий буйынса 19,5 градустан 20,5 градуска тиклем күтәреү өсөн талап ителгән йылылыҡ миҡдары).* □ Килокалория. *Килокалориялар һанау. Майлы аҙыҡта килокалориялар күп.*

КИЛОЛАП *р. ҡар.* **килограмлап.**

КИЛОЛЫ *с. ҡар.* **килограмлы.**

КИЛОМЕТР [рус. < гр. *chilioi* ‘мең’ + *metpon* ‘күләм, үлсәм’] (Р.: километр; И.: kilometre; Т.: kilometre) *и.*

Алыҫлыҡ үлсәү берәмеге *(1000 метрға тиң).* □ Километр. ■ *Насос ултыртып, бер километр торба һуҙыр өсөн ниндәй проект кәрәк? — Амантаев блокнотын сығарҙы ла һыҙа башланы.* Р. Солтангәрәев. *[Хәмитйән — Мостафаға:] Мин бынан алтмыш-етмеш километр ерҙә генә хеҙмәт итәм.* М. Кәрим.

КИЛОМЕТРАЖ [рус. < фр. *kilomètrage*] (Р.: километраж; И.: distance in kilometres; Т.: kilometrelik) *и.*

Километрҙар менән үлсәнә торған ара. □ Километраж. *Юл километражы. Спидометрҙан километражды яҙып алыу. Аҙ километраж үткән машина.*

КИЛОМЕТРЛАУ (километрла-) (Р.: измерять километрами; И.: measure by kilometres; Т.: kilometre ile ölçmek) *ҡ.*

Километрға һалыу. □ Измерять километрами, по километрам. *Ун километрлап юл үтеү. Биш километрлап ер ҡалды. Араларын километрлап бүлеү.* ■ *Тар юлда үҙе лә шунан шөрләберәк килә ине Ғилман. Шулай ҙа сәме еңде, рулде Нинаға биргеһе килмәне. Хәҙер бесәнселәр ҡыуышына бер километрлап ҡына ҡала бит.* Н. Мусин. *Ауылға 20—25 километрлап ер ҡалғас, машина юлда хасил булған бысраҡты йырып сыға алмаҫ булды һәм бөтә тәгәрмәстәренә тиклем һаҙлыҡҡа инеп ултырҙы.* Б. Дим.

КИЛОМЕТРЛЫ (Р.: километровый; И.: kilometre long; Т.: kilometre) *с.*

Километрға тин. □ Километровый. *Бер километрлы ара.*

КИЛОМЕТРЛЫҠ (километрлығы) (Р.: достаточный на километр; И.: kilometre; Т.: kilometrelik) *и.*

Билдәле бер километр арауығы. □ Достаточный на километр, ... километров. ■ *Лагерҙан өс-дүрт километрлыҡ урында Каменең һыуы буйында бер утар бар.* А. Таһиров.

КИЛОПАРСЕК [рус. < фр. *kilo* < гр. *chilloi* ‘мең’ + гр. *parallaxis* ‘тайпылыу’ +

сек(унд)] (Р.: килопарсек; И.: kiloparsek; Т.: kiloparsek) *и. физ.*

Йыһан киңлеген, йондоҙҙар араһын үлсәү берәмеге *(бер килопарсек 1000 парсекка тиң).* □ Килопарсек. *Ҡояш менән Галактикабыҙ үҙәге араһы 8 килопарсекка тиң.*

КИЛҪАБЫ *и. диал. ҡар.* **килеһап.**

КИЛТЕРЕЛЕҮ (килтерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **килтереү.** *страд. от* **килтереү.** *Килтерелгән миҫал. Килтерелгән аш.* ■ *Иҫәнлек-һаулыҡ һорашылды, ҡул йыуылды, бишбармаҡ килтерелде.* Т. Йәнәби. *Өй эҫеп китмәһен өсөн ишек-тәҙрәләр асып елләтелде. Бөтә нәмә рәткә килтерелде.* С. Агиш. *Урмансылар тарафынан килтерелгән бурсаларҙы ҡабул итеү өсөн, Вахиттың ағаһы – Ғарифтың ҙур улы Ғәли сыҡты.* Г. Хәйри. *Аҫҡа төшкәс, Сәмәрә Минһажева әле килтерелгән ауырыуҙың тарихына күҙ һалды: «Ҡыҙрасов Батыр Заһир улы».* Т. Ғарипова.

КИЛТЕРЕҮ (килтер-) [боронғо төрки *кәлтүр-; кәлүр-*] (Р.: приносить; И.: bring; Т.: getirmek) *ҡ.*

1. Тотоп, күтәреп, һөйрәп йәки *нимәгәлер* һалып алып килеү. □ Приносить, подносить; привозить, подвозить. // Принос, подношение; привоз, подвоз. *Арба менән килтереү. Күтәреп килтереү. Һөйрәп килтереү. Һыу килтереү. Йөк килтереү. Машина менән килтереү. Килтереп ауҙарыу. Аш килтереү. Сәй килтереү.* ■ *Яландағы ырҙындан ике йөк иген килтерҙеләр.* Б. Бикбай. *[Әмирханов] .. миңә мөрәжәғәт итте. «Йә, сәй килтерҙеңме?»* С. Агиш. *Ҡара ҡумтаны Батырҙарҙың өйҙәре янындағы гараж артына килтереп ҡуйҙылар.* Н. Ғәйетбаев. *Баҫыуҙа бәрәңге өтөү кәрәкмәне, әҙер аш килтереп ашаттылар.* Д. Бүләков. *Арыҫланғәләне комендант бүлмәһенә килтереп ташланылар.* А. Таһиров.

2. Етәкләп, эйәртеп, саҡырып һ. б. юл менән бергә алып килеү. □ Приводить. *Баланы етәкләп килтереү. Ҡаҙҙы ҡыуып килтереү. Иптәште эйәртеп килтереү.* ■ *Тиҙ генә Хәйернисаны саҡырып килтерҙеләр.* Б. Бикбай. *Эльвира Йәнғәләне үҙ өҫтәле янына етәкләп килтереп ултыртты.* Ф. Иҫәнғолов. *Нуғайҙар етәкләп килтергән арыҡ алашаға [Һабрау] әйләнеп тә ҡараманы, иҫке еләндәрен алманы.* Ә. Хәкимов. *[Маруся – Даша апайға:] Бына һеҙгә бер ҡунаҡ килтерҙем, – тине.* Һ. Дәүләтшина. ● *Өрә белмәгән эт өйөнә ҡунаҡ килтерер.* Мәҡәл. *Илсе итеп эт ебәрһәң, илеңә яу килтерер.* Мәҡәл. *Яман аға ил көтһә, илгә дошман килтерер.* Мәҡәл. *Баш көн килде – байыһ алып китте бисәмде, буш көн килде – байым килтереп ҡуйҙы бисәмде.* Мәҡәл. *Бүрене ҡыҫырыҡлап килтерһәң, өҫкә ташланыр.* Әйтем. *Ҡарғанан ҡарауыл ҡуйһаң, өҫтөңә яу килтерер.* Мәҡәл.

3. Ағымы менән алып килеү *(һауа, һыу, һ. б. ҡарата).* □ Приносить, наносить *(движением воздуха, воды, ветром и т. п.). Ел ямғыр килтерҙе. Тулҡын кәмәне икенсе ярға килтергән.* ■ *Был кистә дала еле ҡар ҙа килтерҙе.* З. Ураҡсин. *Ҡаршынан иҫкән еңелсә ел ағымы көйөк еҫен килтереп таратты.* Ә. Хәкимов.

4. *Нимәгәлер* яҡын алып килеү, яҡынайтыу. □ Приподнести, приблизить. *Бармаҡты танауға килтереү. Күҙгә килтереү. Шәм яҡтыһына килтереү.* ■ *Ҡулды эскә килтерәм. Ул нимә менәндер тығыҙ итеп бәйләнгән.* С. Агиш. *Малай ҡара йоҙроғон күҙенә килтерә, керпектәрен ыуалап, бер аҙ өндәшмәй тора.* Й. Солтанов. *Малай уны [бинокльде] күҙенә килтерҙе лә икенсе осон ҡалаға табан йүнәлтте.* Н. Ғәйетбаев.

5. Алып килеп биреү, тапшырыу. □ Принести, передать. *Саҡырыу килтереү. Баһалама килтереү. Телеграмма килтереү. Күстәнәс килтереү.* ■ *Яңы яугирҙы әле ойошоп етмәгән һәм шуға күрә айырым тирмәһе лә булмаған тиҫтәгә килтереп тапшырҙылар.* К. Мәргән. *Хат килтергән дәрүиш сығып киткәйне инде.* Ә. Хәкимов. ● *Эшлекһеҙгә эш бирһәң, ғариза килтерер.* Мәҡәл.

6. *күсм.* Һөйләп, әйтеп ишеттереү, еткереү. □ Принести, передать устно. *Дуҫтан сәләм килтереү. Ҡыуанысло хәбәр килтереү. Ғәйбәт килтереү. Баһалама килтереү.* ■ *Сәйетгәрәй Алкиндың хоҡуҡсы һәм офицер улы Ильяс Алкин да .. атаһынан миңә сәләм килтерәсәк.* Ә.-З. Вәлиди. *Римаға йәш*

тулғанда, әсәһенә һуғыштан атаһының үле хәбәрен килтерҙеләр. Ф. Әсәнов.

7. Юҡлыҡ формаһында: килергә, яҡынлашырға мөмкинлекте бирмәү; ебәрмәү. □ В отрицательной форме выражает запрет на приближение. ■ *Ҡорбанов башҡаларҙы станокка яҡын да килтермәй.* Б. Бикбай. *Быны тап ошо ваҡыттарҙа Мәүлетов .. үҙ волоҫына дошмандарҙы яҡын килтермәү менән мәшғүл ине.* Ғ. Хәйри. *Беҙ, Сидоренко менән, .. немецтарҙы яҡын килтермәйенсә ут асмаҫҡа ҡарар биргәйнек.* Б. Дим.

8. Килем, файҙа биреү. □ Приносить пользу, давать доход. *Килем килтереү. Баҡса файҙа килтерә.* ■ *Бер генә нәмә арыған саҡтарҙа рәхәтлек бирә: ул — халыҡҡа ниндәй ҙә булһа файҙа килтереүеңде тойоу.* Д. Бүләков. *[Миңлегәленең] тыуған иле өсөн файҙа килтерергә ынтылыуына тәүге саф мөхәббәт рухландыра.* Я. Хамматов. ● *Ир килтерә белһен, ҡатын еткерә белһен.* Мәҡәл.

9. Фекерҙе иҫбатлау, нығытыу маҡсатында әйтеү; күрһәтеү. □ Приводить, представлять *(аргументы, факты, доказательства и т. п.) Дәлилдәр килтереп һөйләү. Сығышты миҫалдар килтереп йәнләндереү. Факттар килтереп иҫбатлау.* ■ *Сәмиғулла Ғилаждың .. вайым менән әйткән һүҙенә үҙен аҡлау өсөн дәлил килтерергә теләмәне.* Ж. Кейекбаев. *Бығаса уйында ла, күңелендә лә булмаған, әҙәпкә һыймаҫлыҡ сәйер бер дәлил килтерҙе ул [Байназаров].* М. Кәрим.

10. Донъяға тыуҙырыу. □ Рожать, приносить плод. *Игеҙәктәр килтергән ҡатын. Бейә ҡолон килтерҙе.* ■ *Ошо яҙҙа ике кәзәләре биш бәрәс килтерҙе, өс йылдан һуң һыйырға ла тейенеп киттеләр.* М. Кәрим. *Яҙын кәртәлә саптар бер ҡолон килтерә.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Ҡотло ҡунаҡ өйгә килһә, ҡуйың ике бәрәс килтерер.* Мәҡәл.

11. *күсм.* Һөҙөмтә рәүешендә нимәнелер булдырыу, тыуҙырыу. □ Реализовать *что-то. Ҡыш һалҡын көндәр килтерҙе.* ■ *Яҙ матурлығы ла, тәбиғәт зауығы ла, яҙ килтергән шатлыҡ, ҡыуаныстың кешеләр йөҙөндә сағылышы ла уның күҙенә күренмәне.* М. Тажи. ● *Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй.* Мәҡәл.

12. *Ниндәйҙер* хәлгә дусар итеү, килтереү. □ Причинять, служить причиной *чего-л. Шатлыҡ килтереү. Ҡайғы килтереү. Бәхет килтереү. Муллыҡ килтереү.* ■ *Йәнә, ул дәрүиш ҡотолоп китһә, үҙен тотҡон иткән, тукмаған Байгилде арҡаһында бөтә ҡыпсаҡ иленә ҡаза килтерер ине.* Ә. Хәкимов. *Ер өҫтөндәге йәнлектәр генә түгел, ер аҫтындағы сысҡандар ҙа уға зыян килтерер кеүек тойолдо.* Т. Ғарипова.

13. Төбәү килештәге исемгә эйәреп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәне ғәмәлдә булдырыуҙы аңлата. □ В сочетании с существительными в дательном падеже означает «приводить *к чему-л, к какому-л.* состоянию». *Иҫкә килтереү. Шартына килтереү. Ыҡҡа килтереү. Фаразға килтереү. Һығымтаға килтереү. Шундай фекергә килтереү. Үткәндәрҙе күҙ алдына килтереү. Бер ҡалыпҡа килтереү.* ■ *Булат улай ҙа һөйләп ҡараны, былай ҙа, ләкин ипкә килтерә алманы бисәһен.* Б. Бикбай. *Сәлмән ағайҙың көлгәнен күҙ алдына килтерәм.* С. Агиш. *Мәжбүр итеүҙе башҡа килтерергә лә ярамай.* Ә. Хәкимов. *Күсемде яйлап ыҡҡа килтерҙе, үҙенә ауҙарҙы Айҙар.* Ғ. Хөсәйенов. *Аңлай иркә ҡыҙыҡай, Шәрғиә булмаһа, кем унда шартына килтереп табын ярашһырыр?* Ә. Хәкимов.

14. Төп йәки төшөм килешендәге исемгә эйәреп, *ниндәйҙер* уй-тойғоно, теләкте уятҡанды аңлата. □ В сочетании с некоторыми существительными в основном и винительном падеже означает «вызвать, породить, явиться причиной *чего». Әйткән һүҙҙәре асыуҙы килтерә. Ҡоҫҡоно килтереү. Киске тыныслыҡ йоҡоно килтерә.* ■ *Нәкиәнең шулай бер туҡтамай көлөүе Шәмсиҙең асыуын килтерҙе.* Ғ. Хәйри. *Илап ебәреп, ҡәйнәһенең асыуын килтереүҙән ҡурҡҡан Сәбилә аҡланырға, ғәфү үтенергә тырышты.* Т. Ғарипова.

15. Оҡшатыу һүҙе йәки ҡушма рәүеш менән төрлө тауыш, хәрәкәт, *ниндәйҙер* хәл-күренеште тыуҙырғанды аңлата. □ Образует сложные глаголы со звукоподражательными словами или наречиями. *Туптар окоптарҙы селпәрәмә килтерә. Донъяның аҫтын-өҫкә килтереү.* ■ *Йәләлетдиндең эйәр-*

сендәре, баш ҡаланың аҫтын-өҫкә килтереп, шағирҙы эҙләргә, кемлеген асыҡларға кереште. Ә. Хәкимов. *Һуғыш беҙҙең хыялдарҙы селпәрәмә килтерҙе.* Ш. Янбаев. *Ҡулға-ҡул, аҙымға-аҙым тура килтереп .. тигеҙ сафта барған курсанттарҙың йөҙө ҡыйыу, етди.* Ә. Хәкимов.

16. Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып, ҡапыллыҡ, көтөлмәгәнлек мәғәнәһен бирә. □ С формой деепричастия на *-п* выступает в роли вспомогательного глагола и придаёт словосочетанию оттенок внезапности, неожиданности. *Таяҡ менән килтереп һуғыу. Килтереп сығарыу.* ■ *Бабайым был юлы ярты аршынлы бәрҙене килтереп сығарҙы.* Н. Мусин. *Ул картузының эске ҡатынан үҙенең ҡубәләкле ҡармағын килтереп сығарҙы.* Ж. Кейекбаев.

КИЛТЕРЕШЕҮ (килтереш-) *ҡ. урт. ҡар.* **килтереү 1, 2.** *взаимн. от* **килтереү 1, 2.** *Бесән килтерешеү. Аттарҙы килтерешеү.* ■ *Ҡадир Мостафин .. МТС машиналарын үҙе килтерешә.* Б. Бикбай. *Салауат менән Хөсәйенгә аттарҙы өйөрҙән үҙе барып килтерешә.* Т. Ғарипова. *Әлеге ике тоҡ тирене лә малайы килтерешкән булып сыкты.* Ш. Бикҡолов.

КИЛТЕРТЕҮ (килтерт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **килтереү 1–15.** *понуд. от* **килтереү 1–15.** *Бесән килтертеү. Факттар килтертеү. Хәтергә килтертеү. Бер фекергә килтертеү. Асыуҙы килтертеү. Сакыртып килтертеү.* ■ *[Насирҙың] ҡаратын оло үтенес менән килтерттеләр.* З. Ураҡсин. *Хәбибназар Төркиәнән яңы сыҡҡан нәшриәтте лә килтертеп уҡый торғайны.* Ә.-З. Вәлиди. *Виктор исем өсөн генә тигәндәй берәр сынаяҡ кофе килтертте.* Ә. Хәкимов. *Башҡорт тәрәнлеге ҡырҡ таяҡ баҙ ҡаҙытҡан, әйләнәһе йөҙ таяҡ утын әҙерләткән, әллә нисә миҫкә иреткән, ыҫмала килтерткән.* Әкиәттән.

КИЛТӘ ЕП (ебе) (Р.: отрезок пряжи; И.: piece of yarn; T.: ipliğin ucu) *и.*

Һуғып бөткәс, буйлыҡтың осонан ҡырҡып алынған еп. □ Отрезок конечной части пряжи. *Килтә еп менән бәйләү. Килтә еп осо.*

КИЛЬ [рус. < гол. *kiel*] (Р.: киль; И.: keel; T.: gemi omurgası) *и.*

1. Судноның төбөн аҫҡы яҡтан беркетеп тотҡан буй бурса. □ Киль *(водного судна). Рифка киль менән ултырыу.*

2. Самолёт йәки дирижабль ҡойроғоноң руль беркетелгән өлөшө. □ Киль *(самолёта, дирижабля). Килде төҙәтеү.*

3. Англияла таш күмерҙе үлсәү берәмеге. *Бер киль 21,5 тоннаға тигеҙ. Бер килдә 21540,16 кг күмер.*

КИЛЬВАТЕР [рус. < гол. *kielwater* < *kiel* ‘киль’ + *water* ‘һыу’] (Р.: кильватер; И.: wake; T.: dümen suyu) *и. махс.*

1. Карап, кәмәнең артында ярылып ҡалған эҙ. □ Кильватер. *Арттан кильватер буйлап барыу.*

2. Тура линия буйынса бер-береһе артынан хәрәкәт иткән караблдәр сафы. □ Кильватер. *Кильватер алдында. Кильватер парады.*

КИЛЬКА [рус. < эст. < нем. *Kil* ‘тар диңгеҙ ҡултығы’] (Р.: килька; И.: sprat; T.: hamsi) *и. зоол.*

Сельдтәр ғаиләһенә ҡараған ваҡ ҡына диңгеҙ балығы. □ Килька (лат. *Clupea sprattus*). *Килька консервалау. Килька тоҙлау. Килька консерваһын һатып алыу.*

КИЛӘ-КИЛГӘНДӘН *р. диал. ҡар.* **килгәндән бирле.**

КИЛӘ-КИЛЕП (Р.: резко; И.: sharply; T.: aniden) *р.*

Ҡапыл килтереп. □ Резко, неожиданно. *Килә-килеп ҡайтарып ебәреү. Килә-килеп хәтергә төшөрөү.*

КИЛӘЛЕ-КИТӘЛЕ *р. диал. ҡар.* **килгеләп.**

КИЛӘМҺЕҘ *с. диал. ҡар.* **аяуһыҙ.** *Киләмһеҙ әҙәм. Киләмһеҙ көрәш. Киләмһеҙ булыу.*

КИЛӘҢКЕ (Р.: недержание мочи; И.: incontinence; T.: idrarını tutamama) *и. вет.*

Бейәләрҙең бәүел тота алмаған ауырыуы. □ Недержание мочи *(болезнь кобылиц). Киләңке менән ауырыу. Киләңкенән дауалау. Киләңке булыу. Киләңке тай.*

КИЛӘП (киләбе) *и. диал. ҡар.* **кәләп.** *Өс киләп. Киләпкә һалыу. Йөн киләбе.*

КИЛӘПЛӘҮ (киләплә-) *к. диал. кар.* **кәләпләү.** *Епте киләпләү. Йөндө киләпләү. Киләпләп ҡуйыу.*

КИЛӘСӘК I (Р.: будущий; И.: the future; Т.: gelecek) *с.*

Алда буласаҡ, киләһе. □ Будущий, грядущий. *Киләсәк тормош. Өмөтлө киләсәк. Киләсәк көндәр. Киләсәк быуынға үрнәк.* ■ *Үткәндәге, хәҙерге һәм киләсәк көндәрҙе күҙ алдына килтереп һөйләштеләр [ҡыҙҙар].* Һ. Дәүләтшина. *Мин һинең өсөн ғорурланам, ҡәҙерле тыуғаным! Киләсәк көндәрең гел яҡты, матур, ә хеҙмәтең һоҡланғыс емешле булһын ине.* Б. Бикбай. *Киләсәк йыл өсөн орлоҡ, алдағы көнгә аҙыҡлыҡ ҡалдырҙыҡ.* А. Таһиров.

КИЛӘСӘК II (киләсәге) (Р.: будущность; И.: future; Т.: gelecek) *и.*

1. Алда буласаҡ көн, алдағы ваҡыт. □ Будущность, будущее *(день). Киләсәкте хәстәрләү.* ■ *Уралҡайҙың аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур. Киләсәктә был ергә Хоҙай үҙе ҡыҙығыр.* Ш. Бабич. *Синыф мәнфәғәте һәм киләсәк өсөн көрәштә бөтә фиҙаҡәрлек тә аҡланмай.* А. Абдуллин. *Ошо минутта алыҫ-алыҫ Ер планетаһында [Батыр] Әмиләне юҡһына, киләсәктә осрашыу хаҡында хыяллана.* Н. Ғәйетбаев.

2. Алда буласаҡ тормош, киләһе яҙмыш, ғүмер дауамы. □ Будущность, будущее *(жизнь). Яҡты киләсәк. Тәбиғәтте киләсәккә һаҡлап ҡалдырыу.* ■ *Беҙ йәшәйбеҙ иркен илдә, яҡты беҙҙең киләсәк.* Н. Иҙелбай. *Бөгөнгөгә мылтыҡтан атһаң, киләсәк пушканан яуап ҡайтарыр, ти бит.* Д. Бүләков. *Ләкин алыҫ киләсәккә ҡарағанда бөгөнгөһө ҡиммәтерәк ине уға [Суминовка].* Ә. Хәкимов.

КИЛӘСӘК ЗАМАН (Р.: будущее время; И.: future tense; Т.: gelecek zaman) *и. грам.*

Буласаҡ эш-хәрәкәтте белдергән ҡылым категорияһы. □ Будущее время *(грамматическая категория). Киләсәк заман формаһы. Билдәһеҙ киләсәк заман. Киләсәк заман сифат ҡылым.*

КИЛӘСӘКЛЕ (Р.: имеющий светлое будущее; И.: having bright future; Т.: geleceği olan) *с.*

1. Матур киләсәге булған. □ Имеющий светлое будущее, перспективный. *Киләсәкле ауыл.* ■ *Милләт рухы — йырҙа, милләт заңы — шиғриәттә, милләт аңы — матбуғатта. Халҡыбыҙ тап шулар менән көслө һәм киләсәкле.* Х. Назар. *Бөгөнгө көндә, күреүебеҙсә, үҫеш тап шул милли үҙаң тәрбиәләнгән киләсәкле илдәрҙә бара.* М. Буракаева.

2. Өмөтлө, талантлы. □ Талантливый. *Киләсәкле йәш ғалим. Киләсәкле шағир.*

КИЛӘҺЕ (Р.: будущий; И.: future; Т.: gelecek) *с.*

Алда буласаҡ. □ Будущий, грядущий. *Киләһе байрам. Киләһе аҙна. Киләһе ай. Киләһе уҡыу йылы.* ■ *Әле бында, бөгөн генә түгел, киләһе көндәрҙә лә бик күп нәмәләрҙе үҙ башым менән генә аңлап етә алмам.* С. Агиш. *Киләһе көн бөгөнгөһөнән һис айырылмайҙыр шикелле тойолдо [Сергейға].* А. Абдуллин. *[Дәрүиш — Сәйфкә:] Киләһе быуын кешеләре һинең ғәзәл-ҡасидәләреңдән, дастандарыңдан йәндәренә дауа, күңелдәренә зауыҡ табырҙар.* Ә. Хәкимов. *Киләһе көҙгә ҡалаға уҡырға барыу фекеренә килде [Шәмси].* Ғ. Хәйри. *Ҡуҙғалаҡ күп булһа, киләһе йылдың ҡышы йылы булыр.* Һынамыш. *Беренсе сентябрҙә йылы булһа, бөтөн көҙ йылы булыр, әгәр шул көндә ел булһа, киләһе йәй ашлыҡ насар булыр.* Һынамыш.

КИЛӘҺЕ КӨН *и. диал. кар.* **иртәнән һуң.**

КИМБЕРЛИТ [рус. < ингл. *Kimberley* ‘тау исеме’ + гр. *lithos* ‘таш’] (Р.: кимберлит; И.: kimberlite; Т.: kimberlit) *и. геол.*

Алмаслы магма тоҡомо. □ Кимберлит. *Алмаслы кимберлит. Кимберлиттың минерал составы.*

КИМВАЛ [рус. < лат. *cymbălum*] (Р.: кимвал; И.: cymbal; Т.: zil) *и.*

Ике еҙ тәрилкәнән торған боронғо һуҡмалы музыка ҡоралы. □ Кимвал. *Боронғо грек кимвалы. Кимвал һуғыу.*

КИМГЕЛ-КИМГЕЛ (Р.: временами; И.: at times; Т.: zaman zaman) *р.*

Ҡайһы берҙә, ара-тирә; ваҡыт-ваҡыт. □ Временами, время от времени, урывками. *Кимгел-кимгел ел иҫеп китә. Кимгел-кимгел килеп китә. Кимгел-кимгел ауыртып ҡуя.*

КИМГӘҮ (кимгә-) *ҡ. ҡар.* **киңгәү.** *Ауыр эштән кимгәү. Оҙон юлдан кимгәү.* ■ *Ул [Гәли] балаһын аслыҡ киҫкән юлдар аша кимгәтмәйенсә ҡайтарып еткереүе .. өсөн ҡыуанды.* Й. Солтанов.

КИМДЕ-ГИМДЕ *р. диал. ҡар.* **кимгел-кимгел.** *Кимде-гимде ямғыр яуып уҙа. Кимде-гимде ел иҫеп китә. Кимде-гимде осрап ҡуя.*

КИМДЕ-КИМДЕ *р. диал. ҡар.* **кимгел-кимгел.** *Кимде-кимде ҡайтып йөрөй. Кимде-кимде алып ҡайтыу. Кимде-кимде шылтыратыу.*

КИМЕК (кимеге) [боронғо төрки *кемүр* 'кимер'] (Р.: губчатая кость; И.: cancellous bone; Т.: süngerimsi kemik) *и.*

1. Елекле һөйәктең баш-башындағы майлы көпшәк өлөшө. □ Губчатая кость. *Кимектең елеге.* ■ *Тәмәке тартмаған кеше салғандыр быны [һуғымды], кимеге лә, ите лә бик йомшаҡ.* Н. Мусин. *Руми: «Мин Ҡөрьәндең елеген һурам, кимектәрен этка атам», — ти.* Ә.-З. Вәлиди. *Һөйәк ярыһынан тәрәндәрәк беше матдә, ә уның аҫтында кимек ята.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 8, 2008. ● *Имә белһәң — имек, кимерә белһәң — кимек.* Мәҡәл.

2. *диал. ҡар.* **күшкә 1.** *Ҡайын кимеген һыҙырыу. Кимек әҙерләү.*

3. *диал. ҡар.* **кимерсәк.** *Кимек һөйәк. Ҡолаҡ кимеге.*

4. *диал. ҡар.* **лепкә.** *Йәш баланың кимеге. Кимеге ҡатмаған.*

КИМЕКЛЕ (Р.: имеющий губчатую кость; И.: having cancellous bone; Т.: süngerimsi kemikli) *с.*

Кимеге бар. □ Имеющий губчатую кость. *Кимекле һөйәк һурпаға шәп. Кимекле һөйәкте урталай сабыу.* ● *Ил икмәге — ирекле, эшләп алһаң — кимекле.* Мәҡәл.

КИМЕКЛЕ УРЫН (Р.: доходное место; И.: fat job; Т.: iyi iş yeri) *и.*

Файҙа килер урын, төшөмлө урын. □ Доходное место. *Кимекле урында эшләү. Кимекле урынға эләгеү. Кимекле урын эҙләү.*

КИМЕР I *и. диал. ҡар.* **тимрәү.** *Ҡоро кимер. Һыулы кимер. Кимер төшөү. Кимер йоғоу.*

КИМЕР II *с. диал. ҡар.* **ҡып-ҡыҙыл.** *Кимер тауар. Кимер төҫ.*

КИМЕРЕЛЕҮ (кимерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **кимереү.** *страд. от* **кимереү.** ■ *Илмырҙа, әҙәп һаҡлаусы ҡунаҡ йолаһын иҫенә төшөрөп, сынаяғын түңкәрҙе лә сит-сото кимерелгән шәкәр киҫәген дә сынаяҡ ситенә ҡуйҙы.* Я. Хамматов.

КИМЕРЕҮ (кимер-) [боронғо төрки *кәм-*] (Р.: грызть; И.: gnaw; Т.: kemirmek) *ҡ.*

1. Ҡаты нәмәне теш менән ваҡлау, ҡырыу. □ Грызть, разгрызать. *Кишер кимереү. Ағас кимереү. Печенье кимереү. Шарт-шорт кимереү. Кимереп өҙөү.* ■ *Ана, бала тәүге ауаздарҙы сығара, уйынсыҡтарға ынтыла, шарҡылдап көлә, печенье кимерә башлай.* Картотека фондынан. *Йәш айғырҙар сапсып ер тырнайҙар, кимерәләр кешнәп ҡураны.* Р. Бикбаев. *Йыллыҡ аҙыҡ-сәтләүектәрен ашап бөткән тейендәр, осло морондарын балға буяп, бөрө кимерәләр.* Ә. Чаныш. ● *Ас эт ҡойроғон туҡ эт кимергән.* Мәҡәл. *«Туйҙым» тигән кейәү туғыҙ мөсәй кимергән.* Мәҡәл. *Тешле һөйәк кимерер, тешһеҙ ашарға тилмерер.* Мәҡәл.

2. Һыу ағымының ярҙы ҡырҡыуы, тишкеләүе. □ Размыть, размывать. ■ *[Ерекле] яр башындағы ағастарҙы төбө-тамыры менән умырып алып, ҡауырһын шикелле генә ағыҙып алып китә, бөгөлдәрҙә ярҙы кимерә.* Н. Мусин. *Ярҙы һыу кимерә, тау-ташты ел-ямғыр онтай.* Ә. Хәкимов.

3. *күсм.* Йонсотоу, ыҙалатыу, ғазаплау. □ Мучить, терзать. *Йөрәкте кимереү. Эсте кимереү.* ■ *[Скважиналар, шахталар, карьерҙар] Ер-әсәнең елек майын һура, икенселәре һөйәген кимерә, өсөнсөләре терелә́й тиреһен тунай.* Л. Яҡшыбаева. *Яман хәбәр — көйә менән бер бит инде ул: эсеңә бер керҙеме, кимерә лә кимерә.* Н. Мусин.

♦ **Елкәне кимереү** үҙең эшләмәй, кемдеңдер иҫәбендә йәшәү. □ Жить за чужой счёт. ■ *Ярты юлда туҡтарғамы? Тимәк, тегеләр дәүләт елкәһен кимерә бирһенме?* Н. Ғәйетбаев.

КИМЕРЕҮСЕ (Р.: грызун; И.: rodent; Т.: kemirgen) *и.*

Алғы тештәре нык үҫешкән һәм кимереү өсөн яраҡлашҡан үлән ашаусы, имеҙеүсе йәнлек *(ҡуян, тейен, йомран, сыскан һ. б.)*. □ Грызун. *Кимереүселәр менән көрәшеү. Сыскан һымаҡ кимереүселәр. Япраҡ кимереүселәр.*

КИМЕРЕҮСЕЛӘР ТӨРКӨМӨ (Р.: отряд грызунов; И.: Rodentia; Т.: kemirgenler) *и. зоол.*

Кимереүсе хайуандарҙы берләштергән төркөм. □ Отряд грызунов (лат. *Rodentia*). *Ҡуян һәм тейен кимереүселәр төркөмөнә ҡарай.*

КИМЕРЕШЕҮ (кимереш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кимереү.** *взаимн. от* **кимереү**. *Кишер кимерешеү. Кимерешә башланылар.*

КИМЕРСӘҒАС *и. анат. диал. ҡар.* **күкрәк ауыҙы.**

КИМЕРСӘК (кимерсәге) [боронғо төрки *кәм-*] (Р.: хрящ; И.: cartilage; Т.: kemircik) *и.*

Умыртҡалы хайуандарҙа һәм кешелә һөлдәнең ҡайһы бер өлөшөн тәшкил иткән, быуындарҙы тоташтырыусы һығылмалы тығыҙ туҡыма. □ Хрящ. *Боғаҙ кимерсәге. Ҡабырға кимерсәге. Ҡолаҡ япрағы кимерсәге. Үпкә көпшәһе кимерсәге.* ■ *Остеоартрит ваҡытында быуын кимерсәктәре боҙола.* «Йүрүҙән», 23 ноябрь 2011.

КИМЕРСӘК ҠАБЫРҒА *и. анат. диал. ҡар.* **бығым.**

КИМЕРСӘК ТӨЙӨНӨ *и. анат. диал. ҡар.* **күмәгәй.** *Кимерсәк төйөнө ауыртыу.*

КИМЕРСӘК ҺӨЙӘГЕ *и. анат. диал. ҡар.* **күмәгәй.**

КИМЕРТЕҮ (кимерт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кимереү.** *понуд. от* **кимереү.** *Сыскандан кимертеү. Ағасты ҡуяндан кимертеү.* ■ *Баштың эттән кимерткәнде күрһәтермен әле һиңә, яуыз!* Я. Хамматов. ● *Икмәк юғы ямандыр — ҡаты-ҡото кимертә, ҡатын юғы ямандыр — ҡарт әбейҙе һөйҙөртә.* Мәҡәл.

КИМЕҪ *с. диал. ҡар.* **кәрәкле.** *Кимеҫ эш. Кимеҫ эш.* ■ *Хаҡ Тәғәлә бәндәләрҙе тигеҙ ҡылған, һәммәһенә бер донъяны кимеҫ ҡылған; ҡоштота ла хатта тап бар, тигән кеүек, бәғзеләрҙең нәфселәрен игеҙ ҡылған.* Р. Фәхретдинов.

КИМЕШ *и. диал. ҡар.* **етешһеҙлек.** *Эшенән кимеш табыу. Эштәге кимештәр. Кимештәрҙе бөтөрөү.*

КИМЙӘҮ (кимйә-) *ҡ. диал. ҡар.* **йонсоу.** *Ауыр эштән кимйәү. Юлдан кимйәү.*

КИМ-КИМ *р. диал. ҡар.* **килке-килке.** *Ким-ким таптар күренә.*

КИМОГРАФ [рус. < гр. *kýma* 'тулҡын' + *graph* 'яҙыу'] (Р.: кимограф; И.: kymograph; Т.: kimograf) *и. махс.*

Организмдың физиологик процестарын яҙып барыу приборы *(йөрәк тибешен, тын алыуҙы һ. б.)*. □ Кимограф. *Кимограф менән тикшереү. Тын алышты кимографҡа төшөрөү.*

КИМОНО [рус. < япон. *кимоно* 'кейем'] (Р.: кимоно; И.: kimono; Т.: kimono) *и.*

1. Япондарҙың тоташ еңле милли кейеме. □ Кимоно *(японская национальная одежда)*. *Кимоно кейеү. Кимоно һатып алыу. Кимоно тектереү.*

2. Төбө уйылмай, тотош беселгән еӊ. □ Кимоно *(особый покрой рукава женского платья)*. *Кимоно итеп тегеү. Кимоно еңле күлдәк.*

3. *спорт.* Каратэ көрәше менән шөғөлләнгәндә кейә торған спорт кейеме. □ Кимоно.

КИМТЕК *с. диал. ҡар.* **китек.** *Кимтек һауыт. Кимтек ҡалаҡ. Кимтек сынаяҡ.*

КИМТЕК-ҺҮТЕК (Р.: прорехи; И.: rents; Т.: delikler) *и. йыйн.*

Йыртылған-һүтелгән урын. □ Прорехи, дыры. *Бәләкәй генә кимтек-һүтек. Кимтек-һүтеген тегеү.*

КИМТЕЛЕҮ (кимтел-) (Р.: отламываться; И.: break off; Т.: kopmak) *ҡ.*

1. Ситтән әҙ генә уйылыу. □ Отламываться, откалываться *(небольшими кусками)*. *Стенаның һыланған балсығы урыны-урыны менән кимтелеп сыҡҡан. Кирбес кимтелгән.*

2. *күсм.* Етешһеҙгә, кәмгә әйләнеү; кәмеү. □ Стать ущербным, иметь недостаток *(чаще в отрицательной форме)*. *Эшләгәндән бер ер ҙә кимтелмәй.* ■ *Ҡыҙҙар уны [Таллыбайҙы] яратманы, әллә күңеле ҡалды кимтелеп.* З. Биишева.

КИМТЕҮ (кимте-) (Р.: отломить; И.: break off; Т.: kırmak, koparmak) *к.*

Берәй *нәмәнең* ситенән әҙ генә уйыу. □ Отломить, отколоть, отхватить часть *чего-л. Кимтеп алыу. Сабынлыкты кимтеп сабыу.* ■ *Мотаһар үҙе лә, мыйыктарын йыбырлатып, ултырған кәрәҙҙән үҙ өлөшөн кимтене.* Й. Солтанов.

КИМШЕРЕК (кимшереге) (Р.: носовой хрящ; И.: nasal cartilage; Т.: burun kemirciği) *и. анат. диал.*

Танау кимерсәге. □ Носовой хрящ.

КИМӘК (кимәге) (Р.: кимаки; И.: Kimek, Kimak; Т.: Kimekler, Yemek) *и. этн.*

Боронғо төрки телле күсмә халык *(XI быуатта кыпсактарға буйһонған).* □ Кимаки *(древний тюркоязычный народ). Кимәктәрҙең дәүере. Кимәктәрҙең буйһоноуы.*

КИМӘЛ [ғәр. كمال] (Р.: уровень; И.: level; Т.: seviye) *и.*

1. Юғарылык сиген белдергән шартлы һыҙык. □ Уровень. *Һыу кимәле. Быуа кимәле. Бил кимәленә етеү.* ■ *Тәгәрмәс юлдары ла, күпсәк кимәленә тиклем батып, койоға әйләнгән.* Т. Хәйбуллин.

2. *күсм. Кемдең* йәки *нимәнең* үҫеше күләмен, ирешелгән юғарылык дәүмәлен күрһәткән билдә. □ Уровень, степень развития, степень в развитии *чего-л. Белем кимәле. Мәҙәниәт кимәле. Фән кимәле. Юғары үҫеш кимәле. Укытыу эшен юғары кимәлдә алып барыу. Техниканың юғары үҫеш кимәле. Юғары кимәлгә ирешеү.* ■ *Нисә тел белһәң, аң-зиһен кимәлең шунса бәрәбәр юғары булыр, тигән бөйөк Әбү-Насир әл-Фараби.* Ә. Хәкимов. *Әлбиттә, ижад ителәү вакыттары төрлөсә булған һымак, аҫәрҙәрҙең эшләнеш кимәлдәре лә төрлөсә.* Ә. Сөләймәнов. *[Илтуған] кыш үтеүгә бүтән шәкерттәр кимәленә етте.* Ә. Хәкимов.

3. *диал. кар.* **миҙгел.** ■ *Яҙ кимәлкәйҙәрен шунан беләм: зыркыуыттар килә зыр кубып.* Халык йырынан.

КИМӘЛЙЕТЕҮ (кимәлйет-) (Р.: растянуть; И.: stretch; Т.: incitmek) *к.*

Быуынға зыян килтереү, быуынды кыҙғатып ауырттырыу. □ Растянуть, повредить *(сухожилия, связки). Аякты кимәлйетеү. Аңғармаҫтан кимәлйетеү.*

КИМӘЛЙЕҮ (кимәлйе-) (Р.: получить ушиб; И.: get a bruise; Т.: incinmek) *к.*

1. Быуын кыҙғалыу, әҙ генә тайыу. □ Получить ушиб, повредиться, оказаться повреждённым *(от ушиба, растяжения). Кулы кимәлйегән. Яңылыш баҫып, аяғы кимәлйене.*

2. *диал. кар.* **биртенеү.** *Биле кимәлйегән. Капыл тартынып, биле кимәлйене.*

КИМӘСӘ (Р.: платье прямого покроя; И.: straight cut dress; Т.: belsiz elbise) *и. диал.*

Билһеҙ күлдәк. □ Платье прямого покроя. *Кимәсә кейгән. Кимәсә тегеү. Кимәсә кейгән катын.*

КИНАМ *и. диал. кар.* **кенә.**

КИНГСТОН [рус. < ингл. *kingston*] (Р.: кингстон; И.: kingston (valve); Т.: kingston) *и. диңг.*

Карап төбөндәге клапан *(карапты батырыу йәки тулған һыуын сығарыу өсөн).* □ Кингстон *(клапан в подводной части судна). Кингстондарҙы асыу.*

КИНДЕР I [дөйөм төрки *киндир*] (Р.: конопля; И.: hemp; Т.: kendir) *и.*

1. *бот.* Һабағынан сүс, орлоғонан май, наркотик матдәләр алына торған тарбағай ботаклы бейек үлән; тарма. □ Конопля *(растение).* / Конопляный (лат. *Cánnabis*). *Киндер япрағы. Киндер һабағы. Киндер баҫыуын һөрөп ташлау. Киндер сәсергә рөхсәт ителмәй. Баксала үҫкән киндерҙе йолкоу.* ■ *Йәшкелт-һоро тоҫтәге бөртөктәр .. корылған киндер орлоғо ине.* Й. Солтанов. ● *Киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең.* Мәкәл.

2. Шул үҫемлектән алынған сүс. □ Пенька. *Киндер иләү. Үҙәк киндер.* ■ *Әсәләре һуға торған киндеренең шөйтәһөн алып, көрөҫ өҫтөнә элеп куйҙы.* Ж. Кейекбаев. *Бәҙгольямал киндерҙән касандыр үҙе шакмаклап һуккан, ләкин өр-яңы көйө һаклаған ҙур ашъяулыкты урындыкка алып барып йәйҙе.* Н. Мусин.

3. *диал. кар.* **етен.**

4. *миф.* Һаклау, түлләндереү көсөнә эйә үҫемлек. □ Конопля *(оберег, наделённый продуцирующей силой).*

5. Ҡулдан һуғылған һәр төрлө туҡыма. □ Холст, холстина, холщовое полотно. *Кесерткән киндере. Етен киндере. Киндер һуғыу.* ■ *Оҫта ҡатындар .. киндер һуҡты, тире иләне, тире тартты, итек-ҡаталыҡ күнде ыҫланы.* Я. Хамматов. *Вахиттың һеңлеһе Мәрйәм .. ағаһына кәрәк булған сылғаулыҡ, таҫтамаллыҡ кеүек аҡ киндерҙәрҙе уға хаслап, күберәк һуҡты.* М. Ғафури. ● *Атаһы өй һалған — улы йылынған, әсәһе киндер һуҡҡан — ҡыҙы кейенгән.* Мәҡәл.

КИНДЕР II (Р.: конопляный; И.: hemp; Т.: kendir) *с.*

Киндерҙән яһалған. □ Конопляный, пеньковый. *Киндер еп. Киндер тоҡ. Киндер күлдәк. Киндер ашъяулыҡ. Киндер таҫтамал.* ■ *Хәбибулла ҡарт .. киндер күлдәге иҙеүен ысҡындырҙы.* Я. Хамматов. *Өҫтөмә .. һарғылт аҡ киндер салбар кейеп алдым.* Ф. Иҫәнғолов. ● *Ҡара икмәккә туйған ас булмай, киндер күлдәккә туйған яланғас булмай.* Мәҡәл.

КИНДЕР АҒАРТЫУ (киндер ағарт-) (Р.: отбеливание конопляного холста; И.: hemp canvas bleaching; Т.: kastarlamak) *ҡ.*

Һуҡҡан киндерҙе һелтегә манып, ҡояшҡа йәйеп йәки ҡарға күмеп аҡ итеү. □ Отбеливание конопляного холста. *Һелте менән киндер ағартыу. Киндерҙе ҡарға күмеп ағартыу.*

КИНДЕРАРБА *и. тук. диал. ҡар.* **көрөҫ сығыры.**

КИНДЕРАТА (Р.: ткацкий станок; И.: loom; Т.: dokuma tezgâhı) *и. диал.*

1. *тук.* Киндер туҡыу станогы. □ Ткацкий станок *(для холщового полотна).*

2. *миф.* Киндер баҫыу эйәһе. □ Мифологизированный предмет, имеющий отгонную силу.

КИНДЕРАШ *и. диал. ҡар.* **киндер I, 1.** *Киндераш сәсеү. Киндерашты сүптән таҙартыу.*

КИНДЕР АШЛАУ (киндер ашла-) (Р.: крахмалить ткань *(льняную, конопляную)*; И.: to starch the hempy fabric; Т.: kolalamak) *ҡ.*

Киндер, етен туҡыманы крахмаллау. □ Крахмалить ткань *(льняную, коноплянную). Бергәләп киндер ашлау.*

КИНДЕР БӘЙЕ *и. диал. ҡар.* **көнйәлә бауы.**

КИНДЕР ЕП *и. диал. ҡар.* **тегәр еп.**

КИНДЕР ИЛӘҮ (киндер илә-) (Р.: прясть коноплю; И.: spin hemp; Т.: kendir eğirmek) *ҡ.*

Оҙон ғүмер, бәхет теләү менән бәйле ритуалға әйләндерелгән хәрәкәт. □ Прясть коноплю *(мифологизированное действие, притягивающее долголетие).*

КИНДЕР КИЛЕҺЕ (Р.: ступа для конопли; И.: hemp mortar; Т.: kendir havanı) *и.*

Киндер, етен төйә торған ағас киле. □ Ступа для конопли. *Киндер килеһендә төйөү. Киндер килеһен йыуыу.*

КИНДЕР МАЙЫ (Р.: конопляное масло; И.: hemp oil; Т.: kendir yağı) *и.*

Киндер орлоғонан һығып алына торған үҫемлек майы. □ Конопляное масло. *Киндер майында ҡурыу. Салатҡа киндер майын өҫтәү.* ■ *Көндөҙгө һыуһынға туҡталғанда, һыуға бешерелгән тары өйрәһе, аҙ-маҙ киндер майы бутап, сейле-бешле итеп әҙерләнгән тары бутҡаһы, баяғы ҡара икмәк ашалды.* Ғ. Дәүләтшин. *[Даша] тары бутҡаһын өлкән табаҡҡа ауҙарып, уның өҫтөнә .. киндер майы һибәләне.* Һ. Дәүләтшина.

КИНДЕРОЯ *и. тук. диал. ҡар.* **киндерата 1.** *Киндерояла төйөү.*

КИНДЕРСЕ (Р.: коноплевод; И.: hemper; Т.: kendirci) *и.*

Киндер үҫтереү менән шөғөлләнеүсе кеше, белгес. □ Коноплевод. *Киндерсе булып эшләү. Тәжрибәле киндерсе.*

КИНДЕРСЕЛЕК (киндерселеге) (Р.: коноплеводство; И.: hemp growing; Т.: kendircilik) *и. а. х.*

Агросәнәғәттең киндер үҫтереү тармағы. □ Коноплеводство. *Киндерселекте аяҡҡа баҫтырыу. Киндерселекте үҫтереү.*

КИНДЕР СТАНЫ (Р.: стан для обработки конопли; И.: camp for hemp processing; Т.: kendir tezgâhı) *и.*

Киндер һуға торған стан. □ Стан для обработки конопли. *Киндер станы яһау. Киндер станында һуғыу.*

КИНДЕР СҮСЕ (Р.: конопляная нить; И.: hempy thread; Т.: kendir ip) *и. диал.*

Киндер сүсенән алынған нәҙек еп. □ Конопляная нить. *Киндер сүсе менән тегеү.*

КИНДЕР ТАРАҒЫ (Р.: бердо с зубьями средней частоты; И.: kind of reed *(in loom)*; Т.: dokuma tarağı) *и.*

Теше уртаса йышлыҡтағы киндер ҡылысы. □ Бердо с зубьями средней частоты. *Киндер тарағы яһау. Киндер тарағын ҡулланыу.*

КИНДЕР ТАРАМЫШЫ (Р.: грубая конопляная пенька; И.: coarse hemp; Т.: kenevir) *и.*

Киндерҙең еп-арҡан ишә торған эре сүсе. □ Грубая конопляная пенька *(для изготовления арканов, канатов). Киндер тарамышынан үрелгән арҡан.*

КИНДЕР ТАЯҒЫ *и. диал. ҡар.* **тәрәпләүес.**

КИНДЕР ТУҠМАУ (киндер туҡма-) (Р.: отбивать конопляный холст; И.: treat hemp sackcloth; Т.: kendir tuvalı yapmak) *ҡ.*

Һуҡҡан киндерҙе йомшартыу өсөн туҡмаҡ менән туҡмау. □ Отбивать конопляный холст. *Туҡмаҡ менән киндер туҡмау.*

КИНДЕР ТУРҒАЙЫ (Р.: коноплянка; И.: linnet; Т.: keten kuşu) *и. зоол.*

Түбәһе һоро, арҡаһы көрән, ҡанаттарында киң ҡара һәм аҡ таптар булған турғай ҙурлығындағы ҡош. □ Коноплянка *(птица)* (лат. *Carduelis cannabina*). *Киндер турғайы һайрауы.*

КИНДЕР ҮҘӘГЕ (Р.: высококачественный лён; И.: high-quality hemp; Т.: en iyi kaliteli keten) *и. диал.*

Үҙәк етен, етендең иң юғары сорты. □ Высококачественный лён.

КИНДЕР ҺУҒЫУ (киндер һуҡ-) *ҡ. ҡар.* **киндер туҡмау.**

КИНДЕР ЫСНАСЫ (Р.: снасти ткацкого станка; И.: tackles of the weaving loom; Т.: dokuma tezgahı takımı) *и. диал.*

Киндер һуғыуҙа кәрәк нәмәләр. □ Снасти ткацкого станка.

КИНДЕРӘ (Р.: верёвка для лаптя; И.: rope for a bastshoe; Т.: bağ) *и. диал.*

Сабата бауы. □ Верёвка для завязывания лаптя. *Киндерә әҙерләү.* ■ *Ҡулы бик өшөгәнгә күрә, киндерәне бәйләй алмай [Йәмилә].* М. Ғафури.

КИНДЕР ЯПМА *и. диал. ҡар.* **сепрәк балаҫ.**

КИНЕЗИГРАФИЯ [рус. < гр.] (Р.: кинезиграфия; И.: kinesographics; Т.: öd yollarını öğrenen bilim) *и. мед.*

Үт юлдарын өйрәнеү ысулдарының береһе. □ Кинезиграфия. *Кинезиграфияны ҡулланыу. Кинезиграфия ысулы.*

КИНЕМА [рус. < гр. *kinema* 'хәрәкәт'] (Р.: кинема; И.: kinema; Т.: hareket) *и. лингв.*

Теге йәки был өндө әйтелеше яғынан айыра торған билдә. Мәҫәлән, [м] өнө өс кинеманан *(ирен, тамаҡ һәм танау)* тора. □ Кинема. *Ҙ өнө кинемаһы. Башҡорт өндәренең кинемаларын билдәләү.*

КИНЕМАТИК (Р: кинематический; И.: kinematic(al); Т.: kinematik) *с. махс.*

Кинематика менән бәйле. □ Кинематический. *Кинематик энергия. Кинематик ысул. Кинематик схема.*

КИНЕМАТИКА [рус. < гр. *kinema* 'хәрәкәт'] (Р.: кинематика; И.: kinematics; Т.: kinematik) *и. махс.*

Есемдәр хәрәкәтенең геометрик үҙенсәлектәрен, уларҙың массаһын һәм уларға тәьҫир итеүсе көстәрҙе иҫәпкә алмай өйрәнә торған механика фәне бүлеге. □ Кинематика. *Кинематика ысулы. Кинематика буйынса лекция уҡыу.*

КИНЕМАТОГРАФ [рус. < гр. *kinema* 'хәрәкәт' + *grapho* 'яҙыу'] *и. ҡар.* **кинематография.** ■ *Кистәрен һирәкләп кинематографҡа барам.* Ә. Хәкимов. *Беҙҙе мунсаға, шунан кинематографҡа алып барҙылар, итле аш, майлы бутҡа, аҡ икмәк бирҙеләр.* Д. Юлтый.

КИНЕМАТОГРАФИК (Р.: кинематографический; И.: cinematographic; Т.: sinematografik) *с.*

Кинематографҡа, кинематографияға мөнәсәбәтле. □ Кинематографический. *Кинематографик таҫма. Кинематографик һүрәт.*

КИНЕМАТОГРАФИСТ [рус.] (Р.: кинематографист; И.: cinematographer; Т.: filmci) *и.*

Кинематография өлкәһендә эшләгән белгес. □ Кинематографист. *Кинематогра-*

фистар кәңәшмәһе. Рәсәй кинематографистары. Француз кинематографистары.

КИНЕМАТОГРАФИЯ [рус. < гр. *kinema* ‘хәрәкәт’ + *graphia*] (Р.: кинематография; И.: cinematography; Т.: sinematografi) *и.*

1. Тормош хәлдәрен хәрәкәтле һүрәт итеп, ысынға оҡшатып төшөрөү һәм экранда күрһәтеү сәнғәте; кино сәнғәте. □ Кинематография *(искусство съёмки и воспроизведения на экране движущихся изображений). Төҫлө кинематография.*

2. Мәҙәниәттең фильмдар төшөрөү һәм халыҡҡа күрһәтеү менән шөғөлләнгән тармағы. □ Кинематография *(отрасль культуры). Кинематография өлкәһендә эшләү.* ■ *Ә Роберт .. оҙаҡламай Мәскәүгә кинематография институтына китәсәген .. һис бер тайшанып тормайынса, циник рәүештә һөйләй.* А. Карнай.

КИНЕСКОП (кинескобы) [рус. < гр. *kineo* ‘хәрәкәткә килтерәм’] (Р.: кинескоп; И.: television tube, kinescope; Т.: kineskop) *и.*

Радио, телевидениела ҡулланылған электрон ҡабул иткес трубка. □ Кинескоп. *Телевизор кинескобы. Кинескопты алмаштырыу. Төҫлө кинескоп.*

КИНЕСКОПЛЫ (Р.: кинескопный; И.: with a kinescope; Т.: kineskoplu) *с.*

Кинескобы бар, кинескоп ҡулланылған. □ Кинескопный. *Кинескоплы телевизор. Телевизорҙың кинескоплыһын һайлау.*

КИНЕТИК (Р.: кинетический; И.: kinetic; Т.: kinetik) *с. махс.*

1. Кинетикаға мөнәсәбәтле. □ Кинетический *(относящийся к кинетике). Кинетик теория. Кинетик ысул. Кинетик мәсьәлә.*

2. Хәрәкәткә мөнәсәбәтле. □ Кинетический *(относящийся к движению). Кинетик энергия.*

КИНЕТИКА [рус. < гр. *kinetikos*] (Р.: кинетика; И.: kinetics; Т.: kinetik) *и. физ.*

Теоретик механиканың динамика һәм статика мәсьәләләрен тикшерә торған бер бүлеге. □ Кинетика. *Кинетика ҡанундары. Физик кинетика. Кинетика бүлеге.*

КИНЕТИК ТЕЛМӘР (Р.: кинетическая речь; И.: kinetic speech; Т.: hareketli dil) *и. лингв.*

Ҡул хәрәкәте ярҙамында башҡарылған телмәр. □ Кинетическая речь. *Кинетик телмәргә өйрәнеү. Комплекслы кинетик телмәр.*

КИНЖАЛ [ғәр. خنجر ‘бысаҡ төрө’] *и. һөйл. ҡар.* **хәнйәр.** *Көмөш һаплы кинжал. Кинжал тағыу.*

КИНЖӘ *и. диал.*

1. *ҡар.* **ҡәйнеш.** *Кинжәне ҡаршы алыу. Кинжәгә ебәреү.*

2. *ҡар.* **кинйә.** *Кинжәгә йортто яҙҙырыу.*

КИНЖӘБАЙ (Р.: младший шурин (*или* деверь); И.: brother in law; Т.: kayınbirader) *и. диал.*

Кесе ҡәйнеш. □ Младший шурин, младший деверь.

КИНЖӘКӘЙ *и. диал. ҡар.* **кинжәбай.**

КИНЖӘ УЛ *и. диал. ҡар.* **кинжәбай.**

КИНЙӘ (Р.: последний *(из детей)*; И.: the last-born child; Т.: küçük) *с.*

1. Ғаиләләге иң һуңғы *(бала).* □ Последний *(из детей).* / Последыш. *Кинйә ҡыҙ. Кинйә ул.* ■ *Кинйәбай ағай уның [Зөләйхә әбейҙең] кинйә балаһы, ыратҡан улы ине.* З. Биишева. *Аҙаҡ, бер аҙ баш-күҙ алып әҙәм рәтлерәк тора башлағас, ошо кинйә улдары Шәрәф тыуҙы.* Б. Бикбай. *Сәлмән ҡарт .. бөтә ҡорттарын үҙенең кинйә улы Баһауға әйтеп ҡалдырҙы.* Ж. Кейекбаев.

2. Йәш яғынан иң бәләкәй *(бала).* □ Младший *(из детей). Кинйә ағай.* ■ *Бер ағаһы ла ишек асып индермәгәс, Бибиғәйшә кинйә ағаһының аҙбарына инеп йәшеренгән.* Әкиәттән.

3. *диал.* Аҙаҡҡы, һуңғы. □ Последний. *Кинйә аҙна.*

4. *миф.* Мифлаштырылған, төрлө магик сараларҙа ҡатнашҡан кеше. □ Последыш *(в башкирской мифологии последыш и первенец участвуют в магических обрядах остановки града, лечении болезней).* ■ *Биртекте бер баш, бер кинйә бала йыя.* Экспедиция материалдарынан.

КИНЙӘБУЛАТ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из ро-

довых подразделений башкир племени бурзян.

КИНЙӘҒОЛ-БИШУЛ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени табын.

КИНЙӘҒЫМЫҘ (Р.: последний в сезоне кумыс; И.: the last koumiss in a season; T.: sonbaharda yapılan en son kımız) *и. диал.*

Көҙгө, иң аҙаҡҡы ҡуйы ҡымыҙ. □ Последний в сезоне кумыс *(самый густой, крепкий).*

КИНЙӘКӘЙ I (Р.: последыш; И.: the last-born child; T.: ailede en küçük çocuk) *и. ирк.*

Кинйә бала. □ Ласковое обращение к последышу. ■ *[Әсәйем — Рәмилгә:] Нисек кенә иҫән ҡалдың, балам... кинйәкәйем минең...* Н. Мусин.

КИНЙӘКӘЙ II (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени мин.

КИНЙӘКӘҮ *и. ҡар.* **кинйәкәй I.** ■ *Ошо тупһала, ошо нигеҙҙә ул Дауыттың өс улын, йәнә кинйәкәү ҡыҙы Таңдысаны ҡулына алды, өләсәй булды.* Т. Ғарипова.

КИНЙӘ ҠАБЫРҒА *и. анат. диал. ҡар.* **быҒым.**

КИНЙӘТӘЙ *и. диал. ҡар.* **кинйә.**

КИНЙӘҮ (кинйә-) *ҡ. диал. ҡар.* **өҙлөгөү.**

КИНО [рус. < гр. *kineo*] *и.*

1. *ҡар.* **кинематография.**

2. Экранда күрһәтеү өсөн махсус төшөрөп алынған әҫәр; фильм, кинофильм. □ Кино *(фильм). Кино күрһәтеү. Субтитрлы кино. Сит ил киноһы. Кино сценарийы. Башҡортостанда төшөрөлгән кино.* ■ *[Спортсмендарҙы] киноларҙа күреп, иҫем китә лә ултыра торғайным.* Р. Солтангәрәев. *Кино батша заманындағы тормошто тасуир итә ине.* Н. Мусин. *Ҡыҙырас был арала киноға йылдағыға ҡарағанда ла йышыраҡ йөрөй башланы.* З. Биишева.

3. Кинофильм күрһәтеү бинаһы. □ Кино *(кинотеатр). Киноға барыу.* ■ *Ҡаланың уртаһындағы кино, театр, парктар мине больницанан сығырға саҡыралар.* С. Агиш.

КИНО- (Р.: кино; И.: film; T.: film)

Ҡушма һүҙҙәрҙә «кино», «кинематографик» мәғәнәһен белдерә торған беренсе киҫәк (мәҫәлән, *кинокадр, киножурнал, кинокамера*). □ Кино- *(первая часть сложных слов, обозначающих отнесённость к понятию «кино», «кинематография»).*

КИНОАКТЁР [рус.] (Р.: киноактёр; И.: film actor; T.: erkek oyuncu) *и.*

Фильмда уйнаған актёр. □ Киноактёр. *Танылған киноактёр.* ■ *[Ҡатыны — Айнурға:] Бөгөн өс сәғәт буйы йөрөп, киноактёрҙар менән осрашыу кисәһенә билеттар алдым.* Н. Мусин.

КИНОАКТРИСА [рус.] (Р.: киноактриса; И.: film actress; T.: kadın oyuncu) *и.*

Фильмда уйнаған актриса. □ Киноактриса. *Талантлы киноактриса. Билдәле киноактриса. Киноактриса булырға хыялланыу.*

КИНО АППАРАТЫ (Р.: киноаппарат; И.: cinecamera; T.: kamera) *и.*

Фильм төшөрөү йәки уны экранда сағылдырыу өсөн ҡулланылған аппарат. □ Киноаппарат. ■ *Унда [вокзал майҙанында] асыҡ күк аҫтында кино аппараты ҡуйылған, бер бейек йорттоң ҡатыҡтай аҡ стенаһы экранға йәтешләнгән.* Й. Солтанов.

КИНО АРТИСЫ (Р.: киноартист; И.: film actor; T.: oyuncu) *и.*

Фильмда уйнаған артист. □ Киноартист. *Танылған кино артисы.*

КИНОАТЕЛЬЕ [рус.] (Р.: киноателье; И.: (film) studio; T.: stüdyo) *и.*

Кинофильмдар төшөрөү өсөн йыһазландырылған махсус бина. □ Киноателье. *Киноательела төшөрөү. Киноательела эшләү.*

КИНО БУДКАҺЫ (Р.: кинобудка; И.: film booth; T.: kamera odası) *и. һөйл. иҫк.*

Кино аппараты торған бүлмә. □ Кинобудка.

КИНОВАРЬ [рус. < гр. *kinnabari*] (Р.: киноварь; И.: cinnabar, vermilion; Т.: zincifre) *и. мин.*

1. Ҡыҙыл төҫтәге минерал, көкөртлө терегөмөш. □ Киноварь *(минерал)*. ■ *Донбасста, Никитовка эргәһендә киноварь ятҡылыҡтары бар.* Картотека фондынан.

2. Шул минералдан алынған ҡыҙыл буяу. □ Киноварь *(краска)*. *Киноварь менән буяу.*

КИНОДРАМАТУРГИЯ [рус.] (Р: кинодраматургия; И.: cinema dramatics; Т.: film dramaturjisi) *и.*

Кинематография өсөн яҙылған әҙәби әҫәрҙәр жанры. □ Кинодраматургия. *Кинодраматургия өлкәһендә ижад итеү. Кинодраматургия жанры.*

КИНОЖУРНАЛ [рус. < гр. *kineo* + фр. *journal*] (Р.: киножурнал; И.: newsreel; Т.: filmler) *и.*

Көндәлек тормош хәлдәрен сағылдырған ҡыҫҡа метражлы фильм. □ Киножурнал. *Фәнни киножурнал. «Ералаш» киножурналы. Киножурнал ҡарау.* ■ *Мотаһарҙы тетрәткән йәнә лә бер ваҡиға булып алды: «Фитиль» тигән әкәмәт киножурналда күтмәгәндә... Ғәлиен күрһәттеләр.* Й. Солтанов.

КИНОКАДР [рус. < гр. + фр.] (Р.: кинокадр; И.: film frame; Т.: film resmi) *и.*

Фильм кадры. □ Кинокадр. *Кинокадрға әләгеү. Кинокадрҙы киҫеп алыу. Уңышлы кинокадр.*

КИНОКАМЕРА [рус. < гр. + лат.] (Р.: кинокамера; И.: cinecamera; Т.: kamera) *и.*

Кино төшөрә торған аппарат. □ Кинокамера. ■ *Кинокамера осоуҙың бөтә этаптарын төшөргән: самолёттың ҙур тиҙлектә күтәрелеүен, юғары пилотаж фигуралар эшләүен. полигондағы өйрәнеү атыштарын һәм башҡаларҙы.* Картотека фондынан.

КИНОКАРТИНА [рус.] *и. ҡар.* **кино 2.** ■ *Кинокартина Шамилдың иҫендә рәтләп ҡалмаһы.* Н. Мусин. *Ғәлиә үҙенең күптән түгел ҡараған кинокартинаһы тураһында һүҙ асты.* Б. Бикбай. *Уның башында тормоштоң төрлө күренештәре, кинокартина һымаҡ, аллы-артлы теҙелеп үттеләр.* Т. Йәнәби.

КИНОКОМЕДИЯ [рус. < гр. + фр.] (Р.: кинокомедия; И.: comedy film; Т.: komedi) *и.*

Көлкөлө йәки сатирик йөкмәткеле фильм. □ Кинокомедия. *Кинокомедия ҡарау. Кинокомедия төшөрөү.*

КИНОЛАШТЫРЫУ (кинолаштыр-) *ҡ. ҡар.* **кинофикациялау.**

КИНОЛЕНТА [рус.] *и. ҡар.* **кинотаҫма.**

КИНОМЕХАНИК (киномеханигы) [рус. < гр. + лат.] (Р.: киномеханик; И.: projectionist; Т.: sinema makinist) *и.*

Кинофильмдар күрһәтеү эшен башҡарыусы. □ Киномеханик. *Киномеханик булып эшләү.* ■ *Мотаһар, .. тамашасылар таралғас, киномеханикты өгөтләп, .. Әгләм ҡорҙашы менән бергә ҡабат клубҡа инде.* Й. Солтанов.

КИНОМЕХАНИКЛЫҠ (киномеханиклығы) (Р.: специальность киномеханика; И.: projectionist's trade; Т.: sinema makinist uzmanlığı) *и.*

Киномеханик һөнәре. □ Специальность киномеханика, знания и навыки киномеханика. *Киномеханиклыҡҡа уҡыу.*

КИНООПЕРАТОР [рус. < гр. + лат.] (Р.: кинооператор; И.: cameraman; Т.: kameraman) *и.*

Фильмды кино аппараты менән төшөрөүсе белгес. □ Кинооператор. *Кинооператор булып эшләү. Тәжрибәле кинооператор.* ■ *Йәш техниктар станцияһынан Саша Попов, Шамил Ямалетдинов, Риф Фәйзуллин кеүек талантлы кинооператорҙар тәрбиәләнеп сыҡты.* Картотека фондынан.

КИНОПЛЁНКА [рус.] *и. ҡар.* **кинотаҫма.**

КИНОПРОКАТ [рус.] (Р.: кинопрокат; И.: film distribution and exhibition (system); Т.: film endüstrisi ve dağıtım) *и.*

Экранда күрһәтеү өсөн фильмдарҙы ишәйтеү һәм уларҙы ваҡытлыса файҙаланыу өсөн кинотеатр, клубтарға һ. б. биреү эше һәм шул эш менән шөғөлләнеүсе ойошма. □ Кинопрокат. ■ *Башҡортостандың кинопрокат контораһы республика экрандары өсөн яңы фильмдар сығара.* Картотека фондынан.

КИНОРЕЖИССЁР [рус. < гр. + фр.] (Р.: кинорежиссёр; И.: film director; Т.: film rejisörü) *и.*

Фильмды ҡуйыусы, картинаның режиссёры. □ Кинорежиссёр. *Талантлы кинорежиссёр. Тәжрибәле кинорежиссёр.*

КИНО СЕЛТӘРЕ (Р.: киносеть; И.: network of cinemas; Т.: sinema) *и.*

Илдәге йәки бер урындағы бөтә булған кинотеатрҙар. □ Киносеть. *Башҡортостан кино селтәре.*

КИНОСТУДИЯ [рус. < гр. + лат.] (Р.: киностудия; И.: film studio; Т.: film stüdyosu) *и.*

Кинофильмдар эшләп сығара торған йәки киносценарий ижад итеүҙән башлап, фильм баҫылып сыҡҡанға тиклемге бөтә эш башҡарыла торған предприятие. □ Киностудия. *«Башҡортостан» киностудияһы. Киностудия асыу.*

КИНОСЦЕНАРИЙ [рус.] (Р.: киносценарий; И.: screenplay; Т.: film senaryosu) *и.*

Кинофильм эшләүгә нигеҙ итеп алынған әҙәби әҫәр. □ Киносценарий. *Киносценарий яҙыу.* ■ *Трагедия, комедия, тар мәғәнәһендәге драма, водевиль, киносценарий, скетч, интермедия кеүек жанрҙарҙың барыһына ла драматик һынландырыу хас.* К. Әхмәтйәнов.

КИНОСЫ *и. һөйл. ҡар.* **киномеханик.** ■ *Вәристәр, Рафиктар бигерәк тә рәхәтләнә, сөнки киносы күберәген уларға төшә.* Р. Шәкүр.

КИНОТАҪМА (Р.: кинолента; И.: tape, reel (of film); Т.: film) *и.*

Фильмдың таҫмаға төшөрөлгән айырым бер данаһы; кинолента. □ Кинолента. ■ *Үтә лә тиҙ әйләнгән кинотаҫма кадрҙарын хәтерләтеп кенә тасуирлай ул яҙ күренешен.* Ә. Сөләймәнов.

КИНОТЕАТР [рус. < гр. *kinēma* ‘хәрәкәт’ + *theatron*] (Р.: кинотеатр; И.: cinema; Т.: sinematograf) *и.*

Кинофильм күрһәтә торған махсус бина. □ Кинотеатр. *«Оскон» исемле кинотеатр.* ■ *[Кыҙырас] .. кинотеатр афишаларын ҡараны.* З. Биишева. *[Офицер] кинотеатрға кергәс, Шәмси ҙә, .. тиҙ генә кассанан билет алып, залға инде.* Г. Хәйри. *Марат кинотеатр бинаһы янында уралды.* Ә. Хәкимов. *[Айнур] .. ниңәлер иртәгә «Родина» кинотеатры алдында буласаҡ осрашыу хаҡында уйлай.* Н. Мусин.

КИНОФЕСТИВАЛЬ [рус. < гр. + фр. < лат.] (Р.: кинофестиваль; И.: film festival; Т.: film festivali) *и.*

Иң яҡшы фильмдарҙы күрһәтеү, конкурс үткәреү эше. □ Кинофестиваль. *Кинофестиваль жюриҙары. Халыҡ-ара кинофестиваль. Балалар кинофестивале. Кинофестиваль уҙғарыу.*

КИНОФИКАЦИЯ [рус. < гр. + лат. *facere* ‘эшләү’] (Р.: кинофикация; И.: cinemafication; Т.: sinema) *и.*

Халыҡты кино селтәре менән тәьмин итеү эше. □ Кинофикация.

КИНОФИКАЦИЯЛАУ (кинофикацияла-) (Р.: кинофицировать; И.: provision of film-showing facilities; Т.: sinema seyredilecek yer ile temin etmek) *ҡ.*

Кинотеатр йәки кино күрһәтә торған урын менән тәьмин итеү. □ Кинофицировать. *Ауылдарҙы кинофикациялау.*

КИНОФИЛЬМ [рус. < гр. + ингл. *film*] *и. ҡар.* **кино 2.** *Кинофильм күрһәтеү. Башҡортса төшөрөлгән кинофильм. Кинофильм төшөрөү.* ■ *Шәмситдин кинофильмдарҙағы ялтыр асфальт урамдарҙа йөрөгән ыҫпай егеттәрҙән һәм ҡыҙҙарҙан көнләшә.* Й. Солтанов. *Уның [Абдулкадир Инандың] ғилем, әҙәбиәт, дини мәсьәләләр буйынса уйланыуҙары, ғишҡы, сәйәси ваҡиғаларҙа ҡатнашлығы ҙур романдар яҙыу, кинофильмдар төшөрөү өсөн нигеҙ булырлыҡ.* Ә.-З. Вәлиди.

КИНӘ (Р.: и; И.: and; Т.: gine) *терк. иҫк. кит.*

Ки йәнә, йәнә. □ *Союз* и.

КИНӘЙӘ [ғәр. كناية] (Р.: иносказание; И.: allegory; Т.: mecâz) *и.*

Йәшерен мәғәнә, ситләтеп әйтелгән һүҙ. □ Иносказание, намёк. *Кинәйә яһау. Кинәйә менән һөйләү. Һүҙендә ниндәйҙер кинәйә бар.* ■ *Илсеғолда өлкәндәр күберәк кинәйә менән һөйләшергә .. оҫталар.* З. Биишева. *Нурия минең менән уратып ҡына, кинәйә менән генә һөйләшә.* Н. Мусин. *Ябай ғына еткерелгән был кинәйә йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте Зифаға.* Й. Солтанов. *Әсәһенең һуңғы һүҙҙәрендә әсе кинәйә ятҡанын тойҙо Ихсан-*

бай. Т. Ғарипова. *[Хөкөм эйәләре] [Сәйефтең] һәр аҙымын һағалап торорҙар, яҙған бер шиғырынан бәйләнер кинәйә эҙләрҙәр.* Ә. Хәкимов.

КИНӘЙӘЛЕ (Р.: иносказательный; И.: allegorical; Т.: mecâzî) *с.*

Туранан-тура аңлашылып тормаған, йәшерен мәғәнәле. □ Иносказательный, аллегорический, аллегоричный. *Кинәйәле һүҙ менән һөйләшеү. Кинәйәле караш ташлау.* ■ *Ғәтиәтулла олатай йырлап бөткәс, әсәйемә кинәйәле карап: — Шундай һылыу кыҙы булған әсәгә мин ошонан да һәйбәт йыр белмәйем, — тип куя.* З. Биишева. *Кинәйәле көлөмһөрәп, Сәлим икенсе бүлмәгә инеп китте.* Яр. Вәлиев. *Мотаһар иһә кинәйәле баш сайкап кына куйҙы.* Й. Солтанов. *Зал буйлап тулкын-тулкын шыбырлашыу, кинәйәле көлөү үтте.* Т. Ғарипова. *Легенда, ләкин ниндәй кинәйәле, тәрән мәғәнәле легенда ул...* И. Абдуллин.

КИНӘЙӘЛЕК (кинәйәлеге) (Р.: иносказательность; И.: allegorical meanings; Т.: kinaye) *и.*

Туранан-тура аңлашылып тормаған йәшерен мәғәнәлелек. □ Намёк, иносказательность, аллегория.

КИНӘЙӘЛӘҮ (кинәйәлә-) (Р.: намекать; И.: hint (at); Т.: ima etmek) *к.*

Уратып, ситләтеп әйтеү. □ Намекать. *Кинәйәләп һөйләшеү.* ■ *Боғара кайҙа йылы һүҙ, кайҙа кинәйәләп янау йә тауҙай вәғәҙә менән ил түрәләрен үҙ тирәһенә тупларға тырышты.* Ә. Хәкимов. *Мин, әлбиттә, уның [Хисмәттең] нимәгә кинәйәләүен шунда ук төшөндөм.* Ғ. Байбурин. *Барсынбикә уйнаған һымак башланған хәбәрҙең олоға олғаша барыуын тойҙо, .. тоткан ерҙән һындырмай кинәйәләп һөйләшеүен белде.* Т. Ғарипова.

КИНӘЙӘҺЕҘ (Р.: без намёка; И.: without a hint; Т.: imasız) *с.*

Йәшерен түгел, туп-тура мәғәнәле. □ Без намёка, прямо, без обиняков. *Кинәйәһеҙ әңгәмә. Кинәйәһеҙ һорау.* ■ *Танышым өйөңә килеп инеүе менән, берәй нәмәгә күҙе төшә лә, һис кинәйәһеҙ: — Ни хакка алдың? — тип һорай.* Ф. Иҫәнғолов. *«Кинәйәһеҙ әйтәм, Вардгес Сергеевич», — тине комиссар, шул кымшанмай ҙа ултырған көйө.* М. Кәрим.

КИНӘМ *и. диал. кар.* **кенә I.**

КИНӘНДЕРГЕС (Р.: радостный; И.: glad, joyous, joyful; cheerful; Т.: sevinçli) *с.*

Кинәндерә торған, кинәнесле. □ Радостный. *Кинәндергес хәбәр. Кинәндергес вакиға.* ■ *Әҙер сыралар янып бөтөп, фатир хужаһы йокларға яткандан һуң да, йән кинәндергес сихри юлдарҙан айырыла алмайынса, Мифтахетдин тәҙрә аша ай яктыһы төшкән урынға барып ултырҙы.* Я. Хамматов.

КИНӘНДЕРЕҮ (кинәндер-) (Р.: обрадовать; И.: make glad/happy, gladden; Т.: sevindirmek) *к.*

1. Булған ихтыяжды кәнәғәтләндереп, кыуандырыу; рәхәтләндереү. □ Радовать, обрадовать *(кого-л.).* ■ *Көҙгө кояш сағыу йылмайһа ла, кинәндереп йылытмай.* З. Биишева. *Илде кинәндерһен хеҙмәт уңышың, ырыҫлы һәм етеш булһын тормошоң!* А. Игебаев.

2. Файҙа килтереп, изгелек күрһәтеп кыуандырыу. □ Обрадовать *чем-л.* ■ *Мин булмаһам, кайҙа инде уларға былай кинәндереп катык ойотоу.* Й. Солтанов. *Фатима менән укытыусы Ғилман радиоалғыс урынлаштырылған өйҙә аппаратты көйләйҙәр һәм башкаларҙы тыңлатып кинәндерәләр ине.* Ғ. Хәйри. *Йән кинәндергес сихри юлдарҙан айырыла алмайынса, Мифтахетдин тәҙрә аша ай яктыһы төшкән урынға барып ултырҙы.* Я. Хамматов.

КИНӘНЕС (Р.: радость; И.: joy; gladness; Т.: sevinç) *и.*

Кәнәғәт булғанда, рәхәтлек тапканда килгән кыуаныс. □ Радость, отрада; удовольствие, наслаждение. *Кинәнес табыу. Кинәнес алыу.* ■ *Тирә-яктағы иркенлеккә, тулкын-тулкын булып һуҙылған тауҙарға карап тороу үҙе бер кинәнес.* Ш. Янбаев. *Бөтә кинәнесем, һөйөнөсөм, бар өмөтөм һин бит, күҙ нурым, һинһеҙ күңелемдең йондоҙо юк, бәхетем юк һәм юк үҙ йырым!* А. Игебаев. *Бөгөн хатта һыйырҙар ҙа, танһык кояшка һырттарын куйып, оло кинәнес менән көйөш ала.* Т. Ғарипова. ● *Эшләй белеп эшләгәнгә*

иген эше – кинәнес, ялкаулашып йоҡлағанға иген эше – көйөнөс. Мәҡәл.

КИНӘНЕСЛЕ (Р.: радостный; И.: glad, joyous, joyful; cheerful; Т.: sevinçli) *с.*

Шатлыҡ уятҡан; ҡыуаныслы. □ Радостный, отрадный. *Кинәнесле миҙгел. Кинәнесле ҡараш. Кинәнесле йөҙ.* ■ *Эйәрҙән төшөп ергә баҫыу кинәнесле булһа ла, Сәлимйән тар итек яфаһын татый башланы.* Й. Солтанов. *Ерән аты йомрас осаһын түйтаңлатып, ара-тирә кинәнесле бышҡырып ихлас еләнә.* Н. Мусин.

КИНӘНЕҮ (кинән-) [боронғо төрки *кән-* ‘рәхәтләнеү’] (Р.: наслаждаться; И.: take pleasure; Т.: zevk almak) *ҡ.*

1. Иркенлек, бәйһеҙлек тойоу. □ Получать удовольствие, наслаждение от свободы действия. *Кинәнеп уйнау. Кинәнеп йүгереү.* ■ *Уның өсөн был минутта .. бары кинәнеү, тәнде ҡытыҡлаған рәхәтлек кенә бар.* Б. Бикбай. *Кескәй Йәнеш, кинәнеп, аяҡ-ҡулдарын тарбаңлатып кирелде.* З. Биишева. *Сысҡан менән бесәй уйынын кинәнеп уйнап йөрөгәндә, көтмәгәндә Еҙсәлем башына ғәм төшә.* Й. Солтанов. *[Урал:] Рәхмәт инде, ағай, балалар уйнап кинәнде, үҙем байтаҡ эш эшләп ташланым.* Н. Мусин. ● *Дуҫ үпкәләһә, дошман кинәнер.* Мәҡәл.

2. Ҡәнәғәт булып ҡыуаныу. □ Быть довольным, радоваться, наслаждаться. *Атаһы малайына кинәнеп бөтә алманы. Кинәнеп йәшәү.* ■ *Олатаһы менән өләсәһе .. Таһир алып килгән цейлон сәйен эсеп кинәнделәр.* К. Мәргән. *Ҡыҙҙар бабайҙың яҡшы һүҙенә кинәнделәр.* Һ. Дәүләтшина. *Өлкәндәрҙә иһә яҙ матурлығы, яҙ хозурлығы менән кинәнеү ҡайғыһы юҡ.* Н. Мусин. *Унан Һабрауҙың халыҡҡа йырҙарын, уларҙың көйөн тыңлап кинәнде ҡарт йырау.* Ә. Хәкимов. ● *Бейей белгән кеше бейеүенән кинәнер.* Мәҡәл.

3. Сығанаҡ килештәге һүҙҙән һуң килеп, рәхмәт теләгән белдерә. □ После существительных в исходном падеже выражает доброе пожелание. *Улыңдан кинән. Балаңдан кинән.* ● *Ит тапмаған үпкәгә кинәнгән, ҡатын тапмаған еңгәгә кинәнгән.* Мәҡәл. *Иртә өйләнгән – улынан, ҡыҙынан кинәнгән.* Мәҡәл.

КИНӘНЕШЕҮ (кинәнеш-) *ҡ. урт. ҡар.* **кинәнеү.** *взаимн. от* **кинәнеү.** ■ *Шулай көн буйы иркен далала йәштәр кинәнешеп төрлө уйындар уйнаны, күңел асты, ярыштар ҡорҙо.* Ғ. Хөсәйенов. *Әкиәтең алыҫ торһон был мөғжизә болонда: иркенлектә кинәнешеп, уйнаҡлаша ҡолондар.* Ш. Бикҡол.

КИНӘТ *р. ҡар.* **ҡапыл.** *Кинәт боролоу. Кинәт туҡтау. Кинәт килеп сығыу. Кинәт йәшен йәшнәне.* ■ *Хәмит нисек тиҙ йырлай башлаһа, шулай кинәт тынып та ҡалды.* Д. Бүләков.

КИНӘТЛЕК (кинәтлеге) (Р.: внезапность; И.: suddenness; Т.: anidenlik) *и.*

Кинәт булыу хәле. □ Внезапность. *Көтөлмәгән кинәтлек.*

КИНӘТТӘН *р. ҡар.* **ҡапыл.** *Кинәттән һиҫкәнеп китеү. Кинәттән уянып китеү. Кинәттән булды.* ■ *Бер ваҡыт кинәттән һиҫкәнеп уянам. Уянам, ни күрәм: әйләнә һәр тирәм, уй тәрән һәм томан...* Ш. Бабич.

КИҢ (Р.: широкий; И.: wide; Т.: geniş) *с.*

1. Арҡырыға ҙур; *киреһе* – тар. □ Широкий. *Киң ҡайыш. Киң юл. Киң экран. Киң итеп киҫеү. Түтәлдәрҙе киң яһау.* ■ *Уңда – һыртлау артынан һыртлау теҙелгән киң дала.* Ғ. Ибраһимов. *Тулы битле, киң маңлайлы, энә шикелле үткер ҡара күҙле Исмәғил Ниместәрҙә ҡунып китеүҙе тейешле тапты.* Ғ. Хәйри. *[Ташлы йылғаһы] үҙе ҙур булмаһа ла, киң үҙәнле.* З. Ураҡсин. *Киң урамдың ике яғына төрлө дөкәндәр, эреле-ваҡлы оҫтаханалар теҙелгән.* Ә. Хәкимов. ● *Ҡыш ҡорһағы – киң алап.* Мәҡәл. *Ярлының яты-ры киң.* Мәҡәл.

2. Иркен, ҡыҫып тормаған *(кейемгә ҡарата).* □ Свободный *(об одежде). Киң кейем. Киң плащ. Киң юбка. Киң билле салбар. Итек киңерәк булған. Киң тегелгән күлдәк.* ■ *Йәйгеҫә асыҡ яғалы, киң итәкле күлдәк Римманы бигерәк тә һөйкөмлө күрһәтә.* Д. Бүләков. *Алпар уларҙың [хохолдарҙың] оҙон күлдәктәренә, киң салбарҙарына, осло бүректәренә ҡарап сәйерһенде.* Ғ. Ибраһимов. *[Гәйникамал абыстай] киң салбар балаҡтарын ике ситек ҡунысына тыҡҡан.* Ғ. Хәйри. ● *Ағай булыр егеттең итәк-еңе киң булыр.* Мәҡәл.

3. Ҙур аралы, киренкә *(хәрәкәткә карата).* □ Размашистый, свободный, крупный *(о движениях). Киң аҙым менән атлау. Коласы киң. Киң колас.* ■ *Аҙнағол, коласын киң йәйеп, кәмәлә аяғүрә баҫып килә.* З. Биишева. *Дача ерендә үҙҙәрен берҙән-бер хужа итеп тойған киң коласлы әре алмағастар бөтәһенән дә нығырак күренеп, маһайышып баҫып торалар.* Д. Бүләков.

4. Күп урынды биләгән, йәйрәп ятҡан; иркен. □ Обширный, просторный. *Киң ялан. Киң болон. Киң ер. Киң ихата.* ■ *Йылайырҙың киң яландары төйөрләнеп үҫкән бүтәгә, карағусҡыл йәшел ҡылған диңгеҙе эсенә батып юғалған.* Ғ. Дәүләтшин. *Күл киң түгел, ләкин бик тәрән күренә.* Д. Юлтый. *Бер киң далала йөҙәрләгән кеше аш ашаныҡ.* Ә.-З. Вәлиди. *Осһоҙ-кырыйһыҙ киң яланда ылау өлкән тирмә иҙәнендә йурмәләп йөрөгән кескәй кара кырмыҫҡа хәтлем генә күренә.* Н. Мусин. *Урҙа ғәскәренең төп көстәре Иҙел менән Тын йылғаһы араһындағы киң даланы иңләп кышланы.* Ә. Хәкимов. ● *Тар ерҙә танышкан киң ерҙә күрешер.* Мәкәл. *Йәйҙең өйө киң.* Мәкәл. *Бишек — киң донъяға ишек.* Мәкәл. *Күкрәк киреп эшләһәң, килер ерең киң булыр.* Мәкәл.

5. *күсм.* Бер ни менән сикләнмәгән. □ Широкий, неограниченный. *Киң кулланыу тауарҙары.* ■ *Ул түп, йәҙрәләр, газдар тураһында тағы ла киңерәк, тағы ла тәьҫирлерәк итеп һөйләргә, уны тағы ла тармаҡландырырға тотонд о.* Д. Юлтый. *Киң тормош юлы кайҙандыр ситләтеп үтә.* Н. Мусин.

6. *күсм.* Тарлыҡ хисен белмәгән; йомарт. □ Широкий, щедрый. *Киң бәйел. Уның күңеле киң.*

7. *күсм.* Күп яҡлы, тәрән. □ Широкий, многогранный. *Киң фекер. Киң белем.* ■ *Һылыуым, әгәр ҙә һин минең йөрәгемдәге һиңә булған ысын кешеләрсә киң карашымды белһәң ине, шул саҡта һин бер минут тормай, башыңдағы кара болот булып торған керле шәленде быргып, минең катҡан кулдарымды каты ҡыҫыр инең бит.* Т. Йәнәби. *Таһир Байышевты беҙ талантлы һәм киң карашлы ғалим, .. үҙенсәлекле бер фекер эйәһе булараҡ хөрмәт менән иҫкә алабыҙ.* Р. Шәкүр.

8. *күсм.* Күпте эсенә алған, күп нәмәгә таралған. □ Широкий, всеобъемлющий. *Киң катламға йәйелдереү. Агитацияны киң күләмдә алып барыу. Эште киң йәйелдереү. Киң танылыу табыу.* ■ *Фәкәт был тәүтормош ғөрөф-ғәҙәт канундары төрки халыктарҙың миллиондарҙан торған киң катламдарына һәм уның интеллигенцияһына йоғонто яһамай ине.* Ә.-З. Вәлиди. *Шулай уҡ киң күләмдә мелиоратив эштәр йәйелдереп ебәреү ҙә күҙ уңында тотола.* Н. Мусин. *[Шөкрү:]. Эйе, Вәлиди Европала киң танылды, бигерәк тә, Германияла.* Н. Асанбаев.

КИҢ БӘЙЕЛЛЕ (Р.: великодушный; И.: magnanimous; Т.: hoşgörülü) *с. диал.*

Киң күңелле. □ Великодушный. *Киң бәйелле кеше. Киң бәйелле булыу.*

КИҢГӘТЕҮ (киңгәт-) (Р.: ослаблять; И.: weaken; Т.: güçsüzlendirmek) *к.*

Ныҡ йонсотоп, хәлһеҙләндереү. □ Обессиливать, ослаблять, доводить до изнеможения. *Аслыҡ киңгәтте. Баланы киңгәтмәй эшләтеү. Ауыр эш киңгәтә.*

КИҢГӘҮ (киңгә-) (Р.: ослабевать; И.: weakenI; Т.: güçsüzlenmek) *к.*

Ныҡ йонсоп, хәлһеҙләнеү, киҫәлеү. □ Ослабевать, обессиливать, изнемогать. *Бала сирләп киңгәгән.* ■ *Ул бахырҙың бауыры, бөйөрө, үпкәләре, йөрәге һәм башҡа эске ағзалары шул зарарлы матдәләрҙән нисек һыҡтап һыҙлаһа, киңгәһә, зәңгәр планетабыҙҙың да яҙмышы ҡыл осонда.* Й. Солтанов.

КИҢЕРҘӘК *и. анат. диал. кар.* **боғарлаҡ.**

КИҢЕРҺЕҮ (Р.: плесенный; И.: musty, mouldy; Т.: küflü) *с.*

1. Иҫкергән, ҡаҡһыған *(еҫкә, тәмгә карата).* □ Плесневой, плесенный; затхлый. *Киңерһеү еҫ. Катыҡтың киңерһеү тәме бар.*

2. Сөскөл, татһыҙ. □ Пресноватый, слегка приторный. *Киңерһеү аҙыҡ. Киңерһеү тәм.*

КИҢ КҮҢЕЛЛЕ (Р.: великодушный; И.: magnanimous; Т.: hoşgörülü) *с.*

Оло тәбиғәтле, кешегә ярҙамсыл, йомарт. □ Щедрый, великодушный, широкая натура. ■ *Таиба әбей, былай изгелексән киң күңелле*

булһа ла, корорак, катырак һөйләшеүсән. З. Биишева. *Көнө буйы ығы-зығынан талыккан Әхмәтзәкир мәғзүм киң күңелле хәзрәт йортонда төнәп калды.* Й. Солтанов. *Был мәлдә уғата киң күңелле ине Аҙнаев, кем нимә һорап килһә, бөтәһен дә бирергә әҙер.* Н. Мусин. *Ул еңеүсе, ә еңеүсе, әйтеп үткәнебеҙсә, киң күңелле була.* Ә. Хәкимов. ● *Күңелең киң булһа, бәхетең кәм булмаç.* Мәкәл.

КИҢКӘЙ *с. диал. кар.* **кәкре 1.** *Киңкәй ағас.*

КИҢКӘЙЕҮ (киңкәй-) *к. диал. кар.* **кәкрәйеү.** *Такта киңкәйгән.*

КИҢЛЕК (киңлеге) (Р.: широта; И.: width; Т.: genişlik) *и.*

1. *Нимәнеңдер* иңе, аркыры үлсәме. □ Ширина, широта. *Күлдең киңлеге. Майҙандың киңлеге.* ■ *Һыуҙың киңлеге биш сажиндан ары юк.* Д. Юлтый. *[Гөлниса] бер көн иртәнсәк тәү башлап һыуға барған сакта йылғаның киңлеген, ташкынлығын күреп курккан да кайғыһынан илай башлаған, ти.* З. Биишева. *Күлдең киңлеге 4—5 сакрым самаһында булғанлыктан, уның бер яғынан икенсе яғында булған нәмәләр күҙгә сак-сак кына күренәләр ине.* М. Ғафури.

2. Иге-сиге булмаған арауык. □ Бескрайнее пространство. *Һауа киңлегендә осоу. Офок киңлеге. Йыһан киңлегендә.* ■ *Ғәлиҙең күңеле киңлектәр теләй.* Ә. Вәли. *Ошондай уй-тойғо менән йәшәгән кыҙ бер көндө йыһан киңлектәрендә эшләү өсөн үçмерҙәр араһында конкурс үткәреләсәген ишетеп калды.* Н. Ғәйетбаев. *Йәйрәп яткан дала, күгелйем киңлектәр, офоктоң һары нур менән каймаланған ситтәре асыкланғандан-асыкланды.* А. Абдуллин. ● *Күңысың тар булһа, донъя киңлегендә ни файҙа.* Мәкәл. *Өйөң тар булһа, донъя киңлеге беленмәç.* Мәкәл.

3. Йәйрәп яткан иркен ер. □ Широта, ширь, простор, раздолье. *Баçыу киңлеге. Тәбиғәт киңлеге. Диңгеҙ киңлеге.* ■ *Күрәйек диңгеҙ киңлеген, күрәйек күңел менән.* М. Кәрим. *Рафик бешкән бойҙай киңлеген сыкты ла, туктап калды.* Ә. Вахитов. *Ул Түрысайына һикереп менде һәм сикһеҙ дала киңлегенә табан елеп сығып китте.* Н. Мусин. *Күҙен томалаған йәште һыпырып, ул [Сәйеф] карашын монарланып яткан дала киңлектәренә күсерҙе.* Ә. Хәкимов. *Алыçка, бик алыçка йәйелгән дала киңлегендә Ырымбур кәлғәһенең һыны төçмөрләнгәс, Илмырҙаның күңеле бер аҙ күтәрелде.* Я. Хамматов.

4. *геогр.* Экваторҙан меридиан буйынса градустар менән үлсәнә торған ара. □ Широта *(географическая). Төньяк киңлек. Көньяк киңлек.* ■ *Африка материгы тотошо менән тиерлек эçе киңлектәрҙә ята.* «Башкортостан укытыусыһы», № 7, 2008. *Мадагаскар бер ҙур жәзирәләр, .. 60 менән 70 градустары һәм көньяк киңлектәренең 10 менән 30 градустары араһында ятыр.* М. Өмөтбаев.

5. *күсм.* Күп яклы булыуҙан, күпте эсенә алыуҙан килгән тулылык, киң күләмлек. □ Широта, обширность *(взгляда, знаний и т. п.). Белем киңлеге. Фекер киңлеге.* ■ *Яңы дәүергә тәҙрә аскан, уның ағымын һәм булмышын нәфис әҙәбиәт аша фекерләү киңлегенә күсергән ижад һәм ижадсы кәрәк.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

6. *күсм.* Сикләнмәгәнлек, йомартлык. □ Щедрость. *Күңел киңлеге.* ■ *Бүтән юктыр ҙа ул һәм булмаç та киңлектәрҙең быға тиңлеге. Илебеҙгә окшаш тыуғандыр ул халкыбыҙҙа күңел киңлеге.* Ә. Атнабаев. *Куя тор киңлекте, аклыкты, кара бул, зәһәр бул дошманға; сер бирмә һыналған куштанға, башыңа бетеү кыл һаклыкты.* Ш. Бабич. *Йәшәү даирәм — ерҙән бейегерәк, күктән түбән — күңел киңлеге.* Т. Ғәниева. *Ул һин генә батыр, һиндә генә асык йөҙ һәм күңел киңлеге.* Н. Нәжми.

КИҢШЕК (киңшеге) (Р.: носовой хрящ; И.: nasal cartilage; Т.: burun kıkırdağı) *и. анат. диал.*

Танау кимерсәге. □ Носовой хрящ.

КИҢШЕРЕК (киңшереге) (Р.: ноздри; И.: nostrils; Т.: burun deliği) *и. анат.*

Танау тишеге. □ Ноздри. ■ *Был еçте, бүре һымак, әллә кайҙан тойҙо ул, шуға күрә, танау киңшеректәрен тағы ла таржайта төшөп, шәберәк йүгерҙе ярһыған көрәшсе.* Б. Бикбай.

КИҢӘЙЕҮ (киңәй-) (Р.: расширяться; И.: widen, broaden; Т.: genişlemek) *к.*

1. Киңлеккә артыу, киң булыу. □ Расширяться, увеличиваться в ширину. *Ярык киңәйгән. Соҡор киңәйгән.* ■ *Берсә киңәйеп, берсә тарайып, берсә быҫранып, берсә таҡырайып киткән юл, беҙгә Оло Боғаҙаҡ буйҙарын күрһәтеп, әлекке өйәҙ ҡалаһы Верхнеуральскиға алып килә.* К. Мәргән. *Күҙҙе асам, әлеге аҡ түңәрәк һаман әйләнә лә киңәйә, үҙе матур төҫлө ул.* С. Агиш. *Артабан, ана теге борологштан һуң, йылға киңәйә, тынысләна.* Ш. Хажиәхмәтов. *Секунд һайын был ярык киңәйә, тәрәнәйә башланы.* Н. Ғәйетбаев.

2. Күләм яғынан ҙурайыу; иркенәйеү. □ Расширяться, становиться большим, раздаваться вширь. *Аяҡ кейеме киңәйгән. Саф һауала үпкәләр киңәйеп китте.* ■ *Бәйләм ойоҡ өҫтөнән кейгән сабата ла һыуланып, кесерәк булһа аяҡтарҙы ҡыра башлай, ләкин көндөҙ ҡыҙыу ҡояш аҫтында бешеп урак урғанда, ул сабаталар кибәләр, киңәйәләр.* Ғ. Хәйри.

3. *күсм.* Эстәлек менән байыу, артыу. □ Обогащаться *(знаниями, взглядами). Күп уҡыу аң-белемде киңәйтә. Донъяға ҡарашы киңәйҙе.*

4. Һан, күләм яғынан үҫеү, көс-ҡеүәт артыу. □ Расширяться, увеличиваться *(по численности, по размерам). Төҙөлөш эштәре көндән-көн киңәйә.* ■ *Ырҙын табағында иген таҙартыу эше көндән-көн киңәйә бара.* Ә. Вәли. *Алдағы йылда конструкцион материалдар эшләп сығарыу киңәйәсәк.* «Башҡортостан», 29 май 1999.

5. Киң таралыш алыу, көсәйеү. □ Расширяться, распространяться. *Агитация эше киңәйҙе. Сәйәси ҡаршылыҡ киңәйҙе.* ■ *Был ихтилалға фронт буйындағы бөтә крәҫтиәндәр ҡушыласаҡтар. Ул хәрәкәттең киңәйеп китеүе бик мөмкин.* Д. Юлтый. *«Мәркәз Шура»ның эше көндән-көн киңәйә.* Й. Солтанов. *Өс полкта ла .. бөтә формаһы менән һуғышҡа ҡаршы агитация киңәйҙе.* А. Таһиров.

КИҢӘЙТЕЛЕҮ (киңәйтел-) *к. төш. ҡар.* **киңәйтеү.** *страд. от* **киңәйтеү.** *Ҡарабойҙай сәсеүлектәре киңәйтелде. Киңәйтелгән йыйылыш.* ■ *Яңы әҙәби бүлектең бер киңәйтелгән ултырышында Поәзовскийҙы ауыл тормошон белмәү, формализм, конфликтһыҙлыҡ тигән етешһеҙлектәрҙе үрсетеүҙә ғәйепләп, ҡолаҡтарын әсе борослап ыуаланылар.* Й. Солтанов. *Келәттең ал яҡ стенаһына ике ҙур тәҙрә эшләнде, күтәрмәһе киңәйтелде, хатта семәрле тотонғостар эшләнде.* З. Биишева.

КИҢӘЙТЕҮ (киңәйт-) (Р.: расширять; И.: widen, broaden; Т.: genişletmek) *к.*

1. Киңлеккә арттырыу, киң итеү. □ Расширять, ширить. *Майҙанды киңәйтеү. Урамды киңәйтеү. Арыҡты киңәйтеү. Юлды киңәйтеп һалыу.* ■ *Кукуруз баҫыуын киңәйтмәбеҙ быйыл — тағы ла бер-ике силос ямы ҡаҙырға кәрәк булыр.* Й. Солтанов. *Ул, ике ҡулы араһына аркыры ағас ҡуйып, ҡосағын киңәйтеп .. өйгә табан йәһәт кенә атларға тырышты.* З. Биишева. *Әрәмәлектәрҙән тыныс аға торған йылғалар, тауҙар һирәгәйгән урындарҙа бергә ҡушылып, ярҙы киңәйтеп, ҡаршылыҡ тура килгән урындарҙа туғайҙар яһап, ҙур булып ағалар.* А. Таһиров.

2. Күләм яғынан ҙурайтыу; иркенәйтеү. □ Расширять, делать свободнее. *Салбарҙың билен киңәйтеү. Аҙбарҙы киңәйтеп һалыу.*

3. *күсм.* Эстәлек яғынан байытыу, арттырыу. □ Расширять, обогащать *(о познаниях, взглядах).* ■ *Әлбиттә, Новиков шунан сығып, мәсьәләне киңәйтеп ебәргән.* Д. Юлтый. *Уҡыған китаптарҙы уҡыусыларҙан һөйләтеү ҙә телмәрҙе үҫтереү һәм балаларҙың аңын киңәйтеү өсөн билдәле әһәмиәткә эйә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», № 2, 2008.

4. Һан, күләм яғынан арттырыу, көсәйтеү. □ Расширять, увеличивать *(по численности, по размерам). Хужалыҡты киңәйтеү.* ■ *Коллектив район тарихын өйрәнеү буйынса ойошторолған музейҙы киңәйтеп, Ғ. Әмири музейы итеү һәм мәктәпкә уның исемен биреүҙе юллау тураһында хыяллана.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 6, 2008. *Әбеллайыр хан ҡарағалпаҡтарҙы үҙенә буйһондороп торорға тырышты, биләмдәрен киңәйтеү юлы менән йәшәне.* Ғ. Хөсәйенов.

5. Киң ҡатламға таралыу мөмкинлеген булдырыу, тәьҫир көсөн арттырыу. □ Расширять, распространять. ■ *Ул еврейҙар, поляктар тураһында белгән «ваҡиғаларҙы» ла өҫтәп ҡуялар, .. провокацияны киңәйтәләр, ҡабарталар ине.* А. Таһиров.

КИҢӘЙТТЕРЕҮ (киңәйттер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **киңәйтеү.** *понуд. от* **киңәйтеү.**

КИҢӘРҘӘК (киңәрҙәге) *и. диал. ҡар.* **боғарҙаҡ.**

КИОСК (киоскыһы) [рус. < фр. *kiosque*] (Р.: киоск; И.: kiosk, booth; Т.: büfe) *и.*

Ваҡ-төйәк нәмә һата торған бәләкәй павильон. □ Киоск. *Сувенирҙар киоскыһы. Гәзит-журнал киоскыһы. Тәмәке киоскыһы.* ■ *Киоск быйылдан башлап ике сменала эшләй.* Картотека фондынан. *Һәйкәл янында ике киоск эшләй, ләкин уның береһе туңдырма һата, икенсеһе ваҡ-төйәк менән һатыу итә.* «Башҡортостан», 12 август 2008. *Теге кеше, гәзит киоскыһы янында бер аҙ туҡтап торғандан һуң, кире яҡҡа китте лә барҙы.* Н. Ғәйетбаев. *Киоск та бикләнгән, уның кескенә тәҙрәһе тупһаһында, зәңгәр күҙҙәрен мөлдөрәтеп, бер матрёшка ултыра.* Т. Ғарипова.

КИОСКЁР [рус.] (Р.: киоскёр; И.: stall-keeper; Т.: büfe satıcısı) *и.*

Киоскылағы һатыусы. □ Киоскёр, продавец в киоске. *Киоскёр булып эшләү. Киоскёр ҡыҙ.* ■ *Арынбаҫаров хатты күңелләнеп китте, көлөп ебәрҙе, киоскёр ҡатындың түңәрәкләнеп киткән күҙҙәренә лә иғтибар итмәйенсә: — Ун етенсе июль... — тип ҡысҡырып уҡыны.* Д. Бүләков.

КИП (кибе) (Р.: форма; И.: shape; Т.: şekil) *и. иҫк.*

Ҡалып, форма. □ Форма. ● *Кирбес кибенән үҫмәҫ.* Әйтем.

КИПАРИС [рус. < гр. *kyparissos*] (Р.: кипарис; И.: cypress; Т.: selvi) *и. бот.*

Көньяҡта үҫә торған һәр ваҡыт йәшел ылыҫлы бейек ағас. □ Кипарис *(дерево)* (лат. *Cupressus*). *Һомғол кипарис. Кипарис үҫтереү.* ■ *Гурзуф бына, Пушкин йөрөгән урын, бына ул ултыртҡан кипарис.* Ғ. Сәләм. *«Кипарис-тар сәскә атҡан саҡта...» — тип башлана ине шиғри хат.* Й. Солтанов. *Диңгеҙ артында бәрхәттән ер, тау һәм кипаристар күренә.* С. Агиш. *Кипарис, пальма, хөрмә, сәрбей ағастары шау йәшел төҫтә.* Ғ. Хөсәйенов.

КИПАРИСТАР (Р.: кипарисовые; И.: cupressaceae; Т.: servigiller) *и. бот.*

Кипарис һымаҡтар, ылыҫлылар класына ҡараған үҫемлектәр ғаиләһе *(кипарис, артыш, сауыр һ.б. инә)*. □ Кипарисовые *(семейство хвойных деревьев)* (лат. *Cupressus*).

КИПЕС *и. диал. ҡар.* **ҡарағура.**

КИПКӘН ИТ (Р.: вяленое мясо; И.: dried meat; Т.: kurutulmuş et) *и. диал.*

Ҡаҡланған ит. □ Вяленое мясо.

КИПКӘР (Р.: сушеница; И.: cudweed; Т.: altınotu) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһенә ҡараған, һабағы йөнтәҫле күп йыллыҡ дарыу үләне. □ Сушеница (лат. *Gnaphálium*). *Кипкәр йыйыу. Кипкәр киптереү.*

КИПЛӘНЕҮ (киплән-) *ҡ. төш. ҡар.* **кипләү.** *страд. от* **кипләү.** *Кипләнеп бәйләнгән ҡаҙ мамығы.* ■ *Боланды ла йоҡҡайным; инде хәлем ҡалманы: ауыҙыма кипләнгән мөгөҙө һис һынманы.* «Урал батыр».

КИПЛӘТЕҮ (киплӘт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кипләү.** *понуд. от* **кипләү.** *Тауарҙы кипләтеү.*

КИПЛӘҮ (киплә-) (Р.: укладывать кипами; И.: pack; Т.: ambalajlamak) *ҡ.*

Таҫлап һалыу, төргәкләү. □ Укладывать кипами, упаковывать. *Тауарҙы кипләп һалыу. Дәфтәр кипләү.* ■ *Ике тирмәнең кирәгәләрен, саңыраҡтарын, кейеҙҙәрен урынын-урынына кипләп, ике арбаға тейәгәндәр.* Ғ. Хөсәйенов.

КИПСӘЛДЕРЕҮ (кипсәлдер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кипсәлеү 2.** *понуд. от* **кипсәлеү 2.** *Кипсәлдереп теккән салбар.*

КИПСӘЛЕҮ I (кипсәл-) (Р.: застревать; И.: stick; get stuck; Т.: takılıp kalmak) *ҡ.*

1. Тығыҙ урынға тығылып ҡыҫылыу; кәпләнеү. □ Застревать *(в чем-л. узком).* ■ *Батырша ҙур йылғаға килеп кипсәлә, ҡырҡлап драгун, офицерҙар уратып тотҡондарын саҡ-саҡ тотоп ала.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Тәнгә һылашып ҡыҫыу *(кейемгә ҡарата)*. □ Обтягивать, плотно облегать *(об одежде)*. *Кипсәлеп торған күлдәк.* ■ *Күлдәгемдең яғаһы ла бик килешле, тап-*

таман ғына еңе, итәге лә оҙон түгел, кипсәлеп тора биле. А. Игебаев.

КИПСӘЛЕҮ II (кипсәл-) *к. диал. кар.* **ҡарышыу.**

КИПСӘҮ I (кипсә-) (Р.: сделать обтягивающим; И.: make fit closely; Т.: dar etmek) *к.*

Ҡыҫып торорлоҡ тығыҙ, тар итеү *(кейемде).* □ Сделать обтягивающим, плотно прилегающим *(платье, одежду). Күлдәкте кипсәп тегеү.* ■ *Түрәләрҙе коридор ишеге алдында күк соға кәзәки кейгән, кәзәкийенең еҙ төймәләрен һимеҙ кәүҙәһенә кипсәп элгән .. берәү .. ҡаршы алды.* Ғ. Дәүләтшин.

КИПСӘҮ II (Р.: обтягивающий; И.: skin tight; Т.: dar) *с.*

Тар, тығыҙ *(кейемгә ҡарата).* □ Сильно обтягивающий, узкий *(об одежде). Кипсәү күлдәк.* ■ *Васяның кесерткән киндеренән тегелгән күлдәк, салбарының ямау һалынмаған ере юҡ, өҫтәүенә уның кейеме ҡыҫҡа ла, кипсәү ҙә.* Х. Мохтар.

КИПТЕРГЕС I (Р.: сушилка; И.: dryer; Т.: kurutma cihazı) *и.*

Дымлы нәмәләрҙе киптереү өсөн эшләнгән ҡоролма. □ Сушилка. *Орлоҡ киптергес. Бойҙай киптергес. Кер киптергес.* ■ *[Мәһира:] Орлоҡ киптергес вәғәҙә иттеләр, һаман килгәне юҡ.* Х. Ғиләжев.

КИПТЕРГЕС II (Р.: промокательная бумага; И.: blotting paper; Т.: kurutma kâğıdı) *и.*

Ҡара ҡорота торған ҡағыҙ. □ Промокательная бумага, промокашка. *Дәфтәр киптергесе.* ■ *Һин булмаһаң – киптергескә һеҙеп бөтөр тамсы. Һин көс бирһәң – ярһыу диңгеҙ мин!* Р. Назаров. *Сәйф һалҡын тир бәреп сыҡҡан маңлайына ҡағыҙҙар араһынан киптергес алып баҫты.* Т. Ғарипова.

КИПТЕРЕЛЕҮ (киптерел-) *к. төш. кар.* **киптереү 1, 2.** *страд. от* **киптереү 1, 2.** ■ *Осорманан ҡаҡланған ҡаҙҙар, киптерелгән эремсек-короттар төшөрөлдө.* Ә. Хәкимов. *1967 йылдан башлап утыҙ биш мең гектарға яҡын һаҙлыҡ киптерелгән.* Д. Буләков. *Әлморон ҡыҙғылт-һары төҫтән ҡуйы ҡыҙыл төҫкә инһә һәм еҫе сыҡмаһа, емештәр һәйбәт киптерелгән тигән һүҙ.* «Башҡортостан», 27 ноябрь 2008. *Иҫәкәй туҫтаҡ тултырып туралған һалҡын йылҡы итенән алда ылаҡта киптерелгән ҡоротҡа үрелде.* Н. Мусин. *Киптерелгән йылҡы тарамышы тәүҙә талҡыла талҡылана.* Я. Хамматов.

КИПТЕРЕНЕҮ (киптерен-) (Р.: сушиться; И.: dry, get dried; Т.: kurutulmak) *к.*

Кейемде киптереү. □ Сушиться, обсушиваться. *Утта киптеренеү. Киптеренеп алыу. Киптеренеп ултырыу. Киптеренеп ятыу.* ■ *Өҫ-башыбыҙ лысма еүеш, киптеренер әмәл юҡ.* Ә. Хәкимов.

КИПТЕРЕҮ (киптер-) (Р.: сушить; И.: dry; Т.: kurutmak) *к.*

1. Дымлы, һыулы нәмәләрҙең дымын бөтөрөү; ҡоро итеү. □ Просушить, сушить. // Сушение. *Керҙе киптерергә элеү. Утынды киптереп алыу. Киптереп ҡуйыу. Киптереп ултырыу.* ■ *Дала еле ҡышын буран килтерә, йәйен ҡыуанлығы менән бар тереклекте киптерә.* З. Ураҡсин. *Оҫҡонло яланындағы бесәнде бер ыңғай ғына киптереп, йыйып алып булманы.* Н. Мусин. *Ағас материалдарын яҡшы киптереү тураһында яҙылған мәҡәлә уға [Әхмәткә] йоҡларға ятҡас та тынғы бирмәне.* Картотека фондынан. *Йәйге эҫелә рәшә булһа, игендәрҙе киптерер.* Һынамыш. ● *Һыуһыҙ йыуған елһеҙ киптерә.* Мәҡәл. *Ярлы еүеш күлдәген өҫтөндә киптерер.* Мәҡәл. *Иҙел кисмәйенсә аяғыңды киптермә.* Мәҡәл. *Һин белгәнде – киптереп элгән!* Әйтем.

2. Ситкә ағыҙып һыуын бөтөрөү. □ Осушить. // Осушение *(о болоте, водоёме). Күлде киптереү. Һаҙлыҡты киптереү.* ■ *Туңәрәккүлде беҙ бынан ике йыл элек киптергәйнек инде.* Ғ. Аллаяров. *Аждаһалар ҡояш ятатмай. Кибеп үлә, шуға бит һаҙ киптерәбеҙ беҙ ҙә...* З. Биишева. *Атбатҡан төбәгендә киптереү эштәре башлап ебәреү өсөн мелиораторҙарҙы үҙебеҙгә саҡырҙыҡ.* Д. Буләков.

3. Һутын бөтөрөү, ҡоро итеү *(һаҡлау ниәте менән).* □ *Иген киптереү. Емеш-еләк киптереү. Бәшмәк киптереү.* □ Сушить. // Сушка *(для хранения).* ■ *Әле иртәгә ҡайнағаң эргәһенә барып ҡайтайым тип сейә киптерергә ҡуйҙым.* Т. Хәйбуллин. *Мәһитап иртә яҙҙан уҡ һары буяҡ үләненең*

япрактарын йыйып киптерә лә, һөттә иҙеп, һары буяу яһай. Ғ. Ибраһимов.

4. Бик нык һыуһатыу. □ Просохнуть, испытывать жажду. *Сәй эсермәй киптереп бөттөләр.*

5. *күсм.* Нык ябыктырыу. □ Иссушить. *Ҡайғы-хәсрәт киптерҙе. Сирҙәр киптерҙе.* ■ *Шул ғына мәсьәлә киптерҙе мине.* Б. Бикбай.

КИПТЕРТЕҮ (киптерт-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **киптереү.** *понуд. от* **киптереү.** ■ *Ҡояш күтәрелгәйне, тамаҡтарҙы киптертеп, ҡыҙҙыра башлағайны.* Й. Солтанов.

КИПШЕНДЕРЕҮ (кипшендер-) *ҡ. диал. ҡар.* **елләтеү.**

КИПШЕНЕҮ (кипшен-) (Р.: сушиться; И.: dry; Т.: kurutulmak) *ҡ.*

1. Бер аҙ кибенеү, киптеренеү. □ Сушиться, обсушиваться. *Кипшенеп алыу.* ■ *Бүрәнә өҫтөндә ултыра торғас, өҫ-баш та аҙырак кипшенде.* Ф. Иҫәнғолов. *Төнгө ысыҡтан кипшенгән биҙгәләктәр серәкәй ауларға тотондо.* Ә. Чаныш.

2. *ҡар.* **кипшеү I.** ■ *[Мирхәйҙәров:] Ер кипшенһә, .. ес смена сәсәбеҙ инде, орлоҡ бар, етерлек...* Т. Ғарипова. *Ҡондорсаның һыуы ҡайтһа ла, үҙәне һаман кипшенмәгән һаҙамыҡ ине әле.* Ә. Хәкимов. *Ер ҡарҙан әрселгән, кипшенгән тау битләүҙәрен һөрә башлағандар.* Ш. Янбаев.

КИПШЕҮ I (кипше-) (Р.: высыхать; И.: dry out; Т.: kurumak) *ҡ.*

Бер аҙ кибеү; һурығыу. □ Высыхать, подсыхать. *Ерҙең кипшегәнен көтөү.*

КИПШЕҮ II (Р.: подсохший; И.: dried out a little; Т.: kuru) *с.*

Әҙ генә кипкән, һурыҡҡан. □ Подсохший. *Кипшеү ерҙе ҡаҙыу еңелерәк. Кипшеү керҙе үтекләү.*

КИР I [дөйөм төрки *кәр-*] (Р.: мухортый; И.: bay; Т.: doru) *с.*

Һарғылт туры *(ат төҫөнә ҡарата).* □ Мухортый *(о масти лошади). Кир ат. Кир айғыр. Кир ҡонажын.* ■ *Алдар маңлай тирен һөрттө, кир атҡайын һөйҙө ялынан.* Ғ. Ибраһимов. *Атайым .. кир атын менеп, беҙҙе оҙатырға сыҡты.* Д. Юлтый. *Ә минең кир айғыр һуң? Ат түгел — аҡыл эйәһе, — ти Әхәт, күңелле көлөп.* З. Биишева. *Ғүмәров та менгән кир атының үреп һалған кикел ялдарын.* Халыҡ йырынан.

КИР II [дөйөм төрки *кәр-*] (Р.: мухортая лошадь; И.: bay, with yellowish markings; Т.: doru at) *и.*

Һарғылт туры төҫтәге ат. □ Мухортая лошадь. ■ *Көмөш кенә эйәр бик килешә, менгән генә атың кир булһа.* Халыҡ йырынан. *Менгән генә атым ай кир булыр, тибенгеһе уның да тир булыр.* Халыҡ йырынан.

КИРАМ [ғәр. كرام] (Р.: великодушный; И.: magnanimous, generous; Т.: yüce gönüllü) *с. иҫк.*

Киң күңелле, яҡшы уйлы, илгәҙәк. □ Великодушный, милосердный. ■ *Үҙеңдең фазыл вә кирамың берлә ҡабул ҡыл.* М. Өмөтбаев.

КИРАМАТ *и. диал.*

1. *ҡар.* **ғәжәп.** ■ *Әүәл түйҙәр кирамат матур булды.* Экспедиция материалдарынан.

2. *ҡар.* **афәт.**

КИРАМӘТ [ғәр. كرامت] *и. ҡар.* **кәрәмәт.** ■ *Кем еңер һуң: тимер кирамәтме, ихтыяр көсөмө, броняға төрөнгән немецмы, илен һөйгән башҡортмо?* Картотека фондынан.

КИРАСА [рус. < фр. *cuiras*] (Р.: кираса; И.: cuirass; Т.: zırh) *и. тар.*

1. Элекке заманда сәнсә һәм саба торған һуғыш ҡоралдарынан күкрәк һәм арҡаны һаҡлау өсөн тимер кейем. □ Кираса *(латы).*

2. Көнбайыш Европа һәм 1917 йылға тиклем рус армияһында ҡайһы бер гвардия полктарының парад формаһы. □ Кираса *(парадная форма).*

КИРАСИР [рус. < фр. *cuirassier*] (Р.: кирасир; И.: cuirassier; Т.: zırhlı süvari) *и. тар.*

1. Атлы армияла кираса (1) кейгән яугир. □ Кирасир.

2. Көнбайыш Европа һәм 1917 йылға тиклем рус армияһында кавалерия полктарында хеҙмәт итеүсе һалдат йәки офицер *(парадҡа сыҡҡанда кираса кейгәнгә шулай аталған).* □ Кирасир.

КИРБЕС I [рус. *кирпич*] (Р.: кирпич; И.: brick; Т.: kerpiç) *и.*

1. Балсыҡ менән ҡомдан иҙеп, ҡалыпҡа һуғып эшләнгән төҙөлөш материалы. □ Кирпич. / Кирпичный. *Йөҙләү кирбесе.*

Утка сыҙамлы кирбес. Ҡыуыш кирбес. Кирбес өй. Кирбес мунса. Кирбес заводы. Кирбес һуғыу. Кирбес һалыу. Кирбестән күтәртелгән нигеҙ. Ҡыҙыл кирбестән һалынған йорт. ■ *[Карам] көнөнә икешәр-өсәр ҡат юллап, .. такта, шифер, кирбес кеүек төҙөлөш ҡорамалдары килтерҙе.* Ә. Хәкимов. *Күк йөҙө аяҙ, .. ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән йәшеллеккә сумған йорт...* Т. Ғарипова. *Сәмиғ кирбес һалырға, панелдәр беркетергә, бейеклеккә менергә-төшөргә өйрәнде.* Т. Ғиниәтуллин. *Әйтерһең дә, өй бүрәнәнән түгел, ә яҫы кирбестән һалынған.* Р. Камал.

2. Дүрткелләп ҡалыпҡа һалып һуҡҡан нәмә. □ Кирпич *(что-то квадратной формы). Торф кирбесе. Күмер кирбесе. Тиҙәк кирбесен яғыу.* ■ *Өйҙәрҙең күбеһе, унын-бынан ғына һуғылған, кәҫтән йәки саман кирбесенән һалынғандар.* Ғ. Дәүләтшин.

КИРБЕС II (Р.: кирпичный; И.: brick; Т.: kerpiç) *с.*

1. Кирбестән (I) эшләнгән. □ Кирпичный. *Кирбес өй.* ■ *Ҡотлоярҙың бәләкәс кенә кирбес өйө, ныҡып тултырған кеүек, халыҡ менән тулған.* Һ. Дәүләтшина. *Ике ҡатлы кирбес өй эргәһенә килеп туҡталғас, эре ҡиәфәттәге бер төркөм яҡшы кейемдәге түрәләр, баштарын эйеп, ихтирам менән ҡаршы алды уларҙы.* Я. Хамматов.

2. Дүрткел, кирбес кеүек. □ Кирпичный. *Кирбес икмәк алыу. Кирбес өй. Кирбес сәй.* ■ *Баракка ҡайтып, кирбес сәй бешереп, сәй эсергә ултырҙыҡ.* Д. Юлтый.

КИРБЕСЛӘҮ (кирбеслә-) (Р.: формовать в виде кирпича; И.: make brick like; Т.: kerpiç şekline getirmek) *ҡ.*

Кирбес рәүешенә килтереү; кирбес итеү. □ Формовать в виде кирпича, спрессовывать в виде кирпича, брикета. *Кирбесләп һуғыу.*

КИРБӘҘ *с. диал. ҡар.* **ҡылансыҡ.** *Кирбәҙ ҡыҙ. Кирбәҙ бала.*

КИРГЕ I (Р.: пяло; И.: tambour; Т.: gergef) *и.*

1. Төрлө нәмәне кирәү өсөн ҡулланылған ҡулайлама. □ Пяло, пяльцы. *Тире киргеһе. Киргегә ҡуйып сигеү. Шәлде киргегә киреү.* ■ *Ултырма ҡыҙҙары, киргеләре өҫтөнә тағы ныҡырак эйелеп, үҙ-ара шырк-шырк килделәр.* Ф. Иҫәнғолов. *Әсәһе сигеү киргеһен өҫтәлгә килтереп ҡуйҙы, төрлө төҫтәге ебәк ептәрен алып килде.* Ғ. Ғүмәр. *Айыу шикелле итеп тунарға кәрәк, шунһыҙ бындай тығыҙ йөнлө ҙур тирене киргегә тартып булмаҫ, тигән фекергә килделәр.* Н. Мусин.

2. Ҡул бысҡыһының керешен бора торған таяҡ. □ Закрутка тетивы *(лучковой пилы).*

КИРГЕ II *бәйл. диал. ҡар.* **алып II.**

КИРГЕС *и. һөйл. ҡар.* **кирге I.**

КИРГЕ ЭНӘҺЕ (Р.: крючок для вышивания; И.: embroidery hook; Т.: çengel) *и.*

Ҡайыу эшендә ҡулланылған ырғаҡлы энә; сигеү энәһе. □ Крючок для вышивания. *Кирге энәһе менән сигеү.*

КИРҘЕРЕҮ (кирҙер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **киреү 1, 2.** *понуд. от* **киреү 1, 2.** *Тиреләрҙе кирҙереп ҡуйыу.*

КИРЕ I (Р.: противоположный; И.: opposite; Т.: karşı) *с.*

1. Тейешле тарафҡа ҡаршы. □ Обратный, противоположный. *Кире яҡ. Кире йүнәлешкә барыу.* ■ *Теге тимер киҫәге, резинаға бәрелгәндәй ҡаҡлығып, кире яҡҡа ырғыны, хатта саҡ-саҡ Батырҙың башына теймәне.* Н. Ғәйетбаев. *Әхәт нисек баҫҡанын да белмәй, бөтөнләй кире яҡҡа атланы.* Н. Мусин. *Бейеш .. эҙ юғалтырға тырышып, бөтөнләй кире яҡҡа сапты.* Я. Хамматов.

2. Көткәнгә ҡапма-ҡаршы булған, ҡапма-ҡаршы эстәлекле. □ Отрицательный, противоположный. *Кире һөҙөмтә. Киреһен һөйләп тороу. Кире яуап биреү.* ■ *Киреһен һөйләп торһа, халыҡ уның Нәғименән йөҙ борасаҡ.* Т. Ғарипова. *Былар өсөһө лә бер йылды, бынан өс йыл элек, комсомолға ағза булып ингәндәр, һаман да йүнле эш күрһәтә алмайҙар, киреһен эшләп һаман керҙәре, сирҙәре килеп сығып ҡына тора.* А. Таһиров.

3. Хуп күрелмәгән, ыңғай булмаған; насар, тиҫкәре сифатлы. □ Отрицательный. *Кире күренештәр.* ■ *Һайлаусылар күҙе алдында ла Арынбаҫаров йөҙөндә кире образ — дошман, ҡороҡкос образы һынлана.* Д. Бүләков. *«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының Беляев тәржемә иткән версияһындағы үҙе ҡарһаҡ, үҙе аҡһаҡ һәм көмөрө Айҡара, башҡа версияларҙағы ҡотор башлы*

ҡолтор таҙ Ҡарағол — ана шундай килбәтһеҙ һәм кире образдар. Ә. Харисов.

4. Кеше яйына килмәгән; тиҫкәре. □ Своенравный, строптивый; несговорчивый, упрямый. *Кире бала. Кире әҙәм.* ■ *Муйылбикә үгәй улына, унан да бигерәк, кире холоҡло атаһына асыуланды.* Һ. Дәүләтшина. *Инде күпме тылҡыны бит! Һаман ышанмай! Шул тиклем дә кире кеше булыр икән!..* Н. Ғәйетбаев. *[Сәғәҙиев:] Ямғыр болоттан яуа. Ә болот — кире холоҡло әйбер.* А. Абдуллин. ● *Кире кешенең аҡылы — кермәле лә сыҡмалы.* Мәҡәл.

5. *физ.* Электрондарҙан торған, электр төрөнә бәйле; *киреһе* — ыңғай. □ Отрицательный *(заряд, магнитное поле). Кире зарядлы өлөшсә.*

КИРЕ II (Р.: обратно, назад; И.: back; backwards; Т.: geri) *р.*

1. Тәүге урынға йәки тәүге хәлгә ҡаршы. □ Обратно, назад. *Кире алыу. Кире ҡайтыу. Кире әйтеү. Кире яҙыу. Кире кереү. Кире бороу.* ■ *Биш-алты көндән буш арбалар әйләнеп кире ҡайттылар.* *Һ. Дәүләтшина. Күкбүре, ояһы тирәләй арлы-бирле йөрөштөрҙө лә, кире инеп ятты.* Т. Ғарипова.

2. Ҡабаттан, яңынан. □ Заново. *Кире йырлай башланы. Йомғаҡты кире тағатыу. Өйгә ҡайтып кире килеү.* ■ *Шеш тип асһалар, бөтөнләй икенсе нәмә булып сыҡты. Был ерҙе кире тегеп, икенсе урындан тағы ярҙылар.* Р. Солтангәрәев. *Теге китҡәс тә, малайҙар килеп, ҡамыт бауҙарын, мисәүҙәрен, дилбегәһен бөтәһен дә кире һүтеп ҡуйғандар.* К. Мәргән.

♦ **Кире ҡағыу** 1) ҡаршы тороп, һөжүмде ҡайтарыу. □ Отбить, отразить. *Һөжүмде кире ҡағыу;* 2) үҙ өҫтөңә алмай, дөрөҫ түгел тип барыу. □ Отвергать, не принимать, отклонять. *Дәлилде кире ҡағыу. Ғәйепте кире ҡағыу;* 3) ҡабул итеүҙән баш тартыу. □ Отказываться принимать. *Бүләкте кире ҡағыу. Һүҙҙе кире ҡағыу. Үтенесте кире ҡаҡмау.* ■ *Сәмиғуллаҡын да Ғилаж хаҡында ҡырын фекерҙә булыуы Сөнәғәткә оҡшаны. Шуға күрә ул еҙнәһенең һүҙен кире ҡаҡманы.* Ж. Кейекбаев. *[Заһиҙә:] Эш эшләргә вәғәҙә биргәс, теләкте кире ҡаҡмаҫ [Мирза].* Ғ. Хәйри. **Кире ҡайтыу** тәүге уй-ниәттән баш тартыу. □ Отказаться от намерения, желания. ■ *Һуңғы көндәрҙә күргән ауырлыҡтарҙан һуң үҙ уйынан кире ҡайтмаҫмы?* Н. Ғәйетбаев. *Мәҙинә ҡаушаны. Көрәшергә була ҡул һуҙырға итте, ләкин, Ғәлимә ҡымшанмай ҙа торғас, ул уйынан кире ҡайтты.* Т. Ғарипова. **Кире түңкәреү** ниәтләгән эштән баш тартыу. □ Отказаться от задуманного. ■ *[Байрамбикә әбей:] Улыңды саҡырып алып әйт, әгәр ул юлыңдан баш тартмаһаң, беҙҙән хәйер-фатиха юҡ, тиң. Ул эшен кире түңкәрһен.* К. Мәргән. **Кире уйлау** дүнеү, тәүге уйҙан ҡайтыу. □ Раздумать, передумать, отказаться от принятого решения. ■ *Ҡыҙ уны уятырға итте лә кире уйланы.* Н. Ғәйетбаев. *Беҙ, арҡаларға тоҡтарҙы аҫҡан килеш, бер бик яҡшы вагонды самаланыҡ та, быныһына һәр нисек тә индермәҫтәр, тип тағы кире уйланыҡ.* Ғ. Хәйри. **Кире һуғыу** ҡабул итмәй кире ҡағыу. □ Отвергать, не принимать, отклонять. ■ *Талаҡы бөтмәгән, бәхет ишимәләре ҡоромаған икән әле. Бикмырҙа ғына кире һуҡмаһын.* Ә. Хәкимов. *[Азамат:] Һин әйтһәң, гөбөрнатор ҙа, бүтән кантон башлыҡтары ла, моғайын, һүҙеңде кире һуҡмаҫтар.* Я. Хамматов. **Кире һүреү** дүндереү. □ Разубеждать, отговаривать. ■ *Миләүшә егетте кире һүргән: «Ҡуй, егет, юҡ эш менән йөрөмә»,— тигән.* Әкиәттән. *Әйтерһең, табанымды коридор иҙәненә ҡаҙаҡлап ҡуйғандар. Берәү егет, йәнәһе, уйынан кире һүрелмәй.* Н. Мусин. *«Мин барам! Ал, үкенмәҫһең», — тип атлығып торған Козловты кире һүрмәһә, юл буйы көләмәс тыңлап рәхәтләнеп, күңел асып бараһы икән...* Ә. Хәкимов. **Кире һүтеү** эште тәүге хәленә ҡайтарыу. □ Вернуться к исходному состоянию. ● *Бер теләнгән икмәк кире йәбешмәй.* Мәҡәл. *Эшең кире китһә, эше алға барғанға кәңәш ит.* Мәҡәл. *Яҙған мал үҙ аяғы менән кире ҡайта.* Мәҡәл. *Бер төкөргән төкөрөгөңдө кире йотма.* Мәҡәл.

КИРЕ III (Р.: после; И.: after; Т.: sonra) *бәйл.*

Сығанаҡ килештәге исем йәки алмаштарҙан һуң килеп, билдәле бер мәлдән, эштән һуңғы ваҡытты белдерә. □ После *(послелог с исходным падежом). Шунан кире.*

■ *Ҡыуаныр йәшәргә лә бит, намыҫына тынғы юҡ, сөнки ул кеше ҡайғыһы төштән кире тип өйрәнмәгән.* Ә. Хәкимов. *Бынан кире, — тине Барсынбикә, — башыңды минең мендәргә терәйһе булма!* Т. Ғарипова. *«Анау Нурбулат ыңғайына юҡҡа ғына сығып киткәнмен. Уҡыуҙың да, заводтың да ни кәрәге бар? Бынан кире ауылымды мәңге ташламам», — тип уйлай Һолтанбай.* Н. Мусин. ● *Ҡалған эш — төштән кире.* Мәҡәл.

КИРЕ IV *с. ҡар.* **тиҫкәре.**

КИРЕГӘ (Р.: наоборот; И.: inside out; back to front; Т.: tersine) *р.*

Кире яҡҡа, кирегә табан. □ Наоборот, в обратную сторону. *Кирегә китеү. Кирегә барыу.* ■ *Осоусы кеҫәртке, кирегә боролоп, малай менән ҡыҙға ташланыу өсөн ыныҡыя башланы.* Н. Ғәйетбаев. *Юҡ, Арынбаҫаров хәҙер бирешмәйәсәк, күрәш юлына бер сыҡҡан икән, кирегә боролорға юл юҡ.* Д. Бүләков. *Ана бер үгеҙ ситкәрәк сығып бөтә кәүҙәһе менән кирегә боролған.* А. Таһиров. ● *Киленгә ҡарағансы кирегә ҡара.* Әйтем. *Бер кирегә китһә, гел кирегә китә.* Әйтем. *Алға киткән кешенең эте үлән ашар, кирегә киткән кешенең килене урлап ашар.* Мәҡәл.

♦ **Кирегә бөткән** үҙ һүҙен генә һүҙ итә торған, тиҫкәре. □ Упрямый, не поддающийся уговорам. ■ *Бер аҙ тыныслапһын, уйлаһын, бөтөнләй үк кирегә бөткән, тиҫкәре кеше түгел бит.* Ф. Иҫәнғолов. **Кирегә һаплау** әйтелгән һүҙҙән икенсе төрлө, тиҫкәре мәғәнә сығарыу. □ Истолковывать совсем по-другому. ■ *Саҡ ҡына бер ҡыңғырлыҡ һиҙелдеме, һүҙеңде кирегә һапларға ғына әҙер.* Й. Солтанов. *Минең башымды, нисек кенә ыңғайға һыпырһа ла, мин кирегә һаплайым.* С. Ҡудаш.

КИРЕГӘ ҺАНАУ (кирегә һана-) (Р.: исполнение обряда лечения; И.: sort of magical treatment; Т.: geriye saymak (büyü ile tedavi için) *ҡ. миф.*

Һандарҙы кирегә һанап имләү йолаһы. □ Обряд лечения больного, исполняемый перечислением чисел в обратном порядке. ■ *Балаңа өсйән булһа, кирегә һана ла, төкөр.* Башҡорт мифологияһынан.

КИРЕК *с. диал. ҡар.* **тиҫкәре.**

КИРЕ КЕШЕ (Р.: непутёвый человек; И.: jinx; Т.: uğursuz kimse) *и. диал.*

Юлыҡһыҙ, ҡотһоҙ кеше. □ Непутёвый человек. ■ *Юлға сыҡҡанда кире кеше осраһа, өйгә кереп, аҙыраҡ тороп сығырға кәрәк.* Экспедиция материалдарынан.

КИРЕЛДЕРЕҮ (кирелдер-) (Р.: вызвать желание потянуться; И.: cause to stretch oneself; Т.: gerinmek) *ҡ.*

1. Сабый баланы ҡул менән һыпырып яҙылдырыу, һуҙылдырыу. □ Вызвать желание потянуться. *Баланы кирелдереү.*

2. *эйһ. ф. ҡар.* **кирелеү 2.** *Ниңәлер кирелдерә, һуҙылдыра.*

3. *миф.* Ауырыу эйәһе, яман заттар тәьҫире арҡаһында кирелеү, һуҙылыу, иҫнәү. □ Потягивание, зевота, вызванные духом болезни.

КИРЕЛЕК (кирелеге) (Р.: упрямство; И.: obstinacy, stubbornness; Т.: inatçılık) *и.*

1. Үҙһүҙлелек, тиҫкәрелек. □ Упрямство, своенравие. ■ *Байрамовтың ошо йоҙроҡ хәтле генә малайҙың кирелегенә, үҙенең уға ябай ғына нәмәне лә аңлата алмауына, шартлар дәрәжәгә етеп, асыуы килде.* Картотека фондынан. *Ҡотлояр тағы ла үҙенең кирелеген итте. — Йә, ул алйыған әбей ни һөйләгән тиһең, берәй акиәт һөйләгәндер әле, — тип ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Тик кенә тор, тупаш, һиңә һүҙ бирелмәгән! Беҙҙең шеф ундай кирелектәрҙе яратмай.* Д. Бүләков. *Уның бойороусанлыҡтың еҫен дә аңҡытмаған, аталарса хәстәрлекле тауышы Рауилде иретеп ебәргәндәй булды, кирелектең әҫәрен дә ҡалдырманы.* Б. Бикбай.

2. Көтмәгәндә булған үҙгәреш, тотороҡһоҙлоҡ. □ Резкая смена, непостоянство. *Тәбиғәтенең кирелектәре.* ■ *Әммә был затлы ҡоштарҙан ул яҙмыштың кирелектәрен ҙур түҙемлек менән кисерә алыуы .. көсһөҙҙәрҙе тапап дан яуларға тырышмауы менән өҫтөн...* А. Абдуллин. *Атаһулла ҡарт менән булған фажиғәле хәл Баймораттың бынабына тормошҡа ашырам тип йөрөгән хыялдарын селпәрәмә килтерҙе. Тормоштоң был кирелеге үтеп кенә бара тигәндә, бынау геологтары килеп сыҡты.* Н. Мусин.

3. Кире, ыңғай түгел. □ Отрицание. *Ҡайһы бер рәүештәр һөйләмдән аңлашылған фекерҙе инҡар итеү, ҡаршы ҡуйыу, кирелекте йәки ыңғайлыҡты белдерә.*

КИРЕЛЕ-МИРЕЛЕ *р. һөйл. ҡар.* **кирле-мирле.** *Киреле-миреле һөйләү.* ■ *Сираевҡа ҡарата Ротовтың мөнәсәбәте дөрөҫ булыуын аңлай ҙа башлағайны ул. Ләкин үҙ һүҙен һүҙ итергә, юғарыраҡ вазифа үтәүен күрһәтергә теләү генә уны киреле-миреле хәбәр һөйләргә мәжбүр итә.* Н. Мусин. *[Кыраубикә — Гөлбикәгә:] Йә, килен, ирең юлға сыҡҡанда киреле-миреле һөйләп торма инде!* Д. Юлтый.

КИРЕЛЕП-ҺУҘЫЛЫП (Р.: потягиваясь; И.: stretch oneself; Т.: gerinerek) *р.*

Бер кирелеп, бер яҙылып, ҡабат-ҡабат кирелеп. □ Потягиваясь *(многократно).* ■ *Уғаса булмай, теге егеттәр ҙә кирелеп-һуҙылып урындарынан торҙолар.* С. Кулибай. *Тышҡа сығып, кирелеп-һуҙылып алдым.* З. Ураҡсин. *[Рауза] башҡа ваҡыттағы кеүек, төшәгендә кирелеп-һуҙылып ултырманы, ырғып тороп урҙалағы һыйға кейә торған күлдәгенә үрелде.* Т. Ғарипова. *Нигеҙ буйында әсәһенең ҡуйынында ойоп ятҡан аҡ ҡойроҡло ҡара бәрәс тороп, кирелеп-һуҙылып алды ла һырғаларын йәлпелдәтә-йәлпелдәтә Иштуған янына килә.* З. Биишева.

КИРЕЛЕҮ (кирел-) *ҡ.*

1. *төш. ҡар.* **киреү 1, 2.** *страд. от* **киреү 1, 2.** *Киргегә кирелгән шәл.*

2. Ойоп киткән тәнде һуҙып яҙылдырыу. □ Потягиваться. // Потягивание. *Кирелеп ойоған тәнде яҙыу.* ■ *Айбулат һикереп торҙо. Ике ҡулы менән битен ныҡ итеп ыуалап һыйпап, ҡысҡырып иҫнәне, быуындары шытырлағансы ныҡ итеп кирелде лә, соландағы һәнәген ҡулына тотоп, һыртҡы ҡәртәгә сыҡты.* Һ. Дәүләтшина. *Зәки торҙо, бик ныҡлап кирелергә, ойоп киткән ҡанға йөрөргә юл асып ебәрергә самалағайны ла, майор алдында әҙәпһеҙлек булыр тип тартынды. С. Агиш.*

3. Ныҡ һуҙылып, тартылыу. □ Сильно натянуться. // Натяжение, распрямление. *Ҡаштар кирелеү.* ■ *Аҡҡош кеүек ғорур кирелеп, елкәндәрен наҙлы елберләтеп йөҙөп бара ул.* З. Биишева. *Ул егеттең бәләкәс күҙҙәре көлгәндә, башҡа кешеләрҙеке кеүек, ҡыҫылмайҙар, бәлки күпте күрергә тырышыпмы, әллә бер нәмәне лә күрмәҫкә һалышыпмы, кирелеп асылалар.* А. Таһиров.

4. Ҡайырылып, күкрәк яҙыу. □ Распрямлять, разворачивать. *Кирелеп һуғыу.* ■ *Яр аша осорға торғандай батырҙың ярһыған толпары. Кирелеп ян тартһа, дошманға ҡаҙалыр шикелле уҡтары.* Ғ. Дәүләтов. *Кабинеттан кешеләр, йомоштарын үтәп, сығып бөткәс, Сыртланов, беренсе осрағандағы кеүек, үҙенең йомшаҡ креслоһына кирелеп ултырҙы.* С. Агиш. ● *Ҡайнаға ҡайҡайып тормаҫ, килен кирелеп тормаҫ.* Мәҡәл.

КИРЕЛТЕҮ (кирелт-) *ҡ. ҡар.* **киреләдереү.**

КИРЕЛӘНЕҮ (кирелән-) (Р.: упрямиться; И.: be obstinate; Т.: inat etmek) *ҡ.*

1. Ыңғайға килмәй ҡарышыу; тиҫкәреләнеү. □ Упрямиться, артачиться. // Упрямство. *Ул киреләнеп тора.* ■ *Әхмәт тә әллә ниңә киреләнә башланы: — Миңә күҙ асырға бирмәйҙәр. сауҙагәр ҡыҙы менән йөрөйһөң, тип бәйләнәләр, — ти.* Б. Хәсән. *Альберт киреләнеп торманы, көтөүсе биргән бойҙай икмәге менән бер шешә һөттө ҡулына алды ла, сиҙәмгә ултырып, ашарға кереште.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡыҙының да улар ҡулында икәнлеген белгәс, ни эшләр икән Лайөн? Элеккесә киреләнеп маташырмы?* Н. Ғәйетбаев. *Иртәнсәк Нурия үҙенең бөгөн Ҡасимдар менән китәсәген әйткәс, Тәкбировтың киреләнеп тауыш күтәререн көткәйне.* Н. Мусин.

2. *миф.* Яман көстәр, юғары көстәр тәьҫире арҡаһында тормоштоң алға бармауы. □ Застой в жизни под влиянием плохих сил.

КИРЕЛӘҮ (кирелә-) (Р.: ухудшаться; И.: become worse; deteriorate; Т.: kötüleşmek) *ҡ.*

Насарланыу, уңмай башлау. □ Ухудшаться, становиться хуже. // Ухудшение. *Эштәр киреләнеп тора.*

КИРЕЛӘШЕҮ (киреләш-) *ҡ. һөйл. ҡар.* **киреләнеү.**

КИРЕМ (Р.: противоречие; И.: contradiction; opposition; Т.: engel) *и.*

Тормоштағы, йәмғиәттәге төрлө ҡаршылыҡ, айырмалыҡ. □ Противоречие, несоответствие. *Киремдәрҙе еңеп үтеү.*

КИРЕНКЕ (Р.: широкий; И.: wide; Т.: geniş) *с.*

Ныҡ кирелгән; киң. □ Широкий, размашистый. ■ *Уның бер-береһенән алыҫырак урынлашҡан киренке ҙур ҡара күҙҙәре, танау аҫтында ике баҫым ғына ҡалдырып ҡырылған ҡара мыйығы, арыҡ аҡһыл йөҙө, нисектер, бик яғымлы ла, ышаныҙға лайыҡлы ла тойолдо.* З. Биишева. *Шул киренке тынлыҡты ваҡытлы боҙғандай, хужаның оло улы Мөксин, ҡырҡтарҙы уҙған ир, табын уртаһына оло көрәгә ҡымыҙ индереп ултыртты.* Ғ. Хөсәйенов.

КИРЕНӘН (Р.: снова; И.: anew, afresh, (over) again; Т.: gene) *р.*

Ҡабаттан, яңынан. □ Снова, заново, повторно. *Киренән барыу. Киренән биреү.* ■ *Күҙ алдында һүрәт киренән терелде, өсөбөҙ ҙә еңел һулаһыҡ.* Й. Солтанов. *Ике малай ырғып тороп, киренән роботҡа ташланды.* Н. Ғәйетбаев. *Егет, уның аяҡ тауышы тынғансы, ишек төбөндә баҫып торҙо ла киренән баяғы эскәмйәгә барып ултырҙы.* З. Биишева.

КИРЕ УҠЫУ (кире уҡы-) (Р.: исполнение обряда лечения; И.: kind of magical treatment; Т.: duayı geriye okumak (büyü ile tedavi için) *к. миф.*

Доғаны кире яҡҡа уҡып имләү йолаһы. □ Исполнение обряда лечения больного чтением молитвы наоборот. ■ *Ерҙән тейенгән ауырыуҙы Аятел көрсиҙе кире уҡып имләйҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

КИРЕҮ (кир-) (Р.: натягивать; И.: stretch; Т.: germek) *к.*

1. *Нимәнелер* тартып, йәйеп, яҡ-яғынан, ситенән нығытыу. □ Натягивать, растягивать. // Растягивание. *Сигергә киндер киреү. Айыу тиреһен киреү.* ■ *Өйгә килеп кергәс тә, Тимерҙең иғтибарын мольберт тартты. Уның өҫтөнә тап-таҙа киндер кирелеп ҡуйылған.* Б. Бикбай.

2. Киргегә кейҙереү *(ваҡ йәнлек тиреләрен).* □ Натянуть на пяльцы. *Ҡуян тиреһен киреү.* ■ *Тирене артыҡ тартып киргәндә, уның йөнө һирәкләнеп йәмһеҙ күренә.* Р. Фәхретдинов. *Бер сирек, ярты аршин самаһындағы тире кирә торған сөйҙәрҙе һәр көн эшләп, 15—20 тин самаһы аҡса төшөрә башланыҡ.* М. Ғафури.

3. Ныҡ һуҙып тартылдырыу. □ Натягивать, делать тугим. // Натяжение. *Янды киреү.*

4. Киң итеү, ныҡ һуҙыу. □ Широко раскрывать, раздвигать; широко раскинуть в сторону; широко расставлять. *Аяҡты кирел атлау. Ишекте кирел асыу. Ҡоласты киреү.* ■ *Тәнзилә әбей ҡуянды яҡынырак барып ҡарарға булып ары китә башлағайны, ҡарағай башындағы бөркөт сая тауыш менән саңҡылдап ебәрҙе лә, ҡанаттарын кирел, һауаға күтәрелде.* М. Тажи. *Ағиҙел ауыр юлдар, таш кәртәләр үтеп тәрәнәйә, кирә ярҙарын.* Ҡ. Даян. *Ишекте әлегәсә бер ҡасан да булмағанса кирә асып, Айтуғанов эргәһенә Шәрәев килеп инде.* Р. Ғабдрахманов. *Их малай, ҡолас кирел бесән сабаһы ине!* Ә. Хәкимов. *Һыу батшаһы хәтирәңде һаҡлай бирһен, ә толпарың ал таңыңа ҡанат кирһен!* Ф. Туғыҙбаева.

5. Ҡайырып яҙылдырыу. □ Развернуть, выпятить. *Түште киреү. Ҡорһаҡты киреү. Яурындарҙы киреү.* ■ *Бер ситтәрәк, бөйөргә таяна биреп, күкрәкте кирел торған, оскор күҙле, йәш, матур һалдат иң әлек минең иғтибарымды үҙенә тарта.* З. Биишева. *Күк ат, башын салыҡлап, моронон кирел, арҡаһындағы күбектәрен сәсрәтеп, ҡойроғон үҙ еленә елберләтеп, Айбулат янына килеп етте.* Һ. Дәүләтшина. *Ғариф яңынан бер нисә тапҡыр ишекле-түрле әйләнгәндән һуң, көҙгө янына барып, түшен кирел баҫты.* Ғ. Хәйри. *Һин нимә, яуҙа еңгән батыр кеүек, түш кирел баҫып тораһың?* М. Кәрим. *Генерал Дутов үҙендә казачий армияһының атаманлығы ғына түгел, «бөтә шәрек донъяһының» ҡаһарманлығы барлығын һиҙеп ҡорһаҡ кирҙе.* А. Таһиров. ● *Күкрәк кирел эшләһәң, килер ерең киң булыр.* Мәҡәл.

КИРЕҺЕНСӘ I (Р.: наоборот; И.: inside out; Т.: bilâkis) *р.*

Ҡапма-ҡаршы рәүештә, бөтөнләй кирегә. □ Наоборот. *Киреһенсә эшләү.* ■ *Ә бын-*

да бит эш бөтөнләй киреһенсә. Аҙнагол да, Зөлхизә лә бер-береһен ярата. З. Биишева. *Ә беҙҙә йыш ҡына киреһенсә була.* И. Абдуллин. — *Яңылышаһың, — тине Әмилә. — Беҙҙә киреһенсә рөхсәт итерҙәр ине.* Н. Ғәйетбаев. *Гөлбаныу уны инде бөтөнләйгә китер, был тупһаға ҡабат аяҡ баҫмаҫ, тип уйлағайны — киреһенсә килеп сыҡты.* Т. Ғарипова. *Әгәр бер урында бер нисә генә минутҡа һуңға ҡалдыңмы, еңеү өсөн уңай хәлде киреһенсә әйләндерергә мөмкин.* И. Насыри.

КИРЕҺЕНСӘ II (Р.: напротив; И.: on the contrary; Т.: aksine) *мод.*

Тейешлегә йәки уйлағанға ҡапма-ҡаршы. □ Напротив. ■ *Сәгиҙә беләген ыскындырырға теләгәйне, Тайморзин, киреһенсә, уның оҙон нәҙек кенә бармаҡлы ҡулын ҡҙенең ҙур һәм иттәс усына йомарлап тотто.* М. Тажи. *Ҡыпсаҡтар, киреһенсә, йомарт, ҡунаҡсыл, киң күңелле, шаян булыуҙары менән айырылып торалар.* Б. Бикбай. *Шулай ҙа был ваҡиға ла Фәхерниса ҡарашында Ренардтың күркәм абруйын ҡаҡшата алманы, киреһенсә, юғарыраҡ күтәрҙе генә.* Й. Солтанов. *Егет, киреһенсә, киң йөҙлө, яҫы ҡашлы һәм танау аҫтынан һыҙылып ҡына киткән ҡара мыйыҡлы ине.* Д. Бүләков.

КИРЗА [рус. < нем. *Kiersei*] (Р.: кирза; И.: kersey; Т.: yünlü kalın bir kumaş) *и.*

Махсус рәүештә эшкәртелгән беше ҡалын туҡыма *(аяҡ кейеме тегеүҙә һәм башҡа эштә ҡулланыла).* □ Кирза. / Кирзовый. ■ *Өҫтөнә ҡара күлдәк, аяғына кирза итек кейгән Венера уны [Айтуғановты] ҡапҡа төбөндә ҡаршылаhы.* Картотека фондынан. *Кабинанан өҫтөнә брезент комбинезон, аяғына кирза итек, башына аҡһыл кепка кейгән бераү һикереп төштө.* Н. Мусин. *Аяҡта кирза итек, өҫтә бобрик пальто, төйөнө йоҙроҡтай галстук урынында ас әсәк кеүек төҫһөҙ бер сепрәк кенә ялпылдап тора.* З. Биишева.

КИРКА *и. диал. ҡара.* **тәпке.** *Кирка менән картуф күмеү.*

КИРКЫРАЙ *и. диал. ҡар.* **сит-ят ер.** *Киркырайға китеү.*

КИРКӘ [рус. *кирка*] (Р.: кирка; И.: pick; Т.: kazma) *и.*

Бер яғы осло, икенсеһе ялпаҡ булған оҙон башлы сүкеш рәүешендәге ҡорал *(тауташ эшендә ҡулланыла).* □ Кирка. *Киркә менән сокоу. Киркә менән аҡтарыу.* ■ *Иртә менән көн яҡтырып етмәгәйне әле, барыбыҙға көрәк, киркә, ломдар тоттороп, Ҡарғалы яғына алып киттеләр.* А. Таһиров. *Юл төҙөүселәр, ошонда ҡая ташҡа килеп төртөлгәс, бындағы ғәжәп ҡаты тоҡомдарҙы киркә йә сүкеш менән генә ватып үтеп булмағанға, тәрән уя аша ергә лыпын тейҙереп оҙон итеп таштан күпер һалырға мәжбүр булғандар.* Н. Мусин.

КИРЛЕ-МИРЛЕ (Р.: противоречиво; И.: inconsistently; Т.: çelişkili) *р.*

Бер тегеләй, бер былай; ҡырҫ-мырҫ. □ Противоречиво, то так, то сяк. *Кирле-мирле йөрөү. Кирле-мирле һөйләшеү.* ■ *[Фәхерниса:] Һин инде, атаһы, кирле-мирле һөйләнмә. Бер ҡул күтәргәнһең, шунда ныҡ торорға кәрәк.* А. Таһиров. ● *Сирле, сирленең холҡо — кирле-мирле.* Мәҡәл.

КИРЛӘҮ (кирлә-) *ҡ. диал. ҡар.* **ярлылаһыу.**

КИРМӘ (Р.: узор на краях пухового платка; И.: pattern on the cloth; Т.: şal deseni) *и. диал.*

Дебет шәл ситендәге биҙәк. □ Узор на краях пухового платка. *Кирмә биҙәге.*

КИРМӘН (Р.: крепость; И.: stronghold, fortress; Т.: kirman) *и. иҫк.*

Бейек диуарҙар, тәрән урҙар менән уратылған хәрби нығытма; ҡәлғә. □ Крепость, укрепление. ■ *Ҡаланы уратмыш кирмән нығытыла, таш биналар, мәсет-мәҙрәсәләр һалына.* Ә. Хәкимов.

КИРСӘЙ (Р.: мухортый; И.: bay, with yellowish markings; Т.: doru) *и.*

Кир төҫтәге ат. □ Мухортый *(о масти лошади).* ■ *Кирсәй генә атым, ай, дүнәнем, дүнәнемә күрә йүгәнем.* Халыҡ йырынан.

КИРТАРТМА (Р.: нагайка со спуском; И.: whip with a descent; Т.: kamçı) *и.*

Һуҡҡанда һуҙылып, һуңынан кире тартыла торған ҡамсы. □ Нагайка со спуском *(плеть после удара убирается в кнутовище).* ■ *Ишектең бер яғында көмөш өҙәнгеле, аҡыҡ ҡашлы эйәр, көмөш ҡойошҡан, күмелдерек.*

Уның янында йыуан киртартмаһы — былар барыһы ла күҙҙең яуын алып торалар. Т. Хәйбуллин.

КИРТЕК (киртеге) (Р.: зарубка; И.: notch; Т.: çentik) *и.*

Киртен алынған урын. □ Зарубка, засечка. ■ *Аркаш шундағы уҫаҡ олонона балта менән бер киртек яһап ҡуя — артабан ошондай тамғалы ҡапҡандар гел Шамилдыҡы буласаҡ.* Д. Шәрәфетдинов.

КИРТЕК ИМЕ (Р.: заговор с засечкой; И.: kind of charm; Т.: büyü türü) *и. миф.*

Сөйәл сыҡҡанда киртек менән имләү йолаһы. □ Заговор с засечкой *(для снятия бородавки).* ■ *Сөйәл сыкһа, һепертке һабына нисә сөйәл бар, шунса киртек киртеп, шуны өрләккә ҡыҫтырып ҡуйһаң, сөйәл бөтә.* Башҡорт мифологияһынан.

КИРТЕКЛЕ (Р.: с засечкой; И.: with a notch; Т.: çentikli) *с.*

Киртеге булған, кителгән. □ С засечкой, с зарубкой, имеющий засечку или зарубку. *Киртекле солоҡ. Киртекле ағас.*

КИРТЕКЛӘҮ (киртеклә-) (Р.: делать засечку; И.: notch; Т.: çentiklemek) *ҡ.*

Киртектәр яһау, киртекле итеү. □ Делать зарубки, засечки. *Ағасты киртекләү.*

КИРТЕЛЕҮ (киртел-) *ҡ. төш. ҡар.* **киртеү.** *страд. от.* **киртеү.**

КИРТЕМ (Р.: мера деления; И.: unit of measuring Bashkir sausage; Т.: kazı bölümü) *и. этн.*

Ҡаҙыны өлөшләп бүлеү берәмеге. □ Мера деления колбасы из цельной полосы конского сала.

КИРТЕҮ (кирт-) (Р.: делать зарубку; И.: notch; Т.: çentiklemek) *ҡ.*

Нәмәнең ситенән, ҡырынан мөйөшләп уйып алыу. □ Делать зарубку, засечку, зарубать, засекать. // Зарубка, засечка. *Киртеп тамғалау.* ■ *Дөрөҫ әйткәндәр бит ололар, кирткән ағас кеүек, туралап: ир ул, тиҙәр, итәк бөгөшө, бала, тиҙәр, йөрәк емеше.* К. Кинйәбулатова. *Һыйға әҙерлек тамамланғас, Ҡаһым ҡунаҡтар алдына бер нисә бысаҡ, ағас ҡалаҡ һалды, тоҙло һауыт ҡуйҙы, төрлө урынға биш-алты сеүәтә, алты туҫтаҡ, сите киртеп һырыулы ике алдыр килтереп ҡуйҙы.* Я. Хамматов.

КИРТЕШ (Р.: бивень; И.: tusk; Т.: fildişi) *и.*

Мамонт йәки фил теше. □ Бивень.

КИРТКЕС *и. диал. ҡар.* **күтәрмә.** *Кирткес эшләү. Кирткестә тороу.*

КИРТКӘС (Р.: зазубрина; И.: notch, jag; Т.: çentik) *и.*

Нимәнеңдер ситендәге киртек-киртек булып торған урын. □ Зазубрина. *Шәл кирткәстәре. Кирткәс яһап тамғалау.*

КИРТКӘС ҠАБЫРҒА (Р.: узор по краям вязаного платка; И.: patterns on the edges of a knitted scarf; Т.: şal deseni) *и. диал.*

Дебет шәл ситендәге биҙәк. □ Узор по краям вязаного платка.

КИРТКӘСЛЕ (Р.: с зазубриной; И.: with a jag; Т.: çentikli) *с.*

Кирткәстәре булған. □ С зазубриной, имеющий зазубрины. *Кирткәсле биҙәк. Кирткәсле шәл сите. Кирткәсле уҡа.*

КИРТКӘСЛӘНЕҮ (кирткәслән-) (Р.: зазубриваться; И.: become jagged (notched); Т.: çentiklenmek) *ҡ.*

Кирткәслегә әйләнеү, кирткәсле булыу. □ Зазубриваться, покрываться зазубринами. *Балта кирткәсләнгән. Кирткәсләнгән салғы. Кирткәсләнеп бөтөү.* ■ *Алыҫтағы офоҡтоң кирткәсләнеп, ҡырҡылып күтәрелгәндәрен, ерҙең өҙөмтәһе өҙөп алынып, һауала тулҡынланып йөҙгәнен, ҡайһы ваҡытта ҙурайып, ҡайһы ваҡытта бөтөп, төрлө һүрәткә ингәнен күреп барҙыҡ.* Г. Дәүләтшин.

КИРТКӘСЛӘҮ (кирткәслә-) (Р.: зазубривать; И.: serrate; Т.: çentiklemek) *ҡ.*

Кирткәсле итеү, кирткәс яһау. □ Зазубривать, делать зазубрины. *Кирткәсләп тегеү.* ■ *Рәүҙәктең текә ярына кирткәсләп яһалған баҫҡыстан Ғәлиә менеп килә.* И. Ғиззәтуллин. *Бынау мейесе һуң әле — ҡайһылай шымалап, ян-яғы кирткәсләп эшләнгән дә ап-аҡ итеп буяп ҡуйылған.* Н. Мусин.

КИРТЛӘС (Р: уступ; И.: ledge; Т.: çıkıntı) *и.*

1. Баҫҡысланып торған урын; һикәлтә. □ Уступ, выступ. // Уступчатый. *Тау киртләсе. Мейес киртләсе. Киртләс яр.* ■ *Ташлы тауҙың киртләс ҡаяһында баҫып тора һомғол ҡоралай.* Ҡ. Даян. *Тауҙың башына менеп*

етер алдынан бер киртләсе бар, беҙ саңғы менән шунан төшәбеҙ. Р. Низамов. *Солоҡ артыҡ бейек түгел ине былай, ете киртләс кенә, йәғни, хәҙергесә итеп әйткәндә, уның ҡорт ҡунған ябыуы — ҡапҡағы — ерҙән ете метрға яҡын бейеклектә була инде.* Н. Мусин. *Уйһыу ерҙә табан ялтыратып артҡа сигенеүсе дошман ғәскәре, тау араһына барып кергәс, һәр утар йә күпергә, ҡая киртләсенә теше-тырнағы менән йәбешеп, ҡаршылыҡ күрһәтә башланы.* Ә. Хәкимов.

2. *Нимәнеңдер* киртеп эшләнгән өлөшө, теше. □ Зубец. *Тәгәрмәс киртләсе.*

КИРТЛӘСЛЕ (Р.: уступчатый; И.: ledged, stepped, terraced; Т.: çıkıntılı) *с.*

1. Уйынтылы-уйынтылы; һикәлтәле. □ Уступчатый, с выступами. *Киртләсле тау. Киртләсле яр.* ■ *Мәҙинә аулағыраҡ ерҙәге эскәмйәгә ултырҙы ла ҡаршын ҡаршыһындағы киртләсле бейек стенаға тоҫҡаны.* Ә. Хәкимов.

2. Киртеп эшләнгән тирәсле, тешле. □ Зубчатый. *Киртләсле тәгәрмәс.*

КИРТЛӘСЛӘНЕҮ (**киртләслән-**) (Р.: покрыться выступами; И.: get covered with ledges; Т.: çıkıntı oluşmak) *ҡ.*

1. Киртләслегә әйләнеү, киртләсле булыу. □ Покрыться выступами, уступами. *Киртләсләнеп торған тау.* ■ *Уның жакетының яғаһы ла, атаһының яғаһы кеүек елән яғаһы булмайынса, киртләсләнеп тегелгән.* Һ. Дәүләтшина. *Шул саҡ ишек алдындағы бурама солан һикәлтәһендә оҙон аҡ күлдәкле, ҙур итләс башына күн таҡыя кейгән, эйәк аҫты ҡатланып-киртләсләнеп торған, кәбәндәй кәүҙәле ир күренде.* Н. Мусин. *[Бераәү:] Иҙелдең арғы яғына сығып, ҡаршылағы Аҡташ тауының өҫтөнә, ана теге өйөлөп-өйөлөп киртләсләнеп, һалынып төшөргә торған ҙур таштарҙың араһына, менеп йөрөргә кәрәк ине, — тине.* М. Ғафури.

2. Тирәстәре киртелеү, тешләләнеү. □ Притупляться, затупляться. *Салғы йөҙө киртләсләнгән. Балта киртләсләнгән.*

КИРТЛӘСЛӘҮ (**киртләслә-**) (Р.: образовывать выступы; И.: form ledges; Т.: çıkıntı yapmak) *ҡ.*

1. Киртләсле итеү; киртләс яһау. □ Образовывать выступы, уступы. ■ *Хәҙер ҙә шыйыҡ томандан әрселеп кенә килгән тымыҙыҡ күл буйын, офоҡ ситен киртләсләгән Уралтау һырттарын хәтерләүе булды, күҙенә йоҡо төйөлдө.* Ә. Хәкимов.

2. Тирәстәрен киртеү. □ Притуплять, затуплять. *Салғыны тапап киртләсләп бөткән.*

КИРТЛӘҮ (**киртлә-**) *ҡ. ҡар.* **киртеү.** ■ *Быны ул [Марина] бура өҫтөндә ятҡан бүрәнәнең башын киртләп юнып бөттө лә, ирҙәргә эш ҡуша башланы.* М. Хәйҙәров. *Мотаһар ҡурай көпшәһе ҡырҡып алды, тишектәр киртләне.* Й. Солтанов.

КИРТМӘС *и. ҡар.* **кирткәс.**

КИРТМӘСЛЕ УҠА (Р.: позумент с зигзагообразными краями; И.: gimp; Т.: sırma şerit) *и. диал.*

Ситтәре һырлы уҡа. □ Позумент с зигзагообразными краями.

КИРТМӘСЛӘНЕҮ (**киртмәслән-**) *ҡ. ҡар.* **кирткәсләнеү.**

КИРТМӘСЛӘҮ (**киртмәслә-**) *ҡ. ҡар.* **кирткәсләү.** *Таҫма осон киртмәсләп ҡырҡыу.* ■ *Балта менән көнөнә әллә нисә таҡҡыр киртмәсләп сапмайынса, атлыһы ла, йәйәүлеһе лә күперҙән күтәрелә лә, төшә лә алмаған.* Н. Мусин.

КИРТТЕРЕҮ (**кирттер-**) *ҡ. йөкм. ҡар.* **киртеү.** *понуд. от* **киртеү.**

КИР ТУРЫ (Р.: гнедой с рыжими подпалинами; И.: of bay hue; Т.: doru) *и.*

Ҡорһаҡ аҫты, морон тирәһе һарғылтыраҡ туры ат. □ Гнедой с рыжими подпалинами *(о масти лошади).*

КИРШӘҮ (**киршә-**) (Р.: лязгать; И.: clank; Т.: makası şıkırdatmak) *ҡ.*

1. Ҡайсыны буштан-бушҡа бер асып бер ябыу; иксәү. □ Лязгать, делать режущие движения *(ножницами).*

2. Ҡолаҡты һағайтып, алмаш-тилмәш алға-артҡа йөрөтөү *(атҡа ҡарата);* ҡайсылау. □ Приподнимать уши, настораживаться *(о лошади).*

КИРӘГӨН *и. диал. ҡар.* **көнө буйы.** *Кирәгөн йөрөү. Кирәгөн эшләү.*

КИРӘГӘ I (Р.: кереге; И.: yurta's framework; Т.: yurtanın iskeleti) *и. этн.*

Кейеҙ тирмәнең һөлдәһе *(нәҙек кенә ағастарҙан сатраштап эшләнгән).* □ Кереге *(решётчатый боковой каркас юрты). Кирәгә башы. Кирәгә бауы. Кирәгәләрҙе тарттырып бәйләү.* ■ *Кирәгәгә көмөшләнгән ике эйәр, йүгән, дуйыр ҡамсы эленгән.* И. Көсәпҡол. *Солтангәрәй ғәскәр башлыҡтары менән бергә тирмә кирәгәһе аҫтына инеп китте.* Картотека фондынан. *Келәмдәр, тирмә йорт кирәгәләре, кейеҙе иһә дөйәгә артмаклана.* Ә.-З. Вәлиди. *Тирмәһе иркен, ун ике кирәгәле.* Н. Мусин. *Урманлы яҡтарҙа ағастан тирмә кирәгәләре, һөңгө һаптары, эйәрҙәр, биҙәкле һауыт-һаба яһайҙар.* Ә. Хәкимов.

КИРӘГӘ II (Р.: двулопастный наконечник; И.: two blade arrowhead; Т.: başak) *и.*

Ике ҡырлы үткер башаҡ. □ Вид наконечника стрелы *(двулопастный с острыми лезвиями). Кирәгә башаҡлы уҡ.*

КИРӘГӘ III *и. диал. ҡар.* **тирмә.**

КИРӘЙ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени кыпчак.

КИРӘК I (кирәге) *и. диал. ҡар.* **ҡыр 2.** *Кирәктә бер әҙәм күренә. Кирәктә йәшәү. Кирәктә ҡалыу.*

КИРӘК II (кирәге) *и. диал. ҡар.* **сит кеше.**

КИРӘК III (кирәге) (Р.: дача; И.: dacha; Т.: yazlık evi) *и. һөйл.*

Ҡала кешеһенең ҡала ситендәге йәйләү өйө. □ Дача. *Кирәктә йәшәү.*

КИРӘ ҠОРТ (Р.: пчела, ищущая место для оседания роя; И.: bee; Т.: arıtürü) *и. диал.*

Айырған күскә ҡуныр ер эҙләүсе ҡорт. □ Пчела, ищущая место для оседания роя.

КИРӘМ (Р.: кирям; И.: kind of special rope used in Bashkir beekeeping; Т.: uzun bağ) *и.*

1. *этн.* Ағас башына менеү өсөн ҡулланылған ус яҫыуындай оҙон бау. □ Кирям *(плоская плетёная верёвка или ремень, при помощи которых бортники лазают на дерево). Ҡайыш кирәм. Сүс кирәм. Кирәм ташлап менеү.* ■ *Бикморат арҡатауының бер осон, тәпәлдерек бауын билбауына ҡыҫтырҙы ла кирәмен яурыны аша алып, солоҡто урлатып бәйләне.* Н. Мусин. *Ҡорттарҙың ҡыҙыу айыра башлаған сағында Баһау бай һыбай ҡанъяғаһына ҡайыш кирәмдәрен бәйләп, биләм ҡарай сығып китте.* Ж. Кейекбаев. *Дуҫын Бейеш тыңламаны. Ҡылдан ишеүле алты аршин самаһы оҙонлоҡтағы яҫы кирәмгә ҡайыштты ҡушып бәйләгәс, ҡарағай олонон уратып, уның әлмәкле осон биленә бәйләне лә үргә үрмәләне.* Я. Хамматов. *Юлдаштары Әмин менән Сураш Алҡыш аҡһаҡалдың кәрәк-яраҡ солоҡ ҡорамалын биштәрләп алғайны: кирәмен, ләңгеһен, ҡыл эркәтәүен, бороҙ, бағау балтаһын, терпеһен — һәммәһен.* Г. Хөсәйенов.

2. *диал. ҡар.* **кирткәс.**

КИРӘМ БАЛТА *и. диал. ҡар.* **бағау.**

КИРӘМӘТ [ғәр. كرامت] *и. ҡар.* **кәрәмәт.**

КИРӘМӘТ КҮРЕҮ (кирәмәт күр-) (Р.: увидеть чудо; И.: see a miracle; Т.: mucize görmek) *ҡ.*

Мөғжизә күреү. □ Увидеть чудо.

КИРӘҮКӘ (Р.: кольчуга; И.: chain mail, chain armour; Т.: yelme, zırh) *и. тар.*

Хәрби тимер кейем. □ Кольчуга. *Кирәүкә кейеү.*

КИРӘҮ ҮЛӘН (Р.: солончаковая густая трава; И.: saline dense grass; Т.: ot) *и. диал.*

Асыҡ ерҙә тығыҙ үҫкән ҡаты үлән. □ Солончаковая густая трава.

КИС I [дөйөм төрки *кәч*] (Р.: вечер; И.: evening; Т.: akşam) *и.*

1. Көн менән төн араһындағы бер мәл, ҡараңғы төшә башлаған ваҡыт. □ Вечер. *Йәйге кис. Йылы кис. Һыуыҡ кис. Кискә ҡарай. Кискә тиклем. Үткән кистә. Кис булды. Кискә ауышты. Кискә ҡалыу. Иртәнән кискә тиклем. Көндө кис итеү. Көндө кискә еткереү.* ■ *Кис булды, ләкин был кис тә Гәрәй байҙың көткәнен килтермәне, Солтановты тағы ултырышҡа саҡырҙылар.* Б. Бикбай. *Кискә табан, магазин ябылыр алдынан, ҡатынын эйәртеп берәү килде.* С. Агиш. *[Риф:] Һин, бәлки, миңә ышанмайһыңдыр? Ошо айлы кис алдында, йондоҙҙар алдында ант итәм.* Н. Асанбаев. *Их, ошо ялан беҙҙең ауыл янында булһа, кис һайын килеп, алтынбаштарҙың*

таждарын ябып йоҡоға китеүҙәрен, иртәнсәк уянып, ысыҡлы керпектәрен асыуын күҙәтер инем. Д. Шәрәфетдинов. *Ҡояш түбәнләй башлағас, Байгилде, ҡорт айырмаҫ инде хәҙер, кис булды, тип ҡайтып китте.* Ж. Кейекбаев. ● *Иртә аяҙытһа – кис аяҙытмаҫ, кис аяҙытһа – һис аяҙытмаҫ.* Мәҡәл. *Мыштыр кеше иртә лә мыштыр, кис тә мыштыр.* Мәҡәл.

2. Ҡояш байып, көн тыуғансы үткән ваҡыт; төн. □ Ночь. *Ике кис ҡуныу. Бер кис йоҡлау.* ■ *Шулай итеп, көндәр, кистәр үтеп торһа, һәр ваҡытта мунсаһын да керетеп тора, ышанмаһаң, күргәндәрҙән барып һора, ялған һүҙгә минең телем бармаҫ инде!* Әкиәттән. *Тимошка умарталыҡта ике генә кис йоҡланы ла өсөнсө көнөнә китте.* Ж. Кейекбаев. *Тегеләрҙең закон үҙҙәре янында, бының ҡыҙыуын баҫып алдылар ҙа бер кис йоҡлатып ҡайтарҙылар, артынса эшенә хат ебәрҙеләр.* Р. Солтангәрәев. *Һабрау һүҙендә торҙо, юл айҡан туҡталып, Боғара ауылында ике кис ҡунып китте.* Ә. Хәкимов. ● *Кис күрккән көндөҙ сыра яндырыр.* Мәҡәл. *Көн күрмәҫ көндөҙ йоҡлар, кис торор.* Мәҡәл.

3. Күңел асыу сараһы; мәжлес. □ Вечеринка. ■ *Ҡотлоярға күптән түгел генә дошман булып йөрөгән Үмәр ҙә бөгөн уны оҙатыу кисенә килмәй ҡалмаған.* Һ. Дәүләтшина. *Бейеү, йырлау китте. Беҙ башлаған мәжлес дөйөм уйынға, күңел асыу кисенә әүерелде.* Д. Юлтый. *Әлеге шул. Бер болғаҡ булып сыҡтың бит. Һөйләһәң көлкө! Газетала оборона министрының приказын күргән дә, әле хәбәр юҡ, ни юҡ, армияға китәм тип, оҙатыу кисәһен ойошторған.* Р. Солтангәрәев.

4. *миф.* Яман көстәрҙең әүҙемләшкән мәле. □ Вечер *(опасное время, время активизации нечистой силы).*

КИС II [дөйөм төрки *кәч*] (Р.: вечером; И.: evening; Т.: akşamleyin) *р.*

Ҡояш байып, ҡараңғы төшкән ваҡытта, төн булыр алдынан. □ Вечером. *Кис барыу. Кис уҡыу.* ■ *Ғәлиә Ямаева эштәре бик ашығыс булыуын әйтеп, үҙҙәренә иртәгә кис килергә саҡырып, Раушл Еникеевкә өй адресын бирҙе.* Б. Бикбай. *Кисә кис килеп төшкәндә уға ауыл матур ғына һымаҡ күренгәйне.* И. Насыри. *Был аҙнала улар кис эшләйҙәр, төнгө сменаға киләләр.* Ғ. Сәләм. ● *Иртә уңмаған төш уңмаҫ, төш уңмаған кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ.* Мәҡәл.

КИСАУ *и. диал. ҡар.* **торон.**

КИСЕ (Р.: вечером; И.: in the evening; Т.: gece) *р.*

Билдәле бер кистә *(билдәлелекте белдергән һүҙ менән ҡулланыла).* □ Вечером. *Ул кисе беҙ эшләнек.*

КИСЕГЕҮ I (кисек-) (Р.: опаздывать; И.: be late; Т.: gecikmek) *ҡ.*

Тейешле ваҡыттан һуңға ҡалыу; һуңлау. □ Опаздывать, запаздывать. // Опаздывание, запаздывание. *Йыйылышҡа кисегеү. Дәрескә кисегеп кереү.* ■ *Әллә кисегеп булһа ла бөтәһен дә бригадирға һөйләп бирергәме?* Ғ. Лоҡманов.

КИСЕГЕҮ II (кисек-) (Р.: вечереть; И.: fall (about night); Т.: akşam yaklaşmak) *ҡ.*

Ҡояш байырға яҡынлашыу; кискә һарҡыу. □ Вечереть, клониться к вечеру. ■ *Көн кисегеп бара ине, бөгөн ҡырға сыҡмаҫҡа булдым.* И. Ғиззәтуллин. *Көн шаҡтай кисеккән булһа ла, ҡараңғы төшмәгәйне әле.* Ф. Әсәнов. *Бына көн кисекте, Сағылтау артынан ярҙай емерелеп аҡһыл ҡара болот ҡалҡып сыҡты.* З. Биишева.

КИСЕЙӘ [рус.] (Р.: кисея; И.: muslin; Т.: muslin) *и.*

Йоҡа, үтә күренмәле кизе-мамыҡ туҡыма. □ Кисея. *Кисейә күлдәк. Кисейәнән тегеү. Кисейә ҡорған.*

КИСЕКМӘҪТӘН [боронғо төрки *кечиксизин*] (Р.: без отлагательств; И.: without delay; Т.: gecikmeden) *р.*

Оҙаҡҡа һуҙмай, тотҡарлыҡһыҙ, тиҙ. □ Без отлагательств, без задержки. *Һис кисекмәҫтән хәл ителергә тейешле мәсьәләләр.* ■ *Бер көн беҙҙең разведка шундай хәбәр килтерҙе: фашист командованиеһы беҙҙең отрядты кисекмәҫтән юҡҡа сығарыу тураһында юғарынан приказ алған.* Картотека фондынан. *Был арала ҡаҙаҡ солтандарынан исеме иҫкә алынған Ғәлихан Бүкәйхановтан да һис кисекмәҫтән Һамарға килеүемде һораған саҡырыу алдым.* Ә.-З. Вәлиди. *Ә Аб-*

рар шәйехте һис кисекмәҫтән Сарайҙан сығарып ебәрергә кәрәк ине. Ә. Хәкимов.

КИСЕКТЕРГЕҺЕҘ (Р.: безотлагательный; И.: pressing, urgent; Т.: acil) *с.*

Кисектерергә ярамаған; ашығыс. □ Безотлагательный, неотложный. *Кисектергеһеҙ эш. Кисектергеһеҙ ярҙам.* ■ *Беренсе секретарь, һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙмайынса, республика урман хужалығы алдында торған кисектергеһеҙ бурыстарға туҡталды.* Н. Мусин. *Кисектергеһеҙ йомош менән йөрөгән кешеләй, Нурислам ашыға, аҙымын тиҙләткәндән-тиҙләтә.* Ә. Хәкимов.

КИСЕКТЕРЕЛЕҮ (кисектерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **кисектереү.** *страд. от.* **кисектереү.** ■ *Яңылыҡты индереүҙе хәҙерҙән хәл итмәһәң, ул тағы бер йылға кисектереләсәк, сөнки киләһе йылдың финанс планына эләкмәй.* Н. Мусин. *Лена Әкрәмде, һирәк киләһең, яратыуың да ысын түгелдер әле, тип шелтәләргә, ым-ишара, шаян һүҙ менән ҡауышыу сәғәтенең һаман кисектерелеүенә ризаһыҙлыҡ белдерергә керешә, үпкәләй.* Ә. Хәкимов.

КИСЕКТЕРЕҮ (кисектер-) (Р.: отсрочивать; И.: postpone; Т.: ertelemek) *ҡ.*

Үҙ ваҡытынан һуңғараҡ күсереү. □ Отсрочивать, откладывать, отодвигать. // Отсрочка. *Китеүҙе кисектереү. Сәфәрҙе кисектереү. Осрашыуҙы кисектереү.* ■ *Беҙҙең полкка барып күренмәҫкә теләүебеҙҙең, аҙ ғына булһа ла шуны кисектерергә тырышыуыбыҙҙың төп сәбәбе лә шул.* Д. Юлтый. *Николай Петрович баяғы хәйерһеҙ имтиханды кисектермәй барып тапшырҙы, әлбиттә, бик уңышлы тапшырҙы; шуның менән ғәйбәттең дә ике аяғын ҡыҫҡартты һымаҡ ине, урыҫтар үҙҙәре әйтмешләй.* Й. Солтанов. *Әлфиә был йыйылышты махсус ошо көнгә кисектереп килде.* Д. Бүләков. *Тирәклегә юл төшкән һайын ни өсөн әле ул осрашыуҙы кисектереү хаҡына унда барыуҙан баш тартырға тейеш?* Т. Ғарипова. ● *Әҙәплелек билгеһе — эйелеп сәләм биргәне, яҡын итеү билгеһе — кисектермәй килгәне.* Мәҡәл.

КИСЕКҺЕҘ [боронғо төрки *кечигсиз*] *с. диал. ҡар.* **тыңлауһыҙ.**

КИСЕН (Р.: вечером; И.: in the evening; Т.: akşamları) *р.*

Кис булғас, кис ваҡыты еткәс; кискеһен. □ Вечером, вечерней порой. *Кисен ҡайтыу. Кисен килеү. Кисен эшләү.* ■ *Бер көн, кисен, миңә ейәнсәрем — Гөлзәйнәбем гәзит уҡыны.* Ғ. Әмири. *[Сәйҙел] иртән эшкә китә, кисен Зәйнәпте һағынып, квартирына ҡайта ашығып.* Ғ. Сәләм. *Атайым кисен утта янмай торған тимер һандығын асып күрһәтте.* Й. Солтанов. *Кисен ҡайтыр алдынан аҡсаһын иҫәпләп ҡараһа, айлыҡ планды үтәй яҙған.* Н. Мусин. *Кисен ике ҡатлы ҙур мәктәптә кисә булып, Солтан үҙенә килгән ҡунаҡтарҙы унда алып барҙы.* Ғ. Хәйри. ● *Күршеңдең кем икәнен белгең килһә, кисен һөт һора.* Мәҡәл.

КИСЕНЕҮ (кисен-) *ҡ. диал. ҡар.* **кисереү I, 1.**

КИСЕРЕКТӘЙ *с. диал. ҡар.* **һимеҙ.**

КИСЕРЕЛЕҮ I (кисерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **кисереү I, 1—4.** *страд. от* **кисереү I, 1—4.** *Һуғыш йылында кисерелгән ауырлыҡтар. Ҙур үҙгәреш кисерелде.* ■ *Дөрөҫөрәге, ярты быуат эсендә уларҙың уйланаһы уйланып, кисереләһе кисерелеп бөткән тиерлек.* М. Кәрим.

КИСЕРЕЛЕҮ II (кисерел-) *ҡ. төш. ҡар.* **кисереү 2.** *страд. от* **кисереү 2.** ■ *Һис ҡасан кисерелмәгән, үҙе татлы ла, әсенеште лә тойғо ине был...* Й. Солтанов. *Өйгә ҡайтып, сәй эсергә һике өҫтөнә ултырғас, үҙемде кисерелмәҫлек өлкән енәйәт эшләгән кеше һымаҡ һиҙәм.* Ғ. Хәйри. *Шул бейеклектән генә алдыңда киң донъя ятыуын, кисерелмәгән шатлыҡтар, ятылаш сере асылмаған киләсәгең барлығын тоя һәм аңлай алаһың.* А. Абдуллин.

КИСЕРЕҮ I (кисер-) [боронғо төрки *кечүр-*] (Р.: переносить; И.: go (through); Т.: geçirmek) *ҡ.*

1. Дауам иттереп үткәреү. □ Переносить, переживать. *Ғүмер кисереү.* ■ *Инйәр генә һыуының яры бейек, йылҡыларҙы бергә эсерәйек. Аттар ғына сабыр, һыуҙар ағыр, был ғүмерҙе бергә кисерәйек.* Халыҡ йырынан. *[Нурия] күпме йоҡоһоҙ төндәр, тынғыһыҙ көндәр кисерҙе ошо ваҡыт эсендә.* Картотека фондынан. *Һалдат дуҫтар! Нин-*

дәй юлдар үттек, ниндәй михнәт йылдар кисерҙек. Ғ. Әмири. *[Карсыҡ — Шаһиҙәгә:] Тик, балаҡайым, минең үҙемдең дә ашарыма юҡ. Үҙем арлы-бирле шулай көн кисереп торған булам, — тине.* Ғ. Хәйри. *[Фәйзи:] Сәлим, һөйгәнең менән ҡауышыу, һөйгән кешең менән ғүмер кисереү — бик ҙур бәхеттер ул.* Н. Асанбаев. *Бигерәк ярата ине шул Зөләйханы. Инде рәхәтләнеп ғүмер кисерәбеҙ икән тип торғанда...* Н. Мусин. *Үҙ илдәрендә көнкүрештәрен рәтләй алмайынса, барлыюҡлы йорт-еренән ҡолаҡ ҡағып, бында, киң ерле урынға, «бәхет» эҙләп килгән ярлылар бәләкәс кенә, балсыҡ өй йүнәтеп, ҡайһылары татар, рус байҙарының малын ҡарап, көтөү көтөп, ҡайһылары станцияла йөксө, тимер юлы төҙәтеүсе булып көн кисерәләр.* А. Таһиров.

2. Уй-фекер аша үткәреү. □ Испытывать, пережить *(в мыслях). Уйҙан кисереү. Эстән кисереү.* ■ *Наилә ниҙер уйлай, ниҙер кисерә ине: — Бәхетем юҡ минең, бәхетһеҙ мин!* С. Поварисов. *Беҙ һәр бер һыҙғырған пуляны, һәр бер өҫтән үткән снарядты бөтә ҡурҡынысы менән эстән кисерәбеҙ.* Д. Юлтый. *Уға быларҙың тормошо шулай донъя шау-шыуҙарын, аң-белем сатҡыларын күңелдән кисермәй тын ғына, ярлы ғына, ябай ғына ағыла төҫлө ине.* Й. Солтанов. *Менәүәрәнең шул тиклем аҡыллы булыуына иҫем китә, — тине Ғиззәт, шулай уҡ күңеленән ниҙер кисереп.* Н. Мусин.

3. Үҙ башында татыу, күреү, түҙеп үткәреү *(тормош хәлдәренә ҡарата).* □ Переносить, испытывать *(чувства). Ауырлыҡтарҙы бирешмәйенсә кисереү. Шатлыҡ кисереү. Бәхет кисереү.* ■ *Әллә нисек кинәт был күреүҙә, күҙ ҡараштарыңдан иҫерҙем; йылмайыуҙарыңды күргән саҡта, тәрән һәм киң бәхет кисерҙем.* М. Хәй. *Йәш уҡытыусы Сәғиҙәгә лә шондай һынауҙарҙы үтергә, уйланыуҙар, борсолоуҙар кисерергә, тормошонда, эшендә төрлө ҡаршылыҡтарға, ауырлыҡтарға осрарға, тормош алдында имтихан тоторға тура килде.* М. Тажи. *Һөйләп тә, яҙып та аңлата алмаҫлыҡ рәхәтлек кисерә инем мин был саҡта.* Н. Мусин. *Тимерәү кисергәндәрҙең тағы ла бер етди дошманы — һыуыҡ тейҙереү.* В. Ғүмәров. *Тимәк, приказды ҡабул итте, тип уйлап алды Ҡазнабаев, шатлыҡ кисереп.* Д. Бүләков.

4. *Ниндәйҙер* бер ҡыҫҡен хәлдә булыу, ошо хәлде үтеү. □ Испытывать, пережить *(событие). Кризис осорон кисереү. Көрәш осорон кисереү.* ■ *Хәҙер беҙ металлургия өлкәһендә бик ҙур кризис кисерәбеҙ.* Д. Юлтый. *1925 йылда Берлинда ни бары биш ай булдым, әммә бик һөҙөмтәле бер дәүер кисерҙем.* Ә.-З. Вәлиди.

КИСЕРЕҮ II (кисер-) (Р.: прощать; И.: forgive; Т.: affetmek) *ҡ.*

Ғәйепләмәү, язаһыҙ ҡалдырыу, ғәфү итеү. □ Извинить; прощать, миловать. // Прощение, извинение, помилование. *Ғәйебен кисереү.* ■ *Ярай, еңгә, уның ни ғәйебе бар, — тине Тимер, — үҙ кешеләр бит, бер юлға кисерербеҙ.* Б. Бикбай. *Ә һин һаман минең янда ҡалдың, гөнаһтарым булды — кисерҙең. Берәү булһа, ағыу бирер ине, һин бит миңә дарыу эсерҙең.* Ә. Атнабаев. *Кисер мине, яуҙаш дуҫым... Минең арҡала харап булдың!.. — Алдарҙың тауышы күкрәк шаршауын йыртырҙай булып һығылып сыҡты.* Н. Мусин. *«Әй, бәпескәйем, бәхетһеҙ колонсағым!» — тип Маһинур иҫ белмәй йоҡлаған улын маңлайынан сыпылдатып үпте, башынан һыйпаны. — «Кисер мине, балам. Түҙер тәҡәттәрем ҡалманы...»* Ә. Хәкимов. *Яңы бригадирҙың эшкә башлап ҡына тотоноуы булғанлыҡтан, был йүнһеҙ күренештәрҙе кисерергә була ине әле.* Б. Бикбай.

♦ **Кисерегеҙ!** мәшәҡәт йәки уңайһыҙлыҡ тыуҙырған өсөн ғәфү үтенеп әйтелә. □ Извините!

КИСЕРЕҮ III (кисер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **кисеү I, 2.** *понуд. от* **кисеү I, 2.** ● *Димсе диңгеҙ кисерер.* Әйтем.

КИСЕРЕШ [боронғо төрки *кечриш*] (Р.: переживание; И.: experience; feeling; Т.: heyecan) *и.*

Ниҙеңдер тәьҫиренән килгән көслө уйтойғо. □ Переживание. *Шатлыҡлы кисереш. Көсөргәнешле кисереш.* ■ *Әхмәҙулла бабай көсөргәнешле кисерештән маңлайына сыҡҡан тир бөрсөктәрен усы менән һеперел төшөрҙө лә ауыр итеп көрһөнөп ҡуйҙы.* Ә. Ва-

хитов. *Заһит әйрөлтмәктә күҙҙәре талғансы күҙәтеп торҙо. Ә мейеһе, шул әйрөлтмәктәй, бер туктауһыҙ үҙ кисерештәрен ҡайнатты.* Яр. Вәлиев.

КИСЕТ [рус.] *и. ҡар.* **янсыҡ 2.** ■ *Ҡыҙҙар егеттәргә сигелгән кисет йәки ҡульяулыҡ бүләк итә, уларҙы көтөргә вәғәҙә бирә.* Т. Ғиниәтуллин. *Беҙ икегеҙгә бик матур итеп, бөтә оҫталығыбыҙҙы һалып, тәмәке өсөн кисет әҙерләнек, иң матур сигештәр менән наҡышлап, ҡульяулыҡтар эшләнек.* Д. Юлтый.

КИСЕҮ I (кис-) [боронғо төрки *кеч- кечиг; кечуг*] (Р.: переходить вброд; И.: ford; Т.: sığ yerden yürüyerek geçmek) *ҡ.*

1. Һыуға төшөп, алға хәрәкәт итеү; һыуға төшөп атлау. □ Переходить вброд. // Брод. *Йылғаны кисеп сығыу. Һыуҙы кисеү.* ■ *Ҡола ат үҙе теләгән бер урында туктап ашап ала, теләгән бер урында йылғаны кисеп, һыу эсә.* С. Кулибай. *Яйыҡты аша кисеп, Әбйәлил юлына төшкәндә, ысынлап та, юлаусылар күбәйеп китте.* Ғ. Ғүмәр. *Тупалаң-дарья йылғаһын кисеп сыҡҡан ерҙә, урмандан сығып, миңә бер ҡабан һөжүм итте.* Ә.-З. Вәлиди. *Фәүзиәнең бөтә өмөтө бит үҙҙәре кисеп сыҡҡанда балаһы тороп ҡалған йылғала ҡалды.* Т. Ғарипова.

2. *Ниҙер* эсенән йырып хәрәкәт итеү, йырып атлау. □ Проходить, утопая *в чём-л. Көрт кисеп барыу. Ысыҡ кисеү. Батҡаҡ кисеп килеү.* ■ *Ураҡ ваҡытында игенде кисеп йөрөнө халыҡ — үҙҙәренең ашағаны быҡтырылған үлән, һыйыры барҙыҡы — ҡатыҡ булды.* Т. Ғарипова. *Мин үҙемде ер уйылып, шунда төшөп киткәндәй һиҙҙем, шунан аҡ болоттар араһында йөҙөп йөрөнөм, унан йондоҙҙарға күтәрелдем, ергә төшөп, сәскәле болондарҙа ысыҡ кисеп йөрөнөм, күбәләктәй, гөлдәргә ҡундым да тағы юғарыға талпындым.* Н. Мусин. *Бына бөгөн дә лаштыр-лоштор ҡар кисеп ҡайтам әле.* Й. Солтанов.

3. Атлап йәки берәй нәмә ярҙамында һыуҙы аша сығыу. □ Проходить через *что*; пересекать *что*. // Прохождение *(водное пространство).* ■ *Ул һөйгәне артынан бер түгел, ете диңгеҙ кисергә, ете ҡат ер аҫтына төшөргә, кәрәк икән, хатта уның менән бергә, уның өсөн ете ҡат үлергә лә әҙер.* З. Биишева. *Ғәскәрҙең .. Үтәк кисеүенә ҡарай табан ялтыратҡаны бер кем өсөн дә сер түгел ине инде. Унда паром менән Иҙел кисерҙәр ҙә тауҙар ышығындағы юлдарҙан Өфөгә ҡарай сигенерҙәр.* Ф. Иҫәнғолов. ● *Ирле кеше иҙел кискән, ирһеҙ кеше утҡа төшкән.* Мәҡәл. *Иҙел кисер булһаң, ике көнлөк аҙыҡ ал.* Мәҡәл. *Иҙел кисмәйенсә аяғыңды киптермә.* Мәҡәл. *Һыуҙы кисә-кисә белерһең, кешене тора-тора белерһең.* Мәҡәл.

4. Урын аралығын үтеү; аша гиҙеп үтеү. □ Пересекать *(местность)* // Прохождение. *Дала кисеү. Тауҙар кисеү.* ■ *Һибелә ул, ямғыр булып, сүлдәр кискәндә ирҙәр, елә҄ елдәр булып иҫә, тамғанда биттән тирҙәр.* М. Басыров. *Уҙаман ир Салауат тауҙар кискән, һыу кискән; яу ҡырында көрәштә полковник булып үҫкән.* Ҡ. Даян. *Аҡбуҙ аттар менеп, арҡаларҙа сәхрә гиҙҙем, йәмдәр тапманым. Күп илдәрҙә йөрөнөм, йыһан кистем, үҙ илемдәй илдәр тапманым.* Халыҡ йырынан.

5. *күсм.* Дауам итеп үтеү *(ваҡытҡа ҡарата).* □ Проходить *(о времени).* // Прохождение. ■ *Бер йыл кисеп китә, тағы һуғыш башлана.* Әкиәттән.

6. *күсм.* Кәүҙәләнеп, бер-бер артлы баштан үтеү *(уй-фекер тураһында).* □ Проходить, пробегать *(о мыслях). Күңелдән кисеү.* ■ *Боронғо ваҡыттар артынан береһе бөгөнгө кеүек күңелемдән кисеп, күҙ алдыма килә ине.* М. Ғафури.

7. *күсм.* Үҙ башыңда татып үткәреү, күреү. □ Пережить. *Оҙайлы ғүмер кисеү. Ҡайғыларҙы бергә кисеү.* ■ *Шулай үҫтем, шулай ғүмер кистем, шаян ҡылдар сиртеп үҫмәнем.* Д. Юлтый. ● *Ағын һыуҙы ат кисер, ауыр көндө ир кисер.* Мәҡәл.

8. Кире уйлау. □ Передумать. ■ *Мәстүрә өҫтөн алмаштырырға ниәтләп бөткәс, был уйынан кисеп, тәкәббер төҫтә ҡулдәкте һандыҡҡа кире һалды.* Ә. Хәкимов.

КИСЕҮ II (Р.: брод; И.: ford; Т.: sığ yer) *и.*

1. Йылғаның йәйәү йәки машина менән сығып йөрөй торған һай урыны. □ Брод, переправа. ■ *Рөхсәт, — тине ҡарттар. — Тик аслан Убыр күленә яҡын бармағыҙ. Ана Ба-*

сир киҫәүенә барып ҡойоноғоҙ. Д. Бураҡаев. *Һаҡмар киҫәүен уҙып, яр буйлап китә ятһа, ҡолағына йыр тауышы ҡағылды.* Ә. Хәкимов. *Ана ла һуң күк тирәк ҡарайып күренә, унан күп тә бармайһың — Торна киҫәүе, унан, Тәңребирҙе йылғаһының аръяғында, уларҙың сабынлығы.* Т. Ғарипова. *Атайымдың һөйләүенә ҡарағанда, ҡуйы ҡәрәмә ҡаплаған был шыҡ киҫәү аша ҡасандыр шул Зәйнетдин исемле ҡараҡ ҡына сығып йөрөгәнгә, уға шундай исем биргәндәр.* Н. Мусин. ● *Киҫәү күрмәй аяҡ сисмә.* Мәҡәл. *Киҫәүен белмәһәң, һыуға төшмә.* Мәҡәл. *Киҫәү бирмәҫ йылға юҡ, батыр еңмәҫ дошман юҡ.* Мәҡәл.

2. *миф.* Ышаныуҙар буйынса, теге һәм был донъяны бәйләп тороусы хәүефле урын. □ Брод *(опасное, пограничное между тем и этим светом место).*

КИСКЕ (Р.: вечерний; И.: evening; Т.: akşam) *с.*

Кис була торған, кисен үткәрелгән, кискә мөнәсәбәтле. □ Вечерний. *Киске ямғыр. Киске буран. Киске тамаҡ. Киске сәй. Киске уҡыу. Киске уйын.* ■ *Уның хәтеренә киске ваҡ, ләкин күңелһеҙ бер ваҡиға төштө.* Һ. Дәүләтшина. *Киске һауа тын. Уртаса аҙымдар менән бер юлдан барабыҙ.* Д. Юлтый. *Киске елдәр иркәләүендә шаулаған япраҡтар ҙа тынды.* Ғ. Хәйри. *Тирмә эсендәге тынсыулыҡтан һуң киске һалҡынса һауа битенә бәрелеүгә уйҙары асыҡланғандай булды.* Ә. Хәкимов. ● *Иртәнге ашты ташлама, кискеһен башлама.* Мәҡәл. *Киске шаңдаҡ ҡыҙарһа, киленем ул тапҡандай, иртәнге шаңдаҡ ҡыҙарһа, илем яуға сапҡандай.* Мәҡәл. *Киске эш таңға көлкө.* Мәҡәл.

КИСКЕ АҠШАМ (Р.: сумерки; И.: twilight; Т.: alacakaranlık) *и. диал.*

1. Эңер ваҡыты. □ Сумерки. *Киске аҡшамға тиклем ҡайтып етеү.*

2. *миф.* Ауырыу, яман заттар күтәрелгән ваҡыт. □ Сумерки *(опасное время).*

КИСКЕ АШ (Р.: ужин; И.: (late) dinner; supper; Т.: akşam yemeği) *и.*

Йоҡо алдынан туҡлана торған иң һуңғы аш. □ Ужин. ■ *Киске аштан һуң, ҡараңғы төшөү менән, ҡыуыш алдына ут яҡтылар.* М. Тажи. *Киске аштан һуң әсәһе ҡайҙалыр йыйынға башланы. Үҙенең йөҙө борсоулы.* Н. Ғәйетбаев. *[Һауынсылар] ҡаҙан аҫтарына ут яғып, аҡланды әскелтем төтөн еҫенә тултырып киске аш хәстәрләй башлайҙар.* Т. Ғарипова.

КИСКЕЛЕК I (Р.: вечерний; И.: evening; Т.: akşam, gece) *с.*

Кискә тәғәйенле, кис үтәлергә тейешле. □ Вечерний. *Кискелек аш. Кискелек намаҙ.*

КИСКЕЛЕК II (кискелеге) (Р.: вечерняя пора; И.: evening; Т.: akşam) *и.*

1. Киске ваҡыт, кислек. □ Вечерняя пора, вечер. ■ *Бына әле Кәбир кискелеккә малдарҙы ҡарарға сығып китте, ә Зифа уның хатын уҡый.* Н. Мусин. *Сәрбиямал Йәнеште туҡмап, ҡарғап та тымыҙа алмағас, кискелеккә һауыр өсөн һыйырҙы алып инергә үҙе сығып китте.* З. Биишева. *Кискелеккә ҡарыу эсер ваҡыт еткәс, баҡсала елләнгән ике ҡартлас һертелдәп ҡайтып инде.* Й. Солтанов.

2. *һөйл.* Киске аш. □ Ужин. ■ *Кискелекте ашағас, ике туған тағы ла оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар.* Д. Исламов. *Ҡайтып, кискелеккә ыумас эсеп, дәрестәрҙе әҙерләгәнсе, ҡараңғы ла төшөп китте.* Й. Солтанов. *Кәртә эсендәге ҡаҙан аҫтына ут яғып, ҡатын-ҡыҙ, сыр-сыу ҡысҡырышып, эркет ҡайната, кискелеккә аш бешерә, самауырҙарҙан сәй эсергә әҙерләнә.* Я. Хамматов.

КИСКЕ МӘКТӘП (мәктәбе) (Р.: вечерняя школа; И.: continuation school; Т.: akşam okulu) *и.*

Эштән һуң, киске ваҡытта барып уҡыу өсөн ойошторолған мәктәп. □ Вечерняя школа. *Киске мәктәптә уҡыу. Киске мәктәпкә барыу.*

КИСКЕ СУЛПАН *и. диал. ҡар.* **Зөһрә йондоҙо.**

КИСКЕТАҢНЫҠ (кискетаңныҒы) *и. диал. ҡар.* **шәфәҡ.**

КИСКЕҺЕН (Р.: вечером; И.: in the evening; Т.: akşamleyin) *р.*

Кис менән, кис булғас; кисен. □ Вечером. *Кискеһен һалҡынайтып ебәрҙе.* ■ *Кискеһен кеше үҙ ғүмеренең бер көнөнә йомғаҡ яһай.* Ш. Янбаев. *Үткер бәйет бер көн эсендә бригадаларға, фермаларға таралып өлгөрҙө.*

Кискеһен уны йәштәр, гармунға ҡушылып, урамда йырлап үттеләр. Й. Солтанов. *Кискеһен шофёрҙарҙы йөрөтөүсе автобус һуңлабыраҡ китә.* Р. Солтангәрәев.

КИСКӘ I (Р.: вечером; И.: night; Т.: akşamleyin) *р.*

Кис булыуға, ҡараңғы төшөүгә; кисен. □ Вечером. ■ *Ҡып-ҡыҙыл ут шары кеүек ҡалҡҡан ҡояш, .. кискә йәнә ҡыҙыл шарға әйләнеп, әллә ҡайҙа төшөп китә.* З. Ураҡсин. *Көн үҙәгендә ярайһы уҡ ҡыҙҙырһа ла, кискә табан һалҡынайта, килеп-килеп ямғыр яуып ебәрә.* Ә. Хәкимов. *Былай ҙа еүеш һалҡын һауа кискә табан .. сирҡандырғыс булып елкәгә баҫа.* З. Биишева.

КИСКӘ II *и. диал. ҡар.* **түмәр.**

КИСКӘ ҠАЛЫУ (кискә ҡал-) (Р.: запоздать; И.: be late; Т.: geç kalmak) *ҡ.*

Һуңлау, һуңлап килеү. □ Запоздать, опоздать. ■ *Ғәлимәкәй, — тине, үҙе уның елкәһенә ҡулын ҡуйҙы,— һин хәҙер ҡайтһаң да ярар, ҡараңғы төшөп килә. Кискә ҡалһаң, ҡайтыу ҡыйын булыр.* А. Таһиров.

КИСКӘРЕ *р. диал. ҡар.* **кискеһен.** *Кискәре килерһең. Кискәре барыу.*

КИСКӘ ҺАРҠЫУ (кискә һарҡ-) *ҡ. ҡар.* **кисәүләү 1.**

КИСҠОРОН (Р.: под вечер; И.: towards evening; Т.: akşamleyin) *р.*

Кискә табан, кис яҡынлашып килгәс. □ Под вечер, ближе к вечеру. ■ *Берҙән-бер мәлде, көҙ көнө, кисҡорон, батшаның уландары ҡарындаштары менән баҡсала йөрөргә булған.* Әкиәттән. *Кисҡорон, Таштуғайҙағы туғандарына инеп хәл белешкәс, тимерлектә тимер сыңлауын ишетеп, Килдебәк аулаҡта Кәримбайҙың ҡылын тартып ҡарамаҡ булды.* А. Абдуллин. *Кисҡорон күңелле генә эселеп ултырылған сәй янында башланған был һүҙҙәр Вәхиттең быға саҡлы үҙе өсөн борсолоп йөрөгән ата-әсәһенә үҙенең эс серен башлап асып биреүенә сәбәп булып төштө.* М. Ғафури. *Барыбер хәҙер яуап юҡ, һөйләшербеҙ кисҡорон.* Ш. Бабич.

КИСЛАХРУМ (Р.: драгоценный камень; И.: gemstone; Т.: mücevher) *и. диал.*

Ҡиммәтле таш. □ Драгоценный камень. *Кислахрум ҡашлы йөҙөк.*

КИСЛЕК (кислеге) (Р.: вечер; И.: evening; Т.: akşam) *и.*

Киске ваҡыт, кискелек. □ Вечер, вечерняя пора. *Көн кислеккә ауышты.* ■ *Боландар иректә йөрөп өйрәнгән, бабай. Кислектә, көслө бурандарҙа, яуындарҙа ятып торорлоҡ ышыҡ булдымы, шул етә, — тине Фәриҙә.* Н. Мусин. *Ҡайтып кислеккә мал тәрбиәләү, ҡурала ваҡ-төйәк эштәр менән булғансы, ҡояш та Бире урманы өҫтөнә төртөлдө.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Төшлөк ғүмерең булһа, кислек ашарға әҙерлә.* Мәҡәл.

КИСЛЕКЛЕ (Р.: бессонный; И.: sleepless; Т.: uykusuz) *с.*

Кисен оҙаҡ йоҡламай ултырыусан. □ Бессонный. *Кислекле әҙәм. Кислекле бала.*

КИСЛЕКҺЕҘ (Р.: рано засыпающий; И.: wont to go to sleep early; Т.: erken uyuyan) *с.*

Кисен түҙә алмай, тиҙ генә йоҡларға ятыусан. □ Рано засыпающий, рано ложащийся. *Кислекһеҙ ҡатын.*

КИСЛОРОД [рус.] (Р.: кислород; И.: oxygen; Т.: oksijen) *и. хим.*

Химик элемент, тын алыу һәм яныу өсөн кәрәк булған, водород менән ҡушылғанда һыу хасил иткән, һауа составындағы еҫһеҙ, төҫһөҙ газ. □ Кислород. *Атомар кислород. Шыйыҡ кислород. Кислород етешмәй интегеү.* ■ *Йыр кислород булып ҡанға керә, ул ҡан булып тәнгә тарала; ҡулың менән һыпырып алған һымаҡ, арыу-талыу шул саҡ юғала.* М. Хәй.

КИСЛОРОД АППАРАТЫ (Р.: кислородный аппарат; И.: oxygen breathing apparatus; Т.: solunum cihazı) *и. махс.*

Ауырыу үҙе тын ала алмағанда үпкәһенә кислород бирә торған аппарат. □ Кислородный аппарат. ■ *Шәфҡәт туташтарының ҡайһы берҙәре кислород аппараты менән булашалар, береһе Йыһанша ағайға укол ҡаҙап тора.* Р. Ғабдрахманов.

КИСЛОРОД ЕТЕШМӘҮ (кислород етешмә-) (Р.: испытывать недостаток кислорода; И.: feel lack of oxygen; Т.: oksijen yetersizliği) *ҡ. мед.*

Тән туҡымаларында кислородтың аҙайыуы. □ Испытывать недостаток кислорода. // Кислородное голодание. *Кислород*

етешмәй башлау. ■ *Яңы тыуған сабыйға кислород етешмәй икән, уның тән ағзалары тейешле кимәлдә формалаша алмай.* «Йәшлек», 31 ғинуар 2012.

КИСЛОРОДЛЫ (Р.: кислородный; И.: oxygen; Т.: oksijenli) *с.*

Кислороды булған, ҡушылмаһына кислород ингән. □ Кислородный. *Кислородлы органик ҡушылмалар. Кислородлы берләшмәләр.*

КИСЛОРОДЛЫ МЕНДӘР (Р.: кислородная подушка; И.: oxygen bag; Т.: oksijen torbası) *и. мед.*

Һауа етмәгәндә кислород һулатыу өсөн ҡулланылған медицина приборы. □ Кислородная подушка. *Кислородлы мендәр ҡуйыу.*

КИСЛОТА [рус.] (Р.: кислота; И.: acid; Т.: asit) *и. хим.*

Тоҙҙар барлыҡҡа килгәндә металл менән алмашыныуға һәләтле водороды булған әскелт шыйыҡ химик берләшмә. □ Кислота. *Тоҙло кислота. Аскорбин кислотаһы. Аккумуляторҙың кислотаһын алыштырыу. Кислотаға бирешмәүсән.*

КИСЛОТАЛЫ (Р.: кислотный; И.: acid; Т.: asitli) *с.*

Кислотаһы булған; кислота ҡушып эшләнгән. □ Кислотный, с кислотой. *Кислоталы буяғыстар. Кислоталы берләшмәләр. Кислоталы стакан.* ■ *Кассир өндәшмәне... [Алтынды] кислоталы һауытҡа төшөрҙө.* Я. Хамматов.

КИСЛӘТЕҮ (кисләт-) (Р.: вечереть; И.: fall (about night); Т.: kararmak) *ҡ.*

1. Кис етеү, кискә еткереү. □ Вечереть, приближаться к вечеру. *Көн кисләтә.* ■ *Көн кисләтеп килеүгә ҡарамаҫтан, урамда ла шаҡтай томра ине.* Ә. Вәли. *[Емеш] был яҙғы оҙон көндө кисләтә алмай йөҙәне.* З. Биишева.

2. Кискә ҡалыу. □ Задерживаться допоздна, до вечера. ■ *Харрастың йөрәге тыҙмәне, кисләтеп булһа ла, ҡалаға барып ҡайтырға булды.* Ғ. Аллаяров. *Ҡолморҙа старшина ошо ваҡиғалар һуңынан кисләтеп булһа ла, янында Әлекәй ҙә булғас, бер нигә ҡарамай Уралға йәйләүенә ҡайтты.* Т. Хәйбуллин. *Ысынлап та, Талха кисләтеп кенә, арба билен эйелтеп, Ғөмәр ауылы тирмәненән ҡайтып килә ине.* Ж. Кейекбаев. *Ә бына кисә, бөтөнләй көтмәгәндә, теүәл өс көн һуңлап, Мәрйәм кисләтеп кенә инеп сыҡты.* Д. Буләков. *Фәрештәләр һинән китмәйме тип, йәнем ҡайтыр, бәлки, кисләтеп.* Х. Назар.

КИСЛӘТӘ (Р.: вечером; И.: in the evening; Т.: akşamları) *р.*

Кис булғас, кис менән. □ Вечером. ■ *Эштән кисләтә ҡайтып, аулаҡ бүлмәһенә бикләнеп ултырғас, ишек шаҡылдаттылар.* Й. Солтанов. *Көс, һәләт һынаш ярыштары, уйындары бөткәс, кисләтә һабантуйҙағылар тәбиғәт ҡосағында аш-һыу мәжлестәренә таралышты, һәр кемдең үҙ ҡоро, үҙ зауығы.* Ғ. Хөсәйенов.

КИСЛӘҮ (кислә-) (Р.: вечереть; И.: fall (about night); Т.: kararmak) *ҡ.*

1. Кис яҡынлашыу, кискә һарҡыу. □ Вечереть. *Көн кисләне.* ■ *Бара-бара бер урманға етәләр. Ул арала көн кисләй башлай.* Әкиәттән. *[Гариф ҡарт:] Көн кисләй, һуңға ҡалам, — тип ҡараны, ләкин уңған хужа ҡатын уны, ай-вайына ҡуймай, ашарға ултыртты.* Б. Бикбай. *Был мәл көн кисләй башлағайны.* Н. Ғәйетбаев. *Мәмерйәлә Хәмиттең дә булғаны юҡ. Күргеһе килә. Ә икегә бүленһәң, көн кисләйәсәк.* Д. Буләков. *Көн кисләй. Тағы бер ун-ун биш сикрым барабыҙ ҙа берәй ауылға инеп ҡунырбыҙ.* З. Биишева.

2. Кискә, һуңға ҡалыу. □ Задерживаться до вечера. *Кисләп китеү. Кисләп ҡайтыу.*

КИСМӘЛЕК (кисмәлеге) *и. диал. ҡар.* **кисеү II, 1.** *Кисмәлек әҙләү. Кисмәлек аша үтеү. Шул ерҙә кисмәлек була торғайны.*

КИСТЕ (Р.: вечером; И.: in the evening; Т.: akşamleyin) *р.*

Билдәле бер кистә; кисен. □ Вечером *(в сочетании с определительными местоимениями). Был кисте. Теге кисте.* ■ *Ҡыҙҙар ул кисте теген менән булаша алманылар.* Һ. Дәүләтшина. *Ул кисте Мостафаның йортонда христиан диненә күскән төркмән офицеры Хан-Йомудскийҙың улы Николай Николаевич Хан-Йомудский тигән офицер менән кис буйы һөйләштек.* Ә.-З. Вәлиди. *Мунса*

инеп сығып, тирләп-бешеп сәй һемерә ине ул кисте Суминов. Ә. Хәкимов.

КИСТЕР.ЕҮ (кистер-) [боронғо төрки *кечит-, кечүрт*] *к. йөкм. ҡар.* **кисеү I, 1.** *понуд. от* **кисеү I, 1.** *Йылғаны кистереп сығыу.* ■ *Юл ҡайһы саҡта ҡайҡайып торған бейек ҡая аҫтынан, йылға эсенән китә, байтаҡ ер һыу кистереп бараһың; ҡая өҫкә ҡолай яҙып тора.* Ж. Кейекбаев. *Артыҡ ҙур булмаған йылғаны кистереп сыҡҡас, ул [Сергей] уңға ҡайырылды.* А. Абдуллин. *Фёдор Пьянков трактор йөрөтә белә, монтажсыларҙың трубоукладчигын алдылар ҙа һыу кистереп киттеләр.* Р. Солтангәрәев. ● *Димсе диңгеҙ кистерер, илтеп ярҙан осорор.* Мәҡәл.

КИСТОЧКА [рус.] *и. ҡар.* **бумала.** *Кисточка менән буяу.* ■ *Шәһүрә, Мөбәрәккә ҡушып, ат ҡылынан төрлө ҙурлыҡтағы кисточкалар яһатып алды ла керешге яңы эшкә.* Н. Мусин. *[Аталары] Иллионораға шалтыраткыс, Нинилгә ҡарағусҡыл сепрәктән яһалған айыу, Маратҡа буяу менән кисточка, Ҡәләмфергә һүрәт яһарға ҡағыҙ алды ла ҡайтырға ашығып сығып китте.* Ғ. Дәүләтшин.

КИСТӘН I (Р.: с вечера; И.: from evening on; Т.: akşamdan) *р.*

1. Кис менән, кисен. □ С вечера, вечером. ■ *Ул кистән, Бибинурҙы күрергә теләп, Ғамирҙарға кергәйне, ләкин уның һеңлеһе ауыл советынан ҡайтмаған икән.* Б. Бикбай. *Салауаттарҙың ҡалай түбәле өй алдына кистән бер зәңгәр машина килеп туҡтаны.* Й. Солтанов. *Ғәбдеян кистән баш күтәрмәй отчёт төҙөп ултырҙы.* Н. Мусин.

2. Уҙған кис, кисә кис. □ Прошлым вечером. *Кистән яуған ҡар.* ■ *Сейәбикә тора һалып, сыралап сыуал алдына киптерергә ҡуйған утындарын көлдөксәгә бушатты ла, кисә кистән күмеп ҡалдырған ҡуҙын болғатып, өрә-өрә сыуалға ут тоҡандырып ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин. *Рауза ғәҙәттәгенән иртәрәк уянды. Уянғас, йомро беләгенә башын һалып, кистән ҡорғаны тартылырға онотолған тәҙрә аша төшкән иртәнге ҡояштың сағыу нурына күҙен ҡыҫа биреберәк уйланып ятты.* Т. Ғарипова. ● *Кистән аяҙ булһа, иртән дә аяҙ килә.* Мәҡәл.

КИСТӘН II *и. ҡар.* **киҫтән.** *Айыу кистәне. Кистән менән һуғып алыу (януарҙы).*

КИСТӘН-КИС (Р.: вечерами; И.: in the evenings; Т.: akşamları) *р.*

Кис ваҡыты, кистәрен. □ Вечерами. *Кистән-кис гәзит уҡыу. Кистән-кис әҙерләнеп ҡуйыу. Кистән-кис бәйләм бәйләү.*

КИСТӘРЕН (Р.: вечерами; И.: by evenings; Т.: akşamları) *р.*

Кис көндәре, кис төшкән ваҡыт. □ Вечерами, под вечер, вечером. ■ *Кистәрен ауыл урамынан йырлап үткән ҡыҙҙар, егеттәрҙең дәртле йырҙары уның йөрәген елкендерҙе, күңелен ҡанатландырҙы.* М. Тажи. *Таллыбай — гел генә эштән бушамай, кистәрен уйынға бик һирәк сығыусан егет, Фатима — матур, шул уҡ ваҡыт уҫал һәм күңелсәк ҡыҙ.* Б. Бикбай. *Һырт яҡтағы иркен аҡланда кистәрен ҡурай тартҡан, таҡмаҡ әйткән ауаздар яңғыраны.* Й. Солтанов. *Улар яңғыҙ, улар икәү генә был донъяла. Шуға күрә лә Батыр әсәһен кистәрен яңғыҙ ҡалдыра алмай.* Н. Ғәйетбаев. *Әле ҡыш уртаһы. Кистәрен бик һыуыҡ була.* Ғ. Хәйри.

КИС УЛТЫРЫУ (Р.: вечерние посиделки; И.: seating; Т.: akşam oturmaları) *и.*

Ҡышҡы оҙон кистәрҙә йыйылышып ҡул эше менән ултырыу. □ Вечерние посиделки. *Кис ултырыуға барыу.*

КИС ҺАРҠЫУЫ (Р.: вечерняя тень; И.: evening fog; Т.: akşam dumanı) *и. диал.*

Ауырыу, сырхау килтереүсе киске һалҡын томан. □ Вечерняя тень, опасная дымка, сгусток в воздухе, несущий болезни людям и животным. *Кис һарҡыуы төшкән.*

КИСЫРАНТАЙ *с. диал. ҡар.* **ҙур.**

КИСӘ I [боронғо төрки *кеч*] *и. иҫк. ҡар.* **кис 1.** *Айҙың икенсе кисәһе.* ■ *«Тыуҙы Ғәли Әхмәт... айҙың 27 кисәһендә, көн матур ине. Аллаһы Тәғәләнән үҙенә бәхет вә байлыҡ дәрәжәһе теләйем. Амин».* Ғ. Хәйри. *Ураҙала, хәҙер кисәһендә, теләгән теләк ҡабул булмай ҡалмай, ти, ул. Алла бирһә, ожмах ишеге һис шикһеҙ асыҡ булыр Шәмсиә һылыуға, — тип раҫлап уҡ ҡуйҙы Бибисара абыстай.* З. Биишева.

КИСӘ II [боронғо төрки *кеч*] (Р.: вечер; И.: evening party; Т.: akşam) *и.*

Киске йыйылыш, мәжлес. □ Вечер, вечеринка. *Юбилей кисәһе. Хушлашыу кисәһе. Шиғриәт кисәһе. Студенттар кисәһе. Сығарылыш кисәһе.* ■ *Ошондай көндәрҙең береһендә техникумда хушлашыу кисәһе булды.* М. Тажи. *Был кисә булыуҙан файҙаланып, иптәштәрҙең фекерен белергә, поэмамды уҡымаҡсы булдым, миңә һөйләргә һүҙ бирҙеләр.* Ғ. Сәләм. *Шул байрам кисәһендә генә Коля-Николаша минең исемемде һораны һәм уға «Сәриә» тигән һүҙҙе башҡортса дөрөҫ итеп әйтергә өйрәттем.* Н. Мусин. *Клуб итеп йәтешләгән иҫке складта байрам кисәһе буласағы тураһындағы хәбәр Ҡарабулаҡҡа таралып та өлгөргәйне.* Р. Солтангәрәев. *Волость ҡуләмендәге ҙур тантаналы кисәләр, йыйылыштар ҙа ошонда үтә.* З. Биишева.

КИСӘ III (Р.: вчера; И.: yesterday; Т.: dün) *р.*

Үткән көнө. □ Вчера. *Кисә ҡайтты. Кисә килде. Кисә булды.* ■ *Сәғиҙә кисә ҡурҡыу ҡатыш ҡыҙыулыҡ менән аяҡтарының ауыртҡанын артыҡ һиҙмәһә лә, иртән торғас, атлай ҙа алмай ине.* М. Тажи. *Кисә генә әле томан арҡаһында ҡылауланған ағастар, буран сапҡынынан ҡылауҙарын һелкеп, ергә ауналалар.* Т. Хәйбуллин. *Бөтәбеҙ ҙә кисә кистән үк был мәлде һағынышып, кейемдәребеҙҙе иплән ҡуйғайныҡ.* Й. Солтанов. *Ә кисә юғалған ун һигеҙ малай өлкән лейтенантты төрлө яҡтан аптырауға ҡалдыра.* Н. Ғәйетбаев. *Арбала артыҡ бер бүрәнә башы булыу сәбәпле, Хәбибулла ла, Сөнәғәт тә кисә һөйләгән һүҙҙәргә ҡайтманылар.* Ж. Кейекбаев.

КИСӘ IV (Р.: вчерашний день; И.: yesterday; Т.: dünkü gün) *и.*

Кисәге көн, кисә булған көн. □ Вчерашний день. *Кисәнән бирле көтә. Кисәнән планлаштырып ҡуйған.* ■ *Кәмәгә төшәрбеҙ, балыҡ тоторбоҙ тип, кисәнән һөйләшеп ҡуйғайныҡ.* М. Хәйҙәров. *Әгәр иҫән-һауҙар икән, ниңә кисәнән бирле ҡайтмағандар?* Н. Ғәйетбаев. *Ә минең кисәнән бирле уң күҙемдең өҫтө тарта... — Ҡайғынан башҡа нәмә күрмәгән Мәҙинә быны үтә хафаланып әйтте.* Т. Ғарипова. ● *Кисә йөрөгән бөгөн һөйөнөр.* Мәҡәл.

КИСӘБАЙ (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әйле ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени ай.

КИСӘГЕ I [боронғо төрки *кечи*] (Р.: вчерашний; И.: yesterday's; Т.: dünkü) *с.*

Кисә булған, кисә эшләнгән, үткән көнгө. □ Вчерашний. *Кисәге ваҡиға. Кисәге хәбәр. Кисәге байрам.* ■ *Гөлйөҙөм сығып киткәс, ул Муйылбикәгә кисәге һүҙҙәрен ныҡланы.* Һ. Дәүләтшина. *Мөлөк ағай мең бәлә менән атын табып алып екте лә, кисәге юлы менән китә башланы.* Т. Хәйбуллин. *Уның кисәге киҫәтеүен колаҡтарына ла элмәй, яңы диләнкәне ҡырҡа башлағандармы әллә?* Н. Мусин. ● *Кисәге аҡыл бөгөнгә ярамай.* Мәҡәл.

КИСӘГЕ II *р. диал. ҡар.* **кисә III.** *Кисәге ҡайҙа барҙың?*

КИСӘГЕНӘК *р. ҡар.* **кисә III.** ■ *Эйе шул. — Көндәй балҡыны хужабикәнең йөҙө. — Кисәгенәк барып, түҙмәй, арышыбыҙҙың мал ауыҙы ялмарҙай юл эргәһенән урыштырып алғайным.* Й. Солтанов. *Ә дала өҫтөндә хәҙер төн. Кисәгенәк кенә әле был ваҡытта ҡарайып ятҡан даланы инде йоҡа ғына ҡар ҡатламы ҡаплаған.* А. Карнай.

КИСӘЙЕҮ (кисәй-) *ҡ. ҡар.* **кисләү 1.** ■ *Көн кисәйҙе, вак тамсылы көҙгө ямғыр ҙа туҡтаны, шулай булһа ла күктәге һоро болоттар юғалып бөтмәгән әле.* Ғ. Хәйри. *[Әпкәдир мулла] Аҫылғужа тархандың ғүмерен оҙайтмағаны өсөн Хоҙайҙы әрләй-әрләй Тамъян ерена ҡайтып ингәндә, көн кисәйеп бара ине.* К. Мәргән.

КИСӘК I *р. диал. ҡар.* **ҡапыл.** *Кисәк килеп сыҡты. Кисәк кенә тоҡаныпкитте. Кисәк тороп ултырҙы.*

КИСӘК II (кисәге) (Р.: конец улицы; И.: end of a street; Т.: sokağın ucu) *и. диал.*

Урам осо. □ Конец улицы. *Был кисәктә ололар ғына йәшәй. Кисәккә хәтлем йүгергәнмен.*

КИСӘЛЕ-БӨГӨНЛӨ (Р.: за последние два дня; И.: during last two days; Т.: dünden bugüne) *р.*

Һуңғы ике көн эсендә, кисә һәм бөгөн. □ За последние два дня, вчера и сегодня. *Кисәле-бөгөнлө көн һыуыҡ тора.* ■ *Кисәле-бөгөнлө ауыл клубында ла ут күренмәй, төн йоҡоларын онотоп, ауылда ҡыңғыраулы гармунға ҡушылып йырлап йөрөүсе егеттәрҙең дә дәртле моңдары ишетелмәй тора.* Ф. Әсәнов. *Тик Зифаның кисәле-бөгөнлө һымаҡ нык һуңлағаны юҡ ине.* Н. Мусин. *Кисәле-бөгөнлө Хәнифәнең аңы асыҡланып, ҡайҙа һуғылырға белмәй йөрөгән сағы ине.* Ә. Хәкимов. *Ниңәлер ул һаман Исәнбай ҡарттың ауырыуына ышанып етә алмай – кисәле-бөгөнлө шап-шаҡтай бәндә әле килеп ни эшләп сирләп ятһын инде.* Ә. Әминев.

КИСӘҢГЕ *с. һөйл. ҡар.* **кисәге 1.** *Кисәңге йылыш. Кисәңге осрашыу.*

КИСӘҮ I (Р.: поздно спарившаяся; И.: cattle which mated late; Т.: geç çiftleşen) *с.*

Һуң ҡаҫҡан, һуңға ҡалып быуаҙыған *(ғәҙәттә, һыйыр, һарыҡ-кәзәгә ҡарата әйтелә).* □ Поздно спарившаяся *(о самке домашних животных). Кисәү һыйыр. Һарыҡтар быйыл кисәү булды.*

КИСӘҮ II (Р.: поздно; И.: late; Т.: geç) *р. диал.*

Тейешле ваҡытынан аҙаҡ, артҡа ҡалып; һуң. □ Поздно. ■ *Бәхеттәренә, быйыл ҡар кисәү төшһә лә, былтырғы кеүек бер юлы ҡалын булып яуманы.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

КИСӘҮ АҒАСЫ (Р.: головешка; И.: firebrand fall (about night); Т.: öksü) *и. миф.*

Янып ҡуҙланған, күмерләнгән мифлаштырылған ағас киҫәге. □ Головешка *(мифологизированный предмет).* ■ *Янып ятҡан кисәү ағасын сығарып ташларға ярамай, насар була.* Башҡорт мифологияһынан.

КИСӘҮБАШ *и. миф. диал. ҡар.* **кисәү ағасы.**

КИСӘҮЕЛЛӘҮ (кисәүеллә-) *ҡ. ҡар.* **кисәүләү 1.** *Ҡышҡы көн тиҙ кисәүелләй.* ■ *Көн ярайһы уҡ кисәүелләгән.* Ғ. Ибраһимов.

КИСӘҮЛӘҮ (кисәүлә-) (Р.: вечереть; И.: fall *(about evening)*; Т.: akşam yaklaşmak) *ҡ.*

1. Кис булыу, кискә ауышыу; кисләү. □ Вечереть, клониться к вечеру. *Көн кисәүләгән.* ■ *Ҡырау ауылына еткәндә, көн кисәүләү генә түгел, шәфәҡ батыуға ла күп ҡалмаған ине.* Т. Йәнәби. *Тал һуйғансы, көн кисәүләне.* Н. Мусин. *Хәйер, көҙ бит инде, көн дә кисәүләне, балыҡ сиртә буламы бындай ваҡытта.* Ә. Хәкимов.

2. Һуңға ҡалыу, һуңлау. □ Опаздывать, запаздывать. ■ *Рахман килеп инде. Гөләйшә инәй: – Эй-й, улым, ниңә кисәүләп йөрөйһөң? – ти.* К. Кинйәбулатова. *Күп көттөрмәне, ҡояш тау арьяғына йәшенгәндә юлда күренде был кисәүләгән ҡунаҡ [Брагин].* Ғ. Хөсәйенов.

КИСӘҮ ТАЯҒЫ *и. миф. диал. ҡар.* **кисәү ағасы.**

КИҪЕГЕҮ (киҫек-) *ҡ. ҡар.* **киҫәү 2.**

КИҪЕК I (Р.: отрезанный; И.: offcut; Т.: kesik) *с.*

1. Киҫеп алынған, киҫелгән. □ Отрезанный, обрезанный, срезанный, срубленный. *Киҫек ҡойроҡ. Киҫек бау.* ■ *Урта буйлы, утыҙ йәштәр тирәһендәге был башҡорттоң танауы, ҡолаҡтары киҫек: танау урынындағы йәрәхәт-яза эҙҙәре өңрәйеп тора – ҡарауы имәнес.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Өҫкө өлөшө яҫылыҡ менән киҫелгән. □ Усечённый. *Киҫек конус һыҙыу. Киҫек пирамиданың күләмен хисаплау. Киҫек цилиндр. Киҫек сфера.*

КИҪЕК II (киҫеге) (Р.: отрезок; И.: piece, section, segment; Т.: kısım, kesinti) *и. мат.*

Ике яҡтан киҫелгән һыҙыҡ. □ Отрезок. *Киҫектең оҙонлоғо. Киҫек һыҙыу. Йүнәлтелгән киҫек. Һандар киҫеге.*

КИҪЕККЕР *с. диал. ҡар.* **киҫекһеҙ 1.**

КИҪЕКТЕРЕҮ (киҫектер-) *ҡ. ҡар.* **киҫәтеү.** *Баланы киҫектереп тороу.*

КИҪЕКҺЕҘ (Р.: непослушный; И.: disobedient, naughty; Т.: söz dinlemez) *с.*

1. Әйткәнде ҡолағына элмәүсән; тыңлауһыҙ. □ Непослушный, не воспринимающий. *Киҫекһеҙ әҙәм. Киҫекһеҙ бала.* ■ *Кәңәшең өсөн рәхмәт, миңә күп изгелек күрһәттең. Солтанғәлемде кеше иттең. Тик Заһиты ғына киҫекһеҙ булып сыҡты.* Я. Хамматов. *Был тиклем киҫекһеҙ кешеләр булыр икән. Уҙған юлы ҡырҡҡан ағастарының осон ҡар бөткәнгә хәтлем үртәп бөтөгөҙ, тип киткәйнем, һаман эшләмәгәндәр.* Н. Мусин.

2. *күсм. диал.* Өҙлөкһөҙ. □ Беспрестанный. *Киҫекһеҙ буран.* ■ *Йонсоткос был ауыр уйҙар, бәгерен өҙгән киҫекһеҙ икеләнеүҙәр тамам алйырғатып бөтөргәс, бөгөн ул [Фәриҙә] өйҙә генә ҡала алманы.* А. Мағазов. *Төптәренә төштөм көн күрмештең, ул — хаяһыҙ, ҡотһоҙ, киҫекһеҙ.* Х. Назар.

КИҪЕКҺЕҘЛӘНЕҮ (киҫекһеҙлән-) (Р.: упрямиться; И.: be obstinate; Т.: inat etmek) *ҡ.*

1. Киҫекһеҙгә (1) әйләнеү, киҫекһеҙ булыу. □ Упрямиться, становиться непослушным. ■ *[Ишкужа:] Камалетдин, баланы әрләмә! Тора-бара аҡылға ултырыр әле, Алла бойорһа. Бер үк һүҙҙе күп тылҡыһаң, бала киҫекһеҙләнә.* Я. Хамматов.

2. Үҙһүҙләнеп үҙенекен дауам итеү, киҫәмәү. □ Настаивать на своём, упрямо продолжать. *Киҫекһеҙләнеп китеү.*

КИҪЕЛЕШ (Р.: разрез; И.: cut; Т.: yarık) *и.*

Киҫеп алынған, киҫеп төшөрөлгән урындың йөҙө. □ Разрез, сечение, срез. *Ҡыя киҫелеш. Перпендикуляр киҫелеш. Арҡыры киҫелеш. Геологик киҫелеш. Пирамиданың арҡыры киҫелеше. Буй киҫелеш яһау. Киҫелештең майҙанын хисаплау.*

КИҪЕМ (Р.: срез; И.: section; cut; Т.: kesik yer) *и.*

Киҫкән, ҡырҡҡан урын. □ Срез, сечение. *Бүрәнә киҫемдәре. Киҫем урынын тегеп ҡуйыу.* ■ *[Күкбүрин] Һағынбай ауылынан ҡайтып барышлай, юлдың кинәт боролған киҫемендә иҫерек баштан тормоз урынына газ педалена баҫты.* М. Ямалетдинов. ● *Киҫемле мал үҫемле.* Мәҡәл.

КИҪЕНДЕ I *и. ҡар.* **ҡырҡынды I.** *Тауар киҫендеһе. Таҡта киҫендеһе.*

КИҪЕНДЕ II *и. ҡар.* **ҡырҡынды II.** *Киҫендегә сығыу.*

КИҪЕП АЛЫУ (киҫеп ал-) (Р.: отрезать; И.: cut off; Т.: kesmek) *ҡ.*

Нимәнелер ҡырҡып алыу. □ Отрезать. *Уртанан киҫеп алыу. Буйға киҫеп алыу. Ботаҡты киҫеп алыу. Туҡыманы киҫеп алдым.*

КИҪЕП ТАШЛАУ (киҫеп ташла-) (Р.: отрезать; И.: cut away; Т.: kesip atmak) *ҡ.*

Нимәнелер ҡырҡып алып ташлау, ырғытыу. □ Отрезать. *Артығын киҫеп ташлау. Сәсте киҫеп ташлау. Ағас остарын киҫеп ташлау.*

КИҪЕРЛЕ *с. диал. ҡар.* **кеҙе.** *Киҫерле бала. Киҫерле кеше.*

КИҪЕҮ (киҫ-) (Р.: резать; И.: cut; Т.: kesmek) *ҡ.*

1. Үткер ҡорал менән өҙөү, киҫәктәргә бүлеү; ҡырҡыу. □ Резать, отрезать, обрезать, разрезать, срезать. // Резка, резание, срезание. *Киҫеп төшөрөү. Туҡмас киҫеү. Ағас киҫеү. Урман киҫеү. Әрҙәнә киҫеү.* ■ *Хәмит, икмәк киҫеп алып, ҡалын итеп май яға. Унан телемен ҡутәреп сығып китә урамға.* Т. Арслан. *Әбүзәр Үҙәк буйына еткәс, ҡурай көпшәһе киҫеп алды.* Я. Хамматов. *Кемдер тук та тук итеп әллә утын киҫә, әллә берәй әйбер йүнәтә.* Ә. Хәкимов. *Башҡа ҡапыл бер уй килде: солаңға инеп, күп итеп әпәй киҫеп алып сыҡтым.* Ғ. Хәйри. ● *Дуҫың бысағы менән мөгөҙ киҫ, дошманың бысағы менән кейеҙ киҫ.* Мәҡәл. *Ҡорал эшләр — ир маҡтаныр, ҡылыс киҫер — ҡул маҡтаныр.* Мәҡәл. *Үткер ҡылыс ҡынын киҫер.* Мәҡәл.

2. Үткер нәмә менән йәрәхәтләү; ҡырҡыу. □ Порезать, поранить. *Ҡылыс менән киҫеү. Бармаҡты киҫеп ебәреү. Ҡулды киҫеү. Ҡырынғанда сикәне киҫеү.* ● *Үтмәҫ бысаҡ ҡул киҫер.* Мәҡәл. *Эйелгән башты ҡылыс киҫмәй.* Мәҡәл.

3. *диал. ҡар.* **бесеү I.** □ Кроить. ■ *Тәҙрәндә асып ҡуйып, кемгә күлдәк киҫәһең? Ҡашың ҡара, буйың зифа, кем бәхетенән үҫәһең?* Халыҡ йырынан.

4. *Ниҙер* аша үтеп, икегә айырыу; ҡырҡыу. □ Пересекать, переходить поперёк. // Пересечение. *Юл урманды киҫә. Йылға яланды киҫә.* ■ *Ел көсәйә төштө. Юлды арҡыры киҫеп ятҡан һырындылар йышыраҡ осрай башланы.* Ғ. Ғүмәр. ● *Тауҙың башын болот киҫер, ирҙең башын юҡ киҫер.* Мәҡәл.

5. Баҫып, өйкәп ауырттырыу; ҡырҡыу. □ Резать, причинять боль *(сдавливая)*. *Биштәрҙең бауы иңбашты киҫә. Арҡан малдың муйынын киҫкән.* ● *Яҡшы аттың башын нуҡта киҫер.* Мәҡәл.

6. *күсм.* Арҡыры төшөү, юлды кәртәләү. □ Загородить, создать препятствие. ■ *[Дәүләт ағай:] Тфу, сатан мәрйә, буш биҙрә аҫып,*

юлды киҫмәһәң, булмаймы? Картотека фондынан. *Бер кемдең юлын киҫмәне, бер кемдең башы аша атламаны Мәҙинә.* Т. Ғарипова. *Түмән әмирҙәре ашығыс кәңәшмәгә йыйылып, һиҙгерлекте икеләтә-өсләтә арттырырға, Тимер ғәскәренең юлын киҫергә ҡарар иттеләр.* Ә. Хәкимов.

7. *күсм.* Бер өлөш бүлеп, айырыу; ҡырҡыу. □ Выделять. *Сабынлыҡ киҫеп биреү. Пай киҫеп биреү. Йәш ғаиләләргә йорт төҙөү өсөн ер киҫеп биреү.* ■ *Улар өсөн башҡорт ерҙәре бушлай киҫеп бирелә.* Ғ. Хөсәйенов.

8. *күсм.* Бер өлөш бүлеп алып, кәметеү; ҡырҡыу. □ Срезать, уменьшить. *Уҡытыу сәғәттәрен киҫеү. Баҡсаны киҫеү. Сабынлыҡты киҫеү. Эш хаҡын киҫеү.*

9. *күсм.* Үлтереү. □ Убить. ■ *Ал дошмандан үс, тураҡла һәм киҫ, киҫ; ҡалмаһын ул ерҙә, дөмөкһөн ғүмергә!* Ғ. Әмири. *Урамдың бирге башына етәрәк аҡтарҙы көслө пулемёт уты киҫә башланы.* Я. Хамматов.

10. *күсм.* Кимереп, йырып ашау. □ Съедать, изъедать. *Тун еңдәрен көйә киҫкән.*

11. *күсм.* Юҡҡа сығарыу, бөтөрөү. □ Уничтожить, лишать *чего,* отнимать *что.* ■ *Бына шулар барыһы йотолорҙар, үлем киҫер улар ғүмерен...* Ғ. Сәләм. *Тракторға ҡуйылған көслө фара, ҡараңғылыҡты киҫеп, барасаҡ юлды яҡтырта.* Я. Хамматов. *Тынлыҡты киҫеп, кинәттән буҙ турғай оса фырлап.* Х. Назаров. *[Ҡыҙҙар:] Хат көттөк, адресыбыҙҙы бирергә онотҡаныбыҙҙы хәтерләп, унан өмөт киҫтек.* Д. Юлтый. *Юлһыҙлыҡ һәм көс етмәү өйҙә йылытыу өмөтөн киҫте.* Ғ. Хәйри. *Фашист пуляһы ғүмерен киҫкән атайымдың һуңғы хатында яҙған васыятын үтәйем тип, йөрөп һәләк булды минең әсәйем.* Н. Мусин.

12. *күсм.* Әсеттереп, яндырып ауырттырыу. □ Причинить боль, терзать. *Эстән киҫеп алыу. Йөрәк киҫеп ауырта. Яра киҫеп һыҙлай.*

13. *күсм.* Интектереү, яфа сиктереү, тынғылыҡ бирмәй ҡаҡшатыу. □ Причинять душевное страдание. *Бәғерҙе киҫеү. Йөрәкте киҫеү.* ■ *Өҙә үҙәкте, киҫә йөрәкте, хуш бул, тигән һүҙҙәре.* Халыҡ йырынан. *Иртән тороп, баш күтәрһәм, һалҡын ғына ел иҫә. Тыуған ерҙәр иҫкә төшөп, йөрәк-бәғерҙе киҫә.* Халыҡ йырынан. *Ул хәҙер гармунды шашҡын хистәр менән уйнамай, әкрен генә, моңло ғына тауыш менән, йөрәктән һығылып сыҡҡан аһлы тауыш кеүек иттереп, гармун телдәрен моңландыра, ул моңдар күңелде яндырып, йөрәкте киҫеп төшәләр.* Д. Юлтый.

КИҪЕШЕҮ (киҫеш-) *ҡ.*

1. *урт. ҡар.* **киҫеү 1, 2, 6.** *взаимн. от* **киҫеү 1, 2, 6.** *Күршегә утын киҫешеү.*

2. Үҙ-ара киҫеп үтеү. □ Пересекаться, скрещиваться. // Пересечение, скрещивание. *Һыҙыҡтар киҫешкән нөктә. Автомобиль юлы менән тимер юлы киҫешкән урын.* ■ *Ишек төбөндәрәк бото һыныҡ эскәмйәләге Мотаһарҙың күҙҙәре ҡапыл Еҙсәлемдекеләр менән киҫеште.* Й. Солтанов. *Бер-береһе менән киҫешеп, арҡос-торҡос һуҙылған туп-тура һуҡмаҡтар ғаләм киңлегендәге йондоҙҙарҙың аҡыл етмәҫ хәтәр юлын хәтерләтә.* Ә. Хәкимов.

КИҪКЕЛӘНЕҮ (киҫкелән-) *ҡ. төш. ҡар.* **киҫкеләү.** *страд. от* **киҫкеләү.** ■ *[Миңлебай:] Барлыҡ еребеҙ ҡырҡмаһа-ҡырҡ ыҙан менән киҫкеләнгән.* Ғ. Әхмәтшин. *[Падуров:] Уларҙы ҡырағайҙарса яҙалап үлтергәндәр, Ваше превосходительство. Аяҡ-ҡул быуындарынан киҫкеләнеп, тиреләре һыҙырылған.* Я. Хамматов.

КИҪКЕЛӘҮ (киҫкелә-) (Р.: резать; И.: cut (in bits); Т.: kesmek) *ҡ.*

Киҫәктәргә киҫеү; турау, ҡырҡҡылау. □ Резать, кромсать. ■ *Ситтәрәк оло йәштәге бер нисә кеше ҡарағай ботаҡтарын киҫкеләй.* Ғ. Ибраһимов. *Әле бына, аҡ миткалды киҫкеләй башлаған, шул баҙарға барыу иҫенә төштө Мәҙинәнең.* Т. Ғарипова. *Ул [Зөһрә] Сәйфулла менән ҡарағайҙы бысып ауҙара. тейешле оҙонлоҡта киҫкеләй. ә Ғәлим йығылған ағасты ботай, ботаҡтарын өйөп, уға шундуҡ ут та төртөп ебәрә, ылыҫлы ботаҡтар шартлап-шыйылдап, кәрәсин һипкән кеүек гөрләп яна башлай.* Н. Мусин. *Тирәк юҡ инде. Ул, олоно тураҡланып, әәнһеҙ бүрәнәләр хәленә килгән, биниһая ботаҡтары ботарланған, әйтерһең дә, тауҙа елеп йөрөгән боланды атып йыҡҡандар ҙа кәүҙәһен киҫкеләп ырғытҡандар.* Р. Солтангәрәев.

КИҪКЕН (Р.: порывистый; И.: gusty; Т.: sert) *с.*

1. Үҙәккә үткес, әсе *(елгә ҡарата).* □ Порывистый, резкий *(о ветре).* ■ *Төньяҡтан иҫкән киҫкән ел ыңғайына рашҡы һибәләне.* Я. Хамматов. *Уның [машинистың], бер яҡтан, машина мейестәренең ҡыҙыуы менән, икенсе яҡтан, паровоз тәҙрәһе буйлап иҫкән киҫкән елдең бәреүе менән ҡыҙарған күҙҙәре дошмандан балаларын һаҡлау юлында көрәшкән ҡарт бүре күҙҙәренә оҡшағандар.* Д. Юлтый.

2. Ҡапыл булған, ҡыҙыу *(хәрәкәткә ҡарата).* □ Резкий, порывистый *(о движении). Киҫкен хәрәкәт менән тороп китеү. Киҫкен аҙымдар менән атлау.* ■ *Ҡыҙ мылтыҡты киҫкен хәрәкәт менән алды ла яурынына элде.* Н. Мусин. *Ғәскәр янынан китергә ни тиклем ҡаршы булмаһын, ул [Һабрау] Юлыштың үткер ҡарашына, киҫкен хәрәкәттәренә һоҡланып ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов. *Офицер ҡапыл киҫкен хәрәкәт яһаны, һәм, күҙҙәрен йомоп, ҡалтыранған ҡулдарын наган кобураһына һуҙҙы.* Ә. Чаныш.

3. Ҡапыл, көтмәгәндә булған, кинәт. □ Резкий, крутой, внезапный. *Киҫкен күренеш. Киҫкен ваҡиға.* ■ *Мәҙинә ҡыҙының яҙмышы нисектер ҡапыл, көтөлмәгәндә киҫкен боролош алыуын кисереп бөтә алмайыраҡ, ҡыуанырға ла, иларға ла белмәйерәк тора.* Т. Ғарипова. *Был кис Емеш өсөн дә эҙһеҙ үтмәне. Хатта уның тормошонда киҫкен боролош яһаны.* З. Биишева.

4. Бик ҡатмарлы, ауыр һәм ҡыйын. □ Напряжённый, острый. *Киҫкен көрәш. Киҫкен бәрелеш. Киҫкен мөнәсәбәт.* ■ *Шулай .. граждандар һуғышы йылдарындағы киҫкен көрәштең күп ваҡиғаларын үҙ башынан кисергән күпер ине. Хәҙер ул юҡ.* З. Биишева. *Ҙур күпселек ниндәй пак йөрәкле булды киҫкен бәрелештәрҙә, утлы-һыулы дауылдарҙы ҡайһылай ҙа сафлыҡ, ғорурлыҡ менән кистек беҙ!* Й. Солтанов.

5. Тиҙ хәл итеүҙе талап иткән, ауыр һәм көсөргәнешле, ҡырҡыу. □ Напряжённый, безотлагательный. *Киҫкен шарттар. Киҫкен минуттар.* ■ *Мәсьәлә шулай бик киҫкен булғанға, юғарыла әйткән эштәргә башланғыс биреү һәм ҡулдан килгән хәтле өлөш индереү ниәте менән ошо эште яҙып ҡарарға булдым.* Ә. Биишев. *Шиғыр заманының иң киҫкен социаль темаһына — Башҡортостан тәбиғәтенең, башҡорт ерҙәренең аяуһыҙ таланыуын күрһәтеүгә арналған.* Ғ. Хөсәйенов.

6. Талапсан, ҡырыҫ. □ Требовательный, жёсткий. *Киҫкен тауыш. Киҫкен бойороҡ.*

КИҪКЕНЛЕК (киҫкенлеге) (Р.: резкость; И.: sharpness; Т.: keskinlik) *и.*

1. Ҡапыл, киҫкен булыу хәле. □ Резкость. *Хәрәкәттәге киҫкенлек.* ■ *Солтанов Өркиәнең мут ҡына йылмайып ҡуйыуын да, уның тауышында киҫкенлек юғын да һиҙҙе.* Н. Мусин.

2. Эш-хәлдәге көсөргәнешлек, киҫкен хәл. □ Напряжённость, острота. *Мөнәсәбәттәр киҫкенлеге. Мәсьәләне бөтә киҫкенлеге менән ҡуйыу.* ■ *Ул үҙенең ябай «башҡортлоғо» менән дә үтәнән-үтә күреп, ике-ара киҫкенлекте ҙур ҡан ҡойошмай бөтөрөү яйы барлығын, һуң түгеллеген һиҙенә.* Й. Солтанов. *Саҡ ҡына инәлтә бирәм тип торған ҡыҙ бындай уҡ киҫкенлекте көтмәгәйне, ахыры, шуға һаман клуб яғына китергә ашыҡманы, уның янына килеп баҫты.* Д. Шәрәфетдинов. *Иштуғанға Әхәт бигерәк тә ширкәткә рәис булып алғаны бирле артыҡ һулға бөгөүсән, урынһыҙ киҫкенлек күрһәтергә әҙер тороусан булып киткәндәй күренә.* З. Биишева.

КИҪКЕНЛӘШЕҮ (киҫкенләш-) (Р.: обостряться; И.: deteriorate, become aggravated; Т.: şiddetlenmek) *ҡ.*

Көсөргәнешле, киҫкен төҫ алыу; ҡырҡыулашыу. □ Обостряться. // Обострение. *Көрәш киҫкенләште. Аралар киҫкенләште.* ■ *Һуңғы ваҡыттарҙа ҡәйнәһе менән аралары киҫкенләшкәс, өйгә инеү менән, күҙгә ташланған был һүрәттәрҙән уның [Кәшифәнең] ене туҙа ине.* Х. Зарипов. *Уйлаған аяуһыҙ уйы асыҡланған һайын, лейтенанттың ирене нығыраҡ ҡымтылды, тәүҙәге ышанлек, аптырау билдәләрен ҡыуып, күҙендә уҫал осҡондар һикереште, хәрәкәте уғата киҫкенләште.* Ә. Хәкимов. *Хәл киҫкенләште. Ваҡыты-ваҡыты менән ҡул һуғышына тиклем күтәрелергә тура килһә лә, дошман ди-*

визия штабына үтә алманы. Я. Хамматов. *Ваҡиға үҫте, ҡабарҙы. Ваҡиға шикелле үк, башында Сәләхи һәм уҡытыусы торған төркөм менән Ғәбдрахман мулла төркөмө араһында көрәш тә киҫкенләште.* И. Насыри.

КИҪКЕНЛӘШТЕРЕҮ (киҫкенләштер-) (Р.: обострять; И.: aggravate; Т.: şiddetlendirmek) *ҡ.*

Киҫкен хәлгә еткереү, көсөргәнешле итеү. □ Обострять. // Обострение. *Көрәште киҫкенләштереү.* ■ *Әле лә ул [Сәрбиямал] бына Нәғимәнең кинәйәле һүҙҙәренә ҡарап һис тә мөнәсәбәтте киҫкенләштерергә ашыҡманы.* З. Биишева. *Ҡуштирәктең былай ҙа ҡатмарлы тормошон ошо ике фамилияның, ике лагерҙың Таңһылыу мәсьәләһендә йөҙгә-йөҙ килеүе уғата киҫкенләштереп ебәрҙе.* Ә. Хәкимов.

КИҪКЕС (Р.: резец; И.: cutter; cutting tool; Т.: keski) *и. махс.*

Тимер һәм башҡа ҡаты нәмәләрҙе ҡырҡыу өсөн хеҙмәт иткән үткер ҡорал; ҡырҡҡыс. □ Резец *(для металла и других твёрдых материалов). Тимер киҫкес. Киҫкес менән эшләү. Киҫкес үткерләү. Киҫкес һатып алыу.*

КИҪКӘ I (Р.: чурбан; И.: block; Т.: kütük) *и.*

1. Йыуан түмәр. □ Чурбан, валежник. *Киҫкә ярыу. Киҫкә яғыу.* ■ *Өйгә инә торған ишек янында, тәҙрә таҡтырындараҡ, берике киҫкә ята, улар эскәмйә хеҙмәтен үтәй.* Ш. Насыров. *Тамаҡ ҡырып ҡына ҡуйҙы ла Мотаһар, ҡул күтәреп аунаған киҫкәләрҙе ярып өйҙө.* Й. Солтанов. *Һолтанбай ситтәрәк ятҡан ҡоро ҡайын киҫкәһен янып бөтөп барған усаҡ өҫтөнә килтереп һалғас, йыуан үк ҡыу муйылды шарт та шорт тумырырға кереште.* Н. Мусин.

2. Ҡырҡылған ағас. □ Срубленное дерево. *Киҫкә әҙерләү. Йыуан киҫкә. Киҫкә килтереү.*

3. Йығылып, сереп ятҡан йыуан ағас. □ Валежник. ■ *[Туғыҙаҡтың] шырлыҡтарҙы үтеп ҡалын урманға барып инеүе булды, киҫкә төбөндәге соҡорҙан һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә быу күтәрелгәне күренде.* Ә. Чаныш. *Артабан әҙәм аяғы баҫмаған урмандар башлана. Унда тик йәй көнө, алпан-толпан баҫып, лапы, шырлыҡ араһында айыуҙар ғына йөрөйҙәр; улар серек киҫкәләрҙе туҙҙырып китәләр.* Ж. Кейекбаев. *Һәр бер йөрәк зәңгәр күк шикелле киңлекте теләй, ләкин ул теләктәр, тимер баҫҡыстар ҡуймайынса, үтә алмаҫлыҡ ҡурҡыныслы киҫкәләргә барып терәлә лә туҡтай.* Ғ. Хәйри. *Бына мин бер киҫкәгә эләгеп йығылдым. Ҡалҡып торайым ғына тигәндә, көслө ҡулдар муйынымдан ҡыҫып тотоп алды.* Н. Мусин.

4. *диал.* Ағас төбө. □ Пень, пенёк. *Ҡайын киҫкәһе. Киҫкәгә ултырыу.*

5. *күсм.* Ауыр ҡуҙғалыусан, яй, ауыр кешегә ҡарата әйтелә. □ Грузный, малоподвижный человек. ■ *Әбрәй батыр, йүнләп кәүҙәһен дә тота алмай, киҫкә һымаҡ тик йөрөй икән.* Әкиәттән. *Малайҙарҙың көс бер сама булһа ла, Айҙар киҫкә кеүек ауыр Вәзирҙе күтәреп сөйөргә иҫәп тотмай ине.* М. Кәрим.

КИҪКӘ II *с. диал. ҡар.* **мыҡты.** *Киҫкә ир бала.* ■ *Киҫкә кеүек була торғайны борон ҡарттар.* Экспедиция материалдарынан.

КИҪКӘ III (Р.: комки почвы; И.: clumps of soil; Т.: toprak yığınları) *и. диал.*

Ҡаты балсыҡ. □ Комки почвы. *Киҫкәне йомшартыу.*

КИҪКӘК (киҫкәге) *и. ҡар.* **киҫкә I, 1.** ■ *Умарта баҙы ишеге эргәһендәге йыуан бер оҙонса киҫкәккә ултырыштылар.* Ғ. Хөсәйенов.

КИҪМӘ ЕЛ (Р.: пронизывающий ветер; И.: chilling wind; Т.: sert rüzgâr) *и.*

Әсе, үҙәккә үткес ел. □ Резкий, пронизывающий ветер. ■ *Кинәт кенә күтәрелгәндәй, киҫмә ел ағастарҙы аяуһыҙ сайҡалдыра башланы.* Ә. Хәкимов.

КИҪМӘК (киҫмәге) (Р.: кадка; И.: tub, vat; Т.: fıçı) *и.*

Ҡолаҡлы ҙур ағас күнәк. □ Кадка, кадушка, чан. *Киҫмәккә һыу тултырыу.* ■ *Ҡар баҙҙарында киҫмәк-киҫмәк балы, киҫмәк-киҫмәк һары майы ултыра.* Н. Асанбаев. *Өйҙә сатнаған ҡул йыуғыстағы һыу киҫмәккә һалмаҡ ҡына тамсылай.* Картотека фондынан. *Тимер киҫмәктәге һыуҙан шаптыр-шоптор йыуынырға, күнәктәрен сайҡарға керештеләр.* Й. Солтанов. *Ғифрит Иштиҙең шәүләһе киҫмәк бейеклеге генә.* М. Кәрим.

КИҪТЕРЕҮ (киҫтер-) *ҡ. йөкм. ҡар.* **киҫеү.** *понуд. от* **киҫеү.** *Утын киҫтереү.*

Сәс киҫтереү. ■ *Был «карун» исеме менән аталған баяр ерен һөрҙөргән, урманын киҫтергән.* Ғ. Хәйри. *О! Мин бындай сихриәтле ҡапҡа артында муйынымды киҫтерергә лә әҙер!* Й. Солтанов. *[Зифа:] Бына утын, мәктәптән ике-өс малай алып ҡайтып киҫтереп ҡуйғайным.* Н. Мусин. ● *Астан ҡаҙан аҫтырма, яланғастан кейем киҫтермә.* Мәҡәл. *Акса таш киҫтерә.* Мәҡәл. *Ҡолағыңды ҡыҙғанып, башыңды киҫтермә.* Мәҡәл.

КИҪТӘН I [рус.] (Р.: кистень; И.: bludgeon, flail; Т.: sopa) *и.*

Ҡыҫҡа ғына һапҡа сылбыр йәки ҡайыш менән гер, шар йәки башҡа шундай ауыр нәмә тағылған боронғо һуғыш ҡоралы. □ Кистень. *Киҫтән менән һуғыу.* ■ *Ауылға алыҫтан һәм төрә-йүндән мылтыҡ, киҫтән, балта менән барынса ҡоралланған крәҫтиәндәр килә тора.* Ғ. Хөсәйенов. *Сыҙаманым, Сәмиғуллаға самосуд башланғас, ҡуйыныма киҫтән тығып, майҙанға килдем.* М. Кәрим.

КИҪТӘН II *с. диал. кар.* **киҫтәндәй.**

КИҪТӘНДӘЙ (Р.: огромный; И.: enormous, huge; Т.: çok büyük) *с.*

Саманан ҙур; уҫлаптай. □ Огромный; очень большой. *Киҫтәндәй бала. Киҫтәндәй икмәк киҫәге.*

КИҪӘ I (Р.: круто; И.: enormous, huge; Т.: keskin) *р.*

1. Ҡырҡа төшкән, ныҡ текә. □ Круто, отвесно. *Яр киҫә аҫҡа төшөп китә.*

2. Ҡап-арҡыры йүнәлештә; текә. □ Круто, резко, не плавно. *Бысаҡты киҫә сарлау.*

3. Көтмәгәндә, ҡапыл. □ Резко, внезапно. ■ *Юл киҫә уңға боролдо. Этҡол сүгәләгән еренән йәһәт кенә ҡалҡып ҡамсыға ҡаршы ҡулын киҫә һуғыуы булды, теге көтөлмәгән ҡаты һирпелеүҙән аяғы ташҡа эләгеп янтайҙы китте, һөрлөгөп арты менән ҡатыға төштө.* Ғ. Хөсәйенов. *[Дилбәр] ҡыҙын саҡырып алғас, ҡаты торҙо, киҫә һөйләште.* Р. Камал.

♦ **Киҫә бысаҡ ҡаршы** *диал.* ҡырҡа ҡаршы. □ Наотрез отказаться, быть категорически против.

КИҪӘ II *с. кар.* **киҫмә ел.** ■ *Иҫә генә, ай ел иҫә, киҫә елдәр киҫкә көсәйер.* Халыҡ йырынан.

КИҪӘ АРҠЫРЫ (Р.: накрест; И.: crosswise; Т.: çapraz) *р.*

1. Туп-тура арҡыры. □ Накрест, крест-накрест. *Киҫә арҡыры һалыу.* ■ *Азамат ғәйепле кеше шикелле урамды киҫә арҡыры сыҡты.* Р. Солтангәрәев.

2. Ныҡ ҡаршы, ҡырҡа ҡаршы. □ Наотрез, категорически. *Киҫә арҡыры ризалашмау.*

КИҪӘК I (киҫәге) (Р.: кусок; И.:piece; bit; Т.: parça) *и.*

1. Бөтөндөң бер өлөшө, бәләкәй бер өлөш. □ Кусок. *Кирбес киҫәге. Ит киҫәге. Таҡта киҫәге. Май киҫәге. Киҫәктәргә бүлгеләү.* ■ *Йәнтимер арба өҫтөндә ултыра. Алдында ҙур ғына киҫәк аҡ икмәк менән һары ҡағыҙға һалынған эреле-ваҡлы биш-алты помидор ята.* С. Агиш. *Мотаһар, семтеп алып, икмәк киҫәге ҡапты.* Й. Солтанов. *Юл ыңғайында почта йәшнигенән гәзиттәрҙе алһам, араһынан бер ҡағыҙ киҫәге килеп төштө.* Н. Ғәйетбаев. *Татлы еҫ бөрккән ҡуй итен эре киҫәктәргә бүлгеләп, табын уртаһына тушәлгән тире кеүек нәмәгә өйөп һалдылар.* Н. Мусин. ● *Етем күңеле — бер киҫәк.* Мәҡәл.

2. Сама менән бүлгеләнгән нәмәнең бер өлөшө *(төп һандар менән ҡулланыла).* □ Кусок, отрез. *Ике киҫәк май. Өс киҫәк ситса. Бер киҫәк һабын.* ■ *Үҙе алып ҡайтҡан йәшел тоҡсайында бер пар күлдәк-ыштаны, таҫтамалы, бер киҫәк кер һабыны бар.* Һ. Дәүләтшина. *Фәнил тәргәкте һаҡлыҡ менән генә һүтте лә бер киҫәк колбаса сығарҙы.* Р. Низамов. *Әле лә Фәүзиә ҡуйынына ике киҫәк икмәк тыҡҡан, арыу ғына итеп май ҙа һылаған.* Т. Ғарипова.

3. Әҫәрҙең бер бүлеге, бер өлөшө. □ Часть *(произведения). Романдың икенсе киҫәге. Дүрт киҫәктән торған симфоник әҫәр.* ■ *Эпостың беренсе киҫәгенә ҡайтайыҡ, Тимофей Беляевҡа башҡорт эпосын рус теленә күсереү өсөн нимә сәбәпсе булған? — тигән һорау булырға мөмкин.* Ә. Харисов.

4. *грам.* Һөйләмдең грамматик функцияға эйә булған синтаксик берәмеге. □ Член предложения. *Айырымланған киҫәктәр. Баш киҫәктәр. Тиң киҫәктәр. Һөйләм киҫәктәре. Эйәрсән киҫәк.* ■ *Һөйләм киҫәктәре*

тураһында укыусылар башланғыс кластарҙа уҡ бер ни тиклем мәғлүмәт алалар. Картотека фондынан.

5. *диал. кар.* **ишарат 2.**

КИҪӘК II (Р.: неожиданно; И.: unexpectedly; Т.: aniden) *р.*

Көтмәгәндә, ҡапыл. □ Неожиданно, внезапно. ■ *Үрҙән пар саңғы әҙе килә лә юлдан алыҫ түгел тигеҙлектә киҫәк кенә ғәйеп була.* Ғ. Әмири. *Айҙың һигеҙе тулған төндө, Мария Тереза, бер-бер төрлө бәлә килгәнен һиҙгән шикелле, киҫәк кенә әсе һағышҡа батты.* М. Кәрим.

КИҪӘКЛЕ (Р.: кусковой; И.: bar; Т.: kesme) *с.*

Киҫәктәргә бүленгән, киҫәк-киҫәк итеп әҙерләнгән. □ Кусковой, брусковый. *Киҫәкле шәкәр. Киҫәкле май.* ■ *Быйыл ҡар әллә ниңә иртә еҫшеп, сәйгә тыҡҡан киҫәкле шәкәр кеүек, күҙәнәктәре мөлдөрәп ята.* Й. Солтанов. *Ҡайһыһы икмәк ҡыйырсығы, ҡайһыһы япраҡ ҡына бешерелгән кукуруз сәкәне, һөт-ҡатыҡ, хатта киҫәкле сыҫҡа майы бирер китә.* Ә. Хәкимов. *Шундай бойороҡто ғына көтөп торған Бибеш, ҡамырын лап иттереп тукмас таҡтаһына һалды ла эре-эре киҫәкле иттәрҙе ҡаҙандан алып ашлауға бушата башланы.* З. Биишева.

КИҪӘКЛӘНЕҮ (киҫәклән-) (Р.: разбиваться; И.: crumble; Т.: parçalanmak) *ҡ.*

Киҫәктәргә бүленеү, ваҡланыу. □ Разбиваться, раскалываться на куски, крошиться. ■ *Ярты ай аҫтында, ел менән ваҡланып, киҫәкләнеп аға, шыуыша торған болоттар Ибрайҙың хәтеренә ун һигеҙенсе йылды төшөрҙөләр.* А. Таһиров.

КИҪӘКЛӘҮ (киҫәклә-) (Р.: делить на части; И.: divide into parts, bits; Т.: parçalamak) *ҡ.*

Киҫәктәргә бүлеү, ваҡлау. □ Делить на части, разрезать. *Итте киҫәкләп турау.* ■ *Киҫәкләп ит таратырға тотондолар, күкрәккә терәп ап-аҡ бойҙай икмәге киҫеп ташланылар.* Р. Низамов. *Алтынды ваҡ ҡомдар араһында эҙләйҙәр, киҫәкләп сыҡҡанының да күбеһе тыштан башҡа нәмә менән ҡапланған була.* С. Агиш. *Оҫта бының менән шул хәтле мауығып китте — донъяларын онотто, йөҙөк ҡашын нескәләп эшләне: береһенә йәшел фирүзә ташын табып ултыртты, икенсеһенә бәллүрҙе киҫәкләп өс ҡашлы итте.* Ғ. Хөсәйенов.

КИҪӘКСӘ (Р.: частица; И.: particle; Т.: edat) *и. лингв.*

Айырым һүҙҙәргә, һүҙбәйләнештәргә йәки һөйләмгә ниндәй ҙә булһа бер мәғәнә үҙенсәлеге өҫтәй торған ярҙамлыҡ һүҙ *(ғына, да, -дыр, -мы һ. б.).* □ Частица. *Икеләнеү киҫәксәләре. Көсәйтеү киҫәксәләре. Сикләү киҫәксәләре.* ■ *Тел һүҙгә бер төрлө ялғауҙар, киҫәксәләр ялғаныуы телде билдәле көйгә көйләй, һүҙҙәр, гүйә, шиғыр булып яңғырай.* Ғ. Хөсәйенов.

КИҪӘКТӘН (Р.: внезапно; И.: suddenly, all of a sudden; Т.: aniden) *р.*

Бик ҡапыл, ҡырҡа. □ Внезапно, резко. *Киҫәктән күңелде шик баҫты. Киҫәктән ҡысҡырып ебәрҙе.* ■ *Күп йөрөй торғас, улар урманға кереп киткәндәр икән. Шул ваҡытта уларҙың алдына киҫәктән генә бүреләр килеп сыҡҡандар.* М. Ғафури.

КИҪӘЛТӘ *и. диал. кар.* **һикәлтә.** *Ҡая киҫәлтәһе. Киҫәлтә тау һырты.*

КИҪӘТЕЛЕҮ (киҫәтел-) *ҡ. төш. кар.* **киҫәтеү.** *страд. от* **киҫәтеү.** *Дәрес күсереләсәге алдан киҫәтелде.* ■ *Мираҫ өсөн ыҙғышыусы вариҫтар киҫәтелде.* Картотека фондынан.

КИҪӘТЕҮ (киҫәт-) (Р.: предупреждать; И.: let know beforehand, warn about; Т.: tembih etmek) *ҡ.*

Алдан белдереү, иҫкәртеү. □ Предупреждать. // Предупреждение. *Киҫәтеү яһалды.* ■ *Разия ханымдың: «Атайығыҙ йоҡлай», — тигән бер киҫәтеүе етә. Балаларҙың тауыш-өндәре булмай.* Ғ. Байбурин. *Атай, әсәй киҫәттеләр мине: һин, тип, ҡыҙым, беҙҙең дәү бала.* К. Кинйәбулатова.

КИҪӘТЕҮЛЕ (Р.: предупредительный; И.: preventive, precautionary; Т.: tembih edilen) *с.*

Киҫәтеү белдергән, иҫкәртелгән. □ Предупредительный, предупреждающий. *Киҫәтеүле ҡараш. Киҫәтеүле хәрәкәт.* ■ *Көҫәпҡолов уның һүҙҙәренең мәғәнәһен аңламаны, тик трактористың киҫәтеүле ҡарашын ғына тойҙо.* Ф. Әсәнов. *Күптәнге һағыштан*

Күкбүре сыйнаны, һаламды сокоп, шул еҫте өҫкә сығарғыһы килде. Ләкин... янында ғына киҫәтеүле ырылдау ишетелде! Т. Ғарипова. *Вәсимдең тауышы киҫәтеүле сыкты, әммә, уйланып ултырғандан һуң, йомшарҙы.* Д. Бүләков.

КИҪӘТМӘ (Р.: предупреждение; И.: warning; notice; Т.: tembih) *и.*

Алдан белдереү, иҫкәртеү. □ Предупреждение. *Киҫәтмә яһау. Киҫәтмә булды.*

КИҪӘҮ I *и. диал. кар.* **торонбаш.** ■ *Заһиттың кулына утлы киҫәүгә тотонған кеүек тиҙ генә кағылып алдым да бәләкәй якка үттем.* Ф. Әсәнов. *Картлас йәһәт усағын хәстәрләне, киҫәү аҫтынан бормасланып әскелтем-сөскөлтөм төтөн койроғо һуҙылғас, ҡаҙанға ишмәнән һыу һоҫоп, йолкоп-таҙартып әҙерләнгән ҙур һуйырҙы сумырҙы.* Й. Солтанов. *Урынында, гүйә, көл-күмер, ҡара торонбаштар ғына ятып ҡалды. Бәлки, осоп киткән осҡондарынан, утлы киҫәүҙәренән яңынан ялҡын ҡабынып, янғын ҡубыр.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Ҡатындар теле — утлы киҫәү.* Мәҡәл. *Ҡыҙлы ҡыҙын ҡыҫтырғанда, ҡыҙһыҙ киҫәү ҡыҫтыра.* Мәҡәл.

КИҪӘҮ II (киҫә-) (Р.: прислушиваться; И.: listen (to), obey; Т.: söz dinlemek) *ҡ.*

Әйткәнде тыңлау, әйткәнгә ҡолаҡ һалыу. □ Прислушиваться, следовать *чьему-л.* совету; слушаться *кого-л. Әйткәнде киҫәгеҙ, балалар*!

♦ **Киҫәмәгән кире байтал** киҫекһеҙ кешегә шелтәләп әйтелә. □ Бранное слово, которым ругают непослушного человека.

КИҪӘҮ АҒАСЫ *и. диал.*

1. *кар.* **тәртешкә.** ■ *Сабира күп уйлап торманы, сөнки күп уйлап торорға ваҡыт юҡ, йүгереп мейес алдына барҙы ла, киҫәү ағасы күтәреп, тегегә ташланды.* Ғ. Хәйри.

2. *миф.* Яуған боҙ, борсаҡты туҡтатыу өсөн ҡулланылған, магик көскә эйә булған тәртешкә. □ Кочерга *(магический предмет).* ■ *Эре боҙ яуһа, киҫәү ағасы ташлайҙар.* Экспедиция материалдарынан.

КИҪӘҮҺЕҘ *с. диал. кар.* **киҫекһеҙ 1.**

КИТ I [рус. < гр. *ketos*] (Р.: кит; И.: whale; Т.: balina) *и.*

1. *зоол.* Һыны менән балыҡҡа оҡшаған иң ҙур имеҙеүсе диңгеҙ хайуаны. □ Кит (лат. *Cetacea*). *Кит майы. Кит мыйығы. Кит аулау.* ■ *Асыуланған киттың һыртынан аҡҡан һыу фонтандары һымаҡ, был да [трактор] үҙ һыртынан ут фонтаны атты.* И. Насыри.

2. *күсм.* Күберәк күплектә ҡулланылып, ниндәйҙер мөһим эште башҡарыусы кешеләрҙе, төркөмдө аңлата. □ Кит *(человек, на котором держится всё дело).* ■ *[Кәрим:] Солтан, һин хәҙер кейен дә баҙарға бар! Вағырак сауҙагәрҙәр менән таныш. Әли Сәлих һымаҡ киттарҙан яфа сиккән урта ҡул коммерсанттар ҙа ярай... Аңлайһыңмы?* Н. Асанбаев.

КИТ II *ымл. кар.* **кит әле.** ■ *Саниәңдән колаҡ ҡаҡтың инде, — тине Билалов [Сабирға]. .. Егеттең ҡото алынды: — Кит, әй! Ысынлапмы?* Д. Исламов.

КИТАҒАЙ (Р.: слово, выражающее удивление; И.: word expressing surprise; Т.: ya) *ымл. диал.*

Аптырауҙы белдергән һүҙ. □ Слово, выражающее удивление. ■ *Китағай, бик һыуытты бит әле.* Экспедиция материалдарынан.

КИТАЙКА I [рус.] (Р.: китайка; И.: kind of blue textile; Т.: dokuma türü) *и.*

Ғәҙәттә, күк төҫтәге беше мамыҡ туҡыма йәки шул туҡыманан тегелгән әйбер. □ Китайка. *Китайка кейеү. Китайка күлдәк.*

КИТАЙКА II [рус.] (Р.: китайка; И.: sort of an apple-tree; Т.: elma ağacı türü) *и. бот.*

Ваҡ емешле алма ағасы йәки ҡытай алмағасы. □ Китайка (лат. *Malus prunifolia*). *Китайка емеше. Китайка үҫтереү.*

КИТ АНАН (Р.: поди же ты; И.: indeed; Т.: haydi ya) *ымл.*

1. Көтөлмәгән хәбәр ишеткәндә, ышанмау, аптырап ҡалыуҙы белдерә. □ Поди же ты, да ну. *Кит анан, ысынмы!*

2. Һүҙҙе ҡабул итмәүҙе, кире ҡаҡҡанды белдерә. □ Не может быть. *Кит анан, алдашмағыҙ! Кит анан, булмағанды һөйләйһең!*

КИТАП I [ғәр. كتاب] (Р.: книга; И.: book; Т.: kitap) *и.*

1. Текст биттәре билдәле бер тәртиптә йыйылып, тышлап төпләнгән баҫма (шулай

уҡ боронғо ҡулъяҙма) әҫәр. □ Книга. *Яңы сыҡҡан китап. Ҡалын китап. Китап магазины. Китап һатыу. Китап алыу. Китап уҡыу. Китап кәштәһе.* ■ *Әхмәт Исхаҡи ярҙамында китаптың Һиндостанда литография ысулы менән баҫылған, китап биттәре ситендә аңлатмалары булған бер нөсхәһен алдырттым.* Ә.-З. Вәлиди. *Ах, кеше күңеле китап бите түгел, уны асып уҡып булмай.* Т. Ғарипова. ● *Уңмаған юл китапһыҙ ҙа уҡыта.* Мәҡәл. *Боронғолар әйткән һүҙ китаптың эсендә лә түгел, тышында ла түгел.* Мәҡәл. *Китап уҡыһаң, белемең артыр, уҡымаһаң, белгәнең дә онотолор.* Мәҡәл.

2. Айырым баҫма итеп баҫып сығарылған йәки баҫыласаҡ, билдәле бер эстәлектәге ҙур күләмле әҫәр. □ Книга, произведение. *Белешмә китап. Йыр китабы. Фәнни китап. Тарихи темаларҙы сағылдырған китап. Мостай Кәрим китаптары. Китап яҙыу.* ■ *Атаһы «Башҡорт теле» дәреслеген ебәрҙе, әммә ҡыҙ, төрлө сәбәптәр арҡаһында, дөрөҫөрәге, үҙенең ялҡаулығына баш була алмайынса, китапты байтаҡ ҡына ваҡыт асып та ҡараманы.* Н. Ғәйетбаев.

3. Ҙур әҫәрҙең айырым баҫылған бер киҫәге. □ Книга, том, часть. *Дүрт китаптан торған әҫәр. Әҫәрҙең икенсе китабын тамамлау. «Мәңгелек урман» романының беренсе китабы буйынса фекер алышыу.*

4. *иҫк.* Боронғо дини әҫәр. □ Религиозная книга, святое писание. *Китап һүҙе. Фал китабы.* ■ *Ул, китап һүҙен тыңлағандай, Алла, Мөхәммәт пәйғәмбәр, Ислам дине исеменән яҙылған һүҙҙәрҙе изге күреп, мәсеттәге вәғәзсә ҡабул итте.* Г. Хөсәйенов.

5. *миф.* Һаҡлау, яман көстәрҙе ҡыуыу көсөнә эйә изге китаптар. □ Священные книги, имеющие обережную, отгонную силу. ■ *Баланы яңғыҙ ҡалдырһаң, яҫтыҡ аҫтына китап һал, тиҙәр әбейҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

♦ **Китап ене ҡағылған** китап йыйып, күп уҡып, шуның менән генә мәшғүл булған. □ Много читающий. ■ *Китап уҡыуҙан тыйыу юҡ өйҙә. Бөгөн дә беҙ, китап ене ҡағылған балалар, 60—70-се йылдарҙа уҡ сыҡҡан китаптарҙы ҡабат-ҡабат алып уҡыйбыҙ.* «Йәшлек», 6 октябрь 2009. **Китап ҡушмай** *ниндәйҙер* эш-ҡылыҡтан тыйғанда әйтелә; ярамай. □ Нельзя делать, не разрешено святым писанием. **Китап маҡтай** эш-ҡылыҡты хуп күргәндә әйтелә. □ Можно делать, разрешено святым писанием.

КИТАП II (китабы) *и. диал. ҡар.* **ҡатланлыҡ 2.**

КИТАП АСЫУ (китап ас-) (Р.: гадать по книге; И.: tell fortunes; Т.: fal açmak) *ҡ.*

Китапҡа ҡарап кешенең яҙмышын әйтеү; күрәҙәлек итеү. □ Гадать по книге. ■ *Элек китап асалар ине, ғәрәпсә китапҡа бармаҡ менән төртәһең берәй биткә.* Экспедиция материалдарынан. *Яман уй менән килгән кешегә китап асылмай, тиҙәр ине.* Экспедиция материалдарынан.

КИТАП ИМЕ (Р.: заговаривание с помощью священных книг; И.: charmed by the holy books; Т.: kitap ile tedavi etmek (büyü) *и.*

Изге китап менән имләү. □ Заговаривание с помощью священных книг. ■ *Ауырыу эргәһенә изге китап һалып ҡуялар им булһын, тип.* Башҡорт мифологияһынан.

КИТАП ҠОРТО (Р.: книжный червь; И.: book worm; Т.: kitap kurdu) *и.*

1. *зоол.* Китап бите *(целлюлоза)* менән туҡланыусы бөжәк. □ Книжный червь *(насекомые)* (лат. *Anobium*). *Китап ҡортонан профилактика үткәреү.*

2. *күсм.* Китап менән мауығыусы, китапты күп уҡыусы кеше. □ Книжный червь *(о человеке).* ■ *И. Губкин исемендәге Рәсәй дәүләт нефть һәм газ университетында уҡыған яҡташтарыбыҙ ҙа күңелһеҙ генә быҫҡып ятырға йә күгәргән китап ҡорто ғына булырға теләмәй, «Аулаҡ өй»гә берләшкән.* «Йәшлек», 15 ноябрь 2011.

КИТАПСА (Р.: по-книжному; И.: in a bookish style; Т.: kitapça) *р.*

Китап теле менән, китапта яҙылғанса. □ По-книжному, книжно. *Китапса аңлатыу. Китапса фекерләү.* ■ *Ғәйфулла мулла китапса ла, китапҡа инмәҫтәй һүҙҙәрҙе лә бергә бутап, бәддоға уҡып ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов. *Әле лә ул йыйылғандарға йәнә күҙ һирпеп алды ла — күрә, араларында йәштәр күберәк — вәғәз-нәсихәтен рәтенә тура кил-*

тереп, еренә еткереп, һалмаҡ көйләп ярым китапса әйтергә кәрәште. Ғ. Хөсәйенов.

КИТАПСАЛАУ (китапсала-) (Р.: выражаться книжно; И.: speak in a bookish style; Т.: kitapça konuşmak) *ҡ.*

1. Китап теленә килтереү. □ Выражаться книжно, говорить по-книжному. *Китапсалап һөйләү.* ■ *Еңгә судьяның китапсалап уҡыуынан, уҡыған ваҡытта өҙләкһеҙ тигәндәй тигән тип барыуынан яҡшылап төшөнә алманы.* Ғ. Дәүләтшин. *[Яубикә:] Аңламайым, хәлфә, кинәйәнде, бигерәк китапсалап һөйләйһең.* Б. Бикбай.

2. Китап ҡушҡанса итеү, китап ҡушҡанға яраҡлаштырыу. □ Действовать, поступать по святому писанию. ■ *[Ныязғол:] Йә, хәҙрәт, эш һиндә инде. Үткән эштән төш яҡшы, тигән мәҡәл булһа ла, беҙ уны үҙебеҙсәләп, һин әйткәндәй, китапсалап алып, берәй яйын табайыҡ инде.* Һ. Дәүләтшина.

КИТАПСАЛЫҠ (китапсалығы) (Р.: книжность; И.: book learning, bookishness; Т.: kitabilik) *и.*

Китапта яҙылғанса эш итеү. □ Книжность. *Телмәрендә китапсалыҡ ярылып ята. Китапсалыҡ менән мауығыу.*

КИТАПСЫ (Р: издатель; И.: bookseller; Т.: kitapçı) *и.*

1. Китапты баҫтырып сығарыусы, нәшриәт тотоусы. □ Издатель книг. ■ *Ҙур мәҙрәсәнең уҡытыусылары, күп һанда тарала торған газеталарҙың мөхәррирҙәре, номер хужалары, китапсылар, тиреселәр — барыһы ла бергәләшеп «мосолман иңраһы» төҙөнөләр.* А. Таһиров.

2. *тар.* Ауылдан ауылға йөрөп, халыҡҡа китап һатыусы кеше. □ Книготорговец. ■ *Беҙҙең ауылға йыш ҡына йә ыҫке-моҫҡо йыйыусы, йә ҡырҡтартмасы, йә китапсы килеп сыға торғайны.* Ә. Вахитов. *Профессор Катанов ярҙамында Көнбайыштан Лондон һәм Лейдендан, икенсе яҡтан Ташкентта һәм Баҡыла көнбайыш китаптарын һатыусы китапсыларҙан тарихҡа бәйле баҫма сығанаҡтарҙы килтертеү эшен башланым.* Ә.-З. Вәлиди.

КИТАПСЫҠ (китапсығы) (Р.: книжка; И.: booklet; Т.: küçük kitap) *и.*

Бәләкәй китап. □ Маленькая книга, книжка. ■ *«Башҡортостан ҡоштары» тураһында материалды балалар менән бик яратып уҡыныҡ, өйрәндек, китапсыҡ эшләп алдыҡ.* «Йәшлек», 5 июль 2008.

КИТАПСЫЛЫҠ (китапсылығы) (Р.: книгопечатание; И.: (book) printing; Т.: matbaacılık) *и. иҫк.*

Китап баҫыусылыҡ. □ Книгопечатание. *Китапсылыҡ менән шөғөлләнеү. Китапсылыҡ эшен яйға һалыу. Китапсылыҡ кәсебе.*

КИТАП ТӨПЛӘҮСЕ (Р.: переплётчик; И.: bookbinder; Т.: ciltçi) *и.*

Китаптарҙың таушалған тышын алыштырыу, биттәрен йәбештереү эше менән шөғөлләнгән кеше. □ Переплётчик. *Тәжрибәле китап төпләүсе. Китапханала китап төпләүсе булып эшләү.* ■ *[Майкл Фрадей] 14 йәшендә китап кибетенә китап төпләүсе булып эшкә керә.* Интернет селтәренән.

КИТАПХАНА [ғәр. + фарс. كتابخانه] (Р.: библиотека; И.: library; Т.: kütüphane) *и.*

1. Төрлө китаптарҙы, гәзит-журналдарҙы һ. б. йыя, һаҡлай һәм уҡырға биреп тора торған ойошма һәм шул ойошма урынлашҡан йорт. □ Библиотека. / Библиотечный. *Мәктәп китапханаһы. Китапханала эшләү. Китапхана йорто. Кирбестән һалынған китапхана.* ■ *Шуны ла әйтергә кәрәк: ул бәләкәйҙән уҡ китапты һыу кеүек эскән, мәктәп китапханаһын да, ауылдыҡын да арҡыры-буй йөҙөп сыҡҡан, кәрәккән һәм кәрәкмәгән мәғлүмәттәрҙе туплаған һәм тел тигәндә телеп һалырҙай егет.* Й. Солтанов. *Ғөмүмән, китапханаға йөрөү, ихлас китап уҡыу ғәҙәте юҡ уның.* Н. Мусин. *Китапханаларҙа, лабораторияларҙа ултырыуын, немец, инглиз телдәрен ентекле өйрәнеүен генә белгән ҡыҙ [Линара] тәҡдимгә ҡаршы түгеллеген аңғартып яуап яҙып өлгөрҙө.* Л. Яҡшыбаева.

2. Айырым бер маҡсат менән бер урынға тупланған китап-журнал йыйылмаһы. □ Библиотека *(собрание книг, принадлежащих кому-л). Ғалим китапханаһы. Шәхси китапхана.* ■ *Николай Ильичтан ҡалған бай китапхана Лоҡмандың тотош булмышын яуланы.* Т. Ғарипова. *Әбделҡадирҙың*

китапханаһы бөтә Сәмәрҡәндкә мәшһүр. Ә. Хәкимов. *Камалетдин Шәрәфетдин бин Нуғаевтың шәхси китапханаһы шаҡтай бай булған.* Ғ. Хөсәйенов.

КИТАПХАНА-АРА (Р.: межбиблиотечный; И.: interlibrary; Т.: kütüphanelerarası) *с.*

Китапхана араһындағы, китапхана менән китапхана бәйләнешендәге. □ Межбиблиотечный. *Китапхана-ара абонемент. Китапхана-ара бәйләнеш.*

КИТАПХАНАСЫ (Р.: библиотекарь; И.: librarian; Т.: kütüphaneci) *и.*

Китапханала китаптарҙы тәртипкә килтереү, һаҡлау һәм уларҙы уҡыусыларға биреү эшен башҡарған хеҙмәткәр. □ Библиотекарь. *Китапханасы булып эшләү. Тәжрибәле китапханасы.* ■ *Ҡыҙ тырышып уҡып, үҙ маҡсатына ирешә — китапханасы булды.* Ә. Хәсәнов. *Менәүәрә бына өсөнсө йыл инде клуб мөдире һәм китапханасы булып эшләй ине.* Н. Мусин. *Әгәр ҙә китапханасы апай ярҙам итмәһә, Искәндәр, ихтимал, үҙенең көсһөҙлөгөн тойоп, ҡул һелтәмәҫ инеме икән.* Ә. Хәкимов.

КИТАП ҺӨЙӨҮСЕ (Р.: книголюб; И.: bibliophile, book lover; Т.: kitapsever) *и.*

Китап уҡырға әүәҫ, китап тураһында күп белеүсе кеше. □ Книголюб, книгочей, книжник. ■ *Камилә апай үҙ эшен яҡшы белә, ярата. .. Китап һөйөүселәрҙең яғымлы, аҡыллы кәңәшсеһе ул.* З. Биишева.

КИТАП ҺҮҘЕ (Р.: священное слово; И.: the sacred word; Т.: kutsal kelime) *и.*

Изге һүҙ. □ Священное, святое слово. ■ *Китап һүҙен боҙоп әйткән боҙоҡ мулла. Өҫтөн сығыр унан да, бурлыҡ ҡылһа.* М. Аҡмулла. *Китап (Ҡөрьән) һүҙен аңламайса йәшәүең етер, бәлки, йәнең иртәгә үк баҡыйға китер.* Г. Ситдиҡова.

КИТЕК I (Р.: с зазубриной; И.: with a notch, jag; Т.: çentikli) *с.*

1. Сите уйылып, кителеп сыҡҡан, кителгән. □ С зазубриной, с щербиной. *Китек тәрилкә. Китек каса. Китек теш.* ■ *Ҡырҡ йәштәр самаһындағы китек иренле Нурый өҫтәлгә таянды.* Ғ. Хәйри. *Мороно китек графиндан субырлатып һыу ҡойоп, Фазыл уның алдына стакан ултыртты.* Ә. Хәкимов. ● *Балтасының балтаһы китек.* Мәҡәл. *Киткәндән китек сүлмәк ҡалыр.* Мәҡәл. *Китек һалма — килендеке.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Теүәллеген юғалтҡан, кәмселекле, етешһеҙ. □ Неполный, неполноценный, с изъяном, ущербный. ■ *Ярай әле ергә һин тыуғанһың, дуҫлыҡ килде, шиғыр, йыр килде. Һин булмаһаң, беҙҙең шиғри донъя китек булыр ине шикелле.* Н. Нәжми. *Берберенән ҡәҙер-хөрмәт итеп торалар, донъя әйберҙәре етеш, ләкин тормоштарының бер мөйөшө китек.* Н. Мусин. *Ҡайһы саҡта үҙ уйҙарыңдың ҡанатһыҙ булыуына, үҙеңдең шәхси тормошоңдоң ниндәйҙер китек ере һиненең күңелеңде өйкәп тороуына эс бошоп китә.* З. Биишева. *Өйҙә түшәк менән самауыр юҡлығы әллә ҡайҙан күҙгә бәрелеп тора, өйҙөң бер яғы китек булып ҡалған кеүек күренә ине.* М. Ғафури. ● *Етем баланың күңеле китек.* Мәҡәл.

3. *миф.* Тулы булмаған, кителгән әйбер (*насар семантикаға эйә*). □ Ущербный (*с отрицательной семантикой*). ■ *Әсәйем әйтә торғайны: «Кителгән, ярылған һауыт-һабаны тотма, ташла, ярлылыҡ тартып тора ул», — тип.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Китек күңел** *ниҙер* етмәгән итеп һиҙеп, кәмһетелгән. □ Обиженный, ущербный. ■ *Күпме бала әсә наҙынан, иркәләүенән мәхрүм. Ундайҙар китек күңелле, төшөнкөлөккә бирелеп бара.* «Йәшлек», 8 сентябрь 2008.

КИТЕК II (китеге) (Р.: щербина; И.: nick; Т.: çentik) *и.*

Кителеп төшкән өлөш, һыныҡ. □ Щербина, зазубрина. *Сынаяҡ китеге. Китеген йәбештереп ҡуйыу.* ■ *Ул да [Александра], Алексей кеүек, ябай, гимназия бөтөрөүенә ҡарамаҫтан, үҙенең юл аҙыҡтарын беҙҙең менән уртаҡлаша, снаряд китектәренән яһалған кружканан өсәү алмашлап сәй эсәбеҙ.* А. Таһиров. ● *Йырҙың йыртығы юҡ, көйҙөң китеге юҡ.* Мәҡәл.

КИТЕК-ҠОТОҠ (Р.: весь щербатый; И.: all dented; Т.: çentikli) *с. йыйн.*

1. Кителеп, ярсылып бөткән. □ Щербатый, с зазубринами, с щербинами. *Китек-ҡотоҡ ҡашығаяҡ.* ■ *Китек-ҡотоҡ тештәрен*

йылтыратып, алсак көрәшкән Торомтайҙың арҡаһынан яратып, Роман: «Бабай, бабай!..» — тип өндәшеп тә ҡуйғас, Төлкөсура: «Һин, Роман, башҡортса өйрәнә лә башланың инде», — тип көлдө. Н. Мусин.

2. Урыны-урыны менән бүленеп-кителеп ҡалған. □ Остатки, клочки. *Китек-коток донъя. Китек-коток сабынлыҡ.*

КИТЕКЛЕК (китеклеге) (Р.: зазубренность; И.: crenation; Т.: çentiklik) *и.*

1. Сите уйылып, китек булыу. □ Зазубренность. *Китеклекте шымартыу.*

2. *күсм.* Кәмселеклек, етешһеҙлек. □ Ущербность. *Күңел китеклеге. Китеклек тойғоһон кисереү.*

КИТЕКЛӘНЕҮ (китеклән-) (Р.: зазубриться; И.: become serrated, dented; Т.: çentiklenmek) *ҡ.*

1. Китек хәлгә килеү. □ Зазубриться. *Салғы китекләнгән. Китекләнгән сынаяҡ. Китекләнгән бысаҡ.*

2. *күсм.* Насарланыу, кире яҡҡа үҙгәреү. □ Стать ущербным. *Китекләнгән күңел. Хистәр китекләнә.*

КИТЕКЛӘҮ (китеклә-) (Р.: зазубрить; И.: make serrate; Т.: çentiklemek) *ҡ.*

1. Китеп алыу, китеп төшөрөү. □ Зазубрить. *Китекләп бөтөрөү. Китекләп ташлау. Салғыны китекләү.*

2. *күсм.* Кәмселекле итеү, йәмһеҙләү. □ Сделать ущербным. *Күңелде китекләп тора. Хистәрҙе китекләй. Китекләп торған күренеш.*

КИТЕК-МИТЕК *с. йыйн. ҡар.* **китек-коток.**

КИТЕЛЕҮ I (кител-) *ҡ. төш. ҡар.* **китеү I, 1—4.** *страд. от* **китеү I, 1—4.** *Бик оҙаҡ ултырып кителгән.* ■ *Ут яғып ебәргәс инде, өшөй башлаған тәндәр йылынып, рәхәтләнеп үк кителде.* Н. Мусин. *«Гәфү ит, ҡыҙыбыраҡ кителде шикелле ысынлап та», — тине Илгиз.* Ә. Әминев.

КИТЕЛЕҮ II (кител-) (Р.: откалываться; И.: break off; Т.: çentiklenmek) *ҡ.*

1. Ситенән киртләс булып ватылыу. □ Откалываться, отделиться кусками. *Сырт итеп кителеп сыҡты. Быяла кителгән. Каса кителде.* ■ *Иҙәндә хужаның тотоғып, йөҙө кителеп бөткән оҫталыҡ балтаһы ята ине.* Н. Ҡотдосов. *Ботаҡлы имән түмәргә ҡоласлап сапҡан саҡта сәсрәп китә лә осҡондар, кителеп сыға балта.* Ғ. Дәүләтов. *Инде икмәк, көлсә, ҡоймаҡ-фәлән бешерәйем тиһәм, табамдың сите кителеп төшкән дә эсендә май тормай.* Ғ. Дәүләтшин. ● *Яҡшы ҡатын тун текһә, йөй-йөйөнән кителер; яман ҡатын тун текһә, бер кейелмәй һүтелер.* Мәҡәл. *Үткер бәке тиҙ кителә.* Мәҡәл. *Көтә-көтә таш та кителә.* Мәҡәл. *Сапма ташҡа, балтаң кителер.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Берәй нәмәнең теүәллегенә кәмселек йәки зыян килеү. □ Стать ущербным. ■ *[Аҡһаҡал — Тәңкәбикәгә:] Эйе, байбисә, донъяң кителеп ҡуйҙы. Әммә үлгән артынан үлеп булмай.* М. Кәрим. *Йөрәге әле хыял ҡулында, ә аҡылы, гүйә, ниндәйҙер килеп һөрләктө, һәм хыялының бер өлөшө ҡапыл кителеп төшкәндәй булды.* А. Абдуллин. *Садрислам ағайҙың «малай» тигән һүҙенә ҡайтанан күңел кителеп ҡуйҙы.* Ш. Биҡҡолов.

КИТЕЛЬ [рус. < нем. *Kittel*] (Р.: китель; И.: single-breasted military; Т.: zubun) *и.*

Ултырма яғалы, бер яҡҡа ғына ҡаптырмалы форма кейеме. □ Китель. ■ *Ялтыр погонлы күк китель кейгән ағай Мараттың һүҙен бүлдермәйенсә генә тыңлай.* Картотека фондынан. *Әбделбаҡый урядник кейемен тиҙ-тиҙ генә кейҙе лә, китель төймәләрен ҡаптыра-ҡаптыра, ҡапҡа тышына сыҡты.* Я. Хамматов. *Бына ул йып-йылтыр еҙ төймәле өр-яңы китель кейеп, ике ҡулды кеҫәгә тығып .. күтәрмәгә менеп баҫты.* З. Биишева.

КИТЕҮ I (кит-) [дөйөм төрки *кәт-*] (Р.: уходить; И.: go away; Т.: gitmek) *ҡ.*

1. *Ниндәйҙер* урынды ҡалдырыу, ҡайҙалыр йүнәлеү. □ Уходить; уезжать, отбывать; отъезжать, поехать, отправиться куда; отходить, отъезжать; улетать, отлетать; уплывать. // Уход; отъезд; отход; отлёт. *Мәктәп яғына китеү. Яланға китеү. Ауылға китеү. Иртә китеү. Һуң китеү.* ■ *Киләһең дә китәм тиһең, әллә һағынмаһыңмы?* Халыҡ йырынан. *Манара ишегенең тутыҡ йоҙағын тартып ҡараным да ары киттем.* Й. Солтанов.

Дневальный булды, ахырыһы, бераү килеп ишекте тартып ҡараны ла, уның эстән бикле икәнен күреп, кире китте. Н. Мусин. *Алда өйҙөң ишеге төҫмөрләнә. Мөмкин тиклем һаҡ баҫып, ишуға табан китте малай.* Н. Ғәйетбаев. ● *Шатлыҡ килмәй ҡайғы китмәй.* Мәҡәл. *Убыр китте, урыны ҡалды.* Мәҡәл.

2. *Нимәләр* ярҙамында ситкә юл тотоу. □ Уехать, уезжать *(на чём-то). Автобус менән китеү. Машина менән китеү. Катерҙа китеү.* ■ *Баҡыға бара алмаһам, дүртәүләп сүл юлы менән Хиваға һыбай китергә уйлаштыҡ.* Ә.-З. Вәлиди. *Поезд, тауҙарҙы урап-әйләнеп, сапты-сапты ла ҡапыл, тыны бөткән кеше һымаҡ, туҡтап ҡалды; .. бынан ары мин инде ат менән китергә тейешмен.* И. Абдуллин.

3. *Ниндәйҙер* маҡсат менән берәй яҡҡа юл тотоу. □ Уходить, уезжать *(с какой-то целью). Ҡалаға уҡырға китеү. Һыуға китеү. Концертҡа китеү. Ярышҡа китеү. Балыҡҡа китеү. Пенсияға китеү. Ялға китеү.* ■ *Хәшиә апайыма ла үҙе ҡайтҡансы ниҙәр эшләргә кәрәклеген әйткәс, ул яңғыҙы ғына бесәнгә китте.* Н. Мусин. *Ана әле кисә кис утынға киткән Ишмәмәт нимә эшләп ята...* Т. Ғарипова. *Бәһлеүәндәй ир-егеттәр һуғышҡа китеп бөтһә, ҡарт-королар, итәк тулы балалар менән ҡалған бисә-сәсәләр нимә ҡыйрата алһындар?..* Я. Хамматов.

4. Ҡуҙғалыу, үҙ юлы менән йүнәлеү *(транспорт тураһында).* □ Уехать, тронуться *(о транспорте). Машина китте. Трактор китте. Катер китте. Поезд үҙ ваҡытында китте.* ■ *Теҙ-быуындарым ҡалтыранды. Әгәр ҙә поезд китһә?..* Р. Низамов. *Киске һөттө алырға килгән машина китеп өлгөрҙө.* Т. Ғарипова.

5. Урындан күсеп алыҫлашыу, юғалыу. □ Уходить, удалиться, исчезнуть. *Күс осоп киткән. Көтөү китте. Ҡойонан һыу киткән.* ■ *Килгән болот китер өсөн килде, бөтөр өсөн төштө ҡырауҙар.* М. Кәрим. *Һауа шул хәтлем саф, иркен, әҙ генә талпынһаң, осоп китер ҙә барырһың кеүек.* Р. Солтангәрәев.

6. Йәшәгән урынды, эште йәки хеҙмәтте ҡалдырыу, ташлау. □ Уходить, покинуть. // Уход. *Сит илгә китеү. Эштән китеү. Ҡалаға китеү.* ■ *Көҙөн улар будкаларын ҡаҡтылар ҙа был урындан киттеләр.* Р. Солтангәрәев. *Хатта үҫәргән ырыуҙарының үҙҙәре араһында берҙәмлек юғалып бара. Баш Бүре ырыуы менән Мораттың яңынан Уралтау буйҙарына күсенеп китеүе шуны раҫлай түгелме?* Ә. Хәкимов. *Мин әйтәм: «Өлгөртөрбөҙ, йорт ҡасмаҫ. Тик бына һин күсенеп китергә ризалығыңды бир», — тим.* Ш. Бикҡолов. ● *Көсөң барҙа, эшеңде ҡара, көсөң киткәс, эшең һине ҡарар.* Мәҡәл.

7. Ебәргән яҡҡа йүнәлеү. □ Быть отправленным *(о письме, телеграмме). Хат иҫке адрес буйынса киткән. Бандероль киткән. Телеграмма ваҡытында китте.* ■ *Яҡын-тирә, алыҫ ыстаршиналарға еккәненә ат, етеренә хат китте.* Ғ. Хөсәйенов.

8. Тормошҡа сығыу. □ Выходить *(замуж). Иргә былтыр киткән. Кейәүгә китеү.* ■ *Ире була тороп, икенсе иргә китһә, халыҡ ниҙәр һөйләмәҫ?* Н. Мусин. *Кейәүгә китһә ҡыҙ көпә-көндөҙ юғалды ла ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов. *Һөйгән йәремятҡа китә, шуға яна йөрәгем.* Халыҡ йырынан.

9. *Кемделер* ташлап, бәйләнеште өҙөү. □ Уходить, расстаться. *Ҡатындан китеү. Һөйгән йәрҙән китеү. Коллективтан китеү.* ■ *Мәскәүгә уның минән китеүе икеләтә ауырыраҡ булыр ине: мин шыңшыған көсөк хәленә ҡалыр инем.* А. Абдуллин. *Юҡ, ышанмайым! Алдайһың һин, Зифа, минән китер өсөн алдайһың!..* Н. Мусин. *[Фәйзи — Рәйсәгә:] Һин миңә яҡшы ҡатын да, тоғро иптәш тә һәм яҡын дуҫ та инең, ләкин мин быларҙың бөтәһен дә һинән киткәс кенә аңланым шул.* Н. Асанбаев.

10. Шыйыҡ нәмәнең хәрәкәте, ағыш менән бергә юлланыу, ағыу. □ Течь, уплывать *(вместе). Ҡан китте. Торбанан һыу китмәй. Боҙ китә. Һал китеп бара.* ■ *Сергей был һүҙҙәрҙе күңеленә һалып ҡуйҙы. Кис ул Ағиҙелдә боҙ китеүен ҡарарға барҙы.* А. Абдуллин. *Бынау йәй уртаһында боҙ китәме ни инде...* Ә. Хәкимов. ● *Йылғаларҙа боҙ төндә китһә, ашлыҡ булыр.* Мәҡәл.

11. *Кемдеңдер* ҡарамағына күсеү, уның милкенә әйләнеү *(аҡса, мал-мөлкәткә ҡарата).* □ Отходить, переходить *(о деньгах,*

имуществе). Ата-әсәгә китеү. Йәмәғәткә китеү. Суд аша китеү.

12. Иреп, ағып, осоп юҡҡа сығыу *(ҡар, боҙға һ. б. ҡарата).* □ Уйти, таять *(о воде, тумане, снеге). Ерҙән дым китә. Биҙрә тишек булһа ла, һыуы китмәгән. Ҡар китмәгән. Томан китә. Күлдең һыуы киткән.*

13. Билдәле бер йүнәлештә ятыу, һуҙылыу *(юл, йылға, тау кеүек нәмәләргә ҡарата).* □ Начаться, тянуться *(о дороге, горе, реке). Тауҙар китә. Урман һуҙылып китә.* ■ *Артабан инде береһенең өҫтөнән икенсеһе аша ҡарап торған һыҙма тауҙар китә.* Ж. Кейекбаев. *Түбән яҡҡа ҡараһаң, унда аҙғы ҡатҡыл ҡар ҡаплаған ялан һуҙылып киткән.* Н. Мусин. *Ауылдың тирә-яғы баҡсалыҡ, ауылдың артынан урман һуҙылып киткән.* Д. Юлтый.

14. Үтеү, уҙыу *(ваҡытҡа бәйле төшөнсәләргә ҡарата).* □ Проходить, миновать *(о времени).* ■ *Йәшлек үтеп китә. Ғүмер китә. Бынығына ярты ғүмер китте, китте йәшлек, китте бар хисем.* Р. Ғарипов. *Улар батша янына барып, Елизавета Петровнанан патенттар, наказ-бүләктәр алып, оҙон юлдан әйләнеп ҡайтҡансы ярты йыл ғүмер үтеп китте, ҡыш, яҙ уҙып, йәй килде.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Күпкә китһә, сүпкә китә.* Мәҡәл.

15. Ағып сығыу *(ҡан, йәш кеүек нәмәгә ҡарата).* □ Пойти, начать течь *(о жидкости). Танауҙан ҡан китеү. Йәш китеү.* ■ *Йырларға көсәнһә, тын юлынан ҡан китә.* Т. Ғарипова. *Бөтә тәне уттай ҡыҙып, шымып ята-ята ла йәш батыр, серәшеп, тороРға ынтыла, ҡалҡынған һайын тамағынан күперекләнеп ҡан китә.* Ә. Хәкимов.

16. Ян-яҡҡа таралыу, йәйелеү *(тауышҡа, еҫкә ҡарата).* □ Распространяться *(о запахе, звуке). Еҫ китеп бөтмәгән. Тауыш яңғырап китте.* ■ *Азамат иртәгеһенә үк Басариевтың шылтыратыуын көтөп йөрөнө, хатта ҡолаҡ төбөндә ғыжылдыҡ тауышы яңғырап киткәндәй булды.* Р. Солтангәрәев. *Бер аҙҙан ажар кешнәүгә оҡшаш йөрәк өҙгөс өн яңғырап киткән.* Ғ. Хөсәйенов. *Килеп ингәс тә, Ғәйшәнән өйгә тәмле хуш еҫ таралып киткәйне; ул бик матур ал күлдәк кейгән, муйынына йоҡа ғына аҡ ебәк шарф ураған.* Д. Юлтый.

17. Күптәргә билдәле булыу, таралыу *(һүҙ, хәбәргә һ. б. ҡарата).* □ Пойти, распространиться *(о вести, новости). Даны китте. Һүҙ китте. Хәбәр китте. Бойороҡ китте.* ■ *Сәй эргәһендә һуғыш тураһында һүҙ китте.* А. Таһиров. *Бер ҡорҙан икенсеһенә: «Арғын! Арғын!..» — тип ниндәйҙер хәбәр китте.* Ә. Хәкимов.

18. *һөйл.* Билдәле бер хаҡҡа һатылыу. □ Быть отданным, проданным. *Бура арзанға китте. Иген ҡиммәт хаҡҡа китте. Акциялар баҙар хаҡына китте.*

19. Сарыф ителеү, *нимәгәлер* кәрәк булыу. □ Тратить, расходовать. *Костюмға өс метр туҡыма китте. Сөгөлдөр утауға өс көн китте. Бишкә китте. Көн бишкә китте. Ҡанау ҡаҙыуға дүрт көн китте.* ■ *Айбулат әсәһен ерләгәндә Хоҙай өсөн киткән был сығымды унан түләтерҙәр тип башына ла килтермәгәйне.* Һ. Дәүләтшина. *[Бейәләй:] Мин .. иң бәләкәсе. Мине бәйләр өсөн бик аҙ ғына йөн киткән.* С. Агиш.

20. Дауам итеү, һуҙылыу, башланыу *(эшхәлгә ҡарата).* □ Пойти, начаться *(о процессе). Бәхәс оҙаҡҡа китте. Фекер алышыу китте. Ямғырҙар китте. Һыуыҡтар китте.* ■ *Бер кем дә яуап бирмәй... Аптыраш, илаш-һыҡташ китте.* З. Биишева.

21. Эшләй башлау. □ Пойти, заработать. *Төҙәлөштә эш китте. Туҡтаған сәғәт китте. Командалар араһында ярыш китте.*

22. *күсм.* Вафат булыу, үлеү. □ Умереть, окончиться. *Иртә китте. Ваҡытһыҙ китте. Ауырыуҙан китеп барыу.* ■ *Нишләйһең, үҙен йәлләмәне, һаҡламаны инде, үтә йәшләй китте.* Ғ. Хөсәйенов. *[Вера Ивановна:] Саф күңелле кешеләр ине ата-әсә, бигерәк тә ваҡытһыҙ китеп барҙылар шул.* Ә. Хәкимов. *Йәшләй китә, йәшләй... Утыҙ ике йәш кенә бит. Самай йәштәр сағы.* З. Биишева.

23. Ҡайһы бер исемдәр менән ҡулланылып, шул һүҙҙән аңлашылған төшөнсәнең юҡҡа сығыуын, бөтөүен аңлата. □ Уходить, пропадать, исчезать; быть потерянным. *Байлыҡ китеү. Һаулыҡ китеү. Тормоштоң йәме китеү. Кешенең ҡәҙере китеү. Сәйҙең*

тәме китте. Ҡулдан власть китеү. Дуҫлыҡ китеү. Таҙалыҡ китеү. Көс китеү. ■ *Фатима ғәрләнеп илаңы. Үйындың йәме китте.* Ж. Кейекбаев. *Һауғанда һыйырҙың аҫтынараҡ инеп, елен төбөн нык һарҡытып һауығыҙ. Ошо арала ҡаймағығыҙҙың да бәрәкәте китә башланы.* Т. Хәйбуллин. *Муйыл, сирень еҫенә иҫергән яҙғы һауаның йәме бөткәндәй, ҡото киткәндәй тойолдо.* Т. Ғарипова.

24. Төбәү килештәге исемдәр менән һүҙ бәйләнеше яһап, берәй хәлгә ыңғайлауҙы аңлата. □ В сочетании с существительным в дательном падеже выражает начало и развитие действия, выраженного основным словом. *Оҙаҡ ауырыуҙан һауығыуға китеү. Эштәр яйға китте. Аралар боҙолоуға китте. Йоҡоға китеү. Оҙаҡҡа китте.* ■ *Ул ғына ла түгел, үҙе бер ҡот осҡос тарихҡа юлыҡҡан. Үлемгә бәйле бер ваҡиғаға шаһит булған, быны милиция белгән... Ҡыҫҡаһы, эш ҙурға киткән.* Н. Ғәйетбаев. *Арлы-бирле донъя хәлдәре тураһында һөйләшеп алғас, һүҙ тәрәнгә китмәҫ борон тигәндәй, ул ҡайтыу яғына ыңғайланы.* Р. Солтангәрәев. *Инәһе серемгә киткәндән файҙаланып, йомро кәүҙәһен Күкбүренең ҡорһағы аша тәгәрәтеп төшөрҙө лә, артына әйләнеп тә ҡарамай, йылға буйына атлыҡты.* Т. Ғарипова.

25. Төбәү килештәге исемдәр менән һүҙ бәйләнеше яһап, билдәләнгән бер тайпылыуҙы аңлата. □ В сочетании с существительным в дательном падеже выражает отклонение от меры. *Вәғәҙәнән китмәү. Килешеүҙә үтәмәй китеү. Сығыш ситкә китте. Графиктан китмәү.*

26. Төбәү килештәге исемдәр менән һүҙ бәйләнеше яһап, берәй нәмәгә әйләнеүҙе аңлата. □ Выделиться, обратиться во *что*. *Файҙаға китеү. Аҡса юҡҡа китте.* ■ *Атты бер елдереп, әҙерәк тирләтеп алмаһаң, ашағаны тәненә һеңмәй уның, күберәк тиҙәккә китә.* Б. Бикбай.

27. Төбәү килештәге исемдәр менән һүҙ бәйләнеше яһап, тәнгә таралыуҙы аңлата. □ Подействовать на *что*. *Шарап башҡа китте. Ҡайнар сәй аяҡтарға китте. Йөрәккә китеү.* ■ *«Рәхмәт, былай ҙа башҡа китте әле», — Марат көсәнеп көлгән булды.* Ә. Хәкимов. *Минең «алған» тиклемем башҡа китеп өлгөрҙөмө (эсмәй эскән кешегә күпме генә кәрәк!), мин үҙемде был өйҙә ғүмер буйы йәшәгән кеше кеүек, бик иркен тоя башланым.* Ш. Бикҡолов.

28. *күбр. юкл.* Сығанаҡ килештәге исемдәр менән берәй нәмәнең уй-тойғола һаҡланыу-һаҡланмауын аңлатҡан һүҙ бәйләнеше яһай. □ В сочетании с существительными в исходном падеже выражает сохранение или несохранение *чего-л.* в памяти. *Күңелдән китмәй. Һүҙҙәре ҡолаҡтан китмәй. Иҫтән китмәй. Хәтерҙән китмәй.* ■ *Әммә үҙенең камил төҫ-һыны, алсаҡ сырайы, тулы күкрәге, күҙ төптәрендә беленгән нескә һағыш төҫө, тығыҙ янбашына йәбешеп торған сәскәле күлдәге менән байтаҡ ваҡыт уның күҙ алдынан китмәй торҙо.* А. Абдуллин.

29. Ҡайһы бер рәүештәр менән ҡулланылып йығылыуҙы белдерә. □ В сочетании с некоторыми наречиями выражает падение. *Баш аша китеү. Баш түбән китеү. Йөҙ түбән китеү.*

30. Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, эш-хәрәкәттең башланған еренән алыҫлашыуын белдерә. □ В сочетании с формой деепричастия на *-п* образует сложные глаголы со значением удаления от места совершения действия. *Биреп китеү. Әйтеп китеү. Ял итеп китеү. Мунса инеп китеү. Бушатып китеү. Тейәп китеү. Килеп китеү. Осрашып китеү. Күреп китеү. Ҡайтып китеү.* ■ *Уның бында һәр ваҡыт ҡунып китә торған йорто бар. Күлгә яҡын ғына ул.* Ғ. Хәйри. *Ишбирҙинде райсоветҡа саҡырып киткәйнеләр.* Р. Солтангәрәев. *Ул йә өс көнгә, йә күп тигәндә бер аҙнаға ҡайтып, туғандарын күреп китә торғайны.* Ж. Кейекбаев.

31. Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, эш-хәрәкәттең башланыуын, барлыҡҡа килеүен аңлатҡан ҡушма ҡылым яһай. □ В сочетании с формой деепричастия на *-п* образует сложные глаголы со значением начала действия. *Һөйләп китеү. Дуҫлашып китеү. Тулҡынланып китеү. Ҡыҙарып китеү. Ҡартайып китеү.* ■ *Ул [Шәмси], иллюмина-*

циялар менән яҡтыртылған урам буйынса барғанда, ҡаланың киске матурлығын тамаша итеп йөрөүсе иптәштәренә осрап, бергә атлап китте. Ғ. Хәйри. *Йыуан, ауыр кәүҙәле Хәлит бик ихлас менеп киткәйне үрмәләп.* Н. Ғәйетбаев. *[Сәғит] борҡота сабып киткән «тимер ат»ты ҡарашы менән оҙатып, юлдашын ҡултыҡлап алды.* Й. Солтанов.

32. Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, эш-хәрәкәттең ҡапыл булыуын аңлатҡан ҡушма ҡылым яһай. □ В сочетании с формой деепричастия на *-п* образует сложные глаголы со значением внезапности действия. *Атылып китеү. Ҡыҙарып китеү. Зыңлап китеү. Өҙөлөп китеү.* ■ *Уның тауышы ҡалтырап китте лә өҙөлдө.* А. Абдуллин. *Ҡыҙ ҡапыл ҡыҙарып китте, уның күҙҙәре уҫал йылтыраны.* Н. Ғәйетбаев. *Таныш фамилияны, Әхмүшкә окшаш исемде ишеткәс, Нәғимә тертүйтеп китте һәм, йөҙөнә сыҡҡан үҙгәреште һиҙҙермәҫ өсөн, башын түбән эйҙе.* Б. Бикбай. *Минең йөрәк шыу итеп китте.* Т. Йәнәби.

33. Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, эш-хәрәкәттең тамамланғанын аңлатҡан ҡушма ҡылым яһай. □ В сочетании с формой деепричастия на *-п* образует сложные глаголы со значением завершения действия. *Туйып китеү. Өйрәнеп китеү. Сығып китеү. Үтеп китеү.* ■ *Ҡартәсәһе, «шайтандар» килмәһен өсөн, бер нисә таҡкыр «көлһуалла»ны уҡып, яҡ-яғына төкөрөп, йоҡлап китте.* Ғ. Хәйри. *Ауылда саҡта бәләкәйҙән мандолинала уйнаған, көйгә-моңға бай кеше булғанғалыр инде, тиҙ үк өйрәнеп китте ул уйнарға.* Н. Мусин. *Ҡыҙы артынан үҙе лә сығып китер ине, аяҡтары ғына зыулап һыҙлай шул.* Т. Ғарипова.

34. Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-а, -й* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ҡабатланып килгәндә, эш-хәрәкәттең дауамлы булыуын аңлатҡан ҡушма ҡылым яһай. □ В сочетании с формой деепричастия на *-а /-ә, -й* образует сложные глаголы со значением повторяемости, продолжительности действия. *Күргәнде һөйләй китһәң. Таныш-белештәрҙе һораша китһәң.*

35. Икенсе зат шарт ҡылым формаһында ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *-а, -й* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, берәй эш-хәлдең күплеге, ҙурлығына баҫым яһаған ҡушма ҡылым яһай. □ В сочетании с формой деепричастия на *-а/-ә, -й* образует сложные глаголы, акцентирующие объём действия. ■ *Баҡты иһәң, тон сыҡҡансы, күрше өлкәнең бер район үҙәгенә һыбай сабып, хәлүәне йәшниге менән һөйрәп алған да ҡайтҡан икән... Э-э-й Алла, һөйләй китһәң, аҙмы инде ул!* Й. Солтанов. *Ә һуйыр нимә генә инде, көсө лә юҡ, хәйләне лә белмәгән мәхлүк, һөйләй китһәң инде ул...* Н. Мусин. *Закира Хановна, — тип һүҙ башланым мин, әлеге уйымдың эҫеһе менән, — һөйләй китһәң, һүҙ күп инде ул. Рәхәтләнеп ултырыр инек тә ни, беҙгә вокзалға төшөргә ваҡыт шул.* Ш. Бикҡолов.

36. Төп ҡылымға ярҙамлыҡ ҡылым сифатында *ла/лә* киҫәксәһе аша теркәлеп, икеһе лә бер үк зат, заман формаһында торғанда, эш-хәрәкәткә интенсив төҫ бирә. □ В сочетании с глаголами изъявительного наклонения и частицы *ла/лә* выступает в роли вспомогательного глагола со значением интенсивности действия. *Алды ла китте. Ҡайтаһың да китәһең. Сыҡҡан да киткән.* ■ *Теге саҡта атаһы ер аҫтындағы станцияның етәксеһе ине, шуға кәрәк кешеләр менән һөйләште лә алды ла китте ҡыҙын Ергә.* Н. Ғәйетбаев. *Иртәгеһенә үк килеп еткән яусыны аталары кире бороп сығарғас, ул, күңел төпкөлөндә тыуған ашҡыныуын тыя алмайынса, егет әргәһенә үҙе барғайны, Ғәбдеян төнө менән ауылдарына етәкләп алып ҡайтты ла китте.* Н. Мусин.

♦ **Бер ҡайҙа ла китмәҫ** берәй эште ашыҡтырыу мөһим түгеллеген белдереү өсөн әйтелә. □ Никуда не денется. *Ашау бер ҡайҙа ла китмәҫ, өлгөрөрбөҙ.* **Киткән баш киткән** сараһыҙҙан тәүәккәллек эшләгәндә, үҙеңде-үҙең ҡеүәтләп әйтелә. □ Терять так терять. **Китте баш, ҡалды муйын** **һерәйеп** *ниндәйҙер* еңелерәк бәлә-ҡазаға осрағанда, шаяртып әйтелә. □ Попасть в беду. **Көс әрәм < гә > китеү** көстө бушҡа сарыф итеү.

□ Бесполезно тратить силу. ■ *[Сәғиҙә:] Балаларҙың яҙыуы якшырҙы, матурлана төштө. Тимәк, минең эшем әрәмгә китмәгән.* М. Тажи. **Әллә ҡайҙа китмәү** бик шәптән түгел, маҡтарлыҡ йүне юҡ. □ Не далеко ушёл. ■ *Уға, имеш, йәмғиәттең киләсәген ышанып тапшырырға ярамай. Төптән уйлағанда, Мараттың атаһы ла әллә ҡайҙа китмәгән инде.* Ә. Хәкимов.

КИТЕҮ II (кит-) [дөйөм төрки *кәт-*] (Р.: откалывать; И.: chop off; break off; Т.: çentiklemek) *ҡ.*

Нәмәнең дә булһа бер ҡырын, ситен киртләс итеп уйыу. □ Откалывать, отделять куском, отшибать. *Тәрилкәне китеү. Касаны китеү. Шоколадты китеп алыу.*

КИТЕШЕҮ (китеш-) *ҡ.*

1. *урт. ҡар.* **китеү I.** *взаимн. от* **китеү I.** *Эшләп китешеү. Тейәп китешеү.* ■ *Унан һуң Бәкер, директорҙың ҡушыуы буйынса, төнөн складтан әйберҙәр тейәп алып китеште.* Н. Ғәйетбаев.

2. Берәм-берәм китеү. □ Уйти, уехать, разъехаться. *Ҡунаҡтар ҡайтып китешеп бөттө. Уҡыусылар тәнәфескә сығып китештеләр.*

КИТЕШЛӘЙ (Р.: по пути; И.: on the way; Т.: giderken) *р.*

Ҡайҙа ла булһа китеп барғанда, юл ыңғайында. □ По пути, по дороге. *Китешләй кереп сығыу. Хатты китешләй алыу.* ■ *Ҡайтышлай Сөнәғәт Ситйылғаға тейә алманы һәм китешләй һуғылмаҡсы булды.* Ж. Кейекбаев. *Аттарына оҙон арбаларын егеп урман яғына китеп барыусылар ял итергә туҡтай — ҡайтышлай ҙа, китешләй ҙә ошонда ҡуналҡа яһап китә.* Р. Солтангәрәев. *[Әйүп:] Эйе, кейен. Китешләй Гөлмәрйәм апайға инеп, ҡайҙа йәшәгәнен беләйек тә...* Т. Ғарипова.

КИТИ-МИТИ ИТЕҮ (кити-мити ит-) (Р.: хитрить; И.: be sly/cunning/crafty; Т.: atlatmak) *ҡ. диал.*

Мутлыҡ эшләү. □ Хитрить, изворачиваться. ■ *Күрше малай кити-мити итеп тик йөрөй мутлашып.* Экспедиция материалдарынан.

КИТ ИНДЕ (Р.: да брось; И.: well, I never; Т.: yapma!) *ымл.*

Берәүҙең һүҙен йәки үҙен кире ҡаҡҡанда әйтелә. □ Выражает возражение: да брось, не морочь. ■ *«Кит инде, донъяла ҡыҙ бөткән булмаһа, шуны килен итеп ала булдыммы?» — тине уға ҡаршы әсәйем.* Ғ. Хәйри. *Кит инде, әҙәм көлөн алып, шул тиклем йөрөмәһәң...* Н. Мусин. *«Кит инде, бөгөн дә ҡашыма инеп ятмағаның», — тип үпкәләй ҡарсығы.* Т. Ғарипова.

КИТМӘ (Р.: диарея; И.: diarrh(o)ea); Т.: ishal) *и. мед.*

Шыйыҡ тиҙәкле йыш булған дефекация *(оло ярау).* □ Диарея. *Китмә менән яфаланыу.*

КИТСЕ (Р.: брось ты; И.: pack it in!; Т.: hadi ya!) *ымл.*

Берәй хәбәргә ышанып етмәй, аптырап ҡалғанда әйтелә; кит. □ Брось ты, да ну; да, неужели. ■ *«Китсе, ниндәй һүҙ ул?» — тип ҡыҙарына Нәфисә, үҙе яҡыныраҡ килә.* Й. Солтанов. *Китсе, уның тормошон, ғүмер юлын ҡапыл балҡытып ебәрерлек бәхет йондоҙо шулай оҙаҡ ҡалҡмаҫмы икән ни?* Н. Мусин. *Китсе, китсе, олатай! Оҫта барҙа, ҡулың тый, сәсән барҙа, телең тый, тимәгәндәрме?* Ә. Хәкимов.

КИТСӘЛЕ *ымл. ҡар.* **китсе.** ■ *«Китсәле, шулаймы ни?» — тине Кәримә, ышанмаған төҫлө. — «Белмәгән-күрмәгән эшкә...»* Н. Мусин. *«Китсәле, беҙҙең кеүек тә баһа. Сәсе генә һары», — тиешеп малайҙар геү килде.* Ә. Хәкимов. *Китсәле, йәнем, һин барында уны иркәләргә күңелем тартамы һуң инде.* З. Бишева.

КИТҺӘНӘ *ымл. ҡар.* **китсе.** ■ *Китһәнә, ни һөйләй был!*

КИТ ӘЛЕ (Р.: да ну; И.: well, I never; Т.: hadi ya!) *ымл.*

Берәй нәмәгә ышанып етмәй, аптырап ҡалғанда әйтелә. □ Да ну, неужели *(выражает внезапное удивление).* ■ *Кит әле, ысынмы? Ҡайҙа? — Бикмораттың ҡолағы үрә торҙо.* Н. Мусин. *Хәлит урынынан ырғып торҙо: — Кит әле! Шулай буламы?* Н. Ғәйетбаев. *[Афзал:] Минең исем — һалдат исеме бит ул. [Билал:] Кит әле?!* Н. Нәжми. *Кит әле, булмаҫ ул арала, — тине Нурый, башта ышанғыһы килмәй.* А. Таһиров.

КИТӘН (Р.: холст; И.: canvas, sackcloth; Т.: tuval) *и.*

Тарма, кесерткән сүсенән һуғылған киндер. □ Холст, холстина. / Холщовый. *Китән тоҡ. Китән ыштан.* ● *Ҡара китән буҙ булмаҫ.* Мәҡәл.

КИТӘРЕҮ (китәр-) (Р.: портить; И.: impair; Т.: bozmak) *ҡ.*

Нимәнеңдер сифатын кәметеү, бөтөрөү, боҙоу. □ Терять, утрачивать; портить. *Мәжлестең йәмен китәреү. Сәйҙең тәмен китәреү. Ҡәҙерен китәреү.* ■ *Эй эсәйек ҡымыҙҙың таҙаһын, китәрмәйек байҙың маҙаһын.* Халыҡ йырынан. *Ошондай йонсоу ваҡытта йүнле әҙәм этен дә тышҡа сығармай, ә һин, үҙ ҡәҙереңде үҙең китәреп, әллә ҡайҙа китергә маташаһың.* Я. Хамматов. *Садрислам ағайҙың үлеүе тураһында телемдән ысҡынды тигәс, тотолоп ҡалдым, хәҙергә инде ниңә уларҙың кәйефтәрен китәрергә?* Ш. Биҡҡол. ● *Саф булһаң, һыу кеүек бул, һыу һәр нәжисте китәрә.* Мәҡәл.

КИФАЯ [ғәр. كيف] (Р.: достаточный; И.: sufficient; enough; Т.: yeterlik) *с. иҫк.*

Етерлек, ҡәнәғәт булырлыҡ. □ Достаточный, соответствующий потребностям. *Барлығына кифая булыу.*

КИФАЯЛАНЫУ (кифаялан-) (Р.: довольствоваться; И.: be content/satisfied (with), content oneself (with); Т.: memnun olmak) *ҡ. иҫк.*

Ҡәнәғәт булыу; ҡәнәғәтләнеү. □ Довольствоваться, быть довольным. ■ *Зәйнәп һаман түҙә ине. Ун һүҙгә бер яуап ҡайтарыу менән кифаялана.* М. Ғафури.

КИФАЯТ [ғәр. كيف] (Р.: довольствование; И.: sufficiency; Т.: yeterlilik) *и. иҫк.*

Етерлек, кәрәк тиклем. □ Довольствование, достаточность. ■ *Хат яҙып белдерәйем шартын, ғалимдар аңлар һүҙҙең кифаятын.* М. Аҡмулла.

КИҺӘҮҺЕҘ *с. диал. ҡар.* **тыңлауһыҙ.** *Киһәүһеҙ бала.*

КИШЕР (Р.: морковь; И.: carrot; Т.: havuç) *и. бот.*

1. Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ҡыҙғылт һары төҫтәге баҡса үҫемлеге, йәшелсә. □ Морковь *(растение).* / Морковный (лат. *Daucus*). *Кишер орлоғо. Кишер ултыртыу. Кишер түтәле. Кишергә һыу һибеү. Кишер утау.* ■ *[Төлбаныу:] Мин бында һуған, кишер, шалҡан кеүек нәмәләр ултыртһам тигәйнем, ҡәйнәм. Ҡул менән ҡаҙһаң, түтәл эшләүе еңел була.* Н. Мусин. *[Харбинко:] Һеҙҙең баҡсасылыҡ эшегеҙ быйыл яҡшы ғына уңыш бирәсәк. Шуны йыйып алыу сараһын күрергә кәрәк. сәселгән картуф, кәбеҫтә. кишер кеүек нәмәләр ерҙә ҡалмаҫҡа тейеш.* А. Таһиров. *«Беҙҙә уңа торған игендәр: арыш, бойҙай, һоло, арпа, картуф, кишер, сөгөлдөр һәм бүтәндәр», — тип бала яуап бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Шул йәшелсәнең ашай торған тамыры. □ Морковь *(корнеплод). / Морковный. Кишер турау. Кишер ҡырыу. Кишер ашау. Кишер һуты.* ■ *[Хашим:] Ҡайһы саҡ картуф менән бергә сөгөлдөр йә кишер ҙә тәгәрәтәм. Мейестә бешкән йәшелсәнең тәме башҡа була бит.* Т. Ғарипова. *Быраса хатта картуфты ла ул хәтле теләп сәсмәгән кешеләрҙең баҡсаларында ла помидор, ҡабаҡ. ҡыяр. сөгөлдөр. кишер кеүек йәшелсәләр йыйып алып бөткөнсө булып бешеп өлгөрҙө.* З. Биишева.

КИШЕРЛЕ (Р.: морковный; И.: with carrot; Т.: havuçlu) *с.*

Кишере бар, кишер ҡушылған. □ Морковный, с морковью. *Кишерле салат. Кишерле аш. Кишерле бөйөрөк. Кишерле, һарымһаҡлы йылҡы ите.*

КИШМИШ [фарс. كشمش] (Р.: кишмиш; И.: seedless grapes; Т.: çekirdeksiz kuru üzüm) *и.*

Һөйәкһеҙ ваҡ йөҙөм сорты һәм уның киптерелгән емеше. □ Кишмиш. ■ *«Ни өсөн хөрмә түгел, әлбә түгел, кишмиш түгел?» — тип шаярып теҙеп алып киттем мин.* М. Кәрим.

КИШӘНКЕ (Р.: шелуха пшеницы; И.: wheat chaff; Т.: buğday kabuğu) *и. диал.*

Бойҙай ҡабығы. □ Шелуха пшеницы. *Бойҙайҙы кишәнкенән таҙартыу.*

КЛАВЕСИН [рус. < фр. *clavecin*] (Р.: клавесин; И.: harpsichord; Т.: harpsikord) *и. муз.*

Фортепьяноға оҡшаған ҡыллы клавишалы музыка инструменты. □ Клавесин. *Клавесинда уйнау. Клавесин өсөн яҙылған музыка. Клавесинда башҡарыу.*

КЛАВИАТУРА [рус. < нем. *Klaviatur* < лат. *clavis* 'асҡыс'] (Р.: клавиатура; И.: keyboard; Т.: klavye) *и.*

1. Музыка ҡоралдарының бармаҡ менән баҫып тауыш сығара торған баҫмаҡтар йыйылмаһы. □ Клавиатура. *Аккордеон клавиатураһы. Пианино клавиатураһы. Клавиатураға ҡулдарҙы дөрөҫ ҡуйыу.* ■ *Мәҙинәнең бер ҡулы пианино клавиатураһында, икенсеһе иркен рәүештә кәүҙәһе буйлап һуҙылған.* Т. Ғарипова.

2. Төрлө механизмдарҙағы баҫмаҡтар йыйылмаһы *(компьютерҙа, һанау машинкаһында һ. б.).* □ Клавиатура. *Компьютер клавиатураһы. Башҡорт теле клавиатураһы.* ■ *Иҙрисов, күп тикшеренеүҙәрҙән аҙаҡ, яҙыу һәм хәреф йыйыу машиналары өсөн яңы йыйғыс кассалар һәм клавиатуралар проекты ижад итә.* С. Латипов.

КЛАВИР [рус. < нем. *Klavier*] (Р.: клавир; И.: clavier; Т.: tuşlu çalgı) *и. муз.*

1. Пианино, рояль, клавесин кеүек клавишлы инструменттарҙың дөйөм атамаһы. □ Клавир *(общее название клавишных инструментов).*

2. Опера йәки симфоник партитураның фортепианола уйнау йәки фортепианоға ҡушылып йырлау өсөн эшкәртелгән күсермәһе. □ Клавир *(переложение оперной или симфонической партитуры). Опера клавиры.*

КЛАВИШ [рус. < лат. *clavis* 'асҡыс'] *и. ҡар.* **баҫмаҡ I.** *Пианино клавишы. Аккордеон клавишы. Ноутбук клавишы. Клавишҡа баҫыу.* ■ *Ҡулындағы китабын өҫтәл өҫтөнә ырғытып, пианино янына барып ултырҙы ла, башын артҡа ташлай төшөп, бармаҡтарын клавиштар өҫтөндә бейетә башланы.* Ғ. Хәйри. *Яҡты нур пианино клавиштарына, унда ятҡан нескә, һылыу бармаҡтарға төшә.* Т. Ғарипова. *Сәғит клавишты батыра, зәңгәр экран тоноҡланып һүрелә.* Й. Солтанов.

КЛАВИШЛЫ (Р.: клавишный; И.: keydriven; Т.: tuşlu) *с.*

Клавишы булған, клавишаһы бар. □ Клавишный. *Клавишлы телефон. Клавишлы уйын ҡоралы.*

КЛАДОВОЙ [рус.] *и. ҡар.* **келәт.** ■ *Унда, — тинем, — магазинда, кладовойға сыға торған ишектә, бер пәрҙә бар. Шул пәрҙәнең артында Әмирхановтың Урманцевка тауар һатыуы тураһында бер материал бар.* С. Агиш. *Һуҡыр сысҡан кладовойға инһә, күрә: бушап ҡалған бураларҙан тик ел өрә.* Ш. Бикҡол.

КЛАДОВЩИК (кладовщигы) [рус.] *и. ҡар.* **келәтсе.** ■ *[Еҙсәлем:] Колхоз келәте — әсәйеңдең йылы ашлауы түгел бит ул һиңә, кладовщик иптәш!* Й. Солтанов. *«Дүртенсе фермаға күс. Кладовщик булырға ризаһыңмы?» — тип өндәште Карпов Камалға.* И. Абдуллин. *Аҙнаев ҡыуғындың башындағы, уртаһындағы һәм түбәнге осондағы бригада менән кемдәр етәкселек итәсәген, заторсылар бригадиры, кладовщик, аш бешереүселәр кем буласағын һанап сыҡты.* Н. Мусин.

КЛАКСОН [рус. < ингл. *klaxon*] *и. ҡар.* **ҡыҫҡыртҡыс.** ■ *Ишек тәңгәлендәге һуғышҡа тиклемге иҫке модалы автомашиналарҙың клаксонына оҡшаш ҡулайламаға ҡарап ҡатты.* А. Мағазов.

КЛАПАН [рус. < нем. *Klappe*] (Р.: клапан; И.: valve; Т.: valf) *и.*

1. *тех.* *Ниндәй ҙә* булһа механизмда газ, пар йәки шыйыҡлыҡ юлын яба торған махсус япҡыс. □ Клапан. *Насос клапаны. Пар ҡаҙаны клапаны.* ■ *Ҡапыл ғына эйелеп ҡарағанда, пожар яҡтыһында Моратов ҙур ғына тартма эсендә запас частарҙың — поршень ҡулсалары, клапандар ялтырап ятҡанын күрҙе.* А. Карнай. *Галя клапандарҙы ҡумыҫтты, тын бирә торған көпшәләрҙе күҙләне.* А. Таһиров.

2. *мед. ҡар.* **йөрәк ҡапҡасы.**

КЛАПАНЛЫ (Р.: клапанный; И.: valvate; Т.: valfli) *с.*

Клапаны булған, клапан ярҙамында эшләй торған. □ Клапанный, имеющий клапан. *Клапанлы механизм. Клапанлы ҡапҡас. Клапанлы система. Клапанлы аппарат.*

КЛАРНЕТ [рус. < фр. *clarinette*] (Р.: кларнет; И.: clarinet; Т.: klarnet) *и. муз.*

Ағастан бер башын киңәйтеп эшләнгән клапанлы тынлы музыка ҡоралы. □ Кларнет. *Кларнетта уйнау. Кларнет триоһы.* ■ *Төрлө халыҡтарҙың тынлы музыка ҡоралдары*

араһында ҡурайҙың үҙенә яҡыныраҡ кәрҙәшлырыуҙары бар: һыбыҙғы, свирель, жалейка, һорнай, флейта, кларнет, борғо, зурна һ. б. Ғ. Хөсәйенов. *Ауыҙына кларнет ҡапҡан Исаак Соломонович музыканттар түңәрәгеге алдына баҫҡан да хәрәкәтһеҙ тора.* А. Карнай.

КЛАРНЕТСЫ (Р.: кларнетист; И.: clarinettist; Т.: klarnetçi) *и.*

Кларнетта уйнаусы музыкант. □ Кларнетист. *Оҫта кларнетсы. Кларнетсылар ансамбле. Кларнетсылар сығышы.*

КЛАСЛЫ (Р.: классный; И.: first rate; top-class; Т.: harika) *с.*

1. *Ниндәйҙер* өлкәлә бик яҡшы эҙерлеге, оҫталығы, тәжрибәһе булған. □ Классный, имеющий высокую квалификацию. *Беренсе креслы тракторсы. Икенсе кластлы шофёр. Юғары кластлы хоккейсы.* ■ *Әле иптәштәре радиограмманы минутына биш-алты ғына группа ҡабул иткәндә, ул [Кәнзәфәров] өсөнсө класлы радиотелеграфистар нормаһы менән эшләй ине инде.* Н. Мусин.

2. Сифат яғынан айырылып торған. □ Классный, имеющий определённый разряд. *Беренсе класлы каюта. Класлы фотоаппарат. Юғары класлы техника.*

КЛАСЛЫ ВАГОН (Р.: пассажирский вагон; И.: passenger coach; Т.: yolcu vagonu) *и. иҫк.*

Кеше йөрөтөү өсөн эшләнгән вагон; пассажир вагоны. □ Классный *(пассажирский)* вагон. *Класлы вагон билеты. Класлы вагонда барыу.*

КЛАСС I [рус. < лат. *classis*] (Р.: класс; И.: class; Т.: sınıf) *и.*

1. Билдәле сифат һәм үҙенсәлектәре яғынан тиң нәмәләр төркөмө *(ғилми терминологияла).* □ Класс *(в научной терминологии: совокупность, группа предметов или явлений с общими признаками). Һандар класы. Имеҙеүселәр класы. Ылыҫлылар класы.*

2. Мәктәп курсындағы бер баҫҡыс; синыф. □ Класс *(в школе). Беренсе класс уҡыусыһы. Икенсе класҡа күсеү. Бишенсе класта уҡыу.* ■ *Ул [Анна], зәңгәр күҙле урыҫ ҡыҙы, шунда беренсе кластан алып башҡорт мәктәбендә уҡыны, башҡорт теле уның шундай уҡ әсә теленә әйләнде.* Й. Солтанов. *Шәмсиҙең ауылдашы, йәшләй ауылда күп ваҡыт бергә булған Һажәр, гимназияның һуңғы класында уҡый.* Ғ. Хәйри. *Хатта уныңсы кластан да бергә хат бирҙереп маташты, Рәмзил уның өнөн тиҙ тыҡты.* Д. Бүләков.

3. Махсус мәктәп йәки уҡыу йортоноң билдәле бер һөнәр өйрәткән бүлеге. □ Класс *(подразделение учащихся). Ҡурай класы. Ҡумыҙ класы. Баян класы. Скрипка класында уҡый.*

4. Башланғыс һәм урта мәктәптә бергә уҡыған уҡыусылар төркөмө. □ Класс *(группа учащихся). Класс менән киноға барыу. Класс йыйылышы. Класс етәксеһе.* ■ *Был көн дәрестәр бөткәс, Ғәбит ағай, отряд вожатыйы Юлай менән бергәләп, класс йыйылышы үткәрҙе.* З. Биишева.

5. Мәктәптәге дәрес уҡытыла торған бүлмә. □ Класс *(комната). Класҡа инеү. Класта ултырыу. Кластан сығыу. Класс таҡтаһы. Класс ишеге.* ■ *Иптәштәре нисек кенә дәртләндерергә тырышмаһын, Йәүҙәт барыбер имтихан барған класҡа кәйефе төшөп, ағарынып килеп инде.* Й. Солтанов. *Шул саҡ, сираттағы дәрес бөтөүен белдереп, ҡыңғырау шылтыраны, күршеләге класта дөпөлдәшеп балалар йүгерешкән, геү-шау килгән тауыштар ишетелде.* Н. Мусин. *Шулай ҙа [Юлдаш], класс ишегенән ингәс, тағы әҙ генә икеләнеп торҙо.* З. Биишева.

КЛАСС II [рус. < лат. *classis*] (Р.: класс; И.: class; rate; Т.: sınıf) *и.*

1. Бер иш нәмәләрҙең урынын, төркөмдәрен билдәләгән сифат күрһәткесе. □ Класс. *Билетта урындың класы күрһәтелгән. Самолётта урындар кластарға бүленгән. Өсөнсө класс каютаһы.*

2. Эҙерлек, оҫталыҡ дәрәжәһе. □ Степень подготовленности в *чём-л.*, квалификация *(категория, разряд). Беренсе класс юрисы. Икенсе класс юстиция кәңәшсеһе.*

КЛАСС ДӘФТӘРЕ *и. ҡар.* **класс журналы.**

КЛАСС ЖУРНАЛЫ (Р.: классный журнал; И.: class register; Т.: sınıf defteri) *и.*

Кластағы (I, 4) уҡыу-уҡытыу эшенең барышын теркәп бара торған кенәгә. □ Классный журнал. *Класс журналына яҙыу. Класс*

журналының тороошо. ■ *Стеналарҙағы ҡаҙаҡтарға күргәҙмә материалдар ҡатлап-ҡатлап эленгән, өҫтәлдә глобус, геометрик линейка, ҡара һауыттары, класс журналдары тулып ята.* Н. Мусин.

КЛАССИК I (классигы) [рус. < лат. *classicus* 'өлгөлө'] (Р.: классик; И.: classic; Т.: klasik) *и.*

Үрнәк булырлыҡ, атаҡлы, киң танылған яҙыусы, фән йәки сәнғәт эшмәкәре. □ Классик. *Башҡорт әҙәбиәтенең классигы. Музыка сәнғәте классигы.* ■ *Хәҙер Әхмуш өсөн рус классиктары ғына түгел, донъя әҙәбиәтенең дә атаҡлы күп яҙыусыларының әҫәрҙәре таныш.* Б. Бикбай. *Көнсығыш поэзияһының йоғонтоһо арҡаһында, мәснәүи башҡорт әҙәбиәтенең классиктары тарафынан да киң ҡулланылған.* К. Әхмәтйәнов.

КЛАССИК II (Р.: классический; И.: classic(al); Т.: klasik) *с.*

1. Классиктар тарафынан ижад ителгән, өлгө булырлыҡ. □ Классический. *Классик музыка. Классик әҫәр. Классик опера. Классик әҙәбиәт. Классик яҙыусы. Классик фәнни тикшеренеү үрнәге.* ■ *[Мәҙинә] университеттың классик телдәр бүлеген, егете ике йыл элек медицина факультетын тамамлаған.* Ә. Хәкимов. *Йәштәр араһында ғына түгел, өлкәндәрҙән дә халыҡтың классик көйҙәрен ғәжәп һәйбәт башҡарыусылар, сәсәндәр, ҡумыҙҙа, ҡурайҙа уйнаусылар, бейеүселәр етерлек ине был ауылда.* З. Биишева. *М. Кәримгә арналған монографияһында Г. Хөсәйенов был шиғырҙы психологик йәнәшәлектең классик миҫалы тип баһалауы менән бик хаҡлы ине.* К. Әхмәтйәнов.

2. Боронғо грек һәм римляндар донъяһына ҡараған, антик. □ Классический *(относящийся к миру древних греков и римлян). Классик филология. Классик телдәр.*

КЛАССИКА [рус.] (Р.: классика; И.: classics; classical literature; Т.: klasik) *и. йыйн.*

Классиктар ижад иткән өлгө булырлыҡ әҫәрҙәр. □ Классика. *Башҡорт әҙәбиәтенең классикаһы. Классика уҡыу. Көнсығыш классикаһы менән танышыу.* ■ *Әммә шуныһы ҡыуаныслы, хәҙер танылған йырсыларыбыҙ көндән-көн классикаға, халыҡ йырҙарына йышыраҡ мөрәжәғәт итә, тип яҙалар газетала. Тимәк, моң кире ҡайта.* Д. Бүләков.

КЛАССИК БЕЙЕҮ (Р.: классический танец; И.: classic dance; Т.: klasik dans) *и.*

Балет сәнғәтенә нигеҙ булған бейеү. □ Классический танец *(относящийся к балетному искусству). Классик бейеү оҫтаһы. Классик бейеү башҡарыу.*

КЛАССИК КӨРӘШ (Р.: классическая борьба; И.: Graeco Roman wrestling; Т.: greko-romen) *и. спорт.*

Ҡул, кәүҙә көсө нигеҙендә алып барылған спорт көрәше. □ Классическая борьба *(греко-римская борьба, в котором запрещены технические приёмы ногами).* ■ *Классик көрәш буйынса ярыш. Классик көрәш менән шөғөлләнеү. Классик көрәш чемпионы.*

КЛАССИФИКАТОР [рус.] (Р.: классификатор; И.: classifier; Т.: sınıflandırıcı) *и.*

1. Классификация үткәреүсе белгес; төркөмләүсе. □ Классификатор *(специалист). Классификатор булып эшләү. Минералдар классификаторы.*

2. Етештереү стандарттары буйынса белешмә. □ Классификатор *(справочник). Классификатор буйынса билдәләү. Классификатор төҙөү. Классификаторға үҙгәрештәр индереү. Яңы стандарт классификаторы. Һөнәрҙәр классификаторы.*

3. Минерал киҫәксәләрҙе ҙурлығы, формаһы, тығыҙлығы буйынса төркөмдәргә айыра торған аппарат. □ Классификатор *(аппарат). Гидравлик классификатор. Конуслы классификатор. Механик классификатор.*

КЛАССИФИКАЦИЯ [рус. < лат. *classis* 'төркөм' + *facere* 'эшләү'] (Р.: классификация; И.: classification; Т.: sınıflandırma) *и.*

Билдәле әйберҙәрҙе, күренештәрҙе, төшөнсәләрҙе төркөмдәргә бүлеү системаһы. □ Классификация. *Фәнни классификация. Классификация үткәреү. Классификация яһау. Классификация схемаһы. Башҡорт теле өндәре классификацияһы.*

КЛАССИФИКАЦИЯЛАУ (классификацияла-) (Р.: классифицировать; И.: classify; Т.: sınıflandırmak) *ҡ.*

Классификация яһау. □ Классифицировать, делить на классы. // Классифициро-

вание, классификация. *Төшөнсәләрҙе классификациялау. Үҫемлектәрҙе классификациялау. Минералдарҙы классификациялау менән шөғөлләнеү. Фәнни яҡтан классификациялау.*

КЛАССИЦИЗМ [рус. < нем. *Klassizismus* < лат. *classicus* 'юғары класлы, өлгөлө'] (Р.: классицизм; И.: classicism; Т.: klasisizm) *и.*

1. XVII быуаттан XIX быуаттың баштарына тиклем сәнғәттә, әҙәбиәттә боронғо Греция һәм Рим классика формаларына һәм образдарына эйәреү өҫтөнлөк иткән йүнәлеш. □ Классицизм. ■ *Үҙенән алда килгән алымға – классицизмға – мөнәсәбәт мәсьәләһендә романтизм күп йәһәттән сентиментализмға яҡын килә.* «Ағиҙел», № 2, 2009. *Ҡайһы бер яҙыусылар, айырыуса классицизм вәкилдәре, үҙ әҫәрҙәрендәге характерҙарҙың үҙенсәлектәрен геройға бирелгән исемдәр аша образлап бирергә тырыштылар.* К. Әхмәтйәнов.

2. Белем биреү, уҡытыуҙың боронғо грек, латин телдәрен, әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен өйрәтеүгә нигеҙләнгән системаһы. □ Классицизм.

КЛАСТАШ *и. кар.* **синыфташ.** *Беҙ уның менән класташтар. Класташ дуҫ. Класташтар менән осрашыу.* ■ *Билдәренә биҙәкле алъяпҡыс бәйләгән бөтмөр еңгәйҙәр, аттестаттарын алыу менән үк эшкә тотонған егәрле класташ ҡыҙҙар ергә оҙон аҡъяулыҡ йәйеп мәш килә.* Й. Солтанов. *Баяғы күңелһеҙ хәлдәр ҙә, кәмәһе ағып киткән Хәмит тә, хатта арттарынан быуа-быуа ҡыуып етергә теләүсе класташтары ла онотолдо.* Д. Бүләков. *Бер көндө мине тәнәфес ваҡытында класташ ҡыҙ, бик хәйләкәр йылмайып, ишек алдына алып сыҡты.*

КЛАСТАШЛЫҠ (класташлығы) *и. кар.* **синыфташлыҡ.** *Класташлыҡ мөнәсәбәттәре.*

КЛЕВЕР [рус. < нем. *Klever*] (Р.: клевер; И.: clover; Т.: yonca) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән тумалаҡ сәскәле мал ашай торған үлән; туҡранбаш. □ Клевер (лат. *Trifolium*). *Клевер баҫыуы. Клевер орлоғо.* ■ *Йәйге айҙың тәүге көндәренән үк күкрәп сәскә атҡан ҡыҙыл клевер, колонғойроҡ, әскелтем лютик, ерек ҡураһы, себер ирисы үләндәре аңҡытҡан тәмле-татлы еҫ ағымы, һәммәһе бергә буталып танауға бәрелеү менән иҫертә, күңелдә ниндәйҙер шатлыҡлы хистәр уята.* Я. Хамматов. *Яланда буй-буй һыҙылып киткән бойҙайҙар, һололар, арпалар, арыштар, .. клеверҙар теҙелешеп-теҙелешеп киткәндәр ҙә, ҡарағусҡылланып, күкһелләнеп, аҡһылланып ярылып яталар.* Ғ. Дәүләтшин.

КЛЕЁНКА [рус.] (Р.: клеёнка; И.: oil cloth; oilskin; Т.: muşamba) *и.*

Һыу үткәрмәҫлек махсус матдә яғылған туҡыма. □ Клеёнка. *Клеёнка түшәү. Клеёнка ябыу. Йоҡа клеёнка. Клеёнка йәбештереү. Өҫтәл клеёнкаһы.* ■ *Фронтҡа китер алдынан Хәлил уны [дәфтәрҙе] ҡалын клеёнкаға төрөп, өй ҡыйығы аҫтына мендереп йыя.* Й. Солтанов.

КЛЕЁНКАЛАУ (клеёнкала-) (Р.: покрыть клеёнкой; И.: cover with oil cloth; Т.:muşamba ile örtmek) *ҡ.*

Клеёнка менән тышлау. □ Покрыть клеёнкой, обделать клеёнкой. *Дымдан клеёнкалау. Документ тышын клеёнкалау.*

КЛЕЁНКАЛЫ (Р.: покрытый клеёнкой; И.: covered with oil cloth; Т.: muşambalı) *с.*

Клеёнка ябылған, клеёнка менән тышланған. □ Покрытый, обитый, обтянутый клеёнкой. *Клеёнкалы өҫтәл. Клеёнкалы дәфтәр. Клеёнкалы теплица.*

КЛЕЙКОВИНА [рус.] *и. кар.* **елемсә.** ■ *Хәҙерге ауыл кешеләре дәүләткә һимеҙ ит, ҡуйы һөт һатырға тырышалар, бойҙайҙың клейковинаһы күп булһын, тиҙәр.* Ә. Гәрәев.

КЛЕЙСТЕР [рус. < нем. *Kleister* 'елем төрө'] (Р.: клейстер; И.: flour paste; Т.: tutkal) *и.*

Крахмалдан йәки ондан яһалған елем. □ Клейстер. *Клейстер бешереү. Клейстер менән йәбештереү.* ■ *Унан ҡағыҙҙы таҫма кеүек киҫеп, рам ярыҡтарын клейстер йәки клей менән йәбештерәләр.* «Башҡортостан», 19 май 2010.

КЛЕММА [рус. < нем. *Klemme*] (Р.: клемма; И.: (clamp) terminal; Т.: sıkma vidası) *и.*

Электр сымдарын аппаратҡа тоташтырыусы ҡулайлама; зажим, гайка. □ Клемма. *Клемманы тоташтырыу. Клемманы ысҡындырыу. Клемманы таҙартыу. Клемма ҡуйыу.*

КЛЕРИКАЛ [рус. < лат. *clericalis* ‘сиркәү’] (Р.: клерикал; И.: clerical; Т.: dinerkçilik taraftarı) *и.*

1. Клерикализм ҡарашлы кеше. □ Клерикал *(сторонник клерикализма). Клерикал булыу. Клерикалдар яҡлы.*

2. Клерикал фирҡә ағзаһы. □ Клерикал *(член клерикальной партии). Клерикалдар органы.*

КЛЕРИКАЛИЗМ [рус. < лат. *clericalis* ‘сиркәү’] (Р.: клерикализм; И.: clericalism; Т.: dinerkçilik) *и. сәйәси.*

Илдең сәйәси һәм мәҙәни тормошонда сиркәүҙең һәм руханиҙарҙың йоғонтоһон көсәйтеүгә йүнәлтелгән сәйәси ағым. □ Клерикализм. *Поляктар клерикализмы. Йәһүдтәр клерикализмы.*

КЛЕРК [рус. < лат. *clericus* ‘рухани’] (Р.: клерк; И.: clerk; Т.: memur) *и.*

Көнбайыш Европа илдәрендә контора хеҙмәткәре. □ Клерк. *Клерк хеҙмәте. Клерктар бүлмәһе.*

КЛЕТЧАТКА [рус.] *и. ҡар.* **күҙәнәклек.** *Тире аҫты клетчаткаһы. Май клетчаткаһы.* ■ *Клетчатка, йәки целлюлоза – тәбиғәттә иң күп таралған ҡатмарлы углевод.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2008.

КЛЕТЬ [рус.] (Р.: клеть; И.: storeroom; Т.: kumanyalık) *и.*

Шахтаға төшөү һәм күтәрелеү өсөн эшләнгән ҡоролма. □ Клеть. *Клеть менән төшөп китеү.* ■ *Инженерҙар ултыра ижад менән, уйҙарында тауҙар аҡтарып, күҙ алдынан үтә клеть юлы асылаҫаҡ яңы шахтаның.* М. Тажи.

КЛЁПКА [рус.] *и. ҡар.* **ҡорама I, 2.**

КЛЁШ [рус. < фр. *cloche* ‘оло ҡыңғырау’] (Р.: клёш; И.: flared skirt; Т.: ispanyol paça) *и.*

Итәк һәм салбар балағының түбәнгә табан киңәйеп киткән фасоны. □ Клёш. / Расклешённый. *Тулы клёш итәк. Клёш салбар кейеү. Итәкте клёш итеп тегеү.* ■ *Володяның бөтә кәүҙәһе тап бейеү өсөн генә яратылған һымаҡ килешеп тора ине. Өҫтәүенә матростар клёшы һәм фуражка лентаһының ялт-йолт елберләп тороуы күҙҙә эйәрмәҫлек шәп һәм һоҡланырлыҡ матур хәрәкәттәргә тағы ла матурыраҡ эффект биреп тора ине.* А. Карнай.

КЛИЕНТ [рус. < лат. *cliens (clientis)*] (Р.: клиент; И.: client; Т.: müşteri) *и.*

1. Үҙ эшен алып барыуҙы адвокатка, нотариус һ. б. тапшырған кеше. □ Клиент *(адвоката, банка и т. д.). Биржа клиенты. Банк клиенты.*

2. *Кемдер* тарафынан даими хеҙмәтләндерелгән ойошма йәки айырым кеше. □ Клиент *(постоянный покупатель, заказчик). Клиенттарҙы хеҙмәтләндереү.* ■ *Бөҙрәхананың ишегенә лә: «Оҫта парикмахер Юрий Викторович Брайнингерға, клиенттар бик күп булыу сәбәпле, алдан яҙылырға кәрәк» тигән яҙыу эленгән.* Картотека фондынан.

КЛИЕНТУРА [рус.] (Р.: клиентура; И.: clientele; Т.: müşteriler) *и. йыйн.*

Клиенттар, заказ биреүселәр. □ Клиентура. *Клиентураны күберәк йәлеп итеү. Клиентура менән эшләү.* ■ *Бында ни, «Буратино»ла ни — барыбер. — Соня ауыҙын усы менән ҡаплап, киң итеп иҫнәп ала. — Бер үк клиентура.* Картотека фондынан.

КЛИЗМА [рус. < гр. *klysma*] (Р.: клизма; И.: enema, clyster; Т.: lavman) *и.*

1. Дауалау йәки диагноз ҡуйыу маҡсаты менән тура эсәккә шыйыҡлыҡ ебәреү. □ Клизма *(введение различных жидкостей с лечебной или диагностической целью). Клизма яһау. Таҙартыу клизмаһы. Дауалау клизмаһы. Тамсылы клизма. Эсте йомшартыу клизмаһы.*

2. Тура эсәккә шыйыҡлыҡ ебәрә торған махсус прибор. □ Клизма *(прибор для введения жидкости). Клизма ҡуйыу. Резиналы клизма.*

КЛИМАКС [рус. < гр. *klimax* ‘баҫҡыс’] *и. мед. ҡар.* **климактерий.** *Климакс осоро. Климаксҡа етеү.*

КЛИМАКТЕРИЙ [рус. < гр.] (Р.: климактерий; И.: climacteric, menopause; Т.: adet kesilmesi) *и. мед.*

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡартлыҡҡа күсеп, енси биҙҙәре үҙгәргән осор; ырыуҙан ҡалған ваҡыт. □ Климактерий. *Климактерийға бәй-*

ләнешле үҙгәрештәр. Климактерий кисереү. Климактерий дәүере.

КЛИМАТ [рус. < гр. *klima* 'эйелеш'] (Р.: климат; И.: climate; Т.: iklim) *и.*

1. Билгеле бер урынға хас булған һауа шарттары. □ Климат. / Климатический. *Эҫе климат. Тау климаты. Урман климаты. Яһалма климат. Климат үҙгәреше. Климатҡа тәьҫир итеү. Климат бүлкәттәре. Климат факторҙары.* ■ *[Сәғәҙиев:] Беҙҙең климат шарттарында эшләнәһе эштәр, ҡәнәғәтләндерелмәгән ихтыяждар тулып ятҡан саҡта, ҡышын колхозсының эшһеҙ йөрөүенә юл ҡуйыу, крәҫтиән тормошон тик ер эштәре менән сикләү — халыҡҡа ҡаршы заговор менән бер!* И. Абдуллин. *Карелиялағы питомник хужалыҡтарында, ҡаты климатты иҫкә алып, ҡарағай һәм шыршының бер йыллыҡ түгел, ә дүрт-биш йыллыҡ үҫентеләрен ултыртыуға күсеүҙәре иғтибарын [Моратовтың] йәлеп итте.* Н. Мусин.

2. *Нимәнеңдер* булыуы, барлыҡҡа килеүе өсөн тәғәйен булған хәл, шарт. □ Климат *(обстановка, условия существования чего-л.). Сәйәси климат. Ғаилә климаты.*

КЛИМАТЛАШТЫРЫЛЫУ (климатлаштырыл-) *ҡ. төш. ҡар.* **климатлаштырыу.** *страд. от* **климатлаштырыу.** *Климатлаштырылған үҫемлек.*

КЛИМАТЛАШТЫРЫУ (климатлаштыр-) (Р.: акклиматизировать; И.: acclimatize; Т.: iklime alıştırmak) *ҡ.*

Яңы климатҡа, яңы тәбиғәт шарттарына күнектереү. □ Акклиматизировать. // Акклиматизирование, акклиматизация. *Климатлаштырыу тәжрибәһе. Климатлаштырыу эштәре. Үҫемлектәрҙе климатлаштырыу.*

КЛИМАТЛАШЫУ (климатлаш-) (Р.: акклиматизироваться; И.: acclimatize oneself; Т.: iklime alışmak) *ҡ.*

Яңы климатҡа, тормош шарттарына күнегеү *(хайуан һәм үҫемлектәргә ҡарата).* □ Акклиматизироваться. // Акклиматизирование, акклиматизация. *Үҫемлектәрҙең климатлашыуы. Климатлашыу процесы.*

КЛИМАТОЛОГ [рус. < гр.] (Р.: климатолог; И.: climatologist; Т.: iklimbilimci) *и. махс.*

Климатология белгесе. □ Климатолог. *Яҡшы климатолог. Климатолог һөнәре.*

КЛИМАТОЛОГИЯ [рус. < гр. *klima* + *logos* 'тәғлимәт'] (Р.: климатология; И.: climatology; Т.: iklimbilimi) *и. махс.*

Климат төрҙәрен, уларҙың барлыҡҡа килеүен һәм органик донъяға булған тәьҫирен өйрәнә торған фән. □ Климатология. *Климатология институты. Климатология өлкәһендә эшләү. Медицина климатологияһы.*

КЛИНИК (Р.: клинический; И.: clinical; Т.: klinik) *с.*

Клиникаға бәйләнешле. □ Клинический. *Клиник шарттар. Клиник тикшеренеүҙәр. Клиник дауахана.* ■ *Ғәйнияр Ғәйнуллович — алтын кеше. Уны, беҙҙең төп уҡыу, тәжрибә базаһының, йәғни республика клиник больницаһының баш врачын, студенттарыбыҙ ҙа бик ярата.* Д. Бүләков.

КЛИНИКА [рус. < гр. *klinike* 'ауырыуҙарҙы ҡарау'] (Р.: клиника; И.: clinic; Т.: hastane) *и.*

Медицина юғары уҡыу йорто йәки ғилми-тикшеренеү институты составына ингән ятып дауаланыу учреждениеһы, унда дауалау менән бергә ғилми-тикшеренеү һәм уҡытыу эше алып барыла. □ Клиника. *Педиатрия клиникаһы. Нервы ауырыуҙары клиникаһы. Клиника шарттарында дауаланыу.* ■ *Имай .. баш ҡаланың атаҡлы хирургия клиникаһында дауаланып ята.* Й. Солтанов. *Республиканың хирургия үҙәге иң ҙур клиникаларҙан иҫәпләнә, ә шул ҙур клиниканың баш врачы кем инде? Ҡаҙнабаев, фән докторы.* Д. Бүләков.

КЛИНИК ҮЛЕМ (Р.: клиническая смерть; И.: clinical death; Т.: klinik ölüm) *и. мед.*

Тын алыш һәм йөрәктең тибеше туҡтағандан һуң организмдың әле тере булған ҡыҫҡа ғына ваҡыты. □ Клиническая смерть. *Клиник үлемдән ҡотҡарыу. Клиник үлем кисереү.* ■ *Егерме йәшлек эшсе В. Шестаковты ашығыс ярҙам машинаһы клиник үлем хәлендә больницаға килтергәйне.* «Башҡортостан», 16 июль 2009.

КЛИНКЕР [рус. < нем. *Klinker*] (Р.: клинкер; И.: clinker; Т.: kiremit tuğlası) *и. махс.*

1. Һыу үткәрмәй торған бик ҡаты кирбес *(юлға түшәү өсөн ҡулланыла)*. □ Клинкер *(кирпич)*. *Клинкер түшәү.*

2. Сеймал *(айырым ҡаты киҫәктәр хәлендәге яндырылған цемент)*. □ Клинкер.

КЛИШЕ [рус. < фр. *cliche*] *и. ҡар.* **ҡалып.** *Цинк клише. Растрлы клише. Төнлө клише. Штрихлы клише. Клише яһау. Клишенан айырыу. Клише телмәрҙе биҙәмәй.*

КЛОАКА [рус. < лат. *cloaca*] (Р.: клоака; И.: cloaca; Т.: kanalizasyon) *и.*

1. Ҡалаларҙа бысраҡ һыу ағыҙыу өсөн ер аҫты каналы. □ Клоака (канализация). *Клоакаға ағыҙыу.*

2. Бысраҡ урын. □ Клоака. ■ *Ҡала ситендә клоакалар күбәйҙе.*

3. *күсм.* Боҙоҡ йәмғиәт, боҙоҡ мөхит. □ Клоака.

4. *биол.* Ҡайһы бер хайуандарҙа бәүел һәм тиҙәк бергә ҡушылған урыны; артҡы юл *(балыҡтарҙа, ҡоштарҙа, һөйрәләүселәрҙә)*. □ Клоака. *Ҡоштарҙың эсәге клоакаға асыла.*

КЛОН [рус. < гр. *klōn* 'ботаҡ, тоҡом'] (Р.: клон; И.: clone; Т.: klon) *и.*

1. Вегетатив үрсеү ысулы менән генетика яғынан бер иш итеп барлыҡҡа килтерелгән үҫемлек йәки тере йән тоҡомо. □ Клон. *Клон үрсетеү.*

2. Төрлө объекттарҙың күсермәләре. □ Клон.

КЛОНЛАШТЫРЫУ (клонлаштыр-) (Р.: клонировать; И.: cloning; Т.: klonlamak) *ҡ. биол.*

Клон барлыҡҡа килтереү. □ Клонировать. *Клонлаштырыу ысулы. Үҫемлектәрҙе клонлаштырыу.* ■ *Компьютерҙар, кибернетик организмдар, клонлаштырыу технологияһы кеше аҡылынан башҡа йәшәй алмай.* «Шоңҡар», № 4, 2010.

КЛОУН [рус. < ингл. *clown*] *и. ҡар.* **кәмитсе.** *Клоун сығышы. Клоун битлеге. Клоун трюгы.* ■ *[Һалдат] шатлыҡ менән дилбегәгә тотонғанда, башҡалар цирк майҙанына сығыусы клоунды көткән тамашасылар кеүек, Шәмсиҙең аяҡтары ерҙән күтәрелгәнде көттөләр.* Ғ. Хәйри.

КЛОУНАДА [рус. < ингл. *clown*] *и. ҡар.* **кәмит I.** *Клоунада менән шөғөлләнеү. Йыйылышты клоунадаға әйләндереү.*

КЛОУНДАРСА (Р.: как клоун; И.: as a clown; Т.: palyaço gibi) *р.*

Клоун кеүек, клоундарға хас рәүештә. □ Как клоун, по-клоуновски. *Клоундарса ҡыланыу. Үҙен клоундарса тота.* ■ *[Ғибәҙәт Фәттәхов] аттың арт яғына әйләнеп ултырҙы ла клоундарса ҡыланыуҙан тыйылманы.* Я. Хамматов.

КЛОУНЛАНЫУ (клоунлан-) (Р.: клоунничать; И.: clown; Т.: soytarılık etmek) *ҡ.*

Клоундарса ҡыланыу, кеше көлдөрөү. □ Клоунничать, смешить людей. *Уҡыусы дәрестә клоунлана.*

КЛОУНЛЫҠ (клоунлығы) *и. ҡар.* **кәмитлек 2.** *Клоунлыҡҡа уҡыу. Клоунлыҡ күрһәтеү.*

КЛОУНСЫЛЫҠ (клоунсылығы) *и. ҡар.* **кәмитлек.** *Клоунсылыҡҡа бирелеү.*

КЛУБ [рус. < ингл. *club*] (Р.: клуб; И.: clubhouse; Т.: kulüp) *и.*

1. Бергәләп ял итеү, күңел асыу, спорт менән шөғөлләнеү һ. б. өсөн уртаҡ бер эш йәки һөнәр кешеләрен берләштергән ойошма. □ Клуб *(общественная организация, объединяющая людей на основе общности интересов)*. *Йәштәр клубы. Кино һөйөүселәр клубы. Спорт клубы. Шахматсылар клубы.* ■ *Стәрле ҡалаһының мәҙәниәт йортонда ял көнө клубы эшләй, уның ишеге теләге булған бөтә балаларға ла асыҡ.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», № 2, 2009. *Силәбе ҡалаһында башҡорттарҙың танышыу клубы уңышлы эшләп килә.* «Йәшлек», 12 октябрь 2009.

2. Шундай ойошмалар урынлашҡан йорт, бина. □ Клуб *(помещение)*. *Клуб сәхнәһе. Ауыл клубы. Завод клубы. Клуб мөдире.* ■ *Культуралы тукланыу урындары, магазин, китапхана, клуб асылған, һәр яҡлап бай йыһазландырылмыш иркен стадион ҡоролған йәш-еленсәккә.* Й. Солтанов. *Клубтан сыҡҡас, яңғыҙ ғына ҡайтып килгәнендә, Ғилман, ошо күренештәрҙе иҫенә төшөрөп: «Бына беҙ хәҙер йәшлектең, мөхәббәттең ҡәҙерен белеп еткермәйерәк йәшәйбеҙ түгелме?» — тип уйланы.* Н. Мусин. *Бар*

мөлкәте батареялы иҫке приёмник менән боҙоҡ барометрҙан ғибәрәт һыуыҡ клубта өҫтәренә бишмәт, тун кейгән егеттәр менән ҡыҙҙар партаға саҡ һыйып ултыралар. И. Абдуллин.

КЛУМБА [рус. < ингл. *clump* ‘ағастар төркөмө’] *и. ҡар.* **сәскәлек.** *Түңәрәк клумба. Клумба яһау. Клумба сәскәләре.* ■ *Ҡайһы саҡта ул [Лотфрахманов Шәрәфетдин бабай] баҡсаның теге башындағы сейә ағасы төбөнә яһалған сәскәләр клумбаһы янында әллә нәмәләр һөйләнеп ултыра.* И. Ғиззәтуллин. *Беҙ сәскә түтәлдәрен, йондоҙ итеп яһалған клумбаларҙы үтеп, парктың артҡы ҡапҡаһына йүнәләбеҙ.* Ғ. Ғәйнуллин.

КНЕХТ [рус. < гол. *knechtu*] (Р.: кнехт; И.: bitts; T.: iskele babası) *и. махс.*

Судно палубаһында йәки пристанда буксир арҡанын бәйләп ҡуйыу өсөн тәғәйенләнгән бүкән. □ Кнехт.

КНИЖКА [рус.] *и. ҡар.* **кенәгә.** *Зачёт книжкаһы. Хеҙмәт книжкаһы. Һаҡлыҡ книжкаһы.*

КНОПКА [рус. < гол. *knoop* ‘пуговица’] (Р.: кнопка; И.: drawing pin; T.: düğme) *и.*

1. Ҡағыҙ, туҡыма йә башҡа нәмәне беркетеү өсөн ҡулланылған яҫы башлы бәләкәй үткер осло ҡыҫҡа сөй; ҡаҙауыс. □ Кнопка *(металлическое острие). Бер ҡап кнопка. Кнопка менән беркетеү. Кнопка менән ҡаҙап ҡуйыу.*

2. Бармаҡ менән баҫып электр селтәрен ялғау һәм төрлө механизмдарҙы хәрәкәткә килтереү өсөн тәғәйенләнгән баҫмалы төймә. □ Кнопка *(для замыкания электрической сети). Ҡыңғырау кнопкаһы. Кнопкаға баҫыу. Сәғ һурҙырғыс кнопкаһы.* ■ *Ҡара һауыты тиклем генә кнопкаһына баҫһаң, ун алты ракета, ҡойроғонан ут көлтәһе сорғолтоп, бөтәһе бер юлы, «жыйт-жыйт» итеп оса ла китә, ти.* Й. Солтанов. *Арынбаҫаров үҙенүҙе битәрләп ишекле-түрле йөрөнө-йөрөнө лә өҫтәленең мөйөшөндәге кнопкаға баҫты.* Д. Бүләков. *Кнопкаға баҫып шылтыратып торманы ул [Саимә], ишекте үҙ асҡысы менән асты ла һаман ҡыйыуһыҙланып ситтәрәк торған Шамилдың яурынынан этте.* Н. Мусин. *[Камали] һул ҡулы ишек тотҡаһында, уң ҡулының бармағы менән кнопканы батырҙы.* Ғ. Хәйри.

3. *ҡар.* **сыртлаҡ.** *Күлдәк кнопкаһы. Кнопка тегеү. Кнопкаһын элдәктереү.*

КНОПКАЛЫ (Р.: кнопочный; И.: key-driven; button; T.: düğmeli) *с.*

Кнопкаға (2) баҫып хәрәкәткә килтерелә торған. □ Кнопочный. *Кнопкалы ҡыңғырау. Кнопкалы ит турағыс. Кнопкалы телефон.*

КОАГУЛЯЦИЯ [рус. < лат. *coagulatio* ‘ойошоу, ҡатыу’] (Р.: коагуляция; И.: coagulation; T.: pıhtılaşma) *и. махс.*

Коллоид системаларҙа өлөшсәләрҙең уҡмашып, дисперслыҡ дәрәжәһенең кәмеү процесы. □ Коагуляция. *Ҡандың коагуляцияһы. Болотта һыу өлөшсәләренең коагуляцияһы.*

КОАГУЛЯЦИЯЛАНЫУ (коагуляциялан-) (Р.: коагулироваться; И.: coagulate; T.: pıhtılaşmak) *ҡ. махс.*

Коагуляция хәленә килеү, уҡмашыу. □ Коагулироваться. *Ҡан коагуляцияланған.*

КОАГУЛЯЦИЯЛАУ (коагуляцияла-) (Р.: коагулировать; И.: coagulate; T.: pıhtılaştırmak) *ҡ.*

Коагуляция хәленә килтереү. □ Коагулировать. *Шыйыҡсаны коагуляциялау.*

КОАЛИЦИОН (Р.: коалиционный; И.: coalition; T.: birleşme) *с.*

Коалицияға бәйләнешле. □ Коалиционный. *Коалицион хөкүмәт. Коалицион килешеү.*

КОАЛИЦИЯ [рус. < лат. *coalitio* < *coalitus* ‘берләшкән’] (Р.: коалиция; И.: coalition; T.: birleşme) *и.*

Дөйөм маҡсаттарға ирешеү өсөн дәүләттәр, фирҡәләр, ойошмалар араһында төҙөлгән килешеү, берләшмә. □ Коалиция. *Коалиция хөкүмәте. Коалиция төҙөү. Коалиция килешеүе. Коалицияға берләшеү.*

КОБАЛЬТ [рус. < нем. *Kobold* ‘гном’] (Р.: кобальт; И.: cobalt; T.: kobalt) *и.*

1. *хим.* Тимерҙән ҡатыраҡ аҡ төҫтәге металл. □ Кобальт *(металл).* / Кобальтовый. *Кобальт мәғдәне. Кобальт окисы. Һөттә йод, кобальт, баҡыр һ. б. микроэлементтар бар.* ■ *Берәү илгә имен көндәр теләй, күгәрсенде ҡулдан ашата. Ә берәүгә атом бомбаһы аҙ, кобальт бомба тиеп баш вата.* М. Кәримов.

2. Ошо металл ҡатышҡан ҡуйы күк буяу. □ Кобальт *(краска). Кобальт менән буяу.*

КОБАЛЬТЛЫ (Р.: кобальтовый; И.: cobaltic, cobaltous; Т.: kobaltli) *с.*

Составында кобальт булған. □ Кобальтовый. *Кобальтлы мәғдән. Кобальтлы ятҡылыҡтар.*

КОБЗА (Р.: кобза; И.: kobza *(Ukrainian traditional musical instrument resembling the guitar)*; Т.: kobza) *и. муз.*

Украин думбыраһы. □ Кобза. *Кобзала уйнау.*

КОБЗАРСЫ (Р.: кобзарь; И.: kobza player; Т.: kobza çalan) *и. муз.*

Кобзала уйнап, йыр башҡарыусы. □ Кобзарь. *Кобзарсыны тыңлау. Оҫта кобзарсы.*

КОБРА [рус. < порт. *cobra*] (Р.: кобра; И.: cobra; Т.: kobra) *и. зоол.*

Йылы яҡтарҙа йәшәүсе, баш арты тимгелле, ағыуы бик көслө булған ҙур йылан; күҙлекле йылан. □ Кобра (лат. *Naja*). *Кобра ағыуы.*

КОБУРА [рус. < төрк. *кубур* 'ҡын'] (Р.: кобура; И.: holster; Т.: tabanca kılıfı) *и.*

Револьвер йәки пистолет ҡабы. □ Кобура. *Күн кобура. Пистолетты кобураға һалыу.* ■ *«Ни эшләйһең һин, юлбаҫар! Үәт шаҡшы нәмәҫтә!» — тип шофёр наган кобураһын ысҡындыра башлағайны, арҡаһына Рамаҙандың автомат көбәге төртөлөүгә, ҡапыл йыуашайып, йомшарып төштө.* Ә. Хәкимов. *Боевой дружина командиры Әүхәди Рамазанов тигән ҙур кәүҙәле быжыр егет ҡотороноп кобураһына тотонған военком алдында күҙҙәрен сылт-сылт итеп йомғолап торҙо.* А. Карнай.

КОВБОЙ [рус. < ингл. *cowboy* < *cow* 'һыйыр' + *boy* 'егет'] (Р.: ковбой; И.: cowboy; Т.: kovboy) *и.*

Көнбайыш Америка далаларындағы һыбай көтөүсе. □ Ковбой. / Ковбойский. *Ковбойҙар ярышы. Ковбой эшләпәһе.*

КОВБОЙКА [рус.] (Р.: ковбойка; И.: cowboy shirt; checked shirt; Т.: erkek gömleği) *и. һөйл.*

1. Айырым фасон менән тегелгән шаҡмаҡлы ирҙәр күлдәге. □ Ковбойка. ■ *[Апуш] өҫтөнә арзанлы триконан тегелгән спорт костюмы, иҙеүен асып, яғаһын тышҡа сығарып, сатраш ковбойка кейгән.* Н. Иҙелбай.

2. Осло түбәле, киң ситле эшләпә. □ Ковбойка. *Ковбойка йөрөтөү.*

КОВЕРКОТ [рус. < ингл. *covertcoat*] (Р.: коверкот; И.: covert; Т.: kalın bir tür kumaş) *и.*

Тышҡы кейемдәр тегеү өсөн тәғәйенләнгән тығыҙ затлы йөн йәки яртылаш йөн туҡыма. □ Коверкот. / Коверкотовый. *Коверкоттан тегелгән костюм. Коверкоттан тектереү. Коверкот пальто.*

КОГОРТА [рус. < лат. *cohors (cohortis)*] (Р.: когорта; И.: cohort; Т.: askeri müfreze) *и.*

1. *тар.* Боронғо Римда легиондың ундан бер өлөшөн тәшкил иткән төркөм. □ Когорта. *Когорта тар-мар ителде.*

2. Уртаҡ маҡсаттар, фекерҙәр берләштергән кешеләр төркөмө. □ Когорта. *Ғалимдар когортаһы. Декабристар когортаһы. Яҙыусылыр когортаһына ҡарау.*

КОД [рус. < фр. *code*] (Р.: код; И.: code; Т.: kod) *и.*

1. Телефон, телеграф, радио һ. б. аша хәбәр алышыу өсөн ҡулланылған йәшерен билдәләр, сигналдар системаһы. □ Код *(для каналов связи). Телеграф коды. Метеорологик код.*

2. Йәшерен шартлы тамғалар системаһы. □ Код *(шифр, пароль). Сейф йоҙағы коды. Һаҡлау камераһы коды. Код йыйыу. Кодын онотоу.*

3. Тоҡомға, нәҫелгә хас сифаттарҙың гендарҙа яҙылыуы. □ Код *(генетический). Генетик код. Тоҡом коды.*

КОДЕИН [рус. < гр.] (Р.: кодеин; И.: codeine; Т.: kodein) *и. мед.*

Йүтәлде баҫа торған аҡ кристалл порошок. □ Кодеин. *Кодеин менән дауаланыу. Кодеинға рецепт яҙҙырыу.*

КОДЕКС [рус. < лат. *codex* 'китап'] (Р.: кодекс; И.: code; Т.: kanunlar) *и.*

1. *юр.* Системалаштырылған һәм билдәле бер өлкәгә ҡарай торған закондар йыйылмаһы. □ Кодекс *(свод законов). Граждандлыҡ кодексы. Ғаилә кодексы. Хеҙмәт закондары кодексы.* ■ *[Рахманов:] Алдан тикшерелгән материалдар нигеҙендә Сәғәҙиев Морат Гәрәй улы РСФСР Уголов-*

ный кодексының тукһан икенсе статьяһының өсөнсө бүлеге һәм йөҙ ҙә етмешенсе статьяһының икенсе бүлеге буйынса ғәйепләнә. А. Абдуллин. *[Пилман:] Минеңсә, эскелеккә ҡаршы көрәште йәштәрҙе боҙоҡ юлға баҫтырыусы өлкән кешеләрҙән башларға кәрәк. Хәйер, кодекста бындай енәйәткә ҡағылышлы айырым статья ла бар.* Н. Мусин.

2. *күсм.* Ҡараш, ҡылыҡ, ғәҙәт ҡағиҙәләренең йыйылмаһы. □ Кодекс *(совокупность правил поведения). Әхлаҡ кодексы. Намыҫ кодексы.*

КОДИФИКАЦИЯ [рус. < лат. *codex* 'китап' + *facio* 'эшләйем'] (Р.: кодификация; И.: codification; Т.: kodifikasyon) *и.*

1. *юр.* Айырым хоҡуҡ тармаҡтарының ҡанундарын яңынан ҡарап бер системаға һалыу. □ Кодификация *(систематизация законов).*

2. *лингв.* Тел күренештәрен нормалаштырыу. □ Кодификация *(нормализация языка). Кодификация комиссияһы.*

КОДЛАНЫУ (кодлан-) *ҡ. төш. ҡар.* **кодлау.** *страд. от* **кодлау.** *Кодланған хәбәр.* ■ *Организм тураһында биологик мәғлүмәт ДНК йәки РНК эҙмә-эҙлелегендә кодланған.* Интернет селтәренән.

КОДЛАУ (кодла-) (Р.: кодировать; И.: code; encode; Т.: kodlamak) *ҡ.*

Йәшерен хәбәрҙе код менән билдәләү; кодҡа һалыу. □ Кодировать. *Хәбәрҙе кодлау. Фармандарҙы кодлау. Кодлап телеграф аша ебәреү.*

КОЖИМИТ [рус.] (Р.: кожимит; И.: imitation leather; Т.: sahte deri) *и. иҫк.*

Яһалма күндәрҙең элекке атамаһы. □ Кожимит. / Кожимитовый. *Кожимит куртка. Кожимит плащ. Кожимиттан тектереү.*

КОЖУХ [рус.] (Р.: кожух; И.: casing, housing; Т.: kapak) *и. тех.*

Ҡорамалдарҙы, механизмдарҙы йәки уларҙың бер өлөшөн зыяндан һаҡлап торған көп; ҡап, тышлыҡ. □ Кожух. *Пулемёт кожухы. Һаҡлыҡ кожухы. Тауышты аҙайтыусы кожух. Генератор кожухы. Кожух менән ҡаплау.* ■ *Дәүләтов ҡулы менән кожухты һыйпап ҡуйҙы, лентаны барланы, запас ленталарҙы бер тирәгә өйөп һалды.* Ә. Ихсан. *Бары бер нисә минут үтте. Пулемёт кожухындағы һыуҙар ҡайнай башланы. Мин автоматҡа яңы магазин ҡуйҙым.* Б. Дим.

КОЗИНАК (козинагы) [рус. < груз.] (Р.: козинаки; И.: nuts-and-honey bar; Т.: tatlı yemek) *и.*

Сәтләүек, кунжут йәки көнбағыш орлоҡтарына бал ҡушып эшләнгән көнсығыш татлы аҙығы. □ Козинаки. *Козинак ашау. Козинак һатып алыу. Бигерәк тә балалар козинак ярата.*

КОЗЫРЁК (козырёгы) [рус.] *и. ҡар.* **күҙерек.** *Кепка козырёгы. Фуражка козырёгы.* ■ *Ҡояш яҡтыһында ялтыраған козырёклы картуз кейгән бер рус егете миңә хат бирҙе.* Ғ. Хәйри. *Күн козырёклы командирҙар фуражкаһы уның [Хәлит ағайҙың] былай ҙа олпат ҡиәфәтенә ғәжәп бер күркәмлек биреп тора ине.* Н. Мусин.

КОЗЫРЬ [рус.] *и.*

1. *ҡар.* **уйын 2.** *Козырҙан сығыу. Козырь менән ябыу. Козырь кәрт. Козырь туз.*

2. *күсм.* Кәрәк саҡта бүтәндәр алдында өҫтөнлөк бирерҙәй нәмә. □ Козырь *(о том, что может дать кому-л. в нужный момент преимущество). Козырь итеп файҙаланыу. Көслө козырь.* ■ *[Мөхәмәтшин:] Ҡабаланып эш сыҡмаҫ, тәүҙә үҙем сығып һөйләшеп ҡарайым әле. Юғиһә, беҙҙең бер генә атыуыбыҙ ҙа кулактар өсөн козырь булыр, бына үҙҙәре саҡыртып йыйҙылар ҙа, үҙҙәре ут астылар, тиерҙәр.* Ә. Вәли. *Мырҙағәле гәзитте козырь итеп файҙаланмаҡсы була! Ирекле һүҙ, ирекле йыйылыш, имеш!* Б. Хәсән.

КОЙКА [рус. < гол. *kooi*] (Р.: койка; И.: cot; Т.: yatak) *и.*

1. Суднола беше киндерҙән аҫмалы итеп эшләнгән бер кешелек йоҡо урыны. □ Койка *(подвесная постель из парусины). Койкала йоҡлау. Койкаға һалыу.*

2. Ятаҡ, больницаларҙа һ. б. була торған бер кешелек караүат. □ Койка *(кровать). Тимер койка. Койкала ятыу. Койка селтәре.* ■ *Сәгит күҙҙәрен йомған килеш театр билеттарына төбәлеп ҡата, оҙаҡ ойоп ултыра, күҙе йомоҡ килеш барып койкаһына йығыла.* Й. Солтанов. *Камалетдиновтың иҫе-*

нән дауахана койкаһында иҫһеҙ ятҡан Мәҙинә сыҡмай. Т. Ғарипова. *Аяҡ тауыштары яҡынлауын һиҙгәс, Менәүәрә стенанан ҡапыл былай табан боролдо, койка эргәһенә килеп баҫҡан Рифҡәткә күҙҙәрен ҙур асып, ҡурҡып ҡараны.* Н. Мусин.

КОК (когы) [рус. < гол. *kok* 'ашнаҡсы'] (Р.: кок; И.: (ship's) cook; Т.: aşçı) *и.*

Караптағы аш бешереүсе. □ Кок. *Кок булып эшләү. Кок бүлмәһе. Карапта кок булып хеҙмәт итеү.*

КОКА [рус. < исп. *coca*] (Р.: кока; И.: coca; Т.: koka ağacı) *и. бот.*

Тропикта үҫкән, япраҡтарынан кокаин алына торған ҡыуаҡ. □ Кока (лат. *Erythroxylum coca*). *Кока япрағы. Кока сәскәһе.*

КОКАИН [рус. < исп. *cocaina*](Р.: кокаин; И.: cocaine; Т.: kokain) *и.*

Кока япраҡтарынан алына торған наркотик көсө булған ағыулы матдә. □ Кокаин. *Кокаин еҫкәү. Кокаин ҡулланыу Рәсәйҙә закон менән тыйыла.*

КОКАИНИЗМ [рус.] *и. ҡар.* **кокаинсылыҡ.**

КОКАИНИСТ [рус.] *и. ҡар.* **кокаинсы.**

КОКАИНСЫ (Р: кокаинист; И.: cocaine addict; Т.: kokainman) *и.*

Кокаинизм менән ауырыған кеше. □ Кокаинист. *Һуңғы заманда кокаинсылар һаны күбәйҙе.*

КОКАИНСЫЛЫҠ (кокаинсылығы) (Р.: кокаинизм; И.: cocainism; Т.: kokainmanlık) *и.*

Наркоманияның бер төрө — кокаинға әүәҫләнеүҙән килгән ауырыу. □ Кокаинизм. *Кокаинсылыҡтан дауаланыу. Кокаинсылыҡҡа ҡаршы көрәш.*

КОКА-КОЛА [рус.] (Р.: кока-кола; И.: Coca-Cola; Т.: kola) *и.*

Алкоголһеҙ газлы эсемлек. □ Кока-кола. *Кока-кола эсеү. Кока-кола рекламаһы. Кока-кола һатып алыу.* ■ *Бер банка кока-колала — 39, пепси-колала 41 г шәкәр бар.* «Йәшлек», 16 июнь 2009.

КОКАРДА [рус. < фр. *cocarde*] (Р.: кокарда; И.: cockade; Т.: kokart) *и.*

Формалы баш кейеменең маңлайына беркетелгән билдә. □ Кокарда. *Полиция кокардаһы. Янғын һүндереүселәр кокардаһы.* ■ *Сығып баҫып торған милиционер кокардаһы артында Шымарғановтың ялтыр башы күренде лә кабинетының бронләнгән ишеге артына ҡапланды.* Й. Солтанов. *Күптән түгел [Өлфәт] ҡайҙандыр осоусылар фуражкаһына беркетеп ҡуя торған кокарда табып алғайны.* Картотека фондынан. *Зәйнәп яуап бирергә өлгөрмәне, Имай, уның артынан урядник, күк фуражкаһының ҡаты кокардаһын, һары еҙ төймәләрен, март ҡояшының тәҙрәнән төшкән нурына ялтыратып алға атланы.* Һ. Дәүләтшина.

КОКЛЮШ [рус. < фр. *coqeuleche*] *и. мед. ҡар.* **күк йүтәл.** *Коклюш йоҡтороу. Коклюш менән сирләү.*

КОКОН *и. ҡар.* **ҡуҙы III.**

КОКОС [рус. < исп. *cocos*] (Р.: кокос; И.: coconut palm; coco; Т.: Hindistan cevizi) *и. бот.*

1. Эре сәтләүекле, олоно балдаҡланып торған ҙур пальма. □ Кокос *(растение).* / Кокосовый. (лат. *Cocos nucifera*). *Кокос пальмаһы. Кокос үҫтереү. Кокос плантацияһы.* ■ *Индонезияның тәбиғи байлыҡтары араһында кокос күренекле урынды тота.* «Башҡортостан», 25 май 2010.

2. Шул пальманың сәтләүеге. □ Кокос *(плод). Кокос йыйыу. Кокос һөтө.* ■ *Кокос сәтләүектәренән ҡиммәтле кокос майы алына.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 8, 2010.

КОКОС ПАЛЬМАҺЫ *и. бот. ҡар.* **кокос 1.**

КОКС [рус. < нем. *Koks*] (Р.: кокс; И.: coke; Т.: kok) *и.*

Ташкүмер, торф кеүек нәмәләрҙе томалап үртәгәндә барлыҡҡа килә торған ҡаты яғыулыҡ. □ Кокс. *Кокс етештереү. Кокс газы. Кокс яндырыу. Домна коксы.* ■ *Завод территорияһында электровоздар йөрөй. Ҙур вагондарға кокс, эҙбизташ һәм руда тейәлгән.* Картотека фондынан.

КОКСЛАНЫУ (кокслан-) (Р.: превратиться в кокс; И.: turn (into) coke; Т.: kok haline gelmek) *ҡ. тех.*

Коксҡа әйләнеү. □ Превратиться в кокс, коксоваться. // Коксование. *Кокслашан күмер.* ■ *Күп кенә урындарҙа таш күмерҙең ҙур ятҡылыҡтары табылған, ләкин кокслана*

торған яҡшы күмерҙәр аҙ. «Башҡортостан», 5 март 2008.

КОКСЛАУ (коксла-) (Р.: коксовать; И.: coke; Т.: kok haline getirmek) *к. тех.*

Коксҡа әйләндереү. □ Коксовать, выжигать кокс. // Коксование. *Кокслау мейесе. Торфты кокслау. Таш күмерҙе кокслау.*

КОКТЕЙЛЬ [рус. < ингл. *cocktail*] (Р.: коктейль; И.: cocktail; Т.: kokteyl) *и.*

Төрлө араҡы төнәтмәләре, шараптар, коньяк, ром, һут, емеш-еләк, туңдырма ҡатнашмаларынан торған иҫерткес йәки һалҡынса тәмле эсемлек. □ Коктейль. *Туңдырма коктейле. Коктейль эсеү. Коктейль әҙерләү.*

КОЛБА [рус. < нем. *Kolben*] (Р.: колба; И.: flask; Т.: tüp) *и.*

1. Химик тәжрибә өсөн ҡулланыла торған оҙон муйынлы быяла һауыт. □ Колба. *Ваҡ колба. Колбаға кислота ағыҙыу. Колбаны утта ҡыҙҙырыу.*

2. Телевизорҙарҙа, термостарҙа, люстраларҙа ҡулланылған төрлө быяла әйберҙәр. □ Колба. *Термос колбаһы сатнаған. Люстраның колбаһын алыштырыу. Телевизор колбаһы янып сыҡҡан.*

КОЛБАСА [рус.] *и. ҡар.* **тултырма 2.** *Бешкән колбаса. Ыҫланған колбаса. Колбаса цехы. Колбаса менән бутерброд яһау. Сояһыҙ колбаса.* ■ *Ҡарағыҙ әле, — ти тағы ла Фәриә, — шофёр ағайымдың колбасаһы бар, кисә мороном ҡысыҡайны, ҡала күстәнәсе ашарға булған икән.* Н. Мусин.

КОЛГОТКА [рус. < чех. *kalhoty*] (Р.: колготки; И.: tights; panty hose; Т.: kilotlu çorap) *и.*

Ыштаны менән ойоғо ҡуша эшләнгән кейем; ойоҡло ыштан. □ Колготки. *Балалар колготкаһы. Йылы колготка. Капрон колготка. Колготка кейеү.*

КОЛЕНКОР [рус. < фр. *calencar*] (Р.: коленкор; И.: calico; Т.: kalikut) *и.*

Ныҡ ашланған беше мамыҡ туҡыма. □ Коленкор. / Коленкоровый. *Китапты коленкор менән тышлау. Коленкор етештереү.* ■ *Булат, һүҙ ошоноң менән тамам тигәндәй, баш осонан Эйнштейндың коленкор тышлы китабын алып уҡырға тотондо.* Ф. Фәйзуллин.

КОЛЕНКОРЛЫ (Р.: коленкоровый; И.: calico; Т.: kalikut) *с.*

Коленкорҙан яһалған. □ Коленкоровый. *Коленкорлы дәфтәр.*

КОЛЕНЧАТЫЙ [рус.] *с. ҡар.* **бөгөмлө 1.** ■ *[Ярлыманов] бынан етмеш километрҙағы совхозда булды. Ләкин бер ай элек уларға шлифовать итергә ебәрелгән коленчатый валдар һаман әҙер түгел ине.* Ә. Вәли.

КОЛЕР [рус. < лат. *color* 'төҫ'] (Р.: колер; И.: colour; Т.: renk) *и.*

Тотонорлоҡ хәлгә еткереп әҙерләнгән буяу. □ Колер. *Колер әҙерләү. Зәңгәр колер. Ҡуйы колер.* ■ *Бригадир аҡланған түшәмгә, әле дымлы зәңгәрһыу стеналарға һүҙһеҙ генә күҙ йөрөтөп сыҡты, филёнка өсөн яһалған колерға бармағын тығып ҡараны.* Картотека фондынан.

КОЛЕСНИЦА [рус.] (Р.: колесница; И.: chariot; Т.: şar) *и. тар.*

Боронғо гректарҙа һәм римдарҙа һуғышта һәм ярышта ҡулланылған ике тәгәрмәсле еңел арба. □ Колесница. *Хәрби колесница. Колесницалар һуғышы.*

КОЛЕЯ [рус.] (Р.: колея; И.: rut; Т.: tekerlek izi) *и.*

1. Тәгәрмәс эҙе. □ Колея *(канавка, углубление от колёс на дороге). Колея ҡалдырыу. Колеянан барыу. Йөк машиналары колеяһы. Тәрән колея.*

2. Тимер юлдың ике параллель рельстан торған бер буйы. □ Колея *(железнодорожный путь). Ике колеялы тимер юл.*

3. *күсм.* Эштең, тормоштоң үҙ яйы менән барыуы. □ Колея. *Тормош үҙ колеяһы менән бара. Колеянан сығыу.*

КОЛИБРИ [рус. < исп. *colibri*] (Р.: колибри; И.: hummingbird; Т.: sinek kuşu) *и. зоол.*

Төньяҡ Американың көньяҡ-көнбайышында һәм Көньяҡ Америкала йәшәй торған, оҙонлоғо 2 см-ға етә торған бик бәләкәй ҡош. □ Колибри (лат. *Trochilidae*). *Колибри суҡышы. Колибри тауышы. Колибри ҡойроғо менән алға оса ала.* ■ *Ер йөҙөндә 8500 төрлө ҡош иҫәпләнә. Иң бәләкәй ҡош — колибри. Уның ауырлығы — ике грамм, ә йөрәге*

минутына мең тапҡыр тибә. «Йәшлек», 22 август 2009.

КОЛИТ [рус. < гр. *kolon* 'йыуан эсәк'] (Р.: колит; И.: colitis; Т.: kolit) *и. мед.*

Йыуан эсәктәрҙең шешеүе. □ Колит. *Колиттан дауаланыу. Колит менән яфаланыу.*

КОЛЛЕГА [рус. < лат. *collega*] *и. ҡар.* **хеҙмәттәш.** *Эш буйынса коллегалар. Коллегалар менән фекер алышыу. Коллегалар менән кисә ойоштороу. Коллега менән тәжрибә уртаҡлашыу.* ■ *[Моисей Казимирович:] Уның сере башҡорт халҡының баяғы мин әйткән тәрән тамырҙарына йомарланған, ә һин, коллегам, шул йомаҡты сисергә тип юлланған юламанһың.* Й. Солтанов. *Профессор әле йәш коллегаларының шулай көтмәгәндә килеп тешәүҙәренә бик нык ҡыуанғайны.* Д. Бүләков. *Бына ике аҙна инде Шамил Шамукович Зәһитов эстән янып, сит-ят кешеләргә лә, бергә эшләгән коллегаларына ла белдермәҫкә тырышып, ут йотоп йөрөй: ҡайҙа булыр ул малай?* Н. Мусин. *Тимәк, кемделер ерләйҙәр. Уның ҡыҙы, Сәмәрәһе, ерләүҙә ҡатнаша. Берәй коллегаһы менән хушлашаларҙыр.* Т. Ғарипова.

КОЛЛЕГАЛЫҠ (коллегалығы) *и. ҡар.* **хеҙмәттәшлек.** *Коллегалыҡ мөнәсәбәттәре.*

КОЛЛЕГИАЛЛЕК (коллегиаллеге) (Р.: коллегиальность; И.: collegiality; Т.: mesleki işbirliği) *и.*

Бер төркөм кешеләр тарафынан башҡарылған идара, етәкселек. □ Коллегиальность. *Коллегиаллек принцибы. Коллегиаллекте тотоу.* ■ *Был иптәштәр коллегиаллекте практикала аҡлай беләләр.* Ғ. Рамазанов.

КОЛЛЕГИАЛЬ I (Р.: коллегиальный; И.: collective, joint; Т.: toplu) *с.*

Күмәкләп, бергәләп башҡарыла торған. □ Коллегиальный. *Коллегиаль етәкселек.*

КОЛЛЕГИАЛЬ II [рус. < лат. *collegium*] (Р.: коллегиально; И.: collective, joint; Т.: toplu) *р.*

Күмәкләп, бергәләп. □ Коллегиально. *Коллегиаль хәл итеү.* ■ *Күмәкләшеп, кәңәшләшеп, йәғни коллегиаль, хәл итер өсөн йыйылалар.* Р. Солтангәрәев.

КОЛЛЕГИЯ [рус. < лат. *collegium*] (Р.: коллегия; И.: board; Т.: kurul) *и.*

1. Кәңәш биреү йәки ҡарар сығарыу органы булып ойошҡан вазифалы кешеләр төркөмө. □ Коллегия *(группа должностных лиц). Министрлыҡ коллегияһы. Киңәйтелгән коллегия. Йәштәр сәйәсәте буйынса коллегия.* ■ *Шәһит Хоҙайбирҙин яңы коллегия ағзаһы һәм хәрби бүлек мөдиренең урынбаҫары итеп билдәләнә.* Картотека фондынан.

2. Ҡайһы бер профессия кешеләренең бергә эшләү өсөн ойошҡан берләшмәһе. □ Коллегия *(объединение лиц некоторых профессий). Адвокаттар коллегияһы. Редакция коллегияһы.* ■ *[Рахманов:] Дауыт Усманович, суд коллегияһы һеҙҙән хөкөм ителеүсегә һәм уның колхоздағы эшенә характеристика биреүегеҙҙе үтенә, һеҙ уны күптән беләһегеҙме?* А. Абдуллин. *Был тәкдимдәр бик урынлы күренде, шуға мәғариф вәзирлеге менән идара иткән Фәйез Мөхәммәт Хан 19 июлдә хөкөмдар Аманулла Хандың һарайында мәғариф коллегияһы мәжлесен йыйҙы.* Ә.-З. Вәлиди.

3. *тар.* Рәсәйҙә XVIII быуатта үҙәк хөкүмәт учреждение исемдәренең бер өлөшө. □ Коллегия *(в России в XVIII в.: составная часть названий центральных правительственных учреждений). Хәрби коллегия. Тышҡы эштәр коллегияһы.* ■ *Батшалар фавориттарын ҡыйырһыта буламы: Адмиралтейство коллегияһының вице-президенты итеп тәғәйенләнгән Чернышев тиҙҙән үҙен һыуға ебәрелергә хөкөм ителгән суртан итеп тойҙо.* Ғ. Хөсәйенов.

КОЛЛЕДЖ [рус. < ингл. *college*] (Р.: колледж; И.: college; Т.: kolej) *и.*

1. Англия, Америка һәм башҡа ҡайһы бер илдәрҙәге юғары йәки урта белем биреү йорто. □ Колледж. *Гоулсмитс-колледж. Сити-колледж.*

2. Хәҙерге Рәсәйҙә: урта профессиональ белем биреү йорто. □ Колледж. *Колледжда уҡыу. Колледж уҡытыусыһы. Колледж тамамлау. Колледж студенты. Медицина колледжы.*

КОЛЛЕЖ [рус. < фр. *college*] (Р.: коллеж; И.: (French) college; Т.: kolej) *и.*

Франция, Бельгия һәм Швейцарияның айырым кантондарында урта уҡыу йорто.

□ Коллеж. *Колледжда уҡыу. Социология колледжы.*

КОЛЛЕКТИВ I [рус. < лат. *collectivus* ‘йыйылмалы’] (Р.: коллектив; И.: team, group; staff; Т.: topluluk) *и.*

Уртаҡ маҡсаттар, уртаҡ бер эш башҡарған кешеләр төркөмө. □ Коллектив. *Студенттар коллективы. Уҡытыусылар коллективы. Үҙешмәкәр хор коллективы. Институт коллективы. Эшселәр коллективы.* ■ *[Яманһаров] мәңге зарлана, теләһә ҡайһы эштән дә риза түгел, йыйылыштарҙа иң беренселәрҙән булып тәнҡитләп сығыш яһай, шуға ахры, дауаханала уны хеҙмәт коллективы советына председатель итеп һайлап ҡуйҙылар.* Д. Бүләков. *Мәҙинә уңайһыҙлана, үҙенә текәлгән хор коллективынан ояла, ҡулы ирекһеҙҙән икенсе партитураға үреләс.* Т. Ғарипова. *Егет һүҙе бер була, тигәндәр бит. Бына берәй йыл эшлә, үҙеңде коллективта күрһәт, шул арала аспирантураға инеү өсөн рефератыңды яҙ, экзамендар тапшырырға әҙерлән.* Н. Мусин.

КОЛЛЕКТИВ II (Р.: коллективный; И.: collective; joint; Т.: toplu) *с.*

Күмәк көс менән башҡарыла торған. □ Коллективный. *Коллектив етәкселек. Коллектив эш. Коллектив хужалыҡ. Коллектив ижад. Коллектив асыш. Гәзит — коллектив хеҙмәт емеше ул.*

КОЛЛЕКТИВИЗМ [рус.] *и. ҡар.* **коллективлыҡ.**

КОЛЛЕКТИВЛАШТЫРЫУ (коллективлаштыр-) (Р.: коллективизировать; И.: collectivize; Т.: kolektifleştirmek) *ҡ. иҫк.*

Ваҡ крәҫтиән хужалыҡтарын эре социалистик хужалыҡҡа берләштереү. □ Коллективизировать. // Коллективизация. *Ауыл хужалығын коллективлаштырыу.* ■ *Хәҙер Митрофандың бар теләге — берҙәм хужалыҡ етәкселәренә ҡаршы һөжүм башлап ебәреү, шуның менән коллективлаштырыуҙы өҙөү.* З. Биишева. *Ерҙе, һыуҙы, ер аҫты байлыҡтарын, ҙур каналдарҙы дәүләт ҡулына биреп, ауылды коллективлаштырыу — социализмды тормошҡа ашырыуҙың нигеҙе итеп алынасаҡ.* Ә.-З. Вәлиди.

КОЛЛЕКТИВЛАШЫУ (коллективлаш-) (Р.: коллективизироваться; И.: collectivize; Т.: kolektifleşmek) *ҡ.*

Коллектив хужалыҡҡа берләшеү. □ Коллективизироваться. // Коллективизация. ■ *Бөтә ил буйынса коллективлашыу башланыуын белә ине инде Искәндәр.* Ә. Хәкимов. *Коллективлашыу осоронда колхозға берелгән бер бейә генә ҡала шул юртаҡтар нәҫеленән.* Д. Бүләков.

КОЛЛЕКТИВЛЫҠ (коллективлығы) (Р.: коллективизм; И.:collectivism; Т.: kolektivizm) *и.*

Ижтимағи тормош һәм эш принцибы итеп алған берҙәмлек. □ Коллективизм. *Коллективлыҡ рухында тәрбиәләү. Коллективлыҡ урынлаштырыу.*

КОЛЛЕКТИВСЫ (Р.: коллективист; И.: collectivist; Т.: kolektivist) *и.*

Коллективта эшләү яғында тороусы. □ Коллективист. *Коллективсы булыу. Коллективсы итеп тәрбиәләү. Коллективсы һыҙаттары.*

КОЛЛЕКТОР [рус. < лат. *collector* ‘йыйыусы’] (Р.: коллектор; И.: distributing centre; Т.: kolektör) *и.*

1. *Нимәнелер* йыйыу һәм бүлеп таратыу эше менән шөғөлләнгән ойошма. □ Коллектор *(организация). Китапхана коллекторы. Уҡыу-уҡытыу коллекторы.*

2. Берәй нәмәнең төрлө өлгөһөн йыйып, иҫәбен алып барған кеше. □ Коллектор *(человек). Геологик экспедиция коллекторы.* ■ *[Милованова — Зифаға:] Экспедицияға бөтөнләй килергә тырыш. Коллектор булыу артыҡ ҡыйын булмаҫ. Геологтар ярҙам итерҙәр.* Ә. Бикчәнтәев.

3. *тех.* Даими электр генераторының үҙгәреүсән токты даими токка әйләндерә торған өлөшө. □ Коллектор *(часть электрического генератора). Коллекторы янып сыҡҡан. Ярым үткәргесле коллектор. Электрон лампалы коллектор.*

4. *тех.* Газ йәки шыйыҡлыҡты төрлө торбаларҙан йыйып, ситкә ағыҙа торған киң торба. □ Коллектор *(труба). Канализация коллекторы. Газ коллекторы. Һыу коллекторы. Коллектор торбаһын алмаштырыу.*

■ *Промыслаһың коллекторҙарынан нефть булипка килә, бында 0,8—40 атмосфера баҫымда шыйыҡ ағыулыҡ газдан айырыла һәм мейескә китә.* Р. Низамов. *Монтажсыларҙың береһе тота ла базаға хәбәр итә: авария, коллектор ярыҡ, нефть атыла.* Р. Солтангәрәев.

5. *тех.* Торба йәки кабель үткәреү өсөн ер аҫтынан эшләнгән юлдар. □ Коллектор *(подземный канал). Коллектор ҡаҙыу.*

6. *геол.* Нефть яткылығы урынлашҡан тау тоҡомо. □ Коллектор *(нефтеносная геологическая порода).* ■ *Нефть яткылығы — ул нефть һеңешкән ҡаты тау тоҡомдары.* Д. Бураҡаев. *Коллекторҙары, йәғни күҙәүле ҡатлауҙары булған ошо ҡалҡыулыҡтарға нефть тупланған була.* Картотека фондынан.

7. *юр.* Банкынан кредит алған кеше менән кредитты ҡайтарыу буйынса эшләүсе юрист. □ Коллектор *(юрист). Коллекторҙар агентлығы.*

КОЛЛЕКЦИОНЕР [рус. < фр. *collectionneur*] (Р.: коллекционер; И.: collector; Т.: koleksiyoncu) *и.*

Коллекция йыйыу менән шөғөлләнгән кеше. □ Коллекционер. *Танылған коллекционер. Коллекционерҙар ойошмаһы. Маркалар коллекционеры.*

КОЛЛЕКЦИОНЕРЛЫҠ (коллекционерлығы) (Р.: коллекционирование; И.: collecting; Т.: koleksiyonculuk) *и.*

Коллекция йыйыу менән шөғөлләнеү. □ Коллекционирование; коллекционерство. *Коллекционерлыҡ менән шөғөлләнеү. Коллекционерлыҡ менән мауығыу.*

КОЛЛЕКЦИЯ [рус. < лат. *collectio* 'йыйыу'] (Р.: коллекция; И.: collection; Т.: koleksiyon) *и.*

Бер үк төрлө нәмәләрҙең билдәле бер тәртиптә тупланған йыйылмаһы. □ Коллекция. *Боронғо аҡсалар коллекцияһы. Минералдар коллекцияһы. Маркалар коллекцияһы. Бай коллекция туплау.* ■ *Класс булмәһенең бер мөйөшөндә балаларҙың үҙҙәре төшөргән рәсемдәре, һәр төрлө үҫемлектәр, бөжәктәр, таштар, тәлмәрйен ҡабырсаҡтары коллекцияһы теҙелеп киткән.* М. Тажи. *Ғилман портфеленән ҙур ғына альбом да алды. Бында Артекта үҫкән ағастарҙың япраҡтарынан коллекция йыйылғайны.* З. Биишева.

КОЛЛЕКЦИЯЛАУ (коллекцияла-) (Р.: коллекционировать; И.: collect; Т.: koleksiyon yapmak) *ҡ.*

Коллекция итеп йыйыу. □ Коллекционировать, собирать коллекцию. // Коллекционирование. *Маркалар коллекциялау. Иҫке аҡсаларҙы коллекциялау. Коллекциялау менән шөғөлләнеү.*

КОЛЛИЗИЯ [рус. < лат. *collisio* 'бәрелеш'] (Р.: коллизия; И.: collision, clash, conflict; Т.: çargışma) *и. кит.*

Кешеләр араһындағы ҡапма-ҡаршы ҡараштарҙың, ынтылыштарҙың бәрелеше. □ Коллизия. *Тормош коллизияһы.* ■ *Тәбиғи, тормош-көнкүреш хикәйәләрендә .. алғы планға халыҡтың көнкүреше һәм шуға бәйле булған коллизиялар сығарыла.* Ф. Нәҙершина. *Уның [Күсимовтың] сал башында әллә ни саҡлы ҡыҙыҡлы хәтирәләр, тормош коллизиялары, оҙон-оҙаҡ хәрби тормошонда төрлө кешеләр менән осрашыу сәхифәләре һаҡланып ине.* Р. Өмөтбаев.

КОЛЛОДИЙ [рус. < гр. *kollodes* 'йәбешкәк'] (Р.: коллодий; И.: collodion; Т.: kolodyum) *и. махс.*

Медицинала һәм фотографияла ҡулланылған эфир аралаш йәбешкәк иретмә. □ Коллодий. *Коллодийҙың составы. Коллодий иретмәһе.*

КОЛЛОИД [рус. < гр. *kolla* 'елем' + *eidos* 'төҫ'] (Р.: коллоид; И.: collodion; Т.: koloit) *и. хим.*

Кристаллашмай торған, иҙелеп ҡуйы шыйыҡлыҡҡа әйләнгән матдә *(крахмал, аҡһым, елем һ. б.).* □ Коллоид. / Коллоидный. *Коллоид хәл. Коллоид үҙенсәлектәре. Коллоид иретмә. Коллоид өлөшсәләр. Коллоид химияһы.*

КОЛЛОИДЛЫ (Р.: коллоидный; И.: colloidal; colloid; Т.: koloidal) *с. хим.*

Коллоиды булған; коллоид барлыҡҡа килтерә торған. □ Коллоидный. *Коллоидлы матдәләр. Коллоидлы процестар. Коллоидлы эретмәләр.*

КОЛЛОИДЛЫҠ (коллоидлығы) (Р.: коллоидность; И.: state of being colloid; Т.: koloit) *и. хим.*

Коллоидлы булыу сифаты. □ Коллоидность. *Аҡһымдарҙың коллоидлығы. Коллоидлыҡ күренеше.*

КОЛЛОКВИУМ [рус. < лат. *colloquium* 'һөйләшеү'] (Р.: коллоквиум; И.: colloquium; Т.: konuşma) *и.*

1. Студенттарҙың белемен һынау һәм арттырыу маҡсатында уҡытыусы тарафынан үткәрелә торған әңгәмә. □ Коллоквиум. *Коллоквиум үткәреү.*

2. Билдәле бер темаға, мәсәлән, сәйәси, ғилми һ. б. сығыштар менән үткәрелә торған кәңәшмә. □ Коллоквиум. *Коллоквиумға әҙерләнеү. Коллоквиумда ҡатнашыу.*

КОЛОДА [рус. *колода*] (Р.: колода; И.: pack; Т.: deste (iskambil) *и. махс.*

Уйнау кәрттәренең тулы йыйылмаһы. □ Колода (*карт*). *Кәрт колодаһы.*

КОЛОДКА [рус.] (Р.: колодка; И.: brake shoe; Т.: fren pabucu) *и.*

1. Тәгәрмәсте туҡтатыу өсөн машина тормозына ҡуйылған тимер йәки ағас ҡыҫа. □ Колодка (*тормозная*). *Тормоз колодкаһы. Машинаның алғы колодкаларын алыштырыу.* ■ *Ашығыс ярҙам машинаһы, тормоз колодкаларын һыҙғырта-һыҙғырта, республика клиник үҙәгенең әллә ҡайҙарға йәйрәп һуҙылған, ҙур бинаһының ҡаһылыр подъезына барып туҡтаны.* Д. Бүләков.

2. Орден, миҙал таҫмаһы ҡуйылған планка. □ Колодка (*планка*). *Ордендар колодкаһы.* ■ *Бондаренконың өҫтөндә хәрби кейем, ләкин званиеһын күрһәткән знагы юҡ, күкрәгендә орден колодкаһы ғына ялтырай.* Ш. Насыров.

КОЛОНИАЛИЗМ [рус. < лат. *colonia*] (Р.: колониализм; И.: colonialism; Т.: kolonializm) *и.*

Социаль-иҡтисади яҡтан артта ҡалған илдәрҙе сәйәси, иҡтисади һәм рухи йәһәттән бойондороҡҡа төшөрөү сәйәсәте. □ Колониализм. *Колониализм сәйәсәте. Колониализмға ҡаршы көрәш. Колониализм системаһы.* ■ *Колониализмдың яңы әмәлдәрен уйлап табыу өсөндөр инде, ерле халыҡтың көнкүрешен, иҡтисади, рухи донъяһын, тарихын һәм телен ныҡлап барлау-өйрәнеү башлана.* Й. Солтанов.

КОЛОНИАЛЬ (Р.: колониальный; И.: colonial; Т.: koloniyal) *с.*

1. Колония хәлендәге, колонияға әйләндерелгән. □ Колониальный. *Колониаль илдәр. Колониаль биләмәләр.* ■ *Хатта [Өмөтбаев] ишғырҙарында ла, Башҡортостандағы бәләне, кешелекһеҙ милли колониаль сәйәсәтте асыҡтан-асыҡ әйтмәйенсә, батшаның яуызлығын түрәләргә һиҙҙермәй фашланы.* Я. Хамматов.

2. Колония биләүгә бәйле. □ Колониальный. *Колониаль сәйәсәт. Колониаль режим.* ■ *Автор [Ғ. Кейеков] Рәсәй батшалығы тарафынан башҡорт ерҙәрен йыртҡыстарса талау һәм тартып алыу тураһында бик әсенеп яҙа, ер хаҡындағы 1818, 1823, 1865 йылғы закондарҙы телгә алып, уларҙың колониаль асылын күрһәтә.* М. Нәҙерғолов.

КОЛОНИЗАТОР [рус.] (Р.: колонизатор; И.: colonizer; Т.: sömürgeci) *и.*

1. Берәй илдең халҡын буйһондороусы, иҙеүсе. □ Колонизатор. *Колонизаторҙар сәйәсәте.* ■ *Салауат Юлаев, Ҡараһаҡал кеүек батырҙар етәкләгән яуҙарҙы баҫтырғандан һуң, колонизаторҙар бөтә Башҡортостан буйына аяуһыҙ ҡан ҡойорға тотонған.* Ә. Хәкимов. *Ҡараһаҡал — батша ҡыҫымына, колонизаторҙарға ҡаршы халыҡты аяҡландырыусы ил батыры.* М. Буранғолов. *Ырымбур губернаһында ғына барлығы бер миллион ярым самаһы дисәтинә рудаға бай ерҙәр колонизаторҙар ҡулында.* Я. Хамматов.

2. *ҡар.* **колонист 1.** *Колонизаторҙар күсеп килде.*

КОЛОНИЗАТОРЛЫҠ (Р.:колонизаторский; И.: colonialist; Т.: koloniyal) *с.*

Колониялар (1) баҫып алыуға йүнәлтелгән. □ Колонизаторский, колониальный. *Царизмдың колонизаторлыҡ сәйәсәте. Колонизаторлыҡ ҡараш.*

КОЛОНИЗАЦИЯ [рус.] (Р.: колонизация; И.: colonization; Т.: kolonizasyon) *и.*

1. Сит илде баҫып алып, көсләп колонияға әйләндереү эше, сәйәсәте. □ Колонизация (*захват чужой земли*). *Колонизация-*

ға ҡаршы көрәш. Урыҫтар колонизацияһы. ■ *Рус колонизацияһы башланғас, башҡорт ерҙәренә муйынларына тәре аҫҡан оҙон һаҡаллы кешеләр хужа була башлаған.* И. Абдуллин.

2. Колонистарҙың (1) буш ятҡан ерҙәргә күсеп ултырыуы. □ Колонизация *(заселение переселенцами пустых земель). Колонизация осоро.*

КОЛОНИЗАЦИЯЛАУ (колонизацияла-) *ҡ. ҡар.* **колониялаштырыу.** ■ *Тарихи дөрөҫлөккә тоғро ғалим [Өмөтбаев] башҡорттарҙың рустарға ҡушылыуы актының кире яҡтарын да ситләтеп үтмәй, крайҙы аяуһыҙ колонизациялау күренештәрен ҡырҡа тәнҡитләп сыға.* Ғ. Ҡунафин.

КОЛОНИСТ [рус.] (Р.: колонист; И.: colonist, settler; Т.: kolonist) *и.*

1. Буш ятҡан ергә ситтән килеп ултырған кеше. □ Колонист *(переселенец).* ■ *Байҙар, бигерәк тә урыҫ колонистары, урман менән кәсеп итеп көҫә ҡалынайтҡан бер мәлдә, күпселек халыҡ үҙе йәшәргә рәтле йорт та һалып кερә алмай интекте.* Н. Мусин.

2. Колонияла (3) торған кеше. □ Колонист *(житель колонии). Ирекле колонистар. Колонистар йәмғиәте. Колонистар хужалығы.*

КОЛОНИЯ [рус. < лат. *colonia*] (Р.: колония; И.: colony; Т.: sömürge, koloni) *и.*

1. Империалистик дәүләт тарафынан баҫып алынып, иҙелгән ил. □ Колония *(насильственно захваченная страна). Британия колониялары. Колония халҡы. Колония менән идара итеү. Колония сәйәсәте менән килешмәү. Колонияға әйләндереү.* ■ *Әле күптән түгел генә Азияның ҡайһы бер ҙур илдәре колониялар ине, ләкин Икенсе донъя һуғышынан һуң ул илдәрҙең халыҡтары ныҡышмалы көрәштә колониаль иҙеүҙән ҡотолоп, үҙаллылыҡ алдылар.* «Ағиҙел», № 5, 2010.

2. Сит ил йәки өлкәнән буш ятҡан ергә күсеп ултырған халыҡтың ауылы. □ Колония *(поселение переселенцев). Колонияла йәшәү.* ■ *Быларҙа немец колонияларындағы сәскәләр, ағастар, йәшеллектәрҙең үҙе түгел, еҫе лә юҡ.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Берәй маҡсат менән *(дауалау, тәрбиәләү һ. б. өсөн)* йыйылған кешеләрҙең торлаҡ урыны. □ Колония *(лечебно-исправительное общежитие). Үсмерҙәр колонияһы. Телһеҙҙәр колонияһы. Суд ҡарары менән колонияға оҙатыу. Холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт колонияһы.* ■ *Малай өйҙән өйгә йөрөп тамаҡ туйҙырырға мәжбүр булған. Шулай йөрөгән сағында урлашып колонияға барып эләккән.* Ф. Әсәнов. *[Әйүп] ҡасып йөрөүе арҡаһында колонияға ла эләкте, урам шпаналары менән дә аралашты.* Т. Ғарипова. *Саша килгәс, колония тулҡынланып, тынысһыҙланып ҡалған күҫек булды.* Х. Ғиләжев.

4. *биол.* Бергә тоташып, уҡмашып үҫә, күпләп бер тирәгә йыйылып йәшәй торған үҫемлек йәки хайуандар төркөмө. □ Колония *(совокупность особей). Ҡырмыҫҡалар колонияһы. Коралдар колонияһы. Пингвиндар колонияһы. Бактериялар колонияһы.*

КОЛОНИЯЛАШТЫРЫУ (колониялаштыр-) (Р.: колонизировать; И.: colonize; Т.: sömürge haline getirmek) *ҡ.*

Колонияға әйләндереү, колония (1) итеү. □ Колонизировать. // Колонизация. *Колониялаштырыу сәйәсәте. Сит ерҙәрҙе колониялаштырыу.* ■ *Башҡорттар рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң уларҙың ерҙәрен хәрби яҡтан, ә бер аҙҙан инде тау эштәре өсөн колониялаштырыу башланған.* М. Хисмәтов.

КОЛОНИЯЛЫ (Р.: колониальный; И.: colonial; Т.: sömürge, koloniyal) *с.*

Колониялары (1) булған. □ Колониальный *(владеющий колониями). Колониялы империя. Колониялы дәүләттәр.*

КОЛОНКА [рус.] (Р.: колонка; И.: water pump; column; Т.: kolon) *и.*

1. Оҙонса цилиндр рәүешендәге төрлө ҡулайлама. □ Колонка. *Һыу колонкаһы. Иген таҙартыу колонкаһы. Колонканан һыу алыу.* ■ *Ара-тирә колонканан һыу алып тороусы ҡатын-ҡыҙ күренә.* Картотека фондынан. *Хәҙер инде ишимгә йөрөмәйҙәр. Һәр йорт алдында тимерлек колонка ҡуйып бөттөләр.* Д. Бүләков. *[Идаралыҡ начальнигы:] Яҡын ара булһа, бер хәл, эштән һуң төнөн ебәреп булһа ла бырауҙатыр, колонкаһын да ҡуйҙырыр инем.* Н. Мусин.